# Йәшәгән, ти, батырҙар...





# Йәшәгән, ти, батырҙар...

БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ӘКИӘТТӘРЕ

Баҫмаға НУР ЗАРИПОВ әҙерләне

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1990

84 Баш
Йә 98

Йә 98 Йәшәгән, ти, батырҙар. Башҡорт халыҡ әкиәттәре.— Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990.— 536 бит.

Халыҡ борон-борондан яҡты киләсәк хаҡында хыялланған, һәр төрлө яуыз көстәргә: аждаһаларға, дейеү-пәрейҙәргә ҡаршы тороrлоҡ батырҙарға ҙур өмөт менән баҡҡан. Ана шул халыҡ фантазияһы тыуҙырған батырҙар тураһында был китап.

Йә $\frac{4702110100-157}{М\ 121(03)90}$ 90—90 84 Баш

ISBN 5—295—00491—0

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1990 й.

# ӘКИӘТ БАТЫРҘАРЫ

Әкиәт тинеңме, малайҙар менән күмәкләшеп, ат ҡунаһына йөрөгән саҡтар, ҡурпылы тау битләүендә дөрләп янған ут тирәләй ултырып, Садиҡ ағай әкиәттәрен тыңлап үткәргән төндәр күҙ алдына баҫа.

Ауылда, әлбиттә, ат ҡараусы Садиҡ ағай ғына әкиәтсе булмағандыр. Мин, мәҫәлән, атайҙар ҡунаҡҡа киткәндә, бала-саға йыйылып кис ултырғанда, үҙемдең өләсәй, ул булмаһа, күрше Шәрғиә инәй һөйләгән әкиәттәрҙе лә хәтерләйем. Бына ғәжәп: өләсәй, йәки Шәрғиә инәй һөйләгәндә, беҙ йыш ҡына мыш-мыш илап ултырабыҙ ҙа, үгәй әсәһе тарафынан аяуһыҙ йәберләнгән йәтимә ҡыҙҙың үҙенең тырышлығы, аҡыллығы, намыҫлығы менән ҙур байлыҡ, бәхет табыуына, хатта батша ҡатыны, йә батша килене булып китеүенә шатланып көлә торғайныҡ. Ә Садиҡ ағай әкиәттәре беҙҙе үҙенә башҡа бер серле донъяға алып инә: бында иҫ киткес ғәйрәтле батырҙар, кеше ашаусы аждаһалар, дейеү пәрейҙәре, яуыз батшалар менән һуғышалар, уларҙы ҡырып, тураҡлап, һуңғы сиктә үҙҙәре батша булып ултыралар, илдә именлек, ғәҙеллек урынлаштыралар. Беҙ, малайҙар, шуға бик һоҡланабыҙ, шулай батыр булһаң ине ул, тип хыялланабыҙ.

Йәнә шуныһы ҡыҙыҡ тойола торғайны, әкиәттең ҡайһыһы ла ысын түгел, йәғни кеше ышанмаҫлыҡ хыял-фантастика булыуын беҙ белә инек инде. Садиҡ ағай ҙа шундай уҡ уйҙырма донъя тураһында һөйләй. Әммә уның геройҙары, мәҫәлән, ошо китаптағы әкиәт батыры Юлбат, үҙенә яраҡлы ат һатып алыу өсөн, беҙҙең ауылдан 40 саҡрымдағы Стәрле (Стәрлетамаҡ) ҡалаһы баҙарына бара (ә Стәрле баҙары ул ваҡытта беҙҙең өсөн донъяла иң ҙур баҙар бит инде!), бер һөйләгәндә Алатауҙа, икенсе һөйләгәндә Ҡантүбә яланында (беҙҙең Көҙән ауылы сабынлыҡтарында) атын ашатып, ары китә. Тап ана шул Алатау һәм Ҡантүбәнән һуң беҙ күрмәгән-белмәгән Урал армыттары араһында, йәки уларҙың аръяғында баяғы әкиәт донъяһы башлана. Ләкин унда ла Юлбат үҙенең ағайҙары, улы менән осрашҡанда, һуғыш яланындағы ысын һалдаттар һымаҡ, «пароль», «пропуск», һорашып таныша...

Бының серен мин, әлбиттә, һуңынан, фольклор әҫәрҙәрен фән күҙлегенән өйрәнә башлағас ҡына, белдем. Мөхәмәтйәнов Садиҡ ағай (1888-1974) батша армияһында хеҙмәт иткән, 1914-1918 йылдарҙағы донъя һуғышында, аҙаҡ граждандар һуғышында ҡатнашҡан: беренселәр рәтендә колхозға инеп, ҡартайғансы ат ҡараусы бу-

лып эшләгән. Ул һөйләгән әкиәттә уның үҙенең биографияһына бәйле нәмәләр сағыла икән дә!

Әкиәт батырҙарын билдәле дәрәжәлә хәрбиләштереп һөйләү йәһәтенән «Юлбат» берҙән бер әкиәт түгел. Беҙҙең быуат башында А. Г. Бессонов тарафынан яҙып алынған «Яңғыҙаҡ батыр» әкиәтендә лә асылда шул уҡ хәлде күрәбеҙ. Уға тәү башлап профессор Николай Константинович Дмитриев иғтибар иткән һәм был «әкиәттә хәрби техниканың үҙ заманынан уҙып китеүе» тураһында тейешле иҫкәрмә яһаған.

Ишембай районы Уразбай ауылы әкиәтсеһе Фәхретдинов Арыслангәле ағай (1897-1970; мин унан 1968 йылда ике әкиәт — ошо китаптағы «Әхмәт батыр менән Ҡасим батыр» һәм тылсымлы әкиәттәргә ҡараған «Ғабдрахман» әкиәтен яҙып алдым) әкиәткә үҙен ҡатнаштырып һөйләргә, теге йәки был хәлде «үҙенең күреүе» менән «раҫларға» ярата ине.

Күмертау районы Яҡут ауылында башланғыс мәктәп уҡытыусыһы Сәмәрә Насретдин ҡыҙы Сарбаеванан 1974 йылда яҙып алынған «Алтын ҡауырһын» әкиәтенең, шау педагогик маҡсаттарға яраҡлаштырып, хәҙерге тәрбиә күҙлегенән һөйләнеүе ҡыҙыҡлы. Әкиәт батырының эпик бала сағы ла бында хас бөгөнгө тормош биҙәктәрендә һүрәтләнә: ете йәше тулғас, малайҙы әбей «матур итеп кейендергән, йыуындырған, сәстәрен тараған, етәкләп алып барып, беренсе класҡа уҡырға биргән. Бала беренсе класҡа барып уҡырға кереү менән, бик тәртипле булып, матур итеп уҡый башлаған, шул хәтлем матур булып, таҙа булып үҫә икән был малай, ай үҫәһен — көн үҫә, әбейгә ҡайттыниһә, шул хәтлем ярҙамлаша, эштәрен эшләй, әнәй, тип, күҙенә генә ҡарап тора икән».

Артабан герой ауыр хәлдә ҡалған саҡтарҙа, уны ҡыҙғаныу, йәлләү, атының һүҙен тыңламайынса алтын ҡауырһынды алғаны өсөн аҙым һайын шелтәләнеү — быларҙың барыһында ла, әле килтерелгән эпизодтағы кеүек, әкиәтсенең педагоглығы күҙгә бәрелеп тора.

Килтерелгән миҫалдарҙан әкиәттең нисек хикәйәләнеүендә әкиәтсенең үҙ шәхесе, характеры, профессияһы һәм белем даирәһе, тел байлығы һәм һөйләү оҫталығы сағылыуын асыҡ шәйләргә була. Был үҙенсәлектәр әкиәтте нәфис тел әҫәре буларак өйрәнеүҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Әйтәйек, Сәмәрә Сарбаева һөйләүендә хискә бирелеүсәнлек әкиәттең тәьҫирлеген көсәйтә, Арыслангәле ағайҙың әкиәт ҡыҙҙарының сибәрлеген «күреп», «иҫе-аҡылы китеүе», сюжеттың айырата көсөргәнешле мәлдәрендә үҙенең дә «ҡатнашыуы», мәҫәлән, Әхмәт батыр төшөндә күреп ғашиҡ булған ҡыҙ батшаны үбергә иткәндә, бында уның сәғәт тотоп тороуы, ярышҡа «шаһит булыуы», Садиҡ ағайҙың ниндәй фантастик хәлдәрҙе лә үҙе йәшәгән төбәк менән бәйләүе, геройҙарҙы һуңғы заман төшөнсәләре менән «хәрбиләштереүе» хикәйәләү стиленә юмор индерә, мауыҡтырғыслыҡты арттыра.

Ә бына әкиәттәрҙең төр-жанр билдәләре нимәгә бәйле? Мәҫәлән, батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең барыһы өсөн уртаҡ сифаттар ниндәй? Тылсымлы әкиәттәрҙән айырмаһы нимәлә?

Тылсымлы әкиәттәр менән батырҙар тураһындағы әкиәттәр араһында ҡәтғи сик үткәреп булмай, әлбиттә. Шулай ҙа был бүленештә тылсым менән төп геройҙың үҙ-ара кирс нисбәттә тороуын шәйләргә мөмкин: тылсым күберәк булған һайын, герой пассивыраҡ һәм киреһенсә — герой активыраҡ булған һайын, тылсым артҡараҡ күсә. Йыйып ҡына әйтһәк, тылсымлы әкиәттәрҙә геройҙың үҙенең таҫыллығы, үҙенең активлығы түгел, ә уға ярҙам итеүсе тылсым әйәләре, мөғжизәле хәлдәр алғы планда һүрәтләнә, тылсым идеаллаштырыла. Ә батырҙар әкиәтендә персонаждар ҡапма-ҡаршы ике лагерға бүленә, сюжет улар араһындағы киҫкен конфликтҡа ҡорола, һүрәтләү алымдары үтә ҡабартылған, ҡуйыртылған төҫтә. Тылсым иһә, берҙән, сюжет үҫешендә дөйөм мифологик фон, әкиәт донъяһының сихри күренештәре, икенсенән, төп геройҙың үҙ характерына, тәбиғәтенә бәйле сифат булып тора. Әкиәт батыры оло маҡсаттар өсөн тыуа. Уның тыумышы ла, бала сағы ла һис ғәҙәттәгесә түгел, — серле, мөғжизәле. Йыл үҫәһен бер айҙа, хатта бер көндә үҫкән был батыр үҫмер сағында уҡ үҙенең иҫ киткес ғәйрәтле булыуын күрһәтә. Уға был донъя тар, уға үҙенә тиң батырҙар кәрәк. Сөнки уны башҡалар үтәй алмаған бөйөк эштәр көтә.

Ҡыҫҡаһы, геройҙың серле-мөғжизәле тыуыуы, уның ғәҙәттән тыш бала сағы, илгә афәт килтергән яуыз заттарға ҡаршы сығыуы, улар менән яңғыҙы йән аямай һуғышып, илдә тыныслыҡ, ғәҙеллек, һәм тигеҙлек урынлаштырыуы батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙе билдәләүсе төп һыҙаттарҙан һанала.

Шундай ҙур ҡаһармանлығы менән әкиәт батырҙары эпос геройҙарын хәтерләтәләр. Ысынлап та Аҡъял батыр, Ҡамыр батыр, Оморҙаҡ батыр, Ҡараса батыр һәм башҡа әкиәт батырҙары — береһе лә үҙенең физик көсө-ғәйрәте, рухи сафлығы, алдына алған маҡсатына ирешеү юлында ныҡышмалығы менән һис тә Урал батырҙан, йәки Һәүбән батырҙан ҡайтыш түгел. Төп айырма — улар образында төрлө кимәлдәге ижтимағи күренештәрҙең, маҡсат һәм ынтылыштарҙың дөйөмләштерелеүендә. Эпос геройы ғәҙәттә ырыу-ҡәбилә, ил-халыҡ исеменән хәрәкәт итә, уның йәшәйешенә, бойондороҡһоҙлоғона янаған йәки хатта, «Урал батыр» ҡобайырындағыса, дөйөм кешелек яҙмышына ҡурҡыныс һалған яуыз көстәргә ҡаршы сыға, ил азатлығы өсөн көрәшә. Уны был яҡтан йәмғиәт үҫешендә халыҡтың үҙенең тарихи ролен, үҙ аллы дәүләтселеккә ынтылыштарын һәм демократик идеалдарын, милли патриотик һәм дөйөм кешелек тойғоларын дөйөмләштереп кәүҙәләндереүсе герой, ысын мәғәнәһендә ил батыры тип танырға мөмкин. Ҡобайырҙың сәсмә телдә һөйләнеп ныҡ әкиәтләшкән вариантында ла ошо идея һаҡланған.

Әкиәт батырҙары ғәҙәттә һыуһыҙ интеккән батшалыҡты (ҡала йәки ауыл халҡын) аждаһа, дейеү, иргәйел ҡоллоғонан ҡотҡаралар,

дошман яуын тар-мар итәләр, яуыз батшаның (хандың) хәтәр йомоштарын үтәйҙәр, юғалған (урланған) ҡатын-ҡыҙҙарҙы, мал-тыуарҙы, тормош өсөн бик кәрәк булған нәмәне (мәҫәлән, дарыу, эш, бәхет, үҙенә тиң батыр, яраҡлы ат) юллап табалар. Әммә әкиәт батыры ниндәй маҡсат менән ата йортонан сығып китмәһен,— ахыр сиктә әкиәт батырының үҙенә тейешле ҡыҙҙы табыуы, бәхетле ғаилә ҡороуы менән бер төрлә (традицион) тамамлана. Шуныһы характерлы: эпос геройы йыш ҡына ил-халыҡ өсөн ҡорбан була; әкиәт батыры иһә үҙенең дошманы йәки хыянатсыл ағалары тарафынан үлтерелгән осраҡта ла тылсым ярҙамында яңынан терелә, ҡабат ауыр һынауҙар үтеп, гәҙәттә тыуған еренә ҡайта, үҙ кәләшенә (йәки ҡатынына) ҡабаттан өйләнә, йыш ҡына ғәҙел батша булып та ултыра.

Маҡсатҡа ирешеү юлында эпос геройы һәр ваҡыт яңғыҙы һыбай хәрәкәт итә. Ат — уның берҙән-бер даими тоғро ярҙамсыһы. Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә иһә ярҙамсы персонаждар шаҡтай күп төрлө. Уларҙың һәр ҡайһыһы билдәле бер традицион функцияны башҡара. Әйтәйек, аттың роле эпоста ла, әкиәттә лә, асылда бер төрлө: геройҙы ул, күҙ асып күҙ йомғансы, тейешле урынға алып бара, тапҡыр кәңәштәрен бирә. Ләкин ҡайһы бер әкиәттәрҙә уның ярҙамы быны менән генә лә сикләнмәй, ул батырҙың үҙенең генә көсө етмәҫ диңгеҙ аттары менән һуғыша, уларҙы тотоуҙа хәл иткес роль уйнай («Алтын ҡауырһын», «Һыу айғыры», «Быбсаҡ» һ. б.). Ҡайһы бер әкиәттәрҙә ат функцияһын бүре («Юлбат») йәки хатта ҡырмыҫҡа («Ғәҙел батша») башҡара.

Сәмреғош — башлыса батырҙар әкиәтендә урын алған ярҙамсы персонаж. Уның ярҙамы һәм ярҙам итеү сәбәптәре әкиәттән әкиәткә бер төрлө һүрәтләнә: себештәрен йыландан (аждаһанан) ҡотҡарғаны өсөн батырҙы ул ер аҫты батшалығынан алып сыға, йә булмаһа диңгеҙ аръяғындағы алыҫ илгә алып бара («Дандан батыр»).

Батырҙар әкиәте өсөн иң характерлы ярҙамсы образдар — Тау батыр, Урман батыр, Күлуртлар, Ертыңлар ише мөғжизәле батырҙар. Әкиәттәрҙә улар төрлө исемдә алынырға мөмкин. Әммә шуныһы закон дәрәжәһендә: беренсенән, улар атһыҙ батырҙар әкиәтендә генә ҡатнашып, һәр ҡайһыһы геройҙың үҙенә, йә уның кәләшен алып ҡалған аждаһаға (ялмауыҙға) ҡыҙ яусылау майҙанында бер шартты үтәй; икенсенән, гәҙәттә, батша тарафынан күпме һәм ниндәй шарттар ҡуйыла, әҫәрҙә шунса һәм шуны үтәрҙәй батырҙар ғына һүрәтләнә.

Ҡыҫҡаһы, ярҙамсы батырҙар һәм улар башҡарған эштәрҙең әҫәрҙән әҫәргә даимилеге, асылда гел генә традицион формаларҙа күрһәтелеүе — батырҙар әкиәтенә генә хас күренеш.

Хәҙерге фольклористикала раҫланыуынса, батырҙар әкиәте, тылсымлы әкиәт кеүек үк, тәүтормош община йәмғиәтенең тарҡалыу осоронда тамырлана. Был, бөтәһенән элек, ырыу коллективынан көслөрәк характерлы айырым шәхестәр бүленеп сыға башлауға, уларҙың үҙаңдары үҫеү процесына, ырыу алдына баҫҡан яңы бурыстарға һәм

теләктәргә бәйләнгән. Һәҙәмтәлә тылсымлы әкиәттә тулыһынса тәбиғәт көстәренә бойондороҡло булған исемһеҙ «бер кешенән» күренекле шәхестең — ғәҙәттән тыш көскә эйә булған кешенең идеаллаштырылған образы — әкиәт батыры үҫеп сыға. Әгәр тылсымлы әкиәттәрҙә беренсе сиратта тылсымлы шарттар сағыуыраҡ күрһәтелһә, батырҙар әкиәтендә иһә герой шәхесе, уның үҙенең мөмкинлектәре һәм активлығы идеаллаштырыла. Тап бына ошо яғы, йәғни ырыу ҡоролошо тыуҙырған батырлыҡ-ҡаһарманлыҡ идеалын күтәреүе менән, батырҙар әкиәте үҙе героик эпос жанрына нығ йоғонто яһаған. Ҡайһы бер эпик хикәйәттәр, мәҫәлән, төрки халыҡтарында киң таралған «Алпамыша» эпосы, академик В. М. Жирмунскийҙың бик күп миҫалдар менән иҫбат итеүенсә, батырҙар тураһындағы боронғо әкиәттәр ерлегендә барлыҡҡа килгән. Героик эпос һәм батырҙар әкиәте халыҡтың героик рухын сағылдырыу, уның өмөттәрен, бәхетле тормош тураһындағы хыялдарын «тормошҡа ашырып» күрһәтеү буйынса береһен береһе ҡеүәтләгән, шул юлда береһен береһе байыҡтырған үҙ аллы ике жанр — ысын мәғәнәһендә ҡәрҙәш жанрҙар булып үҫкәндәр, беҙҙең замансаса килеп еткәндәр.

* * *

Әкиәттәрҙә тормош хыялда тоҫмаллаған формаларҙа кәүҙәләнә. Сюжетты тәшкил иткән хәл-ваҡиғалар, ҡатнашыусы персонаждар, уларҙың буйы-һыны, эштәре-ҡылыҡтары һ.б. — барыһы ла уйҙырма характерҙа. Әлбиттә, ниндәй фантастиканың да бер ерлеге булған кеүек, әкиәт фантастикаһының да тарихи ерлеге бар. Уның тәрән тамырҙары, бер яҡтан, тәүтормош кешеһенең мифологик ҡараштарына (анимизм, тотемизм һ.б), күп төрлө хөрәфәттәргә (табу, магия һ.б.), икенсе яҡтан, община ҡоролошонда көнкүреш тәртиптәрен билдәләгән йолаларға һәм ғөрөфтәргә барып тоташа.

Беҙҙең өсөн бында шуныһы мөһим: әкиәт, халыҡтың художестволы ижад емеше, үҙенсәлекле жанр булараҡ, тәүтормош община ҡоролошоноң тарҡалыу осоронда барлыҡҡа килә һәм боронғо хөрәфәттәрҙе нығытыу, әллә ҡасанғы йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлау, артабан дауам итеү ниәтендә түгел, ә асылда уларға ҡапма-ҡаршы йүнәлештә үҫә, үҙе ҡабул иткән мотивтарҙы, образдарҙы, сюжеттарҙы яңы быуындарҙың идеалдарына, ынтылыштарына яраҡлаштырып үҙгәртә, художестволы эшкәртә. Быны бик асыҡ бер миҫалын күп әкиәттәрҙә аждаһаға тәғәйенләнгән ҡыҙҙы үлемдән ҡотҡарыу эпизодында күрергә мөмкин. Элек ерҙе һуғарған йылғаға, һыу эйәһенә тип, кешене (ғәҙәттә ҡыҙҙы) ҡорбан итеү йолаһы булған. Әкиәт батыры килә лә «һыу эйәһен» тураҡлап ташлап, ҡыҙҙы үлемдән ҡотҡара. Теге йола үҙ көсөндә булған заманда бындай «ҡотҡарыусыны» халыҡтың именлегенә ҡаршы сығыусы һанап, өҙгөләп ташларҙар ине, әлбиттә. Ә әкиәттәрҙә «һыу эйәһен» халыҡ аждаһа ҡиәфә-

тендәге яуыз йән тип «конкретлаштыра», ә егетте ысын батыр итеп таный, батша уға ҡыҙын бирә. Шулай итеп, тәүтормош кешеһенең аңын томалаған йола бөтөнләйгә кире ҡағыла. Улай ғына ла түгел, ҡаһарманлыҡ төшөнсәһенән яҡтыртылып, өр яңы мәғәнә ала.

Батырҙар әкиәтендә конфликт мәсьәләһе лә геройҙың, беренсенән, төрлө мифик заттар йөҙөндә дөйөмләштерелгән тәбиғәт көстәренә, икенсенән, кешенең үҙ иркен тотҡарлап торған һәм халыҡтың социаль ынтылыштары, ижтимағи үҫеш талаптары менән һыйышмаған йола һәм ғөрөфтәргә ҡаршы сығыуына бәйләнгән. Әкиәттәрҙә был конфликттың ҡаһарманлыҡ идеалы яҡтылығында эшкәртелеүен түбәндәгесә күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Ҡасандыр берәүҙең «әллә ниндәй» януар, ҡот осҡос йән эйәһе (һуңынан «шүрәле», «пәрей», «аждаһа», «дейеү»... тип аталған мифик заттар) менән осрашыуы, шул ғәҙәттән тыш ситуацияла тегене бер үҙе еңеп, өйгә иҫән ҡайтыуы кеүек, әле аң кимәле бик түбән кешене таң ҡалдырған ғәжәп хәлдәр тураһындағы һүҙҙәр-хәбәрҙәр, ҡыҙыҡлы хәтирәләр телдән-телгә һөйләнгәндә легендалар менән үрелеп, киңәйтелеп-дөйөмләштерелеп, художестволы сюжеттар төҙөлгән, һәр төрлө яуыз һәм ҡурҡыныс көстәрҙән азат булған бәхетле һәм ғәҙел тормош тураһындағы өмөт һәм хыялдарҙы кәүҙәләндергән образдар ижад ителгән. Был образдарҙың тәүге прототибы булып, юғарыла әйтеп үтелгәнсә, ырыу коллективында үҙенең көсө һәм ҡыйыулығы, ихтыяры һәм аҡылы, ныҡышмалылығы һәм тапҡырлығы менән айырылған шәхестәр торған. Бындай шәхестәрҙең бөтә эше-ҡылығы ғәҙәттән тыш күренгәнгә, уларҙың тыуыуҙары ла ғәҙәттән тыш һаналған, тылсымлы сәбәптәр, тотемистик ҡараштар менән аңлатылған.* Әкиәт иһә шул «аңлатмаларҙы» үҙенә бик йәтеш бер сара — батырҙарҙы тыумыштары буйынса уҡ башҡаларҙан айырыу, өҫтөнөрәк, затлыраҡ итеп күрһәтеү, идеаллаштырыу сараһы итеп ҡабул иткән.

Батырҙар тураһындағы әкиәттәр, бер яҡтан, архаик сюжеттарҙы ана шулай киңәйтеү, художестволы дөйөмләштереү һөҙөмтәһендә репертуарға инеп китһәләр, икенсе яҡтан, героик мотивтарҙы ижтимағи сфераға ла күсерә килеп, элекке ысынбарлыҡҡа ҡаршы мөнәсәбәт, заманы уҙған йола һәм ғөрөфтәрҙе инҡар итеү нигеҙендә тыуғандар, социаль тигеҙлек, ғәҙеллек өсөн тирандарға ҡаршы көрәш төҫөн алғандар. Һөҙөмтәлә тәүтормош фольклоры үҙенең архаик йөкмәткеһен һәм көнкүрештәге практик тәғәйенләнешен тамам юғалтып, ауыҙ-тел сәнғәтенең ғәжәп бай йөкмәткеле бер нәфис формаһына әүерелгән, өр яңы идея-эстетик йүнәлеш алған: тәүтормош

* Был хаҡта киңерәк мәғлүмәт алырға теләгән уҡыусы түбәндәге мәҡәләләрҙе ҡарар: Мингажетдинов М. Х. Мотив чудесного рождения в богатырской сказке//В сб.: Эпические жанры устного народного творчества.— Уфа: БГУ, 1969; Зарипов Н. Т. Герой башкирских богатырских сказок, его враги и помощники//В сб.: Вопросы башкирской фольклористики.— Уфа; БФАН СССР, 1978.

кешеһенең аңында анимизм, тотемизм, күп төрлө ырым-хөрәфәттәр тыуҙырған тылсымлы мотивтар, фантастик образдар һәм сюжеттар һуңғарак әкиәтте ижад иткән халыҡтың социаль теләктәре һәм өмөттәре, аңдары һәм ҡараштары менән үрелеп, әкиәттәргә яңы төшөнсәләр һәм милли көнкүреш һыҙаттары өҫтәлгән, жанрҙың үҙенә генә хас художестволы ысул һәм саралары барлыҡҡа килгән, сюжет төҙөү һәм хикәйәләү алымдары ҡанунлашҡан. Быларҙың барыһы ла ижад тәжрибәһендә күп тапҡыр һыналып, ҡат-ҡат эшкәртелеп шымартылған, һәр осраҡҡа яраҡлаштырылып универсаллаштырылған. Әкиәттәрҙең образлы йөкмәткеһе барған һайын үҙенең тарихи ерлегенән нығыраҡ айырылған (шуға ла ул хәҙер беҙгә уйҙырманың да уйҙырмаһы һымаҡ күренә), әммә уның идея-эстетик мәғәнәһе, сәнғәтсәнлек сифаты кәмемәгән,— киреһенсә, талантлы әкиәтселәр ижадында асыҡ һыҙатланыш алған.

Әкиәттәрҙең бөтә йөкмәткеһе һәм художество туҡымаһы баштан-аяҡ антитезағы ҡоролған. Бында персонаждар ҙа, урын-ара, ваҡыт, юл төшөнсәләре лә үҙ-ара ҡапма-ҡаршылыҡ нисбәтендә: дошман заттар йәшәгән ерҙәр бынан бик алыҫта, ҡалын-ҡалын ҡарурман, әллә күпме тау-таш, диңгеҙ һәм даръялар аръяғында; герой китеп бара, китеп бара, бара торғас артына әйләнеп ҡараһа,— тышау (уҡлау) буйы ғына ер киткән булып сыға. Иң ҡыҙығы шулдыр, моғайын: әкиәт батыры өйҙән нисә йәшендә сығып китһә, күпме ғүмер үтмәһен,— шул йәшендә әйләнеп ҡайта. Улай ғына ла түгел, ҡайһы бер әкиәт батыры, мәҫәлән, Оморҙаҡ, майҙанда көрәшеп, батша ҡыҙын ала, тыуған еренә ҡайтышлай улы тыуа, уныһы (яңы тыуған малай) һыу аша сығармаған аждаһаны үлтерә, күрше батша майҙанында атаһы еңә алмаған батырҙы еңеп, батша ҡыҙын ала; унан ҡайтышлай ейәне тыуа, быныһы инде дейеү ғәскәрен ҡырып, дейеү ҡыҙын ала. Бейеш батырға үҙе киткәс тыуған улдары ярҙамға килә, Юлбатты ла шулай уҡ улы ҡаршы ала һ.б. Башҡорт әкиәттәренең береһендә генә лә һаҡал-мыйыҡ үҫтергән батырҙарҙың күренмәүе, «Мең башлы аждаһаны еңгән егет» геройҙарының әкиәт аҙағынаса «малай» тип һөйләнеүе фольклорҙа ваҡыт-ғүмер төшөнсәһенең ифрат шартлы булыуын иҫкәртә.

Образдар араһында контраслыҡ бөтә персонаждарҙың геройға (уның аша — кеше тормошона) йә ыңғай, йә кире мөнәсәбәтендә күренә: герой һәм дошман зат, ысын герой һәм ялған герой, герой һәм батша ҡыҙы, кәмһетелгән кесе ул һәм көнсөл ағайҙар... Әкиәт бер ваҡытта ла теге йәки был персонаждың ҡылығын анализлап, психологик яҡтан дәлилләп тормай, барыһын да халыҡ аңында ҡабул ителгәнсә һүрәтләй: дейеү ҡатын-ҡыҙҙарҙы урлай, сөнки, боронғо халыҡ ҡарашынса, уның холҡо шулай; батыр дейеүҙәргә, башҡа дошман заттарға ҡаршы сыға, сөнки ифрат ҙур көс талап иткән был эште ғәйрәтле баһадирҙар ғына башҡара ала; ат геройға ярҙам итә, сөнки ул — ғүмер-баҡый ир-егеттәрҙең тоғро юлдашы һ.б. Һәр персонаждың эше-хәрәкәте уның ана шулай әүәл-әүәлдән халыҡ аңында

төҫмөрләнгән характер үҙенсәлеге менән эстән дәлилләнә. Эпизодтар ғәҙәттә көтөлмәгән ҡапма-ҡаршылыҡҡа нигеҙләнеп, үҙ-ара сәбәп һөҙөмтә бәйләнешендә һүрәтләнә, сюжет үҫеше ҡатмарланғандан ҡатмарлана бара.

Әкиәттәрҙең башланғыс өлөшөндә контраслыҡ ғәҙәттә йә рухи, йә социаль характерҙа. Батырҙар тураһындағы байтаҡ әкиәттәрҙә, мәҫәлән, әбей менән бабай балалары булмауға зарланалар. Йыш ҡына был уларҙың берҙән-бер ҡайғыһы итеп бирелә: «Тик балалары булмау ғына уларҙың эстәрен бошороп торған да торған, ти» («Ҡамыр батыр»). «...Икәүләп кенә бик матур итеп донъя көткәндәр. Быларҙың алты ҡолас оҙонлоҡта ала бейәләре булған, ти. Шулай ҙа күңелдәре бик китек булған. Ни өсөн тиһәң, ҡатын бер ҙә бала тапмаған. Балалары булмай ҙа ҡуя икән быларҙың» («Алтын ҡауырһын»).

Донъяла етешмәгәнде эҙләүсе батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә башланғыс антитеза бигерәк тә асыҡ күренә. «Дарыу эҙләүселәр», «Әбелхәсән батыр» тигән әкиәттәрҙә, мәҫәлән, әбей менән бабайҙың улдары ла бар, байлыҡтары ла етерлек — тик күҙ (йән) дарыуҙары юҡ. «Алтындуға батыр», «Юлбат», «Бәләкәй Яҡуп» ише әкиәттәрҙә ҡарттарҙың байлығы иҫәпһеҙ-хисапһыҙ булыуы өҫтөнә улдары ла күп: 7, 30, 40, «Туҡһан бер батыр» әкиәтендә — хатта 91, ләкин береһенең дә ҡатыны юҡ. Бында инде контраслыҡ икенсе төр антитеза, атап әйткәндә, рухи һәм социаль ҡапма-ҡаршылыҡтар менән ҡатмарлаштырыла: кесе ул зирәклеге, булдыҡлығы менән ағайҙарға ҡаршы ҡуйыла, улар күмәкләп саҡ башҡарған эште ул бер үҙе башҡара. Өйләнергә кәрәклекте лә башлап ул әйтә һ. б. Әммә шуға ҡарамаҫтан, мал ҡарарға тип, ул өйҙә ҡалдырыла, ә аталары менән бергәләп бер ата ҡыҙҙарын яусыларға киткән булдыҡһыҙ ағайҙар тиҫкәрелектәре арҡаһында ярамаған урында ҡунырға туҡтап, кесе туғандарына тигән ҡыҙҙы аждаһаға (йәки ялмауыҙға) биреп ҡайталар. Был әкиәттәрҙә сюжет ана шулай төйөнләнә, батыр һис көтмәгәндә ауыр юлға сығырға мәжбүр була.

Хәҙер теге балаһыҙ ҡартайған әбей менән бабайға килһәк, улар аңғармаҫтан-аңламаҫтан балалы булалар. Уны «мәрәкә өсөн» йә әбей үҙе ҡамырҙан яһап, ҡыйыҡ башына ҡояшҡа (йәки көбө эсенә йылыға) ҡуя ла, шунда балаға йән ҡуна; йә «яҙмыш (алла) бүләк итә», йә әбей тылсымлы орлоҡ (емеш) ашап бала таба һ.б. Бында әкиәт фантазияһы һис ниндәй сама менән дә, аҡыл менән дә сикләнмәгән. «Тубыҡ батыр» тигән әкиәттә, мәҫәлән, герой хатта яңғыҙ йәшәгән әбейҙең тубыҡ шешенән ярала, тыуыу менән әбейҙең алдына һикереп менеп ултырып, уны талап имә лә башлай. Ҡыҫҡаһы, әкиәт батыры нисек кенә донъяға килмәһен, ҡартайған көндәрендә әбей менән бабайҙың бала табыуы — һәр яҡтан ғәҙәткә ҡаршы күренеш.

Серле тыуған батырҙар әкиәтендә контраслыҡ артабан икеләтә арта, ҡатмарлаша. Беренсенән, бик теләп алынған был бала үтә «әҙәпһеҙ» булып сыға: ул йыл үҫәһен, көн үҫеп, уйнарға сығып та китә һәм тәүге көнөндә үк малайҙарҙың ҡул-аяғын һындырып бөтә,

йорт-ҡаралтыларҙы емерә, мал-тыуарҙы үлтерә һ.б. Герой үҙенең тыйнаҡһыҙлығы, холоҡһоҙлого арҡаһында ата-әсәһе һәм ауылдаштары менән конфликтҡа инә.

Икенсенән, ек күргән был малайҙан ҡотолорға теләп, ҡарттар үҙҙәре лә гуманизмға ҡаршы эш башҡаралар: уға хәтер йомоштар ҡушалар (урманда айыу ашар, йәнәһе) йәки биләүҙә сағында уҡ юл сатына илтеп ташлайҙар...

Айыу, бүре, балыҡ ҡатнашлығында йәки тылсым ярҙамында тыуған йәки ҡамырҙан яһалған балалар тотемизм, анимизм һ.б. боронғо ҡараштарға бәйле булһа, бындай геройҙарҙың аҙаҡ ситкә ҡыуылыуы, үлемгә хөкөм ителеүе һ.б. шулай уҡ бик боронғо бер ғөрөф-инициация (үҫмерҙе ир ҡорона күсереү, уға тормош серҙәрен асыу, никахҡа әҙерләү) йолаһы менән бәйләнгән булырға тейеш. «Таҙ батыр» әкиәтендә, мәҫәлән, «насар» төш күргәне өсөн өйҙән ҡыуылған кесе улдың артабан дейеү тарафынан утта яндырып сынығтырылыуы, тылсымлы әүерелеүҙәр оҫталығына эйә булыуы шул йоланы бик хәтерләтә.

Боронғо ғөрөфтәрҙе сағылдырыуы яғынан «Ҡырҡатар батыр» әкиәте ҡыҙыҡлы. Ул хәҙерге кешегә бик сәйер тойолған шундай ҡапма-ҡаршылыҡ менән башлана: Ҡырҡатар үҙенә кәләш алғаны өсөн, кешеләр уны күралмайҙар. Шуға түҙә алмайынса, батыр бынан ҡатынын алып сығып китә лә, бер йылға башында икеһенә ике йорт һалып, ырыуҙаштарынан ситтә йәшәй башлай.

Һорау тыуа: ниңә кәләш алғаны өсөн Ҡырҡатарҙы ырыуҙаштары ситкә тибә? Ниңә айырылып киткәс тә ул бисәһе менән бер өйҙә түгел, ә айырым йәшәй?

Билдәле булыуынса, матриархат дәүерендә бер ырыу ирҙәре икенсе ырыуҙағы ҡатын-ҡыҙҙар менән генә никахлаша ала (дуаль экзогамия); әммә быны ысын мәғәнәһендә даими никах тип булмай әле. Сөнки, беренсенән, ирҙәр — үҙ ырыуында, ҡатындар үҙ ырыуында айырым (дислокаль) йәшәй, йәғни йәше еткән ир-ат теге ырыуға барып, «кейәүләп» кенә йөрөй. Икенсенән, парлашыу, ике яҡ өсөн дә тиң дәрәжәлә ирекле: ир кеше теләһә ниндәй ҡатын менән енеси мөнәсәбәткә инә алған кеүек, быға ҡатын-ҡыҙҙың да шундай уҡ хоҡуғы бар...

Ҡырҡатар батыр ана шул ғөрөфтө боҙа: беренсенән, кәләшен был ырыуға алып ҡайтып, «башҡа һыймаған» эш эшләй; икенсенән, үҙе өсөн генә кәләш алып, ул был ҡатынға башҡа ирҙәрҙең хоҡуғын инҡар итә. Тәүтормош-община көнкүрешендә ҡанунлашҡан ғөрәфкә үҙ ихтыярын ҡаршы ҡуйып, Ҡырҡатар ана шулай рухи батырлыҡ күрһәтә. Тап ошо һыҙаты, ошо ҡылығы менән ул ырыу коллективында ғәҙәттән тыш шәхес булып алға баҫа.

Артабан шуныһы ҡыҙыҡ: Ҡырҡатарҙың кәләш алырға йөрәге етһә лә, уның әле бисә менән бер өйҙә йәшәргә башы етмәй. Дөрөҫ, хәҙер инде уларҙы ике ырыу араһындағы тау-таштар, әллә күпме урман-далалар айырып тормай. Улар хәҙер бер һыу буйында ҡара-ҡар-

шы ғына һалынған ике өйҙә йәшәйҙәр. Ләкин ара нисек кенә яҡын булмаһын,— ғәмәлдә иһә был барыбер элеккесә дислокаль йәшәү формаһы әле.

Ҡырҡатар батыр, әлбиттә, үҙ иркенә, үҙе теләгәнсә йәшәмәксе. Әммә тормошта тамыр йәйеп, ҡанға һеңешкән ғөрөфтәрҙән ҡасып ҡына ҡотолоп булмай икән. Әкиәт шул уҡ ғөрөфкә бәйле яңы ҡаршылыҡтарҙы аса. Ҡырҡатар ҡатынына йылғаға йөн ташламаҫҡа ҡуша, ә ҡатыны ташлай...

Хәҙерге әкиәтсе быны̧ң төп сәбәбен, әлбиттә, белмәй: күптән онотолған инде ул. Ә сәбәп иһә, баяғы ғөрөфкә бәйләнгән. Ҡатын иренең һүҙен тотмай шуның өсөн, сөнки ул, матриархат ырыуында тәрбиәләнгән ҡатын, әле ир ҡушҡанса йәшәй белмәй, үҙен һаман ирекле һанай; йылғаға бер иләк ҡауырһын ташлап, ул быны̧ң менән түбәндәгеләргә үҙенең бында, йылға башында, йәшәүе тураһында хәбәр итә, ғәҙәттәгесә сигнал бирә...

Әкиәттәрҙе тарихи күҙлектән анализлай китһәң, уларҙың ана шулай бик ҡыҙыҡлы ерлеген, тәрәнгә һуҙылған тамырҙарын, тәүге сығанаҡтарын асырға мөмкин.

Ситкә ҡыуылған йәки үлемгә хөкөм ителгән батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең күбеһендә прологта билдәләнгән конфликттың сюжет үҫешенә туранан-тура ҡыҫылышы юҡ. «Ҡарағанда батша менән Ҡыҙ батыр» һәм «Ғәҙел батша» әкиәттәрендә генә беҙ тәүге конфликттың аҙаҡ ғәҙел хәл ителеүен күрәбеҙ. «Ҡырҡатар батыр» әкиәтендә ул, ҡатындың ир һүҙен тотмауы менән үҫтерелеп, көнкүрештә матриархат ғөрөфтәре менән патриархат йолалары бәрелеше формаһында ҡатмарлаша, сюжет ир хоҡуғының еңеүе менән тамамлана. Бүтән әкиәттәрҙә иһә тәүге конфликт гүйә онотола, артҡы планда тороп ҡала. Юлға сыҡҡан батыр көтөлмәгән икенсе бәләгә осрай һәм, шулай итеп, прологтағы хәлдәргә бәйләнешле булмаған, яңы сюжет башлана. «Алтын ҡауырһын» һәм «Һыу айғыры» әкиәттәрендә, мәҫәлән, геройҙың яңы̧нан-яңы һынауҙарға дусар булыуы бөтәһенән элек уның юлда осраған ҡауырһынды алыуына бәйләнгән. Был сәбәптә лә контраслыҡ күренә: ат ҡауырһынды алмаҫҡа ҡуша, бәлә-ҡазаһы күп булыр, ти; ә егет ала һәм, ысынлап та, артабан ҡомһоҙ бер батшаға юлығып, уның береһенән береһе хәтәрерәк йомоштарын үтәй.

Прологта «тыйнаҡһыҙ» малай илдән ҡыуыла, үлемгә хөкөм ителә, ә ул күп төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп, аҙаҡ сиктә батша булып ултыра, ғәҙел тормош урынлаштыра, йәғни боронғо халыҡ аңында бәхет һаналған бөйөклөккә ирешә, юғары затҡа әйләнә. Шулай итеп, пролог менән эпилог үҙ-ара социаль контраслыҡ нисбәтендә алынып, икеһе ике полюсты кәүҙәләндерә.

Антитеза алымы ҡайһы бер осраҡта парадоксаль күренештәр тыуҙыра. Миҫалға баяғы 30, 40, хатта 91 уллы әбей менән бабайҙы иҫкә төшөрөгөҙ. Тарихи күҙлектән ҡарағанда, шул тиклем күп уландарҙың бергә йәшәүенә, күмәкләшеп-бергәләшеп донъя көтөүҙәренә

артыҡ ғәжәпләнмәҫкә лә мөмкин. Сөнки бында, әлбиттә, патриархаль ғаилә общинаһы, йәиһә ырыу-ара коллективы сағыла булыр. Этнографтар төрки халыҡтарында, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, ундай ҙур патриархаль ғаиләләрҙең һәм, бер нәҫелдән ойошоп, хужалыҡ эштәрен бергә алып барған, көнкүрештә үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә йәшәгән ырыу-араларҙың XVIII быуат ахрынаса һаҡланыуын раҫлайҙар. Парадокс икенсе нәмәлә: иң һуңғы ҡустылары тыуғанда, был 30,40,90 ағай-эне нисә йәштә булған да, нисек улар шулай ҡартайғансы буйҙаҡ «егет» булып ҡалғандар?..

Икенсе миҫал. Алтындуға батыр, Бәләкәй Яҡуп, Бейеш батыр булдыҡһыҙ ағалары тарафынан биреп ҡалдырылған кәләштәрен алып ҡайтыр өсөн аждаһаға (йәки ялмауыҙға) киләләр. Батырҙарҙың ғәҙәттән тыш ғәйрәтле булыуҙарын иҫәпкә алһаҡ, улар, әлбиттә, килеү менән теге яуыҙды үлтерергә лә кәләштәрен алып ҡайтып китергә тейештәр ине. Аҙаҡта улар шулай итәләр ҙә. Ләкин башта улар дошмандың бик хәтәр йомошон үтәргә күнәләр. Бындай хәлдәр «Таңһиҙәр батыр» һ.б. экиәттәрҙә лә сағыла.

Айыҡ ҡарашҡа үтә ғәжәп, бөтөнләй логикаһыҙ тойолған бындай парадокстарҙы халыҡ ижадында йыш осратырға мөмкин. Әҙәби әҫәрҙә булһа, ул ҙур кәмселек һаналыр ине. Ә бында уға экиәтсенең дә, тыңлаусының да бер ҙә иҫе китмәй, ҡаршылыҡты улар хатта һиҙмәйҙәр ҙә төҫлө: береһе һөйләүен, икенсеһе мөкиббән тыңлауын ғына белә, барыһын да бәхәсһеҙ ҡабул итә. Сөнки экиәт законы шулай. Ныҡлабыраҡ ҡараһа, экиәттәрҙең мауыҡтырғыслығы ла персонаждарҙың ҡылыҡтарын анализлап тормайынса, гел генә контраст һүрәтләүгә, шул арҡала йә үтә бер ҡатлы күренгән, йә айыҡ ҡарашаҡыл менән һис һыйышмаған ғәжәп хәлдәргә бәйләнгән. Килтерелгән миҫалдарҙа беҙ экиәт эстетикаһының шул үҙенселеген бик асыҡ күрәбеҙ. Ағайҙарҙың күмәген бер юлы кесе ҡустыға ҡаршы ҡуйып, экиәт тегеләрҙең барыһының да булдыҡһыҙлығынан көлә, бынығын иһә күккә күтәрә, идеаллаштыра.

Халыҡ ижадында кесене (кинйә улды, кинйә ҡыҙҙы) һәр яҡтан идеаллаштырыу — ғөмүмән, фольклор эстетикаһының мөһим законы ул. Экиәттәрҙә иһә был закон бигерәк тә ҙур урын ала. Мәҫәлән, игеҙәк батырҙар йәки бер туған ике (ҡайһы саҡта өс) ағай эне тураһындағы экиәттәрҙә ҡустының мөһимерәк эштәр башҡарыуы, «Оморҙаҡ» ише әҫәрҙәрҙә ул менән ейәндәрҙең ата һәм олатайҙан көслөрәк булып сығыуы асылда шул уҡ эстетик законға бәйләнгән.

«Хәсән менән Хөсәйен», «Алсуҙар менән Кирсуҙар» экиәттәре, көс һынашырға тип, дейеүҙәргә сығып киткән аталарҙы юмористик планда һүрәтләүҙәре менән ҡыҙыҡлы. Бында аталар образының көлкөлөлөгө форма менән йөкмәтке нисбәтенең боҙолоуына, эске ҡапмаҡаршылыҡҡа нигеҙләнгән.

Тылсымлы экиәттәрҙән айырмалы рәүештә, батырҙар экиәтендә персонаждарҙың портретын һүрәтләүгә лә бер аҙ ынтылыш һиҙелә. Был бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ һәм дошман заттар образында асыҡ күре-

нә. Ләкин бында ла әкиәтсе үҙенең ижад мөмкинлектәренә ирек бирмәй, бәлки шулай уҡ күбеһенсә контраст буяуҙар — традицион саралар менән эш итә. Ҡатын-ҡыҙ образына ҡарата, мәҫәлән, «бик матур булған, ти», «шундай һылыу, шундай һылыу, хатта иҫең китерлек (йәки күҙең ҡамашырлыҡ), ти», «бер бите ай, бер бите ҡояш (көн) кеүек, ти» ише арсеналға ингән дөйөм эпитеттар, космогоник сағыштырыуҙар ғына ҡулланылып, ҡыҙҙың сибәрлеген күҙ алдына баҫтырыу тыңлаусының үҙенә, уның эстетик тәжрибәһенә ҡалдырыла. Иыш ҡына ҡыҙҙың матурлығы уның исемендә кәүҙәләнә: Айһылыу, Көнһылыу, Барсынһылыу, Һыуһылыу, Гәүһәрташ, Яҡутташ һ.б. Шуға тағы «алтынсәсле» аныҡлауысы өҫтәлә.

Ҡайһы бер әкиәттәрҙә гүзәллек туранан-тура түгел, ә ҡыҙға геройҙың интим мөнәсәбәтен, ынтылышын һүрәтләү аша аңлатыла. Мәҫәлән, «Әхмәт батыр менән Ҡасим батыр» әкиәтендә геройҙың ҡыҙ батшаны үбергә теләп, үҙенсәлекле ярыш ойоштороуы, Әбелхәсән батырҙың сәңгелдәктә йоҡлап ятҡан алтын сәсле ҡыҙҙы ҡабат-ҡабат инеп үбеп сығыуы һ.б. Геройҙың бындай эше-хәрәкәте үҙенең комик кәүҙәләнеше менән ҡыҙҙың ысынлап та бик сибәр, хатта тәҡәт тыйып тора алмаҫлыҡ гүзәл булыуына ышандыра, эстетик тойғо уята.

Батырҙар әкиәтендә кире персонаждар ғәҙәттә ифрат ҡурҡыныс ҡиәфәттә алға баҫтырыла. Мәҫәлән: «Ҡамыр батыр: — Һине ҡотҡарырға килдем,— тип әйтеүгә, тышта, бик яман ел-дауыл ҡубып, күк күкрәне, йәшен-йәшнәне, ти. Шул арала бында әллә ҡайҙан, ер аҫтынан сыҡҡан кеүек, ҡот осҡос бер дейеү килеп тә баҫты, ти. Уның янында Ҡамыр батыр малай һымаҡ ҡына күренә, ти». («Ҡамыр батыр»).

«Өйгә инһәләр, мейес йыуанлыҡ бер әбей ултыра, ти. Сәстәре туҙған, үҙе шундай яман, ти». («Ҡарабәкәл»).

«Дейеү ҡотһоҙ була икән ул. Үҙе гел йөн генә, тырнаҡтары — бер сирек!» («Әхмәт батыр менән Ҡасим батыр»).

Ләкин быларҙы ла ысын мәғәнәһендә художестволы портрет тип булмай әле. Асылда тик контраслыҡҡа нигеҙләнгән бындай һүрәтләнештең эстетик тәғәйенләнеше — ҡот осҡос затҡа нисбәт аша геройҙың баһадирлығын күрһәтеү. Йәғни әкиәт батырҙары менән дошман заттар үҙҙәренең самаһыҙ көсө-ғәйрәте менән генә түгел, һыныҡиәфәттәре буйынса ла бер-береһенә ҡаршы ҡуйыла.

Был йәһәттән, күп әкиәттәрҙә ҡабатланғанса, батырҙың дейеү менән күпер төбөндә һуғышыу картинаһы бик характерлы. Бында ғәҙәти һынлы батыр ифрат дәү дошманға — өс, алты, ун башлы дейеүгә ҡаршы ҡуйыла. Дейеүҙең ел-дауыл ҡуптарып килеүе, был саҡ хатта тау-таштарҙың һелкенеүе дошмандың ибәтәйһеҙ ҙур булыуы өҫтөнә, ғәйрәтенең дә самаһыҙлығын күрһәтеп тора. Әммә шундай мифик зат ғәҙәти кеше нәҫеленән булған батырҙан еңелә. Етмәһә, Алтындуға батыр, мәҫәлән, өс дейеүҙе лә үлтереп, баштарын күпер бағанаһына теҙеп сыҡҡандан һуң: «Өс (алты, ун ике) башлы дейеү-

ҙе ун һигеҙ йәшлек әҙәм балаһы үлтерҙе»,— тип яҙыу ҡаҙаҡлап китә. «Юлбат» әкиәтенең 1939 йылда яҙып алынған тексында ла шуны уҡ күрәбеҙ. Был инде Кеше көсөнә ышаныу, уны данлау һымаҡ ҡабул ителә.

Әкиәт батырҙары йыш ҡына үҙҙәре лә — ғибрәт рәүештә ҙур кәүҙәлеләр, әлбиттә. Алп батыр һәм Һунаҡ менән Имрәкте генә ҡарағыҙ. Ә Ҡаһарман батыр һуң?.. Ләкин был осраҡта ла теге мифик зат ошо дәү батырҙан да дәүерәк итеп күрһәтелә. Мәҫәлән, ҡырҡ аршын буйлы Ҡаһарман батыр ҡырҡ дейеү тиреһенән ишелгән ҡырҡ аршын оҙонлоғо билбауы менән өй ҙурлыҡ дейеүҙәрҙе һуғып үлтереп бөткәс, ата (баш) дейеү янына килә. Быныһының буйы — 80 аршын, йыуанлығы 40 аршын, ә һәр бармағы үҙе бер кеше дәүмәле. Шул уҡ ваҡытта Ҡаһарман батыр таҫыллығы, иҫе-аҡылы менән дошман затҡа ҡаршы ҡуйыла (һуғышҡан саҡтарындағы диалогты ҡарағыҙ).

Батырҙар әкиәтендә антитеза алымы һүрәтләү саралары менән тығыҙ бәйләнгән. Был йәһәттән бигерәк тә гипербола ҙур әһәмиәткә эйә. Бында ботә нәмә гәҙәттәге сифаттарынан күпкә арттырып һүрәтләнә. Күн батырҙар йыл үҫәһен ай-көн үҫә, йыраҡ араларҙы ла, толпарға йәки хатта ҡырмыҫҡаға атланып, күҙ асып йомғансы үтә. Ҡамыр батыр үҙенә егерме ботлоҡ суйындан суҡмар ҡөйҙора, уның ныҡлығын үҙенең башына төшөрөп һынай. Ҡаһарман батырҙың буйы аршын менән үлсәнһә, Имрәктең алплығы — тау менән, тын алышы ел-дауыл менән тиңләштерелә. Тау батыр, Йүгерек, Күлуртлар ише ярҙамсы батырҙарҙың самаһыҙлығы шулай уҡ күҙгә бәрелеп тора.

Әкиәттәрҙә геройҙың буйы-һыны тураһында әйтелмәҫкә лә мөмкин. Әммә көс-ғәйрәт тигәнең унда ла сикһеҙ. Был, бер яҡтан, уның күп башлы дейеүҙәр, аждаһалар, башҡа мифик заттар менән алышыуында беленһә, икенсе яҡтан, гиперболик формалағы сағыштырыуҙарҙа белене. Мәҫәлән, Хоҙайбирҙе батыр Әхмәт батырға ярҙамға китеп барышлай, йыуан имәнгә терәлеп, бер мискә һыу эсмәксе була, ә нисә ҡолас йыуанлығы имән уның һөйкәлеүенән шартлап һына, ауған саҡта ел-дауыл ҡубып, әллә ҡайҙағы ике башлы батырҙың өй ҡыйығын осора.

Эйе, халыҡ ижадында художестволы фантазияның сиге юҡ. Әкиәт фантастикаһы, ул кәүҙәләндергән донъяның үтә шартлылығы, беренсенән, тәүтормош кешеһенең аңы тыуҙырған мифик заттарға һәм һәр төрлө тылсымлы мотивтарға, уйҙырма хәлдәргә бәйләнгән булһа, икенсенән, бөтә сюжеттың контраслыҡҡа ҡоролоп, гиперболик формаларҙа һүрәтләнеүе менән аңлатыла. Гипербола контраслыҡты көсәйтеп, фантастиклыҡты арттыра. Әммә уның художество функцияһы был түгел. Антитеза алымы кеүек, гипербола ла батырҙар образын нисек тә сағыуыраҡ итеп күрһәтеү өсөн ҡулланыла. Батырҙар әкиәтенең идея-эстетик айышы сюжет структураһынан

поэтик туҡымаға үтеп сыҡҡан ана шул ифрат күп тармаҡлы контраст төҫтәр, шуларға үрелгән сағыу биҙәктәр аша беленә.

Ысынбарлыҡ менән әкиәт араһы — ер менән күк араһы. Әммә был арауыҡ бушлыҡ түгел. Батырҙар әкиәтен ысынбарлыҡ менән боронғо халыҡтың яҡты идеалдары, бәхетле тормош тураһындағы хыялдары, өмөттәре тоташтыра. Күк көмбәҙендә йондоҙҙар Ҡояш яҡтыһынан нурланған төҫлө, әкиәт батырҙары Ерҙә йәшәгән халыҡтың быуындан быуынға ҙурая килгән эстетик идеалынан яҡтылыҡ алып, хыял күгендә балҡыйҙар.

Был төр әкиәттәр халыҡтың ғүмер ғүмергә һаҡланған иң мөҡәддәс хыялдарын, быуындан-быуынға көсәйә килгән социаль өмөттәрен ана шулай «ғәмәлгә ашырып» күрһәтәләр.

**Нур Зарипов**, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты.

## УРАЛ БАТЫР



Борон-борон заманда, Урал тауы ла, Ағиҙел дә әле юҡ саҡта, шыр урман эсендә йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Оҙаҡ ғүмер иткәс, әбей үлеп киткән, ә бабай береһе Шүлгән, икенсеһе Урал исемле ике үҫмер улы менән тороп ҡалған, ти.

Бабай һунарға йөрөгән, ә Шүлгән менән Урал өйҙә ҡалыр булған. Айыу тиһәң — айыуҙы, бүре тиһәң — бүрене, арыҫлан тиһәң — арыҫланды тере көйө тотоп алып ҡайтыуҙы бабай уйынға ла күрмәгән, ти,— ул шулай көслө булған. Ни өсөн тиһәң, бабай һунарға гел генә бер ҡалаҡ йыртҡыс йәнлек ҡаны эсеп китә икән. Шул ҡанды эсеп алдымы — уға ана шул йыртҡыстың көсө өҫтәлер булған.

Йола буйынса, йыртҡыс кейекте үҙ ҡулы менән үлтергән кешегә генә уның ҡанын татып ҡарарға яраған. Шуның өсөн бабай үҙенең улдарына: «Бәләкәйһегеҙ әле, кейек ауларға йәшегеҙ етмәгән; минән күрмәксе турһыҡтағы ҡанға ауыҙығыҙҙы тейҙерәһе булмағыҙ тағы — һәләк булырһығыҙ» — тип, гел генә киҫәтә торған булған.

Берҙән-бер көндө, аталары һунарҙа саҡта, Шүлгән менән Урал янына бик һылыу бер ҡатын килгән дә:

— Атайығыҙ менән бергә һунарға йөрөмәйенсә, ниңә өйҙә ултыраһығыҙ?— тип һораған, ти.

Шүлгән менән Урал:

— Иөрөр инек тә, атайыбыҙ алып бармай, йәшегеҙ етмәгән әле, тип, өйҙә ҡалдыра,— тигәндәр, ти.

Шунан һуң теге ҡатын:

— Өйҙә ултырып, йәш еткереп булалыр шул!— тип көлгән, ти.

— Ә нәмә эшләргә һуң?

— Ана турһыҡтағы ҡанды эсергә кәрәк,— тигән, ти, теге ҡатын.— Шуны бер генә ҡалаҡ эсеп алдыңмы — бер көн эсендә үк ир еткән егеткә әйләнәһең, арыҫландай көслө булаһың.

Шүлгән менән Урал:

— Атайым ҡан һалынған турһыҡ янына яҡын барырға ла ҡушманы. Эсһәгеҙ — һәләк булырһығыҙ, тине. Беҙ атайыбыҙҙың һүҙен тотабыҙ,— тигәндәр, ти.

Шунан теге ҡатын:

— Һеҙ бәләкәйһегеҙ шул әле. Атайығыҙ ни әйтһә, шуға ышанаһығыҙ,— тигән, ти.— Был ҡанды эсһәгеҙ, һеҙгә арыҫландай көслө егеттәргә әүерелеп, рәхәтләнеп һунарға йөрөргә, ә атайығыҙға өй һаҡлап ултырырға тура килә. Бына шуны белеп алған да, атайығыҙ турһыҡтағы ҡанды үҙе генә эсеп йөрөй, ә һеҙгә күрһәтмәй ҙә... Ихтыяр үҙегеҙҙә, әйттем дә бөттөм,— тип, теге һылыу ҡатын юҡ та булған, ти.

Был ҡатындың әйткәненә ышанып, Шүлгән ҡанды тәмләп ҡарамаҡсы булды, ә Урал, атаһының һүҙен ныҡ тотоп, ҡанға яҡы да барманы, ти.

Шүлгәндең турһыҡтан бер ҡалаҡ ҡанды алып йотоуы булды — айыуға әүерелеүе булды, ти. Шунда уҡ теге һылыу ҡатын инеп, Уралға:

— Бына күрҙеңме — туғаның ни эшләне!— тип һыны ҡатын көлә икән, ти. Үҙе шунда уҡ: — Хәҙер мин уны бүре яһайым!— ти икән.

Ҡатын айыуҙың маңлайына бер сирткәйне — теге бүрегә әйләнде, ти. Бүренең маңлайына бер сирткәйне— арыҫлан булды, ти. Шунан теге ҡатын ана шул арыҫланға атланып алды ла үҙ юлына саптырып сыҡты ла китте, ти.

Был ҡатын тигәнебеҙ юха йылан булған икән. Һылыу ҡатын ҡиәфәтенә ингән ана шул юха йыландың хәйләһе арҡаһында Шүлгән үҙенең кешелеген ғүмергә юғалтып, кейек булып ҡалған; бер ҡараһаң — айыу, икенсе ҡараһаң — бүре йәки арыҫлан булып йөрөгән-йөрөгән дә, йөрөй торғас, бер күлгә батып үлгән, ти.

Ә Урал тиңдәше юҡ батыр егет булып үҫеп еткән. Ул, атаһы кеүек, һунарға йөрөй башлаған мәлдә генә тирә-яҡты үлем ҡурҡынысы солғаған: күлдәр, йылғалар ҡороған, үләндәр ҡыуарған, ағас япраҡтары һарғайып бөткән, тын алыуы ауырлашҡан. Кешеләр үлгән, малдар ҡырылған. Донъяны ҡыҙырып, бөтә тереклекте ҡоротоп йөрөгән Әжәлгә ҡаршы бер кем бер ни эшләй алмаған.

Урал батыр Әжәлдең үҙен тотоп үлтереү хаҡында хыяллана башлаған, ти. Атаһы уға үҙенең атаһынан ҡалған, һелтәгәндә йәшен уттары сығара торған алмас ҡылысын биргән дә:

— Был ҡылыс менән бөтә нәмәне ҡыйратып була,

тик Әжәлде генә үлтереп булмай. Шулай ҙа һин уны ал, кәрәге булыр,— тигән.— Ҡайҙалыр, бик алыҫта Тереһыу тигән бер шишмә ағып ята икән. Ана шул Тереһыуҙың бер тамсыһы үлеп ятҡанды терелтә, ауырып ятҡанды һауыҡтыра, ә Әжәлде үлтерә икән. Әжәлде шул шишмә һыуына һалырға кәрәк. Унан ҡотолоу өсөн башҡа әмәл юҡ,— тигән, ти.

Урал атаһы биргән ҡылысын тағып, башы һуҡҡан яҡҡа сығып китте, ти. Эй китте, эй китте, ти, был, бара торғас, ете юл сатына килеп сыҡты, ти. Шунда ул, бер ҡартҡа тап булып:

— Бабай, Тереһыу шишмәһенә ҡайһы юл менән барырға?— тип һораны, ти. Бабай ете юлдың береһен күрһәткәс, Урал батыр:— Ә ул бынан алыҫмы, нисә көнлөк юл?— тип һораны, ти.

Шунан бабай:

— Уныһын инде, балам, мин әйтә алмайым. Ҡырҡ йыл буйы мин ошо ерҙә уҙғынсыларға Тереһыу юлын күрһәтеп торам, иллә мәгәр ошо ғүмер эсендә унан әйләнеп ҡайтҡан бер кешене күргәнем юҡ әле,— тигән, ти. Быға өҫтәп, был бабай йәнә шулай тигән:— Улым, бер аҙ барғас, йылҡы өйөрөнә осраһың, шул өйөрҙә бер Аҡбуҙат булыр. Булдыра алһаң, шуны менеп ал.

Урал батыр, бабай менән хушлашып-аманлашып, Тереһыу юлы менән китеп барҙы, ти. Китә торғас, теге бабай әйткән йылҡы өйөрөнә барып сыҡты, ти. Ҡараһа — йылҡы өйөрө араһында:

Башы йүгән күрмәгән,
Һыртына эйәр теймәгән;
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған;
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Еңел, текә тояҡлы;

Һарымһаҡтай аҙаулы,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы;
Урайы ҡуш, яңағы ас,
Ҡыйғыр-бөркөт һабаҡлы;
Муйындары бер ҡолас,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы;
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сылатыр;
Елһә, ҡоштай елпенеп,
Артында саң уйнатыр
Аҡбуҙат тора ине, ти.

Урал Аҡбуҙатҡа иҫе китеп ҡарап торҙо-торҙо ла әкрен генә янына барҙы, ти. Аҡбуҙат бер боролоп ҡараны ла ятһынмай-нитмәй тик торҙо, ти. Шунан Урал

йәһәт кенә Аҡбуҙҙы менеп алып, саптырып китмәксе булғайны, Аҡбуҙ асыуланып Уралды шул тиклем бейеккә сөйөп ебәрҙе, ти, кем, теге атылып төшөп, биленә тиклем ергә батты, ти. Урал тырышып-тырмашып батҡан еренән сыҡты ла яңынан Аҡбуҙатҡа барып атланды, ти. Аҡбуҙ Уралды йәнә сойорғотоп ебәрҙе, ти. Был юлы Урал ергә тубыҡтан батты, ти. Ул тағы тырышып-тырмашып тора һалды ла йәнә Аҡбуҙға атланып, уға талпан һымаҡ йәбешеп алды, ти. Аҡбуҙ, күпме генә тырышмаһын, был юлы өҫтөндәге Уралды осортоп төшөрә алманы, ти. Шунан Аҡбуҙ Уралды баш тартҡан яҡҡа ҡарап, елдереп алып сыҡты ла китте, ти.

Эй бара, ти, Урал, эй бара, ти. Оҙон-оҙон яландарҙы, тау-таш ерҙәрҙе, соҡор-саҡыр урындарҙы үтте, ти. Бер ҡара урмандың уртаһына еткәс, Аҡбуҙ туҡтаны, ә Урал, ни булды икән, тип, ергә һикереп төштө, ти. Шул ваҡыт Аҡбуҙ, телгә килеп: «Беҙ хәҙер Тереһыу юлын бүлеп ятыусы туғыҙ башлы дейеү пәрейе янына килеп еттек. Һиңә унын менән алышырға тура килер. Ялымдан өс бөртөк ҡылымды алып ҡал. Кәрәк булһам, шуларҙы өтәрһәң дә, мин килеп етермен»,— тип әйтте, ти.

Урал Аҡбуҙҙың өс бөртөк ҡылын өҙөп алды, ә Аҡбуҙ шунда уҡ юҡ та булды, ти.

Урал, ни эшләргә, ҡайҙа барырға, тип аптырап торғанда, арҡаһына ауыр тоҡ йөкмәгән бик һылыу бер ҡыҙ уҙып барғанын күреп ҡалды, ти. Урал, ҡыҙҙы туҡтатып:

— Эй, һылыу, ҡайҙа китеп бараһың? Тоғоңда ни нәмә ул, бик ауыр күренә?— тип һораны, ти.

Шунан ҡыҙ илай-илай үҙ ҡайғыһын һөйләп бирҙе, ти. Ҡарағаш исемле был ҡыҙҙы күптән түгел генә дейеү урлап алып килеп, үҙенә ҡол иткән икән. Ҡарағаш, туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһына уйнар өсөн, иртәнән кискә саҡлы йылға буйынан ҡырсынташ ташый икән. Урал, ҡыҙҙы йәлләп китеп:

— Ҡана, һылыу, тоғоңдо үҙем күтәрәйем,— тигәйне, Ҡарағаш уға:

— Юҡ-юҡ, егет, минең менән бергә бараһы булма, дейеү һиҙеп ҡалһа, үҙеңде шунда уҡ юҡ итер бит!— тип әйтте, ти.

Әммә Урал, үҙенекен итеп, таш тултырылған тоҡто туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһы йыйылышып торған урынға хәтле күтәреп алып барҙы, ти. Уралдың ташты ергә ҡойоуы булды — дейеү балаларының берберенә таш атышып уйнап китеүҙәре булды, ти. Улар

атышып уйнаған арала Урал эргәләге бер ҡарама ботағына бау менән ат башы хәтле бер таш аҫып ҡуйҙы ла үҙе, ҡасып-боҫоп ҡына, дейеү йәшәгән мәмерйә алдына үтеп китте, ти.

Дейеү балаларының уйындары оҙаҡҡа барманы — таштары төрлө яҡҡа атылып, юғалып бөттө, ти. Шунан улар оҙон бау менән ҡарамаға аҫып ҡуйылған ҙур ташты күреп ҡалып, шуның тирәһенә йыйылдылар, ти. Береһе, мәрәкә күреп, ташты атындырып ебәргәйне, таш кире килеп, тегене һуғып йыҡты, ти. Дейеү малайы йығылған урынынан асыуланып тора һалып, ташты бөтә көсө менән осорта һуҡҡайны, таш был юлы дейеү малайының башын иҙә һуғып уҡ ҡуйҙы, ти. Башы ярылған туғанының үсен алмаҡ булып, ташты дейеүҙең икенсе малайы һуғып ебәрҙе, ти. Ләкин уныһы ла шунда уҡ башы ярылып, йән бирҙе, ти. Туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһы ошолай, береһе артынан береһе ҡырыла торһон, беҙ дейеүҙең үҙенә күсәйек әле.

Юлдың тауҙы киҫеп үткән ерендә генә, бер ҡараңғы мәмерйә алдында, туғыҙ башлы дейеү ята ине, ти. Тирә-йүне әҙәм һөйәктәре менән тулы, ти. Урал батыр алыҫтан уҡ:

— Эй, дейеү, юл бир, мин Тереһыуға китеп барам! — тип һөрәнләне, ти.

Дейеү быға бер ҙә иҫе китмәй генә, юлға арҡыры төшкән көйө ята бирҙе, ти. Урал батыр йәнә: «Юл бир!» — тип ҡысҡырғайны, дейеү, асыуы килеп, Уралды тыны менән үҙенә тартып ала башланы, ти. Урал батыр дейеү ҡырына килеп баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды, ти. Шулай ҙа ҡаушап ҡалманы, ғәйрәтен йыйып, дейеүгә өндәште, ти:

— Алыштанмы, сабыштанмы?

Дейеү, бындай ҡыйыу егеттәрҙе бик күп күреп тә, быға са һис тә еңелмәгәнлектән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Минең өсөн барыбер. Нисек үлергә теләһәң, шулай булһын, — тип яуап ҡайтарҙы, ти.

Шунан былар тауҙың иң ҡалҡыу еренә менеп алдылар ҙа тирләп-бешеп көрәшә башланылар, ти. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, ти, былар, көрәшә торғас, төш ауып, көн кискә һарҡты, ти. Бына бер заман дейеү Уралды күтәреп алып ырғытты, ти. Урал биленән ергә батты, ти. Шунан дейеү уны батҡан еренән тартып сығарҙы ла йәнә көрәшә башланылар, ти. Дейеү Уралды йәнә атып бәрҙе, ти. Был юлы инде Урал муйынынан ергә батты, ти. Дейеү уны ике ҡолағынан тотоп тартып сығарҙы ла, яңынан көрәшә башланылар, ти.

Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, ти, былар, көрәшә торғас, кис булып эңер төшә башланы, ти. Бына бер заман әллә кем булып ирәйеп йөрөгән дейеүҙе Урал елтерәтеп күтәреп тә алды, быраҡтырып та ебәрҙе, ти. Дейеү биленән ергә батты, ти. Шунан Урал уны батҡан еренән тартып сығарҙы ла йәнә көрәшә башланылар, ти. Урал дейеүҙе тағы элеп алды ла һелкеп һалды, ти. Был юлы дейеү муйынынан ергә батып, туғыҙ башы туғыҙ яҡҡа ҡарап һерәйеп ҡалды, ти. Урал дейеүҙе тартып сығарҙы ла яңынан көрәшә башланылар, ти. Дейеү алан-йолан ҡаранырға ла өлгөрмәне, Урал уны ҡапыл элеп алып, йән асыуы менән шул хәтле атып бәрҙе, ти, дейеү ергә һеңде лә ҡуйҙы, ти. Яуыз дейеүҙең башына ҡиәмәт килеүе шул булды, ти.

Ҡарағаш, бисара егеттең һөйәктәрен йыйып алып, күмеп ҡуяйымсы тип, тау башына менһә, Уралды һаусәләмәт көйө күреп, шатлығынан илап ебәрҙе, ти. Шунан ул, бөтөнләй ғәжәпкә ҡалып:

— Дейеү ҡайҙа китте һуң? — тип һораны, ти.

Урал батыр:

— Дейеүҙе мин ергә һеңдерә һуҡтым, — тип әйтеп тә өлгөрмәне, улар баҫып торған урындан өс-дүрт аҙым ғына ситтәрәк бөркөлөп-бөркөлөп төтөн күтәрелеп сыҡты, ә төтөн артынан ялҡын сыға башланы, ти.

Быны күреп, Ҡарағаштың:

— Был ни хәл? — тип һорауына, Урал батыр:

— Мин ошо урында дейеүҙе ер аҫтына тыҡҡайным. Ер был хәшәрәттең емтеген үҙенең ҡуйынына алыуҙан ерәнде, күрәһең. Бына шуға күрә ул янып, төтөнө сығып ята, — тип яуап бирҙе, ти.

Был тау ошо яныуынан туҡтамаҫ булды, ти. Шул көндән алып уны Янғантау* тип йөрөтә башланылар, ти.

Дейеүҙең башына еткәс, Урал батыр был тау башында оҙаҡ торманы, ти; кеҫәһенән теге өс бөртөк ҡылды алып өтөүе булды — Аҡбуҙаттың ҡаршыға тып итеп килеп баҫыуы булды, ти. Шунан Урал батыр, Ҡарағашты үҙе менән бергә ат өҫтөнә ултыртып, Тереһыу юлы менән саптырып китеп тә барҙы, ти.

Эй баралар, ти, былар, эй баралар, ти. Оҙон-оҙон яландарҙы, таулы-ташлы ерҙәрҙе, соҡор-саҡыр урындарҙы үттеләр, ти. Бара торғас, Аҡбуҙат туҡтаны ла,

* *Янғантау* — Башҡортостандың Салауат районында. Бында хәҙер ауырыуҙарҙы ерҙән сыҡҡан йылы пар менән дауалай торған санаторий урынлашҡан.

телгә килеп: «Беҙ хәҙер Терешыуға яҡынлаштыҡ. Ләкин уның юлын ун ике башлы дейеү пәрейе бүлеп ята. Һиңә уның менән алышырға тура килер. Ялымдан өс бөртөк ҡылымды алып ҡал. Кәрәк булһам, шуларҙы өтөрһөң дә, мин килеп тә етермен»,— тип әйтте, ти.

Урал Аҡбуҙҙың өс бөртөк ҡылын өҙөп алды, ә Аҡбуҙ шул арала юҡ та булды, ти. Шунан Урал Ҡарағашҡа:

— Һин ошо ерҙә мине көтөп тор, дейеүҙең башына еткәс, килеп алырмын. Бына һиңә ҡурайымды ҡалдырам. Юлым уңһа, ҡурай осонан һөт тамыр, уңмаһа, ҡан тамыр,— тип, дейеү менән алышырға китте, ти.

Бына алда Терешыу сылтырап ағып ята, ти. Ул тауҙан ағып сыға ла шунда уҡ әллә ҡайҙа, ер аҫтына китеп юҡ та була икән. Терешыуҙы өйөм-өйөм әҙәм һөйәктәре уратып алған, ти. Ауырыуҙы һауыҡтыра, һауҙы үлемһеҙ итә торған был шишмәне, бер тамсы һыуын да бирмәйенсә, ун ике башлы ҡарт дейеү үҙе һаҡлап ята икән. Урал батыр күҙ күреме ерҙән үк:

— Эй дейеү, юл бир, мин Терешыу алырға килдем!— тип һөрәнләне, ти.

Дейеү, бер ҙә ыжламайынса, Терешыу алдында ҡуҙғалмай ята бирҙе, ти. Урал батыр йәнә: «Юл бир!» — тип ҡысҡырғайны, дейеү, асыуы килеп, Уралды тыны менән үҙенә тартып ала башланы, ти. Урал батыр дейеү ҡаршына килеп баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды, ти. Шунда ла ҡаушап ҡалманы, баяғыса ғәйрәтләнеп:

— Алыштанмы, сабыштанмы?— тип әйтте, ти.

Дейеү, бындай ҡыйыу егеттәрҙе байтаҡ күреп тә, бығаса һис тә еңелмәгәнлектән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Минең өсөн барыбер. Нисек үлергә теләһәң, шулай булһын,— тип яуап ҡайтарҙы, ти. Урал батыр:

— Ярай, улай булһа,— тип, билендәге алмас ҡылысын һурып алып, уңлы-һуллы сатрашлап һелтәгәйне, тирә-яҡҡа йәшен уттары сәселеп китте, ә дейеүҙең күҙҙәре шунан сағылып торҙо, ти. Урал: «Ярай, улай булһа»,— тип, йәнә бер тапҡыр әйтте лә ҡылысы менән дейеүҙе тураҡлай ҙа башланы, ти; ҡылыс һелтәнгән һайын, дейеүҙең ун ике башының береһе ҡырҡылып төшә торҙо, ти.

Был ваҡытта Ҡарағаш ҡулындағы ҡурай осонан һөт тамды, ти. Ҡарағаш быны күреп, бик ныҡ һөйөндө, ти.

Ләкин күп тә үтмәне, дейеүҙең бөтә көсө менән үкереүен ишетеп, тирә-яҡтағы вағыраҡ дейеүҙәр, аждаһалар ярҙамға килделәр, ти. Урал батыр уларға ла

бирешмәне, ти: уның ауыр кәүҙәһен күтәргән аяҡтары тайшанмайынса, һаман ергә батҡан көйө, башы болотҡа тейерҙәй булып юғары күтәрелгән көйө торҙо, ә ҡулындағы ҡылысы, йәшен уттары сығарып, уйнап ҡына торҙо, ти.

Бына бер заман, бөтә дейеүҙәрҙе, аждаһаларҙы ҡыйратып бөттөм тигәндә генә, Урал батырҙың өҫтөнә һанһыҙ күп ен-пәрей көтөүе килеп ябырылды, ти,— тын да алдырмайҙар, күҙ ҙә астырмайҙар, бөрөп алып баралар, ти, егетте.

Был ваҡытта баяғы ҡурай осонан ҡан тамды, ти. Ҡарағаш, быны күреп, бик нык борсолдо, ти. Шунан ул, күп уйлап тормай, ҡурайҙы алды ла өҙҙөрөп-өҙҙөрөп әллә ниндәй, ишетер ҡолаҡҡа яғымһыҙ бер бейеү көйөн тарта башланы, ти.

Теге ен-пәрейҙәргә шул ғына кәрәк икән: улар, үҙҙәренең бейеү көйөн ишетеү менән, бөтә донъяларын оноттолар, Уралды яңғыҙ ҡалдырып, ҡурай тауышы ишетелгән яҡҡа йүгерештеләр ҙә шунда барып, тыйыла алмайынса, бейергә керешеп тә киттеләр, ти.

Урал батыр, ен-пәрейҙәр донъяһын ҡыйратып, Тереһыу шишмәһен дейеү ҡулынан ҡотҡарҙым, хәҙер инде уның тереклек һыуы кешеләргә булыр, тип шатланып, шишмә эргәһенә килһә, унда бер тамсы ла һыу юҡ ине, ти. Ни өсөн тиһәң, был һуғышта иҫән ҡалған дейеү пәрейҙәре, Тереһыу әҙәм затына ҡалмаһын тип, эсеп ҡоротҡандар икән. Урал батыр шишмә янында күпме генә ултырмаһын, бер тамсы ла һыу сыҡманы, ти.

Урал батыр быға бик көйөндө, ти. Шулай ҙа уның дейеүҙәрҙе, аждаһа-йыландарҙы пыран-заран килтереп ҡырып ташлауы файҙаһыҙ булманы: бөтә тирә-яҡҡа йән керҙе, йәмләнеп китте, үләндәр, ағастар йәшәрҙе, ҡоштар һайрашты, кешеләр йөҙөндә шатлыҡ балҡыны, ти.

Урал батыр, үҙенең Аҡбуҙын менеп, алдына Ҡарағашты ултыртып алды ла Тереһыуҙы ташлап китеп тә барҙы, ти. Был урында Урал тураҡлаған дейеү пәрейҙәре, аждаһа-йыландар кәүҙәһенән ҙур бер тау өйөлөп ҡалды, ти. Ана шул тауҙы халыҡ телендә Яман-тау тип йөрөтә башланылар, ти.

Урал менән Ҡарағаш, ирле-ҡатынлы булып, донъя көтә башланылар, ти. Уларҙың өс улы булды ти: өлкәне — Иҙел, уртансыһы — Яйыҡ, кинйә улдары — Һаҡмар.

Хәҙер инде был тирәгә Әжәл дә һирәк килә торған

булып китте, ти. Ни өсөн тиһәң, ул бәһлеүән Урал батырҙан, уның йәшен уты сығара торған ҡылысынан шөрләй ине, ти. Бына шул арҡала халыҡ бик ишәйеп китте, ти. Шул тиклем күбәйҙе, хатта эсер һыу ҙа етмәй башланы, ти. Урал батыр, был ауыр хәлде күреп, берҙән-бер көндө ҡынынан ҡылысын тартып алды ла баш өҫтөндә өс тапҡыр һелтәп, аяҡ аҫтындағы ерҙе уйҙыра сапты, шунан:

— Бына ошо ерҙә ҙур һыуҙың башы булыр! — тип әйтте, ти. Үҙе шунда уҡ өлкән улы Иҙелде саҡырып килтереп: — Бар, улым, аяғың тартҡан яҡҡа сығып кит тә халыҡ араһында йөрө, иллә мәгәр ерәй ҙур ағым һыуға барып етмәйенсә артыңа әйләнеп ҡарайһы булма! — тип әйтте, ти.

Атаһы һымаҡ ауыр кәүҙәле Иҙел, аяғының тәрән эҙен ҡалдыра-ҡалдыра көньяҡҡа ҡарай сығып китте, ти. Атаһы уның артынан күҙ йәштәрен мөлдөрәтеп ҡарап ҡалды, ти. Сөнки ул Иҙелдең кире әйләнеп ҡайтмаясағын белеп тора ине, ти.

Эй бара, ти, Иҙел, эй бара, ти, туҡтап хәл йыйыуҙы ла белмәй, ти. Бик оҙаҡ барғас, уңға ҡайырылып китте, шунан төньяҡҡа йүнәлде, ти. Эй китте, ти, Иҙел, эй китте — ай үтте, йыл үтте, ти, шунан ул көнбайышҡа юл тотто, ти. Бара торғас, ҡамышы ҡама менән тулған ҙур бер йылғаға килеп етте, ти. Шунан Иҙел артына әйләнеп ҡараһа, уның эҙенән киң йылға булып ап-аҡ һыу урғылып ағып килеп, ошо ҡамалы йылғаға ҡоя башланы, ти.

Бына шул көндән алып йәмле Ағиҙел йылғаһы барлыҡҡа килде, ти.

Иҙел батыр оҙон юлға сығып киткән көндө уның атаһы теге ике улын да шундай уҡ шарт менән илгә сығарып ебәрҙе, ти. Ләкин улар ағаларына ҡарағанда ҡыйыуһыҙыраҡ, түҙемһеҙерәк булғандар, ти: Иҙел батыр һымаҡ, бер үҙҙәренең генә шундай оҙон, ауыр юлды үтергә йөрәктәре етмәне, ти. Һаҡмар үҙенең тыуып үҫкән еренән алыҫлаша башлағас, яманһыулап китеп: «Ни эшләп әле мин әллә ниндәй ят ерҙәрҙе япаңғыҙым ҡыҙырып йөрөйөм? Яйыҡ ағайыма барайым да ҡушылайым, бергә йөрөүе еңел дә, күңелле лә булыр»,— тип, Яйыҡҡа барып ҡушылды, ти.

Ҡайһылай ғына булмаһын, халыҡ Иҙелгә генә түгел, Яйыҡ менән Һаҡмарға ла бөткөһөҙ рәхмәт уҡыны, ә Урал батырҙың үҙенә ана шундай данлы улдар үҫтергәне өсөн оҙон ғүмер теләне, ти.

Ләкин йөҙ ҙә бер йәшкә еткән Урал батырҙың ғүмере

күп ҡалмағайны: уның ҡартайып, хәлһеҙләнә башлауын күптән көтөп йөрөгән Әжәл яҡынлашҡайны инде, ти. Бына хәҙер Урал батыр хәл өҫтөндә ята. Уның янында, изгелекле батырыбыҙҙан айырылабыҙ инде, тип ҡайғырышып, бөтә тирә-яҡ халҡы йыйылған, ти. Шул ваҡыт әле генә әллә ҡайҙан ҡайтып төшкән ир уртаһы бер кеше, йыйылған халыҡты икегә айырып үтте лә, үлем түшәгендә ятҡан Урал батырға ҡарап:

— Эй, батырҙарҙың батыры Урал атабыҙ, һин түшәккә ятҡан көндә үк мин, халыҡтың һорауы буйынса, һыуын теге заман ен-пәрейҙәр эсеп бөтөрөп киткән Тереһыуға барғайным. Ул бөтөнләй үк ҡороп бөтмәгән икән: мин унда ете көн, ете төн ултырып, һуңғы тамсыларынан бына бер мөгөҙ тереклек һыуы йыйып алып ҡайттым. Бына хәҙер шул һыуҙы халыҡ исеменән һиңә бирәм. Ҡәҙерле Урал атабыҙ, һин шул һыуҙы эсеп ебәр ҙә, үлемдең ни икәнен дә белмәйенсә, халыҡ бәхете өсөн мәңге йәшә! — тип, мөгөҙҙө түшәктә ятҡан Урал батырға һондо, ти.

— Тамсыһын да ҡалдырмай эс, Урал батыр! — тип үтенде, ти, халыҡ.

Урал батыр әкрен генә тороп, аяғына баҫты, Тереһыуҙың һуңғы тамсы һыуы һалынған мөгөҙҙө уң ҡулы менән алды, шунан халыҡҡа баш эйеп, рәхмәт белдерҙе лә мөгөҙҙәге һыуҙы уртланы, ти. Ләкин һыуҙың бер тамсыһын да йотманы, ә бер алдына, бер артына әйләнеп, бер уңға, бер һулға ҡарап — бөтә тирә-яҡҡа бөркөп ебәрҙе, ти. Шунан үҙе:

— Мин — бер кеше, һеҙ — күп кеше; мин түгел, ә ер-һыу үлемһеҙ булһын; ерҙә кешеләр шат, рәхәт йәшәһен! — тине, ти.

Урал батыр шулай тип әйтеп бөтөрөүгә барлыҡ тирә-яҡ үҙгәреп, яңырып китте: аяҡ аҫтына йәм-йәшел үлән түшәлде, ағастар яңы япраҡ ярҙы, ер өҫтөндә төрлө-төрлө еләктәр, ағаста төрлө-төрлө емештәр ҡыҙарып беште, гөлдәр сәскә атып, күҙ яуын алып торҙо, ниндәйҙер аҫыл ҡоштар килеп һайрай башланы, сылтырап шишмәләр аҡты, ҡуйы ҡамыш менән уратылған түп-түңәрәк күлдәр барлыҡҡа килде, шул күлдәрҙә, шулай уҡ Ағиҙелгә, Яйыҡҡа, Һаҡмарға килеп ҡушылған яңы йылғаларҙа быға тиклем күренмәгән аҡҡоштар ҡаңғылдашып йөҙҙөләр, баш өҫтөндә аҡсарлаҡтар сырылдашып осоп йөрөнөләр, ти.

Бына шул йәмле донъяла кешенең йәшәгеһе килеп кенә торҙо, ти. Шунда тыуҡан йәшлек бер сәсән халыҡ

алдына сығып, ҡалҡыуыраҡ ергә баҫып алды ла былай тип һамаҡланы, ти:

Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер.
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған тыуған ер.

Тугайҙары түшәктәй,
Талы, муйылы ҡурсаҡтай,
Балтырғаны беләктәй,
Һарнаһы ҡурай еләктәй;
Сәскәләре мең төҫлө,
Иҫертерлек хуш еҫле,
Йәйрәп ятҡан еребеҙ!

Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп еребеҙ;
Алырын аңдып йөрөгән
Бүреһе күп еребеҙ;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп еребеҙ;
Ыҫпай баҫып йөрөгән
Төлкөһө күп еребеҙ;
Балығы аттай тулаған,
Ҡамаһы ҡуйҙай һулаған,
Һыуы ярына һыймаған
Йылғаһы күп еребеҙ!

Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер;
Йылҡылары сыңырлап,
Һыйырҙары мөңөрәп,
Ҡуй-һарығы ҡуңырып,
Көтөү-көтөү йөрөгән ер;
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йөҙ ҡуй булып үрсер ер;
Тороп ҡалған яңғыҙ тай
Өйөр булып йөрөр ер;
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер!

Ҡарт сәсән ана шулай үҙе йәшәгән ерҙең байлығына, матурлығына һоҡланып ҡобайыр әйтте, ти. Ә тап бына шул ваҡытта Урал батыр үҙе донъя ҡуйҙы, ти.

Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп, ҡалҡыуыраҡ бер ергә күмде, шунан һәр кем уның ҡәбере өҫтөнә бер ус тупраҡ һалып сыҡты, ти. Көн үтте, йыл үтте, Урал батырҙың ҡәберенән кеше аяғы өҙөлмәҫ булып китте, ти. Уның ҡәберенә услап-услап һала торғас, шул тиклем күп тупраҡ өйөлдө, хатта ҡәбер өҫтөндә бик ҙур бер тау барлыҡҡа килде, ти.

Ана шул тауға халыҡ Урал тигән исем биргән, ти. Унда Урал батырҙың һөйәктәре әле лә һаҡлана икән: ҡаҙһаң, Урал тауынан сыға торған бөткөһөҙ күп алтын-көмөш, төрлө-төрлө аҫыл таштар тигәнебеҙ ана шул Урал батырҙың ҡиммәтле һөйәктәре икән ул. Урал батырҙың аҫыл һөйәктәре һаҡлана биреү генә түгел, хатта уның ҡаны ла һыуынмаған икән әле, тик, күп ғүмер үткәнлектән, төҫө-сифаты ғына үҙгәргән икән: бөгөн бөтә Урал буйында урғылып атып торған нефть — тап ана шул оло Урал батырҙың кибеү белмәҫ ҡаны икән ул.

## АЛП БАТЫР

Борон-борон заманда Ағиҙел буйында бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Бабай һунарға йөрөгән, әбей орсоҡ иләп, киндер һуҡҡан. Шулай бергә ғүмер иткәндәр, оло йәшкә еткәндәр. Әйләнеп ҡараһалар: ғүмер үткән, бер ҙә балалары булмаған. Үҙҙәре үлгәс, иҫкә төшөрөрлөк кеше лә юҡ.

Шунан бабай бик ҡайғырған да, уҡ-һаҙағын алып, балтаһын билгә тағып, сығып киткән. Эй киткән был, эй киткән, бер тау битләсенә барып еткән. Шунда ял итергә ултырған. Ултыра торғас, был йоҡомһорап киткән. Бабай шул ерҙә бер төш күргән. Төшөндә уға ошо тауҙың хужаһы килеп сыҡҡан.

— Эй, бабай,— тигән был,— ни эшләп бик бойоғоп киттең?

Ҡарт яуап биргән:

— Донъяла нисәмә йыл йәшәнем, бер улым да булманы. Үлеп китһәм, атым да, затым да юҡҡа сыға. Шуның өсөн ҡайғырам,— тигән.

Теге тау хужаһы әйткән:

— Бер йән үлмәй, бер йән тыумай. Әгәр донъялыҡта ул алһаң, үҙең донъянан китергә тейеш булаһың.

Ҡарт риза булған. Шунан теге тау хужаһы таш артына инеп юғалған. Бабай ултырып уйға ҡалған. Шунан һуң күп тә үтмәй, бабай башын һөйкәп ултырған таш ҡыймылдай башлаған. Бабай уянып киткән дә, билендәге балтаһын алып, ташҡа һуҡҡан. Таш ярылып киткән. Таш эсенән, тауҙы ярып, бик таҙа бер егет килеп сыҡҡан.

Бабай аптырап ҡалған. Егет, йылмая биреп, ҡарт янына килгән дә әйткән:

— Бына мин һиңә ул булып килдем,— тигән.

— Әйҙүк, улым,— тигән ҡарт, теге егетте ҡосаҡлап алған.— Мин һине ғүмерем буйы көткәйнем.

Егет бик килбәтле, үҙе бик мөһәбәт, ҙур кәүҙәле икән. Бармаҡтары беләктәй, ти. Беләктәре бүрәнәләй, аяҡтары кәмәләй, яурыны яландай киң, кәүҙәһе имәндәй ныҡ, ти.

— Мә, улым, әләйһәң, минең ҡоралдарымды ал,— тип әйткән, ти, шунда бабай, малайына янында ятҡан уҡ-һаҙағын алып, билендәге балтаһын һалып биргән, ти.

Егет әйткән:

— Атай, был ҡоралдарың үҙеңдә торһон. Миңә икенсене — ҙурыраҡты яһап алайыҡ,— тигән.

Ҡарт әйткән:

— Юҡ, улым, был уҡ-һаҙаҡ менән балта миңә олатайыңдан ҡалған. Уларҙы мин һиңә тапшырам,— тигән.— Былар хәҙер һинеке булһын, мә ал, уғың менән ҡош ауларһың, балтаң менән урман ҡырҡырһың,— тигән.

Егет риза булып алған да ҡарттың һаҙағынан бер уҡ алып, йәйәһен киреп, керешен тарта башлаған. Әҙ генә тартайым тиһә, йәйәһе шартлап һынған да сыҡҡан. Йәйәһе шартлап һынған тауышҡа тау һелкенеп киткән, таш емерелеп төшкән, бабай ҙа йығылып киткән.

— Алп!.. — тип ниҙер әйтмәк булған да бабай, шунда йән биргән.

Егет тәүҙә аптырап киткән. Шунан ни, ни эшләһен инде, атаһын ҡәҙерләп кенә күмгән дә, балтаһын алып, ташҡа ҡайрап үткерләгән дә, сәс бәкеһе кеүек кенә итеп усына һалып, урманға инеп киткән. Унда бер йыуан оҙон имән ағасы ҡырҡып, үҙенә йәйә яһап алған. Өс айыуҙың тарамышынан кереш яһап тарттырған. Имән ҡырҡып, уҡ яһаған, ул уҡтың башағына осло таш ҡуйған. Шунан донъя гиҙергә сығып киткән.

Уралтауҙың аръяғына сығып, ете аҙым атлаған да туҡтаған. Тегенең аяғы төшкән урындар аҡлан-аҡлан тигеҙ ялан булып ҡалғандар. Егет шунда хәл йыйырға ултырған. Шул саҡ ҡаршы тауҙан быны бер ҡыҙ күреп ҡалған. Ул хан ҡыҙы икән. Шунда ҙур тирмә ҡороп ята икән. Тирмәһенең ҙурлығы ике өйөр йылҡы һыйырлыҡ булған. Ҡыҙ үҙе лә мөһәбәт батыр булған. Егетте күргән дә үҙенә саҡырып алған.

— Исемең нисек, егет? — тип һораған ҡыҙ.

Егет аптырап ҡалған. Кешелә исем тигән нәмә булыуын ул белмәй икән.

— Нимә һуң ул исем? — тип һораған.
Ҡыҙ йылмайып яуап биргән:
— Бына һиңә кем тип өндәшәләр һуң?
Егет әйткән:
— Атайым үлер алдынан ғына миңә «Алп» тип өндәшкәйне,— тигән.
— Улай булғас, һин Алп батыр булаһың инде. Әгәр ҙә көрәштә мине еңә алһаң, мин һиңә ҡатынлыҡҡа барам,— тигән.
Егет, риза булып, көрәш тотҡан. Былар ете көн, ете төн көрәшкәндәр. Шунан килеп, Алп батыр ҡыҙҙы еңгән.
Алп батыр әйткән:
— Йә, һылыу ҡыҙ, үтә вәғәҙәңде,— тигән.
Ҡыҙ әйткән:
— Минең күңелем күптән һиндә,— тигән.— Мин һинеке, һин минеке, көс һынаштыҡ — хәҙер бергә булайыҡ,— тигән.
Егет әйткән:
— Тәүҙә һин миңә исемеңде әйт, һылыу ҡыҙ,— тигән.
Ҡыҙ яуап биргән:
— Минең исемем Барһын булыр,— тигән.
Егет әйткән:
— Барһын һылыу, Барһын һылыу, йөрәгемде алһын һылыу,— тигән. Килеп ҡыҙҙы ҡосаҡлап алған.
Шунда былар ҡауышҡандар, туй үткәргәндәр, бергә тора башлағандар.
Уларҙың ете улы булған. Ошо ете улынан ете башҡорт ырыуы башланып киткән, ти. Ошо ете ырыу Урал буйын биләп йәшәгән. Алп батыр аяҡ баҫҡан ете аҡлан ошо ете ырыуҙың йәйләүе булып ҡалған, ти.

## АЛПАМЫША БАТЫР

Борон заманда бер әбей менән бер бабай булған. Уларҙың һис балалары булмаған. Үҙҙәре бик фәҡир торғандар. Емерелеп бөткән өйҙә йәшәгәндәр. Бабай байҙа эшләгән. «Ҡартайғанда, исмаһам, берәй балабыҙ ҙа юҡ бит»,— тип ҡайғырышҡандар былар.
Әмәлгә ҡалғандай, бер ваҡыт быларҙың эштән ҡайтыуына өйҙәрендә бер бала илап ултыра икән.
— Ниндәй бала был?
— Үҙебеҙҙең бала.— Әбей менән бабай би-и-ик шатлана.
— Ниндәй исем бирәбеҙ?

— Әйҙә, Алпамыша тип әйтәйек.

Күрше-күләнде саҡырып, үҙҙәренә күрә исем туйы үткәрәләр. Бала бик таҙа була: көн үҫәһен сәғәт үҫә, йыл үҫәһен ай үҫә. Бер-ике йыл үтеүгә, эшләп йөрөй, атаһына ярҙам итә башлай.

— Һин, атай, ҡартайғанһың, ял ит. Һинең урыныңа үҙем барып эшләйем,— ти.

Атаһы:

— Балам, йәшһең әле, эшләргә өлгөрөрһөң,— ти.

Алпамыша атаһының ай-вайына ҡарамай, эшкә үҙе йөрөй. Атаһы бик ныҡ шатлана. Ниндәй генә эш булһа ла, малай бик тиҙ, бик һәйбәт эшләй.

Бер саҡ, эшләп йөрөгән сағында, Алпамыша ниндәйҙер батшалыҡта ниндәйҙер майҙан булғанын ишетеп ҡайта. «Атай, миңә бер ат алып бир,— ти.— Бер батшалыҡта майҙан була икән, шунда көрәшкә барам»,— ти. Атаһы ҡайғыға төшә.

— Ат алырлыҡ хәл юҡ бит әле, балам,— ти.

Алпамыша ике уйлап тормай, ат эҙләргә үҙе сығып китә. Бер күрше ауылдағы байға бара.

— Берәй атыңды бир миңә, бай,— ти.— Хаҡын берәй ваҡыт түләрмен,— ти.

Бай ҡарышып тормай.

— Анау аранға кер ҙә үҙең теләгән атты һайлап ал,— ти. Алпамыша иң элек сбруй келәтенә кереп, иң яҡшы йүгән менән ҡамсы һайлап ала. Унан аранға керә. Аттар юшап тора икән. Йүгән шылтыратҡанға ҡайһы ат ҡараһа, шул ат уныҡы була икән. Йүгәнде шылтырата был. Бер наса-а-ар ғына ҡорсаңғы ат ҡарай.

— Миңә тура ҡарағас, бәхетем шунандыр,— тип, ошо бәләкәй генә тулаҡты тотоп алып сыға. Бик һәйбәт итеп тороп эйәрләй. Хәҙер ҡорал да һорай:

— Бай, уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс бир миңә,— ти. Теге бай барын да бирә. Атты етәкләп бик күп ерҙәр үтә. Алпамыша ҡайтыу яғына бара. Ат үҙенән-үҙе ҙурая килә, ҙурая килә, баҡтаһын ҡоя килә. Бара торғас, ат бик яҡшы бер толпарға әйләнә. Ҡайтышлай, бер йылғаға төшөрөп, атын эсереп ала ла менеп ултыра тегенең өҫтөнә. Шул саҡ ат телгә килә:

— Алпамыша батыр, бер һуҡ — тиремә үтер, ике һуҡ — итемә үтер, өс һуҡ — елегемә үтер,— ти.

Алпамыша һуға. Шунан ат тағы телгә килә:

— Күҙеңде йом, батыр,— ти.

Алпамыша күҙен йома. Шул арала күҙ асып йомғансы ат егетте үҙенең ишек алдына килтереп тә ҡуйған була. Инәһе-атаһы ҡаршы сыға.

— Эй балаҡайым, ҡайһы илдәрҙә йөрөнөң, ни михнәттәр күрҙең? — тип илай инәһе.

— Иламағыҙ, ҡайттым бит инде,— ти Алпамыша батыр.

Шул кисен ҡуна ла иртәгеһен Алпамыша майҙан тотолған батшалыҡҡа китә. Быны барыуына бик күп халыҡ йыйылған була. Көрәш бара икән. Алпамыша, атын ебәреп, үҙе генә барырға итә. Шул саҡ аты әйтә:

— Өс бөртөк ҡылымды алып ҡал. Ни ваҡыт ҡыл үтә һыҙғырһаң, шул ваҡыт килеп етермен янына,— ти.

Алпамыша атын ебәрә лә, майҙанға яҡын уҡ килеп, көрәш араһына килеп керә. Тәүҙә бер аҙ ҡарап тора. Бер батырға ҡаршы бер кем дә сыҡмай, ҡурҡалар. Алпамыша батыр:

— Таҫтамалды бирегеҙ, үҙем сығамын,— ти.

Бөтөн халыҡ хайран ҡала. Байҙар, мыҫҡыллап:

— Эй, бынау йолҡондонан буламы ни? Ниндәй таҙа-таҙа егеттәр сығып еңә алмайҙар,— тип көләләр.

Бер кешенең һүҙенә ҡарамай, үҙенә-үҙе ҡеүәт биреп, үҙенә-үҙе дәрт биреп, Ҡарабатырға ҡаршы сыға Алпамыша. Ҡарабатыр, ер тырнап, быға килә икән, йәнәһе лә быны ҡурҡытырға. Былар алышырға тотоналар. Алыша торғас, икеһе лә тубыҡ тиңете ергә баталар. Берҙән-бер ваҡыт теге Ҡарабатырҙы Алпамыша батыр ерҙән һурып алып, күккә сөйөп ебәрә. Ҡарабатыр ергә килеп төшә алмай, Алпамыша батыр тегене ҡулы менән тотоп ала. Ҡайһы халыҡ ҡысҡыра:

— Булманы ла булманы! — Байҙар инде.

Ҡайһылары:

— Булды, булды! — ти.

Шунан Алпамыша батыр, ғәрләнеп китеп, Ҡарабатырҙы икенсегә сөйөп ебәрә.

— Юҡ, былай булмай! — тип, өсөнсөгә көрәштерәләр. Өсөнсөһөндә Алпамыша ҡаҙаҡ батырын шул тиклем ныҡ күтәреп ебәрә, әллә ҡайҙа күккә олғаштырып, халыҡ күҙенә күренмәҫлек итеп, өҫкә ырғыта. Шулай уҡ ергә төшөрмәй, күтәреп алып, Ҡарабатырҙы үҙе ултырған балаҫҡа, байҙар янына, илтеп ултырта. Алпамыша батырҙы бөтөн халыҡ маҡтай.

— Ҡайҙан килгән был батыр? Ҡайҙан килгән был батыр? — тип бөтөнөһө уратып ала. Ҡымыҙ эсерәләр, бүләктәр бирәләр.

Батшаның шарты былай булған була:

— Ҡарабатырҙы кем еңә, сабып килгән килеш ҡулса күҙәүенән кем уҡ үткәрә, ҡыҙымды ашарға

килгән алты башлы аждаһаны кем үлтерә, шуға ярты батшалығымды бирәм,— тигән, ти.

Ошо өс шарттың тәүгеһен Алпамыша үтәне бит инде. Хәҙер икенсеһен үтәргә кәрәк. Аттар ебәрәләр сабыштырырға бер иллешәр саҡрымға. Теге ҡулсаны бейе-е-ек тау башына мендереп ҡуялар. Шуға күҙ күреме ерҙән атырға кәрәк була.

Алпамыша иптәштәрен алдан ебәрә, үҙе артҡараҡ ҡала. Береһе лә үткәрә алмай уғын ҡулса күҙәүенән. Алпамыша батыр тағы ла алыҫтанырак ата. Атып ебәрә — Алпамышаның уғы, күҙәүҙән үтә сығып, майҙан уртаһына килеп ҡаҙала.

Алпамыша батырҙы майҙанда шау-гөр килеп күтәреп алалар.

Икенсе бер батшалыҡтан, үс итеп, батшаның ҡыҙын алырға алты башлы аждаһа ебәрәләр. Батша ҡыҙын таш келәткә бикләп ҡуя. Һаҡсылар ҡуйыла. Алпамыша батырҙы ҡыҙ янына килтерәләр. Алпамыша батыр ҡыҙға:

— Мин бер аҙыраҡ йоҡлап алам. Бына һиңә хәнйәр. Аждаһа килһә, шуның менән берәй еремә ҡаҙарһың,— ти.

Алпамыша батыр ултырған килеш кенә йоҡлап китә. Теге аждаһа, ер тетрәтеп, ғауға ҡуптарып, ҡара буран туҙҙырып килгән була. Ҡыҙ бик ныҡ, ысын күҙ йәштәре менән илай, хәнйәре менән Алпамышаға ҡаҙарға йәлләй. Шул ваҡыт эҫе күҙ йәше Алпамышаның битенә төшә. Ошо йәш тамсыһынан Алпамыша уянып китә.

— Һи-и-и-и, һылыу, бик оҙаҡ йоҡлағанмын бит! Ниңә иртәрәк уятманың? — ти. Тирә-яғына ҡараһа, Алпамышаның янында өҫтәл тулы аҙыҡ, ти. Ашап торорға ваҡыты булмай, бер-ике туҫтаҡ ҡымыҙ эсеп ала. Эсеп бөтөүгә, аждаһа бик яман үкереп, ҡапҡаларҙы, тимер ишектәрҙе асып, кереп килгән була. Алпамыша батыр быға ҡаршы сыға. Ҡыҙы, илап, ишек алдында ҡарап тора.

Аждаһа:

— Батша минән берҙе түгел, икене йәлләмәгән икән: ҡыҙын да, был егетте лә килтереп ҡуйған. Бик тештәрем дә, ҡулдарым да ҡысып тора ине,— ти.

Алпамыша батыр әйтә:

— Ҡысыһа ҡысыйҙыр. Әйҙә, улай булғас, алышабыҙмы, көрәшәбеҙме? — ти.

Шунан аждаһа, маҡтанып:

— Һин миңә бер ҡабымлыҡ ҡына бит инде, ни эшләп мин һинең менән көрәшеп торайым? — ти.

Алпамыша аждаһаның ай-вайына ҡуймай:

— Алышмы, көрәшме? — ти.

Шулайтып, былар алышырға тотоналар. Ике төн, ике көн алышалар. Өсөнсө көнөн Алпамыша аждаһаның аҙаҡҡы башын өҙөп алып, тураҡлап, ҙур бер таш аҫтына ҡыҫтырып ҡуя.

Шунан ҡыҙ, ҡайтып:

— Алпамыша батыр аждаһаны еңде,— ти.

Батша, вәзирҙәрен ебәреп, һарайға саҡырта Алпамышаны. Бара Алпамыша батша ҡырына. Батша бик шатлана.

— Ярар, егет, мин һиңә рәхмәт белгертәм,— ти.— Әйткән һүҙемдә торамын. Бына,— ти,— өсәү ине ҡыҙҙарым,— ти.— Иң кесеһе генә тороп ҡалды, икәүһен элегерәк килеп, аждаһа ашап китте,— ти.— Һин кесе ҡыҙымды ҡотҡарҙың, шатлығымдан ярты батшалығымды бирәм,— ти.— Күңелеңә оҡшаһа, ҡыҙымды ла ал,— ти. Ҡыҙыҡай Айһылыу исемле була.

Шулайтып, бында туй яһайҙар. Батша бөтөн илдән үҙенең дуҫ-иштәрен саҡырған була. Алпамышаның ата-инәһен дә алдырта. Туй айҙан ашыу бара — оҙаҡ байрам итәләр.

Аҙаҡ Алпамыша ата-инәһен тотош күсереп алып килеп, бер һарайҙа тота. Ялан тулы көтөү, үҙенең хеҙмәтселәре була, яртылашын ярлыларға таратып бирә.

Алпамыша батыр толпарына атланып, йыраҡ-йыраҡ ерҙәрҙә һунарҙа йөрөй. Өс көн, өс төн йөрөһә, өс көн, өс төн йоҡлаған була. Һунарҙан ҡайтып килешләй һәр саҡ бер бей-е-е-к тау башына менеп ултыра ла атын аҡланға ашарға ебәрә икән. Үҙе бик ҡаты йоҡоға тала, ти.

Ҡарабатыр быныҡ ҡайҙарҙа йөрөгәндәрен күҙәтеп йөрөгән икән. Ҡарабатыр бер саҡ яҡындарына әмер бирә:

— Алпамыша батыр ҡайҙа йоҡлаған, шунда бик тәрән итеп соҡор ҡаҙығыҙ,— ти.

Ун ике һыбайлы килеп, Алпамышаның йоҡлаған урынын табалар. Бында бик тәрән итеп ер ҡаҙыйҙар. Алпамыша батырҙы йоҡлаған килеш шул соҡорға осоралар. Быныҡ өҫтөнә йәшел ағастар ауҙаралар. Атын алып ҡайтып китеп, таш келәткә бикләп ҡуялар. Шулайтып, был Ҡарабатыр хәҙер маҡтана: йәнә инде донъя йөҙөндә ул ғына батыр!

Айһылыуға яусы ебәрә:

— Һинең Алпамыша батырың үлде, мин һине алам ын. Бер аҙнанан туй яһайбыҙ! — ти.

Яусы килгәндән һуң Айһылыу бик ҡайғыра, көн илай, төн илай. Айһылыуҙың ай-вайына ҡуймай, түй яһарға булалар.

Был ваҡытта инде Алпамыша батыр теге соҡорҙа ун ике көн ятҡан була. Айһылыуҙың иптәштәре, ун ике-ун бишләп ҡыҙ йыйылып, яланға еләккә сыҡҡан икән, ти. Еләк йыйып йөрөгәндә, улар ҡайҙандыр ер аҫтынан бер бәйет ишетәләр:

Оҙон сәсле, ҡара ҡашлы Айһылыуым бар микән?
Ялы-ҡойроғо ергә тейгән туры толпарым бар микән?*

— Ҡарабатырҙың эше генәлер, иҫән-һауҙар ошонан сыҡһам, күккә сөйөр инем үҙен,— тип һөйләнә үҙ алдына үҙе Алпамыша батыр.

Теге ҡыҙҙар тауышты юллап килеп, Алпамыша ултырған соҡорҙо килеп табалар.

— Кем унда? — тип һорайҙар ҡыҙҙар.

— Мин, мин. Мин Алпамыша батыр. Айһылыуым иҫән микән? Минең толпарым ҡайҙа йөрөй икән?

— Толпарың бында аҡланда юҡ. Айһылыуың йортта, иҫән. Ҡарабатыр туйға әҙерләнә,— тип яуаплайҙар ҡыҙҙар.

— Айһылыу килһен ине бында, ҡайтып әйтегеҙ әле,— тип ҡуша Алпамыша ҡыҙҙарға.

Тегеләр йүгерешеп ҡайтып китәләр ҙә, Айһылыу янына инеп:

— Һөйөнсө, Айһылыу! Алпамыша батыр иҫән. Һине саҡыра үҙе янына,— тиҙәр.

Ҡыҙҙарҙың әйтеп бөтөүе була, Айһылыу сығып та йүгерә. Күмәкләшеп, һә тигәнсе килеп тә етәләр соҡор янына. Айһылыуҙың сәсе бик оҙон булған була. Башын әйеп, Алпамыша соҡорона сәсен төшөрә. Ни ҡәҙәре оҙон булһа ла, Алпамышаның буйы етмәй.

— Минең толпарҙы табығыҙ, юҡһа эш насар,— ти Алпамыша.

Ҡыҙҙар толпарҙың таш келәттә бикле торғанын белгән була.

— Нисек тә булһа, келәттең асҡысын урлағыҙ,— тип өйрәтә Айһылыу ҡыҙҙарға.

Ҡыҙҙар, һаҡсыларҙы алдап-йолдап, асҡысты урлайҙар. Туй барған ваҡытта уйнап йөрөгән булып, һарай-

* Бәйеттәре күп ине, онотканмын,— ти әкиәтсе.

ҙы асып ебәрәләр. Толпарҙың сабып сығыуы була, ҡыҙҙар, ҡурҡышып, сарылдашып ҡасып бөтәләр. Толпар, ер тетрәтеп, Алпамыша ятҡан ергә сабып бара. Сабып барып та етә, сүгәләй биреп, соҡорға ҡойроғон төшөрөп тә ебәрә. Алпамышаны һөйрәп сығара. Сыҡҡас, тиҙ генә толпарына атлана ла һарайға ҡарай саба батыр. Һарайға етер алдараҡ атын ебәрә лә үҙе йәйәүләп ҡайтып инә. Был ваҡытта инде Айһылыуҙы сымылдыҡҡа япҡан булалар.

Алпамыша батырҙың һарайы ҙу-у-р була. Аш кухнялары ғына ун ике урында икән, ти. Ҡайтһа, шуларҙың һәр ҡайһыһында аш өлгөрөп килә икән, ти. Хеҙмәтселәре Алпамышаны танымайҙар: һаҡал-мыйыҡ баҫҡан тегене.

— Ашығыҙ өлгөрәме әле. Асыҡтым, юлсыны ашатып ебәрегеҙ,— ти икән Алпамыша.

— Өлгөрә-өлгөрә,— тиҙәр хеҙмәтселәре.

Ҡарабатыр ун ике урындағы ашты тәмләп йөрөй, уның артынан төшөп, Алпамыша һәр ҡаҙандың ашын ашап бөтөрә йөрөй, ти. Һуңғы ҡаҙанды тәмләгәс, Ҡарабатыр, һарайға инеп, аш көтөп ултыра, ти. Алпамыша батырҙың аҙаҡҡы ҡаҙанды ла ашап бөтөрөп килгәнен күреп, хеҙмәтселәр бик ҡурҡҡан, ти. Алпамыша тегеләргә, тауышланмағыҙ, тип бармаҡ ҡына янап ҡуя, ти.

Ашап бөткәс, Алпамыша Ҡарабатыр янына инә. Тегеһе танымай быны.

— Ҡарабатыр, һин ни эшләп ятаһың? Алпамыша терелеп сыҡҡан бит, әле ҡайтып килә,— ти Алпамыша батыр.

Ҡарабатыр, үҙен-үҙе йолҡҡоларҙай булып, батша янына бара.

— Һалдаттар бир, Алпамышаға ҡаршы сығам,— ти.

Батшалыҡта күпме һалдат бар, шуны алып, Алпамышаға ҡаршы китә йәнә лә. Ә Алпамыша батыр бында ашап-эсеп йөрөй.

Алпамыша йәһәт кенә ҡырынып, йыуынып-сайҡанып ала ла, тимер кейемдәрен кейеп, ҡоралланып тышҡа сыға. Атын тиҙ генә ҡыл үтә һыҙғыртып алып, Ҡарабатырға ҡаршы китә. Ҡарабатыр һалдаттарын стройға теҙеп кенә тора икән, Алпамыша батыр быныҡ янына саптырып килеп етә:

— Йә, Ҡарабатыр, әҙерһеңме майҙанға сығырға? — ти. — Мин һине, бик яҡшы итеп әҙерләнгәс, көтөп

тораһыңдыр тип уйлаһам, һин ғәскәр менән ҡаршы тораһың икән дә,— ти.

Ҡарабатыр, юхаланып:

— Ҡайҙарҙа булдың? Ни арала ҡайтып еттең? — ти.

Һалдаттар ҙа аптырап ҡала: ысынында Алпамыша һалдаттары бит инде.

Алпамыша әйтә:

— Йә, етер, һин минең баштан көлөргә уйлағайның, килеп сыҡманы был эшең. Юхаланма юҡҡа, Айһылыуҙы табып килтер! — ти. Айһылыуҙы йәшергән булалар был саҡ.

Айһылыуҙы һә тигәнсе таптыра. Вәзирҙәренә әмер бирә:

— Ҡарабатырҙы зинданға ябып ҡуйығыҙ, кәрәк ваҡытта үҙем сығарырмын,— ти.

Алпамышаны һарайҙа бик яҡшы итеп ҡаршы алалар. Айһылыу илай.

Берҙән-бер көндө Алпамыша вәзирҙәренә:

— Һумала ҡайнатығыҙ! — тип әмер бирә. Һумала ҡайнағас, Ҡарабатырҙы зиндандан сығарта.

— Шул ҡайнап торған ҡаҙандан сумып сыға алһаң, йәшәрһең; сыға алмаһаң, шунда ҡалырһың инде,— ти Ҡарабатырға.

Ҡарабатыр бик ныҡ итеп ер тырнап илай гәрлегенән. Алпамышаға башын әйеп, аяғына йығыла:

— Мине харап итмә! — ти.

Алпамыша Ҡарабатырға:

— Һин ҡурҡаҡ! — ти.

Майҙан йыйыла. Ошо майҙанда Алпамыша Ҡарабатырҙың башын ҡылыс менән сабып өҙә.

Алпамыша әле булһа Айһылыуы менән тора, һаман батыр булып йөрөй бирә, ти.

## ҠАҺАРМАН БАТЫР

Борон-борон заманда Ҡаһарман исемле бер кеше булған. Бер ваҡыт уның ҡатыны юғалған. Ҡаһарман батырҙың буйы ҡырҡ аршын булған. Ҡатыны юғалғас, ул уны эҙләп дейеүҙәргә киткән. Бөтә дейеүҙәрҙе йөрөп сыҡҡан, береһе лә уның ҡатынының ҡайҙа икәнлеген әйтә алмаған. Шулай ҙа бер дейеү:

— Ҡаф тауының артында бер бик көслө дейеү бар. Һинең ҡатыныңды, моғайын, шул алғандыр,— тигән.

— Ул дейеүгә нисек барырға һуң? — тип һораған Ҡаһарман батыр.

— Хоҙай тәғәләнең юлы бөтмәҫ. Ҡаф тауының артына барырға ла юл бар,— тигән дейеү.

— Улай булғас, мин киттем,— тигән батыр.

Шулай тигән дә Ҡаһарман батыр, ҡатынын эҙләп, Ҡаф тауы артына киткән. Уның аты бер атлағанда өс көнлөк юлды үтер булған. Барып еткән, Ҡаф тауы эргәһендә бер йылға бар икән. Йылғанан килеп һыу эсһә, ирененең тиреһе һыҙырылып төшкән. Атын эсергән, атының да ирененең тиреһе һыҙырылып төшкән. Шул ерҙә Ҡаһарман батыр ҡоҙоҡ ҡаҙыған да һәйбәт һыу алып эскән. Мәғриб* менән мәшриҡ** ҡапҡаларына килеп еткәс, Ҡаһарман батыр тәһәрәт алған. Шунан һуң ҡапҡаны күтәрәйем тиһә, күтәрә алмай икән. Ул ҡапҡаны тағы ла күтәреп ҡарамаҡсы булған, көсәнә торғас, тубығына тиклем күтәргән. Шунан, бөтә көсөн йыйып, ыһ та ыһ, тағы ла күтәреп ҡараған. Был юлы ҡапҡаны үҙенең ауыҙ тәңгәленә тиклем күтәргән. Ҡапҡа аҫтынан атын индереп ебәргән дә, үҙе лә инеп, ҡапҡаны кире төшөргән.

Тауҙан Ҡаһарман батыр өс көн өс төн буйы төшкән. Шул тиклем ҡурҡыныс икән, бер ниндәй әҙәм заты юҡ, ти. «Бында кешеләр булһа ла ҡырылып бөткән, ахыры»,— тип уйлаған Ҡаһарман батыр. Бара торғас, Ҡаһарман батыр ерҙең аҫты-өҫкә әйләнеп ятҡан урынға килеп сыҡҡан. Ҡаф тауының артында бер ҙур күл бар икән. Башҡа бер нәмә лә күренмәй, ти. Күлгә ике яғынан да йәш кенә ҡарағайҙар ултыртылған бер ҡалҡыу һуҡмаҡ барып төшә, ти. Ҡаһарман батыр шул һуҡмаҡ буйлап киткән. Бара торғас, бер һарайға килеп сыҡҡан. Һарайҙың башына ҡараһа, бүреге ҡолап төшкән. Шунан һарай башын атынан төшөп ҡарамаҡсы булған, тик бер нәмә лә күрә алмаған. Ергә ятып ҡарағас ҡына ул һарайҙың башын күрә алған. Шунан Ҡаһарман батыр һарай ҡыйығына менеп ятҡан да:

— Хоҙа тәғәләнең рәхмәте менән мин ошонда ятып йоҡлап алайым әле, ни булһа ла булыр,— тигән. Шунда бер түшәк бар икән. Ҡаһарман батырҙың түшәккә ятыуы булған, күл ҡайнай башлаған. Унан кешегә оҡшаған бер йән эйәһе килеп сыҡҡан. Күл тағы ҡайнай башлаған, унан тау ҙурлыҡ дейеү килеп сыҡҡан. Шунан былар ашарға, уйнарға тотонғандар.

---

* Мәғриб — көнбайыш.
** Мәшриҡ — көнсығыш.

— Ашағыҙ, эсегеҙ! Миңә дуҫым бер ҡыҙ килтереп бирҙе. Бөгөн мин шул ҡыҙ менән ҡушылам,— тигән дейеүҙәрҙең ҙурыһы.

Шул ваҡыт бер ҡыҙҙың сеңләп-сеңләп илаған тауышы ишетелгән. Ҡаһарман батыр сыҙамаған, «Был бит минең ҡатыным!» — тип, һарайҙан һикереп төшкән.

Ҡаһарман батырҙың билбауы ҡырҡ аршын булған. Билбауҙы ул ҡырҡ дейеү тиреһенән үреп алған. Ошо билбау менән ул өй ҙурлыҡ дейеүгә һуҡҡан икән, дейеү ергә тәгәрәп барып төшкән. Ҡаһарман батыр уның ҡул-аяҡтарын бәйләп ташлаған да тегеһе менән һуғыша башлаған. Тау ҙурлыҡ дейеү менән өс көн, өс төн һуғышҡан. Дейеүҙе үлтереп, әлеге илаған ҡыҙҙы табып алған. Был бер батшаның ҡыҙы икән.

— Минең ҡатыным ҡайҙа? Ул бында юҡмы ни? — тип һораған Ҡаһарман батыр теге ҡыҙҙан.— Уның әхирәте бар, моғайын, шул әхирәте эргәһендәлер,— тигән теге ҡыҙ.

Батыр ҡыҙҙы алған да ҡатынын эҙләп киткән. Бара торғас, бер һарайға барып сыҡҡандар. Был һарайҙың оҙонлоғо өс саҡрым икән. Инһәләр, һарай тулы һалдат, ти. Береһе: «Был — миңә», икенсеһе: «Юҡ, миңә!» — тип, дыу килеп ыҙғышып яталар, ти.

— Бына һеҙгә!— тигән дә Ҡаһарман батыр һалдаттарҙың баштарын ҡырырға тотонған. Өс көн, өс төн һуғышҡан, бөтә һалдаттарҙы ҡырып бөтөргән. Икенсе бер һарайға инһә, Ҡаһарман батырҙың ҡатыны шунда ултыра, эргәһендә тағы бер ҡатын бар, ти. Ҡатыны, ирен күреп ҡалып:

— Эй, Ҡаһарман, бында килмә! Ҡайҙан килдең шунда кит! — тип ҡысҡырған.

— Юҡты һөйләмә,— тигән Ҡаһарман батыр.— Мин бит Ҡаф тауының теге яғынан килдем, дейеүҙәр менән һуғышмайынса китмәйем, ни булһа ла булыр! — тигән.

— Ярай, Ҡаһарман. Дейеү бына был һарайҙа йоҡлап ята.

Һарайға барып инһә, бер ҙур дейеү ята, ти. Буйы һикһән аршын, йыуанлығы ҡырҡ аршын, ә һәр бармағы кеше дәүмәле, ти. Тәүҙә Ҡаһарман батыр дейеүҙе шунда уҡ сапҡылап ташларға уйлаған да аҙаҡ: «Ҡуй, былай егетлек түгел. Ҡаф тауы артына килеп, йөҙгә-йөҙ килеп алышмайынса, йоҡлап ятҡан дейеүҙе үлтерһәм, исемем Ҡаһарман булмаҫ»,— тип, был уйынан кире ҡайтҡан. Шулай тигән дә Ҡаһарман нығ итеп

ҡысҡырып ебәргән. Дейеү уянмаған. Икенсе тапҡыр ҡысҡырған. Дейеү йоҡо аралаш:

— Ҡаһарман, килдеңме әллә? Йоҡомдо туйҙырып алайым да, барып, Ҡаһарманды үлтереп, он итеп онтап киләйем тип ята инем әле,— тигән.— Алыш бармы, көрәш бармы?

— Алыш атаң башына, көрәш бар! — тигән Ҡаһарман.

Һарай эргәһендә генә ҙур бер ҡара таш ята икән. Шуның янына сыҡҡандар ҙа:

— Йә, башлап һин һуҡ, һуңынан үкенерлек булмаһын,— тигән дейеү.

— Юҡ, һин башлап һуҡ, минең ҡатынымды урлағас, батырлығың артҡандыр,— тигән Ҡаһарман.

— Ярар, улай булғас, мин башлап һуғам,— тигән дейеү.

Дейеүҙең ҡырҡ батман ауырлығы күҫәге бар икән. Ҡаһарман батыр теге ташҡа баҫҡан. Дейеү ҡырҡ батманлы күҫәген һуҡҡан саҡта, Ҡаһарман ситкә һикергән.

— Йәнең сыҡманымы әллә? — тип һорай икән дейеү.

— Юҡ әле,— ти Ҡаһарман. Дейеү тағы ла һуҡҡан. Ҡаһарман батыр тағы ла ситкә һикергән.

— Йәнең бармы әле? — тип һорай икән дейеү.

— Бар әле, бар,— ти Ҡаһарман.

— Ҡайҙа, хәҙер мин һинең ҡабырғаңа һуғайым,— тип, дейеү ҡырҡ батманлыҡ күҫәген һелтәгән икән, Ҡаһарман был юлы ла ситкә янтайып ҡалған.

— Хәҙер минең сират,— тигән Ҡаһарман батыр. Шулай тигән дә Ҡаһарман батыр, дейеүҙең яғаһынан алып, йоҙроғо менән бер тондорған икән, дейеү үлгән дә ҡуйған. Шунан дейеүҙең кәүҙәһен тураҡлап, ҡатынын, теге батша ҡыҙы менән икенсе ҡатынды ла алып, ҡайтып киткәндәр. Ҡаф тауына килеп еткәндәр, уны аша сыҡҡандар. Батша ҡыҙын үҙенә ҡатынлыҡҡа алған, теге ҡатынды үҙ өйөнә ҡайтарып ебәргән. Шулай итеп, донъя көтөп, йөн тетеп, йәшәп киткәндәр, ти, былар.

## ҺУНАҠ МЕНӘН ИМРӘК

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бабай менән әбей. Уларҙың бер ир балалары тыуған. Уға Һунаҡ тип исем ҡушҡандар. Һунаҡ бик көслө бәһлеүән булып үҫкән. Бер йоҡлаһа, өс көн, өс төн йоҡлар булған, ти.

Һунаҡ үҫеп еткәс, үҙенә иш табалмайса, көсөн һынау өсөн ситкә сығып киткән, ти. Йөрөй торғас, бер батшалыҡҡа барып сыҡҡан. Батша, быны күреп, бик ҡурҡҡан, ти. «Бөтә батшалығымды алыр был»,— тип уйлаған. Батша батырҙы йоҡлаған ваҡытта зинданға һалырға булған. Тик бәйләп бәй сыҙата алмаған, ти. Һунаҡ аҙ ғына ҡыбырлаһа ла, бәйҙәре өҙөлөп бөтә лә ҡуя, ти. Бәйләп-бәйләп бәй сыҙата алмағас, батша, иң күп йәшәгән ҡарсыҡты саҡыртып алып:

— Кеше бәйләү өсөн нимә ныҡ була? — тип һораған.— Әгәр дөрөҫ әйтмәһәң, башыңды сабып өҙәм,— тип ҡурҡытҡан, ти. Ҡарсыҡ батшаға:

— Эй батша, әйтһәм дә үлтерәһең, әйтмәһәм дә. Кешене бәйләү өсөн, әҙәмдең һырт ҡайышы булыу кәрәк,— тигән. Шул ерҙә әбейҙе үлтереп, һырт ҡайышын алырға ҡушҡан батша. Шуның менән Һунаҡтың ҡул-аяғын бәйләтеп, зинданға япҡан. Шул көйгә Һунаҡ зинданда ятҡан да ятҡан, ти.

Һунаҡ ҡайтмағас, ата-әсәһе бик ҡайғырған. Ошо ваҡытта уларҙың тағы бер балалары тыуған, ти. Уға Имрәк тигән исем биргәндәр. Имрәк Һунаҡҡа ҡарағанда ла шәп үҫкән. Ай үҫәһен көн үҫкән, ти.

Берҙән-бер көндө балалар менән көрәшеп йөрөгәндә, Имрәкте малайҙар үсекләй башлағандар.

— Бик көслө булғас, Һунаҡ ағайыңды эҙләп алып ҡайт! — тигәндәр.

Ата-әсәһе Һунаҡтың ҡайҙа икәнен әйтмәгәндәр. Имрәк йүгереп ҡайтып ингән дә:

— Әсәй, миңә ҡурмас ҡыҙҙырып бир! — тине, ти.

Әсәһе ҡурмас ҡыҙҙырған. Ҡурмас ҡыҙып, ҡашыҡ эҫегәс, Имрәк ҡашыҡты алған да әсәһенең ҡулына баҫҡан, ти.

— Әсәй, минең Һунаҡ ағайым бар инеме? — тип һораған. Әсәһе башта, юҡ, тиһә лә, ҡулы яна башлағас:

— Бар ине, балам, бар ине. Тик ағайың китте лә ғәйеп булды,— тигән, ти.

— Улай булғас, ағайымды эҙләп китәм,— тип, Имрәк тынғыһыҙланған, атаһынан суҡмар эшләүен һораған, ти. Суҡмар эшләтеп, ағаһын эҙләргә сығып киткән, ти.

Имрәк Һунаҡҡа ҡарағанда ла көслөрәк булған. Ул, бер йоҡлаһа, ете көн, ете төн йоҡлар булған, ти. Яуыз батшаға етәрәк, Имрәктең йоҡоһо килеп, йоҡлап киткән. Батшаның ярандары, быны күреп, хәбәр һалғандар:

— Шундай бер кеше ята: суҡмары — бер тау, үҙе

бер тау, һис янына барыр әмәл юҡ,— тигәндәр, ти.

Имрәк тын алғанда, ярандар, йүгереп барып, уның танау эсенә инеп китәләр, тын сығарғанда, йүгерешеп килеп сығалар, ти. Ахыры, аптырағас, һыбай бесән артмаҡлап килгәндәр, ти, былар. Шулай ҙа барыбер, Имрәк тын алғанда, бесәндәре менән инеп китәләр ҙә килеп сығалар, инеп китәләр ҙә килеп сығалар, ти. Иң аҙаҡ батша Һунаҡты сығарырға әмер биргән, ти.

— Ҡаршы торһа, Һунаҡ ҡына ҡаршы тора алыр быға! — тигән, ти.

Һунаҡты сығарып, ярандар менән бергә Имрәк янына ебәргәндәр. Һунаҡ Имрәктең күкрәгенә килеп ултырған да, ҡарап ултыра торғас, илап ебәргән, ти.

— Был батыр, башына ҡараһам да, төҫөнә ҡараһам да, миңә оҡшай,— тип әйтә, ти.

Шул саҡта күҙенең бер тамсы йәше Имрәктең битенә тамған, ти. Шул ерҙә Имрәк, уянып китеп, ағаһын ҡырға ырғытҡан да суҡмарына йәбешкән, ти. Һунаҡ:

— Тороп тор, батыр. Хәл-әхүәл һорашҡансы, көрәшмәй торайыҡ. Һин ҡайһы ырыуҙан, ҡайһы илдән, кем улыһың? — тип һораған, ти. Имрәк уға һөйләп биргән:

— Шулай-шулай илдәнмен, шул кешенең улымын. Һунаҡ исемле ағайымды эҙләп китеп барамын,— тип әйткән, ти. Һунаҡ быны ишеткәс, шатланып:

— Бына ағайың мин булам! — тип әйтте, ти. Былар илашып, күрешеп, танышып, батшаны ла, уның яуыз йәндәрен дә ҡырып бөтөрөп, ҡайтып киткәндәр, ти. Ата-әсәһе, ҡартайып, илашып ултырғанда, уландары ҡайтып төшкән, ти.

Улар һаман да бергә йәшәйҙәр, ти.

## ОМОРҘАҠ БАТЫР

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай булған. Уларҙың бер улдары тыуған. Уға Оморҙаҡ* тип исем ҡушҡандар. Әбей менән бабай бик ярлы булғандар. Оморҙаҡты бер байға малайлыҡҡа биргәндәр. Оморҙаҡ бик тиҙ үҫкән, батыр булып етешкән. Бер мәлде бер батша байрам ойошторған. Был байрамға Оморҙаҡ

---

* Оморҙаҡ — ғүмере оҙаҡ (булһын) һүҙҙәренән яһалған исем.

та барған. Батшаның бер ҡыҙы бар икән. Был ҡыҙ Оморҙаҡҡа ғашиҡ булған да үҙенең атаһына әйткән:

— Атай, бирһәң дә, бирмәһәң дә — барыбер ошо егеткә кейәүгә сығам,— тигән.

— Ярар, ҡыҙым, сыҡ,— тигән батша. Шунан Оморҙаҡты саҡырып алған:

— Ҡыҙым һиңә кейәүгә сығам, ти. Әгәр мин һораған ҡалымға риза булһаң, ҡыҙымды һиңә бирәм,— тигән.

— Ярай, мин риза,— тигән Оморҙаҡ.

— Минең бер бәһлеүәнем бар, уға хатта өс кеше бергәләп тә ҡаршы тора алмай. Шул бәһлеүәнде йығып үлтерһәң, һиңә ҡыҙымды бирәм,— тигән батша.

Батша менән бәһлеүән бер-береһен күрә алмайҙар икән.

— Ярай,— тигән Оморҙаҡ.

Шунан батша теге бәһлеүәнде килтерткән дә, былар көрәшә башлағандар.

— Нимәгә ышанып, минең менән көрәшкә сыҡтың? — тип һораған теге бәһлеүән.

— Эй, батыр, улай һөйләнмә! Көфөр һүҙҙәр әйтәһең,— тигән Оморҙаҡ.

Эй көрәшәләр былар, эй көрәшәләр. Көрәшә торғас, Оморҙаҡ теге бәһлеүәнде һауаға ырғытып ебәргән дә төшөп килгән сағында тегенең башын аяғы менән тибеп өҙгән дә сығарған.

Батша бөтә ергә тыу элергә, музыка уйнатырға, ура ҡысҡырырға ҡушҡан. Шунан ҡыҙын Оморҙаҡҡа биргән.

Бер аҙ торғас, Оморҙаҡ батша булып киткән. Батша булғас, ҡатынын алған да тыуған өйөнә ҡайтырға сыҡҡан. Ҡайтып барғанда, Оморҙаҡтың улы тыуған. Бер төркөм батша һалдаттары быларҙы оҙата киләләр икән. Бер ҙур йылға буйына килеп еткәс, һал һаллап, йылға аша сыға башлағандар. Йылға уртаһына килеп еткәс, һалды бер нәмә тотҡан да алған. Был аждаһа икән.

— Улыңды бирһәң, йылға аша сығырға рөхсәт итәм; бирмәһәң, һалығыҙҙы ла, үҙегеҙҙе лә һыуға батырам,— тигән аждаһа.

— Тәүҙә яр буйына барып етәйек, шунан һуң мин һиңә улымды бирермен,— тигән Оморҙаҡ.

Аждаһа һалды күтәреп алған да күҙ асып йомғансы яр буйына килтереп тә ҡуйған. Шул ерҙә Оморҙаҡтың улы атаһына былай ти икән:

— Атай, һин мине аждаһаға бирмә, мин уның менән көрәшәм.

— Ярар, улым, көрәш,— тигән Оморҙаҡ.

Атаһынан рөхсәт булғас, әлеге малай аждаһа менән көрәшергә тотонған. Аждаһаны әләктереп алған да ергә һеңдерә һуҡҡан да ҡуйған. Аждаһаны үлтереп, былар ҡайтып киткәндәр.

Ҡайтып килһәләр, Оморҙаҡтың атаһы менән әсәһе бик ҡартайғандар, ти. Уландарының иҫән-һау ҡайтыуын күреп, шатлыҡтан илашып та алғандар. Оморҙаҡ, бик ҙур мәжлес йыйып, үҙен батша итеп иғлан иткән. Ауылға батша булып киткән.

Күрше ауылда ла бер батша булған. Был батша ҡыҙын кейәүгә биреү уңайы менән ҙур туй үткәреп ята икән. Оморҙаҡты ла ҡунаҡҡа саҡырған, башҡа халыҡтар ҙа күп йыйылған. Оморҙаҡтың бер батыры булған. Теге батшаның батыры Оморҙаҡтың батырын еңгән. Шул ерҙә Оморҙаҡ һикереп торған да теге батыр менән үҙе көрәшмәк булған. Көрәшә башлағандар икән, теге батыр Оморҙаҡты ла еңгән. Шул ваҡыт Оморҙаҡтың улы йүгереп сыҡҡан да:

— Атай, был батыр менән мин көрәшәйем әле,— тигән.

— Ҡуй, улым, һин йәшһең бит әле,— тигән Оморҙаҡ.

— Көрәшәйем инде, атай!

— Ярай, улай булғас, көрәш,— тигән атаһы.

Оморҙаҡтың улы теге батыр эргәһенә барған да, былар, бер-береһенең биленән алып, көрәшә башлағандар.

— Нимәгә ышанып, минең менән көрәшергә сыҡтың? — тип һораған теге батыр.

— Батыр, артыҡ һүҙ һөйләмә. Үлһәм, батыр ҡулынан үләйем тип уйланым,— тигән Оморҙаҡтың улы.

— Ярай,— тигән теге батыр,— улай булғас, мин һинең биленде һындырайым әле!

Шулай итеп әйтешкәндәр ҙә көрәшә башлағандар. Әй көрәшкәндәр былар, әй көрәшкәндәр, көрәшә торғас, Оморҙаҡтың улы теге батырҙың ҡолағынан ғына тотоп алған да һауаға сөйөп ебәргән. Һауанан ергә төштөм тигәндә генә, йоҙроғо менән теге батырҙың арт һанына биргән икән, батыр көлгә әйләнгән дә ҡуйған. Батша бик ҡурҡҡан, ти. Ҡурҡыуынан аҫтына хатта ҡом таш ебәргән, ти.

— Былай булғас, минең ҡыҙымды улыңа ҡоҙам,— тигән батша Оморҙаҡҡа.

— Ярар, бирһәң, ҡоҙалармын,— тигән Оморҙаҡ.

Оморҙаҡ, батша ҡыҙын ҡоҙалап, улына кәләш алып биргән. Алты көн буйы туй барған. Туйҙа тағы ла көрәш башланған. Оморҙаҡтың улына ҡаршы бер кем тора алмаған. Теге батшаның да (хәҙер ҡоҙаһы булды бит инде) бер улы бар икән. Шул малай торған да:

— Атай, еҙнәм менән мин көрәшеп ҡарайым әле? — тигән.

— Ярай, көрәшеп ҡара,— тигән атаһы. Шунан теге малай еҙнәһе эргәһенә килгән:

— Әйҙә, еҙнә, бер-беребеҙҙе күтәрешеп, көрәшеп ҡарайыҡ,— тигән.

— Ҡуй, ҡәйнеш, көрәшмәйек, оят булыр,— тигән еҙнәһе.

— Булмаһа, бер-беребеҙҙе күтәрешеп кенә ҡарайыҡ та шунан туҡтарбыҙ,— тигән ҡәйнеше.

— Ярай, улай булғас, әйҙә, көрәшәйек,— тигән еҙнәһе. Шунан еҙнә менән ҡәйнеш көрәшә башлағандар. Еҙнәһе ҡәйнешен күтәреп алған да, һауала өйрөлтөп-өйрөлтөп тороп, ергә атып бәргән.

— Ай һай, еҙнә, бик батыр икәнһең,— тигән ҡәйнеше.

Оморҙаҡтың улының улы тыуған. Ул атаһына бер ҙә оҡшамаған, үҙе бик матур булған. Теге батша — ҡыҙының улына батша исеме биргән. Бер ваҡыт Оморҙаҡтың улы ҡайныһынан тыуған яҡтарына ҡайтырға рөхсәт һораған.

— Эй, батшам-солтаным, беҙгә тыуған илгә ҡайтырға рөхсәт ит,— тигән.

— Рөхсәт итәм, ҡайтығыҙ,— тигән батша.

Оморҙаҡтың улы, ҡатынын, улын алып, ҡайтып киткән. Килә торғас, бейек тау башында ғәскәр күреп ҡалғандар. Яҡыныраҡ килеп ҡараһалар, был дейеү пәрейҙәре икән. Шул ерҙә дейеү пәрейҙәре батшаһы Оморҙаҡтың ейәненә:

— Әйҙә, беҙҙең менән көрәш,— тигәндәр.

— Минең улым йәшерәк әле, мин үҙем көрәшәм,— тигән дә Оморҙаҡтың улы көрәшергә тотонған. Оморҙаҡтың улы бер нисә батырҙы йыҡҡан. Иң аҙаҡ дейеүҙәр батшаһының батыры сыҡҡан. Эй ҡысҡырып та үкереп, ерҙе тырнап килә, ти, был. Шул ваҡыт дейеүҙәр батшаһы әйткән:

— Кем ошо батырҙы еңә, шуға ҡыҙымды бирәм,— тигән.

Оморҙаҡтың улы көрәшкә сығырға торһа, улы килә лә:

— Атай, туҡта, мин көрәшәйем,— тигән.

— Ярай, улым, көрәш,— ти атаһы.

Былар көрәшә башлайҙар. Өс көн, өс төн көрәшкәндәр. Оморҙаҡтың ейәне дейеү батшаһының батырын һауаға атып ебәргән икән, теге батыр килеп төшкән ыңғайы ергә һеңгән дә бөткән. Шунан дейеү батшаһы ҡыҙын Оморҙаҡтың ейәненә биргән.

Оморҙаҡтың улы ҡайтыу яғына юлын дауам иткән, ә улы, батша кейәүе булып, ҡунаҡлап ятып ҡалған.

Күп тә үтмәгән, дейеүҙәр батшаһына үлергә ваҡыт еткән. Уның бер генә улы ла булмаған. Берҙән-бер ошо ҡыҙы ғына булған. Дейеү үҙенең батшалығын ҡыҙына биреп үлгән, ҡыҙы кейәүенә биргән. Шулай итеп, Оморҙаҡтың ейәне бөтә дейеүҙәргә батша булып киткән. Бер ваҡыт ул ябыға, һарғая башлаған.

— Ниңә былай ябығаһың? — тип һорай икән ҡатыны.

— Минең атам менән әсәм бар бит, шуларҙы һағынам, өйгә ҡайтып килергә ине,— ти ире.

— Ҡайтайыҡ һуң,— ти ҡатыны.

Шунан һуң теге ҡатынын алған да бөтә дейеүҙәре менән ҡайтып киткән.

Бына шулай Оморҙаҡ та батша булған, уның улы ла батша булған, улының улы ла батша булып киткән. Улар өсәһе лә ил менән яҡшы идара итеп яталар икән.

Бөгөн шунда киттем, кисә ҡайтып еттем.

## ТАШБАШ БАТЫР, СОЛТАНҒОЛ ҺӘМ СОЛТАНБАЙ БАТЫР

Бер ҡарттың өс улы булған: Ташбаш батыр, Солтанғол батыр, Солтанбай батыр. Берҙән-бер көндө бабай төш күрә: имеш, Ташбаш улы күккә осҡан; Солтанғол алыҫ юлға сыҡҡан да һуғыша башлаған; Солтанбай батша ҡыҙын алған икән. Бабай төшөн улandарына һөйләй, уландары иларға тотоналар.

Аҙмылыр, күпмелер ваҡыт үткәс, берҙән-бер көндө быларға дейеү осоп килә лә Ташбаш батырға:

— Һине батша саҡырта,— ти. Шулай ти ҙә дейеү Ташбашты күктең етенсе ҡатына осороп алып китә. Күктең етенсе ҡатына күтәрелһәләр, унда ҙур мәжлес бара икән. Мәжлестә батырҙар дыу килеп көрәшәләр,

ти. Ҡайһы бер батырҙар меңәр ботло сынйырҙар* менән һуғышалар икән.

— Кем дә кем ошо батырҙарҙы еңә, шуға ҡыҙымды бирәм,— ти дейеүҙәр батшаһы Ташбаш батырға. Ташбаш батыр батшанан көрәшергә рөхсәт һорай:

— Мин ошо батырҙар менән көрәшеп ҡарар инем,— ти.

— Э-э-э,— ти батша,— хәлеңдән килмәҫ! — ти.

— Үлергә икән, батыр ҡулынан үлергә,— ти Ташбаш батыр.

— Ярар, улайһа, көрәш! — ти дейеүҙәр батшаһы.

Ташбаш батыр теге батырҙар менән көрәшә башлай. Тегеләрҙең береһе лә Ташбаш батырға ҡаршы тора алмай. Дейеүҙең иң көслө бер баһадиры була. Батша шул баһадирын майҙанға сығара:

— Кем ошо батырҙы еңеп үлтерә ала, шуға батшалығымды бирәм,— ти. Ташбаш батыр батшанан рөхсәт һорай.

— Рөхсәтең булһа, мин көрәшеп ҡарар инем,— ти.

— Рөхсәт, көрәш! — ти батша.

Ташбаш батыр теге бәһлеүән менән көрәшә башлай. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр былар, көрәшә торғас, Ташбаш батыр тегене һауаға бырағтырып ебәрә, теге бәһлеүән көлгә әйләнеп килеп төшә. Дейеүҙәр батшаһы ҡыҙын да, батшалығын да Ташбаш батырға бирә. Был — батшалыҡта ҡала, рәхәтләнеп йәшәй бирә.

Күпме ваҡыт үткәндер, уныһы билдәһеҙ, бер көндө Ташбаш батыр ябыға, һарғая, кибә башлай.

— Ни эшләп былай ябығаһың? Ниндәй ҡайғың бар? — тип һорай ҡатыны.

— Минең атайым менән инәйем бар бит, уларҙы бик һағындым,— ти Ташбаш батыр.

— Атайымдан рөхсәт алайыҡ та ҡайтып киләйек,— ти ҡатыны.

Ташбаш ҡайныһына бара ла:

— Рөхсәт итһәң, ҡайным, мин ҡайтып килер инем,— ти.

— Рөхсәт,— ти батша,— һин үҙең батша, ниңә минән һорап тораһың? — ти. Шулай ти ҙә дейеү пәрейҙәренә:

— Тыуған төйәгенә алып барығыҙ,— ти.

---

* Сынйыр — тоҡаға сынйыр менән тағылған ауыр шар, асылда ҡиҫтән, суҡмар һымаҡ боронғо ҡорал *(Н. К. Дмитриев иҫкәрмәһе).*

Пәрейҙәр Ташбашты ла, уның ҡатынын да ата йортона алып киләләр. Ташбаш батыр батшалыҡ итә башлай. Ташбаш батыр батша булып тора бирһен, беҙ Солтанғолға күсәйек әле.

Солтанғол башы һуҡҡан яҡҡа сығып китә. Бара торғас, был бер ауылға тап була. Ауылда ҙур мәжлес бара, ти. Бик күп ғәскәр йыйылған, ти. Солтанғол килә лә шул ғәскәр менән һуғыша башлай. Өс көн, өс төн һуғыша был, һуғыша торғас, ғәскәрҙең яртыһын ҡырып бөтөрә, яртыһын әсирлеккә ала.

— Былай булғас, сара юҡ, ҡыҙымды һиңә бирәм,— ти был илдең батшаһы. Солтанғол батша ҡыҙын алған да өйөнә ҡайтып киткән. Ҡайтып, һин дә мин рәхәтләнеп йәшәй башлаған.

Солтанғол ауылында тағы ла бер батша булған. Бер көндө был батша йыйын йыя. Бик күп батыр көрәшселәр тирә-яҡтан килеп тулалар. Йыйынға Ташбаш батыр ҙа, Солтанғол да, Солтанбай батыр ҙа баралар. Батшаның бер батырына бер кем дә ҡаршы тора алмай икән, батырҙарҙы теге бер-бер артлы ырғытып ҡына тора, ти. Быға ҡаршы Ташбаш батыр сыға.

— Һин батша бит, батша башың менән көрәшкә сығып йөрөмә! — ти теге батша Ташбаш батырға.

— Юҡ, сығам, батша булһа, ни булған? — ти Ташбаш батыр.

— Көрәш һуң, улай булғас,— ти батша.

Көрәшеп ҡарағайнылар, Ташбаш батыр еңелә. Хәҙер көрәшкә Солтанғол сыға, ул да еңелә.

— Кем дә кем ошо батырҙы еңә, шуға ҡыҙымды бирәм,— тип иғлан итә батша. Көрәшкә Солтанбай батыр сыға. Солтанбай батыр батшаның теге бәһлеүәнен эләктереп тә ала, бырaҡтырып та ебәрә. Ергә төшәйем тигәндә генә, осаһына берҙе тибеп ебәрһә, теге көлгә әйләнеп барып төшә.

Был батшаның ике оло кейәүе лә бар икән. Иң олоһоноң исеме Фәхерислам, уртансыһыныҡы — Динмөхәммәт. Солтанбай кейәүҙәрҙең иң кесеһе була.

— Хәҙер, батырҙар, үҙ-ара көрәшегеҙ,— ти батша. Батшаның оло кейәүенә ҡаршы Ташбаш батыр сыға — еңелә. Ике оло кейәүгә бер кем дә ҡаршы тора алмай икән. Ташбаш батыр еңелгәс, Солтанғол көрәшкә сыға, оло кейәү уны ла еңә.

— Батшам, йәнем, миңә көрәшергә рөхсәт ит,— ти Солтанбай.

— Йәшһең әле, уға ҡаршы тора алмаҫһың,— ти батша.

— Ҡайным, еңелгәс, батырҙан еңелергә кәрәк,— ти Солтанбай.

— Рөхсәт, көрәш,— ти батша.

Солтанбай батыр оло бажаһы менән көрәшергә тотона.

— Э-эй! Нимә уйлап миңә ҡаршы сыҡтың? — ти бажаһы.

— Һин, бажа, юҡты һөйләмә! — ти ҙә Солтанбай, тегене күтәреп алып, быраҡтырып та ебәрә. Батшаның уртансы кейәүе күтәрелә. Солтанбай уныһын да еңә. Ошо мәлдән алып батша кесе кейәүенә илтифат күрһәтә, шуға оло кейәүҙәре Солтанбайҙы күрә алмай башлайҙар.

Бер көндө өс бажа һунарға сыға. Баралар, баралар, бара торғас, бер өйгә тап булалар. Өй тирәләп йылҡы малы йөрөй, ти. Бер бейәне тотоп һуйып ашайҙар ҙа былар йоҡларға яталар. Иртәгеһен иртүк тороп һунарға сығып китәләр. Ҡайтып килһәләр, әлеге өйҙә өс ҡыҙ, бер ҡарт ултыра.

— Әссәләмәғәләйкүм, олатай,— тип һаулыҡ бирәләр былар.

— Ошо сәләмегеҙ булмаһа, бөтәгеҙҙе бер юлы йотҡан булыр инем,— ти ҡарт. Шунан ҡарт тора ла һунарсыларға:

— Алыштанмы, әллә атыштанмы? — ти.

— Атыш атаң башына, алыштан! — тиҙәр батырҙар.

Иң тәүҙә оло кейәү көрәшә башлай, ҡарт быны еңә. Шунан уртансы кейәү сыға, ҡарт быныһын да тәгәрәтә һуға. Иң аҙаҡтан көрәшкә Солтанбай сыға. Сыға ла, ҡартты әләктереп алып, ергә шундай итеп һуға, теге ер аҫтына инеп китә. Шунан Солтанбай батыр оло бажаһына:

— Һин оло ҡыҙҙы ал,— ти. Икенсе бажаһына:

— Һин уртансы ҡыҙҙы ал,— ти.— Ҡыҙҙарҙың иң кесеһе миңә булыр,— ти.

— Ярар,— тиҙәр тегеләр.

Өс бажа өс ҡыҙҙы ҡатынлыҡҡа алып ҡайтырға сығалар. Киләләр, киләләр, килә торғас, бер ерҙә төнгөлөккә туҡталалар. Теге ике бажа үҙ-ара һөйләшә:

— Әйҙә, үҙен үлтерәйек тә китәйек,— тиҙәр. Солтанбайҙың үңәсен ҡырҡып өҙәләр ҙә ҡайтып китәләр былар. Ҡайтып етәләр. Солтанбайҙың ҡатыны иларға тотона. Шул ерҙә был ҡатын янына бер аҡ һаҡаллы ҡарт килә. Килә лә:

— Ниңә илайһың? — тип һорай.

— Бына иремде боғаҙлап үлтереп киткәндәр, шуға илайым,— ти ҡатын:

— Күпме ғүмер теләйһең һуң ireңә? — тип һорай ҡарт.

— Исмаһам, бер өс көнгә терелһен ине,— ти ҡатын. Ҡарттың бер таяғы бар икән, шул таяғын һелтәүе була, Солтанбай теп-тере булып алдарына килеп баҫа. Былар өс көн йәшәп ҡалалар. Дүртенсе көндө Солтанбай яңынан үлә. Ҡатыны, күкрәгенә бысаҡ ҡаҙап, үҙен-үҙе үлтерә лә ҡуя. Быларҙы йәнәш һалып, бер ҡәбергә ерләйҙәр.

## ЯҢҒЫҘАҠ БАТЫР

Борон-борон заманда бер бабай менән әбей йәшәгән. Улар бик бай булғандар, тик балалары ғына юҡ икән. Илай-илай, алланан бала һорағандар. Алла быларға бер ул биргән. Был малай бер көн эсендә бер йыллыҡ үҫә икән. Япа-яңғыҙ улдары булғанға, уға Яңғыҙаҡ тип исем ҡушҡандар. Уҡырға биргәндәр. Яңғыҙаҡ бик тырыш булып сыҡҡан, бик ҙур ғалим булып киткән. Яңғыҙаҡты уҡытҡан мулла:

— Һин, улым, бик ҙур ғалим булдың, хәҙер төрлө һөнәрҙәргә өйрән,— тигән. Яңғыҙаҡ атаһына ҡайтҡан да:

— Атай, мулла миңә төрлө ғәжәп һөнәрҙәргә өйрәнергә ҡуша,— тигән.

— Ярай, улым, өйрән,— тигән атаһы.

Яңғыҙаҡ бер ҡартҡа киткән.

— Ҡайҙа бараһың, улым? — тип һораған ҡарт.

— Бына шулай-шулай, төрлө ғәжәп һөнәрҙәр өйрәнергә барам. Кем мине өйрәтә алыр икән? — ти Яңғыҙаҡ.

— Ярай, улым, миндә ҡал, бик батыр күренәһең, үҙем өйрәтермен,— тигән ҡарт.

Ҡарт Яңғыҙаҡты төрлө ғәжәп һөнәрҙәргә: музыка, ҡурай, скрипка уйнарға, төрлө ҡоштар ҡиәфәтенә инеп, ҡош булып осорға өйрәткән. Шунан Яңғыҙаҡ атаһына ҡайтҡан.

Яңғыҙаҡ китап уҡый башлаһа, бөтә ҡарттар илап ултыра икән. Уның тауышы яғымлы, ғалимлығы шул тиклем көслө булған. Төрлө уйын ҡоралдарында көй уйнап ебәрһә, ҡарттар тағы ла илағандар. Ҡурай уй-

һаһа ла илағандар. Унынң һөнәре — оҫталығы шул тиклем ҙур булған.

Яңғыҙаҡ ауылда тыныс ҡына йәшәп ята икән. Бер көндө уға күрше ауылдың батшаһынан хат килгән. Был батша Яңғыҙаҡты үҙенә саҡыра икән. Атаһы менән әсәһе уландарын күҙ йәш түгеп оҙатҡандар. Яңғыҙаҡ батшаға киткән. Батша был ваҡыт ҡыҙын кейәүгә биреп ята икән. Батша Яңғыҙаҡтың ғәжәп һөнәрҙәре хаҡында электән ишеткән булған, ти. Яңғыҙаҡ килеп ингәс тә, батша:

— Йә, Яңғыҙаҡ, һөнәреңде күрһәт, уйнап ебәр,— ти.

Яңғыҙаҡ уйнай башлай, бөтә халыҡ иларға тотона. Батша үҙе лә, башҡа кешеләре лә илай, ти. Батша ике оло ҡыҙын кейәүгә биргән булған. Хәҙер өсөнсө — кесе ҡыҙы ла үҫеп еткән икән. Батшаның кесе ҡыҙы Яңғыҙаҡҡа бик ныҡ ғашиҡ була ла ҡуя. Бер-ике көн эсендә һарғайып, кибеп бөтә был. Батша ҡыҙын кейәүгә бирергә була. Тирә-яҡтан бөтә батырҙарҙы йыйып ала ла:

— Көрәштә кем еңә, ҡыҙымды шуға бирәм,— ти.

Батша батырҙарының береһе бигерәк көслө икән, үҙенә бер кем ҡаршы тора алмай, ти. Шул ерҙә Яңғыҙаҡ батыр батшанан:

— Рөхсәт итһәгеҙ, мин дә көрәшеп ҡарар инем,— тип рөхсәт һорай.

— Һин йәшһең әле. Күрәһеңме уның батырлығын: көсөнөң самаһы юҡ бит,— ти батша.

— Үлгәс, батыр ҡулынан үлергә кәрәк,— ти Яңғыҙаҡ.

— Ярай, улайһа, көрәш,— ти батша.

Яңғыҙаҡ көрәшә башлай. Теге батырҙы һауаға сөйөп ебәрә лә ергә төшөп килгәндә генә, арт һанына берҙе тибә, батыр көлгә әйләнеп барып төшә.

Батша кесе ҡыҙын шунда уҡ Яңғыҙаҡҡа бирә, ура ҡысҡырырға, тыуҙар элергә ҡуша. Шулай итеп, Яңғыҙаҡ хәҙер батша кейәүе булып китә.

Бер ваҡыт батшаға икенсе батшалыҡтан бер ҡағыҙ килә. Ҡағыҙҙа: «Әгәр ҙә мәгәр оло ҡыҙыңды миңә бирмәһәң, һуғыш менән барам»,— тип яҙылған, ти. Батша ҡағыҙҙы уҡый ҙа:

— Һуғышырға тура килер, оло ҡыҙымды кейәүгә биреп өлгөргәйнем бит әле,— ти ҙә: «Һуғышҡа барам»,— тип теге батшаға хат ебәрә. Шунан бөтә ғәскәрен йыйып, һуғышҡа сығып китә. Яңғыҙаҡ батша эргәһенә килә лә:

— Ҡайным, батшам, улар бик хәйләле халыҡ.

Ҡош һымаҡ осоп килерҙәр ҙә* бөтәгеҙҙе лә ҡырып бөтөрөрҙәр. Һеҙ әкрен генә бара тороғоҙ, мин, алдан барып, уларҙың нисәү икәндәрен белеп киләйем,— ти.

Яңғыҙаҡ китә. Барһа, тегеләрҙең ғәскәре әллә ни күп түгел икән. Яңғыҙаҡ барыһын да ҡырып бөтөрә лә кире әйләнеп ҡайта. Батшаға:

— Батшам, әйҙә, ҡайттыҡ. Мин уларҙы ҡырып бөтөрҙөм инде,— ти. Батша үҙенең ғәскәре менән кире боролоп ҡайтып китә.

Икенсе көндө тағы бер батшалыҡтан ҡағыҙ килеп төшә. Быныһында: «Уртансы ҡыҙыңды миңә бирмәһәң, һуғыш асам»,— тип яҙылған була. Батша ҡағыҙҙы уҡый ҙа:

— Һе, уртансы ҡыҙымды ла кейәүгә биреп өлгөргәйнем бит әле, һуғышырға тура килер,— ти ҙә быныһына ла: «Ярар, һуғышырбыҙ»,— тип яҙыу ебәрә.

Икенсе көндө батша тора ла, ғәскәрен алып, һуғышҡа китә. Яңғыҙаҡ та улар менән. Яңғыҙаҡ батшаға әйтә:

— Ҡайным, батшам, бөгөн улар беҙҙең менән томан ебәреп һуғышырҙар*. Һинең ғәскәрең күренеп торор. Һеҙ яйлап бара тороғоҙ, улар аҙмы икән, күпме икән, мин, алдан барып, һанап киләйем,— ти. Шулай ти ҙә Яңғыҙаҡ алдан китә. Барып етһә, дошман ғәскәренең иҫәбенә-һанына сығырлыҡ түгел, шул тиклем күп, ти. Яңғыҙаҡ батыр әйләнеп килә лә батшаға:

— Уның ғәскәре бик күп икән. Мин хатта иҫәп-хисабына ла сыға алманым. Һеҙ ошонда тороп тороғоҙ, мин тағы ла барып киләйем әле,— ти ҙә, яңынан барып, дошман батшаның ғәскәрен ҡыра башлай. Ҡырып бөтөргәс, килә лә:

— Әйҙә, батша, ҡайтайыҡ,— ти. Батша ғәскәрен алып ҡайтып китә.

Ҡайтып етһәләр, өсөнсө бер батшалыҡтан ҡағыҙ килгән. Быныһында: «Әгәр кесе ҡыҙыңды миңә бирмәһәң, яу асам»,— тип яҙылған була. Батша: «Ҡыҙҙарымды күптән кейәүгә биреп бөткәнмен, яу менән барам»,— тип яуап яҙа ла һуғышҡа әҙерләнә башлай.

— Ҡайным, батшам,— ти Яңғыҙаҡ,— һеҙ йөрөмәгеҙ. Был юлы улар һыу аҫтынан килерҙәр. Һеҙ уларҙың килгәнен белмәй ҙә ҡалырһығыҙ, үҙегеҙҙе ҡырып

---

* «Ҡош һымаҡ осоп килерҙәр...» «Томан ебәреп һуғышырҙар...» Был әкиәттә хәрби техника шулай уҡ үҙ заманын уҙып киткән: әкиәтсе (башҡорт Жюль Верны) бында һауанан һөжүм итеү һәм төтөн шаршауы тураһында һөйләй *(Н. К. Дмитриев иҫкәрмәһе).*

бөтөрөрҙәр. Мин үҙем генә барайым,— ти ҙә Яңғыҙаҡ, йәйенгә әйләнеп, йөҙөп китә. Барып, теге батшаның бөтә ғәскәрен ҡырып бөтөрә. Өйгә ҡайтып ингәс, батша Яңғыҙаҡтан:

— Йә, кейәү, дошманды ҡырып бөтөрә алдыңмы? — тип һорай.

— Ҡырмайса ни эшләмәк кәрәк. Ҡырып бөтөрҙөм, береһен дә ҡалдырманым,— ти Яңғыҙаҡ. Шул ерҙә батша үҙенең батшалыҡ дәрәжәһен Яңғыҙаҡҡа бирә.

Яңғыҙаҡтың бер улы тыуа. Был шундай бәһлеүән егет була, хатта быға атаһының да көсө етмәй, ти. Яңғыҙаҡ ҡатынын, улын ала ла тыуған яҡтарына ҡайтып китә. Батша уға бер дивизия һалдат та бирә. Ҡайтып килә торғас, былар бер ҙур ауылға тап булалар. Был ауылдың батшаһы бик ҙур итеп мәжлес ҡороп ята икән. Батша үҙенең быялалы көпшәһенә ҡарай ҙа:

— Яуға әҙерләнегеҙ, ана тегендә яу килә,— ти. Яңғыҙаҡҡа ике кешеһен ебәрә.

— Кем ул, ниндәй ғәскәр ул, белеп килегеҙ,— ти.

Ике кешенең килгәнен күргәс, Яңғыҙаҡ үҙенең һалдаттарына:

— Күмәгегеҙ бер кеше кеүек атлағыҙ, баҫҡан һайын тыҡ-тыҡ-тыҡ килеп торһон,— ти. Теге ике кеше килеп етә.

— Мин яу менән килмәйем,— ти Яңғыҙаҡ вәкилдәргә.— Мин — батша, тыуған илемә ҡайтып барам.— Шулай ти ҙә Яңғыҙаҡ үҙенең ғәскәре менән был батша янына килә. Был ваҡыт майҙанда көрәш бара. Яңғыҙаҡтың улы көрәшеүселәргә ҡарап-ҡарап тора ла:

— Атай, миңә батырҙар менән көрәшергә рөхсәт ит,— ти. Атаһы рөхсәт бирә. Шул ерҙә Яңғыҙаҡтың улы бер батырҙы эләктереп ала ла һауаға сөйөп ебәрә. Яңғыҙаҡ ура ҡысҡырырға, музыка уйнарға ҡуша. Теге батша үҙенең ҡыҙын Яңғыҙаҡтың улына бирә.

Яңғыҙаҡ тағы ла юлға сыға. Ҡайтып етә. Ата-әсәһе бөтөнләйгә бөлөп, хәлдән тайып, күп илауҙан күҙҙәре һуҡырайып бөткән, ти. Көлгә кесе йәрау итеп, көл ашап ултыралар*, ти. Яңғыҙаҡ илай-илай ата-әсәһе менән күрешеп сыға.

Яңғыҙаҡ үҙ ауылына батша булып алғас, әле лә шунда батша булып тора, ти, ата-әсәһе, бала-сағалары менән рәхәтлектә көн күрә, ти.

---

* Кесе йәрау итеп, көл болғатып ашау — ҡарттарҙың тамам аҡылдан яҙыуын күрһәтә *(Н. К. Дмитриев иҫкәрмәһе).*

## АРПА БАТЫР

Борон-борон заманда бер әбей йәшәгән. Уның бер генә балаһы ла булмаған. Бер көндө әбей бер бөртөк арпа табып алып ашай. Күп тә тормай, уның бер улы тыуа. Әбей балаһына Арпа тип исем ҡуша. Кешеләр әбейҙән:

— Был баланы ҡайһылай таптың? — тип һорайҙар.

— Бер бөртөк арпа ашағайным, шунан яралды,— ти әбей.

Арпа бик батыр булып үҫеп етә. Үҙенә суйындан мең ботлоҡ суҡмар ҡойорға ҡуша. Кәртә-ҡаралтыһына берәй кешенең малы килеп инһә, бер һуғыуҙан үлтерә лә ашай ҙа ҡуя икән был. Кешеләр быны күрә алмай башлайҙар. Бер көндө Арпа батыр әсәһенә* әйтә:

— Хуш, һау бул, мин сығып китәм. Кешеләр мине күрә алмайҙар,— ти.

Егет сығып киткән. Бара торғас, туғыҙ ҡолас йыуанлығындағы бер ағас күргән. Ағастың башы кәкре икән, шул кәкреләә өй дәүмәлендәге бер ҡош ултыра икән. Был ҡоштар батшаһы Сәмреғош икән. Арпа батыр суҡмарын ҡошҡа бәрә — суҡмар теймәй, ҡош осоп китә. Арпа батыр ары китә. Бара торғас, бер кеше күрә. Ул тауҙы тауға һуғып йөрөй, ти. Арпа батыр килә лә һаулыҡ һораша:

— Һауғынаһыңмы, Тау батыр! — ти.

— Үҙең иҫән генә йөрөйһөңмө, Арпа батыр? — ти тегенеһе.

Былар хәҙер икәүләшеп китәләр. Бара торғас, бер кешегә тап булалар. Был кеше бер күлдең һыуын уртлап ала ла икенсеһенә алып барып ҡоя, ти.

— Әссәләмәғәләйкүм, егет!

— Вәғәләйкүмәссәләм! — ти тегенеһе.

— Һауғынаһыңмы, Һыу батыр? — ти Арпа батыр.

— Үҙең һау ғына йөрөйһөңмө, Арпа батыр? — ти Һыу батыр.

Шунан былар ары өсәүләп китәләр. Бара торғас, бер туғайға килеп сығалар. Туғай уртаһында бер өй ултыра, өй тирәләй иҫәпһеҙ-һанһыҙ йылҡы малы йөрөй, ти. Батырҙар ошо өйҙә йәшәй башлайҙар. Бер көндө быларға үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш иргәйел килә лә:

— Алыш бармы, көрәш бармы? — ти.

---

* Бессонов тексында — ҡатынына.

— Алыш атаң башына, көрәш бар,— ти Арпа батыр. Шунан Һыу батырға әйтә:

— Иң элек һин көрәшеп ҡара,— ти.

Һыу батыр көрәшә башлай — еңелә.

— Хәҙер һин көрәшеп ҡара,— ти Арпа батыр Тау батырға. Тау батыр ҙа еңелә. Иң аҙаҡтан Арпа батыр үҙе көрәшергә тотона. Ҡартты һеңкелдәткәнсе ергә күтәреп һуға ла һаҡалынан бер уҫаҡҡа аҫып ҡуя. Батырҙар йоҡларға яталар. Иртән торһалар, ҡарт юҡ: һаҡалын өҙөп ҡасҡан. Ҡарттың һаҡалын сисеп алалар ҙа ҡан эҙе менән тегене ҡыуа сығалар.

Ҡарт бер ҙур ташҡа еткән дә таш аҫтына төшөп киткән. Шул таш аҫтындағы өңгә килеп еткәс, Арпа батыр:

— Йә, берегеҙ төшөгөҙ! — ти.

Тау батырҙың да, Һыу батырҙың да төшкөһө килмәй. Иптәштәре төшмәгәс, Арпа батыр теге ҡарттың һаҡалынан арҡан ишкән дә таш ҡыуышынан үҙе төшөп киткән. Таш аҫтына төшөп, әҙерәк бара бирһә, бер өйгә тап була. Өйгә инһә, өс ҡыҙ ултыра.

— Һин ҡайҙан, егет? — тип һорайҙар ҡыҙҙар.

— Мин — мулла, ауырыуҙарҙы өшкөрөп терелтәм,— ти егет.

— Беҙҙең атайыбыҙ ауырып ҡайтты. Ул яҡты донъяға сыҡҡайны,— тиҙәр ҡыҙҙар.

— Өсөгөҙ ҙә миңә ҡатын булһағыҙ, өшкөрөп ҡарайым,— ти Арпа батыр.

— Булырбыҙ, булырбыҙ, атайыбыҙҙы ғына терелт,— тиҙәр тегеләр.

Шунан Арпа батыр ҡарттың янына инә лә башын өҙә саба ла ҡуя. Сыға ла ҡыҙҙарға әйтә:

— Атайығыҙ терелде. Әйҙәгеҙ, хәҙер ер өҫтөнә, яҡты донъяға сығайыҡ,— ти.

Ҡыҙҙар риза булалар. Арпа батыр ер өҫтөнә үҙе төшкән арҡанға тағып, иң элек оло ҡыҙҙы, шунан уртансы ҡыҙҙы, шунан кесе ҡыҙҙы сығара. Иң аҙаҡтан үҙе күтәрелә башлай. Бының сығып килгәнен күреп ҡалалар ҙа иптәштәре арҡанды ҡырҡалар ҙа ҡуялар. Арпа батыр ер аҫтына барып төшә. Илап та, һыҡтап та ала.

Шунан тора ла китә. Бара биргәс, бер ҙур йылға буйына килеп сыға. Ҡараһа: бер уҫаҡ башында оя бар, ояла ике себеш ята. Егет себештәрҙән һорай:

— Инәйегеҙ ҡайҙа? — ти.

— Инәйебеҙ ер өҫтөнә әҙәм ашарға китте,— тиҙәр

себештәр.— Егет, һин бынан алыҫыраҡ кит: беҙҙе аждаһа ашай, юғиһә ул һине лә ашар.

— Мин аждаһаны үлтерәм,— ти ҙә егет аждаһаға ҡаршы китә. Аждаһа быны һоғонам тигәндә генә, егет уның башын өҙә сабып төшөрә. Аждаһаның кәүҙәһен тураҡлап, кәбән итеп өйөп ҡуя. Шунан себештәр янына килә лә:

— Мин аждаһаны үлтерҙем,— ти.

— Беҙ инәйебеҙгә әйтербеҙ, ул һине ер өҫтөнә сығарып ҡуйыр. Һин йәшенеп тор, юғиһә инәйебеҙ үҙеңде ашап ҡуйыр,— тиҙәр себештәр. Арпа батыр себештәрҙең ҡанаты аҫтына инеп ята. Сәмреғош ҡайта. Ҡайта ла себештәренә әйтә:

— Фу-фу! Әҙәм еҫе сыға. Бында әҙәм заты бармы ни? — ти.

— Бар,— тиҙәр себештәр.

— Ҡайҙа ул, күрһәтегеҙ әле миңә үҙен.

— Күрһәтмәйбеҙ. Һин уны ашайһың,— тиҙәр себештәр.— Ә ул кеше аждаһаны үлтереп, беҙҙе үлемдән ҡотҡарҙы. Уға теймәҫкә ант итһәң, күрһәтәбеҙ.

Сәмреғош ант итә. Себештәр егетте инәләренә күрһәтәләр ҙә:

— Инәй, ошо егетте яҡты донъяға сығарып ҡуйсы,— тиҙәр.

— Ярай,— ти Сәмреғош.— Туғыҙ батман ҡош атып ал,— ти.

Егет туғыҙ батман ҡош ата. Шунан батмандарҙы Сәмреғоштоң арҡаһына ҡуйып, үҙе лә менеп ултыра. Осоп китәләр былар. Осҡан саҡта Сәмреғош, әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа ҡарай; башын борған һайын, егет уға уңлы-һуллы ҡош ҡаптыра. Сәмреғош егетте яҡты донъяға алып сыға ла, хушлашып, кире осоп китә.

Егет иптәштәрен эҙләп китә. Бара торғас, ут яҡҡан урынға килеп һуғыла. Ҡараһа, көлдә күмәс ята, күмәс, ҡара яныып, күмергә әйләнгән. Егет ары китә. Бара бирһә, тағы ла ут яҡҡан урынға тап була. Бында ла күмәс бешеп ята. Арпа батыр туҡтап тормай, китә һала. Ҡыуып барып етә лә, ике иптәшенең дә башын саба ла өҙә. Ни өсөн тиһәң, арҡанды өҙөп, ташлап киттеләр бит. Ә ҡыҙҙарҙың өсөһөн дә үҙенә ала.

Батыр өйгә, әсәһе янына ҡайта. Ҡайтһа, ауылдың батшаһы үлеп ҡалған, ти. Арпа батыр үҙе батша булып ала. Әле булһа шул өс ҡатыны менән байман йәшәп ята, һаман байлығын арттырып, шул батшалыҡта идара итә, ти.

## ТАҢ БАТЫР

Борон-борон заманда бер хан йәшәгән, ти. Быныӊ бер балаһы ла булмаған. Шунан бер убырлы ҡарсыҡ:

— Хан, һин һунарға киткән саҡта ҡатыныңды айырып кит. Былай ни, бер затың да ҡалмай бит үҙеңдең,— тигән. Хан ҡатынын айырған да, юлдаштарын эйәртеп, һунарға киткән.

Ҡатыны йылғаға килеп ҡайғыһын һөйләп ултыра икән, бер балыҡ килеп сыҡҡан да, телгә килеп:

— Һин ҡайғырма, бына һиңә өс балыҡ, шуларҙы бешереп аша, тик баштарын аш бешереүсегә ашатырһың,— тигән.

Был ҡатын ҡайтҡан да шулай иткән, үҙе лә, аш бешереүсе лә ауырға ҡалған. Шунан инде хандың ҡатыны өс ҡыҙ бала тапҡан, ә аш бешереүсе йөклө булыуына ғәрләнеп сығып киткән, ти.

Хан һунарҙан ҡайтып төшә. Ҡайтыуына туптай өс ҡыҙы донъяға килеп торған, ти. Хандың балалары ҡыҙ булғанға бер ни тиклем кәйефе ҡырылған ҡырылыуын, шулай ҙа бик ҡыуанған, ти. Хан ҡыҙҙарын өрмәгән ергә ултыртмай икән. Бер ҡайҙа ла сығарып йөрөтмәй, ти, балаларын. Ҡыҙҙары ун ете йәшкә етеп, аңлай башлағас:

— Атай, беҙҙең дә яҡты донъя күрәһебеҙ килә, ниңә беҙҙе һәр ваҡыт һарай эсендә һарғайтып тотаһың? — тиешкәндәр.

Хандың күңеле йомшарып китеп, ҡыҙҙарын донъя күрергә сығарырға риза була. Елкәнле кәмәгә ултырып, ҙур һаҡсылар менән был ҡыҙҙар күңел асырға сығып китәләр. Аҙмы-күпме ваҡыт үтмәй, диңгеҙ ҡутарып, ел-дауыл ҡубып китә. Ҡубып тора ла шунда уҡ тынысланып та ҡуя. Бәй, ҡараһалар теге хандың өс ҡыҙы ла күҙҙән юғалған, ти. Ханлыҡҡа бик ҙур ҡайғы килде бит инде. Һаҡсыларҙың бөтәһенең дә баштарын ҡырҡырға әмер бирҙе, ти, был хан.

Хан юғалған ҡыҙҙарының ҡайғыһы менән бутала торһон, беҙ аш бешереүсе хәленә киләйек. Аш бешереүсе, илай-һыҡтай бара торғас, бер урманда өйгә тап булды, ти. Ҡайҙа барһын инде, шунда туҡтап, шунда йәшәй башлаған ҡатын. Ваҡыты еткәс, өс улы донъяға килде, ти. Сабыйҙарҙың береһе таң менән, икенсеһе төш ваҡытында, өсөнсөһө кис тыуҙы, ти. Шуға күрә лә әсәһе Таң, Төш, Кис тип исем ҡушты, ти, балаларға. Егеттәр бик батыр һунарсы булып үҫтеләр, ти.

Хәҙер ҡабат тегеләргә килһәк, хан, ат еткән ергә

ат, хат еткән ергә хат ебәреп, ҡыҙҙарын эҙләтә башлаған,— бер хәбәр-хәтер ҙә ишетелмәгән. Шунан ҡыҙҙарҙы юллап сығырға батыр егеттәр эҙләй башлаған. Бик күп эҙләгәс, бер тимерсе егетте табып алған. Тимерсе егет риза булған да әҙерләнеп сығып киткән, ти. Бара икән был, бара икән, бара торғас, урман уртаһында бер өйгә тап булған, шунда бер әбейҙе осратҡан:

— Әссәләмәғәләйкүм, әбей?

— Нихәл, балам? Әйҙә, түрҙән уҙ, тамаҡ ялғап, ял итеп китерһең. Минең батыр улдарым менән танышырһың,— тигән әбей.

Күп тә үтмәй, әбейҙең улдары дөбөр-шатыр ҡайтып та төштөләр, ти.

Тимерсе егет, Таң, Төш, Кис менән танышып, үҙенең ҡайҙа китеп барыуын һөйләп биргәс, әлеге егеттәр:

— Һин, ҡайтып, өс ҡылыс эшләтеп алып кил, шунан бергәләп юлға сығырбыҙ,— тигәндәр, ти.

Тимерсе егет кире хан иленә ҡайтып, оҫта тимерсе иптәштәре менән бергәләп, бик яҡшы өс ҡылыс эшләп, шул өс ҡылысты алты пар атҡа тейәп, тағы ла юлға сыҡҡан, ти. Әлеге әбей йортона килеп етһә, теге өс егет быны көтөп торалар икән. Әбейҙән ризалыҡ алып, егеттәр юлға сығып киткәндәр, ти. Ризалыҡ һорағанда, әбей ҙә әллә ни ҡаршы тормаған: үҙенең хужабикәһенең ҡыҙҙарын эҙләргә барғандарын белә бит инде. Былар дүртәүләп сығып киткәндәр. Ай барғандар, йыл барғандар, бара торғас, бер тәгәрәп барған ут күреп ҡалғандар. Баҫтырып етеп, ҡылыс менән һуҡҡандар икән, тешен ыржайтып, бер убыр әбейе ултыра, ти, шул урында.

— Әбей, беҙ хандың юғалған ҡыҙҙарын эҙләп барабыҙ, беҙгә юл өйрәт,— тигәндәр.

Әбей ҡаршылашырға уйлап ҡараһа ла, ялтырап торған ҡылыс күтәрелә башлағас, ауыҙынан бер мискә ҡоҫоп сығарған. Был мискә шунда уҡ күҙ алдында кәбән ҙурлығы булып киткән, ти.

— Барығыҙ, шул мискә артынан ҡалмағыҙ! — тигән дә убыр әбей күҙҙән юғалған. Ҡараһалар, теге мискә лә тәгәрләй ҙә тәгәрләй, тәгәрләй ҙә тәгәрләй, ти.

Егеттәр нисек етте шулай, көс-хәл менән өлгөрә-өлгөрә, мискә артынан йүгерәләр, ти. Бара торғас, мискә бер ер тишегенә төшөп китте, ти. Хәҙер кемгә алдан төшөргә? Өс батыр алдан төшөргә теләп, үҙ-ара бәхәсләшә башланылар, ти. Бәхәсләшә торғас, арала иң көслөһө Таң еңеп, ул төшөргә булды, ти. Шунан,

бер ҡаҙанға ултырып, төпһеҙ ҡойоға төшөп тә китте, ти, был.

Егет төшөп етә лә ер аҫтынан китеп ултыра. Бара торғас, бер баҡыр һарайға тап була. Баҡыр алмалар үҫеп, ҡойолоп тора, ти. Таң батыр баҡыр һарайҙың ишеген асып инһә, хандың оло ҡыҙы ултыра, ти, шишмәләй йәшен ағыҙып.

— Мин Таң атлымын, һине ҡотҡарырға килдем,— ти егет.

— Эй батыр егет, тиҙерәк китә һал, юғиһә һәләк булырһың! Минең ирем — өс башлы дейеү, хәҙер ҡайтыр ваҡыты ла етте инде,— ти теге ҡыҙ.

— Ул ҡайһы яҡтан ҡайта?

— Баҡыр күпер аша ҡайта.

Таң батыр, йәһәт кенә әҙерләнеп алып, баҡыр күпер эргәһенә соҡор ҡаҙып, әҙерләнеп ятты, ти. Бер ваҡыт, күпер дерелдәгәнгә Таң батыр әйләнеп ҡараһа, дейеү, өс башын болғай-болғай, күпер аша ҡайтып килә, ти. Таң һикереп сыға ла:

— Алышмы, бирешме? Мин хан ҡыҙын алып ҡайтырға килдем,— ти. Дейеү:

— Алыш! — ти ҙә, күҙҙәренән ут сәсрәтеп килеп, Таң батырҙың биленән ҡыҫып та ала. Шул ваҡыт Таң батыр, бер елкенеп, дейеүҙе һауаға сорғотоп ебәргән икән, теге дейеү, баҡыр күпер өҫтөнә төшөп, йәнен дә бирҙе, ти. Шунан һуң Таң батыр теге һарайға ҡайтып, ҡыҙға:

— Һин көтөп тор, мин һине ҡайтышлай алырмын,— тигән дә юлын дауам иткән.

Бара торғас, бер көмөш һарайға тап булған. Бында хандың уртансы ҡыҙы икән. Ул алты башлы дейеүҙә икән. Ҡыҙҙан хәл-әхүәл һорашып, Таң батыр алты башлы дейеүгә ҡаршы барып, быныһын да үлтереп, ҡыҙға көтөргә ҡушып, артабан киткән.

Киткән, киткән, китеп бара торғас, хәҙер алтын һарайға тап булған. Был һарайҙа хандың кесе ҡыҙы икән. Бер ваҡыт алтын күпер аша туғыҙ башлы дейеү ҡайтып килә. Был саҡ хандың кесе ҡыҙы Таң батырҙың башын алдына ҡуйып, ял иттереп ятҡан була.

— Тор, тор, дейеү ҡайтты! — тип уятырға итә, Таң батыр һис уянмай икән. Шунан ҡыҙ илап ебәрә. Күҙ йәше Таң батырҙың маңлайына тама. Тамыуы була, егет күҙен асып та ебәрә. Ул арала булмай, дейеү ишектән килеп, бик яйлап ҡына ултырып алып, ашарға һорарға итһә, аптырап ҡала:

— Бэй, минең ашар ашым ҡаршымда икән дә! Һин ни йөрәгең менән бында килдең? — ти.

— Һинең көлөңдө күккә осороп, хан ҡыҙын ҡотҡарырға килдем! — тип яуап бирә Таң батыр.

Шулай ғына тигән икән, теге, ер һелкетеп ҡуҙғалып, туғыҙ башын туғыҙ яҡҡа болғай-болғай, Таң батырҙың өҫтөнә ташланған, ти. Бына киткән алыш! Таң батыр дейеүҙең баштарын, берәм-берәм сабып, өҙөп ташлап бөтөргән. Шул урында бер әбей килеп сыҡҡан:

— Балам, бына һиңә өс бөртөк ярма: береһе алтын, икенсеһе көмөш, өсөнсөһө баҡыр. Теге ҡыҙҙар бына ошо ярмалар эсендә. Хәҙер һин анау ҡаршы тауға ҡарап кит. Шунда бер ҙур ташҡа осраһың, шул таш аҫтында был дейеүҙәрҙең ун ике башлы атаһының ҡара айғыры ятыр. Шул ҡара айғырҙы эләктермәй тороп, һин ул ҡарт дейеүҙе еңә алмаҫһың,— тигән.

Таң батыр, әбей өйрәткәнсә барып, теге ҡара айғырҙы алған да, бар байлыҡтарҙы тейәп, ҡайтыр юлға сыҡҡан. Теге тишек тураһына килеп, байлыҡтарҙы ҡаҙанға тейәп сығарып бөткән. Үҙе ултырып сығайым тиһә, ағалары ҡаҙанды ҡырҡып төшөргән дә ебәргән. Шул ваҡыт ер аҡтарып үкереп, ҡарт дейеү килеп етә башлаған. Таң батыр, өс бөртөк ярманы йота һалып, йәһәт кенә ҡара айғырға атланған. Атланған да уң яғына һуғып ебәргән икән, айғырҙың һул яғынан ҡан атылып сыҡҡан. Шул ерҙә былар осоп сығып та киткәндәр, ер өҫтөнә килеп тә төшкәндәр!

Йәйләүгә етәрәк, ҡарт дейеү Таң батырҙы ҡыуып тотҡан, шул урында алыш башланып киткән. Алыша торғас, Таң батыр был ун ике башлы дейеүҙең дә көлөн күккә осорған. Әлеге ханға ҡыҙҙарын алып ҡайтып тапшырған.

Таң батыр ике ағаһын ҡыуып сығарып ебәрә. Үҙе кесе ҡыҙға өйләнә. Тимерсене ғәскәр башлығы итеп ҡуя. Ҙур туй яһайҙар*.

Өс көн туйҙа булдым, балдарын эстем, мыйыҡтан үтте, ауыҙыма теймәне.

---

* Әкиәттең тамамланышында тоҡослоҡ (ашығыу) һиҙелә. Бында Таң батырҙың теге өс ярманы (етмәһә, уларҙы йоҡҡайны ла бит әле!) нисек ҡабат ҡыҙға әйләндереүе, хыянатсы ағаларын нисек фаш итеүе, хан булыуы һәм башҡаһы традицион формала булһа ла әйтелергә тейеш ине.

# АҠЪЯЛ БАТЫР

Борон-борон заманда бер ауылда бер ир менән бер бисә булған. Улар бик ярлы ғына көн иткәндәр. Ураҙа ла тотмағандар, намаҙ ҙа уҡымағандар, муллаларға ла һис бер төрлө хәйер бирмәгәндәр, ти. Үҙ көндәрен үҙҙәре күргәндәр: һыуҙарҙан балыҡ тотҡандар, урманға һунарға йөрөгәндәр, ти.

Бер ваҡыт, ҡыш килеп еткәс, быларҙың яға торған утындары бөтөп киткән. Былар, ирле-бисәле икәүләп, мәсет ишеге алдына ингәндәр ҙә, шунда үҫеп ултырған бер йыуан ҡайынды тумырып йығып алғандар ҙа ҡайтҡандар, шул мәсет ҡайынын сыуалдарына яғып, өйҙәрен йылыта башлағандар, ти. Иртәгеһен был эште белеп ҡалып, бейҙәр, муллалар мәсет ҡайынын ҡырҡып яҡҡан кешене эҙләп табырға бойороҡ биргәндәр. Бер ваҡыт ауыл халҡы тегеләрҙе эҙләп табып, шул арала икеһен дә урамға алып сыҡҡандар ҙа, туҡмап-туҡмап, аяҡ-ҡулдарына бығау һалып, Себер ебәргәндәр: бик алыҫҡа, Урал тауҙарының кеше аяғы баҫмаған бер еренә алып барып, ҡулдарын-аяҡтарын сисеп, ташлап киткәндәр. Теге ир менән ҡатын, шунда бер бәләкәй генә өй һалып, ирле-бисәле йәшәп ятҡандарында, быларҙың бер ир балалары донъяға килгән. Был малай түбәһенән алып ҡалаҡ һөйәге араһына еткәнсе ап-аҡ оҙон сәсле, ти, үҙе. Шуға ҡарап, уға Аҡъял батыр тип исем ҡушҡандар.

Был малай ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып етешкән, айыуға ла, бүрегә лә бирешмәгән. Атаһына булышып, ҡош, йәнлек һунарына йөрөгән. Һунарға өйрәнеп, болан, ҡоралай тотоп алып ҡайтҡан; мал аҫрап, был малдарҙың һөтөн эсеп, итен-майын ашап, былар яҡшы ғына донъя көтөп алып киткәндәр. Атаһы менән әсәһе, быға һөйөнөп, кинәнеп бөтә алмағандар.

Аҡъял батыр ун алты, ун ете йәшкә еткәндә, бының ата-әсәһе үлеп киткән. Был ваҡыт инде Аҡъял батыр бик ҙур кәүҙәле, киң күкрәкле батыр булған. Ата-әсәһе үлеп, яңғыҙ ҡалғас: «Ҡайҙа кемдәр йәшәй икән, ниндәй хәлдәр бар икән?» — тип уйланып ултырған да, болан тиреһенән тегелгән тунын кейеп, бер батман уғын йөкмәп, осоп төшөп торған йөндө лә ҡырҡа алған үткер йылтыр ҡылысын тағып, донъя күрергә тип, сығып та киткән.

Аҡъял батыр ай киткән, йыл киткән, күп тауҙар, урмандар, һыуҙар үткән. Бара торғас, бер бейек тауға

үрләгән ерҙә хәл йыйырға туҡтаған. Шул саҡта ул саң борҡотоп, тау-таш аҡтарып йөрөгән бер кешене күреп ҡалған. Артыҡ уйлап тормай, болан тунын кейеп, ҡылысын тағып, уҡ-йәйәһен алып, тотҡан да шул кеше эргәһенә киткән. Килгән дә һаулыҡ һорашҡан, аҙаҡ:

— Эй, ағай, һин кем? Нишләп улай саң борҡотоп йөрөйһөң бында? — тип һораған.

— Бына тауҙарҙы күсереп йөрөйөм, эшем шул,— тип әйтте, ти, теге кеше.

— Эш юҡта эш тапҡанһың икән,— тигән Аҡъял батыр.— Был тирәлә күптән йәшәйһеңме, ниндәй хәлдәр бар? Һөйлә әле, исемең кем? — тип, ҡат-ҡат һорау бирҙе, ти.

— Мин үҙем Тау батыр булам,— ти теге кеше.— Бик күп замандан бирле ошо тауҙар араһында йәшәйем. Яҡын-тирәлә ауылдар юҡ, булғандары бынан бер нисә йөҙ саҡрымдарҙа ғына,— ти. Шунан: — Ә һин үҙең кем булаһың һуң? — тип һорай.

— Мин Аҡъял батыр булам. Тыуған илемде ташлап, ер-һыу тикшерергә, донъя күрергә сыҡтым. Бына һиңә осраным. Йөрөйһө ерҙәрем күп әле, ярай, мин китәйем,— ти ҙә, уҡ-һаҙағын яурынына аҫып, ҡуҙғала башлай. Шул ваҡыт Тау батыр:

— Үҙеңә юлдаш итһәң, мин дә һинең менән барыр инем,— ти. Аҡъял батыр уны-быны уйлап тормай:

— Ярай, улай булғас, әйҙә, киттек,— ти.— Берәүҙән икәү яҡшы булыр, һөйләшеп йөрөргә күңелле булыр,— тигәс, былар урындарынан ҡуҙғалып, тау буйлап, икәүләп китеп барҙылар, ти. Китеп баралар, китеп баралар, ти. Тау батырҙың йөрөгән тауҙарынан, яландарынан айҙар буйына бара торғас, бер ҙур ҡалын урманға барып еткәндәр. Урмандың шарт та шорт килеп торғанын ишеткәндәр, ти. Шул ваҡыт былар: «Бер-бер ҡурҡынысла нәмәгә осраманыҡ микән?» — тип, ҡоралдарын алып, урманға инеп китһәләр, бер кеше күрәләр. Туҡтап, ҡарап торалар. Был кеше ағасты тамырҙары менән ҡуптарып, икенсе урынға алып барып ултыртып йөрөй, ти. Батырҙар, уның эргәһенә килеп:

— Ағай, ни эшләйһең былай? — тип һоранылар, ти. Теге кеше:

— Бынау ерҙән анау ергә ағастарҙы күсереп ултыртам. Был ерҙең урманы ҡуйырып киткән, тегендә бик һирәгәйгән,— тип яуап ҡайтарҙы ла, үҙе батырҙарға яҡыныраҡ килеп: — Мин Урман батыр булам.

һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ? — тип һораны, ти. Аҡъял батыр:

— Мин ил күрергә сыҡҡайным, бына үҙемә иптәшкә Тау батырҙы осраттым да икәүләп бергә йөрөп ятабыҙ әле. Хәҙер килеп һине осраттыҡ,— тип әйтте, ти.

— Улай булғас, мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ,— ти Урман батыр.

— Ярай, әйҙә, берҙән ике булыр, икенән өс булыр, һөйләшә-һөйләшә йөрөргә арыу булыр,— тигәс, былар хәҙер өсәүләп ҡибла ҡарай бер һуҡмаҡтан китеп барҙылар, ти.

Киттеләр, киттеләр, әллә күпме ер үттеләр, һаман китеп бара торғас, Урман батыр менән Тау батыр:

— Ерҙең сиге ҡайҙа икән? — тип һоранылар, ти. Аҡъял батыр бер аҙ уйлап торҙо ла:

— Ерҙең сите беҙҙең өсөн бер ҙур һыу булыр: ултырып йөрөр өсөн кәмә яһап алмаһаҡ, беҙҙең юлыбыҙ шунда бөтөп ҡалыр,— тип әйтте, ти.

Өс батыр шулай һөйләшә-һөйләшә китеп бара, китеп бара, ти. Көн үтте, төн үтте, ти. Аҡъял батыр хәҙер егерме йәшкә етеп, ғәләмәт ҙур кәүҙәле, ҡыҙыл сырайлы, киң күкрәкле егет булды, бер ашағанда бер бейә ашар, бер эскәндә бер биҙрә һыу эсер, бер йоҡлағанда биш көн йоҡлар батыр булып етеште, ти. Иптәштәре Аҡъял батырға ҡарап-ҡарап торалар ҙа: «Донъяла бынан да ғәйрәтлерәк батыр булмаҫ!» — тип ҡуялар, ти.

Берҙән-бер көндө был өс батыр, ҙур-ҙур тауҙарҙы артылып, ҡуйы урмандарҙы аша сығып, йәйрәп ятҡан тигеҙлектәрҙе үтеп барғандан һуң, ауылға оҡшаған бер ергә килеп сығалар. Килһәләр, төрлө яҡҡа таралып йөрөгән мал, йылҡы өйөрөнән башҡа бер йән әйәһе лә күрмәйҙәр. Аҡъял батыр ҡарап тора ла:

— Ҡарағыҙ әле, бында тыу бейәләр ҡайһылай һимеҙ! Быларҙың бер нисәһе беҙҙең ризыҡҡа яҙған икән,— ти.

Бында кемдәр бар, ниндәй халыҡ йәшәй икән тип, ауылға барып, өй беренсә йөрөп сыҡтылар,— бер генә кешене лә осрата алманылар, ти. Шунан һуң Аҡъял батыр:

— Ярай, күп уйланып торорға ярамай. Һин, Урман батыр, бер бейәне тотоп һуй ҙа ашарға ит бешер, беҙ Тау батыр менән был урындарҙы тикшереп, ҡарап сығайыҡ. Яландарҙа йөрөп ҡайтайыҡ,— ти. Аҡъял батыр менән Тау батыр ҡоралдарын аҫып сығып китәләр.

Урман батыр бысаҡтарҙы үткерләп, әҙерләп алып, тыу бейәләр ятҡан ергә сығып киткән. Бик оҙаҡ һайлап йөрөгәндән һуң, Аҡъял батыр һоҡланған тыу бейәгә күҙе төшә, эргәһенә бара, тоторға уйлай. Тыу бейә бик ҡырағай булып сыға. Урман батырҙы яҡын да ебәрмәй. Урман батыр бейәне тота алмай. Шунан, башҡаһы булһа ла ярар тип, башҡаларын тота башлай. Оҙаҡ маташҡандан һуң, бер ҡола бейәне тотоп бысаҡлай, тиҙ генә тиреһен һыҙырып ташлап, итте ҡырҡ-ҡылап, ҡаҙанға һалып, ут яғып ебәрә. Ит бешә башлай, батырҙар ҙа әйләнерҙәр инде тип торғанда, тышҡы яҡтан ҡапыл ишек ҡағылды, ти. Урман батыр:

— Унда кем бар? — тип һорауға:

— Мин — ҡунаҡ,— тигән тауыш ишетелә. Урман батыр:

— Ярай, ҡунаҡ булһаң, асайым,— ти.

Ишекте асып ебәрһә, алдында үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт баҫып тора.

— Мине күтәреп индер! — ти ҡарт.

Урман батыр күтәреп индерә. Өйгә ингәс:

— Мине күтәреп ултырт! — ти.

Урман батыр күтәреп ултырта. Түргә менеп ултырғас, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт әйтә:

— Ашарға бир! — ти.

Урман батыр был ҡартҡа ҡаҙандан бер ҙур киҫәк ит алып бирә. Ҡарт унан-бынан ғына һоғона ла:

— Тағы ла бир! — ти. Урман батыр:

— Минең иптәштәрем бар. Иптәштәр ҡайтҡас, бергәләшеп ашарбыҙ,— ти. Ҡарт ҡысҡырып ебәрә:

— Әйткәс, һалып бир! Мин һинең иптәштәреңде белмәйем! — ти.

Урман батыр бирмәй ҡарыша башлағас, ҡарт урынынан ырғып төшә лә, Урман батырҙы күтәреп алып, бармағын өрлөк ярығына ҡыҫтырып ҡуя. Шунан ҡаҙандағы итте унан-бынан ҡабалана-ҡабалана ашап бөтөрөп, сыға ла китә. Урман батыр ҡандарын туҙҙырып, бармағын тартып алып: «Инде нишләргә? Батырҙар ҡайтһа, нисек итеп яуап табырға?» — тип һөйләнә-һөйләнә тиҙ генә кейеҙ ҡырҡып алды ла, уны көйҙөрөп, бармағына баҫты, тағы ла ат һуйырға сығып китте, ти.

Урман батыр, йән асыуы менән бер атты тотоп алып, һуйып, тулы ҡаҙан ит бешерә башлай. Шул ваҡыт Аҡъял батыр менән Тау батыр ҡайтып инәләр.

— Аш бештеме? — ти Аҡъял батыр. Урман батыр:

— Беште,— тип яуап ҡайтара.

Батырҙар ашарға ултыралар. Ашап, күңел тыныслanғас, Аҡъял батыр Урман батырға:

— Ҡулыңа ни булды? Нишләттең? — тип һорау бирә Урман батыр.

— Ана теге ат һуйҙырмай тулап китте, шуның менән ҡарышып йөрөгәндә, аңғармаҫтан бысаҡ ҡаҙалып ҡуйҙы,— тип кенә һылтау тапты ла ҡуйҙы, ти. Теге ҡарт тураһында ләм-мим һүҙ әйтмәне, ти.

Ашап-эсеп тамаҡ туйҙырғас, ятып йоҡларға булалар. Яталар, йоҡлайҙар. Иртә менән тороп, йыуынып эш бөткәс, Аҡъял батыр Тау батырға ҡарап торҙо ла:

— Бөгөн һин ашарға әҙерләрһең, беҙ Урман батыр менән сығып йөрөп ҡайтырбыҙ,— тине лә, ҡоралдарын күтәреп сығып киттеләр, ти.

Оҙон-оҙон юл буйлап, ҡалын-ҡалын урман аша, киң-киң туғайҙар үтеп, тәрән-тәрән һыу буйҙарын үтеп барып, бик алыҫ ер киткәс, ял итергә ултырҙылар, ти. Был ваҡыт өйҙә ҡалған Тау батыр бысаҡтарын сарлап, малдар араһына сығып, бер атты тотоп алып һуйып, ҡаҙан аҫып, ит бешерә башлаған була. Бына бер ваҡыт берәү бик ҡаты ишек дөбөрләтә башлай. Тау батыр:

— Унда кем бар? — ти. Тыштан:

— Мин — ҡунаҡ, ас! — тип яуап ҡайтарыуға, Тау батыр ишекте асып ебәрһә, ишек төбөндә үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш әлеге ҡарт баҫып тора, ти. Тау батыр эстән генә: «Бында ла бер йән эйәһе бар икән әле»,— тип уйлай ҙа:

— Әйҙә, бабай, рәхим ит! — ти. Ҡарт:

— Юҡ, мин инә алмайым, күтәреп индер! — ти.

Тау батыр ҡартты күтәреп индереп, түр башына ултыртып ҡуя. Күп тә ултырмай, теге ҡарт:

— Миңә ашарға бир! — ти.

Тау батыр уға бер ҙур киҫәк ит алып бирә. Ҡарт итте унан-бынан ғына һоғоноп, тағы ла һорай башлағас, Тау батыр:

— Иптәштәрем өсөн бешергән итте һиңә генә ашатып бөтөрөр хәлем юҡ,— тип яуап ҡайтарған икән, ҡарт ырғып төштө лә, Тау батырҙы ҡосаҡлап алып, өйҙөң тәҙрә яғында ҡағыулы торған сөйгә ҡолағынан аҫып ҡуйып, ҡаҙандағы итте һоғона-һоғона ашап бөтөп, сыҡты ла китте, ти.

Тау батыр ҡолағын ысҡындырып алып, ҡаҙанды килеп ҡараһа, бер генә киҫәк тә ит ҡалмаған, ти. Тиҙ генә сығып тағы ла бер атты һуйып, ҡаҙан тултырып яңынан ит бешерә башлауға Аҡъял батыр

менән Урман батыр ҙа ҡайтып инәләр. Өсәүләп ит ашарға ултыралар. Аҡъял батыр үҙҙәренең йөрөгәндәрен, йөрөгәндә күргәндәрен һөйләп бөттө лә Тау батырға:

— Ҡолағың нишләне? — тип һорау бирҙе, ти. Тау батыр:

— Аттар тотоп йөрөгәндә бер уҫалы тибеп ебәрҙе лә, шуның тояғы ҡолаҡҡа эләгеп китте,— тип әйтте, ти. Аҡъял батыр:

— Йә, нишләп һеҙ улай, берегеҙ бармаҡ ҡырҡа, икенсегеҙ ҡолаҡ өҙҙөрә? Ярай, иртән мин үҙем ҡалайым әле, миңә нимә булыр икән? — ти.

Батырҙар, итте ашап бөтөрөп, йоҡларға яттылар. Йоҡлап торғас, тамаҡ туйҙырҙылар ҙа, Аҡъял батыр, һүҙ башлап:

— Егеттәр, бөгөн һеҙ икегеҙ йөрөп ҡайтығыҙ, мин ашарға әҙерләп торормон. Мин бәлки теге, килгән саҡта күреп ҡалған ҡола бейәне осратырмын, уның ите яҡшы булырға тейеш. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? — тине, ти.

Урман батыр менән Тау батыр: «Шулай уҡ ҡола бейәне тота алыр микән?» — тип уйлашып, икәүләп, өйҙән сығып киттеләр, ә Аҡъял батыр бысаҡтарын үткерләп, бер арҡан алып, ҡола бейәне тоторға әҙерләнә башланы, ти.

Аҡъял батыр йылҡы өйөрө араһында бик оҙаҡ эҙләп йөрөгәндән һуң, бер туғайҙа үҙе күргән ҡола бейәне осрата. Бейәгә яҡыныраҡ барып, аяҡтарын нығытып баҫа ла тоҙаҡты бейәгә ырғыта. Арҡан муйынына һалына төшкәс, бейә тулап ҡараһа ла, ысҡына алмай. Аҡъял батыр тиҙ генә арҡанды арт аяғынан аша бәйләп, бейәне тартып йыҡты ла, салып ебәреп, унан-бынан тиреһен һыҙырып ташлап, иттәрен ваҡлап, ҡаҙанға тултырып, бешерә башланы, ти. Бер ваҡыт ишек ҡаға башлаған тауыш ишетә. Тыңлап-тыңлап тора ла:

— Унда кем бар? — ти. Тыштан кемдер:

— Мин — ҡунаҡ! — тип яуап ҡайтара.

Аҡъял батыр тышҡа сыҡһа, теге үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт баҫып тора. Былар бербереһенә оҙаҡ ҡарап торғас, теге ҡарт:

— Мине күтәреп индер! — ти. Аҡъял батыр:

— Бында еткәнсе атлап килгәнһең бит, инерһең дә ултырырһың! — тип өйгә ингән дә киткән.

Теге ҡарт үҙе өйгә инеп, үҙе түргә менеп ултырҙы ла:

— Ашарға килтер! — тип, ҡысҡырып ебәрҙе, ти.

Аҡъял батыр уның ҡысҡырыуына илтифат итмәй генә:

— Беҙҙә ҡунаҡтар һорап ашамайҙар, һалып биргәнде көтәләр,— тигән икән, ҡарт:

— Әле һин минең менән әрепләшергә уйлайһың икән! — тип ырғып төшөп, Аҡъял батырҙы тотайым тигәндә, Аҡъял батыр ҡарттың һаҡалынан урап тотоп өрлөк ағасына аҫты ла ҡуйҙы, ти.

Ҡарт ҡурҡыуынан нишләргә лә белмәй, эй тулай, тулай торғас, һаҡалы өҙөлөп китеп, сыға ла ҡаса. Ул арала булмай, Урман батыр менән Тау батыр икәүләп бик күп ерҙәр йөрөп, арып-талып килеп инәләр. Аҡъял батыр артыҡ хәл һорашып тормай:

— Әйҙәгеҙ, тиҙерәк ашағыҙ, беҙҙең бер эш бар. Эшкә башлағансы, һеҙгә бер һүҙ әйтергә кәрәк: һеҙҙең бармаҡтарығыҙ ҙа, ҡолаҡтарығыҙ ҙа юҡтан ғына өҙөлмәгән, ана теге, өрлөктә һалынып торған аҡ һаҡалдың эйәһенең эше булһа кәрәк,— ти. Шунан һуң ғына Урман батыр менән Тау батыр, бер-береһенә ҡарашып, икеһе бер юлы:

— Дөрөҫ, батыр, шулай булды шул,— тип ауыр ғына көрһөнөп ҡуйған булдылар, ти. Шунан Аҡъял батыр:

— Беҙгә ул ҡартты эҙләп табырға, үс алырға кәрәк,— ти.

Батырҙар ашап-эсеп тамаҡ туйҙырҙылар ҙа, ҡоралдары менән теге ҡарттың һаҡалын алып, өсәүләшеп юлға сығып китәләр.

Өс батыр, тауҙарҙы, урмандарҙы, яландарҙы үтеп, бер бик ҙур тауҙың башына менеп етһәләр, алыҫ түгел бер ерҙә берәүҙең саң туҙҙырып йүгереп китеп барғанын күреп ҡалалар. Шул саҡ Аҡъял батыр:

— Егеттәр, ана теге ҡарт беҙҙән ҡасып бара,— ти.

Батырҙар йүгерә башлай. Ҡарт ҡаса, батырҙар ҡыуа, ҡарт ҡаса, батырҙар ҡыуа. Эй ҡыуалар, эй ҡыуалар, ти. Бер заман тауҙың тап башына менеп еткәс кенә, ҡарт ҡапыл ғына күҙҙән юҡ була ла ҡуя. Батырҙар ҡарт юғалған урынды барып ҡараһалар, бер ҙур ҡыуыш барлығын күрәләр. Был ҡыуыш тауҙы туп-тура өңөп төшкән, бик тәрән соҡор булып сыҡҡан. Батырҙар бер-береһенә ҡарап, аптырашып торҙолар, ти. Аҡъял батыр:

— Был тау аҫтында берәй хәл булырға тейеш. Төшөргә, унда булған хәлдәрҙе беҙгә белергә кәрәк. Йә, батырҙар, ҡайһығыҙ төшә? — ти. Батырҙар өндәшмәйҙәр. Шунан һуң Аҡъял батыр:

— Улай берегеҙ ҙә төшөргә теләмәһәгеҙ, мин һеҙгә төшөргә ҡушам! — тигәс, Тау батыр батырсылыҡ итә:

— Ярар, улай булғас, мин төшәм,— ти.

Теге ҡарттың һаҡалын алып, арҡан ишәләр ҙә Тау батырҙы арҡан бәйләп, төшөрә лә башлайҙар. Бер аҙ ғына төшә биргәс, Тау батыр ҡысҡырып ебәрә:

— Ай, төшә алмайым, зинһар, сығарығыҙ! — ти.

Быны кире тартып сығаралар. Тау батыр ер өҫтөнә килеп сыҡты ла:

— Әл дә тартып алдығыҙ, әтү үлер инем: үҙе ҡараңғы, үҙенән әллә ниндәй еҫ килә, бик ҡурҡыныс ер икән,— тип ҡуйҙы, ти.

Шул саҡ Аҡъял батыр:

— Тау батыр, һин батырлығыңды юғалттың, батырҙар соҡорҙан, тауҙан, елдән, һыуҙан ҡурҡмайҙар, батыр ҡаршыһында ҡурҡыныс бер нәмә лә юҡ, батыр үлемдән ҡурҡмаҫ булыр! — ти.

Аҡъял батырҙың һүҙен тыңлап торғандан һуң, Урман батыр:

— Ҡана, бәйләгеҙ, үҙем төшөп сығам! — ти. Аҡъял батыр, ышаныр-ышанмаҫ ҡына:

— Ярар, улай булғас, төшөп ҡара,— ти. Урман батырҙы биленән бәйләп, төшөрә лә башлайҙар. Аҙ ғына төшөрә биргәс:

— Батырҙар, юҡ, мин төшә алмайым, зинһар, тартып алығыҙ! — тип ҡысҡыра.

Аҡъял батыр, был батыр ҙа ысын батыр түгел икән, тип уйлап тора ла, тегене кире тартып сығара.

— Урман батыр һинән дә эш сыҡманы, батыр һүҙе бер була ул. Һеҙҙән изгелек булмаҫ, ахыры. Үҙемә төшөргә тура килә,— тип, арҡанды яҡшылап, бер нисә тапҡыр тикшереп сыға ла:

— Ярар, егеттәр, төшәм, иллә мәгәр һеҙ китмәгеҙ. Мин әйләнеп сыҡҡансы, көлдән күмәс бешереп, көн күреп, ошо ерҙән китмәй мине көтөп тороғоҙ! — ти.

Арҡанға тотоноп, соҡорға төшә башлай. Соҡор төбөнә төшөп тә етә, тирә-яҡҡа ҡарап ала: «Был ниндәй ер икән, бында тағы ла ниндәй донъя бар икән?» — тип уйлап ҡуя. Уйлап-уйлап ултыра ла төрлө яҡтарға таралып киткән юлдарҙың береһенән сығып китә.

Аҡъял батыр бик оҙаҡ ваҡыттар бара торғас, бик матур һалынған бер ҡала ситенә килеп сыға. Тирә-яҡҡа ҡарап торғандан һуң, үҙенең ҡатҡан болан тунын кейгән, бер батманлы йәйәһен, ярты батманлы уғын аҫҡан, осоп килгән йөндө урталай ҡырҡып төшөрә торған үткер ҡылысын таҡҡан көйгә, ҡаланың ситен-

дәге бер бәләкәй генә өйгә барып инде, ти. Өйгә барып инһә, алама ғына кейенгән бер ҡарт менән бер әбей ултыра икән. Аҡъял батыр бер аҙ хәл йыйғандан һуң, ҡарт менән әбейҙән былдағы хәлдәрҙе һораша башлай. Ахырҙа үҙенең кем булыуын, илдән нисек сығып киткәнен һөйләп аңлата. Ҡарт менән әбей егеттең Аҡъял батыр булыуын белгәс:

— Балам, һин тиҙ генә һыуға барып кил инде,— тип әйттеләр, ти. Аҡъял батыр:

— Ниңә, бабай, әллә һеҙҙә һыу бик алыҫмы? — тип һорай.

— Балам, беҙҙә һыуҙы үлсәү менән генә бирәләр. Беҙҙең һинең тамағыңа әҙерләү өсөн һыуыбыҙ юҡ. Ә һин ҡунаҡ кеше булғас, һиңә бер силәк һыуҙы бер һүҙһеҙ бирерҙәр,— ти. Аҡъял батыр оҙаҡ уйлап тормай:

— Ҡана, инәй, силәгеңде бир, улай булғас, мин тиҙ генә барып һыу алып ҡайтайым,— тип, силәкте күтәреп һыуға китә.

Урамдың буйынан буйына барып, ҡаланың икенсе осондағы бер быуа эсенә шаулап ағып ята торған һалҡын һыулы бер бәләкәй генә йылға эргәһенә барып, силәген батырып, һыу алырға ғына торғанда:

— Һин нишләп һыуға килдең? Һин кем булаһың? — тигән ҡалын тауыш ишетелә. Аҡъял батыр:

— Мин — ҡунаҡ,— тигәс:

— Ярар, ҡунаҡ булһаң, бер силәк һыу ал инде,— ти теге тауыш.

Аҡъял батыр силәген тултырып алып китә. Һыу күтәреп урам буйлап ҡайтып барғанын күргән халыҡтар тәҙрәнән баштарын тығып ҡарап торалар, ти.

— Был ниндәй кеше булыр икән, был ваҡытта нисек һыу ала алды икән? — тип һөйләшәләр, ти.

Аҡъял батыр һыуҙы өйгә алып ҡайтып ултыртыр-ултыртмаҫтан уҡ, ҡарт менән әбей силәк өҫтөнә ябырылып, ҡабаланып эсә башлайҙар. Һыу Аҡъял батырҙың үҙенә етмәй ҡала. Ҡарт менән әбей һыуһындары ҡанғас, Аҡъял батырға:

— Балаҡай, һин беҙгә көймә инде, беҙ бик һыуһағайныҡ. Һин алып ҡайтҡан һыуҙы эсеп бөтөрҙөк тә ҡуйҙыҡ,— тигәс, Аҡъял батыр тәрән уйға сумып торҙо ла, үҙ алдына һөйләнә башланы, ти: «Әҙәм балаһы был донъяла йәшәргә тыуған. Ниңә һуң ул туҡтауһыҙ ағып ятҡан һыуҙы ла үҙе теләгәнсә эсә алмай? Булмаҫ, был эштең былай булыуы мөмкин түгел. Мин ысын батыр булһам, был хәлгә сыҙап тора

алмам, ул яуыз йән менән һуғышырға, халыҡҡа рәхәт көн тыуҙырырға тейешмен!» — тип, тиҙ генә ҡылысын биленә тағып, силәген beләгенә элеп, сыға башлағас, бабай менән әбей, батырҙың итәгенә йәбешеп:

— Балаҡайым, зинһар, бара күрмә инде, үҙеңде харап иттерерһең, ваҡытһыҙыраҡ бараһың, унда һине үлтерерҙәр,— тип илаша-илаша Аҡъял батырҙы ебәрмәҫкә тырыша башлағас, Аҡъял батыр:

— Иламағыҙ, иламағыҙ, ул мине үлтерә алмаҫ. Минең был беләктәрем уның һымаҡ яуыздарҙы күп күргән, егет һүҙе бер булыр, мин һеҙҙе был яфанан ҡотҡарырға тейешмен! — тип сығып киткән. Бабай менән әбей бик ныҡ ҡурҡышып, Аҡъял батырҙы йәлләп, илашып ҡалдылар, ти.

Аҡъял батырҙың урам буйлап икенсе ҡат китеп барғанын күреп, халыҡтар тағы ла аптыраша төштөләр, ти. Уның һәр ваҡыт ҡылыс тағып йөрөүенә ғәжәпләнәләр икән: «Был кеше нишләп тағы һыуға бара икән, ниңә ул ҡорал менән йөрөй икән?» — тигән уйға ҡалдылар, ти.

Аҡъял батыр йылғаға барып етә лә, өндәшмәйнитмәй генә батырып һыу ала башлай. Шул саҡ ҡайҙандыр теге иргәйел килеп сығып, батырға ташланғайны, Аҡъял батыр, ҡылысын ала һалып:

— Әһә, һин икәнһең! Мин һине эҙләп бында килеп сыҡтым. Һин әле минең иптәштәремде рәнйетеү генә етмәгән, бөтә ил халҡын һыуһыҙ мантыҡтырып ята икәнһең. Һаҡалыңды ла мин өҙгәйнем, хәҙер инде башыңа ла мин етәм! — тине лә, ҡарттың башын өҙә сапты ла ҡуйҙы, ти.

Ҡартты үлтереп ташлап, үҙе тулы силәк һыу күтәреп, урам буйлап ҡайтышлай осраған бер кешегә:

— Һыу алырға барығыҙ, мин һеҙгә һыу бирмәй ятҡан яуыз ҡартты үлтерҙем, хәҙер һыу иркен ҡалды, теләгәнсә алығыҙ! — тип һөрән һалып уҙған.

Аҡъял батырҙың был һүҙҙәренә ышаныр-ышанмаҫ торған халыҡ, береһе артынан икенсеһе, өсөнсөһө, башҡалары йүгереп барып, яр өҫтөндә һыу хужаһының үле кәүҙәһен күргәс, бөтә ҡалаға шатлыҡлы хәбәр таралды, ти: «Илебеҙгә бер батыр килгән, иргәйелде үлтергән, һыу алыу ирекке ҡалған!»

Һәр бер өйҙән дүртәр, бишәр силәк күтәреп йүгерешәләр. Бер нисә сәғәт эсендә бөтә ҡала халҡы һыуға туйына. Аҡъял батырҙың арымай-талмай таҙа егет булып йәшәүен теләп таралдылар, ти.

Ағъял батыр тағы ла бер силәк һыу күтәреп өйгә ҡайтып ингәс, ҡарт менән әбей аптырап ҡалалар:

— Балаҡай, нисек иҫән-һау ҡайтып еттең? — тип һорау бирәләр. Аҡъял батыр:

— Мин һыу хужағыҙҙы үлтерҙем, хәҙер һыуға аптырамаҫһығыҙ инде. Ана, халыҡ ниндәй ҙур шатлыҡ менән шаулаша-шаулаша һыу ташый,— тигәс, ҡарт менән әбей ҙә, силәктәрен күтәреп, шишмәгә йүгерҙеләр, ти.

Аҡъял батыр ҡарт менән әбейҙең йорт-ҡаралтыларын ҡарап инә. Ҡарт менән әбей һыуҙан ҡайтҡас:

— Йортоғоҙҙоң башы бик иҫкергән икән, уны яңыртып ябырға кәрәк,— ти. Ҡарт әйтә:

— Йорттоң түбәһен ябырға кәрәк тиһең дә бит, улым, минең көсөм бөткән шул, ҡулымдан эш килмәй. Ярар, үҙебеҙ үлгәнсе торор әле,— ти. Аҡъял батыр:

— Ҡайҙа, улай булғас, мин үҙем һеҙгә ярҙам итәйем әле, ҡайһы урманда йүкә ағастары бар, миңә өйрәт, мин унан ҡабыҡ һуйып алып ҡайтайым,— ти.

Ҡарт урманды өйрәтеп ебәрә. Батыр урманға барып, ат йөгөнән ҙур итеп, ҡабыҡ төшөрөп алып ҡайта. Иртәгә үк йорт түбәһен ябырға булып, ҡарт менән әбейҙе һөйөндөрөп, ашап-эсеп алғас, йоҡларға яттылар, ти.

Иртән тороп тамаҡ туйҙырғас та Аҡъял батыр өй ябырға тотона. Яртыһын ябып бөтөп барғанда ғына ҡаланың бер яҡ ситендә тауыш ишетелә. Аҡъял батыр өй башынан төшә лә ҡарт менән әбейҙән һорай:

— Анау яҡта бик геүләшәләр, нимә булды икән? — ти.

Ҡарт менән әбей батырҙы унда ебәрергә теләмәгәнлектән, әйтмәҫкә тырышһалар ҙа, әйтәләр ҙә ҡуялар.

— Балам, унда бик ҙур майҙан ҡоролған, бөгөн беҙҙең илдең батшаһы майҙан яһай. Уның бер ҡыҙы бар, бик һылыу. Сәстәренең бер бөртөгө алтын, бер бөртөгө көмөш. Бына шул ҡыҙ: «Кем дә кем балдаҡҡа атып, балдаҡ үтә сығарһа, шул минең кейәүем булыр, шуға кейәүгә сығам»,— тип әйтә, ти. Атаһы, батша: «Кем дә кем минең кейәүем булһа, шуға бөтә малымды бирәм»,— ти икән,— тип әйттеләр, ти. Аҡъял батыр шул һүҙҙәрҙе ишеткәс тә, үҙенең болан тунын кейеп алып:

— Туҡта, мин дә барып ҡарап ҡайтайым әле,— тип сығып китте, ти.

Бер ваҡыт Аҡъял батыр үҙенең ҡатҡан туны менән майҙан алдына килеп баҫа. Батшаның вәзирҙәре, күп

кенә кешеләр яҡшы кейемдәр кейенеп, майҙанда беренселекте алырға килгәндәр, ти. Батша тарафынан: «Атыуға ҡатнашта балдаҡ уртаһынан атып сығара алмаған кешене бик ҡаты розга менән һуҡтырып ташларға»,— тигән закон ҡуйылған, ти. Аҡъял батыр бер нисә кешенең туҡмалғанын үҙ күҙе менән күреп торһа ла, бик ныҡ сабырлыҡ күрһәтеп, аҙаҡтан үҙе батшаның алдына бара ла:

— Батшам-солтаным, әгәр рөхсәт итһәгеҙ, мин дә атып ҡарар инем,— тип һорағас, батша:

— Күңелеңдә булғас, ниңә атмайһың, ат,— тип яуап ҡайтарған икән, шул саҡ Аҡъял батыр тағы ла:

— Батшам-солтаным, улай булғас, мин атам, минең ҡоралдарымды алып килергә бер өс кеше бирһәңсе,— тигәс, батша аҙыраҡ аптырап ҡалып:

— Ярар, ана өс санатты бирәм,— тип яуап ҡайтарҙы, ти.

Был хәлде күргән вәзирҙәр, санаттар бер-беренә ҡарашып көлөшә башланылар:

— Был ҡатҡан тунлы бәндә үҙен туҡматырлыҡ урын таба алмағандыр шул, шуға бында килгән икән,— тип әйтәләр, ти.

Күп тә үтмәй, өс санат Аҡъял батырҙың бик ҙур йәйәһе менән ярты батман уғын күтәреп килтерҙеләр ҙә, ахылдашып, ухылдашып, майҙан уртаһына ташланылар, ти. Аҡъял батыр бер уғы менән йәйәһен еңел генә күтәреп алды ла, йәйә керешен кирелеп тартып, балдаҡҡа төҙәп атып ебәргәйне, уғы балдаҡты эләктереп, батша һарайына барып ҡаҙалды, ти. Быны күреп торған майҙан халҡы аптырауҙа ҡалды, ти. Шул саҡ батша:

— Минең кейәүем дә, минең тәхетемдең хужаһы ла ошо булыр,— тип, Аҡъял батырҙы һарайына алып инеп китте, ти.

Аҡъял батыр бер бөртөгө алтын, бер бөртөгө көмөш сәсле ҡыҙҙың кейәүе булып, тәхеткә менеп ултырҙы, ти.

Аҙмы-күпме ваҡыт үткәс, икенсе бер батшалыҡтан: «Тиҙҙән майҙан йыйыла. Кем дә кем энә күҙенә уҡ ата ала, батша тулған ай һымаҡ нурлы йөҙлө ҡыҙын шул кешегә кейәүгә бирә, мөлкәтен уның ҡарамағына тапшыра»,— тигән хәбәр килеп төшә. Аҡъял батыр шул майҙанға барыу ниәте менән ҡатынына әйтә:

— Мин ошо арала һунарға сығып ҡайтырға уйлайым,— ти.

Үҙенең майҙанға барған миҙгелендә яратып кейә тор-

ған болан тунын кейеп, ҡоралдарын аҫып сығып китте, ти.

Көн китте, төн китте, байтаҡ ваҡыттар үтте, ти. Бына бер көн Аҡъял батыр майҙан асылған ергә лә барып етте, ти. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, майҙан хәлен белгәс:

— Ярар, улай булғас, мин һуңға ҡалмағанмын икән әле,— тип әйтте, ти.

Был майҙанда: «Кем дә кем тура ата алмаһа, ул кешенең ҡулын ҡырҡып ташларға»,— тигән шарт ҡуйылған икән. Аҡъял батыр унан тартынмайынса, майҙан башлығына барып, үҙенең атып ҡарарға теләге барлығын белдереп, рөхсәт һораны, ти. Рөхсәт ителгәс, үҙенең бик нескә башаҡлы бер уғын алып атып ебәргәйне, уғы энә күҙенә барып тейеп, Аҡъял батыр был батшалыҡтың да кейәүе булып, батшаның ҡыҙын икенсе бисәлеккә алып, донъя көтә башланы, ти.

Бер нисә аҙна үткәндән һуң, был батшалыҡтан алыҫ түгел тағы ла бер батшалыҡта ҙур майҙан асыласағы тураһында хәбәр таралды, ти. Был батшалыҡтың башында бер ҡыҙ батша ултыра икән. Ул ҡыҙ үҙе батырҙарҙың батыры икән, ти. «Әгәр ҙә көрәштә миңә сыға алған батыр булһа, мин шул батырға кейәүгә сығам, батшалығымды шул кеше ҡулына бирәм»,— тип әйткән, ти. Ә ҡыҙ батша үтә ғәйрәтле генә түгел, өҫтәүенә бик матур ҙа — бөтә донъяла иң гүзәл ҡыҙ икән, ти. Был хәбәрҙе ишеткәс, Аҡъял батыр тыныс ҡына ята алмаған:

— Мин шул майҙанды күреп ҡайтайым әле,— тип, бисәһенән рөхсәт һораған. Бисәһе быға ризалыҡ белдергән, ти.

Аҡъял батыр, үҙенең әлеге болан тунын кейеп, ҡоралдарын аҫып, йәнә юлға сығып киткән. Киткән дә киткән, алһыҙ-ялһыҙ килә торғас, баһадир ҡыҙ батша ҡалаһына ла барып еткән, һораша-һораша майҙан ҡоролған ергә килгән. Килһә, ярыш башланған, бер нисә егеттең башы ботаҡлы бер йыуан бағанаға элеп тә ҡуйылған, ти, инде. Ҡыҙ батшаның фарманы шулай икән шул: «Көрәштә ҡатышып та еңә алмаған егеттең башын сабып өҙөргә!»

Аҡъял батыр байтаҡ ваҡыт ҡарап-күҙәтеп торған да, бик һолло тотоноп, тырышып-тырмашып көрәшкән тағы бер нисә егеттең башы сабып өҙөлгәнен күргәс:

— Рөхсәт итһәгеҙ, һеҙҙең менән мин көрәшеп ҡарайым әле,— тип, ҡыҙ батшанан рөхсәт һораған, ти.

Быны ишетеп, майҙан гөж килгән:

— Ҡатҡан туныңды кейеп, башыңды өҙҙөрөргә килгәнһең икән, алйот! — тип ҡысҡырғандар.

— Ҡайҙа инде ул һиңә? Ана ниндәйерәк батша уландары, һомғол егеттәр ҙә еңә алманылар, баштарын саптырҙылар!

Аҡъял батырҙы мысҡыллап көлгән тауыштар ҙа ишетелде, ти.

— Алай үләһең килгәс, әйҙә, сыҡ һуң уртаға,— тип, бына Аҡъял батырға таҫтамал килтереп бирҙеләр, майҙанға саҡырҙылар, ти.

Аҡъял батыр килеп сыҡҡайны, ҡыҙ батша таҫтамалын елпей-елпей ҡаршы килеп:

— Йә, егет, алай бик теләгәс, көрәшһәк көрәшеп ҡарайыҡ һуң,— тип, таҫтамалын етеҙ генә Аҡъял батырҙың биленә һалды, ти.

Ҡыҙ батыр Аҡъялды ла баяғы егеттәрҙе ырғытҡан һымаҡ ҡына алып ырғытырға ынтылғайны ла,— булдыра алманы, ти. Аҡъял батыр ҡыҙ батшаны биленән шундай ҡаты итеп ҡыҫып алып, һауаға сөйөп ебәрҙе лә, төшөп килгәнендә, ҡабат тотоп алып, ике беләгенә һалып күтәреп алып барып, майҙан ситендәге затлы урындығына ипләп кенә ултыртты, ти. Шунан батыр ҡыҙ майҙандағы халыҡҡа ҡарап:

— Батырҙың батырлығы кейемендә түгел, көсөндә. Мин — бөгөндән ғәйрәтле лә, әҙәпле лә ошо егеттең ҡатынымын! — тип, урта бармағынан алтын балдағын һурып алып, Аҡъял батырға бирҙе, ти. Ә Аҡъял батыр үҙ балдағын уның бармағына кейҙерҙе, ти. Майҙанды ябып, ҡыҙ Аҡъялды етәкләп, батша һарайына инеп киттеләр, ти. Майҙан халҡы:

— Ҡайҙа тыуған да, ҡайҙа үҫкән был егет? — тип уйланып, аптырашып, шул уҡ ваҡытта тағы ла күпме егеттең башы киҫелмәүенә шатланып таралышты, ти.

Аҡъял батыр ана шулай баһадир ҡыҙ батшаны ла үҙенә алып, ер аҫтындағы өс батшалыҡтың һис ниндәй дошман еңә алмаҫ хакимы булып танылды, ти.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Аҡъял батыр ер өҫтөндә ҡалған иптәштәрен иҫенә төшөрөп, һиҫкәнеп китте, ти. Үҙе сыҡҡансы көтөп торорға ҡушып киткәнен хәтерләп, уйланып, көрһөнөп ҡуйҙы, ти. Шунан ул уйхәсрәтен бисәһенә һөйләп:

— Мин бит ер йөҙөндә йәшәгән батырмын, мин үҙ илемә ҡайтырға тейешмен,— тип әйтте, ти.

Аҡъял батырҙың бисәһе быға ризалыҡ белдерҙе, ти. Күп тә үтмәй, бик күп малдар алып, ҡоралдар тейәп, юлға сығалар. Юлда килә торғас, Аҡъял батырҙың

икенсе бисәһенең иленә килеп етәләр. Аҡъял батыр көрәшеп алған батыр бисәһенә бөтә хәлде аңлата:

— Мин һине ташламайым, һин минең менән ғүмерлек булып ҡалырһың. Ә был бисәләрем, тау башында мине көтөп торған Тау батыр, Урман батыр тигән иптәштәремә булырҙар, ти. Аҡъял батыр юл ыңғайында тәүге бисәләренә инеп, уларҙың да малдарын-байлыҡтарын тейәп, үҙе менән алып китә. Шулай килә торғас, Аҡъял батыр иргәйелде үлтереп, шишмә һыуын халыҡҡа ҡайтарып биргән ҡалаға килеп етәләр. Аҡъял батыр бисәләренә әйтә:

— Туҡтағыҙ әле, минең иң башта төшкән урыным бына ошо ине,— тип, түбәһен яба башлап киткән өйгә, ҡарт менән әбейҙең хәлдәрен белергә, инеп китте, ти.

Ҡарт менән әбей Аҡъял батырҙы күргәс:

— Әй, беҙҙең улыбыҙ ҡайтты! — тип шатланышып ҡаршы алдылар, ти.— Ҡайҙа булдың, низәр күрҙең? — тип һораша башланылар, ти. Аҡъял батыр үҙенең йөрөгәндәрен, күргәндәрен берәм-берәм һөйләп бөткәс, ҡарт менән әбей Аҡъял батырға аҡыл бирҙеләр, ти:

— Аҡъял батыр улым, һин күп илдәр үтеп, күп байлыҡтар тапҡанһың. Бында үҙең төшкән ер тишегенә барып еткәс иң башта һин үҙең сыҡ, унан малдарыңды, шунан һуң ғына бисәләреңде сығарырһың. Ишетһен ҡолағың, беҙҙең һүҙҙе тот,— тип әйттеләр, ти.

Был көн ҡала халҡы өсөн бер байрам көнөнә әйләнеп китте, ти. Аҡъял батыр бабай менән әбейгә бик күп мал бүлеп биргән. Был хәлде ишетеп, бөтә халыҡ Аҡъял батыр эргәһенә йыйылды, уның көсһөҙҙәр, иҙелеүселәр, малһыҙҙар хәлен ҡайғыртып йөрөүсе бер батыр ир булыуын маҡтаны, ти. Атһыҙҙарға ат, һыйырһыҙҙарға һыйыр, айыры тояҡ ғәйре мал өләшкәне өсөн ҡат-ҡат рәхмәт уҡынылар, ти. Аҡъял батыр ҙа әбей менән бабайға, бөтә ҡала халҡына бәхетле тормош теләп, юлға сыҡты, ти.

Күп малдарҙы тейәп, өс бисәһе менән бара торғас, үҙе төшкән тау тишегенә килеп етәләр. Тау тишегенә килеп еткәс тә, Аҡъял батыр, Тау батыр менән Урман батыр әҙерләп ҡуйған арҡанға малдарын бәйләп, берәм-берәм мендерә башлай. Өс бисәһен сығарғандан һуң, иң аҙаҡтан үҙе сығырға була. Әммә ул уйлағанса булмай шул. Малдарын, бисәләрен тартып алғас, Аҡъял батырҙың үҙенең менеп килгәнен күреп ҡалалар ҙа, Тау батыр менән Урман батыр, бер-береһенә ымлашып: «Әгәр ҙә беҙ уны сығарһаҡ, ул беҙгә бер нәмә лә бирмәҫ, әйҙә, кире төшөрөп ебәрәйек»,— тип, ар-

ҡанды ҡырҡтылар ҙа ҡуйҙылар, ти. Аҡъял батыр, дөбөр-дөбөр ер аҫтына төшөп китеп, шунда тороп ҡалды, ти. Хыянатсылар, малдарҙы, бисәләрҙе үҙҙәренә алып, илдәренә ҡайтып киттеләр, ти.

Аҡъял батыр соҡор төбөндә бик оҙаҡ уйланып ултырғандан һуң: «Ярар, былар мине былай итеп ҡалдырҙылар инде. Әгәр мин батыр икәнмен, был хәлдән сығыу әмәлен дә табырға тейешмен»,— тип, кире теге ҡалаға китте, ти. Ҡабат килеп ингәйне, баяғы әбей менән бабай аптырап ҡалдылар, ти.

— Ни булды, улым, берәр хәлгә тарыныңмы әллә?— тип һораша башланылар, ти. Аҡъял батыр:

— Мин һеҙҙең һүҙҙе тотмай яңылыштым. Һеҙгә ҡабат кәңәшкә килдем. Миңә тағы ла аҡыл бирегеҙ,— тип, ни булғанын барыһын да һөйләп бирҙе, ти.

Әбей менән бабай, быны бик ауыр хәлдә ҡалыуына борсолоп:

— Эй, балам, бик ҙур хаталыҡ яһағанһың икән, нишләп ҡарайыҡ инде? — тип ҡайғырышып алдылар ҙа: — Бына, улым, беҙҙең һиңә аҡтыҡ аҡыл шул. Әгәр булдыра алһаң, шулай итеп ҡара: бынан бик алыҫ түгел бер ҡара урман бар. Унда бер сәмреғош йәшәй. Уның балаларын йыл һайын бер аждаһа ашап бөтөрөп тора. Әгәр һин шул ҡоштоң балаларын аждаһа ауыҙынан тартып ала алһаң, ул ҡош һине, бәлки, тау тишегенән яҡты донъяға алып сығыр,— тип әйттеләр, ти.

Бабай шул һүҙҙәрҙе һөйләгәс, Аҡъял батырҙың йөҙө асылып китте, ти. Тамағын туйҙырып алғас, ҡылыс менән уҡ-йәйәһен тағып, ҡара урманға ҡарап сығып китте, ти.

Аҡъял батыр ҡара урмандың уртаһына барып, бер йыуан ағас төбөнә яҡынлашҡас, ҡош себештәренең тауыштарын ишетә. Ныҡлабыраҡ ҡараһа — бабай менән әбей әйткән сәмреғош ояһы ошонда икән. Аҡъял батыр ағас башына үрмәләй. Шул саҡ себештәр илаша башлай:

— Ағай, һиңә нимә кәрәк? Ана беҙҙе бер аждаһа ашарға килә бит! — тиҙәр.

Аҡъял батыр артына әйләнеп ҡараһа, урманды ярып, дауыл ҡуптарып, был яҡҡа бер аждаһа йылан шыуыша, ти.

Аҡъял батыр, төшә һалып, ҡылысын ҡынынан сығарып, аждаһаны көткән. Теге килеп етеп, туп-тура ағасҡа үрмәләй башлаған икән, Аҡъял батыр яуыздың башын сапҡан да өҙгән. Шунан кәүҙәһен тураҡ-

лап, әрҙәнә итеп өйөп, сәмреғоштоң балаларына күрһәткән. Аждаһанан ҡоттары осҡан себештәр, был хәлде күргәс, бик шатланғандар, ти.

— Аҡъял батыр ағас башындағы ояға менеп ултырып, себештәргә үҙ хәлен һөйләгән. Шул арала, ҡанаттарын елпеүҙән ел-дауыл сығарып, сәмреғош та ҡайтып төшкән. Был саҡ себештәр Аҡъял батырҙы үҙҙәренең ҡанаты аҫтына йәшереп ултырғандар. Сәмреғош ояға килеп төшкән дә, тирә яғына ҡаранып:

— Фу-фу, әҙәм еҫе сыға. Ҡайҙа ул? Хәҙер ашайым үҙен,— тип әйтә, ти. Сәмреғоштоң бер себеше:

— Әсәй, ана ағас төбөнә ҡара әле, нәмә ятҡанын күрерһең! — ти. Сәмреғош аптырап ҡала:

— Ә... был теге аждаһа ла баһаң! Нисек ашаманы ул һеҙҙе? Кем үлтерҙе уны? — ти. Ҡоштоң һорауы була, себештәре сыр-сыу килә:

— Беҙҙе бер ағай ҡотҡарҙы. Әсәй, һин уға теймә, йәме? Теймәҫһеңме? Әтеү күрһәтмәйбеҙ.

— Ярар-ярар, теймәм. Ҡайҙа ул, күрһәтегеҙ.

Себештәренең ҡанаты аҫтынан бик дәү кеше килеп сыҡҡас, сәмруғ, суҡышын шаҡылдатып, ынтылып-ынтылып ҡуйҙы, ти, Аҡъял батырға. Балалары: «Әсәй!» — тип ҡысҡырғас ҡына туҡталып ҡалды, ти.

Аҡъял батыр, башынан үткән хәлдәрҙе һөйләп, үҙенең бынан алыҫ түгел бер тау тишегенән яҡты донъяға сығырға теләүен белдергәс, сәмреғош:

— Ярар, егет, мин һиңә ярҙам итәм, тик һин миңә ашарға бер тоҡ сыйырсыҡ, бер тоҡ сәпсек әҙерлә, унан осоп китербеҙ,— ти.

Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, Аҡъял батыр тиҙ генә урманға сығып китеп, оҙаҡ та үтмәй бер тоҡ сыйырсыҡ, бер тоҡ сәпсек йыйып ҡайтып килгән. Шунан теге ҡош:

— Иә, егет, минең арҡама менеп ултыр. Уңға ҡарағанда сыйырсыҡ, һулға ҡарағанда сәпсек һоғондороп барырһың,— тигән.

Шулай итеп, былар тау тишегенән менеп баралар, менеп баралар, ти. Һаман менәләр, һаман менәләр, менгән һайын тау тишеге тарая бара икән. Сәмреғоштоң ҡанат осо тейгән урындан ер ишелеп, суҡышы тейгән ерҙән киртләс-киртләс баҫҡыс яһалып ҡала бара, ти. Былар артынан тау юлы киңәйеп, ер аҫтына ҡояш яҡтыһы төшөп, бөтә ҡаланы яҡтыртып ебәрҙе, ти. Ҡала халҡы:

— Һыуһыҙ инек, һыу булды, малһыҙ инек — мал булды, йортобоҙ яҡтырҙы, йөҙөбөҙ асылды,— тип һөйөнештөләр, ти.

Инде сығып еттек тигәндә, һыйырсыҡ та, сәпсек тә бөткән бит. Инде нишләргә? Сәмруғ уңға ла ҡарай, һулға ла — ә ҡаптырырға һыйырсыҡ та юҡ, сәпсек тә юҡ. Күп уйлап тормай, Аҡъял батыр үҙенең балтыр итен ҡырҡып һоғондора башлағайны, шул арала тау өҫтөнә менеп тә еттеләр, ти. Тау өҫтөнә менгәс, сәмреғош:

— Йә, егет, төш инде,— ти.

Аҡъял батыр төшкәйне, аяғына баҫып тора алмай йығылды ла китте, ти.

— Ни булды егет?

— Мин һиңә балтырымды ҡырҡып алып һоғондорғайным...

— Әйтәм, һуңғы ике йотомом бик тәмле булды. Ҡана, күрһәт әле.

Балағын күтәреп, балтырын күрһәткән икән, сәмруғ ике тапҡыр кикереп, балтыр итен ҡоҫҡан да, уны урынына ҡуйып, төкөрөгө менән һылап йәбештергән. Шунан һуң Аҡъял батыр һин дә мин аяғына баҫҡан, ҡошҡа ҙур рәхмәттәр әйткән. Хушлашҡандар. Сәмреғош түбән төшөп киткән, Аҡъял батыр үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡартты ҡыуып килгән юлдан Тау батыр менән Урман батырҙы юллап киткән.

Хыянатсы юлдаштарын ҡыуып етергә тырышып атлаған да атлаған Аҡъял батыр. Ашығып бара торғас, үҙенең баһадир бисәһенең йырлағанын ишеткән:

Урал тауҙары борма-борма,
Бормалары һайын айырма.
Бөтә батырҙарҙан көслө булған
Һөйгән батырымдан айырма.

Ошо йырҙы ишетә-ишетә Аҡъял батыр килеп еткән икән, тегеләр ҡойолған да төшкән. Тау батыр, Аҡъял батырҙың алдына теҙләнеп:

— Батырҙарҙың батыры, көсһөҙҙәр менән иҙелгәндәрҙең иң яҡын таянысы Аҡъял батыр! Һинең батырлығың, ғәйрәтең минең йөрәгемдә һиңә ҡаршы ҡара уй тыуҙырҙы. Мин һинең ирлек намыҫыңа ҡаршы ҡул күтәрҙем. Ниндәйҙер бер йәшерен көс минең ҡулдарымды һиңә ҡаршы күтәрергә мәжбүр итте. Эшләгән эшемдең язаһы үҙ өҫтөмдә, был язаны кисереү, батырҙар батыры Аҡъял батыр, һинең иркеңдә,— тине лә, маңлайын ергә ҡуйып, өс тапҡыр уҡ-һаҙағын үпте, ти. Аҡъял батыр:

— Алтын ерҙә ятып тутыҡмай,— тип яуп ҡайтар-

ҙы, ти. Тау батырҙы ғәфү итеп, тағы ла алға табан киттеләр, ти.

Шулай итеп былар күп ерҙәр күреп, күп йыл ғүмер уҙҙырып, үҙҙәренең тыуған илдәренә ҡайтып барышлай, былар Урман батырҙың иленә килеп еттеләр, ти. Шул саҡ Аҡъял батыр:

— Батырҙар, хәҙер беҙгә таралырға ваҡыт етте,— ти.— Һеҙгә әйтә торған һүҙҙәрем бар, ошо ерҙә һеҙгә ул һүҙҙәремде әйтеп үтәм,— ти ҙә, былай тип, һөйләргә тотона:

— Бынан һуң үҙегеҙ менән йөрөгән иптәштәрегеҙгә бер ваҡытта ла яуызлыҡ күрһәтмәгеҙ. Ҡарттар: «Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын»,— тигәндәр. Үҙ иптәшеңә һәр ваҡыт ярҙам итергә кәрәк. Мин һеҙҙең ташлап китеүегеҙгә үпкәләмәйем. Һеҙ мине, мал, бисәләр өсөн ҡыҙығып, шулай эшләнегеҙ. Ярар, ҡабат улай итмәҫһегеҙ. Урман батыр хәҙер донъя көтөргә тейеш, уға мал биреп, өлөш сығарырға кәрәк,— ти ҙә, Урман батырға күп кенә мал бүлеп, бер бөртөгө алтын, бер бөртөгө көмөш сәсле бисәһен уның ҡарамағына тапшыра. Тағы ла әйтә:

— Урман батыр, әгәр ҙә минең менән дуҫ булырға теләһәң, мин һиңә серемде асам. Мин ике йөрәкле кеше. Минең йөрәгем ошо булыр,— тип, ҡултыҡ аҫтынан алып бер аҡ беләү ташын күрһәтте, ти.— Минең иҫән-һаулығымды шунан белерһең: иртә менән сыҡ та йондоҙ һана; әгәр ҙә һанаған саҡта йондоҙҙар таҡ булһа, мин ауырыу булырмын; әгәр ҙә йондоҙҙар йоп булһа, мин иҫән булырмын,— тип, Урман батыр менән ҡул бирешеп, ҡосаҡлашып, һаубуллаштылар, ти.

Тау батырҙың тыуған иленә килеп еткәс, Аҡъял батыр уға ла мал бүлеп биргән, үҙенең икенсе бисәһен уға бисәлеккә ҡалдырған. Аҙаҡ бер ҡурай тотторған да:

— Тау батыр, һин һәр көн һайын иртә менән тышҡа сыҡ та, ошо ҡурайҙы һыҙғыртып ҡара. Әгәр ҙә һыҙғыртҡан сағында ҡан тамһа, мин ауырыу булырмын; бер нәмә лә таммаһа, мин таҙа булырмын,— тигән.

Тау батыр менән дә ҡосаҡлашып хушлашып, Аҡъял батыр үҙ иленә ҡайтып китте, ти. Оҙаҡ ваҡыттар үткәндән һуң, үҙ иленә етеп, ҡыҙ батыр бисәһе менән донъя көтә башланылар. Аҡъял батыр, көн аралаш бер тапҡыр урманға һунарға сығып, төрлө ҡоштар, йәнлектәр аулап алып ҡайта башланы, ти.

Көндәрҙең береһендә Аҡъял батыр һунарға сығып киткәс, бисәһе эргәһенә ниндәйҙер бер әбей килеп инеп, бер аҙ ултыра төшкәс, ҡыҙ батырҙан:

— Һине ирең яратамы, яҡшы тораһығыҙмы? — тип һораны, ти. Аҡъял батырҙың бисәһе, ирен маҡтап:

— Аҡъял батыр менән минең тормошом шундай яҡшы, күңелле, һис бер кем дә беҙҙе айыра алырлыҡ түгел! — тип әйтте, ти.

Ҡыҙ батыр Аҡъял батырҙың илендә яңы ғына донъя көтә башлағанлыҡтан, был әбейҙең кем булыуын белә алмаған. Ә ул ошо тирәләге урманда дейеү пәрейҙәренең илендә йәшәгән бер әбей булған икән, ти. Ул Аҡъял батырҙың бисәһе бик матур булғанлыҡтан, үҙенең улына бисә итеп, урлап китергә йөрөй икән. Ҡыҙ батыр үҙ ирен маҡтай башлағас, быларҙы айырып булмаҫ микән ни, тип кире сығып киткән. Аҡъял батыр һәр көн урманға йөрөп, кисен ҡайтып йоҡлай ҙа, иртәгеһен тағы ла сығып китә икән. Ә ҡыҙ батыр теге әбей тураһында иренә бер нәмә лә һөйләмәй икән.

Бер көн теге әбей тағы ла Аҡъял батырҙың өйөнә килеп инде, ти. Был килеүендә лә Аҡъял батыр өйҙә булмаған. Был юлы әбей икенсе хәйлә ҡороп килгән икән. Өйгә ингәс тә:

— Ни хәл, балам, яҡшы ғына йәшәйһеңме? Ирең менән татыу тораһығыҙмы? Ирең һине яратамы? — ти.

Аҡъял батырҙың бисәһе әлеккесә:

— Ярата, бик ярата, әбей,— ти.

— Ирем ярата тиһең дә тиеүен, һуң иреңдең йөрәге нисәү икәнен беләһеңме? Ул һиңә әйткәне бармы? Әгәр ҙә мәгәр ирең бик ныҡ ярата икән, үҙенең икенсе йөрәгенең ҡайҙа икәнлеген һинән йәшермәҫ, әйтер. Ә белдерергә теләмәһә, һине яратмауы шул булыр. Ирең ҡайтҡас, һорашып ҡара, һынап бел,— тине лә, тиҙ генә сығып китте, ти.

Оҙаҡ та үтмәй, Аҡъял батыр ҡайтып инә. Үҙенең урманда күргәндәрен, бик күп йәнлектәр үлтергәнен һөйләй. Ашап-эсеп тамаҡ туйҙырып алғас, тағы ла донъя хәлен һөйләшеп ултырғанда, бисәһе ҡапыл ғына:

— Әй, һин мине яратаһыңмы? — тип һорау бирҙе, ти.

Аҡъял батыр:

— Мин һине донъялағы бөтә нәмәләргә ҡарағанда ла нығыраҡ яратам, һине бер ваҡытта ла ташлаясаҡ түгелмен! — ти. Шул саҡ бисәһе:

— Әй, батырым, яратыуың ысын булһа, йәнеңдең нисәү булыуын әйт,— ти.

Аҡъял батыр йөрәктәренең ҡайҙалығын белгертәһе

килмәһә лә, бисәһен бик нык яратканлыктан әйтә лә ҡуя:

— Минең йөрәгем икәү, береһе күкрәгемдә, ә икенсеһе бына, ҡултыҡ аҫтымда,— тип, ҡултыҡ аҫтынан аҡ беләү ташы һымаҡ бер нәмә алып күрһәтте, ти.

Шунан һуң бисәһе бер һүҙ ҙә өндәшмәй. Кис була. Былар йоҡларға яталар. Иртәнсәк Аҡъял батыр үҙенең күреп ҡайтҡан йәнлектәрен ауларға тағы ла һунарға сығып китә.

Аҡъял батыр сығып китеп, күп тә тормай, әлеге әбей йылт итеп килеп тә инде, ти.

— Йә, ҡыҙым, иреңдең һине яратҡанын белдеңме, йөрәктәрен күрһәттеме? — ти. Ҡыҙ батыр:

— Әбей, Аҡъял батыр мине бик нык ярата бит ул. Йәнен минән йәшермәй, күрһәтте. Береһе — күкрәгендә, икенсеһе — ҡултыҡ аҫтында икән,— ти. Әбей быны тыңлап торҙо ла:

— Балам, һин һүҙеңдең дөрөҫлөгөнә һынау яһап ҡара әле. Ирең йоҡлаған сағында шул ҡултыҡ аҫтындағы йәнен берәй ергә ҡуйып тор, шунан һуң ул ниш-ләр икән,— тине лә.— Ярар, балам, мин ҡайтайым әле, беҙ бынан байтаҡ уҡ алыҫ торабыҙ,— тип, унан-бынан баҫып сығып китте, ти.

Аҡъял батырҙың бисәһе: «Ирем дә тиҙҙән ҡайтыр инде»,— тип ашарға әҙерләй башлай. Күп тә үтмәй, Аҡъял батыр ҡайтып инә. Ирле-бисәле ҡара ҡаршы ултырып, уйнап-көлөп, ашап эсәләр ҙә, кис булғас, йоҡларға яталар. Аҡъял батыр көн буйы һунарҙа йөрөп, арып ҡайтҡанлыктан, таңға тартым бик ҡаты йоҡлап киткән була. Шул саҡ бисәһе иренең беләү йөрәген урынынан алып сыҡты ла, үҙҙәренең өйҙәре эргәһенән ағып ятҡан йылғаның суйыр таштары араһына ташлап ебәрҙе, ти. Был ваҡыт теге әбей үҙе менән бер нисә кешене эйәртеп килеп тә етә.

Тыштан бик нык тәҙрә ҡағалар. Аҡъял батырҙың бисәһе ирен уятырға итеп ҡарай — Аҡъял батыр һис уянмай, үлек кеше һымаҡ, бер нәмә лә тоймай тик ята икән. Шул саҡ ҡатын быһың сәбәбен һиҙеп ала ла, Аҡъял батырҙың йөрәген кире урынына ҡуйырға тип, тышҡа йүгереп сығып китә. Ишекте асып, ябыр-япмаҫтан, ишек төбөндә көтөп торған пәрейҙәр уны тиҙ генә тотоп алалар ҙа, атҡа ултырып, алып сығып та китәләр. Аҡъял батыр бер нәмә лә белмәй, ғор-шар килеп йоҡлап ятып ҡала.

Байтаҡ ғүмер үтеп киткәс, көндәрҙән бер көн, Аҡъял батырҙың әйтеп ҡалдырған һүҙҙәре буйынса, Урман

батыр таң алдынан сығып йондоҙ һанап ҡараны, ти. Бер һанап ҡарай — таҡ сыға, ике һанап ҡарай — таҡ сыға. Шунан Урман батыр уны-быны уйлап тормай, тиҙ генә кейенә лә Тау батырға йүгерә. Тау батырға килеп инә лә:

— Аҡъял батыр үлгән булырға тейеш,— ти.

Тау батыр тиҙ генә ҡурайҙы ала ла, тышҡа сығып, өрөп ҡарай. Бер һыҙғырып ебәрҙе, ҡан тамды, ике һыҙғырып ебәрҙе, тағы ла ҡан тамды, ти. Былар бер-беренә ҡарашып торҙолар ҙа:

— Былай булғас, эш яҡшынан түгел икән, тиҙерәк булайыҡ,— тип, тиҙ-тиҙ генә ҡоралдарын алып, Аҡъял батырҙың иленә сығып киттеләр, ти.

Өйгә инһәләр — Аҡъял батыр йоҡлап ята, өйҙә бер кем дә юҡ, ти. Аҡъял батырҙы уятырға итеп ҡарайҙар — һис уята алмайҙар. Шунан тиҙ генә хәтерләп алып, ҡултыҡ аҫтын асып ҡараһалар,— теге аҡ беләү ташы урынында юҡ, ти. Өй эсен пыр туҙҙырып эҙләнеләр, эҙләнеләр — таба алманылар, ти. Тыштан эҙләп ҡаранылар,— унда ла таба алманылар. Шулай итеп йөрөй торғас, һыу буйына килеп ҡараһалар, Аҡъял батырҙың йөрәге сылтырап аҡкан йылға ситендә ятҡанын күреп ҡалдылар, ти. Тиҙ генә алып ҡайталар ҙа, Аҡъял батырҙың ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып ҡуялар. Аҡъял батыр бер талай ваҡыт үткәс, кирелеп-һуҙылып:

— Һай, һай, оҙаҡ йоҡлап ебәргәнмен, иптәштәр ҙә килгәндәр икән,— тип урынынан тороп ултырҙы, ти.

Тау батыр менән Урман батыр, бер-береһенә ҡарашып:

— Эйе, Аҡъял батыр, бик оҙаҡ йоҡлағанһың шул. Әгәр ҙә беҙ килеп етмәһәк, мәңгегә йоҡлаған булыр инең әле. Йөрәгеңде һыу төбөнән табып индереп, үҙ урынына ҡуйғас ҡына уяндың,— тип көлөштөләр, ти.

Шул саҡ Аҡъял батыр, тирә-яғына ҡараштырып, бисәһенең өйҙә юҡлығын күрә лә бик оҙаҡ уйға ҡала. Урынынан тороп:

— Батырҙар, мин был хәлдең серенә төшөндөм, был дейеү пәрейҙәренең эше булырға тейеш. Минең бисәмде лә, моғайын, улар урлағандарҙыр. Ҡоралланығыҙ, донъяларын туҙҙырып, минең бисәмде тартып алып ҡайтайыҡ! — тигәс, батырҙар тиҙ генә кейенеп, ҡоралланып, пәрейҙәр йәшәгән илгә ҡарап юлға сығып киттеләр, ти.

Бер заман батырҙар пәрейҙәр иленә барып етәләр. Ләкин һарайға инеү бик ҡыйын була. Һарайҙың

тирә-яғына һаҡсылар ҡуйылып бөткән икән, ти. Батырҙар уға-быға ҡарап тормай, һаҡсыларҙы ҡыҫымға алалар, бик күбеһен ҡырып ташлап, һарайҙың ишеген ҡыйрата һуғып, ишек төбөнә инеп ултыралар. Шул саҡ Аҡъял батыр бисәһенең тауышына оҡшаған бер тауыш ишетә. Ләкин уның ҡайһы урында икәнен һис тә төшөнә алмай ултыра торғас, ашханаға табан китәләр. Унда барып инһәләр, бер әбей бер бәләкәй генә алтын һауытҡа бутҡа һалып тора икән, ти. Аҡъял батыр әбейҙе күргәс тә, был тиктәҫкә булмаҫ, минең бисәмә ашарға әҙерләй торғандыр, ти ҙә, әбей башҡа эш менән булғанда, бисәһе бүләк иткән алтын балдағын тиҙ генә бутҡа эсенә батырып ҡуя. Әбей ҙуп-ҙур ауыр асҡыстарҙы алды ла, алтын һауыт менән бутҡаны күтәреп, һарайҙың икенсе осондағы ҙур ишектәрҙе асып инеп китте, ти.

Әбей сығып китеү менән берәү оло тауыш менән илай башлай. Аҡъял батыр:

— Ишетәһегеҙме, был минең бисәнең тауышы бит, таптыҡ! Әйҙәгеҙ, быларҙың ояларын туҙҙырып, көлдәрен күккә осорайыҡ! — тип, ҡоралдарын ҡул остарына ғына тотоп, һарай эсенә инә башланылар, ти. Осраған бер пәрейҙе үлтерә баралар, ахырҙа бер бүлмәгә инеп, пәрей әбейҙең үҙен дә, уның малайын да бер юлы үлтерә һуғып, тағы ла бер ишекте ҡайырып инһәләр, унда ҙур бер һандыҡ ултыра, ти. Батырҙар һандыҡты асып ебәрһәләр,— ҡалын ебәк юрғанға урап һалынған бер бисә ята, ти. Аҡъял батырҙың үҙ бисәһе булып сыҡҡан ул. Батырҙар бисәне һандыҡтан сығарып алалар ҙа, шунда күмәкләшеп ултырып, хәл йыйғандан һуң, пәрейҙәрҙең бөтә булған мал-мөлкәттәрен тейәп, Аҡъял батырҙың иленә ҡайтып китәләр.

Аҡъял батырҙың йортонда ҙур байрам үткәргәс, Тау батыр менән Урман батыр үҙ илдәренә йүнәләләр. Ошо көндән башлап был өс батыр өсөһө өс илдә иркен, тыныс донъя көтөп яталар, ти.

## ИСМАЙ

Борон-борон заманда бер батшаның бер ҙә балалары тормаған: тыуған бере үлеп торған. Батша, аптырап, күрәҙәсе әбейгә барған.

— Ни эшләп беҙҙең балаларыбыҙ тормай? — тип һораған.

— Балаларығыҙ тыуғас, егерме йәшкә тиклем ер аҫтында аҫрағыҙ,— тигән күрәҙәсе әбей.

Ошонан һуң ҡыҙ балаһы тыуғас, батша уны ер аҫтына йәшереп ҡуйған, шунда аҫраған. Ҡыҙға ете йәш тулғас, уны уҡыта башлағандар, ер өҫтөндә яҡты донъя барлығын һөйләгәндәр. Ҡыҙҙың яҡты донъяны бик күргеһе килгән. Ун ике йәше тулғанда, атаһынан рөхсәт һораған. Ҡыҙ бик үтенгәс, атаһы риза булған да, быға аҙ-аҙ ғына яҡты донъяны күрһәтеп индерер булғандар. Шунан был ҡыҙ тағы ла дәртләнеңкерәп уҡый башлаған, яҡты донъя менән һоҡланыуы артҡандан-арта барған. Ун ете йәшенә еткәс, оҙаҡҡараҡ сығарыуҙарын һораған. Бик матур бер аяҙ көндә уға иптәш ҡыҙы менән алма баҡсаһында йөрөргә рөхсәт иткәндәр. Шул саҡта бер ҡара болот килеп сыҡҡан да, ел-дауыл ҡубып, ҡыҙҙы осороп алған да киткән.

Батша был хикмәткә бик аптыраған, тирә-яҡҡа һөрән һалған:

— Кем дә кем ҡыҙымды табып килтерә, шуға ярты байлығым менән ҡыҙымды бирәм,— тигән.

Батша әмерен ишетһәләр ҙә, һис кем, батырсылыҡ итеп, ҡыҙҙы эҙләргә сыҡмаған. Ике-өс ай ваҡыт үтеп киткән. Шул ваҡытта эш эҙләп йөрөгәнендә, Исмай тигән бер егет батша яҙып элгән ҡағыҙҙы күреп ҡалған да батшаға барған.

— Ҡыҙыңды табам, ике иптәш, бер пароход, бер йыллыҡ аҙыҡ әҙерлә,— тигән.

Батша быға риза булған, Исмайҙың әйткәнен барыһын да үтәгән. Ике иптәш алып, пароходҡа бер йыллыҡ аҙыҡ тейәп, Исмай хәтәр юлға сығып киткән. Бик күп ваҡыт барғандар былар. Бара торғас, диңгеҙ бер тауға килеп терәлгән. Ҡараһалар, диңгеҙ һыуы, өйрөлөп-өйрөлөп, шул тау тишегенә ағып ята икән. Пароход менән бынан үтеү мөмкин булмағас, былар ошонда туҡтарға булғандар. Ҡыҙҙы эҙләп, тау башына менеп киткәндәр. Көн дә икеһе эҙләй, береһе пароходта ҡала икән.

Бер көндө Исмай менән икенсе иптәше ҡыҙҙы эҙләргә сығып киткәс, күп тә үтмәй, яр ситенә бер һыбайлы кеше килеп туҡтай. Ул үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш була.

— Аттан төшөр! — тип ҡысҡыра ҡарт.

Егет аттан төшөрә.

— Мине күтәреп эскә индер! — ти тағы.

Егет ҡартты күтәреп пароходҡа алып менә. Бабай ашарға һорай. Егет иптәштәренә тигән итте ашата. Ҡарт бөтә ашты ашап бөтә, ҡәнәғәт булмай, тағы һорай. Егет:

— Башҡа юҡ,— тип яуап биргәс, ҡарт егеттең ҡулын ишеккә ҡыҫтырып сыға ла китә. Егет ҡулын саҡ тартып ала. Бармағы ҡанағас, егет ҡулын бәйләп ҡуя. Кис менән иптәштәре ҡайта, ашарға һорайҙар. Егет яуап бирмәй.

— Ҡулыңа ни булды?

Егет яуап бирмәй.

Иртәгеһен икенсе иптәштәре пароходта ҡала. Әлеге һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш ҡарт тағы килә. Килеп, үҙен күтәртеп индереп, бешкән иттәрен ашап бөтөп, егеттең ҡолағынан сөйгә элеп сығып китә.

Өсөнсө көндө ике иптәше ҡыҙҙы эҙләп китә. Исмай пароходта ҡала. Теге ҡарт килә.

— Аттан төшөр! — ти ҡарт.

Исмай уны аттан төшөрә.

— Мине күтәреп индер!

Исмай быны күтәреп пароходҡа алып инә.

— Ашарға бир! — ти ҡарт.

— Хәҙер иптәштәрем ҡайта, бергә-бергә ашарбыҙ,— ти Исмай.

Ҡарт, ырғып тороп, Исмайға ташланғайны, Исмай быныҡ һаҡалынан эләктереп ала ла пароходтың тотҡаһына бәйләп ҡуя. Тиҙҙән иптәштәре лә ҡайта.

— Хәҙер мин белдем инде ни өсөн һеҙҙең ашығыҙ әҙер булмағанын,— ти Исмай.— Ана, сығып ҡарағыҙ, бабайығыҙҙы аҫып ҡуйҙым,— ти.

Сығып ҡараһалар — бабай юҡ, һаҡалы ғына елберләп тора, ти.

Иртәгеһен егеттәр бабайҙы эҙләп сығып китәләр. Юлын ҡыуып барһалар, теге ҡарт бер мәмерйәгә кереп киткән. Былар һаҡалдан арҡан ишәләр ҙә, береһе мәмерйә тишегенә төшмәксе була. Төшә башлағас, ҡараңғынан, һаҫыҡтан ҡурҡып, был кире сығарыуҙарын һорай. Уны тартып алалар. Икенсеһен төшөрәләр. Уныһы ла кире сыға. Шунан Исмай үҙе төшә. Арҡан бөттө тигәндә, был төшөп тә етә. Ҡараңғы тип тормай, китә был ары. Бара биргәс, бер яланға килеп сыға. Ялан уртаһында бер йорт тора, йортта бер әбей менән бабай йәшәй, ти. Исмай өйгә инә, һаулыҡ һораша, ни эшләп йөрөгәнен, хәл-әхүәлдәрен һөйләй. Әбей менән бабай тыңлап ултыралар ҙа Исмайға юл өйрәтәләр.

— Бынан ары дейеү заты йәшәгән ер булыр. Тәүҙә ҡош ояһы осратырһың. Ҡош ояһы аҫтында йөҙ асҡыс, туҡһан туғыҙы көмөш, йөҙөнсөһө алтын булыр. Шул

асҡыстарҙы алып, йөҙөнсө бүлмәгә етһәң, унда ҡарт ятыр, ә һин эҙләгән ҡыҙ быяла шкафта булыр,— тиҙәр.

Егет юлға сыға. Тиҙҙән теге ҡошто ла барып таба. Ҡош шундай уҫал, егетте яҡын да ебәрмәй, ти. Алыша торғас, егет уны еңә. Асҡыстарҙы оянан ала ла бүлмәләрҙе асырға тотона. Туҡһан туғыҙынсы бүлмәлә бөтә дейеүҙәр йыйылышып кәңәш ҡороп ултыралар икән. Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы меҢ ҡарыштың улы:

— Ер өҫтөндә минең атайға һөжүм иткәндәр, иртәгә үк һуғышҡа китәйек,— ти.

Ҡарттың улы һөйләп бөтөү менән, Исмай ишекте шар асып ебәрә. Дейеүҙәр ишектән берәм-берәм сығып тора, егет уларҙың башын өҙә сабып тора. Шулай итеп, бөтә дейеүҙәрҙе ҡырып бөтә. Исмай йөҙөнсө бүлмәне алтын асҡыс менән асып инһә — бүлмәлә сәңгелдәк, сәңгелдәктә ҡарт йоҡлап ята. Егет уны үлтерә лә шкаф эсендәге ҡыҙҙы сығара. Ҡыҙ яҡты донъя күрә алмай һарғайып, кибеп бөткән, ти.

— Үләһең, егет, тиҙерәк сыҡ,— ти ҡыҙ.

— Ниңә сығайым, һине ҡотҡарырға килдем мин,— тип, Исмай теге ҡарттың үле кәүҙәһен күрһәтә. Был шатлыҡтан ҡыҙ:

— Вәғәҙәм — антым булыр,— тип, егеткә алтын балдаҡ бирә.

Исмай менән ҡыҙ, ер өҫтөнә сығырға тип, әлеге тишеккә киләләр. Егет тәүҙә ҡыҙҙы бауға бәйләп сығара, унан үҙе күтәрелә башлай. Өҫтә иптәштәренең Исмайҙы сығармаҫҡа һөйләшеп торғандарын ишетеп ҡала ла бауға түмәр тағып сығара. Арҡан өҙөлөп килеп төшә. Егет арҡанды ялғай ҙа икенсегә үҙен бәйләп сыға*. Сыҡҡас, бер ни ҙә өндәшмәй. Күмәкләшеп пароход янына киләләр. Ашап-эсеп ял итеп алалар ҙа пароходҡа ултырып ҡайтып китергә булалар. Пароходҡа инеп ултырғас, Исмай ҡулына ҡараһа, бармағында теге ҡыҙ биргән йөҙөк юҡ, йыуынған ерендә онотоп ҡалдырған, ти. Шуны алырға тип, ярға сыҡҡан арала иптәштәре китәләр ҙә баралар. Ҡыҙҙы ҡурҡытып, мине ошо ике егет тапты, тип әйтергә мәжбүр итәләр.

---

* Был урында Исмайҙың хәйләһе логикаһыҙ булыуын әйтергә тура килә. Был хәл әкиәтте һөйләүсенең был сюжетҡа бәйле традицион эпизодтарҙы (батырҙың ер өҫтөнә Сәмрегош, ҡара айғыр йәки бүтән берәй мифик зат ярҙамында сығыуын) онотоуына, йәки белмәүенә бәйләнгән булырға мөмкин.

Исмай утрауҙа яңғыҙы тороп ҡала, һунарҙа йөрөй, йәнлектәр аулап туҡлана. Утрауҙағы бер ағасты бер ай буйы кимереп йыға ла, шуға атланып, диңгеҙҙең аръяғына йөҙөп сыға. Тирә-яғына ҡараһа, алыҫта бер ауыл күрә. Барһа, был ауылда дейеү заты йәшәй, ти. Егет дейеүҙәрҙе ҡыра ла батшаларына бара.

— Миңә эш бир,— ти Исмай. Батша уға эш бирмәй:

— Беҙҙең дейеүҙәрҙе ҡырғанһың,— ти.

— Эш бирмәһәң, бөтә донъяңды тар-мар итәм,— ти Исмай.

— Ярай, улай булғас,— ти дейеүҙәр батшаһы,— минең ике улым бар; береһе аттарға һыу эсерә, икенсеһе бесән һала, ә һин аҫтарын таҙартырһың,— ти.

Исмай аттарға һыу ҙа эсерә, бесән дә һала, тиҙәген дә таҙарта. Яҡшы эшләгәс, дейеүҙәр батшаһы быны ярата башлай. Бер ай самаһы ваҡыт уҙа. Бер көндө ат эсергәндә, Исмай батша улына:

— Атайың мине бер айға өйгә ҡайтарһа ине,— ти.

— Ул ҡайтарыр. Һиңә аттың иң яҡшыһын һайлап алырға ҡушыр, ә һин һарайҙағы иң алама атты һора. Ҡылыстарҙың иң яҡшыһын һайлатыр, ә һин тартмалағы алама ҡылысты һора,— ти дейеү батшаһының улы.

Исмай батшанан:

— Өс көнгә генә ҡайтып киләйемсе,— тип һорай. Батша рөхсәт итә:

— Яҡшы эшләнең, теләгән атыңды, теләгән ҡылысыңды һайлап ал,— ти. Егет:

— Миңә яҡшыһы кәрәкмәй, эйәһенә күрә бейәһе, һарайҙағы алама ат менән тартмалағы иҫке ҡылыс та миңә ярар,— ти. Батша уйлап тора ла рөхсәт итә. Егет юлға сығыр алдынан ғына батша быға бер көҙгө бирә.

— Атыңа өс һуҡ та күҙеңде йомоп ас — һин түңәрәк яланда булырһың, шунда ял ит. Унан тағы өс тапҡыр һуҡ та күҙеңде йомоп ас — ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер күперҙе үтерһең, шунан ауылығыҙҙа булырһың,— ти батша.

Исмай атына өс тапҡыр һуғып, күҙен йомоп асһа, түңәрәк яланда була. Шунда ял итә. Тағы өс тапҡыр һуғып, күҙен йомоп асһа,— ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер күперҙе үткән, ауылдарына еткән. Ауыл ситендәге ярлы ғына ҡарсыҡҡа инә был. Ҡараһа, батша һарайының башында ҡыҙыл тыу елберләгәнен күрә.

— Ни уңай менән ҡыҙыл тыу элгәндәр? — тип һорай Исмай әбейҙән.

— Батшабыҙҙың ҡыҙын тапҡандар, улар бөгөн килеп етергә тейештәр, бөгөн туй була, бөтә халыҡ барырға тейеш,— ти әбей. Кисләтеп кенә Исмайҙың ике иптәше менән ҡыҙ ҡайтып төшә. Батша халыҡты туйға саҡыра.

Бөтә халыҡ туйға йыйыла. Ауыл осондағы был әбей иң аҙаҡ бара.

— Бөтә халыҡ килеп бөттөмө? — тип һорай батша.

— Юҡ, беҙҙә бер юлаусы ҡалды,— ти әбей. Әбейҙе Исмай артынан ебәрәләр. Исмай әбейҙе йәлләп бара. Батша халыҡҡа:

— Ике егет ҡыҙымды тапҡан. Икеһенә лә ҡыҙымды бирәм,— ти. Батша һәр кешегә берәр туҫтаҡ бал тоттора. Икенсе аяҡты ҡыҙ үҙе өләшә. Исмай иң аҙаҡта торған була. Ҡыҙ уға бал бирә, егет һул ҡулы менән алырға итә.

— Уң ҡулың менән ал,— ти ҡыҙ.

— Юҡ, уң ҡулым бысраҡ, туҫтағығыҙҙы буяр,— ти егет.

— Юҡ, тотоғоҙ, бысрамаҫ,— ти ҡыҙ. Егет һаман:

— Йоғошло ауырыу менән ауырый ул,— тип ныҡыша.

— Улай булғас, табибҡа күрһәтәйек,— ти ҡыҙ. Бөтә халыҡ йыйылғанлыҡтан, халыҡ араһында табиб-тар ҙа була. Шунда уҡ табиб саҡыртып, ҡарарға тип, ҡулын сисәләр. Ҡыҙ егет ҡулында үҙ балдағын күреп, ҡысҡырып ебәрә:

— Бына мине тапҡан егет, ә тегеләре мине ҡурҡытып әйттерҙеләр,— ти.

Батша Исмайҙың ике иптәшен үлем язаһына тарттыра, ҡыҙын Исмайға бирә.

Былар шулай бер нисә йыл рәхәтлектә йәшәйҙәр.

Бер ваҡыт икенсе батша быларҙы ҡунаҡҡа саҡырып килә. Икенсе батшаның улы, ҡыҙҙы күреп, уға ғашиҡ булған икән. Егет менән Исмайҙың кәләше, нисектер инде, үҙ-ара һүҙ ҡуйышып та өлгөргән булалар.

— Мин һине яу менән килеп алырмын,— ти батша улы. Исмай кәләше риза була. Ҡунаҡтан һуң былар ҡайтып китәләр.

Иртәгеһен батшаның улы был батшаға һуғыш иғлан итә. Батша Исмайға һуғышҡа әҙерләнергә ҡуша. Исмай: «Мин һуғышырға теләмәйем»,— тип ята ла йоҡлай.

Теге яу әйтелгән сәғәттә быларҙың ҡалаһына баҫып инә. Батша ни эшләргә лә белмәй, бик бошорғолана. Исмай, уянып китеп, урамға сыҡһа,— урам тулы ғәскәр, ти. Инә һалып, ҡылысын алып сыға ла бер һелтәү менән теге батшаның теҙелеп торған ғәскәрен ҡыра һуға ла ҡуя. Теге батша улы аптырай, ҡыҙға хат яҙа. «Ул ниндәй ҡылыс икәнен бел дә һиҙҙермәй генә миңә ебәрт»,— ти.

Ҡылысты алыр өсөн, ҡыҙ Исмайҙы эсереп иҫертә. Ҡыҙ нәҡ шундай ҡылысты Исмайҙың ҡылысы урынына элә лә уныҡын батша улына ебәртә. Күрше батша тағы һуғыш иғлан итә:

— Шул сәғәт, шул минутта һуғыш буласаҡ,— ти.

Батша тағы Исмайға килә. Егет тағы баш тарта. Әйтелгән сәғәттә күрше батшаның ғәскәрҙәре килеп етә. Исмай сыға ла ҡылысы менән һелтәй, ҡылысы бер ҙә сапмай. Батша улы ҡылысы менән һелтәп ебәрһә, Исмай атының дүрт аяғы бер юлы өҙөлөп төшә. Исмай аптырай, һыу буйына йыуынырға төшә, дейеү батшаһы биргән көҙгөгә ҡарай. Ҡарауы була, үҙе хеҙмәт иткән батшалыҡта була. Дейеү батшаһы уға тағы бер көҙгө менән бер сәскә бирә.

— Ҡайҙа булырға теләүеңде әйтеп, көҙгөнө ватһаң, шул урында булырһың; икенсе затҡа әйләнергә теләп сәскәне ҡапһаң, шул затҡа әйләнерһең,— ти.

Исмай: «Үҙем һуғышҡан батшаның ҡалаһына илт!» — тип көҙгөнө ватҡайны, шул ҡалала булды, ти. Күп уйлап тормай, ҡала баҙарына килә был хәҙер. Бер оло ғына ҡартты саҡырып ала ла:

— Бабай, һиңә аҡса кәрәкме? — тип һорай.

— Кәрәк, улым, кәрәк,— ти ҡарт.

— Кәрәкһә, бына һин нимә эшлә: мин хәҙер бер бик шәп атҡа әйләнермен, һин шуны һатырһың, тик бик ҡиммәт һора, батша улы ғына алырлыҡ булһын. Ә йүгәнде һатма,— ти.

Бабай риза булғас, Исмай, теләген әйтеп, сәскәне ҡапҡайны, бынамын тигән матур атҡа әйләнә. Бөтә халыҡ ат тирәһенә йыйыла. Алғылары килә — хаҡ бик юғары, бер кемдең дә алырға көсө етмәй. Батша улы килә. Биш йөҙҙө бирә лә атты йүгәне менән бергә алып китә. Уйламаған ерҙән шул саҡлы аҡса ҡулға килеп төшкәс, бабай йүгән хаҡында онота. Батша улы атты кирандасҡа егеп алып ҡайта ла, инеп, ҡатынына әйтә:

— Бына тигән ат һатып алдым,— ти.

Ә ҡатыны аттың Исмай икәнен белә, уны үлте-

рергә ҡуша. Ялсы ҡыҙыҡай быларҙың һөйләшкәнен ишетеп ҡала ла, атҡа килеп:

— Харап итәләр һине,— ти.

— Минең башыма һуғырҙар, мейем сәсрәр, һин минең мейемде алма баҡсаһына күм,— ти.

Батша улы сыға.

— Мә, ал кәрәгеңде, Исмай! — тип аттың башына һуға. Һуҡҡан ыңғайы аттың мейеһе сәсрәп, ҡыҙҙың итәгенә барып төшә. Аттың һөйәген үртәйҙәр. Ҡыҙ үҙенең итәгенә килеп төшкән мейене алма баҡсаһына илтеп күмә. Шул урында бик матур алмағас үҫеп сыға. Ә батша улы менән батша ҡыҙы атты үлтереүҙәренә шатланышып йәшәй башлайҙар.

Бер көндө былар икәүләшеп алма баҡсаһына сыҡҡалар, батша улы яңы бер алмағасты күреп ҡала. Бығаса булмаған был алмағастың алмалары үҙе күп, үҙе ҡып-ҡыҙыл булып янып тора, ти. Батша улы, быға бик ҡыҙып, алма өҙөп алып ашарға ынтылғайны, ҡатыны быны тотоп ала.

— Ҡуй, ашама! Ул — алма түгел, Исмай! — тип ҡысҡырып ебәрә. Ире аптырай.

— Ни эшләп бөтәһе лә Исмай ҙа Исмай һуң әле ул?! — ти. Шунан хеҙмәтселәренә был алмағасты төбө-тамыры менән йолҡоп алып үртәргә ҡуша. Ялсы ҡыҙ эште һиҙеп ҡала ла алмағасҡа килә:

— Харап итәләр бит һине,— ти.

— Мине балта менән сапҡан ваҡытта ситкә ырғыған тапты һыуға ырғыт,— ти алмағас ҡыҙға. Алмағасты сабып ауҙаралар, киҫкеләп үртәйҙәр. Был эште ҡыҙ ситтән генә ҡарап тора. Алмағасты тураҡлаған саҡта, бер тап бының алдына килеп төшә. Ҡыҙ тиҙ генә ала ла күлгә ырғыта. Тап, өйрәккә әйләнеп, йөҙөп китә.

Бер заман батша улы һунарға сыға. Күлдең ситендә генә матур өйрәк йөҙөп йөрөгәнен күреп, уны атмай ғына алырға уйлай. Өйрәккә яҡын килә. Өйрәк яр ситенән саҡ ҡына алыҫая. Егет өйрәкте ҡурҡытмай ғына тағы алға ынтыла, өйрәк тағы шыла. Шулай итеп, өйрәк ярҙан алыҫыраҡ киткән һайын, егет тә һыуға эскәрәк инә. Һыу тәрәнәйә башлағас, егет сисенеп төшә. Өйрәк кинәт күлгә сумып китә лә Исмайға әйләнеп килеп сыға. Тиҙ генә ярға сыға ла Исмай аттың эйәрендәге үҙ ҡылысын ала. Батша улы ярға әйләнеп килеп сыҡҡайны, ҡаршыһында Исмай баҫып торғанын күреп, ҡойола ла төшә. Исмай күп уйлап тормай: «Йә, етер һиңә, бәдбәхет!» — тип тегенең башын саба

ла өҙә. Шунан ҡатыны йәшәгән һарайға килә. Ҡатыны ҡаршы сыға.

— Гонаһың ҙур,— тип, Исмай уны ла үлтерә.

Әлеге ялсы ҡыҙҙы кәләш итеп алып, батша булып, Исмай әле лә йәшәп ята, ти.

## БАТЫР ҺАЛДАТ

Борон-борон заманда бер батша йәшәгән. Уның бала-сағаһы булмаған. Һарай эсендә ҙур алма баҡсалары бар икән. Бер ваҡыт батша ҡатыны менән һыу инергә барғанда, алмағас төбөндә бер ҡарт күргән.

— Был ҡарт ҡайҙан килеп сыҡты икән? Нишләп ултыра икән бында? — тип ғәжәпһенгәндәр ҙә, барып, ҡартҡа өндәшкәндәр.

— Мин шулай, шулай, ялан күрергә сыҡтым. Баҡсаң бик оҡшағас, алмағас төбөнә ял итергә ултырҙым. Мин үҙем бер табибмын. Балаға мохтаж кешеләргә ярҙам итәм,— тигән ҡарт. Батша әйтә:

— Беҙҙең бала-сағабыҙ юҡ. Беҙгә ярҙам итә алырһыңмы? — ти.

— Итермен,— ти ҡарт.— Анау алманы өҙөп алып бирегеҙ әле,— ти. Шунан алманы уртаға яра ла бер яртыһын батшаға, икенсе яртыһын ҡатынына бирә.

— Ашағыҙ ошоно,— ти.— Һеҙҙең бер ҡыҙ балағыҙ донъяға килер. Балағыҙ тыумаҫ борон уҡ ер аҫтында йорт эшләтегеҙ. Ун ике йәш тулмайынса, ер аҫтынан сығармағыҙ. Алдан сығарһағыҙ, балағыҙ һеҙҙеке түгел,— ти.

Ҡайталар ҙа, ерҙе ҡаҙып, йорт эшләтә башлайҙар былар хәҙер. Йорт һалынып бөткәс, батшаның ҡатыны шунда төшөп бәбәйләй. Бер бала ҡараусы килтереп ҡушалар. Баланы тәрбиәләйҙәр. Бала көндән-көн матурлана. Бик сибәр ҡыҙ булып үҫеп килә. Бер йыл үтә, ике йыл үтә, ете йыл үтә ер аҫтында. Хәҙер ҡыҙға бер уҡытыусы килтереп, уҡытырға ҡушалар. Яҙырға, уҡырға өйрәтә башлайҙар. Берҙән-бер бала, етмәһә, батша балаһы булғас, төрлөсә ҡыландырып ҡарайҙар быны. Ун йәшкә, ун бер йәшкә етә ҡыҙ, хәҙер аң керә бығa. Китабында ағас, тауҙар, һыуҙар, урмандар, йондоҙҙар күрә; айҙы, ҡояшты, күп нәмәләрҙе һүрәттән ҡарап белә. Бер көндө ҡыҙ һорай бит:

— Бынан башҡа донъя бармы ни?
— Бар.
— Нишләп мине сығармайһығыҙ?
— Әле ваҡыт етмәгән,— тиҙәр.

Ҡыҙ ер өҫтөнә сығырға бик яғалаша. Ун икенсе йәшенә генә киткәйне, баланы ҡояшҡа алып сығалар. Ҡыҙ бала донъяның киңлегенә аптырай, хайран ҡала.

Бер өс-дүрт көн үттеме — юҡмы, ҡыҙҙы яланға алып сығалар. Тройка менән баралар. Күсер, бала ҡараусы, уҡытыусы ла шунда. Йәнлектәрҙе, тауҙарҙы күрһәтеп йөрөтәләр ҙә ҡайтыу яғына боролалар. Боролоу менән бик ҡаты ел сыға. Ел өйрөлөп-өйрөлөп килә лә ҡыҙҙы күтәреп ала ла китә. Аптырап торалар ҙа ҡалалар. Ул иттеләр, был иттеләр, саптырып ҡайттылар батшаға.

Батша аптыраны-алъяны, эҙләр өсөн һәр яҡҡа ғәскәрен таратты. Ай эҙләйҙәр, йыл эҙләйҙәр,— юҡ, таба алмайҙар ҡыҙҙы. Бөтә ил ҡайғы-хәсрәткә ҡалды. Эҙләй торғас ете йыл үтеп тә китте. Бер ҡоро ер ҡалманы, бер тишек ҡалманы, юҡ ҡыҙ, табылманы. Шунан батша:

— Берәй кешегә тапшырып ҡуяйыҡ, ғүмер буйына эҙләһен,— ти. Шунан эфисәрҙәрҙе, полковниктарҙы, генералдарҙы, һалдаттарҙы йыялар ҙа әйтәләр.

— Кем дә кем ғүмере буйына эҙләргә риза, шуға ашау-эсеү буш, нәмә кәрәк, бөтәһен табып бирәбеҙ,— тиҙәр.

Шулай тип әйтеп ҡарайҙар ҙа бит,— риза булыусы юҡ. Оҙаҡ ҡына ваҡыт тын торғас, иң арттағы бер һалдат ҡул күтәрә:

— Мин риза,— ти.
— Кил әле бында.

Теге килә.

— Йә, нисек эҙләйһең? — ти батша.
— Мин шулай-шулай эҙләйем,— ти һалдат.— Миңә карап эшләт, ун ике йылға етерлек аҙыҡ, бер капитан, ашарға әҙерләүсе бер һалдат кәрәк,— ти.

Батша шунда уҡ быға генерал чины бирҙе, яҡшы кейемдәргә кейендерҙе. Карап эшләп бөтөрәләр, ун ике йыллыҡ аҙыҡ-түлек тултыралар. Былар өсәүләп сығып китәләр, музик* менән оҙатып ҡалалар.

Баралар, баралар, ай баралар, йыл баралар. Бара торғас, аҙашалар былар. Ҡара ер юғалды, бөтөн донъя-

---

* Музик (музыка) — оркестр.

ны һыу алды. Хәҙер ҡайһы яҡҡа боролоп китергә лә белмәйҙәр. Һауа ла бер, донъя ла бер. Нишләргә? Үҙҙәрен йыуатырға тырышып, ашап-эсергә тотоналар. Йырлаштылар-шаулаштылар, уйнанылар, көлдөләр ҙә шул көйөнсә иҫереп йығылдылар. Бер ваҡыт һалдат уянып китһә, карап бер ағаслыҡҡа килеп туҡталған. Һалдат иптәштәрен уята. Ергә сығалар, китәләр. Бара торғас, бер һуҡмаҡ күреп ҡалалар. Шул һуҡмаҡ менән китәләр, алда дүрт босмаҡлы йорт тора. Шул йортҡа барып керәләр. Керһәләр, һауыт-һаба, йорт кәрәк-яраҡтары тулып ята. Караптан ашамлыҡ килтереп, арлы-бирле ашайҙар ҙа тағы сығып китәләр. Аш бешереүсене өйҙә ҡалдыралар. Аш бешереүсе ашарға бешереп бөтөүгә, берәү ишек шаҡылдата.

— Кем бар унда?

— Ас әле ишегеңде!

Ишекте аса. Асҡайны, ни күҙе менән күрһен, туп-һала үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт баҫып тора. Ишек асылыу була, ҡарт йылт итеп кереп тә китә. Инә лә:

— Күтәреп ултырт! — ти. Был күтәреп ултырта.

— Хәҙер ашарға бир. Нимәң бар, барыһын да килтер! Ашағым килә,— ти.

Аш бешереүсенең йөрәге алынды бит инде: теге ни ҡушһа, шуны йүгертеп эшләп кенә тора. Әҙерләнгән аштарын ҡарттың ашап бөтөп сығып китеүе була, тегеләр ҡайтып төшәләр.

— Ултырт ашыңды, бик асыҡтыҡ,— тиҙәр.

— Йоҡлап киткәнмен дә, ашым өлгөрмәй ҡалды бит әле,— тигән була аш бешереүсе.

Икенсе көндө капитан өйҙә ҡала, уның менән дә шундай уҡ хәл була. Өсөнсө көндө һалдат үҙе тороп ҡала.

Бер ваҡыт әлеге-баяғы һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш ҡарт килә.

— Ас ишекте!

— Үҙең асып кер!

— Күтәреп ултырт!

— Үҙең менеп ултыр!

Ҡарт һикегә менеп ултыра ла:

— Ашарға килтер! — ти. Һалдат, ашарға ултыртам тип, ҡартҡа яҡынлай ҙа һаҡалынан урап тотоп алып тороп күтәреп бәрә тегене, сеңк итеп ҡала. Шунан ишек алдына һөйрәп сығарып, бер йыуан ҡарағайға һаҡалынан бәйләп ҡуя.

Иптәштәре ҡайта, ашайҙар, эсәләр. Һалдат теге-

ләрҙең бер-береһенә ҡарашып ултырғанын күрә бит инде.

— Әйҙәгеҙ, һеҙгә бер әкәмәт күрһәтәм! — тип, һалдат тегеләрҙе ишек алдына алып сыға. Сыҡһалар, бәй, теге ҡарт ағасты тамыры-нейе менән һөйрәтеп алған да киткән. Былар, тиҙ генә йыйынып, ҡартты ҡыуа сығалар. Баралар, бара торғас бер көмөш ҡойоға етәләр. Бер береһен төшөргә ҡыҫташалар. Береһе лә төшмәгәс, һалдат үҙе төшөп китә. Ҡарттың эҙенән эҙләп бара был. Бара торғас, бер матур, бик бай йыһазландырылған өйгә барып инә. Бәй, ни күҙе менән күрһен, бүлмә уртаһында әлеге ҡарт ҡан ағыҙып ултыра! Ҡарт «аһ» тейергә лә өлгөрмәй, һалдат ҡылысы менән быны тураҡлап та ташлай. Ҡарт йән биргән саҡта стеналағы бер бәләкәй генә ҡара нәмәгә ҡарай. Һалдат быны ҡарашын һиҙеп ҡала ла шул ҡара нәмәгә барып төртә. Төртөүе була, шатыр-шотор килеп, ҡалын тимер ишек асылып китә. Ҡараһа, эстә бер һылыу ҡыҙ ултыра.

— Һин әҙәм затымы? — тип һорай һалдат.

— Эйе. Кит тиҙерәк, егет, дейеү юҡ итә үҙеңде! — ти ҡыҙ.

— Мин шул дейеүҙең һабағын уҡыттым инде,— тип, һалдат һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш ҡартты күрһәтә. Шунан һалдат үҙенең кемде эҙләүен төшөндөрөп бирә. Теге ҡыҙ:

— Ул апай ана теге бүлмәлә,— ти. Һалдат ҡарай-ҡарай, бер ҙә ишеккә оҡшаған урын күрмәй.

— Ҡайҙа һуң ул бүлмә?

Ҡыҙ бойҙай бөртөгө ҙурлығы ғына бер нәмәне төртөп күрһәтә. Һалдат шул нәмәгә бармаҡ осо менән баҫҡайны, ауыр тимер ишектәр асылып китә. Был бүлмәнең эсендә тегеһенән дә һылыуыраҡ бер ҡыҙ ултыра. Әҙәми зат егетте күргәс, ҡыҙ:

— Егет, ҡас, дейеү һәләк итер үҙеңде! — тип ялбара башлай.

— Дейеүҙән ҡурҡмағыҙ,— ти һалдат.

Шулай итеп, ике ҡыҙҙы ла ҡотҡарҙы бит инде был. Һуңғы ҡотҡарған ҡыҙ батша ҡыҙы булып сыға. Ҡыҙҙар егетте кейендереп, йыуындырып алалар. Батша ҡыҙы һалдатҡа үҙе ун ике йыл ер аҫтында ултырғанда атаһы эшләтеп биргән йөҙөктө бүләк итә.

Өсәүләшеп, капитан менән аш бешереүсе ҡырына сығалар. Карапҡа ултырып, ҡуҙғалып киттек тигәндә генә һалдат:

— Йөҙөгөм тороп ҡалған! — тип ҡысҡырып ебәрә.

Шунан һалдат йөҙөктө алырға ер аҫтына кире төшөп китә. Был юлы һалдатты ер аҫтынан тегеләр күтәреп сығармай ҙа ҡуялар, үҙҙәре генә китәләр ҙә баралар. Һалдат ҡысҡыра-ҡысҡыра, ары йүгерә, бире йүгерә, йүгерә торғас арып бөтә. Уйлап ултыра-ултыра ла, тороп, бер яҡҡа китә лә бара. Ай бара, йыл бара, бара торғас, бер асыҡ ялан күреп ҡала. Бының ҡаршыһына бер һыбай килә, күҙе баҙлап тора:

— Һин бында нисек килеп ҡаптың?

— Мин йоҡлағанмын, ошо ерҙә уянып киттем,— тип яуап бирә һалдат.

— Ә-ә, Урман батша дейеүе мыҫҡыл итеп килтереп ташлаған инде һине, алай булғас! — тип ажғырып ҡуя һыбайлы. Был Ялан батша дейеүенең улы икән.

Һыбайлы һалдатты атаһына алып килә.

— Егет, иркең булһа, нишләр инең?

— Үҙ илемә ҡайтыр инем.

— Мин һиңә бер эш бирәм, шуны үтәй алһаң, илтеп ташларбыҙ,— ти Ялан батша дейеүе һалдатҡа.— Өй ҙурлығындағы ҡаҙанды йыл буйына туҡтатмайса ҡайнат! — ти. Һалдат риза. Йыл тулырға ике ай ҡалғас ҡына, һалдат арып йоҡлап киткән бит, шайтаның. Һалдат йоҡлаған арала ҡаҙан эсенән меңәрләгән ҡоралды дейеүҙәр килеп сыға ла, китә былар менән һуғыш: Ялан батша дейеүен батшалыҡтан алып ташларға итәләр икән тегеләр. Йән-фарман һуғыша торғас, Ялан батша дейеүенең ғәскәре быларҙы ҡыйратып ташлай. Ялан батша дейеүе һалдатты саҡыртып ала:

— Был юлы ғәйебең булды, тағы ике йыл эшләһәң, ҡайтарып ебәрербеҙ үҙеңде,— ти.

Һалдат хәлдән тайып, арып йығыла яҙып, йығыла яҙып эшләп йөрөй. Теге ҡаҙанды һәр ваҡыт ҡайнатып торорға кәрәк бит инде. Шул ваҡыт теге дейеүҙең улы килә:

— Ну, егет, бик тырыштың! Мин һиңә аҡыл өйрәтмәксе булдым. Һинең көнөң бөттө, атайым бүләк бирер өсөн саҡырыр: күп ҡылыс араһынан береһен һайларға ҡушыр,— һин яман ҡынлы ҡылысты ал; өйөрҙән ат һайларға ҡушыр,— һин ҡорсаңғы атты һайла; шунан бик күп сумка сығарып һалыр,— иң туҙған сумканы алырһың,— тип өйрәтеп ҡуя.

Һалдатты батша саҡыртҡан.

— Ну, егет, һиңә бүләк бирәм, үҙең теләгәнеңде һайлап ал,— тигән.

Нәмә генә бирһә лә, һалдат дейеү улы өйрәткәнсә

эшләп тик тора икән. Дейеү аптыраашта ҡалған. Шулай ҙа һүҙенән кире сикмәгән. Ялан батша дейеүе:

— Хәҙер һин һайлап алған атыңды мен, минең күҙ күреме ерҙән ҡыйрата торған ҡылысымды ал, күпме кәрәк шул тиклем аҡса бирә торған сумкамды ла ал да, анау ҙур күл ситенә бар. Бер аҡҡош осоп китер, шуның артынан ҡалма! — тип өйрәтә.

Һалдат бөтәһен дә дейеү өйрәткәнсә эшләй. Дейеү үҙе, аҡҡош һүрәтенә кереп, юл өйрәтеп бара икән. Байтаҡ ваҡыт оса торғас, һалдат үҙҙәренең ҡалаһына килеп төшә, аҡҡош кире оса. Һалдат ҡала ситендәге бер өйгә инә. Унда бер әбей йәшәй икән.

— Нихәл әбей?

— Бер көйгә, балаҡайым,— ти әбей.

— Әбей, ҡалала ниндәй яңылыҡтар бар?

— Бына өс-дүрт көндән батшаның ҡыҙы ҡайтып төшөргә тейеш икән. Ҙур байрамға әҙерләнәләр, төш юраусылар белеп әйткән,— ти әбей.

Өс-дүрт көн үтеп тә китә. Музик менән тегеләр ҡайтып төшәләр. Халыҡ шау-шыу килеп ҡаршылай.

— Ҡайҙа һалдат? — тип һорайҙар бит инде быларҙан.

— Һалдат дауыл ваҡытында һыуға йығылып төшөп ҡалды,— тиҙәр тегеләр. Алдашалар инде шаҡшылар!

Хәҙер батша халҡы, шау-гөр килеп, туй яһарға йыйына. Туй башлана, туйға һалдат барып керә. Шул ваҡыт батша ҡыҙы:

— Мине ошо егет ҡотҡарҙы! — тип һалдаттың муйынына барып аҫылына. Шул арала һалдат капитандың башын сабып өҙә.

Батша, ҡыҙын һалдатҡа биреп, батшалығын да кейәүенә тапшырып ҡуя. Шулай яҡшы ғына донъя көтөп ятҡанда, күрше батшанан бер кеше килеп төшә. Ул хат килтерә: «Һинең ҡатыныңа бик күптән ғашиҡ инем, миңә бир! Бирмәһәң, һуғышып аласаҡмын!» — тип яҙылған хатта. Һалдат: «Оятһыҙға аҡыл өйрәтеп ҡайтарырбыҙ, килегеҙ»,— тип яуап яҙа. Шунан ике арала һуғыш башланып киткән. Һалдат-батша серле ҡылысы менән күҙ күреме ерҙән тегеләрҙе ҡыйратып тик ята икән.

Еңелгәс, күрше батша хәйлә эҙләй башлаған. Быны ҡатынын үҙе яҡлы кешеләр менән уратып алған, һалдаттың серен систерергә тырыша икән был. Батша улы батша ҡыҙына оҡшамай булмай бит инде. Батша улы нисек етте шулай, һалдаттың ҡатынын үҙенә ҡаратып, ҡылысын урлата. Бәй, бер ваҡыт һалдат-батшаның

ғәскәре еңеләә башлай. Батша улы быны тамам еңеп, үҙен әсир иттем тигәндә генә, һалдат атына атланып ҡасып ҡотола. Туп-тура дейеүгә бара, шулай-шулай тип, аңлатып бирә. Ялан батша дейеүе:

— Әйттем бит мин һиңә, ҡылысыңды һаҡла тип, ә һин нишләнең? — тип һуҡрана.— Хәҙер мин һине сатыр-сотор ағасҡа әйләндерәм,— ти.— Бер һуҡыр хәйерсе килеп әләгеп йығылыу менән һин матур атҡа әйләнерһең. Шул хәйерсе һине теге батшаға илтеп һатыр. Шунан инде йоҡлама, нисек тә ҡылысты ҡулға төшөрөү яғын ҡара,— тип өйрәтә.

Бөтәһе лә дейеү өйрәткәнсә килеп сыға. Шулай ҙа теге батша ҡыҙы, дейеүҙә йәшәп, уҡыған бит инде. Был атты яндырырға ҡуша. Ә ат ҡатындың уйын белеп тора бит инде. Ат үҙен ҡараусыға, телгә килеп, шуны әйтә:

— Мине яндырған ваҡытта бер тешем осоп китер, шуны алып баҡсаға ырғыт, шул урында күл хасил булыр,— ти.

Атты яндыралар, бер теше осоп китә. Ат ҡараусы, һөйләшеп ҡуйылғанса, теште алып баҡсаға ырғыта. Теге батша улы менән быныҡ ҡатыны ҡыуана-ҡыуана һыу инәләр, ә күл төбөндә ятҡан теш ҡабат һалдатҡа әйләнә лә, ағас артынан сығып, ҡылысты эләктерә. Ҡылысты эләктерә лә тегеләрҙе ҡыйрата башлай. Батша менән ҡатындың башын сабып өҙә. Бөтөн байлыҡты халыҡҡа таратып бирә лә үҙе ил гиҙәргә сығып китә.

Әле булһа насар батшалар менән һуғышып йөрөй, ти, ул батыр һалдат.

## АЛТЫН САБАҠ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ. Былар бик олоғайғандар, бала-сағалары булмаған. Ҡарт менән ҡарсыҡ балыҡ аулап тамаҡ аҫрағандар. Бер көндө ҡартҡа бер алтын балыҡ эләгә. Балыҡ телгә килә лә ҡартҡа былай тип әйтә:

— Һин мине үҙең ашама, башымды бейәңә ашат, кәүҙәмде ҡарсығыңа ашат, ҡойроғомдо этеңә бир.

Ҡарт балыҡтың әйткәнен эшләй. Алтын балыҡты алып ҡайта ла башын алты йәшәр бейәһенә, кәүҙәһен етмеш йәштәрҙәге ҡарсығына ашата, ҡойроғон этенә ташлай. Әбей шунда уҡ гоманлы була, бейә ҡолонға,

эт көсөккә ҡала. Күп тә үтмәй, әбей ике ир бала, бейә ике ҡолон, эт ике көсөк килтерә. Малайҙарҙың баштары алтын, арт һандары көмөш, ти. Ҡолондарҙың ялдары алтын, ҡойроҡтары көмөш, ти. Көсөктәрҙең дә баштары алтындан, ҡойроҡтары көмөштән, ти.

Бабай ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй, ти. Малайҙарҙы тәрбиәләп үҫтерә. Малайҙар бик бәһлеүән булып үҫәләр. Дүрт-биш йәштәрендә урамдағы оло кешеләрҙе тәгәрәтә һуғалар ҙа ҡуялар. Бала-сағаларҙы үлтерә һуҡҡан саҡтары ла булғылай. Малайҙар ололарға йәбешә башлағас, ауыл халҡы быларҙы нисек тә булһа ситкә олаҡтырырға, ауылдан тайҙырырға уйлаша. Бер көндө батшаға хәбәр итәләр:

— Бер ҡартта ике бала бар, үҙ яныңа алһаң ине. Балаларҙың баштары алтын, арт һандары көмөш,— тиҙәр.

Батша малайҙарҙы үҙ тәрбиәһенә ала. Аттары менән эттәре лә малайҙарға эйәреп баралар. Батша быларҙы уҡыта, һуғыш һөнәрҙәрен өйрәтә, алтын эйәр менән алтын ҡылыс биреп ҡуя. Малайҙар ҙурайып китәләр, тәүҙә күренгәне оло булып иҫәпләнә.

Ун ете йәшкә еткәндә егеттәрҙең олоһо төш күрә. Төшөн әнеһенә һөйләй:

— Ҡайҙалыр бер батшалыҡта батша ҡыҙын аждаһа ашарға тейеш икән. Кем дә кем ҡыҙҙы аждаһанан һаҡлап ҡала, ҡыҙ шуныҡы икән. Ҡыҙҙы һаҡларға килгән егеттәр сират торалар икән.

Егеттәрҙең олоһо төшөн юллап китергә була. Киткән саҡта алма ағасының бер ботағына бәкеһен сәнсә лә, аҫтына табаҡ ултыртып, әнеһенә былай тип әйтә:

— Бәкенән һәр ваҡыт бал тамыр: миңә берәй хәл булһа, ҡан тамыр. Шул ваҡытта мине эҙләп сығырһың,— ти.

Егет ҡалаға барып етә. Бер әбейҙән фатир һорай. Был ярлы ғына әбей икән.

— Юҡ, балам, мин бик ярлымын, һине фатирға төшөрә алмайым. Тамағыңды туйҙырырлыҡ рәтем юҡ,— ти.

— Мин үҙем ярлы балаһымын, юҡҡа борсолма, инәй,— тип егет әбейҙә ҡала.

Ҡалала бөтә ергә ҡара тыу эленгән була. Егет әбейҙән:

— Инәй, ни эшләп бөтә ергә ҡара тыу эленгән? — тип һорай.

— Беҙ аждаһанан һыу алабыҙ, шул һыу өсөн аждаһа көн дә бер ҡыҙҙы сиратлап алып китеп тора.

Бөгөн аждаһаға батша ҡыҙын апаралар. Шул көйөктән ҡара тыу эленгән,— ти әбей.

— Ҡыҙҙы алып киткәндә мине уятырһың,— ти ҙә егет йоҡларға ята. Бер ваҡыт музыка уйнай башлай, ҡыҙҙы аждаһаға тип алып сығалар. Әбей егетте уята-уята, уята алмай. Әбей ни эшләргә белмәй торғанда, егеттең аты тибенергә тотона. Ат бер тибә — өй һеңгерләп китә; ике тибә — ер һеңгерләй; өс тибә — күк күкрәй. Егет уянып килеп тора ла әбейгә:

— Ниңә уятманың? Ҡыҙҙы ҡасан алып киттеләр? — тип һорай.

— Уятһам да, уянманың. Ҡыҙҙы күптән алып киттеләр,— ти әбей.

Егет атын менә лә ҡыҙ эргәһенә саба. Барһа,— бер ҙур диңгеҙ, яр ситендә биш мөйөшлө ҙур йорт; ҡыҙ йортҡа, ҡасмаһын тип, бәйләнеп ҡуйылған. Егет атын ҡуя ла ҡыҙ эргәһенә бара.

— Зинһар, егет, яҡын килмә, аждаһа икәүебеҙҙе лә ашар, үҙем генә ашалайым,— ти ҡыҙ.

— Юҡ,— ти егет,— һинең урыныңда мин ҡалам, һин ат ҡашына барып көтөп тор,— ти ҙә егет ҡыҙҙы бәйҙән ысҡындыра. Ҡыҙ ат янына китә. Күп тә үтмәй, аждаһа килә. Егетте күрә лә аждаһа:

— Һай-һай, сират үҙенең ҡыҙына еткәс, батша ниндәй матур егетте килтереп ҡуйған. Быны ите лә тәмлелер әле,— ти.

— Кемдеке тәмлерәктер бит, әллә минеке, әллә аждаһаныҡы, самалашырбыҙ,— ти егет.

— Бирешмәбеҙ,— ти аждаһа,— минең баш өсәү.

— Теләһә ҡырҡ булһын!

Егет менән аждаһа алыша башлайҙар. Алыша торғас, егет аждаһаның өс башын да алтын ҡылысы менән ҡырҡып төшөрә лә ҡумарылған ағас аҫтына тыға, ә кәүҙәһен тураҡлап, ҙур өс әрҙәнә итеп өйөп ҡуя. Ҡыҙ егеткә үҙенең исемле балдағын бирә лә, былар ҡайтып китәләр. Ҡалаға еткәс, айырылышалар. Ҡыҙ өйөнә ҡайтып ингәс тә, батша бөтә ҡалаға ҡыҙыл тыу элергә ҡуша.

Егет әбейҙең өйөнә ҡайта. Ҡайта ла әбейҙән:

— Мин ҡыҙҙы күрә алманым, ниңә ҡалаға ҡыҙыл тыу элгәндәр? — тип һорай.

— Батша, алтын биреп, ҡыҙын аждаһанан алып ҡалғандыр. Берәй ярлының балаһы булһа, аждаһа әллә ҡасан ашаған булыр ине инде, һөйәктәрен дә таба алмаҫтар ине,— ти әбей.— Ҡыҙының ҡотолоу шатлығынан батша байрам итергә бойорған.

Егет йоҡларға ята. Иртәгеһен торһа, ҡалала тағы ла ҡара тыу эленгән.

— Ни эшләп бөгөн ҡара тыу элгәндәр? — тип һорай егет әбейҙән.

— Батша ҡыҙын алты башлы аждаһаға алып китергә тейеш. Аждаһа батшаға: «Ҡыҙыңды ашарға килтермәһәң, бөтә батшалығыңды туҙҙырам»,— тип ҡағыҙ ебәргән,— ти әбей.

— Ҡыҙҙы алып киткән саҡта мине уятырһың әле,— ти ҙә егет йоҡларға ята. Күп тә үтмәй, музыка уйнай башлай, ҡыҙҙы алып китәләр. Әбей егетте уятып-уятып ҡарай,— уята алмай. Шунан егеттең эте ишекте тырнап килеп инә лә аяғынан тешләп уята. Егет һикереп килеп тора ла, атына атланып, ҡыҙ артынан китә. Барып етһә, ҡыҙ әлеге өйгә бәйләнеп ҡуйылған. Егет атынан төшә лә ҡыҙ эргәһенә бара.

— Егет, килә күрмә, үҙең харап булырһың. Бөгөн алты башлы аждаһа килә, уны бер кем дә еңә алмай,— ти ҡыҙ. Егет ҡыҙҙың бәйен сисә лә аты ҡашына ебәрә, үҙе аждаһаны көтә. Күп тә үтмәй, диңгеҙҙән аждаһаның алты башы күренә. Егет эргәһенә килә лә аждаһа:

— Ә-ә-ә, кисәге минең баламды үлтереүсе һин икәнһең. Улымды еңгәс тә, мине лә еңмәк булдың, ахыры. Ҡапҡан һайын ҡалъя эләкмәй ул, итеңде тәмләп йотормон,— ти.

— Йоторһоң, йотмай ни! Ҡапҡан һайын ҡалъя эләкмәһә лә, алты баштың өсөһө эләгер әле,— тип, егет алтын ҡылысын һелтәп ебәрә. Аждаһаның өс башы шунда уҡ тәгәрәп килеп төшә. Икенсе һелтәүҙә егет аждаһаның ҡалған өс башын өҙөп төшөрә. Баштарҙы ҡумарылған ағастарҙың төптәренә тыҡҡыслап һалып сыға ла кәүҙәһен кәбәндән дә ҙур алты әрҙәнә итеп өйөп ҡуя. Шунан ҡыҙ менән егет ҡайтып китәләр. Ҡалаға еткәс, айырылышалар. Ҡыҙ егеттең атының ялына ҡулъяулыҡ бәйләй ҙә атаһы йортона китә.

Ҡыҙы тағы ла иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, батша бөтә ҡала буйынса ҡыҙыл тыуҙар элергә ҡуша. Егет ҡайта ла әбейҙән:

— Инәй, ни эшләп ҡалаға ҡыҙыл тыу элгәндәр? — тип һорай.

— Батша ҡыҙы — батша ҡыҙы инде, ярлы ҡыҙҙарының береһе лә аждаһанан ҡайта алманы, бөтәһе лә һәләк булды, батша ҡыҙы ике үлемдән ҡотолдо,— ти әбей. Егет йоҡларға ята.

— Инәй, иртәгә ҡыҙҙы тағы ла алып китһәләр,

уятырһың, уянмаһам, ошо хәнйәр менән маңлайыма сәнсерһең,— тип әбейгә хәнйәрен бирә.

Таң ата, ҡалала тағы ла ҡара тыу эленгән була. Был юлы батша ҡыҙын туғыҙ башлы аждаһа ашарға һората икән. Бер ваҡыт музыка уйнай башлай. Батша ҡыҙын өсөнсө тапҡыр аждаһаға алып китәләр. Әбей уята-уята, егет уянмай. Хәнйәр менән сәнсергә йәлләй, иларға тотона. Әбейҙең бер бөртөк күҙ йәше егеттең битенә тамып яндырып ала. Егет һикереп килеп тора ла, атына атланып, этен эйәртеп, ҡыҙ артынан диңгеҙ буйына китә. Барып етә, ҡыҙ тағы ла бәйләнеп ҡуйылған. Егет атын ҡуя ла ҡыҙ эргәһенә бара.

— Егет, зинһар, килә күрмә, был юлы һәләк булырһың,— ти ҡыҙ. Егет ҡыҙҙы бәйҙән ысҡындыра ла аты ҡашына ебәрә, үҙе аждаһаны көтөп ҡала. Күп тә үтмәй, диңгеҙҙе ҡайнатып, туғыҙ башлы аждаһа килеп сыға. Килеп сыға ла:

— Ә-ә-ә, егет, минең улым менән ҡатынымды үлтергән кеше һин икән. Итең бик тәмлегә оҡшаған, бер ҡабып йотормон, улым менән ҡатынымдың ҡонон алырмын,— ти.

— Ҡабаланмай тор, әҙәм һөйәге ҡаҡ булһа ла, үткер ул, тамағыңа ҡаҙалыр,— ти ҙә егет аждаһа менән алышырға тотона.

Бик оҙаҡ алышалар былар. Алыша торғас, егет алтын ҡылысы менән аждаһаның тәүҙә өс башын, шунан тағы ла өс башын өҙә сабып төшөрә. Аждаһа ҡойроғо менән өҙөлгән баштарын үҙ урынына ҡуя. Егет аждаһаның ҡойроғон өҙә саба ла баштарын өсәрләп-өсәрләп киҫеп төшөрә. Баштарҙы тәгәрәтеп алып барып ҡумарылған ағастарҙың төптәренә тыңҡыслап тороп тығып сыға. Аждаһаның кәүҙәһен тураҡлап, туғыҙ ергә туғыҙ әрҙәнә итеп өйә. Егет аждаһа менән эште бөтөргәс, ҡыҙҙы менгәштереп ала ла, былар ҡайтып китәләр. Ҡалаға килеп еткәс, ҡыҙ алтын сәғәтен эттең муйынына бәйләй ҙә атаһы йортона ҡайтып китә. Батша, ҡыҙы өсөнсө тапҡыр иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, ҡала тултырып ҡыҙыл тыу элергә бойора.

Егет ҡайта ла әбейҙән һорай:

— Инәй, ниңә тағы ҡыҙыл тыу элгәндәр?

— Батшаның ҡыҙы был юлы ла иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан. Батша өс көн буйына байрам итергә бойорған. Ҡыҙҙы бер батыр егет ҡотҡарып тора икән. Батша ҡыҙын шул егеткә бирергә булған. Егетте таба алмайҙар. Өс көн буйына егет табылмай торһа, ҡыҙҙы икенсе кешегә кейәүгә бирәләр,— ти әбей.

Бер көн үткән, ике көн үткән, егетте таба алмайҙар икән.

Ошо батшалыҡтағы бер ҡарттың ҡырҡ бер улы булған. Бер көндө уландарҙың иң олоһо:

— Әйҙәгеҙ, батшаға барайыҡ, ҡыҙыңды беҙ ҡотҡарҙыҡ, тип әйтәйек. Аждаһаны үлтергән егетте ике көн буйы эҙләнеләр — таба алманылар; иҫән кеше булһа, күптән табырҙар ине, йәне бар түҙеп тә ятмаҫ, тауыш бирер ине,— ти.

— Беҙ күмәкләп бармайыҡ, арабыҙҙан берәүебеҙ генә барһын,— ти уландарҙың икенсеһе.

— Беҙ үҙ-ара көрәшәйек, кем еңер, батшаға шул барыр,— ти өсөнсөһө. Башҡалары ла был тәҡдимгә ҡушыла.

Ҡырҡ улан үҙ-ара көрәшә башлайҙар. Әй көрәшәләр былар, әй көрәшәләр, көрәшә торғас, пыр туҙышып һуғышып китәләр. Ҡырҡ беренсе ул таҙ икән. Ул көрәшмәй ҙә, һуғышмай ҙа ситтә генә ҡарап тик ултыра икән. Ағалары бер һыуһын көрәшеп, бер һыуһын һуғышып алғас, таҙ былай тигән:

— Иәрәбә һалығыҙ, кемгә сыҡһа, ҡыҙ шуға булыр.

Иәрәбә һалһалар, йәрәбә таҙға сыға. Уландар күмәкләшеп батшаға китәләр. Барып етәләр ҙә:

— Беҙ һинең ҡыҙыңды алырға килдек,— тиҙәр.

— Ҡайһығыҙ ала һуң? — тип һорай батша.

— Бына иң кесебеҙ таҙ ала, йәрәбә уға сыҡты,— тиҙәр уландар.

— Ярай,— ти батша, ҡыҙын бирергә риза була. Шунда уҡ мунса яғырға ҡуша, мунса әҙер булғас, таҙҙы мунса төшөртә, мунсанан сыҡҡас, кейәү егетте сарҙаҡҡа мендереп ултырта.

Шул ваҡытта теге аждаһаларҙы үлтергән егетте ҡараған әбей батшаға яҡыныраҡ килә лә былай ти:

— Миндә бер һалдат бар, рөхсәт итһәң, уны ла туйға алып килер инек,— ти.

— Хәҙер үк алып килегеҙ! — ти ҙә батша тройка ектереп ебәрә. Пауыскаларының* күсәре еректән эшләнгән, ти. Батшаның вәзирҙәре барғанда, егет атын тарап, этен ҡарап тора икән. Вәзирҙәр килеп еткәндәр ҙә:

— Һалдат, һине батша саҡырта, әйҙә ултыр, исмаһам, бер туйғансы ашап ҡалырһың,— тип ҡысҡыралар икән.

---

* Пауыска — повозка, карета.

— Була ул,— ти икән егет.— Яҡшы аш алдан ҡалғансы, яман ҡорһаҡ ярылһын!

Егет вәзирҙәр эргәһенә килә лә пауыскаларының драгаһына* баҫып ҡарай.

— Был мине күтәрмәҫ,— ти.

— Һо,— тиҙәр вәзирҙәр,— һине түгел, батшаның үҙен күтәрә ул! Һинең шайы уға бер ни тормай,— тиҙәр.

Егет ултырғайны, ерек күсәрҙәр һына ла төшә. Вәзирҙәр аптырайҙар, ҡайтып китәләр, батшаға әйтәләр. Батша көйә:

— Эшкинмәгәндәр, һеҙҙе ебәрһәң, шул булыр инде. Ярай, мин үҙем һыбай барып ҡайтырмын,— ти.

Егеткә барыу өсөн батша урамға асфальт түшәтә. Килә, егетте алып китә. Егеттең аты асфальтты айыра баҫып бара икән. Батша быны күреп ҡала ла эстән генә: «Эх, юлды боҙоп килә бит был, ҡәһәрең. Яҡтас, өйөндә ятһын ине»,— тип, ниңә саҡырған көнгә төшә. Таҙ кейәү менән батша ҡыҙы сарҙаҡта баҫып ҡарап торалар икән. Шул ваҡытта егеттең аты көмөш ҡойроғо менән юлды тигеҙләп килә башлай. Батша менән егет сарҙаҡ тапҡырына килеп еткәс тә, ҡыҙ атаһына:

— Атай, һинең кейәүең бына ошо егет булыр,— тип егеткә күрһәтә.

— Юҡ,— ти таҙ,— ҡыҙҙы мин ҡотҡарҙым, ҡыҙ минеке,— ти. Таҙҙың ағалары ла килеп етеп:

— Ҡыҙҙы беҙ ҡотҡарҙыҡ, ҡыҙ беҙҙеке,— тип тырышыналар. Ҡыҙ үҙе биргән әйберҙәрҙе әйтергә ҡуша. Ҡарттың ҡырҡ бер улы әйтә алмай. Егет ҡыҙҙың әйберҙәрен ҡуйынынан сығарып күрһәтә. Ҡарттың ҡырҡ бер улы һаман тырышына:

— Ҡыҙ беҙҙеке, хәҙер үк ҡыҙҙы беҙгә биреп ебәрегеҙ,— тиҙәр.

— Әйҙәгеҙ, улайһа,— ти егет,— барайыҡ аждаһа ятҡан ергә. Кемдең хәленән килә, шул аждаһаларҙың кәүҙәһен икенсе ергә өйһөн,— ти. Был тәҡдимгә риза булалар. Баралар.

— Былай бик батыр булғас, аждаһаның иттәрен алып икенсе ергә өйөгөҙ,— ти егет.

Ҡарттың кесе улы барып тотоноп ҡарай — күтәрә алмай. Өсәүләп күтәреп ҡарайҙар — булдыра алмайҙар. Көллөһө бергә йәбешеп күтәреп ҡарайҙар — барыбер булдыра алмайҙар.

---

* Драга — шулай яҙып алынып, «арба» тип аңлатылған. Дөрөҫө «канат» (каретаға ултырғанда, баҫып инеү урыны) булырға тейеш.

— Берегеҙҙең түгел, күмәгегеҙҙең хәленән килмәне,— ти егет.— Хәҙер аждаһаның башын табып килтерегеҙ,— ти. Тегеләр эҙләп-эҙләп ҡарайҙар — башты таба алмайҙар. Таба алмағас, егеткә:

— Беҙ башты ошонда ғына һалғайныҡ, моғайын, һин урлағанһыңдыр әле,— тиҙәр. Былар шулай тигәс, егет бара ла бер ҡарағайҙы күрһәтә:

— Аждаһа башы ошо ҡарағай аҫтында ята, ҡарағайҙы ауҙарығыҙ ҙа башты алығыҙ,— ти.

Тегеләр ҡарағайҙы этеп ҡарайҙар — йыға алмайҙар. Шунан егет ҡарағайҙы һыңар ҡулы менән генә этәреп ауҙара ла башты алып бирә.

— Йә, хәҙер башты күтәреп ҡарағыҙ,— ти.

Тегеләр башты ла күтәрә алмайынса, ҡулдарынан төшөрөп ебәрәләр. Хәҙер бөтә халыҡ аждаһаны егет үлтереүенә ышана. Майҙанға баралар, ҡарттың ҡырҡ бер улына хөкөм сығаралар:

— Ҡырҡ беренә ҡырҡ бер бағана ултыртып, һәр береһен бер бағанаға бәйләп ҡуйырға. Һәр бағанаға берәр беҙ ҡаҙарға, үткән бер кеше беҙ менән ҡырҡ берен дә сәнсергә тейеш. Кем дә кем сәнсеп үтмәй, шул кешенең үҙен сәнскеләп үлтерергә.

Егет, батша кейәүе булып, тыныс ҡына йәшәп ята. Бер көндө йоҡлап ятҡан ваҡытта егеттең эргәһенә бер алтын ҡош осоп килә. Ҡош сөйгә ултыра ла йоҡларға ирек бирмәй, бик маҙаһыҙлай егетте. Егет, ятҡан еренән тороп, тоторға итә, ҡош тышҡа осоп сыға. Егет атын менеп, этен эйәртеп, ҡош артынан төшә. Осҡанда ҡоштан яҡтылыҡ ергә төшөп, юлды яҡтыртып бара икән. Таң алдынан ғына яҡтылыҡ юҡ була ла ҡуя. Егет кире әйләнеп ҡайта. Кис булғас, егеттең йоҡларға ятыуы була, әлеге ҡош тағы ла килә, тағы ла маҙаһыҙлай башлай, егет тағы ла ҡошто ҡыуа төшә. Был юлы таң атырға өлгөрмәй, егет ҡоштоң торған еренә барып етә. Өйгә барып инһә, шәм яғып бер ҡатын ултыра Егет ҡатынға:

— Төнәп сығырға рөхсәт итмәçһегеҙме? — тип өндәшә. Был юлбаçарҙар өйө икән.

— Рөхсәт,— ти ҡатын. Егет, тышҡа сығып, атын тәрбиәләй, этенә ашарға бирә. Яңынан өйгә инһә, ҡатын өçтәл артында ултыра, өçтәлдә кәрт ята.

— Әйҙә, кәрт уйнайыҡ,— ти ҡатын.

— Әйҙә,— ти егет.

— Дуракмы әллә отошмо? — тип һорай ҡатын.

— Отошо ни ҙә, дурағы ни? — тип һорай егет.

— Бер отолғанда, бер аҙым, ике отолғанда, ике аҙым, өс отолғанда, өс аҙым артҡа баҫырға,— ти ҡатын.

— Улайһа, эйҙә, отоштан булһын,— ти ҙә егет ҡатын менән кәрт уйнарға тотона.

Егет бер тапҡыр отола, бер аҙым артҡа баҫа, ике тапҡыр отола, ике аҙым артҡа баҫа. Өсөнсө тапҡыр отолғанда, өсөнсө аҙымды артҡа баҫҡайны, боҙға осто ла төштө был. Егеттең атын да, этен дә шунда килтереп ташлайҙар.

Таң ҡыйыла. Егеттең өйҙә ҡалған ҡустыһы таң алдынан тышҡа сығып ҡараһа, бәкенән ҡан тама. Быны күреп, ул ағаһын эҙләп сығып китә. Батшаға бара. Барһа, быны батша үҙенең кейәүе тип уйлай. Ағаһы менән ҡустыһы араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ икән. Быныҡ да башы алтын, арт һаны көмөш, аты ла, эте лә бер иш. Батшаға барып еткәс, ат ҡараусылар егеттең атын алырға итәләр, был бирмәй, атын бер һарайға бикләй ҙә асҡысын үҙе һалып ала, этен дә үҙе ҡарай. Батшаның бөтә кешеһе аптырай. Егет ҡатын менән дә һөйләшмәй. Ҡатын, егетте үҙенең ире тип уйлап:

— Был бик баҙанып* ҡайтҡан икән,— ти.

Кис була. Ҡатын урын әҙерләй, хәҙер бергә йоҡларға кәрәк бит инде. Егет еңгәһе менән үҙенең араһына ҡылысын һалып ята. Ҡатынға:

— Ошо ҡылысты аша сығып, ҡул һалыусы булма,— ти. Ҡатын: «Был шаярталыр»,— тип егеткә ҡулын һалайым ғына тигәндә, бүлмәгә әлеге ҡош осоп килеп инә. Ҡатын егеткә:

— Һин киткәс, был ҡоштоң килеп йөрөүе баҫылғайны. Һин ҡайтҡас, тағы ла килгән,— ти. Егет, əһə, тип уйлап ала ла ҡош артынан китмәк була. Ҡатын ебәрмәй:

— Ул ҡошта эшең булмаһын! — ти. Егет китә, ҡатын илап тороп ҡала.

Ҡош оса, уның яҡтыһын күреп, аты, эте менән егет саба. Әлеге өйгә килеп етәләр. Егет өйгә инһә, өҫтәл артында бер ҡатын ултыра, үҙе бик матур, бите нурҙар бөркөп тора. Егет:

— Төнәп сығырға рөхсәт итмәҫһегеҙме? — тип һорай.

— Рөхсәт,— ти ҡатын.

Егет атын, этен бер һарайға бикләп инә, һарайҙың

---

* Баҙаныу (диал.) — арыу, йонсоу.

аҫкысын ҡатынға бирмәй, үҙенең кеҫәһенә һала. Ағаһына ҡарағанда ҡустыһы зирәгерәк булған шул.

— Әйҙә, кәрт уйнайыҡ,— ти ҡатын.

— Әйҙә,— ти егет.

— Дуракмы әллә отошмо?

— Отош.

Шарттар әүәлгесә була. Кем отола, шул бер аҙым артҡа сигә. Егет ҡатындан бер отола, ике отола. Өсөнсөһөндә лә отолғайны, ҡатынды сәсенән урап тороп ала ла ҡамсыһы менән яра башлай.

— Минең ағайҙы ҡайҙа иттең, хәҙер үк тап! — ти.

— Белгәнем дә, күргәнем дә юҡ,— ти ҡатын. Егет ҡатынды һыуындырып-һыуындырып тетергә тотона. Ҡатын түҙә алмай.

— Ағайың баҙҙа,— ти.

— Үлеме әллә тереме?

— Үле,— ти ҡатын.

— Үлтерә белгәс, терелтә лә белерһең. Әйт, уны нисек терелтергә?

— Ана, мөйөштә ике мискә ултыра. Береһендә үле һыу, икенсеһендә тере һыу,— ти ҡатын. Егет ышанмай. Ҡамсыһының көмөш һабын тәүҙә үле һыуға тыға. Көмөш һап ҡап-ҡараға әйләнә. Егет ҡамсы һабын тере һыуға тыға, көмөш алтынға әүерелә.

— Был һыуҙарҙы нисек файҙаланырға? — тип һорай егет ҡатындан.

— Баҙға төш тә һәр бер сүпкә тәүҙә үле һыуҙы, шунан тере һыуҙы һибеп сыҡ,— ти ҡатын.

Егет бер мөйөшкә сыңға ҡаға ла ҡатынды шунда сынйырлап ҡуя. Баҙ ҡапҡасын аса ла баҙҙағы сүпкә тәүҙә үле һыуҙы һөртөп сыға, шунан тере һыуҙы һибә башлай. Егет һибә тора, баҙҙан кешеләр сыға тора. Өй эсе тулып китә, һәндерә, көпкә* баштарына ла кешеләр менеп ултыралар. Был ҡатындың кәсебе шул булған: алтын ҡошҡа әүерелгән дә, батырҙарҙы эйәртеп алып килеп, гел шулай кеше ите ашап ятыр булған. Иң аҙаҡтан егеттең ағаһы үҙенең аты, эте менән баҙҙан килеп сыҡҡан.

Егет ҡатынды сынйырҙан ысҡындырған.

— Хәҙер үк бөтә батырҙарҙың да тамағын туйҙыр,— тигән.

Ҡатын батырҙарҙы икенсе бер бүлмәгә саҡыра. Инһәләр, унда оҙон өҫтәл, өҫтәл өҫтө төрлө ашамлыҡ-

* К ө п к ә (диал.) — мейес артына быҙау йәки бәрәс ябыу өсөн яһалған урын.

эсемлек менән шығырым тулы. өҫтәл тирәләп ҡыҙҙар теҙелгән, ти. Былар батша ҡыҙҙары икән, ҡатын уларҙы хеҙмәтсе итеп тотҡан.

Батырҙар ашап-эсеп, һәр береһе берәр ҡыҙҙы алып, егеткә күп рәхмәттәр әйтеп, ҡайтып китәләр. Егет ҡатынды баҙға төшөрә лә үле һыу һөртә, ҡатын көлкүмергә әүерелә. Үле һыу менән тере һыуҙы алып сыға ла егет ҡатындың донъяһын үртәй.

Ағалы-энеле ике һыбай, эттәрен эйәртеп, ҡайтып китәләр. Килә торғас, ҡустыһы ағаһына:

— Ағай, миңә еңгә менән йоҡларға тура килде бит әле,— ти. Ағаһы: «Был икебеҙгә лә ҡатын булыр?» — тип уйлай ҙа ҡустыһының муйынын өҙә сабып китә. Ҡустыһының атын да етәкләп ала, эте бармай. Эт тәүҙә үле, аҙаҡтан тере һыу алып килеп, эйәһенең муйынына һөртә. Шунан һуң киҫелгән башты килтереп муйынға йәбештерә, тик егеттең йөҙөн артҡа ҡаратып йәбештерә лә ҡуя.

Егеттең ағаһы, ҡайта торғас: «Этте лә алып ҡайтырға кәрәк, ни эшләп һуң әле мин уны ҡалдырып киттем»,— тип кире әйләнеп килһә, ҡустыһы яңылыш ҡарап тора. Ағаһы ҡустыһын йәлләй.

— Ил өҫтөндә ҡатын табылыр әле,— ти ҙә ҡустыһының башын, яңынан өҙә сабып, төҙәтеп ялғай. Ҡайтып килә торғас, ҡустыһы ағаһына үпкәләй:

— Эх, ағай, шулай эшләргә яраймы ни?! Әгәр еңгәм ҡосаҡлаһа, мин уның ҡулын өҙә сабыр инем. Еңгә менән йоҡлағанда, мин уртаға ҡылыс һалып яттым бит,— ти.

Ағай-энеле ике егет шәһәргә килеп етәләр. Батша:

— Кейәүем берәү ине, хәҙер икәү булған,— тип аптырай. Бөтә халыҡтың иҫе-аҡылы китә. Ҡыҙ ҙа ҡайһыһын ирем тип әйтергә лә белмәй.

— Бына, ҡоҙа, кейәүегеҙҙе алып килдем,— ти ҙә ҡустыһы батшаға барып күрешә. Батша ҡоҙаһын бик ныҡ һыйлай, бик оҙаҡ ҡунаҡ итә. Ашап-эсеп, уйнапкөлөп туйғас, ҡустыһы ҡайтып китә, ағаһы батша булып тороп ҡала.

Улар әле лә донъя көтөп, йөн тетеп яталар, ти.

## ҠАМЫР БАТЫР

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Бабай балыҡ аулаған, шуның менән көн күргәндәр, ти. Барын барға иҫәпләп, юғын юҡҡа иҫәп ләп йәшәй биргәндәр, һис нәмәгә зарланмағандар, ти,

былар. Тик балалары булмау ғына уларҙың эстәрен бошороп торған да торған, ти. Йонсоу бер көндө бабай үҙенең ғәҙәтенсә диңгеҙгә балыҡҡа барған. Диңгеҙгә ауын һалып, тартып алған икән — сәйер бер балыҡ эләгеп килеп сыҡҡан. Был балыҡтың тәңкәләре алтындан да көмөштән, гәүһәрҙән дә яҡуттан ғына икән. Күҙҙең яуын алып торалар, ти.

Бабай, балыҡты усына һалып, оҙаҡ ҡарап торған да: «Быны ашап тамаҡ туймаҫ, йәшәй бирһен әйҙә»,— тип диңгеҙгә ташлайым ғына тигәндә, балыҡ телгә килгән:

— Бабай! Мине алып ҡайт. Итемде улдарыңа ашат, ҡанымды аттарыңа эсер, һөйәктәремде эттәреңә бир,— тигән.

Бабайҙың улдары булмағас, аптырап ҡалған. Ни эшләргә белмәй торған-торған да, ни булһа ла булыр тип, балыҡты алып ҡайтып киткән.

— Ҡайтҡас, тупһаһын ашатлап, һүҙ ҡатырға ла өлгөрмәгән, ҡарсығы, ике малай күтәреп, ҡаршыһына килеп баҫҡан.

— Күрәһеңме, был малайҙар — беҙҙең улдарыбыҙ! — тигәс, бабай тағы ла нығыраҡ ғәжәпкә ҡалған. Шунан быйың ҡарсығы бабай балыҡҡа киткәс ни булғанын һөйләп биргән.

— Һин балыҡҡа сығып китеүең менән ҡамыр баҫтым да, ике малай яһап, һандыҡҡа һалдым,— тигән әбей.— Шул арала үҙем ишек алдына сығып әйләндем. Килеп инһәм, ҡолағыма бала илаған тауыш салынғандай булды. Иплэберәк тыңлаһам, тауыш һандыҡ эсенән килә. Һандыҡты асып ебәргәйнем, шаҡ ҡаттым: минең бая һалып ҡуйған малайҙарыма йән ингән!

Ни әйтергә белмәйенсә ҡатып ҡалған бабай һушына килгәс, баяғы балыҡтың әйткән һүҙҙәрен иҫенә төшөргән. Шунан балыҡтың итен малайҙарға ашатҡан, ҡанын ике атына эсергән, һөйәктәрен ике этенә ташлаған.

Мөғжизәле балыҡтың итен ашағас, малайҙарҙың баштары, алтын балыҡ тәңкәләре кеүек, аҫыл таштар менән ҡапланған. Был малайҙар көн үҫәһен бер сәғәттә үҫкәндәр. Быға бабай менән әбей бик ҡыуанғандар, үҙҙәрен донъяла иң бәхетле кеше итеп һанағандар, ҙурыһына Ҡамыр батыр тип исем ҡушҡандар.

Бер ваҡыт Ҡамыр батырҙың донъя гиҙеп йөрөп ҡайтҡыһы килгән. Уның был уйын белеп, бабай менән

өбей ҡайғыға ҡалғандар. Ҡамыр батыр үтенеп һорағас, ебәрергә риза булғандар.

Бер көндө Ҡамыр батыр атаһына:

— Атай! Миңә ун биш бот суйындан суҡмар ҡойҙор, унан да ауырыраҡ итеп ҡылыс һуҡтыр. Улар миңә юл йөрөгәндә кәрәк булыр,— тигән.

Атаһы суҡмар менән ҡылыс эшләтеп биргәс, Ҡамыр батыр ҡоралдарын һынамаҡ булып, бер яланға сыҡҡан. Шунан был теге ун биш ботло суҡмарҙы шундай итеп күккә сорғап ебәргән, суҡмар хатта күҙҙән юғалған. Байтаҡ ваҡыттан һуң төшөп килгәне күренгәс, Ҡамыр батыр уның аҫтына үҙенең яланғас башын ҡуйған. Суҡмар, бының башына бәрелеп, селпәрәмә ватылған да тирә-яҡҡа сәсрәгән. Ҡамыр батыр был суҡмарҙың ярсыҡтарын йыйып ҡайтҡан да, тағы ла ауырыраҡ итеп, икенсе суҡмар ҡойҙортоп алған. Баяғыса һынап ҡарағас, бынығын ярарлыҡ тапҡан.

Сығып китергә әҙерләнеп бөткәс, Ҡамыр батыр бер уҡты епкә бәйләп келәт өрлөгөнә элгән дә ҡустыһына:

— Һин ошо уҡты көн һайын сығып ҡара. Әгәр унан май тамһа, мин иҫән-һау булырмын; ҡан тамһа, үлгән булырмын. Ул саҡта инде һин мине эҙләй сыҡ,— тигән.

Ҡамыр батыр ата-әсәһе, туғаны менән хушлашҡан да, теге суҡмарын, ҡылысын тағып, атҡа атланып сығып киткән. Ауылды сыҡҡас, артына әйләнеп һуңғы тапҡыр хуш тигән дә өйөрмә ҡуптарып алға сапҡан. Киткән был, киткән, сабып китеп бара торғас, япаяңғыҙ бер өйгә барып еткән, шунда йоҡлап китмәк булған. Арғымағын ситкәрәк бәйләгән дә үҙе өйгә ингән. Унда мәскәй тора икән. Ул Ҡамыр батырҙы, ишек асып, ҡаршы алған:

— Кем булаһың, улым? Ҡайҙан киләһең? Ҡайһы илгә китеп бараһың? — тип һораша башлаған. Ҡамыр батыр мәскәйҙең һорауҙарына яуап биргәс:

— Бик асыҡтым, ҡапҡылап алырға берәй нәмәң булмаҫмы? — тип һораған.

Мәскәй Ҡамыр батыр алдына төрлө ашамлыҡ өйөп ташлаған. Әллә ниндәй бер эсемлек тә килтереп ултыртҡан. Ҡамыр батыр, шикләнмәй-нитмәй, барыһынан ауыҙ итеп, теге һыуҙы эскән икән, шунда уҡ һуштан яҙған да ҡуйған. Эсемлек тигәне ағыу булған инде. Шуны ғына көтөп торған мәскәй Ҡамыр батырҙың кәүҙәһен тотошлай йотҡан да аҫыл ташлы башын, өй биҙәргә тип, алып ҡалған.

Ҡамыр батыр сығып киткәс, байтаҡ ваҡыт үткән, уны хатта бөтөнләй онотҡандар. Берҙән-бер көндө

әсәһе өйҙә ҡалған улына теге уҡты ҡарап керергә ҡушҡан. Ҡамыр батырҙың ҡустыһы keләткә инеп ҡараһа, уҡтан ҡан тамып тора, ти. Керә һалып, атаәсәһенә әйткән дә, ағаһын юллап, сығып китергә булған. Атаһы менән әсәһе ризалыҡ биргәс, был теге балыҡтың һөйәген ашаған эттәрҙе эйәртеп сығып киткән. Эттәр быны туп-тура мәскәй әбейҙең өйөнә алып килгәндәр. Өйгә килеп инһә, уны бик һылыу бер ҡыҙ ҡаршы алған.

— Егет, йәнең ҡәҙерле булһа, кит бынан тиҙерәк! — тигән.

— Ағайымды күрмәйенсә китмәйем,— тигән егет.

— Улай булғас, бына нәмә: әбей һине һыйларға итер, күп итеп төрлөһөнән ашамлыҡ ҡуйыр, эсемлек бирер. Һин уның бер нәмәһен дә ашама ла, эсмә лә,— тип, ҡыҙ күҙҙән юғалған.

Шунан был аптырап тора ине, теге мәскәй килеп инде, ти. Килеп инде лә, баяғыса ярамһыҡланып:

— Кем булаһың, улым? Ҡайҙан киләһең? Ҡайһы илгә китеп бараһың? — тип һораша башланы, ти. Шунан: — Асыҡҡанһыңдыр, улым, ашап-эсеп кит,— тип, быныц алдына төрлө ашамлыҡ өйөп ташланы, эсемлек килтереп ултыртты, ти. Егет бер ҙә ашамағас, ҡыҫтай ҙа ҡыҫтай, ҡыҫтай ҙа ҡыҫтай, ти. Мәскәй күпме генә ҡыҫтамаһын, егет бының һыйын ауыҙ итеп тә ҡарамаған. Шунан ҡарсыҡ быны тотоп алып үлтермәксе булған икән, көсө етмәгән. Был егет үҙе мәскәйҙең сәстәренән урап тотоп алған да, «бир минең ағайымды, бир», тип ҡамсыһы менән шажлатып ярырға тотонған. Шунан мәскәй ни эшләһен, быға ағаһын бирергә вәғәҙә иткән. Ҡамыр батырҙың һөйәктәрен килтереп сығарған да, башын ялғап, ниндәйҙер һыу бөрккән. Шунан һуң Ҡамыр батыр күҙен асып, һикереп торған да ултырған.

— Ай-һай, оҙаҡ йоҡлағанмын икән,— тигән Ҡамыр батыр.

— Йоҡлағанһың, йоҡламай ни! Мин булмаһам, мәңге йоҡлаған булыр инең,— тип, ҡустыһы бөтә хәлде һөйләп биргәс, Ҡамыр батыр яуыз ҡарсыҡты шунда уҡ һуҡҡан да үлтергән. Шунан мәскәйҙең бөтә байлығы менән теге ҡыҙҙы ҡустыһына биргән. Ҡустыһы ата-әсәһе янына ҡайтып, шул ҡыҙ менән йәшәй башлаған, ә Ҡамыр батыр үҙе ары киткән.

Китеп бара, китеп бара, ти. Ҡамыр батыр, ә үҙе, донъяла минән дә көслөрәк кеше бармы икән, тип уйлай, ти. Китеп бара торғас, үҙенең көсөн һынап ҡара-

маҡ булып, юл буйында ятҡан бик ҙур бер ташҡа суҡмары менән һуҡҡан икән, таш он-талҡан булған да ҡуйған. Китеп бара тағы ла Ҡамыр батыр, китеп бара, китеп бара торғас, хәҙер бер батша йәшәгән ҡалаға килеп етә. Килеп еткәс, бер ҡартҡа фатир төшә. Ҡунаҡты был бабай үҙендә бары менән һый-хөрмәт итә. Ашап ултырғанда Ҡамыр батыр ҡала хаҡында, бындағы хәл-әхүәл тураһында һораша. Ҡарт, ауыр көрһөнөп:

— Бик бәхетһеҙ булды әле ул, беҙҙең ҡалабыҙ,— ти бабай.— Һәйбәт кенә йәшәп ятҡан бер көндө ҡалабыҙға дейеү осоп килеп төштө. Ошонда йәшәмәк булып, барыбыҙҙы ҡырып бөтөрөү менән янай башланы. Быны ишеткәс, ҡаланың бөтә халҡы майҙанға йыйылды, батша ла килде. Шул ерҙә дейеүгә илселәр ебәрергә булдыҡ. Илселәребеҙ дейеүгә барып: «Беҙҙән күпме түләү һорайһың, шул хәтле бирәбеҙ, тик үҙебеҙҙе тыныс ҡалдыр»,— тинеләр. Ә дейеү әйткән: «Миңә көн һайын бер ҡыҙ биреп торһағыҙ, үҙегеҙгә бер ниндәй ҙә зыян килтермәм»,— тигән. Ни эшләмәк кәрәк, ҡала халҡы шуға риза булды. Дейеүгә көн дә бер ҡыҙ биреп тора башланыҡ. Бөгөн бына нәүбәт батшаның берҙән-бер ҡыҙына килеп етте. Ҡыҙын ҡотҡарып ала алған кешегә батша ҙур бүләк вәғәҙә итә. Хәҙер уның ҡыҙы суйын һарайҙа, һарай тирәһен батшаның бер вәзире һаҡлап тора.

Бабай һөйләп бөтөрөү менән Ҡамыр батыр үҙенең суйын суҡмарын алған да урамға сыҡҡан, ти. Был саҡ ете төн уртаһы булған, ҡараңғы. Ҡамыр батыр суйын һарайға барып, ишеген тартып ҡараған икән, ишек шунда уҡ асылып киткән. Шул ваҡытта батша ҡыҙы, Ҡамыр батырҙы күреп:

— Егет, ниңә килдең бында? — тип һораны, ти. Ҡамыр батыр:

— Һине ҡотҡарырға килдем,— тип әйтеүгә, тышта бик яман ел-дауыл ҡубып, күк күкрәне, йәшен йәшнәне, ти. Шул арала бында әллә ҡайҙан, ер аҫтынан сыҡҡан кеүек, ҡот осҡос бер дейеү килеп тә баҫты, ти. Уның янында Ҡамыр батыр малай һымаҡ күренә, ти. Дейеү Ҡамыр батырға:

— Һин бында нимә тип килгән булдың? — ти.

— Һине үлтереп, батша ҡыҙын ҡотҡарырға килдем! — ти Ҡамыр батыр.

Шулай тигән дә Ҡамыр батыр, суҡмарын күтәреп, дейеүгә һуҡҡан икән, тегенең башы өҙөлөп, ситкә тәгәрәгән, кәүҙәһе шунда ергә ауған. Ҡамыр батыр

дейеүҙең башын, суйын һарайҙы ҡалҡытып, уның аҫтына тығып ҡуйған, ә кәүҙәһен шундағы диңгеҙгә ташлаған. Шунан Ҡамыр батыр, батша ҡыҙы менән хушлашып:

— Мин һеҙгә һуңынан барырмын, хәҙер миңә ял итергә кәрәк,— тигән дә ҡайтып киткән.

Ҡамыр батыр күҙҙән юғалыу менән ҡыҙ янына батшаның суйын һарайҙы һаҡларға ҡуйылған һанаты килеп еткән. Ул:

— Әгәр атайыңа дейеүҙе мин үлтерҙе тип әйтмәһәң, хәҙер үк башыңа етәм! — тигән. Ҡото алынған ҡыҙ риза булған. Улар икәүләп батша һарайына йүнәлгәндәр.

Батша, иҫән-һау ҡайтып ингән ҡыҙын күреп, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай торған. Шатлығынан хатта ҡыҙының нисек ҡотҡарылыуын, дейеүҙе кем үлтереүен һорашырға ла оноҡҡан. Шунда уҡ ҡыҙын ошо һанатына кейәүгә биреүен халыҡҡа иғлан иткән.

Инде өсөнсө көн туй бара. Батша ла, кейәү ҙә, ҡунаҡтар ҙа — барыһы шат, батша ҡыҙы ғына күңелһеҙ, ти. Ул Ҡамыр батырҙы көтә, ә Ҡамыр батыр һаман килмәй ҙә килмәй, ти. Батша ҡыҙы килгән бер кешене күҙҙән үткәреп ултыра.

Бына бер ваҡыт һарайға бер хәйерсе килеп ингән дә ишек төбөнә генә ултырған. Батша, хәйерсене күреп ҡалып, бик асыуланған, уны ҡыуып сығарырға бойорған. Батша ҡыҙы ул хәйерсенең Ҡамыр батыр икәнен таныған да, атаһына килеп, уны бында ҡалдырыуын һораған.

— Атай, рөхсәт ит, ул да бында булһын,— тигән. Ҡыҙы һорағас, батша ҡарышмаған. Шул саҡта батша ҡыҙы хәйерсегә бер аяҡ бал килтереп биргән. Хәйерсе балды эсеп ебәргән дә батшанан бер йыр йырларға рөхсәт һораған. Батша рөхсәт иткән. Ҡамыр батырҙың сикһеҙ моңло йырынан тәьҫирләнеп, бөтә ҡунаҡтар ойоп киткәндәр. Батша ҡыҙы ғына айыҡ ҡалған. Шул саҡта Ҡамыр батыр хәйерсе кейемен сисеп ташлаған, батша ҡыҙы уға суйын һарайҙан сыҡҡас ниндәй хәлдәр булғанын һөйләп биргән. Ҡамыр батыр:

— Ҡунаҡтар һушын йыйғас, һин ошоларҙың барыһын да уларға һөйләрһең,— тигән дә икенсе йыр башлаған, ти. Был йырға ҡунаҡтар, һушын йыйып, уянып киткәндәр. Батша ҡыҙы үҙен дейеүҙән кем ҡотҡарғанын ҡысҡырып һөйләп биргән. Ҡунаҡтар теге һанатҡа ҡырын күҙ менән ҡарай башлағандар, ә ул һаман:

— Юҡ, юҡ! Дейеүҙе мин үлтерҙем, батша ҡыҙын дейеүҙән мин ҡотҡарҙым! — тип ҡысҡырына, ти.

Шул ваҡыт батша уға:

— Әгәр дейеүҙе һин үлтергәнһең икән, раҫла! Нисек раҫларһың? — тип һорау биргән.

— Дейеүҙең башын өҙә саптым да суйын һарай аҫтына ҡыҫтырып ҡуйҙым,— тигән теге һалдат.

Бына шулай тигәс, барыһы ла, күмәкләшеп, суйын һарай янына киткән. Барып еткәс, батша үҙенең был һанатына:

— Дейеүҙең башын суйын һарай аҫтына ҡыҫтырып ҡуйғанһың икән, хәҙер уны кире алып беҙгә күрһәт,— тигән.

Һанат тегеләй иткән, былай иткән, суйын һарайҙы күтәреү түгел, урынынан ҡуҙғата ла алмаған.

Шул саҡта халыҡ араһынан Ҡамыр батыр килеп сыҡҡан да, суйын һарайҙы күтәреп:

— Дейеүҙе мин үлтерҙем. Бына уның башы! — тип дейеүҙең килбәтһеҙ башын алып күрһәткән. Шунан ул диңгеҙгә сумған да шул арала дейеүҙең кәүҙәһен дә күтәреп алып сыҡҡан. Халыҡ, Ҡамыр батырҙың был батырлығын күреп, хайран ҡалған.

Шунан инде батша Ҡамыр батырға:

— Вәғәҙәм буйынса, ярты байлығым менән ҡыҙымды һиңә бирәм, минең вариҫым булырһың,— тигән, ә теге алдаҡсы һанатын аҫырға бойорған, ти.

## ҒӘЙНИЗАР МЕНӘН ЕТЕМЙӘР

Борон-борон заманда Зөлҡәрнәй тигән хан йәшәгән. Уның ике улы булған. Өлкәне Ғәйнизар, кесеһе Етемйәр исемле. Күп тә үтмәй, уларҙың әсәләре үлеп киткән. Хан икенсе ҡатын алған. Үгәй әсә балаларҙы бер ҙә һыйҙырмаған. Ғәйнизарға күршеләре:

— Үгәй әсә һыйҙырмағас, һин кит бынан,— тиҙәр. Ғәйнизар китергә була. Китерҙән элек уға ҡала осондағы сихырсы әбейгә барырға ҡушалар. Сихырсы әбей уға дейеү ҡыҙына барып ғилем алырға кәңәш итә.

— Атайыңдың йылҡы өйөрөнә барып, ҡороғоңдо ҡылтырат, йүгәнеңде шылтырат. Ҡайһы ат ҡараһа, шуны мен,— ти.

Ғәйнизар, йылҡы араһына барып, ҡороғон ҡылтырата, йүгәнен шылтырата. Уға баҡтаһын ҡоймаған бер тай боролоп ҡарай. Ғәйнизар шуны тотоп атлана. Тай баҡтаһын ҡоя, яҡшы бер ҡонанға әйләнә. Ғәйнизар

алыҫ юлға сығып китә. Бик оҙаҡ барғас, бер тау итәгендә туҡтарға була. Уғын сыра итеп ярып, ут яға, уҡтың башаҡтарын уттың көлө тирәләй сәнсеп сыға.

Иртәнсәк Ғәйнизар тауҙы аша төшһә, уға ҡаршы дейеү килә, ти. Ғәйнизар дейеүгә:

— Мин һинең ҡыҙыңда уҡып ғилем алырға тип китеп барам,— ти. Дейеү:

— Ярар, мин һиңә иртәгә ғәскәр менән килермен, һин шуларҙы еңһәң, ҡыҙым һине уҡытыр,— ти.

Иртәгеһенә дейеү ғәскәр менән килә. Ғәйнизар уларҙың барыһын да ҡыра. Дейеү:

— Иртәгә тағы ғәскәр алып киләм,— тип ҡайтып китә. Иртәгеһен Ғәйнизар дейеү ғәскәрен йәнә ҡырып бөтөрә.

Ай үтә, йыл үтә, ә дейеү көн һайын ғәскәр алып килә.

Был ваҡытта Етемйәр ҙур булып үҫеп китә. Уға күршеләре:

— Һинең ағайың бар ине. Ул дейеү ҡыҙына уҡырға китте. Уны сихырсы әбей белә,— тиҙәр.

Етемйәр сихырсы әбейгә бара. Сихырсы Етемйәргә ағаһының ҡайҙа икәнен әйтә.

— Фәлән тау итәгендә ул йоҡлап китте. Ут яҡҡан ерендә уғының башаҡтарын сәнсте. Шуны тапһаң, ағайыңды табырһың,— ти. Сихырсы Етемйәргә ағаһы менән киткән аттың «ҡустыһын» менергә ҡуша.

Етемйәр атаһының аттары араһынан теге ат нәҫеленән булған атты табып менә лә ағаһын эҙләргә сығып китә. Тау итәгенә барып еткәс, уҡ башаҡтарын табып, Ғәйнизар йоҡлаған урында йоҡларға ята. Иртәнсәк тауҙың икенсе яғына төшә. Унда бер сатыр ҡороулы тора, эргәһендәге бер ағаста бер ат, бер бәйләнеп, бер сиселеп, уйнап тора, ти. Етемйәр аты менән теге ат кешнәшеп, бер-береһен танышҙар.

Етемйәр сатыр эсенә инә. Унда бер кеше йоҡлап ятҡан була. Егет уның күкрәгенә ултыра. Теге кеше уяна. Былар көрәшә башлайҙар. Етемйәр теге кешенең өҫтөнә тағы ултырып ала ла, хәнйәрен сығарып:

— Һин кем? Әйтмәһәң, үлтерәм,— ти.

Ғәйнизар үҙенең Зөлҡәрнәй хан улы булыуын әйтә. Ике туған, берен-бере танып, ҡыуанышалар.

Ғәйнизар ҡустыһына үҙе менән булған хәлдең барыһын да һөйләп бирә. Шул арала теге дейеү йәнә ғәскәр алып килә. Былар дейеү ғәскәрен тағы ҡыйраталар. Етемйәр дейеүҙең үҙен ҡыуып китә. Дейеү бер ер тишегенән аҫҡа төшөп ҡаса. Шул саҡ Етемйәрҙең аты:

— Һин төш, мин һине өс тәүлек көтөрмөн,— ти.
Етемйәр тишектән ер аҫтына төшөп китә. Төшһә, унда бер ҡала күрә, ҡалаға барып, бер өйгә инә. Унда һалдат яһайҙар икән. Һалдат яһаусы оҫталар:

— Дейеү бер егеткә шарт ҡуйған. Уға ҡаршы һуғышырға беҙҙән һалдаттар яһата,— тиҙәр.

Етемйәр дейеү ҡыҙы йәшәгән йортто һораша. Башҡа һалдат яһамаҫҡа ҡушып, сығып китә. Дейеү ҡыҙының өйөнә барһа, унда дейеү ҡыҙы ҡыҙҙар уҡытып ята икән. Етемйәр дейеү ҡыҙынан инәһенең йәне тәҙрә төбөндә ятҡан йомортҡала икәнен белә. Шунан егет дейеү әбейҙең ҡашына килә. Ул йоҡлап ятҡан була. Етемйәр уны туҡмай башлай. Дейеү әбей уянып китә лә Етемйәр менән алыша башлай. Дейеү еңеп барғас, Етемйәр тәҙрә төбөндәге йомортҡаға ынтыла: Дейеү:

— Ай, егет, һәләк итәһең бит! — тип, Етемйәрҙе икенсе яҡҡа ырғытып ебәрә. Өсөнсө ынтылышында Етемйәр тәҙрә төбөндәге йомортҡаны һыта. Дейеү үлә.

Етемйәр менән дейеү ҡыҙы икәүләп ер өҫтөнә сығалар. Шунда Етемйәр:

— Мин түгел, минең ағайым Ғәйнизар ул һинең әсәйеңдең ғәскәрен еңгән батыр. Һин унығы,— тигән.

Ҡыҙ риза булған. Сатырға килеп етеп ҡараһалар, сатыр эсендә һуҡырайып бөткән бер ҡарт ултыра, ти. Етемйәр ҡарттың кем булыуын һораша башлай, ә ул Ғәйнизар булып сыға. Ғәйнизар:

— Мин һине үлгән икән тип уйлағайным. Шуға ҡайғынан ошо хәлгә ҡалдым,— ти.

Дейеү ҡыҙы Ғәйнизарға бер дарыу эсерә. Дарыуҙы эсеүе менән Ғәйнизар элекке хәленә ҡайта. Улар шунда йоҡларға булалар. Төндә Етемйәр ағаһы менән дейеү ҡыҙының һөйләшкәндәрен тыңлап ята.

Ғәйнизар ҡатынына:

— Һин ниндәй һылыуһың,— ти. Ҡатыны:

— Мин нимә, бына ут батшаһының ҡыҙы матур, исмаһам,— ти.

Иртәгеһен Етемйәр ут батшаһы ҡыҙының ҡайҙа икәнен һорай. Еңгәһе:

— Беҙ уның менән бергә уҡыныҡ. Ул да хәҙер уҡыта,— ти, барыр юлды өйрәтә.

Етемйәр ут батшаһының ҡыҙын эҙләп, ә Ғәйнизар ҡатынын алып тыуған йортона ҡайтып китә.

Етемйәр ай бара, йыл бара, алыҫта бер ҡаланы күрә. Ҡалаға етер саҡта атының ҡылын ала ла атын ебәрә. Шул саҡ ул әллә ниндәй бер ярты кәүҙәһе

янып йүгереп килгән кешене күрә. Етемйәр уның утын һүндерә. Янып килгән кеше:

— Ярар, егет, үлемдән ҡотҡарҙың, изгелегеңде онотмам,— ти.

Етемйәр ҡалаға инә. Ут батшаһының йортона ҡарай китә. Барһа, йорт Етемйәр кеүек килеүсе егеттәр менән шығырым тулы, ти. Ҡыҙ егеттәрҙе берәмләп саҡырып ала ла, үтәй алмаҫ шарттар ҡуйып, барыһын да бер-бер артлы үлтереп тора икән.

Иртәгеһен батша үҙе килә лә:

— Кисә килгән егет ҡайҙа? — тип һорай. Етемйәр:

— Мин,— тигәс.

— Ҡыҙымдың шарты буйынса, мин өс көн буйы йәшенеп ятам, һин мине эҙләрһең. Әгәр тапмаһаң, башыңды ҡырҡам. Тапһаң, өс көн һин йәшенәһең, мин эҙләйем. Мин һине тапһам, үлтерәм. Тапмаһам, ҡыҙымда уҡырһың,— ти.

Батша ҡайтып китә. Бер сәғәт үтеүгә, Етемйәр батшаны эҙләргә сыға. Урамда уға әлеге ярты кәүҙә тап була. Ул Етемйәрҙең ҡайҙа барыуын һораша, егет һөйләп бирә.

— Ай, егет, был шартты үтәү анһат түгел. Һин көнө буйы эҙләп йөрөгән бул да, батша йортоноң ишек башындағы ҡаҙауҙа бер сәллә элеүле торор, шуны утҡа ырғыт. Ут батшаһы шул булыр,— ти ярты кәүҙә.

Етемйәр ярты кәүҙә ҡушҡанды эшләй. Сәлләне янып торған мейескә ырғыта. Сәллә мейестән кире килеп сыға ла ут батшаһына әйләнә. Батша:

— Иртәгә тағы эҙләргә килерһең,— тип, Етемйәрҙе ҡайтарып ебәрә.

Иртәгеһен Етемйәр йәнә батшаны эҙләргә сыға. Уға тағы ла ярты кәүҙә тап була. Ул:

— Етенсе һарай эсендә ҡара үгеҙ торор. Батша шул булыр,— ти.

Етемйәр көнө буйы батшаны эҙләгән була. Кискә табан арҡан, бысаҡ алып, шул һарайға китә. «Бында ни эшләп батша ҡарт үгеҙ ҡуйҙы икән? Мин быны ғилем алыусыларға һуйып ашатайым әле»,— тип, һөйләнә-һөйләнә, егет үгеҙҙе алып сыға. Аяҡтарын бәйләп, һуйырға бысаҡ ала. Шул саҡ үгеҙ ут батшаһына әүерелә лә:

— Ярар, егет, иртәгә килерһең,— тип, батша уны ҡайтарып ебәрә.

Иртәгеһен Етемйәр йәнә батшаны эҙләп йөрөй. Баяғы ярты кәүҙә уға:

— Батша бүлмәһендә бер бәке ятыр. Шул бәке батша үҙе булыр,— ти.

Етемйәр, батшаны эҙләп йөрөгән кеше булып, уның бүлмәһенә барып инә, шунда ятҡан бәкене ала ла:

— Батша һынлы батша була тороп, ни эшләп был насар ғына бәкене тота икән? — тип, бәкене утҡа ташлай. Бәке мейестән сыға ла батшаға әйләнә.

— Ярар инде, егет, һин мине таптың. Хәҙер һин йәшен. Иртәгә эҙләрмен. Тапһам, башыңды киҫәм,— ти.

Иртәгеһен Етемйәр йәшенергә тип урамға сығыуы була, ярты кәүҙә килеп етә лә:

— Бар, бар, һине батша ҡыҙы йәшерер,— ти.

Егет барып ингәс тә, ҡыҙ гөлдөң бер ботағын һындырып ала ла егетте шуның урынына ҡуя. Батша, күпме генә эҙләһә лә, егетте таба алмай. Иртәгеһен Етемйәр тағы йәшенә. Ҡыҙ уны атаһы таянып йөрөгән таяҡ эсенә ҡуя. Батша эҙләмәгән ерҙе ҡалдырмай. Таяғына таянып, эҙләй-эҙләй тамам хәлдән тая. Аптыраған-йөҙәгән батша:

— Егет, таба алманым. Ярай, йәшенгән ереңдән сыҡ инде,— тип ҡысҡыра. Етемйәр, мин бында, тип батша ҡулындағы таяҡтың эсенән килеп сыға.

Өсөнсө көн йәшенергә китеп барғанда, Етемйәргә ярты кәүҙә йәнә тап була. Ул:

— Батша һине иртәгә лә таба алмаҫ. Шунан ул һиңә ҡыҙын бирер. Инселәп никах уҡытайыҡ, бер аҙна туй үткәрәйек тиеүенә ышанма. Һәләк булырһың,— ти.

Етемйәр барып инеү менән, батша ҡыҙы уны һөрмәгә әйләндерә лә һөрмәне ҡашына һөртә. Батша тырышып-тырышып эҙләй — таба алмай. Шунан:

— Егет, сыҡ инде, һин еңдең,— ти.

Егет батша ҡыҙының ҡашы араһынан килеп сыға. Батша:

— Ярар, ҡыҙымды һиңә бирәм. Инселәп никах уҡытайыҡ. Берәй аҙна туй үткәрербеҙ,— ти. Етемйәр:

— Юҡ, мин ҡыҙ алырға килмәнем. Мин уҡырға килгәйнем. Бер көн дә тормайым, ҡайтам,— ти, ә ҡыҙ унан ҡалмай. Батша уларҙы оҙатып тороп ҡала. Ҡаланы сыҡҡас, уларға баяғы ярты кәүҙәле кеше килеп ҡушыла. Өсәүләп китәләр. Юлда Етемйәр ағаһы менән еңгәһен кисә кис үгәй әсә ағыулап үлтереү хәбәрен ишетә.

Етемйәр ҡатыны менән тыуған йортона ҡайтып етер алдынан теге ярты кәүҙә осрап:

— Ҡайтҡас, мин ашарға ҡушмайынса, ашамағыҙ,— ти.

Ҡайталар. Күрешәләр. Үгәй әсәһе аш-һыу әҙерләгән. Күҙгә күренмәҫ ярты кәүҙә тәүҙә Етемйәр алдындағы ҡалаҡ менән, шунан уның ҡатыны алдындағы ҡалаҡ менән ашты барлап ҡарай. Ағыулы булмағас, ашарға рөхсәт итә. Ашты ашап бөткәс, үгәй әсә:

— Мунса яҡҡайным, мунса төшөгөҙ,— ти.

Ярты кәүҙә мунсаға тәүҙә үҙе барып килә. Килә лә мунсаның ағыуланған икәнен, үҙе лә көскә-көскә генә ҡотолоп ҡалғанын әйтә. Шунан Етемйәр үгәй әсәһенә:

— Мунсаның ағыуланған икәнен беҙ алдан уҡ белеп торабыҙ. Шуға бармайбыҙ. Үҙең барып кер,— ти.

Ярты кәүҙәнең өс таяғы була: алтын, көмөш, баҡыр. Ул алтын таяғын үлеп ятҡан Ғәйнизар менән ҡатынына тейҙергәйне, тегеләр әйләнә биреп ҡуйҙы, ти; көмөш таяҡ менән төртһә, көлә биреп яталар; баҡыр таяҡ менән төртһә, һикереп үк торҙолар, ти. Ағалы-энеле Ғәйнизар менән Етемйәр, ике килен, Зөлҡәрнәй хан үҙе илаша-илаша ҡыуандылар, ти. Шунан Зөлҡәрнәй хан, асыуынан ярһынып:

— Һин яуыздың яуызы, беҙҙең бөтәбеҙҙе лә шулай ағыулап үлтереп бөтөрөргә булғанһың икән! — тип, ҡатынын үҙе ағыулаған мунсаға илтеп томаланы, ти.

Оҙаҡламай Зөлҡәрнәй хан үҙе лә донъя ҡуйған. Хәҙер кемде хан итеү тураһында бәхәс китә. Хандың сәмреғошо бар икән. Халыҡты йыялар ҙа сәмреғошто осоралар. Сәмреғош кемгә килеп ҡуна, шул хан булырға тейеш.

Сәмреғош Етемйәргә ҡуна.

## БОҒАР ХАН УЛДАРЫ

Борон заманда Боғар тигән хан булған. Уның бер улы тыуған. Улына Йыһангиз тип исем ҡушҡандар. Шунан был, ир еткәс, атаһы менән әсәһенә: «Мин һөнәр эҙләйем»,— тине лә атҡа менеп сыҡты ла китте, ти.

Китте был, ай китте, йыл китте, бер йыл буйына китте, барып етте бер диңгеҙ буйына. Диңгеҙ буйын ҡыҙырып китеп ултырһа, күрә: ята ҡотһоҙ бер әбей, маңлайының уртаһында бер күҙе генә бар. Эргәһендә бер сатыр ҡороулы — алтын сатыр. Алтын сатырҙа бер ҡыҙ ултыра: бер бите ай, бер бите көн кеүек. Керҙе лә әйтте:

— Һин ни эшләп ултыраһың бында хур булып? Мин һине алайым,— тине.

Ҡыҙ әйтә:

— Бынау ятҡан әбей — минең инәйем, тау ендәренең батшаһы ул,— ти.— Инәйем бирһә, мин һиңә барырмын,— ти.

— Инәйең тиҙ уянырмы?

— Алты көн, алты төн йоҡлай торған,— ти ҡыҙ.

— Мин дә алты көн, алты төн йоҡлай торғанмын. Әбей торһа, көтһөн,— тине лә йоҡларға ятты, ти, егет.

Әбей унан элек ырғып килеп торҙо, ти, йоҡоһо бөтөп. Торҙо ла:

— Был ниндәй кеше? Быны ашайым бит мин хәҙер,— тип әйтә, ти.

— Юҡ, инәй, ул хан балаһы. Мине һорай ул,— ти ҡыҙы.

Бына бер ваҡытта йоҡоһо бөтөп, Йыһангиз дә торҙо, килде, ти, бының янына ҡылысын тартып биленән.

— Ҡыҙыңды бир! Бирмәһәң, ҡаныңды ағыҙам хәҙер,— тине.

Әбей әйтә:

— Ярар,— ти.— Мәһәренә күнһәң, бирермен,— ти.

— Мәһәре ни?

— Минең рәғиәтемде* ҡырып бөт тә ал,— ти ҡарсыҡ. Батша булғас, быының халҡы, ғәскәре булған инде.

— Ярай, ризамын,— ти егет.

Ҡарсыҡ әйтә:

— Иртән ҡояш ҡалҡып килгәндә, ошонда көт,— ти.

Шул ваҡытта эргәләрендә бер сонтор буҙ бейә хасил булды. Әбей шул сонтор буҙ бейәгә ҡыҙҙы ла ултыртып алып ҡайтып китте, ти.

Иртәгеһен иртүк егет көтөп тора. Ендәр килгәндә, ер уйылып, ҡалтырап торғандай була: шул тиклем күп, ти, теге әбейҙең ғәскәре. Йыһангиз ҡылысы менән барыһын да ҡырҙы ла бөттө, әбей яңғыҙ ҡалды. Әбей:

— Иртән тағы көтөп тор, килермен,— тине лә теге сонтор бейәһенә атланып ҡайтып китте, ти.

Батша ҡарсыҡ һәр көн шулай тау ендәрен өйөрө менән килтереп тора,— Йыһангиз ҡырып бөтөрөп тора.

Был ваҡытта егеттең инәһе, балаһын һағынып, алланан һорай икән:

— Тағы ла бер ул бир һин миңә. Һис бер ергә ебәрмәҫ инем,— тип әйтеп.

Аллаһы тәғәлә быларға бер ул бирҙе, ти, һорағанын ҡабул итеп. Быныһы көн һайын бер йылға үҫеп, алты көндә алты йәшкә етте, уҡ-ян алып, малайҙар менән

* Рәғиәт — бер батшаға буйһонған халыҡ.

уйнарға сығып та китте, ти. Йәйәһен киреп атып ебәргәйне, уғы күккә ашып күҙҙән юғалды, ти. Йөрөй торғас, бер малайҙың башына сирткәйне, мейеһен уя сиртте лә ҡуйҙы. Башы уйылған баланың әсәһе йүгереп килеп:

— Уй, һин яуыз! Ағайың һинең һөнәр эҙләй киткәйне, бында йөрөгәнсе, һин дә китеп олаҡһаңсы! — тип әйтте, ти.

Малай өйгә ҡайтып инде лә инәһенән һораны:

— Минең ағайым бармы? — тип. Инәһе әйтмәгәс,— Инәй, миңә борсаҡ ҡурып бир әле,— тип һораны, ти.

Борсаҡ ҡыҙғас, әсәһе һауытҡа һалып биргәйне:

— Юҡ, услап алып бир! — тип әйтте, ти.

Әсәһе услап алып биргәйне, ҡулын ҡуша тотто ла торҙо, һис кенә лә ысҡындырмай, ти.

— Әйт, инәй, минең ағайым бар инеме? — тип һорай ҙа һорай, ти.

Ҡулы бешкәс, сыҙар хәле ҡалмағас, әйткән инде әсәһе:

— Бар ине, балам, бар ине! Һөнәр эҙләй сығып китте ул,— тип.

Шунан ни был:

— Хуш бул, инәй, мин ағайымды эҙләйем,— тигән дә йүгереп сыҡҡан да киткән.

Шәп итеп йүгереп китеп ултыра, китеп ултыра, хатта үлән йығылып ҡала, ти, бының еленә. Шулай китеп бара ине, күл буйында бер аҡ һаҡаллы бабайҙың намаҙ уҡып ултырғанын күрә. Бабайға сәләм бирә, һаулыҡ һораша.

— Ҡайҙа бараһың, балам? — тип һораша бабай. Был әйтә:

— Мин ағамды эҙләй барам,— ти. Бабай әйтә:

— Ағаң бер йыллыҡ ерҙә, былай ғына барып етә алмаҫһың, ҡайт һин,— ти.— Ҡайтып ҡапҡаңа ингәс, уң яғыңа ҡара, унда бер алтын бағана булыр,— ти.— Көсөң етеп һурып алалһаң, уның төбөндә, һикһән сажин тәрәндә, бер Аҡкола тигән ат булыр,— ти.— Шул атты сығарып алырһың һин,— ти.— Шул аттан башҡа ат һине күтәреп йөрөй алмаҫ,— ти. Йыһангиз ҙур ине, быныһы унан да ҙурыраҡ булған инде.

Был егет кире ҡайтып, ҡапҡаға инде, уң яҡта алтын бағананы күрҙе. Тибеп ебәргәйне, алтын бағана ҡырҡ тау аша ырғып китте. Аҡколаны нуҡтаһынан тартҡайны, ырғып килеп сыҡты. Шул ерҙә Аҡколаға ҡулын һалғайны — ҡулын күтәрмәй, аяғын һалғайны,— аяғын күтәрмәй: аттың көсө етмәй, биле һығылып тик тора икән. Шунан был ялбара:

— Миңә ниңә был тиклем кәүҙә бирҙең? Мине ат та күтәрмәй бит! — ти. Аҡкола әйтә:

— Һин инә ҡарынында ярала башлағандан бирле, һинән ҡасырып, ошо ергә мине хибескә һалдылар. Мине өс көнгә ебәр. Мин диңгеҙ ҡултығынан үҙемдең ашай торған утымды ашап киләйем,— ти.

Ебәрҙе. Өс көндән һуң килде Аҡкола. Хатта бының ауыҙ-морононан, ҡойроҡ төптәренән һөрөмө сығып килә, шул тиклем ҡеүәт алған. Бының өҫтөндә яу ҡоралдары көллөһө беркетелгән.

Егет атҡа менде, Аҡкола айлыҡ ерҙе алты атланы, йыллыҡ ерҙе ете атланы, бер диңгеҙҙең эргәһенә барып етте. Күрҙе: бер сатыр ҡороулы тора, бер кеше ята, бер кесерәк тау хәтле бар,— ҙур бик, йоҡлап ята. Әйтте был егет: «Ат менән ат татыу булһа, эйәһе лә татыу була»,— тип. Төшөп атын ебәрҙе лә йоҡларға ятты. Теге батырҙың йоҡоһо бөтөп, ырғып торҙо. Ырғып тороп килеп, бының өҫтөнә менеп ултырҙы ла: «Был тауҙың дейеү пәрейе икән, үлтерәйем үҙен» — тип, ҡылысын күтәргәйне, туҡтап ҡалды: «Уң яҡ битенә ҡараһам, атама оҡшатам, һул яҡ битенә ҡараһам, инәмә оҡшатам»,— тип, муйынына ҡылысын терәне лә, иланы ла ултырҙы. Ултыра ине һаман илап, бер бөртөк йәше тегенең битенә тамды. Йоҡлап ятҡан еренән ҡапыл биләнләп, өҫтөндәге егетте ырғытып ебәргәйне, Йыһангиз ҡырҡ тау аша барып төштө. Йүгереп килеп еткәйне, ҡылысын һурып алып, ҡаршыһына баҫты.

— Һин дейеүме, әҙәм затынанмы? — тип һораны.

— Мин — Боғар хандың балаһымын. Һөнәр эҙләй киткәйнем дә, ошо ерҙә тау батшаһы ҡарсыҡҡа тап булып, уның ҡыҙын алмаҡ өсөн, мәһәренә ендәрен ҡырып бөтөрмәксе инем. Ә ул көн һайын өйөр-өйөр ен ғәскәрен ебәреп тора, мин ҡырып торам. Бына алтынсы көн инде, уның бер ене лә күренмәй,— ти.

— Мин дә Боғар батшаның улы бит! — ти, аҙаҡ килгән егет.

— Һин алдайһың,— ти Йыһангиз.— Минең ҡустым юҡ ине,— ти.

— Минең тыуғаныма ун өс көн генә әле. Ун көн өйҙә торҙом. Өс көн бында һинең йоҡоңдан уянғаныңды көтөп ултырҙым.

Ағаһы шул икән. Таныштылар былар, илаштылар ҡосаҡлашып, Йыһангиз әйтә:

— Иртән тағын ендәр килер инде, өйөр-өйөр булып,— ти.

Ҡустыһы әйтә:

— Ағай, һин арығанһың, иртән мин һуғышайым,— ти.

— Ярар,— ти тегеһе.

Иртәгеһенә йәнә ен ғәскәре килә, ер уйылып килә баягыса. Йыһангиздең ҡустыһы тау батшаһы ҡарсыҡтың рәғиәтен ҡырып бөттө лә әбейҙе ҡыуалап китте. Әбей ер тишегенә инеп барған ваҡытта, ҡарсыҡтың сонтор буҙ-сыбар ҡойроғоноң төбөнән ҡырҡа сабып алып ҡалды. Егет Аҡҡолаға әйтә: «Һин мине ошонда, соҡор ауыҙында, өс ай, өс көн көткәс, тағы өс сәғәт көт,— ти.— Мин һаман килеп сыҡмаһам, ағайыма хәбәр бир. Шул соҡорҙоң эсендә һәләк булды, тип». Шунан һуң соҡорға төшөп китте, ти.

Соҡорға төшөп еткәс, бер яҡҡа сығып китеп, байтаҡ ҡына барғайны, күрә: алты дейеү тимер һуғып тора. Бер һуҡһа, бер ен яратыла, ике һуҡһа,— йәнләнә, өс һуҡһа,— ен һалдаты атҡа атлана ла һуғышҡа сабып сығып та китә. Сихыр менән шулай итеп команда яһай икән теге әбей. Егет әйтә:

— Һуға белмәйһегеҙ. Мин бер һуҡҡанда яһайым уны, бына ҡарап тороғоҙ мине,— тип, теге тимерсе ендәрҙе бергә теҙеп баҫтыра ла, ҡылысын алып, алтыһының башын бер һелтәүҙә өҙә лә төшөрә.

Артабан китте егет. Китеп ултыра ине, теге һылыу ҡыҙға тап булды. Ҡыҙ энәне бер сәнсһә, алпамыша һымаҡ дәү ен яратыла, ике сәнсһә — йәнләнә, өс сәнсһә — тора һалып, стройға баҫа. Егет күрә лә быны, ҡыҙға әйтә:

— Ахмаҡ! — ти.— Сихыр менән ни аҙапланып ултыраһың һин? — ти.

— Мәһәргә тип, инәйемдең рәғиәтен ҡырып бөттөң бит үҙең,— ти ҡыҙ.

Был егет ағаһына бик оҡшағас, уны Йыһангиз тип белә инде тау батшаһының ҡыҙы.

— Әпсәң ҡайҙа ята һуң ул? — тип һорай егет.

— Әпсәм әле генә егерме-утыҙ кешене ашап, хәҙер сисенеп, алтын һарайҙа хәл йыйып ята,— ти ҡыҙ.— Барып инерһең инде, ингәс, башы осондағы һыуҙы ишек төбөнә ултырт. Ул көс индерә торған һыу. Һиңә берәү генә күренһә лә, уның башы етәү. Йәне үҙендә түгел. Бер башын ҡырҡ та, йәнен һора. Алдар ул: башын ҡырҡҡас, аҡ һандыҡтан бер йомортҡа алып бирер,— йәне ул түгел, йәне йәшел һандыҡтағы йомортҡала булыр. Ә йәшел һандыҡтың ҡайҙа икәнен мин белмәйем,— ти.

Егет барып инде алтын һарайға. Барып инһә,— шыр яланғас ҡарсыҡ ята. Килде лә: «Һей, ҡафыр, ни эшләп ятаһың шулай, әҙәпһеҙ!» — тип типте, ти, тегеңә.

Әбей ырғып торҙо ла, йәбеште, ти, быға. Әбейҙе егет күтәрә лә һуға шул ерҙә. Күтәреп тә һуға, бер башын ҡырҡып та ташлай.

— Йәнең ҡайҙа? — тип һорай.

— Минең йәнем ана өҙөлгән башымда,— ти.

Башы тулап, һикрәңләп иҙәндә йөрөй. Бер юлы дүрт башын ҡырҡып ташлай егет ҡарсыҡтың.

— Эй, егет, үлтермә инде. Мин һиңә ҡыҙымды ла бирәйем, үҙем дә бергә китәйем. Минең йәнем аҡ сепрәккә уралған, аҡ һандыҡта ята,— ти.

Егет аҡ һандыҡтағы йомортҡаны алып һытты — ен ҡарсыҡ үлмәне, ти. Йәнә бер башты ҡырҡып төшөрҙө, берәү генә ҡалды. Ә теге баштар һаман тулап-тыпырсынып йөрөйҙәр: «Ендәрҙе йыйып алып киләбеҙ!» — тип ҡысҡыралар, ти. Яңғыҙ ҡалған башын ҡосаҡлап, әбей:

— Берүк һуңғы башымды өҙмә,— ти.— Йәнемде ал да кесәңә һалып алып ҡайт, ҡыҙымды ла ал,— ти.

Егет быны ялбарыуына ҡарамай, аҙаҡҡы башын да сабып өҙә. Ә баштар — иҙәндә һаман тыпыр-тыпыр. Егет йәшел һандыҡты эҙләй — таба алмай, һис бер ерҙә йәшел һандыҡ күренмәй. Егет килә лә ҡарсыҡтың күкрәгенә баҫып:

— Ҡайҙа һандыҡ? Үҙең алып бир! — ти.— Үҙе һаман тубығы менән баҫып тора әле тегеңә. Әбей ятҡан ерҙән стенаға ҡулын тығып, йәшел һандыҡты һөйрәп килтереп сығара. Шунан егет һандыҡты асып йомортҡаны ала ла әбейҙең баш осона ҡуйып һыта. Шул ерҙә әбей үлә. Ҡыҙ әйтә:

— Баштарын йыйып, утҡа үртә,— ти.

Үртәп көл иткәс, ҡыҙ әйтә:

— Быны елгә осорһаң, бер сихырға олғашып, тағы килер беҙгә. Һыуға иҙеп, ағыҙып ебәр,— ти.

Егет шулай эшләй. Шунан икәүләп ҡайтырға сығалар. Өс ай үтеп, өс көн көтөп, өс сәғәт бөтөп, Аҡкола ҡайтып ултыра икән. Һөрәнләгәйне, ҡабат килде. Ҡыҙҙы ағайыма алып барып бирермен тип һаҡлай. Икәүләп Аҡколаны менеп ҡайталар. Килеп етеп килгәндә, егет ҡыҙға әйтә:

— Туҡта әле, минең бер энем бар, йорт ҡалай тора икән, ҡайтып йүнәтеп киләйем,— ти.

Ағаһына килде. Илаштылар. Ағаһы:

— Һау килдеңме? Һәләк булғандыр, тип эҙләргә

сығайым тип тора инем. Рәғиәтен ҡырып та бөткәйнем,— ти. Энеһе әйтә:

— Һин ҡырып бөтмәнең, мин ҡырып бөттөм,— ти.— Кәләшең анау ерҙә ҡалды, барып алып кил,— ти.

Ағаһы барып алып килгәс, ҡыҙ, быларҙың оҡшашлығын күреп, хайран ҡалды, ти. Шунан былар өсәүләп, Йыһангиз менән бисәһе Аҡбуҙатҡа атланып, ҡустыһы үҙенең Аҡҡолаһын менеп ҡайтып киттеләр, ти.

## ОСҠОС ИШӘК

Борон бер бабай менән әбей йәшәгән. Уларҙың ике улы булған. Бабай менән әбей үлгәс, улдары эш эҙләп ҡалаға киткәндәр. Килеп еткәс, бер ҡарсыҡҡа ингәндәр. Ҡарсыҡ:

— Йә, балаҡайҙар, ҡайҙа китеп бараһығыҙ? — тип һораша быларҙан.

— Эш эҙләп килгәйнек,— тиҙәр.

— Миндә генә тороғоҙ,— ти ҡарсыҡ.

Шулайтып былар ошо ҡарсыҡта тороп ҡалалар. Ә әбейҙең бер ишәктән башҡа һис ниндәй дәүләте юҡ икән. Шул ишәкте ҡарарға тейештәр ағай-энеле икәүләп. Ҡарсыҡ әйтә:

— Балаҡайҙар, ишәкте эсерергә алып барғанда ишәккә һуға күрмәгеҙ,— ти.

Бер көн шулай ишәкте менеп, йылғаға китеп ултыралар ине, «әбей ниңә һуҡмаҫҡа ҡушты икән был ишәккә?» — тип уйлайҙар. Шунан тота ла береһе ишәккә һуға бит. Һуҡҡайны, ишәк шундуҡ егеттәрҙе һауаға күтәреп осто ла китте. Эй осто ишәк, эй осто — былар ишәк өҫтөндә бит инде — байтаҡ ҡына шулай осоп йөрөгәс, икенсе бер ҡалаға килеп төштөләр. Килеп төшһәләр — ни ғәләмәт был: ҡаланың бер яғында сыр-сыу илашалар, икенсе яғында зыу әкәмәт килеп уйнайҙар, көлөшөп күңел асалар. Егеттәрҙең береһе ҡабат ишәккә һуҡҡайны, мәхлүк быларҙы йәнә осороп алды ла китте. Хәҙер ҡайтыу яғына осто ла әбейҙең ихатаһына килеп төштө. Егеттәр ҡарсыҡтан һорайҙар:

— Ни эшләп анауҙағы ҡаланың бер яғында күңел асалар, икенсе яғында илашалар ул?

Ҡарсыҡ әйтә:

— Ҡуй, балаҡайҙар, һорашмағыҙ инде һеҙ уны! — ти.— Ул ҡалала аждаһа бар бит, һәр көн сиратлап

бер ҡыҙҙы ашап тора. Ҡаланың теге яртыһында аждаһа ҡыҙҙарҙы ашап бөткән инде, шуға халыҡ үҙ сираттары үткәнгә шатлана, күңел аса. Иртәгә сират батша ҡыҙын ашауға, ә унан берәмләп был яҡтағы ҡыҙҙарға күсә. Шуға ҡайғырып, был яҡ халҡы илай.

Икенсе көндө таң менән егеттәр тағы ла ишәкте һыу эсерергә алып киттеләр. Бер аҙ килгәс һуҡкайнылар, ишәк тағы ла быларҙы осороп алып китә лә, баяғы ҡалаға килтереп төшөрә. Былар килеп төшкән саҡта ғына, батша ҡыҙын, арбаға ултыртып, аждаһаға алып китеп баралар икән. Егеттәрҙең кесеһе әйтә:

— Мин барайым әле, аждаһаны күрәйем,— ти.

Китте был арба артынан шым ғына, ағаһы ишәк янында ҡалды. Батшаның хеҙмәтселәре яр буйына ҡыҙҙы ҡалдырҙылар ҙа, үҙҙәре ҡайтып китте. Шым ғына егет килеп еткәйне, батша ҡыҙы:

— Ой, егет, бында торма, бар тиҙерәк ҡайтып кит! Ана аждаһа килә, икебеҙҙе лә ашар юғиһә!

— Юҡ, аждаһаны үлтермәйсә ҡайтмайым,— ти егет.

Ҡарап тора был хәҙер аждаһаның яҡынайғанын. Тыны менән тартып ала башланы быны хәҙер аждаһа. Егет тайшанманы, үҙе аждаһаға ҡаршы китте. Яуыздың яҡынайыуы булды, батыр шунда уға ташланды ла башын сабып өҙҙө. Ҙур бер таш аҫтына ҡыҫтырып ҡуйҙы ла тегенең башын, ҡыҙ янына килде.

— Бар, ҡайтып кит инде, мин аждаһаны үлтерҙем,— тине.

— Бер үҙем ҡайтмайым, әйҙә, бергә ҡайтайыҡ,— ти ҡыҙ, батырҙы батша һарайына саҡыра.

Шулай тигәс, бергә ҡайтып китәләр былар. Ҡалаға килеп еткәйнеләр, егет арбанан һикереп төшә лә ҡала. Ҡыҙ әйләнеп ҡараһа,— егет юҡ, ни арала ғәйеп булған.

Иртәгеһен батша аждаһаны үлтергән батырҙы эҙләтеп ҡарай, ҡыҙын уға бирер өсөн,— юҡ, таба алмайҙар. Ә ат егеп ҡыҙҙы алып ҡайтҡан хеҙмәтселәр, күҙҙәрен дә йоммайҙар, беҙ үлтерҙек, тиҙәр, оятһыҙҙар. Батша әйтә:

— Алайһа,— ти,— барығыҙ аждаһаның башын бында алып килегеҙ! — ти.

Тегеләр барып, аждаһаның башын алмаҡ булып, ташты күтәрергә итеп ҡарағайнылар,— ҡайҙа ул күтәреү, ҡыбырлата ла алмайҙар, йүнһеҙҙәр!

Батша нисек булһа ла батырҙы табырға фарман бирә. Һанаттар бөтә ҡаланы өйбөрөнсә йөрөп сығалар. Ҡала ситендәге әлеге яңғыҙ әбей өйөнә ингәйнеләр,—

ике егет ултыра! Алып китеп, батшаға алып килделәр быларҙы.

— Бына, батша хәҙрәттәре, таныш булмаған ике егет алып килдек! — тиҙәр.

Батша ҡарап тороп һорашырға ғына итә ине, ҡыҙы йүгереп килеп сыҡты ла:

— Бына, атай, аждаһаны үлтергән батыр! — тип ҡысҡырып, тегеләрҙең кесеһенең beләгенән килеп тә тотто.

— Әгәр әйткән һүҙең дөрөҫ булһа, барһын да аждаһаның башын бында алып килһен,— ти батша.

Батыр егет, бара һалып, аждаһаның башын күтәреп алып килә лә батша алдына ташлай:

— Бына ул яуыздың башы, күрегеҙ!

Батшаның ҡото оса:

— Әй-әй, кәрәкмәй! Тиҙерәк ситкә алып ырғыт! — ти.

Егет күтәреп алып, ҡаланың аръяғына ырғытырға иткәйне, аранан бер ҡарт ҡысҡырҙы:

— Ырғытма! Ҡабат яуыз йәне керер. Ут яғып, үртәргә кәрәк ҡәһәрҙе!

Теге һыу буйына ҡабат килеп, өс-дүрт йөк әрҙәнә яғып, аждаһаның башын, кәүҙәһен, ҡойроғон үртәйҙәр ҙә, көлөн ҡырға һибәләр.

Ҡайтҡас, ҡыҙын ошо батырға бирәм тип, ҙур туй иғлан итә. Егет килә лә батшаға әйтә:

— Ҡыҙыңды минең ағайыма бир,— ти.

Батша риза була. Ҡыҙын батырҙың ағаһына биреп, шаулатып туй үткәрә.

Бер төндө батыр егет йоҡлап ятҡан бүлмәгә ялбыр сәсле бер ҡыҙ килеп инә лә, егет өҫтөнән юрғанын тартып алып:

— Һин минең атайымды үлтерҙең, мин һинән барыбер үс алырмын,— ти.

Егет һикереп торған ыңғайға, теге сығып тая. Ә ул — аждаһаның ҡыҙы икән. Ни эшләргә хәҙер? Егет уйлап ултыра ла:

— Туҡта, тотоп алып киләйем әле мин уны,— тип, артынан ҡыуа сыға тегенең.

Эй йүгерә, эй йүгерә, йүгереп бара торғас, ҡартайып бөткән бер әбейгә тап була.

— Мин ен-пәрейҙәр ырыуы аждаһаның ҡыҙын ҡыуып китеп бара инем, ҡайҙа табырмын икән шуны? — тип һорай. Әбей әйтә:

— Мин әле генә бөтә ерҙе өс урап ҡайттым, күрҙем мин ул ҡыҙҙы. Шулай ҡыйыулығың етеп, уны ҡыуыр-

ға булған икәнһең, өйрәтәм мин һиңә уға барыр юлды,— ти әбей.

— Өйрәт, инәй, өйрәт.

— Бынан киткәс, һин бер диңгеҙ буйына барып сығырһың,— ти әбей.— Яр башында имәнес ҙур бер нәмә күрерһең. Шуны тотоп өҫтөнә атланһаң, ул һине диңгеҙҙең теге яғына алып сығыр. Ә аръяҡта бейек тау булыр. Шул тауға барып еткәс, һиңә бер ҡош осоп килер. Һин уның аяҡтарынан эләктереп алырға тырыш. Тотоп ала алһаң, һине ул тау башына осороп алып мендерер. Ана шунда, шул бейек тау башында, үҙенең алтын һарайында йәшәй ул — һин эҙләгән ҡыҙ. Алтын һарайға барып инә алһаң, ул йоҡлап ятҡан саҡ булыр. Үҙенең ялбырлап һуҙылған оҙон сәстәре менән ҡул-аяғын тиҙ генә сырма ла, ишек яңағында элеүле торған ҡамсыһын алып, тотон ярырға. «Етер, егет, мин һинеке!» — тип әйткәнсе, яр ҙа яр.

Егет әбей әйткәнсә эшләй: диңгеҙ ярына барып еткәс, теге ғәләмәт ҙур йән эйәһен тотоп менә, ул быны диңгеҙ аръяғына алып сыға; тау башына әбей әйткән ҡош тәпәйҙәренә тотоноп күтәрелә. Алтын һарайға барып ингәс, ҡыҙҙың аяҡ-ҡулын тегенең сәстәре менән сырмап ҡуя ла, ишек яңағынан ҡамсыһын алып тотона ярырға. Ҡыҙ тегеләй ҙә ырғый, былай ҙа ырғый, аяҡ-ҡулдар бәйле, ысҡына алмай. Ә егет туҡтамай. Ҡыҙ: «Етер, егет, мин һинеке! Мин һиңә зыян итмәм!» — тип әйткәс кенә, туҡтай.

Былар алтын һарайҙа бергә йәшәй башлай. Бер ваҡыт яланда йөрөгәндә бер ҡарсыҡ тап була.

— Әгәр йортоң булһа, мине үҙең менән алып ҡайт әле, балаҡай! — ти был ҡарсыҡ.— Юҡһа,— ти,— бынау ҡола яланда асҡа үләм бит инде,— ти.

Егет, быны ҡыҙғанып, һарайға алып ҡайта. Бисәһе әйтә быға:

— Их, юҡҡа алып ҡайтҡанһың был яуыз ҡарсыҡты,— ти.— Беҙҙең икебеҙҙең дә башты ашар был,— ти. Пәрей ҡыҙы бит, белә инде тегенең эсендәгеһен-тышындағыһын.

Ә ире уны-быны уйламай:

— Бергә йәшәгеҙ. Мин һунарға киткәндә, яңғыҙыңа күңелһеҙ бит. Һиңә, ҡартайып, теше төшөп бөткән ул ҡарсыҡтан әллә ни зыян булмаҫ,— ти.

Йәшәп яталар былар бергә. Бер көндө, ире йәнә һунарға киткәс, был ҡарсыҡ пәрей ҡыҙының эргәһенә килеп ултырҙы ла һорай бынан:

— Ҡыҙым, иреңдең йәнен беләһеңме һуң? — ти.

— Юҡсы, белмәйем.

— Эй, ул һине яратмай икән, яратһа, әйтер ине,— ти ҡәһәр һуҡҡан ҡарсыҡ, быныӊ эсенә шом һалып.

Ире һунарҙан ҡайтҡас, ашап-эсеп, йоҡларға ятҡас, һорай был хәҙер иренән:

— Һинеӊ йәнеӊ ҡайҙа ул? — ти.

— Минеӊ йәнем һиӊә ниӊә кәрәк булды әле?

— Атаҡ, ҡатыныӊ булғас, белге килә бит,— ти тегеһе.

— Минеӊ йәнем — итегемдеӊ башында,— ти ире.

Быны теге мут ҡарсыҡ ишетеп ята бит инде. Ишетә лә, тегеләр торғансы, егеттеӊ итеген һыуға илтеп ташлай. Ә егет үлмәне. Иртән торғас, тағы ла һунарға сығып китте. Ҡарсыҡ тегенеӊ бисәһенә йәнә шом өҫтәй:

— Дөрөҫөн әйтмәгән бит ireӊ. Ул һине, ысынлап та, һөймәй икән шул,— ти.

Ире ҡайтып, йоҡларға ятҡас, был йәнә һорай. Бик аптыраһа ла, был юлы егет дөрөҫөн әйтә:

— Улай бик беләһеӊ килгәс, әйтһәм әйтәйем һуӊ: минеӊ йәнем — минеӊ ҡылысымда,— ти.

Былар ныҡлап йоҡлап киткәс, ҡарсыҡ ҡылысты ала ла диӊгеҙгә илтеп ташлай.

Иртәнсәк ҡатын сәй әҙерләп ултырта, ҡарсыҡ ярҙам итеп йөрөгән була, ә ир һаман тормай ҙа тормай. Килеп ҡараһалар — үлгән!

Ҡарсыҡ һиҙҙермәй, бергә ҡайғырған була. Ҡатынды йыуатып:

— Ҡуй, өйҙә ултырмайыҡ. Әйҙә, бер аҙ йөрөп, ҡайғыбыҙҙы таратып, диӊгеҙ буйынан әйләнеп ҡайтайыҡ,— ти.

Шулай тип, алып та китә. Диӊгеҙгә барып еткәс, алдаштырып-йолдаштырып, бер кәмәгә ултырта ла һаман эскәрәк, һаман эскәрәк алып китә ҡатынды. Диӊгеҙҙеӊ теге яғына алып сыға ла, бер ҡалаға алып килеп, шул ҡаланыӊ батшаһына бирә. Пәрей ҡыҙы булғас, сибәр бит инде был ҡатын.

Хәҙер егеттеӊ ағаһына килһәк, ул ҡустыһыныӊ юғалғанын белгәс, уны эҙләп сығып китә. Ул да теге әбейгә осрап, унан һорашып, ҡыҙҙыӊ алтын һарайына килә. Килһә,— ҡустыһы үлеп ята. Янында ҡылысы юҡ. Һарай эсен генә түгел, бөтә тирә-яҡты эҙләп сыға,— юҡ ҡылыс. Шунан ярҙан һыуға һикереп төшә лә, балыҡҡа әйләнеп, диӊгеҙ төбөнән эҙләй. Ҡаранып йөрөй торғас, ярҙан әллә ни алыҫ түгел, ялтлап ятҡан нәмә күрә. Барып ҡараһа,— ҡустыһыныӊ ҡылысы. Алып сыға ла,

мәйеттең эргәһенә һалғайны, ҡустыһы күҙен аса, һикереп тороп та ултыра.

— Ҡайһылай оҙаҡ йоҡлағанмын,— ти кирелеп-һуҙылып.

— Йоҡлағанһың йоҡламай ни, үлгәйнең бит һин. Мин килмәһәм, һаман үлеп ятыр инең әле,— ти ағаһы.

Шунан былар күрешәләр, илашалар. Ағаһы һорай:

— Ниңә ҡылысыңды диңгеҙгә ташланың? — ти.

Ҡустыһы тора һалып һарай эсен ҡарап сыға,— ҡатыны ла юҡ, теге ҡәһәр ҡарсыҡ та. Эште аңлай был. Ағаһына һөйләп бирә.

Иртәгәһен ағаһы ҡайтып китә, был — ҡатынын эҙләп сығып китә. Кәмә табып, диңгеҙ аша йөҙөп сыға ла, теге ҡалаға килһә,— йылға буйында әлеге ҡарсыҡтың эсәк йыуып ултырғанын күрә. Килә, һорай:

— Нишләп бында ултыраһың, инәй? — ти.

— Һинең ҡатыныңды ошо ҡаланың батшаһына килтереп бирҙем дә бына хәҙер туйға эсәк йыуып ултырам,— ти ҡәһәрең, күҙен дә йоммай.

Батыр ҡылысын һурып ала ла, ҡарсыҡтың башын сабып өҙөп, диңгеҙгә ырғыта. Шунан батша һарайына барып инә.

— Кем һин? Ниңә килеп керҙең бында? — ти батша.

— Мин былай ғына, туй күрергә килдем,— ти егет.

Быны ҡатыны күреп ҡала ла, һүҙ ҡуйышып, төндә ҡасалар былар. Ҡабат диңгеҙ аша сығып, алтын һарайҙағы байлыҡтарын алып, ағаһы янына ҡайталар.

Шул саҡ ағаһы — батша, ҡустыһы вәзир булып бергә тора башлайҙар. Әле лә шунда татыу ғына донъя көтөп яталар, ти.

## ЕГЕТ МЕНӘН АЖДАҺА

Борон бер кеше йәшәгән. Уның ике ҡатыны булған. Бер саҡ эшкә китеп барғанда, быға бер ҡарт осраған.

— Йәш ҡатыныңдың буйында бар. Ул бушанғас, балаңды миңә ебәр,— тигән был ҡарт.

Ваҡыты еткәс, быҙың ҡатыны бәбәйләгән. Ул тапҡан. Был малай ай үҫәһен көн үҫеп, бик һиҙгер егет булып еткән. Атаһы һис ҡасан әйтмәгән булһа ла, был бер көндө атаһына:

— Атай, ни эшләп һин мине һаман ебәрмәйһең? Һин мине бер ҡартҡа ебәрергә тейеш инең бит,— тигән.

— Улай бик бараһың килгәс, бар һуң,— тигән атаһы.

Тоҡсайына бер ҙә бөтмәҫ аҙыҡ, аяғына һис тә туҙмаҫ ҡатаһын кейеп алған да, киткән был егет сығып, теге ҡартты юллап. Китеп бара, китеп бара, ай бара, йыл бара, бара торғас бер тауға барып етә. Тау башына менеп китә. Менеп етһә,— бер өй күрә. Барып инә был өйгә. Өйҙә бер ҡарсыҡ ултыра. Өс бөртөк кенә сәсе ҡалған, өс теше ыржайып тора. Инде егет, иҫәнлек-һаулыҡ һорашты. Баяғы әбей әйтә:

— Әгәр шул сәләмең булмаһа, уртаға өҙөп, ике ҡабып, бер йотор ҙа ҡуйыр инем үҙеңде,— ти.

— Йотһаң йотор инең шул! Ә хәҙергә ҡана ашарға бир, бик асыҡтым юғиһә.

Әбей бының тамағын туйҙырған. Ашап-эсеп алғас:

— Һин, инәй, шундай-шундай ҡартты белмәйһеңме? — тип һорай.

— Мин көн һайын был донъяны бер генә әйләнеп, сығам,— ти әбей.— Мин белмәйем, минең апайым бар, белһә ул белер. Шуға бар,— ти.

Бының апаһына сығып китә хәҙер. Бара, бара, бара торғас, барып етә был икенсе ҡарсыҡтың өйөнә. Өйгә инә. Әбей ултыра. Быныһының ике бөртөк сәсе менән ике теше генә ҡалған. Егет сәләм бирҙе. Әбей әйтә:

— Шул сәләмең булмаһа, ике ҡабып, бер йотор ҙа ҡуйыр инем үҙеңде,— ти.

— Ярар, йотһаң йотор инең шул. Ҡана, ашарға килтер әле башта,— ти егет.

Ашап-эсеп тамағын туйҙырғас, быныһынан һорай:

— Һин, инәй, шундай-шундай ҡартты белмәйһеңме?

— Мин көнөнә был донъяны ике генә ҡабат урайым,— ти әбей.— Минең иң оло апайым бар, унан һора,— ти.

Егет тағы сығып китә. Китеп бара, китеп бара, бара торғас, быныһына ла барып етә. Өйгә инә, ҡарсыҡ ултыра. Бер бөртөк сәсе, бер бөртөк теше генә ыржайып тора. Егет баяғыса иҫәнлек-һаулыҡ һорашты, әбей әлегесә яуап бирҙе:

— Шул сәләмең булмаһа, ике ҡабып, бер генә йотор инем үҙеңде!

— Ярар, йотһаң йоторһоң. Ҡана, башта минең тамаҡты туйҙыр,— тине егет.

Әбей йүгертеп ашарға килтерҙе, донъяһында нимәһе бар, шуның менән һыйланы. Тамағы туйғас, егет һорай:

— Һин, инәй, шундай-шундай ҡартты беләһеңме? Белһәң, юл өйрәт,— ти.

— Беләм, улым, беләм,— ти әбей.— Уға барыр юлда бик күп хәтәр бар бит. Ай-һай, барып етә алырһың микән һин уға? — ти.

— Өйрәт һуң, инәй, ул хәтәр урындарҙан нисек үтергә?

— Һин өс урында йоҡлама,— тине ҡарсыҡ. Өйрәтеүе шул булды бының.

Сығып китте егет тағы ла. Бик оҙаҡ барҙы, арыны. Кис булып, ҡараңғы төштө, инде һис тә атларлыҡ хәле ҡалмағас, бер йылға буйында төнәп китергә булды. Ятырға тип, урын әҙерләп йөрөй ине, бер кеше быға аҙыҡ килтереп бирҙе. Егет үҙе ашаманы, эйәреп килгән эте бар ине, уға ташланы. Ашағайны, шундуҡ үлде лә ҡуйҙы эте. Егет теге кешене баҫтырып китте. Эй, йүгерҙе, эй, йүгерҙе, ҡыуып бара торғас, бер өйгә барып етте. Өйгә инһә — бер ҡыҙ ултыра. Үҙенең аяғы-ҡулы бәйләнгән.

— Эй, егет, ҡайҙан килһәң, шунда кит тиҙерәк! Үлтерәләр бында һине! — ти.

Сыҡты ла егет, өй артына ҡасты. Бер аҙҙан һуң, йүгерешеп, пәрейҙәр ҡайтып керҙе. Шул тиклем күптәр — өй туп-тулы булды. Ҡыҙҙан һорайҙар:

— Әле генә кем килде? — тиҙәр.

— Шулай, шулай, бер мосолман кешеһе килгәйне,— ти ҡыҙ.

Бер пәрей эҙләргә сығып китә. Егет өй артында боҫоп тора бит инде. Пәрейҙең уға табан боролоуы була, егет башын саба ла өҙә.

Өйҙәгеләр бының ҡайтыуын көтәләр.

— Ни эшләп ҡайтмай һаман? — тиҙәр.

Көтөп-көтөп тә ҡайтмағас, икенсе пәрейҙе эҙләргә сығаралар. Егет уныһының да башын баяғыса саба ла өҙә. Шунан — өсөнсөһөн, дүртенсеһен. Тегеләр сығып тора, егет үлтереп тора. Барыһын да үлтергәс, өйгә инә, ҡыҙҙан һорай:

— Һин ниндәй нәҫелдән? — ти.

— Мин — фәлән батшаның ҡыҙымын. Бында мине пәрейҙәр урлап алып килде,— ти.

Егет ҡыҙҙың аяғын-ҡулын систе лә алып сығып китте был өйҙән. Ҡыҙҙың атаһына баралар. Ҡыҙы иҫән ҡайтыу шатлығынан батша ҙур мәжлес йыйҙы, ҡыҙын батыр егеткә биреп, туй үткәрҙе.

Егет ҡатыны менән бында бер аҙ торҙо ла, тағы теге ҡартты эҙләп сығып китте. Барҙы-барҙы ла, эңер төшкәс, бер урында йоҡларға ятты. Йоҡлар-йоҡламаҫ ята ине, кеше илаған тауыш ишетте. Эҙләргә тотондо.

Эҙләп йөрөй торғас, ҡул-аяғы бәйләнгән бер ҡыҙға килеп төртөлдө.

— Ни эшләп ултыраһың бында?

— Беҙҙең ауыл ҡыҙҙарын берәмләп аждаһаға бирәләр. Бөгөн сират миңә килеп етте. Атайым, батша булһа ла, ҡотҡара алманы мине. Бына бәйләнеләр ҙә ошо күл эргәһенә килтереп ташланылар. Һин кит, егет, бынан тиҙерәк. Юҡһа аждаһа һине лә ашар,— ти ҡыҙ.

Ярар, егет китмәне, аждаһаның килгәнен ҡарауыллап ҡалды. Тора ине был ҡарап, тора ине, бына бер саҡ, күлде ике яҡҡа ярып, аждаһа килеп сыҡты. Килеп сыҡты ла ҡыҙға ынтылды. Ынтылды — йоторға өлгөрмәне: егет, ҡылысын ала һалып, тегенең башын ҡыйып төшөрҙө. Башы өҙөлһә лә, ҡойроғо менән батырҙың ҡулына килтереп һуҡты, ҡәһәрең. Егеттең ҡулы ҡанай башланы. Ҡыҙ тиҙ генә ебәк яулығы менән бәйләп ҡуйҙы. Шунан ҡыҙ ҡайтып китте, егет тороп ҡалды.

Иртәнсәк ҡыҙ атаһына әйтә:

— Аждаһаны үлтергән егетте таптыр, мин шуға кейәүгә сығам,— ти.

— Ҡайҙан таптырайым мин уны? — ти батша.

— Бөтә ирҙәрҙе йыйҙыр. Араларынан уны мин үҙем танырмын,— ти ҡыҙы.

Иртәгәһен батша бөтә халыҡты саҡырта.

— Рөхсәт ит, атай, мин ҡулдарын йыуҙырып сығайым,— ти ҡыҙы.

Батша рөхсәт итә. Барыһының да ҡулдарын йыуҙырҙы ҡыҙы,— тик теге егет табылманы. Атаһы янына килде лә ҡыҙ:

— Мине ҡотҡарған егет бында юҡ,— тине.

Берәй кеше килмәй ҡалманы микән тип, батша үҙенең хеҙмәтселәрен тағы ла эҙләргә ебәрә:

— Береһен дә тикшермәй ҡалмағыҙ,— ти.

Хеҙмәтселәр эҙләп-тикшереп йөрөй торғас, яңғыҙ ғына торған бер әбейгә килеп инәләр. Инһәләр — бер егет йоҡлап ята. Уяталар ҙа: «Әйҙә, батша саҡыра һине»,— тип алып китәләр быны.

Алып килеп батша алдына баҫтырғас, ҡыҙы бының ҡулын йыуҙырырға иткәйне, ҡулының ебәк яулыҡ менән бәйләнгәнен күреп, ҡыҙ шатлығынан ҡысҡырып ебәрҙе:

— Бына ошо егет үлтерҙе аждаһаны! — тип.

Батша ҙур туй үткәреп, ҡыҙын ошо егеткә бирә.

Батыр егет бында бер аҙ торғас тағы ла сығып

китә. Атаһы вәғәҙә иткән теге ҡартты табырға кәрәк бит инде. Эҙләп йөрөй торғас тапты ул ҡартты. Өйөнә инеп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашты, ҡулын биреп күреште. Ҡарт:

— Эй, улым, күпме көттөм мин һине! Ярай килгәнһең, бер-ике көн ҡунаҡ булырһың да ҡайтып китерһең,— ти.— Ә хәҙергә,— ти,— анау күлгә барып һыу алып кил,— тип, биҙрә тоттора.

Егет, күлгә килеп, биҙрәһенә һыу тултырып алғайны, бер тауыш ишетә:

— Эй, кем унда һыу ала?

— Ҡунаҡ,— ти егет.

— Ярар, ҡунаҡ булһаң, ал бер биҙрә һыу,— ти баяғы тауыш.

Егет һыу алып ҡайтҡайны, бабай биҙрәне күтәреп эсте лә бөттө. Эсеп бөттө лә: «Их, тағы ла берәй биҙрә булһа»,— тип ҡарап тора, ти. Ни эшләһен егет, тағы ла китә һыуға. Килеп, биҙрәһен һирпеп тултырып алғайны, йәнә теге тауыш:

— Эй, кем һыу ала унда?

— Мин, ҡунаҡ,— ти егет.

— Ул ниндәй бөтмәҫ ҡунаҡ ул? — ти ҙә аждаһа килеп сыға күлдән.

Килеп сығып, быға ынтылғайны йоторға тип, егет, ҡылысын ала һалып, тегенең тәүҙә ҡойроғон, унан башын сапты ла өҙҙө. Шунан бөтә кәүҙәһен, ҡойроғон тураҡлап-тураҡлап кәбән итеп өйөп ҡуйҙы. Биҙрәһенә яңынан һыу тултырып алды ла ҡайтып китте. Ҡайтҡас, бабай һорай:

— Ниңә бик оҙаҡланың? — ти.

— Күлегеҙҙә аждаһа булған даһаң, шуны үлтерҙем. Тураҡлап, кәбән итеп ҡуйҙым,— ти егет.

Сығып ҡараһалар, күлдән төрлө яҡҡа шарлап һыу ағып ята, ти. Теге яҡтан да, был яҡтан да кешеләр һыуға йүгерә, ти. Баҡһаң, баяғы аждаһа, был йылғаны уратып быуып, күл яһаған, һыуҙы кешеләргә бирмәй тотҡан икән.

— Мин һине, улым, шул яуызды үлтерер өсөн саҡырғайным. Яңылышмағанмын икән. Хәҙер халыҡ һыуға зарыҡмаҫ,— тип, егеттең арҡаһынан һөйҙө лә, рәхмәттәр әйтеп, ҡайтарып ебәрҙе, ти.

Юлайҡан теге батша ҡыҙҙарын алып, егет үҙенең тыуған иленә ҡайтып киткән. Ҡайтып, ҙур итеп бер йорт һалған да әле булһа шунда йәшәп ята, донъя көтөп.

## БЕР ТУҒАН ИКЕ БАТЫР

Борон-борон заманда бер батша йәшәгән. Уның бик матур ҡыҙы булған була. Йәй көндәре был ҡыҙ алма баҡсаында йоҡлай торған булған. Кис һайын ҡыҙ янына дейеү пәрейе килеп йөрөгән икән. Шунан ни бер көндө ҡыҙҙың ике игеҙ улы тыуа. Батша балаларҙы кешегә күрһәтмәй, айырым йорт һалдырып, малайҙарҙы шунда бикләтә лә бер ҡарсыҡҡа ҡарарға ҡуша.

Малайҙар ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, өс ай тулғанда урамға йүгерешеп сығып та китәләр, туп һуғып уйнай ҙа башлайҙар. Шул көндө үк бер яңғыҙ ғына ҡарсыҡтың тәҙрәһен ваталар. Батша быны ишетеп ҡала ла малайҙарҙы суйын йортҡа бикләргә ҡуша. Малайҙарҙың береһе шунда уҡ йоҡлап китә, икенсеһе өй эсендә йөрөй торғас, бер йөй таба ла тибеп ебәрә. Типкән ыңғайы ишек асылып китә. Был малай батша һарайына ҡайта ла, ат, йүгән, ҡылыс алып, башы һуҡҡан яҡҡа сыға ла китә.

Эй китә был хәҙер, эй бара, бара торғас, бер ҙур күпер янына килеп сыға. Күпер аҫтына төшә лә йәшенеп ҡарап тора. Ҡарап тора ине, бына бер ваҡыт ел-дауыл ҡуба. Үрелеберәк ҡараһа, биш башлы дейеү килә!

— Фу-фу, әҙәм еҫе килә, кем бар, сыҡ! — ти дейеү.

Малай, атын һикертеп, күпер аҫтынан килеп сыға ла дейеү менән алыша башлай. Батыр егет шунда дейеүҙең биш башын биш яҡҡа сабып төшөрә. Шунан тағы күпер аҫтына йәшенә. Күп тә үтмәй, ел-дауыл сыға. Ни бар икән тип ҡараһа, күпергә ете башлы дейеү яҡынлашып килә. Дейеү күпергә килеп етә лә:

— Фу-фу, әҙәм еҫе килә, кем бар унда, сыҡ! — ти.

Малай аты менән һикереп килеп сыға ла алышырға тотона. Алыша торғас, дейеүҙең ете башын ете яҡҡа сабып төшөрә. Шунан ял итергә тип, күпер аҫтына төшөп ята. Ятыуы була, тегеләренән дә яманыраҡ дауыл ҡуба. «Тағы кем килә икән?» — тип, башын ҡалҡытып ҡараһа, ун башлы дейеү килә.

— Фу-фу, әҙәм еҫе сыға, кем бар унда, сыҡ! — ти дейеү.

Егет атын менә һалып килеп сыға ла тегенең менән алышырға ла тотона. Эй алыша былар, эй алыша, егеттең ҡылысынан уттар сәселә, уның һайын дейеү яманыраҡ ажғыра. Шулай итеп алыша торғас, егет был дейеүҙең дә баштарын — уныһын ун яҡҡа сабып төшөрә.

Дейеүҙәр ҡайтмай оҙаҡлап киткәс, ҡатындары, әсәләре: «Быларға бер-бер хәл булғандыр, юғиһә күптән ажғырып ҡайтып инерҙәр ине»,— тип бергәләшеп кәңәш ҡоралар. Оло дейеүҙең ҡатыны әйтә:

— Әгәр ҙә мәгәр минең иремә берәй хәл булып, уны үлтергән батыр бында килһә, мин шәп ямғыр яуҙырырмын да үҙем өй булырмын, ямғырҙан ҡасып өйгә инһә, мин уны шунда баҫып үлтерермен,— ти.

Ете башлы дейеүҙең ҡатыны әйтә:

— Мин эҫе көн яһармын, үҙем ҡайын булырмын; эҫенән ҡасып, ҡайын төбөнә килһә, мин уны шунда үлтерермен,— ти.

Өсөнсө дейеүҙең ҡатыны әйтә:

— Мин тар ғына һыу булырмын, ашатлап сығам тиһә, киңәйермен дә китермен, шунан ул батып үлер,— ти.

Дейеүҙәрҙең әсәһе былай ти:

— Мин ҙур ҡабан сусҡаһы булырмын да уны йотормон,— ти.— Әгәр ул, доға белеп, тупраҡ менән минең өҫкә һуҡмаһа,— ти.

Быларҙың һөйләшкәнен теге батыр егет ҡайһылай итеп ишеткәндер инде, уны хәҙер ҡайҙан беләһең. Шул ерҙә был тора һалып, ҡабат үҙҙәренең йортона ҡайтҡан да йоҡлап ятҡан ҡустыһын уятып, икәүләп икеһенә ике ситән үрергә тотонғандар. Үреп бөткәс, ситәндәргә тупраҡ тултырып бөркәгәндәр. Шунан тупраҡ тултырылған шул ситәндәрен күтәргәндәр ҙә икәүләп юлға сығып киткәндәр. Китеп баралар икән, бына бер саҡ ҡойоп ямғыр яуа башлаған. Ҡараһалар, яҡында ғына ҙур өй күрәләр. Шул ерҙә доға әйтеп, бер ситән тупраҡ менән өйгә һуҡҡайнылар, ямғыр туҡтаны ла ҡуйҙы, ти. Өй урынында, йылға булып, ҡара ҡан ағырға тотондо, ти.

Егеттәр ары китәләр. Көн шундай эҫе, шундай эҫе, егеттәр хатта әлһерәп төшәләр. Бер бик ялбыр ҡайын үҫеп ултырғанын күрәләр. Барып етеп, бер ситән тупраҡ менән һуғыуҙары булды, шул ерҙә аҡ ҡайын төбөнән йылға булып ҡара ҡан урғылып та сыҡты, ти. Шул саҡ көн еләҫләнеп, егеттәргә хәл керҙе, хәҙер ары киттеләр, ти. Китеп баралар ине, тар ғына йылғаға тап булдылар ҙа уға ла тупраҡ менән һуҡтылар, ти. Һуҡҡайнылар, йылға — йылға түгел, ә ҡара ҡан, ти, әй!

Быларға ҡаршы хәҙер үкерә-үкерә, бер ҡабан сусҡаһы килә. Килеп етеп, ташланам тигәндә генә, егеттәр, доға әйтеп, теге тупраҡ тултырылған ситәндәре

менән һуҡҡайнылар, ҡабан сусҡаһы ҡара ҡан йылғаһына әйләнде лә ҡуйҙы, ти. Был егеттәрҙең атаһы дейеү булғас, төрлө доғаларҙы белгән булалар. Бына шунан һуң ғына был бер туған ике егет, батыр тигән исем алып, яу килһә — яу ҡайтарып, дау сыҡһа — әмәлен табып тынысландырып, йортҡа ныҡлы таяу булдылар, матур итеп донъя көттөләр, ти.

## БУЛАТ БАТЫР

Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың ике улы булған. Олоһо — Барый исемле, кесеһе — Булат исемле. Уландары ҡул араһына керер, һәйбәт кенә донъя көтөп ятҡанда, башта бабай, унан, күп тә тормай, берҙән-бер көндө әбей ҙә үлеп киткән. Етем ҡалған малайҙар ни эшләргә белмәгәндәр. Көн артынан көн үткән.

Булат ағаһына ҡарағанда зирәгерәк булған. Берҙән-бер көндө ул ағаһына бында тормаҫҡа, икенсе яҡҡа бәхет эҙләп сығып китергә кәңәш иткән.

— Ағай, былай ултырып, беҙгә берәү ҙә бәхет алып килмәҫ, бәхетте үҙебеҙ эҙләп сығып китәйек, ни күрһәк тә күрербеҙ әле,— тигән. Ағаһы ҡустыһының был кәңәшенә тәүҙә ҡаршы килһә лә, һуңынан ризалашҡан. Былар өйҙәрендәге һуңғы аҙыҡтарын тоҡсайҙарына тултырып алғандар ҙа көндөң байышына ҡарай юл алғандар. Көн барғандар, ай барғандар,— юлда бер генә йән эйәһе лә, ауыл да тап булмаған. Алып сыҡҡан аҙыҡтары ла бөткән. Улар ҡырҙа үҫеп ултырған тамыраҙыҡтар менән генә туҡланғандар. Өсөнсө ай тигәндә, егеттәр бик ҙур бер тау эргәһенә килеп туҡтағандар. Тау бик бейек булған. Бер-ике көн хәл алғас, былар тауға шыуышып булһа ла менә башлағандар. Тауға менеп еттек тигәндә генә, олоһо, Барый исемлеһе, хәлдән тайып, тороп ҡалған. Булат ағаһына һуңғы тамыраҙыҡтарын ҡалдырған да, бар көсөн йыйып, тауҙың иң башына имгәкләп менеп еткән. Аяғына баҫһа, шатлығынан ҡысҡырып ебәргән: тауҙың аҫтында, урман аҡланында, бәләкәй генә бер өйҙөң ялтырап ултырғанын күргән. Булат арыуын да, аяҡтарының талыуын да онотҡан. Ағаһының ятып ҡалған ерен тиҙ генә эҙләп тапҡан да уны, арҡаһына һалып, баяғыса имгәкләй-имгәкләй, тауҙың башына алып менгән. Ағаһы ҡустыһына асыуланырға ла, көлөргә лә белмәгән. Былар аҙыраҡ хәл йыйып алғандар ҙа теге өйгә табан юл тотҡандар.

Өйгә барып етһәләр, бында хужалыҡтың ҙур ғына икәнен күргәндәр. Һарай эсендә бер ат, бер һыйыр, бер нисә баш ваҡ мал тора, ти. Булат күп уйлап тормай, ҡаты ғына итеп ишек шаҡый. Бер ҡарт ҡына әбей уларға ишек аса. Булат әбейгә үҙҙәренең был яҡҡа нисек килеп сыҡҡандарын бәйнә-бәйнә һөйләп бирә. Ҡарсыҡ егеттәргә үҙендә ҡалырға, бергәләп донъя көтөргә тәҡдим итә.

— Бына мин дә ҡартайҙым, уландар, үлер көнөм күп ҡалманы инде. Кисә генә бабайым үлеп китте. Ана уның аты, аҙ булһа ла малы бар. Бүтән бер ҡайҙа ла йөрөмәгеҙ, ошонда ҡалығыҙ. Мин үлеп ҡалһам, барыбер һеҙгә бөтә нәмәм ҡалыр, һәйбәт итеп донъя көтөп китерһегеҙ,— ти. Әбейҙең был һүҙенә егеттәр икеһе лә риза була.

— Күрәһе бәхетебеҙ ошолор инде,— тип ҡалырға булалар. Әбей асығып килгән малайҙарҙы тәмле-тәмле аҙыҡтар менән һыйлай, сәй эсерә. Тамаҡтары туйған егеттәр, ҡалай ултырһалар, шул көйө иҙрәп йоҡлап китәләр.

Иртәгеһен Булат, бөтәһенән дә иртәрәк тороп, һарайҙа торған атты егә лә урманға утынға китә. Атын туҡтатып, бәйләп ҡуйғас, утын ҡырҡырға тотона. Күп тә ҡырҡмай, ағастарҙың ҡот осҡос шаулауына аптырап ҡала. Булат яҡындағы тауға менеп китә. «Ошо тауҙан берәй нәмә күренмәҫме?» — тип уйлай инде. Тауҙың башына менеп етеүе була, ике тау араһында бер ҙур ғына күл, күл эргәһендә бер шәһәр ялтырап ятҡанын күрә. Балтаһын ҡулына ала ла шәһәргә ҡарап китә. Күлдең ситенә барып етһә, теҙҙәренән бәйләп ҡуйылған һыйыр, кәзә-һарыҡтарҙың баҡырышып торғанын күрә. Инде шәһәргә инеп, күреп-белеп сығайым тип боролһа, саң borҡотоп, ағастарҙы тамырҙарынан ҡуптарып, ике башлы дейеү килә. Дейеү осоп килеп төшә лә бәйләп ҡуйылған малдарҙы баҡыртып ашарға тотона. Ашап бөтә лә килгән яғына осоп та китә. Дейеү егеттең йәшенеп торғанын һиҙмәгән булған. Һиҙгән булһа, уға ла ташланған булыр ине.

Егет эштең нимәлә икәнен һиҙеп ҡала ла тиҙ генә урмандағы аты янына ысҡына. Өйгә ҡайтҡас, әбейгә лә, ағаһына ла ләм-мим бер һүҙ ҙә әйтмәй. Кисәгенән дә иртәрәк тороп, ул атаһынан ҡалған хәнйәрҙе үткерләп ала ла, өйҙәгеләрҙе, «кейек аулай барам», тип ышандырып, әлеге күлгә табан сығып китә. Булат шәһәргә тура инмәй, тәүҙә ситтәрәк ултырған яңғыҙ йортҡа инеп сығырға була. «Кисәге хәлде ошо өй кеше-

ләренән һорармын»,— тип уйлай инде. Өйҙә бер әбейҙән башҡа бер кем дә юҡ, ти. Ошо өйҙән бөтә шәһәр күренә икән. Күл ситенә ҡараһа, кисәге дейеү малдарҙы йотоп киткән урында бөгөн дә малдарҙың теҙелеп торғанын күрә. Әбей Булатҡа көн һайын шәһәрҙә ошондай хәлдең ҡабатланып тороуын һөйләп бирә.

— Улым, бына беҙҙең бөтә шәһәр халҡына ҙур ҡайғы төштө. Бер йыл инде бөтә халыҡ дейеүҙән ҡан биҙәне. Көн һайын халыҡтан мал талап итә, мал менән бергә бер кешене лә йотоп тора. Шәһәр батшаһы быға бер нәмә лә эшләй алмай. Бабайым үлеп китте. Ул үлмәһә, дейеү ҙә был тирәгә килә алмаҫ ине. Хәҙер был тирәлә уның башына етерлек бер батыр ҙа юҡ, исмаһам,— тип зарлана, ти, әбей.— Бөгөн дейеү батшаның ҡыҙын ашарға тейеш,— тип әйтеп һала әбей. Шул ваҡыт Булат ишек башында йөҙө иңләп һалып ҡуйылған алмас ҡылысты күреп ҡала ла:

— Инәй, был кемдең ҡылысы? — тип һорай.

— Эй балам, балам. Был ҡылыс олатайың мәрхүмдең алмас ҡылысы ине. Уның менән күп дошмандарҙың башына етте ул. Уны тотоп сыҡһа, бер ваҡытта ла еңелеп ҡайтмай торғайны. Хәҙер, улым, уны тоторға ир батыры юҡ шул,— тип егеткә әйтеп һала бит был әбей. Егет әбейҙән алмас ҡылысты тотоп ҡарарға һорай, әбей йәш егеттән көлә генә, ти.

— Өҫтөңә төшһә, бер ерең дә иҫән ҡалмаҫ, ҡуй, юҡҡа ыҙаланма, улым,— ти икән әбей.

Алмас ҡылыстың ауырлығы утыҙ боттан ашыу булған, ти, шул. Егет бик инәлеп һорағас, әбей уға ҡылысты тотоп ҡарарға рөхсәт итә. Егеттең ҡылысты әҙ генә тотоуы була, ул баҫҡан имән иҙән таҡталары эйелеп, шартлап һына башланы, ти. Әбей абайламай ҙа ҡала, егет күҙ асып йомған арала ҡылысты ҡулына алып, билбауына элеп тә ҡуя. Әбей егеттең батырлығын күреп, йөҙө яҡтырып китте, ти.

— Улым, олатаңдан һуң да батырҙар табылыр әле тип өмөт итә инем, бына ул һин булғанһың икән,— тип илап та ебәрҙе, ти.

Егет шәһәр халҡына күп бәлә-ҡазалар килтергән ике башлы дейеүҙең башын тураҡлап ташларға һүҙ бирә. Әбей егеттең был теләгенә шатланып риза була.

— Батша ҡыҙы алтын менән эшләнгән өйҙә дейеүҙе көтөп ултырыр,— тип, теге өйгә күрһәтә лә әбей, егеткә изге теләктәр теләп, оҙатып ҡала.

Бына егет, әбей өйрәткәнсә, күлде аша сығып, иң тәүҙә теге ҡыҙ ултырған өйгә яҡынлашты, ти. Гәүһәр,

төрлө яҡут таштарҙан эшләнгән был өй егеттең башын әйләндергән һымаҡ була. Булат өйҙөң ишеген асырға ҡыймай тора икән. Шул саҡта ул эстә үкһеп-үкһеп илаған ҡыҙ тауышын ишетә. Ишекте асып инһә, ебәккә солғанған ҡыҙ ултыра. Бите ҡара пәрҙә менән ҡапланған, ти. Ҡыҙ егеткә кире сығып китергә ҡуша:

— Егет, бында аҙашып килеп индеңме ни? Сыҡ, юҡһа хәҙер дейеү килеп мине лә, һине лә ашап сығып китер. Мин шул дейеүҙе көтөп ултырам, үлемгә күп ҡалманы инде. Егет, тиҙерәк сыҡ, дейеүҙең килер ваҡыты ла етеп килә,— тип, ҡыҙ инәлә башлай. Егет ҡыҙҙың һүҙен ҡолағына ла элмәй, ти.

— Юҡ, һылыу, мин бында дейеүҙе күрер өсөн килдем, бөгөн мин уның менән алышырға тейешмен,— тип әйтте, ти.

Шул саҡ ер һелкенеп, дауыл ҡуба. Егет дейеүҙең осоп килеүен күрә, тиҙ генә ҡынынан алмас ҡылысын һурып сығара. Ҡыҙ ултырған өйҙөң артындағы йыуан таш бағанаға ышыҡлана ла дейеүҙе көтә башлай. Дейеү, бәйҙә торған һыйыр, кәзә, һарыҡ малдарын ашап бөтөп, ҡыҙ ултырған өйҙөң ишеген килеп аса.

— Әһә, миңә бөгөн татлы аҙыҡ әҙерләнгән икән,— ти. Дейеү икенсе башын өйгә индереүе була, егет, бөтә гәйрәте менән ҡулына алмас ҡылысын алып, дейеүгә ташлана. Алыш башлана. Нисектер мәлен тура килтереп, дейеү егеттең өҫтөнә ашатланып ултырғайны, егет ялтырап торған алмас ҡылысын тегенең эсенә ҡаҙай. Дейеү дөрҫ итеп ергә ҡолай. Егет дейеүҙең эсенән алмас ҡылысын һурып ала ла бер башын өҙә сабып ташлай. Дейеү ялбара башлай:

— Зинһар өсөн, егет, бер башымды ҡалдыр, оронма инде! — ти.— Нимә һораһаң да, алдыңда булыр, батыр егет,— ти дейеү.

— Ә-ә, шулаймы ни?! Күпме малды, күпме йәнде харап иттең һин, яуыз! — ти ҙә Булат батыр тегенең икенсе башын да өҙә саба. Дейеү, башы булмағас, яҡ-яҡҡа ҡойроҡтарын һелтәп, бер нисә ағасты һындыра ла, хәле бөтөп тәгәрәй. Егет дейеүҙең кәүҙәһен һалма һымаҡ тураҡлап ташлай. Тураҡлап ташлағас: «Кешеләр үҙ күҙҙәре менән күрһен!» —тип, дейеүҙең кәүҙәһен һигеҙ күбә итеп өйөп ҡуя, ә баштарын яҡында үҫеп ултырған ике таштың аҫтына тығып ҡуя. Шунан һуң ғына егет ҡыҙ ултырған өйгә инә. Дейеүҙе күреү менән, ҡыҙ иҫе китеп ауған икән. Егет һыу бөркә. Ҡыҙ, аңына килгәс, үҙен үлемдән ҡотҡарған Булат батырға рәхмәттәр уҡый.

— Рәхмәт, егет! Хәҙер мин һинеке. Ошо алтын балдағымды һиңә бирәм. Юғалтмаһаң, мин дә һинең менән бергә булырмын,— ти.

Ошо ваҡытта ҡыҙҙың һөйәктәрен йыйып алырға тип, ике вәзир килә. Ҡыҙҙы иҫән көйө күреп, былар аптырап ҡала. Ҡыҙ эргәһендә егетте күреп, вәзирҙәр ни булғанын һөйләргә үтенәләр. Вәзирҙәр бик үтенгәс, егет быларға түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Вәзирҙәр аттарына атланалар ҙа, һөйөнсө һорарға тип, сабып ҡайтып китәләр. Батшаға барып, егеттең һөйләгәнен еткерәләр. Батша ҡыуанысынан бөтә туғандарын алдырта, тирә-яҡтағы бөтә ғәскәрен йыйҙыртырға бойороҡ бирә. Сәғәт тә үтмәй, бөтә ғәскәр батша һарайы алдына йыйыла. Батша, байрамса кейенеп, үҙенең көмөш тояҡлы атына атланып ала ла егет менән ҡыҙ ҡалған өйгә бөтә ғәскәрен алып китә. Ҡыҙ, йүгереп сығып, атаһының ҡосағына ташлана.

— Ҡыҙым,— ти батша,— мин ул егеттең дейеү менән алышҡанына ышанмайым әле. Әгәр ҙә ул миңә кейәү булам ти икән, үҙе үлтергән дейеүҙең ике башын да миңә алып килеп күрһәтһен, бына шунда мин уны ысын батыр икән тип тә танырмын, кейәү ҙә итермен.

Ҡыҙ егеткә атаһының һүҙҙәрен һөйләп бирә. Булат батыр һүҙһеҙ генә өйҙән сыға ла баяғы ике таш бағана янына бара. Килә лә ике ташты ике яҡҡа тибеп ауҙара. Шунан таш аҫтында ятҡан дейеүҙең ике башын майҙан уртаһына ырғыта. Был хәлде күреп, бөтә халыҡ таң ҡала. Батша йөҙләгән һыбайлыһын ауылдарға тарата, халыҡты йыйып алып килергә ҡуша. Сапҡындар шул ике арала кешеләрҙе йыйып та килтергәндәр, ти. Батша, үҙенең толпар аттарын ектереп, теге әбейҙәрҙе лә, Булаттың ағаһын да алдыртҡан.

Батша ҙур байрам мәжлесе ойошторған, ти. Бөтә ғәскәр алдында ул үҙенең көмөш тояҡлы атына егетте мендергән дә уға үҙенең батшалығын тапшырған. Батша үҙенең болоттарға олғашып торған матур йортон да кейәүенә биргән. Быға бөтә халыҡ ҡыуанған, ти. Ике башлы яуыз дейеүҙән шәһәрҙе ҡотҡарып алып ҡалған был батыр егеткә халыҡ бөтмәҫ рәхмәттәр уҡыған.

— Үҙебеҙҙең батшабыҙ! Үҙебеҙҙең батшабыҙ! — тип, егетте халыҡ күккә сөйгән.

Булат ике әбейҙе лә, ағаһын да үҙ янында ҡалдырған, ағаһына кәләш алып биргән. Улар, шат, бәхетле

тормош ҡороп, әле лә йәшәп яталар, ти. Булат батырҙың даны алыҫтарға таралып, уның хаҡында кешеләр һоҡланып һөйләйҙәр, ти.

## ТИМЕРБУЛАТ

Борон-борон заманда булған, ти, бер бабай менән бер әбей. Оҙаҡ йәшәгәндәр, ти, улар, көнкүрештәре лә хәлле генә булған, ти. Тик бына бер бөртөк тә балалары булмауы ғына эстәрен ҡырып торған, ти, уларҙың.

Ары һуғылғандар, бире һуғылғандар былар бала юҡлыҡтан. Ахыр килеп, бағыусыға барғандар. Бағыусы уларға бер күкәй тотторған да:

— Ошо күкәйҙе йыл буйына ҡулығыҙҙан төшөрмәгеҙ, әле берегеҙ, әле икенсегеҙ усығыҙҙа тотоғоҙ,— тигән.

Бер йыл үткән. Әбей менән бабай, теге күкәйҙе тотоп, йәнә бағыусыға барғандар. Бағыусы был күкәйҙе хәҙер ашарға ҡушҡан. Әбей менән бабай ашағандар. Ә туғыҙ айҙан һуң уларҙың бер ир балалары булған, уға Тимербулат тип исем ҡушҡандар. Ҡарт менән ҡарсыҡ быға шатланып бөтә алмаған.

Тимербулат көнләп түгел, сәғәтләп үҫкән, ти. Ун алты йәш тулғас, ул донъя күреп йөрөргә сығып китмәк булған. Ата-әсәһе ҡаршы килмәгән.

Эй киткән, ти, Тимербулат, эй киткән, ти. Бара торғас, бер ҙур урманға барып еткән, ти. Урманда ул бер ҙур ташҡа барып төртөлгән. Тимербулат, ни өсөндөр, был ундай-былдай ғына таш түгелдер, уның аҫтында берәй нәмә барҙыр, тип уйлаған. Ташты күтәрмәк булған — бик ауыр икән. Көскә-көскә генә ҡуҙғатып, ситкәрәк тайшалдырған. Ҡараһа, таш аҫтында ҙур ғына тишек барлығын күргән.

Тимербулат оҙаҡ уйлап тормаған, тотҡан да шул тишектән аҫҡа төшөп киткән. Оҙаҡ төшкән. Төшөп еткәс, ҡараһа — ҡаршыһында бер ишек күргән. Шуны асһа, эсе ер өҫтөндәге һымаҡ яп-яҡты, ти. Был бер ҙур ҡала икән. Ә үҙендә йән эҫәре юҡ, ти. Йөрөй торғас, Тимербулат бер өйгә барып ингән. Тәүҙә унда бер кем дә булмаған, бер аҙҙан һуң бер ҡарт килеп сыҡҡан.

— Һин бында ҡайҙан килеп сыҡтың? — тип һораған был ҡарт.

Тимербулат бәйнә-бәйнә һөйләп биргән. Ҡарт башын сайҡап ҡуйған. Шунан:

— Ә көсөң бармы һуң? — тигән.

— Бар,— тигән Тимербулат.

Шунан ҡарт кеҫәһенән ҡулъяулығын алып, иҙәнгә ташлаған да:

— Алып бир әле миңә шул яулыҡты,— тигән.

Тимербулат, күпме генә тырышһа ла, яулыҡты иҙәндән күтәрә алмаған. Шунан ҡарт кеҫәһенән бер ҡыуыҡ сығарған, уның эсендә ниндәйҙер һыу булған. Ҡарт Тимербулатҡа шул һыуҙы эсергә ҡушҡан. Тимербулат эскән. Эсеү менән, ғәләмәт көслө бәһлеүән булған да киткән был.

— Иә, хәҙер алып ҡара инде шул яулыҡты,— тигән ҡарт.

Тимербулат яулыҡты шунда уҡ иҙәндән алған. Ҡарт уға:

— Кеҫәңә һалып ҡуй, ауыр хәлгә осрай ҡалһаң, һелкеп-һелкеп алырһың,— тигән дә юҡ та булған, ти.

Тимербулат был ер аҫты ҡалаһында бер йыл торған, ти. Бер заман ул әллә ниндәй ҡурҡыныс тауыш ишеткән. Тәҙрәнән ҡараһа, ике башлы йылан өйөрөнөң ябырылып килгәнен күргән. Тимербулат шөрләп ҡуйған. Шул ерҙә теге ҡартты иҫенә төшөрөп, ул биргән яулыҡты һелккеләп алған. Шул минутта уның ҡаршыһына теге ҡарт үҙе үк килеп баҫҡан. Ҡарт Тимербулатҡа бер ҡылыс тоттороп, йыландарға ҡаршы сығырға ҡушҡан. Сығыу менән, уны йыландар ҡамап алған. Шул ваҡыт Тимербулат уларҙы, уңлы-һуллы сапҡылап, тураҡлай башлаған. Тиҙҙән бөтә йылан өйөрөн ҡыйратып бөтөргән, тик бер генә йылан, ҡасып ҡотолоп, бында булған хәлде үҙҙәренең батшаларына ҡайтып һөйләгән, ти. Йылан батшаһы, быны ишеткәс, ҡотороноп асыуланған, быға ҡаршы берәй нәмә эшләргә кәрәк тип, үҙенең яҡындарын кәңәшкә йыйған. Арала ер йөҙөндә өс йөҙ йылдан да ашыу йәшәгән бер йылан бар икән, ул кешеләрҙе, уларҙың йомшаҡ яҡтарын яҡшы белә икән. Ана шул йылан Тимербулатты алып килеүҙе үҙ өҫтөнә алған, тик бында уны тотоуҙы ғына ышандыра алмайым, тигән.

Бер ваҡыт, ҡалала йөрөгәндә, Тимербулат бик матур бер ҡыҙ күргән. Йәһәт кенә был ҡыҙ янына барып, уның кем ҡыҙы икәнен, бында ҡайҙан килеп сыҡҡанын һораған. Теге ҡыҙ, мине бында ел ташланы, тигән. Тимербулат уға ғашиҡ булып та өлгөргән; оҙаҡ уйлап тормай, уны бисә итеп алып, бергә тора ла башлаған.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, был һылыу ҡатын иренә, икәүләп ер аҫты донъяһын ҡыҙырып йөрөп ҡайтайыҡсы, тигән. Тимербулат риза булған. Сығып та киткәндәр.

Бара торғас, бер ҡалаға килеп ингәндәр былар. Бисәһе алдан, Тимербулат уның артынан барған. Әллә ниндәй бер һарайға килеп еткәндәр. Шул һарайҙың эсенә инеү менән, һылыу бисә ҡот осҡос йыланға әйләнгән дә ҡуйған. Тимербулатты иҫәпһеҙ күп йылан уратып алған. Уның ҡаршыһына йылан батшаһы үҙе лә килеп баҫҡан. Йыландар үҙ-ара:

— Быны тере көйө ҡурырға ине,— тип һөйләнә башлағандар. Бына шулай, үлем ҡурҡынысы алдында торғанда, Тимербулат ҡапыл ҡулъяулығын болғап ебәргән, ҡаршыһына йәнә теге ҡарт килеп баҫҡан. Ҡартты күреү менән, йыландарҙың шатлығы тағы ла артып киткән: «Бер кеше урынына икәүҙе ашайһыбыҙ бар икән»,— тип ҡыуаналар икән. Бына ҡарт, ҡапыл, үҙенең серле таяғын болғап ҡуйған, шунда уҡ бөтә йыландарҙы ут диңгеҙе ҡамап алған. Шул ваҡыт йыландар, ялынып-ялбарып, уттан ҡотҡарыуҙы һорай башлағандар. Теге ҡарт уларға:

— Батшағыҙ Тимербулатҡа үҙенең кесе ҡыҙын бирһә генә, уттан ҡотҡарам,— тигән.

Ни хәл итәһең бит, риза булырға тура килгән: йылан батшаһы үҙенең кесе ҡыҙын Тимербулатҡа кейәүгә биргән, бер йыл буйы егет торған ҡаланы ла уның үҙенә бүләк иткән, ти.

## ӘХМӘТ БАТЫР МЕНӘН ХОҘАЙБИРҘЕ БАТЫР

Борон-борон заманда Урал тауҙарының урманлы урындарында йәшәгән, ти, бер Әхмәт батыр.

Берҙән-бер көндө Әхмәт батыр, атай-инәйҙәрен өйҙә ҡалдырып, ил гиҙеп сығып китә. Бара торғас, ҡарурманға килеп инә, шунда бер өй күрә. «Туҡта әле, был өйҙә кемдәр йәшәй икән, күреп сығайым»,— тип өйгә инһә, унда бер кем дә юҡ, ти. Өй тирәләп ун ике келәт ултыра, ти. Ун икеһе лә алтын йоҙаҡ менән бикләнгән, ти.

Әхмәт батыр, үҙе баш, үҙе түш булып, ошо өйҙә йәшәй башлай. Бер көндө ул келәттәрҙе асып ҡарамаҡ була. «Был келәттәрҙең асҡыстары ла булырға тейеш бит, асып, унда нимәләр барлығын белергә кәрәк ине»,— тип асҡыс эҙләй башлай. Бүрәнә ярығынан ун ике алтын асҡыс табып ала. Беренсе келәтте асып ебәрһә, ҙур мискә менән һыу ултыра, ти. Мискәнең

тышына: «Көс кертә торған һыу»,— тип яҙылған, ти. Икенсе келәттән көстө ала торған һыу табыла, ҡалғандары кейем, ҡорал, төрлө ашамлыҡтар менән шығырым тулы, ти. Сират ун икенсе келәткә килеп етә. Ун икенсеһен асып ҡараһа — ҡойо, ҡойо эсендә тағы ла ҡойо, ти. Ҡойо төбөндә ҙур таш, таш аҫтында дейеү ята, ти. Егетте күргәс тә, дейеү:

— Беренсе келәтте асып, бер генә мискә һыу килтереп бир әле,— тип ялына икән. Әхмәт батыр уның һүҙенә иғтибар итмәй:

— Әйҙә, ята ғына бир,— ти ҙә шарт итеп келәтте бикләп тә ала.

Әхмәт батыр көн дә һунарға йөрөй. Бер көндө ул һунарҙан бер бала табып алып ҡайта. Балаға Хоҙайбирҙе тип исем ҡуша ла Хоҙайбирҙегә көс кертә торған һыу эсерә. Бала көнләп, сәғәтләп үҫә башлай. Тик теле генә сыҡмай. Баланы ҡарау өсөн Әхмәт батыр һеңлеһен барып алып килә. Һунарға киткән саҡта, һеңлеһенә ун икенсе келәтте асмаҫҡа ҡуша.

— Ҡара, ҡыҙыҡай, асһаң, харап булырһың,— ти.

Ағаһы сығып киткәс: «Ағайым ниңә ул келәтте асмаҫҡа ҡушты икән, унда нәмәкәй бар икән?» — тип уйлай ҙа ун икенсе келәтте барып аса. Асһа, дейеү:

— Ҡәрендәш, беренсе келәттән миңә бер мискә һыу килтереп эсер әле,— тип ялбарып ята. Ҡыҙ:

— Ағайым миңә был келәтте асмаҫҡа ҡушҡайны,— тип келәтте бикләп ҡуя.

Икенсе көндө ҡыҙ келәтте тағы барып асһа, дейеү тағы ла инәлә башлай. Ҡыҙ, дейеүҙе йәлләп, беренсе келәттән бер мискә һыу килтереп эсерә. Һыу эскәс, дейеү, көсләнеп китеп, ташты күтәреп килеп сыға ла бынамын тигән егет ҡиәфәтенә инә.

— Был йорт, был байлыҡтар бөтәһе лә минеке,— ти дейеү.— Әйҙә, ағайыңды үлтерәйек тә, мәңге бергә йәшәрбеҙ,— ти. Егеттең ҡупшылығын күреп, ҡыҙ риза була.

— Әхмәттең һунарҙан ҡайтыуына ағыулап аш бешер,— ти дейеү.

Был икәүҙең һөйләшкәнен телһеҙ Хоҙайбирҙе тыңлап ултыра.

Әхмәт батыр һунарҙан ҡайта, ашарға ултыра. Ашты ҡабырға тип, ағас ҡалаҡты ауыҙына килтергәс кенә, Хоҙайбирҙе ҡашыҡты бәреп төшөрә. Әхмәт батыр аптырап, Хоҙайбирҙе шаяра тип уйлай ҙа тағы ла ашарға итә. Хоҙайбирҙе ҡалаҡты тағы ла бәреп төшөрә. Әхмәт батыр асыулана башлай:

— Ҡамасаулама әле, ашап туйғас, уйнарбыҙ,— ти. Өсөнсө тапҡыр ҡалаҡты ҡабыр саҡта, Хоҙайбирҙе телгә килә лә:

— Эх, ағай, харап булаһың бит! — ти. Хоҙайбирҙе дейеүҙе лә, ағыулап бешерелгән ашты ла һөйләп бирә. Дейеү өҫтәл аҫтында ултырған була. Әхмәт батыр дейеүҙе өҫтәл аҫтынан һөйрәтеп сығара ла ҡәрендәше менән икеһен бик ныҡ туҡмай. Шунан дейеүҙе кире таш менән баҫтырып ҡуя. Әхмәт батыр менән Хоҙайбирҙе икәүҙән-икәү генә йәшәй башлайҙар.

Хоҙайбирҙе, ай үҫәһен көн үҫеп, бик көслө батыр булып үҫеп етә. Бер көндө былар икеһе ике яҡҡа — береһе көнсығышҡа, икенсеһе көнбайышҡа — ил гиҙергә сығып китә. Киткән ваҡыттарында ҡапҡаға икеһе лә ҡылыс ҡаҙап китә.

— Беребеҙгә бер-бер хәл булһа, шул кешенең ҡылысы осонан ҡан тамып торор,— тиҙәр.

Әхмәт батыр, китә торғас, бик ҙур бер ауылға барып етә. Ауыл араһында буш мискәләр шалтырашып ятҡан була. Ауыл ситендәге бер өйгә керә. Унда бер ҡарт менән ҡарсыҡ әлһерәшеп ултыра. Әхмәт ауылдағы хәлдәрҙе һораша башлай. Ҡарт менән ҡарсыҡ һыуһыҙ интегеүҙәрен һөйләп бирә.

— Ауылдың ҙур ғына йылғаһы бар ҙа, һыу аждаһа ҡулында,— тиҙәр.

Ауыл халҡы һыу алыр өсөн аждаһаға йыл һайын бер ҡыҙ биреп торалар икән. Ауылдағы бөтә ҡыҙҙарҙы биреп бөткәндәр, сират хәҙер батша ҡыҙына еткән була. Аждаһа ситтән килгән ҡунаҡтарға ғына бирәр биҙрәләп һыу бирә, ти.

Әхмәт батыр:

— Ҡарт менән ҡарсыҡҡа ҡунаҡмын,— тип, аждаһанан ике биҙрә һыу килтереп эсерә лә йоҡларға ята, ҡыҙҙы аждаһа алып китер алдынан ғына уятырға ҡуша.

— Бик ҡаты йоҡлап китһәм, бына ошо беҙ менән арҡама бөткәнсе сәнсерһең,— тип, әбейгә беҙ бирә.

Аждаһаға батша ҡыҙын алып китер мәл етә, төрлө музыка уйнай башлай. Әбей Әхмәт батырҙы эй уята, эй уята, ул ҡыбырламай ҙа. Беҙҙең осо менән арҡаһына сәнсеп ҡарай — һаман да уянмай. Беҙҙе арҡаһына бөтөргәнсе сәнскәйне, Әхмәт батыр һикереп килеп тора ла, ҡоралдарын алып, ҡыҙҙы ҡотҡарырға китә. Ҡыҙҙы һыу эргәһендәге суйын өйгә бикләгән булалар. Ул аждаһа өйө икән.

Әхмәт батыр суйын өйҙөң йоҙағын ҡылысы менән сабып өҙә лә ҡыҙ янына керә.

— Эх, егет, бынан тиҙерәк сыҡ, икебеҙ ҙә харап булабыҙ бит, аждаһа икебеҙҙе лә алып китәсәк,— ти ҡыҙ.

— Юҡ, мин сыҡмайым, мин бында һеҙҙе ҡотҡарырға килдем,— ти егет. Шул ваҡыт ел-дауыл сыға, бөтә ауылды ҡараңғылыҡ ҡаплай. Аждаһа килеп етә лә:

— Батшаға һыу кәрәк булғас, ҡыҙын ғына түгел, егетен дә ултыртып ҡуйған икән! — ти. Шул саҡ Әхмәт батыр:

— Алыш бармы, көрәш бармы? — тип аждаһаға ҡаршы сыға.

Аждаһа:

— Алыш та, көрәш тә бар, әй, әҙәм балаһы, бисара! — тип көлә.

Ике башлы аждаһа эйелеп-бөгөлөп көлгәндә, Әхмәт батыр уның бер башын бер һелтәүҙә сабып өҙә, икенсе һелтәүҙә дейеүҙең икенсе башы тәгәрәп барып төшә. Егет, аждаһаның кәүҙәһен өскә тураҡлап, ҙур таш аҫтына тығып ҡуя. Алыш бөткәс, ҡыҙ егеткә алтын балдағын бирә.

Батша, ҡыҙын аждаһанан ҡотҡарырға тип, ике батыр һимерткән була. Ҡыҙ ҡайтып килгәндә, әлеге ике батыр ҡаршы осрай.

— Һине кем ҡотҡарҙы? — тип аптырап һорашалар улар.

Ҡыҙ:

— Бик матур бер батыр ҡотҡарҙы,— ти. Шул ерҙә теге ике батыр:

— Атайыңа: «Мине ике батыр ҡотҡарҙы»,— тип әйт. Әйтмәһәң, ошонда уҡ һине юҡ итәбеҙ,— тиҙәр. Ҡыҙ кеше ни эшләһен, ҡурҡыуынан риза була. Ҡайта ла атаһына:

— Мине ошо ике батыр ҡотҡарҙы,— ти.

Батша:

— Ҡыҙымды ҡотҡарған батырға ҡыҙымды бирәм,— тип, ауыл халҡын туйға саҡыра. Бер ҙур майҙанға бөтә халыҡ йыйыла.

— Бөтә халыҡ килеп бөттөмө? — тип һорай батша. Шул ваҡыт бер ҡарт:

— Миндә бер ҡунаҡ егет бар, ул да килһенме? — тип һорай.

Батша:

— Килһен, бер кеше лә килмәй ҡалмаҫҡа тейеш, барып килтерегеҙ,— ти. Ҡарт, ҡайта һалып, егеткә:

— Батша һиңә лә килергә ҡуша,— ти.

Егеттең былай ғына бараһы килмәй. Батша, пар ат ектереп, егетте килтертә. Әхмәттең батыр икәнен халыҡ белмәй. Ҡыҙ халыҡҡа ҡымыҙ һалып биреп тора икән. Сират Әхмәткә килеп етә. Әхмәт батыр ҡымыҙлы туҫтағын һул ҡулы менән ала.

— Беҙҙә уң ҡул менән алалар,— ти ҡыҙ.

— Уң ҡулым шешкән, шуға бәйләп ҡуйғанмын,— ти егет.

— Шешһә, беҙҙә фельдшерҙар бар, дауаларҙар. Ҡайҙа, күрһәт әле,— тип, ҡыҙ егеттең ҡулын систерә. Егет ҡулын сискәс, ҡыҙ үҙе биргән балдаҡты танып ҡала ла егетте атаһы янына алып килә.

— Мине ҡотҡарған егет бына ошо,— ти. Батша:

— Шул егет ҡотҡарғас, ниңә, «ике батыр ҡотҡарҙы», тип әйттең? — ти. Ҡыҙ:

— Улар мине ҡурҡыттылар,— ти.

Батырҙар араһында бәхәс китә. Әхмәт батыр теге батырға:

— Һеҙ үлтергәс, дейеүҙең кәүҙәһен табып бирегеҙ,— ти.

Киттеләр, ти, теге ике батыр дейеүҙең кәүҙәһен эҙләргә. Эй эҙләйҙәр, эй эҙләйҙәр — таба алмайҙар. Әхмәт, ташты ҡалҡытып, аждаһаның кәүҙәһен күрһәтә.

Батша теге ике батырҙы алдашҡандары өсөн үлтерергә ҡуша. Әхмәт батыр уларҙың баштарын өҙә саба ла батша ҡыҙын алып ҡайтып китә. Әлеге урман араһындағы өйҙәренә ҡайтып етәләр. Ҡапҡаға бер яҙыу ҡағылған була. Унда: «Бер ауылда ике башлы батыр бар, бер батыр ҙа уны еңә алманы, Әхмәт батыр, һиңә генә алышырға ҡалды»,— тип яҙылған була.

Әхмәт батыр ҡаҙап киткән ҡылыстарҙы барып ҡарай, һәйбәт торалар, ҡан таммай. Шунан, ҡатынын ҡалдырып, ике башлы батыр менән көс һынашырға китә. Беренсе келәтте асып, көс кертә торған бер мискә һыу эсә, тағы бер мискә тултырып, үҙе менән ала. Ауылға барып етерҙән алда быныһын да эсеп бөтә. Килә был хәҙер, ғәйрәте — яман! Ике башлы батырҙы эҙләп таба ла:

— Алыш бармы, көрәш бармы? — тип ҡысҡыра.

Ике башлы батыр ҡатынына утыҙ биш бот ит һалырға ҡуша. Ит бешеп сыҡҡас, ике батыр ашарға ултыралар. Әхмәт батыр биш бот ашап өлгөрә, теге ике башлы батыр утыҙ бот итте ашап бөтөрә. Ашап бөткәс, ике башлы батыр:

— Көстө былай һынашайыҡ: икебеҙгә ике ялғаш, алтмышар ботло ике гер. Кем дә кем бер һуғыуҙа шул ялғашты көл итә ала, шул — батырҙың батыры, көслөнөң көслөһө була. Ҡунаҡ кеше, һин тәүҙә һуҡ,— ти.

Әхмәт батыр һуға, ялғаш тапсыҡҡа әйләнә. Ике башлы батыр һуғып ебәрә, ялғаш көлгә әйләнә; өрһә, көл, осоп китеп, юҡ була. Әхмәт батыр быны менән генә ҡәнәғәтләнмәй:

— Беләк көстәрен һынашайыҡ,— ти.

Алыш башлана. Ике башлы батыр Әхмәт батырҙы еңә лә ҡатынына ҡылысын сығарырға ҡуша. Ҡатыны ҡылысты сығарыу түгел, йәшереп ҡуя: Әхмәт батырҙың үлемен теләмәй. Ҡатынына Әхмәтте тотоп торорға ҡуша ла ике башлы батыр ҡылысын эҙләргә тип өйөнә кереп китә.

Ике башлы батыр ике мөгәрәп ҡаҙҙырған була. Шул мөгәрәптәрҙең берећенә үҙе үлтергән батырҙарҙың баштарын, икенсеһенә кәүҙәләрен тултырған була. Ике башлы батыр ҡылысы артынан өйгә инеп киткән арала, ҡатыны Әхмәт батырҙы мөгәрәпкә йәшерә.

Үҙе иренең сығыуына:

— Әхмәт батыр мине йыға һуғып ҡасты,— тип тора. Ике башлы батыр:

— Минән ҡасыр, ҡасмай ни! — тип, Әхмәт батырҙың артынан ҡыуа төшә.

Был саҡта Хоҙайбирҙе батыр өйгә ҡайтып төшкән була. Ҡылыстарға ҡараһа, Әхмәт батыр ҡаҙаған ҡылыстың осонан ҡан тамып тора.

— Ҡайҙа ғына харап булды икән? — тип, Хоҙайбирҙе өйгә инә. Инһә, өйҙә бер ҡатын ултыра. Хоҙайбирҙе аптырап китә.

— Ҡайҙан килдегеҙ? — тип һораша.

— Мин Әхмәт батырҙың ҡатыны булам,— ти ҙә ҡатын Әхмәт батырҙың ҡайҙа китеүен һөйләп бирә.

Хоҙайбирҙе көс кертә торған ике мискә һыуҙы эсә лә, тағы икенсеһен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, ике башлы батыр йәшәгән ауылға көс һынашырға китә. Ауылға барып етер саҡта бер йыуан имәнде күрә лә шул имәнгә һөйәлеп һыу эсмәксе була. Имәнгә һөйәлеүе була, имәндең ауыуы була. Ауған саҡта ел-дауыл ҡубып, ике башлы батырҙың өйөнөң башын осороп алып китә.

Ике башлы батыр, Әхмәт батырҙы таба алмауына йәне көйөп, өйҙә ултыра икән. Өйөнөң ҡыйығы осоп киткәс:

— Минән дә көслөрәк батыр бармы әллә донъя-

ла? — тип, тышҡа сыҡһа, Хоҙайбирҙе батыр баҫып тора.

— Алыш бармы, көрәш бармы? — ти Хоҙайбирҙе батыр.

— Алыш та, көрәш тә бар,— ти ике башлы батыр.

Ике башлы батыр тағы утыҙ биш бот ит бешертә. Хоҙайбирҙе утыҙ ботто ашап бөтә, ике башлы батыр ни бары биш кенә бот ашап ҡала. Ике башлы батыр тағы ла:

— Көс һынашыу өсөн бер һуғыуҙа ялғашты көл итәйек,— ти. Хоҙайбирҙе риза булмай:

— Беләк көстәрен һынашайыҡ,— ти. Шулай итеп, алыш башлана. Хоҙайбирҙе тәүҙә ике башлы батырҙы ергә алып һуға. Ике башлы батырҙың ҡапҡа бағанаһы суйындан икән. Хоҙайбирҙе батыр ике башлы батырҙы тағы ла күтәреп ала ла суйын бағанаға килтереп бәрә, батырҙың ике башы ике яҡҡа сәсрәп китә. Ике башлы батырҙың ҡатынын күреп, Хоҙайбирҙе батыр:

— Ҡайҙа Әхмәт батыр? — тип һорай.

Ҡатын Әхмәт батырҙы мөгәрәптән сығара. Ике башлы батырҙың ҡатынын Хоҙайбирҙе батыр үҙенә кәләш итеп алып, өсәүләп ҡайтып китәләр.

Ике батыр әле лә бергә йәшәйҙәр, һаман да батырлыҡтар күрһәтеп йөрөйҙәр, ти.

## МЕҢ БАШЛЫ АЖДАҺАНЫ ЕҢГӘН ЕГЕТ

Борон-борон заманда бәләкәй генә ауылда бер бабай менән бер әбей бар ине, ти. Былар етмеш ете йәшкә еткәс, бер улдары булды, ти. Был бала тыуғанда уҡ сабатаһын кейеп, сәкмәнен нығытып бәйләп, өҫтөнә бар кейемен кейеп торҙо, ти, ә икенсе көндө инде шар һуғырға сығып китте лә шунда уҡ берәү менән һуғышып керҙе, ти. Был малай һәр көндө урамға сығып һуғышып, һәр көндө бер-ике малайҙы туҡмап керә башланы, ти. Шулай итеп йөрөй торғас, бабайға: «Малайыңды тый, малайың бик уҫал, бар кешене ҡырып бөтөрә бит инде!» — тип килеп әйтә башланылар, ти. Был эштән бабай тамам ялҡып, малайҙы ни эшләтергә тип, уйға ҡала башланы, ти.

Шулай бик күп уйлана торғас, бабай баланы берәй ергә илтеп олаҡтырырға булған. Был эште бала һиҙеп ҡалған да кеҫәһенә бик күп итеп һалам тултырған, ти. Бабай баланы яланға эйәртеп алып киткән, малай һа-

лам ташлап барған. Шунан былар бер урманға барып кергәндәр. Урманға кергәс, бабай малайҙы бер аҡлан-ғараҡ кертеп еләк йыйырға ҡушты ла, үҙе бер яҡҡа, урман араһынараҡ үтеп, тиҙерәк шыҡыйҙы, ти. Бабай, бала күрмәһен тип, урман араһынан урай-урай көскә генә ҡайтып етте, ти. Малай үҙе һалам ташлап килгән юлдан бабай артынан уҡ, ике айыу эйәртеп, ҡайтып төштө, ти. Бабай менән әбей, малайҙан тынып, бер рәхәтләнеп сәй эсәйек тип кенә ултырғандар ине, ти, шул сәйгә малай ҙа ҡайтып етте, ти. Малай ҡайтып кергәс, бабай менән әбей, айыуҙан ҡурҡып, мейес башына менеп киттеләр ҙә:

— Балаҡайым, зинһар, айыуҙарыңды өйгә кертә күрмә, беҙ ҡурҡабыҙ! — тип ҡысҡырыша башланылар, ти. Шунан малай бабайҙарҙы төшөрөп, бергәләп сәй эстеләр, ти. Малай сығып айыуҙарҙы һуйып, тиреләрен һаттылар, ти.

Бер аҙ торғас, малай тағы урамға сығып уйнай башланы, ти. Тағы һуғыш сығарып, тағы бик күп малайҙарҙың баштарын ярып бөтөрҙө, ти. Был эш һәр көн ҡабатланып торғас, халыҡ түҙмәне, тағы бабайға килеп:

— Малайыңды тый, урамға сығарма, йә күҙҙән юғалт! — тип киҫәттеләр, ти.

Башҡа сара тапмағас, бабай тағы яланға алып сығып киткән. Был юлы малай быны һиҙмәй ҡалып, һалам ала алмай сыҡҡан. Бик оҙаҡ барғас, былар бер урманға кереп, утын киҫә башланылар, ти. Киҫтеләр, киҫтеләр ҙә, арығас, бер аҙ ял итеп алайыҡ тигән булып, шунда яттылар, ти. Бик йыуан ҡерәш ағастарҙы киҫеп арығанлыҡтан, малай, ятҡас та ойоп, йоҡоға китте, ти. Шул арала бабай бер яҡҡа янтайып шылды — ҡасты, ти. Бабай киткәс, малай уянды ла, ҡайтырға ҡайһы яҡҡа икәнен белә алмайынса, тотто ла бер яҡҡа ҡарап китте, ти. Шулай бара торғас, күп тә бармай, бер өйгә осраны, ти. Шул көйгә өйгә барып керергә йөрәге етмәй, тәҙрәнән өй эсен ҡарамаҡсы булды, ти, ләкин көндәр һыуыҡараҡ булғанға күрә, өйҙөң тәҙрәләре эстән боҙ ҡатып өйҙөң эсе күренерлек түгел ине, ти. Был, ни булһа ла булыр тине лә, өйгә баҫып (рөхсәтһеҙ) керҙе, ти.

Был өй бер дейеү пәрейенең өйө икән. Малай барып кергәс, дейеү: «Ә, бына минең балам килде! Бар, балам, минең атты эсереп ҡайт. Юлыңда таштар булыр, абындыра күрмә, атты сатанлатып, аҡһата күрмә. Абындырмай, атты иҫән генә алып ҡайтһаң, мин һине улым

итермен»,— тип, малайҙы ат эсерергә ебәрҙе, ти. Малай атты диңгеҙгә барып эсерҙе, ти. Ҡайтып килгәндә, бер өй ҙурлығындағы ташҡа тап булдылар, ти. Аты шуға абынып, аҡһаны ла ҡуйҙы, ти. Малай, асыуы килеп, тотто ла ташты күтәреп алып һыуға ырғытты, ти. Таш һыуға барып төшөү менән, диңгеҙ тулҡынланып, һыу ташырға кереште, ти. Һыу хатта дейеү өйөнә лә барып керҙе, ти. Дейеү ни эшләргә белмәне, малайға ҡаршы сығып:

— Иә, малай, алыш бармы, биреш бармы? — тип ҡысҡырҙы, ти.

— Әйҙә, алыш та бар, биреш тә бар! — тип әйтте, ти.

Шунан былар керештеләр, ти, ағай, көрәшергә. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр — һис еңешә алмайҙар, ти. Шулай көрмәкләшеп йөрөй торғас, малай дейеүҙе күтәреп һуҡты ла, аяҡ-ҡулын бәйләп, бер келәткә бикләне лә ҡуйҙы, ти. Шунан үҙе һунарға-ауға сығып китте, ти. Эй йөрөнө, эй йөрөнө, бер нәмә лә осрата алмай йөрөй торғас, бер юлға килеп сыҡты, ти. Килеп сыҡһа, быға ҡаршы бер ҡортҡа килә, ти.

— Һау ғына йөрөйһөңмө, әбей? — тип сәләм бирҙе, ти, малай.

— Һәйбәт кенә йөрөйөм әле, балам.

— Ҡайҙа китеп бараһың?

— Танышыма китеп барам, ҡунаҡҡа,— тип әйтте, ти, ҡарсыҡ.

— Танышың ҡайҙа тора?

— Фәлән-фәлән ерҙә,— тигәс, малай:

— Шулаймы ни,— тине лә,— ярай улай булғас, бар, һин бара тор, дейеү хәҙергә өйҙә юҡ әле. Бына асҡысы, өйҙө үҙең асып керерһең,— тип, барлыҡ асҡыстарҙы ҡарсыҡҡа бирҙе, ти. Шунан: — Әбей, ҡара әле, бына был асҡыс менән фәләнсә келәтте асма, йәме,— тип үҙе ауға китте, ти.

Ҡарсыҡ дейеү өйөнә килеп кергәс, келәттәрҙе асып ҡараһа, беренһендә — алтын, икенсеһендә — көмөш, өсөнсөһөндә — аҫыл таштар, дүртенсеһендә затлы-затлы нәмәләр, ебәк тауарҙар тулып ята, ти. Һәр ҡайһыһын асып ҡарай торғас, ахырында теге асма тигән келәткә килеп етте, ти. Түҙмәне, быныһын да асып ҡараны, ти. Асһа — аяҡтары-ҡулдары бығаулы дейеү ята! Ҡарсыҡ иҫе китеп ҡарап торҙо ла, тегенең аяғын, ҡулын ысҡындырып, дейеүҙе сығарҙы, ти. Шунан былар бер-береһенең хәлен һорашҡас, дейеү теге малай тураһында энәһенән ебенә саҡлы ҡалдырмай һөйләп бирҙе, ти. Былар икеһе бергә ултырып бик оҙаҡ һөй-

ләштеләр, ти, бынан һуң икеһе бергә тормаҡсы булдылар, ти. Дейеү ҡарсыҡты үҙенә бисә итеп алды, ти. Малай ауҙан ҡайтҡансы, былар уны нисек үлтерергә, унан нисек ҡотолорға уйлаша башланылар, ти. Дейеү менән ҡарсыҡ, малай ҡайтып кергәс тә, уға үҙҙәре йәбешергә тип кәңәш ҡорғандар икән, шул ваҡытта быларҙың балаһы (балалары ла тыуып өлгөргән була инде!) һикереп торҙо ла:

— Юҡ, һеҙ уны улай ғына еңә алмаçһығыҙ. Ул бөгөн ҡайтыр ҙа, ашап-эсеп, иртәгә тағы һунарға китер. Шунда ул ҡойма ямғыр аçтында ҡалыр. Ышыҡланырға урын таба алмай йүгереп йөрөгәнендә, һеҙ уның алдына бер лапаç яһағыҙ ҙа, ул шунда ышыҡланғас, лапаçты кинәт емерерһегеҙ, ул аçта ятып үлер. Инде улай ҙа үлтерә алмаһағыҙ, шул ямғырҙан һуң бик эçе булыр. Шул ваҡытта уның алдына ағыулы бер күл хасил итегеҙ. Ул шул күлдән һыу эсер ҙә үлер. Инде улай ҙа булмаһа, уның ҡайта торған ҡапҡа төбөнә бер көҙгө ҡуйығыҙ. Шул көҙгөгә ҡараһа, уның ике күҙе сәсрәп сығыр, унан һеҙгә үлтереүе яйлы булыр. Инде улай ҙа булмаһа, уның асығып ҡайтыуына бутҡа бешереп ҡуйығыҙ, ул шуны ашар ҙа үлер,— тип әйтте лә, ти, шунда уҡ был бала үҙе үлде, ти.

Ә теге малай был ваҡыт өйгә ҡайтҡан булған икән. Ҡайтҡан да, өйгә инеп, һике аçтына ҡасҡан булған. Дейеүҙең ҡарсыҡ менән һөйләшкәнен барыһын да тыңлап ятҡан. Шым ғына ятҡан-ятҡан да, бер арала яйын табып, шылған, ти, бынан.

Шунан һуң байтаҡ ваҡыт уҙғас, малай бик арыған булып ҡайтып керҙе, ти. Бөгөн үҙе алып ҡайтҡан йәнлектәрен ашаны, эсте лә, ти, иртә менән тағы һунарға китте, ти.

Был малай аталары йортонан сығып киткәс, уның бер энеһе тыуған икән. Шул бала ағаһын эҙләп сығып киткән дә, йөрөй торғас, улар ошо урманда килеп осрашҡандар, ти. Осрашып танышҡас, бергәләп һунар итә башланылар, ти. Әй йөрөйҙәр, әй йөрөйҙәр, тегеһен дә атып алалар, быныһын да, шулай йөрөй торғас, бик шәп итеп ямғыр яуа башланы, ти. Әй ҡоя, ти, ағай, ышыҡланырға бер урын юҡ, ти. Былар ямғырҙан бик күшектеләр, ти. Йүгерешеп китеп баралар ине, быларҙың алдында ғына бер ҡыуыш — бөркәү күренде, ти. Бәләкәй бала ҡыуышҡа йүгерә башлағайны, теге малай алдан килә һалып, ҡулы менән ҡыуышҡа төрттө, ҡыуыш шунда уҡ емерелде лә төштө, ти. Шунан былар тағы киттеләр, ти. Китеп баралар ине, көн ҡа-

пыл аяҙытып, бик эҫе була башланы, ти. Быларҙың тамаҡтары кибеп, бик һыуһанылар, ти. Арып-талып бара торғас, бер күлгә барып сыҡҡайнылар, бәләкәй бала тағы шунда йүгерә башланы, ти. Ағаһы быны саҡ тотоп алып ҡалды, ти. Бала һаман тартышҡас, ағаһы йән асыуы менән күлгә һуҡҡайны, күл юҡ булды, ти. Шунан былар тағы киттеләр, ти. Ҡайтып етеп киләләр ине, баҫыу ҡапҡаһының төбөндә генә бағанала бер бик ҙур көҙгө тора, ти. Быны күргәс, бәләкәй бала: «Эй, беҙ күшегеп тә, һыуһап та ни булып бөттөк икән?» — тип, көҙгөгә табан йүгерә башлағайны, ағаһы тағы көҙгөнө бәрҙе лә ватты, ти. Көҙгө селпәрәмә килеп төштө, ти. Шунан энеһе: «Һин минең ағайым түгелһең, ахыры, бер сихырсы малайһыңдыр әле, моғайын»,— тип илай башлағас, ағаһы теге ҡыуыштың — ниндәй ҡыуыш, күлдең — ниндәй күл, был көҙгөнөң ниндәй көҙгө булғанын баштан-аяҡ һөйләп бирҙе, ти. Өйгә ҡайтҡас нимә булаһын да әйтеп ҡуйҙы, ти. Шунан һуң ғына бәләкәй бала тынысланып, ағаһына рәхмәт әйтте, ти.

Былар ҡайтып инеү менән теге ҡарсыҡ: «Эй, балаҡайҙарым, асығып бөткәнһегеҙҙер инде!» — тип икеһенә ике һауыт бутҡа һоҫоп килтерә ине, ти, бутҡаларын кесе ул — ҡарсыҡтың үҙенең ауыҙына, ә олоһо дейеүҙең ауыҙына төйгөсләп тултыра башланылар, ти. Эй тултырҙылар, эй тултырҙылар,— дейеү ҙә, ҡарсыҡ та сыҙаманы, икеһе лә ағыулы эҫе бутҡанан тонсоғоп үлде, ти.

Шунан һуң былар, үҙҙәре әҙерләп, тамаҡтарын туйҙырғас, ағаһы бер ҡамсы яһап, түшәмгә элеп ҡуйҙы ла энеһенә: «Ошо ҡамсыны ҡарап тор: мин үлһәм, ҡан тамыр, иҫән булһам, һөт тамыр. Ҡан тамһа, мине эҙләргә сыҡ»,— тип, үҙе тағы юлға сығып китте, ти.

Эй китте, эй китте, ай китте, йыл китте, артына әйләнеп ҡараһа, энә буйы ер киткән, ти. Бара торғас, бер шәһәргә барып етеп, иң ситтәге бәләкәй генә өйгә керҙе, ти. Был өйҙә бер етем ҡарсыҡ ҡына тора икән, ти. Үҙе ябығып-кибеп бөткән, ти. Быларҙың һыуында мең башлы бер аждаһа бар, шул быларға һыу бирмәй икән, ти. Малай быны әле белмәй, килеп ингәс тә, әбейгә:

— Әбей, самауыр ҡуй, бик тамағым кипте,— тине ти. Әбей:

— Балам, самауыр ҡуйырға һыуым юҡ шул, беҙгә улай самауыр ҡуйырлыҡ һыу бирмәйҙәр,— тип әйтте, ти.

— Ә кем бирмәй уны? — тип һорағас, ҡарсыҡ:

— Һыуыбыҙҙа аждаһа бар, шул бирмәй,— тигәйне, малай:

— Әбей, улай булһа, самауырыңды әҙерләй тор, мин һыу алып ҡайтырмын,— тип, һыуға сығып китте, ти. Малай йылғаға барып, һыу ала ғына башлағайны, ти, аждаһа:

— Кем бар унда? Кем һыу ала? — тип ҡысҡырҙы, ти. Малай:

— Ҡунаҡ, ҡунаҡ һыуға килде,— тип әйткәйне, аждаһа:

— Ә, улайһа ярар, ҡунаҡ булһаң, бер биҙрә ал! — тип ҡалды, ти.

Малай, һыуҙы алып килеп:

— Әбей, бына һыу, самауырыңды ҡуй инде,— тип биргәйне, теге ҡарсыҡ һыуҙы алды ла биҙрәһе менән күтәреп эсте лә бөтөрҙө, ти.

— Балам, рәхмәт! Бер йылдан бирле һыу күрмәй ҡорғаҡһып бөткәйнем,— тип, биҙрәһен малайға табан килтереп ҡуйҙы, ти. Малай тағы һыуға барып, тағы бер биҙрә һыу алып ҡайтты, ти. Ҡарсыҡ тағы үҙе эсеп бөтөрҙө, ти.

Малай тағы барып алып ҡайтҡайны, әбей өсөнсө биҙрәне лә эсеп бөтөрҙө, ти. Быға малайҙың асыуы килеп китте, ти:

— Шаяртма инде, етер! Ҡуй тиҙерәк самауырыңды! — тип ҡысҡырҙы, ти.

Ҡарсыҡ, бер ҙә бошмай-нитмәй, һалмаҡ ҡына ҡыймылдап торҙо ла, ти, самауырҙы асып, һыу урынына төкөрә-ҡаҡыра башланы, ти. Малайҙың был эшкә бик асыуы килде лә яңынан һыуға китте, ти. Барып еткәс, алайым тип, һыуға эйелгәйне, теге аждаһа:

— Кем бар унда тағы? Кем һыу ала? — тип ҡысҡырҙы, ти. Малай:

— Ҡунаҡ, ҡунаҡ мин! — тине, ти. Аждаһа шул саҡ:

— Ниндәй бөтмәгән ҡунаҡ ул? — тип асыуланып килеп сыҡты, ти. Ярға уҡ килеп сыҡты ла, мең башынан мең төрлө тауыш сығарып, мең яҡҡа тармаҡланған ҡойроҡтарын болғай-болғай, эй килә, ти, эй килә, ти, тауышынан хатта ер һелкенеп, бөтә шәһәр халҡы ҡурҡып, ҡайһыһы — баҙға, ҡайһыһы ҡойоға ҡасып бөттөләр, ти. Теге малай ғына биҙрәһен тотҡан көйө, һис ҡурҡмай, аждаһаны көтөп ҡаршы торҙо, ти.

Аждаһа килеп етеп, инде йотам тигәндә генә, малай аждаһаның яңағына биҙрә менән «шалт!» сабып ебәрҙе, ти, ағай, аждаһа тәкмәс-тәкмәс тәгәрәп китте, ти.

Малай, шул ыңғай яңынан барып йәбеште лә, ти, аждаһаның мең башын мең яҡҡа ботарлап ташланы, ти. Шунан тегенең бер башын күтәреп алды ла батшаның ҡапҡа төбәһенә илтеп ҡуйҙы, ти. Бар кеше ҡасып бөткәнлектән, быны бер кем күрмәне, ти. Малай биҙрәһен тәҙәтеп, һыу алып ҡайтып, үҙе самауыр ҡуйып, сәй эсергә тотондо, ти.

Батша ҡапҡаһы башындағы аждаһа башын бер түрә күреп, батшаға кереп әйтте, ти. Батша быға ышанмайынса: «Юрамал мыҫҡыл итәһең»,— тип, теге түрәне шунда үлтерҙе лә ҡуйҙы, ти. Тағы бер түрә кереп әйткәйне, уныһын да үлтерҙе, ти. Өсөнсөһө лә шул уҡ хәбәр менән кергәйне, батшаның ҡатыны арҡыры төшөп, быныһын үлтертмәне, ти. Сығып ҡараһалар, быларҙың ҡапҡа башында, ысынлап та, аждаһа башы тора, ти. Батшаның әмере менән бында ире, ҡатыны — бер кеше ҡалмай килде, ти. Халыҡ йыйылғас, батша:

— Был аждаһаны кем үлтерҙе? Башты бында кем ҡуйҙы? Әйтегеҙ, шуға ҡыҙымды бирәм! — тип ҡысҡырҙы, ти. Быға ҡаршы бер бай:

— Мин үлтерҙем! — тип сыҡҡайны, батша:

— Алай булһа, ҡапҡа төбәһенән аждаһа башын төшөрөп ташла! — тип ҡушты, ти.

Теге бай, өтәләнеп, ҡапҡа башына менеп киткәйне лә — башты күтәреп төшөрөү түгел, хатта урынынан да ҡуҙғата алманы, ти. Эй аҙапланды, эй аҙапланды, аҙаплана торғас, хәлдән тайып, ахырҙа үҙе йығылып төштө, ти. Бынан бар халыҡ шарҡылдап көлдө, ти. Батша тағы: «Кем үлтерҙе? Ниңә әйтмәй ул? Ҡыҙымды бирәм бит!» — тип, ҡат-ҡат ҡысҡырып ҡараһа ла, теге бай хәленә төшөүҙән ҡурҡып, бер кеше лә «мин» тип сыҡманы, ти. Ахырында батша аптырап:

— Әллә бында килмәй ҡалған берәй кеше бармы? Берәйегеҙҙең өйөндә берәй кеше тороп ҡалманымы? — тип һорағайны, теге ҡортҡа:

— Минең өйҙә бер генә йәшлек бер сит бала бар ҙа барын — был эш уның ҡулынан килмәҫ шул,— тине, ти. Батша:

— Барығыҙ, алып килегеҙ әле шул малайҙы! — тигәс ҡортҡа үҙе ҡайтып китте лә малайҙы сәй эсеп ултырған еренән елтерәтә-елтерәтә алып килде, ти.

Батша:

— Беҙҙең һыуҙағы аждаһаны һин үлтерҙеңме әллә? — тип һораны, ти. Малай:

— Асыуланмаһағыҙ, мин үлтергәйнем шул,— тип әйтте, ти. Быға бар халыҡ бер ауыҙҙан:

— Бына рәхмәт, бына рәхмәт! — тип ҡысҡырҙы, ти. Батша:

— Минең ҡапҡа түбәһенә лә аждаһа башын һин мендереп ҡуйҙыңмы? — тип һораны, ти.

— Мин мендереп ҡуйҙым,— тип әйтте, ти, малай. Батша:

— Алай булғас, төшөрөп тә ҡуй инде,— тигәс, малай ҡапҡа башына менде лә, ти, башты бер ҡул менән генә алып, ырғытып ебәрҙе, баш шәһәрҙән егерме саҡрым ситкә барып төштө, ти.

Быны күргәс, бар халыҡтың иҫ-аҡылы китеп, гөж килде, батша үҙенең вәғәҙәһендә тороп, малайға ҡыҙын бирҙе, бер ай буйы туй яһаны, ти. Шулай итеп, был малай батша ҡыҙы менән тора башланы, ти.

Бер ваҡыт малай үҙенең кәләше менән бик күңелле генә ултырған саҡта, матур ғына кейенгән бер шүрәле ҡыҙы быларҙың өй ишеген аса ла яба, аса ла яба, ти. Үҙе быларҙан шарҡылдап көлә, ти. Малай: «Шаярма, ҡыҙыҡай!» — тип ҡараһа ла, теге ҡыҙ туҡтаманы, һаман шаярҙы ла шаярҙы, ти. Быға малайҙың асыуы ҡабарып, шүрәле ҡыҙын ҡыуып алып китте, ти. Былар бара-бара әллә ниндәй баҫыуҙарҙан үтеп киттеләр, ти. Бара торғас, ағас араларына барып керҙеләр, ти. Унан һуң әллә ниндәй таш бағаналыҡҡа барып сыҡтылар, ти. Бында таш араһында йөрөй торғас, әллә ни эшләп малай ике таш араһына килеп ҡыҫылды, ти. Шунан ҡыҙ әйләнеп килде лә: «Әйҙә, ҡытый-ҡытый уйнайыҡ»,— тип, малайҙы ҡытыҡлай башланы, ти. Малай тулаған һайын нығыраҡ ҡыҫылды, ә шүрәле һаман ҡытыҡланы ла ҡытыҡланы, ҡытыҡланы ла ҡытыҡланы, ти. Ҡытыҡлай торғас, малайҙы тамам хәлдән тайҙырып үлтерҙе, ти.

Шул ваҡытта әнеһе янына элеп киткән ҡамсынан ҡан тама башланы, ти. Әнеһе быны күреү менән ҡамсыны алды ла ағаһына ярҙамға сапты, ти. Эҙләп йөрөй торғас, батшаға килеп етте, ти. Был малай шау ағаһы төҫлө, ағаһы ҙурлығында булған, ти. Батша ҡыҙы янына барып кергән икән, ҡыҙ уны үҙенең ире тип уйлап:

— Эй, бик оҙаҡ йөрөнөң, ни эшләп ул саҡлы йөрөнөң? — тип ҡаршы алды, ти.

Малай бер ни тип тә әйтмәгән, серҙе белер өсөн, ҡыҙ менән бергә тора башлаған.

Бер ваҡыт шулай еңгәһе менән уйнап ҡына ултыралар икән, тағы теге шүрәле ҡыҙы килде лә, быларҙы тағы мыҫҡыл итә башланы, ти. Малай, быға асыуланып, ҡамсыһын алды ла ҡыҙҙы ҡыуып алып китте, ти. Эй

баралар, ти, былар, эй баралар, ти, ҡыуышып бара торғас, әлеге ташлыҡҡа барып керҙеләр, ти. Таш араһында баҫтырышып йөрөгәндә, был малай таш араһына кереп ҡыҫылған булды, ти. Шуны ғына көткән шүрәле ҡыҙы борола һалып килде лә: «Әйҙә, ҡытый-ҡытый уйнайыҡ»,— тип, оҙон бармаҡтарын тарбаҡландырып һуҙғайны, малай ҡыҙҙы тотто ла алды, ти. Тотоп алды ла эй кереште, ти, ағай, быны ҡамсы менән ярырға! «Тап минең ағайымды! Тап! Тап!» — тип яра, ти. Ҡыҙ ни эшләргә белмәй һыуға төшһә, был да һыуға төшә, ҡыҙ утҡа керһә, малай ҙа утҡа керә, һис кенә лә ысҡындырмай, ти, тегене. Ҡыҙ сыҙай алмағас, ахыры килеп, быны ағаһын күрһәтте, ти. Ҡараһа — ағаһы ике таш араһында үлеп ята. Быны күрҙе лә малай: «Ағайымдың йәнен килтер, ағайымдың йәнен килтер!» — тип, шүрәле ҡыҙын ҡабаттан яра башланы, ти. Эй яра, ти, ағай, эй яра, ти, ҡыҙҙың арҡаһынан ҡара ҡандар аға, ти, хатта! Инде бер ҙә генә сыҙар әмәле ҡалмағас, шүрәле ҡыҙы быны ағаһының йәнен килтереп, өҫтөнә ҡуйҙы, ти. Ағаһы шунда уҡ һикереп торҙо ла шүрәле ҡыҙын һуғып та йыҡты, ти. Ҡыҙ тәгәрәп китеп, ташҡа бәрелеп үлде, ти.

Былар ағалы-энеле батша йортона ҡайттылар, ти, малай үҙ ҡатынын алып, энеһенә батшаның кесе ҡыҙын бирҙертте, ти. Былар шулай итеп, икеһе лә батша кейәүе булып, бик рәхәт тора башланылар, ти. Әле булһа шулай торалар, ти. Кисә барҙым, бөгөн ҡайттым, тфү-тфү, тфү-тфү.

## ҠАМЫР БАТЫР МЕНӘН УБЫРЛЫ ҠАРСЫҠ

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгәндәр, ти. Уларҙың бер балалары ла булмаған. Бабай һунарға йөрөгән, әбей йөн иләп, аш-һыу әҙерләп көн күргән. Әбей менән бабай бик ҡартайғандар.

— Әгәр беҙ үлеп китһәк, беҙҙең бер балабыҙ ҙа юҡ, ни эшләрбеҙ икән? — тип бик ҡайғырғандар. Берҙән-бер көндө бабай ҡайғыһын әбейгә әйткән. Әбей:

— Эй, ҡайғырма бабай! Бар, һунарыңда яҡшы ғына йөрөп ҡайт, мин һинең ҡайтыуыңа ул әҙерләп ҡуйырмын,— тигән. Бабай:

— Нисек әҙерләйһең уны, ҡайҙан алаһың? — тип аптырап һораған.

— Ярай, унда эшең булмаһын, бар, юлыңда бул,— тигән әбей.

Бабай, уҡ-һаҙағын алып, һунарға киткән. Әбей тиҙ генә ҡамыр баҫҡан. Ҡамырҙың бер аҙынан бер малай һүрәте яһаған да ҡыйыҡ башына киптерергә ултыртып ҡуйған. Бер аҙ ваҡыт үткәс, бабай һунарҙан ҡайтып килә икән, теге ҡамыр малай уны күргән дә:

— Әсәй, әсәй, ана атайым ҡайтып килә! — тип ҡысҡыра, ти.

Бабай ҡайтҡан, уллы булғанына бик ҡыуанған. Уға Ҡамыр батыр тип исем ҡушҡандар. Малай айлап түгел — көнләп, көнләп түгел — сәғәтләп үҫкән. Үҙе бик көслө булған. Малайҙар менән шар уйнағанда, шары малайҙарҙың аяғына тейһә, аяғын һындырған, өй мөйөшөнә тейһә, өйҙәң мөйөшөн емергән, ти. Халыҡ Ҡамыр батырҙың атаһына ялыу иткән. Халыҡ асыуынан ҡурҡып, атаһы, әйҙә, быны бүре ашаһын тип, урманға ебәргән.

— Улым, мин күптән бирле бер бүре балаһын ала алмай йөрөйөм, урманға барып, шуны алып кил әле,— тигән бабай.

Ҡамыр батыр урманға киткән. Инде бынан ҡотолдом, тип кенә ултырғанда, бабай урман яғынан бер көтөү бүреләрҙең килгәнен күреп ҡала. Ҡараһа, бүреләрҙең артынан сыбыртҡыһын шартлатып, улы килә, ти. Улы:

— Атай! Атай! Ҡапҡаны ас! Бүреләрҙе кертәм! — тип ҡысҡыра, ти. Шунан бүреләрҙе һарайға индереп бикләп ҡуйғайны, бүреләр, ҡасырға тырышып, кәртәҡураны емереп бөттөләр, ти. Атаһы:

— Бүреләреңде ҡайҙан алдың, шунда алып барып ҡуй,— ти.

Ҡамыр батыр бүреләрҙе урманға алып барып ташлай. Икенсе көндө уны атаһы, айыу ашамаҫмы икән тип, айыу балаһы алып ҡайтырға ебәрә. Күп тә үтмәй, Ҡамыр батыр, бер көтөү айыу алып ҡайтып, ҡураһына ябып ҡуя. Атаһы уларҙы ла урманға кире ебәртә. Инде ни эшләргә белмәй аптырағас, атаһы:

— Үҙең теләгән яҡҡа сығып кит, бында ҡайтып йөрөмә,— тип, Ҡамыр батырҙы өйөнән ҡыуып сығарып ебәрҙе, ти.

Эй китә Ҡамыр батыр, эй китә бер үҙе. Бара торғас, бер кешегә осрай.

— Һин бында бер үҙең ни эшләп йөрөйһөң? Әйҙә, икәү дуҫ булайыҡ,— тине, ти, Ҡамыр батыр.

— Мин Имән батыр булам,— ти теге кеше.

Былар танышып-дуҫлашып, ары бергә киттеләр, ти. Бара торғас, тағы бер кеше осраны, ти. Быныһы Тау батыр икән. Уның менән дә дуҫлашып, былар хәҙер өсәүләшеп китәләр. Бара торгас, алыҫта бер өй күрҙеләр, ти. Ҡамыр батыр:

— Әйҙәгеҙ, ошо өйгә инеп ял итеп алайыҡ,— ти.

Юлдаштары, риза булып, өйгә инеп йоҡларға ятalар. Былар йоҡлап китергә лә өлгөрмәйҙәр, өйгә өс матур ҡыҙ килеп инә. Ут яғалар, һыу килтерәләр. Аш-һыу әҙерләп, ашап-эсәләр ҙә, матур итеп кейенеп, йырлашып сығып китәләр. Икенсе көндө тағы ла шулай итәләр был ҡыҙҙар. Өсөнсө көндө ҡыҙҙарҙың өйгә килеп инеүҙәре була, егеттәр һикереп төшәләр ҙә ҡыҙҙарҙы тотоп алалар. Шул көндән алып бергә-бергә донъя көтә башлайҙар.

Бер көндө егеттәр һунарға китеү менән, өйгә бер убырлы ҡарсыҡ килә. Килә лә ҡыҙҙарҙан башын ҡарата. Башын ҡараған арала ҡыҙҙарҙың елек майын һура, ти, был. Ҡыҙҙарябыға башлайҙар. Батырҙар:

— Ниңәябығаһығыҙ? — тип һорайҙар икән. Ҡыҙҙар әйтмәйҙәр. Батырҙар, был ни булды икән тип, ҡарап ятмаҡсы булалар. Беренсе көндө Имән батыр ҡала. Тау батыр менән Ҡамыр батыр һунарға китеп күп тә тормай, убырлы ҡарсыҡ килеп инә лә башын ҡарата башлай. Ятып, ҡыҙҙарҙан башын ҡарата ла ҡайтып китә. Тау батыр менән Ҡамыр батыр һунарҙан ҡайталар. Имән батырҙан һорайҙар:

— Иә, ни күрҙең?

— Бер нәмә лә күрмәнем,— тип яуап бирә Имән батыр.

Икенсе көндө Тау батыр тороп ҡала. Ҡамыр батыр менән Имән батырҙың өйҙән сығып китеүе була, әлеге ҡарсыҡ килә. Ҡыҙҙарҙан башын ҡараткан булып, елек майҙарын һура ла ҡайтып китә. Тау батыр ҙа, Имән батыр кеүек, ҡурҡыуынан бер ни эшләй алмай.

Өсөнсө көндө Ҡамыр батыр үҙе ҡала. Убырлы ҡарсыҡ өйгә килеп инеп, башын ҡарата башлауы була, Ҡамыр батыр йәшеренеп торған урынынан сыға ла тегенең башын өҙә саба ла ҡуя.

— Бер башҡа мең баш килтерәм! — ти ҙә ҡарсыҡ, өҙөлгән башын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, сыға ла китә. Был ете башлы убырлы ҡарсыҡ икән. Ҡамыр батыр уның бер башын ғына өҙә сапҡан була.

Имән батыр менән Тау батыр һунарҙан әйләнеп ҡайтҡас, Ҡамыр батыр бөтә булған хәлде һөйләп бирә. Өс батыр, өс ҡатын мең баш гәскәргә ҡаршы уҡ әҙер-

ләй башлайҙар. Күп тә үтмәй, саң болото күтәреп, мең баш ғәскәр килә, ти. Атыш китә. Батырҙар ғәскәрҙе ҡырып бөтөрәләр. Икенсе көндө батырҙарға ҡаршы ике мең баш ғәскәр килә. Батырҙар ғәскәрҙе тағы ҡырып бөтөрәләр. Өсөнсө көндө өс мең баш ғәскәр килә. Бик оҙаҡ һуғыш була. Ғәскәр, был юлы батырҙарҙы еңеп, өс ҡыҙҙы алып китә. Батырҙар арып, хәлдән тайып, тороп ҡала.

Уйлай-уйлай торғас, батырҙар ғәскәрҙе ҡыуып сығып китмәксе булалар. Китәләр. Бара торғас, бер тау итәгенә барып етәләр. Тау итәгенән ер аҫтына бер тишек бар, ти. Батырҙар ошо тишектән ер аҫтына төшмәксе булалар. Имән батыр ҙа, Тау батыр ҙа төшмәгәс, Ҡамыр батыр үҙе төшөп китә. Иптәштәренә арҡанды тишектән тартып алмайынса, шунда көтөп торорға ҡуша. Ҡамыр батыр тау аҫтына төшһә, өсөһөнөң дә бисәһе шунда, ти.

— Нисек төштөң, батырым? Хәҙер үҙеңде дейеү ашай бит,— тиҙәр ҡатындар.

— Бына һеҙҙе ҡотҡарырға килдем, юлын өйрәтегеҙ,— ти Ҡамыр батыр.

— Беҙ бер хәйлә беләбеҙ: һин йәшенеп ятып тор, тиҙҙән дейеү ҡайтыр, уның бер генә балаһы бар. Беҙ уны илатырбыҙ, ҡалғанын үҙең ишетерһең,— тиҙәр ҙә ҡатындар Ҡамыр батырҙы йәшерәләр. Күп тә үтмәй, дейеү ҡайтып килә.

— Фу-фу, әҙәм еҫе килә, кем ул? Ҡайҙа, ашай һалайым,— ти дейеү.

— Үҙең әҙәм ашап килгәс, әҙәм еҫе сығыр инде ул, бында бер кеше лә юҡ,— тиҙәр ҡатындар. Дейеү йоҡларға ята. Ул өс көн, өс төн йоҡлар булған. Күп тә үтмәй, ҡатындар дейеү балаһын семтеп илаталар. Дейеү балаһының тауышына уяна ла:

— Ниңә илай? — тип һорай.

— Атайымдың йәне янына барғым килә тип илай бит,— тип яуап бирәләр ҡатындар. Дейеү әйтә:

— Аҙбарҙа алты өйөр йылҡы бар, шуларҙы сығарһын. Иң аҙаҡтан алты ҡолас бер бейә сығыр, шул бейәнең эсендә суйын һандыҡ бар, уның эсендә күгәрсен бар. Шул күгәрсендә минең йәнем. Барһын, улай булғас, шул бейәне күреп инһен,— ти.

Быны Ҡамыр батыр ишетеп ятты, ти. Тороп сыҡты ла һарайҙы асты, ти. Асҡайны, алты өйөр йылҡы сыҡты, иң аҙаҡтан алты ҡолас бейә сыҡты, ти. Ҡамыр батыр бейәне уртаға сабып ебәргән ине, эсенән бер суйын һандыҡ сыҡты, суйын һандыҡ эсенән күгәрсен

сыҡты, ти. Күгәрсен һауаға осоп та китте, теге дейеү мейес башынан йығылып та төштө, ти. Ҡамыр батыр, инә һалып, дейеүҙең баштарын тураҡлап та ташланы. Һәр башынан бик күп байлыҡ сыҡты, ти. Ҡамыр батыр байлыҡтарҙы, ҡатындарҙы үҙе төшкән тау тишегенә алып барҙы ла, арҡанға бәйләп, ер өҫтөнә сығарып бөттө, ти. Иң аҙаҡтан үҙе сығып килһә, Имән батыр менән Тау батыр арҡанды өҙҙөләр ҙә ҡуйҙылар, ти. Сыға алмағас, Ҡамыр батыр бер ҡалаға барҙы, ти. Бер әбей менән бабайға инеп, йоҡлап сыҡмаҡ булды, ти. Был ҡала халҡы һыуһыҙ интеккән була. Әбей менән бабай уны шишмәгә юл өйрәтеп һыуға ебәрә.

Ҡамыр батыр, ике ҡулына ике күнәк алып, шишмәгә килһә, шишмәне аждаһа уратып алған да быны йоторға итә, ти. Ҡамыр батыр ҡылысы менән аждаһаның башын сабып өҙә лә, ике күнәген тултырып, һыу алып ҡайта. Юлда осраған кешеләргә:

— Мин аждаһаны үлтерҙем, һыу барып алығыҙ! — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра ҡайтты, ти. Әбей менән бабай бик ҡыуандылар, ти.

— Нимә кәрәк, шуны бирәбеҙ,— тип әйттеләр, ти.

— Миңә яҡты донъя кәрәк, башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй,— тип әйтте, ти, батыр.

— Фәлән ерҙә бер тишек бар, тишек янында бер ҡош һайрай, шуның тауышына бар,— тип, әбей менән бабай Ҡамыр батырға юл өйрәтеп ҡалдылар, ти.

Ҡамыр батыр шунда барып етһә, ағас башында ике ҡош балаһы сырылдай, ти. Ниңә сырылдайҙар икән тип ҡараһа, ағас башына бер йылан менеп бара. Ҡамыр батыр йыланды ҡылысы менән тураҡлап ташлай. Ҡош балалары егетте ояларына индереп йәшереп ҡуялар. Күп тә үтмәй, әсәләре ҡайта. Ул әҙәм ашаусы Сәмреғош була.

— Фу-фу, әҙәм еҫе килә! — ти Сәмреғош.

— Ана, ерҙе ҡара ла, һин ул әҙәмгә теймә, йәме, әсәй,— тиҙәр себештәр. Сәмреғоштоң һүҙен алып, Ҡамыр батырҙы күрһәтәләр.

Сәмреғоштоң балаларын йыл да ошо йылан ашап тора торған булған, ти. Йыландың үлтерелеүенә Сәмреғош бик ҡыуанған, ти.

— Һин бында нисек килеп сыҡтың? Хеҙмәтең өсөн һиңә нимә кәрәк? — тип һораған Сәмреғош.

Ҡамыр батыр үҙенең хәлдәрен һөйләп биргән.

— Улай булһа, һин миңә ҡырҡ бер сыйырсыҡ, ҡырҡ бер сүмес һыу әҙерлә,— тип әйтте, ти, Сәмреғош.

Ҡамыр батыр ҡырҡ бер сыйырсыҡ, ҡырҡ бер сүмес

һыу әҙерләне, ти. Сәмреғош, батырҙы өҫтөнә ултыртып, тишектән өҫкә сыға башланы, ти. Ҡамыр батыр Сәмреғошҡа, бер яҡҡа башын борһа, сыйырсыҡ ҡаптыра, икенсе яҡҡа борһа, бер ҡалаҡ һыу эсерә, ти. Сығып етер саҡта ғына, бер сыйырсыҡ етмәне, ти. Ҡамыр батыр, бот итен киҫеп алып, Сәмреғошҡа ҡаптырҙы, ти. Ер өҫтөнә сыҡҡас, Сәмреғош:

— Иң һуңғы ҡаптырған сыйырсығың бик тәмле булды, ул ниндәй сыйырсыҡ ине? — тип һорай. Ҡамыр батыр ботон күрһәтә. Сәмреғош ҡанаты менән бер елпенгәйне, Ҡамыр батырҙың яраһы төҙәлде, ти. Шунан Ҡамыр батыр иптәштәрен ҡыуып китте, ти. Иптәштәрен ҡыуып еткәс, тегеләр:

— Арҡан өҙөлөп китте бит,— тигән булдылар, ти.

— Шулайҙыр шул... — тине лә Ҡамыр батыр, хәҙер былар бергәләп киттеләр, ти. Бара биргәс, ял итеп алмаҡсы булып, бер урында туҡтағайнылар, Ҡамыр батыр:

— Әйҙәгеҙ, бутҡа бешерәйек,— тип әйтте, ти.

— Бутҡа бешкәс, уны кем ашай? — тип һоранылар, ти, тегеләр.

— Уҡтарыбыҙҙы һауаға атайыҡ: кемдең уғы бутҡаға төшә, бутҡаны шул ашар,— тине, ти, Ҡамыр батыр.

Уҡтарын һауаға атҡайнылар, Тау батырҙың уғы менән Имән батырҙың уғы үҙҙәренең тап маңлайҙарына килеп төштө, ә Ҡамыр батырҙың уғы бутҡаның ҡап уртаһына килеп төштө, ти. Тау батыр менән Имән батырҙың әйткән вәғәҙәләре, ана шулай, үҙ баштарына төшөп, улар үлеп ҡалды, ә Ҡамыр батыр рәхәтләнеп бутҡаны ашаны, ти. Әле лә теге өс ҡатын менән донъя көтә, ти.

## БҮРЕ УЛЫ СЫНТИМЕР БӘҺЛЕҮӘН

Борон-борон заманда бер шәһәрҙә булған, ти, бер батша. Быһың балалары күп булмайынса, ун еге йәшлек бик матур бер ҡыҙы ғына бар ине, ти. Был ҡыҙ баҡсаларға сығып, иркәләнеп кенә ял итеп йөрөй торған булған, ти.

Көндәрҙән бер көндө, үҙенең аҫрауы менән баҡсала йөрөгән ваҡытта, былар янына һикереп кенә бүре керҙе лә, батша ҡыҙын елкәһенә һалып, алып сыҡты ла китте, аҫрау илап торҙо ла ҡалды, ти. Бүре, күҙ асып йомғансы, ҡыҙҙы бер тау янына еткерҙе, ти. Шул

урында бүре бер һелкенгәйне, ҡыҙҙың үҙенән дә матурыраҡ бер егеткә әйләнде, ти.

Егет менән ҡыҙ бер һуҡмаҡ менән киттеләр, ти. Бик оҙаҡ ҡына барғас, бер тау тишегенә барып еттеләр, ти. Тау тишеге, өс ҡат өй бейеклеге бер таш менән баҫтырылып ҡуйылған, ти. Егет килеп тибеп ебәргәйне, таш, үрле-ҡырлы килеп, егерме аҙым* саҡлы ер тәгәрәп китте, ти. Күк күкрәгәндәге кеүек, бөтә тау буйҙары яңғырап торҙо, ти. Ҡыҙ был эште күргәс, шаҡ ҡатып ҡалды, ти. Шунан бүре ҡыҙҙы шул тишектән алып кереп китте, ти. Тауҙың эсе ҡыуыш икән. Шул ҡыуышта бүре-егеттең әйберҙәре тора икән. Ҡыҙ, тау тишегенә кереп, ундағы йыһаздарҙы күргәс, аптырап ҡалды, ти. Был ҡәҙәре йыһаз үҙенең атаһы — батшала ла юҡ икән, ти. Бындағы йыһаздарҙы тел менән һөйләп бөтөрөрлөк түгел, ти. Тоҙ һауыты, шырпы һауыттарына ҡәҙәр алтындан да көмөштән, ти. Шул кергән өйҙә былар, һис сыҡмай, бер аҙна торҙолар, ти. Гел бергә ашап, бергә эсеп, бергә ятып, бергә тороп, бер-беренә өйрәнеп тә бөттөләр, ти. Бер аҙнанан һуң бүре-егет ҡыҙҙы ошонда ҡалдырып, үҙе һунарға сығырға булды, ти. Ҡыҙ яңғыҙ ҡалырға теләмәйенсә, бик күп илап ҡараһа ла, егет барыбер туҡтаманы, ти.

— Мин биш айҙан ҡайтмаһам, үлгән тип белерһең,— тип китте, ти. Был һүҙ ҡыҙға тағы ла ауырыраҡ тойолдо, ти.

Бүре-егет сыҡты ла, ти, әлеге өй ҙурлығы таш менән мәмерйәне ҡапланы ла, өҫтөнән өс өлөш ҙурыраҡ тағы бер таш менән баҫтырып ҡуйҙы, ти. Ҡыҙ был эште күргәс иларға кереште, ти, инде ағай, ер һелкетеп иланы-иланы ла, бөтөнләй хәле бөтөп, йоҡлап китте, ти. Шул йоҡлауынан уянмай өс көн ятты, ти. Өс көндән һуң тороп, арлы-бирле йөрөп, ҡарана башланы, ти. Тау тишегенең бер ерен ҡалдырмай ҡарап бөтөрҙө, һис бер урындан сығыр әмәл тапманы, ти. Ахырында аптырап, кире мәмерйә ауыҙына килеп ҡараны, ти. Бында ла ҡыҫылып сығырлыҡ та юлы күренмәгәс, кире эскә кереп, бик оҙаҡ ваҡыт торҙо, ти.

Бер-ике ай уҙғас, ҡыҙҙың ауыры барлығы һиҙелә башланы, ти. Бер көндө мәмерйә ауыҙына килде лә ҡаплап ҡуйылған ташҡа асыу менән бик ҡаты типте.

---

* Егерме аҙым — экиәт гиперболаһы өсөн бик бәләкәй һан. Артабан «күк күкрәгәндәге кеүек, бөтә тау буйҙары яңғырап торҙо, ти» тигән һөйләмгә ҡарағанда, гипербола күпкә ҙурыраҡ булырға тейеш, әлбиттә.

Таш үрле-ҡырлы килеп, сөйөлөп китте лә кире урынына ултырҙы, ти. Ҡыҙ яңынан асыу менән нығытып типкәйне, таштар, парса-парса булып, сөйөлөп төштөләр, ти. Шунан ҡыҙ тишектән сығып китте, ти.

Эй бара, эй бара, ти, ҡыҙ, бара торғас, бер бик матур сиҙәмлеккә барып сыҡты, ти. Бик арып-алйып килеп етте лә шул сиҙәмлеккә ятып йоҡланы, ти. Шул йоҡоһонан бер аҙна буйы уяна алманы, ти. Йоҡоһонан торғас, төрлө еләк-емештәр ашап, тамағын туйҙырҙы ла, бер һуҡмаҡ күреп ҡалып, шул һуҡмаҡ менән өс аҙна барғандан һуң, бер өйгә барып сыҡты, ти. Был өй урман ҡарауылсыһының өйө икән, ти. Ҡыҙ өйгә кереп, ҡарт менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашты, ти. Ҡарт был ҡыҙҙы бик яратты, ти. Быны бик оҙаҡ ҡунаҡ иткәндән һуң, бер арбаға биш ат егеп, ҡыҙҙы түргә ултыртып, батшаға алып китте, ти.

Был батша ҡырҡ йәштәрҙә генә бер кеше икән. Ҡыҙҙы күргәс тә ғашиҡ булды ла уны үҙенә йәриә итеп алды, ти. Батшаның бынан башҡа ла йәриәләре бар ине, ти. Был ҡыҙ бик матур булғанға күрә, батшаның теге йәриәләре унан көнләшеп, төрлө яфалар күрһәтә башланылар, ти. Шулай ҙа ҡыҙ теш ҡыҫып түҙҙе, тегеләр менән һис асыуланышманы, гел үҙ эшендә булды, ти. Шулай тора торғас, ҡыҙҙың бүренән булған балаһы ла тыуҙы, ти. Ул балаға Сынтимер тип исем ҡуштылар, ти. Бала тыуғас, теге йәриәләрҙең көнсөлөгө артып, ҡыҙҙы бигерәк ныҡ яфалай башланылар, ти.

Сынтимер, йыл үҫәһен бер айҙа, ай үҫәһен бер аҙнала үҫеп, тиҙ арала ҙурайып та китте, ти. Бер йәш тулғанда бик батыр булып, урамдағы балаларҙы ҡырып йөрөтә башланы, ти. Ә ун ике йәшенә еткәндә, урамда кем генә ҡаршы килмәһен, шуны һуға ла үлтерә, ти. Бынан яфа сиккән ҡала халҡы, бер көндө йыйылышып, батшаның үҙенә килде, Сынтимерҙе ҡайҙа булһа ла берәй сит ергә илтеп олаҡтырырға үтенде, ти. Батша Сынтимерҙең батырлығынан ҡурҡып, үҙе лә бик йөҙәп бөткәнгә күрә, олаҡтырырға тиҙ күнде, ти. Шунан үҙ-ара кәңәшләшеп, алты арбаға алты үгеҙ ектеләр ҙә, утын алып ҡайтырға тигән булып, егетте айыу күп булған бер урманға ебәрҙеләр, ти.

Сынтимер үгеҙҙәр менән саба-саба урманға барып керҙе, ти. Урманға барып кергәс тә, үгеҙҙәрҙе туғарып, бер аҡланға ебәрҙе, үҙе ағас киҫергә кереште, ти. Ағастарҙы ул йүнләп киҫеп тә тормай, төбө-тамыры менән тарта ла сығара, тарта ла сығара, ти. Шулай итә торғас, бөтә урманды бөтөрә яҙҙы, ти. Шунан һуң Сынти-

мер, бик йыуан керәштәрҙе ботамай-нитмәй арбаһына тейәне, ти. Инде үгеҙҙәрҙе егергә тип, аҡланға барып ҡараһа, Сынтимер ни күҙе менән күрһен,— аҡлан тулы айыу, үгеҙҙәрҙе ашап бөтөргәндәр. Үгеҙҙәрҙең тиреһе генә ҡалған ти. Был эшкә Сынтимер күп ҡарап торманы, тиҙ генә айыуҙар эргәһенә килде лә, ҡолаҡтарынан һөйрәп килтереп, алты арбаға алты айыуҙы екте, ти. Шунан һуң, айыуҙарҙы һуҡтыра-һуҡтыра ер олотоп, саптырып ҡайтып китте, ти. Шәһәр халҡы, Сынтимерҙең ҡайтып килгәнен күргәс, айыуҙарҙан ҡурҡып, ҡайһыһы ҡысҡыра, ҡайһыһы илай, ҡайһыһы абына-йығыла йүгерә, ҡаса башланылар, ти. Сынтимер айыуҙар менән урамға килеп кергәс, арҡылы-торҡоло һалынған ағастарҙың ботаҡтары урамға һыймай, өйҙәрҙе ҡырып бөтөрҙө, ти. Батшаның ҡапҡаһына һыймайынса, уның ҡапҡаһын да әйләндереп төшөрҙө, ти. Шулай итеп, дөбөр-шатыр килеп, айыуҙары аҡырып, батшаның ишек алдына килеп туҡтанылар, ти. Сынтимерҙе, әсәһенән башҡа, ҡаршыларға сығыусы ла булманы, ти. Барыһы ла ҡасып бөткән ине, ти. Айыуҙарҙы күреп, әсәһе лә шаҡ ҡатып ҡалды, ти. Был эштең төбөнә төшөнөп, батша янына керҙе лә:

— Алай минең улымды күпһенһәң, үҙем дә китәм, беҙҙе ебәр,— тип, бик ҡаты үпкәләй башланы, ти.

— Юҡ, йәриәм, бынан ары ундай эш һис булмаҫ, зинһар, ул айыуҙарын бынан оҙата күрһен, улыңа сығып әйтә күр,— тип, хәҙер батша үҙе ялына, ти. Бынан һуң ундай эш ҡылмаҫҡа ант итеп вәғәҙә бирҙе, ти. Сынтимер бер кешегә лә зыян тейҙермәй, айыуҙарҙы туғарып, әлеге урманға оҙатып ебәрҙе, ти.

Сынтимер ун биш йәшенә еткәнсе, тыныс ҡына торҙолар, ти. Шулай булһа ла батша һаман Сынтимерҙе берәй ергә ебәреп олаҡтырыу уйында ине әле, ти. Бер көндө батша шул уй менән Сынтимерҙе саҡыртып алды ла:

— Йә, улым, инде буйың-һының етте, сәфәр сығып, әҙерәк донъя күрергә кәрәк. Юғиһә бер нәмә лә күрмәй өйҙә ятаһың. Ана үҙеңә бер ат һайлап ал да, сит ерҙәрҙә йөрөп ҡайт,— тине, ти. Сынтимер, риза булып, ат һайларға аҙбарға сығып китте, ти.

Сынтимер аттарҙың биленә ҡулын һалып ҡарай,— аттар бер ҙә сыҙай алмай, бөгөлә лә төшә, ти. Шулай итеп, Сынтимер бар атҡа ла ҡулын һалып ҡарағайны, береһе лә күтәрә алманы, ҡайһыһы билһеҙ, ҡайһыһы аяҡһыҙ булып үлделәр, ти. Иҫән ҡалғандары ла бой-

роҡһоҙ булып ҡалдылар, ти. Батша был эте күргәс, Сынтимерҙе тиҙ генә саҡырып алды ла:

— Һин бик батыр булырһың, ахыры, һиңә минең аттарым сыҙаманы,— ти.— Һиңә Ҡаман диңгеҙендә Ҡаман утрауындағы ҡара айғыр ғына сыҙаһа сыҙар. Һин шуны эҙләп алып ҡайт,— тине, ти. Сынтимер был һүҙҙе ишеткәс, ҡара айғырға бик ҡыҙығып, нисек булһа ла шуны эҙләп тапмаҡсы булды, күңеленә беркетеп ҡуйҙы, ти. Бер кәмә, бер арҡан алып юлға сығып китте, ти.

Сынтимер эй китте, ти, эй китте, ти, ағай, бара-бара әллә ниндәй урмандар, әллә ниндәй йылғалар аша үтте, ти. Бер урманда үҙенә туҡһан батманлы суҡмар яһап алды, ти. Һаман бара, ти, һаман бара, ти. Бара торғас, һис әҙәм үтә алмаҫлыҡ бер ҡара урманға барып етте, ти. Килһә, бында бик дәү бер кеше, урманды киҫеп, бар бүрәнәне бер юлы килтереп, бер юлы әллә нисә бура яһап, шул бураларҙы бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөй, ти. Сынтимер быны күреп хайран ҡалды, ти. Шунан һуң, батыр менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашып таныштылар, ти. Был — Бура батыр икән. Бергә-бергә ашарға әҙерләп, тамаҡтарын туйҙырҙылар, ти. Ләкин эсергә һыу тапманылар, ти. Тамаҡтары кибеп, бик һыуһағас, Бура батырҙың балтаһы менән сабып, ҡайын һыуы эстеләр, ти. Шулай ашап-эсеп тамаҡ туйҙырғас, бер кешенән ике кеше яҡшы булыр тип, Бура батырҙың балтаһын да алып, икеһе бергә киттеләр, ти.

Былар эй баралар, эй баралар, ти, бара торғас, тағы әллә ниндәй урман, әллә ниндәй йылғалар аша үттеләр, ти. Шулай бара торғас, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән бик бейек тауҙар араһына барып керҙеләр, ти. Шунда тағы ла бер бик дәү кеше йөрөгәнен күрҙеләр, ти. Ул кеше ҡулына бик йыуан, оҙон бер лом тотҡан да, шул ломы менән тауҙарҙы ҡуптарып алып, бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөй, ти. Был кеше Тау батыр икән. Сынтимер менән Бура батыр Тау батыр янына килеп күрештеләр, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып таныштылар, ти. Былар тағы бергәләшеп тамаҡ туйҙырҙылар ҙа, өсәү йөрөһәк, күңеллерәк булыр тип, артабан өсәүләп киттеләр, ти.

Эй киттеләр, эй киттеләр, ти, былар, бара-бара тағы әллә ниндәй урман, әллә ниндәй йылға, әллә ниндәй әҙәм сыға алмаҫлыҡ тауҙарға осранылар, ти. Үтә алмаҫлыҡ ҡалын урманға етһәләр, Бура батыр, урманды киҫеп, юл асты; менә алмаҫлыҡ ҡая тауға килеп сыҡ-

һалар, ул тауҙы ломы менән ҡуптарып, Тау батыр икенсе урынға күсереп ултыртты; тәрән һыуға килеп төртөлһәләр, Сынтимерҙең кәмәһенә ултырып сыҡтылар, ти. Шулай бара торғас, былар бик күп ерҙәр үттеләр, быларҙың аҙыҡтары ла бөттө, ти. Күп ваҡыт ағас ҡайыры ашап, ағас тәсөгәне эсеп, һаман бара торғас, инде арый ҙа башланылар, ти, ә Ҡаман утрауы һаман юҡ та юҡ, ти. Шунан былар үҙ-ара кәңәшләштеләр ҙә, Сынтимер туҡһан батман суҡмарын, Бура батыр балтаһын, Тау батыр ломын ырғытып, кемдең ҡоралы йырағыраҡ төшһә, ҡорал эйәһен баш итеп, шунда торорға булдылар, ти. Өсөһө лә ырғытҡас, шул яҡҡа ҡарап киттеләр, ти. Ун көн барғас, Бура батырҙың балтаһын таптылар, ти. Быны алып, өс көн барғас, Тау батырҙың ломын таптылар, ти. Ломды алып, бер ай барғас, Сынтимерҙең суҡмарына барып еттеләр, ти. Ошо ерҙә бер көтөү үгеҙ йөрөй, шунан йыраҡ та түгел, балсыҡ өй тора, ти. Суҡмарҙы алдылар ҙа: «Беҙгә әҙер өй ҙә бар әле бында»,— тип, теге өйгә барып керҙеләр, ти. Шунан Сынтимер баш булып, Бура батырға бер үгеҙҙе һуйып, аш бешереп торорға ҡушты ла, үҙе Тау батыр менән һунарға сығып китте, ти.

Бура батыр бер үгеҙҙе тотоп һуйып, аш һалған ине, ти, өй хужаһы — үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бер ҡарт ҡайтып керҙе, ти. Был һис сәләм-фәлән биреп тормайынса, түр башына менде лә ултырҙы, ти. Аш бешеп еткәс тә, Бура батырҙан аш һораны, ти. Бура батыр ҡартҡа асыу менән генә ҡараны ла, ти, аш бирмәне, ти. Ҡарт Бура батырҙың бирмәүенә ҡарап торманы, ти, ҡаҙан янына килде лә, ашты ашап бөтөрөп, кире түр башына менеп ултырҙы, ти. Бура батыр бер һүҙ ҙә әйтә алмай ҡалды, ә ҡарт түр башында:

— Бына рәхмәт, егет! Бир ҡулыңды, бынан һуң дуҫ булырбыҙ,— тип, Бура батырҙың ҡулын һорап ултыра, ти. Бура батыр, уны-быны уйламай ҡулын һуҙғайны, ти, ҡарт Бура батырҙың баш бармағын киҫеп алды ла сығып тайҙы, ә Бура батыр бармаҡһыҙ ҙа, ашһыҙ ҙа торҙо ла ҡалды, ти. Был эшкә бик аптырап торҙо-торҙо ла, ти, тиҙ генә тағы бер үгеҙҙе һуя һалып, яңынан ҡаҙан тултырып аш һалды, ти. Аш ҡайнап сыҡманы, Сынтимерҙәр ҡайтып еттеләр, ти. Аш өлгөрмәгәнгә кәйефтәре ҡырылһа ла, иптәштәренең бармаҡһыҙ йөрөгәнен күреп, һораша башланылар, ти. Бура батыр ни булғанын йәшермәне, барыһын да һөйләп бирҙе, ти.

Был хәлде белгәс, Сынтимер икенсе көн үҙе ҡалып,

Бура батыр менән Тау батырҙы һунарға ебәрҙе, ти. Сынтимер бер үгеҙҙе һуйып, өйҙөң ишеген элеп кенә ултырған ине, ти, берәү тыштан:

— Ас! — тип ҡысҡырып, ишекте ҡаға башланы, ти. Сынтимер ултырған көйгә генә:

— Беҙгә килгән ҡунаҡ ишекте үҙе асып керә! — тип ҡысҡырҙы, ти.

Шул арала булмай, шарт итеп ишек асылды ла, ти, теге ҡарт килеп керҙе, ти. Ҡарт, кергәс, Сынтимергә:

— Мине түргә мендереп ултырт! — тип ҡысҡырҙы, ти. Сынтимер:

— Беҙҙә ҡунаҡ үҙе менеп ултыра,— тип кенә яуап бирҙе, ти.

Ҡарт, һуҡрана-һуҡрана, үҙе менеп ултырҙы, ти. Ҡарт Сынтимергә:

— Йә, улым, күрешәйек, бир ҡулыңды,— тип, Сынтимергә ҡулын һуҙҙы, ти. Сынтимер был эштең нисек булырын һиҙеп алды ла, ти, ҡулын бирмәне, ти. Ҡарт аш һорап ҡараны,— Сынтимер аш та бирмәне, ти. Ҡарт ҡаҙанға үҙе үрелә башлағайны, Сынтимер ҡарттың һаҡалынан шыйырып тотоп алды ла, ти, бер бик ныҡ ырғаҡҡа бәйләп ҡуйҙы, ти. Үҙе ишекте тыштан бикләне, ти. Шунан йыраҡ түгел бер ауылға барып, шул ауылдың мәсетенән саламат (киндерҙән үрелгән ҡамсы) алып килде, ти. Өйгә кереп, ҡартты сисеп алды ла, эй кереште, ти, саламат менән ярырға! Ярҙы, ярҙы ла, ти, тышҡа алып сығып китте, ти. Тышҡа сыҡҡас, һаҡалынан тотоп, бер-нисә мәртәбә ергә күтәреп бәрҙе лә, шунда үҫеп ултырған ике ҡолас йыуанлығы имәнгә һаҡалынан бәйләп ҡуйҙы, ти.

Сынтимер өйгә керһә, ашы бешкән, шунан күп тә тормаған, иптәштәре лә ҡайтып еткәндәр. Бергәләп ултырып ашты ашап, тамаҡтарын туйҙырҙылар, ти. Ашағанда Сынтимер ҡарт менән булған хәлде берәм-берәм һөйләп бирҙе, ти. Ашап туйғас, Бура батыр менән Тау батыр теге ҡартты ҡарарға сыҡһалар, ҡарттан елдәр иҫкән: һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш юҡ, теге ике ҡолас йыуанлығы имән дә юҡ, ти. Ағастың һөйрәлеп киткән эҙҙәре генә бар, ти. Теге ҡарт, һаҡалын өҙә алмағас, ағасты төбө-тамыры менән йолҡоп, һөйрәтеп алған да киткән, ти!

Сынтимерҙәр бер аҙ иҫәпләшеп торҙолар ҙа, ти, үҙ әйберҙәрен алып, ағас эҙе менән теге ҡартты ҡыуып киттеләр, ти. Былар бик оҙаҡ барғас, теге ағасҡа барып еттеләр, ти. Ҡарттың һаҡалы өҙөлгән дә, ағас төшөп ҡалған икән. Батырҙар бында туҡтап ҡалмағандар, ары

киткәндәр. Бара торғас, бер тау тишегенә барып еткәндәр. Тишек ауыҙында ҡарттың бер аҙ һаҡалы ҡойолоп ҡалған, ти. Шуға ҡарап ҡарттың ошонда икәнен белделәр, ти. Был соҡорҙоң тәрәнлеген беләһеләре килеп, бик оҙон бер ҡолға тығып ҡарағайнылар, ҡолға үҙе генә етмәне, Сынтимерҙең арҡанын ялғап төшөрҙөләр, ти. Соҡорҙоң тәрәнлеге нәҡ шул арҡан буйы булды, ти. Кемгә төшөргә тип, шыбаға тотҡайнылар, шыбаға Сынтимергә сыҡты, ти.

Сынтимер арҡанға тотоноп, төшөп китте, ти. Төшөп еткәс тә бер һуҡмаҡ күрә. Шул һуҡмаҡ менән бер аҙ барғас, бер өйгә тап булды, ти. Уны-быны ҡарап торманы, өйгә инеп китте, ти. Керһә, береһенән-береһе матур өс ҡыҙ кәрт уйнап ултыра, ти. Ҡыҙҙарҙың береһе бигерәк тә сибәр, ти. Ят егет килеп кергәс, ҡыҙҙар уйындарын туҡтатып, Сынтимергә аш урыны әҙерләй башланылар, ти. Ҡыҙҙар ашарға әҙерләгән арала, Сынтимер шым ғына ултыра ине, өйҙөң төпкө бүлмәһенән бер ыңғырашҡан тауыш ишетелеп ҡалды, ти. Яйын килтереп, барып ҡараһа, бүлмә эсендә теге ҡарт ыңғырашып ята, ти. Ҡыҙҙар Сынтимерҙе ашатып-эсереп, тамағын туйҙырғас, үҙҙәре менән уйнарға саҡырҙылар:

— Кем отолһа, шуның ҡул-аяғын бәйләп ҡуйырбыҙ,— тип, уйындың шартын әйттеләр, ти.

Сынтимер риза булғайны, теге матурыраҡ ҡыҙҙың йөҙҙәре ҡара янып китте, ти. Был ҡыҙ үҙе лә ер йөҙөнән төшкән Гөлтамсы исемле бер ҡыҙ икән. Теге икеһе — ҡарттың үҙенең ҡыҙҙары, ти.

Кәрт уйнай башлағайнылар, теге ҡыҙҙар юрый отолған булдылар. Сынтимер уларҙың ҡул-аяҡтарын бәйләп ҡуйҙы ла, бер аҙ торғас сисеп тағы уйнарға тотондолар. Быға Гөлтамсы бик борсолоп ултыра, ти. Сынтимер бер ҙә бошонмай: «Ҡартты үлтереү — һабан туйы»,— тип кенә уйлап ултыра, ти.

Был юлы теге ҡыҙҙар отто, ти. Сынтимерҙең аяҡ-ҡулдарын ҡыл арҡан менән бәйләп ҡуйҙылар ҙа, үҙҙәре теге ҡарт ятҡан бүлмәгә инеп киттеләр, ти. Сынтимер ҡул-аяғын тартҡылап ҡарарға ла өлгөрмәне, Гөлтамсы ишек башындағы ҡылысты алды ла, егетте сырмаған ҡыл арҡанды киҫеп, ҡылысты Сынтимергә биреп ҡуйҙы, ти. Ҡарт быны белмәйенсә, егетте быуып үлтерәм тип сыҡҡайны, Сынтимер ҡарттың башын сапты ла өҙҙө, ти. Шунан бар малдарҙы тейәп, өс ҡыҙҙы ла алып, тишек ауыҙына килде. Тишек ауыҙына килгәс, иң элек алтын-көмөш кеүек нәмәләрҙе

арҡанға бәйләп, Бура батыр менән Тау батырға тартырға ҡушты. Тегеләр арҡанды тартып, бар әйберҙәрҙе сығарып бөтөрҙөләр, ти. Әйберҙәрҙе сығарып бөтөргәс, ҡарттың оло ҡыҙын Бура батырға тип, ә кесе ҡыҙҙы Тау батырға тип сығарҙы, ти. Гөлтамсыны: «Быныһы үҙемә!» — тип ҡысҡырҙы, ти. Иң һуңынан арҡанға үҙе йәбешеп сығып килә ине, сығып еттем, тигәндә генә, Бура батыр менән Тау батыр, Гөлтамсыны үҙҙәренә алыр өсөн, арҡанды киҫтеләр ҙә, Сынтимер кире төштө лә китте, ти. Үҙҙәре бөтә әйберҙәрҙе, ҡыҙҙарҙы алып киттеләр, ти.

Сынтимер соҡор төбөнә йығылып төшкәс, бик оҙаҡ иҫһеҙ булып ятты. Тороп, арҡаны менән үҙенең кәмәһен алып, яңынан теге өйгә барҙы, яңынан тамағын туйҙырҙы, теге ҡылысты ла алды, тағы эскәрәк китте, ти.

Сынтимер, шулай бер аҙ барғас, бер диңгеҙ буйына килеп сыҡты. Килеп етһә, яр башында — бағана, бағана төбөндә бер ҡыҙ ултыра. Ҡыҙ быға ҡысҡыра:

— Кит, егет, килмә бында! Кит тиҙерәк, әтеүһә харап булаһың! — ти.

Сынтимер ҡыҙҙың ҡысҡырыуына ҡарамай килһә, бағанаға шундай яҙыу ҡаҙаҡланған, ти:

«Был һыу Ҡаман диңгеҙе була. Был диңгеҙ ҡырына һис әҙәм килә күрмәһен: диңгеҙҙә ете башлы аждаһа бар, яҡын килгән кешене шул аждаһа йота».

Сынтимер яҙыуҙы уҡып сыҡты ла: «Был мин эҙләгән диңгеҙ була ла баһаң»,— тип уйлап ҡуйҙы, шунан теге ҡыҙға өндәште, ти:

— Һин ни эшләп бында тораһың? Кем һин, кем ҡыҙы? — тип һорашты, ти.

— Мин — батша ҡыҙы. Беҙҙең шәһәр ошо Ҡаман диңгеҙендә йәшәгән аждаһаға аҙна һайын бер ҡыҙҙы ҡорбан итә. Бөгөн минең сират,— тип, ҡыҙ илап ебәрҙе, ти.

Батша ҡыҙы илай-илай үҙ хәлен һөйләп торған арала, диңгеҙ ике яҡҡа ярылып китте лә, ете башлы аждаһаның йөҙөп килгәне күренде, ти.

— Кит! Кит тиҙерәк, егет! Ана аждаһа килә, харап булаһың бит минең менән бергә! — тип, ҡыҙ үкһеп-үкһеп ялына башлағанға Сынтимер артына әйләнеп ҡараһа, ете башын алға һоноп, аждаһа килә, ти, ағай, ике яҡҡа өй дәүмәллек тулҡындар тәгәрәй, ти! Ҡулына ҡылысын алып әйләнә һалды ла, егет аждаһаға ҡаршы китте. Ҡыҙ туҡтатырға итә, ә Сынтимер, һис нигә ҡарамай, ҡылысын болғап бара ла бара. Ҡылыслы егетте күреп, аждаһа ғәйрәтләнә, ете ауыҙынан әҫе

тынын бөркөп, диңгеҙ өҫтөндә өйөрмә уйната, ти. Тартып алып егетте йотам тигәндә, Сынтимер быныҡ дүрт башын бер юлы сапты ла өҙҙө, ти. Аждаһа иҫенә килергә лә өлгөрмәне, Сынтимер ҡылысын күтәреп, ҡалған баштарын да сабып төшөрҙө, ти. Шул ыңғайҙан аждаһаны тураҡлап бөтөрҙө лә, ете башынан ун дүрт ҡолағын киҫеп алып, ҡыҙ янына килде, ти. Ҡыҙҙың йөҙөгөн алып, үҙенең бармағына кейҙе; ҡулъяулығын алып, теге ҡолаҡтарҙы төйнәп, кеҫәһенә һалды, ҡыҙға ҡайтып китергә ҡушты, ти. Ә ҡыҙ:

— Юҡ, мин ҡайтмайым, мин үҙеңә барам,— тип тик тора, ти. Сынтимер:

— Юҡ, минең бараһы ерем бар, һин өйгә ҡайт, кем ҡотҡарғанды атайыңа һөйлә,— тине, ти.

Ҡыҙ ҡайтып киткәс, үҙе диңгеҙ янына килде лә, арҡаһынан кәмәһен төшөрөп, кәмә менән диңгеҙ эсенә Ҡаман утрауына табан кереп китте, ти. Был хәлде батшаның бер вәзире ситтән генә ҡарап торған икән. Сынтимерҙең киткәнен күргәс тә, теге вәзир батшаға йүгереп ҡайтты ла:

— Ҡыҙыңды мин ҡотҡарҙым,— тип, батшаны ышандырҙы, ти. Батша быға бик күп алтын бирҙе, ике айҙан һуң, йәше кергәс тә, ҡыҙын да бирмәксе булды, ти.

Сынтимер кәмә менән диңгеҙ эсенә кереп китте, ти, ағай, эй бара, ти, эй бара, ти. Ай ярымдан артығыраҡ барғас, бер утрау күренә башланы, ти. Был утрау — шул Ҡаман утрауы икән. Утрауға йөҙ аҙымдар ҡалғас, утрауҙа бер ҡара айғыр ашап йөрөгәне күренде, ти. Сынтимер, айғырҙы күргәс, арҡанынан ҡороҡ яһап, ҡара айғырҙың муйынына ырғытты, ҡороҡ ҡара айғырҙың муйынына барып эләкте, ти. Эй ҡара айғыр бышҡыра башланы, ти, ағай, бөтә диңгеҙ тулҡынланып, кәмә утрауға табан бармаҫ булды, ти. Сынтимер арҡанды тартҡайны, ҡара айғыр үрле-ҡырлы килеп һикергеләй башланы, ти. Шунан тағы ла ныҡлабыраҡ тартҡайны, ҡара айғыр ҡаршы тора алманы, диңгеҙгә килеп керҙе, кәмә лә ат башына барып етте, ти. Шул арала Сынтимер тиҙ генә ҡара айғырға атланып та алды, ти. Эй ҡара айғыр асыу менән йөҙөргә кереште, ти, ағай, кәмә менән ай ҙа өс аҙна барған юлды, бер аҙнала йөҙөп, диңгеҙ ярына килеп еттеләр, ти.

Ярға сыҡҡас, Сынтимер иң элек батша өйөнә барып керҙе, ти. Батша өйөндә, теге вәзиргә ҡыҙҙы биреп, никах уҡырға ғына торалар икән. Сынтимер ишек

төбөнә генә ултырҙы, ти. Никах уҡырға башлағанда ғына, Сынтимер торҙо ла батшанан:

— Кемгә бирәһең ҡыҙыңды? Кейәү булаһы кешегеҙ ни эш күрһәтте? — тип һораны, ти. Бар халыҡ:

— Кем шаулай унда? Сығарып ебәрегеҙ, ҡысҡырып, туйҙы боҙоп ултырмаһын бында! — тип шаулаша башланы, ти. Шул саҡ батша:

— Ҡысҡырышмағыҙ әле! — тип, халыҡты туҡтатты ла, Сынтимергә ҡарап:

— Егет, был кейәү булаһы кешенең эшен белмәй, һин ҡайҙа йөрөнөң? Әллә берәй баҙҙа яттыңмы? — тип, бар кешене көлдөрҙө, ти. Сынтимер:

— Мин уның бер эшен дә күргәнем юҡ. Былай батша ҡыҙын алырлыҡ ни хеҙмәт күрһәтте икән, тип беләһем килеп кенә һорайым,— тине, ти. Батша, бер аҙ асыулана төшөп:

— Был кейәү булаһы кешебеҙ бөтә ҡала халҡын үлемдән ҡотҡарҙы, аҙна һайын ҡыҙ ала торған аждаһаны үлтереп, шул аждаһа ауыҙынан ҡыҙыбыҙҙы ҡотҡарҙы, шуның өсөн ҡыҙыбыҙҙы бөгөн уға бирәбеҙ,— тине, ти. Сынтимер:

— Аждаһаны үлтергәненә ул егеттең берәй дәлиле бармы һуң? Ҡулында нәмә бар икән, күрһәтһен ине шуны? — тип һораны, ти. Теге вәзир өндәшмәй-нитмәй ултыра, ти. Сынтимер:

— Уның билгеһе булмаһа, минең дәлилем бар: бына батша ҡыҙы үҙе биргән йөҙөк, бына уның яулығы, бына аждаһаның ҡолаҡтары! — тип, теге төйөнсөктө килтереп батшаның алдына һалды, ти. Бар халыҡ был эшкә аптырап ҡалды, ти. Шунан ҡыҙҙы сығарып һорағайнылар, ҡыҙ Сынтимерҙе күргәс тә:

— Бына мине ҡотҡарыусы егет! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти.

Шул арала теге вәзир ҡаса башлағайны, тотоп алдылар ҙа, урамға сығарып аҫып үлтерҙеләр, ти. Шунан һуң, никах уҡып, батша ҡыҙын Сынтимергә бирҙеләр, ти.

Сынтимер бында ике ай ҡунаҡ булып ятҡандан һуң үҙ иленә — ер өҫтөнә ҡайтмаҡсы булды, ти. Был уйын ҡыҙ менән батшаға ла белдерҙе, ти. Батша ризалыҡ биргәс, ҡыҙҙы үҙе менән бергә алып, ҡара айғырға атланып, теге ер аҫты тишегенә барҙылар, ти. Бында килеп еткәс, Сынтимер айғырға һыҙыра һуҡҡайны, ҡара айғыр йығылып китте, ти. Яңынан бер, тағы ла нығыраҡ һуҡҡайны, ҡара айғыр киҫәк кенә һикереп ер өҫтөнә сыҡты, ти.

Ер өҫтөнә сыҡҡас, Сынтимер иң элек Тау батырҙы эҙләп таба. Уны үлтереп, бар малды, Гөлтамсыны (ул Тау батырҙа булған) алып, Бура батырҙы эҙләп китә. Тапҡас, уны ла үлтерә лә, янындағы ҡыҙҙарҙы, малды алып, ҡайтып китә.

Сынтимерҙең инәһе, улын көтө-көтә һарғайып бөткән, ти. Сынтимер өйгә ҡайтҡас, Гөлтамсы менән ер аҫты батшаһының ҡыҙын үҙенә ҡатын итеп, һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш ҡарттың ҡыҙҙарын инәһенә аҫрау итеп ҡуйҙы, ти. Шунан һуң әле Гөлтамсының аталарына, әле ер аҫты батшаһына алмаштилмәш ҡунаҡҡа йөрөп, бик күңелле көн үткәрҙеләр, ти. Әле булһа шулай бик рәхәт торалар икән, ти.

Кисә барҙым, бөгөн ҡайттым, күҙем менән үҙем күрҙем, тфү-тфү!.. Төкөрмәгән кешенең арҡаһына сей тире.

## АЙЫУҒОЛАҠ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Уларҙың бер генә балалары ла булмаған. Йәйен бабай балыҡ тотҡан, әбей емеш-еләк йыйған. Ҡыш килгәс, әбей балаҫ һуҡҡан, бабай бәләкәй сана менән урмандан утын ташыған.

Шул рәүешле тырышып-тырышып көн итә торғас, берҙән-бер көн, сатлама ғинуар ыҙғарында, бабай сирләп аяҡтан йығылған. Уларҙың яғыр утындары бөткән. Шунан әбей бәләкәй сана һөйрәгән дә, урманға утынға киткән.

Арлы-бирле утын йыя һалып, ҡайтыр юлға сыҡһа, әбей, бик ҡаты буранға осрап, аҙашҡан, ти. Күҙ асҡыһыҙ буранда аңҡы-тиңке булып йөрөй торғас, ул бер ҡар ҡыуышына барып кергән. Был ҡыуыш тигәнең айыу өңө икән. Өңгә инеү менән айыу әбейҙе ҡосаҡлап алған да ашатҡан, эсергән. Ҡайтарып ебәрмәгән.

Шулай итеп, айыу менән бергә байтаҡ замандар йәшәгәс, әбей шунда айыу өңөндә бәпесләгән, ти. Ҙур ҡолаҡлы бер малай тапҡан, ти, ул. Шунан бер саҡ айыуҙың сығып киткәнен ҡарап ҡына торған да бәпесен күтәреп ҡайтып киткән, ти, Әбей өйөнә ҡайтып инһә, бабай үлер сиккә етеп ҡайғырып ултыра икән. Шунан әбей хәлде һөйләп аңлатҡан да бәпесте күрһәткән. Бабай балалары булыуға бик шатланған, ти. Бәпестең ҡолағы айыу ҡолағына оҡшағанға, уға Айыуғолаҡ тип исем ҡушҡандар.

Айыуғолаҡ айлап ҡына түгел, көнләп, сәғәтләп

үҫкән, ти. Күп тә ваҡыт үтмәй, йомош-юлға йөрөй башлаған. Бер көн эсендә урмандан йылға етерлек утын ташыған.

Берҙән-бер көн Айыуғолаҡ имән оронһонан туп, имән ботағынан сәкән яһап алып, урамға туп һуғырға сыҡҡан. Ауылдың бер осонан һуғып ебәргән икән, туп шунда уйнап йөрөгән малайҙарҙың баштарын өҙөп, өйҙәрҙе емереп, ауылдың икенсе осона сығып киткән. Был хәлдән һуң ауыл халҡы йыйылған да Айыуғолаҡтың атаһына килеп әйткән:

— Һинең улың беҙҙең балаларыбыҙҙы ла, үҙебеҙҙе лә һәләк итер. Һин уны сығарып ебәр. Юҡһа беҙ уны үлтерәбеҙ,— тигәндәр, ти.

Бабай менән әбей быны ишетеп, бик ҡайғырғандар, һуңынан Айыуғолаҡ менән бәхилләшкәндәр ҙә, хәйерле юл теләп, сығарып ебәргәндәр, ти.

Айыуғолаҡ башы һуҡҡан яҡҡа сығып киткән. Ай барған, йыл барған, бара торғас, бер ерҙә үҫеп ултырған имәндәрҙе йолҡҡолап, икенсе ергә күсереп ултыртып йөрөүсе кеше күргән, ти.

— Ай-һай, батыр икәнһең, кем булаһың һин? — тип һораған. Теге батыр әйткән:

— Имән батыр булам,— тигән.— Мин батырмы ни, бына донъяла Айыуғолаҡ тигән батыр бар икән, һин шуны күрһәң ине,— тигән. Шунан теге:

— Айыуғолаҡ мин булам,— тигән.

— Шулаймы ни,— тигән Имән батыр.— Айыуғолаҡ булһаң, һөнәрең күрһәт.

Айыуғолаҡ шунда Имән батырҙы күтәреп йыҡҡан. Теге әйткән:

— Маладис! Хәҙер ышандым,— тигән.

Айыуғолаҡ уға:

— Берҙән икәү яҡшы, әйҙә минең менән, бергә-бергә йәшәрбеҙ,— тигән.

Имән батыр риза булған, улар икәүләп киткәндәр. Ай барғандар, йыл барғандар, энә буйы ер барғандар, ти. Бара торғас, бер ерҙә тауҙарҙы бер урындан икенсе урынға күсереп ултыртып йөрөүсе бер кешегә тап булғандар.

— Кем булаһың һин? — тип һорағандар унан.

— Мин Тау батыр булам,— тигән был.

— Ай-һай батыр икәнһең,— тигәндәр былар.

Тау батыр уларға:

— Һи, мин батырмы ни, бына Айыуғолаҡ тигән батыр бар, һеҙ шуны күрһәгеҙ ине,— тигән.

— Айыуғолаҡ мин булам,— тигән тегеһе,— был

Имән батыр була. Икәүҙән өсәү яҡшы, әйҙә беҙҙең менән киттек, бергә-бергә йәшәрбеҙ,— тигән.

Тау батыр риза булған, улар есәүләшеп киткәндәр.

Ай баргандар, йыл барғандар, ти, былар, әнә буйы ер барғандар, ти. Бик күп замандар барып, бик күп юлдар үткәс, былар бер йорт янына килеп сыҡҡан. Өйҙөң хужаһы-фәләне булмаған. Шунан яҡын-тирәнән ҡош-ҡорт ата һалып, Имән батырҙы аш-һыу әҙерләргә ҡалдырғандар ҙа, Айыуғолаҡ менән Тау батыр урманға һунарға инеп киткән.

Имән батыр яҡшылап аш әҙерләгән. Шунан аш бешеүгә генә тыштан берәү:

— Ишекте ас! — тип ҡысҡырған, ти. Асып ебәрһә, үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бер ҡарт килеп ингән.

— Күтәреп ултырт,— тигән ҡарт. Имән батыр быны күтәреп ултыртҡан. Шунан теге ҡарт:

— Аш һалып бир, тәмләп ҡарайым,— тигән. Теге һалып биргән.

Теге ҡарт тағы:

— Был ғына етмәй, тағы һалып бир,— тигән.

Имән батыр уға:

— Минең иптәштәрем бар, уларға етмәй ҡалыуы бар,— тигән.

Шунан теге ҡарт Имән батырҙы иҫен китәргәнсе туҡмаған-туҡмаған да, ҡаҙандағы бөтә ашты күтәреп ашап, сығып киткән.

Имән батыр иҫенә килеп, тороп ҡараһа, ҡарт та юҡ, аш та юҡ, ти. Ул яҡын-тирәнән тиҙ генә ҡош-ҡорт ата һалып, ҡаҙанға һалған. Ҡаҙан ҡайнап та өлгөрмәгән, Айыуғолаҡ менән Тау батыр ҡайтып та төшкәндәр.

Тегеләр:

— Ни эшләп ашты әле һаман өлгөртмәнең? — тип асыулана башлағандар икән, Имән батыр:

— Башыма еҫ тейеп, сирләп ятҡанмын, яңы ғына ҡалҡып торҙом әле,— тип яуап ҡайтарған. Сейле-бешле ашты әпен-төпөн генә ашағандар ҙа былар йоҡларға ятҡандар.

Иртәгеһен һунарға Айыуғолаҡ менән Имән батыр киткән, ә өйҙә Тау батыр тороп ҡалған. Шунан кисәге аш бешкән ваҡыт еткәс, теге ҡарт тағы килеп ҡысҡырған. Тау батыр быны асып индергән. Тағы ла теге ҡарт аш һораған. Тау батыр һалып биргән. Ҡабатлап һораған. Тау батыр, кисәге Имән батыр һымаҡ:

— Минең иптәштәрем бар, улар асығып ҡайтырҙар, аш етмәй ҡалыр бит,— тигән.

Теге ҡарт бының да иҫен китәргәнсе туҡмаған-туҡмаған да, ҡаҙандағы ашты күтәреп ашап, сығып та киткән.

Тау батыр иҫенә килеп, тороп ҡараһа, ҡарт та юҡ, аш та юҡ, ти. Ул да, Имән батыр һымаҡ, яҡын-тирәнән ҡош-ҡорт ата һалып алған да тиҙ генә бешерергә тотонған. Шул арала Айыуғолаҡ менән Имән батыр ҡайтып төшкәндәр. Имән батыр эштең ниҙә икәнен аңлай бит инде, ә Айыуғолаҡ асыулана икән. Тау батыр кисәге һымаҡ:

— Башыма еҫ тейеп ятҡанмын, яңы ғына ҡалҡып торҙом,— тип яуап ҡайтарған.

Шулай итеп, былар бөгөн дә аслы-туҡлы ғына йоҡларға ятҡандар. Өсөнсө көндө инде өйҙә Айыуғолаҡ тороп ҡалған. Әлеге аш бешкән ваҡыт еткәс, теге үҙе бар ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт килеп тағы ла:

— Ишекте ас! — тип ҡысҡырған.

— Кәрәк булһа, асып та инерһең әле,— тигән Айыуғолаҡ уға ҡаршы. Ҡарт асып ингән.

— Күтәреп ултырт! — тигән теге ҡарт.

— Сабый түгелһең бит, ултыр,— тигән Айыуғолаҡ.

— Аш һалып бир! — тигән ҡарт.

— Ҡунаҡ кеше һорап алмай уны,— тигән Айыуғолаҡ.

Шунан ҡарт асыуланып, Айыуғолаҡҡа килеп йәбешкән. Былар көрмәкләшеп алып киткәндәр. Айыуғолаҡ тегене туҡмап-туҡмап өй алдындағы бер ағасҡа һаҡалынан аҫып ҡуйған, ти.

Күп тә үтмәй, Имән батыр менән Тау батыр ҡайтып инәләр.

— Йә, Айыуғолаҡ, ашың өлгөрҙөмө? — тип, былар уға ҡарап шырҡ-шырҡ көләләр, ти.

Айыуғолаҡ быларға әйткән:

— Әйҙәгеҙ, һеҙҙең башығыҙға еҫ тейҙергән ҡартты күрһәтәм,— тигән, быларҙы теге ҡарт янына алып киткән. Барып ҡараһалар,— ағас ботағында теге ҡарттың һаҡалы ғына йолҡоноп тороп ҡалған, ә үҙе ҡасҡан, ти.

Былар, ҡан тамсылары эҙе буйынса юллап, ҡартты ҡыуып киткәндәр. Ай барғандар, ти, былар, йыл барғандар, ти, энә буйы ер барғандар, ти. Бара торғас, ҡан эҙе бер урында ҡойо һымаҡ ер тишегенә төшөп киткән, ти. Былар, унда нисек төшөргә, тип аптырашта ҡалғандар. Шунан ҡырҡ көн, ҡырҡ төн буйы арҡан ишкәндәр ҙә, шул арҡандың осона таш бәйләп төшөрөп ҡарағандар. Арҡандың осо төпкә барып еткән, ти.

Инде, кемгә төшөргә, тип һөйләшкәндәр. Имән батыр ҙа, Тау батыр ҙа ҡурҡышып, өндәшмәй ултыралар икән, Айыуғолаҡ:

— Әләйһәң, үҙем төшәм, һеҙ мине ошонда көтөп торорһоғоҙ,— тигән дә арҡандың осона йәбешеп төшөп киткән, ти.

Төшөп, ергә аяғы тейгәс, был ҡарай: бер юл китә. Айыуғолаҡ шул юл менән бик күп замандар бара-бара ла бер йортҡа барып етә. Өйгә барып инһә, унда бик һылыу бер ҡыҙ ултыра, ти. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан да ҡыҙҙан:

— Шундай-шундай ҡартты күрмәнегеҙме? — тип һораған.

Теге ҡыҙ:

— Бынан алыҫ түгел минең оло апайым бар, шул белһә белер,— тигән.

Бара торғас, Айыуғолаҡ ул өйгә лә еткән. Бында ла баяғынан һылыуыраҡ ҡыҙ йәшәй икән.

— Шундай-шундай ҡартты күрмәнегеҙме?— тип һораған Айыуғолаҡ унан. Ҡыҙ:

— Бынан алыҫ түгел оло апайым бар, шул белһә белер,— тигән.

Айыуғолаҡ тағы ары киткән. Өсөнсө өйгә барып етһә, быныһында тегеләрҙең икеһенән дә һылыуыраҡ бер ҡыҙ күргән. Айыуғолаҡ һораған:

— Шундай-шундай ҡарт күрмәнегеҙме?

— Ул миндә, әле генә мунса инергә китте,— тигән ҡыҙ. Шунан Айыуғолаҡ ҡыҙға бер ҡаҙан ҡурғаш иретергә ҡушҡан. Ҡыҙ иреткән. Айыуғолаҡ шул ҡурғашты алған да мунсаға барған. Ҡарт йәйрәп китеп мунса кереп ята икән.

Айыуғолаҡ, әкрен генә килеп:

— Ә ҡаптыңмы? Инде ҡасып ҡотола алмаҫһың,— тигән дә теге ҡурғашты ҡарттың ауыҙына ҡойған. Ҡарт шунда тонсоғоп үлгән.

Шунан Айыуғолаҡ ҡыҙ янына килеп, уға үҙенең хәлен һөйләп аңлатҡан. Ҡыҙ Айыуғолаҡ менән бергә ер өҫтөнә сығырға ризалыҡ белдергән. Бөтә байлыҡтарын йыйып, алтын һандыҡҡа тейәп, улар юлға сыҡҡандар. Сыҡҡас, Айыуғолаҡ йорттарға ҡарап, һоҡланып тора икән. Ҡыҙ унан:

— Ниңә улай бик һоҡланып ҡарайһың, әллә йорт йәл ҡаламы?— тип һораған.

— Йәл ҡала шул,— тигән Айыуғолаҡ.

Шунан ҡыҙ бер күкәй алып тәгәрәткән икән, бөтә йорт менән ҡаралтылар алтын күкәйгә әйләнгән дә ҡуйған. Былар кеҫәләренә һалып алып, китеп тә барғандар.

Икәүләп былар әлеге уртансы ҡыҙға барып еткәндәр. Уртансы ҡыҙ ҙа:

— Апайым барғас, мин дә һеҙҙең менән китәм,— тип, әйберҙәрен йыйып, көмөш һандыҡҡа тейәгән дә уларға ҡушылған.

Быныһы ла баяғыса бер күкәй тәгәрәткән дә, йортто, бөтә ҡаралтыларҙы көмөш күкәйгә әйләндереп, кеҫәһенә һалып алған. Былар өсәүләп киткәндәр.

Өсәүләп кесе ҡыҙға барғандар.

Килһәләр, быныһы ла әйткән:

— Апайымдар барғас, мин дә һеҙгә ҡушылам,— тигән. Дүртәүләп юлға сыҡҡандар. Был кесе ҡыҙ үҙенең әйберҙәрен баҡыр һандыҡҡа тейәп, йорт-мөлкәтен баҡыр күкәйгә әйләндереп, алып киткән.

Шулай итеп, былар дүртәүләп әлеге Айыуғолаҡ килеп төшкән ҡойо төбөнә килеп еткәндәр, ти. Әлеге Айыуғолаҡ төшкәндәге арҡан аҫыулы тора икән. Айыуғолаҡ арҡанды һелкетеп ҡараған. Өҫтән дә арҡанды һелкетеп, «бындабыҙ» тигән хәбәр биргәндәр. Шунан Айыуғолаҡ иң тәүҙә арҡанға һандыҡты бәйләп, уның өҫтөнә иң кесе ҡыҙҙы ултыртып, мендереп ебәргән. Өҫтәгеләр арҡанды тартып алғандар ҙа тағы төшөргәндәр.

Икенсе юлы көмөш һандыҡ менән уртансы ҡыҙ менгән. Өсөнсө юлы алтын һандыҡ менән оло ҡыҙ менгән. Имән батыр менән Тау батыр был ҡыҙҙарҙың сыҡҡан беренә һоҡланып торғандар. Оло ҡыҙ килеп сыҡҡас, уның матурлығына, йәнә алтын һандығына ҡарап, былар: «Айыуғолаҡ быны беҙгә бирмәҫ инде», тип, көнләшеп киткәндәр. Шунан иң аҙаҡтан Айыуғолаҡ арҡанға тағылып сығып килә икән, ер өҫтөнә сығырға бер-ике таяҡ ҡалды тигәндә генә, был икәү арҡанды киҫкәндәр ҙә Айыуғолаҡты төшөрөп ебәргәндәр. Үҙҙәре ҡыҙҙарҙың өсөһөн дә алып киткәндәр ҙә барғандар.

Айыуғолаҡ, аҫҡа барып төшкәс, бик оҙаҡ ваҡыт иҫәңгерәп ятҡан, ти. Шунан, иҫ кергәс, ауыр итеп көрһөнгән дә, тороп, әлеге килгән юлдары менән сығып киткән. Унда барып ҡараһа ни, теге йорттарҙың урындары ғына ултыра, ти, тағы ла ары атлаған был. Бик күп барғас, Айыуғолаҡ бер ҙур күл янына барып сыҡҡан. Күл ситендә ҙур тирәк үҫеп ултыра, ти. Тирәк янына килеп ҡараһа, уның башында өй саҡлы ҙур бер оя күргән. Айыуғолаҡ тирәктең башына менгән. Менһә: был Сәмреғош ояһы икән. Сәмреғош үҙе өйҙә юҡ, бында балалары ғына ҡалған, ти. Сәмреғош балалары Айыуғолаҡты күргәс:

— Эй, әҙәм балаһы, һин ни эшләп бында килеп сыҡтың? Беҙ бит барыбыҙ ҙа һәләк булабыҙ,— тигәндәр.

— Ниңә?— тип һораған Айыуғолаҡ.

— Хәҙер күлдән туғыҙ башлы аждаһа күтәрелеп, беҙҙең барыбыҙҙы ла йотасаҡ,— тигән Сәмреғош балалары.

Улар һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән көслө ел-дауыл сығып, күлдән туғыҙ башлы аждаһа күтәрелгән. Ауыҙҙарын асып, Сәмреғош балаларын тирәге-ние менән йотам тигәндә генә, Айыуғолаҡ ҡылысын алған да, аждаһаны тураҡлап, тирәк төбөнә ҡырҡ таяҡ әрҙәнә итеп өйөп ҡуйған. Сәмреғош балалары быға бик шатланғандар, Айыуғолаҡҡа рәхмәттәр әйткәндәр. Шунан улар:

— Инәйебеҙ оҙаҡламай ҡайтыр, һин тәүҙә йәшеренеп тор, беҙ уға һөйләп аңлатырбыҙ, шунан ғына күренерһең, юғиһә күреү менән үҙеңде ашап ҡуйыр,— тигәндәр.

Оҙаҡ та үтмәй, ел-дауылдар ҡуптарып Сәмреғош ҡайтып килгән. Ҡайтыу менән балаларынан:

— Әҙәм еҫе килә, әллә берәй кеше бармы?—тип һораған.

— Ниндәй кеше булһын, үҙеңдән сығалыр, үҙең әҙәм араһында булғанһыңдыр,—тиҙәр балалары.

— Юҡ, юҡ, йәшермәгеҙ, әйтегеҙ, бында яңы еҫ бар,—ти Сәмреғош.

Шунан Сәмреғоштоң балалары тирәк төбөндәге әрҙәнәләргә күрһәтеп, эсәләренә бөтә эште булғанынса һөйләп бирҙеләр, ти. Сәмреғош Айыуғолаҡты күреү менән, ашарға тип өс тапҡыр уҡталып-уҡталып ҡуйҙы, ти.

— Балаларым хаҡына мин һине иҫән ҡалдырам. Йә, әҙәм балаһы, миндә ни теләгең бар? Ни эшләп килеп сыҡтың был яҡҡа?— тигән.

Айыуғолаҡ үҙенең башына төшкән бәләне аңлатҡан да ер өҫтөнә сығарыуҙы һораған.

— Ярар,— тигән Сәмреғош,— мин һине ер өҫтөнә сығарырмын. Тик һин ҡырҡ мискә ит, һөт әҙерлә. Уңға ҡараһам,— ит, һулға ҡараһам, һөт ҡаптырырһың,— тигән.

Айыуғолаҡ ит менән һөт әҙерләргә сығып киткән. Аждаһа ҡулынан ҡотолған барлыҡ йәнлектәр быға ә тигәнсе ҡырҡ мискә ит менән ҡырҡ мискә һөт әҙерләп бирҙеләр, ти. Шунан Айыуғолаҡ ит менән һөттө алды ла, Сәмреғоштоң ҡанат өҫтөнә ултырып, осоп китте, ти. Сәмреғош осҡан саҡта, күл ҡайнап ҡалған, ти, тирәктең осо бөгөлөп ергә тейә икән, ти. Сәмреғош

уңға ҡараһа, Айыуғолаҡ уға ит ҡаптырған, һулға ҡараһа, һөт ҡаптырған. Шулай осоп ер өҫтөнә сығыр саҡта ғына Сәмреғош иң һуңғы тапҡыр боролоп ҡараған. Айыуғолаҡтың ите етмәй ҡалған, ти. Ул аптырап тормайынса, тиҙ генә уң ботоноң һум итен ҡырҡып алды ла Сәмреғошҡа ҡаптырҙы, ти.

Былар ер өҫтөнә осоп сыҡтылар, ти.

— Әҙәм балаһы, һинең һуңғы ҡаптырған итең бик тәмле булды, ни эшләп улай?— тип һораны, ти, Сәмреғош. Айыуғолаҡ ҡурҡып дөрөҫөн әйтмәгән.

Сәмреғош, Айыуғолаҡтың аҙыраҡ аҡһағанын күреп:

— Ниңә аҡһайһың?— тип һораған.

Айыуғолаҡ был юлы Сәмреғошҡа дөрөҫөн һөйләп бирҙе, ти. Шунан Сәмреғош телен сығарып Айыуғолаҡтың киҫелгән ерен бер генә ялағайны, яраһы уңалды ла ҡуйҙы, ти. Сәмреғош Айыуғолаҡ менән хушлашты ла:

— Һин инде, әҙәм балаһы, бынан ҡырҡ саҡрым ер барып, ерҙе ҡырҡ таяҡ ҡаҙып кереп ят. Юғиһә минең еләмә ҡабат килеп төшөрһөң,— тип әйтте, ти.

Айыуғолаҡ шулай Сәмреғош әйткәнсә эшләне, ти. Сәмреғош осоп китте, ти. Айыуғолаҡ уның еленә күтәрелеп-күтәрелеп ҡалды, ти.

Инде Айыуғолаҡ уйлап торҙо-торҙо ла, табып булмаҫмы икән тип, теге иптәштәрен эҙләп сығып китте, ти.

Бик күп ерҙәр барғас, ул бер йылҡы көтөүсеһен осратып:

— Бынан шундай-шундай кешеләр үткәне күренмәнеме?— тип һораны, ти.

— Бынан бер өс йыл элек үткәйнеләр шикелле,— тип яуап ҡайтарҙы, ти, көтөүсе. Ауылға керер саҡта, Айыуғолаҡ бер көл өйөмө күрҙе, ти. Барып бутап ҡараһа, унан күмер булып ҡатҡан бер көлсә тапты, ти. Был — теге оло ҡыҙ күмеп киткән көлсә булған икән.

Шунан тағы бик күп юлдар үткәс, уға бер һыйыр көтөүсеһе осраны, ти.

Айыуғолаҡ унан:

— Шундай-шундай кешеләр күрмәнеңме?— тип һораны, ти.

— Бер өс ай самаһы элек үткәйнеләр шикелле,— тип яуап ҡайтарҙы, ти, көтөүсе.

Айыуғолаҡ ауыл янында, улар туҡталған урындағы бер көлдө бутап ҡараһа, бешеп, ҡатып ҡына өлгөргән көлсә килеп сыҡты, ти.

Айыуғолаҡ ауылға барып керҙе лә, кешеләрҙән һорашып, тегеләрҙең ҡайҙа төшкәнлектәрен белде, ти. Те-

геләр дүртеһе бер фатирға, ә оло ҡыҙ яңғыҙы бер фатирға төшкән икән. Айыуғолаҡ ул ҡыҙҙы эҙләп тапты, ти. Теге ҡыҙ аптырап китте, ти.

— Ни эшләп тороп ҡалдың? — тип һораны, ти.

Айыуғолаҡ уға:

— Күрәһең, арҡан серек булғандыр инде, өҙөлдө бит,— тип яуап ҡайтарҙы, ти. Шунан былар ашанылар, эстеләр, йыуындылар, кейенделәр ҙә тегеләр янына киттеләр, ти.

Барып керһәләр, тегеләр эсеп ултыралар икән. Имән батыр менән Тау батырҙың ҡулдарындағы стакандары төшөп китте, ти.

Айыуғолаҡ үҙенең ҡыҙына ҡарап:

— Ҡара әле, минең дуҫтарым нисек һағынғандар. Шатлыҡтарынан ҡулдарындағы стакандары төшөп китте! — тип әйтте, ти.

Былар күмәкләп бер матур күл буйына сәхрәгә сығалар. Башта быларҙың бисәләре, бер ашлау бутҡа бешереп, уртаһына бер йомғаҡ май һалып, килтереп ултырталар. Шунан Айыуғолаҡ иптәштәрен йыйып алды ла:

— Беҙ, иптәштәр, бик күп ваҡыттар бергә була алманыҡ. Бер-беребеҙҙе тикшереп ҡарайыҡ әле: кем ниндәй гонаһ эшләне икән? Бының өсөн һәр кем һауаға уҡ атырға тейеш. Әгәр гонаһы булмаһа, уҡ бутҡа уртаһындағы майға килеп төшөр. Әгәр инде берәүҙең гонаһы булһа, уҡ үҙ башына төшөр,— тип әйтте, ти.

Шунан, Имән батыр менән Тау батыр ҡурҡышып атмай торалар икән. Айыуғолаҡ үҙе йәйә менән уҡ алды ла туп-тура һауаға атып ебәрҙе, ти. Уҡ әйләнеп килеп, бутҡаның уртаһындағы майға килеп төштө, ти.

Имән батыр йәйә менән уҡ алып аҙыраҡ ҡыялатып атты, ти. Уғы әйләнеп килде лә башына төшөп, бөтә кәүҙәһен үтә сыҡты, ти.

Тау батыр ҡобараһы осоп, уҡты бөтөнләй тиҫкәре яҡҡа атып ебәрҙе, ти. Шулай булһа ла уҡ әйләнеп килеп, уның башына төштө лә, кәүҙәһен үтәләй сыҡты, ти. Шунан Айыуғолаҡ теге ҡыҙҙарға быларҙың икеһенең дә гонаһтарын һөйләп бирҙе, ти.

Үҙе оло ҡыҙға өйләнеп, тегеләре менән дуҫлашып, бик күп йылдар буйы ғүмер кисерҙе, ти, ул.

# АҠЪЕЛӘК

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Уларҙың бер ҡара һыйырҙары булған. Бына шул ҡара һыйырҙы һуйырға булғандар, ти, былар. Һыйырҙы һуйғанда, ҡаны өй ҡыйығына сәсрәп киткән, ти.

Берҙән-бер көндө өй ҡыйығында бала илаған тауыш ишетелгән. Бабай менеп ҡараһа — бер ир бала ултыра, ти, шунда. Бабай уны алып төшөп, өйгә алып ингән. Аҡъеләк тип исем ҡушҡандар был балаға.

Аҡъеләк йыл үҫәһен бер көндә үҫкән. Егерме көн тигәндә, ул егерме йәшлек батыр егет булып еткән, ти. Шунан атаһы уны батшаға хеҙмәтсе итеп биргән.

Батшаның бер мөгөҙө күккә, икенсеһе ергә тейеп торған бик уҫал бер үгеҙе бар икән. Ул Аҡъеләккә ана шул үгеҙҙе һуғарып алып ҡайтырға ҡушҡан. Аҡъеләк ҡыуалап алып китергә булған икән, үгеҙ быны һөҙөргә итә, ти. Аҡъеләк үгеҙҙе мөгөҙөнән тотоп алған да маңлайына сирткән. Үгеҙ шунда уҡ үлгән дә ҡуйған, ти. Быны батша малайы тәҙрәнән ҡарап торған да атаһына әйткән:

— Малай үгеҙҙе үлтерҙе,— тигән. Батшаның быға иҫе-аҡылы киткән, малайҙың үҙен үлтертергә булған. Вәзирен саҡырып, шул турала аҡыл һораған. Вәзире:

— Батшам, һин уға алты ат бир ҙә балтаһыҙ-ниһеҙ генә урманға утынға ебәр. Урманда уны алты бүре тотоп ашар,— тигән.

Аҡъеләк алты ат алып, буш ҡул менән урманға утынға киткән. Барғас, алты атҡа утын артмаҡлаған да ҡайтырға сыҡҡан. Юлда уға алты бүре тап булған. Аҡъеләк аптырап ҡалмаған, алты бүренең алтыһын да тотоп алған да, маңлайҙарына сиртеп, барыһын да үлтергән дә ташлаған. Шунан алтыһын алты ат өҫтөнә һалып, батшаға алып ҡайтҡан. Батша бүреләрҙе алмаған:

— Ҡайҙан алып килһәң, шунда илтеп ташла!— тигән.

Аҡъеләк үлтергән бүреләрен үҙенең атаһына илтеп биргән.

Батша йәнә вәзирен саҡырып аҡыл һораған. Вәзире:

— Хәҙер һин уны урманға ун ике ат менән ебәр. Урманда уны ун ике айыу тотоп ашар,— тигән.

Аҡъеләк, йырлай-йырлай, ун ике ат менән урманға киткән. Баяғыса, барыһына ла утын тейәгән.

Береһенә артығыраҡ артмаҡлаған икән, аттың биле һынған да ҡуйған. Шунан был ун бер ат менән ҡайтып киткән. Ҡайтҡанда уға ун ике айыу тап булған. Аҡъеләктең был юлы ла ҡото осмаған: уға ынтылған һәр беренең маңлайына сиртеп торған, айыуҙар аллы-артлы тәгәрәп йән биргән. Батшаға алып ҡайтҡан икән, батша был юлы ла алмаған. Шунан Аҡъеләк айыуҙарҙы ла атаһына илтеп биргән.

Батша йәнә вәзирен саҡыртҡан:

— Был малай айыуҙарҙы ла үлтерҙе бит, инде ни эшләйбеҙ? — тип һорағас, вәзире:

— Батшам, һин уға хәҙер алтмыш ҡолас ала бейә табып килтерергә ҡуш. Табып килтерә алмаһа, язалап үлтерербеҙ, — тигән.

Батша Аҡъеләккә ошо бойороҡто биргән. Егет, аптырап, быны атаһына ҡайтып һөйләгән:

— Батша миңә алтмыш ҡолас ала бейә табып килтерергә ҡушты, — тигән.

Атаһы уға шулай тип кәңәш биргән:

— Һин батшанан арымаҫ ат, бөтмәҫ аҙыҡ һора, — тигән.

Шунан Аҡъеләк батшаға килгән дә:

— Һин миңә арымаҫ ат, бөтмәҫ аҙыҡ бир, мин барам, — тигән.

Батша Аҡъеләккә һораған нәмәһен биргән. Аҡъеләктең атҡа атланып сығып китеүе булған, аты телгә килгән:

— Күҙеңде йом да, мин туҡталып аяғыма баҫмайынса тороп, асма, — тигән.

Аҡъеләк күҙен йомған, ат осоп та киткән. Ҡабат ергә баҫып, аты туҡтағас, Аҡъеләк күҙен асып ҡараһа, алдында ҡыйыҡһыҙ-ниһеҙ бер өй тора, ти. Эсенә инһә, мәскәй әбей ултыра, ти. Мәскәй унан:

— Балаҡайым, нәмә эҙләп килеп сыҡтың бында? — тип һораған.

— Мин алтмыш ҡолас ала бейә эҙләп йөрөйөм, — тигән Аҡъеләк. Мәскәй:

— Мин бөгөн егерме кеше ашаным, ундай бейәне бер ҙә күрмәнем. Бынан алыҫыраҡ минең апайым тора. Һин уға бар ҙа ошо яҙыуҙы бир, — тигән.

Аҡъеләк мәскәйҙең апаһын барып табып, баяғы яҙыуҙы бирә. Яҙыуҙы уҡығас, мәскәйҙең апаһы:

— Бында бер күл бар. Ул бейәләр, төш еткәс, шунда һыулауға килә. Һин яр буйында ҡамыш араһында йәшенеп кенә ят та иң арттағыһын тотоп ал, ҡалғандарына теймә, — ти.

Аҡъеләк шул күл буйына бара ла, ҡамыш араһында йәшенеп, бейәләрҙең һыулауға килгәнен һағалап ята. Барыһы ла килеп бөткәс, иң арттағыһын тота ла ала. Бейә Аҡъеләкте өҫкә сөйөп ебәрә, ергә күтәреп һуға,— егет уны барыбер ҡулынан ысҡындырмай. Шунан, бер нисек тә булдыра алмағас, бейә быға буй бирә, ҡырыҫланмаҫ була.

Шул уҡ күлдә бер аждаһа бар икән. Етегә уралып ята, ти, был аждаһа. Аҡъеләк атланып килгән атын ебәреп, алтмыш ҡолас ала бейәгә менеп, ҡайтырға ҡуҙғалам ғына тигәндә, бының башына: «Был аждаһаны үлтермәй китһәм, мин ниндәй батыр булайым?» — тигән уй төшә. Шунан ул аждаһа янына килә лә, тегенең башын тотоп алып, маңлайына берҙе тондора. Аждаһа ҡалҡына биреп, йән асыуы менән ҡысҡырып ебәрә, бының тауышынан хатта тауҙан таштар ишелеп төшә. Аждаһаны үлтергәс, Аҡъеләк уның тиреһен тунап, үҙенә ҡамсы үреп алды, ти.

Батша Аҡъеләктең ҡайтып килгәнен ишеткәс, уны үлтерергә кешеләр ебәргән. Улар ҡурҡып, Аҡъеләккә күренмәйенсә, ҡасып ҡалғандар. Аҡъеләк батшаға алтмыш ҡолас ала бейәне алып ҡайтып биргән. Батша был юлы кире ҡаҡмаған, бейәне алған да Аҡъеләкте үҙенең вәзире итеп ҡуйған, йәнә үҙенә вариҫ итеп иғлан иткән, ти.

## ЙӨРГӘК БАТЫР

Борон-борон заманда бер бабай йәшәгән. Уның ҡырҡ улы булған, иң кесеһен Йөргәк тип йөрөткәндәр. Бабай уландары менән оҙаҡ йылдар ғүмер иткән. Йөргәк бик батыр булып сыҡҡан. Урамда малайҙар менән уйнап йөрөгәндә, берәйһе оҡшамаһа, үлтерә һуға ла ҡуя икән был. Бер ваҡыт халыҡ йыйылған да Йөргәктең атаһына былай тигән:

— Улыңды юҡ ит, юҡ итмәһәң, үҙеңде үлтерәбеҙ.

— Үҙем үлгәнсе, улым үлһен,— тигән бабай.

Бер урында пәрейҙәр йәшәй икән. Бабай тотҡан да улын пәрейҙәргә ебәргән.

— Бар, шунда йөрөп кил,— тигән.

Егет шунда киткән. Барып, тауҙар араһында йөрөп ятһа, бер пәрейҙе осратҡан.

— Мин һеҙҙең артығыҙҙан килдем. Хәҙер үк бала-сағаларығыҙ менән йыйынығыҙ, мин һеҙҙе бынан алып китәм,— тигән егет пәрейгә.

— Мин үҙем көрәшсе. Нисәмә йыл йәшәгән еремде ташлап китергә йыйынмайым,— тигән пәрей.

— Яҡшылыҡ менән бармаһағыҙ, мин һеҙҙе көсләп алып китәм,— тигән дә егет пәрей менән көрәшә башлаған. Көрәшә торғас, пәрейҙе арытып, хәлдән тайҙырып, егет пәрейҙәрҙе, бала-сағалары менән, бер урынға ҡыуып килтергән. Иң өлкән пәрейҙе бер ҙур санаға егеп, бала-сағаларын санаға өйөп тейәгән дә алып ҡайтып киткән.

Егет ҡайтып етһә, бабай ни эшләргә белмәй икән. Атаһының бер һарайы булған. Егет пәрейҙәрҙе шул һарайға индереп бикләгән. Бабай һаман ни эшләргә белмәй, ти. Уйлап-уйлап, улын үлтереү сараһын таба алмағас, бер хәйлә ҡорған. Бабайҙың өйөнөң эргәһендә генә бер ҙур күл булған.

— Йәш сағымда ошо күлгә ике алтынымды төшөрөп ебәргәйнем. Яңыраҡ ҡына күрәҙәселәрҙән һораштырып ҡарағайным: «Алтындарың хәҙер ат башындай булғандар»,— тинеләр. Улым, төшөп, шул алтындарҙы алып сыҡһаңсы,— тигән бабай Йөргәккә.

Егет был юлы ни эшләргә белмәй аптырап ҡалған. Хәйлә менән улын үлемгә ебәреүен егеттең әсәһе белеп ҡалған да улына былай тигән:

— Улым, кит һин бынан, бында йәшәмә, һине үлтерергә йыйыналар. Пәрейҙәргә ебәргәндә лә һине үлтермәксе булғайнылар. Ауыл ҡарттарының һиңә асыуы килгән, шуға пәрейҙәргә ашатырға иткәйнеләр. Әле лә атайың һине үлтереү өсөн күл төбөнә төшөрә. Алтын түгел, бер нәмә лә юҡ унда. Ул күлдә эре балыҡтар йәшәй. Һине күл төбөнә төшөрөп, шул балыҡтарға ем итмәкселәр. Кит, улым, был ерҙән.

— Күрәһең, был ерҙә йәшәүҙән миңә файҙа булмаç. Быларға зыян килтереп тормайым, башымды алып, сығып китәйем,— тигән дә егет, һарайға инеп, пәрейҙәрҙе үлтереп, башы һуҡҡан яҡҡа сығып китмәк булған. Һарайға инһә, пәрей уға былай тигән:

— Егет, беҙҙе үлтермә, бер саҡ һиңә беҙҙең файҙабыҙ тейер. Ебәр беҙҙе,— тигән.

Егет уйлап-уйлап торған да пәрейҙәрҙе сығарып ебәргән.

Йөргәк, уҡ юнып, ян эшләп алған да, атаһы, әсәһе, ағайҙары менән хушлашып, ауылдан сығып киткән. Эй киткән, эй киткән, бара торғас, алыçта бер тау күргән. Тауҙың башына менһә, таштан һалынған бер өй ултыра. Егет өйҙөң эргәһенә барған да:

— Эй, бында берәй йән эйәһе бармы? Булһа, сығығыҙ. Мин алышырға килдем,— тип ҡысҡырған. Өйҙән

бер йылан килеп сыҡҡан. Егет йылан менән һөйләшә башлаған.

— Был кемдең өйө?

— Был өй беҙҙең батшабыҙҙыҡы. Һин, егет, кит бынан, һиңә бында ҡалырға ярамай,— тигән йылан.

Егет икенсе яҡҡа киткән. Бара ятһа, әллә ҡайҙан йыландар ыҫылдашып килеп сыҡҡандар ҙа егетте тирәяҡлап уратып алып:

— Ниңә беҙҙең ерҙәргә килеп сыҡтың?— тип һораша башлағандар.

Шул ерҙә егет йыландарҙы ҡырырға тотонған. Йыландар егеткә уҡ булып ташланалар ҙа, тәненә үтә алмайса, ҡолап төшөп, ер аҫтына инеп юғалып торалар икән. Йыландарҙы ҡырып бөтөргәс, егет тағы ла киткән.

Бара торғас, бер ерҙә бер кешегә тап булған. Был кеше бер аяғын елкәһенә килтереп бәйләп ҡуйған да һыңар аяҡлап һикереп китеп ултыра икән. Ниндәй генә йәнлек тап килмәһен, береһен дә ысҡындырмай тотоп ала икән. Егет был кеше эргәһенә килеп еткән дә, былар һөйләшә башлағандар.

— Әйҙә, берәм-берәм йөрөгәнсе, бергәләшеп китәйек, бер-беребеҙгә иптәш булышайыҡ,— тиешкәндәр ҙә икәүләшеп ары киткәндәр.

Бара бирһәләр, бер кеше ергә ятып, ҡолағын ерге ҡуйып, нимәлер тыңлай, ти. Йөргәк менән теге йүгерек быныҡ янына килгәндәр, һорашҡандар:

— Ни эшләйһең һин бында?

— Ерҙе тыңлап ятам. Ерҙә ниндәй хазина ятыуын белер өсөн, мин һәр ваҡыт шулай итеп йөрөйөм,— тигән теге кеше.— Ҡайҙа ниндәй генә хазина ятмаһын,— мин шуны тыңлап беләм. Бына өсөнсө көн инде мин ошо ерҙе тыңлап ятам. Ошо ерҙән бер алдыр аш килеп сығасаҡ. Мин шуны көтөп ятам да инде,— тигән. Шунан:— Бына хәҙер сыға ул,— тип, теге кешенең әйтеүе була, бер алдыр аш ер аҫтынан ҡалҡып килеп тә сыға.

Былар өсәүләп бер алдырҙан аш ашайҙар ҙа, был кешене лә алып, ары өсәүләп китәләр. Бара торғас, тағы ла бер кешегә тап булалар. Был кеше ике яҡ уртына ике күлдең һыуын уртлап алған да шул күлдәрҙең һыуын бер уртынан икенсе уртына ҡойоп маташа, ти. Янына киләләр, һорашалар:

— Һин кем булаһың? Бында ни эшләп йөрөйһөң?

— Мин ошо ике күлдең һыуын үлсәйем. Ҡайһы күл ҙурыраҡ икән, шуны белгем килә,— тип яуап бирә был кеше.

Былар үҙ-ара һөйләшәләр ҙә, был кешене лә үҙҙәре

менән алып, ары китәләр. Дүртәүләп, бер илгә килеп сығалар, бер ҡала күрәләр.

— Бар, хандың ҡыҙын һора! «Бынан өс айлыҡ юл алыҫлығында ятҡан ерҙән Йөргәк батыр килә, ул һинең ҡыҙыңды һорай. Әгәр яҡшылыҡ менән бирмәһәң, ҡыҙыңды беҙ һуғышып алырбыҙ», тип әйт,— тип, Һыңараяҡты шул ҡалаға ебәрәләр.

Һыңарайяҡ, ҡалаға килеп, хан йортона инә лә иптәштәренең һүҙен тапшыра. Батша* ни эшләргә белмәй, аптырай, вәзирҙәрен йыйып, һөйләшеп алырға була. Вәзирҙәр әйтә:

— Улар эшләй алмаған берәй эш барҙыр әле, мөғайын. Беҙ уларға шундай берәй эш табайыҡ. Шуны үтәй алмаһалар, беҙ уларҙы үлтерербеҙ,— тиҙәр.

Кәңәшләшә торғас, дүрт төрлө шарт уйлап табалар. Вәзирҙәрҙең береһе әйтә:

— Ҡыҙ өсөн мин шундай ҡалым уйлап таптым: улар килгәс тә, мин тимерҙән йорт һалырға ҡушам да үҙҙәрен шул йортҡа индереп йоҡлатам. Улар йоҡоға китеү менән йорт тирәләп ут яғырға ҡушам да шунда үҙҙәрен яндырып үлтерәм.

— Тимер өй бик яҡшы буласаҡ,— ти батша,— улар бер нәмә лә эшләй алмаясаҡтар.

— Йә беҙ уларҙы убырлы әбей менән йүгерештерәйек. Әбейҙе уҙа алмаһалар, баштарын киҫербеҙ.

— Йә тағы шулай итәйек: ҡыҙҙы йәшерәйек тә, таба алмаһалар, баштарын сабып өҙөрбөҙ.

— Инде улай ҙа булмаһа, минең урам уртаһында алтын бағана бар, шул бағана башында бер тәгәс бар, ул тәгәскә ямғыр һыуы тулған. Беҙ уларға, шул бағана башына менеп, бер генә тамсы ла һыуын түкмәйенсә, тәгәсте алып төшөргә ҡушырбыҙ. Әгәр түкһәләр, беҙ уларҙы үлтерербеҙ.

Үҙ-ара кәңәшләшкәндең һуңында:

— Иртәгә килегеҙ, ҡыҙҙы бирәбеҙ,— тип, Һыңараяҡты ҡайтарып ебәргәндәр.

Һыңараяҡ иптәштәре эргәһенә ҡайта ла барыһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

Егеттәр иртәгеһен иртә менән батшаға баралар. Егеттәр килгәс тә, батша уларҙы тимер өйгә индерергә ҡуша, көн кисләү менән өйгә ут төртөп, егеттәрҙе ҡурмаҡ була. Күлуртлар батыр, бара һалып, уртына тотошлай бер күлдең һыуын уртлап килә. Егеттәр тимер өйгә инеп ятҡас, батша кешеләре өйҙө уратып утын өйәләр

* Бессонов тексында шулай, артабан «батша» тип алынған.

ҙә ут төртәләр. Өй эсендәге батырҙар янғынды бар тип тә белмәйҙәр: өйҙөң берәй ере ҡыҙа башлаһа, Күлуртлар, һыу һибеп, өйҙөң ҡыҙыуын ҡайтара.

Өйгән утын янып бөтә. Иртәгеһен батша үҙенең бер кешеһен ебәрә:

— Бар, барып, көлдәрен елгә осороп кил! — ти.

Был кеше килеп, тимер өйҙөң ишеген асып ебәрһә, батырҙар рәхәтләнеп балыҡ ашап ултыра. Ҡайта һалып, батшаға әйтә:

— Улар янып үлеү түгел, балыҡ ашап ултыралар! Уларға бер ни ҙә булмаған, — ти.

— Һин мине алдайһың, — ти ҙә батша теге кешенең башын өҙә саба. Шунан, бер кемгә ышанмайынса, тимер өйгә үҙе китә. Килһә, батырҙар балыҡ ҡурып ашап ултыралар! Батшаны күргәс, балыҡ ашарға саҡыралар:

— Әйҙә, ҡоҙа, әйҙә, түрҙән уҙ, ҡурылған балыҡ итен ауыҙ итеп сыҡ, — тиҙәр.

Батша ғәҙәттән тыш аптырап ҡайта. Шунан батырҙарҙы саҡыртып ала ла:

— Мин һеҙгә өс шарт ҡуям. Үтәй алһағыҙ, ҡыҙымды алырһығыҙ, — ти.

— Ҡыҙыңа күпме һораһаң да, беҙ бирәбеҙ. Күпме байлыҡ теләйһең, шул хәтле һора! — тиҙәр егеттәр.

— Миңә байлыҡ кәрәкмәй, — ти батша. — Бына тәүҙә һеҙ минең бер кешем менән йүгерешеп ҡарағыҙ. Уны уҙа алырһығыҙмы икән?!. Шунан мин ҡыҙымды йәшерермен, һеҙ уны эҙләп табығыҙ. Ә унан һуң бағанаға менегеҙ, шул бағана башындағы тәгәсте, бер тамсы ла һыуын түкмәйенсә, ергә алып төшөгөҙ! — ти.

Егеттәр риза була.

Бына бер ваҡыт батша йүгерешергә ҡушты. Быларҙан Һыңараяҡ йүгерешергә булды, батша теге убыр әбейҙе сығарҙы. Былар бик алыҫтан — ете көн, ете төн барырлыҡ ерҙән йүгерешә башлайҙар. Кем уҙарҙан йүгерешеп бара торғас, әбей егеткә:

— Әйҙә, ошонда туҡтап, әҙ генә серем итеп алайыҡ. Шунан торорбоҙ ҙа тағы ла йүгерешербеҙ, — ти.

Һыңараяҡ ятып йоҡлап киткәс, әбей егеттең башына үҙенең аш бешерә торған ярыҡ ҡаҙанын түңкәрә лә, үҙе артабан йүгерә. Ертыңлар батыр ерҙе тыңлап ята ла әйтә:

— Һыңараяҡтың аяҡ тауышы ишетелмәй, күрәһең, берәй хәл булғандыр, — ти.

Йөргәк батыр бер ағасҡа менеп ҡараһа, Һыңараяҡ башына ярыҡ ҡаҙан ҡаплап йоҡлап ята. Йөргәк уғын

ҡаҙанға тоҫҡап атып ебәрә. Һыңарайаҡ һикереп тороп ҡараһа,— әбей юҡ. Эштең низә икәнен төшөнөп, әбейҙе ҡыуа төшә. Был ваҡытта әбей өс көнлөк юлды үтеп өлгөргән була. Һыңарайаҡ әбейҙе ҡыуып етә лә, күҙенә бер ус тупраҡ һибеп, уҙып китә. Әбей артта ҡала, күпме генә тырышһа ла, Һыңарайаҡты ҡыуып етә алмай. Ерҙе тыңлап ятҡан егет әйтә:

— Беҙҙең иптәш әбейҙе уҙып китте!— ти.

Һыңарайаҡ әбейҙән өс көнгә элек килә. Өс көн үткәс, ах та ох булып, әбей килеп еткәйне, батша уның башын сабып өҙә. Шунан һуң батша батырҙарға әйтә:

— Хәҙер мин ҡыҙымды йәшерәм, эҙләп табығыҙ!— ти.

Батша үҙенең өй аҫтында тәрән итеп соҡор ҡаҙып, шунда мөгәрәп эшләргә ҡуша. Ҡаҙын мөгәрәпкә бикләп ҡуя. Ҡыҙҙы бер кем эҙләп табырлыҡ түгел, ти.

Ҡыҙҙы Ертыңлар эҙләй башлай. Бында ла ятып тыңлап ҡарай, тегендә лә барып тыңлап ҡарай — таба алмай. Батша һарайына яҡынораҡ барып тыңлап ҡараһа, ер аҫтында өс ҡыҙ һөйләшеп ултыра. Батша ҡыҙы:

— Атайым ниңә мине бирмәй икән? Бындай егеттәрҙе ул тағы ҡайҙан табыр икән?— тип әйтә, ти.

— Ҡыҙҙар бына ошо урында ер аҫтында ултыралар,— ти Ертыңлар.

— Бында бер ниндәй соҡор юҡ, һин алдашаһың,— тип, батша вәзирҙәре быларҙың башын киҫергә йыйына башлайҙар.

Тегеләрҙең һүҙен иғтибарға алмайынса, Ертыңлар үҙе ерҙе ҡаҙырға тотона. Өс-дүрт һөңгө буйы ерҙе ҡаҙып төшһә, ҡыҙҙар ултыра. Ҡыҙҙарҙы алып сыҡҡайны, батша таң ҡала. Шунан хәҙер бағана башына менеүҙе әҙерләргә ҡуша. Бағананы тирәләтеп кейеҙ йәйҙертә лә егеттәргә әйтә:

— Бер генә тамсыһын түкһәгеҙ ҙә, башығыҙҙы киҫтерәм!— ти.

Был эште Йөргәк батыр үҙе башҡарырға була. Алтын бағанаға ул өс көн, өс төн буйы үрмәләй. Бағананың башына менеп еткәс, тыуған яҡтарын, атаһын, әсәһен, ағаларын күреп, илап ебәрә. Бағана төбөнә йәйелгән кейеҙгә Йөргәктең күҙ йәштәре тама. Батша менән уның яҡындары быны күреп ҡалалар ҙа:

— Һыуҙы түкте, һыуҙы түкте!— тип ҡысҡырырға тотоналар.

Йөргәк батыр тәгәсте алып төшә. Алып төшкәс, быға әйтәләр:

— Һин тәгәстәге һыуҙы түктең,— тиҙәр.

— Юҡ, мин түкмәнем,— ти Йөргәк батыр.— Бына ҡарағыҙ, тәгәстәге һыу туп-тулы бит!— ти.

— Улай булғас, ни тамыҙҙың!— тиҙәр уға.

— Юҡ, тамыҙманым да!— ти Йөргәк батыр.— Багана башына менеп еткәс, тыуған яҡтарымды күреп, мин илап алдым,— ти.

Батша быға ышанмай, үҙенең иң яҡшы белгестәрен саҡыртып ала ла, был күҙ йәшеме, әллә ямғыр тамсыһымы — шуны белергә ҡуша. Белгестәр кейеҙгә тамған тамсыны ялап ҡарайҙар ҙа:

— Был ысынлап та күҙ йәше,— тиҙәр.

Бынан һуң батшаның башҡа хәйләһе лә, хәйлә ҡорорлоҡ хәле лә ҡалмаған. Йөргәк батырға ҡыҙын биргән.

Бер аҙ йәшәгәс, Йөргәк батыр: «Сит илдә йәшәгәнсе, үҙ өйөмә ҡайтайым»,— тип уйлаған.

Был уйын ул бер көндө батшаға әйткән:

— Бында мин оҙаҡ йәшәһәм дә, аҙ йәшәһәм дә — миңә барыбер үҙ өйөмә ҡайтырға кәрәк! — тигән.

Быға бер төрлө лә ҡаршы яуап таба алмағас, батша:

— Ҡайтҡың килһә, ҡайт,— тигән.

Ул ҡырҡ дөйәгә һәр төрлө байлыҡ артмаҡлап, ҡыҙы менән бергә кейәүен ҡайтарып ебәрергә булған. Шунан һуң улар теге иптәштәре менән бергә ҡайтырға сыҡҡандар. Ҡайтышлай бер әбейгә фатирға төшкәндәр. Шунда был әйткән:

— Балаҡайҙар, юлда йоҡларға туҡталғанда өс ерҙә һаҡ булығыҙ, унда туҡталмағыҙ*,— тигән.

Китәләр былар тағы. Йөргәк батырҙың иптәштәре, үҙ илдәренә килеп еткәс берәм-берәм тороп ҡалалар. Йөргәк батыр иптәштәре менән хушлашҡас ары ҡатыны менән генә китә. Ҡараңғы төшә башлағанда, бер урынға килеп етәләр, шунда йоҡларға булалар. Егет тә, һис нәмәгә шикләнмәйенсә, йоҡларға ята. Төндә кемдер килә лә бының бөтә байлығын алып китә. Йөргәк батыр иртәгеһен уянып китһә, эргәһендә ҡатыны ла, бер нәмәһе лә юҡ, үҙе ялан уртаһында ята. Йөргәк һикереп торған да, ҡылысын биленә тағып, ҡатыны менән малын эҙләп киткән. Бара торғас, ул ҡатыны менән малын бер пәрей алып китеп барғанын күргән.

---

* Ҡайһы урындарҙа туҡтарға ярамауы хаҡында әкиәттә әйтелмәгән.

Батыр, ҡыуып етеп, пәрейҙе үлтергән дә, ҡатыны менән байлығын кире алып, ары киткән. Бара биргәс, былар тағы ла бер урында төнгөлөккә туҡтағандар. Ҡараһалар, былар тирәһендә әллә ниндәй бер кеше урала, ти. Үҙе:

— Аш бешер, ҡунаҡтарҙы һыйлайыҡ! — тип һөйләнә, ти.

Йөргәк менән ҡатыны йоҡларға әҙерләнгәндә, бик һылыу бер егет быларға бер табаҡ аш килтереп ҡуя:

— Торогоҙ, мин һеҙгә ашарға килтерҙем! — ти.

Йөргәк батыр һикереп тора ла, (уның бер эте лә булған була) табаҡтан бер ҡашыҡ аш алып этенә бирә. Был ашты йотоу менән эт үлә лә ҡуя.

— Бына нисек икән! Һин мине ағыулап үлтерергә килгәнһең икән! — тип, Йөргәк батыр теге пәрейҙе тураҡлап ташлай.

Шунан, был урындан ҡуҙғалып, тағы юлға сығалар. Килә торғас, элек Йөргәк үҙе йыландар менән һуғышҡан тауға етәләр. Кис була, былар йоҡларға яталар. Былар ятып йоҡлап киткәс, бер аждаһа килә лә быларҙы ете ҡат итеп уратып ала. Иртәгәһен Йөргәк батыр уянып китһә, ете балдаҡ булып аждаһа ята. Хәҙер ни эшләргә? Йөргәк батыр ҡылысын ала ла аждаһаға саба. Сабыуы була, аждаһа һөлөк кеүек һылыу егеткә әүерелә. Был егет Йөргәк батырға әйтә:

— Һин бынан киткән саҡта, минең ғәскәремде ҡыйратҡайның. Хәҙер мин һинән шуның үсен алырға килдем, — ти.

— Алышырға теләһәң, мин риза. Мин һиңә бер нәмәмде лә бирмәйәсәкмен, — ти Йөргәк батыр. Теге әйтә:

— Мин пәрейҙәр батшаһы инем. Быға хәтле бер кемдең дә мине еңә алғаны юҡ ине. Әйҙә, дуҫ, өйгә ин. Дуҫлашып, һиңә бик күп әйберҙәр бүләк итәйем, — ти һылыу егет.

Шунан һуң егет тау башындағы таш йортҡа килә. Был пәрейҙәр батшаһының өйө була. Шунда пәрейҙәр батшаһы, Йөргәк батыр менән дуҫлашып, уға бик күп байлыҡ бирә лә ҡайтарып ебәрә. Өйөнә ҡайтып еткәс, Йөргәк батыр атаһы, әсәһе, ағайҙары менән иҫәнләшә. Улар әле лә күмәкләшеп, иҫән-һау йәшәп яталар, ти.

## ХӘТӘР ШӘП БАТЫР

Борон заманда бер бай йәшәгән. Уның егерме туғыҙ хеҙмәтсеһе булған. Бай оҙаҡ йылдар буйы бер үгеҙ һимерткән, үгеҙ шул тиклем уҫалланып киткән, хатта егерме туғыҙ хеҙмәтсенең көсө етмәй икән. Яҡын барһалар, һөҙгөләй ҙә ташлай, ти.

— Утыҙ булһаҡ ине,— тигәндәр, ти, хеҙмәтселәр. Бер көндө байҙы күреп:

— Тағы берәй кеше булһа, көсөбөҙ етһә етер,— тигәндәр.

Бай хеҙмәтсе эҙләп сығып киткән, ти. Бер ауылда уға:

— Ана, мейес башынан төшмәгән бер малай бар, кәрәкһә, шуны ал,— тигәндәр.

Бай башта: «Мейес башынан төшмәгән кешенең ни рәте булһын?» тигән. Һуңынан һөйләшеп ҡарарға булған.

Өйгә барып керһә, ысынлап та малай мейес башында ята, ти.

— Улым, улым,— тигән бай,— бер генә айға миңә хеҙмәтселеккә бар әле.

— Ярар.

— Күпме һорарһың?

— Кәрәкмәй. Маңлайыңа бер сирттерерһең,— тигән малай.

Бай, йүгерә-атлай өйөнә ҡайтып, ҡатынына:

— Ҡарсыҡ, бушҡа бер хеҙмәтсе таптым, хаҡ алмайым, ти. Маңлайыңа бер сирттерһәң, етер тигәс, мин шуға риза булдым,— тип һөйөнсө алды, ти.

— Ай-һай, йүнле кеше булмаҫтыр ул,— тип, әбейе шикләнә төшә. Бай:

— Мейес башында ятҡан малай хаҡ һорай беләме ни ул? — тип көлдө генә, ти.

Малай килә. Хеҙмәтселәр менән ашап-эсә лә, үгеҙҙең маңлайына сиртһә, үгеҙ йығылып китә. Бөтәһе лә хайран ҡалалар. Егерме туғыҙ хеҙмәтсе күтәрә алмаған үгеҙҙе ул бер үҙе күтәрә икән. Тегеләр күмәкләшеп бер көн эшләгән эште, был яңғыҙы ярты көндә бөтөрә, ти.

Бай бөтөнләй ғәжәпкә ҡала. Көн-төн уйлана, хәсрәтләнә. Шунан бер мәскәй әбейгә үҙ ҡайғыһын һөйләп бирә.

— Донъя батырына осрағанһың,— ти теге ҡарсыҡ.— Бер сиртеүҙә үҙеңде лә үлтерер ул,— ти.

— Ни эшләтергә һуң уны? Үлтерергә кәрәк ине,— ти бай.

— Минең бер тәжрибәм бар. Оло үгеҙҙең ботон, шуға ҡушып егерме бот бойҙай килтерһәң, өйрәтермен,— тигән мәскәй.

Бай риза булған.

— Улым,— тигән мәскәй әбей байға,— донъяла алтын тау бар. Шул тау башында алтын киле менән алтын килеһап ята. Уларҙы дейеү һаҡлай. Шуны алып ҡайтырға ҡушып сығарып ебәрһәң, ул кире ҡайтмаҫ.

Бай, әбейгә рәхмәттәр уҡып, өйөнә ҡайта ла, малайға:

— Улым, алтын тау бар икән. Шул тауҙа алтын киле менән алтын килеһап ята икән, алып ҡайтып бир әле,— ти.

Малай икенсе көндө үк юлға сыҡҡан. Ай китәһен — бер сәғәттә, йыл үтәһен бер көндә үтеп, малай алтын тауҙы эҙләп тапҡан. Барһа, бер дейеү йоҡлап ята икән. Малай — килене тәгәрәтеп, һабын күтәреп алып ҡайта ла китә. Ҡайтып етә лә киле менән килеһапты байҙың ишек алдына ҡуя.

Бай, йоҡоһо осоп, тағы мәскәй әбейгә йүгерә.

— Ни эшләтергә инде? Алып ҡайтты бит! — ти.

— Ураҙгилде һыуында ике тирмән ташы ята. Шуларҙы төшөп алып сыҡһын,— ти әбей.

Бай малайҙы шул таштарҙы алып ҡайтырға ебәрә.

Малай оҙон итеп арҡан ишә лә, байҙы тыңлап, ике-өс көндә күл янына барып етә. Етһә, бер дейеү аш бешереп ултыра. Иҫләмәҫтән генә дейеүҙе ҡыҫып үлтерә. Икенсеһе һыу килтерә икән, уныһын сиртеп үлтерә лә, арҡан буйлап төшөп, тирмән таштарын алып сыға.

Байҙың, малайҙы күреп, ҡото оса, ул тағы мәскәй әбейгә йүгерә.

— Ни эшләтергә? Алып ҡайтты бит,— ти. Ҡарсыҡ:

— Ата-бабанан ҡалған малдар кейекләнеп киткән, шуларҙы алып ҡайтһын,— ти.

Бай, өйөнә ҡайтып, малайға һөйләп бирә.

— Ярар, барырмын,— ти малай.— Баҙарға барып, күп кенә киндер алып ҡайтырға кәрәк,— ти.

— Ни эшләтәһең уны?

— Уныһын үҙем беләм,— ти малай.

Бай менән малай, баҙарға барып, киндер алып ҡайталар.

Малай киндерҙән оҙон итеп сыбыртҡы ишкән дә икенсе көн иртә менән урманға сығып киткән. Көн йөрөгән, төн йөрөгән, урман эсе шаулап торған. Сы-

быртҡы шартлауын ишетеп, барлыҡ йәнлектәр юлға сыҡҡан, ти.

Малай, уларҙы өйөрөп, ҡыуып ауылға алып ҡайтҡан да:

— Бына алып ҡайттым, эшем бөттө,— тип ҡысҡыра икән.

Бай, урам тулы йәнлектәрҙе күреп, ғәжәпкә ҡалған. Ни эшләргә? Муллаларҙы йыйып кәңәшләшә. Муллалар теге малайҙы өгөтләргә тотоналар.

— Ни теләһәң, шуны ал,— тиҙәр.

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ,— тигән дә байҙың маңлайына сиртеп тә ебәргән теге батыр. Бай шунда уҡ үлеп ҡалған. Ә донъя батыры, уның донъяһына хужа булып, уртансы ҡыҙын алып, әле лә көн күреп йәшәп ята икән шунда.

## БУҘАНСЫ БАТЫР

Борон-борон заманда бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ йәшәгән. Балалары булмаған, малдары ғына күп булған, ти, быларҙың.

Бына бер заман йотлоҡ килгән: иген уңмаған, үлән дә үҫмәгән. Халыҡ асыға башлаған. Көн һайын йөҙәрләп мал ҡырылған. Был ҡарттарҙың малы бик әҙ ҡалған. Йотлоҡтан ҡотолмаҡ булып, бабай менән әбей күсеп китергә булғандар. Бер тау араһындағы уяға барып, ҡышлау ҡорғандар ҙа йылҡыларын тибенгә ҡыуғандар. Был да ярҙам итмәгән: бабайҙың бөтә мал ғынаһы ҡырылып бөткән. Бер буҙ бейәһе генә тороп ҡалған. Был бейә нимә ашап, нисек иҫән ҡалғандыр инде, уныһын алла ғына белә.

Бына ҡыш үтеп, яҙ килеп еткән. Бабай менән әбей, буҙ бейәләрен алып, йәйләүгә сыҡҡандар. Был йәйләүҙә өс көн торғас та, буҙ бейә бер ир бала ҡолонлаған. Ҡарттарҙың бер балаһы ла булмағас, быны улар үҙҙәренә алып, Буҙансы батыр тип исем ҡушып, үҙҙәре тәрбиәләп үҫтерә башлағандар. Был исем малайға бик тура килгән: ул, ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен аҙна үҫеп, биш йәшендә үк инде ҙурайып еткән, үҙе бик көслө, ҡыйыу булған. Урамға сығып йөрөгән сағында, кемгә булһа ла берәйһенә асыуы килһә, бөтә ауылды туҙҙырып, бөтә кешене туҡмап ташлар булған — уны бер кем тотоп тыя алмаған. Бындай хәл көн һайын тип әйтерлек ҡабатланып торған. Аҙаҡ сиктә

был эш уны бик туйҙырған. Үҙенең ҡарттары менән хушлашҡан да, донъя күреп, ил гиҙергә сығып киткән.

Бер көн, ике көн, өс көн бара Буҙансы батыр, бер ҡайҙа ла туҡтамай. Дүртенсе көн тауҙар, урмандар араһынан үтеп барғанда, үҙе кеүек үк бер илгиҙәр батырҙы осрата. Был батыр гел генә тауҙарҙы түңкәреп йөрөй икән. Шуға күрә уны Тауҙытауғаһуғар тип атағандар, ти. Былар осрашып һөйләшәләр, ҡайҙа тыуып, хәҙер ҡайҙа китеп барыуҙарын һорашалар. Тауҙытауғаһуғар:

— Мин — батыр һуғышсымын. Ил гиҙеп байлыҡ табыу өсөн үҙемә тиң иптәш эҙләйем,— ти.

Буҙансы батыр үҙенең уға ҡушылырға теләүен әйткәс, былар бәхет эҙләргә икәүләп сығып китәләр. Баралар былар, бер көн баралар, ике көн баралар — артыҡ бер нәмә лә осрамай. Өсөнсө көн барғанда, өс ғәрипкә тап булалар. Уларҙың береһе алпан-толпан баҫып, бер аяҡ менән генә атлап йөрөй; икенсеһенең ҡолаҡтары һалынып төшөп, ергә тейеп тора; өсөнсөһөнөң ике ирене ике яҡҡа һалбырап төшкән. Буҙансы батыр һорай:

— Эй, алла бәндәләре! Һеҙ ҡайҙан, кем булаһығыҙ?

Тегеләрҙең һыңар аяҡлыһы яуап бирә:

— Мин — Һартһуғар, тыумыштан донъяла беренсе йүгерек булам. Ә был, ҙур ҡолаҡлы иптәшем, Ертыңлар, бик һиҙгер кеше; ул һеҙгә ете ер, ете диңгеҙ аръяғында кемдәр йөрөп, низәр булыуын әйтеп бирә ала. Ә был һалпы иренлеһе — Күлуртлар; ул теләһә ниндәй күл-диңгеҙ һыуын бөткәнсе уртлап ала ала.

Теге шулай һөйләп бөткәс, Буҙансы батыр менән Тауҙытауғаһуғар: «Бәхетһеҙлеккә осрағанда, был һәр ҡайһыһы үҙҙәренсә булдыҡлы кешеләр беҙгә ярҙам итергә мөмкиндәр бит»,— тип уйлағандар ҙа тегеләрҙе үҙҙәре менән алырға теләгәндәр. Ғәриптәр быға риза булған. Шунан биш илгиҙәр бергәләп артабан китеп барғандар. Юлда барғанда Ертыңлар быларға шулай тип һөйләй:

— Бая ерҙе тыңлағанда ишетеп ҡалдым: ҡайҙалыр бер батша үҙенең оло ҡыҙын кейәүгә бирергә йыйына икән. Туй көнөндә ҙур йыйын үткәреп, ҡыҙын батша үҙе ҡуйған бөтә шарттарҙы үтәгән донъялағы иң батыр кешегә бирергә итә икән.

Ертыңларҙың был һүҙен тыңлап бөткәс, батырҙар үҙ-ара кәңәшләшкәндәр ҙә шунда киткәндәр. Бер ай баралар, ике ай баралар — һаман барып етә алмайҙар. Өсөнсө айҙа ғына барып еткәндәр былар. Барып еткән-

дәр ҙә батшаға килеп әйткәндәр. Батша ҡаршы сығып сәләм биргән дә быларға үҙенең шарттарын әйткән:

— Минең бер үгеҙем бар. Кем шуны еңә ала, шул ҡыҙыма кейәү егеттәр һанына алына,— тигән.

Беҙҙең илгиҙәрҙәр бер-береһенә ҡарашып алғандар ҙа үгеҙ менән көрәшергә Тауҙытауғаһуғар батырҙы сығарырға булғандар.

Бына бер ваҡыт ҡаты үкереп, башын сайҡап, ҡойроғон сәнсеп, ер тырнай-тырнай, майҙан уртаһына ғәләмәт ҙур бер үгеҙ килеп сыҡҡан. Майҙандағы халыҡ ҡурҡышып ҡуйған. Шул саҡта, әкрен генә атлап, Тауҙытауғаһуғар үгеҙгә ҡаршы йүнәлгән. Ғәйрәтләнеп килгән үгеҙ инде һирпеп алып, теҙләп ташлайым тигәндә генә, Тауҙытауғаһуғар үгеҙҙе, ике мөгөҙөнән шаҡарып тотоп, баш осона күтәреп алған да батша һарайы ҡоймаһынан аша урамға атып бәргән. Үгеҙ ларҫ итеп ергә төшөп, урталай ярылған.

Тауҙытауғаһуғарҙың көсөн күреп, халыҡ хайран ҡалған: «Бына кем ул батшаның кейәүе!» — тип ҡысҡырған.

Батша, гөж килгән халыҡты тыйып, яңы шартын әйткән:

— Хәҙер минең икенсе шартымды үтәгеҙ: ана, алдығыҙҙа ҡырҡ аршын оҙонлоғо бағана тора. Ҡайһығыҙ шул бағана башына бер стакан һыуҙы бер тамсыһын да түкмәйенсә алып менә, шуныгыҙ ҙа мин һайлаған егеттәр араһында булыр,— тигән.

Батшаның был шартын Буҙансы батыр үҙе үтәгән. Батша өсөнсө шартын әйткән:

— Минең бер ҡарсығым бар. Шуны йүгерешеп уҙа алғаныгыҙ минең ҡыҙыма шулай уҡ дәғүә итә ала.

Йүгерешергә һыңар аяҡлы Һартһуғар сығырға булған. Батша йүгерешеү урынын билдәләгәс, киткәндәр былар шул урынға. Бер тәүлек, ике тәүлек йүгергәндәр — теге ергә һаман барып етә алмағандар. Өсөнсө көн кис булғас, бер аҙ ял итеп алырға булғандар. Һыңараяҡтың бер ташты яҫтыҡ итеп ятыуы булған — донъяһын онотоп йоҡлап та киткән. Шуны ғына көтөп торған теге әбей шым ғына урынынан торған да төтәтеп йүгереп тә киткән. Көн йүгергән, төн йүгергән, батша тәғәйенләгән урынға барып етергә бер көн йүгерәһе генә ҡалған, ә был ваҡыт йүгерек Һартһуғар бер ни һиҙмәй, һаман йоҡлап ята, ти. Бының иптәштәре бик хафалана башлағандар.

Ертыңлар ергә ҡолаҡ һалып ҡараһа, аптырап ҡалған. Иптәштәренә:

— Һартһуғар бик ҡаты хырылдап йоҡлап ята; туҙан туҙҙырып, теге ҡарсыҡ бер үҙе йүгерә,— тигән.

Был һүҙҙе ишетеү менән, Буҙансы батыр йәйә менән уғын алған да баяғы ҡырҡ аршынлы бағана башына менеп киткән. Йоҡлап ятҡан йүгерек Һартһуғарға урман-тауҙар аша ҡарап торған да, кирелеп, уғын атып ебәргән. Уҡ Һартһуғарҙың баш аҫтындағы ташҡа барып тейгән, таш шартлап ярылып, он-талҡан булған. Һартһуғар һиҫкәнеп уянып китһә, теге ҡарсыҡтың иҫе-еле лә юҡ, ти. Һыңар аяғына һикереп торған да тотонған Һартһуғар йүгерергә. Был саҡ ҡарсыҡтың бер сирек юл йүгерәһе генә ҡалған булған. Ярты көн дә үтмәгән, һыңар аяҡлы йүгерек ҡарсыҡты ҡыуып етеп, уҙып та киткән, майҙанға унан ярты көнгә алдан килеп ингән.

Батша үҙенең бөтә шарттарының да үтәлә барыуына ғәжәпләнгән. Шунан дүртенсе шартын әйткән:

— Бына минең суйын мейесем бар. Һеҙ бишегеҙ ҙә мейескә инегеҙ ҙә, минең хеҙмәтселәрем уны тирәләтеп ҡырҡ сажин утынды яндырып бөткәнсе, шунда ултырығыҙ. Ҡайһығыҙ шунан иҫән-һау сыҡһа, шул, моғайын, минең кейәүем булыр,— тигән.

Быны үтәүҙә иптәштәренә Күлуртлар ярҙам иткән. Ул тиҙ генә барған да, ҙур бер күлде тотошлай уртлап алып килеп, иптәштәре менән бергә суйын мейескә инеп ултырған.

Бына бер заман батшаның хеҙмәтселәре мейесте тирәләтеп утын өйгәндәр ҙә, ут төртөп, яндыра башлағандар. Мейес эсендә тегеләр көлөшөп кенә ултыралар: мейестең ҡайһы ере ҡып-ҡыҙыл булып ҡыҙа башлаһа, Күлуртлар һыу бөркә лә, мейес һыуына ла ҡуя. Бына ҡырҡ сажин утын янып бөтә, ә тегеләр иҫән ҡала.

Бөтөнләй аптырап ҡалған батша хәҙер инде һуңғы шартын әйтә:

— Мин ҡыҙымды йәшерҙем. Ҡайһығыҙ тапһа, ул шуныҡы булыр,— ти.

Батырҙар ҡыҙҙы эҙләргә керешеп киткәндәр. Бер ай эҙләгәндәр, ике ай эҙләгәндәр — һис таба алмайҙар, ти. Шунан Ертыңлар ергә ятып тыңлап ҡарай ҙа иптәштәренә әйтә:

— Әйҙәгеҙ, батшаның үҙен тентеп ҡарайыҡ. Әгәр ҡыҙыҡай атаһының берәй кейемендә ҡасып ятмаһа, ерҙең аҫтында ла, өҫтөндә лә ул юҡ,— ти.

Хәҙер былар батшаның үҙен тентей башлайҙар. Сисендерҙеләр — һаман юҡ. Инде килеп, итеген һалды-

рып ҡарағайнылар, таптылар быны: батша ҡыҙы итек эсендә ята!

Шулай итеп, батшаның хәҙер бөтә шарты үтәлеп бөттө. Теләһә-теләмәһә лә, ҡыҙын тегеләрҙең береһенә бирергә тейеш. Ҡайһыһына бирергә батша үҙе лә белмәй икән: һәр береһе ҡуйылған шартты теүәл үтәне бит. Уйлай торғас, батша бының бер әмәлен таба: ҡайһыһы олораҡ булһа, ҡыҙҙы шуға бирергә.

Батырҙарҙың йәшен белер өсөн, сихырсыны алып киләләр. Сихырсы, ауыҙҙарын астырып, тештәрен ҡарай быларҙың, һеңерҙәрен тотоп ҡарай. Ҡарай-ҡарай ҙа Буҙансы батырға күрһәтә:

— Бына ошоноһо оло,— ти.

Булды, кейәү һайланды. Кейәү менән ҡыҙҙы ҡотлау, изге теләктәр теләү башланды. Шунан бик шәп итеп туй яһанылар ҙа, батша быларға үҙ батшалығын бирҙе, ти. Буҙансы батыр батша булғанда, бөтә халыҡ бик һәйбәт йәшәне, ти.

## ТИМЕРХАН

Элгәре Мәхмүт тигән бер хан йәшәгән. Уның Әхмәтхан исемле вәзире булған. Әхмәтхандың бер генә балаһы ла булмаған, ти. Берҙән-бер көн Әхмәтхан, ҡырҡ дөйәһен ҡорбан салып, алланан уғыл* һораған. Хоҙа тәғәлә уға бер уғыл биргән. Уғылға Тимерхан тип исем ҡушҡандар. Малай йыл үҫәһен — бер айҙа, ай үҫәһен бер көндә үҫеп, бик ғәйрәтле булып сыҡҡан. Уйнаған саҡта ла үҙ тиҫтерҙәренә һис көн күрһәтмәй, тегеләрҙе ҡыйратып, имгәтеп алып бара, ти. Иәберһетелгән балаларҙың аталары, вәзирҙәр, берәй сара күреүҙе һорап, Мәхмүт ханға килгәндәр, ти. Мәхмүт хан, Әхмәтханды саҡыртып алып, Тимерханды ҡайҙа булһа ла олаҡтырырға ҡушҡан.

Әхмәтхан, ҡаты ҡайғыға ҡалып, өйөнә ҡайта, Тимерхан, атаһының бошоноп ҡайтып килгәнен күреп:

— Атай, ниңә төҫөң ҡасып ҡайттың? — тип һорай. Атаһы, ҡыйын булһа ла, хан әмерен улына әйтергә мәжбүр була.

— Мин илдә тормаҫҡа ла риза, атай, һин миңә ат ҡына бир,— ти малай.

Атаһы:

---

* Уғыл — ул, малай.

— Улым, йылҡы өйөрөнә бар ҙа йүгәнеңде шылтырат. Ҡайһы ат әйләнеп ҡараһа, шуны тотоп менерһең,— ти.

Тимерхан йылҡы өйөрөнә килеп йүгәнен шылтыратһа, уға насар ғына тай әйләнеп ҡараған, ти. Егет, шул тайға үҙдек һалып, ата-инәһе менән хушлаша ла баш һуҡҡан яҡҡа сығып китә. Әй китә, әй китә был, китеп бара торғас, бөтөнләй юл да бөтә. Шунан китеп бара ине, бының исемен әйтеп берәү сәләм бирә. Әйләнеп ҡараһа, аҡ һаҡаллы бабайҙы күрә. Ул көтөүсе булған була*. Егетте үҙе менән алып китә лә, былай тип кәңәш бирә:

— Бына һуҡмаҡ. Ошо һуҡмаҡтан аттар һыу эсергә төшәр. Һин ышыҡланып ят та береһенә ҡамсы менән һуҡ. Һуғыу менән ат сүгәләп китер ҙә, һин уға менерһең дә алырһың! — ти**.

Тимерхан, ҡарт әйткәнсә, йылҡыларҙың һыуға төшкәнен көтөп ята. Береһенә ҡамсы менән һуға ла, ат сүгәләп киткән арала, өҫтөнә менеп тә ултыра. Ул ошо ат менән ары юлға сыға.

Бара торғас, бер ерҙә бик күп кешенең үлеп ятҡанын күрә.

— Һеҙҙе кем былай ҡырып китте? — тип ҡысҡыра Тимерхан үлектәргә.

Яуап биреүсе булмай. Өсөнсө тапҡыр ҡысҡырғас ҡына бер егет баш ҡалҡытып:

— Беҙҙе бер егет ҡырып, анау яҡҡа китте,— тип әйтә лә кире йығыла.

Тимерхан үле егет әйткән яҡҡа китә. Бер тау битенә барып етһә, унда бер сатыр күрә. Сатырҙа баяғы кешеләрҙе ҡырып киткән егет йоҡлап ята, ә аты сатыр алдында бәйле тора, алдына бойҙай һалынған, ти. Тимерхан атын теге егеттең аты янына килтереп бәйләй ҙә, үҙе сатыр эсенә инеп ята, егетте күҙәтә. Теге

---

* Әкиәттең «Тимершаһи батыр» исемендә яҙып алынған вариантында *(аңлатмаларҙы ҡарағыҙ)* күрешеү эпизоды диалог аша бирелә:

— Әй, Тимершаһи улым, ҡайҙа бараһың? — тип һорай. Тимершаһи:

— Минең исемде ҡайҙан беләһең, бабай? — ти. Бабай әйтә:

— Һин бәләкәй саҡта, мин һеҙҙең көтөүегеҙҙе көттөм, шунан беләм,— ти.

Тимершаһи үҙенең хәлен ҡартҡа һөйләп бирә.

** Теге вариантта аҡ һаҡаллы ҡарттың кәңәше түбәндәгесә:

— Мин йылҡыларҙы һыу эсергә алып төшәм. Йылҡылар араһында бик шәп һары айғыр булыр. Һин ағас артында ғына ҡасып ятып, шул һары айғырға ҡамсы менән һуғырһың. Шунан ат әйеләп китер ҙә, һин ырғып менерһең дә тотоп алырһың,— тине, ти.

егет уяныпп тышҡа сыҡһа, Тимерхандың бойҙай ашап торған атын күрә. Сатырға инһә, Тимерханды күрә лә:

— Кем рөхсәте менән бында инеп яттың? — ти.

— Миңә рөхсәт кәрәкмәй, үҙем инеп яттым! — ти Тимерхан.

Был икәү хәҙер көс һынашмаҡ булалар. Атҡа менеп, суҡмар менән һуғышалар. Тимерхан теге егетте атынан суҡмар менән йыға һуғып төшөрә. Инде үлтерә һуғайым тип, икенсегә суҡмарын күтәргәйне, егет тере ҡалдырыуҙы һорап, ялына башлай, дуҫ булырға вәғәҙә итә. Шунан былар дуҫлашып, теге батыр — үҙ юлына, Тимерхан үҙ юлына китә.

Бара торғас, Тимерхан бер тау башында бер сатыр күрә. Барып ҡараһа, унда өс гүзәл ҡыҙ сигеү сигеп ултыра. Тимерхан килә лә:

— Был донъяла минән дә батыр, һеҙҙән дә матур бармы? — тип һорай.

— Һинең батырлығың батырлыҡмы ни, Искәндәр батшаның Йәләлетдин Аҡбүрек исемле батыры — вәт батыр: ул һауанан — ҡош, ерҙән йылан да үткәрмәй! Беҙҙең сибәрлек сибәрлек түгел, Әсфәндияр батшаның бер ҡыҙы бар, ана шул ҡыҙ беҙҙән дә матур! — тиҙәр ҡыҙҙар*.

Тимерхан Йәләлетдин Аҡбүрек батырҙы эҙләп китә. Бара торғас, тау һыртында ат өҫтөндә йоҡлап ултырған Йәләлетдин Аҡбүрек батырҙы күреп, уға сәләм бирә. Егет иҫәнләшә лә:

— Кем рөхсәте менән килдең? Минән рөхсәтһеҙ һауанан — ҡош, ерҙән йылан да үтмәй,— ти.

Былар икәү көс һынашырға булалар. Тимерхан уны суҡмар менән һуға ла үлтерә. Шунан Искәндәр батшаға китә. Батша уны аш-һыу менән яҡшылап ҡаршы ала, һыйлай. Батша егеттән:

— Минең Йәләлетдин Аҡбүрек батырым бар. Ул һине бында нисек үткәрҙе? — тип һорай.

— Мин уны көс һынашҡанда үлтереп киттем,— тип яуап ҡайтара Тимерхан.

Искәндәр батшала ҡунаҡ булғандан һуң, егет Әсфәндияр батшаға юл тота. Бара, бара, бара торғас, уның ҡалаһына килеп етә. Килһә, ҡала ҡапҡаһы бикле.

---

* Теге вариантта киреһенсә: Йәләлетдин Аҡбүрек — Әсфәндияр батшаның батыры, ә тегеләрҙән дә матурыраҡ ҡыҙ — Искәндәр батшаның ҡыҙы. Ул Зәйнәп исемле икән.

Ҡала ситендә бер күл ята. Күл эргәһендә бик сибәр бер ҡыҙ бәйле тора.

Ошо күлдә ете башлы аждаһа йәшәй икән. Ҡала халҡы көн һайын уға бер ҡыҙ менән бер ҡуй биреп торғандар. Бөгөн Әсфәндияр батшаның ҡыҙына сират икән. Егет ҡыҙ янына килә лә аждаһаның күлдән сығыуын көтә. Бына бер заман ел-дауыл ҡуптарып, аждаһа күлдән килеп сыға ла ҡыҙға уҡтала. Шул ваҡытта Тимерхан ҡылысы менән тегенең ете башын бер юлы саба ла өҙә. Аждаһаны тураҡлап өйөп, батша өйөнә ҡыҙҙан алда килеп етә. Батша:

— Юл өҫтөндә аждаһа бар, һин нисек уны үтеп беҙгә килдең? — тип һорай.

Егет аждаһаны үлтереп, уның ҡыҙын ҡотҡарыуын әйтә. Батша бик шатлана:

— Ҡыҙымды ҡотҡарғаның өсөн нимә һорайһың, егет? — ти.

— Миңә ҡыҙыңды бир,— ти Тимерхан,

Батша риза була. Егет туйға ата-инәһен дә алып килергә тип ҡайтһа, туған ҡалаһы күрше батшалыҡ тарафынан емертелгән, халҡы ҡырылып бөткән, ти. Бер генә йорт имен ҡалған, ти. Унда тәһәрәт алып ултырыусы бер бабайҙы күреп ҡалып, Тимерхан шул ҡарттан ни булғанын, ата-инәһенең ҡайҙа киткәнен һораша.

— Атайыңдың да, инәйеңдең дә күҙҙәрен соҡоп алдылар ҙа үҙҙәре менән алып киттеләр,— ти теге бабай.

Тимерхан атаһы менән инәһен юллап килә лә теге дошман батшалыҡтың ғәскәрен ҡырып бөтөрөп, батшаның үҙен дә үлтерә. Ата-инәһе бикләнгән зинданға килә. Һаҡсыларҙы үлтереп, терәп ҡуйған таштарын алып ташлап, зинданды аса ла әскә инә, сәләм бирә. Атаһы менән инәһе быны ҡосаҡлап ала, күрешәләр. Атаһы Тимерханға:

— Фәлән ерҙә сихырсы Уткүҙ бар. Шуның майын алып ҡайтып һөртһәң, беҙҙең күҙ күрер ине,— ти.

Егет хәҙер сихырсы Уткүҙҙе эҙләп сығып китә. Юлда уға бер ҡарт* тап була. Ҡарт егеткә:

— Балаҡайым, һин Уткүҙҙе ҡылысың менән сабып үлтерә алмаҫһың. Ул һиңә ҡаршы ут бөркөп торор. Бына ошо таба менән битеңде ҡапларһың. Һин барып

---

* Теге вариантта был ҡарттың Сиражетдин исемле булыуы әйтелә.

ингәндә, ул ҡыҙынып ултырыр, һин уның артын ҡылысың менән яра сабырһың. Ике киҫәк майын ал, икенсе тапҡыр сапма! — ти*.

Егет сихырсы Уткүҙ шәһәренә барып керә. Әбейҙең өйөнә инә. Уткүҙ әбей шунда яман янған усаҡ алдында ҡыҙынып ултыра, ут ишеккә тиклем бөркөлөп тора, ти. Тимерхан, битен таба менән ҡаплап, әбейгә яҡынлаша ла ҡылыс менән арт һанын яра саба. Ике киҫәк майын алып, ҡайтып китә. Майҙы һөртөп, ата-инәһенең күҙен һауыҡтыра, туйға алып китә. Туйҙан һуң атаһын күрше батшалыҡҡа батша итеп ҡуя. Үҙе тыуған иленә ҡайтып, батша була.

Туйҙан ҡайттым да мин дә самауыр ҡуйҙым. Ҡорһаҡ асҡан. Әйҙә, улым, бергәләп сәй эсеп алайыҡ.

## ҒӘҘЕЛ БАТША

Бынан бик күп йылдар элек бер ханлыҡта Таҡыянус исемле хан йәшәгән. Таҡыянус бик уҫал, тупаҫ хан булған. Халыҡ йәберләнеп йәшәгән. Уның өс улы булып, олоһона Сөләймән, уртансыһына Хәсән, бәләкәйенә Хөсәйен исемен ҡушҡан. Ярлы кешеләргә ышанмайынса, һарыҡтарын да вәзиренән көттөргән.

Бер ваҡыт көтөү араһына ҙур бер аҡҡош килеп йөрөй башлай. Вәзир күреп ҡала ла ханға ҡайтып әйтә. Хан, ҡошто атып алып ҡайтырға ҡушып, мылтыҡ бирә. Вәзир ҡошто атып, хан алдына килтереп һала. Хан:

— Был ниндәй ҡош икән? — тип, әйләндереп-әйләндереп ҡараһа, ҡоштоң маңлайында ошондай яҙыу күрә: «Кем дә кем мине үлтереп, минең башты ашай, шул мәңгелек батша булып ҡаласаҡ». Хан яҙыуҙы уҡый ҙа ҡошто йолҡоп бешерергә ҡуша. Вәзире, ҡошто йолҡоп, бешерергә ҡуя.

Ошо ваҡытта хандың мәҙрәсәлә уҡып йөрөгән малайҙары төшкө ашҡа йүгерешеп ҡайтҡандар. Мейестә бешеп ултырған ҡошто алып, ҡоштоң башын Хөсәйен, ҡанатын Хәсән, тәпәйен Сөләймән ашай. Ашап бөтәләр ҙә кире мәҙрәсәгә йүгерәләр.

---

* Теге вариантта Сиражетдин ҡарт Тимерханға таба менән ергә үҙенең ҡылысын да бирә. Аҙаҡ шулай ти:

— Сихырсы һинән: «Ниңә килдең?» — тип һорар. Һин: «Хеҙмәт итергә килдем»,— тип әйтерһең. Ул ҡушҡан эштәрҙең бөтәһен дә эшләрһең. Аҙаҡ ул, һиңә тамам ышанһа, битенән ергә батып ултырыр. Шул саҡ һин, уны уртаға сабып, майын алырһың. Шунда торған халыҡ: «Тағы ла сап!» — тип әйтер. Һин уларҙы тыңлама: тағы ла сапһаң, ҡылыс үҙеңдең башыңа тейер»,— тине, ти.

Хан ҡайта, төшкө ашҡа теге ҡошто ултыртырға ҡуша. Килтерһәләр, ҡоштоң башы, башы менән бергә тәпәйҙәре лә, ҡанаттары ла юҡ. Хан аптырап ҡала, ҡысҡырып ебәрә:

— Ҡайҙа ҡуйҙың башын? Йәнең аяулы булһа, тап! — ти. Вәзир ары иткән, бире иткән, мәҙрәсәгә барып, теге шәкерттәрҙән һорашҡан. Малайҙар барыһын да һөйләп биргәс, хан балаларын үлтерергә ҡушҡан.

Көтөүсе вәзир, ике тауыҡ тотоп, бысаҡ алып, балаларҙы урманға алып киткән. Урманға барып еткәс:

— Балалар, мин һеҙҙе үлтермәйем. Үҙемә ҡурҡыныс булһа ла ҡотҡарам,— тигән.

Хөсәйен, Хәсән, Сөләймән рәхмәттәр әйтеп, ҡайтып күренмәҫкә вәғәҙә биреп, кейемдәрен ҡалдырып, мәрхәмәтле вәзир менән хушлашып, ни булһа ла булыр инде тип, өсәүләп юлға сыҡҡандар. Вәзир тауыҡтарҙы һуйып, ҡанына малайҙарҙың кейемен буяған да:

— Уландарыңды һуйҙым,— тип, кейемдәрен ханға илтеп биргән.

Өс туған ҡайҙа баргандарын да белмәй, илаша-илаша киткәндәр ҙә киткәндәр. Эске кейемдәре туҙа башлаған, аслыҡтан йөҙәгәндәр. Бара торғас, өс юл сатына килеп еткәндәр. Килеп етһәләр, юл сатында бер бағана, бағанала шундай яҙыу бар, ти: «Уңға киткән уңыр, һулға киткән туңыр, уртанан киткән шул көйө ҡалыр». Кем ҡайһы юлдан китергә белмәй торғанда, Хөсәйен:

— Беҙҙең яҙмыш ошолор, ағайҙар, айырылышырға тура килер. Оло ағай, һин — уң юлдан, уртансы ағай, һин урта юлдан кит. Мин, туңһам туңырмын, һул юлдан китәм,— тигән. Өс туған, бер-береһен онотмаҫҡа һүҙ бирешеп, ҡасан булһа ла осрашырбыҙ тип, хушлашып айырылышҡандар.

Хөсәйен һул юлдан бик оҙаҡ бара. Бара торғас, алда бер янғын күрә. Янғын, бының юлын арҡыры бүлеп, күкле-йәшелле булып һауаға күтәрелеп, тирә-яғын ялмап тора, ти.

Был утты дейеүҙәр яндырып ҡуйғандар икән. Ни өсөн тиһәң, янғын артында бейек тау булған, тауҙа алтын-көмөш, яҡут, гәүһәр, мәрмәр таштар өйөлөп ятҡан.

Хөсәйен:

— Ни булһа ла булыр инде, мин туңа торған юлдан киттем,— тип, ут күперенә барып ингән. Ут күперен үткәндә, бының ҡалдыҡ-боҫтоҡ кейемдәре янып бөткән;

аяҡ табаны яна башлағанда, ут күперен үтеп тә сыҡҡан.

Егет, тау битенә барып, хәл алырға ятҡан икән, йоҡлап киткән. Бер ваҡыт тау артында илаш, музыка, йыр ишетеп, уяныр киткән. Торған да тауыш ишетелгән ауыл яғына киткән. Ауыл осондағы бер әбейгә килеп ингән.

— Ай, балам, һин кем? Ҡайҙан киләһең, нисек килеп еттең? — тип һораған әбей.

— Мин йәтим кеше, илем дә, һыуым да, төбәп барған ерем дә юҡ, — тип, Хөсәйен бөтәһен дә һөйләп биргәс, әбей, быны йәлләп, кейемдәр кейҙергән, ти.

— Һеҙҙең ауылда ниңә бер кеше лә күренмәй, теге оста үҙҙәре илайҙар, үҙҙәре йырлайҙар, етмәһә, музыка тауышы ишетелә? — тигән егет.

— Унда, улым, беҙҙең хан кейәү һайлай, йөҙөк аша уҡ аттыра. Йөҙөк аша ата алған кешегә ҡыҙын бирә, үткәрә алмаһа, башын ҡырҡалар. Минең һинең кеүек берҙән-бер улым бар ине. Уның башын кисә киҫтеләр. Улым, һин ул тирәгә барып йөрөмә, үҙеңде ул итермен, минең башҡа бер кемем дә юҡ, — тип, илап ебәргән, ти.

— Юҡ, әбей, бармайым, — тигән Хөсәйен. Үҙе эстән генә: «Туңһам туңырмын, шулай ҙа барып ҡарарға кәрәк», — тип уйлай икән.

— Ханлығығыҙ менән танышайым әле, — тип сыҡҡан да майҙанға киткән. Барһа, кеше баштарынан тау өйөлгән, ти. Һаман да йөҙөк аша атыш бара икән. Хөсәйен ҡарап-ҡарап торған да атып ҡарамаҡ булған. Атайым тиһә, — уғы юҡ. Шул ерҙә ниндәйҙер бер ҡарт:

— Бынау бала күптән уҡ һорап йөрөй, бирегеҙ бер уҡ, атып ҡараһын, — тигән. Хөсәйенгә бер йыуан уҡ биргәндәр. Уҡты төҙәп тороп атып ебәргән икән, уҡ йөҙөктөң уртаһына тейеп, һыймағанлыҡтан йөҙөктө ярып барып ҡаҙалған.

— Бына кем икән ул хан кейәүе! — тип, халыҡ геү килә башлаған.

Хөсәйенде ханға алып барғандар. Хан ҡыҙы менән икеһен аҡ келәткә бикләп ҡуйғандар. Шул ерҙә егет:

— Мин һинең янда ҡуна алмайым, мин бәлиғ түгелмен. Бәлиғ булғас, килеп алырмын, — тигән дә сығып киткән.

— Ярай, мәргән егет, һин ҡасан килеп алһаң да, мин көтөрмөн, — тип ҡыҙ вәғәҙә биреп ҡалған.

Егет, ҡайтып, әбейҙең әҙерләгән ашын ашап, яҡ-

шылап ятып йоҡланы, ти. Ул әбейгә ул булып, яҡшы ғына йәшәй башланылар, ти.

Көндәрҙән бер көндә Хөсәйен теге алтын, көмөш, гәүһәр, яҡут өйөләп ятҡан тауға барып ҡайтырға булды, ти. Тауҙағы байлыҡтарҙы ҡарап йөрөгәндә тауҙың икенсе бер яғында музыка, йыр, илаш тауыштары ишетеп ҡалды, ти. Ҡайтҡас әбейҙән:

— Әбей, тау артында кеше йәшәйме? Мин музыка, йыр, илаш тауыштары ишетеп ҡалдым,— тип һорағайны, әбей:

— Улым, берүк бара күрмә. Ундағы халыҡтың даръяһында аждаһа йәшәй. Ул дарънанан һыу алыу өсөн көн дә бер кешене аждаһаға биреп торалар. Хандың ҡыҙына йәрәбә сыҡҡан, ти, уны даръяга ырғытырға әҙерләнәләр. Шуға музыка, илаш,— тип әйтте, ти.

— Юҡ, әбей, мин унда бармайым, ханлығығыҙ менән танышып бөтмәнем әле,— тип, егет сыҡҡан да, балта алып, теге ханлыҡҡа йүнәлгән. Барып еткән дә бер әбейҙән һорашҡан. Әбей:

— Хан ҡыҙын даръя ситендәге һарайға алып барып ташланылар. Тиҙҙән аждаһа сығып йотасаҡ,— тигән.

Хөсәйен даръя ситенә барғанда, аждаһа әле сыҡмаған булған. Ҡыҙ, үлем көтөп, илап ултыра, ти. Егет, ҡыҙҙы ҡотҡармаҡ булып, уны һарай эсендәге ағас бағанаға ҡуша бәйләгән. Шул ваҡыт аждаһа, күтәрелеп, һарай эсендәге ҡыҙҙы тыны менән тарта башлаған. Ҡыҙ бәйле булғанлыҡтан, уны тартып ала алмай икән. Аждаһа, һарай ишегенә башын тығып, тыны менән ҡыҙҙы һура башлағанда, Хөсәйен уның башын балта менән сабып өҙә лә, кәүҙәһен тураҡлап, тау итеп өйөп ҡуя, башын бер ҙур таш аҫтына ҡыҫтыра. Шунан үҙе теге әбейгә ҡайта ла ята.

Бер ваҡыт хан вәзиренә:

— Бар, ҡыҙымдың кейемдәре ҡалғандыр, шуларҙы алып ҡайт,— ти.

Вәзир, ҡыҙҙың иҫән булыуын күреп, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй, ти. Ҡыҙҙы сискән дә:

— Атайыңа аждаһаны мин үлтерҙе тип әйтерһең, минең кәләшем булырһың, мин һине ҡотҡарҙым,— тип, ҡыҙҙы алып ҡайтып киткән. Ҡайтҡан да:

— Бадишаһым, ҡыҙыңды мин ҡотҡарҙым, аждаһаны үлтерҙем, ҡыҙың минеке, туй үткәрәйек,— тигән.

Аждаһанан ҡотолгас, бөтә халыҡ һыу ташый, хайуан, ҡош-ҡорт дарънанан рәхәтләнеп һыу эсә, ти. Халыҡ бик ҡыуана, дыу килеп, вәзирҙе маҡтайҙар, ти.

Ҡыҙ менән вәзирҙе атҡа ултыртып, ҡыңғырауҙар тағып, туй була торған урынға, әлеге даръя ситенә алып киттеләр, ти.

— Күрегеҙ, йәмәғәт, был аждаһаны мин үлтерҙем. Бөгөн ҙур туй була. Бадишаның ҡыҙын алам,— тип, вәзир әллә кем булып йөрөй, ти. Шул ерҙә хан ҡыҙы:

— Мин һиңә барырға ҡаршы түгел, бер аҙ көтәйек. Аждаһаны үлтереүсе батыр һин булғас, башын таш аҫтынан алып халыҡҡа күрһәтеүсе лә һин бул инде,— тигән.

Вәзир ташты күтәреп-күтәреп ҡараған, урынынан да ҡуҙғата алмаған. Күрше ханлыҡтан да кешеләр саҡыртылған икән, улар араһында ла батыр табылмағас, хан:

— Бөтә кешенең өйөн ҡарап сығырға, ниндәй кеше заты бар, бөтәһен дә майҙанға килтерергә,— тигән. Бер ҡарт:

— Ауылда кеше заты ҡалманы, барыһы ошонда. Тик беҙҙең ханлыҡта, ауыл осондағы әбейҙә, аҙыптуҙып йөрөгән бер өтөк малай ғына ҡалды,— тигән.

Хан Хөсәйенде лә алып килергә бойорған. Хөсәйен теге ташты бер ҡулы менән генә күтәреп алған да аждаһа башын күккә еткәнсе ырғытып ебәргән. Бөтә халыҡ хайран ҡалған.

— Бына батыр табылды, бына кем икән ул хан кейәүе! — тип, вәзирҙе дарьяға ырғытҡандар. Хөсәйен үҙенең кем булыуын, ҡайҙан килеүен халыҡҡа баштанаяҡ һөйләп биргән дә:

— Мин әле кәләш ала алмайым, минең бәлиғем юҡ, бәлиғем еткәс, килеп алырмын,— тигән. Шунан бөтә халыҡ менән хушлашып, үҙ юлына киткән.

Хөсәйен көнө-төнө, айҙар-йылдар барған. Юлда барғанда бер кешегә осрай. Сәләм бирешеп, һалам алышҡас, теге кеше:

— Ете даръя уртаһында утрау бар икән, утрауҙың уртаһында, алтын һарай эсендә алтын сәсле ҡыҙ йәшәй икән. Кем шул ҡыҙ янына барып етә, шул уның кейәүе буласаҡ икән. Минең улым шунда киткәйне, әйләнеп ҡайтманы. Мин улымды эҙләп барам әле,— ти.

Хөсәйен:

— Туңһам туңырмын,— ти ҙә шул алтын сәсле ҡыҙҙы эҙләп китә. Китеп бара торғас, юл ситендә ятҡан ат башына текләп ҡарап торған бер ҡартты осрата. Сәләм биреп, һалам ала:

— Бабай, был ниндәй ат башы ул? Ниңә уға текләйһең? — тип һорай.

— Улым, был башты танымай торам, толпар башымы икән, әллә ат башымы икән тип ҡарап торам.

— Толпар башы нисек һуң ул?

— Толпар һыу эскәндә моронон күҙенә тиклем йыйырып эсәр булыр, ябай ат иренен генә тейҙереп эсер. Һин, улым, яңғыҙың ҡайҙан килеп сыҡтың? Ниңә улай бер үҙең генә йөрөйһөң? — тигән ҡарт. Хөсәйен үҙенең ҡайҙа китеп барыуын баштан-аяҡ һөйләп биргән.

— Улым,— тигән ҡарт,— унда барған кешенең кире әйләнеп ҡайтҡанын күргәнем юҡ. Унда барған бер кеше, даръяны үтә алмай, батып үлә. Мин һиңә ҡайһы бер кәңәшемде бирәйем, бик мәрхәмәтле, гәҙел егет күренәһең,— тигән ҡарт.— Ошо юлдан барғанда ҡара урманға осраһың. Уны үткәндә иҫән-һау ҡалһаң, тигеҙ ялан башланыр. Бер аҙ барғас, юл уңға боролор, һул юлдан китмә. Уң юлдан бер аҙ барғас, бөтә донъяны ҡаплап ятҡан ете даръяны күрерһең. Даръя янындағы кәрешкә үләне араһында Ҡырмыҫҡабил йөрөр. Уны һин тоҙаҡ ҡороп тоторға тырыш, тоҙаҡҡа эләктереүе ҡыйын булыр, батыр булһаң, барыбер тоторһоң. Ҡырмыҫҡабилде эләктергәс тә өҫтөнә менеп ултыр. Ул бер һикергәндә ҡырҡ ҡыр һикерер, ете даръя аша һикереп, утрауға төшкәндә, һин тиҙ генә төшөп ҡал, ул ары китер. Алтын һарай эсенә ингәс, бер бүлмәлә, алтын карауатта алтын сәсле ҡыҙ йоҡлап ятыр. Ул ҡыҙҙы алыуы ҡыйын булыр, үҙеңде даръяға ырғытып ҡуймаһын. Ул көс һынашырға тырышыр. Башта сәсен карауатҡа бәйлә, шунан ҡамсы менән берҙе осаһына һуҡ, уянғас, ысынлап яра башла. Аръяғын үҙең белерһең,— тигән ҡарт.

Хөсәйен, бабайға рәхмәттәр әйтеп, хушлашып, ары киткән. Ҡара урманды үткәндә пәрей, убыр, дейеүҙәр, төрлө ҡурҡыныс уҫал йәнлектәр сығып, юлға теҙелеп тороп, быны ҡурҡытмаҡсы булғандар. Хөсәйен ененән дә, йыланынан да, дейеүенән дә — береһенән дә ҡурҡмаған, урманды үтеп, тигеҙ яланлыҡҡа килеп сыҡҡан. Яланлыҡтан бара торғас, юл сатына еткән, бабай әйткәнсә, уң юл менән киткән. Бөтә донъяны ҡаплап ятҡан ете даръяның ситенә барып еткән. Ҡуйы кәрешкә үлән араһында ҡырҡ ҡыр һикерә торған Ҡырмыҫҡабилдең һикергеләп йөрөүен күреп, тоҙаҡ әҙерләй башлаған. Ҡырмыҫҡабилде эләктереүе еңел булмаған. Тоҙаҡты өҙөп ҡаса ла бик оҙаҡ ваҡыт күренмәй тора икән. Әҙәм заты юҡ икәненә ышанғас ҡына үҙ урынына килә икән. Хөсәйен аҙым һайын тоҙаҡ ҡороп бөтөрә, үҙе бик ныҡ йәшеренә. Ҡырмыҫ-

ҡабил тоҙаҡҡа эләгсү менән ер һелкенә башлаған. Егет, һикереп тороп, уның өҫтөнә менеп тә ултырған. Ҡырмыҫҡабил, ете даръяны аша һикереп, утрауға барып төшкән. Шул ваҡытта егет һикереп төшөп ҡалған да алтын һарай янына киткән.

Был утрауҙа кеше заты күренмәгән. Хөсәйен алтын һарай ишеген асып ингән дә, бүлмә һайын йөрөп, алтын сәсле ҡыҙҙы эҙләгән. Бер бүлмәлә генә күгәрсендәр осоп йөрөгән. Башҡа йән эйәһе күренмәгәнгә аптырап торғанда, Хөсәйен күрше бүлмәлә бер кешенең хырылдап йоҡлап ятҡанын ишетеп ҡала. Ишекте асып керһә, алтын карауатта алтын сәсле ҡыҙ тас салҡан төшөп йоҡлап ята, ти. Егет хайран ҡала. Ҡыҙ әйтеп бөтөргөһөҙ матур, һөйкөмлө, ти. Ҡыҙ күреп туя алмаҫлыҡ йөҙлө, күҙҙең яуын алырлыҡ сәсле, иҫтән яҙҙырырлыҡ һынлы булған. Хөсәйен, бабай ҡушҡанды иҫкә алып, ҡыҙҙың сәсен карауатына ҡуша бәйләгән дә ҡамсыһы менән осаһына берҙе һуғып ебәргән. Ҡыҙ ҡапыл уянып китеп, ырғып тороп китмәксе булған. Сәстәре бәйле булғас, тора алмаған. Шунда егет тегене яра башлаған. Ҡыҙ сәсен ысҡындыра алмағас:

— Батыр егет икәнһең, һин мине таптың, минең яныма килеп етә алдың. Ысҡындыр мине, мин ғүмерлек хәләл ефетең булырмын,— тип инәлә башлаған.

Хөсәйен менән алтын сәсле ҡыҙ бер-береһен ныҡ яратышып йәшәй башлағандар. Бер бүлмәлә ашап-эскәндәр, икенсеһендә музыка тыңлағандар, өсөнсөһөндә йоҡлар булғандар. Яр буйҙарына сығып, күңел асып йөрөгәндәр. Бик шат йәшәп киткәндәр.

Шулай йәшәп ятҡанда, бер дауыллы ҡараңғы төндә быларға бер убырлы ҡарсыҡ килеп инә:

— Бар икән донъяла рәхимле кешеләр. Һыуҙа кәмә менән йөрөй инем, ҡапыл дауыл сығып, тулҡын алып китте. Кәмәмде ярға һуғып ырғытты. Үҙем саҡ ҡотолоп ҡалдым,— тип һөйләнә-һөйләнә сисенә башлай был. Егет менән ҡыҙ был убырлы ҡарсыҡ икәнен белмәйенсә, йәлләп, үҙҙәре менән бергә торорға ҡушалар.

Хөсәйен бер үҙе һыу буйҙарына сығып йөрөр булған. Шул саҡтарҙа теге ҡарсыҡ:

— Ирең бик мәрхәмәтле, ғәҙел кеше икән. Ундай кешенең йәне үҙе менән бергә булмай, айырым була. Ҡыҙым, һин уның йәненең ҡайҙа икәнен һораш,— тигән. Ҡыҙ иренең йәне ҡайҙа икәнен һорашҡас, егет:

— Минең йәнем теге бүлмәлә ултырған бер мискә көрпә эсендә булыр,— тигән. Быны ишеткән убырлы

ҡарсыҡ бер мискә көрпәне, төндә тороп, даръяға ауҙарған. Иртән торһа, Хөсәйен һин дә мин йөрөп ята. Икәүһе генә ҡалғас, убырлы ҡарсыҡ ҡыҙға:

— Ул һине яратпай икән. Яратҡан кеше һөйгәненән йәнен йәшермәй, сере булмай. Һин унан тағы ла һорап ҡара,— тигән.

— Һин мине яратмайһың икән. Яратһаң, миңә ышанһаң, йәнеңдең ҡайҙа икәнен йәшермәҫ инең,— тип, ҡыҙ үпкәләргә тотонған.

— Ярай, улай булһа, минең йәнем ошо таҡыям эсендәге алтын эҫкәк булыр. Таҡыя эсендәге алтын эҫкәк юғалһа, мин үлгән булырмын,— тигән дә егет, таҡыяһын сисеп, эҫкәкте күрһәткән.

Быны ишетеп торған убырлы ҡарсыҡ төн уртаһы етеүен түҙемһеҙлек менән көтә башлаған. Төн булып, былар йоҡлап киткәс, ҡарсыҡ таҡыяны алған да һыуға бәргән. Иртән торғанда Хөсәйен үлек булған. Алтын сәсле ҡыҙ түгелеп иларға тотонған. Убырлы ҡарсыҡ, ҡыуана-ҡыуана тупһа аҫтына ҡәбер ҡаҙып, егетте күмеп тә ҡуйған. Шунан һуң:

— Илама, ҡыҙым, бойоҡма, минең менән һиңә күңелһеҙ булмаҫ. Әйҙә, тышҡа сығып һыу буйында йөрөйөк,— тип өгөтләп, алтын сәсле ҡыҙҙы даръя буйына алып сығып киткән. Теге ҡарсыҡ, ҡамыш араһына йәшереп ҡуйған кәмәһен алып, ишкәген сығарып, һыуҙа бер тегеләй, бер былай йөҙөргә тотонған. Үҙе:

— Күңелем асылып китте, ҡалай рәхәт, ултыр, ҡыҙым, яныма, күңел асайыҡ,— ти икән. Ҡыҙ ултырмаған, ҡайтҡан да Хөсәйендең ағаларына хат яҙырға тотонған. «Һеҙҙең ҡәҙерле ҡустығыҙ, минең һөйөклө ирем Хөсәйен вафат булды. Уны тупһа аҫтына күмдек. Бик ҡайғырам, минең бер кемем дә юҡ. Һеҙҙе күргем килә, килеүегеҙҙе көтәм»,— тип яҙған, ти. Ҡыҙ нисек килергә, утрауҙы нисек табырға икәнен дә яҙған, быны Хөсәйендең ағалары ғына белергә тейеш булған. Ҡыҙ, хатты бәләкәй генә өс мөйөшлө итеп бөкләп, күгәрсендәрҙең береһенә таҡҡан да осороп ебәргән.

Убырлы ҡарсыҡ бер көндө, ҡыҙҙы өгөтләй торғас, кәмәгә ултыртҡан да алып киткән. Убырлы ҡарсыҡты бер хан ебәргән булған икән. Әбей алтын сәсле ҡыҙҙы быға килтереп тапшырған. Хан, алтын сәсле ҡыҙҙы күреп, шаҡ ҡатты, ти, үҙе әбейгә бүләккә ни биререн белмәй, ти.

Тиҙҙән туй буласағын, алтын сәсле ҡыҙҙы аласағын халыҡҡа әйтеп, хан музыка әҙерләргә, мал һимер-

тергә, ҡымыҙ әсетергә ҡушты, ти. Халыҡ гөж килә, ти. Алтын сәсле ҡыҙҙы күрергә бөтә халыҡ сыҡҡан, ти.

Хөсәйендең ағалары хатты алғандар ҙа теге утрауға килеп төшкәндәр. Хөсәйенде тупһа аҫтынан ҡаҙып алып, һөйәп ҡуйҙылар ҙа эҫкәкле таҡыяны эҙләргә тотондолар, ти. Быларҙың береһе һыуға сурағай булып сумып эҙләргә тотонған, икенсеһе аҡҡош булып, утрау өҫтөнән осоп эҙләгән. Бер нисә көн эҙләгәндәр. Бер көндө сурағай булып һыуға сумған ағаһы Хөсәйендең таҡыяһын табып алып сыға ла уның башына кейҙерә. Хөсәйен сөскөрөп ебәргән дә күҙен асҡан. Өс ағай-эне, ҙур һал яһап, һамаҡлашып, ҡыҙҙы эҙләп киткәндәр.

> Йәһәт әйҙәп, һалды бәйләп йөрөрҙәр,
> Алда тулҡын, арттан елдәр өрөрҙәр.

Бик оҙаҡ барғандан һуң, бер яр күренгән. Ярға килеп етһәләр, бер әбей һарыҡ тиреһе йыуа икән. Әбей тирене йыуа ла йыуа, йыуа ла йыуа, йыуа торғас, туҙҙырып бөтөргән, ти. Өс ағай-эне ҡыҙығып ҡарап торғандар ҙа:

— Әбей, ниңә тирене йыуаһың да йыуаһың? — тип һорағандар.

— Ханымдың биргән бойороғон үтәнем, шуға алтын сәсле ҡыҙ алып ҡайтып бирҙем, ул миңә ҙур байлыҡ бирәсәк, шуға ҡыуанысымдан ни эшләргә белмәйем,— тигән, ти, әбей. Егеттәр, шунда уҡ ҡарсыҡты тотоп алып, муйынына таш бәйләп һыуға батырғандар ҙа яр өҫтөнә сыҡҡандар. Ярҙан күтәрелгәс, ҡояш яҡтыһында балҡып торған бик матур ҡала күренгән. Урам тулы кеше, йүгерешеп, сабышып йөрөйҙәр, ти. Уйын да көлкө, музыка уйнап тора, ти.

— Был ниндәй ҡыуаныс, ни булды? — тип һорағандар былар, бер кешене туҡтатып.

— Ҡалабыҙға алтын сәсле ҡыҙ килтерҙеләр, бик матур, тиҙәр. Ханыбыҙ шул ҡыҙға өйләнә. Бөтә кешегә байрам итергә ҡушты. Тиҙҙән туй башланасаҡ, алтын сәсле ҡыҙҙы күрәбеҙ тип ҡыуанышабыҙ.

Өс ағай-эне өсәүләшеп, хан йортона барып кергәндәр ҙә:

— Ә, һин икәнһең кеше үлтереүсе. Минең ҡатынға өйләнмәксе булаһың икән әле, хәҙер үк кәрәгеңде бирәм! — Хөсәйен шулай тине лә, ҡылысын ҡайрай башланы, ти. Хан убырлы ҡарсыҡтың ҡөҙрәте менән генә йөрөгән икән. Убырлы ҡарсыҡ булмағас, ҡаршылыҡ күрһәтә алмаған.

— Үлтермә инде, егет, ҡатыныңды ла, батшалығымды ла ал, вәзир итеп кенә ҡалдырһаң да ризамын,— тип инәлгән. Хөсәйен, батшалыҡты алып, тәхеткә менеп ултырған. Йөҙөктән аша атып алған ҡыҙҙы оло ағаһына алып биргән, аждаһанан ҡотҡарылған ҡыҙҙы кесе ағаһына килештергән, ҙур итеп туй үткәргәндәр. Туйҙа бөтә халыҡ: ярлыһы ла, хәйерсеһе лә ҡатнашҡан, ашағандар-эскәндәр, типтереп күңел асҡандар.

Хан булып алғас, Хөсәйен халыҡҡа ирек биреп, рәхәт йәшәтә башлаған, ти. Был батшаны «Ғәҙел батша» тип йөрөтөр булғандар.

Егеттәрҙең атаһы, ҡартлыҡ көнөндә ханлыҡтан төшөрөлөп, бөлөнөп, уғрылыҡ менән йәшәй башлаған, ти. Бер кешенең һыйырын урлап тотолғас:

— Ғәҙел батша хөкөм итһен,— тип, Хөсәйенгә алып килгәндәр. Хөсәйен атаһын таныған да үткән ғүмерен һөйләп бирергә ҡушҡан. Атаһы бөтә булған хәлде түкмәй-сәсмәй, әнәһенән-ебенә тиклем һөйләп биргән.

— Улыңды күрһәң, таныр инеңме? — тигән Хөсәйен.

— Таныр инем, Хөсәйендең уң яҡ битендә миң бар ине.

— Бына улың — мин булам, мәрхәмәтле вәзирең бар ине, ул беҙҙе үлтермәне, ireккә ебәрҙе. Бына минең ағайҙарым,— тип, Хөсәйен ағаларын да күрһәтте, ти.

— Һин, атай, ҡомһоҙ ҙа, ғәҙелһеҙ ҙә кеше булғанһың. Кешеләрҙе рәнйеткәнһең, ҡартлыҡ көнөңдә шуның көйәһе килгән,— тигән. Шулай ҙа, бөлөнөп бөткән атаһын йәлләп, Хөсәйен уны үҙ эргәһенә алған, ти. Был һынлы гонаһлы кешене лә ғәфү иткәс, кешеләр:

— Донъяла беҙҙең батшанан да ғәҙел кеше юҡтыр. Мәңге йәшәһен! — тип ҡыуанышҡандар, ти.

Был батша әле лә бар, ти. Бөтә халыҡ ҡыуанышта йәшәй, ти.

## КИНИӘБАТЫР

Борон бер ярлы ғына ҡарт йәшәгән. Уның ҡатыны, өс улы булған. Ул сыбыҡ-сабыҡ, утын һатып көн иткән.

Берҙән-бер көндө ҡарт, ишек алдында өйөлгән сыбыҡтар араһында ҡара тауыҡ күреп, уға оя яһап ҡуйҙы, ти. Ҡара тауыҡ аҙнаһына бер алтын йомортҡа

һалыр ине, ти. Улар байып киткәндәр, ә ҡарт үлеп ҡалған. Үлер алдынан:

— Ҡара тауыҡты һаҡлағыҙ, тамағығыҙ ас, өҫтөгөҙ яланғас булмаҫ,— тип әйтеп ҡалдырған, ти. Аталары үлеп киткәс, атаһының ҡустыһы еңгәләренә өйләнмәксе булды, ти. Ул:

— Мин һине алам. Тик һин иң элек ҡара тауыҡты һуйып бешерерһең,— тине, ти.

Ҡатын тауыҡты һуйҙыртып, сөгөн менән мейес төбөнә бешерергә ултырта. Ул мулла менән ҡәйнешенең килеүен көткән була. Бер ваҡыт уйнап асығып, өс малай ҡайтты, ти. Әсәләре йомошҡамылыр сыҡҡан булған. Малайҙар, өйҙә тәмле еҫ сыҡҡанын белеп, эҙләнә башлағандар. Бешеп ултырған итте табып, өлкәне — башын, уртансыһы — ҡанатын, кесеһе — йөрәген ашаны, ти.

Кис була, мулла менән буласаҡ кейәү киләләр.

— Йә, һуйҙыңмы тауыҡты?— тип һорай ҡәйнеше еңгәһенән.

— Ултырығыҙ, ит әҙер,— тигән был. Сөгөндө килтергән. Мулла ит турарға булды, ти. Ул:

— Башы ҡайҙа?— тип һораны, ти.

— Мин ашаным,— ти өлкән улы.

— Ҡанаты ҡайҙа?

— Мин ашаным,— ти уртансыһы.

— Йөрәк ҡайҙа?

— Мин ашаным,— ти Кинйәбатыр.

— Мин тауыҡты тотошлай бешереп, беҙҙең алға ҡуйырға әйткәйнем. Һин шартты боҙғанһың. Мин һине алмайым,— тине, ти, ҡәйнеше.

Мулла менән ҡәйнеше ҡайтып киткәс, ҡатын улдарын өйҙән ҡыуып сығарып ебәргән, ти. Кинйәбатыр атаһынан ҡалған ҡылысты алды, ти.

Өс туған бер ҡалаға килеп ингәндәр. Кинйәбатыр, остағы бер өйҙөң ишеген шаҡып:

— Ҡолһоҙҙарға ҡол булам, улһыҙҙарға ул булам,— тине, ти. Бында бер яңғыҙ ғына әбей йәшәй икән:

— Минең улым юҡ, миңә ул булырһың,— тине, ти, әбей. Әбей, сығанаҡ бармағын ҡанатып, икмәк баҫа башланы, ти.

— Ни эшләп икмәкте ҡан менән баҫаһың, инәй?— тип һораны, ти, Кинйәбатыр.

— Беҙҙә һыуға аждаһа хужа, һыу бирмәй,— тине, ти, әбей. Кинйәбатыр, ике биҙрә алып, һыуға киткән. Бер тауыш:

— Кем һыу ала? — тип ҡысҡырҙы, ти. Кинйәбатыр:

— Мин, ҡунаҡ, — тине, ти. Һыуҙы алып килеүе булған, әбей эсеп тә бөткән.

Кинйәбатыр, тирә-яҡты ҡарамаҡ булып, тауға менһә, ҡаланың бер яғы илай, бер яғы көлә, ти. Батыр бының сәбәбен әбейҙән һораған икән, әбей:

— Беҙ һыу алған өсөн аждаһаға бер ҡыҙ бирәбеҙ. Бөгөн батшаның ҡыҙына сират етте. Һыу эргәһендәге суйын өйҙә бер дилбегә бөткәнсе бәйләнгән ҡыҙ ултыра. Бараһы булма, кире әйләнмәҫһең, — тигән, ти.

Ағалары йоҡлағас, батыр ҡылысын алып киткән, ти, әлеге ҡыҙ эргәһенә. Ҡыҙҙы ысҡындырғыс:

— Бында ни эшләп килдең? Һәләк булаһың бит? — тине, ти, ҡыҙ егеткә. Шул ваҡыт өй дәүмәллеге аждаһа килә, ти, ажғырып. Егетте тыны менән тартып алып, йотоп ебәргән икән, егет аждаһаны ҡылысы менән уртаға ярып килеп сыҡҡан. Аждаһаны тураҡлап, башын таш аҫтына тыҡҡан, ти, был. Ҡыҙ ата йортона ҡайтып китте, ти.

Икенсе көндө батша, халыҡтарҙы йыйып:

— Кеше йыйылып бөттөмө? — тип һораны, ти. Вәзир:

— Бер әбейҙә өс егет бар, килмәнеләр, — ти.

Вәзирен батша егеттәр артынан ебәрә, егеттәрҙең барғылары килмәй, вәзир менән тартышалар, ти. Тартыша торғас, риза булдылар, ти. Батша ҡыҙы Кинйәбатырҙы күргәс тә:

— Бына ошо егет мине ҡотҡарҙы, — тип әйтте, ти.

— Ул малай тауыҡ та үлтерә алмай, мин үлтерҙем аждаһаны, — тине, ти, вәзир шул ерҙә. Шунан батша:

— Аждаһаны кем үлергән, шул уның башын күрһәтһен, — тип бойорҙо, ти.

Ташты бераү ҙә ҡыбырлата алмай, ти. Кинйәбатыр таш аҫтынан аждаһаның башын алып һауаға ырғытып ебәрҙе, ти. Ҡала халҡы бик ҡыуанған, батша үҙенең ҡыҙын, батшалығын Кинйәбатырға бирергә булған. Батыр:

— Мин әле йәш, ағайыма бирегеҙ, — тигән, ти. Шунан батша булып алған ағаһынан ҡала ситенә өй һалдыртып, үҙе шунда йәшәй башлаған, ти.

Бер төндө йоҡлап ятҡанда Кинйәбатыр тояҡ тауышы ишетә. Уянып китһә, ҡулына бер бөртөк алтын сәс эләгеп тора. Ә ат тояғының эҙҙәре, ярты аршин ергә батып, ярылып ята, ти. Ағаһы ҡустыһына эҙҙе ҡыуып китергә кәңәш бирҙе, ти.

— Угыңды ҡаҙап кит! Әгәр һөт тамһа, ҡыуанырбыҙ; ҡан тамһа, эҙләргә сығырбыҙ,— тине, ти, агаһы.

Кинйәбатыр сыгып киткән. Эй бара, эй бара, бара торгас, бер мәскәй әбейгә тап була. Кинйәбатыр әбейҙән тояҡ эҙенең кемдеке булыуын һорай.

— Минең ете гиҙгән апайым бар, шуга бар,— тигән әбей. Кинйәбатыр ары киткән, мәскәй әбейҙең донъяны ете гиҙгән апайына барып еткән. Уныһы:

— Минең ун ике гиҙгән апайым бар, шуга бар,— тигән. Кинйәбатыр ун ике гиҙгән әбейҙе эҙләп барып тапҡан. Унан әлеге эҙҙе һорашҡан.

— Ул мәрхүм Ерәнсәй батыр толпарының эҙе. Ерәнсәй батыр — һыу башында йәшәй ине. Уның һарайының ишегенә таш һөйәлгән, ипләп кенә алырһың. Эстә Һыуһылыу исемле ҡыҙ булыр. Ҡыҙҙың һарайы агайының һарайы эсендә булыр. Ҡапҡалары өс ҡат булыр, тутыҡҡан булыр, майлап алырһың,— ти ҙә әбей Кинйәбатырга бер һарыҡтың осаһын ҡырҡып бирә.— Һин ингәндә, ҡыҙ һуҙылып йоҡлап ятыр. Һин уны уятма. Ишегенең төбөндә еҙ ҡамсыһы торор, шуны ал да, «Етер, егет, мин һинеке»,— тигәнсе, туҡма,— ти.

Был ваҡытта Һыуһылыу, килер бәләне һиҙеп:

— Агайымдың башына еттең, минең башыма ла етергә уйлайһыңмы?— тип, Ерәнсәй батырҙың толпарын туҡмап үлтергән булган. Тынысланып, ишеген дә элмәй йоҡларга ятҡан, ти.

Кинйәбатыр килә, һарай ишегенә һөйәлгән таштарҙы ипләп кенә ситкә алып ҡуя. Һыуһылыу йәшәгән һарайҙың ҡапҡаларын, һарыҡ майы менән майлап, шым гына аса, ишектән инә. Барып инһә, Һыуһылыу иҙрәп йоҡлап ята, ти. Ишек төбөндә эленеп торган еҙ ҡамсыны ала ла тотона ҡыҙҙы һыҙырырга. Эй һыҙыра, эй һыҙыра, һыҙыра торгас, ҡыҙ түҙмәй, «Мин һинеке»,— ти. Шулай тип әйткәс кенә, егет туҡтай. Бергә тора башлайҙар.

Һыуһылыуҙың сәсе алтын була. Егет ҡыҙга сәсен һыуҙа йыуырга ҡушмай.

Берҙән-бер көндө ҡыҙ сәсен йыуа. Һыу аҫты батшаһының вәзирҙәре һыуҙан агып килгән бер бөртөк алтын сәсте тотоп алалар ҙа батшага күрһәтәләр. Батша сихырсы ҡарсыҡты саҡыра:

— Ошо йылганың үрендә һыу ҡыҙы йәшәй икән, уны миңә алып килә алһаң, ярты байлыгымды бирәм,— ти.

Әбей еңел генә бер кәмә эшләтеп ала ла йылга үренә

ишеп китә. Барып сыҡҡас, кәмәһен ҡомлоҡҡа күмә. Кинйәбатыр һунарҙан ҡайтып килгән саҡ була, әбейҙе осрата. Һыуһылыуға иптәш булыр тип әбейҙе һарайға алып ҡайта.

Берҙән-бер көндө әбей ҡыҙға:

— Батырҙың йәне ҡайҙа икән? Ул һине яратһа әйтер,— тип, йәнен һорарға ҡоторта. Кис, Кинйәбатыр һунарҙан ҡайтҡас, Һыуһылыу:

— Батырҙарҙың йәне үҙендә булмай, һинең йәнең ҡайҙа?— тип һорай.

— Ул ниңә кәрәк булды әле һиңә?— ти егет.

— Һин мине яратмайһың, яратһаң, әйтер инең,— тип, Һыуһылыу үпкәләргә тотонған. Ҡатыны көсләшкәс, Кинйәбатыр:

— Йәнем — олтырағымда,— тигән булған. Тегеләр йоҡлап киткәс, әбей егеттең олтырағын һыуға ташлаған.

Иртәгеһен иртүк тороп, Кинйәбатыр һунарға киткән. Әбейҙең уйы барып сыҡмағас, тағы ҡыҙҙы ҡотортҡан:

— Ирең һине яратмай икән шул, яратһа, дөрөҫөн әйтер ине,— тигән.

Кис булғас, Кинйәбулат һунарҙан ҡайтҡан. Ашап-эсеп, ял итергә ятҡан. Ҡатыны килеп, үпкәләгән булып:

— Һин мине яратмайһың икән. Йәнеңдең ҡайҙалығын да дөрөҫ әйтмәгәнһең!— тигән.

— Йәнем — ҡылысымда,— тигән Кинйәбатыр был юлы.

Иртәгеһен батыр тағы һунарға киткән. Әбей Һыуһылыу эргәһенә килгән.

— Йәне — ҡылысында,— тигән Һыуһылыу. Әбей кисен ҡылысты ҡойоға һалған, батырға бер ни ҙә булмаған. Быныһы ла барып сыҡмағас, әбей тағы үсекләгән.

— Һин бик бәхетһеҙ икәнһең, ҡыҙым, ирең һине ысынлап та яратмай икән шул,— тигән.

Кис ире ҡайтҡас, Һыуһылыу илай-илай иренә үпкәләгән. Кинйәбатыр сыҙамаған.

— Йәнем — балдағымда,— тип әйтеп һалған. Быны ишетеп торған әбей, батыр йоҡлап киткәс, балдағын һурып алып, һыуға ташлаған. Иртәгеһен Кинйәбатыр тормаған, ул үлгән, ти. Һыуһылыу түшәлеп ятып илай, ти. Әбей:

— Илама, балам, ул торор. Әйҙә, һыу буйына барып киләйек!— тип, ҡыҙҙы алып киткән, ти.

Кәмәгә ултырыуҙары була, һыу аҫты батшалығына килеп тә етәләр. Батша бик ныҡ шатланған. ти.

«Ете көн, ете төн туй яһайым, шунан ғына ҡушылам»,— тип әйтә, ти, батша.

Инде Кинйәбатырҙаң ағаларына килһәк, улар уҡтан ҡан тамып торғанын күргәндәр. Шунан тиҙ генә әҙерләнеп юлға сыҡҡандар, барып та еткәндәр, ти. Килеп етһәләр,— ҡустылары үлеп ята. Юлда бик йонсоп, асығып килгәс, башта балыҡ тотоп, тамаҡ ялғап алмаҡ булғандар. Оло ағаһы һыуҙан бер балыҡты эләктереп тә алған, биҙрәгә һалған. Эсен ярһалар, балдаҡ килеп сыҡҡан. Таҙартып, Кинйәбатырҙаң бармағына кейҙергәйнеләр, тегеһе ырғып килеп торҙо, ти.

— Ай-һай, оҙаҡ йоҡлап киткәнмен икән,— тип, аптырай, ти, үҙе.

— Йоҡлағанһың йоҡламай ни, беҙ килеп етмәһәк, ятыр инең әле һаман ошонда һуҙылып!— тигәндәр ағалары.

Эштең айышына төшөнгәс, һыу аҫты батшаһына юл тотҡандар, ти, былар. Барып етһәләр, бер әбей һыу буйында эсәк арытып* ултыра икән.

— Ни булды, ниңә шул саҡлы эсәк йыуаһың? — тип һорағандар егеттәр.

— Мин батшаға һыу ҡыҙы Һыуһылыуҙы алып килдем, шуға туй башлана, батша миңә ярты мөлкәтен бирҙе,— тигән маҡтанып.

Бына бер ваҡыт тирә-яҡтан саҡырылған ҡунаҡтар килеп бөтөп, туй башланған.

— Һыу ҡыҙы Һыуһылыуға кем аяҡ яһай**?— тиҙәр икән.

Кинйәбатыр сыҡҡан. Ул ашты тоҙһоҙ йүнәткән, ти. Һыуһылыуға килтереп биргәндәр икән, ул тәмләп ҡараған да:

— Кем ашты, мыҫҡыл итеп, тоҙһоҙ яһаны? Шул кешенең үҙен бында алып килегеҙ!— тигән. Егет килеп кергәс тә, Һыуһылыу һуштан яҙған, ти.

Икенсе көндө бәйге үткәрҙеләр, ти. Алдан килеүселәргә ҙур бүләктәр биргәндәр. Кинйәбатыр иң арттан килгән. Килеп еткәс:

— Миңә нәмә?— тип һораған икән, Һыуһылыу:

— Һиңә мин!— тип, иренең толпарына атланды ла ултырҙы, ти.

Шунан ни, күк толпарға атланып, елеп ҡайттылар ҙа киттеләр, ти.

---

* Арытыу — тағатып йыуыу.

** Аяҡ яһау — беренсе булып аш әҙерләү.

# ӨС БАТЫР

Борон-борон заманда бер бик ғәйрәтле баһадир кеше булған. Уның өс улы бар ине, ти. Үҙе бик ҡартайып, йәше һикһәнгә етте, ти. Көндәрҙән бер көн был ҡартҡа ауырыу тейеп, өс улын янына саҡыртып, васыятын әйтте, ти:

— Әй, уландарым, ахыр мин был донъяны ҡуйырмын. Минән һеҙгә бер ҡылыс ҡала. Ул ҡылыс һеҙҙе ризыҡһыҙ итмәҫ. Ризығығыҙ батша ҡулында булмаһын. Сәфәргә сыҡһағыҙ, өсөгөҙ бергә сығығыҙ. Икегеҙ йоҡлағанда, берегеҙ һаҡта тороғоҙ. Башығыҙға килгән хәүеф-хафаларҙан имен булырһығыҙ,— тип васыятын әйтте лә, башын яҫтыҡҡа терәп, вафат булып ҡалды, ти.

Өс улына, аталары әйткәнсә, сәфәр сығырға тура килде, ти. Улар башҡа батшалыҡҡа етмәк булғандар. Бик күп ер киткәс, көн батып, ҡараңғылана башланы, ти. Шунда бер аҙ ял итеп, ашап-эсеп алдылар ҙа, аталары ҡушҡанса, икеһе ятып йоҡланы, олоһо ҡарауыл ҡалды, ти. Төн уртаһы еткәс, бер аждаһа һауанан ҡойроғон болғап төшөп килә икән, егет аждаһаның ҡойроғон киҫеп алған да кеҫәһенә һалып ҡуйған. Ҡустылары уянған, күргән хәүефте был ҡустыларына белдермәгән.

Ашанылар, эстеләр ҙә ары киттеләр, ти, былар. Тағы бер ни тиклем ер үткәс, ҡараңғы төшкән. Ашап-эсеп, икеһе йоҡларға ятты, уртансылары ҡарауылға ҡалды, ти. Ҡарауылсы егет алыҫта бер ут яҡтыһы күрҙе, ти.

— Туҡта әле, кем икән унда, яҡындан барып күрәйем,— тип килеп ҡараһа, өйҙөң эсендә ете башлы бер дейеү пәрейе ултыра, ҡулында алтын балдағы бар, ти. Үҙе ултырған ерендә йоҡоға киткән, ти. Егет:

— Туҡта әле, был дейеүҙе һәләк итәйем,— тип аҡрын ғына ишекте асып инде лә, дейеүҙең башын ҡылыс менән өҙә сабып, ҡулындағы алтын балдағын һалдырып алды, ти. Шунан туғандары янына ҡайтып, ағаһы менән ҡустыһын уятты, әммә ләм-мим һүҙ әйтмәне, ти. Тороп, ашап-эсеп, юлға сығып киттеләр, ти, былар яңынан.

Бер ҡалаға етеп барған саҡта, ҡояш байып, ҡараңғы төшә, ҡаланың ҡапҡалары ябыла, һис тә керергә мөмкин түгел, ти. Шул ерҙә быларҙың икеһе ятып йоҡлай, кесеһе ҡарауылда тороп ҡала. Шул саҡта утыҙ туғыҙ кеше килә. Егет, был кешеләрҙе күргәс, юл уртаһына

сығып, сәләм бирҙе, тегеләр быны сәләмен алдылар, ти.

— Ҡайҙа бараһығыҙ? — тип һораны, ти, егет.

— Беҙ фәлән ҡалаға, фәлән батшаны баҫырға барабыҙ,— тинеләр тегеләр.

— Әйҙәгеҙ, мин дә һеҙҙең менән барайым,— тип әйтте лә егет, ҡырҡынсы кеше булып, былар менән китте лә барҙы, ти. Бара торғас, был кешеләр егеткә:

— Һинең ниндәй эшкә оҫталығың бар? — тип һоранылар, ти.

— Ҡайҙа юғары ер бар, шунда менә алам,— ти егет.

Бара торғас, ҡалаға етеп, батшаның һарайы янына килделәр, ти. Әлеге егет, бер бик оҙон бауҙың башына тимер ырғаҡ бәйләп, һарайҙың түбәһенә ташланы ла, ырғаҡ бер ергә барып эләккәс, үрмәләп, һарай түбәһенә менде, ти. Шунан тегеләргә:

— Шул бауға үрмәләп, минең янға менегеҙ,— тине, ти. Шулай тип әйтеү менән тегеләрҙең береһе йәбешеп менде. Егет уны ҡулы менән тартып алды ла, бер ҡолағын ҡырҡып алып, үҙен сарҙаҡҡа ырғытты. Шунан икенсеһен, өсөнсөһөн саҡырып мендереп, ҡолаҡтарын ҡырҡып ала торҙо, үҙҙәрен ырғыта торҙо, ти. Утыҙ туғыҙынсыһының да һыңар ҡолағын ҡырҡып, кеҫәһенә һалды ла, киҫелгән баштары менән кәүҙәләрен батша һарайы сарҙағына өйөп ҡуйҙы, ти.

Шунан был, һәйбәт кенә бер яйын табып, батшаның өйөнә инде лә, өс ҡыҙының да балдаҡтарын, яулыҡтарын алды, ти. Икенсе бүлмәгә кергәйне, бәләкәй генә эт өрә башланы, ти. Эттең муйынын ҡылыс менән сабып өҙә лә һаман йөрөй был. Һарай эсен ҡарап бөткәс, «мин булмаһам, был батшаның үлгән көнө булыр ине», тип яҙыу ҡалдыра ла сығып китә, ағалары эргәһенә ҡайта.

Иртән тороп тышҡа сыҡҡанда, батша эт тора торған бүлмәгә инеп ҡараһа, эт үлеп ята. Өйгә инһә, ҡыҙҙарының өсөһө лә: «Балдағым да юҡ, яулығым да юҡ»,— тип илашып ултыралар, ти. Батша һарай бүлмәһенә керһә, бер яҙыу ята. Яҙыуҙы алып уҡый. Сарҙаҡҡа менһә, утыҙ туғыҙ баш менән утыҙ туғыҙ кәүҙә ята. Баштарҙың һәр береһенең берәр ҡолағы юҡ. Батша хайран ҡала. Вәзирҙәрен саҡыртып, әмер бирә:

— Хәҙер үк, утыҙ туғыҙ ҡолаҡты табып килтерегеҙ! — ти.

Бөтә халыҡты тикшереп сығалар, берәүҙә лә артыҡ ҡолаҡ юҡ. Батша һорай:

— Тағы ла кеше ҡалманымы?

— Тағы өс кеше бар, мосафирҙар. Уларҙан был эш булмаç. Әле генә ҡалаға килеп инделәр, үҙҙәре бик фәҡир, ас-яланғастар. Ашарға ризыҡ таба алмай аптырап йөрөйҙәр,— тиҙәр вәзирҙәр.

— Хәҙер үк яныма алып килегеҙ, ашатырбыҙ, эсерербеҙ,— ти батша. Вәзирҙәр шул сәғәттә өс егетте батшаға алып киләләр. Алдарына аш килтерәләр, эсерәләр. Егеттәр, ашап-эсеп, тамам хәл алдылар, ти. Батша үҙе ишек артына йәшенеп тора, былар үҙ-ара һөйләшә башлайҙар. Ағалары:

— Мин булмаһам, һеҙ әллә ҡайҙа үлеп ятҡан булыр инегеҙ,— ти.

— Һе, ни эшләп үләйек, ти, беҙ?— тиҙәр ҡустылары.

— Ни эшләп, имеш. Һеҙ йоҡлағанда, һыу эсенән бер аждаһа сығып килә ине, бына ҡылыс менән ҡойроғон киçеп алып ҡалдым,— тип кеçәһенән ҡойроҡто сығарып күрһәтә оло ағай.

Шунан икенсеһе лә, үҙе менән булған хәлде һөйләп, егеттәрҙең алдына теге ете башлы дейеү пәрейенең балдағын сылтыратып сығарып һалды, ти.

— Ағайҙар, батырлыҡтарығыҙ һеҙҙең ярайһы. Шулай ҙа, әгәр мин булмаһам, һеҙ бында ысынлап та ултырмаç инегеҙ. Мин утыҙ туғыҙ ҡараҡтың утыҙ туғыҙ ҡолағын киçеп алдым, үҙҙәрен әрҙәнә итеп өйҙөм. Шулай итеп мин һеҙҙе лә, батшаны ла үлемдән ҡотҡарҙым. Бына ул юлбаçарҙарҙың ҡолағы!— тип, утыҙ туғыҙ ҡолаҡты кеçәһенән сығарып өçтәлгә һалды, ти. Ҡолаҡтарҙың бөтәһен бер епкә теҙгән, ти, был.

Егеттәрҙең һүҙҙәрен ишетеп, батша хайран ҡалған, «һай, афарин», тип ҡысҡырып уҡ ебәргән. Ҡасып торған еренән килеп сыҡҡан да, егеттәрҙең олоһона — оло ҡыҙын, уртансыһына — уртансы ҡыҙын, кесеһенә кесе ҡыҙын бирмәксе булған. Батша, өс егеттең өсөһөн дә яратып, хөрмәт итеп, башта оло ҡыҙын туйларға кәңәшләште, ти.

Батшаның оло ҡыҙы Гәүһәрташ исемле булған. Айҙың ун дүртенсе кисәһе кеүек нурлы йөҙлө, ҡыҙыл яҡут ирендәрен тибрәндереп, ынйы кеүек тештәрен күрһәтеп көлгәндә, һарай эстәре яҡтырыр ине, ти. Донъяла был беренсе гүзәл ҡыҙҙы күргәндә, кешеләрҙең күҙе ҡамашып, һушһыҙ булып йығылырҙар ине, ти.

Батша, вәғәҙәһендә тороп, бер нисә көндән туй яһамаҡ булып, мәжлес өсөн төрлө-төрлө ашамлыҡтар әҙерләтеп, ҡалалағы барлыҡ кешеләрҙе саҡырған, бөтә

халыкҡа — фәҡирҙәргә лә, байҙарға ла алтын өләшкән. Һәр береһе:

— Эй, батшам, ғүмергә яҡшы йәшә, ғүмереӊ оҙон булһын,— тип батшаға рәхмәт уҡыны, ти.

Төн үтеп, ҡояш ҡалҡҡас, бөтә вәзирҙәр эшкә тотонғас, Гәүһәрташ баҡсаға ингән, һыу буйына барып, һыу кереп, ҡара ебәк кеүек сәсен үреп, матур күлдәген кейеп, сибәрләнеп, йөҙөнә пәрҙә кейгәс, ҡараусы ҡыҙҙары оло ағайҙыӊ өйөнә килтереп ултырттылар, ти.

Гәүһәрташтыӊ кейәүе был көндө нисек тиҙерәк еткерергә белмәй, ти. Кейәү килер көндө халыҡ төрлө уйындар башланы, ти. Батшаныӊ хеҙмәткәрҙәре төрлө шиғырҙар әйтеп, кейәү килерен зар-интизар булып көтөп торҙолар, ти. Кейәү килеп, һарайҙыӊ ишек төбөнә баҫҡас, ике ҡатын ике ҡулынан етәкләп, ҡыҙҙыӊ бүлмәһенә алып инеп, алтын креслоға ултырттылар, ти. Һәр төрлө ашамлыҡтар килтереп, ашатып-эсереп, Гәүһәрташ менән кейәүҙе биҙәп-әҙерләп ҡуйылған бүлмәлә ҡалдырҙылар, ти. Егет, еӊгәләр сығып киткәс, ишекте бикләп, ҡыҙ менән уйын-көлкөләр һөйләшеп, бер-береһенә ғашиҡ булдылар, ти. Бер-береһенән күҙҙәрен алалмайынса, мөхәббәттәре артып, мөхәббәт тамырҙары тибеп, минут һайын бер-береһенеӊ ауыҙҙарынан үбеп, йоҡларға яттылар, ти.

Туйҙы ана шулай, бик яҡшы итеп үткәргәндәр. Иртәгеһен Гәүһәрташтыӊ ата-әсәһе бер ҡыҙ артынан:

— Әгәр ваҡыттары булһа, хәл белешергә керербеҙ,— тип әйттерҙеләр, ти. Гәүһәрташ кейәүгә был хәбәрҙе әйткәс, кейәү:

— Бик хуп булыр, хәҙер керһендәр,— тип әйтте, ти. Ҡарт менән ҡарсыҡ килеүгә бик матур кейенеп ҡуйҙылар, ти. Ата-әсәһе кергәс, кейәү:

— Эй, ҡайным, ҡәҙерлем, ғүмерегеҙ оҙон булһын,— тип фатиха ҡылдылар, ти. Батша һүҙ башлап:

— Хәҙер шатлығымдан шаштым, ғибәҙәткә күсәм*, һин шаһ булырһыӊ,— тигәйне, егет:

— Эй, ҡайным, ҡыҙығыҙҙы ҡабул күреп, никахлап алдым, ә шаһлыҡта үҙегеҙ тороғоҙ,— тип яуап ҡайтарҙы, ти. Батша, аҡыллы яуапты ишеткәс, кейәүенеӊ ике күҙенән үбеп алды, ти.

Батша уртансы ҡыҙы Йәүһәрташты, егеттәрҙеӊ уртансыһына биреп, шулай уҡ оло туй үткәргән, икен-

---

* Ғибәҙәткә күсеү — донъя мәшәҡәтенән ваз кисеп, аллаға ғибәҙәт ҡылып ҡына йәшәү.

се бер ҡалаға шаһ ҡылып, мәрхәмәтле булырға бойорған.

Батшаның кесе ҡыҙы Яҡутташ бигерәк матур, бигерәк белемле ине, ти. Быныһын инде егеттәрҙең кесеһенә биргән. Батша, кесе ҡыҙы менән кейәүе янына килеп:

— Эй, минең улым тиңе күргән кейәүем! Мин ҡартайҙым, һине батша ҡылып, үҙем ғибәҙәткә китәм,— тигән.

Ҡарт тәхетте кейәүенә тапшырған, өс йылдан һуң вафат булған. Кейәүе илле йыл батша булып торҙо, ти. Ғәҙеллек менән хакимлыҡ итте, ти. Уның ике улы булып, аталарынан һуң улар батша булып торҙолар, ти.

## ҠЫРҠАТАР БАТЫР

Борон-борон заманда бер ҡарттың бер улы булған. Улының исеме Ҡырҡатар икән. Ҡырҡатар кәләш алған. Кешеләр уны күралмай башлағандар. Шул саҡ Ҡырҡатар:

— Башымды ситкә алып сығып китәм!— тигән.

Ҡырҡатар, ҡатынын да үҙе менән алып, сығып киткән. Бер шишмә инешенә килеп еткәндәр ҙә, ҡара-ҡаршы ултыртып, ике өй һалып ингәндәр. Ҡырҡатар бик оҫта һунарсы булған. Көн дә һунарға йөрөгән. Шулай йәшәп ятҡандар былар.

Бер көндө Ҡырҡатар ҡатынына әйтә:

— Һыуға ҡош ҡауырһыны ташлама!— ти.

«Ирем ниңә улай тип әйтә икән?» — тип, ҡатыны уйға ҡалған. Бер иләк ҡауырһын йыйып алған да һыуға алып барып ташлаған. Түбәндә бер батша йәшәгән икән. Йылға буйына килһә, батша ағып килгән ҡауырһындарҙы күреп ҡала. Күреп ҡала ла:

— Моғайын, йылға башында мин белмәгән кеше йәшәйҙер,— ти. Шулай ти ҙә батша үҙенең ҡырҡ вәзирен саҡырып ала:

— Мин йылға башына барып киләм!— ти. Батша, ҡырҡ вәзирен эйәртеп, йылға буйлап китә. Баралар былар, бара торғас, Ҡырҡатарҙың өйөнә тап булалар. Батша өйгә инә. Инһә, бер ҡатын ултыра, итәгендә — ике бәләкәй генә малайы. Батша ҡатынға әйтә:

— Һин ни эшләп япа-яңғыҙ ултыраһың?— ти.

— Ултырмайынса ни эшләйем?

— Миңә кейәүгә сыҡһаң, мин ireңде үлтерер инем,— ти батша.

— Ул бик көслө баһадир, һин уны нисек үлтерәһең? Уны юкҡа ғына Ҡырҡатар батыр тип атамағандар бит,— ти ҡатын. Батша әйтә:

— Беҙ уны хәйлә менән үлтерербеҙ!— ти.

— Ниндәй хәйлә менән?— тип һорай ҡатын.

— Мин һиңә ат ҡылынан үрелгән арҡан бирермен. Ирең ҡайтҡас: «Әйҙә, тартыш уйнайыҡ! Кем көслөрәк?»— тиген. Шунан һин уның ҡулдарын артҡа шаҡарып бәйләрһең дә, бәйҙе өҙә алмаһа, миңә ҡысҡырырһың. Тауышыңды ишетеү менән килеп инермен дә беҙ уны үлтерербеҙ,— ти.

Ире ҡайтҡас, ҡатын:

— Әйҙә, тартыш уйнайыҡ, ҡайһыбыҙ көслөрәк икән?— ти. Ҡырҡатар әйтә:

— Ни эшләп тоҡ-томалдан уйнарға булдың әле һин? Әллә берәйһе килдеме?— ти. Шулай ти ҙә ҡатынының ҡулын артҡа ҡайырып бәйләй.

— Йә, өҙөп ҡара һуң улай булғас,— ти. Ҡатын бәйҙе өҙә алмай. Шунан Ҡырҡатар ҡатынының ҡулын сисә лә үҙенекен бәйләтә. Аҙ ғына тартҡандай иткәйне, ҡыл арҡан өҙөлөп тә китә. Шунан былар ятып йоҡлайҙар.

Иртәгеһен Ҡырҡатар торған да һунарға киткән. Ҡырҡатарҙың сығып китеүе булған, батша йүгереп килеп тә ингән.

— Йә, арҡанды өҙҙөмө?— тип һорай батша.

— Аҙ ғына тартҡайны, арҡан өҙөлдө лө китте,— ти ҡатын. Батша аптырап ҡалған.

— Былай булғас, ул бик көслө баһадир икән,— ти батша.— Хәҙер мин һиңә ҡайыш бирәм, уны өҙә алырмы икән?— ти.

Ире ҡайтҡас, ҡатын тора ла:

— Әйҙә, тағы тартыш уйнайыҡ,— ти.

— Ҡайҙан таптың әле һин ул тартыш уйынын?— ти ире.

— Бер үҙем япа-яңғыҙ өйҙә ултырам да ултырам. Күңелһеҙ булып китә,— ти ҡатын.

— Ярай улайһа, бир ҡулыңды, бәйләйем,— ти Ҡырҡатар. Ҡатынының ҡулын бәйләй ҙә: — Йә, өҙ! — Кисәге арҡанды мин өҙгәйнем, бөгөн һин өҙ!— ти.

Ҡырҡатар ҡатынының ҡулын һаман сисмәгәс, ҡатыны илай башлай. Илағас, Ҡырҡатар ҡатынының ҡулын сисә. Хәҙер ҡатыны Ҡырҡатарҙың ҡулын артҡа ҡайырып бәйләй. Ҡырҡатарҙың аҙ ғына көсәнеүе була, ҡайыш өҙөлөп тә китә. Шунан былар ятып йоҡлайҙар.

Иртәгеһен Ҡырҡатар иртүк тороп һунарға китә. Батша өйгә йүгереп килеп инә лә һорай һала:

— Йә, ҡайышты өҙҙөмө? — ти.

— Өҙҙө, — ти ҡатын.

Шул ерҙә батша ике вәзиренә әмер бирә:

— Шундай-шундай илдә, йөҙйәшәр бер әбей бар, — ти. — Шуға барығыҙ ҙа: «Был мәкерле донъяла* иң нык ҡайыш ниндәй тиренән яһала?» — тип һорағыҙ, ти.

Вәзирҙәр йөҙйәшәр әбейҙе эҙләп китәләр. Баралар, һорайҙар:

— Кем тиреһе иң нык? — тиҙәр.

— Был донъяла кеше тиреһенән дә нығыраҡ тире юҡ!** — ти.

Вәзирҙәр ҡайталар ҙа:

— Әбей «Кеше тиреһенән дә нығыраҡ тире юҡ», — тине, тиҙәр.

— Барығыҙ, — ти батша, — шул әбейҙең тиреһен һыҙырығыҙ, — ти. — Ул ашар ашын ашаған, йәшәр йәшен йәшәгән инде, — ти.

Тегеләр барып әбейҙе һуйғандар ҙа, тиреһен һыҙырып алып, батшаға килтереп биргәндәр. Шунда уҡ әбейҙең тиреһен дуплап, ҡайыш эшләгәндәр. Батша ҡайышты Ҡырҡатарҙың ҡатынына биргән:

— Мә әле, быныһын өҙә алырмы икән?

Ҡырҡатар һунарҙан ҡайтҡас, ҡатыны әйтә:

— Йә әле, тағы уйнап ҡарайыҡ, — ти. Ҡырҡатар әйтә:

— Әллә берәйһе килдеме? Ҡайҙан уйлап сығарҙың әле шул тартышты? — ти.

— Ҡайҙа ул! Кем килһен инде беҙгә, — тигән була ҡатын. Шул ерҙә Ҡырҡатар ҡатынының ҡулын бәйләй. Ҡатыны тарта-тарта — ҡайышты өҙә алмай.

— Йә, өҙ!.. Мин ике арҡанды өҙҙөм, ә һин берҙе лә өҙә алмайһың, — ти Ҡырҡатар.

Ҡулын һаман сисмәгәс, ҡатыны иларға тотона. Шунан Ҡырҡатар ҡатындаң ҡулын сисә. Хәҙер ҡатын

---

* Мәкерле донъя — боронғо Көнсығыш поэзияһында донъя (йыһан) мәкерле яуыз көс рәүешендә алға баҫтырыла. Кешеләр ҡәһәрле яҙмыштан интегәләр, уға ҡаршы косһөҙҙәр. Көнсығыш пессимизмының быңдай формаһын фарсы поэзияһының классиктарынан алып төрөкмәндәрҙең Мәхтүм-Ҡолой һәм башҡа шағирҙарҙың ижадында — һәр урында күрергә мөмкин. Ул төрки халыҡтарының фольклорында ла сағыла. Башҡорт әкиәтенә был эпитеттың һәм «мәкерле донъя» образының ана шул үҙенә күрә бер халыҡ-ара тәжрибәнән килеп кереүе характерлы *(Н. Дмитриев иҫкәрмәһе).*

** Донъя халыҡтарында киң таралған ҡараш буйынса, кеше тиреһе — бөтә төр йәнлек тиреләренән дә нығыраҡ тире һанала.

иренең ҡулын артҡа ҡайырып бәйләй. Ҡырҡатар тартып-тартып ҡарай — өҙә алмай. Кеше тиреһе тегенең ҡулын ҡабырғаларына ҡыҫа, тартҡан һайын нығыраҡ һыға. Шул ерҙә ҡатын тышҡа сыға ла батшаны саҡыра. Батша үҙенең ҡырҡ вәзире менән килеп тә инә. Ҡырҡатарҙы шунда уҡ үлтерәләр ҙә былар, кәүҙәһен һөйрәп алып барып, сыуыл артына тығалар. Батша сымылдыҡты тартып аса ла ҡатын янына инеп тә ята.

Ҡырҡатарҙың ике улы бар икән: береһе дүрт йәштә, икенсеһе ике йәштә. Был ике малай иҙәндә йүгерешеп уйнап йөрөйҙәр. Ҡырҡатар ята, ята, ята торғас, быға йән ингән. Батша менән ҡатын йоҡлап киткәс, Ҡырҡатар иҙәндә уйнап йөрөгән ике малайын саҡырып алған.

— Уландарым, килегеҙ әле! — тигән.— Әсәйегеҙгә барығыҙ ҙа: «Атайыбыҙҙың ҡылысын ат итеп уйнатайыҡ әле, әсәй?» — тип ҡылысты һорап алығыҙ,— тигән. Балалар әсәләренән ҡылысты һорайҙар, әсәләре бирмәй.

— Атайығыҙ үлде, үлек кешене атай тип әйтмәгеҙ, бына был батшаны атай тип әйтегеҙ! — ти. Батша әйтә:

— Йә, балаларҙың ни ғәйебе бар, бир ҡылысты, уйнатһындар! — ти. Шулай тигәс, ҡатын ҡылысты алып биргән. Малайҙар ҡылысты ат итеп уйнарға тотонғандар.

Батша менән ҡатын тағы ла йоҡлап киткәндәр. Ҡырҡатар малайҙарҙы саҡырып алған да, ҡынды үҙенең ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, малайҙарына ҡылысты тартырға ҡушҡан:

— Тартығыҙ ҡылысты! — тигән. Малайҙар икәүләшеп тарталар-тарталар, ҡылысты ҡындан һура алмайҙар. Һура алмағас, Ҡырҡатар уландарынан аяғын систерә. Малайҙары аяғын сискәйне, ҡылыстың һабын ике аяғы менән ҡыҫа ла үҙе тарта башлай. Тарта торғас, бер-ике иле самаһындай ғына булып ҡылыстың йөҙө күренде, ти. Ҡырҡатар малайҙарына:

— Ҡырҡығыҙ ҡайышты! — ти. Улдары икәүләшеп ҡайышты ҡырҡып өҙә.

— Бар, йоҡларға ятығыҙ! — тип, Ҡырҡатар уландарын ебәрә лә, үҙе өйҙән сыҡһа, кәртә эсендә ҡырҡ вәзир баҫып тора. Былар, Ҡырҡатарҙы батшалары тип уйлап, юл бирәләр:

— Батша килә! — тиҙәр. Ҡырҡатар:

— Бына һеҙгә юл! — ти ҙә ҡылысы менән башта-

рын өҙә лә ташлай. Ҡырҡ вәзирҙең башын ишек төбөнә өйөп ҡуя ла, инеп, яңынан теге сыуал артына ята.

Иртәгеһен ҡатын менән батша иртүк торалар. Батша ҡатындан һорай:

— Һин төш күрҙеңме?

— Күрҙем,— ти ҡатын.

— Йә, ниндәй төш күрҙең, һөйлә әле?— ти батша.

— Мин шундай төш күрҙем,— ти ҡатын.— Имеш, ҡырҡ вәзирҙең ҡырҡ башы ҡырҡ ҡат ер аҫтында ята,— ти. Батша әйтә:

— Ә мин төшөмдә ҡырҡ вәзиремдең ҡырҡ башы ишек алдында өйөлөп ятҡанын күрҙем,— ти. Ҡырҡатар сыуал артынан килеп сыға ла:

— Ух, шаҡшы! Ҡаның менән өйөмдө буяма!— тип батшаны аяғынан урамға һөйрәп сығара ла ҡатынына ҡысҡыра:

— Сығып ҡарап тор! Бына батшаңды хәҙер мин ни эшләтәм,— ти.

Ҡырҡатар батшаны ете юл сатына алып бара ла тәүҙә ҡулдарын быуындарынан киҫеп сыға, шунан аяҡтарын быуын-быуын сапҡылап сыға. Хәҙер ҡатынынан һорай:

— Күрҙеңме? Ҡәнәғәтһеңме минең хөкөм менән?— ти.— Ҡәнәғәт булһаң, һине лә шулай быуын-быуын киҫкеләп сығам. Әллә һиңә атайың хөкөмө кәрәкме?— ти.

— Миңә атайымдың хөкөмө кәрәк,— ти ҡатын.

Ҡырҡатар ҡатынды эйәртә лә, йәйәүләп, ҡайныһына китә. Ҡатынының атаһына килә. Ҡайныһы әйтә:

— Эй, кейәү, ауырыныңмы әллә? Бик ябығып киткәнһең,— ти.

— Эх, ҡайным,— ти Ҡырҡатар,— мин бер осоҡ та ауырыманым,— ти. Үлеп терелгәс, нисек ябыҡмайһың инде!— ти.

— Ни булды?— тип һорай ҡайны.

— Бына шулай ҙа бына шулай,— ти Ҡырҡатар.— Һинең ҡыҙың мине батшанан үлтертте, ә бына был ике ғәзиз бала миңә ярҙам итте,— ти.

— Һин был усҡаны алып сыҡ та, ете юл сатына алып барып, быуын-быуынын тураҡла,— ти ҡайныһы. Ҡырҡатар ҡатынды ете юл сатына алып барып быуын-быуын тураҡлай ҙа ҡайны өйөнә ҡайта.

Ҡырҡатарҙың ике балдыҙы бар икән. Еҙнәләре яңғыҙ ҡалғас, былар тартҡылаша башлай:

— Еҙнәмә мин барам! Юҡ, еҙнәмә мин барам!— тиҙәр. Аталары әйтә:

— Шыбаға тотошоғоҙ. Кемегеҙ өҫкә сыҡһа, шул барыр,— ти. Шыбаға тотошҡайнылар, кесе ҡыҙ өҫкә сыға. Шунан Ҡырҡатар кесе балдыҙы менән ҡушыла. Был ҡатыны Ҡырҡатарға ебәктән ян кереше үреп бирә. Шунан Ҡырҡатар ҡайныһынан ҡайтып китергә рөхсәт һорай:

— Мин ҡайтайым инде, ҡайным. Минең тыуып үҫкән ерем бар,— ти.

— Ҡайт, улым, ҡайт,— ти тегеһе.

Ҡырҡатар ҡайтып киткән. Ҡатынын да үҙе менән алған. Ҡайтып килһәләр, юлда бер бәләкәй генә ҡыҙҙы осраталар. Был ҡыҙ Ҡырҡатарҙың артынан ҡалмай, йүгереп эйәреп килә, үҙе илай, ти. Ҡырҡатар ҡатынына әйтә:

— Әйҙә, алайыҡ бынау ҡыҙҙы үҙебеҙ менән. Моғайын, берәйһенең ҡыҙы аттан ҡолап ятып ҡалғандыр,— ти. Шунан Ҡырҡатар ҡыҙҙы күтәреп алған да үҙенең атына менгәштереп ултыртҡан.

Бына Ҡырҡатарҙың торған еренә яҡынлашҡандар. Ҡарайҙар, бөтә халыҡ урамда, етмәһә, ғәскәр килеп тулған, ти. Яңы батша һайлайҙар икән. Ҡырҡатар күренеү менән, ғәскәр уға ҡаршы сабып килә лә башлаған. Ҡырҡатар йәйәһен алып ҡараһа, кереше ҡырҡылған, ти. Әлеге ҡыҙ, йәйәнең керешен ҡырҡып, аттан һикереп төшөп ҡалған икән. Ҡырҡатар ғәскәрҙән тайпылып ситкә сабып сығып киткән. Ҡатыны:

— Ҡалъяныңда минең баш тарағым ята! Тараҡты һыуға тейҙермә!— тип ҡысҡырып ҡалған. Ҡырҡатар бер йылғаны йөҙҙөрөп сыҡҡас, ҡальянын асып ҡараһа, кереш барлыҡҡа килде, ти. Шунан йәйәһен тиҙ генә йүнәтеп алған да, тегеләргә ҡарап, уҡ осора башлаған икән, бөтә ғәскәр ҡырылып бөтә яҙҙы, ти. Иҫән ҡалғандары быныӊ аяғына йығылғандар:

— Харап итмә беҙҙе, Ҡырҡатар! Беҙ һине батша итербеҙ!— тигәндәр. Ҡырҡатар йылғаның бирьяғына йөҙҙөрөп сыҡҡан да ғәскәр менән батшаның торған еренә килгән. Килгәс, батшаның өйөндә туҡталған. Шунан ул батша булып киткән. Ике ҡатын алып, рәхәтләнеп йәшәп ята, ти.

# ҠАРАСА БАТЫР

Борон заманда булған, ти, бер бай ҡарт менән ҡортҡа. Быларҙың ун бер улы булған, ти. Бер ваҡыт ҡарт менән ҡортҡа үлеп китеп, ун бер улы ла ярлыланған. Аталарынан ҡалған мал да бөткән. Ун ағай-эне бергәләшеп, эш эҙләп сығып киткән, кеселәре өйҙә тороп ҡалған.

Китеп бара торғас, былар Кирпәсте ҡылысында ял итергә туҡтағандар. Шул урында һыуға манып, икмәк ашап алдылар ҙа китергә тип торғайнылар, бер кеше ҡаршы осрап:

— Кирпәсте ҡылысынан йыраҡ түгел бер өй булыр, шунда барығыҙ,— тип әйтте, ти. Шунда китеп баралар ине, бер ҡарсыҡ быларға ҡаршы йүгереп сыҡты ла:

— Эй, балаларым, тоҙһоҙ өйрә эсеп китегеҙ!— тип өндәште, ти. Ун ағай-эне:

— Һинең тоҙһоҙ өйрәңде эсеп ултырғансы, ни ҡәҙәре ер атларбыҙ, эсмәйбеҙ,— тип киттеләр ҙә барҙылар, ти.

Быларҙың өйҙә ҡалған кесе энеләре: «Мин дә эшләргә китәйем әле»,— ти ҙә, атаһынан ҡалған ҡылысты алып, йыраҡ юлға сығып китә. Ағалары юлынан килеп, теге урында туҡтап һыу менән икмәк ашап ала ла тағы китә. Әлеге әбей быға ла ҡаршы сыға:

— Тоҙһоҙ өйрә ашап кит, улым!— ти.

Был егеттең исеме Ҡараса батыр икән. Ҡараса батыр әбейгә әйтә:

— Ярай, керәм, өйрәңде ашайым,— ти.

Керә. Керһә, әбей бик күп итеп аш әҙерләгән: ҡаҙылы ял менән бишбармаҡ. Ҡарасай* бик һәйбәт ашап бөткәс, фатиха ҡыла ла артабан китә. Ике юл сатына барып сыға. Береһе — Алабуғатыға, икенсеһе Кирпәстегә киткән юл. Икеһенең araһында бағана, бағанала яҙыуы бар. «Уңға киткән уңыр, һулға киткән туңыр», тип яҙылған.

Ҡарасай уйлап тора ла: «Ни булһа ла булыр, һулға китеп туңайым»,— тип һулға китә. Китеп ултыра, китеп ултыра, китеп ултыра торғас, түбәһе күккә тейеп торған бер күк һарай күренә. Шул һарайҙың эсенә барып керһә, бер бите ай, бер бите көн кеүек бер ҡыҙ ултыра, ти. Ҡарасай:

---

* Текста батырҙың исеме Ҡарасай тип тә, Ҡараса батыр тип тә ике төрлө алынған.

— Һаумы, ҡарындаш?— тип һаулыҡ һорашты. Теге ҡыҙ:

— Һаубыҙ,— тип кенә яуап бирҙе, ти.

Ҡараса батыр:

— Ете башлы ялмауыҙҙың көсө ҡайҙа? — тип һорай. Ҡыҙ күрһәткәйне, Ҡараса батыр ялмауыҙҙың көсөн алды ла аяғы менән тартып өҙҙө*, ояһын туҙҙырып ташланы, ти. Шунан:

— Ялмауыҙҙың көсөн алдым, хәҙер минеке булды...— ти.— Ул ете башлы ялмауыҙ ҡайҙан ҡайтып килер? Ҡайһы юлдан ҡайтыр?— тип һорай. Ҡыҙ:

— Ул баҡыр күперҙән килер, килгән саҡта ер тетрәтеп, таш яуҙырып ҡайтыр,— ти.

Ҡараса батыр шунда бара ла баҡыр күпер аҫтында тегенең ҡайтҡанын көтөп ята. Бына бер ваҡыт, ер тетрәтеп, ялмауыҙ ҡайтып килә. Бының аты бер аяғын күпергә баҫты ла, икенсе аяғын баҫмайынса, шып туҡтаны, ти. Ете башлы ялмауыҙ:

— На! На! Ҡараса батыр килгән тип ҡурҡаһыңмы әллә?!— тип атын ярырға тотонғайны, Ҡараса батыр:

— Мин килдем шул!— тип ырғып торҙо ла тегенең алдына килеп баҫты, ти. Шунан былар алыша, көрәшә башлайҙар. Көрәшә торғас, Ҡараса батыр ялмауыҙҙы ергә күтәреп һуҡты ла, һалмалыҡҡа турап, өйөп китте, ти.

Ҡарса батыр ары китә. Бара торғас, тағы күккә тейеп торған бер күк һарай күрә. Бынаһы туғыҙ башлы ялмауыҙҙыҡы икән. Барып керһә, был һарайҙа ла бер ҡыҙ ултыра. Ҡараса батыр бында ла ялмауыҙҙың көсөн һорай. Ҡыҙ:

— Ана тора!— ти.

Ҡараса батыр туғыҙ башлы ялмауыҙҙың көсөн өҙгөләп ташлай ҙа уның ҡайҙан ҡайтыуын һорай. Ҡыҙ:

— Ул көмөш күперҙән килер, килгән саҡта ер тетрәп торор,— ти.

Егет күпер аҫтына барып ята. Бына бер ваҡыт туғыҙ башлы ялмауыҙ ҡайтып килә. Күпергә еткәс кенә, аты бер аяғын баҫа, икенсеһен баҫырға ҡурҡа. Туғыҙ башлы ялмауыҙ:

— На! На! Әллә Ҡараса килгән тип ҡурҡаһыңмы?!— ти.

Шул урында Ҡараса батыр:

— Мин килдем шул!— тип ырғып килеп сыҡты ла

---

* Бында мифик зат — ялмауыҙҙың ниндәйҙер бер әйбер һүрәтендә һаҡланған йәшерен көсө тураһында һүҙ бара.

тегенең менән һуғышырға ла тотондо, ти. Алышып, көрәшә торғас, Ҡараса батыр быныһын да күтәрә һуғып, һалмалыҡҡа тураны-өҙгөләне лә ары китте, ти.

Китеп бара, китеп бара был, китеп бара торғас, тегеләренән дә ҙурыраҡ тағы бер һарай күрә. Бара, керә, бик матур ҡыҙ ултыра. Һорашып белһә, бында ун ике башлы ялмауыҙ йәшәй икән. Ҡараса батыр бының да көсөн һорап алып өҙә. Шунан ҡайҙан ҡайтыуын һорай.

— Алтын күперҙән ҡайта, ҡайтҡанында ер тетрәтеп, буран олотоп ҡайта,— ти ҡыҙ.— Барма унда, егет, йөрөмә. Ул үҙендәге йәне менән дә бик хәтәр, бер ҙә юҡҡа харап булырһың,— ти.

— Ни эшләп бармайым, барам, үлтерәм мин уны,— ти ҙә Ҡараса батыр алтын күпер аҫтына төшөп ята.

Бына бер саҡ, ер тетрәтеп, күк күкрәтеп, ел-дауыл ҡуптарып, ун ике башлы ялмауыҙ ҡайтып килә. Күпергә килеп еткәйне, бының аты ла шып туҡтаны ла ҡуйҙы, ти.

— На! На! Әллә Ҡараса килгәнме, кемдән өркәһең?— тип атын ярырға керешкәйне, Ҡараса батыр күпер аҫтынан килеп сыҡты ла эй тотондолар, ти, былар көрәшергә. Бер Ҡараса батыр күтәреп һуҡһа, бер ялмауыҙ сөйөп ебәрә, ти. Шулай йән-фарман көрәшә торғас, Ҡараса батыр тегене тамам хәлдән тайҙырҙы, ти. Ялмауыҙ үҙендәге көсө менән генә быны еңә алмаҫтай булғас, хәйлә ҡороп:

— Әйҙә, Ҡараса, миңә барып, бер аҙ тамаҡ ялғап, хәл алайыҡ,— тип, «ҡунаҡҡа» саҡыра башлағайны, Ҡараса батыр:

— Ә, шулаймы, һиңә хәл алырға кәрәкме?— тине лә, йән асыуы менән ҡабат йәбешеп, тегене шундай итеп күтәреп алып бәрҙе, ялмауыҙ, дыңҡ итеп, бөтә кәүҙәһе менән ергә батты, ти. Ҡараса батыр тиҙ генә ҡылысын һурып алды ла ялмауыҙҙың ун ике башын ун ике яҡҡа сабып өҙөп, кәүҙәһен һалма-һалма турап, өйөп ҡуйҙы, ти.

Үҙе лә бик арыған була Ҡараса батыр. Ултырып хәл ала ла тағы сығып китә. Китеп бара торғас, бер тауға килеп етә. Шул тауҙан ике тапҡыр «һин һимеҙ, мин арыҡ» тигән тауыш ишетелә. Ҡараса батыр, был ниндәй тауыш икән, тип эҙләй башлай. Йөрөй торғас, һөйәп ҡуйылған бер таҡта таш күреп ҡала. Ҡуҙғатып ҡараһа — ишек. Асып кергәйне, эстә йөҙ ҡыҙ ултыра, йөҙ ҙә беренсеһе — ҡарсыҡ. Ҡараса батыр барып кереү менән теге ҡыҙҙар:

— Мин арыҡ, һин һимеҙ,— тип, бер-береһенә төртөшә башлайҙар. Әлеге ялмауыҙҙар был ҡыҙҙарҙы ошонда бикләп тотоп, һимеҙен һайлап ашап йөрөгәндәр икән. Ҡоттары осоп бөткән ҡыҙҙар Ҡараса батырҙан да, был беҙҙе ашарға килгән, тип ҡурҡышып ултыралар икән. Ҡараса батыр:

— Мин кеше ашарға килмәнем, әйҙәгеҙ, сығығыҙ, ҡайтайыҡ,— ти.

Теге йөҙ ҙә беренсеһе ҡыҙҙарҙы ҡарауыллауға ҡуйылған ҡарсыҡ булған икән. Ҡыҙҙарҙы сығармаҫҡа итә башлағайны, Ҡараса батыр шул ерҙә уны ботарланы ла ырғытты, ти. Шунан ҡыҙҙарҙы берәм-берәм сығарып, үҙе менән бергә алып ҡайтып китте, ти.

Ҡайтышлай ун ике башлы ялмауыҙҙың һарайына төйеп, атын егеп, алтынын тейәп, ҡыҙҙы алып сыға. Бара-бара теге ҡыҙҙарҙы ла ала. Хәҙер былар күмәкләшеп килә торғас, әлеге Кирпәсте ҡылысына килеп етәләр. Ҡараһаның ағалары ла, ҡайтып килешләй, шунда ял итеп яталар икән. Ағалары, быларҙың килгәнен күреп: «Тегенән ниндәй ғәскәр килә?» — тип аптырап торалар, ти. Ҡараса батыр яҡынлаша төшкәс: «Үҙебеҙҙең энебеҙ Ҡараса икән дә! Ул да беҙҙең арттан сыҡҡан икән шул»,— тип шатланалар. Шунан күрешәләр, һөйләшәләр. Ҡараса әйтә:

— Ярар, ошонда ғына йоҡлап китәйек, бөгөн ҡайтырға һуң инде,— ти.

Һәр береһенә унар ҡатын менән байлыҡтарҙы бүлә. Үҙенә теге ялмауыҙҙарҙан ҡотҡарылған өс ҡатынды ала. Кирпәсте ҡылысы йылғаһынан йыраҡ түгел бик йәмле суҡ ҡарағай ултыра. Ағалары шул ҡарағай төбөнә барып яталар. Ҡараса:

— Унда ятмағыҙ, харап булырһығыҙ!— ти. Тегеләр тыңламай.

Иртә менән Ҡараса батыр ҡараһа, ағаларын аждаһа ҡоршап алған, ти.

— Әйткәйнем дә бит мин уларға, унда ятмаҫҡа тип, тыңламанылар. Был аждаһа менән һуғышып булдырып булмаҫ шул,— ти.— Ҡатындар, һеҙ самауыр ҡайнатығыҙ, ағайымдарҙы аждаһа ҡоршап алған, һорайым әле, сығармаҫмы икән,— ти ҙә, ҡылысын ҡалдырып, аждаһа янына китә. Бара, сәләм бирә. Аждаһа һораша:

— Йә, Ҡараса, ни хәлдә, ни һөнәрҙә йөрөйһөң?— ти. Ҡараса:

— Ни һөнәрҙә йөрөйһөң тип ни, бына минең аға-

йымдар һинең аҫтыңда ята, сығармаҫһыңмы тип килдем,— ти.

— Күренмәҫ хандың ҡыҙын килтерһәң, сығарам,— ти аждаһа.

— Ул хандың ҡыҙын мин түгел, ялмауыҙҙар ҙа ала алмай. Мин нисек килтерәйем уны?

— Ағайыңдар кәрәк булһа, килтерерһең!— ти аждаһа.

— Ни эшләмәк кәрәк, барып ҡарармын инде улай булғас, тик ағайымдарҙы сығар,— ти Ҡараса батыр. Аждаһа:

— Һынамаҡҡа бер бурыс,— ти ҙә, Ҡараса батырҙың вәғәҙәһенә ышанып, ағаларын сығара. Ҡараса, ағаларын күргәс:

— Әйттем бит мин һеҙгә, унда ятмағыҙ тип, минең башты ашанығыҙ бит!— ти.

Шулай итеп, Ҡараса батырға көтөлмәгән эш тыуа. Ағалары менән бергәләшеп сәй эсә лә, бәхилләшеп, ҡайтып килгән юлы менән кире китә.

Китеп алып ултыра, китеп алып ултыра, китеп алып ултыра торғас, бер һыңар аяҡлы кеше осрай. Был кеше ҡыр кәзәләрен, ҡоралайҙарҙы баҫтырып барып, һыңар аяғы менән тибеп кенә ала икән. Быныңэргәһенә килеп, Ҡараса батыр сәләм бирә, һорай:

— Ҡоралайҙы ниңә улай баҫтырып тотаһың?— ти.

— Нисек тотайым һуң, ҡоралым булмағас?— ти һыңараяҡ*.

— Һе, шәп икән шул! Әйҙә, минең менән бараһыңмы?— ти Ҡараса батыр.

— Ә һин ҡайҙа китеп бараһың һуң?

— Күренмәҫ хандың ҡыҙын ҡоҙаларға!

— Бергә-бергә иптәш булырбыҙ,— тип килештеләр, ризалаштылар ҙа, икәү киттеләр былар. Китеп ултыралар, китеп ултыралар, алда ҡолға кеүек оҙон бер кеше күрәләр. Был кеше күккә ҡарап китеп ултыра, ти. Барып сәләм бирәләр, һорайҙар:

— Ниңә улай гел күккә ҡарайһың?

— Ни эшләйем һуң, бар һөнәрем шул булғас?

— Ә ул һөнәрең һиңә ни бирә?

— Осҡан ҡошто күреп ҡалам да тотоп алам,— ти теге.— Туҡта, туҡта, һеҙ үҙегеҙ кем һуң әле, ҡайҙа китеп бараһығыҙ?

---

* Һыңараяҡ — ҡулъяҙма текста *ҡоралай типкес* тип аталған. Кешегә исем булыуҙан бигерәк ҡорал төшөнсәһен аңлатҡанлыҡтан, башҡа әкиәттәрҙә лә осраған ошо традицион исем менән алмаштырылды.

— Күренмәҫ хандың ҡыҙын алырға!

— Мине лә бергә алығыҙ, ярҙамһыҙ булмам,— ти Күккәҡарар.

Ҡараса батыр риза булды, өсәүләп киттеләр хәҙер. Бара торғас, юл буйында ергә туңҡайып ятҡан бер кешегә тап булалар. Сәләм бирәләр, һорайҙар:

— Эй, ниңә туңҡайып ятаһың?

— Ерҙе тыңлап ятам. Ә һеҙ үҙегеҙ кем, ҡайҙа китеп бараһығыҙ?

— Күренмәҫ хандың ҡыҙын ҡоҙаларға барабыҙ.

— Эй-й-й! Мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ, файҙаһыҙ булмам,— ти Ертыңлар.

Дүртәү китеп ултыралар ине, ике күл араһына килеп сыҡтылар. Шунда бер кеше ултыра. Был кеше бер күлдең һыуын уртлап ала ла икенсе күлгә ҡоя. Тегеләр быны яныңа килде, сәләм бирҙе, һораша башланы:

— Эй, ағай, ниңә улай юҡ менән булаһың?

— Ниңә юҡ булһын, балыҡ һөҙәм бит!

Ҡараса батырҙар был кешенең ҙур ауыҙын күреп, иҫтәре китә.

— Тағы ниндәй һөнәрең бар?— тип һорайҙар.

— Миңә шуныһы ла еткән тамаҡ аҫрарға!— ти Күлуртлар.— Ә һеҙ кем? Ҡайҙа киттегеҙ?

— Беҙ Күренмәҫ хандың ҡыҙын ҡоҙаларға китеп барабыҙ.

— Мине лә алығыҙ, файҙам тейер әле,— ти Күлуртлар.

— Ярар, алырбыҙ. Йәгеҙ, ошо урында бергәләп, тамаҡ туйҙырып алайыҡ,— ти Ҡараса батыр.

Шулай тип әйтеүе була быныҡ, тегеләр һәр ҡайһы үҙенсә ризыҡ әҙерләргә тотона: Һыңарайаҡ, бара һалып, бер ҡоралайҙы тибеп килтерә; Күккәҡарар, ҡулын һуҙып, һауала осҡан үрҙәктәрҙе тотоп ала; Күлуртлар, күлдең һыуын уртлап, балыҡ һөҙә; Ертыңлар, шул ерҙә ҡаҙан аҫып, ут яға. Шулай итеп былар, күмәкләшеп-берҙәмләшеп, тегеһен дә, быныһын да бик тәмләп ашап алалар.

Шул күлдән алыҫ түгел бер ауыл бар икән, шул ауылда ҡунып китергә булалар. Бер әбейгә фатирға төшәләр.

— Әбей, беҙ бик һыуһаныҡ, самауыр ҡуй әле,— тиҙәр. Тегендә итен дә, балығын да ашап һыуһаған-

---

* Күлуртлар — ҡулъяҙмала Һыуурттағыс. Баяғыса, традицион исем менән алмаштырылды.

дар бит инде. Әбей самауыр ҡуя, былар, һыуһындары ҡанғансы, сәй эсә. Сәй эсеп ултырғанда һөйләшәләр:

— Ҡараса, һин әбейҙән һораш әле, Күренмәҫ хандың ҡыҙын нисек алып була, мәһәрҙәре, ҡыҙ алыу шарттары нисек икән?— тиҙәр. Ипләп кенә Ҡараса батыр һорай. Әбей:

— Һеҙгә бер ҙә барырға кәрәкмәҫ ине, барһағыҙ ҙа, ала алмаҫһығыҙ. Һеҙ түгел дейеү пәрейҙәре лә, ете башлы ялмауыҙҙар ҙа ала алманы уның ҡыҙын,— ти.

Ҡараса батыр:

— Ә ни эшләп ала алмайҙар һуң?— ти.

— Күренмәҫ хандың мәһәре шулай, бер кем дә үтәмәй алырлыҡ түгел. Егеттәр баралар ҙа, үҙҙәре харап булалар ҙа ҡуялар,— ти әбей.

— Ә нимә һуң уның мәһәре?— тигәс, әбей барыһын да һөйләп бирә.

Былар кәңәшләшеп ултыралар ҙа, барырға тәүәккәлләп, ятып йоҡлайҙар. Ҡараса батыр әбейгә:

— Әбей, һин беҙҙе сәғәт алтыла уят, беҙ хандың тороуына барып ҡарайыҡ әле,— ти.

Әбей, иртүк тороп, самауыр ҡайната ла тегеләрҙе үҙҙәре әйткән ваҡытта уята. Батырҙар торалар, йыуыналар, сәй эсәләр ҙә Күренмәҫ ханға китәләр. Килеп етәләр, ҡапҡа төбөндәге һаҡсыға хәбәр итергә ҡушалар. Күренмәҫ хан инергә рөхсәт итә. Керәләр. Хан, хеҙмәтселәренә әйтеп, самауыр килтертә. Сәй эсеп ултырғанда, Ҡараса батыр һүҙ башлай:

— Йә, хан, беҙ һиңә ҡыҙыңды яусыларға килдек, бирәһеңме?— ти.

— Ниңә бирмәйем, бирәм, әгәр мәһәренә күнһәгеҙ,— ти хан.

— Мәһәре ни?

— Мәһәре шул,— ти хан.— Беренсеһе — минең ете йәшәр үгеҙемде һарай аша бырғарҙан; икенсеһе — баш түбәһенә бер күбәтә* ҡымыҙ ултыртып, етмеш аршын бағанаға менеп, бағана башындағы ҡыңғырауҙы шалтыратып төшөргә; өсөнсөһө — минең алтмыш йәшәр ҡарсыҡ менән йүгерешергә, дүртенсеһе — ут кеүек ҡыҙҙырылған суйын мунсала ҡунып сығырға. Әгәр шуларҙың береһен генә үтәй алмаһағыҙ ҙа, баштарығыҙ киҫелә.

Ҡараса батыр тыңлап ултыра ла:

— Ярар, ярар, күнәбеҙ,— ти.

---

* К ү б ә т ә *(диал.)* — сеүәтә.

— Иртәгә бөтә халыҡты йыйып, майҙан ҡоророҙ,— ти хан, батырҙарға бер өй бирә.

Шунда барып яталар былар, кәңәшләшәләр, һөйләшәләр:

— Ярай үгеҙенә ҡаршы мин сығырмын инде,— ти Ҡараса батыр.

— Ҡарсығы менән мин уҙышырмын,— ти Һыңарайаҡ.

— Ә бағана башына мин менермен,— ти Күккәҡарар.

— Ә мунсала нисек йоҡларбыҙ икән һуң?— ти Ҡараса батыр.

— Йоҡларбыҙ, мин берәй күлде уртлап алып килермен,— ти Күлуртлар.

— Ә миңә бер эш тә юҡмы ни инде?— ти Ертыңлар.

— Ҡайғырма, һиңә лә табылыр,— ти Ҡараса батыр.— Йәгеҙ, йоҡлайыҡ хәҙер, һәйбәтләп хәл йыяйыҡ,— ти. Ятып йоҡлайҙар былар.

Хан, иртә менән вәзирен ебәреп, Ҡараса батырҙарҙы сәйгә саҡыра. Тегеләр килә, бергәләп сәй эсәләр.

Ярай, ашанылар, эстеләр, сыҡтылар былар хәҙер тышҡа. Сыҡһалар, майҙан тулы халыҡ, гөж килеп тора. Ҡарап-тикшереп торорға комиссия төҙөлгән, үгеҙ менән көрәшергә урын әҙерләнгән, бағана ла ултыртылған. Ҡарап торалар ине, бына бер саҡ, ер тырнап үкереп, хандың ете йәшәр үгеҙе килеп сыға. Күҙен ҡан баҫҡан, мөгөҙө менән ерҙе тишә, шул ҡәҙәр ажарлана, күрһәң, ҡотоң осорлоҡ! Ҡараса батыр килә лә, тегенең ике мөгөҙөнән тотоп алып, өйрөлтөп-өйрөлтөп сөйөп ебәрә, үгеҙ һарай аша дыңҡ итеп барып төшә. Халыҡ гөж килә. Хан, иҫе китеп:

— Маладис! Беренсе мәһәр булды,— тигән була.— Иә, хәҙер икенсеһе. Бағана башына ҡайһығыҙ менә? Тик ҡарағыҙ уны, ҡымыҙҙың бер тамсыһын сайпылтһағыҙ ҙа, башығыҙ киҫелә,— ти хан.

— Ярар, уныһын мин эшләп ҡарайым әле,— тип етмеш аршын бейеклеге шып-шыма бағана төбөнә Күккәҡарар килеп баҫа. Хандың бер вәзире, мөлдөрәмә тултырып, быны маңлайына бер күбәтә ҡымыҙ килтереп ҡуя. Шул минутында уҡ хандың бер һалдаты, ҡулына ҡылыс тотоп, бағана төбөнә килеп баҫа.

Күккәҡарар бағанаға шыуышып-үрмәләп менеп тә китә, ҡыңғырауҙы шалтыратып, килеп тә төшә. Ҡарай-

зар — ҡымыҙҙың тамсыһы ла түгелмәгән, бағана төбө ҡоп-ҡоро! Халыҡ аптырай быға.

Хәҙер хандың алтмыш йәшәр ҡарсығы менән йүгерешергә Һыңарайаҡ сыға. Көтәләр, көтәләр быларҙы — һаман әйләнеп килмәйҙәр. Ҡарсыҡ та юҡ, Һыңарайаҡ та. Бик аптырағас, Ертыңлар ергә ятып тыңлап ҡарай ҙа Ҡараса батырға әйтә:

— Эш дан түгел, ҡарсыҡ беҙҙең йүгеректең башына ҡаҙан түңкәреп киткән! — ти.

Ҡараса батыр быны ишеткәс, тиҙ генә уҡ менән янын алды ла, шул яҡҡа ҡарап атып ебәргәйне, уҡ ҡаҙанға барып тейҙе, ҡаҙан уртаға ярылып китте, ти. Шул ваҡыт ҡоралай типкес Һыңарайаҡ ҡаҙан эсенән килеп сыҡты ла: «Һу-у-у! Ҡайһылай оҙаҡ йоҡлағанмын», — тип, ике ҡулына ҡом услап, тотондо, ти, йүгерергә. Ҡарсыҡты ҡыуып та етте, күҙенә ҡом һибеп, уҙып та китте, ти. Ҡарсыҡ:

— Һу-у-у! Минән дә яман йүгерек икәнһең, — тип тороп та ҡалды, ти. Майҙандағы халыҡ:

— Ана! Ҡараса батыр ҡоҙаның йүгереге килә! — тип ҡысҡырышып ҡаршыланылар, ти.

Һыңарайаҡтың алдан килеүенә иҫе-аҡылы киткән хан:

— Ярар, бында эш бөттө, — ти.

Халыҡ тарала. Хан ҡоҙаларға сәй эсерә лә:

— Инде бөгөн кис булған, ҡайтып тормағыҙ, — ти. Үҙе сығып, вәзирҙәренә әмер бирә: мунсаны тирәләтеп әрҙәнә өйөп ҡуйырға ҡуша. Биш батырҙы төнгөләккә шул мунсаға биклəп, яндырып үлтермәксе була. Быны Ертыңлар ишетеп ҡала ла Ҡараса батырға әйтә:

— Беҙҙең эш дан түгел, яндырып үлтерергә уйлайҙар! — ти. Күлуртлар:

— Ҡараса батыр, һин хандан күл буйына барып килергә рөхсәт һора, — ти. Ҡараса батыр хан эргәһенә инә лә:

— Хан, рөхсәт ит, беҙ йоҡлар әлек, күл буйына барып, киске намаҙ уҡып киләйек, ти. Хан рөхсәт итә.

Былар күлгә баралар ҙа, Күлуртлар һыу уртлап ала. Ҡараса батыр ханға инеп, үҙҙәренең килеүҙәре тураһында хәбәр итә. Хан:

— Ярай, намаҙ уҡынығыҙмы? Инде һеҙгә урын мунсала булыр, — ти. Бер вәзиргә ҡоҙаларҙы мунсаға алып барырға ҡуша.

Биш батыр мунсаға инеп ултыра. Бына бер ваҡыт

ҡараңғы мунсаның стеналары ҡыҙара башлай. Күлуртлар уртындағы һыуҙың яртыһын мунсаның баҙына ҡоя ла, бишеһе лә төшөп ята. Ҡалған һыуҙы Күлуртлар, стенаның ҡайһы ере ут була, шул еренә шажлатып бөркөп тора. Мунса эсе бөркөүләнде, парланды, баҙҙағы һыу ҙа эҫене. Шулай ҙа түҙерлек. Былар шулай тирләп-бешеп ята торғас, мунсаның ҡыҙыуы бөтә башланы, таң атты. Былар, ҡалған һыу менән һәйбәтләп ҡойоноп, эләүкәгә менеп ултырҙылар.

Иртән торғас, хан бер вәзирен мунсаға ебәрә:

— Барығыҙ, ҡоҙаларҙың көлөн бер ышыҡ урынға илтеп түгегеҙ,— ти.

Өс вәзир, аҡ зипун* бәйләп, ҡулдарына һепертке тотоп, мунсаға килә. Асып ҡараһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр,— ҡоҙалар ай ҙа көн, най ҙа ҡуй** уйнап яталар. Тегеләр йүгереп ҡайтып, ханға хәбәр итәләр:

— Ҡоҙалар үлмәгән, бер нәмә лә булмаған!

— Эй, йөҙө ҡаралар! Ни эшләп үлмәнеләр икән?— ти хан, аптырай, бот саба.— Ни эшләмәк кәрәк, барығыҙ, сәйгә саҡырығыҙ,— тип, вәзирҙәрен ҡабат ебәрә. Биш батыр килгәс, хан һорай:

— Йә, ҡоҙалар, һәйбәт йоҡланығыҙмы?

— Рәхмәт, хан, мунсаң бик һәйбәт булды, иҙрәп йоҡланыҡ,— тиҙәр тегеләр. Серҙе асмайҙар инде. Шунан Ҡараса батыр әйтә:

— Хан, рөхсәт ит, беҙ йылғаға барып йыуынып, иртәнге намаҙҙы уҡып киләйек,— ти.

Хан рөхсәт итә. Ҡараса батыр иптәштәре менән йылғаға барып, бик һәйбәтләп бит-ҡулдарын йыуып киләләр. Сәй эсеп бөткәс, Ҡараса батыр:

— Йә, хан, мәһәр үтәлде, ҡыҙыңды алып китәбеҙҙер бит инде?— ти.

— Һеҙҙеке, һеҙҙеке инде хәҙер! Ҡул яҡмайым,— ти.— Мин, ҡыҙҙы нисек оҙатырға кәңәш-төңәш итеп алайым, һеҙ сығып тороғоҙ,— ти.

Биш батыр тышҡа сыҡҡайны, хан вәзирҙәрен йыйып алды ла тотондо, ти, яңы этлек ҡорорға:

— Йә, ни кәңәш бирәһегеҙ? Оттолар бит тегеләр беҙҙе,— ти.

Бер вәзир әйтә:

— Беҙ уларға, ҡыҙ оҙатыу шарты тигән булып,

---

* Зипун *(диал.)* — алъяпҡыс.

** Ай ҙа көн, най ҙа ҡуй *(диал.)* — һис нигә иғтибар итмәйенсә, онотолоп китеп.

өс шарт ҡуяйыҡ,— ти. Беренсеһе: «Бына ун ике самауыр, шуларҙың береһен бирнәгә үҙегеҙ һайлап алығыҙ»,— тип әйтәйек. Ә ҡыҙҙы бысаҡҡа әйләндереп, ҡынына тығып, сөйгә элеп ҡуяйыҡ. Икенсеһе: «Бына ун ике түшәк, шуларҙың береһен һайлап алығыҙ»,— тип әйтербеҙ. Ә ҡыҙ, бәләкәй генә мендәр булып, ситтәрәк икенсе бер мендәр өҫтөндә ятыр. Өсөнсөһө: «Бына ун ике писарь, шуларҙың береһен үҙегеҙгә алығыҙ»,— тиербеҙ. Ә ҡыҙҙы ручкаға әйләндереп һалып ҡуйырбыҙ. Шуларҙы белерҙәрме икән? Белмәһәләр: «Ҡыҙ ҡасҡан, үҙегеҙ эҙләп табығыҙ»,— тип әйтербеҙ. Табалмағас, ҡайтып китерҙәр!

Ханға оҡшаны был кәңәш. Шул уҡ ваҡытта ул кәңәште Ертыңлар ҙа, ҡолағын ҡарпайтып, ишетеп торған икән. Ҡараса батырға барыһын да һөйләп бирҙе.

Ҡоҙаларҙы саҡырып кертәләр. Хан ун ике самауырҙы күрһәтә. Ҡараса батыр:

— Миңә самауыр кәрәкмәй, бына ошо бысаҡ кәрәк,— тип, ҡынынан тартып алғайны, тып итеп, ҡыҙ килеп төштө, ти.

Шунан ҡыҙҙы ебәрҙеләр ҙә, быларҙы икенсе бүлмәгә алып инделәр.

Барып керһәләр,— бүлмәлә ун ике түшәк ҡабарып ята.

— Шуларҙың береһен һайлап алығыҙ,— ти хан.

Ҡараса батыр:

— Беҙгә ошоһо ла ярар,— тип, теге бәләкәй генә мендәрҙе алыуы була, тып итеп, ҡыҙ килеп тә төшә.

Хәҙер быларҙы өсөнсө бүлмәгә алып инәләр. Унда ун ике писарь алтын һаплы ҡәләмдәр менән яҙып ултыра. Береһенең алдында пероһы һынған алама ғына бер ручка ята. Хан әйтә:

— Һеҙгә писарь ҙә бирергә булдым. Оҡшағанын һайлап алығыҙ үҙегеҙ,— ти.

Ҡараса батыр тегеләрҙең ҡаршыһына барып ҡарап йөрөгән булды ла:

— Юҡ, хан, писарҙәрең шәп күренмәй. Үҙебеҙҙең беребеҙ писарь булыр әле, бынау ручкаңды ғына алам,— тип, теге пероһы һыныҡ ручканы алғайны, тағы, тып итеп, ҡыҙ килеп тә төштө, ти.

— Ну, егеттәр икәнһегеҙ! Таптығыҙ бит ҡыҙҙы*!

---

* Бында боронғо көнкүрештәге ҡыҙ ябыу һәм ҡыҙ оҙатыу йолаһы буталған булһа кәрәк. Ләкин Ҡараса батырҙың үҙе кейәү булып түгел, ә ҡыҙҙы ҡоҙаларға килгән яусы дәрәжәһендә йөрөүе әйтелгән йола менән һис тә ярашмай.

Инде тәҡәтем* бөттө, ҡыҙҙы алып ҡайтырһығыҙ. Сәй әҙерләгәнсе, барығыҙ, намаҙығыҙҙы уҡып килегеҙ,— ти хан.

Йылға буйына киләләр ҙә былар йыуынырға керешәләр, ә Ертыңлар, яр башына ҡолағын һалып, тыңлап ята. Тегендә хан вәзирҙәре менән кәңәшләшә. Хандың тылсым белгән иң оло вәзире әйтә:

— Беҙ ҡыҙға тылсым өйрәтәйек. Башта ул балыҡ булып күлгә сумһын. Табып тотһалар, бойҙайға әйләнеп, ергә сәселһен. Унда ла тапһалар, күгәрсен булып осһон. Был серҙе лә сисһәләр, бүтән сара юҡ, башҡаса ҡыланмаһын. Ни күрһә лә күрер, бәхете шулдыр,— ти.

Ертыңлар быларҙың һөйләшкәнен барыһын да Ҡараса батырға еткерә.

— Эй, улай булғас, ҡотола алмай ул беҙҙән,— тиҙәр иптәштәре.

Хан батырҙарҙы саҡырып индерә лә:

— Әйҙәгеҙ, ҡоҙалар, ултырығыҙ, сәй эсәйек,— ти. Сәй эсеп бөткәс:

— Бына, ҡыҙымды бирәм инде һеҙгә, бүләге — тройка ат булыр,— ти. Ҡараса батыр:

— Ярар, уныһы үҙ һөнәрең. Мин һорап алмайым,— ти. Ҡыҙҙы оҙатырға халыҡ йыйыла. Ҡыҙҙың әхирәттәре йырлап, илап ҡалалар.

Күлуртлар йәшәгән теге ике күл буйына килеп еткәйнеләр, ҡыҙ балыҡ булып һыуға төштө лә китте. Бына хәҙер ҡайһы балыҡ ҡыҙ икәнен белергә кәрәк. Күлуртлар тиҙ генә күлде уртлап ала ла, һыуын эргәләге күлгә ҡоя. Күлдең төбөндә балыҡтар ялтырашып ятып ҡала. Йыйып ала һалып, өс силәк балыҡты ҡайнатып түгәләр. Дүртенсе силәкте ҡайнатҡан саҡта:

— Ой, янып үләм бит инде!— тип, ҡыҙ сарылдап килеп сыҡты, ти.

Ошо урында Күлуртлар бәхилләшеп тороп ҡалды, былар, ҡыҙҙы алып, ары китте, ти.

Тройка менән китеп ултыралар ине, бер урында ҡыҙ, бойҙай булып, ергә сәселде лә ҡуйҙы, ти. Күккәҡарар тиҙ генә бер үрҙәкте тотоп алды ла, сәселгән бойҙайҙы үрҙәккә ашата башланы, үрҙәк өсөнсө орлоҡто ҡымтып алғайны, ҡыҙ:

---

* Тәҡәт — көс, ҡеүәт. Был урында ҡаршы торорға мөмкинлегем (ҡеүәтем) ҡалманы тигәнде аңлата.

— Ой, үләм, ҡотҡарығыҙ!— тип, үрҙәк томшоғонан сарылдап килеп төштө, ти.

Тағы китеп ултыралар ине, һис көтмәгәндә, ҡыҙ аҡ күгәрсен булып осто ла китте, ти. Әллә ни һауалап та өлгөрә алмай, Күккәҡарар быны тағы тотоп ала. Ҡыҙ, ғәжәпкә ҡалып:

— Һай-һай-һай! Һеҙ егеттәр икәнһегеҙ! Инде әйтегеҙ, ҡайһығыҙ миңә хужа?— ти. Ҡараса батыр:

— Мин һиңә хужа булырмын,— ти.

Шул урында Күккәҡарар, урманға ингәс — Ертыңлар, бер тау битендә Һыңараяҡ тороп ҡалды, ти. Ҡараса батыр менән ҡыҙ икеһе генә ҡайтып киләләр. Юлда быларға бер ҡыҙыл төлкө ҡаршы сыға:

— Эй, ағай! Тороп тор әле!

«Тыңлап ҡарайыҡ әле, был төлкө ни әйтер икән»,— тип, Ҡараса батыр туҡтай. Төлкө килеп етә лә Ҡараса батырҙан һораша башлай:

— Ҡайҙа китеп бараһың, ағай?— ти.

— Бына Күренмәҫ хандың ҡыҙын аждаһаға алып китеп ултырам,— ти Ҡараса батыр.

— Һи-һи-һи! Уны ниңә аждаһаға биреп әрәм итәһең?— ти төлкө.

— Бирмәй сара юҡ. Мин уға вәғәҙә бирҙем, ағайҙарымды сығарғаны өсөн.

— Һи-и-и, ҡыҙҙы уға биреп торорға! Минең башыма бисәңдең яулығын ябындыр ҙа, аждаһаға мине илтеп бир. «Күренмәҫ хандың ҡыҙы матур булһа ла, дүрт аяҡлы икән», тип әйтерһең,— ти төлкө.

Шулай эшләргә булып, тройкаға өсәү ултырып китәләр. Барып етәләр. Ҡыҙ аттар эргәһендә ҡала, Ҡараса батыр, төлкөнө етәкләп, аждаһаға килә.

— Һай-һай, аждаһа ағай! Күренмәҫ хандың ҡыҙы һылыулығын бик һылыу икән дә, тик дүрт аяҡлы икән шул,— ти.

— Ярар, дүрт аяҡлы булһа ла,— ти аждаһа.

Шулай итеп, аждаһа йылан, Күренмәҫ хандың ҡыҙы тип ышанып, төлкөнө алып ҡалды, ти. Ә Ҡараса батыр, ҡыҙҙы алып, иленә ҡайтып китте, ти. Өс саҡырым да бармағандыр, бының артынан төлкө ҡыуып та етте, ти. Килеп етте лә:

— Бына, ағай, төшөндөңмө, аждаһаны нисек һемәйттек?— тип, үҙе шарҡылдап көлә, ти. Шунан:

— Йә, батыр, хуш-һау булығыҙ, матур йәшәгеҙ!— тип оҙатып ҡалды, ти.

Ҡараса батыр ауылға ҡайтып етһә, теге ялмауыҙҙарҙан ҡотҡарып алған ҡатындары һәр береһе бик

шәп йорт һалдырған, алтын-көмөш менән биҙәгән, ти. Ҡараса батыр был хан ҡыҙына үҙенә башҡа йорт һалдырған да, дүрт ҡатын менән йәшәп ята, ти.

## ЕТЕГӘН БАТЫР

Борон-борон заманда бәләкәй генә бер ауыл янында бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ йәшәгән, ти. Уларҙың алты улдары булған. Һис көтмәгәндә етенсе улдары донъяға килгән. Уға Етегән тип исем ҡушҡандар, ти.

Етегән айлап, йыллап түгел, ә сәғәтләп үҫә, ти. Ул үҙенең был тиҙ үҫеүе, матурлығы, көслөлөгө менән кешеләрҙе ғәжәпкә ҡалдыра. Көс яғынан Етегән менән бер кем тиңләшә алмай. Берҙән-бер көн ул ағаларын йыйып алған да:

— Ни эшләп беҙ өйҙә ятабыҙ, әйҙәгеҙ, атайымдан рөхсәт алайыҡ та, үҙ бәхетебеҙҙе үҙебеҙ эҙләргә сығып китәйек,— тигән. Ағалары:

— Етегән, бар һин атайымдан рөхсәт һора, ул һине ярата, һинең һүҙеңде кире ҡаҡмаҫ,— тиҙәр. Етегән, атаһына барып:

— Атай, беҙҙең йыйылышып өйҙә ятаһыбыҙ килмәй, сит илдәргә барып үҙ бәхетебеҙҙе эҙләп ҡарарға теләйбеҙ,— ти.

Ҡарт улының киң күкрәкле, көслө, матур булыуына һоҡланып ҡарап тора ла:

— Ярай, барығыҙ ҙа үҫеп еттегеҙ, мин ҡаршы килмәйем,— ти.— Бына һеҙгә ете йүгән, һәр берегеҙгә бер ат һайлағыҙ ҙа бәхетегеҙҙе үҙегеҙ тырышып табыу өсөн үҙегеҙ теләгән яҡтарға китегеҙ. Ләкин минән васыят шул: бер нәмәнән дә ҡурҡмағыҙ,— ти.

Ете туған һәр береһе бер атҡа атлана ла, сығып китәләр былар. Ай китәләр, йыл китәләр, бик күп урман, тауҙар, йылға, күлдәр кисәләр. Берҙән-бер көндө ике юл сатына килеп етәләр. Алдан килгән Етегәндең аты бышҡырып туҡтай. Юлсылар, ни булды икән тип, туҡтайҙар. Тирә-яҡҡа ҡараһалар, ике юл сатында үҫеп ултырған ҙур тирәктә: «Уңға киткән уңыр, һулға киткән туңыр»,— тип яҙылып ҡуйылған, ти. Етегәндең ағалары, үлемдән ҡурҡып, уңға китәләр, ә Етегән бер үҙе һулға китә. Ҡара урман эсенән Етегән ай бара, йыл бара, бара торғас, бик матур бер йылға буйына килеп сыға. Йылға аша күпер һалынған, аръяҡта бер йорт ултыра, ти. Ул, бик асығып, шул йортҡа барып инә. Өйҙә бер кем дә юҡ. Бик алыҫтан моңло йыр

тауышы ишетелә. Шунан Етегән бер бикле бүлмәне асып инһә, бер бик һылыу ҡыҙ ултыра, ти. Ҡыҙ Етегәнде күреү менән илап һүҙ башлай:

— Ай, егет, ниңә һин бында килдең? Минең ирем — ике башлы дейеү, ул һине ашар,— тип әйтә, ти.

— Ә һин үҙең кем һуң?

— Беҙ алты бер туғандар инек. Тыныс ҡына йәшәгәндә, беҙҙең барыбыҙҙы ла дейеүҙәр көсләп алып киттеләр. Минең бәләкәй һеңлеләрем дә шулай ҡайҙалыр дейеү тотҡононда интегәләр. Һин, егет, тиҙерәк кит, юҡһа, дейеү хәҙер ҡайтыр ҙа һине ашар,— ти был ҡыҙ.

Етегән дейеүҙең ҡайҙан ҡайтасағын һорап та өлгөрмәгән, күк күкрәгән, ер тетрәгән тауыштар ишетелгән. Ҡыҙ дейеүҙең ҡайтып, күпергә етеүен әйткән.

Етегән тиҙ генә күпергә дейеү ҡаршыһына сыға. Күперҙә Етегән дейеү менән көрәшә. Үлтерә тегене. Үлтерә лә, башын ҡырҡып алып, ҡыҙ алдына ырғыта. Ҡыҙ үҙенең азат булыу шатлығынан ни эшләргә лә белмәй. Етегәндән үҙен алып китеүҙе һорай. Етегән, ҡыҙҙы кире ҡайтҡан саҡта алып ҡайтырға вәғәҙә биреп, яҡшылап тамағын туйҙыра ла ары китә.

Бик күп күлдәр, урмандар, йылғалар, тауҙар үтә Етегән. Бер ваҡыт ҙур ялан уртаһына һалынған ике ҡатлы бер таш йорт эргәһенә барып сыға. Бында ла бик матур бер ҡыҙҙы бүлмәлә бикле көйө таба. Ул ҡыҙ ҙа:

— Һин, егет, бында нисек килеп сыҡтың? Минең ирем — өс башлы дейеү, ул һине ашар, тиҙерәк ҡас!— ти. Етегән:

— Мин, ике башлы дейеүҙе үлтереп, апайыңды ҡотҡарҙым инде. Ҡалған дейеүҙәрҙе лә үлтереп, бөтәгеҙҙе лә ҡотҡармайынса тыныслана алмам,— ти.

Шул ваҡыт алыҫта ел-дауыл ҡуба. Етегән инде дейеү ҡайтауын белә, уға ҡаршы сығып, уны үлтерә. Ҡыҙҙы ҡайтҡанда алып ҡайтырмын тип, юлын дауам итә. Шулай итеп, ул биш ҡыҙҙы дейеү ҡоллоғонан ҡотҡара. Инде иң кесе ҡыҙ ғына ҡала. Етегән уны эҙләп китә. Бик арып, асығып, бер күл буйына килеп өй тора. Шул өйҙөң иң өҫкө ҡатындағы иң артҡы бүлмәлә тегеләрҙең кесе һеңлеһе алты ҡат тимер ишектәр менән бикләнгән була. Етегән килә лә ишектәргә асыу менән бер һуға. Һуғыуы була, ишектәр ватылып, бик матур ҡыҙ килеп сыға.

— Минең ирем — алты башлы дейеү, уны һис

кем еңә алмай, ул һине ашар, тиҙерәк кит бынан, егет,— ти ҡыҙ.

Етегән алты башлы дейеү менән өс көн, өс төн алыша. Дүртенсе көн тигәндә генә Етегән дейеүҙең алтынсы башын өҙә саба. Ҡыҙ шатлығынан ни эшләргә белмәй:

— Эй матур егет, мин һиңә тиң түгелмен. Бына ут батшаһының ҡыҙы бар. Ул үҙенең матурлығы менән һиңә тиң. Тик шуныһы — ут батшаһы бөтә кешеләрҙе яндырып үлтерә, ҡыҙын бер кемгә лә бирмәй,— ти. Етегән был һүҙҙе ишетеү менән, ҡыҙҙы ҡайтҡанда алып ҡайтырға вәғәҙә биреп, ут батшаһының ҡыҙын эҙләп китә.

Етегән бик күп юлдар үтә. Арып-талып, ул бер йылға буйында ял итмәксе була. Шул ваҡыт аяғына, ҡулына тирмән ташы таҡҡан бер кеше йүгереп үтеп бара, ти.

— Ниңә былай йүгерәһең?— тигәс, тегеһе:

— Мин — Елғыуар, бына ел ҡыуам. Артыҡ шәп йүгермәҫ өсөн аяҡ-ҡулдарыма тирмән таштары таҡтым,— ти.

— Минең менән бараһыңмы?— тип, тәҡдим яһаған, ти, Етегән.

— Барам,— тигән, ти, Елғыуар. Шунан улар, дуҫ булышып, артабан китәләр.

Күп юл үткәндәр, ти, былар. Бара торғас, бер ҙур кеше бер тауҙы алып икенсе урынға күсереп йөрөгәнен күргәндәр.

— Һин кем?— тип һораған Етегән.

— Мин — Тау күсереүсе,—тип яуап биргән, ти, теге кеше.

— Әйҙә, минең менән бараһыңмы?— ти Етегән. Кеше риза булып, хәҙер былар өсәүләп юл тоталар. Бик күп ер киткәс, былар бер күлдең һыуын эсеп бөтөрөп, икенсе күлгә алып барып ҡойоп йөрөгән бер кешене күрәләр.

— Һин кем?— тип һорай Етегән.

— Күл күсереүсе мин.

— Беҙҙең менән бараһыңмы?

— Була ул,— ти теге.

Ризалаштылар-килештеләр ҙә киттеләр былар хәҙер. Дүртәүләп бара торғас, бер кешенең ергә ятып әллә ни тыңлай ҙа, шул ерҙе ҡаҙа башлауын күрәләр.

— Кем һин, беҙҙең менән бараһыңмы?

— Мин Ертыңлар булам. Әйҙә, киттек,— тип, был да Етегәнгә эйәрә.

Хәҙер бишәүләп бара торғас, алыҫта ут батшаһы-

ның йортоноң ҡыҙарып торғанын күрәләр. Етегән иптәштәре менә батшаның ҡапҡа төбөнә килеп туҡтай. Шул ваҡыт батшаның һаҡсыһы:

— Беҙҙең хөкөмдәребеҙ һеҙҙең кем икәнегеҙҙе, ни өсөн килеүегеҙҙе белергә теләй,— ти. Етегән:

— Беҙ ут батшаһының ҡыҙын алырға килдек,— ти.

Һаҡсы был хәбәрҙе кереп батшаға әйткәс, батша асыуланған. Шулай ҙа егеттәрҙең көсөн һынап ҡарамаҡсы булған. Юлсыларҙы саҡырып алып:

— Ярай, мин һеҙгә ҡыҙымды бирермен, тик уның бер шарты бар. Минең етмеш йәшлек әсәйҙе етмеш саҡрымдан йүгереп уҙа алһағыҙ, шунда ҡыҙымды бирермен,— тигән, ти.

Юлсылар риза булалар. Шунда уҡ етмеш йәшлек ҡарсыҡ сыға. Уның менән йүгерешергә Етегән Елғыуарҙы ебәрә, ә үҙе бейек тауға менеп ҡарап тора. Ҡарсыҡ менән Елғыуар тейешле урынға барып етеп йүгерешә башлайҙар. Елғыуар әбейҙе бик күпкә ҡалдырып китә. Ҡарсыҡ, Елғыуарҙы уҙа алмаҫын белеп, хәйләгә тотона:

— Һинең, балам, бик ашайһың килгән. Һин ашап ал, ә мин көтөп торормон,— ти.

Елғыуарҙың ысындан да ашағыһы килгән була. Ул ҡарсыҡтың һүҙенә ышанып туҡтай. Елғыуар ашарға ултырғас, теге ҡарсыҡ уның башына ҙур ҡаҙан ҡаплай ҙа, ары йүгерә. Был хәлде тау башынан күреп торған Етегән борсола башлай, ә ут батшаһы шатлығынан ни эшләргә белмәй. Ҡарсыҡтың егерме саҡрым ғына йүгерәһе ҡалғас, Етегән ҡаҙанға төҙәп уҡ атып ебәрә. Уҡ килеп тә тейә, ҡаҙан селпәрәмә ватыла. Елғыуар асыуы менән тороп та йүгерә, шул арала ҡарсыҡты ҡыуып та етә, уны биш саҡрымға артта ҡалдырып, килеп тә етә. Ут батшаһының кәйефе боҙола. Етегәндәр унан ҡыҙын талап итә башлайҙар.

— Ярай,— ти ут батшаһы.— Мин һеҙгә ҡыҙымды бирәм, ләкин бер шарт менән. Һеҙ был төндө минең мунсамда ҡунып сығығыҙ, әгәр шунда йоҡлай алһағыҙ, ҡыҙ — һеҙҙеке,— ти.

Етегәндәр быға ҡыуаналар, сөнки мунсала ҡуныу ауыр эш түгел бит инде. Етегән батшаның хәйләһен аңлай. Кис була. Мунсаға барыр ваҡыт етә. Елғыуар алдан тороп йүгермәксе була, Етегән уны туҡтата:

— Янып үлергә итәһеңме! Бар әле, Күл күсереүсе, берәй күлде алып килеп, һүрелдер шул мунсаны,— ти.

Күл күсереүсе тиҙ генә күлде уртлап алып килә лә

баҙлап торған суйын мунсаға һибә. Мунса шыжлап һүрелә. Етегән:

— Тау күсереүсе, бар әле, һин кеше менә алмаҫтай берәй бейек тауҙы алып кил дә, шул мунсаны тау өҫтөнә ултырт. Ә һин, Сосҡолаҡ, иҙәнгә ятып тыңлап ятырһың. Әгәр ут батшаһының килеүен ишетһәң, ошо шәмде яҡтыртырһың,— тип, уға шәм бирә.

Тау күсереүсе ҙур бер таштауҙы алып килә лә мунсаны уның башына ултырта. Бөтәһе лә инеп мунсала йоҡларға яталар.

— Бына беҙ беҙ инде, был донъяла бер Етегән батыр бар, ти. Ул бишәр-алтышар башлы дейеүҙәрҙе үлтергән, ти. Вәт ул батыр, исмаһам,— тип, былар үҙ-ара Етегәнгә һоҡланалар икән. Шул ваҡыт Ер тыңлаусы ут батшаһының килеүен ишетә лә тиҙ генә шәмгә ут төртә. Шәм яҡтыртыу менән мунса ҡып-ҡыҙыл булып янған төҫ ала. Ут батшаһы, быны күреп:

— Әһә, мунса ҡып-ҡыҙыл булып янып тора, улар унда йоҡлай алмаясаҡтар,— тип шатланып, ҡайтып йоҡларға ята. Иртә менән ул үҙенең һаҡсыһына:

— Бар әле, теге егеттәрҙең көлөн алып ҡайт,— тип әмер бирә.

Һаҡсы барһа, тегеләр иҫән генә йоҡлап ята. Уята. Тегеләр ут батшаһынан ҡыҙҙы һорарға киләләр.

— Батша ҡыҙы тау аҫтында, тапһағыҙ, алығыҙ,— тиҙәр быларға.

Етегән шунда уҡ Тау күсереүсегә тау аҫтын ҡарарға ҡуша. Теге тауҙы күсереп ҡуйһа, ҡыҙ унда булмай. Ут батшаһы:

— Ҡыҙ ер аҫтында, тапһағыҙ, алығыҙ,— ти.

Етегән был эште Ер тыңлаусыға ҡуша. Быныһы ҡыҙҙың бер тал төбөндә ятҡанын әйтә. Тау күсереүсе бара һалып ҙур тал өйкөмөн йолҡоп алғайны, былар алдында ғәжәп бер матур ҡыҙ баҫып тора. Ут батшаһы:

— Һеҙ еңдегеҙ. Инде ҡайһығыҙ көслөрәк, ҡыҙ шуға булһын,— ти.

Етегәндең иптәштәре ҡыҙ өсөн тауыш күтәрәләр. Етегән шунда үҙенең һул беләген күрһәтә. Унда «Етегән» тип яҙылған була. Иптәштәре ғәжәпләнеп:

— Эй, батыр Етегән, һин беҙҙе ғәфү ит, белмәнек. Ҡыҙ һиңә булһын,— тиҙәр.

Шунан Етегән иптәштәре менән хушлашып, ут батшаһының ҡыҙын алып, ҡайтыр юлға сыға. Юл ыңғайында дейеүҙәрҙән ҡотҡарған теге ҡыҙҙарҙы ла алып китә. Бер көн улар йылға буйында ҡунырға

туҡтайҙар. Иртән тороуҙарына, ҡараһалар, ете ҡат стена менән уратылып алынғандар. Стенаға: «Бер һуғыуҙа ете ҡатын да емерә алһағыҙ — сығырһығыҙ; емерә алмаһағыҙ — үлерһегеҙ»,— тип яҙылған була. Етегән асыу менән бик ҡаты һуҡҡайны, стеналар емерелә лә төшә. Шунан ҡыҙҙарын эйәртеп юлын дауам итә.

Бер ваҡыт бер күперҙе сығып барғанда, алты кешенең һыуҙа балыҡ тотоп йөрөгәнен күрә. Ҡараһа — үҙенең ағалары! Етегән уларҙы саҡырып ала ла һәр береһенә бер ҡыҙҙы бирә. Ут батшаһының ҡыҙын үҙенә ала. Барыһы бергә ҡайтып, бик ҙур туй яһайҙар, һәйбәт итеп донъя көтәләр.

Шулай һәйбәт кенә донъя көтөп ятҡанда, бер төндө Етегән төшөндә һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш бабай күрә. Ҡарт әйтә: «Мин — һин үлтереп бөткән дейеүҙәрҙең атаһымын. Һинән үс аласаҡмын. Бөтә ырыуыңды ҡоротормон»,— ти.

Етегән шул ваҡыт уянып китә лә, ҡатыны, ағалары менән хушлашып-аманлашып, ҡартты эҙләп сығып китә. Ай китә Етегән, йыл китә,— бер кем дә осрамай, ти, бығаь. Бара торғас, йыраҡта, ҡара урман уртаһында, бер кескенә тәҙрәлә ут яҡтыһы күренә. Етегән шул өйгә барып инһә, маңлайында бер генә күҙе ялтырап торған бер әбей ултыра, ти. Етегән уны-быны ҡарап тормай, ашарға һорай. Әбей бик тиҙ ашарға әҙерләй. Етегән боролған саҡта ғына, ашына ағыу һибә һала. Етегән, быны күреп ҡалып, ҡарсыҡты һуға ла үлтерә. Шунан тентей башлай. Тентей торғас, әбейҙең муйынынан асҡыс таба. Шул асҡысты ғына ала ла китә. Бик күп юлдар үткәс, бер түңәрәк суйын өйгә килеп сыға. Өйҙөң ишеге лә, тәҙрәһе лә юҡ. Етегән бик оҙаҡ өй тирәләй әйләнеп йөрөй торғас, асҡыс иҫенә төшә. Асҡысты стенаға терәүе була — ишек асылып китә. Өйгә инһә, ике һандыҡтан башҡа бер әҙәм, бер нәмә юҡ икән, ти. Етегән теге асҡыс менән бер һандыҡты аса, уның эсендә тағы бер һандыҡ, унан — тағы, тағы. Етегән ҡырҡ һандыҡ аса. Иң эстәге һандыҡта бер алтын асҡыс ята. Ул асҡыс менән икенсе һандыҡты асҡайны, уныһының эсендә лә тағы һандыҡ та һандыҡ, һандыҡ та һандыҡ, ти. Етегән теге асҡыс менән тағы һикһән һандыҡ аса. Һикһәненсе һандыҡ эсенән бер йылан балаһы килеп сыға. Йылан балаһын ҡулына алыуы була, өйҙәр һелкенеп китә лә, ишектән һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш иргәйел килеп кереп, уҡ кеүек Етегәнгә

ташлана. Етегән йылан балаһын үлтереп тә өлгөрә, шунда уҡ ҡарт та йығылып үлә. Ул йылан балаһы һаҡалы мең ҡарыштың йәне булған, ти. Етегән өйөнә ҡайтып китә.

Ауылына ҡайтып етеп, баҫыу ҡапҡаһына ингәс тә Етегәнгә бер шәүлә осрай. Етегән уны-быны тикшереп тормай, «уф, арыным» тип, ҡара шәүләгә бик ныҡ һуға. Теге шәүлә теҙенән ергә бата. Шунан шәүлә киҙәнеп килеп тороп Етегәнгә һуҡһа, Етегән муйынынан ергә бата ла ҡуя. Етегән:

— Улым, был — мин, һинең атайың, ҡотҡар!— тип ҡысҡырып ебәрә. Сөнки ул донъяла уны еңерлек бүтән кеше юҡлығын белә. Шунан улы: «Атай!» тип, күтәреп алып, быны өйҙәренә алып ҡайтып китә. Етегән үҙе юлда саҡта, улы үҫеп үҙенән дә көслөрәк булып торған икән. Улар тоҡомо әле лә донъяла йәшәй, ти.

## ТАҢҺИҘӘР БӘҺЛЕҮӘН

Борон-борон заманда бер бабай менән бер әбей, уларҙың ике улы булған. Бөтәһе бергәләп, көн итеп, йөн тетеп, йәшәп ятҡандар. Уларҙың ике йөҙ баш һарыҡтары булған. Иртәнән төнгә тиклем улдары һарыҡтарҙы көткәндәр.

Бер ваҡыт, дауыл уйнатып, бер дейеү килеп сыҡҡан да, малдарын, көтөүселәре менән бергә, өйөрөп алған да киткән.

Бабайҙың ҡарсығы ҡайғыһын күтәрә алмай үлеп киткән, ти. Бабай икенсе ҡатын алған. Уларҙың бик зирәк бер улдары тыуған. Уға Таңһиҙәр тип исем ҡушҡандар. Ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, бик бәһлеүән булып етешкән, ти, был. Биш йәше тулғас, Таңһиҙәр:

— Атай, тимерҙән егерме ботлоҡ туп яһа, егерме бот ауырлығы суҡмар яһа,— тип әйтте, ти. Атаһы:

— Уны нисек йөрөтәһең?— тип ғәжәпләнһә лә, улының һорауын үтәне, ти, бабай.

Малай егерме ботлоҡ тупты, урамда һуғып, уйнатып йөрөтөр булған. Көндәрҙең береһендә ул атаһы янына килгән дә:

— Атай, мин ни эшләп яңғыҙ, ағайымдар юҡмы ни?— тип һораған.

— Бар ине лә, икеһе лә ике йөҙ баш һарыҡ менән бергә юғалды шул,— тигән атаһы.

— Эҙләп табайым мин уларҙы!

— Булмаҫ, улым, күп ваҡыттар үтте инде уға,— тигән атаһы.

Шулай ҙа егет юлға сыҡҡан. Ай барған, йыл барған, бара торғас, бер дейеү пәрейенә осраған.

— Алыш бармы, көрәш бармы?

— Алыш та бар, көрәш тә бар.

Улар көрәшә башлағандар. Егет дейеүҙе бер күтәреп һуҡҡан, теге бил тиңенә ергә күмелгән; икенсегә күтәреп һуҡҡан, дейеү муйынынан ергә батҡан. Егет суҡмары менән дейеү башына йәнсә һуҡҡан да ары киткән. Бара-бара дүрт мөгөҙлө дейеүгә осраған.

— Алыш бармы, көрәш бармы?

— Алыш та бар, көрәш тә бар.

Егет был дейеүҙе лә тураҡлап киткән.

Бара, бара егет, бер ауылға барып кергән. Унда егетте күреү менән ҡыҙҙар, йыйылышып, илаша башлағандар, ти.

— Егет, ҡотҡар беҙҙе, алып ҡайт! Алты мөгөҙлө дейеү йәшәй бында,— тигәндәр ҡыҙҙар.

— Тағы ла бармы ни әле ул?— тип, егеттең һорауы булған, ерҙе күккә тиңләп, ҡырҙарҙы иңләп, шашынып, дейеү пәрейе ҡайтып кергән.

— Кем бар минең донъяла? Сыҡ!— тип екергән дейеү.

Егет килеп күренгән дә:

— Мин булам,— тигән.

— Ә-ә... Ни йомош, батыр егет?

— Һиңә килдем бына. Ағайымдарымды юллап.

— Алыш бармы, көрәш бармы?

— Алыш та бар, көрәш тә бар.

Дейеү, зәһәрләнеп, егеткә ташланған икән, Таңһиҙәр суҡмар менән тегенең бер юлы өс мөгөҙөн һуғып һындырған. Дейеү ҡалған өс мөгөҙөн һуҙып, егеткә тотонған. Билдән алып көрәшәләр былар хәҙер. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, былар көрәшкәнгә тирәяҡ тау-таш тетрәп тора, ти. Көрәшә торғас ярһып, Таңһиҙәр тегене күтәрептереп ергә бәргән, дейеү тәгәрәп барып ятҡан. Ухылдап, ҡабат торорға маташҡанында, Таңһиҙәр суҡмары менән теге мөгөҙҙәрен дә һындыра һуҡҡан, башын иҙгән.

Был яуызды ла ана шулай еңеп, Таңһиҙәр ял итеп ултырғанда, ҡыҙҙар йүгерешеп килгәндәр.

— Минең ағайымдар ҡайҙа икән?— тип һорай егет.

— Улар йыраҡта. Бейек таш ҡойма менән уратып

ҡуйғандар уларҙы. Һис сығырлыҡ түгел,— тигән ҡыҙҙарҙың береһе.

— Бына дейеүҙең яулығы, шуны күрһәтһәң, ҡапҡаһы асылыр уның,— тип, икенсе бер ҡыҙ егеткә яулыҡ килтереп биргән.

Таңһыҙәр ағаларын ҡотҡарырға киткән. Бара, бара был, барып етһә, бейе-е-ек таш ҡойма күренә. Егет ҡапҡаға етә лә теге яулыҡты болғай, шунда уҡ ҡапҡа асылып, дейеү ғәскәре сыға башлай. Егет сыҡҡан бер дейеүҙе һуғып үлтереп тора, ти.

Дейеү ғәскәрен ҡырып, егет ағаларын табып ала. Ағалары ҡартайышып бөткән, ти. Һарыҡтарын ҡыуып, ҡайтырға сығалар.

Килә торғас, быларҙы дейеү батшаһы ҡыуып етә. Шул ерҙә Таңһыҙәр бәһлеүән дейеүгә:

— Ғәскәреңде үлтерҙем; йәмәғәт алып бир, юҡһа, үҙеңде лә үлтерәм!— ти.

Дейеү риза була. Егеткә күлгә килергә ҡуша ла, ҡайтып китә.

Егет шунда китеп барғанда бер кешегә осрай.

— Ҡайҙа бараһың?— тип һорай теге кеше.

— Дейеү батшаһынан ҡыҙ алырға.

— Мине лә алаһыңмы?

— Әйҙә,— тигәс, былар хәҙер икәүләп китәләр. Юлда тағы берәү осрай.

— Ҡайҙа бараһығыҙ?

— Дейеү батшаһының ҡыҙына.

— Исемең кем?

— Таңһыҙәр.

— Ә үҙең кем булаһың?

— Уттаянмаҫ.

— Ә мин Ҡоштотор,— ти тәүҙә осраған.

— Мине лә үҙегеҙ менән алаһығыҙмы?— ти Уттаянмаҫ.

— Әйҙә.— тигәс, былар хәҙер өсәүләп китәләр. Күл янына килеп етәләр ҙә дейеүҙе саҡыралар. Күл төбөнән дейеү килеп сыға ла Таңһыҙәр бәһлеүәнгә:

— Минең өс ҡыҙым бар. Өс шартымды үтәһәң, өсөһөн дә бирәм,— ти.— Беренсе шартым шул: һикһән йәшлек әбей менән ярышта еңһәң, ҡыҙ һинеке,— ти.

Һикһән йәшлек әбей менән йүгерешергә Ҡоштотар сыға. Улар йүгерешә башлайҙар. Әбей һис ҡалмай икән. Шул саҡ Ҡоштотар әбейгә:

— Әбей, ял итеп алайыҡ,— ти.

Әбей риза булған, ятыу менән йоҡлап та киткән.

Ә Ҡоштотар ары йүгергән, беренсе булып килеп тә еткән.

— Ҡыҙ һинеке,— тигән дейеү.

— Икенсе шартынды әйт,— тиҙәр егеттәр.

— Икенсе шартым шул: суйын мунсала бер сәғәт буйы сабына алһаң, ҡыҙ һинеке.

Был шартты үтәргә Уттаянмаҫ китә. Ул, артығы менән мунсала сабынып, дейеүҙең икенсе ҡыҙын алған.

— Һуңғы шартыңды әйт! — тигәндәр егеттәр.

— Һуңғы шартым шул: биш ҡыҙ араһынан минең ҡыҙымды таный алһаң, ҡыҙ һинеке; таный алмаһаң, башыңды киҫәм,— тигән, ти, дейеү.

Быныһы Таңһиҙәргә инде хәҙер. Таңһиҙәр барһа, бер иш биш ҡыҙ ултыра. Үҙҙәренә ҡарап та, кейемдәренә ҡарап та береһен икенсеһенән айырырлыҡ түгел, ти.

Таңһиҙәр ҡыҙҙарҙың балдаҡтарын ҡарай, батша ҡыҙының балдағында бер генә төрткө була, ә тегеләрҙекендә булмай.

— Бына һинең ҡыҙың,— тип, Таңһиҙәр әлеге ҡыҙға күрһәтә. Шулай итеп, Таңһиҙәр — ана шул батша ҡыҙына, ә иптәштәре үҙҙәренә бирелгән ҡыҙҙарға өйләнә. Ҡайтырға булып, юлға сығалар. Шул саҡ бер төлкө килеп сыға ла:

— Ҡайҙа бараһығыҙ? — тип өндәшә.

— Ҡайтып барабыҙ,— тиҙәр батырҙар.

— Ниңә тағы ике ҡыҙҙы үҙегеҙ менән алып китмәйһегеҙ?

— Беҙгә булды инде,— тиҙәр былар. Төлкө:

— Тороп тороғоҙ,— ти ҙә күл төбөнә төшөп китә. Килһә, дейеү ике ҡыҙҙы арҡанлап ҡуйған да йоҡлап ята. Төлкө арҡандың осон кәҙә аяғына бәйләй ҙә ҡыҙҙарҙы алып ҡаса. Төлкө алып килгән ҡыҙҙарҙы Таңһиҙәрҙең ағаларына бирәләр.

Дейеү уянып китһә,— ҡыҙҙар ҙа юҡ, егеттәр ҙә. Ә Таңһиҙәр бәхлеүән был ваҡыт, ағалары, дуҫтары менән күмәкләшеп, байып-сереп, донъя көтөп ята икән.

## АЛТЫНДУҒА БАТЫР

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың ҡырҡ улы булған. Иң кесеһенең исеме Алтындуға батыр ине, ти. Былар бик бай булғандар. Бигерәк тә йылҡы малын күп аҫрағандар. Йылҡыларының хисабын да белмәгәндәр.

Йылҡылар кәртәгә һыймағас, яланда ҡырҡ ҡура эшләткәндәр. Бабай менән утыҙ туғыҙ улы, көн һайын кис барып, малды ҡураларға айырып бикләр булғандар. Бикләгән ваҡытта ҡуралар тулһа: «Мал теүәл икән»,— тип ҡайтып киткәндәр; тулмаһа, эҙләп табып, тултырып ҡайталар ине, ти.

Алтындуға батыр бик шәп үҫкән. Ул бәләкәс сағынан уҡ бик көслө, бик сос булған. Хатта бала ғына сағында уҡ ололарға көсө етә ине, ти. Бер көндә ул әсәһенән:

— Инәй, атайым менән ағайымдар көн һайын кис ҡайҙа йөрөп ҡайталар ул?— тип һораған.

Әсәһе:

— Эй балам, һин белмәйһең шул, беҙҙең йылҡылар бик күп бит. Атайыңдар, көн дә барып, шуларҙы ҡураларға айырып бикләп теүәлләп ҡайталар,— тине, ти.

Атаһы ҡайтҡас, Алтындуға батыр:

— Атай, һеҙ ниңә улай күмәкләп йөрөйһөгөҙ? Мин генә барып теүәлләп ҡайтайым,— тине, ти.

Атаһы:

— Эй балам, беҙҙең йылҡылар һин генә теүәлләрлек түгел шул. Беҙ уларҙы ағайҙарың менән күмәкләшеп барып та, хисабын белмәйбеҙ, тик ҡырҡ ҡураға айырып бикләйбеҙ ҙә, шулар тулыуға ҡарап, теүәллеген белеп ҡайтып китәбеҙ,— тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр көн һайын: «Мин барам»,— тип һорай, ти. Бик инәлә торғас, уны атаһы бер үҙен ебәргән. Үҙе утыҙ туғыҙ улы менән уның артынан барған да күҙәтеп торған. Алтындуға батыр, шул тиклем сос йөрөп, йылҡыларҙы бикләне, атаһы менән ағалары хайран ҡалып ҡарап торҙолар, ти. Алтындуға батыр малдарҙы бикләп бөтөрөп ҡайтып киткәс, барып ҡараһалар, мал теүәл, ҡураларҙың барыһы ла туптулы, ти. Атаһы менән ағалары, шулай итеп, бер нисә көн Алтындуғаны ебәреп, үҙҙәре ситтән генә ҡарап торғандар. Мал гел теүәл сыҡҡас:

— Был бер үҙе лә булдыра ала икән,— тип, ҡабат Алтындуға батырҙың үҙең генә ебәрер булғандар.

Берҙән-бер көндө атаһы Алтындуға батырҙы саҡырып алды ла:

— Балам, йылҡы араһына бар ҙа йүгәнеңде шалтырат, ҡороғоңдо ҡалтырат. Шул ваҡыт ниндәй мал ҡараһа, шуны тотоп ал, ул үҙеңә булыр,— тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр, мал араһына барып, йүгәнен шалтыратып, ҡороғон ҡалтыратҡайны, уға насар

ғына бер буҙ тай әйләнеп ҡараны, ти. Ә башҡаларының йомошонда ла булманы, ти. Алтындуға батыр:

— Яҙғаны шулдыр инде,— тип, буҙ тайҙы тотоп алды ла ҡайтып китте, ти.

Ошо көндән һуң Алтындуға батыр мал теүәлләй барғанда гел генә ошо буҙ тайҙы менеп йөрөр булды, ти. Был буҙ тай бик шәп үҫеп, тиҙ үк ат ҡорона тулды, ти. Алтындуға батыр мал теүәлләп ҡайтҡанда, һәр ваҡыт елдереп ҡарап, буҙ тайҙың шәплегенә ҡыуана ине, ти.

Берҙән-бер көндө Алтындуға батыр, мал теүәлләп ҡайтып килгәндә, Буҙат телгә килеп:

— Күҙеңде йом, мин һине бер ергә алып барам,— тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр күҙен йомғайны, Буҙат уны осороп алып китте, ти. Бик күп осоп барып бер ергә туҡтағас, Алтындуға батыр күҙен асып ебәрһә, алдында — бер бейек ҡая таш, ти. Буҙат Алтындуға батырға:

— Бар, бына ошо ҡая ташҡа мен. Унда бер һәйбәт өй булыр, ул өйҙә ҡыҙҙар уйнап ултырыр, алтын-көмөштәр тулып ятыр. Һин ул өйгә инмә, ҡыҙҙарға, алтын-көмөштәргә теймә, юҡһа һәләк булырһың. Унда икенсе бер насар ғына өй булыр, һин шуныһына ин; ишек төбө сөйҙә бер ҡылыс элеүле торор, һин шуны ал да төш, ул һинең йәнең,— тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр, атынан төшөп, тауға менергә тырышып ҡарай — бер ҙә менә алмай, шыуып килә лә төшә, килә лә төшә ти. Шунан һуң Буҙат:

— Алай булғас, ҡайтайыҡ, һин аяғыңа, ҡулыңа тимерҙән тырнаҡтар эшләтеп ал,— тип әйтте, ти.

Кире өйгә ҡайтып киттеләр, ти, былар. Алтындуға батыр тимерҙән аяҡ-ҡулына тырнаҡ эшләткәс, тағы килделәр, ти. Был юлы бик тайманы, тырыша торғас, Алтындуға батыр ҡаяға менеп китте, ти. Ул менгән ҡая таштың өҫтөндә шул тиклем һәйбәт, йәмйәшел тигеҙлек, ти. Алтын-көмөш тулып ята, ти. Бер быяла өйҙө барып ҡараһа, һылыу-һылыу ҡыҙҙар ултыралар, ти. Был ҡыҙҙар шул тиклем һылыу, шул тиклем һәйбәт уйнайҙар, ти. Алтындуға батыр, үҙен онотоп, бик оҙаҡ ҡарап торҙо, ти. Был ҡыҙҙар уны күрмәнеләр, ти. Бик күп ваҡыт торғандан һуң, аты әйткән һүҙҙәр иҫенә төшөп, әлеге насар өйгә инеп, ҡылысты алды ла тауҙан төштө, ти. Аты ҡаршыһына килгәс, ҡыҙҙар уйнағанын һөйләгәйне, Буҙат уға:

— Улар бөтәһе лә бер кешенең ҡыҙҙары, береһе һинең кәләшең,— тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр, ҡайтҡас, ағаларын йыйып:

— Беҙ хәҙер бөтәбеҙ ҙә еткән егеттәрбеҙ, атайым беҙгә кәләш алып бирһен, кәләш һорайыҡ,— тип әйтте, ти.

Ағалары быға бик риза булып, Алтындуға батырға был ниәттәрен аталарына әйтергә ҡуштылар, ти. Алтындуға батыр, атаһына барып:

— Атай, һин беҙгә кәләш әйттер. Беҙ ҡырҡыбыҙ ҙа бер туған, һин беҙгә ҡырҡ ҡыҙлы кешене табып, шуның ҡыҙҙарын алып бир, беҙгә төрлө кешенең ҡыҙҙары кәрәкмәй,— тип әйтте, ти.

Аталары:

— Ҡайҙан табайым мин һеҙгә бер өйҙән ул ҡырҡ ҡыҙҙы?— тип ҡараһа ла, балалары һорағас, эҙләргә сығып китте, ти. Китеп алып ултыра, китеп алып ултыра, ти. Шулай бара торғас, бер бабайға осраны, ти.

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүм әссәләм!

— Һаумы!

— Иҫәнме! Юлың уң булһын! — тейештеләр, ти.

Алтындуға батырҙың атаһы теге бабайҙан ҡайҙа барыуын һорашҡас, бабай:

— Минең ҡырҡ ҡыҙым бар, шуларҙы бирергә ҡырҡ уллы кешене эҙләп йөрөйөм әле,— тине, ти.

Был бабай баяғы Алтындуға батыр күргән ҡыҙҙарҙың атаһы булған икән. Алтындуға батырҙың атаһы, был ҡарттың һүҙенә ҡыуанып:

— Минең ҡырҡ улым бар, шуларға алып бирер өсөн ҡырҡ ҡыҙлы кешене эҙләй инем. Улай булғас, әйҙә, ҡоҙа булышайыҡ,— тине, ти.

Теге бабай:

— Ярай, фәлән көндө бар!— тип, Алтындуға батырҙың атаһының ҡулына бер һуҡты ла юҡ булды ла ҡуйҙы, ти.

Алтындуға батырҙың атаһы: «Бәй-бәй, был ни булды, өйөн һораша ла алмай ҡалдым бит»,— тип торҙо, ти. Эҙләп ҡараны, ҡысҡырып та ҡараны — һис таба алманы, ти. Ахырҙа аптырап өйөнә ҡайтып китте, ти. Өйөнә ҡайтып еткәс, улдарына:

— Шулай, шулай, бер ерҙә бер бабайға осрағайным. Ул ҡырҡ ҡыҙына ҡырҡ уллы кешене эҙләп йөрөй икән. Мин ҡоҙа булышайыҡ тигәс, ярай, булышайыҡ тип, минең ҡулға һуҡты ла, үҙе күҙҙән юғал-

ды ла ҡуйҙы. Өйөн һораша алмай ҡалдым,— тип әйтте, ти. Алтындуға батыр:

— Эй атай, юҡҡа ғына аптырағанһың, мин уның өйөн беләм,— ти.

Бына теге бабай әйткән көн килеп еткән. Инде кәләшкә китәбеҙ тип йыйынып бөткәс кенә, һорау тыуған: «Ә мал? Кем теүәлләп торор йылҡыларҙы?» Әгәр Алтындуға батырҙы алып барһалар, тегеләрҙең берешә лә, бында ҡалып, малды теүәлләй алмай. Ә Алтындуға батыр бер үҙе лә теүәлләй ала. Шул сәбәпле бабай, Алтындуға батырҙы ҡалдырып, утыҙ туғыҙ улы менән ҡырҡ дуға алып, юлға сыҡты. Алтындуға батыр уларға юлды өйрәтеп ебәрҙе, ти. Ҡыҙҙарҙың атаһы, ҡоҙа килә тип, әҙерләнеп торған икән, бик ныҡ ҡунаҡ итте, ти. Кис булғас, ҡыҙҙарҙы олоһон ололата кейәүгә ҡуштылар, ти. Иң кесе ҡыҙ Алтындуғы батырға ҡалды, ти. Аҙна буйы ҡунаҡ булғас, былар ҡайтырға йыйына башланылар, ти. Ҡыҙҙарҙың атаһы ҡырҡ ат ектереп, арбалар тулғансы алтын, көмөш, ҡиммәтле әйберҙәр, йыһаздар тейәтте, ти. Үҙе: «Өйҙә ҡалырға кеше юҡ»,— тип, бармай ҡалды, ти. Кейәүҙәренә икенсе бер юлды өйрәтеп ебәрҙе, ти.

— Юлда бер урында бик матур емеш баҡсаһы булыр. Ул баҡса янында туҡтамағыҙ, емешенә теймәгеҙ, юҡһа һәләк булырһығыҙ. Ул баҡса — ете башлы ялмауыҙҙыҡы,— тип әйтте, ти.

Тегеләр, ярар, ярар тип, һикһән дуға булып, юлға сыҡтылар, ти. Алтындуға батырҙың кәләше бер үҙе бер атҡа ултырып арттан бара. Бына бер ваҡыт әлеге баҡса тапҡырына килеп етәләр былар. Был баҡса күҙ алғыһыҙ матур, ти. Былар туҡтамайынса сыҙай алмайҙар.

— Беҙ бит йөҙгә яҡын. Был ҡәҙәре кешене нимә эшләтер тиһең. Әйҙә, емеш ашайыҡ,— тиешеп, арбаларынан төшөп, емеш ашай башланылар, ти.

Ашап-ашап туйғас, китергә булғайнылар, ете башлы ялмауыҙ килеп сыҡты ла:

— Һеҙ минең нисә йылдар буйы һаҡлап үҫтергән баҡсамды бөтөргәнһегеҙ, мин һеҙҙе ебәрмәйем,— тип әйтте, ти.

Былар инәлеп ҡарайҙар,— теге һис ебәрмәй. Ялмауыҙ нисек булһа ла Алтындуға батырҙы бында килтертеп, уның аръылы үҙенә Ҡаф тауы артында йәшәүсе дейеү ҡыҙын алдыртмаҡсы була икән. Шул сәбәпле Алтындуға батырҙың кәләшен алып ҡалырға уйлаған. Тегеләр яман инәлгәс:

— Ярай, һеҙҙе ебәрәм, Алтындуға батырҙың кәләшен алып ҡалам,— ти.

Ялмауыҙҙан ҡоттары осҡан ағайҙар: «Был тиклем кешене һәләк иттергәнсе, бер кеше биреп китәйек»,— тип, Алтындуға батырҙың кәләшен ҡалдырып киттеләр, ти.

Былар ҡайтыуға Алтындуға батыр: «Кәләш килә»,— тип көтөп ултыра, ти. Ҡайтһалар, Алтындуға батырҙың кәләше юҡ.

— Кәләшеңде юлда ете башлы ялмауыҙ алып ҡалды,— тиҙәр.

Алтындуға батыр, күп уйлап тормайынса, ҡылысын алды ла, йәйәүләп, ялмауыҙ торған ергә китте. Барып етте, ете башлы ялмауыҙ килеп сыҡты, ти. Алтындуға батыр кәләшен һорай. Ялмауыҙ:

— Мин уны былай ғына бирмәйем. Ҡаф тауы артында бер дейеү ҡыҙы бар, шуны миңә алып кил, шунан бирәм,— ти.

Алтындуға батыр аптырауға ҡала: ялмауыҙҙы үлтерергә Алтындуға батырҙың көсө етә,— кәләшенең ҡайҙа йәшерелгәнен белмәй. Ни эшләргә?.. Бик аптырағас, теге ҡыҙҙы алып килергә китә. Китеп алып ултыра, китеп алып ултыра. Ай китте, йыл китте, артына әйләнеп ҡараһа, балта һабы буйы ер киткән, ти. Шулай бара торғас, бер кешегә барып етте, ти. Был кеше ергә ятҡан да һауанан әллә ни көтә, ти. Сәләм биреп, сәләм алыштылар, ти. Алтындуға батыр был кешенән:

— Ни көтөп ятаһың?— тип һораны, ти. Теге кеше:

— Бына һауаға уҡ атҡайным, шуны көтөп ятам. Бөгөн өсөнсө көн, өс көндә төшә торғайны, инде төшөр ваҡыты етеп килә,— тип әйтеп тә бөтөрҙө, уғы шып итеп килеп төштө лә ергә ҡаҙалды, ти.

Теге кеше:

— Һин кем булаһың?— тип һорағас, Алтындуға:

— Мин Алтындуға батыр булам,— тип әйтте, ти.

— Ә-ә, беләм, Алтындуға батыр һин икән!

Алтындуға батыр үҙенең Ҡаф тауы артына дейеү ҡыҙын алырға барыуын әйткәс, теге:

— Ҡоҙа булып кеше икәү йөрөй торғайны, мине лә алып бар,— тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр уны бергә алып китте, ти. Ай киттеләр, йыл киттеләр, арттарына әйләнеп ҡараһалар, балта һабы буйы ер киткәндәр. Бара торғас, былар йәнәшә ятҡан ике күл эргәһенә барып сыҡҡандар. Ике күлдең араһына бер кеше ятҡан да, бер күлдең

һыуын тотош уртлап алып, икенсеһенә алмаштырып һалып ята, ти. Батырҙар килеп етеп, сәләм бирҙеләр ҙә:

— Ни эшләп быныӊ һыуын икенсеһенә ҡояһыӊ? — тип һоранылар, ти.

— Мин күлдеӊ һыуын уртлап алам да, тешем араһынан ҡыҫып сығарып, балығын алып ҡалып ашайым, — тип әйтте, ти, был. Шунан: — Ә һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ? — тип һораны, ти. Алтындуға:

— Мин Алтындуға батыр булам, ә был — Атҡысы*, юлда осраштыҡ, — ти.

— Беләм, беләм Алтындуға батырҙы, ишеткәнем бар, ул һин икәнһеӊ. Ҡайҙа бараһығыҙ? — тип һораны, ти, теге. Былар:

— Ҡаф тауы аръяғынан дейеү ҡыҙы алып ҡайтырға барабыҙ, — тип әйттеләр, ти. Теге кеше:

— Ҡоҙа булып кеше өсәүләп йөрөй торғайны, мине лә бергә алығыҙ, — тип әйтте, ти.

— Әйҙә, һинеӊ кеүек кешеләр беҙгә кәрәк, — тип, быны ла алып киттеләр, ти.

Китеп алып ултыралар, китеп алып ултыралар, ти. Бара торғас, бер кешегә осранылар, ти. Был кеше ике аяғына ике тирмән ташы таҡҡан да йүгергеләп йөрөй, ти. Батырҙар был кешенеӊ ҡаршыһына килеп сәләм бирҙеләр ҙә:

— Ниӊә улай аяғыӊа таш бәйләнеӊ? — тип һоранылар, ти. Теге кеше:

— Мин ҡоралай кеүек хайуандарҙы тотоп ашайым. Әгәр аяғыма таш бәйләмәһәм, йүгереп үтеп китәм дә тота алмай ҡалам, шуныӊ өсөн бәйләнем, — тип әйтте, ти. Быларҙыӊ ҡайҙа китеп барыуҙарын һорашты, ти. Улар Ҡаф тауы артына дейеү ҡыҙы алырға барыуҙарын әйткәс, теге кеше:

— Ҡоҙа булып кеше дүртәүләп йөрөй торғайны, мине лә алығыҙ, — тип әйтте, ти. Былар:

— Һинеӊ кеүек кеше беҙгә кәрәк, әйҙә, — тип, быны ла үҙҙәре менән бергә алып киттеләр, ти.

Шулай итеп хәҙер дүртәүләп китеп алып ултыралар, китеп алып ултыралар былар. Бара торғас, бер ҡалаға барып етәләр. Был ҡалала халыҡ геү килеп шаулай, ти. Былар ҡаланыӊ ситендәге бер әбейгә төшәләр ҙә:

— Әбей, ниӊә халыҡ шаулаша? — тип һорайҙар.

— Бында бер батша йәшәй, уныӊ еткән ҡыҙы бар.

---

* А т ҡ ы с ы — шулай яҙылған. *Уҡсы* мәғәнәһендә. Башҡа әкиәттәрҙә — *Уғатар*.

Батша, бына ике ай инде, ҡыҙына кейәү һайлай. Бөтә тирә-яҡтағы халыҡ йыйылған,— тип әйтте, ти, әбей.

— Кемгә бирә, нисек-нисек бирә һуң?

— Батшаның дүрт шарты бар. Кем үтһә, шуға бирә.

— Алай икән. Ә шарттары нисек һуң?

— Беренсеһе шулай: батша бик бейек бер һырғауыл ултыртҡан. Кейәү булырға теләгән кеше, түбәһенә тулы стакан бал ултыртып, шуны бер тамсы ла түкмәй, һырғауыл башына менеп төшөргә тейеш; икенсеһе: батшаның бер йүгерек әбейе бар, шуның менән йүгерешергә тейеш; өсөнсө шарты — алтын йөҙөк үтә уҡ атыу; дүртенсе шарты: таш һарай эргәһенә ҡырҡ сажин утын өйөп, шуға кәрәсин һибеп ут төртә. Шул ваҡыт кейәү булаһы кеше һарай эсендә ултырып сыҙарға тейеш. Быларҙың береһен генә үтәй алмаһа ла, батша шул кешенең башын ҡырҡа,— тине, ти, әбей.

Алтындуға батыр:

— Беҙгә бирерме икән?— тип һораны, ти.

— Батшаның әйткәндәрен теүәл иттереп үтәй алһағыҙ, бирер, ниңә бирмәһен, кем булһа ла бирәм тигәс. Һеҙ уның әйткәндәрен үтәй алмаҫһығыҙ шул. Һеҙ түгел, һеҙҙән былайыраҡ шаһзадалар* килеп тә, батшаның шартын үтәй алманы, баштары ҡырҡылды,— тине, ти, әбей.

Әбейҙең әйтеүенә ҡарамайынса, Алтындуға батыр, иптәштәре менән бергәләп, батшаға килә лә:

— Беҙҙе лә сиратҡа яҙығыҙ,— ти.

Батша быларҙы күргәс:

— Һеҙҙең кеүек күптәрҙең баштары киҫелде инде,— тип көлдө лә уларҙы сиратҡа яҙып ҡуйҙы, ти.

Көтә торғас, быларҙың сираты килеп етә. Иң башта теге һырғауылға менеү икән. Бына бер ваҡыт Алтындуға батыр, бер стакан балды түбәһенә ултырта ла һырғауылға үрмәләй башлай. Эй үрмәләй, эй үрмәләй торғас, балды һис бер түкмәйенсә, тегенең башына уҡ менеп етә. Һырғауыл шундай бейек, хатта, Алтындуға батырҙың тыуған-үҫкән ерҙәре, аяҡ аҫтында ғына кеүек, бөтәһе лә күренеп ята, ти. Быларҙы күргәс, батырҙың күңеле тулып, күҙенән йәш тамды, ти.

Хайран ҡалып торған халыҡ:

— Түктең, түктең! Тамсы тамды!— тип ҡысҡырыша башлағайны, Алтындуға:

* Шаһзада — батша улы.

— Түкмәнем, минең күҙ йәше ул! Ышанмаһағыҙ, ялап ҡарағыҙ! — тип әйтте, ти.

Ялап ҡараһалар, ысынлап та бал түгел, ти. Төшкәндә лә Алтындуға батыр теге балды сайпылтмай. Шулай итеп бер шарт үтәлде, ти.

Хәҙер алтын йөҙөк үтә атырға. Быныһына Атҡысы сыға. Атып ебәргәйне, бының уғы алтын йөҙөктөң тап уртаһынан үтеп, йөҙөк сылтыр итеп ҡалды, ти.

Өсөнсө — йүгереш. Быға әлеге таш бәйләп йөрөй торған кеше китте, ти. Йүгерә торған ерҙәре ун өс көнлөк юл икән. Былар аҙыҡ, сүлмәк алып киттеләр, ти. Бараһы ерҙәренә барып еткәс, аш бешереп ашап алдылар, ти. Ашты ашап бөткәс, теге әбей:

— Ял итеп алайыҡ әле, — тип ятҡырҙы ла, сихырлап йоҡлатып, тегенең башына сүлмәкте ҡаплап, үҙе йүгереп китте лә барҙы, ти. Был әбей йүгерергә шәп түгел, гел шулай сихыр менән алдап йөрөй икән. Әбей әй йүгерә, әй йүгерә, әй йүгерә, ә теге һаман йоҡлай, ти. Әбей тәүлек ярым йүгергәс, Алтындуға батыр һырғауыл башына менеп ҡараһа, әбей инде ярты юлға еткән, ә үҙҙәренең йүгереге, башына сүлмәк ҡаплап, йоҡлап ята, ти. Төшөп, хәлде иптәштәренә әйткәйне, Атҡысы уғын ала һалды ла, һырғауыл башына менеп, тегеңә уғын атып ебәрҙе, ти. Атҡысының уғынан сүлмәк ауып төштө лә, Йүгерек уянып, тороп ултырҙы, ти. Күҙен асып ҡараһа — әбей юҡ! Тиҙ генә әйберҙәрен алды ла тотондо йүгерергә. Әй йүгерә, әй йүгерә, йүгерә торғас, әбейгә килеп тә етте, сүлмәкте башына түңкәреп, артына бер типте лә уҙып та китте, ти.

Атҡысы, быны күргәс, шатланып, Алтындуға батырҙарға төшөп һөйләне, ти. Был ваҡытта батша, хәҙер әбей килә, тип, былар, теге кеше килә, тип көтәләр, ти. Шулай көтә торғас, теге кеше йүгереп килеп етте, ә әбей — юҡ, ти. Ул, бөтә нәмәне ҡосаҡлап, бер тәүлеккә һуңлап килеп етте, ти. Ошолай итеп, өс шарт үтәлде, һуңғыһы ғына ҡалды, ти. Ул да булһа — таш һарай эсендә ултырыу. Унда батырҙар дүртәүләп ултырырға булдылар, ти. Ут төртөр алдынан ғына былар:

— Беҙ барыбер үләбеҙ инде, исмаһам, тәһәрәт алып киләйек, — тип, батшанан рөхсәт һоранылар, ти.

Батша рөхсәт иткәс, тәһәрәт алабыҙ тип, һыу буйына барҙылар ҙа, әлеге күл уртлаусы бер күлдең һыуын уртлап алып килде, ти. Шунан таш һарайға инеп ултырҙылар, ти. Быларҙы тыштан бикләп, ут төртөп ебәр-

ҙеләр, ти. Бына бер ваҡыт һарай ҡыҙа башланы, ти, ә былар эстә янған мөйөшкә һыу һибеп кенә ултыралар, ти. Утын янып бөткәс, батша:

— Бар, һөйәктәрен сығарып ташла,— тип, бер вәзирен ебәрҙе, ти.

Вәзир килһә, былар балыҡ ашап ултыралар, вәзирҙе балыҡ ашарға саҡыралар, ти.

— Батшаны ла балыҡ ашарға алып кил!— тип әйтәләр, ти, етмәһә.

Вәзир, ҡайта һалып:

— Үлмәгәндәр улар, балыҡ ашап ултыралар! Һине балыҡ ашарға саҡыралар,— тип әйткәйне, батша:

— Һин мине мәсхәрә итәһең, улар утта нисек итеп иҫән ҡалһындар ҙа балыҡты ҡайҙан алһындар улар!— тип асыуланып вәзиренең башын ҡырҡтырҙы ла, үҙе китте, ти, ҡарарға. Барып ҡараһа, күрә, былар дөрөҫөн дә балыҡ ашап ултыралар, ти. Батшаны күреү менән тегеләр:

— Әйҙә, батша хәҙрәттәре, балыҡ ашарға ултыр!— тинеләр, ти. Был эшкә бик аптырап, батша:

— Инде минең шарттар үтәлде, ҡыҙҙы ҡайһығыҙға бирәйем?— тип һораны, ти. Тегеләр:

— Бына ошо егеткә бир!— тип, Алтындуға батырҙы күрһәтәләр.

Батшаға ҡоҙа булып, бик яҡшы итеп һыйландылар, ти, былар. Алтындуға батыр батша ҡыҙына ҡушылды, ти. Тағы бер аҙ ҡунаҡ булғандан һуң, улар:

— Ҡыҙҙы ҡайтҡанда алып ҡайтырбыҙ,— тип, үҙ юлдарына киттеләр, ти.

Баралар, баралар, бара торғас, бер ваҡыт быларға Ҡаф тауы күренде, ти. Ҡаф тауының башына менеп еткәс, Алтындуға батыр:

— Һеҙ ошонда ҡалығыҙ, аръяғына мин үҙем генә китәм. Бына һеҙгә бер ҡурай. Әгәр мин еңһәм, ошо ҡурайҙан һөт тамыр; әгәр миңә бер-бер хәл булһа, ҡан тамыр. Ҡан тамһа, мине эҙләп барһағыҙ барырһығыҙ, бармаһағыҙ, ҡайтырһығыҙ,— тип, ҡурайҙы бирҙе лә, үҙе китте, ти. Иптәштәре шул ерҙә быны ҡайтыуын көтөп ҡалдылар, ти.

Алтындуға батыр китеп ултыра, китеп ултыра, ти. Бара торғас, Ҡаф тауының аръяғына барып сыҡты, ти. Унда бер өй осраны, ти. Шул өйгә барып инһә, бер әбей ултыра, ти. Алтындуға батыр килеп ингәс, шул әбей:

— Әҙәм затымы, ен затымы һин? — тип һораны, ти.

Алтындуға батыр:

— Мин — әҙәм заты, дейеү ҡыҙын алырға килдем. Ул ҡайҙа тора? — тип һораны, ти. Әбей:

— Мин белмәйем, минән алда апайым бар, бәлки ул беләлер, — ти.

Алтындуға батыр шуға китте, ти. Барып етеп, бер өйгә инһә, йәнә бер әбей ултыра, ти. Был әбей ҙә Алтындуға батырҙан:

— Әҙәм затымыһың, ен затымыһың? Әҙәм заты булһаң, ни эшләп бында килеп сыҡтың? — тип һораны, ти. Алтындуға батыр:

— Әҙәм затымын, дейеү ҡыҙын алырға килдем. Ул ҡайҙа тора? — тип һораны, ти. Был әбей ҙә:

— Белмәйем шул, балам. Минән алда апайым бар, шул белһә белер уны, — тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр хәҙер шуныһына китә. Барып етеп, өйгә инһә, тағы бер әбей ултыра. Был әбей ҙә:

— Эй балам, әҙәм затымыһың, ен затымыһың? Әҙәм заты булһаң, ни эшләп бында килеп сыҡтың? — тип һораны, ти.

Алтындуға батыр:

— Әҙәм затымын, әбей, әҙәм затымын. Дейеү ҡыҙын алырға килдем. Ул ҡайҙа тора? — тип һораны, ти.

Әбей Алтындуға батырға:

— Ай-һай, балам, алып ҡайта алырһыңмы икән? Ул үҙе лә бик көслө, өс ағаһы бар, улары ла бик уҫал. Бер ағаһы — өс башлы, ул өс батшаның ғәскәре менән һуғыша ала; икенсеһе — алты башлы, уныһы алты батшаның ғәскәре менән һуғыша ала; өсөнсөһө — ун ике башлы, уныһы ун ике батшаның ғәскәре менән һуғыша ала. Теге батшалар ҙа шул дейеү ҡыҙы өсөн һуғышалар. Күпме һуғышһалар ҙа тегеләр еңеп, ҡыҙҙы алалмайҙар, — тип әйтте, ти. Шунан: — Анау сөйҙә торған ҡамсыны күтәреп ҡара әле, көсөң ни саҡлы икән, күрәйем, — тип, шул ҡамсыны күрһәтте, ти.

Алтындуға батыр, үҙенең көсөн күрһәтмәксе булып, ҡамсыны сәтәкәй бармағы менән генә күтәрмәксе булғайны, — көсө етмәне, ти. Унан бер ҡулы менән күтәрмәксе булды, тағы ла көсө етмәне, ти. Иң ахырҙа бик асыуланып, ике ҡулы менән күтәреп ҡараһа ла, көсө етмәне, ти. Шунан әбей:

— Эй балам, көсөң бик аҙ икән шул. Дейеүҙең өс башлыһы ул ҡамсыны күтәреп иҙәнгә төшөрә, әммә

уралтып һуға алмай; алты башлыһы уралтып һуға ала; ун ике башлыһы күтәреп тә ала, уралтып та ала, башҡаһын да эшләй. Унаһы бик гәйрәтле,— ти. Шунан һуң әбей Алтындуға батырға туҫтаҡ менән бер нәмә алып килеп эсерҙе лә:

— Йә, хәҙер күтәреп ҡара! — тине, ти.

Алтындуға батыр ҡамсыны был юлы иҙәнгә төшөрә алды, ти. Әбей уға тағы ла бер туҫтаҡ алып килеп эсерҙе лә тағы ла күтәреп ҡарарға ҡушты, ти. Был юлы Алтындуға батыр ҡамсыны уралтып һуға алды, ти. Шунан әбей:

— Бына хәҙер һинең көсөң алты башлы дейеүҙең көсөнә тиңләнде, инде барһаң, барып ҡара,— тип, батырға юл өйрәтте, ти: — Бынан бер аҙ барғас, алтын өй булыр. Ҡыҙ шул өйҙә йоҡлап ятыр, уны арыҫландары, ҡапландары ҡарауыллап торор. Һин барып күренеү менән улар, бөтәһе дыу төшөп, олой башларҙар. Шул ваҡытта теге ҡыҙ суҡмарын тотоп килеп сығыр. Һин ҡапландарға күренгәс тә, улар олой башлаһа, ошо ҡамсы менән ергә һуҡ. Шул һуғыуҙан бер сажин ер уйылып, соҡор яһалыр, һин ана шул соҡорға төшөп ят. Ҡыҙ сығып тирә-яҡҡа ҡаранып ҙа кире инеп китер. Ҡыҙ инеп китеү менән һин соҡорҙан сыҡ та алға бар. Ҡапландар тағы ла олой башларҙар, һин тағы ерҙе һуғып соҡор яһа ла тағы шул соҡорға ят. Шулай ҡапландарҙы бер нисә олотҡандан һуң, теге ҡыҙ, асыуланып, ҡапландарҙың барын да суҡмары менән ҡыра-ҡыра һуғыр ҙа, инеп йоҡларға ятыр. Ҡыҙ йоҡлап киткәс, уның өйөнә ин, дүрт бөртөк сәсен йолҡоп ал, ике аяғын ике яҡҡа, ике ҡулын ике яҡҡа бәйлә лә ошо ҡамсы менән иҫен китергәнсе туҡма. Ҡасан: «Ебәр инде, мин һинеке»,— тип әйтә, шунда ғына ебәрерһең. Шуға тиклем һуҡ та һуҡ,— тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр сығып китте, ти. Бара торғас, әбей әйткән алтын өй күренде, ти. Ҡыҙҙы һаҡлаусы арыҫлан, ҡапландар бәйле торалар, ти. Алтындуға батырҙы күреү менән теге арыҫлан, ҡапландар дыу килеп олой башланылар, ти. Улар олой башлағас та, Алтындуға батыр, ерҙе ҡамсыһы менән уя һуғып, шул соҡорға төштө лә ятты, ти. Бына бер ваҡыт сәсен ялбыратып, ҡулына суҡмар тотоп, дейеү ҡыҙы килеп сыҡты, ти. Тирә-яҡҡа ҡаранды ла, бер нәмә лә күренмәгәс, ҡабат инде лә ятты, ти. Ҡыҙ инеп киткәс, Алтындуға батыр соҡорҙан сығып алға ҡуҙғалғайны, арыҫландар, ҡапландар тағы ла олорға тотондолар, ти. Ҡыҙ тағы суҡмарын тотоп килеп сыҡты, ти. Ҡаран-

ды, ҡаранды ла, бер нәмә лә күренмәгәс, тағы инде лә ятты, ти. Шул рәүешле өс тапҡыр ҡабатланғас, дейеү ҡыҙы: «Бер нәмә булмаһа ла олойһоғоҙ!» — тип, суҡмары менән тегеләргә ҡыра-ҡыра һуҡты ла кире инде лә ятты, ти. Бер аҙҙан һуң Алтындуға батыр ипләп кенә ҡыҙҙың бүлмәһенә инде лә, дүрт бөртөк сәсен йолҡоп алып, ике аяғын ике яҡҡа, ике ҡулын ике яҡҡа тарттырып бәйләне, ти. Шунан һуң, үлеп ҡуймаһын тип, ипләп кенә ҡамсы менән берҙе һуҡты,— ҡыҙ быны һиҙмәне лә, ти. Икенсе юлы ныгыраҡ төшөргәйне, ҡыбырлай биреп ҡуйҙы; өсөнсө тапҡыр һуҡҡайны, уянып китеп, дыулай башланы, ти. Алтындуға батыр ҙа, асыуланып, ҡамсы менән быны яра башланы, ти. Эй туҡмай, эй туҡмай, һуҡҡан һайын ҡыҙ яманыраҡ дыулай, ти. Ҡыҙ, хәле бөтә башлағас:

— Мин һинеке, ебәр инде!— тип әйтте, ти.

Шулай тип әйткәс, Алтындуға батыр ҡыҙҙы systе, ти. Шунан һуң улар ҡосаҡлашып үбештеләр ҙә ҡыҙ Алтындуға батырҙан нисек бында килгәнен һораштты, ти. Алтындуға батыр бөтәһен дә һөйләп бирҙе, ти. Ҡыҙ:

— Беҙ бынан тиҙерәк ҡасайыҡ. Минең ағайҙарым бик уҫалдар. Белеп ҡалһалар, һине һәләк итерҙәр,— ти. Алтындуға батыр:

— Юҡ, шул тиклем ерҙән килеп, ҡурҡып ҡасып ҡайтыу егетлек түгел! Мин уларға үҙем барам,— ти. Шунан теге ҡыҙ:

— Бынан алда минең өс башлы ағайым тора. Ул фәлән ваҡытта һуғыштан ҡайтасаҡ, ҡайтҡанда бер күперҙән сығасаҡ. Һин шул күпер аҫтына йәшенеп ят. Ул ел-дауыл ҡуптарып ҡайта. Өҫтә ятһаң, ятып сыҙай алмаҫһың. Унан ары — алты башлы, уныһынан да ары ун ике башлы ағайым тора. Уларҙың һуғыштан ҡайта торған ваҡыттары — фәлән ваҡыт, улар гел фәлән-фәлән күперҙән ел-дауыл ҡуптарып ҡайтырҙар. Һин уларҙы шул күпер аҫтына йәшеренеп көтөп ят,— тип әйтте, ти.

Алтындуға батыр, өс башлы дейеү ҡайта торған күпергә барып, аҫтына төшөп ятты, ти. Бына бер ваҡыт ел-дауылдар ҡуптарып дейеү килә, ти. Күпергә етеү менән дейеүҙең аты Алтындуға батырҙың еҫен һиҙеп өрктө, ти. Дейеү:

— Ни эшләп өркәһең? Әллә бында Алтындуға батыр килгән тип уйлайһыңмы? Ул үҙе түгел, бында уның итен ашаған ҡоштар ҙа килеп етә алмаҫ!— тип атына һуҡты, ти. Алтындуға батыр:

— Ҡошо килеп етмәһә етмәç, үҙе бында инде! — тип, күпер аçтынан сыҡҡайны, аты өркөп ситкә үрәпсене лә, дейеү ергә ҡолап төштө, ти.

Дейеү Алтындуға батырға:

— Килеүен килгәнһең, һау ҡайтырмын тип уйлама! — тине, ти. Шунан алыша башлағайнылар, был дейеүгә Алтындуға батырҙың көсө бик еңел етте, ти. Бер һелтәүҙә дейеүҙең өс башын бермә ҡырып һуҡты ла, күперҙең рәшәткәһенә теҙеп ултыртып: «Өс башлы дейеүҙе ун һигеҙ йәшлек әҙәм заты үлтерҙе»,— тип яҙҙы ла алты башлы дейеүҙе үлтерергә китте, ти.

Барып етеп, алты башлы дейеү ҡайта торған күперҙең аçтына төшөп ятҡайны, бына бер ваҡыт тағы ла ел-дауылдар ҡуптырып быныһы ҡайтып килә, ти. Күпергә етеү менән быныһының да аты өрктө, ти. Шунан дейеү:

— Ни эшләп өркәһең, әллә бында Алтындуға батыр килгән тип уйлаһыңмы? Ул түгел, бында уның итен ашаған ҡош та килеп етә алмаç! — тип, атына һуҡҡайны, күпер аçтынан Алтындуға батыр килеп сыҡты ла:

— Ҡошо килеп етмәһә етмәç, ул үҙе бында инде! — тине, ти.

Шул ваҡыт дейеүҙең аты өркөп китте лә, был дейеү ҙә атынан ҡолап төштө, ти. Шул арала Алтындуға батыр тегенең алты башын да ҡыра һуҡты ла ҡуйҙы, ти. Баяғы шикелле күпер рәшәткәһенә теҙеп ултыртып: «Алты башлы дейеүҙе ун һигеҙ йәшлек әҙәм балаһы үлтерҙе»,— тип яҙып китте, ти.

Алтындуға батыр хәҙер ун ике башлы дейеү ҡайта торған күпер аçтына барып ята. Ята ине, бына бер саҡ тегеләренән дә яманыраҡ ел-дауыл ҡуптарып, ун ике башлыһы ҡайтып килә, ти. Быныһының еле шул тиклем көслө, ти, хатта күпер аçтында сыҙап ятыр хәл юҡ, ти. Күпергә етеү менән был дейеүҙең дә аты өрктө, ти. Дейеү, атына асыуланып:

— Ниңә өркәһең, әллә бында Алтындуға батыр килгән тиһеңме? Ул килеү түгел, бында уның итен ашаған ҡоштар ҙа килеп етә алмаç! — тип, атына һуҡҡайны, шул минутта уҡ күпер аçтынан Алтындуға батыр килеп сыҡты ла:

— Ҡошо килмәһә килмәç, ә үҙе бында инде! — тине, ти. Аты өркөп ситкә тайпылған ыңғайға дейеү һикереп төштө лә:

— Килеүен килгәнһең дә, һау ҡайтырмын тип уйлама инде! — тип көлөп, ун ике башын ун ике яҡ-

тан һуҙып, батырға килә лә башланы, ти. Эй тотондолар, ти, былар шунан алышырға. Бер Алтындуға батыр һалып ебәрһә, бер дейеү һелтәп ебәрә, ти. Дейеү көслө, унан да бигерәк Алтындуға батыр көслө. Бик сос ҡылана егет: дейеү һелтәгән арала артҡа сигенеп тора ла, килә һалып, башын өҙә һуға ла ҡуя, өҙә һуға ла ҡуя, ти. Шулай итә торғас, дейеүҙең алты башын өҙөп төшөрҙө, ә үҙенә бер зарар булманы, ти. Дейеү быны ҡамсыһын тартып алырға итә икән. Теге ынтылған һайын, Алтындуға батыр дейеүҙең бер башын ҡыра һуғып тора. Теге ынтыла, был һуға, теге ынтыла, был һуға торғас, дейеүҙең баштары ҡырылып та бөтә. Алтындуға батыр ун ике башты баяғыса рәшәткәгә теҙеп ҡуя ла: «Ун ике башлы дейеүҙе ун һигеҙ йәшлек әҙәм балаһы үлтерҙе»,— тип яҙыу йәбештерә.

Алтындуға батырҙың теге иптәштәренә ҡалдырып киткән ҡурайынан был ваҡыт гел һөт ағып торҙо, ти. Быны күреп, иптәштәре, Алтындуға батырҙың эштәре шәп икән, тип шатланып, уның ҡайтыуын көттөләр, ти. Дейеүҙәрҙе ҡырып бөтөргәс, инде башҡа ҡурҡыныс ҡалманы тип, Алтындуға батыр теге ҡыҙ янына ҡайтып килде, ти. Бик арыған булғанға, берәй аҙна ошонда торорға уйланылар. Алтындуға батыр һунарға йөрөй, үҙе менән бергә ҡыҙҙы ла алып сыға, ти. Шул тирәлә бер диңгеҙ бар икән. Бер көндө шул диңгеҙ буйына барһалар, алыҫтан бер ҡараҫҡы күренә.

— Был нимә икән?— тип көтәләр.

Теге ҡараҫҡы яҡынайғандан яҡыная. Яҡынлашҡас, күрәләр, ул бер генә таҡтаға ултырған бер әбей икән. Үҙе илай-илай һөйләнеп килә, ти. Былар янына килеп еткәс:

— Диңгеҙҙә тулҡын сығып китте лә, кәмә менән иптәштәрем барыһы ла һыуға батты, мин бына ошо таҡтаға эләгеп кенә ҡалдым. Мине үҙегеҙ менән алығыҙ,— тип ялына башланы, ти. Алтындуға батыр:

— Мин көн дә һунарға сығып йөрөйөм. Мин киткәндә, һиңә иптәш булыр, алып ҡайтайыҡ,— тигәс, теге ҡыҙ ҙа күнеп, был әбейҙе үҙҙәренә алып ҡайттылар ҙа бергә тора башланылар, ти.

Алтындуға батыр көн дә һунарға сыға, ә ҡыҙ әбей менән өйҙә ҡала. Бер көндө әбей ҡыҙҙан:

— Был егетте һин яратаһыңмы?— тип һорай.

— Яратам,— ти ҡыҙ.

— Һин яратаһың да яратыуын, ә ул һине яратамы икән?— ти әбей.

— Ул да мине ярата, минең өсөн үлеп тора,— ти ҡыҙ.

— Эй балам, белмәйем шул, әҙәм балаһына ышанма, улар бик хәйләкәр була. Бына һин бөгөн кис унан: «Һинең йәнең ҡайҙа?» — тип һора әле. Әгәр яратһа, дөрөҫөн әйтер,— тип, әбей быны ҡоторта.

Кис, Алтындуға батыр һунарҙан ҡайтҡас, ҡыҙ унан:

— Әй, һинең йәнең ҡайһы ерҙә?— тип һораны, ти.

Алтындуға батыр:

— Ул һиңә ниңә кәрәк?— тип ҡараһа ла, ҡыҙ һаман ныҡышҡас: — Минең йәнем — олторағым,— тип әйтте, ти.

Иртәнсәк торғас, әбей ҡыҙҙан:

— Йә, әйттеме?— тип һораны, ти.

Ҡыҙ:

— Олторағым тине,— ти.

Шунан һуң әбей, ҡыҙ күрмәгәндә генә, Алтындуғаның олторағын алып, сихырлап, утҡа яҡты ла ҡуйҙы, ти. «Инде үлде былай булғас»,— тип йөрөй ине, шул саҡ Алтындуға батыр торҙо ла һунарға сығып китте, ти. Быға күҙе аҡайған әбей:

— Мин әйткәнгә ышанмай инең, бына күрҙеңме инде: олторағы — уның йәне түгел, ул һине алдаған! Һин унан ҡабат һора,— тине, ти.

Кис булып, йоҡларға ятҡас, ҡыҙ:

— Һин мине алдағанһың, һинең йәнең олторағың түгел. Һин мине яратмайһың, яратһаң дөрөҫөн әйтер инең,— тип илай башланы, ти. Бик аптыратҡас, Алтындуға батыр:

— Минең йәнем — ҡылысым,— тип әйтте лә һалды, ти.

Иртәнсәк бик иртә тороп, әбей ҡыҙҙан һорашып белде лә, һиҙҙермәй-күрһәтмәй генә Алтындуғаның ҡылысын алып сығып китеп, диңгеҙгә илтеп ташланы, ти. Ҡыҙ ашарға әҙерләй, Алтындуға батырҙың йоҡонан торғанын көтә торғас төш етеп килә. Алтындуға батыр һаман тормай. Әбей:

— Уят кейәүеңде!— тигән була.

Ҡыҙ барып уятайым тиһә, Алтындуға батыр үлгән. Ҡыҙ ҡысҡырып илап ебәрә. Күҙенә төкөрөгөн һөртөп, әбей ҙә илаған булып ҡылана. Эй илайҙар, эй илайҙар, илай торғас, әбей әйтә:

— Ярар, ҡыҙым, етер, үлгән артынан үлеп булмай, илаһаҡ та файҙа булмаҫ. Әйҙә, ҡырға сығып йөрөп, күңел асып ҡайтайыҡ,— ти.

Бер нәмә лә уйламайынса, ҡыҙ быға риза була.

Сығып киттеләр, һыу буйына барҙылар. Был әбейҙең һыу буйында йәшереп ҡуйған бер кәмәһе булған икән. Шул кәмәһе янына алып килде лә:

— Эй, бына бер кәмә! Әйҙә ултыр, йөрөп киләйек,— тип, ҡыҙҙы ултыртып алды ла китте, ти.

Был әбей икенсе бер батша тарафынан ебәрелгән булған икән. Ул батша ҡыҙҙың ағалары менән һуғышып та еңә алмағас, ҡыҙҙы ошо әбей арҡылы алдыртмаҡсы булған, ти.

Кәмәлә бара торғас, ҡыҙ ҡурҡа башлай:

— Әйҙә, ҡайтайыҡ инде,— тип ҡараһа ла, әбей:

— Бара бирәйек әле,— тип, ҡыҙҙы һаман алыҫыраҡ алып китә.

Бара торғас, әбей быға үҙенең батша тарафынан ебәрелгәнен һөйләй. Ҡыҙ, эштең насарлығын белһә лә, бер нәмә лә эшләй алмай. Әбей уны батша торған ҡалаға алып килеп еткерә.

Был ваҡыт Алтындуға батырҙың Ҡаф тауы аръяғында ҡалған иптәштәрендәге ҡурайҙан ҡан тама башланы, ти. Батырҙар:

— Ах, Алтындуға батырҙың эше насар икән. Уны былай ташлап китеү егетлек түгел, әйҙәгеҙ, барып ҡарайыҡ,— тип эҙләргә киттеләр, ти.

Әлеге өс әбейҙән һoраша-һораша килеп, Алтындуға батырҙы тапһалар,— Алтындуға батыр үлгән, эргәһендә ҡылысы юҡ, ти. Алтындуға батыр уларға үҙенең йәне ҡылыс икәнен һөйләгәйне, ти. Шул ерҙә былар, өсөһө өс яҡҡа китеп, ҡылысты эҙләй башланылар, ти. Теге диңгеҙ уртлаусы диңгеҙ янына барһа, яр буйында ғына бер балыҡ күрҙе, ти. Балыҡтың күҙенә ҡан һауған, ти.

— Ни эшләп күҙең ҡанланды?— тип һорағайны, балыҡ:

— Ошо арала ғына күҙемә бер ҡылыс ҡаҙалды,— тип әйтте, ти. (Хәҙерге көндәге ҡыҙыл күҙ балыҡ ана шул балыҡтың нәҫеле икән ул.) Күл уртлаусы, ҡылыстың бында икәнен белеп, һыу уртлай башлай. Уртлай торғас, диңгеҙҙең ситендә генә ҡылысты күреп ҡала. Иптәштәрен саҡырып, ҡылысты алып ҡайтып, Алтындуға батырҙың эргәһенә һалғайнылар, Алтындуға батыр:

— Эй оҙаҡ йоҡлап киткәнмен икән!— тип килеп торҙо, ти. Иптәштәре:

— Йоҡлағанһың йоҡламай ни, атаң башы! Кемдәр үлтерҙе, кемдәр бар ине?— тип һораштылар, ти.

Алтындуға батыр, иптәштәрен күреп, шул тиклем

шатланды, ти. Ҡараһа, өйҙә ҡатыны ла, теге әбей ҙә юҡ, ти. Алтындуға батыр үҙенең кемдәр менән һуғышҡанын, ҡыҙҙы нисек алғанын, ниндәй әбей килгәнен — барыһын да һөйләп бирҙе, ти. Кәләшенең юҡлығына ныҡ ҡайғырҙы, ти. Алтындуға батыр иптәштәренә:

— Ярай, һеҙ ҡайтһағыҙ ҙа ярай, мин кәләшемде эҙләйем, уны алмай ҡайтыу минең өсөн хурлыҡ булыр. Ҡатынымды, моғайын, теге әбей урлап ҡасҡандыр. Мин үҙем уны эҙләргә барам,— тип әйтте, ти. Иптәштәре уға:

— Юҡ, һине бер үҙеңде ебәрмәйбеҙ, әйҙә күмәкләп эҙләйбеҙ,— тигәс, бергәләп сығып киттеләр, ти.

Китеп баралар, китеп баралар, ти, былар. Бара торғас, теге ҡыҙҙы урлаған батшаның ҡалаһына килеп еттеләр, ти. Был ваҡыт ҡалала туй бара, бөгөн батша теге ҡыҙ менән ҡушылмаҡсы икән. Теге әбей, батырҙарҙы күреп ҡалып, тиҙ генә батшаға барып уға әйткәйне, батша быларға ҡаршы һуғыш асты, ти. Эй һуғышалар былар хәҙер, эй һуғышалар: Алтындуға батыр батша ғәскәрен үҙенең ҡылысы менән тураҡлай; Йүгерек, аяғына тирмән ташы бәйләп, шуның менән тапай; Атҡысы, уҡ атып, бер атҡанда йөҙәрләгән кешене үлтерә; Диңгеҙ уртлаусы диңгеҙҙән һыу уртлап алып килә лә, батшаның һалдаттары өҫтөнә һибеп, сәсәтеп үлтерә, ти! Батша ғәскәр өҫтәп тора, былар ҡырып тора. Алтындуға батырҙың еңгәнен, батшаның еңелгәнен күреп, ҡыҙ сарҙаҡта һөйөнөп ултыра, ти. Батырҙар батшаны ла, теге әбейҙе лә үлтереп, ҡыҙҙы алырға был өйгә киләләр. Унда бер нисә көн ял итәләр ҙә, алтын-көмөштәрҙе алып, ҡайтырға сығалар. Тәүҙә айырылышҡан ергә еткәс туҡтап, тапҡан малды бүлешә башлайҙар. Алтын-көмөштәрҙе бүлешеп бөткәс, Алтындуға батыр:

— Малды бүлештек, хәҙер ҡыҙҙы ла дүрткә бүләйек,— тип, ҡылысын күтәргәйне, ҡыҙ, ҡурҡып, ҡара ҡан ҡоҫа башланы, ти. Ҡоҫоп бөткәс, Алтындуға батыр тағын ҡылысын күтәргәйне, ҡыҙ был юлы ҡан ҡоҫмай, ашағанын ҡоҫто, ти. Шулай итеп, Алтындуға батыр ҡыҙҙың йөрәген боҙоҡ ҡандан таҙартты ла, бөтәһе бергә юлға сыҡтылар, ти. Китеп алып ултыралар, китеп алып ултыра торғас, теге шарттарын үтәп, ҡыҙын алған батшаның ҡалаһына килеп еттеләр, ти. Унда бер аҙ ҡунаҡ булғандың һуңында, ул ҡыҙҙы ла алып, тағы ла юлға сыҡтылар, ти. Теге иптәштәре, Алтындуға батырға ҡайһы ерҙә ҡушылған булһа,

шул ерҙә тороп ҡала барҙылар, ти. Был яғына Алтындуға батыр ике кәләш менән үҙе генә китте, ти. Килә торғас, ялмауыҙ торған баҡсаға килеп еттеләр, ти. Ялмауыҙ:

— Алып килдеңме?— тип, килеп сыҡты ла, ҡыҙҙың матурлығына ғәжәп итеп ҡарап торҙо, ти. Алтындуға батыр:

— Алып килдем, ҡана, инде һин минең кәләште бир,— тип әйтте, ти.

Ете башлы ялмауыҙ Алтындуға батырҙың кәләшен алып килеп биргәйне, Алтындуға батыр ялмауыҙҙың ете башын бер юлы ҡыра һуҡты ла ҡуйҙы, ти. Үҙе өс кәләше менән теттереп донъя көтә башланы, ти. Әле лә иҫән-һау икән, кисә генә телеграм алдым, бик шәп торалар, ти.

## ЮЛБАТ*

Бер батшаның утыҙ улы булған. Иң бәләкәйе — Юлбат исемле. Аталары өйләндерергә уйлағас, улдары әйткән:

— Беҙ утыҙ ҡыҙлы кешене табырға тейешбеҙ,— тигәндәр.

Утыҙ ҡыҙлы батшаны табып, яусы** ебәрәләр. Батша әйтә:

— Минең утыҙ ҡыҙым бар ине лә — өйөрмә сығып, юғалдылар шул. Хәҙер ҡайҙа икәндәрен белмәйем,— ти. Яусы ҡайтып әйтә***.

Юлбат әйтә:

— Беҙ ул ҡыҙҙарҙы эҙләргә тейеш,— ти. Ағалары быға риза була.

---

* Был әкиәт бер үк кешенән ике тапҡыр яҙып алынған *(аңлатмаларҙы ҡарағыҙ)*, әммә текст шау бер төрлө түгел. 1930 йылдар ахырында яҙып алынған тексҭағы мөһимерәк айырымлыҡтар юл аҫты иҫкәрмәләрендә килтерелә.

** Теге текста, утыҙ ҡыҙлы кешене эҙләп, улдарҙың атаһы үҙе сығып китә; унда буласаҡ ҡоҙалар икеһе лә — ябай кешеләр, батша түгелдәр.

*** Теге текста бынан һуң ҡарт, икенсе ҡалаға барып, егерме туғыҙ ҡыҙлы кешене таба, оло улдарына шул ҡыҙҙарҙы килешеп ҡайта. Әммә Юлбат, быға риза булмайынса, тәүге ҡарттың өйөрмә алып киткән утыҙ ҡыҙын эҙләргә тәҡдим итә, ағалары риза була.

Шунан былар әҙерләнә башлайҙар. Һәр береһе үҙенә ат һайлай, эйәр, башҡа кәрәк-яраҡтарҙы барлай. Юлбат тикшереп сыға. Абзыйҙарын мендереп бөткәс, үҙенең атына менергә итһә, уны аты күтәрә алмай. Хәҙер әйтә был:

— Һеҙ сығып китегеҙ. Мин Стәрлегә* барып ат алам,— ти.

Абзыйҙары сығып китә. Иртәгеһен был үҙе Стәрлегә бара. Барһа, үҙенә яраҡлы ат таба алмай: бер ат та күтәрә алмай быны. Кире ҡайтып китә. Ҡайтып килгәндә күрә: бер кахол** ҡара айғыр алып барған да, һата алмай, алып ҡайтып килә. Юлбат кахолды туҡтата:

— Ҡайҙа алып барҙың атты?

— Баҙарға алып барғайным, һата алманым,— ти.

— Нихаҡ һорайһың?

— Мең тәңкә.

— Ҡайҙа менеп ҡарайым әле, шәпме икән? — ти Юлбат.

Юлбат һикереп менгәйне, ат һелкенмәй ҙә. Өс саҡрым сабып барып әйләнеп килде лә, ат өҫтөнән төшмәйенсә үк түләп, ҡайтып китте***. Кахол да һөйөндө.

Ҡайтҡас, ҡара айғырҙы эйәрләй ҙә абзыйҙары артынан сығып китә был хәҙер.

Бара торғас, юл сатында — бер бағана, анда яҙыу: «Уңға киткән уңа, һулға киткән туңа». Был килә лә абзыйҙарының эҙен ҡарай****. «Әһә, уңға киткәндәр, абзыйҙар уңа икән», ти ҙә, үҙе һулға китә.

Бер аҙ ер киткәйне, артынан бер бүре***** төшә. Ҡайҙан белгәндер исемен, «Юлбат стой!» тип ҡысҡыра. Юлбат ҡара айғыры менән һыптыра ғына. Бүре лә ҡалышмай. Саба торғас, аты арый, тәгәрәй. Бүре килеп етә лә әйтә быға:

— Һалдыр йүгәнеңде, ал эйәреңде, ат минеке! — ти.

Эйәре менән йүгәнде күтәреп алып киткәс, бүре ҡара айғырҙың эсен ярып йөрәген генә ашаны ла Юлбат

---

* Теге текста Стәрле телгә алынмай.

** Кахол — хохол, украинец. Теге текста «бер кеше» тип кенә әйтелгән.

*** Теге текста ат һатыусы ун биш тәңкә һорай, Юлбат утыҙ тәңкә түләй.

**** Теге текста абзыйҙарының эҙен ҡарау тураһында һүҙ юҡ.

***** Теге текста алтмыш аршынлы бүре.

артынан тағы китте. Бүре килеп еткәс, Юлбат һорай:

— Әллә мине лә ашарға итәһеңме?

— Юҡ, һине ашамайым. Һин берҙән-бер атыңды миңә биреп ашаттың,— ти.— Ә һин, Юлбат, ҡайҙа бараһың?— тип һорай бүре.

— Шулай-шулай, бер батшаның утыҙ ҡыҙын эҙләп китеп барам,— ти Юлбат.

— Алай булғас, мине эйәрлә, йүгәнлә лә мен,— ти бит был.— Хәҙер барып етәбеҙ анда!— ти*.

Бүрене менеп сапты был хәҙер. Шәпкеһен генә тотоп бара. Шулай йән-фарман сабып бара торғас, былар бер тимер рәшәткәле күпергә етеп туҡтанылар.

— Вәт,— ти бүре,— мин һине алып килдем; дейеү батшаһы хәҙер йыраҡ түгел, миңә барырға ярамай. Бөгөн кире ҡайтырға кәрәк, иртәгә минең үҙемә суд була,— ти**.

Хәҙер Юлбат йәйәүләп бер үҙе китте, ти.

Бер дейеү пәрейенең өс улы булған. Өс улына теге ҡыҙҙарҙың өсөһөн алып биргән. Егерме етеһе әбейҙең үҙендә*** һарайҙа һолола торалар. Ҡыҙҙарҙы бейәләргә әйләндергән дә ҡуйған инде.

Бында килеп етер ваҡытта Юлбат теге кейәүҙәге ҡыҙҙарҙың береһенә туры килә бит әй. Һөйләшеп китеп,

---

* Теге текста был диалог юҡ. Бүре Юлбатты ҡыуып килеп еткәс, уға шулай ти: «Егет, рәхмәт һиңә, миңә атыңды ҡалдырыуға. Мин уның йөрәк ҡанын эстем, һиңә бурыслы булдым. Ултыр минең арҡаға. Минең бер ҡабырғама һуҡһаң, икенсе ҡабырғамдан ҡан сыҡһын»,— ти. Юлбат шулай эшләй, бүре уны елдереп алып сығып та китә.

** Бүренең тороп ҡалыу мотивы теге текста башҡаса. Бүре, күҙ асып йомғансы, «бер урынға» (тимер рәшәткәле күпер тураһында һүҙ юҡ) килтереп еткергәс:

— Йә, егет, төш инде, бараһы ереңә илле саҡрым ҡалды,— ти. Юлбат уға:

— Һин минең ҡайҙа барғанымды ҡайҙан беләһең? — ти. Бүре уға:

— Мин беләм, дуҫ, һин утыҙ ҡыҙ эҙләргә бараһың. Алдағы өмөттә һеҙ минең дошманым булған буйы өс йөҙ аршынлы, арҡырыһы алтмыш аршынлы аждаһаны үлтерергә тейешһегеҙ. Ныҡлы белеп әйтмәйем, һинме, әллә һинең улыңмы үлтерер, уныһын асыҡ әйтә алмайым. Шуның өсөн мин һине йәлләп, шул аждаһа ятҡан ерҙе күрһәтмәй алып сыҡтым. Мин хәҙер китәм, мин кәрәк булһам, мине уйла, мин һиңә ярҙам итермен (йәғни уйлау, иҫеңә төшөрөү менән килеп етермен.— *Н. З.),*— ти ҙә юртып китә лә бара.

*** Әбейҙең үҙендә, йәғни дейеү пәрейенең үҙендә.

ҡыҙ менән танышалар*. Егет бер батшаның утыҙ ҡыҙын эҙләүен әйтеп бирә. Ҡыҙ:

— Мин шул утыҙ ҡыҙҙың береһе инде, дейеүҙең улындамын,— ти. Ҡалғандары ҡайҙа, барыһын да әйтеп бирә был.

— Ә кейәү ҡайҙа һуң? — тип һорай Юлбат.

— Ул сығып китте, ат менән,— ти ҡыҙ.

— Ҡайһы яҡҡа китте?

— Һин ҡайҙан килдең? Тимер күперҙе сыҡтыңмы?

— Сыҡтым.

— Вәт, ана шул яҡҡа инде,— ти ҡыҙ.

— Рөхсәт итәһеңме, мин уны бөтөрөп киләйем,— ти.— Минең менән ҡайтырһыңмы?

— Ҡайҙа инде ул ҡайтмаған, әгәр бөтөрә алһаң икән? — ти ҡыҙ**.

Шунан һуң Юлбат барып теге күперҙең аҫтына боҫоп ята. Бына бер заман дейеү ҡайтып килә, ерҙәр һелкетеп. Ат менгән. Күпергә килеп еткәйне, быны аты күпергә кермәй, үрә баҫа ла тора.

— Әллә Юлбат килгән тип әйтәһеңме, ник инмәйһең күпергә? — тип атының арт һанына ҡаты иттереп һуға***.

— Әллә килмәҫ тип әйтәһеңме? — тип, Юлбат күпер аҫтынан һикереп сыға ла алдына баҫа. Дейеү әйтә:

---

* Теге текста егеттең ҡыҙ менән осрашыуы был типтағы башҡа әкиәттәрҙәгесә традицион формала һөйләнгән: Юлбат ҡыҙҙы баҡыр һарайҙа күрә.

** Теге текста диалог түбәндәгесә:

Юлбат:

— Был йорт кемдеке, һин үҙең кем ҡыҙы? — ти. Теге ҡатын:

— Мин мосолман булам, бынан бер йыл элек мине бер дейеү пәрейе дауыл менән урлап алып китте. Беҙ утыҙ ҡыҙ инек,— ти.

— Ә улар ҡайҙа?

— Өсөбөҙ ирҙә, дейеү пәрейҙәрендә. Егерме етеһе әбей батша ҡулында, ул да дейеү пәрейе,— ти.

— Ә ирең ҡайҙа? — ти Юлбат.

— Ул әҙәм заты ашарға китте.

— Ҡайҙан ҡайта?

— Анау торған күперҙән.

— Мин уны үлтерәм. Һеҙҙе алып ҡайтырға килдем,— ти Юлбат. Ҡатын уға:

— Мин һиңә, мә, көс кертә торған дарыу эс, мине лә үҙең менән алып ҡайтырһың,— ти. Юлбат:

— Ярар, һеҙҙе алып ҡайтырға килдем дә инде,— ти. Көс кертә торған дарыуҙы эсә лә, ҡылысын арыулап, күпергә китә.

*** Теге текста дейеүҙең һүҙе:

— На, на! Әллә Юлбат килгән тип әйтәһеңме? Юлбат бәләкәй әле, ун алты йәштә генә,— ти.

— Көрәшәбеҙме, һуғышабыҙмы?

— Ҡалай булһа ла ярай,— ти Юлбат.

Көрәшергә булалар былар. Юлбат күтәреп ала ла дейеүҙе күперҙең рәшәткәһенә башын өҙгәнсе һуға ла ҡуя*. Дейеүҙең ҡалған ике улын да был шулай күпер төбөндә көтөп ултырып, үлтереп бөтә**.

Шунан өс ҡыҙҙы бер ергә йыйып килтереп ҡуя ла, егерме етеһен эҙләп сығып китә. Дейеү батшаһының торған ҡалаһына барып, өйөн табып керә. Кергәс, күрә, әбей батша ултыра. Уны һуға ла үлтерә***. Өйҙә бер үҙе был хәҙер, һис кем юҡ. Бер асҡыс таба,— йоҙаҡҡа ярамай. Аҙаплана торғас, стенала бер тишек күреп ҡала. Шуға тығып шаҡарғайны, шарт итеп ишек асыла. Унда әбейҙең үҙ ҡыҙы булған икән, шул ултыра****. Дейеү батшаһының ҡыҙы Юлбатҡа ялына башлай. «Абзыҡай ҙа абзыҡай, мине үлтермә, ни теләһәң, шуны бирәм»,— ти.

— Инәйеңдең иң яҡшы әйберен бир миңә. Бирмәһәң, һуғам да үлтерәм!— ти Юлбат.

— Инәйҙең менеп йөрөй торған дөлдөлө бар, шуны бирәм. Ул ете ҡат ер аҫтында,— ти. Шул атты бирә был*****.

— Егерме ете ҡыҙ ҡайҙа? — тип һорай Юлбат, шунан һуң.

---

* Теге текста Юлбат ҡылысы менән дейеүҙе тураҡлап өйгәндән һуң: «Өс йөҙ йәшлек дейеүҙе ун алты йәшлек Юлбат үлтерҙе»,— тип яҙып китә.

** Теге текста икенсе дейеүҙең — алюмин һарайҙа, өсөнсөһөнөң көмөш һарайҙа йәшәүе әйтелә.

*** Юлбаттың әбей батша (дейеүҙәрҙең әсәһе) менән осрашыуы теге текста ентеклерәк һөйләнгән. Беренсенән, ул алтын йортта йәшәй. Икенсенән, шундай диалог бар: өйгә килеп ингәс, Юлбат, һаулыҡ һораша.

Әбей батша:

— Иҫәнлегең булмаһа, ике ҡабып, бер йотор инем,— ти. Юлбат:

— Һин йоторһоңмы, мин йотормонмы, хәҙергә төш тәхетеңдән, алышып-көрәшеп ҡарайыҡ,— ти.

Әбей батша асыуланып төшә лә быға килеп йәбешә. Юлбат, бәләгә лә күрмәй, ботонан тотоп, (әбейҙе) стенаға бәрә. Стена менән (емерелеп) тышҡа сығып китә. Сыҡҡас та әбейҙе ботонан бәйләп ҡуя ла, тыш яҡҡа сығып, башын өҙә саба. Шул ваҡыт сәс үрмәһенән ун ике асҡыс ала.

**** Теге текста әбейҙең сәсүргесенән алынған ун ике асҡыс менән ун ике бүлмәне аса. Ун икенсе бүлмәне асһа, бер ҡыҙҙың йоҡлап ятҡанын күрә.

***** Теге текста диалогтың был өлөшө юҡ. Унда бынан һуң да дейеүҙең аты (дөлдөл) тураһында һүҙ сыҡмай. Әммә ул бик кәрәкле.

— Һарайҙа. Егерме ете бейә һоло ашай. Бына һарайҙың асҡысы. Бына ҡамсы,— ти ҡыҙ.

Хәҙер Юлбат ҡамсы менән асҡысты ала ла, ҡыҙҙың үҙен дә етәкләп, һарайға килә. Һарайға кергәндә, ҡыҙҙы алдан кертә. Керһәләр, бер-бер төҫлө егерме ете бейә тора.

— Ҡамсы менән һуҡ,— ти ҡыҙ.

Бейәләрҙең һәр береһенә ҡамсы менән һуғып сыҡҡайны, тегеләр ҡыҙға әйләнә. Шулай итеп, был егерме ете ҡыҙҙы ла тапты булды инде. Шунан һуң Юлбат дейеүҙең ҡыҙына әйтә:

— Арттан төшмәҫһеңме?— ти.

— Төшмәм, төшмәм,— ти. Шулай тигәс, Юлбат быны үлтермәй, иҫән ҡалдыра.

Егерме ете ҡыҙҙы теге өс ҡыҙ янына алып барып, хәҙер былар утыҙ бер кеше булып, ҡайтып китәләр. Ҡуналҡаға барып етәләр. Ҡыҙҙар йоҡлай. Юлбат ҡарауыллай. Шулай итеп ултырғанда, ат тояғы тауышы ишетелә.

Ҡыҙҙарҙы уята ла: «Кемдәрҙер килә, һеҙ бер ҡайҙа ла китмәгеҙ, мин уларға ҡаршы сығам»,— тип юлға сыға ла был ҡысҡыра:

— Стой!

Шарт туҡтайҙар тегеләр.

— Кем һеҙ?— тип һорай Юлбат. Яуап юҡ.

— Пропуск* кем?

Яуап бирәләр:

— Мушка!

Тегеләр һорай:

— Һин әллә Юлбатмы?

— Юлбат,— ти был.

— Беҙ Юлбаттың ағалары.

— Ҡайҙа бараһығыҙ?

— Ҡайҙа барғанды ла белгән юҡ. Беҙ паспорттарҙы юғалтып төрмәгә эләктек. Төрмәне ватып, аттарҙы урлап ҡастыҡ,— тиҙәр**.

— Мин ҡыҙҙарҙы таптым, алып ҡайтып киләм,— ти Юлбат.

Ағалы-энеле күмәкләшеп, былар ҡыҙҙар янына

---

* Пропуск — бында пароль мәғәнәһендә. Теге текста осрашыу-танышыу — ғәҙәти формала исем һорашып.

** Теге текста ағайҙарҙың паспорт юғалтыуҙары (яңы заман элементы) тураһында һүҙ юҡ. Уларҙың теге юл сатынан уңға китеп, сит бер батшалыкта тотконда булыуҙары, унан ҡасып китеүҙәре әйтелә.

киләләр хәҙер. Оло абзыйына батшаның оло ҡыҙын, ҡалғандарына шул тәртиптә тейешлеһен биреп, Юлбат иң кесеһен үҙенә алып ҡала.

— Барығыҙ, үҙегеҙ ҡайтығыҙ инде,— ти Юлбат. Ағалары: «Юҡ, бергә ҡайтайыҡ»,— тигәс, бергәләп ҡайтып китәләр былар. Алтмышына — утыҙ ат.

Тағы бер ҡуналҡаға туҡтайҙар. Ашап-эсеп алалар ҙа, һәр береһе үҙенең кәләшен ҡосаҡлап, йоҡларға ята. Юлбат ат ҡарауыллай. Төндә әлеге бүре килеп сыға бит.

— Ни хәл, Юлбат?— ти. Таптыңмы ҡыҙҙарҙы?— тип һорай.

— Таптым,— ти Юлбат.

— Һуң, улай булғас, бар, ҡыҙың янына барып ят. Аттарығыҙҙы үҙем ҡарауыллармын,— ти бүре.

Юлбат ризалашып, батшаның кесе ҡыҙын ҡосаҡлап төн ҡата. Иртән торһалар, бер ат та юҡ. Бүре, баяғыса, аттарҙың гел йөрәген ашаған да сыҡҡан. Юлбат тороп килгәс, бүре һорай:

— Әллә асыуланаһыңмы, Юлбат? — ти.

— Юҡ, юҡ, асыуланмайым,— ти Юлбат. Бүре әйтә:

— Әйҙә, атланығыҙ миңә алтмышығыҙ ҙа!*.

Барыһы ла атланып ултырғайны, бүре алып сапты, малай, быларҙы — атың ҡырҙа торһон, осорта ғына! Шулай сабып бара торғас, быларҙың юлдары бер текә тауға барып ҡаҡлыҡты. Бүре быларҙы тауға мендерергә итә — юҡ, булдыра алмай: тырнаҡтары ҡалмаған икән, шыуа ла төшә, шыуа ла төшә.

— Төшөгөҙ инде, хәл бөттө,— ти.— Мин һеҙҙе бик йыртҡыс януарҙарҙан ҡотҡарҙым, ҡалған ағын үҙегеҙ генә барырһыҙ,— ти.— Был тау бер юханың ере. Бындағы бер әйбергә лә теймәгеҙ, һыуын эсмәгеҙ, алмаһын ашамағыҙ. Шуларҙы үтеп киткәс, тауҙы төшкәс бер соҡор булыр. Соҡор аръяғында үҙ ыңғайығыҙға китерһегеҙ,— ти.

Шулай ти ҙә бүре, артҡа боролоп, урман эсенә кереп китә, ә былар тырмаша-тырмаша тауға менеп китәләр. Бара торғас, тауҙан сылтырап аҡҡан бер

* Теге вариантта бүре тороп ҡалған урынға килеп еткәс, Юлбат: «Теге бүре булһа ине»,— тип уйланыуы менән, бүре былар алдына килеп тә баҫа. Юлбат бүренән теге хәтәр урындан алып сығыуын һорай. Бүре — ағайҙарынан аттарының йөрәк ҡандарын һорай. Ағайҙары быға тәүҙә ҡаршы торһалар ҙа, аҙаҡ ризалашалар.

шишмәгә килеп етәләр. Эй быныӊ һыуы ла тирә-яғында ҡыҙарып бешеп ултырған алмалары!

— Давай, энем Юлбат, ошонда йоҡлап китәйек,— тиҙәр абзыйҙары.

— Юҡ, ярамай,— ти Юлбат.

— Беҙҙе, алтмыш кешене, ни эшләтер тип беләһең? — тиҙәр тегеләр.

— Юҡ, ярамай тигәс, ярамай инде!

Юлбат абзыйҙарын тыӊлата алмай. Ҡатыны менән үҙе генә китә. Ә тегеләр шул шишмә буйында ятып ҡалалар, шишмәнән һыу эсәләр, алмаларын өҙөп ашайҙар.

Юлбат тырыша торғас, тауҙы менеп, түбән төшөп, соҡор аръяғына сыға, шунда ята. Иртән торғас, килгән юлдарына әйләнеп, абзыйҙарын көтөп ултыра. Бер тауыш ишетелә, тау башында һөрән һалалар. Юлбат ҡатынына әйтә:

— Һин ошонда ғына ултыр, мин барып киләйем,— ти.

Тауға менеп китә был. Барып етһә, бер стенаға бәрелә. Үрелеп ҡарай, буйы етмәй, стенаныӊ сиге лә күренмәй. Тотона-тотона, стена буйлап китә. Шулай итеп бара торғас, стенаныӊ башына сыҡты. Ул икән бер йылан. Абзыйҙарын уратып алып, ҡойроғон тешләгән дә ятҡан. Юлбат әйтә аждаһаға:

— Абзыйҙарҙы сығар,— ти.

— Сығармайым. Минеӊ баҡсамды ҡыйратҡандар,— ти йылан.

— Мин һине үлтерәм ату,— ти Юлбат.

— Һин мине үлтерһәӊ, мин, бүрәнә булып, ағайҙарыӊдыӊ өҫтөнән тәгәрәп сығам да китәм. Улар ҡағыҙ булып ҡалырҙар!— ти йылан.

Юлбат аптырай, ни эшләргә лә белмәй. Аждаһа әйтә:

— Бирмәҫ батшаныӊ Бармаҫ ҡыҙы* бар, шуны килтереп бирһәӊ, ағайҙарыӊды сығарам,— ти. Юлбатҡа бөтә юлын өйрәтә.

Юлбат риза булғас**, аждаһа тегеләрҙе сығара. Абзыйҙары күмәкләшеп ҡайтып китәләр. Юлбат бер юл айырмаһында тороп ҡала. Ағаларына әйтә:

— Минеӊ ҡатынды ла алып ҡайтығыҙ,— ти.—

---

* Бирмәҫ батшаныӊ Бармаҫ ҡыҙы — теге текста *Уг батшаныӊ ҡыҙы.*

** Теге текста Юлбат, ун ике йылдан әйләнеп килергә вәғәҙә итеп, ҡағыҙ яҙып бирә. Аждаһа тегеләрҙе шунан һуӊ ғына сығара.

Ҡолағығыҙ ишетһен: иҫән-һау ҡайтһам, әгәр насар ҡараһағыҙ, кәрәгегеҙҙе бирермен,— ти. Абзыйҙарын шулай тип киҫәтте лә сығып китте был хәҙер бер үҙе.

Эй бара, эй бара, бара торғас, бер сатан кешегә тап була.

— Һәй, иптәш, ҡайҙа китеп бараһың?— тип һорай Сатан.

— Бирмәҫ батшаның Бармаҫ ҡыҙын алырға.

— Мине лә эйәрт,— ти Сатан.

— Һин кем булаһың һуң? — тип һорай Юлбат.

— Мин Сатан йүгерек булам,— ти тегеһе*.

— Әйҙә, улай булғас,— ти ҙә алып китә быны үҙе менән Юлбат.

Китеп баралар былар хәҙер икәүләшеп, бара торғас, йәнә берәүҙе осраттылар. Ҡулында уҡ-йәйәһе бар.

— Ҡайҙа китеп бараһығыҙ?— тип һорай ул быларҙан.

— Беҙ Бирмәҫ батшаға китеп барабыҙ, ә һин үҙең кем булаһың?

— Уғатар батыр мин, мине лә эйәртегеҙ,— ти**.

Шулай итеп былар хәҙер өсәү булды, өсәүләшеп ары киттеләр. Бара торғас, тағы бер кеше осраны. Ҡулында харап елле ҡамсы бының. Тегеләр кеүек был да ҡайҙа китеп барыуҙарын һорай***. Ҡамсыһы менән ергә һуға ла, ятып, ерҙе тыңлай икән. Шуға күрә исемен Ертыңлар тип йөрөтәләр икән.

Уны ла алып, дүртәүләп китәләр хәҙер. Шулай тағы берәү осрай, уныһы Һыууртлар батыр була****. Бишәүләп, тағы киттеләр былар. Инде батшаның шәһәренә лә яҡынлап баралар. Шул саҡта быларҙың юлын киҫеп, бик киң бер дарья ағып ята. Киңлеге — ете саҡрым. Бирьяҡ яр буйында берәү ҡармаҡ һалып ултыра. Лыбырлашҡан тауышты ишетеп, артына әйләнеп ҡараһа, былар килә. Һикереп тора ла был ете саҡрымлы йылғаның теге яғына бер генә атлап сыға ла баҫа. Вәт бына һиңә! Тегеләр килеп еткәс, быға ҡул болғайҙар. Сыға.

— Һин кем булаһың?— тип һорайҙар бынан.

---

* Теге текста «аягына ике таш таҡкан кеше», исеме — Йүгерек.

** Теге текста Уғатар батыр малайҙар менән уҡ атышып йөрөгән ерендә иң һуңынан осрай.

*** Теге текста Ертыңлар батыр батша Юлбат ағзаларының ҡайтып етеп барыуын әйтә. «Ҡайҙан беләһең уны?» — тип һорағас, үҙенең һөнәрен һөйләй.

**** Теге текста Күлуртлар исемендә һөйләнгән.

— Мин Һыуатлар батыр булам,— ти был.— Ә һеҙ үҙегеҙ кемдәр, ҡайҙа китеп бараһығыҙ?

Юлбат барыһын да әйтеп бирә.

— Мине лә эйәртегеҙ,— ти был.

— Әйҙә, улай булғас,— тиҙәр тегеләр*.

Шунан Һыуатлар батыр тегеләрҙең барыһын бергә ҡултыҡ аҫтына ғына ҡыҫтыра ла даръяны аша атлап сыға ла китә.

Хәҙер алтаулап киттеләр, батшаға ла барып еттеләр. Бер байрам ваҡыты икән. Батша һорай былардан:

— Ниңә килдегеҙ?— ти.

— Һинең ҡыҙыңды алырға,— тиҙәр былар**.

— Минең сүген*** мунса бар. Шунның тышына утын өйөп яғып, алты көн буйы ҡыҙҙырыуға мунса эсендә тороп түҙһәгеҙ, ҡыҙ һеҙҙеке,— ти батша****.

Юлбат Һыууртлар батырға:

— Йүгер, берәй күлде уртлап алып ҡил,— ти*****

Тегеһенең күлде уртлап килеп етеүе булды, мунсаға яптылар, тыштан ут таҙ яғып ебәрҙеләр. Шарт та шарт яна инде тирәләп өйөлгән ҡоро утын. Ә тегеләр мунсаға кереү менән иҙәнде ҡутарып алдылар ҙа, баҙ ҡаҙып, күл һыуын шунда ҡойҙолар. Хәҙер ни былар йылы һыуҙа ҡойоноп, рәхәтләнеп кенә ултыралар, етмәһә стена буйына теҙеп балыҡ ҡыҙҙыралар. Алтынсы көнөнә мунса һүрелгәс, тиҙ генә баҙҙы күмәләр ҙә, алтыһы ла эләүкәгә менеп, балыҡ ашап ултыралар.

Батша мунса ҡараусыларына әйтә:

---

* Һыуатлар батырҙы теге текста ул бер диңгеҙҙең йә бер яғына, йә икенсе яғына һикереп сыҡҡылап йөрөгән сағында осраталар.

** Теге текста батша менән осрашыу үҙенсәлекле: батырҙарҙы кешеләр байрамға (уйынға) саҡыралар,— былар бармай, батшаның үҙенең килеүен һорайҙар. Батшаның портреты бирелгән: ул «йыуан ҡорһаҡлы, оҙон мыйыҡлы бер кеше» икән. Батша килгәс, Юлбат үҙен шулай таныштыра:

— Бадишам, һеҙҙең бер ҡыҙығыҙ бар икән. Шул ҡыҙығыҙҙы мин, йәғни исемем Юлбат тигән батыр булам, алып ҡайтырға килдем,— ти.

*** Сүген *(диал.)* — суйын.

**** Теге текста был — икенсе шарт.

***** Теге текста күлде уртлап алып килеү йәшереберәк башҡарыла: Күлуртлар һыу эсеп киләйем әле тигән булып китә. Мунса тышында ҡоро утынға, етмәһә, кәрәсин һибеп яндыралар.

— Барығыҙ, һепереп түгегеҙ шуларҙың көлдәрен!— ти.

Мунса ҡараусы килеп ишекте асып ебәрһә, тегеләр эләүкәлә балыҡ ашап ултыра. Ҡараусы йүгереп ҡайтып китә лә батшаға әйтә. Батша үҙе килеп ҡараһа, былар кәрт уйнап ултыра, ти.

— Ни хәл янманығыҙ?— тип һорай батша, аптырап.

— Һе, былдай мунсала янһаң, батша ҡыҙын алып буламы ни!— тип яуап бирә Юлбат.

Сығара ла тағы бер хикмәтле эш бирә батша быларға.

— Минең һикһән йәштә бер әбей бар. Шуның менән егерме биш саҡрымдан йүгерешеп, уны уҙып килһәгеҙ, ҡыҙ һеҙҙеке,— ти.

Юлбат әйтә:

— Ана беҙҙең бер сатан ҡусты бар, шул йүгерешер әбейең менән.

Киттеләр ҙә барып та еттеләр былар. Әбей әйтә:

— Улым, ултырып хәл йыяйыҡ,— ти.

Ултырғайнылар, әбей быны өшкөрөп йоҡлатты ла, үҙе йүгерҙе, ти.

Юлбат Ертыңларға тыңлап ҡарарға ҡуша. Тыңлап ҡараһа, Сатан хыр-хыр йоҡлап ята, әбей ухылдай-ухылдай йүгерә.

Юлбат Уғатарға уҡ атырға ҡуша. Атып ебәргәйне, уҡ тегенең баш осона килеп ҡаҙала. Сатан уянып китә лә, эште аңлап, йүгерергә тотона. Өс саҡрым ер ҡалғас, әбейҙе ҡыуып етеп, артына тибеп, үтеп тә китә. Әбей ухылдап килеп еткәнсе, Сатан ял итеп алған була инде*.

Батша был юлы ла үҙенекен итә алмағас, өсөнсө шартын әйтә.

— Минең, болоттарҙы тишеп, күккә ашып торған бер бағана бар. Шуның башына мөлдөрәмә бер стакан һөттө мендереп алып төшһәгеҙ, ҡыҙ һеҙҙеке,— ти.

Бағананың төбөнә кейеҙ йәйәләр. Мөлдөрәмә тултырып, бер стакан һөт килтерәләр. Быны Юлбат үҙе алып менеп китә. Башына менеп ултырғас, тыуған-

* Беренсенән, йүгерешеү — теге текста тәүге шарт. Икенсенән, шундай айырмалар бар: унда һикһән саҡрымдан йүгерешәләр; Юлбаттың Сатан ҡусты йүгерешер тигән һүҙҙәре, әбейҙең Сатанды доға уҡып йоҡлатыуы юҡ; Уғатарҙың уғы Сатандың ҡолағына килеп ҡаҙала; әбейҙе Сатан ун саҡрым ҡалғанда ҡыуып етә.

үҫкән илен күрә лә, күңеле тулып, илап ебәрә. Күҙ йәштәре ергә тама.

— Ә һөт түгелде! — тиҙәр түбәндәгеләр. Шулай ҙа аранан бер аҡыллы ҡарт:

— Сабыр итәйек әле, төшкәс күрербеҙ, — ти.

Юлбат килеп төшкәс, ҡараһалар, һөт тамсы ла кәмемәгән*.

Шулай итеп бөтә шарт та үтәлгәс, батша ҡыҙын бирә инде, башҡаса ни эшләһен.

Ҡыҙҙы алып ҡайтып китәләр. Теге иптәштәре ҡайҙа ҡушылған булһалар, шунда тороп ҡала баралар. Шунан һуң Юлбат ҡыҙ менән икәүһе генә ҡалып, ары китәләр.

Нисәнсе тапҡырҙыр инде, тағы кис булды. Бер урында ял итергә туҡтанылар. Батша ҡыҙы йоҡлап китте, Юлбат йоҡламай. Төнгө тынлыҡты тыңлап ултыра торғас, ниндәйҙер аттың тояҡ тауышын ишетә. Тороп ҡараһа, юл өҫтөндә бер ат утлап йөрөй. Был ниндәй ат икән тип, барып ҡараһа, ат өҫтөндә бер кеше йоҡлап ята. Юлбат килде лә:

— Кит, ни эшләп ат өҫтөндә йоҡлап ятаһың? — ти. Ә тегеһе:

— Ялан иркен, ура ла үт! — ти. Ә үҙе башын да күтәрмәй, күҙен дә асмай**. Юлбат, ҡыҙ янына килә, уята:

— Тор әле, — ти. — Бында бер кеше бар, ат өҫтөндә йоҡлап ята, күҙен дә асмай. «Ана, ура ла кит», тип әйтә. Әллә мин уны барып үлтерәйемме икән? — ти.

— Һин йоҡлаған кешене үлтермә, улай шәп булғас, уятып үлтер. Беҙгә, бәлки, кәрәк кеше булыр, — ти ҡыҙ.

Юлбат ҡабат бара ла, егетте нисек тә уятып, һүҙ ҡуша:

— Кем һин, ҡайҙа китеп бараһың былай? — ти.

* Теге текстан айырымлыҡтар: бағана «бер км оҙонлоғонда»; күҙ йәше тамғас, батша ҡыҙып китеп:

— Атып төшөрөгөҙ үҙен, һөттө түгеп бөттө! — тип ҡысҡыра. Аранан берәү:

— Унан бик күп ерҙәр күренә, ауылы күренгәндер ҙә шуға илайҙыр, — ти. Һөттөң түгелмәгәнен «дохторҙар» бағана төбөн тикшереп, күҙ йәше тамғанын әйтәләр.

Шуныһын да әйтеп үтеү кәрәк: теге текста һәр шарт үтәлгәндән һуң батырҙарға батша өс көн ял бирә.

** Юлбаттың һорауы, егеттең яуабы теге текста юҡ.

Ат өҫтөндәге кеше күҙен аса ла:

— Пропускың кем? — тип һорай.

— «Мушка», — ти Юлбат.

— Мин дә «Мушка», — ти. — Һин әллә Юлбатмы? — ти тағы.

— Эйе, Юлбат, — ти.

— Ә мин Юлбаттың улы, — ти тегеһе. Атынан һикереп төштө лә атаһын ҡосаҡлап ала, атаһы улын ҡосаҡлай. Һөйөнөшәләр инде*.

Юлбаттың ҡатынынан малай тыуып, ул туғыҙ йәшкә еткәс, ат менеп, атаһын эҙләй сыҡҡан икән. Теге аждаһаны тураҡлап, әрҙәнәгә һалған**.

Батшаның ҡыҙын улына бирә лә өсәүләп ҡайтып китәләр. Ҡайтып еткәс, бергәләп, әле булһа рәхәтләнеп донъя көтөп, йөн тетеп, йәшәп яталар, ти.

## БӘЛӘКӘЙ ЯҠУП

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың булған, ти, ҡырҡ улы. Иң бәләкәйе — Яҡуп исемле. Уландары ҙурайғас, бабай кәңәш итә:

— Уландарым, һеҙ хәҙер үҫеп еттегеҙ, һеҙгә кәләш алырға ваҡыт етте. Мин һеҙгә берәмләп кәләш алып бирә алмайым, ҡайҙалыр ҡырҡ ҡыҙ булырға тейеш. Һеҙҙең кеүек — бер ата, бер инәнән. Һеҙ шуларҙы эҙләп табығыҙ, — ти.

Уландар юллыҡ аҙыҡ алалар ҙа сығып китәләр. Бер нисә айҙар барғас, ике яҡҡа айырылған юлға барып етәләр. Унда бер бағана була. Бағанаға былай тип яҙылған, ти: «Уңға киткән уңа, һулға киткән туңа».

Быны уҡып ҡарағандан һуң уландар кәңәш итәләр. Шул ерҙә Бәләкәй Яҡуп ағаларына:

— Һеҙ, ағайҙар, утыҙ туғыҙығыҙ ҙа — уңға, мин бер үҙем һулға китәйем, — ти.

Ағалары риза булып — уңға, ә бәләкәй Яҡуп һулға китә. Айырмалы юлдың бағанаһына бысаҡ сәнсеп ҡалдыра:

— Зыянға осраһам, ҡан тамыр; һау булһам, шул көйө торор, — ти.

---

* Теге текста ата менән улдың танышыуы гәҙәти формала: Юлбат егеттең исем-фамилияһын һорай. Егет: «Юлбирҙин Яҡуп Юлбат улы», — тип яуап бирә.

** Был хаҡта Юлбатҡа улы үҙе һөйләй, уның хәҙер ун биш йәштә булыуы әйтелә.

Бер нисә ай уҙғас, бәләкәй Яҡуп бер ер тишегенә барып етә. Уның барыр юлы бөтә, батыр ете ҡат ер тишегенә төшөп китә. Ете ҡат ер аҫты үҙе бер донъялыҡ икән. Анда төшөп, бара торғас, Яҡуп бер баҡыр күпергә барып етә. Күперҙең ике яғында юлбарыҫтар, башҡа йыртҡыстар ташланырға ғына тора, ти. Был йыртҡыстар Яҡупҡа ғәййәрләнеп яталар, ти. Яҡуп ҡурҡып ҡала. Шулай ҙа күперҙән үтә. Быға тиклем йыртҡыстар күперҙән берәүҙе лә сығармаған булғандар. Яҡупты танып, улар көлөп ҡалалар.

Бәләкәй Яҡуп баҡыр йортҡа барып керә. Унда күҙҙең яуын алып торған бер ҡыҙ ултыра, ти. Яҡупты күргәс, ҡыҙ һикереп тора:

— Их, егет, һеҙ ниңә бында килдегеҙ, һеҙ әҙәм заты бит. Бында дейеү пәрейе тора, ул кешеләрҙе ашай,— ти. Бәләкәй Яҡуп:

— Юҡ, мин дейеүҙән ҡурҡмайым, мин уның менән көрәшәм,— тигән, ти. Ҡыҙ:

— Улай булғас, дейеүҙең баҡсаһына кергән саҡта ике яҡта ике мискә һыу ултырыр. Уң яҡтағыһы көсләндерә, һул яҡтағыһы көсһөҙләндерә, һин шуларҙы алмаштырып ултырт,— ти.

Егет ҡыҙға рәхмәт әйтеп сығып китә. Күпер аҫтына инеп ултыра ла дейеүҙе көтә башлай. Шул арала дейеү пәрейе ҡайтып килә, ти. Яҡшы ҡара ат менгән, ел-дауылдар уйната, ти. Күпергә еткәс, аты туҡтай төшә.

Дейеү пәрейе атына:

— Нәмәнән ҡурҡтың? Донъяла беҙҙең ҡурҡа торған әйбер юҡ. Бәләкәй Яҡуп бар ҙа, ул бәләкәй әле, бында килә алмай,— тигән, ти. Ул арала Бәләкәй Яҡуп күпер аҫтынан килеп сыға ла дейеүгә:

— Әгәр Бәләкәй Яҡуп килгән булһа, ни эшләрһең? — ти.

Дейеү пәрейе:

— Хуш килдең, миңә ризыҡ булды!— ти. Бәләкәй Яҡуп дейеүгә:

— Ашай алмаҫһың, тешең һыныр!— тип яуаплай.

Көрәшергә баҡсаға керҙеләр, ти. Алышынып ҡуйылған мискәләрҙең уң яҡтағыһынан дейеү үҙе эсте, ә һул яҡтағыһынан Бәләкәй Яҡупҡа эсерҙе, ти. Шунан китте, ти, алыш. Бәләкәй Яҡуп дейеүҙе биленән алып ергә күтәреп бәрә. Бер нисә алышҡандан һуң Яҡуп, дейеүҙе ергә сумыра һуғып, башын өҙөп ташланы ла өйгә йүгерҙе, ти. Йүгереп барып һылыу ҡыҙҙы сыбыртҡы менән өс тапҡыр һуғып алды ла:

— Ҡалған утыҙ туғыҙ апайың ҡайҙа? — тип һораны, ти.

— Ошонан бер нисә йөҙ саҡрым барғас, көмөш йорт булыр. Шул йортта минең апайымдар йәшәй. Улар мине беләләр, — тине, ти, ҡыҙ. Егеткә иҫтәлек өсөн көмөш балдаҡ бирҙе, ти.

Бәләкәй Яҡуп, йөҙ саҡрым барғас, бер көмөш күпергә осраны, ти. Бында ла шул уҡ януарҙар бар икән, улар ҙа Яҡуптан көлөп ҡалдылар, ти. Күперҙе сығып, Бәләкәй Яҡуп көмөш йортҡа барып инә. Инһә, бер ҡыҙ һикереп тора ла:

— Их, егет, харап булдың бит, бында дейеү пәрейе тора, ул һине ашай инде! — ти.

— Юҡ, мин уның үҙен үлтерәм, — тине, ти, Бәләкәй Яҡуп.

— Улай булғас, дейеүҙең баҡсаһындағы ике мискәне алыштырып ултырт, — тине, ти, ҡыҙ.

Яҡуп мискәләрҙе алмаштырып ҡуйҙы ла, күпер аҫтына инеп, дейеүҙе көтөп ята башланы, ти. Бер ваҡыт ел-дауыл ҡупты, ти. Ағастар эйелеп-һығылып китәләр, ти. Дейеү күпергә килеп етте лә, үҙенең атына:

— Ниңә ҡурҡаһың, әллә бында Бәләкәй Яҡуп бар тип беләһеңме? Бәләкәй Яҡуп бар ҙа ул, бәләкәй әле, бында килә алмай, — тине, ти.

Ул арала Бәләкәй Яҡуп күпер аҫтынан һикереп сыҡты ла:

— Әгәр Бәләкәй Яҡуп бында булһа, ни эшләрһең? — тине, ти.

— Хуш килдең, миңә өҫтәмә ризыҡ булды, — тине, ти, дейеү.

— Ашай алмаҫһың, һинең дә тешең һыныр! — тине, ти, Яҡуп.

Көрәшергә баҡсаға керҙеләр, ти. Уң яҡтағы мискәне дейеү үҙе эсте, һул яҡтағыһын Бәләкәй Яҡупҡа эсерҙе, ти. Шунан китте, ти, алыш. Яҡын тирәләге урмандар шаулап, тауҙар ишелеп, һыуҙар һелкенеп торҙо, ти. Алыша торғас, Бәләкәй Яҡуп дейеүҙе биленән алып, ергә һеңдерә һуҡты ла, ҡамсыһын алып, йүгереп барып ҡыҙға өс тапҡыр ҡамсы менән тартты, ти.

— Ҡалған утыҙ һигеҙ апайың ҡайҙа? — тигәс, ҡыҙ:

— Ошонан бер нисә йөҙ саҡрымда бер алтын йорт булыр. Шул йортта минең апайымдар йәшәй. Улар мине беләләр, — тине, ти.

Бәләкәй Яҡуп китә. Бара торғас, алтын күпергә етә. Күперҙе төрлө йыртҡыстар һаҡлай икән. Был

януарҙар ҙа батырҙы олоп ҡаршы алалар, көләп оҙаталар. Күперҙе үтеп, алтын йортҡа барып инә.

— Их, егет, харап булаһың бит. Бында бер әҙәмдең дә дейеүҙән ҡотола алғаны юҡ әле,— тине, ти, ҡыҙ. Яҡуп:

— Ҡарап ҡарарбыҙ,— тигәс, ҡыҙ:

— Һин дейеүҙең атын мен, кейемен кей. Бына һиңә дейеүҙең ҡылысы, сыбыртҡыһы. Йөҙ саҡрым баргас, бер ҡая тау булыр. Шул ҡая тауҙан арҡан менән аҫылған карета килеп төшәр. Шул каретаға атың-кейемдәрең менән ултыр ҙа түбән ҡарап бар, юғары ҡарама, менеп етмәйенсә, йөҙөңдө күрһәтмә. Һине каретаң менән үргә күтәреп алырҙар. Менеп еткәс, утыҙ ете апайыбыҙ булыр. Менгәс, ҡыҙҙарға берәр тапҡыр сыбыртҡы менән һуғып сыҡ. Шунан улар, һинән ҡурҡып, артыңдан эйәрерҙәр. Унда ун ике башлы дейеү пәрейе йәшәй. Ул бер йылға юлға сыҡҡан булыр, тиҙ ҡайтмаҫ. Шулай ҙа һеҙ тиҙерәк ҡуҙғалығыҙ,— тигән, ти.

Бәләкәй Яҡуп китә. Теге тауға барып етһә, карета түбәндә тора. Бәләкәй Яҡуп, ҡыҙ әйткәнсә, каретаға аты-ние менән кереп ултырғайны, теге күтәрелә башлай. Күтәрелеп еткәс кенә Бәләкәй Яҡуп, тағы ла күп ҡалдымы икән тип, юғары ҡарай. Ҡыҙҙар, күтәрелеп килеүсенең дейеү түгеллеген белеп, каретаны төшөрөп ебәрәләр.

Күп кенә ваҡыт ятҡандан һуң Бәләкәй Яҡупҡа иҫ керә. Тороп атына менә лә юл эҙләй башлай. Бер юл табып, урап, тау башына менеп етә. Ҡыҙҙарҙы таба ла сыбыртҡы менән һыҙыра башлай.

— Ни эшләһәң дә, беҙ һинеке!— тип, ҡыҙҙар баш эйәләр, Яҡупты алтын йортҡа алып киләләр. Алтын йорттағы ҡыҙ был йортто алтын йомортҡа итеп һалып алып, барыһы бергә көмөш йортҡа китәләр. Барып еткәс, көмөш йортто ла, баҡыр йортто ла йомортҡаға әйләндереп алалар ҙа, Бәләкәй Яҡуп ер аҫтына төшкән тишеккә киләләр.

Был ваҡытта Яҡуптың ағалары, кире әйләнеп килеп, бағананы ҡарайҙар. Бағаналағы бысаҡта үҙгәреш юҡ. Бәләкәй Яҡуп тишектән сыға, ҡыҙҙарҙы ла сығара. Бағана янына килеп етәләр. Бәләкәй Яҡуп ағаларын, иң алға олоһон, иң артҡа бәләкәйен ҡуйып, теҙеп сыға ла, ҡыҙҙарҙы ла шул тәртиптә теҙеп, һәр берeһенә бер ҡыҙҙы бирә. Шунан етәкләшеп юлға сығалар. Бер аҙ килгәс, бейек кенә тау башына килеп

етәләр, ошонда ял итеп китергә булалар. Бәләкәй ҡыҙ шул ваҡыт:

— Юҡ, беҙ был урында туҡтамайыҡ, түбән төшөп ял итәйек,— ти. Ә башҡа ҡыҙҙар менән ағалары:

— Бында бик матур, ошонда ҡалайыҡ,— тиҙәр.

Бәләкәй Яҡуп менән кинйә ҡыҙ түбән төшөп, ә ҡалғандары тау башында йоҡлайҙар.

Был ваҡытта ун ике башлы дейеү пәрейе үҙенең тау башындағы донъяһына, утыҙ ете ҡыҙ янына ҡайтҡан була. Ҡайтһа, ни күҙе менән күрһен, ҡыҙҙар юҡ. Дейеү, йөҙ десятина арыш сәсеп, уны урҙырып, тирмәндә тарттырып, икмәк бешертеп ашай ҙа, яҡшы атын менеп, ҡыҙҙар артынан саба. Ҡыҙҙар менән егеттәрҙе иң тәмле йоҡоларында килеп баҫа, тегеләр ҡысҡырыша башлайҙар. Тауышҡа Бәләкәй Яҡуп менән ҡатыны уяна. Ни булған икән тип, тау башына менһәләр, дейеүҙе күрәләр.

— Ах, дейеү, һиңә ни кәрәк? Ебәр һин уларҙы!— ти Яҡуп. Ә дейеү уға:

— Ниндәйҙер бер батшалыҡта батша ҡыҙы бар. Шуны миңә килтерһәң, ебәрәм,— ти.

Яҡуп риза була. Ҡатынын ағалары менән еңгәләренә биреп ҡайтарып ебәрә лә, үҙе дейеүҙең һорауын үтәр өсөн юлға сыға. Бара торғас, юлдың уң яғында бер кеше күрә. Ул кеше ҡыуыш яһай ҙа һүтә, яһай ҙа һүтә, ти. Бәләкәй Яҡупты күреп ҡала ла:

— Яҡуп, һин ҡайҙа бараһың?— тип һорай.

— Мин бер батшаның ҡыҙын эҙләп барам,— ти Яҡуп.

Теге — Йүгерек батыр икән. Яҡуп уны үҙе менән алып китә.

Бара торғас, ғәҙәттән тыш бер йыуан ҡайын күренә. Был ҡайын бер йығыла, бер тора, ти. Иплэп ҡараһалар, тамыр аҫтынан бер кеше килеп сыға. Үҙе баҡанан бәләкәй, филдән ҙур, ти.

— Яҡуп, һин ҡайҙа бараһың?— тип һорай теге кеше.

— Батша ҡыҙын эҙләргә,— ти Яҡуп.

Яҡуп Баҡа батырҙы ла үҙе менән алып китә. Өсәүләп бара торғас, тағы бер кеше күрәләр. Ул күтәрелеп һауаға олғаша ла ергә төшә, олғаша ла кире төшә, ти.

— Бәләкәй Яҡуп, ҡайҙа бараһың? — тип ҡысҡыра теге.

— Батша ҡыҙын эҙләргә,— ти Яҡуп.

Быны ла үҙҙәре менән алып китәләр. Бер ҡалаға

барып еталәр. Унда бер йорт күрәләр. Йүгерек уның батша йорто икәнен әйткәс, йортҡа керәләр. Батша менән яҡшы итеп һөйләшәләр, ҡыҙына яусы булып килеүҙәрен әйтәләр. Батша былай ти:

— Мин риза. Мин өс талап ҡуям. Шуны үтәй алһағыҙ, ҡыҙ һеҙҙеке. Үтәй алмаһағыҙ, дүртегеҙҙең дә башығыҙ киҫеләсәк,— ти.

— Талаптарығыҙҙы әйтеп ҡарағыҙ,— ти Яҡуп.

— Беренсе талап: башығыҙға стакан менән һыу ултыртып, бер тамсыһын да түкмәйенсә, һырғауыл башына менеп төшөгөҙ,— ти батша.— Икенсеһе: минең бер сатан инәйем бар, шуны йүгереп уҙығыҙ. Өсөнсөһө: ҡыҙыу мунсам бар, шунда сабынып сығығыҙ.

Быларҙы ишеткәс, Бәләкәй Яҡуп бик ҡаты уйлана. Ярай, һәләк булһам, ағай-еңгәйҙәр өсөн һәләк булам, тип ризалығын белдерә.

Батша халыҡты йыя. Бәләкәй Яҡуп башына стакан ултыртып һырғауылға менеп китә. Аҫҡа бер шәшке аҫты ҡуялар. Бәләкәй Яҡуп менеп тә етә, шәшке аҫтына бер тамсы һыу тама. Батша:

— Талапты үтәмәнең,— тип ҡысҡырып ебәрә.

— Ялап ҡарағыҙ, һыу түгел, бер тамсы тирем сыҡҡайны, шул тамған,— ти Яҡуп.

Тикшереп ҡараһалар, шәшке аҫтында һыу түгел, тир була.

Бер талап үтәлә. Икенсе шартҡа сират етә. Батшаның сатан инәйе менән йүгерешергә теге Йүгерек китә. Бик оҙаҡ йүгерәләр. Йүгерешеп килә торғас, батшаның инәйе әйтә:

— Егет, әйҙә ултырып хәл йыйып алайыҡ. Бына тубығыма башыңды һалып ял ит,— ти. Йүгерек риза була.

Йүгереүселәр бик оҙаҡлағас, бер һауаға олғашып, бер ергә төшөүсе батыр һауаға менеп ҡараһа, батшаның инәйе Йүгеректең башын ҡарап ултыра, ти. Бер аҙ көткәс, Күккә олғашыр батыр икенсе тапҡыр ҡарай. Йүгерек йоҡлаған, әбей йән-фарман сабып килә, ти. Бер аҙ көтәләр ҙә, Күккә олғашыр батыр өсөнсө тапҡыр менеп ҡарай. Ҡараһа, Йүгерек әбейҙең артынан килеп етеп, уны кире бороп ебәрҙе, ти. Әбей кире йүгереп китте, ә Йүгерек майҙанға килеп етте, ти.

Өсөнсө талапты үтәү ваҡыты етә. Бер ай буйы яғылған мунсаға дүртәүләшеп китәләр. Мунсаға йөҙ метрҙан да яҡын барып булмай, ялҡын һибелә, ти. Батырҙар бер күл эргәһенә баралар ҙа Баҡа батыр был күлдең һыуын эсеп бөтөрә. Ул филдәй була, һыуҙы бөркә-

бөркә алдан атлай, ялҡын бөтә, мунсаға инеп һәйбәтләп йыуыналар. Шул арала батша үҙенең вәзирен мунсаға ебәрә.

— Һөйәктәрен сығарып ташла,— ти батша.

Вәзир килһә, батырҙар, йыуынып, кейенеп торалар. Кейенеп, каретаға ултырып, батшаға баралар. Батша аптырап ҡала. Бының талаптары шулай үтәлеп бөткәс, батырҙар, ҡунаҡ булып, ҡыҙҙы алып ҡайтып китәләр.

Бара торғас, бер урында ял итеп, йоҡлап китәләр. Яҡуп уянып китһә, ҡыҙ юҡ. Тиҙ генә Йүгеректе уятып, артынан ебәрә. Йүгерек ҡыҙҙы тотоп килтерә. Батша ҡыҙҙы әмәл менән үҙенә тартҡан икән. Батырҙар юлдарын дауам итәләр.

Күккә олғашыр батыр үҙенең яланына ҡайта, Баҡа батыр ҡайын тамыры төбөндә ҡала. Йүгерек батыр менән Яҡуп һаман да бергә киләләр. Бара торғас, Йүгерек батыр Яҡуптан:

— Ҡыҙҙы кемгә алып бараһың?— тип һорай.

— Дейеүгә,— ти Яҡуп.

Дейеү әлеге тау башында йорт һалып, быларҙы көтә икән. Ҡыҙ илай башлай, Бәләкәй Яҡупҡа:

— Мине үҙеңә алып ҡайтаһың икән тип ышанғайным. Дейеүгә биргәнсе, мине бөтөрөп китегеҙ,— ти.

Яҡуп та ҡыҙҙы бик йәлләй. Шулай ҙа ҡыҙҙы дейеүгә илтеп бирәләр. Дейеү каретаһын төшөрөп ҡыҙҙы тартып ала. Батырҙар ҡыҙға: «Һин дейеүҙән көнөнә бер тапҡыр түбән төшөргә рөхсәт һора. Беҙ һине ҡотҡарырбыҙ»,— тип ҡалалар.

Икенсе көндө ҡыҙ түбән төшөргә һорай. Дейеү ҡаршы килмәй, арҡан менән бәйләп, каретаһына ултыртып, ҡыҙҙы түбән төшөрә. Йүгерек ҡыҙҙы сисә лә тиҙ генә үҙен бәйләтә. Яҡуп менән ҡыҙға ҡайтырға ҡуша. Дейеү, ҡыҙҙы тартып алам тип, каретаны тартып ала. Йүгерек батыр маймыл сифатындараҡ йөнлө булған, ти. Дейеү ҡыҙҙы ҡосаҡлайым тип ҡосаҡлаһа, Йүгерек батырҙы ҡосаҡлап ала ла, уның йөнөнән ҡурҡып:

— Минән дә көслө ендәр бар икән,— тип ҡаса.

Бәләкәй Яҡуп ҡыҙҙы алып ҡайтып килә. Бара торғас, ял итергә туҡтайҙар.

— Мин йоҡлап китһәм, ошо энә менән минең маңлайға сәнсерһең,— ти Яҡуп ҡыҙға.

Бер аҙ йоҡлағас, былар янына бер матур егет килеп сыға ла:

— Бында кем йоҡлап ята?— тип, Яҡуптың башына тибә.

Яҡуп уянып китә. Ырғып тороп егеткә һуҡмаҡсы булғайны, ҡатынының: «Ҡапыл ҡыҙып китеп, кешене һуҡма, уйланҡырап һуҡ»,— тигәне иҫенә төшөп, туҡталып ҡала.

— Һин, егет, ҡайҙа бараһың?— тип һораша башлай.

— Мин бик алыҫ ауыр юлға сыҡҡанмын. Минең атайым булған. Уны мин белмәйем дә, танымайым да. Шуны эҙләп китеп барам,— тип яуаплай егет.

— Ә һуң уны нисек табырһың?— ти Яҡуп.

— Мин атайымдың исемен беләм,— ти егет.— Уның исеме — Бәләкәй Яҡуп.

Яҡуп егетте ҡосаҡлап ала:

— Мин — һинең атайың!— ти.

Өсәүләшеп илдәренә ҡайтып, батшаның ҡыҙын улына биреп, туй үткәрәләр. Туйҙары бик шәп булды, мин дә булдым, әле генә шунан ҡайтып торам.

## БЕЙЕШ БАТЫР

Борон-борон заманда бер ҡарттың ете улы булған. Иң кесеһе Бейеш атлы икән. Бер ваҡыт ҡарт үҙенең улдарын өйләндерергә уйлаған. Ул алты улын алған да ете ҡыҙы булған кешене эҙләп сығып киткән. Бейеште мал ҡарарға өйҙә ҡалдырғандар. Бейеш атаһына былай тип әйтте, ти:

— Атай, һеҙгә ике бик ҡурҡыныслы урынды үтергә тура киләсәк: береһе — тирәһендә бик матур йәшел үлән үҫкән күл булыр,— унда туҡтамағыҙ; шунан тау-таш араһындағы бер тарлауыҡҡа барып сығырһығыҙ. Тарлауыҡты ла йәшел үлән ҡаплап үҫкән булыр,— унда ла туҡтамағыҙ,— тине, ти.

Шунан бабай улдары менән юлға сығып киткән. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң былар бер ҡартты осратҡандар. Унан ҡайҙа барыуын һорашҡандар.

— Минең ете ҡыҙым бар, мин ете уллы кешене эҙләп китеп барам,— тигән теге ҡарт. Шул саҡ ете уллы ҡарт:

— Минең ете улым бар, ҡоҙалар булайыҡ,— тигән.

Улар шунда уҡ ҡоҙа булыштылар, ти. Ҡарт ике улын мал алып килергә ҡайтарып ебәрҙе, ти. Ике улы барып, малдарҙы алып килгәндәр. Ҡарт, килендәрҙе алып, үҙенең йортона алып ҡайтып киткән. Бара-бара улар бер тарлауыҡҡа килеп еткәндәр: тирә-яҡ һирәк осрай торған йәшел үлән менән ҡапланған, ти. Был ваҡытта уларҙың аттары бик ныҡ арыған булған. Ҡарттың уландары:

— Ошонда туҡтап, ат ашатып алайыҡ,— тиҙәр икән.

— Юҡ,— ти бабай,— ярамай, Бейеш улым бында ат ашатып төнләп ятырға ҡушманы,— ти.

Шунан былар ҡыйын булһа ла ары киткәндәр. Бара торғас, бер күл буйына барып сығалар. Күл тирәһе йәп-йәшел үлән менән ҡапланған, ти. Быларҙың аттары хәҙер бөтөнләйгә хәлдән тайыр сиккә еткән.

— Атай, ошонда туҡтап ат ашатып алайыҡ,— тиҙәр икән уландары тағы ла.

— Юҡ, ярамай,— ти бабай.— Бында ашатмайбыҙ, үрҙе үрләгәс кенә туҡтарбыҙ ҙа, ат ашатып, тамаҡ ялғап алырбыҙ,—ти. Аталарының шулай тип тороуына ҡарамаҫтан, алты ул аттарын туғаралар ҙа күл буйына ебәрәләр. Етмәһә, аталарына:

— Киткең килһә, әйҙә, китә бир,— тиҙәр.

Хәҙер бабай бер үҙе ни эшләһен, сара юҡ, бер үҙе генә китеп ултыра алмай. Сараһыҙҙың көнөнән, ул да атын туғара. Аттарҙы ашатып, һыу эсерәләр ҙә йоҡларға яталар. Иртән торһалар — күҙҙәре аҡайып китә. Быларҙы аждаһа уратып алған!

— Бейеш улыңдың кәләшен ҡалдырып китһәң, бөтәгеҙҙе лә ҡайтарам,— ти аждаһа.

Былар Бейештең кәләшен аждаһаға бирәләр ҙә ҡайтып китәләр. Өйгә ҡайтып инәләр.

— Һинең кәләшең тегендә ҡалды, бар ҙа үҙең алып кил,— ти бабай. Бейеш иларға тотона:

— Башҡынайымды ашанығыҙ инде,— ти.

Шунан тора ла аждаһа йәшәгән күлгә китә. Барып аждаһаны таба, тирмәһенең башына менеп ултыра.

— Кем унда?— тип һорай аждаһа.

— Был мин,— ти Бейеш.

— Һин булһаң, тирмәгә уҙ,— ти аждаһа.

Бейеш тирмәгә инә лә:

— Һин минең кәләште алып ҡалғанһың икән, мин уның артынан йөрөйөм,— ти.

— Күреп торам,— ти аждаһа.— Ниндәйҙер бер

ерҙә Ҡыҙыл исемле ҡырҡ аршынлы бер дейеү батыр бар. Барып, шуны үлтереп килергә риза булһаң, кәләшеңде бирәм,— ти аждаһа. Бейеш риза була.

— Ярар,— ти ҙә, кәләшен алып, өйөнә ҡайтып китә. Ҡайтҡас, өйөндә бер-ике генә кис йоҡлай ҙа яңынан юлға сығып китә. Эй бара был, эй бара, бара торғас, бер ауылға килеп сыға. Ауылда йыйын бара икән, тирә-яҡтан да бик күп халыҡ йыйылған. Бейеш шунда килә. Килһә — көрәш бара. Бейеш ҡарап-ҡарап тора ла батшанан рөхсәт һорай:

— Рөхсәтегеҙ булһа, мин дә көрәшер инем,— ти.

— Рөхсәт,— ти батша,— әйҙә, көрәшеп ҡара.

Шунан Бейеш майҙанға сыға ла көрәшә башлай, бөтә кешеләрҙе йығып бөтөрә. Батшаның Иегодь* тигән бер урыҫ баһадиры бар икән.

— Ошо батырҙы еңә алһаң, ҡыҙымды һиңә бирәм,— ти батша Бейешкә. Бер ваҡыт Бейеш был баһадир менән көрәшә башлай. Тегене ҡыҫып тотоп ала ла һауаға сөйөп ебәрә, теге батыр өс көн, өс төн оҙонлоғо бейеклеккә осоп китә. Батша хәҙер ни эшләһен, ҡыҙын Бейеш менән ҡушырға тура килә быға.

Бейеш кәләше менән бер төн генә уҙғара ла ары китә. Эй бара был, эй бара, бара торғас, тағы бер ауылға килеп сыға. Ҡараһа, был ауылда ла йыйын бара. Кем көмөш балдаҡ аша уҡ менән ата ала, шул кешегә батша ҡыҙын бирә; кем ата алмай, батша шуның башын киҫә икән. Бейеш батшаға килә лә:

— Рөхсәтең булһа, мин дә көмөш балдаҡ аша атып ҡарар инем,— ти.

— Рөхсәт,— ти батша.

Бейеш уғын ала ла атып ебәрә, уҡ көмөш балдаҡтың уртаһынан үтә сығып китә. Был батша ла ҡыҙын Бейеш менән ҡушырға мәжбүр була. Был кәләше эргәһендә лә Бейеш бер генә төн уҙғара ла ары китә.

Эй бара был, эй бара, бара торғас, бер көрәшсене осрата. Был батыр атлаған һайын, аяғы бәкәленә тиклем ергә батып китә икән. Бейеште күреп ҡала ла был батыр:

— Йә, Бейеш, әйҙә көрәшәйек,— ти. Был Ҡыҙыл батыр икән.

— Юҡ, көрәшмәй торайыҡ әле. Мин һине күптән эҙләп йөрөйөм. Башта һин мине ашат-эсер, бер йыл һыйла, шунан көрәшербеҙ,— ти Бейеш.

---

* Бессоновта шулай яҙылған.

Ҡыҙыл батыр риза була. Бер йыл буйына Бейеште ашата-эсерә. Бер йыл ваҡыт үткәс, былар көрәшә башлайҙар. Бейеш әйтә:

— Һин бик бейекһең, әйҙә һине бәкәлеңдән ҡыҫҡартайыҡ,— ти.

Ҡыҙыл батыр риза була, аяғын бәкәленән ҡырҡып ташлайҙар. Ҡыҙыл батырҙың бер әбейе бар икән. Был көн әбейе* икән.

— Әйҙә, беҙҙең яурындарға май һөртөп тор,— ти Ҡыҙыл батыр әбейгә.

Батырҙар көрәшергә тотоналар. Өс көн, өс төн көрәшәләр. Әбей Бейештең арҡаһына май һөртә, Ҡыҙылдың арҡаһына көл һибә икән. Көрәшә торғас, былар, бербереһен еңә алмайынса, бер-береһенә ҡаршы ҡарап ултыралар. Шул ваҡыт көньяҡтан йылы ел иҫеп үтә. Ел артынса ике малай килеп сыға. Бейешкә былар: «Атай»,— тип өндәшәләр.

— Ни эшләп мин һеҙҙең атайығыҙ булып сыҡтым һуң әле?— тип һорай Бейеш.

— Инәйҙәребеҙҙе кәләш итеп алғас, һин нисек беҙҙең атай булмайһың ти? Һин — беҙҙең атайыбыҙ,— тиҙәр малайҙар.— Ҡайҙа, атай, беҙ көрәшеп ҡарайыҡ әле,— тиҙәр.

— Һеҙ бик йәшһегеҙ әле, уландарым, быуынға ултырып өлгөрмәгәнһегеҙ,— ти Бейеш.

Атаһы тыйһа ла, малайҙарҙың береһе дейеүҙәр баһадиры менән көрәшә башлай. Ҡыҙыл батыр малайҙың биленән алһа, умыртҡа һөйәктәре шатыр-шотор итеп ҡала.

— Эй, һин ипләп тотон, ул йәш бит әле!— ти Бейеш дейеү батырға.

Шунан дейеү батыр ипләп кенә тотоп ергә күтәреп һуғам тигәндә, малай Ҡыҙылдың үҙен әләктереп ала ла һауаға сөйөп тә ебәрә. Ҡыҙылдың ергә төшкәнен көтөп тора ла килеп төшөр-төшмәҫтән тибеп ебәрә, дейеү батыр көл була ла ҡуя.

Бейеш уландары менән ҡайтып китә. Юл ыңғайына йәш кәләшенә тейеп, уны ла ала. Шунан күмәкләшеп, оло ҡатын торған ергә килеп етәләр былар. Уны ла алып, ҡайтып китәләр. Ҡайтып етһәләр, ауылда бер

---

* Бессоновта шулай — старуха дня. Быға ҡарата Н. К. Дмитриев: «Был ләҡәп исемдә, бәлки, ниндәй ҙә булһа берәй мифологик ҡараш сағылалыр. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әкиәттең үҙендә был образға ҡарата бер ниндәй ҙә аңлатма юҡ»,— тип иҫкәрмә яһаған. «Старуха дня» көң (ҡол) әбей исеменең руссаға хата тәржемәһе булыуы ла ихтимал.

йән эйәһе юҡ, буп-буш. Бейеш ҡатындары менән ulандарын ҡалдыра ла атаһын, ағаларын эҙләп китә. Бара торғас, бер әбейҙе осрата. Был әбей һарыҡ көтөп йөрөй икән. Үҙе ергә ҡарай ҙа илай, үргә ҡарай ҙа көлә, ти.

— Һин ниңә улай итәһең?— тип һорай Бейеш.

— Ергә ҡараһам, алты улымды уйлап илайым, үргә ҡараһам, бында Бейеш улым килә икән тип, шатлыҡтан көләм,— ти әбей.

— Һинең Бейеш улың мин булам,— ти Бейеш. Шул ерҙә улы әсәһен танып, әсәһе улын табып, әсәле-уллы илашып алалар. Илашып туйғас:

— Атайың йылҡы көтөүен көтә,— ти әсәһе Бейешкә.

Арыраҡ барһалар, ысынлап та Бейештең атаһы йылҡы малын ҡайырып йөрөй, ти. Үҙе күккә ҡарап көлә, ергә ҡарап илай, ти. Бейеш атаһының ҡашына бара ла:

— Һин ни эшләп ергә ҡарап илайһың, күккә ҡарап көләһең?— тип һорай.

— Эй, улым, улым! Алты улымды хәтерләйем дә ергә ҡарап илайым; күккә ҡараһам, Бейеш улым ҡайтып килгән төҫлө була ла, шатлығымдан көләмен,— ти бабай.

— Улай булғас, улың Бейеш — мин инде,— ти Бейеш батыр.

Атай менән ул, бер-береһен танып, күрешеп, илашып алалар.

— Дейеү пәрейенең ҡырҡ улы бар, һинең ҡатыныңды пәрей алып китте,— ти атаһы Бейешкә.

Бейеш пәрейҙе эҙләп китә. Барып етә, ҡунып сығырға фатир һорай. Пәрей индерә быны өйөнә, үҙе Бейеште танымай. Ит һалырға ҡуша. Ашарға ултырғас, Бейештең әсәһе менән атаһы килеп инә. Бейеш атаһы менән әсәһенә икешәр һөйәк тоттора.

— Ниңә үҙең ашамайһың, кешеләргә бирәһең?— тип һорай пәрей.

Бейеш бер нәмә тип тә өндәшмәй, бәкеһен табаҡҡа һалып ҡуя. Кис була, йоҡларға ята башлайҙар, Бейешкә урынды тышҡа һалалар. Урынына сығып ята ла Бейеш:

— Хужа, өйҙә бәкем ятып ҡалған, сығарып бир әле,— ти. Бәкене Бейештең ҡатыны алып сыға.

— Бейеш, был һин түгелме?— тип һорай ҡатын.

— Мин,— ти Бейеш.

— Улай булғас, һин минең ирем булаһың да,— ти ҡатын.

— Ирең булам шул,— ти Бейеш.— Һин миңә уларҙы нисек үлтерергә икәнен әйт!— ти.

— Ишек төбөнә тәрән итеп соҡор ҡаҙ ҙа пәрейгә: «Малың таралды, көтөүселәрең ҡайырып ала алмайҙар»,— тип ҡысҡыр. Шул саҡта пәрей, типкеләптуҡмап, уландарын өйҙән ҡыуып сығара башлар. Һин ишек төбөндә генә тор ҙа ишектән сыҡҡан береһенең башын өҙә сап,— ти ҡатын. Шулай ти ҙә өйгә инеп китә.

Бейеш тәрән итеп соҡор ҡаҙа. Шунан:

— Хужа! Малың тарала бит!— тип ҡысҡырып ебәрә.

Пәрей ҡаты итеп йоҡлап ятҡан уландарын берәмберәм типкеләп тә һуҡҡылап уятып, өйҙән ҡыуып сығара башлай. Бейеш сыҡҡан береһенең муйынын өҙөп тора. Иң аҙаҡтан Бейеш өйгә инә лә пәрейгә:

— Алыштанмы, әллә атыштанмы?— ти.

— Алыштан,— ти пәрей.

Шунан былар көрәшә башлайҙар. Алыша торғас, Бейеш пәрейҙе һауаға быраҡтырып ебәрә. Пәрей көлгә әйләнеп килеп төшә.

Бейеш атаһы менән әсәһен алып ҡайтып китә. Ҡатынын да өйөнә алып ҡайта. Пәрейҙең бөтә малдарын ҡыуып алып ҡайталар былар. Шунан бик байығып, әле лә рәхәт йәшәп яталар, ти.

## УҒЛАНЫ ҠОРОҠСА БАТЫР

Бер байҙың алты улы булған, иң кеселе — Уғланы Ҡороҡса. Быларҙың аталары бер тауға менеп йөрөй икән. Бер көн менә, бер көн төшә, ике көн ғүмер үткәрә. Уғланы Ҡороҡса һорай атаһынан:

— Атай, һин анау тауға бер көн менәһең, бер көн төшәһең, бейекме ни шулай?

— Һей, балам, унда күп кеше менә алмай әле!— ти.

Бер ваҡыт Уғланы Ҡороҡса:

— Атай, һин миңә рөхсәт ит, мин дә шул тауға менеп ҡарайым,— ти.

— Ярар, рөхсәт.

Рөхсәт алды ла китте Уғланы Ҡороҡса. Төшкә ҡәҙәре менеп етте был. Тауҙың башына менһә, алты мөйөшлө өй. Бер яҡта алты тәҙрә, бер яҡта ике тәҙрә.

Ике тәҙрәнең араһына ултырғандар ирле-ҡатынлы икәү: әбей менән бабай сәй эсәләр. Алты тәҙрәлә алты ҡыҙ теген тегә. Быларҙы күреп үтте Уғланы Ҡороҡса. Тауҙың башында тағы бер тау бар икән. Түмәләс кенә тау, һирәк кенә урманы ла бар. Быныһына ла менеп китте егет. Менһә, нәҡ түбәһендә бер ялбыр имән үҫеп ултыра. Юғарылағы бер ботағында ҡумта менән ҡылыс эленеп тора. Ҡумтаға: «Бында бер кем дә менә алмаҫ, Уғланы Ҡороҡса ғына был ҡылысты менеп ала алыр»,— тип яҙылған. Ярар, Уғланы Ҡороҡса быны ла күрҙе, ҡайтып китте. Был ҡайтҡан ваҡытта әле иртә булған, ҡояш байымаған.

— Барҙыңмы, балам?

— Барҙым.

— Ниҙәр күрҙең?

— Мин,— ти — шуны күрҙем: бейек тауҙың башына менеп еткәс, ялан икән. Унда һигеҙ тәҙрәле бик елле йорт бар. Ике тәҙрә араһында әбей менән бабай сәй эсеп ултыра, алты тәҙрәлә алты ҡыҙ теген тегә,— ти Уғланы Ҡороҡса.

— Ярай, улай икән. Тағы ни күрҙең?

— Тағы бер түмәләс кенә тау күрҙем, башына мендем. Уның башында бер имән үҫеп ултыра, ҡылыс элеп ҡуйылған. Имәндең төбөнә: «Ҡылысты бер кем дә менеп ала алмаҫ, Уғланы Ҡороҡса ғына менеп алыр»,— тип яҙылған. Бына, атай, мин шуны күрҙем,— ти.

— Һай, маладис, һай, бәхетле икәнһең, улым,— ти атаһы.— Шул ҡарт менән мин һөйләшеп йөрөйөм, уның алты ҡыҙы бар, бына алтығыҙға ла шуларҙы йәрәшәм,— ти.

Ярар, бик һөйөндө ҡарт. Хәҙер, иртәгеһенә, китте ҡарт тағы теге тауға менеп. Бер көн менде, бер көн төштө, ике көндән һуң ҡайтып килде. Ҡайтты ла ulандарын йыйып янына ултыртты:

— Йә, балалар, туйға барабыҙ, килен йәрәштем,— ти.— Ҡыҙҙарҙың атаһы мал хисабын белгәнегеҙҙе йортта ҡалдырырға ҡушты,— ти.

Ҡарт оло улын саҡырып алды, ти. Икенселәре килеп теҙелеп торҙолар, ти. Торалар инде, хисап бирәләр бит атайға. Ҡарт башта оло улынан һорай:

— Йә, улым, әйт әле: беҙҙең йылҡы малы ни саҡлы ла һыйырҙар күпме?

Юҡ, әйтә алмай был, белмәй.

Икенсе улынан һорай, уныһы ла белмәй:

— Уны кем иҫәпләп торһон,— ти.

Барыһынан да һораны ҡарт, бишәүҙең береһе лә әйтә алманы. Сират Уғланы Ҡороҡсаға килеп етә.

— Йылҡы фәләнсә, һыйыр фәләнсә, һарыҡ бәрәстәре менән өс мең һигеҙ йөҙ, аҡһаҡ бәрәс менән өс мең һигеҙ йөҙ бер,— ти.

— Маладис!— ти ҡарт.

Уғланы Ҡороҡса өйҙә ҡалырға тейеш бит инде.

Ярар, йыйындылар, киттеләр былар. Байтаҡ малды ҡыуып алып киттеләр. Уғланы Ҡороҡса әйтә:

— Ике ерҙә хәтәр бар, шул ерҙә ҡунмағыҙ,— ти.— Матур йылға бар, унда ҡунмағыҙ; матур күл бар, унда ла ҡунмағыҙ,— ти.

Баралар, баралар былар, бер йылға буйына килеп сығалар. Бик матур: һыуы тоноҡ, йәшел туғайлыҡ.

— Әйҙә, ҡунабыҙ ошонда, бер нәмә лә булмаç,— тиҙәр.

Ҡундылар, ары киттеләр. Барып етеп, ҡатындарын алып, әйләнеп ҡайтып киләләр хәҙер. Уғланы Ҡороҡсаның ҡатынын әбей менән бабай үҙҙәренең арбаһына ултыртып алып ҡайтып киләләр.

Ҡарышҡан шикелле, бер күл йәйрәп ята бит. Ҡарт ҡунмайыҡ тип ҡарай, уландары тыңламай:

— Юҡ, ҡунабыҙ! Киткәндә йылға буйында ҡундыҡ, бер нәмә лә булманы бит,— тиҙәр.

Ҡарт ни эшләһен инде бер үҙе, килеп яттылар былар. Барыһы ла йоҡлап китте. Уғланы Ҡороҡсаның ҡатыны ғына йоҡламай. Иртәнсәк торғайнылар, быларҙы бер тау әйләндергән дә ятҡан. Бына ысын тау инде! Тегеләй ҙә, былай ҙа йөрөп ҡарайҙар, юҡ, урап сығырға ла әмәл юҡ. Бер аждаһа килеп, ҡойроғон ауыҙына ҡапҡан да шулай ята икән.

— Уғланы Ҡороҡсаның ҡатынын ҡалдырып китегеҙ,— ти йылан, ҡойроғон ауыҙынан ала ла телгә килә.— Уғланы Ҡороҡсаның ҡатынын ҡалдырһағыҙ, ҡайтаһығыҙ, ҡалдырмаһағыҙ, шунда бөтәһегеҙ,— ти.

Былар, биш ағай, кәңәшләшәләр ҙә:

— Ҡалдырайыҡ, әллә Уғланы Ҡороҡсаға ҡатын табылмаçмы!— тиҙәр.

Ҡалдырҙылар быны. Киргәйнеләр, аждаһа Уғланы Ҡороҡсаның ҡатынын хап итеп йотто ла, күлгә төштө лә китте.

Ярар. Ҡайтып еттеләр былар. Ҡайтып килеүгә Уғланы Ҡороҡса ҡапҡа асып тора.

— Ни хәлдә ҡайттығыҙ?

— Эш хөрт,— тиҙәр. Әбей ҙә, бабай ҙа илай. Ағалары иламай.

— Эш шулай икән, атай, миңә рөхсәт ит,— ти Угланы Ҡороҡса,— үҙем барайым әле,— ти.

Атты менде лә әлеге бейек тау башына ҡарап сапты был. Менеп, теге имәндәге ҡылысын алгас, күл буйына килде. Килде лә күлгә тауыш итте:

— Йә, минең аманат ҡатынды алып ҡалыу менән һинең ни дәрәжәң артты инде?— тине.

Тауышты ишетеп, күл ҡайнаны, бер нәҫтә килеп сыҡты. Үҙе әҙәм сифатындараҡ, телләшә башланы был.

— Бына,— ти,— фәлән батшаның ҡыҙын барып килтер миңә. Һинең ҡатының имен, үҙеңә алып ҡайтырһың,— ти.

Уғланы Ҡороҡса туҡталып та тормай, китә шунда. Китеп бара, китеп бара торғас, бер кеше осрай быға. Ергә ятҡан да ер тыңлай. Был Ертыңлауыс исемле икән.

— Ҡайҙа китеп бараһың, егет?

— Бына шулай-шулай, фәлән батшаның ҡыҙы артынан барам,— ти.

— Мин кәрәк булырым, мине алып кит.

Ярар, был эйәрҙе. Бер аҙ барһалар, бер ҡарт тирмән ташын һөйрәгән дә китеп бара.

— Ни эшләп, бабай, улай китеп бараһың?

— Кейек ҡыуып китеп барам,— ти.— Ташты һөйрәмәһәм, үтәм дә китәм, кейек ялтанып тора ла ҡала,— ти.

Ярар, быны ла үҙҙәре менән алдылар. Барһалар, ике күл араһында бер ҡарт ултыра. Бер күлде уртлап ала ла икенсеһенә бушата. Иҫәнләштеләр.

— Ҡайҙа бараһығыҙ, балаҡайҙар?

— Бына шулай-шулай, фәлән батшаның ҡыҙын алырға барабыҙ,— ти Угланы Ҡороҡса.

— Бер кәрәгеңә ярармын, мине лә эйәрт.

— Әйҙә һуң улай булгас, киттек, бабай!

Шулай итеп, былар хәҙер дүртәүләп киттеләр, әлеге әйткән батшаға ла барып еттеләр. Еткәс, таш һөйрәгән ҡарт яусы булып бара, тегенең ҡыҙын һорай бит инде.

— Беҙ бер батыр егет алып килдек, шуға ҡыҙыңды бир,— ти.

Батша ҡаршы килмәй:

— Ярар, кәңәш итербеҙ,— ти. Батша өс шарт ҡуя:

— Беренсе шартым — минең йүгереҡ әбейем менән уҙышырға; икенсеһе: йөҙ егерме аршын билге* ҡуйҙырам, шуның башына һыңар ҡул менән бер сеүәтә бал-

---

* Билге — багана.

ды тотоп менергә, тукмаҫкә, аҫҡа күн төшәйем; өсөнсөһө: минең бер баҡыр мунсам бар, шул мунсаға бикләп, бер тәүлек тыштан яндырам. Шул шарттарҙы үтәй алһағыҙ, ҡыҙ һеҙҙеке,— ти.

Ярай, риза булды ҡарт. Ҡайтты ла, хәҙер былар батша өйөнә күмәкләшеп килделәр. Эйе. Батша бер тәүлек ҡунаҡ итә, тамаҡтарын туйҙыра. Шунан был ҡарт менән теге әбей йүгерергә әҙерләнәләр. Ҡарт аяҡтарын тышай. Киттеләр йүгерешеп. Әбей һыҙлана, ҡарт һыҙланмай, һаман тышаулы көйгә һикерә лә һикерә. Юлдың осона сыҡтылар, кире әйләнделәр. Әбей әйтә бабайға:

— Ҡара әле, беҙ иртә киләбеҙ, беҙгә ышанмаҫтар, ти. Әҙерәк кенә тубығыма ятып, ял итеп ал, башыңды ҡарайым,— ти.

Ҡарт риза. Тубығына һалып ҡартты йоҡлатты ла әбей ысҡынды. Бәхеткә ҡаршы инде, ҡарт уянып китһә — әбей юҡ. Был саҡта әбей яртылыҡ юлды үткәйне инде. Ҡарт, тышауын һалып, торҙо ла сапты. Ҡыуып килеп тә етте, әбейҙең артына берҙе тибеп тә ебәрҙе. Шунда уҡ әбейҙең хәле бөттө. Ҡарт, килеп етер саҡта, аяғын тағы тышаны. Тышаулы көйөнсә килеп инде. Ярар, бер шарт үтәлде.

Хәҙер билгегә менергә. Уғланы Ҡороҡса, бер ҡулына сеүәтә тотоп, һыңар ҡулы менән генә менеп китте. Шулай менеп еткәйне, Уғланы Ҡороҡса тыуған-үҫкән ерҙәрен күреп, күңеле тулышып китте лә, аҫтағы тирегә тып-тып итеп күҙ йәше тамды, ти. Вәзирҙәр ҡысҡырырға ла тотондолар, ти:

— Үлтерергә, үлтерергә! — тиҙәр.

Ҡарттар ашыҡтырмай:

— Башта тикшереп ҡарарға кәрәк,— тиҙәр.— Бал булһа, бал тәме сығыр, йәш булһа, тоҙ тәме сығыр.

Ялап ҡараһалар, тоҙ тәме сыға. Шулай итеп, бынан да ҡотолдолар, был шарт та үтәлде.

Хәҙер мунсаға ябыу шарты. Мунсаға алып киттеләр быларҙы. Мунсаға барып керҙеләр. Утын әҙерләнгән, ут тоҡандыраһы ла үртәйһе генә ҡалған. Ҡарт әйтә:

— Бер күл уртлап киләйем, балыҡтары-нейҙәре менән бергә,— ти.

Китте күлгә. Бер күлде уртлап алып килде. Ә теге, тирмән ташы таҡҡан ҡарт, көбө табып булмаҫмы икән тип, эҙләнеп сығып киткәйне, уныһын да табып алып килде, ти. Көбөгә һыу тултырып, алмашлап төшөп торалар, миндек менән сабынып, һыу ҡойоп торалар үҙҙәре-

нә. Былар сабынып бөтөүгә, тышта утын да янып бөттө, мунса ла һүрелде, ти. Батша хеҙмәтселәренә:

— Барығыҙ, һөйәктәрен тейәгеҙ ҙә ҡырға илтегеҙ! — ти икән.

Килделәр. Килһәләр, былар мунса төшөп, балыҡ ашап ултыралар. Хеҙмәтселәр ҡайтып:

— Үлмәгән улар, балыҡ ашап ултыралар!— тиҙәр.

Батшаның ҡатыны ышанмайынса үҙе килде. Килһә:

— Әйҙүк, ҡоҙағый, әйҙүк!— тип, бының үҙен һыйға саҡыралар. Ҡарт балыҡ бүлеп ултыра, эреһен бер башҡа, вағын бер башҡа һала.

— Ҡоҙағый, һеҙгә күстәнәскә эреһен һайлап алып ултырам әле,— ти. Аптырап, батша ҡатыны:

— Әйҙәгеҙ, улай булғас, беҙгә ҡунаҡҡа барығыҙ!— тип, күңелһеҙ генә ҡайтып китә.

Барҙылар былар, ҡунаҡ булдылар. Башҡа сара юҡ. Батша Уғланы Ҡороҡсаға ҡыҙҙы биреп ҡайтара.

Үҙенең төйәгенә еткәс, тирмән ташы һөйрәп йөрөгән ҡарт тороп ҡалды, ти. Шунан килделәр, ти, һыу уртлаусы ҡартҡа, ул да үҙенең өйрәнгән урынында ҡалды, ти. Ертыңлауыс үҙенең ерендә тороп ҡалды, ти. Шунан былар бер йылға буйына килделәр. Егет бер урын, ҡыҙ бер урын һалып ятырға йыйыналар. Ҡыҙ әйтә:

— Һин ни эшләп улай башҡа ятаһың?— ти.— Мин һинеке булам, ике ҡатын менән тора алмаçһыңмы ни?— ти.— Бына минең балдаҡ бар, шуны бер ағасҡа ғына кейҙерәбеҙ ҙә, шуның менән аждаһаға һуғырһың, аждаһа урталай өҙөлөр,— ти.

Ярар, аҡыл өйрәтте ҡыҙ, бергә ятып йоҡланылар. Торғас, барҙылар теге күл янына. Килеп еткәйнеләр:

— Килтерҙеңме?— тип килеп сыҡты, ти, аждаһа, үҙе кеше ҡиәфәтенә кергән, ти.

— Килтерҙем, бына тора, бына, күр,— ти Ҡороҡса.

Аждаһа инде ҡыҙҙы тотайым тип ынтылғайны, һыуҙан сығып бөтмәгән ҡойроҡҡа егет йөҙөк менән бәреп өлгөрҙө, ти. Шул ерҙә аждаһа үлде, ти. Ҡыҙ:

— Тиҙ генә эсен яра һал, ҡатыныңдың йәне уның йәне менән бергә сығасаҡ,— тине, ти. Егет шул арала аждаһаның эсен ярып ебәрҙе,— ҡыҙ юҡ!

— Ҡойроҡ яғын ҡара!

Ҡойроҡ һыу эсендә инде. Ҡойроҡто тартып алып ярып ҡараһалар, ҡатыны ҡойроҡ яғына йомарланып ҡына барып ятҡан, шулай ҙа тере, ти.

Ярға сығып иçәнләштеләр, ҡыҙ йүнәлеп китте, ти.

Матур гына булып ҡайтып киттеләр былар өсәүләшеп.

Бик этләнһә лә, һыу һөлөгө кеүек ике ҡатын менән йәшәй, ти, был егет. Кисә барып, бөгөн ҡайттым.

## ҠЫРАН БАТЫР

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың өс улдары, бер ала бейәләре булған. Был ала бейә йыл да ҡолонлай, ә ҡолонон бер ҙә ала алмайҙар икән.

Әбей менән бабайҙың уландары үҫеп етә. Бер көндө ҡарт уландарын саҡыртып ала ла:

— Балалар, үҫеп еттегеҙ инде. Беҙ ҡартайҙыҡ. Әсәгеҙ менән миңә күп йәшәргә ҡалмаған. Беҙ үлеп-нитеп китһәк, һеҙҙең ҡарамаҡҡа бер ала бейә тороп ҡала. Ала бейә ҡолон килтерһә, һәр ҡайһығыҙға ат булыр ине лә, уның бер генә ҡолонон да күргәнебеҙ юҡ. Йыл да берегеҙ ала бейәне ҡарауыллағыҙ. Бөгөн-иртәгә ала бейә ҡолонлай торған көн. Оло улым, башта һин бәхетеңде һынап ҡара, ала бейәнең ҡолонон ала алһаң, үҙеңә ат булыр,— ти.

Оло улы ала бейәне бер төн ҡарауыллай, ике төн ҡарауыллай, өсөнсө төндө таң алдынан быны бик ҡаты йоҡо баҫа. Был йоҡлап китә. Йоҡоһо туйып, һикереп килеп торһа, ҡояш төшкөлөккә етеп бара, ала бейә бушанған, ашанып йөрөй,— ҡолон юҡ.

Икенсе йыл ала бейәне ҡарауылларға уртансы ул китә. Бер төн көтә, икенсе төндө лә керпек ҡаҡмай уҙғара. Өсөнсө төндө таң алдынан быны бик ҡаты йоҡо баҫа. Был сыҙай алмай ҙа ятып йоҡлай. Ҡояш битен йылытҡанға һикереп килеп торһа, ала бейә ашанып йөрөй,— ҡолон юҡ.

Өсөнсө йыл ала бейәнең ҡолонон һаҡларға уландарҙың иң кесеһе, Ҡыран тигәне, китә. Ул атаһының ҡылысын ала, йоҡламай. Бер төн үтә, икенсе төн үтә, өсөнсө төн етә. Таң алдынан быны йоҡо баҫа башлай. Егет һис бер йоҡламай, керпек тә ҡаҡмай ҡарауыллай, нисек булһа ла түҙергә тырыша. Сыҙар хәле ҡалмағас, ҡылысты ала ла ҡоролай сәсен ҡырырға тотона. Башын сейләндереп бөтөрә. Сәсен дә ҡырып бөтөрә, ала бейә ҡолон да килтерә. Ҡолондоң аяғына баҫыуы була, ҡибланан бер ҡара болот килә. Ҡолондо алам тип түбәнәйеүе була, Ҡыран болотто уртаға яра саба. Болот, икегә ярылып, үргә күтәрелә, шунан бергә ҡушыла, ту-

бән төшөп, егетте иҫәңгерәтә һуғып, ҡолондо алып, осоп китә лә бара. Тамсылап-тамсылап ҡына тамған ҡан эҙе генә ятып ҡала.

Егет, иҫ йыйып, килеп торһа, ала бейә ашап йөрөй,— ҡолон юҡ. Ҡайтып, атаһына бөтә булған хәлде һөйләй.

— Инәй, аҙыҡ әҙерлә. Беҙ ағайҙар менән эҙләп китәбеҙ. Ағайҙар бармаһа, үҙем китәм,— ти.

Инәләре аҙыҡ әҙерләй, өс ағай-эне юлға сығып китә. Эй баралар былар ҡан эҙен ҡыуып, эй баралар. Бара торғас, бер бейек текә тауға килеп теркәләләр. Ҡараһалар, таштарҙағы ҡан эҙе юғарыға үрмәләй. Ҡыран батыр ағаларына тамаҡҡа әҙерләп торорға ҡуша ла тау башына менеп китә. Тау башына менһә, бер ерҙә баҡыр йорт, икенсе ерҙә көмөш йорт, өсөнсө ерҙә алтын йорт күрә. Егет ҡарап-ҡарап тора ла иң элек баҡыр йортҡа инмәксе була. Барһа, кәртә эсендә оло ағаһы ала алмаған ҡолондо күрә. Был ҡолон хәҙер баҫҡан ерендә ут уйнатып, осҡон сәсрәтеп торған ҡонан рәтенә ингән, ти. Егет өйгә инә. Инһә, өйҙә әҙәм затынан булған бер ҡатын ултыра.

— Ҡустым, ни эшләп бында килдең, имен сағында китеп ҡотол. Хәҙер дейеү пәрейе ҡайта, үҙеңде бер һоғоноуҙа юҡ итер. Тиҙерәк бул, ҡас!— ти ҡатын. Үҙе ике ҡаҙан ит бешерә, ике көбө ҡымыҙ бешә, ти.

— Беҙгә Ҡыран батыр килә. Дейеү пәрейе шуға әҙерләнә,— ти ҡатын.

— Дейеү пәрей ҡайһы яҡтан ҡайта?— тип һорай егет.

— Баҡыр күперҙән ҡайта.

Егет сығып китә лә баҡыр күперҙең аҫтына инеп ята. Күпер аҫтына инеп ятыуы була, баҡыр күпер геүләй башлай. Дейеү пәрейҙең иң алда һайыҫҡаны, унан һуң эте ҡайтыр булған. Һайыҫҡан күпергә килеп етә лә, шыҡыр-шыҡыр килеп, кире осоп китә. Эт тә килеп етә лә шыңшый-шыңшый кире саба. Дейеү пәрейҙең аты күпергә баҫа ла тып итеп туҡтап ҡала, кире сигенә башлай.

— Ни булған бөгөн һеҙгә? Әллә Ҡыран батыр килгән тип уйлайһығыҙмы?— ти дейеү пәрей.

Егет күпер аҫтынан сыға ла:

— Килһә, ни булған? Килмәҫлек ерме ни?— ти.

— Килдеңме, Ҡыран, әйҙә ҡунаҡҡа, мин һине күптән көтәм,— ти дейеү пәрейе.

— Беҙҙә ашҡа ҡаршы таш менән атмайҙар,— ти ҙә Ҡыран батыр дейеү пәрейгә ҡунаҡҡа китә.

Өйгә инәләр, ҡулдарын сайҡап, ашҡа ултыралар. Берәр ҡаҙан ит, берәр көбө ҡымыҙ эсәләр. Ашап-эсеп туйғас, дейеү:

— Беҙгә килгән ҡунаҡ аштан һуң оҙаҡ ултырмаҫ. Алышыу, көрәшеү булыр. Алыштанмы, көрәштәнме? — ти.

— Алыштан,— ти ҙә Ҡыран батыр дейеү пәрейе менән алыша башлай. Эй алышалар, эй алышалар, алыша торғас, Ҡыран батыр дейеү пәрейҙе тасылдатҡансы ергә һуға. Шунан, ҡылысын алып, тураҡлап ташлай.

Был көндө Ҡыран батыр баҡыр өйҙә ятып йоҡлай. Ит ашай, ҡымыҙ эсә, хәл йыя. Иртәгеһен көмөш йортҡа килә. Баҡыр йорттағы ҡатынды оло ағаһына инселәй.

Көмөш йортҡа барып етә. Кәртәлә уртансы агаһы ала алмаған ябағы тайҙы күрә. Ябағы тай, бына тигән ат булырын һиҙҙертеп, тыпырсынып, кешнәп тора, ти. Өйгә инһә, бер ҡатын ултыра. Һаулыҡ һораша.

— Егет, ни эшләп бында килеп сыҡтың? Имен сағыңда ҡасып ҡотол. Хәҙер дейеү пәрей ҡайта, үҙеңде харап итер,— ти ҡатын. Үҙе өс ҡаҙанда ит бешерә, өс көбө ҡымыҙ бешә, ти. Ҡыран батыр:

— Был хәтлем ризыҡты кемгә әҙерләйһең?— тип һорай.

— Беҙгә Ҡыран батыр килә ята, тиҙәр. Дейеү пәрей уны көтә,— ти ҡатын.

Ҡыран батыр дейеү пәрейҙең ҡайтыр юлын һорай.

— Көмөш күперҙән ҡайтып йөрөй.

Ҡыран батыр көмөш күпер аҫтына инеп ята. Шул ваҡытта күпер сыңлай башлай. Иң алда дейеү пәрейҙең һайыҫҡаны күпергә килеп етә лә кире осоп китә. Шунан лаҫ та лоҫ өрөп, йән-фарманға сабып килгән эт, күпергә еткәс, туҡтап ҡала, ҡойроғон ҡыҫып, кире әйләнеп саба. Дейеү пәрейҙең аты күпергә баҫа ла шып туҡтай.

— Ни булған бөгөн һеҙгә? Әллә Ҡыран батыр килеп тә еткән тип беләһегеҙме?— ти дейеү пәрей. Ҡыран батыр күпер аҫтынан сыға ла:

— Килеп етһә ни булған? Килеп етмәҫлек ерме ни?— ти.

— Килгәнһең икән, бик һәйбәт булған, әйҙә ҡунаҡҡа.

Дейеү пәрей Ҡыран батырҙы алып ҡайта. Ашап-эсәләр, теге өс ҡаҙан ит менән өс көбө ҡымыҙ етер-етмәҫ кенә булып ҡала быларға.

— Ашамаҡ-эсмәктән һуң алышмаҡ та көрәшмәк бар,— ти дейеү пәрей.— Алыштанмы, әллә көрәштәнме?

— Алыштан! Алыштан ҡалһаң, көрәштән!— ти Ҡыран батыр. Былар алыша башлайҙар. Эй алышалар, эй алышалар, алыша торғас, Ҡыран батыр дейеү пәрейен ергә лырҡылдатҡансы һуға ла, ҡылысын алып, тураҡлап ташлай. Шунан Ҡыран батыр өйгә инә, ашайэсә, ял итә. Иртәгеһен алтын йортҡа китә.

— Егет, мине лә үҙең менән ал,— ти ҡатын.

— Ярай, алырмын, ҡайтыу ыңғайында,— ти Ҡыран батыр.— Кесе ағайыма кәләш булырһың,— тип быныһын да инселәй.

Алтын йортҡа барһа, кәртәлә үҙенең ҡолоно тора, ти. Шул тиклем ҡупшы, ти, теге ҡолон, уйнаҡлап ҡына тора, ти. Өйгә инһә, бер йәш кенә ҡыҙ ултыра, ти. Үҙе шундай һылыу, бөтә ере үҙенә килешеп кенә тора, ти. Килешмәгән ере юҡ, ти. Ҡыран батыр һаулыҡ биргән. Ҡыҙ һаулыҡ алған да:

— Егет, ҡайҙан килдең, шунда ҡас, дейеү пәрей үҙеңде һәләк итәсәк. Бына-бына ҡайтып етер,— ти.

Биш ҡаҙан аҫылып, бишеһендә лә быҡырҙап ит бешеп ултыра, ти. Биш көбө ҡымыҙҙы ҡыҙ йүгереп йөрөп бешкәкләй, ти. Ҡыран батыр дейеү пәрейҙең ҡайтып йөрөй торған юлын һорай.

— Алтын күпер аша йөрөй,— ти ҡыҙ.

Ҡыран батыр алтын күпер аҫтына инеп, хәл йыймаҡ булып ята. Шул ваҡытта алтын күпер иңрәп-иңрәп китә. Күпергә иң элек дейеү пәрейҙең һайыҫҡаны килеп етә лә, кәйелеп китеп, кире оса. Эт тә килеп етеү менән үк кире боролоп саба. Дейеү пәрейҙең аты күпергә баҫа ла туҡтап ҡала, бышҡырынып тик тора.

— Ни булған бөгөн һеҙгә? Әллә Ҡыран батыр бар тип уйлайһығыҙмы?— ти дейеү пәрей. Ҡыран батыр күпер аҫтынан килеп сыға ла:

— Булһа ни булған? Килеп етмәҫлек ерме ни?— ти.

— Килгәнһең икән, бик һәйбәт булған, әйҙә, ҡунаҡ булырһың,— ти дейеү пәрей.

— Беҙҙә ашҡа ҡаршы таш менән атмайҙар. Әйҙә,— ти ҙә Ҡыран батыр дейеү пәрейгә ҡунаҡҡа китә. Өйгә инәләр, ҡулдарын сайҡап, ашҡа ултыралар. Теге биш ҡаҙан ит, биш көбө ҡымыҙ етер-етмәҫ кенә булып ҡалды, ти. Дейеү пәрей итте киҫәк-киҫәк көйөнсә, ҡулын бер, ботон бер, билдәмәһен бер һоғона ла ҡуя икән.

— Ашамаҡ-эсмәк бар, ашамаҡ-эсмәктән һуң алыш-

маҡ менән көрәшмәк тә бар. Алыштанмы, әллә көрәштәнме?— ти дейеү пәрейе.

— Алыш атаң башына, көрәш бар!— ти Ҡыран батыр.

Эй китә көрәш, эй китә! Дейеү пәрей Ҡыран батырҙың биленән алһа, Ҡыран батырҙың умыртҡаһы шытырлап китә; Ҡыран батыр алһа, дейеү пәрей үкереп-үкереп ебәрә, ти. Көрәшә торғас, саң болото күтәрелә, ер тап-таҡыр булып ҡала. Көрмәкләшеп йөрөй торғас, дейеү пәрей Ҡыран батырҙы һауаға сөйөп ебәрә. Ҡыран батыр бәкәләнә тиклем батып барып төшә. Ҡыран батыр дейеү пәрейҙе һауаға ороп ебәрһә, теге тубығына тиклем ергә бата. Дейеү пәрей икенсе тапҡыр һауаға сөйөп ебәрә, Ҡыран батыр тубығына тиклем ергә батып китә. Ҡыран батыр ороп ебәрһә, дейеү пәрей биленә тиклем ергә батып барып төшә. Эй алышалар былар, эй алышалар, алыша торғас, дейеү пәрей Ҡыранды өсөнсө тапҡыр һауаға сөйөп ебәрә. Ҡыран батыр ергә биленә тиклем инеп китә. Батырҙың хәҙер бик асыуы килә бит инде. Йән асыуынан, дейеү пәрейҙең билен һындыра яҙғансы тотоп, һауаға ороп ебәргәйне, теге һауанан бик оҙаҡ ергә төшмәй торҙо, ти. Шунан ергә дөп итеп килеп төшкәйне, ер уйылып китеп, дейеү пәрей үҥәсенә тиклем ергә батып ултырҙы, ти. Ҡыран батыр:

— Быны тартып сығарайым да тағы ла һауаға орайым,— тип, тегенең ҡолағына килеп йәбешкәйне, дейеү пәрейе:

— Ярай, Ҡыран, көрәштән һин еңдең. Хәҙер алышып ҡарайыҡ. Алыш үлештән булыр,— тине, ти.

— Әйҙә, улайһа, алышып ҡарайыҡ,— тип, Ҡыран батыр дейеү пәрейҙе ҡолағынан тартып сығарҙы ла, эй алыша башланылар, ти, былар, ағай, ҡылыс һелтәгәндә, йәшен уйнай, ҡылысҡа ҡылыс тейһә, күк күкрәп китә, ти! Алыша торғас, Ҡыран батыр дейеү пәрейҙең үҥәсен өҙә сапты ла, кәүҙәһен тураҡлап, тауҙай итеп өйөп ҡуйҙы, ти. Шунан, әлеге алтын йортҡа барып, мунса төшөп, ике-өс көн буйы ашап-эсеп, хәл йыйып ятты, ти. Шунан теге ҡыҙға:

— Әйҙә, өйләнешәйек, минең ҡатыным бул, шунан ҡайтып китербеҙ,— тип әйтте, ти.

— Ярай, мин риза,— ти ҡыҙ,— тик һин тәүҙә шуны эшлә: дейеү пәрейҙең тота алмаған ҡола бейәһе бар, шул бейәне тотоп ҡара,— ти.

Теге ҡола бейә төш мәлендә шул тирәләге бер күлгә төшөп һыу эсә торған булған. Үҙе сыйыр нуҡталы икән. Ҡыран батыр ҡарауыллап ята. Ҡола бейә күлгә

төшә, һыу эсә, туя. Инде боролоп китәйем тигәндә генә, Ҡыран батыр тегенең сынйыр нуҡтаһынан тотоп ала. Бейә ары ырғып ҡарай, бире ырғып ҡарай, Ҡыран ебәрмәй. Ебәрмәгәс, ҡапыл үргә һикерә. Ҡола бейәнең үргә һикереүе була, Ҡыран батыр тегенең өҫтөнә менеп тә ултыра. Шул ыңғайы бейәнең биле эйелеп-бөгөлөп китте, тояҡтары ергә батты, ә үҙе, ер йыртып, кешнәп ебәрҙе, ти. Шунан Ҡыран батыр ҡола бейәнең ике яҡ ҡабырғаһына ныҡ итеп типте лә күлде уратып сабырға тотондо, ти. Күлде өсөнсө тапҡыр урап сыҡҡас, ҡола бейә телгә килде, ти:

— Ярай, егет, батыр икәнһең. Дейеү пәрей тота алмағайны, бер кемгә лә буй биргәнем юҡ ине, һиңә генә буй бирҙем. Мин һинеке хәҙер,— тип әйтте, ти.

Шунан Ҡыран батыр бейәне етәкләп ҡыҙ эргәһенә алып ҡайтҡан.

— Ҡола бейәне алып килдем, ана кәртәлә тора. Йә, китәбеҙме инде хәҙер?— тине, ти, Ҡыран батыр теге ҡыҙға.

— Ярай, мин риза,— ти ҡыҙ.— Улай, ҡола бейәгә көсөң еткәс, икенсеһен дә һынап ҡара инде. Шул күл төбөндә алтын ҡылыс ята. Көсөң етһә, шуны ла ал. Дейеү пәрейе күпме тырышһа ла, ала алмағайны. Ҡылыс төш мәлендә генә, ҡола бейә һыу эсергә төшкән саҡта ғына, күл төбөндә ялтырап күренеп ятыр,— ти ҡыҙ.

Төш мәле күптән уҙған була. Был эште иртәгәгә ҡалдырып, Ҡыран батыр ятып йоҡлай. Иртәгәһен тора ла, күл буйына барып, төш еткәнен көтә. Төш еткәс барып ҡараһа, күл төбөндә, ысынлап та бер алтын ҡылыс ялтырап ята. Ҡыран батыр, сисенеп ташлап, һыуға сумып-сумып ҡарай,— күлдең төбөнә етә алмай. Шунан күкрәге шартлар сиккә еткәнсе тын ала ла тағы сума. Күлдең төбөнә төшөп етһә, ҡылыс юҡ була ла ҡуя. Һәрмәй-һәрмәй, ҡылыс ҡулға эләкмәй, аҡ ҡом ғына эләгә. Ҡыран батыр сыға ла, аптырап, яр башында ултыра: күлгә ҡарай,— ҡылыс ялтырап ята; алайым тип сумһа, ҡылыс юҡ була.

Шул ваҡыт ҡола бейә күлгә һыу эсергә килә.

— Нимәгә улай аҙапланаһың, батыр?— тип һорай ҡола бейә.

— Күл төбөндә алтын ҡылыс ята икән. Шуны алырға итәм дә алалмайым, ҡом баҫҡан, ахырыһы,— ти Ҡыран батыр. Ҡола бейә башын сайҡай-сайҡай килә лә Ҡыран батырға әйтә:

— Эй, егет, егет!— ти.— Күрәһеңме, күлдең төбөн-

дә ҡояш та ялтырап тора, болоттар ҙа аға, ағастар ҙа үҫә, тауҙар ҙа бар бит! — ти.

— Күрәм, — ти Ҡыран батыр.

— Күрһәң, бел: күл төбөндә күренгән күк тә, ялтыраған ҡояш та, аҡҡан болоттар ҙа, үҫкән ағастар ҙа, ҡылыстай ҡаҙалған тауҙар ҙа ысын түгелдәр, ә ҡоро шәүлә генә. Алтын ҡылыс та ысын түгел, уның шәүләһе генә, — ти ҡола бейә. — Шәүлә генә булған өсөн уны дейеү пәрей ҙә ала алманы. Ҡаяһы күккә тейеп торған ҡаршылағы тау башында ҙур ҡарағай үҫер. Ҡарағайҙың олоно, күкте тишеп сығып, теге яғына ҡарап торор. Шул олондоң осона алтын ҡылыс ҡаҙалған булыр. Әйҙә, мине менеп ал да киттек шунда, — ти ҡола бейә.

Ҡыран батырҙың атланыуы була, ҡола бейә бер һикереүҙә тау башына менеп тә етә. Әлеге ағас төбөнә килә лә:

— Батыр, ағасҡа менә алһаң, алтын ҡылыс һинеке. Мин ошонан да бейек һикерә алмайым. Тик бер һүҙем бар: ҡылыс менән һелтәнмә, күк көмбәҙен ярырһың, — ти Ҡола бейә.

Ҡыран батыр аттан төшә лә ағасҡа үрмәләп менеп китә. Эй менә, эй менә, менә торғас, күктең көмбәҙенә башын зыңҡ итеп һуғып алды, ти, был, үҙе саҡ-саҡ ҡына ҡолап төшмәй ҡалды, ти. Шунан әлеге ағас олоно тишеп үткән тишектән ҡыҫылып-ҡыҫылып булһа ла күктең теге яғына сығып, алтын ҡылысты алды, ти. Йондоҙҙар ғына, баҙлауыҡ кеүек бер янып, бер һүнеп, тәгәрәшеп ятып ҡалдылар, ти.

Ҡыран батыр алтын ҡылысты алып төшкәйне, ҡола бейә бер һикереүҙә уны әлеге алтын йорт эргәһенә килтереп тә еткерҙе, ти.

— Бына алтын ҡылысты ла алдыҡ. Әйҙә инде, ҡайтайыҡ, — ти, Ҡыран батыр.

— Хәҙер ҡайтырбыҙ. Алтын ҡылысың һырты менән алтын йорттоң ҡабырғаһына берҙе һуҡ, — тине, ти, ҡыҙ.

Баҡһаң, был ҡылыстың һөнәре бар икән. Ҡыран батыр алтын ҡылыстың һырты менән алтын өйҙөң бер ҡабырғаһына һуҡҡайны, өй алтын йомортҡаға әйләнде лә ҡуйҙы, ти. Шунан Ҡыран батыр алтын йомортҡаны ҡуйынына һалып алды ла, ҡолонға теге ҡыҙҙы атландырып, үҙе ҡола бейәгә атланып, көмөш йортҡа киттеләр, ти. Көмөш йортҡа килеп еткәс, ашап-эсеп, йоҡлап, хәл йыйҙылар, ти. Иртәгеһен көмөш йортто, алтын ҡылыстың һырты менән һуғып, көмөш йомортҡаға әйләндереп алдылар ҙа баҡыр йортҡа киттеләр,

ти. Теге кесе ағаһына тип инселәгән ҡатынды ябағы тайға мендереп алдылар, ти. Баҡыр йортҡа килеп еткәс, унда ла бер кис йоҡлап сыҡтылар, йортто баҡыр йомортҡаға әйләндереп алдылар, ти. Оло ағаһына тип инселәгән ҡыҙҙы теге тайға атландырҙылар, ти. Тауҙан килеп төшһәләр, Ҡыран батырҙың ике ағаһы көтөп ултыра, ти. Аш ашап алдылар, ти, былар. Ҡыран батыр оло ағаһына баҡыр йорттағы ҡатын менән тайҙы бирҙе, ти, кесе ағаһына көмөш йорттағы ҡатын менән ябағы тайҙы бүләк итте, уларға тейешле йомортҡаларҙы ла бирҙе, ти.

— Быныһы киленегеҙ булыр,— тип, үҙенең ҡатынын күрһәткәйне, ағалары, бының һылыулығына иҫеаҡылы китеп, ҡайнаға булыуҙарын да, әҙәп тигәнде лә онотоп, тегеңә оҙаҡ итеп ҡарап торҙолар, ти.

Ашап-эсеп, хәл йыйып алдылар ҙа ҡайтырға сыҡтылар, ти, былар. Ҡайтып киләләр, ҡайтып киләләр, ти. Ҡуна-ҡуна ҡайтып килә торғас, ағаларының көнсөллөгө килә башланы, ти.

— Ҡустының сынйыр нуҡталы ҡола бейәһе, алтын йорто, алтын ҡылысы бар, ҡатыны ла матурыраҡ,— тип шыбырлашалар, ти, былар. Шулай аҫтыртын һөйләшә торғас: «Үҙен үлтерәйек тә донъяһын емерәйек беҙ бының»,— тигән ҡарарға килгәндәр. Быны Ҡыран батырҙың кәләше ишетеп ҡалған. Кис булып, тамаҡ туйҙырып, йоҡларға ятҡас, йәш ҡатын Ҡыран батырға:

— Һине ағайҙарың үлтерергә йыйына,— ти.

Ҡыран батыр тора ла ятҡан урынына бер серек түмәрҙе килтереп һала. Үҙе ҡыуыштың һыртына сығып: «Былар ни ҡыланған булырҙар икән»,— тип, ҡарап ултыра. Төн урталап, таңға тарта башлай. Таң ҡыйылыр-ҡыйылмаҫтан, йоҡоноң иң тәмле сағында, Ҡыран батырҙың ағалары ҡыуыштарынан сығалар ҙа, ҡустыбыҙҙы сәнсәбеҙ тип, серек түмәрҙе ҡыршылдата сәнсәләр. Ҡыран батыр тегеләрҙе тотоп ала ла:

— Таң убырҙарымы тиһәм, ағайҙар, һеҙ икәнһегеҙ ҙә! Ни эшләп былай, ҡара таңдан тороп йөрөп ятаһығыҙ?— тип һорай.

— Һинең серек түмәрҙе килтереп һалғаныңды күрҙек тә нәмә икән тип сәнстек. Ярай, икенсе улай эшләмәбеҙ, теләһәң, әллә нәмәләр ташы,— тинеләр, ти, ағайҙары.

Былар тағы ла юлға сығалар. Эй киләләр, эй киләләр, килә торғас, Ҡыран батырҙың ағалары тағы ла кәңәш итә башлайҙар. Был юлы быларҙың нисек ҡарар иткәндәрен берәү ҙә белмәй ҡала. Кис етә, эңер төшә.

Былар, ҡыуыш эшләп, аш бешереп, туйынып йоҡларға яталар. Төн урталары еткәс, ағалары торалар ҙа, шым ғына алтын ҡылысты алалар. Шунан ҡыуыштың ауыҙына тубыҡ тиңенән итеп ҡылыстың үткер яғын эскә ҡаратып бәйләп ҡуялар. Үҙҙәре ситкәрәк китәләр ҙә:

— Ҡыран батыр, Ҡыран батыр! Бурҙар баҫты, бурҙар! Малды ҡыуып алып китәләр,— тип һөрән һала башлайҙар.

Йоҡлап ятҡан Ҡыран батыр ырғып тора ла, аныбыны аңғармайынса, йүгереп сығайым тиһә, ике аяғы ла тубыҡтан өҙөлгәнсе ҡырҡылып барып ултыра. Тегеләр шунда уҡ, шарт та шорт Ҡыран батырҙың байлығын бүлешергә тотоналар. Ҡайнағалары байлыҡ бүлешкән арала йәш ҡатын Ҡыран батырҙың аяҡтарын дарыуларға өлгөрә. Дарыулап та бөтә, ҡатындың аяҡ-ҡулын арҡан менән бәйләп, атҡа һалып, алып та китәләр. Юлға ҡуҙғалған саҡта ағалары:

— Был күҙле бүкән ултырып ҡалһын әйҙә, күпкә барыр тиһеңме, таң атҡансы эше бөтөр. Кисәге ҡояш — һуңғы ҡояшы булған икән. Яңы ҡояшты күрә алһа ярай ҙа,— тип, Ҡыран батырҙы йыға төртөп китәләр. Бер аҙ бара биргәс:

— Эй, Ҡыран батыр, хәлеңдән килһә, әйҙә, беҙҙе ҡыуып ет,— тип үсекләргә тотоналар. Шулай итеп, ағалары, ҡустыларын эшлектән сығарып, үсекләй-үсекләй ҡайтып китәсәр.

Ҡыран батыр бер үҙе ултырып ҡала. Менәйем тиһә — ат юҡ, атлайым тиһә — аяҡ юҡ, ашайым тиһә — аш юҡ. Ҡылыс та юҡ. Таң ата, ҡояш сыға. Ҡыран батырҙың ҡарыны асыға. Ни эшләргә белмәй аптырап ултыра-ултыра ла: «Киске аш әҙерәк ҡалмағанмы икән»,— тип, кисен ут яҡҡан ергә шыуышып килеп, көлдө буталай башлай. Көлдө болғауы була, бер көлсә килеп сыға. Көлсәне Ҡыран батырҙың ҡатыны әллә ҡайһы арала һалып өлгөргән була. Ҡыран батыр көлсәне ашай. Ашағас, һыу эскеһе килә. Ҡояш ҡыҙҙыра, бик ныҡ һыуһата. Ҡайҙан һыу табаһың хәҙер! Уйлап ултыра-ултыра ла был: «Һыу булһа, ҡайтыу юлында булырға тейеш»,— тип, ағаларының артынан төшә. Эй бара был, эй бара. Имгәкләп тә бара, шыуышып та бара, терһәгенә таянып та бара. Бара торғас, бер бәләкәй генә йылғаға килеп етә. Һуҙылып ятып, һыуһыны ҡанғансы, һыу эсеп ала. Йылғаның аръяғына сыҡһа, ут яҡҡан урынды күреп ҡала. Шыуышып бара, әлеге көлдө болғап ебәрһә, бер көлсә килеп сыға. Был көлсәне лә Ҡы-

ран батырҙың ҡатыны йәшереп кенә ҡалдырып киткән икән.

Тамаҡ ялғап алғас, Ҡыран батыр тағы ла ҡайтыу яғына йүнәлә. Йә түше менән шыуышып, йә имгәкләп, йә терһәктәренә таянып, бик оҙаҡ бара. Шулай бара торғас, хәлдән тайып йығыла был. Кис була. Ята торғас, Ҡыран батыр йоҡлап китә.

Бер ваҡыт дөп тә дөп иткән тауышҡа уянып китә. Уянып китһә, бер кеше йән-фарман болан баҫтырып килә. Боландың ике мөгөҙө араһында ҡояш эленеп тора, тирә-яҡты көндөҙгө кеүек яҡтыртып тора, ти. Болан ҡайһы яҡҡа боролһа, теге кеше лә шул яҡҡа борола икән. Боландың артынан бер иле лә ҡалмай ҡыуып тик бара икән теге кеше. Ҡыран батыр ҡарап ята-ята ла теге кешегә тауыш бирә:

— Һин кем? Ниңә боланды улай ыҙалатаһың? Үҙең баҫтыраһың, үҙең тотмайһың, һуғып та алмайһың, һис юғы менеп алыр инең,— ти.

— Бына был болан ҡояшты мөгөҙөнә эләктереп ҡасты, шуны ҡыуып барам. Ҡояшһыҙ күҙем һуҡырайҙы, боландың эргәһендә торғанда ғына күҙем күрә. Бөтөнләйгә күҙҙән яҙмайып тип, бер иле лә ҡалмай болан артынан йүгереп барам,— ти теге кеше.

Ысынлап та, тегенең ике күҙе лә һуҡыр икән.

— Һин һуҡыр, мин аяҡһыҙ, әйҙә, бергә-бергә китәйек,— ти Ҡыран батыр.

Теге кеше риза була. Һуҡыр Ҡыран батырҙы елкәһенә ултыртып ала ла, эй баралар, эй баралар былар. Уңға боролорға булһа, Ҡыран батыр һуҡырҙың уң ҡолағын, һулға боролорға булһа, һул ҡолағын тарта, ти. Бер йылға буйына ах та ох булып килеп йығылдылар, туйғансы һыу эсеп алдылар, ти. Йылғаның аръяғына сыҡҡайнылар, Ҡыран батыр ут яҡҡан урынды күреп ҡала. Барып, көлдө болғап ҡараһа, бер көлсә килеп сыға. Көлсәне йәнә Ҡыран батырҙың ҡатыны күмеп ҡалдырған икән. Былар көлсәне уртаға бүлеп, тамаҡ ялғап алалар ҙа йоҡларға яталар. Төн урталары еткәс, шарт та шорт иткән тауышҡа уянып китһәләр, берәү әлеге боланды йән-фарманға ҡыуып килә икән. Тегенең ике аяғы ла бар, ике күҙе лә бар, ике ҡулы ғына юҡ, ти. Йүгереп бара ла боланды аяғы менән тибә, йүгереп бара ла боланды аяғы менән тибә, ти, был кеше. Боланды хәлдән тайыр хәлгә еткергән, ти. Ҡыран батыр ҡарап-ҡарап тора ла тауыш бирә:

— Эй, егет, ниңә улай хайуанды ыҙалатаһың? Ниңә улай типкеләйһең?— ти.

— Типкеләмәҫ ерҙән типкеләрһең. «Мөгөҙөмә элэктереп Ҡояш алып киләм»,— тине лә алып килмәне. Бөтә кешеләребеҙ һыуыҡтан ыҙалап, туңып бөттө. Бына минең дә ике ҡулым, туңып, өҙөлөп төшөп ҡалды. Боланды яңынан ҡояш артынан китһен тип ҡыуам, ә ул китмәй ҙә китмәй,— ти теге кеше.

— Әйҙә, беҙҙең менән ҡал. Икәүҙән өсәү яҡшы, өс зәғиф бер кешеләй булырбыҙ әле,— ти Ҡыран батыр.

Теге кеше риза була. Шул ерҙә төйәк тартып йәшәй башлайҙар былар. Һунарға йөрөйҙәр. Ҡыран батыр үҙенә бер суҡмар эшләп ала, бер көн күҙһеҙгә, бер көн ҡулһыҙға атланып, һунарға йөрөй, төрлө йәнлектәр һуғып ала. Тик аш бешереүсе генә булмай. Ниңә тиһәң, Ҡыран батыр һуҡырға атланып һунарға сыҡһа, ҡыуышта ҡулһыҙ тороп ҡала. Ҡулы булмағас ни, ул, меҫкен, аш бешерә алмай. Ҡыуышта һуҡыр ҡалһа, ул да аш бешерә алмай. Күҙе күрмәгәс, утҡа инеп кенә бара. Былар хәҙер ни эшләргә белмәйҙәр. Ҡыуышта Ҡыран батыр ҡалһа, тегеләр йәнлек тота алмай. Шулай аптырашып йәшәй торғас, бер көндө һуҡыр:

— Беҙгә аш бешерергә бер ҡатын кәрәк,— ти.

— Күрше ханлыҡта тиҙҙән туй була. Хан ҡыҙы кейәүгә сыға,— ти ҡулһыҙ.

— Улай булғас, әйҙәгеҙ, ҡуҙғалдыҡ,— ти Ҡыран батыр.

Эй китәләр былар, эй китәләр. Ҡыран батыр тегеләрҙең йә береһенең, йә икенсеһенең елкәһендә сиратлап ултырып бара. Бара торғас, теге хандың йәйләүенә килеп етәләр. Килеп етәләр ҙә төрлө кәмиттәр күрһәтә башлайҙар. Кәмит күрергә хан ҡыҙы ла килә. Былар кәмит күрһәтеп йөрөйҙәр-йөрөйҙәр ҙә ҡыҙҙы алып ҡасалар. Ҡыран батыр һуҡырға атлана, ҡыҙҙы ҡулһыҙ елкәһенә ултыртып ала. Кәмит ҡарарға тип йыйылған халыҡ эштең ниҙә икәнен аңғармай ҙа ҡала. Хан быларҙың арттарынан ҡыуғын төшөрөп ҡарай. Ҡыуғынсылар, ҡыуып етә алмайынса, кире әйләнеп ҡайталар.

Ҡыҙҙы ҡыуышҡа алып ҡайталар. Хәҙер һунарға өсәүләп йөрөйҙәр, ҡыҙҙы аш бешерергә ҡалдыралар. Киткән саҡта:

— Утты һүндерә күрмә,— тип әйтеп ҡалдыралар.

Ҡыҙ бер үҙе тороп ҡала. Илай. Аш бешерәйем тиһә, ут һүнгән. Хәҙер ни эшләргә? Ҡыуыш башына менеп ҡараһа, бер ерҙән ҡыл арҡан ҡәҙәре генә төтөн сыға. Ҡыҙ төтөнгә ҡарап китә. Барһа, бер ҡыуыш тора. Ҡыуыштың ауыҙын асып инһә, убырлы ҡарсыҡ ултыра.

— Әбей, утым һүнеп ҡуйҙы, ағайҙарым хәҙер һунарҙан ҡайталар, аш бешеп өлгөрмәһә, асыуланалар инде,— ти ҡыҙ.

— Ярай, балам, ана усаҡтан ал. Былай яҡын торғас, ниңә килеп йөрөмәйһең? Килеп йөрө,— тип убырлы ҡарсыҡ бер ус ҡыҙған күмер биреп ебәрә.— Усың янмаһын, балам, ҡайтҡансы бер усыңдан икенсе усыңа алмашлап бар,— ти.

Ҡыҙ йүгерә-йүгерә ҡайта, бер усы яна башлаһа, күмерҙе икенсе усына һала. Устан усҡа һалғанда, күмерҙең көлө оса икән, көл осоп төшкән ергә ҡырсын таш түшәлә икән. Ҡыҙ аш бешерә. Ашы бешергә өлгөрмәй, әлеге убырлы ҡарсыҡ килеп етә. Үҙе:

— Балам, урманда яңғыҙ йәшәп эс бошоп китә. Шулай бер-беребеҙгә йөрөшөп торайыҡ,— тигән була.

Һөйләшеп китәләр. Һөйләшеп ултыра торғас, баш ҡарашырға тотоналар. Мәскәй әбей башын ҡаратҡан булып, ҡыҙҙың тубығына башын һала ла елек майын һура. Һурып-һурып туйғас:

— Ярай, балам, ағайыңдарҙың ҡайтыр ваҡыты етәләр. Асығып ҡайтырҙар. Ас кешенең асыуы яман, ти, йә асыуланырҙар. Мин ҡайтып китәйем, иртәгә килермен әле,— тигән була.

Һунарсылар ҡайталар, тамаҡ туйҙыралар. Ҡараһалар, ҡыҙҙың йөҙө һап-һары булған.

— Һиңә ни булды, ни эшләп йөҙөң һарғайып киткән? Әллә ауырыйһыңмы?— тип һорайҙар. Ҡыҙ бер нәмә лә өндәшмәй. Убырлы ҡарсыҡтың килгәнен дә әйтмәй. Йоҡларға яталар. Иртән торғас, Ҡыран батыр һуҡырға әйтә:

— Һин бөгөн ҡыҙҙы ҡарауыллап ҡал. Берәйһе килә ҡалһа, беҙ ҡайтҡансы ебәрмәй тот,— ти.

Һунарсылар китеп бер аҙ торғас, убырлы ҡарсыҡ килеп етә. Һуҡыр кемдеңдер ҡырсын ташты шығырлата баҫып килеүен, ҡыуыш эсенә инеүен һиҙә, тик күҙе күрмәгәс, ни эшләһен инде, һәрмәнеп-һәрмәнеп ҡараһа ла, бер кемде лә тота алмай. Ҡыҙҙан:

— Берәйһе килдеме әллә?— тип һорап ҡарай, ҡыҙ дөрөҫөн әйтмәй.

— Юҡ, берәү ҙә килмәне,— ти. Убырлы ҡарсыҡ, тағы ла башын ҡаратҡан булып, ҡыҙҙың елек майын һура-һура ла ҡайтып китә.

Кис була, һунарсылар ҡайта. Тамаҡ туйҙырып алалар. Ҡараһалар, ҡыҙ тағы ла һарғая төшкән. Ҡыран батыр һуҡырҙан һорай.

— Ҡырсын таш буйлап берәү килде килеүен, үҙен

тота алманым, кем икәнен белмәйем,— тип яуаплай һуҡыр. Ҡыран батыр ҡулһыҙға:

— Иртәгә ҡарауылға һин ҡалырһың,— ти ҙә, йоҡларға яталар.

Йоҡлап торалар. Ҡыран батыр менән һуҡыр һунарға китә, ҡулһыҙ ҡыуыш эсендә ҡыҙҙы ҡарауыллап ҡала. Күп тә үтмәй, убырлы ҡарсыҡ йәлп-йолп атлап килеп тә етә. Ҡыуышҡа килеп инә лә ҡыҙҙан баш ҡаратырға тотона. Ҡулһыҙ ҡыуып ҡарай, убырлы ҡарсыҡ китмәй, көлөп тик ята. Типкеслэп ҡараһа, убырлы ҡарсыҡ:

— Эм-м-м, бына шул ерем ҡысый ине, бына шул ерем ҡысып тора ине, ҡалай рәхәт булып китте, рәхмәт һиңә,— тип тик ята. Ҡыҙҙың елек майын һурып туйғас, тороп ҡайтып китә.

Тағы ла кис була, һунарсылар ҡайта. Тамаҡ туйҙырып алалар. Ҡулһыҙ барыһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

Иртәгеһен ҡыҙҙы ҡарауылларға Ҡыран батыр үҙе ҡала. Күп тә үтмәй, убырлы ҡарсыҡ йәлп-йолп атлап килеп етә. Ҡыуышҡа килеп инеү менән ҡыҙҙың елеґен һурырға тотона. Ҡыран батыр тегене ҡыуып ҡарай, ҡарсыҡ бер нәмә лә өндәшмәй, ҡыҙҙың елеген һурыуҙы ғына белә. Хәҙер ни эшләргә? Ҡыран батыр ҡыуыштың дүрт мөйөшөнә дүрт бағана ҡаға ла, дүрт бағанаға ҡарсыҡтың сәсен тарттырып тороп бәйләй. Шунан беләк йыуанлығы бер һуйыл алып, ҡарсыҡтың һырт буйына берҙе тондора. Ҡарсыҡ ҡыбырлап ҡуя. Икенсе тапҡыр төшөрә, ҡарсыҡ йөгөнләп ултыра. Йән асыуынан Ҡыран батыр өсөнсө тапҡыр һуҡҡайны, убырҙың арҡаһынан ҡара ҡаны урғылып сыға. Һикереп тороп, Ҡыран батырға йәбешәйем тиһә, тора алмай: сәс ебәрмәй. Ҡыран батыр дүртенсе тапҡыр һуйылын күтәрә. Шул саҡ убырлы ҡарсыҡ:

— Етәр, балаҡайым, ебәр мине, ни теләһәң, шуны үтәйем, ни һораһаң, шуны бирәм,— ти.

— Иң элек беҙҙең һеңлекәште үҙенең элекке төҫөнә ҡайтар.

— Була ул, була ул, хәҙер эшләйем,— ти ҙә ҡарсыҡ ҡыҙҙы бөтөнләйгә йота. Йота ла кире сығармай ҙа ҡуя. Ҡыран батыр, әлеге һуйылды алып, тотона был ҡарсыҡтың тетмәһен тетергә. Тетә торғас, ҡарсыҡ алҡынып-алҡынып ҡоҫорға тотона. Ҡоҫоп ебәреүе була, ҡыҙ элеккенән дә матурыраҡ булып килеп сыға.

— Хәҙер мине ебәр инде, балаҡайым,— ти убырлы ҡарсыҡ.

— Мин һине бөгөн ебәрмәйем, иртәгә ебәрәм,— ти Ҡыран батыр.

Кис була. Һунарсылар ҡайта. Ултырып ашайҙар, Ҡыран батыр бөтә булған хәлдәрҙе һөйләп бирә. Ятып йоҡлайҙар. Таң һарыһы беленеү менән убырлы ҡарсыҡ:

— Балаҡайым, һин мине иртәгә ебәрермен тигәйнең, яңы көн тыуҙы, зинһар, ебәрә күр инде, ҡарыным асыҡты!— ти.

Ҡыран батыр тора ла:

— Минең иптәшемде күҙле ит,— ти. Ҡарсыҡ өндәшмәгәс, тегеңә әлеге һуйылы менән бер-икене тамыҙып ала.

— Итәм, итәм,— тип, ҡарсыҡ риза була.

Һуҡырҙы йота ла тағы ла сығармай ҙа ҡуя. Ҡыран батыр йәнә һыҙыра башлай. Шыжлатып һыҙыра торғас, убырлы ҡарсыҡ алҡынып-алҡынып ҡоҫоп ебәрә. Һуҡыр килеп сыға. Ҡараһалар, ике күҙе лә бар! Һуҡыр шатлығынан ни эшләргә белмәй, бейеп тик йөрөй, ти.

— Хәҙер икенсе иптәшемде ҡуллы ит,— ти Ҡыран батыр. Ҡарсыҡ өндәшмәгәс, тағы ла берҙе төшөрөп ала.

— Итәм, итәм,— ти ҙә ҡарсыҡ ҡулһыҙҙы йота. Көтәләр, көтәләр, быны кире сығармай ҙа сығармай. Ҡыран батыр һуйылын тегенең һырт буйына тағы ла берике тапҡыр ныҡ ҡына итеп тейҙереп ала. Шул ерҙә ҡарсыҡ алҡынып-алҡынып ҡоҫорға тотона. Ҡоҫа торғас, ҡулһыҙҙы кире сығара. Ҡараһалар, ҡулһыҙҙың ике ҡулы ла бар. Был да шатлығынан ни эшләргә белмәй, сәбәкәйләп өйөрөлөп йөрөй, ти.

— Хәҙер мине аяҡлы ит,— ти Ҡыран батыр.

— Итәм, балаҡайым, итәм,— ти ҙә убырлы ҡарсыҡ Ҡыран батырҙы йота.

Йота — кире сығармай. Алай итеп ҡарайҙар, былай итеп ҡарайҙар,— теге кире сығармай. Туҡмай-туҡмай хәлдәре бөтә. Сығармағас, убырлы ҡарсыҡтың эсен яралар. Эсен ярып ҡараһалар, батыр юҡ. Шунан тотоналар убырлы ҡарсыҡтың бөтә ерен ярырға, бар нәмәһен ҡалдырмай ярып сығалар. Елек һөйәктәрен дә ярып ҡарайҙар. Бер сәтәкәй бармаҡ ҡына тороп ҡала.

— Башҡа ерендә булмағас, быныһында ғына булмаҫ инде,— тип, сәтәкәйҙе ырғыталар ҙа был урындан ҡуҙғалып китәләр былар. Бара торғас, бер һаҙлыҡҡа килеп етәләр. Шунда бер турғай:

— Сетәкәй, сетәкәй, сетәкәй!— тип ҡысҡырып ултыра.

Был ҡошто ҡыуып та ҡарайҙар. Бер урындан икенсе урынға барып ултыра ла тағы һайрай.

— Ниңә был турғай «сетәкәй» тип ҡысҡыра әле? Бәлки «сәтәкәй» тип әйтәлер ул,— тип аптырашалар былар. Һөйләшәләр ҙә кире боролоп китәләр. Кире боролоп килеп, әлеге сәтәкәйҙе табып, ярып ҡараһалар, эсенән Ҡыран батыр килеп сыға. Ике аяғы ла төҙәлгән, ти, быныҡ.

Хәҙер былар бөтәһе лә теүәл, иҫән-һау. Ҡыҙҙы алалар ҙа әлеге ханға китәләр. Ҡыҙҙы атаһына алып баралар.

— Мә, ҡыҙыңды ҡабул итеп ал. Бер ере лә кәмемәгән, һылыулығы ғына артҡан. Уның арҡаһында аяҡлы, ҡуллы, күҙле булдыҡ,— тиҙәр.

Хан ҡыҙының иҫән-һау ҡайтып төшөүенә бик шатлана.

— Был егеттәр һине рәнйетмәнеләрме, ҡыҙым?— тип һорай.

— Юҡ, атай,— ти ҡыҙ,— улар миңә тырнаҡ осо хәтлем дә зыян күрһәтмәнеләр, бик яҡшы мөғәләмәлә булдылар, бер туған ҡарындаштары кеүек итеп аҫранылар,— ти ҡыҙ.

Хан егеттәрҙе өс көн, өс төн ҡунаҡ итә. Дүртенсе көндө Ҡыран батыр ҡайтырға була. Ике иптәше уны оҙатып ҡуйырға була. Хан менән хушлашып, киләсәктә хәбәрҙәш булырға вәғәҙәләр бирешеп, былар Ҡыран батырҙың иленә юл алалар.

Был ваҡытта Ҡыран батырҙың ағалары күптән инде өйҙәренә ҡайтып еткән булалар. Ҡайтып етеү менән Ҡыран батырҙың кәләше алтын ҡылысты ҡулға эләктерә лә тегеләргә бер ҙә ирек бирмәй. Ҡылыс ярҙамында был ҡатын үҙенә алтын йорт һалып ала, ҡайны менән ҡәйнәһен дә ҡарай, ә теге ҡайнағаларына йорт та юҡ, мал да юҡ.

Ҡыран батыр алыҫтан ялтырап күренгән алтын йорт күреп ҡала. Баралар, ҡатын быларҙы ҡаршы сығып ала. Өйгә инһәләр, Ҡыран батырҙың атаһы менән әсәһе бер туҡтауһыҙ илауҙан һуҡырайышып бөткәндәр. Кискә күп итеп ҡунаҡ саҡыралар, ҡарт-короларҙың, ағай-энеләрҙең береһен дә ҡалдырмайҙар. Теге ике ағаһы ла килә. Ашап-эсеп алғас, Ҡыран батыр үҙе менән булған хәлде түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

— Ағайҙарымдың ҡатындарын иптәштәремә бирәм,— ти.

Һуҡырға Ҡыран батыр баҡыр йорттағы ҡатынды, ҡулһыҙға көмөш йорттағы ҡатынды алып бирә. Халыҡ

бик ҡәнәғәт була. Ике ағаһын Ҡыран батыр өс йортҡа тиҙәк ташыусы итеп ҡуя.

Улар әле лә иҫән-һауҙар, ти, бик һәйбәт итеп донъя көтөп торалар, ти.

## КӨЛӘШӘ БАТЫР

Борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың өс улдары булған. Иң кесеһенә Көләшә тип исем биргәндәр.

Бер мәлде әбей үлеп китә. Уның артынса бабай ҙа донъя ҡуя. Егеттәр аптырашҡа ҡала: ата-әсәнән малтыуар ҡалмаған, йорт-ҡура туҙған, нисек көн итергә? Уйлай-уйлайҙар ҙа, юлға сығырға булалар. Китәләр былар, китәләр,— арҡан буйы юл үтәләр. Бара торғас, ете юл сатына барып етәләр. Алты юлдан үтеп була, етенсе юлдан ел дә үтмәй, эт тә үтмәй икән. Көләшә батыр ағаларына әйтә:

— Һеҙ һәйбәт юлдарҙы һайлағыҙ, ә мин, ни булһа булһын, ошо етенсе юлдан китәйем,— ти. Ағаларының ай-вайына ҡуймай китеп тә бара.

Эй бара, эй бара, бара торғас, бер далаға килеп сыға. Даланың уртаһында яңғыҙ өй тора, ти. Өйгә яҡын килгән был. Инәйем тиһә, ишеген табалмай. Тирәләп урап сыға өйҙө,— юҡ, ти, ишек. Шул ерҙә был, тәүәккәлләп, өйҙөң бер мөйөшөнә тибеп ебәрә. Шығырлап ишек асылып китә. Егет өй эсенә уҙа. Ҡараһа,— бер яңғыҙ ҡыҙ ултыра, ти, түрҙә. Сәләмде алғас:

— Эй, егет, ни эшләп килдең һин бында? Минең ирем бит дейеү пәрей. Ҡайтып инһә, тотоп ашар үҙеңде,— ти икән.

— Ашалып ҡалмағайы тағы! Кешенән башҡа ирең ни менән туҡлана?— тип һорай егет.

— Өс батман бейә ите ашай, өс батман һыу эсә.

— Алып кил миңә шул ризыҡтарҙы!— тип бойора егет. Ҡыҙ йүгертеп өс батман бешкән бейә ите, өс батман һыу алып килә.

Көләшә батыр килтерелгән ризыҡты ашап, билен ҡайышы менән һыға быуып ала ла, ҡыҙҙан һорай:

— Ирең ҡайһы яҡтан ҡайта?

Ҡыҙ күрһәтә.

— Мин хәҙер ирең менән алышҡа сығам.Өс көн, өс төн алышырбыҙ. Өсөнсө көн һин бер усыңа тары йо-

моп, икенсе усыңа көл йомоп, беҙҙең янға сыҡ. Беҙ арманһыҙ булып ултырған булырбыҙ. Йәнә алышҡа тотонғанда, һин дейеүҙең аяғы аҫтына тарыңды түк, минең аяҡ аҫтыма көләңдә һип,— тигән дә егет дейеүҙең ҡайтыр юлына сыҡҡан.

Бына бер мәл ғәрәсәт ҡупҡан, ҡойон уйнаған. Был дейеүҙең ҡайтып килеүе икән. Көләшә батыр уның ҡаршыһына сыҡҡан да:

— Алышмы, атышмы?— тип ҡысҡырған.

— Атыш атаң башына, алышабыҙ, ҡурҡмаһаң!— тип ажғырып, дейеү егеткә ташланған.

Бына бер заман китте, ти, алыш. Ер убылып, ҡойон уйнап торҙо, ти, быларҙың ғәйрәтенән. Ҡылыстарынан сыҡҡан осҡондар йәшен булып йәшнәп торҙо, ти.

Өс көн, өс төн көрәшеп, хәлдән тайып ергә ауҙылар, ти, бер мәл былар. Быны күҙәтеп торған ҡыҙ йәһәт кенә өйгә инеп, бер ус тары, бер ус көл тотоп сыҡты, ти. Тегеләр ҡайтанан алыша башлағас, йүгереп килеп дейеүҙең аяҡ аҫтына тары һипте, Көләшә батырҙың баҫҡан еренә көл түкте, ти. Тарыға баҫып, дейеүҙең салҡан төшөп ҡолап китеүе була, Көләшә батыр ҡылысы менән тегенең өс башын да өҙә сабып ебәреп, кәүҙәһен тураҡлап ташланы, ти.

Шул ерҙә ҡыҙ ҡыуанып киткән. Егетте ҡайтанан өйгә саҡырып, һыйларға керешкән. Бер төн шул йортта ҡунып, ҡунаҡ булғандан һуң Көләшә батыр ары юлға сығырға булған. Ҡыҙ быныӊ китмәүен үтенә, ти.

— Дейеүҙең ике ағаһы бар, улары бигерәк тә хәтәр. Юлыңда осрап, һәләк итерҙәр үҙеңде,— тип илай икән.

Көләшә батыр һис ҡаушамаған, юлын ары дауам иткән. Эй бара, ти, был, эй бара, ти. Бара торғас, тағы ла ҙурыраҡ, тағы ла ҡотһоҙораҡ бер далаға килеп сыҡты, ти. Дала уртаһында баяғынан да ҙурыраҡ, баяғынан да мөһәбәтерәк бер өй тора, ти. Шул өй янына килгән был. Тирәләп урап сыҡҡан, әммә һис ишеген тапмаған. Күп уйлап тормаған, тоҫморлап, бер урынға, йән фарман тибеп ебәргән икән, шул ерҙә шығырлап тимер ишек асылып киткән. Өйгә инһә,— түрҙә бер яңғыҙ ҡыҙ ултыра, ти, бойоғоп. Инеү менән, сәләм биргән Көләшә батыр, хәл-әхүәл һорашҡан. Ҡыҙ илап ебәргән.

— Дейеү мине урлап алып килеп, ошо өйҙә бикләп тота. Һин ни эшләп бында килдең? Ирем — алты башлы ғәйрәтле дейеү. Ҡайтһа, тотоп ашар үҙеңде,—ти икән.

— Ашамағайы тағы! Әҙәм итенән башҡа ирең тағы ни менән туҡлана?

— Ул алты батман бейә ите ашай, алты батман һыу эсә.

— Килтер миңә шул ризыҡтарҙы!

Ҡыҙ йүгертеп дейеүҙең ашамлыҡтарын алып килә. Көләшә батыр уларҙы ашап ала ла ҡыҙға әйтә:

— Мин хәҙер дейеү менән алышҡа сығам. Ҡайһы яҡтан ҡайта ирең?

— Анау суйын күперҙән киләсәк. Тик һин уға ҡаршы тора алмаҫһың. Тиҙерәк ҡасыуың хәйерле,— ти ҡыҙ.

— Һин миңә ярҙам итһәң, еңелмәм. Беҙ өс көн, өс төн һуғышып, арманһыҙ булып ятҡанда, һин бер бот тары, бер бот көл алып, яныбыҙға кил. Яңынан алышҡа тотонған мәлдә генә тегенең аяҡ аҫтына тары һип, ә минең аяҡ аҫтыма көл түк,— тигән Көләшә батыр. Үҙе билен һыға быуып ала ла ҡылысын тотоп суйын күпер аҫтына барып йәшенә.

Бына бер мәл ҡуба ғәрәсәт. Болоттар ҡабара, дауыл ҡуба, ҡойон өйөрөлә башлай. Алты башлы дейеүҙең ҡайтып килеүе шул икән. Иң алдан еле килә, ти. Суйын күперҙән үтә алмай, ел өйөрөлә башлай. Уның артына сабып килгән эте лә күпергә еткәс, артабан бара алмай, шыңшый башлай. Быны күреп, дейеү яман ажғырып ебәргән:

— Нимә, әллә Көләшә батыр ята тип уйлайһығыҙмы!— тип, елде туҙҙыра тибеп ебәргән, этен бер яҡҡа осора һуҡҡан.

Шул ваҡыт Көләшә батыр күпер аҫтынан килеп сыҡҡан да:

— Мин булмай, кем һине көтһөн! Атыш бармы, алыш бармы?— тип ҡысҡырған.

— Атыш атаң башына, алышабыҙ, хәлең етһә!— тигән дә ажғырып егет өҫтөнә ташланған, ти, дейеү.

Бына китте, ти, алыш. Күк күкрәп, ер тетрәп торҙо, ти, былар ғәйрәтенән. Өс көн, өс төн алышып, арманһыҙ булып, бер мәл гөрһ итеп ергә ауҙылар, ти, былар. Быны күреп торған ҡыҙ, йүгереп өйҙән бер бот тары, бер бот көл алып сыҡҡан. Тегеләр ҡабаттан алыша башлау менән, егет ҡушҡанса, дейеүҙең аяҡ аҫтына тары түгеп ебәрҙе, Көләшә батырҙың баҫҡан еренә көл һипте, ти. Дейеү тарыға баҫып, тайып китте лә, ларһ итеп, салҡатан барып төштө, ти. Шуны ғына көтөп торған егет, йәһәт киҙәнеп, ҡылысы менән дейеүҙең алты башын да һә тигәнсе киҫеп ырғытты, ти.

Шул ерҙә көн асылып китте, үҫемлектәр йәшелләнде, гөрләп шишмәләр аҡты, ти. Ҡыҙ, ҡыуанысы-

нан, егетте ҡосаҡлап алды, ти. Ҡунаҡ булып, ҡунып китеүен һораны, ти. Әммә Көләшә батыр, бараһы юлы әле бөтмәгәс, ары китте, ти. Ҡыҙ илай-илай оҙатып ҡалған. Алда тағы ла зәһәрерәк, ун ике башлы дейеү барлығын әйткән.

Бара, ти, егет, бара, ти. Урман-тауҙар артылған, даръялар кискән. Бара торғас, икһеҙ-сикһеҙ бер далаға килеп сыҡҡан. Ҡараһа,— дала уртаһында дәү бер йорт тора, ти. Яҡынығаҡ килеп ҡараһа,— быныҡ да ишеге юҡ, ти. Аптырап ҡалмаған Көләшә бытыр, артҡараҡ сиккән дә, ырғып килеп, ике аяғы менән ҡушарлап, бер урынға типкән икән, шатыр-шотор ишек асылып киткән. Егет эскә үткән. Түрҙә бер яңғыҙ ҡыҙ ултыра, икән. Сәләм алған да ҡыҙ ҡысҡырып илап ебәргән.

— Ҡабат әҙәм балаһын күрмәм тип уйлағайным, бер батырҙы күрергә насип булған икән. Башҡайыңды һәләк итмә. Йәһәт кенә ҡас, егет. Минең ирем — ун ике башлы дейеү. Өҙөп-йолҡоп ашар үҙеңде,— тигән, ти.

— Ашамай торһон. Мин уның ике ҡустыһының башына еткән батыр. Быныһын да юҡ итермен, тик һин ярҙам ит,— тигән. Дейеүҙең ашаған ризыҡтарын һораған. Ҡыҙ ун ике батман бейә ите, ун ике батман һыу алып килгән. Көләшә батыр туйынып алған да ҡыҙға әйткән:

— Беҙ өс көн, өс төн буйы йән аямай алышырбыҙ. Һуңғы сиктә икебеҙ ҙә арманһыҙ булып, хәлдән тайып, ял итергә туҡтарбыҙ. Шул мәлдә һин бер тоҡ тары, бер тоҡ көл алып сығырһың. Беҙ яңынан алыша башлағас, дейеүҙең аяҡ аҫтына тарыңды түк, ә минең баҫҡан ергә көл һип,— тигән. Шунан ҡылысын ҡайрап, биленә таҡҡан да. дейеү ҡайтаһы юлдағы оло суйын күпер аҫтына инеп йәшеренгән.

Бына ҡупҡан бер мәл ғәрәсәт. Күк күкрәгән, йәшен йәшнәгән, ер өҫтөн ҡап-ҡара болот ҡаплаған. Был ун ике башлы дейеүҙең ҡайтып килеүе икән. Алдан килгән еле менән эте суйын күперҙән үтә алмай, шыңшып өйөрөлә башлаған. Дейеү үтә ярһып, айбарланып, икеһен ике яҡҡа осора тибеп ебәргән.

— Көләшә батыр бар тип беләһегеҙме ни, мәлғүндәр! — тип, ажғырып ебәреүе була, күпер аҫтынан, ҡылыс күтәреп, Көләшә батыр килеп сыға.

— Мин булмай, кем көтһөн һине! Сыҡ алышҡа, йөрәгең етһә!

Дейеү ажғырып, ун ике башынан ут сәсеп, ер аҡтарып егет өҫтөнә ташланғын. Эй китте, ти, бер заман

алыш! Ер тетрәп, һыуҙар атылып торҙо, ти. Әллә ҡайҙа ятҡан күлдәр ташып, ҡайнап, даръя булып аҡты, ти. Өс көн, өс төн барған туҡтауһыҙ алыштан арманһыҙ булып, икеһе лә бер юлы ларһ итеп ергә тәгәрәнеләр, ти.

Быны ҡарап торған ҡыҙ йүгертеп бер тоҡ тары, бер тоҡ көл алып килде, ти. Тарыны дейеүҙең торған еренә түкте, егет баҫҡан урынға көл һипте, ти. Тегеләр яңынан алышҡа торғайнылар ғына, дейеү, тарыға тайып, гөрһ итеп, салҡатан йығылып китте, ти. Шуны күткән Көләшә батыр, йәшен тиҙлеге менән ҡылысын уйнатып, дейеүҙең ун ике башын һә тигәнсе өҙә сабып ташланы, ти.

Шул ерҙә дауыл тынып, көн асылып китте, ти. Шишмәләр сылтыраны, ҡоштар һайраны, донъя йәнләнде, ти. Ҡыҙ ҙа сикһеҙ ҡыуанып, егетте өйөнә саҡырҙы, дейеүҙең мөлкәтенә хужа булырға өндәне, ти. Әммә Көләшә батыр бер аҙ ял иткән дә, ҡабат килергә һүҙ биреп, ҡайтыу яғына юлға сыҡҡан. Ни өсөн тигәндә, ағалары иҫенә төшөп, уның күңеле әрнене, ти.

Килгән юлынан кире ҡайтышлай, Көләшә батыр дейеүҙән ҡотолдорған ике ҡыҙға тағы һуғылған. Уларға ла ҡабат килергә һүҙ биргән, көтөп торорға ҡушҡан.

Бара торғас, бер мәлде ул ағалары менән айырылышҡан ете юл сатына килеп еткән. Ағалары киткән юлдан ары ыңғайлаған. Урман-тауҙар үткән, бер аҡланға килеп сыҡҡан. Абайлабыраҡ ҡараһа, ҙур аждаһа йомарланып, ике ағаһын ҡулсаға алып ята икән. Тегеләр ҡуҙғала ла алмай торалар, ти. Аслыҡтан ҡаҡ һөйәк булып, йонсоп, хәлдән тайып, саҡ үлмәле хәлдәләр икән. Көләшә батыр аждаһаның башын өҙә сабам тиһә, таба алмай, ти. Йылан йомарланып, ҡойроғон ауыҙына тығып ятҡанлыҡтан, һис уның башын табыр әмәл юҡ, ти. Шул ерҙә ағалары ымлап ҡына йыландың башын күрһәткәндәр. Көләшә батыр ажарланып килеп бер сабып ебәреүе булды, ти, йылан яҙылып китте лә, йән бирҙе, ти. Ҡыуаныстан илап ебәрҙеләр, ти, ағалары. Мең рәхмәттәр әйтеп, ҡустыларын ҡосаҡлап алғандар. Көләшә батыр ағайҙарын үҙе ҡотҡарған теге ҡыҙҙарға алып китә. Тәүгеһенә килһәләр, унда бер сабый йүгереп йөрөй икән. Ул Көләшә батырҙың улы булып сыҡҡан. Көләшә батыр был ҡатынға өйләнде, ә ағаларына өлкән дейеүҙәрҙең ҡатындарын алып бирҙе, ти. Шулай итеп, гөрләтеп донъя көтөп алып киткәндәр былар.

# ҠАРАБӘКӘЛ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Уларҙың өс улынан, бер бейәһенән башҡа бер нәмәләре лә булмаған, ти. Ошо бейәләре быларҙың көн һайын ҡолонлай икән. Ә ҡолоно көн дә юғала ла ҡуя, ти. Ҡолондо һаҡларға бабай өс улын алмаш-тилмәш ҡарауылға сығармаҡсы булған.

Беренсе көндө өлкән улын ебәргән. Өлкән ул таң беленгәнсе йоҡламайынса һаҡлаған, ә таң ата башлағас, йоҡлаған да киткән, ти. Ә бейә һәр ваҡыт таң атыр алдынан ғына ҡолонлай икән. Бына бейә ҡолонлаған. Ҡолон аяҡланып, уйнаҡлап йөрөй башлағанда ғына, бөтөн донъя өҫтөн ҡараңғылыҡ ҡаплап алған. Дауыл ҡубып, таштар яуған, йәшен йәшнәгән, ти. Шул саҡ ҡолон мәхшәр араһында юҡ булған да ҡуйған. Бейәнең һәр бер ҡолонон, ошолай итеп, дейеү алып китә икән. Өлкән ул күҙен асып ебәрһә, донъя тып-тын, ә бейә тыныс ҡына үлән утлап йөрөй, ти. Шулай итеп, өлкән ул атаһына бер ниндәй ҙә яңы хәбәр алып килә алмаған.

Икенсе көндө бабай уртансы улын ҡарауылға сығарған. Уртансы ул да таң һыҙылып килгәнсе керпек ҡаҡмаған. Шулай ҙа һуңынан ойоп, ҡүҙҙәрен йомған. Бейә тағы ҡолонлаған. Ҡолон тағы юҡ булған.

Быныһы ла йүнле хәбәр алып ҡайта алмағас, өсөнсө көндө бабай кинйә улы Ҡарабәкәлде ебәргән. Ҡарабәкәл бейәнең таң алдынан ғына ҡолонларын белгән, ти, шуға күрә һаламға күмелеп йоҡларға ятҡан. Сыр-сыу, шау-шыу тауышҡа күҙҙәрен асып ебәрһә, күҙҙәренә уйнаҡлап торған аҡ ҡына* ҡолон салына. Ҡолон тирәһендә кешнәп, уны нәмәнәндер һаҡлап ҡалырға тырышып, үрһәләнеп торған бейәне лә күрә. Ҡарабәкәл һикереп торғансы, ҡолон ел-дауыл менән ҡуша юҡ та була. Ҡарабәкәл, уғын алып, һауала осоп барған ниндәйҙер бер ҡара нәмәгә атып ебәрә. Был дейеү булған була. Ҡарабәкәлдең уғы дейеүҙең ҡойроғон өҙөп төшөрә. Ҡарабәкәл уғы менән бергә килеп төшкән дейеү ҡойроғон атаһына алып ҡайта ла:

— Бына беҙҙең ҡолондо кем урлай икән! — ти.

Атаһы эштең нимәлә икәнен төшөнгәс, оло ике улын саҡырып алып:

— Беҙҙең ҡолондарҙы дейеү урлай икән. Хәҙер үк йыйынығыҙ ҙа дейеүҙе эҙләргә юлға сығығыҙ! — ти.— Ул дейеү беҙҙең ҡолондарҙы көтөү-көтөү итеп көтөп

---

* Аҡ ҡына — шулай яҙып алынған.

алып йөрөр. Һеҙ ана шул көтөү-көтөү ҡолондарҙы ҡыуып алып ҡайтығыҙ,— ти.

Бабайҙың өлкән улы менән уртансы улы юлға йыйына. Ҡарабәкәл дә ағалары менән китмәксе булып, атаһынан рөхсәт һорай. Нисек кенә инәлеп, ялбарып һорамаһын, атаһы уны, иң кинйә, иң яратҡан улы булғанлыҡтан, барыбер ебәрмәгән. Ҡарабәкәл ағаларының үҙҙәренең генә китеүенә бик ҡайғырған, бошонған. Быны күреп, ағалары:

— Бына, беҙ ошо ҡаҙ ҡауырһынын өй өрлөгөнә ҡыҫтырып китәбеҙ, көн һайын иртәнсәк торғас та ҡарарһың. Әгәр ҙә ошо ҡауырһын осонан һөт тамһа, беҙ иҫән-һау булырбыҙ; әгәр ҙә инде ҡан тамһа, беҙҙең менән берәй хәл булған булыр. Шул саҡ һин беҙҙең арттан юлға сығырһың,— тинеләр, ти.

Ағалары сығып киткән. Ҡарабәкәл уларҙы оҙатып ҡалған. Беренсе көн, иртәнсәк торғас та, Ҡарабәкәл өрлөктәге ҡауырһынға ҡараған, иҙәнгә тыпылдап һөт тамып тора, ти. Икенсе көндө лә шулай булған. Өсөнсө көн иртәнсәк тороп ҡараһа, ни күҙә менән күрһен, теге ҡауырһындан ҡан тама, ти. Ҡарабәкәл шунда уҡ юлға йыйынған. Уның асыуы ташҡан, һарыуы ҡайнаған. Үҙендә әйтеп бөтөргөһөҙ көс барлыҡҡа килеүен һиҙгән. Ул уғы менән янын алған да ата-әсәһе менән хушлашырға ингән. Быларҙың бер ҙә генә уны үҙ әргәләренән ебәргеләре килмәһә лә, башҡа сара ҡалмағас, риза булғандар. Хушлашҡанда әсәһе:

— Бына, улым, һиңә тараҡ: һинең алдыңа үтеп сыҡҡыһыҙ ҡара урман осрар, ошо тараҡты ташлаһаң, ул ҡара урман юҡ булыр. Бына быныһы көҙгө: һиңә осоҡрыйы күренмәгән диңгеҙ тап булыр, ошо көҙгөнө ташлаһаң, алдыңдағы диңгеҙ юҡ булыр,— тип, улына тараҡ менән көҙгө бирҙе, ти.

Ҡарабәкәл юлға сыҡҡан. Бер көн барған, икенсе көн барған. Өсөнсө көн бара торғас, ул кеше үтеп инә алмаҫлыҡ шырлыҡлы урманға барып еткән. Ни эшләргә белмәй аптырап торғанда, әсәһе биргән тараҡ иҫенә төшкән. Тараҡты алып ташлаған икән, алдындағы ҡара урман юҡ булған, ти. Шунан юлын дауам итеп, әй бара, әй бара, бер көн бара, ике көн бара, ти. Өсөнсө көн барғанда иге-сиге булмаған диңгеҙгә килеп сыға. Теге көҙгөнө ырғытҡайны, алдындағы икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ юҡ булды, ти. Бер аҙыраҡ барғас, бер тау башында быҙлап янған ут күрә. Яҡыныраҡ барһа, был баҡыр һарай икән. Баҡыр һарайға барып еткәйне, бының ҡаршыһына йүгереп бер ҡыҙ килеп сыға ла:

— Эй егет! Ҡайҙан килдең, шунда кит! Юҡһа, хәҙер дейеү ҡайтыр, башыңды ашар! — ти. Ҡарабәкәл ҡыҙға ҡаршы:

— Мин ҡайтыр өсөн килмәнем! — тип һарай эсенә үтә. Инһә, ни күҙе менән күрһен, өс ҡаҙан ит, өс самауыр сәй ҡайнап ултыра, ти. Ҡыҙ:

— Егет! Әгәр ҙә һин дейеү менән алышырға теләһәң, бына ошо өс ҡаҙан итте, өс самауыр сәйҙе ашап, эсеп бөтөрәһең. Шуларҙы бөтөрә алһаң ғына, һин дейеүҙе еңә алаһың, — ти.

Ҡарабәкәл ашанырға ултыра. Эй ашай, эй ашай, ти, был, ашай торғас, теге өс ҡаҙан аш менән өс самауыр сәйҙе саҡ ашап-эсеп бөтөрҙө, ти. Ашап бөтөргәс, Ҡарабәкәл ҡыҙҙан:

— Дейеү ҡайһы юлдан килә? — тип һорай. Ҡыҙ:

— Ана теге күперҙән! — тип баҡыр күперҙе күрһәтә.

Ҡарабәкәл шул күпер аҫтына барып ятҡан. Бына бер заман дауыл ҡубып, таш яуа, йәшен йәшнәй башлаған. Был ҡот осҡос дауылдан ағастар тамырҙары менән йолҡона, мең йәшәр ҡаялар емерелеп ауа, ти. Шул саҡ дейеү бер өйөр ҡолондо ҡыуып алып килә ята, ти. Дейеүҙең аты, күпергә баҫҡас та бышҡырып, артҡа ташлана. Дейеү:

— Бында Ҡарабәкәл ята тип уйлайһыңмы әллә? Ниңә өркәһең? — тип атын яра башлай. Ҡарабәкәл:

— Әллә ятмаҫ тиһеңме? — тип килеп сыға ла дейеү менән алыша башлай. Эй алышалар, ти, былар, эй алышалар, ти, көн алышалар, төн алышалар, бер көн алышалар, ике көн алышалар. Өсөнсө көн алышҡанда ғына Ҡарабәкәл дейеүҙең һуңғы өсөнсө башын өҙөп төшөргән, ти. Дейеүҙе бәләкәсерәк бер күбә итеп өйөп, ут төртөп үртәп, ҡолон көтөүен әйҙәп, баҡыр һарай эргәһенә килгән, ти. Ҡарабәкәл ҡыҙға:

— Эй, бынау донъялар бушҡа тороп ҡала бит инде! — тигән. Ҡыҙ:

— Ҡайғырма, ҡалмаҫ! — тигән дә, баҡыр һарайҙы өшкөрөп йомортҡаға әүерелдереп, егеттең кеҫәһенә һалған, ти.

Ҡарабәкәл бер көтөү ҡолондо, баҡыр һарай менән ҡыҙҙы алып, артабан юлын дауам иткән. Эй баралар, ти, былар, эй баралар, ти, бара торғас, инде алты көн, алты төн барҙылар, ти. Алтынсы көн быларға тау башында ялтырап торған көмөш һарай күренде, ти. Ба-

рып еткәйнеләр, көмөш һарай эсенән быларға ҡаршы матур ғына бер ҡыҙ йүгереп килеп сыҡты ла:

— Эй егет! Ҡайҙан килдең, шунда кит! Юҡһа, хәҙер дейеү килер, башыңды ашар! — тип һамаҡлай башланы, ти. Ҡарабәкәл:

— Мин ҡайтыр өсөн килмәнем! — тип, батырланып, көмөш һарайға инеп китте, ти. Инһә, ни күҙе менән күрһен, алты самауыр сәй, алты ҡаҙан ит бешеп ултыра, ти. Көмөш һарайҙағы ҡыҙ тағы ла:

— Егет! Әгәр һин дейеү менән көс һынашырға теләһәң, бына ошо алты самауыр сәйҙе эсеп, алты ҡаҙан итте ашап бөтөрөргә тейешһең,— тип әйтте, ти.

Ҡарабәкәл ашанырға тотонған. Эй ашай, ти, был. Тырыша торғас, саҡ-саҡ ашап-эсеп бөттө, ти. Ул хатта үҙенең еңәсәгенә икеләнеп тә ҡуйҙы, ти. Ашап бөткәс, ҡыҙҙан:

— Дейеү ҡайһы юлдан килә? — тип һорай. Ҡыҙ:

— Ана теге күперҙән үтә ул,— тип, көмөш күперҙе күрһәтә.

Ҡарабәкәл, дейеүҙе ҡаршыларға әҙерләнеп, күпер аҫтына барып ятҡан, ти. Бына бер заман дауыл ҡупҡан, ҡара болот эркелеп, ҡояшты ҡаплаған, ер һелкенгән, мең йәшәр ҡаялар емерелеп төшкәндәр, ти. Шул саҡ дейеүҙең аты килеп еткән дә, күпергә баҫыу менән быш-ҡырып, артҡа ташланған. Дейеү:

— Һин нимә, әллә бында Ҡарабәкәл ята тип беләһеңме? — тип, атын яра башлаған, ти. Ҡарабәкәл:

— Әллә ятмаҫтай тиһеңме? — тип килеп сыҡҡан да дейеү менән һуғыша башлаған. Эй һуғышалар, эй көрәшәләр, ти, былар. Алты көн, алты төн һуғышҡандар, көрәшкәндәр, ти. Алтынсы төндә генә Ҡарабәкәл дейеүҙең алтынсы башын өҙөп төшөргән, ти. Дейеүҙе бәләкәйерәк бер кәбән итеп өйөп яндырып, көлөн күккә осорған, ти. Шунан дейеүҙең көтөүен ҡыуып, теге көмөш һарай эргәһенә килгән. Бында уны теге ике ҡыҙ көтөп тора икән, ти. Егет һарай эргәһенә килеп еткәс:

— Эй, был донъялар бушҡа тороп ҡала бит инде! — тигән икән, көмөш һарайҙағы ҡыҙ, ҡайғырма тип, һарайҙы өшкөрөп йомортҡаға әүерелдереп, егеттең кеҫәһенә һалған, ти.

Ҡарабәкәл, ике көтөү ҡолондо әйҙәп, ике ҡыҙҙы, бер баҡыр, бер көмөш һарайҙы алып, юлын артабан дауам иткән, ти. Эй барғандар былар, эй барғандар, туғыҙ көн, туғыҙ төн барғандар, ти. Туғыҙынсы төн барғанда, быларға тау башынан балҡып бер ут күренә, ти. Былар һарайға яҡынлашҡандар. Был — алтын һа-

рай булып сыҡҡан. Барып еткәйнеләр, ти, шул саҡ быларҙың ҡаршыһына бик матур бер ҡыҙыҡай килеп сыҡты, ти. Ул шул тиклем матур, ти, хатта бер бите ай, бер бите ҡояш кеүек, ти! Ҡыҙыҡай килеп сыҡҡан да, иламһырап:

— Эй егет! Ҡайҙан килдең, шунда кит! Юҡһа, хәҙер дейеү ҡайта, башыңды ашар! — тип һамаҡлаған, ти. Ҡарабәкәл:

— Мин ҡайтыр өсөн килмәнем! — тип, батырланып, һарайға үткән. Инһә, ни күҙе менән күрһен, туғыҙ ҡаҙан ит бешеп, туғыҙ самауыр сәй ҡайнап ултыра, ти. Әлеге ҡыҙ, Ҡарабәкәлдең эргәһенә килеп:

— Әгәр дейеү менән көс һынашырға теләһәң, бына ошо туғыҙ ҡаҙан итте ашап, туғыҙ самауыр сәйҙе эсеп бөтөрөргә тейешһең,— тигән, ти.

Ҡарабәкәл ашанырға тотонған. Эй ашай, эй ашай, ти. Нисек кенә тырышмаһын, бер сынаяҡ сәйе менән бер ҡашыҡ һурпаһын эсеп бөтөрә алмаған. Шуны йоторлоҡ та хәле ҡалмағас: «Ах, был юлы булдырып булмаç, ахыры»,— тип хафаланып торған да, алтын һарайҙағы ҡыҙға ҡарап:

— Дейеү ҡайһы яҡтан ҡайта? — тип һораған. Ҡыҙ:

— Ана анау күперҙән ҡайта,— тип, алтын күперҙе күрһәткәс, Ҡарабәкәл шул алтын күпер аçтына барып ятҡан, ти.

Бына бер заман тағы ла дауыл ҡупҡан, йәшен йәшнәгән, ер тетрәп, тауҙар емерелгән, хатта күпер аçтынан ағып ятҡан һыу ҡороған, үләндәр һарғайған. Дейеүҙең аты күпергә баçыу менән бышҡырып артҡа ташланған икән, дейеү:

— Һин нимә, әллә бында Ҡарабәкәл ята тип уйлайһыңмы? — тип атын ярырға тотонған, ти. Ҡарабәкәл:

— Әллә ятмаçтай тиһеңме? — тип килеп сығып, дейеү менән һуғыша башлаған, ти. Эй һуғышалар, ти, былар, эй һуғышалар, ти. Туғыҙ көн, туғыҙ төн һуғыштылар, ти. Туғыҙынсы төнгә кергәндә, дейеүҙең туғыҙынсы башы ғына тороп ҡалған, ти. Шулай ҙа был һаман бирешмәй, Ҡарабәкәл бының иң аҙаҡҡы башын өҙөп төшөрә алмай ҙа ҡуя, ти. Арығандар инде, икеһе лә ҡара тиргә төшкәндәр. Шул саҡ дейеү: «һы-ы-ыыу-у!» — тип ҡысҡырып ебәргән, ти.

Теге алтын һарайҙағы ҡыҙ, йүгереп килеп, дейеүгә көс бөтөрә торған һыуҙы, Ҡарабәкәлгә көс индерә торған һыуҙы биргән, ти. Һыуҙы эскәс тә, дейеү: «Ах, харап иттең!» — тип тәгәрәп киткән, ти. Шунан Ҡарабәкәл дейеүҙе ҙур бер кәбән итеп өйөп яндырып, көлөн

күккә осорған да, көтөүҙе әйҙәп, һарай эргәһенә әйләнеп ҡайтҡан. Һарай эргәһенә килгәс:

— Их, бынау донъялар бушҡа тороп ҡала бит инде! — тигән, ти. Алтын һарайҙағы ҡыҙ:

— Ҡайғырма, егет! — тигән дә, һарайҙы өшкөрөп йомортҡаға әүерелдереп, егеттең кеҫәһенә һалған, ти.

Ҡарабәкәл өс ҡолон көтөүен әйҙәп, өс ҡыҙ менән өс һарайҙы алып, ҡайтыр юлға сыҡҡан. Эй баралар, ти, былар, эй баралар, ти. Бара торғас, бер иге-сиге күренмәгән диңгеҙ ситенә барып еткәндәр, ти. Ҡарабәкәл яҡшылабыраҡ ҡараһа, ике ағаһының ошо диңгеҙ буйында, хәлдәре бөтөп, әлһерәшеп ултырғандарын күреп ҡалған, ти. Ағалары эргәһенә килеп, хәл-әхүәлдәрен һорашып, тамаҡтарын туйҙырған да, баҡыр һарай менән ундағы ҡыҙҙы — өлкән ағаһына, ә көмөш һарай менән ундағы ҡыҙҙы уртансы ағаһына бирергә вәғәҙә иткән, ти. Ҡайтҡас, күңелле итеп туй ҡорорға һөйләшкәндәр, ти. Ошонда йоҡлап хәл алғандар ҙа иртәгәһен өс туған бергәләшеп ҡайтыр юлға сыҡҡандар.

Бер көн килгәндәр, ике көн килгәндәр, килә торғас, Ҡарабәкәлдең ағалары унан көнләшә башлағандар, ти. Ул үҙенә алтын һарайҙағы иң матур ҡыҙҙы алғайны, шуға көнләшәләр, ти. Өсөнсө көн барғанда, тәбиғәттең бик матур бер урынында ял итергә туҡтағандар. Ағалары ошонда Ҡарабәкәлде үлтереп, уның малын да үҙ-ара бүлешеп алырға һөйләшкәндәр, ти. Ҡарабәкәл ҡыуышта йоҡлап ятҡанда, ҡыуыш ауыҙына ике ағаһы ҡылыс бәйләгәндәр ҙә: «Ҡарабәкәл, сыҡ! Яу килә!» — тип ҡысҡырғандар, ти. Ҡарабәкәл ырғып тороп сығайым тиһә, йоҡоло күҙе менән ҡылысты күрмәйенсә, ике аяғын да тубығынан былай ҡырҡҡан да ҡуйған, ти. Шунан ағалары, бының ҡатынын да, байлығын да алып, ашарға хатта бер телем икмәк тә ҡалдырмайынса ҡайтып киткәндәр, ти.

Ҡарабәкәл, ята торғас, бик нык һыуһап киткән, ти. Ул эргәлә генә сылтырап шишмә ағып ятҡанын күргән дә шуға табан шыуыша башлаған. Һыу эсеп, хәл йыйып ятҡанда, үҙенә ике кешенең яҡынлашып килеүен күреп ҡалған. Ныҡлабыраҡ ҡараһа, ул кешеләрҙең береһе аяҡһыҙ, икенсеһе ҡулһыҙ, ти. Ҡулһыҙы аяҡһыҙын йөкмәгән, ти. Ҡарабәкәл:

— Ҡайҙа бараһығыҙ? — тип өндәшкән икән, тегеләр:

— Анау яҡта бер мәскәй әбей бар, ти. Шул кешене йотоп ҡоҫһа, ҡулһыҙ кеше — ҡуллы, аяҡһыҙ кеше —

аяҡлы, күҙһеҙ кеше күҙле булып яңынан тыуа, ти. Шуға китеп барабыҙ,— тигәндәр.

— Улай булғас, мине лә алығыҙ! — тигән Ҡарабәкәл.

Тегеләр, риза булып, Ҡарабәкәлде лә үҙҙәре менән алып киткәндәр, ти. Эй китеп баралар, ти, былар, эй китеп баралар, ти. Өсөнсө төн китеп барғанда, быларға быҙлап ҡына бер ут күренгән, ти. Былар туп-тура шул утҡа табан барғандар. Барып етһәләр, бер бәләкәсерәк кенә өй, ти. Өйгә инһәләр, мейес йыуанлыҡ бер мәскәй әбей ултыра, ти. Сәстәре туҙған, үҙе шундай яман, ти. Былар сәләм биргәндәр ҙә:

— Шулай-шулай, һеҙ зәғиф кешене йотһағыҙ, ағзалары теүәл булып яңынан тыуа икән. Шул дөрөҫмө, әбей? — тип һорағандар, ти.

— Дөрөҫ! — тип яуап биргән әбей. Былар:

— Улайһа, беҙҙе лә йотоп, ҡоҫоп ҡара әле,— тигәндәр, ти.

Мәскәй әбей быға риза булған. Ҡарабәкәл тәүҙә ҡулһыҙ иптәшен йоторға ҡушҡан. Әбей йотоп ебәргән дә, ҡоҫ тигәс, ҡоҫҡан икән, теге һап-һау ике ҡуллы булып килеп төшкән, ти. Хәҙер аяҡһыҙ иптәшен йоторға ҡушҡан, ти. Йотҡан. Ҡоҫорға бойороҡ биргәс, ҡоҫҡан, ти. Аяҡһыҙ иптәше аяҡлы булып тыуған, ти. Хәҙер сират Ҡарабәкәлдең үҙенә. Ул, иптәштәренә ҡарап:

— Был әбей мине йотор йотоуын, әммә ҡоҫоуын белмәйем, ҡоҫормо икән? Әгәр ҙә киреләнһә, быуын-быуынынан тураҡлағыҙ! — тигән, ти.

Үҙенә был әбейҙең үсле икәнен Ҡарабәкәл уның төҫөнә, йөҙөнә ҡарап белгән, ти. Баҡтиһәң, Ҡарабәкәл үлтергән 'дейеүҙәр барыһы ла ошо мәскәйҙең улдары булған икән.

Иптәштәре Ҡарабәкәлде йоторға бойороҡ биргән, ти. Мәскәй әбей йотҡан да, ҡоҫмайынса тик тора, ти. Былар әйтеп ҡарай,— юҡ, һаман ҡоҫмай, ти. Әйтеп-әйтеп тә ҡоҫмағас, былар тегене турарға тотоналар. Эй турайҙар, эй турайҙар, ти. Ҡарабәкәл юҡ та юҡ, ти. Былар, аптырашып, хәлдәре бөтөп, ҡойма буйына сығып ултырғандар икән, шул саҡ бер ҡош килеп: «Сығансыҡ! Сығансыҡ! Сығансыҡ!» — тип ҡысҡыра, ти. Былар: «Был ҡош сәтәкәй бармаҡты әйтмәйме икән?» — тип, инә һалып, мәскәйҙең сәтәкәй бармағын эҙләй башлағандар. Эй эҙләйҙәр, эй эҙләйҙәр, ти. Баҡтиһәң, сәтәкәй бармаҡ сыуал артына ырғып киткән, ти. Былар шунан саҡ табып алып, ярып ҡараһалар, Ҡарабәкәл сәтәкәй бармаҡ эсендә көлөп тик ята икән, ти. Бөтә ере

теүәл, аяҡтары ла бар, ти. Өс дуҫ ҡыуанышып ҡосаҡлашҡандар, ти.

Ҡарабәкәл, ике дуҫын эйәртеп, ағаларын ҡыуа төшкән. Юлда китеп барғанда, быларға бер ҡыуыш осраған, ти. Баҡтиһәң, был ағалары ял итеп киткән ҡыуыш икән. Усаҡ тирәһенә барһалар, көлдән ҡара янып бөткән икмәк табып алғандар. Ҡарабәкәлдең кәләше уның нисек кенә булһа ла ҡайтып етәсәгенә шул тиклем ышанған, ялға туҡтаған һайын сөсө икмәкте көлгә күмеп ҡалдыра барған, ти. Янып күмергә әйләнгән икмәкте күргәс, Ҡарабәкәл: «Алыҫтар икән әле»,— тип иптәштәрен ары алып киткән, ти. Бара торғас, тағы бер ҡыуышҡа тап булғандар. Усаҡ тирәһен ҡараһалар, тағы ла икмәк тапҡандар. Был юлы икмәк, ҡаты булып, һарғайып бешкән, ти. Быны күреп, Ҡарабәкәл: «Яҡынлашып киләбеҙ шикелле»,— тигән, ти. Улар тағы юлдарын дауам иткәндәр, тағы бер ҡыуышҡа барып еткәндәр, тағы ла икмәк тапҡандар. Был икмәк һап-һары ғына, йомшаҡ ҡына булып бешеп ята, ти. Ҡарабәкәл: «Бына-бына барып етәбеҙ икән»,— тигән, ти.

Бара торғас, тағы ла ҡыуышҡа тап булғандар икән, быныһында икмәк бешеп тә өлгөрмәгән ине әле, ти. Ҡарабәкәл: «Бына хәҙер, килеп еттек, тиһәк тә ярай»,— тигән, ти.

Ысынлап та, бер аҙыраҡ барғас ҙур көтөү мал ҡыуып барған ике кеше, артта ҡатын-ҡыҙ ултырған арба күренде, ти. Ҡарабәкәл ағаларын ҡыуып еткән дә, икәүһен дә үлтереп, баҡыр һарайлы ҡыҙҙы малы менән беренсе иптәшенә биргән, көмөш һарайлы ҡыҙҙы малы менән икенсе иптәшенә биргән, ти. Үҙенә алтын һарайлы ҡыҙҙы малы менән алған, ти.

Ҡарабәкәл, бына ошолай итеп тыуған иленә, атаһы йортона ҡайтып төшкән. Әбей менән бабай Ҡарабәкәлдең ҡайтыуына эй ҡыуанғандар, ти. Өс егеттең өсөһө лә ауылды гөрләтеп туй яһағандар, ти. Мине лә саҡырҙылар, мин дә барҙым. Кисә барҙым, бөгөн ҡайттым, бер ҡашыҡ һурпаларын, ике сынаяҡ сәйҙәрен эстем.

## АҠ БҮРЕ

Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың өс улы булған. Быларҙың өсөһө лә бер шәһәрҙә уҡырға булалар. Иң тәүге улы:

— Инәй, мин уҡырға барыр инем,— ти.

— Ярар, балам, бар,— ти ҙә әсәһе, имсәк һөтөн һауып, шуға ҡамыр баҫып, икмәк бешереп бирә. Оло

улы китә. Улы китеп өс көн торғас, уртансы улына китергә ваҡыт етә. Ул да:

— Инәй, уҡырға барам,— ти.

Әбей был улына ла, имсәк һөтөнә ҡамыр баҫып, икмәк бешерә. Был да китә.

Әбей, бабай, кесе улы — өсәү генә тороп ҡалалар. Өсөнсө улы урманға сығып йөрөй. «Мин дә ағайымдар кеүек уҡырға барыр инем»,— тип уйлай ул. Ҡайта ла инәһенән:

— Инәй, мин дә уҡырға барайым,— ти.

Инәһе менән атаһы риза булмайҙар.

— Ҡуй, балам, ике ағайың китте. Һин дә китһәң, беҙ нисек торайыҡ? — тиҙәр.

Был малай көнөн-төнөн илап инәлә. Атаһы менән инәһе, аптырағас, малайҙы ебәрергә булалар, Инәһе тағы ла, имсәк һөтөнә ҡамыр баҫып, икмәк бешереп биреп ебәрә.

Бик матур айлы төн була. Әбей менән бабай йоҡламаҡсы булалар. Төн уртаһы еткәс, бабайҙың әбейен дейеү пәрейе урлап алып китә. Таң ата, бабай уянып китә. Тирә-яғына ҡараһа,— әбей юҡ. Эй эҙләй бабай әбейҙе, эй эҙләй — тапмай. Өс көндән һуң бабайҙың оло улы ҡайтып керә. Бабай илап ултырған була.

— Атай, инәйем ҡайҙа? — ти.

— Балам, бынан өс көн элек инәйеңде дейеү пәрейе урланы.

— Атай, улай булғас, мин эҙләргә сығайым.

Бабай риза була, өс юлдаш биреп, өлкән улын инәһен эҙләргә сығарып ебәрә. Улы сығып китә. Китеп баралар, китеп баралар, ай баралар, йыл баралар, сабата буйы ер баралар. Бара торғас, бер ҡара урманға барып инәләр. Аттарын буш ебәреп, үҙҙәре йәшел үләнгә ял итергә яталар. Бер ваҡыт быларҙың янына бер кеше килә лә:

— Бында килеп, минең үләнемде тапарға кем ҡушты һеҙгә? — ти.

— Кит, ҡауғалама, һин бер үҙең, беҙ күмәк. Юғиһә, үҙеңде атып үлтерербеҙ,— ти егет.

Шул ерҙә был урман кешеһе әпсен-төпсөн уҡый ҙа егеләргә ҡарап өрә. Тегеләр шул урында таш булып ҡаталар.

Бабайҙың уртансы улы ҡайтып керә.

— Атай, инәйем менән ағайым ҡайҙа?

— Инәйеңде дейеү пәрейе алып китте, ағайың инәйеңде эҙләп китте.

— Атай, эҙләргә мин дә барам.

— Ярар, ярар,— ти ҙә бабай алты юлдаш бирә.

Ай китәләр, йыл китәләр, сабата буйы ер китәләр. Баяғы урманға барып сығалар. Аттарын ебәрәләр ҙә үҙҙәре йәшел үләнгә түшәлеп яталар. Улар янына бер кеше килә лә:

— Кем ҡушты һеҙгә, рөхсәтһеҙ, минең урманымды тапап йөрөргә? Етмәһә, үҙегеҙ түшәлеп ятҡанһығыҙ! — ти.

— Кит бынан, һин бер үҙең, беҙ күмәк. Юғиһә, һәләк итербеҙ үҙеңде,— ти егет.

Теге кеше әпсен-төпсөн уҡып, быларға ҡарап өшкөрә. Былар таш булып ҡаталар.

Өйгә бабайҙың иң кесе улы ҡайтып керә.

— Атай, инәйем менән ағайымдар ҡайҙа?

— Эй, балам, балам, инәйеңде дейеү пәрейе урлап алып ҡасты. Уны ағайыңдар эҙләп киткәйнеләр, ҡайтманылар.

— Атай, мин дә барайым.

— Юҡ, балам, һине лә ебәреп, мин бер үҙем ни эшләйем? — ти ҡарт.

Өсөнсө улы инәлеп ялбара. Шунан атаһы риза була.

— Ярар, бар! — тип, туғыҙ юлдаш бирергә була. Кесе улы:

— Миңә юлдаш кәрәкмәй,— ти.

Бер алама ғына ат менеп, мылтыҡ алып юлға сыға. Баяғы урманға барып етә. Атының башын өҫкә шаҡарып бәйләп ҡуя ла үҙе ҡош атырға китә. Егеттең янына теге кеше килә.

— Кем ҡушты һиңә минең урманыма рөхсәтһеҙ керергә? Етмәһә, ҡошомдо атырға йөрөйһөң?

— Юҡ, ағай, атманым әле. Ана, атымдың башын өҫкә шаҡарып бәйләп ҡуйҙым,— ти.

— Бар, атыңды ебәр,— ти теге кеше.— Тик был ҡошто атма; икенсе тирәктәгене ат та, ҡошто бешереп, мине саҡыр,— ти.

Егет атты тышай. Икенсе тирәктәге ҡошто ата. Уны урман ситенә алып барып бешерә. Шул ваҡыт бының янына бер аҡ бүре килә. Егет ашты бүлә, ашарға ултыралар. Егет уйланып ултыра. Ашты ашап бөткәс, аҡ бүре:

— Егет, ниңә уйланаһың? — тип һорай.

— Миңә бер ҡунаҡ килергә тейеш ине,— ти егет.— Ул килһә, минең итем юҡ, ашап бөтөрҙөк,— ти.

— Эй, егет, ҡурҡма. Ул ҡунаҡ бына мин,— ти ҙә бүре егеттең хәлен һораша:

— Егет, һин ни эшләп был яҡҡа килеп сыҡтың?

— Минең инәйем бар ине. Уны дейеү пәрейе урлап алып киткән. Ағайымдар уны эҙләп киткәндәр.

— Һин ағайыңдарҙы таныйһыңмы?

— Таныйым, улар ҡайҙа һуң?

Аҡ бүре таш булып ҡатҡан бер кешегә күрһәтә:

— Был һинең ағайыңмы?

— Эйе, минең ағайым.

Бүре эпсен-төпсөндө кире өрә. Ағаһы шунда уҡ тороп ултыра.

— Был һинең ағайыңмы? — ти бүре, икенсеһенә күрһәтеп.

— Эйе, минең ағайым.

Тағы эпсен-төпсөн уҡып өрә бүре. Был ағаһы ла терелә. Егет, рәхмәттәр уҡып, ағаларын күл ситенә алып китә. Ҡыуыш ҡороп, уларҙы шунда урынлаштыра ла үҙе китә.

Ай китә, йыл китә, сабата буйы ер китә. Бара торғас, бер бейек тау күрә. Шул тау эргәһендә туҡтай. Тауҙың башына менә алмай. Егет илай. Бер заман күк күкрәп, ҡуйы ҡара болот ҡалҡа. Егеттең янына бер ҡош килә лә:

— Егет, һин ни эшләп һыҡтап ултыраһың? — ти.

— Бына мин ошо тауҙың башына менә алмай ултырам.

— Әйҙә, ултыр миңә, мин мендереп ташлармын,— ти ҡош.

Егет ултыра. Күҙ асып йомғансы егет тау башында була. Ҡош үҙ юлына, егет үҙ юлына китә. Бара торғас, ул бер өйҙә ут күрә. Шул өйгә барып тәҙрәһенән ҡарай. Ни күҙе менән күрһен, унда ҡырҡ ҡол әҙәм ите йыуа. Егеткә ҡаршы ишектән ҡояш күҙле ҡыҙ сыға ла:

— Һин ҡайҙан килдең, егет? — тип һорай.

— Инәйемде дейеү пәрейе урланы, шуны эҙләп килеп сыҡтым.

Ҡыҙ егетте өйгә алып керә. Ашаталар, эсерәләр, туйҙырғансы йоҡлаталар. Егет иртәнсәк тора ла тағы юлға сыға. Тағы бер өйгә барып эләгә. Тәҙрәнән ҡараһа, ҡырҡ ҡол әҙәм ите йыуа. Егет ишеккә килә. Ишектән уға ҡаршы бер ҡыҙ сыға ла:

— Егет, ни эшләп йөрөйһөң? — тип һорай.

— Инәйемде дейеү пәрейе урлағайны, шуны эҙләп килдем,— ти егет.

Егетте ашаталар, эсерәләр, йоҡоһо туйғансы йоҡлаталар. Иртәгеһен йоҡонан тора ла, был тағы юлға китә.

Ай китә, йыл китә, сабата буйы ер китә. Бара тор-

ғас, бер өйгә етә. Тәҙрәнән ҡараһа, унда ҡырҡ ҡол әҙәм ите йыуа. Ишектән бер ҡатын килеп сыға ла:

— Эй, егет, һин ни эшләп йөрөйһөң бында, нисек килеп сыҡтың? — ти.

— Инәйемде дейеү пәрейе урлап китте. Мин шуны эҙләп йөрөйөм.

Был ҡатын егеттең инәһе икән, тик егет уны танымай, инәһе танып ҡала. Таныһа ла, үҙен асмай.

Егетте ашаталар, эсерәләр, йоҡоһо туйғансы йоҡлаталар. Теге ҡатын егеткә бейек тау башына алтмыш ботло герҙе мендерергә ҡуша. Әбей герҙе тауҙан тәгәрәтә. Егет герҙе урынынан да ҡуҙғата алмай. Әбей икенсе ҡатка тәгәрәтә. Егет, герҙе күтәреп алып, тауҙың яртыһына еткерә. Әбей өсөнсө мәртәбә тәгәрәтә. Егет герҙе күтәреп ала ла тауҙың өҫтөнә тәгәрәтеп ебәрһә, гер әбейҙе уҙып барып туҡтай. Егетте өйгә алып керәләр, туйғансы ашаталар, эсерәләр, йоҡлаталар. Егет торғас, бер беҙ бирәләр.

— Бына ошо беҙҙе теге бүлмәлә йоҡлап ятҡан дейеү пәрейенең үксәһенә батыр,— тиҙәр. Егет инә лә беҙҙе батыра.

— Әҙәм заты булһа, ашатығыҙ! — ти дейеү.

— Миңә һинең ашатыуың кәрәкмәй,— ти егет.

Дейеү пәрейе аҡыра:

— Алышмы, бирешме?

Егет:

— Алыш! — ти.

Дейеү менән егет тышҡа сығалар. Тәүҙә дейеү егетте алып ергә бәрә. Егет табандан ергә бата. Дейеү икенсе тапҡыр бәрә, егет билдән ергә бата. Өсөнсөһөндә егет дейеүҙе алып бәреп ебәрһә, дейеү муйындан ергә бата. Дейеү:

— Дауа килтерегеҙ! — тип ҡысҡыра.

Ике төрлө дауа була: беренсеһе — хәл бөтөрә торған, икенсеһе — көс кертә торған. Хәл бөтөрә торған дауаны ялсылары дейеүгә эсерәләр, көс кертә торғанды егеткә бирәләр. Тегеләр тағы көрәшә башлайҙар. Дейеү пәрейенең хәле бөтә. Егет уны күтәреп бәрһә, дейеү муйынынан ергә бата. Егет ҡылысын алып дейеүҙең муйынын өҙә саба ла ҡуя. Шул ерҙә инәһе килеп үҙен таныта. Былар бик шатланышалар, егетте ашаталар, йоҡоһо туйғансы йоҡлаталар.

Иртәгеһен егет һауаға аҫылған машинаны күрә. Епте ҡырҡһа, машина ергә ултыра. Инәһен шул машинаға ултырта ла егет ҡайтырға сыға. Ҡояш-ҡыҙ янына килә, уны ла ала. Шунан Ай-ҡыҙ янына килә, уны ла ултыр-

тып ала. Ай китә, йыл китә, сабата буйы ер китә. Баяғы ҡара урманға килеп туҡтай. Уның янына аҡ бүре килә. Егет Ай-ҡыҙҙы, Ҡояш-ҡыҙҙы, инәһен теҙеп ҡуя ла:

— Йә, дуҫ, ҡайһыһын алырға теләйһең? — тип һорай.

— Ай ҡыҙы ла ярай,— ти бүре.

Егет ағаларын саҡырып ҡунаҡ итә.

Шунан былар ҡайтып китәләр, егет инәһен атаһына тапшырып, үҙе Ҡояш ҡыҙы менән йәшәй, ти.

## АҠТЫМ МЕНӘН ҺӘМӘНДИР

Борон-борон заманда булған ти, бер әбей. Әбейҙең Аҡтым исемле бер ҡыҙы менән Һәмәндир исемле бер улы булған. Ҡыҙҙың сәсе бер тыны алтын, бер тыны көмөш булған.

Бер көн әбей ҡунаҡҡа киткән. Әсәләре киткән көндө Һәмәндир батыр һунарға йыйына башлай. Ағаһы һунарға китергә йөрөгәндә, Аҡтым уға:

— Ағай, һин һунарға барма, мин төш күрҙем,— тигән.

— Ул ниндәй төш? — тип һораған ағаһы.

— Ҡаҙан тулы баш, тирә-яғы шеш,— тигән ҡыҙ. Уға ағаһы:

— Төш кире килә ул,— тигән дә, Елтура тигән атын һарайға бикләп, Аҡтымды йәшереп, һунарға сығып киткән.

Бер аҙҙан ялмауыҙҙар килгәндәр ҙә соҡсона башлағандар. Бер ялмауыҙ:

— Бында кеше башы бар,— тигән.

Улар, эҙләп йөрөй торғас, Аҡтымды табып алғандар. Бик матур булғанға уны ашамағандар, бисә итеп алырға булғандар. Елтураны һарайҙан алып сығып, Аҡтымды, сәсенән урап-урап, Елтураға мендереп, алып киткәндәр.

Ул арала Аҡтымдың ағаһы ла, әсәһе лә ҡайтҡан. Бик аптырашҡандар. Шул саҡ Һәмәндир:

— Мин һунарға киткәндә, Аҡтым төш күрҙем тигәйне. Мин, төш кирегә була, тинем дә киттем. Мин уны эҙләйем,— тигән.

— Балам, унда нисек бараһың? Унда ҡарлуғас үтмәҫлек ҡара урман бар. Унан нисек сығырһың? Унда Уяулының күк бүреһе бар, унан нисек ҡотолорһоң?

Унда үтә алмаҫлыҡ Күк ятыу бар, унан нисек сығырһың? — тигән әсәһе.

— Сығырмын әле... Тик ҡайһы атты менәйем икән, әсәй? — тип һораған улы.

— Бар ҙа ҡорогондо ҡолторат, йүгәнеңде сылтырат, ҡайһы ат әйләнеп ҡараһа, шуны менерһең,— тигән әсәһе.

Һәмәндир, өйөр араһына барып, ҡорогон ҡолторлатҡан, йүгәнен сылтырлатҡан. Уга бер Күкбуҙат әйләнеп ҡараған. Атты менеп, Һәмәндир ҡулына ике түкәләк* икмәк алган да береһен уңга, береһен һулга ташлаған. Икмәктәр тәгәрәп киткән, Һәмәндир уларҙың уртаһынан бара икән. Китеп бара, китеп бара, артына әйләнеп ҡараһа,— бер ҡарыш юл үткән.

Аҡтымдың бер бите ай, бер бите көн булған. Бер саҡ уның йөҙөнөң яҡтылығы Һәмәндиргә төшкән. Һәмәндир ошо яҡтыға ҡарап киткән. Бара торғас, ҡарлуғас үтә алмаҫ ҡара урманға тап булған. Егет бик ныҡ бошонған. Шул саҡ аты телгә килгән дә:

— Бошонма, егет, ҡылыс менән ҡый,— тигән.

Егет ҡара урманды ҡылыс менән ҡыйып үткән. Урманды үткәс, Күк ятыуға барып еткәндәр. Егет тағы ла бошонған. Аты телгә килеп:

— Бошонма, егет, минең ике яғыма таш баула ла, йәлләмә, һуҡ та һуҡ,— тигән.

Егет аты әйткәнен эшләгән. Күк ятыуҙан да ҡотолоп киткәндәр, ти, былар. Бара биргәс, Уяулының күк бүреһе олой башланы, ти. Һәмәндир батыр Аҡтымды күреп ҡалган да, уның алдына сыҡмаҡсы булып, ары сапҡан, бире сапҡан. Күк бүре олоп торғас, Күкбуҙат Аҡтымдың алдына бер ҙә сыға алмай икән. Аҡтым ағаһын күреп ҡалган да:

— Күкбуҙаттың аҡ күпереген ҡойма, ағай! — тип ҡысҡырған.

Һәмәндир батыр, янын алып, күк бүрене уҡ менән атып үлтергән. Быны күреп, ялмауыҙҙар Һәмәндиргә ата башлағандар. Эй, аталар, эй, аталар,— Һәмәндиргә тейҙерә алмайҙар, ти. Һәмәндир батырҙың донъяла бер кемдә лә булмаған уҡтары булған. Ул шул уҡ менән ялмауыҙҙарға атып тик тора икән. Ялмауыҙҙарҙы үлтереп бөтөп, Һәмәндрир, Елтураға мендереп, Аҡтымды алып ҡайтып киткән.

Ҡайтһалар, әсәләре үлергә ултыра икән. Улы менән ҡыҙын күргәс, шатлыҡтан үлгән дә ҡуйған, ти.

Аҡтым менән Һәмәндир икәү донъя көтәләр, ти.

* Түкәләк — түңәрәк.

# ХӘСӘН МЕНӘН ХӨСӘЙЕН

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер ҡатын менән унның бик яратҡан ире. Көндәр үткән, айҙар үткән, йылдар үткән,— быларҙың бер балалары ла булмаған. Берҙән-бер көндө ҡарт менән ҡарсыҡ йылға буйында донъяның матурлығына һоҡланып, үҙҙәренең балалары юҡлығына ҡайғырып йөрөйҙәр икән. Ҡатыны:

— Ҡартыҡайым, беҙҙең улыбыҙ буласаҡ, мин шулай тоям,— тип әйтеп тә бөтмәгән, ҡарсыҡҡа, тау һелкетеп, ер тетрәтеп, бер үгеҙ ташланған, ти. Ҡарт, был хәлде күреп, үгеҙҙең мөгөҙөнән тотоп ала ла бик йыраҡҡа борғап* ебәрә. Үҙенең шул хәтле ғәйрәтен күреп, ҡарт үҙе лә аптырап ҡала. «Бәй, ни эшләп әле мин шул тиклем көсөмдө әрәм итеп, файҙаһыҙға тик ятам!» — ти ҙә, буласаҡ улына хат яҙып ҡалдырып, ҡарсығының илауына ҡарамаҫтан, сит илдәргә сығып китә.

Бара икән был, бара икән, бара торғас, дүрт яҡтан килеп ҡушылған дүрт юл сатында туҡтап ҡала. «Инде ҡайһы юл менән китәйем икән?» — тип торғанда, «Һул яғынан кит, һул яғынан»,— тип, серекәй безелдәүе кеүек кенә бер тауыш ишетелә. Бабай, ошо серле тауышҡа ҡолаҡ һалып, һул яҡ юлдан китеп тә барған. Бара икән был, бара икән, бара торғас, бер ут күреп, шул утҡа табан юл тотҡан.

Ҡарт оҙон юлдар үтеп, инде ял итәйем, тип бер өйгә барып инһә, ни күҙе менән күрһен, урындыҡта убырлы ҡарсыҡ ята, ти.

— Әссәләмеғәләйкүм! — ти ҡарт барып кереү менән.

— Сәләмең булмаһа, ҡарт, бер ҡабып, бер йотор ҙа ҡуйыр инем үҙеңде,— тигән ҡарсыҡ.

— Шулаймы ни? Әйҙә, улай булғас, көс һынашабыҙ,— тигән ҡарт, елләнеп китеп.

— Оҙаҡламай ике улым ҡайтыр, шулар менән генә һынашып ҡарарһың инде. Шунан тағы күҙ күрер,— тип, әбей көтөргә ҡушты, ти.

Бер заман ҡарт, мыҡты кәүҙәле ике егеттең ауыр баҫып килгәнен күреп, еңдәрен һыҙғанып, көрәшкә әҙерләнә башланы, ти. Тегеләр килеп еткәс, башта кесеһе менән көрәшеп алып китте, ти. Бәй, ҡарт ни тиклем генә ғәйрәтләнеп тотонмаһын, егетте еңә алманы, ти.

---

* Борғап — быраҡтырып.

Егет быны күтәреп алып һауаға сөйөртөп ебәргәйне, килеп төшкәндә ҡарттың ҡоро һөйәк ватыҡтары ғына тороп ҡалды, ти. Шунан ни ҡарттың һөйәктәрен һарай аҫтына өйөп ҡуйҙылар, ти, былар.

Әйҙә, ҡарттың һөйәктәре өйөлөп ята торһон, ҡарсығы ни эшләй икән, шуны беләйек.

Ҡарт китеп, аҙмы-күпме тормаған, ҡарсыҡ ике ул тапҡан. Беренсеһенә Хәсән, икенсеһенә Хөсәйен тип исем ҡушҡандар. Малайҙар, өс көндә өс йәш үҫеп, ун биш көндә ун бишкә етеп, егет ҡорона ингәндәр.

Берҙән-бер көндө уйнап йөрөгәндә, улар урамды тупраҡ менән быуып ташлағандар, ти. Еңгәләре һыуҙан ҡайтып килгәндә, өйөлгән тупраҡты ашатлап сығайым тиһә, теге тупраҡ ишелеп китеп, йығылып һыуын түккән, ти.

— Әзмәүерҙәй башығыҙ менән бында юҡты юҡҡа бушатып көн уҙғарғансы, йүнегеҙ булһа, барып, атайығыҙҙың һөйәген йыйып күмеп ҡуйыр инегеҙ! — тип һуҡыранып киткән, ти, еңгәләре.

Егеттәр, быны ишетеп, йүгерешеп ҡайтып ингәндәр ҙә инәләренән:

— Инәй, беҙҙең атайыбыҙ ҡайҙа? — тип һоранылар, ти.

Уландары бик үтенеп һорағас, инәләре теге хатты сығарып бирҙе, ти. Унда: «Ҡыҙ булһа ла, ул булһа ла минең һөйәгемде йыйып күмергә барһын»,— тип яҙылған булған. Ата васыятын уҡығас, егеттәр йыйынып, сығып та киткәндәр.

Киттеләр, ти, егеттәр ил гиҙеп. Халыҡтан һораша-һораша баралар, ти. Айҙар, йылдар эҙләй торғас, барып сығалар былар теге убырлы ҡарсыҡтың өйөнә. Барып керһәләр, теге ҡарсыҡ өйҙә ултыра икән.

— Шулай-шулай, беҙ атайыбыҙҙы юғалттыҡ, нисек табырға инде? — тип зарҙарын һөйләй башлауға, ҡарсыҡ:

— Атайығыҙҙы ана тышта ял итеп ятҡан минең улдарым үлтерҙе. Сәбәбен, бар, үҙҙәренән һорағыҙ,— тип сығарып ебәрҙе, ти.

Егеттәр сыҡһа, ысынлап та, тын алғанда үҙҙәренә тартып торған ғәйрәтле ике егет ял итеп ята, ти. Шул ерҙә егеттәр araһында киткән алыш, хатта донъя яңғырап торған. Убырлы ҡарсыҡтың улдары алып һуҡҡан һайын, Хәсән менән Хөсәйендең аяҡтары ергә батып-батып китә икән. Улар шул арала бер аҙ хәл алып, тағы ла ныҡлабыраҡ тотонһалар, убырлы ҡарсыҡ улдарының хәлдәре бөтөп, тындары ҡурыла башлаған, ти:

ерҙән күс алырға ирек бирмәй, һауала сөйөп йөрөтәләр икән былар убырлы малайҙарын.

Шулай итеп, быларҙы арытып, хәлдән тайҙырып, баштарын сабып өҙөп, убырлы ҡарсыҡтың көлөн күккә осороп, һарай аҫтындағы тауҙай һөйәктәр араһынан аталарының башын эҙләй башлағандар, ти. Эҙләй торғас, маңлайына ғәрәпсә исеме яҙылған башты табып алалар ҙа, шуға сағыштырып ҡарап, бөтә һөйәктәрен йыйып күмәләр.

Хәсән менән Хөсәйен шунда уҡ ял итергә ятып, бер йома* йоҡлап, хәл алғас, тағы ла сығып китteләр, ти. Бара торғас, юлда халыҡ илаған тауыш ишетеп, туҡтарға мәжбүр булдылар, ти, былар. Үтеп барыусы бер әбейҙән:

— Әбей, ни булды, ниңә халыҡ һыҡтай? — тип һорауға, әбей:

— Ана теге күлдәге аждаһа халыҡтың ҡыҙҙарын ашап бөтөрөп бара. Бөгөн хандың ҡыҙын ашағас, тағы ла йөҙ ҡыҙҙы күл ситенә илтеп ташларға тейештәр,— тип аңлатып бирҙе, ти.

Бер заман ҡыҙҙы, аҡ әйбергә төрөп, күл ситенә илтеп ташлауҙары булған, донъя яңғыратып, күлде икегә ярып, аждаһа килеп сыҡҡан. Хөсәйен, күл ситенә барып, төрөлгән ҡыҙҙы һаҡлап тора икән. Аждаһа тыны менән һура-һура яҡынлаша башлағас, Хөсәйен, әҙерләнеп тороп, аждаһаны кинәт муйынынан эләктереп алған да, ҡороға тартып сығарған. Шунан тын алырға ирек бирмәйенсә һөйрәп килтергән дә, бер тауҙың мөйөшөн күтәреп, аждаһаны ҡыҫтырып ҡуйған. Шунан ҡыҙҙы алып, ханға барған.

Хан һарайы янында, Хөсәйендең аждаһа менән һуғышҡанын күреп, бөтә халыҡ таң ҡалып тора икән. Ҡыҙҙы алып килгәс, Хөсәйенде күтәреп алғандар. Хан, шатлығынан, быға бөтә байлығын биргән. Хөсәйен, ағаһы Хәсәнде саҡыртып, хандың икенсе бер ҡыҙын алып, бергә йәшәргә тәҡдим иткән икән, Хәсән быға ризалашмаған. «Кеше ҡулы, кеше көсө менән яулап алынған бәхет миңә кәрәкмәй»,— тигән дә, үҙ бәхетен юллап, ары сығып киткән.

Бара икән был, бара икән, бара торғас, бер ауылға барып ингән. Ауыл халҡының йөҙө һарыға һабышып, үҙе һыуһыҙлыҡтан мурап** бөткән булған. Был хәлде

---

* Йома — был урында бер аҙна мәғәнәһендә.

** Мурап — һыуһыҙлыҡтан кибеп.

күреп, Хәсәндең асыуы ҡабарған. Бөтә донъяны киптереп, кешеләрҙе интектергән яуыз затты уның тиҙерәк тапҡыһы килгән.

— Ҡайҙа ята һуң ул яуыз нәмәкәй? — тип һораған үтеп барыусы кешеләрҙән.

— Ҡойо төбөндә һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш иргәйел урынлашып алған да халыҡты ҡойо ҡырына килтермәй, уттар сәсеп ята,— тигәндәр кешеләр.

— Эй, батыр егет, ғүмереңде юғалтмай*, арыҫландай шуға ташланып, беҙҙе был бәләнән ҡотҡарһаң ине! Яраланһаң, яраңды халыҡтың саф күҙ йәше менән төҙәтер инек; арыһаң, һылыу ҡыҙҙан һый-хөрмәт әҙерләтеп, үҙеңдең элекке көсөң кире ҡайтҡанға тиклем ял иттерер инек,— тип үтенеп һорағандар, ти.

Хәсән, халыҡ һүҙен тыңлап, уларҙың тилмереп ҡарап торған меңдәрсә күҙҙәренән көс алып, теге төпһөҙ ҡойоноң төбөнә төшөп киткән. Төшөп бара, төшөп бара, ти, был, инде төшөп еттем тигәндә генә, теге ҡарт үҙенең оҙон ҡыл һаҡалы менән быны уратып та алған. Башланған, ти, шул ваҡытта һаҡалы мең ҡарыш, үҙе бер ҡарыш иргәйел менән Хәсән араһында ҡаты көрәш. Хәсән хәнйәре менән һаҡалдың ҡылын берәмберәм ҡырҡа икән, ҡырҡҡан һайын, йәшен йәшнәгәндәй, ут сәселеп тора икән! Шулай итеп көрәшә торғас, ҡарт:

— Һиңә ни кәрәк, батыр егет? Бөтәһен дә бирәм, тик һаҡалымды ғына ҡырҡып бөтмә! — тип инәлә башлаған. Хәсән:

— Халыҡ йәнен ҡыйыуың өсөн, уларҙың ҡан йәшен йылғалай ағыҙыуың өсөн юҡ итәм мин һине, яуыз! — тип, тегенең һуңғы һаҡалын да өҙөп ташлаған.

Шунан Хәсән батыр ҡарттың баҫтырыҡтай һаҡалын иңбашына һалып, үҙен бәләкәй балалай ҡулынан етәкләп, шишмәнең башын табырға алып китте, ти. Был ҡарттың бөтә көсө, бөтә аҡылы һаҡалында булған икән. Һаҡалы өҙөлгәс, ҡаршылаша ла алмаған, йылғаның башын күрһәтерлек аҡылы ла ҡалмаған, ти. Баралар икән былар, бара торғас, һыу башына барып сыҡһалар, теге ҡарт шишмә ҡойоһон тау дәүмәле таш менән тығып ҡуйған икән. Хәсән ташты ҡуптарып ала ла, ҡарттың үҙен ошонан йыраҡ түгел бер түбә башына мендереп, теге таш менән баҫтырып ҡуя. Шунан ошо ташҡа баҫып түбән ҡараһа, ҡороған шишмә сайынан,

---

* Ғүмереңде юғалтмай — ваҡытыңды бушҡа сарыф итмәй, ҡыҙғанмай тигән мәғәнәлә.

дарья һымаҡ тулҡынланып, топ-тоноҡ йылға ағыуын, бөтә йәнлек, ҡош-ҡорттоң йылғаға ятып һыу эсеүен, тупраҡ та дым тартып, ер өҫтөн йәм-йәшел хәтфә болондар ҡаплап алыуын күргән, ти.

Яңынан йән өрөлгән донъяға хозурланып, Хәсән халыҡ янына ҡайтҡан. Халыҡ уға бер аҡыллы ҡыҙҙы кәләш итеп димләгән. Ҙур итеп туй яһағандар. Шунан былар Хөсәйен менән үҙ араһы илселәр аша хәбәрләшеп-килешеп, ике илде бер иткәндәр, әсәләрен дә үҙ ҡырҙарына алдыртып, шат-рәхәт йәшәй торған донъя ҡороп ебәргәндәр. Әле булһа шунда күңелле йәшәп яталар, ти, былар барыһы ла.

## АЛСУҘАР МЕНӘН КИРСУҘАР

Борон заманда бер бик ҡурҡаҡ ҡарт булған. Шундай ҡурҡаҡ икән был ҡарт, кис менән тәһәрәткә сыҡҡанда ла ҡатынын алып сыға икән.

Бер көндө был ҡарт, батырланып, тышҡа кис менән үҙе генә сығып киткән. Үҙ йомошон йомошлап ултырғанда, уның эргәһенә ете ҡуңыҙ килеп төшкән. Ырғып торайым тиһә, тиҙәгенә ултырып, ете ҡуңыҙҙы ла үлтергән. Шунан ул батырланып өйөнә килеп ингән.

— Ҡатын, мин бик батыр, көслө икәнмен дә баһа! Бер юлы ете дейеү үлтереп керҙем. Былай булғас, дейеүҙәр менән көс һынашырға китәм, өйҙә ятыу ярамаҫ,— тигән.

Шунан ул кузнисҡа бара ла:

— Һин миңә бер ай һуғып бир, шул айға «Был кеше ете дейеү үлтерҙе» тип яҙ,— ти.

Тимерсе уға, ул әйткәнсә, ай һуғып, айға: «Был кеше ете дейеү үлтерҙе, бик ғәйрәтле был кеше»,— тип яҙып бирә.

Шунан был ҡурҡаҡ ҡарт дейеүҙәр менән көс һынашырға сығып китә. Китер ваҡытында ҡатынына әйтә:

— Ҡатын,— ти,— мин киткәс, һин ике ир бала табырһың. Шул балаларҙың береһенә Алсуҙар тип, икенсеһенә Кирсуҙар тип исем ҡушырһың,— ти.— Алсуҙар ала айғыр өйөрөнә барып, Кирсуҙар кире айғыр өйөрөнә барып, ҡороҡтарын ҡылтыратһындар, йүгәндәрен шылтыратһындар,— ти.— Ҡайһы ат ҡараһа, шуны тотоп менһендәр ҙә юлға сыҡһындар,— ти.

Шулай итеп, ҡарт китә. Бара, бара, бара торғас, бер йылҡы көтөүенә барып етә.

— Кем көтөүе был? — тип һорай ул көтөүселәрҙән.

— Дейеүҙәрҙең көтөүе был,— тип яуап бирәләр уға көтөүселәр.— Ә һин ҡайҙа бараһың? — тип һорайҙар үҙенән.

— Дейеүҙәрегеҙ менән көс һынашырға барам! — тип яуап бирә ҡарт.

— Беҙгә килгән ҡунаҡ бер йылҡының итен ашап, тиреһен ҡайыш итеп биреп китә,— тиҙәр көтөүселәр.

— Ярай, ашайым,— ти был.

Теге көтөүселәр шунда бер йылҡыны тотоп һуялар ҙа бөтә итен ҡаҙанға һалып бешерәләр.

Был ҡарт йылҡы итенең бер ҡабырғаһын да ашап бөтөрә алмай, тиреһен дә ҡайыш итә алмай.

Көтөүселәр: «Был ҡарт дейеүҙәргә ем була икән»,— тип ҡалалар.

Ҡарт артабан китә. Бара, бара, бара торғас, бер үгеҙ көтөүенә осрай.

— Кемдең үгеҙ көтөүе был? — тип һорай көтөүселәрҙән.

— Дейеүҙәрҙең көтөүе был,— тип яуап бирәләр уға үгеҙ көтөүселәре.— Ә үҙең ҡайҙа бараһың?

— Дейеүҙәрегеҙ менән көс һынашырға барам!

— Беҙгә килгән ҡунаҡ бер үгеҙҙең итен ашап, тиреһен ҡайыш итеп биреп китә,— тиҙәр уға көтөүселәр.

— Ярай, ашайым,— ти уларға ла ҡарт.

Теге көтөүселәр шул арала бер үгеҙҙе йығып һуялар ҙа итен бөтөнө менән ҡаҙанға һалалар, тиреһен ҡартҡа эшкәртергә бирәләр.

Ҡарт үгеҙ итенең бер ҡабырғаһын көскә-көскә ашап бөтөрә, ә тирене ҡайыш итә алмай.

Был көтөүселәр ҙә: «Был ҡарт дейеүҙәргә ем генә була икән»,— тип ҡалалар.

Ҡарт ары китә. Бара, бара, бара торғас, бер ҡуй көтөүенә осрай.

— Кем көтөүе был?

— Дейеүҙәрҙең көтөүе был, үҙең ҡайҙа бараһың?

— Шул көтөүегеҙҙең хужаһы дейеүҙәр менән көс һынашырға барам!

— Беҙгә килгән ҡунаҡ бер ҡуйҙың итен ашап бөтөрөп, тиреһен ҡайыш итеп биреп китә.

— Ярай, була ул.

Көтөүселәр шул арала бер ҡуйҙы тотоп алалар ҙа, һуйып, итен ҡаҙанға бешерергә һалалар, тиреһен ҡартҡа ҡайыш итергә бирәләр.

Ҡарт бында ла бер ҡабырғанан артыҡ ашай алмай, тирене лә ҡайыш итә алмай.

Шунан артабан китергә була.

— Алыҫмы әле дейеүҙәр йорто? — тип һорай теге көтөүселәрҙән.

— Ошо тауҙың башынан күренеп тора,— тиҙәр уға.

Ҡарт шул тауҙың башына менеп китә. Ысындан да унан дейеүҙәрҙең бөтә йорттары күренеп тора икән. Ҡарт дейеүҙәр йортона барып етә. Уның ҡаршыһына дейеүҙәрҙең эте өрөп килеп сыға.

Эт тауышын ишеткәс, өйҙә дейеүҙәрҙең инәһе ҡыҙына әйтә:

— Ҡыҙым, ти, бар сығып ҡара әле: эт ҡойроғон күтәреп өрәме, әллә бот араһына ҡыҫып өрәме? — ти.— Күтәреп өрһә, ем килер; бот араһына ҡыҫып өрһә, яу килер,— ти.

Ҡыҙы сығып ҡарай. Ҡараһа, эт ҡойроғон күтәреп өрә.

— Күтәреп өрә, инәй,— ти ҡыҙ кереп.

— Улайһа, ҡурҡыныс юҡ икән,— ти инә дейеү.

Ҡарт ул арала өйгә килеп инә.

— Дейеүҙәр йорто ошомо?

— Нимә кәрәк һиңә?

— Мин һеҙгә дейеү менән көс һынашырға килдем!

— Әйҙә, тәүҙә ҡунаҡ бул,— ти дейеү ҡатыны.

— Юҡ, һин миңә ашарға килтер, ҡунаҡ булып торорға ваҡытым юҡ,— ти ҡарт.

Шулай тиеүгә дейеүҙең ҡатыны ҡартты ғәйеп итте лә ҡуйҙы, ти: тереләй йотто, ти, тегене.

Шул арала ҡарттың өйөндә ике ир бала тыуа. Улар, оҙаҡламай, йүгерешеп йөрөй башлайҙар, көслө булып үҫәләр. Урамға сығып, балаларға уйнап ҡына һуҡһалар ҙа, теге балалар йә үлә, йә имгәнәләр ҙә ҡуялар икән. Халыҡ быларҙан бик ек күрә башлаған.

— Әгәр һеҙ шулай бик көслө булһағыҙ, дейеүҙән барып атағыҙҙың үсен алығыҙ! — тигәндәр уларға бер көндө. Был һүҙҙе ишеткәс, балалар ҡайтып инәләренән һорайҙар:

— Инәй, беҙҙең атайыбыҙ бармы? — тиҙәр.

— Юҡ, үлде,— тип яуап бирә инәләре. «Әле аталары тураһында дөрөҫөн әйтергә ярамаҫ,— тип уйлай.— Быуындары ҡатһын әле» — ти.

Әйтмәгәс, малайҙар уйға ҡала: «Нисек әйттерергә?»

Шулай йөрөй торғас, бер көндө береһе әйтә:

— Әйҙә, беҙ инәйҙән ҡулына ҡурмас тоттороп һорайыҡ, ти.

Шулай хәйлә ҡороп, инәләренән ҡурмас ҡурҙырта-

лар былар. Инәләре ҡурмас ҡура, балаларына туҫтаҡ менән килтерә. Тегеләр алмай.

— Усыңа һалып бир,— тиҙәр.

Инәләре ҡурмасты усына һалып килтергәйне, ҡайнар ҡурмаслы ҡулын ҡыҫалар ҙа тоталар былар. Шунан:

— Әйт, ҡайҙа беҙҙең атайыбыҙ? — тиҙәр.

— Әйтәм, әйтәм, берүк ҡулымды ебәрегеҙ,— тип ялына инәләре.

Малайҙар инәләренең ҡулдарын ебәрәләр.

— Атайығыҙ бар ине шул,— ти инәләре.— Дейеү менән көс һынашырға тип китте лә шунда ғәйеп булды. Һеҙгә эҙләргә барһындар, тине. Һеҙ әле йәш инегеҙ. Шуға күрә мин быға тиклем әйтмәй торҙом. Хәҙер инде атайығыҙҙы эҙләп китергә мөмкин,— ти.— Һин, Алсуҙар, ала айғыр өйөрөнә барып, бер ат ал. Ә һин, Кирсуҙар, кире айғыр өйөрөнә барып, үҙеңә ат ал,— ти.— Ҡороҡтарығыҙҙы ҡылтыратығыҙ, йүгәндәрегеҙҙе шылтыратығыҙ. Ҡайһы ат боролоп ҡараһа, шуны тотоп менегеҙ. Бына һеҙгә ҡороҡ, бына йүгән, бына эйәр,— тип, инәләре Алсуҙар менән Кирсуҙарға ҡороҡ, йүгән, эйәр бирә.

Малайҙар инәләре әйткәнсә китәләр: береһе ала айғыр өйөрөнә, икенсеһе кире айғыр өйөрөнә бара. Ҡороҡтарын ҡылтыраталар, йүгәндәрен шылтыраталар. Шылтыратҡайнылар, икеһенә лә алама ғына тай ҡарай. Тайҙарҙы һуғып ебәрәләр ҙә тағы ҡороҡтарын ҡылтыраталар, йүгәндәрен шылтыраталар. Быларға тағы шул уҡ алама тайҙар ҡарай. Егеттәр был тайҙарҙы йәнә ҡыуып ебәрәләр, тағы йүгәндәрен шылтыраталар, ҡороҡтарын ҡылтыраталар. Өсөнсө ҡатында ла шул уҡ тайҙар ҡарағас: «Беҙҙең бәхет ошолор инде»,— тип, шул тайҙарҙы тоталар. Тотоп, баштарына йүгән кейҙереп, һырттарына эйәр һалып, үҙҙәре менгәйне, теге йолҡош ҡына тайҙар ете йәшәрле ат, һәйбәт толпарға әйләнә лә ҡуя. Шунан былар, икеһе ике толпарға атланып, инәләре менән хушлашып, юлға сығып китәләр.

Баралар, баралар, бара торғас, йылҡы көтөүенә осрайҙар.

— Кем көтөүе был? — тип һорайҙар егеттәр көтөүселәрҙән.

— Дейеүҙәрҙең көтөүе был,— тиҙәр көтөүселәр егеттәргә.— Ә үҙегеҙ ҡайҙа бараһығыҙ һуң?

— Беҙ шул дейеүҙәрегеҙ менән һуғышырға барабыҙ,— тиҙәр егеттәр.

— Беҙгә килгән ҡунаҡ бер йылҡының итен ашап, тиреһен ҡайыш итеп биреп китә,— тиҙәр көтөүселәр.

— Ярар, ашарбыҙ, тиреһен ҡайыш итербеҙ,— тиҙәр Алсуҙар менән Кирсуҙар.

Шунан Алсуҙар йоҡларға ята. Көтөүселәр бер йылҡыны һуйып, бөтә итен бешереп Кирсуҙарға килтерәләр. Ит бешкән арала Кирсуҙар йылҡының тиреһен ҡайыш итеп ырғытты; ит килгәс, Алсуҙарҙы уятып маташманы, яңғыҙы ғына ашаны ла бөттө, ти.

Шунан һуң Алсуҙарҙы уятып, былар ары китәләр. Баралар, баралар, бара торғас, бер үгеҙ көтөүенә осрайҙар.

— Кем көтөүе был?

— Дейеүҙәрҙең көтөүе. Ә үҙегеҙ ҡайҙа бараһығыҙ һуң?

— Беҙ ана шул дейеүҙәрегеҙ менән һуғышырға барабыҙ,— тиҙәр Алсуҙар менән Кирсуҙар.

— Беҙгә килгән ҡунаҡ бер үгеҙҙең итен ашап, тиреһен ҡайыш итмәйенсә китмәй,— тиҙәр көтөүселәр.

— Ярар, ашарбыҙ, тиреһен ҡайыш итербеҙ,— тип яуап бирәләр егеттәр.

Шунан был юлы Кирсуҙар йоҡларға ята. Көтөүселәр бер ҙур үгеҙҙе тотоп һуялар, итен ҡаҙанға бешерергә һалалар. Ит ҡайнап та сығырға өлгөрмәне, Алсуҙар үгеҙҙең тиреһен ҡайыш итеп тә ырғытты, ти. Шунан, Кирсуҙарҙы уятып та торманы, үгеҙҙең итен ашап та бөтөрҙө, ти, был. «Ай-һай, дейеҙәрҙе ҡуймаç был: бөтөн үгеҙҙе бер үҙе ашап бөттө!» — тиҙәр көтөүселәр үҙ-ара.

Шунан Алсуҙар туғанын уятты ла, артабан киттеләр, ти, былар. Баралар, баралар, бара торғас, бер ҡуй көтөүенә осранылар, ти.

— Был кем көтөүе?

— Дейеүҙәрҙең ҡуй көтөүе,— тип яуап бирәләр көтөүселәр.— Ә үҙегеҙ ҡайҙа бараһығыҙ һуң?

— Шул дейеүегеҙ менән һуғышырға барабыҙ.

— Беҙгә килгән ҡунаҡ бер ҡуйҙың итен ашап бөтмәйенсә, бер тирене ҡайыш итмәйенсә китмәй.

— Ярай, һуйығыҙ ҡуйығыҙҙы.

Көтөүселәр бер ҡуйҙы тотоп һуялар, итен ҡаҙанға һалалар, тиреһен быларға тотторалар. Ары-бире иткәнсе, Алсуҙар тирене ҡайыш итеп ырғыта. Ит бешкәс, Кирсуҙар уны ашап ала.

Шунан былар артабан китергә йыйыналар.

— Алыçмы әле дейеүҙәрҙең йорто? — тип һорайҙар көтөүселәрҙән.

— Ошо тауҙың башына менһәң, күренеп тора,— тип яуап бирәләр тегеләр.

Алсуҙар менән Кирсуҙар тау башына менәләр, унан дейеүҙәр йорто күренә. Китәләр былар шул йорттарға ҡарап. Быларҙың килгәнен күреп, дейеүҙәрҙең эттәре өрөп сабып сыға.

Эт тауышын ишетеп, дейеүҙең ҡатыны ҡыҙына әйтә:

— Бар әле, ҡыҙым, ҡарап ин: эт ҡойроғон күтәреп өрәме, бот араһына ҡыҫып өрәме? — ти.— Күтәреп өрһә, ем килер; бот араһына ҡыҫып өрһә, яу килер,— ти.

Ҡыҙы сығып ҡарай ҙа, тиҙ генә инәһенә кереп әйтә:

— Эт ҡойроғон бот араһына ишеп-ишеп ҡыҫып өрә,— ти.

— Улай булғас, яу килгән,— ти дейеү ҡатыны.

Ул арала Алсуҙар менән Кирсуҙар килеп тә еттеләр, этте һуғып үлтереп, өйгә инеп тә киттеләр, ти.

— Давай, беҙгә ашарға! — тип ҡысҡырҙылар, ти, былар өйгә инеү менән.

— Бына балаларым ҡайтыр, шунан бергә ашарһығыҙ,— ти дейеү ҡатыны.

— Юҡ, көтөп торорға беҙҙең ваҡытыбыҙ юҡ, ашайбыҙ ҙа китәбеҙ, барып балаларыңды үлтерәбеҙ! — тиҙәр егеттәр.

Шунан дейеү ҡатыны быларға бер ҡаҙан аш бешереп бирә, егеттәр тулы ҡаҙан ашты ашап бөтөрәләр.

— Ҡайһы яҡҡа китте балаларың? — тип һорайҙар егеттәр.

Дейеүҙең ете балаһы бар икән, сәхрәлә бер күпер аҫтында, бишәр ботло туп менән уйнап йөрөйҙәр икән. Бына Алсуҙар менән Кирсуҙар баралар, баралар, бара торғас, теге дейеү балалары уйнаған күпергә еттеләр. Аттар күпергә етеү менән шып туҡтаны ла, һис бармайҙар, ти, артабан.

Былар туҡтағас, күпер аҫтынан дейеү балалары теҙелешеп килеп сыҡтылар, ти.

— Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме? — тиҙәр егеттәр дейеү балаларына.

— Атыш кәрәк түгел, алышайыҡ,— тиҙәр дейеү балалары.

Шунан былар алыша башлайҙар, алыша торғас, Кирсуҙар алтыһының, Алсуҙар береһенең баштарын киҫеп ҡайталар.

Ҡайтҡас дейеү әбейгә:

— Балаларыңды бөтөрҙөк, тап беҙҙең атайҙы,— тиҙәр.

Шунан дейеү ҡарсығы ауыҙын асып «аһ» тиһә, ауыҙынан ҡарт килеп сыҡты, ти.

Алсуҙар шунда дейеү әбейҙең ҡыҙын алып, бөтә малға хужа булып тороп ҡала, аталарын-инәләрен үҙе янына килтерә.

Кирсуҙар:

— Мин киттем, һау булығыҙ инде, бер ҡауышырбыҙ әле,— ти ҙә йыраҡ сәфәргә сығып китә.

Бара, бара, бара торғас, кис була, был бер күл янына барып етә. Аттың эйәрен ала ла, шуға башын ҡуйып ята. Шул ваҡытта Кирсуҙар күрә: яҡындан ғына өс ҡош осоп бара. Был егет тиҙ генә ырғып тороп атына менә лә шул ҡоштар артынан китә. Ҡоштар һауанан осоп баралар, Кирсуҙар ерҙән айғыр менән саба. Саба торғас, былар бер тауҙы үтәләр, ҙур һыуға барып етәләр. Был һыуҙың аръяғында бик шәп бер йорт күренә. Ҡоштар шул йорттоң түбәһенә барып ҡуналар.

Кирсуҙар атын ебәрә, ятып ял итә башлай. Шул сағында бер көтөүсе теге йорттоң ишек алдынан быҙауҙар ҡыуып сығып килә.

— Ҡусты, яҡынырaҡ кил әле,— тип ҡысҡыра Кирсуҙар көтөүсегә. Көтөүсе һыуҙың аръяғынан уларҙың ҡаршыһынараҡ килә.

— Был ниндәй йорт?

— Батша ҡыҙҙарының йорто.

— Ә һин ни эшләп йөрөйһөң унда?

— Мин көндөҙ быҙауҙар көтәм,— ти көтөүсе.— Кис булды ниһә, быҙауҙарҙы бикләйем дә ҡыҙҙарҙы ятҡырам: аяҡ остарына ятып, табандарын ялап йоҡлатам,— ти.

— Был һыуҙың ул яғына ҡайҙан сығалар һуң? Һай ер бармы?

— Ана анауында,— ти көтөүсе.

Шунан һуң Кирсуҙар көтөүсе күрһәткән ерҙән һыуҙың аръяғына сыға ла көтөүсе малайҙы үлтерә. Уның кейемдәрен һалдырып үҙ өҫтөнә кейә. Шунан быҙау көтә башлай. Шунда, көткән ваҡытта, бер быҙауҙы һуйып телен ҡырҡып ала ла кеҫәһенә һалып ҡуя.

Кис ҡайтҡас, бер быҙауҙы һис аҙбарға кертә алмай был. Быҙау ҡасып сыға ла китә. Шул быҙауҙы ҡыуып йүгергәндә, әллә нәмәгә эләгеп йығыла. Йығылғанда, бер толомо күренеп ҡала. Ул толомдо батшаның кесе ҡыҙы күреп ҡала. «Был беҙҙең көтөүсе түгел икән»,— тип иҫкә алып ҡуя.

Шунан инде Кирсуҙар ул быҙауҙы ла ҡыуып кертә,

аҙбарҙы биклəп ҡуя. Ашап-эсə лə ҡыҙҙар бүлмəһенə инə.

Ҡыҙҙар яталар. Был хəҙер өлкəн ҡыҙ табанын яларға тейеш.

— Иə, əллə үҙ эшеңде оноттоңмо? — ти уға батшаның өлкəн ҡыҙы.

Кирсуҙар кеçəһенəн көндөҙгө быҙау телен ала ла батша ҡыҙының табанын шуның менəн ышҡый башлай. Быҙау теле теге көтөүсенең теленəн ҡаты була бит инде.

— Телең шырау шикелле, бар, бер тəпəн бал аша,— ти Кирсуҙарға батша ҡыҙы.

Кирсуҙар китə, бер тəпəн балды ашап бөтөрə лə тағы килə батша ҡыҙы янына. Хəҙер инде тегенең аяғын быҙау теленең шыма яғы менəн һыйпай башлай.

— Бына хəҙер йомшарған,— ти ҡыҙ.

Кирсуҙар иртəн тороп, тағы быҙау көтөргə китə. Көндөҙ батшаның иң кесе ҡыҙы, сырламалар бешереп, уға аш килтерə.

— Һин ни эшлəп миңə ашарға килтереп йөрөйһөң? — ти уға Кирсуҙар.

— Асығып йөрөйһөңдөр,— ти ҡыҙ.

— Юҡ, мин асыҡманым,— ти уға егет.

Ҡыҙҙың нисек тə егет менəн һөйлəшкеһе килə. Ə егеттең үҙен һиҙҙертəһе килмəй. Ҡыҙ, шулай итеп, əллə ни һөйлəшə алмай ҡайтып китə. Кис, көтөү ҡайтҡас, егеткə быҙауҙарҙы ябыша. Кирсуҙар быҙауҙарҙы биклəп ҡуя, ашай-эсə.

Ҡыҙҙар йоҡларға яталар. Бөгөн көтөүсе уртансы ҡыҙ табанын яларға тейеш.

Кирсуҙар, уртансы ҡыҙҙың табанын да быҙау теленең ҡытыршы яғы менəн һыйпай башлай.

— Телең шырау шикелле, бар, бер тəпəн май аша,— ти Кирсуҙарға уртансы ҡыҙ.

Кирсуҙар китə, бер тəпəн майҙы ашап бөтөрөп килə лə теге ҡыҙҙың табанын быҙау теленең йомшаҡ яғы менəн һыйпай башлай.

— Бына хəҙер телең йомшап ҡалған,— ти ҡыҙ.

Иртəн торғас, Кирсуҙар тағы быҙауҙар көтөргə сығып китə. Көндөҙ батшаның кесе ҡыҙы уның янына тағы ашарға алып килə. Тағы Кирсуҙарҙы һөйлəштерергə телəй. Əммə Кирсуҙар был көндө лə əллə ни һөйлəмəй, үҙен һиҙҙергеһе килмəй. Ҡыҙ ҡайтып китə.

Кис ҡайтҡас, кесе ҡыҙ Кирсуҙарға тағы ла быҙауҙарҙы ябыша. Кирсуҙар ашай-эсə. Ҡыҙҙар яталар. Сират бөгөн кесе ҡыҙҙың табанын яларға инде. Ятҡайнылар, батшаның кесе ҡыҙы һис тə табанын ялатмай.

Кирсуҙарҙың ҡулын һаман үҙенә табан тартырға итә. Ә Кирсуҙар ҡулын тарттырмай.

— Ялатмаһаң әллә,— ти ҙә, бара ла ята шунан Кирсуҙар.

Иртән торғас, тағы ул быҙау көтөүен көтөргә сығып китә. Ул киткәс, тегеләр һөйләшә:

— Беҙҙең йәш ғүмеребеҙ заяға уҙҙы инде, һаман кейәүгә сыға алмайбыҙ,— тиҙәр.— Йәгеҙ, атайыбыҙға алма ебәрәйек. Хикмәтен һиҙһә, беҙҙе кейәүгә бирер,— тиҙәр.

Олоһо — бөтөнләй һулыған алма, уртансыһы яртылаш һулыған алма ебәрергә була, ә кеееһе яңы ҡыҙарып бешкән алма һайлай. Шунан алмаларҙы ебәрәләр былар. Сәй эсергә ултырһалар, батшаның ҡатыны бының алдына өс алма килтереп ҡуя. Батша алмаларҙы телеп ашарға итһә, ҡатыны ашатмай:

— Юҡ, ашамай тор әле,— ти.— Ҡыҙҙарың ебәргән ул алмаларҙы. Ни өсөн икәнен беләһеңме? — ти.

— Ни өсөн һуң? — ти батша.— Ниңә береһе һулыған, береһе яртылаш һулыған, ә береһе яңы бешкән? — тип һорай.

— Өлкән ҡыҙыңдың ғүмере заяға уҙған,— ти әбей,— уртансы ҡыҙыңдыҡы инде яртылаш уҙып бара, ә иң кесе ҡыҙыңдың самай бешеп еткән сағы,— ти.— Шулай булғас, нимә икәнен белдеңме инде хәҙер был күстәнәстәрҙең? — ти.— Ваҡыттары уҙып бөтмәҫ борон ҡыҙҙарыбыҙҙы кейәүгә бирәйек,— ти.

— Ярай ул,— ти батша.— Бирәйек улайһа.

Шунан батша ҡыҙҙарын кейәүгә бирергә була. Ҙур ғына бер ҡапҡа эшләтә. Ҡапҡаның башына өс ултырғыс ҡуялар ҙа, ултырғыстарға батшаның ҡыҙҙарын теҙеп ултырталар. Шунан бөтөн батшалыҡҡа белдереү тараталар: «Кем дә кем батша ҡыҙын алырға теләй, шунда йыйылырға тейеш». Кешеләрҙе шул ҡапҡа аша үткәрергә тейеш булалар. Батшаның ҡыҙҙары кемде оҡшатһа, шуға ҡулъяулыҡ менән һуғырға тейештәр.

Билдәләнгән көндә бөтә халыҡ йыйыла. Егеттәр, өмөтләнеп-өмөтләнеп, ҡапҡа аша үтәләр. Батшаның өлкән ҡыҙы бер батша малайын һуға, уртансыһы ла бер батша малайын һайлай. Ә кеееһе бер кемгә лә һуҡмай: халыҡ үтә тора, үтә тора, ә теге ҡыҙ үҙенә оҡшағанды һаман тапмай. Инде бөтә халыҡ ҡапҡа аша үтеп бөтә. Шунан һуң:

— Берәй кеше ҡалмағанмы? Кем килмәй ҡалды икән, тикшерегеҙ! — тип бойора батша.

— Ана, бер быҙау көтөүсеһе генә ҡалған, ул бында

кәрәк тә түгелдер инде,— тип белдерәләр батшаға. Шулай ҙа барып теге быҙау көтөүсеһе тигән егетте лә килтерәләр.

Ул ҡапҡаға килеп етеү менән, батшаның кесе ҡыҙы шуға үҙенең ҡулъяулығы менән һуға.

— Эй, батшаның кесе кейәүе — үҙҙәренең быҙау көтөүсеһе! — тип көләләр йыйылған кешеләр.

Шунан туй яһап, батша малайҙарына кейәүгә сыҡҡан ике өлкән ҡыҙҙы бик һәйбәт бүлмәләргә урынлаштыралар, ә кесе ҡыҙ менән кейәүгә бер алама ғына мал өйөндә торорға ҡушалар.

Бер ваҡыт ҡыҙҙарҙың аталары — ҡарт батша ауырый башлай. Күп кенә табиптар килтерәләр.

— Минең ауырыуыма ни дауа бар, табығыҙ,— ти уларға батша.

Табиптар үҙҙәренең төрлө китаптарынан ҡарайҙар ҙа:

— Кейек кәзә ите һәйбәт буласаҡ,— тиҙәр.

Батша ике кейәүен, бик шәп ике атҡа атландырып ауға ебәрә, кейек кәзә ите табып килтерегеҙ, ти. Кесе ҡыҙы ла, атаһы янына барып:

— Атай, кесе кейәүең дә барыр ине, берәй ат бирһәң,— ти.

— Эй, уны ебәреп, юлда берәй ерҙә ҡолап үлеп ҡалһа, бәләһенән ҡотола алмаçһың,— ти батша.

Шунда әбейе:

— Әйҙә, бир, кесе ҡыҙыңдың күңеле булыр, кәртә тулы ат бит, алып ҡайта алмаһа ла, зыяны булмаç әле,— ти.

— Ана, алһын улайһа һыу ташый торған туры атты. Уға шул да ярар,— ти батша.

Ҡыҙ һыу ташый торған насар ғына туры атты алып ҡайта. Кейәү туры атҡа менә лә ауға тип сығып китә. Ҡала ситенә сыҡҡас, ҡойроғонан күтәреп бәрә лә быны, үҙ атының өс ҡылын алып төтәтә. Шул арала аты килеп тә төшә. Кейемдәрен кейенеп, ҡоралдарын тағып ала ла, китеп тә бара. Бара торғас, бер кейек кәзә осрай. Кирсуҙар төҙәп уға атып ебәрә. «Эсәк-ҡарыны дарыу булһын, ите-майы ағыу булһын», тип тунай ҙа эс-ҡарынын ала. Шул сағында быньң янына теге ике бажа килеп сыға.

— Һат әле беҙгә кәзә итеңде,— тиҙәр улар Кирсуҙарға.

— Ярар, һатырмын,— ти Кирсуҙар.

— Күпме һорайһың?

— Миңә аҡса ла, алтын да кәрәкмәй, алтын балдағымды уң яҡ осағыҙға баçам да бирәм,— ти Кирсуҙар.

Тегеләр үҙ-ара һөйләшеп алалар: «Беҙҙең осабыҙҙы кем күрә, кем тикшерә, әйҙә, риза булайыҡ»,— тиҙәр.

— Ярар, беҙ риза,— тиҙәр ике бажа.

Шунда ут яғып, алтын балдағын ҡыҙҙыра ла, икеһенең дә уң яҡ осаһына баҫа. Кәзәнең итен биреп ебәрә.

Шунан үҙе кәзәнең эс-ҡарынын йыуып алып ҡайтып бисәһенә бирә, бар илтеп бир, ти.

Батша теге ике өлкән бажа алып ҡайтҡан итте ашап үлә яҙған. Шулай интегеп ятҡанда, кесе ҡыҙы эс-ҡарынды бешереп илтә.

— Килтермә лә, күҙемә лә күрһәтмә! Әле итен ашап үлә яҙҙым, инде эс-ҡарынын ашап, бөтөнләй үләйемме ни?— ти батша ҡыҙына. Ҡатыны:

— Ҡыҙыңдың күңеле булһын, бер-ике ҡалаҡ ҡына булһа ла ҡабып ҡара әле,— ти.

Батша бер-ике ҡалаҡ ҡапты, арыу булып китте. Шунан бер сеүәтә һурпаны бөтөнләй ашап бөтөрҙө. Ашап бөтөрәм генә тигәндә, сеүәтә төбөнән бер бәрәс тиҙәге килеп сыҡты, ти.

— Быныһы нимә тағы?— тине батша, асыуланып.

— Мал өйөндә торалар бит, бешергәндә төшкәндер,— тине ҡатын.

Шунан һуң батша бер аҙ хәлләнеп алды ла, ике кейәүен саҡырып:

— Кейек кәзәнең эс-ҡарыны дарыу икән, тотоп, эс ҡарынын килтерегеҙ,— тине, ти.

Ике кейәү ике шәп атҡа атланып китәләр. Кесе ҡыҙ тағы атаһына бара:

— Атай, кесе кейәүең дә ауға барыр инем, ти, берәй ат бир әле.

— Уға нәмә, кисә лә теге кейәүҙәрҙең ташлап ҡалдырған эс-ҡарынын алып ҡайтҡан, үҙе берәй йүнле нәмә тота алһа, тағы бер хәл,— ти батша.

Ҡатыны тағы:

— Иә, ҡыҙыңдың күңеле булһын, үҙ ҡыҙың бит,— тигәс, батша тағы бер насар ғына атты алырға рөхсәт итә.

Ҡыҙ атты етәкләп ҡайта. Кейәүе шул атты менеп сығып китә лә, ҡала ситенә еткәс, ҡойроғонан тотоп бәреп, тағы үҙ атының өс ҡылын төтәтә. Шул арала ҡаршыһына үҙенең аты килеп төшә. Кирсуҙар шунан кейемдәрен кейеп ала ла, ҡоралдарын тағып, атына менә. Бара, бара, бара торғас, бер кейек кәзә осрай. Кейеккә төҙәп ата ла, «эсәк-ҡарыны ағыу булһын, итемайы дарыу булһын» тип, тунай башлай. Шул саҡта тағы теге ике бажа килеп сыға.

— Кәзәндең эс-ҡарындарын һатаһыңмы? — тип һорайҙар Кирсуҙарҙан.

— Ярар, һатырмын,— ти Кирсуҙар.

— Күпме һорайһың?

— Күпме һорайһың инде эс-ҡарынға, уң ҡулығыҙҙың сәтәкәй бармаҡтарығыҙҙан берәр быуындарын киҫеп бирһәгеҙ, шул етер,— ти Кирсуҙар.

Теге бажалар: «Сәтәкәй бармаҡтың бер быуыны өҙөлгәндән генә әллә ни булмаҫ. Ҡайҙа тип һораһалар, ауҙа өҙөлдө, тип әйтербеҙ әле»,— тиҙәр ҙә, сәтәкәй бармаҡтарының берәр быуынын ҡырҡалар ҙа бирәләр. Шулай итеп, ике бажа — Кирсуҙар тотҡан кәзәнең эс-ҡарынын, ә Кирсуҙар үҙе итен алып ҡайта.

Ҡайтҡас, Кирсуҙар итте ҡатынынан бешертә. Ҡатыны уны атаһына алып барһа, батша теге ике кейәүе алып ҡайтҡан эс-ҡарынды ашап үлә яҙып ята икән. Ҡыҙының ашын күргәс:

— Килтермә лә, күҙемә лә күрһәтмә! Эс-ҡарынын ашап үлә яҙҙым, итен ашаһам, бөтөнләй үлермен,— ти.

Батшаның ҡатыны:

— Ашап ҡара инде, бер-ике генә ҡалаҡ булһа ла, кесе ҡыҙың алып килгән аш шифалы булғайны бит,— ти.

Шунан батша кесе ҡыҙы алып килгән итте бер-ике ҡалаҡ ҡабып ҡарай, арыу булып китә. Шулай итеп, итте бөтөнләй ашап бөтөрә, бер юлы шәбәйеп китә.

Күп тә тормай, батшаға бер ҡағыҙ килә. Күрше батша быларға ҙур яу менән килә икән. Кесе ҡыҙын үҙ улына бирмәгән өсөн, яу ебәргән икән теге батша.

Батшаның теге ике кейәүе ҡатындары менән яуға ҡаршы китә. Ҡатындары яралыларҙы бәйләргә, тәрбиәләргә тип баралар. Кирсуҙар ҙа үҙенең ҡатынына:

— Атайыңа барып һорап ҡара әле, мин дә барайым һуғышҡа,— ти.

Кесе ҡыҙ атаһы янына бара ла әйтә:

— Кесе кейәүегеҙ ҙә һуғышҡа барыр инем ти,— ат бирегеҙ әле,— ти.

— Ҡуй, уға ни бар унда, ошо тирәлә йөрөһөн, йә һуғышта үлтереп ҡуйырҙар,— ти уға батша. Шунан әбей:

— Әйҙә, күңеле булһын, бер ат биргәндән бөлмәбеҙ, барып ҡараһын,— ти.

Батша быға насар ғына ат бирергә була.

Кейәүҙәр, шулай итеп, яуға ҡаршы баралар. Кирсуҙар ҙа улар артынан китә. Ҡала ситенә сыҡҡас, атты ҡойроғонан тотоп бәрә лә, үҙ атының өс ҡылын төтә-

тә. Шул арала бының ҡаршыһына үҙенең аты килеп төшә. Кирсуҙар кейемдәрен кейенеп, ҡоралдарын аҫып, атына менә лә яуға ҡаршы китә.

Ике бажа ҡатындары менән яу ҡырына барып еткәндәр инде. Кирсуҙар улар янына килә лә:

— Мин һуғышҡа яңғыҙ керәйем, һеҙ ҡарап тороғоҙ,— ти.

Тегеләр, был ниндәй батыр икән, тип ҡарап ҡалалар. Кирсуҙар яу эсенә кереп тә китә, ғәскәрҙе һыпырып сабып та сыға. Шулай ҙа үҙенең ҡулы яралана. Батшаның ике өлкән ҡыҙы үҙҙәренең ебәк яулыҡтары менән уның ҡулын бәйләйҙәр.

— Әйҙә, батша янына барайыҡ, һин беҙҙе яуҙан ҡотҡарҙың бит,— тиҙәр.

— Төндә ун икелә барып етермен,— ти егет.

Ҡайтҡас, батша ҡыҙҙары аталарына һөйләйҙәр:

— Әллә ҡайҙан бер батыр егет килеп сыҡты ла шул ярҙам итте. Беҙ ҡарап ҡына торҙоҡ. Ә ул бер үҙе яу эсенә инеп китте лә, бөтә ғәскәрҙе ҡылысы менән сабып килеп тә сыҡты,— тиҙәр.— Саҡырғайныҡ, бергә килмәне, төндә ун икелә килермен тине,— тиҙәр.

Кирсуҙар ун икелә бер тоҡҡа — һайыҫҡан, икенсеһенә ҡарға тултырып алып килә лә, батшаның һарайы алдына түгеп, ҡайта ла ята.

— Был кейәү аҙабылыр,— тип ҡалалар тегеләр.

Кирсуҙар яраһының һыҙлауына йоҡлай алмай, тәҙрәнән беләген тышҡа һалҡынса һауаға сығарып ята. Шул сағында батша ҡатыны тышҡа сыға, егет тиҙ генә ҡулын тартып ала. Шулай ҙа батша ҡатыны уның яралы ҡулын күреп ҡала.

Шунан инә лә батшаға әйтә:

— Ҡарт, беҙҙең кесе кейәү тиген түгелдер, ахыры: бер ҡулы яралы, кисәге яуҙы ҡырған батыр шул түгелме икән? — ти.

— Китсәле, ҡайҙан ул булһын?! — ти батша.

Иртәгеһен оло кейәүҙәр тағы һуғышҡа китәләр. Кирсуҙар тағы ҡатынын атаһы эргәһенә ебәрә.

— Кесе кейәүең дә барыр инем ти, ат бир әле,— ти кесе ҡыҙ, атаһына инеп.

Батшаның тағы биргеһе килмәй, ҡатыны әйткәс, бер насар ғына ат биреп ебәрә.

Кирсуҙар киткән саҡта ҡатынына әйтә:

— Ҡатын, һин миңә ҡаршы сыҡ, аттың башынан алырһың,— ти.— Минең айғыр бейеп килер, һалдаттар менән ҡайтырмын,— ти.

Кешеләрен яу ҡырына ебәргәндә батша әйтә:

— Теге батыр егет осраһа, уны нисек тә үҙегеҙ менән алып килегеҙ. Музыкалар менән ҡаршы алырбыҙ,— ти.

Ярай, кейәүҙәр китте һуғыш ҡырына. Кирсуҙар ҙа батша биргән насар ғына атҡа атланып сығып китә. Ҡала ситенә сыҡҡас, ул атты ҡойроғонан тотоп бәрә лә үҙ атының өс ҡылын төтәтә. Шул арала ҡаршыһына аты килеп төшә. Кирсуҙар үҙ кейемдәрен кейенеп, ҡоралдарын таға ла, атына атланып, һуғыш барған яланға килә. Килә лә, тағы тегеләрҙе ҡалдырып, һуғышҡа яңғыҙ кереп китә. Бер үҙе дошман ғәскәрен ҡырып-һыпырып ташлай. Теге кейәүҙәр аптырайҙар инде. Шунан быны янына киләләр ҙә, бик түбәнселек менән ялыналар:

— Әйҙә инде беҙҙең менән ҡайтайыҡ. Уҙған юлы ла килмәнең, яҡшылап һый-хөрмәт күрһәтербеҙ, беҙҙең батшаны ла күреп-танышып китерһең,— тиҙәр.

Кирсуҙар барырға була. Үҙ атына менеп, бөтә ҡоралдарын тағып китә. Еңеп ҡайтып килеүсе ғәскәрҙе ун ике саҡрымдан музыка менән ҡаршы алалар. Кирсуҙарҙың аты бейеп кенә килә инде, әллә ҡайҙан айырылып тора. Ғәскәрҙең килеп етеүе була, Кирсуҙарҙың ҡатыны, ҡаршы сығып, ире атының башынан тотоп та ала.

— Кит, яңылышаһың, тотма, ул бит һинең ирең түгел,— ти батша кесе ҡыҙына.

— Һин үҙең яңылышаһың, атай! — ти ҡыҙ.— Үҙ кейәүеңде үҙең танымайһың, йәберләйһең,— ти.

Батша хәҙер, ни алып, ни ҡуйырға белмәй йөрөй кейәүе алдында.

— Ни теләйһең, бөтә нәмәгә лә ризамын,— ти батша Кирсуҙарға.

— Миңә бүтән бер нәмә лә кәрәкмәй, бына ике ҡолом ҡасты, ғәскәреңдән шуларҙы табып алыр инем,— ти Кирсуҙар.

— Ярар, ярар. Тамғалары бармы һуң? — ти батша.

— Уң яҡ осаларына балдаҡ ҡыҙҙырып баҫылған, уң ҡулдарының сәтәкәй бармағынан берәр быуыны киҫелгән,— ти Кирсуҙар.

Шунан улар бөтә ғәскәрҙе ҡарай башлайҙар, береһендә лә тамға юҡ. Ике кейәү генә ҡала.

— Бына быларын да ҡарайыҡ,— ти Кирсуҙар.

— Былар кейәүҙәр бит,— ти батша.

— Барыбер, ҡарайыҡ әле,— ти Кирсуҙар.

Ҡараһалар, икеһендә лә тамға бар: уң яҡ осаларына алтын балдаҡ ҡыҙҙырып баҫылған, уң ҡулдарының

сәтәкәй бармаҡтарынан берәр быуыны ҡырҡып алынған.

— Бына ул ҡырҡылған бармаҡтар, бына осаларына баҫылған алтын балдаҡ,— ти Кирсуҙар. Ҡуйып ҡараһалар, тура килеп тора.

— Үлтермә инде уларҙы, кейәүҙәр бит,— тип ялына батша.

— Ярар, һинең хаҡҡа, ҡыҙҙарың хаҡына ғына ҡалдырам. Тик ҡара уны, бынан һуң кеше булһындар, илгә тоғро хеҙмәт итһендәр!

— Эйе, эйе,— ти ҙә батша, еңеү туйына кесе ҡыҙының туйын ҡушып, ҙур мәжлес үткәрә. Ошо мәжлестә Кирсуҙарҙы үҙ урынына батша итеп иғлан итә. Ә теге ике бажаны уға ялсылыҡҡа бирә.

Кирсуҙар ана шулай батша булып, аталары, ағалары менән ҡунаҡҡа барышып, әле булһа шунда йәшәй, ти.

## ДАРЫУ ЭҘЛӘҮСЕЛӘР

Борон-борон заманда бер ҡарт булған, ти. Ул ҡарттың өс улы булған, ти. Улар бик ярлы йәшәгәндәр, гел һунарға йөрөп кенә көн күргәндәр, ти.

Көндәрҙән бер көн, артыҡ ҡартайыу арҡаһында, ҡарт һуҡырайып киткән. Шунан һуң ул, кистәрҙән бер кис балаларын сыуал янына йыйнап алып, былай тип һөйләгән:

— Балаҡайҙарым, инде ир-егетһегеҙ. Үҙ алдығыҙға донъя көтә алаһығыҙ. Татыу йәшәгеҙ. Инде һеҙҙең был көнөгөҙгә еткәс, мин үлһәм дә үкенмәйем, тик бына һеҙҙең йөҙөгөҙгә бер генә тапҡыр ҡараһам ине, күҙем күрмәй шул,— тигән.

Уландары аталарын бик йәлләгәндәр, уны күҙле итергә уйлашҡандар. Шунан улар күҙ дарыуы эҙләп сығып киткәндәр. Былар, шулай итеп, өсөһө бергә бик оҙаҡ ваҡыт, бик оҙон юл китеп бара торғас, бер юл сатына килеп еткәндәр. Был ерҙә юл өскә айырыла, ти. Һәр юл сатында — таҡта, таҡтала шундай яҙыу бар, ти: «Уңға киткән уңыр, һулға киткән туңыр, уртаға киткән — йә уңыр ҙа, йә туңыр».

Шул ерҙә былар: «Кем дә кем күҙ дарыуы тапһа, ҡайтышлай ошо ерҙә башҡаларҙы көтһөн»,— тип һүҙ бирешеп, өсөһө өс юлға инеп китәләр. Иң оло ул — «уңыр» тигән юлдан уңға, уртансыһы — «йә уңыр ҙа, йә туңыр» тигән урта юл менән, ә иң кесеһе «туңыр» тигән юлдан һулға китә.

Иң өлкән ул бара-бара артына боролоп ҡараһа, тышау буйы ер киткән, ти. Шулай, бик күп ваҡыттар бара торғас, уның бөтмәç аҙығы бөткән, туҙмаç кейеме туҙған, арымаç аты хәлдән тайған, ти. Шунан ул бер ҡалаға барып инеп, бик оҙаҡ аптырап йөрөгәндән һуң, урам һепереүсе булып эшкә яллаңған, ти.

Уртансы ул да шулай үҙ юлы менән бик күп ваҡыттар барғандан һуң, бөтмәç аҙығы бөткәс, туҙмаç кейеме туҙғас, арымаç аты арығас, бер ҡалала тиҙәк түгеүсе булып эшкә ингән, ти.

Иң кесе улы шулай уҡ бик күп ер китә. Бара, бара, тышау буйы ер бара. Уның да бөтмәç аҙығы бөтә, арымаç аты арый, туҙмаç кейеме туҙа. Шуға ҡарамаçтан, ул йәйәүләп булһа ла һаман юлында була. Бик оҙаҡ бара торғас, инде бының бара торған юлы ла бөтә.

Алда ул бик алыçта күккә тоташып торған бер ҡыҙыл йорт күрә. Барһа — ул бер шау баҡырҙан эшләнгән йорт икән. Эскә инә — бер кем дә юҡ. Ә бүлмәләре бик күп, ти. Ҡарап йөрөй торғас, бер бүлмәлә бик гүзәл ҡыҙҙы таба. Ҡыҙ:

— Ай, егет, харап булаһың, ҡайҙан килдең, шунда кит! — ти.— Мин фәлән батшаның ҡыҙы инем. Мине бында ике башлы дейеү урлап алып килде. Оҙаҡламай ҡайтыр, һәләк булырһың! — ти. Егет:

— Юҡ, һылыу, мин һине ҡотҡармайынса, бер ҡайҙа ла китмәйем,— ти. Шунан һуң улар һүҙ беркетәләр. Ҡыҙ әйтә:

— Дейеүҙең йәне ҡойроғонда. Һин иң элек ҡойроғон өҙөрһөң. Шунан ул арыр, һыу һорар. Мин уға һыу бирермен. Уның ике мискә дарыулы һыуы бар. Уның береһе көс бирә, береһе көстө бөтөрә. Беҙ шул мискәләрҙе хәҙер үк алыштырып ултыртайыҡ,— ти.

Шунан былар теге мискәләрҙе алмаштырып ҡуялар. Егет, ҡыҙҙың әйтеүе буйынса, тап төш ваҡыты еткәс, дейеү ҡайта торған юлдағы таш күпер аçтына инеп ултыра.

Бына бер ваҡыт ел-дауыл ҡуптарып, йәшендәр йәшнәтеп дейеү ҡайтып килә, ти. Күпергә килеп еткәс тә дейеү:

— Әҙәм еçе сыға, әһә!..— ти.— Мин әле бөгөн бер әҙәмде лә ашай алмай ҡайтып килһәм, ул үҙе килгән икән, сыҡ тиҙерәк! — тип ҡысҡыра, ти.

— Йә, ҡарап ҡарайыҡ,— тип күпер аçтынан егет килеп сыға.

— Алыш бармы, атыш бармы?

— Атыш атаң башына! Алыш бар! — ти егет.

Шунан һуң былар алыша башлайҙар. Егет үҙенең ҡылысы менән дейеүгә сапһа — ташҡа сапҡан менән бер, ти. Шулай алыша торғас, егет дейеүҙең ҡойроғон өҙә саба. Шул ерҙә дейеү: «Һыу!» — тип ҡысҡырып та ебәрә.

Теге ҡыҙ мискәләрҙе килтереп ултырта. Бер мискәгә дейеү, икенсеһенә егет йәбешә.

— Ах! — ти дейеү, бер мискә һыуҙы эскәс тә хәле бөтә. Ә егет тағы ла көсәйеп китә. Шул ерҙә егет ике башлы дейеүҙең кәүҙәһен тураҡлап, күбәләй итеп өйөп һалып ҡуя.

Шунан һуң был ҡыҙ менән бергә, ирле-ҡатынлы булып бер аҙ торғас, егет ҡыҙға үҙенең күҙ дарыуы эҙләргә сыҡҡанлығын һөйләй.

Ҡыҙ әйтә:

— Ундай дарыу беҙҙә юҡ. Бына һин үлтергән дейеүҙең ағаһы бар. Булһа, шунда булыр ул дарыу,— ти.— Ул дейеү алты башлы, уны еңә алмаçһың шул,— ти. Егет әйтә:

— Барам шунда, күҙ дарыуы алып ҡайтам,— ти.

Шунан ҡыҙ менән хушлашып, юлға сығып китә. Бара ла бара был, бик оҙаҡ бара. Бара торғас, күккә терәлеп торған ап-аҡ йорт күрә. Көмөш йорт икән был. Килә егет, өйҙөң эсенә инә, йөрөй. Әммә унда берәү ҙә юҡ, ти. Шулай эҙләнеп йөрөй торғас, бер бүлмәлә бер ҡыҙ күрә. Был ҡыҙ баяғы баҡыр йорттағыға ҡарағанда ла һылыу, ти. Ҡыҙ әйтә:

— Ай,егет, харап була күрмә, ҡайҙан килдең, шунда кит! — ти.— Минең ирем — алты башлы дейеү пәрейе. Мин фәлән-фәлән батшаның ҡыҙы инем, мине ул бында урлап алып килде. Ул дейеү кеше ашай. Оҙаҡламай ҡайтырға тейеш, һине харап итер! — ти.

— Ярай,— ти егет,— мин һине ҡотҡармайынса, бер ҡайҙа ла китмәйем!

Шулай тигәс, ҡыҙ менән егет һүҙ ҡуйышалар. Ҡыҙ әйтә:

— Дейеүҙең йәне ҡойроғонда. Иң элек ҡойроғон өҙ. Ә унан һуң алты башын да ҡырҡыуы еңел булыр,— ти. Шунан быны теге көс бөтөргәс, көс индергес һыуы барлығын әйтә.

Мискәләрҙе алмаштырып ултырталар ҙа, тап төш ваҡыты еткәс, егет дейеүҙең ҡайта торған юлына сығып, таш күпер аçтына төшөп ултыра. Бына бер ваҡыт, ер һелкетеп, туҙан туҙҙырып, ҡойондар уйнатып, йәшен йәшнәтеп, дейеү ҡайтып килә. Күпергә килеп еткәйне:

— Фу-фу! — ти дейеү.— Мин бөгөн ашарға әҙәм осрата алмағайным, ул бында үҙе килеп ятҡан икән. Әйҙә сыҡ, ашайым һине! — ти.

Егет, ҡылысын күтәреп, күпер аҫтынан килеп сыға.

— Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме? — ти дейеү.

— Атыш атаң башына! Алыш кәрәк! — ти егет.

Шунан былар алыша башлайҙар. Эй көрәшәләр былар, эй көрәшәләр, бик оҙаҡ көрәшкәндән һуң, егет тегенең ҡойроғон сабып өҙгәйне, дейеү: «Һыу!» —тип ҡысҡыра ла башлай. Ҡыҙ, йүгертеп, теге алмаштырылған мискәләрҙе килтереп ҡуя. Аңын-тоңон ҡарап тормай, дейеү мискәне төп күтәрә эсеп тә ебәрә, бының көсө лә бөтә. Ә егеттең көсө арта. Шунан, тора һалып, алты башлы дейеүҙе тураҡлап ташлай. Тураҡлай, тураҡлай ҙа кәбәндәй итеп өйөп ҡуя.

Егет был көмөш йорттағы ҡыҙ менән дә туй яһап, ирле-ҡатынлы булып байтаҡ ваҡыт торғандан һуң үҙенең күҙ дарыуы эҙләргә сыҡҡанын һөйләй. Ҡыҙ әйтә:

— Ундай дарыу беҙҙә юҡ. Бына ошо һин үлтергән дейеүҙең ун ике башлы ағаһы бар. Булһа, шунда булыр ул дарыу,— ти.— Әммә уны былай ғына еңеп булмаҫ. Уны еңеү өсөн һин бына нәмә эшлә,— тип был ҡыҙ егеткә ике батман май менән бер тире бирҙе, ти.— Юлда, шағыр ҙа шоғор килеп, асылып-ябылып торған ҡапҡа булыр. Шул май менән ҡапҡаны майларһың,— тип әйтте, ти.— Ҡапҡанан сығып, тағы ла барғас, бер ҡыптыр тун өсөн талашып ятҡан әбей менән бабайҙы осратырһың. Был тирене һин шуларҙың береһенә ябып китерһең. Унан, бер эт менән дөйә осрар. Эт алдында — бесән, дөйә алдында һөйәк булыр. Һин шуларҙы алмаштырып, бесәнде — дөйәгә, һөйәкте эткә килтереп һалырһың. Унан алтын һарайға барып етерһең. Алтын һарайҙы уратып, ҡойроғон тешләп ятҡан йылан булыр. Уға һин теймә, атың менән һикереп сыҡ. Һарай ишегенә барғас, һине ашарға торған ҡапландар, башыңды сабырға торған айбалталы һаҡсылар булыр. Һин уларға ла теймә, ҡурҡмай ғына, шуларҙың араһындағы келәм юлдан һарайға ин. Унда алтын, мәрмәр, гәүһәр, яҡуттар булыр, береһенә лә теймә, икенсе бүлмәгә ин. Икенсе бүлмәгә барып инһәң, унда сәңгелдәктә бер ҡыҙ йоҡлап ятыр, һин уға ла оронма, ары уҙ. Туп-тура барып, йәнә бер бүлмәгә ингәс, кәштә тулы дарыуҙар күрерһең. Шул дарыуҙар араһынан күҙ дарыуын ал да, нисек ингән булһаң, шул рәүештә, ҡайтыр юлыңа сыҡ,— тине, ти.

Ҡыҙ биргән ике батман май менән тирене ала ла сы-

ғып китә егет хәҙер тағы ла атына атланып. Бара ла бара был, бара ла бара, артына әйләнеп ҡараһа, уҡлау буйы ер уҙған була. Шулай бара торғас, баяғы ҡыҙ әйткән ҡапҡаға барып етә. Тирә-яғы бейек ҡойма. Ә ҡапҡа, шағор ҙа шоғор итеп, асылып-ябылып тора, ти. Егет ике батман һары май менән ҡапҡаны майлай. Майлағайны, ҡапҡа шығырламай башлай. Егет үткән саҡта, ҡапҡа:

— Ай, егет, юлың уң булһын! Мин мең йылдар шағырлап тора торғайным,— тип ҡала.

Китә егет, ары китә. Китеп бара торғас, юл буйында бер әбей менән бабайҙың йоҡлап ятҡанын күрә. Икәүһенә бер ҡыптыр тун, әбей ябынһа, бабайға етмәй, бабай ябынһа, әбейгә етмәй, ти. Шуға талашып яталар икән. Егет килә лә, тунды — береһенә, үҙе килтергән тирене икенсеһенә ябып китә.

— Ай, егет, юлың уң булһын! Беҙ ғүмер буйына бер тун өсөн талашып ята инек, бына хәҙер икебеҙгә лә булды,— тиҙәр былар.

Егет быларҙан китеп бара торғас, юл буйында ятҡан дөйә менән эткә осрай. Эт алдында — бесән, дөйә алдында — һөйәк, ти. Егет эт алдындағы бесәнде — дөйә алдына, дөйә алдындағы һөйәкте эт алдына илтеп һала. Дөйә бесәнде ашай башлай, ә эт һөйәкте кимерергә тотона.

— Ай, егет, рәхмәт, юлың уң булһын! Беҙ тилмерешеп, ас ята инек, юғиһә,— тип ҡалдылар, ти, был дөйә менән эт.

Китте егет, быларҙы ла үтеп китте. Бара торғас, теге, күккә тоташып торған алтын йортто күрҙе, ти. Барып етһә, уны бер йылан уратып алған да, ҡойроғон тешләп, йоҡлап ята, ти. Егет уға теймәне, ҡыҙ өйрәткәнсә, атын һикертеп, ҡураға барып төштө, ти. Барып төшкәйне, быны алдына, ажғырып, ҡапландар, арыҫландар, уларға эйәреп, айбалталы һаҡсылар килеп сыҡты, ти. Егет ҡурҡманы — тегеләр араһындағы киләм юлдан атын уйнатып ҡына үтте лә китте, ти. Шунан ни был, атын ишек төбөндә генә ҡалдыра ла, һарай эсенә инә инде. Барып инһә, һарай эсе тулы алтын-көмөш, гәүһәр, яҡут кеүек аҫыл-аҫыл таштар! Егет береһенә лә теймәй, ары уҙа. Икенсе бүлмәгә барып инһә, сәңгелдәктә бер ҡыҙ йоҡлап ята. Өсөнсө бүлмәгә инеп китә. Быныһында иҙәндән түшәмгә тиклем кәштәгә дарыу теҙелгән. Егет тиҙ генә үҙенә кәрәкле күҙ дарыуын ҡарап ала ла кире борола. Икенсе бүлмәгә боролоп сыҡҡайны, ҡарай бит сәңгелдәктең ҡорғанын

асып теге ҡыҙға. Ә ҡыҙ шундай һылыу, шундай һылыу, хатта иҫең китерлек,ти! Ҡарап тора торғас, теге ҡыҙҙың һүҙе иҫенә килеп төшә лә, сығып китергә була был. Сығып китеп бара ине, туҡтап ҡала. «Исмаһам, бер генә үбеп китәйем»,— тип, кире килеп, маңлайын үпкән икән, ҡыҙҙың маңлайынан түбә таҡтаһына тиклем ҡан сәптерә башлаған. Шул саҡта ҡыҙ: «Егет!» — тип ҡысҡырып ҡалған, ә был сығып ҡасҡан.

Егет атына менә һалып, йыланды һикереп сығам тигәндә, аттың ҡойроғо бер ҡыңғырауға тейеп ҡалған ла, береһенә береһе ҡушылып, ҡыңғырауҙар зыңғырлай башлаған. Заң-зоң иткән тауышҡа уянып, йоҡлап ятҡан еренән дейеү килеп сыҡҡан. Сыҡҡан да теге ҡапландарҙы, арыҫландарҙы, һаҡсыларҙы, йыланды әрләп, пыран-заран туҙҙырып ташлаған. Шунан һуң егетте баҫтырырға тотонған.

Эй егет саба, дейеү баҫтыра, егет саба, дейеү баҫтыра, ти. Шулай баҫтырышып килә торғас, теге дөйә менән эт тапҡырына килеп еттеләр, ти. Килеп еткәйнеләр, дейеү:

— Этем, һөҫ, дөйәм баҫ! Этем һөҫ, дөйәм баҫ! — тип ҡысҡыра, ти.

Дөйә менән эт, был егетте танып, урындарынан да тормайынса:

— Хәйерле юл, егет! — тип ҡалдылар, ти.

Дейеү килеп етеп, эт менән дөйәне быраҡтыра тибеп ебәрҙе, ти.

Шул арала егет тағы ла алыҫлаша төшә. Эй дейеү баҫтыра, егет ҡаса, дейеү баҫтыра, егет ҡаса, ти. Теге бабай менән әбей тапҡырына килеп етә башлағайнылар, дейеү ҡысҡыра:

— Бабай, тот! Әбей, тот! Бабай, тот! Әбей, тот!

Бабай менән әбей егетте танышҙар ҙа, ҡайҙа ул тотоу — «Хәйерле юл, улым!» — тип ҡалалар. Дейеү килеп етә лә, асыуынан, бырактырғансы тибеп ебәрә быларҙы. Шунан тотона тағы баҫтырырға. Хәҙер теге ҡапҡаға килеп етәләр былар. Етеп килгәндә, дейеү:

— Ҡапҡам, ҡыҫ та киҫ! Ҡапҡам, киҫ тә ҡыҫ! — тип ҡысҡыра, ти.

Ҡапҡа, егетте таныгас, шар асылып:

— Хәйерле юл, егет! — тип үткәреп ебәрҙе, ти.

Дейеү килеп етте лә ҡапҡаны ауҙара типте лә ҡуйҙы, ти.

Ярай, ҡапҡа ла тотманы егетте. Дейеү бында ҡапҡаһын тибеп осорған арала егет тағы ла алыҫлаша төштө. Артынан етмәк булып, дейеү эй баҫтыра егетте, эй

баҫтыра. Етеп бара ине, егет атының теҙгенен ебәреп, үҙе артҡа боролоп ултыра ла уҡ-һаҙағын әҙерләй. Дейеү инде һәрмәйем тигәндә, уҡ менән тегенең бер башын ата ла төшөрә. Дейеү үңәсен бәйләп маташҡансы, егет тағы ла бик күп ер алға китеп өлгөрә. Дейеү егетте ҡыуып етеп килгәндә:

— Минең бер башымды өҙһәң, әле тағы ла ун бер башым бар. Барыбер ҡотола алмаҫһың минән! — тип ҡысҡыра.

Ә егет үҙенекен эшләй: дейеү ҡыуып килеп еттениһә, тегенең башын берәмләп уғы менән атып төшөрөп бара, төшөрөп бара, ти. Шул рәүешсә, ҡыуып еткән һайын, дейеүҙең баштарын өҙә торғас, тегенең бер генә башы тороп ҡалды, ти. Шуға ҡарамаҫтан, дейеү:

— Минең ун бер башымды өҙһәң, миңә берәүһе лә етер. Һин барыбер ҡотола алмаҫһың! Алда әле минең өс башлы, шунан тағы алты башлы ике ҡустым бар, — тип һаман баҫтыра ла баҫтыра, ти.

Шул саҡта егет үҙе менән алып сыҡҡан һуңғы уғын төҙәп атып ебәрә. Дейеүҙең ун икенсе башы ла өҙөлөп төшә. Шунан һуң егет, атынан төшөп, дейеүҙең аҫыл кейемдәрен, алтындарын алып, кәүҙәһен тураҡлай, тураҡлай ҙа, эҫкерттәй итеп өйөп, ҡайтып китә.

Егет, шулай килә торғас, теге көмөш һарайҙағы ҡатыны янына килеп төшә. Унда күпмелер ваҡыт ҡунаҡ булғандан һуң, был һарайҙың бөтә мал-мөлкәтен алып, ҡыҙ менән бергә егеттең иленә ҡайтып китәләр. Юл ыңғайында, баҡыр һарайҙағы бисәһе янында ҡунаҡ булып, ундағы байлыҡты ла алып китәләр. Шулай итеп килә торғас, былар үҙҙәренең осо-ҡырыйы булмаған каруаны менән әлеге өс юл сатына килеп етә. Егет, теге ваҡыттағы һүҙ ҡуйышыу буйынса, ошонда туҡталып, сатырҙар ҡороп ебәреп, ағаларын көтөргә була. Аҙна көтә, ай көтә, бер йыл көтә — юҡ тегеләр. Бик оҙаҡ булырҙай тойолғас, эҙләргә тип сығып китә.

Егет оло ағаһын бер ҡалала урам һепереүсе, икенсе ағаһын тиҙәк түгеүсе булып йөрөгән ерҙәренән алып ҡайта. Каруанға килеп еткәс, уларға бик күп байлыҡ бүлеп бирә, ҙур итеп туй яһай. Туйҙан һуң каруан төнгө йоҡоға тала.

Шул саҡта уның ике ағаһы, көнләшеп, быны үлтермәксе, ике бисәһен икеһенә алмаҡсы булалар. Шулай тип кәңәшләшәләр ҙә, ҡустыларының алмас ҡылысын алып, тегенең үңәсе етерлек бейеклектә сатырҙың ишегенә арҡыры бәйләйҙәр. Шунан:

— Каруанды яу баҫты! Каруанды яу баҫты! — тип

һөрән һалалар. Тауышты ишетеү менән егет һикереп тороп, ашығып сығып килгәндә, теге бәйле ҡылысҡа үңәсе ҡырҡылып, башы өҙөлгән дә төшкән, ти.

Шунан ни был егет, шулай үлеп, ятып ҡала, ә ике ағаһы, ике бисәне алып, каруанды әйҙәп, үҙ ауылдарына ҡайтып китә. Ҡайтып төшәләр ҙә, аталарына:

— Атай, бына беҙ байып ҡайттыҡ. Тик күҙ дарыуы ғына таба алманыҡ,— тиҙәр. Һуҡыр ҡарт былар өсөн ҡыуана, улдарын күргеһе килә, кесе улын һораша. Тегеләр: «Юҡ, күрмәнек»,— тиҙәр.

Шулай көндәрҙән бер көн әлеге юл сатына тағы ла бер ҙур каруан килеп туҡтай. Был каруандың башында килгән ҡыҙ, юл сатында башы ҡырҡылып ятҡан кешене күреп төшөп ҡараһа, таный:

— Был мин эҙләп килгән егет тә баһа! — тип аптырап ҡала. Шунан тиҙ генә үҙенең дарыуҙары араһынан бер дарыуҙы ала ла, егеттең үңәсен йәбештереп, тағы ла бер дарыу еҫкәтә. Еҫкәткәйне, егет:

— Ах, оҙаҡ йоҡлап киткәнмен икән,— тип һикереп тороп ултыра. Шул саҡ ҡыҙ әйтә:

— Оҙаҡ йоҡлағанһың, йоҡламай ни, әгәр мин булмаһам, ошо ерҙә мәңгегә йоҡлап ҡалған булыр инең! — ти.

Шунан ултыралар былар, танышалар. Ҡыҙ үҙенең теге сәңгелдәктә йоҡлап ятҡан ҡыҙ булыуын, алтын һарайҙың бөтә дәүләт-мөлкәтен тейәп, каруан менән уны эҙләп килеүен һөйләп бирә. Егет тә үҙенең башынан үткәндәрен иҫенә төшөрә, барыһын да ҡыҙға һөйләй. Шунан былар ҡыҙ алып килгән каруан менән ауылға ҡайтып китәләр.

Кесе улы ла ҙур байлыҡ менән ҡайтып төшкәс, атаһы бының әй шатлана, ә ағалары, ҡобаралары осоп, әй ҡайғыра, ти. Шул ерҙә егет күҙ дарыуын сығарып, атаһының күҙҙәренә тамыҙғайны, атаһы һин дә мин күрә башланы, улын ҡосаҡлап, алды, ти. Егет ағаларының хәлен һөйләгәс, атаһы:

— Улым, күҙле булдым, төҫөгөҙҙө күрҙем. Инде үлһәм дә үкенмәйем. Тик, мин үлгәнгә тиклем, битһеҙ ағайҙарыңдың яза алыуҙарын күрер инем: теләһәң — аҫ, теләһәң — ат ҡойроғона тағып ебәр,— тип әйтте, ти.

Атаһының һүҙен тыңлап бөткәс, егет ағайҙарына ҡарап ултыра-ултыра ла икеһен дә ғәфү итә. Олоһона — көмөш һарайлы ҡыҙҙы, уртансыһына баҡыр һарайлы ҡыҙҙы ҡатын итеп бирә. Ә үҙенә алтын һарайлы ҡыҙҙы ала. Ауыл уртаһына күккә тейеп торған

баҡыр, көмөш, алтын йорттар ҡороп ебәрәләр. Шунан донъяны шаулатып туй яһайҙар.

Улар, әле лә шулай бергәләп, бөтмәҫ байлыҡтарына күмелеп, йәшәп яталар, ти.

## АЛТЫН ҠОШ

Борон булған, ти, бер бабай. Булған, ти, уның өс улы, таҙ ине, ти, кесе улы.

Был бабайҙың баҡсаһына көн дә иртән бер алтын ҡош килеп, талығып-талығып һайрай ҙа алмаларын суҡыштырып китә икән. Бабай был алтын ҡошто бер нисек тә тота алмаған, бәхет ҡошолор тип, атып төшөрөргә лә, ҡыуып ебәрергә лә ҡурҡҡан. Бер ваҡыт алтын ҡош бөтөнләй килмәй ҙә башлаған. Бабай тағы ла ныҡ ҡайғырып, иҫе-аҡылы ҡороған. Бабай был хәлде үҙенең улдарына һөйләй. Улдары алтын ҡоштоң ояһын эҙләп сығып китергә булалар. Бабай, быны бик хуп күреп:

— Хәҙер үк йылҡылар араһына барығыҙ ҙа йүгәндәрегеҙҙе сылтыратығыҙ,— тигән.— Ниндәй ат башын күтәреп үҙегеҙгә ҡараһа, шуға атланып юлға сығырһығыҙ.

Йылҡылар араһына барып, йүгәндәрен сылтыратһалар, өлкән улы менән уртансы улына яҡшы ат, ә Биктимер исемле кесе улына бер насар ғына ат ҡараған, ти. «Ярар, бәхетем шулдыр инде»,— тип уйлаған, ти, Биктимер.

Былар өсәүләп юлға сығалар. Күп тә бармай, Биктимерҙең аты арып, артта ҡала. Ул атын туҡтата ла, лутсы йәйәү барайым тип, атын бер ярлауға төртөп осормаҡсы була. Шул ваҡыт аты телгә килеп: «Һин мине ярлауға осорма. Уң ҡолағымдан ин дә, һул ҡолағымдан сыҡ»,— ти. Биктимер аттың уң ҡолағынан инеп, һул ҡолағынан сыҡһа, насар ат бик яҡшы атҡа әйләнә. Биктимер шунда уҡ ағаларын ҡыуып етә.

Бер аҙ барғас, былар бер баҡыр урманға осрайҙар. Ағастар ҙа, ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә,— барыһы ла баҡыр икән бында. Өс туған ошо урман ауыҙында ял итергә туҡтайҙар. Икәүһе йоҡларға ята, Биктимер йоҡламай, атын ҡарай. Аты ашамай.

— Эй, хайуаным, ниңә ашамайһың, бик арыныңмы әллә? — тип һорай Биктимер атынан.

Ат әйтә:

— Ошо баҡыр урманда бер нәмә бар, шуны үлтермәй тороп, ашай алмам,— ти.

Биктимер урманға кереп китә, тикшерә. Эскәрәк ут-кәс, башлап ҡына янған бер ут күрә. Бәләкәй генә бер өй икән. Тәҙрәнән эскә ҡараһа — бер убырлы ҡарсыҡ ултыра. Өҫкө ирене түшәмдә, аҫҡы ирене иҙәндә, ти, бының. Убырлы ҡарсыҡтың өс ҡыҙы бар икән, ул шуларҙы әрләй: «Урман ауыҙында өс егет туҡтаған, шуның береһен килтерегеҙ миңә, ашайым»,— тип әй-тә, ти. Өс ҡыҙ ишектән сыҡҡас ҡына, Биктимер улар-ҙы һуғып үлтерә. Убырлы ҡарсыҡ көтөп ултыра-улты-ра ла, ҡыҙҙарымдың теге егеттәргә күҙҙәре төшкәндер, үҙем барайым әле, тип сыҡһа, Биктимер уны ла бәреп үлтерә.

Туҡтаған ерҙәренә әйләнеп килһә, ат ашай, үҙе йоҡларға ята. Ағалары торалар ҙа:

— Ниңә һаман йоҡлап ятаһың? — тиҙәр.

Биктимер бер һүҙ ҙә әйтмәй. «Мин эшләгән эште эшләһәгеҙ, өс көн, өс төн йоҡлар инегеҙ әле»,— ти үҙ-үҙенә.

Йәнә ике көн буйы барғас, былар көмөш урманға ос-райҙар. Бында ағастар ҙа, ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә — барыһы ла көмөш була. Өс туған ошонда ҡунып кит-мәксе булалар. Ағалары йоҡларға ята, Биктимер атын ҡарай. Аты менән һөйләшә. Аты Биктимергә:

— Һул ҡолағымдан инеп, уң ҡолағымдан сыҡ,— ти.

Биктимер аттың һул ҡолағынан инеп, уң ҡолағынан сыҡһа,— баштан-аяҡ ҡоралланған бер батырға әйләнә. Шунан был көмөш урман эсенә инеп китә.

Урман уртаһында бер ҙур казарма, ул казармала ҡырҡ егет була. Биктимер шуларға тап була. Шулай ҙа ҡаушап тормай, эскә инә. Былар бер ҙур аждаһала ҡол булып хеҙмәт итәләр икән.

— Ни эшләп тораһығыҙ бында? — тип һорай Бик-тимер.

Тегеләр:

— Беҙҙең хужабыҙ — ете башлы аждаһа. Күҙенә салынып ҡалма тағы — башыңды һәләк итер! — тиҙәр.

Биктимер әйтә:

— Юҡ, мин уны күрергә тейешмен! — ти.

Аждаһаны эҙләп китә. Барһа — яҡшы тимер ҡап-ҡалы йорт. Һорауһыҙ-ниһеҙ инә лә: «Иҫәнме, һау-мы?» — тип өндәшә. Аждаһа уның һаулығын ала. Үҙе һикелә, ете башын ете мендәргә һалып, бик эре ята, ти.

Биктимер уның янына бара, һөйләшеп, һорашып ултыра. Аждаһа:

— Дуҫ булайыҡ, мин ошо йәшкә етеп һинең кеүек батыр кешене күргәнем юҡ ине,— ти.

Аждаһа хәйлә ҡороп, Биктимерҙе үлтермәксе була. Егет тә уның хәйләһен белә. Аждаһа шкафтан ике төрлө эсемлек килтереп, береһен Биктимергә эсермәксе, береһен үҙе эсмәксе була.

— Дуҫлашыу хөрмәтенә берҙе эсеп алайыҡ,— ти аждаһа.

Биктимер бында бер-бер хәйлә булырға кәрәк тип, туҫтаҡтарҙы сәкәштергән булып, аждаһаныҡын үҙе эсә, үҙенекен аждаһаға тоттора. Аждаһа быны һиҙмәй ҙә ҡала. Был эсемлектәрҙең береһе көс индерә, береһе көс сығара торған икән. Эсеп алғас, аждаһа:

— Хәҙер урманға сығып, алышып ҡарайыҡ, булғас, батырҙарса булһын,— ти.— Әгәр мин йыҡһам, башыңды өҙәм, ана ҡылыс. Әгәр һин йыҡһаң — һинең шартыңа күнәм,— ти.

Биктимер риза була. Сығалар, алышалар. Бик ныҡ алышалар, бер аждаһа, бер Биктимер елтерәкләтеп күтәреп алып китә. Иң һуңында егет аждаһаны күтәреп килтереп бәрә. Шунан ҡылысы менән ете башын етегә сабып өҙә.

Тотҡондағы хеҙмәтселәр быға шатланалар. Биктимер уларҙы иреккә сығара, аждаһаның төрлө илдәрҙән йыйған ҡыҙҙарын теге хеҙмәтсе егеттәргә бирә. Үҙе ағалары янына китә. Был йоҡларға ятҡас ҡына тегеләр торалар ҙа быны ороша башлайҙар. Егет бер ни һөйләмәй. «Мин эшләгәнде эшләһәгеҙ, өс көн, өс төн йоҡлар инегеҙ әле»,— тип кенә ҡуя.

Бер аҙ ер барғас, өс туған алтын урманға килеп етә. Бында ағастар ҙа, ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә — барыһы ла алтын була. «Әһә, алтын ҡош ошонда булырға тейеш»,— тиҙәр. Ағалары йоҡларға ята, Биктимер алтын ҡошто эҙләп сығып китә. Тетеп эҙләй — теге ҡош юҡ. Ағалары янына буш ҡул менән ҡайтып йоҡларға ята.

Былар йоҡоларынан тороп, алтын урман менән бара торғас, бер бик киң эҙ күрәләр. «Ниндәй эҙ икән был?» — тип, юллап китәләр. Эҙ һаман китә лә китә.

Биктимер:

— Һеҙ ошонда ҡалып, мине көтөп тороғоҙ, мин китәйем. Бына һеҙгә ҡурай: юлым уңһа, һөт тамыр; һәләк булһам, ҡан тамыр,— тип, ағалары менән хушлашып, ары китә.

Эҙ менән бара торғас, алтын урманды сығып китә. Бик күп тауҙар, һыуҙар аша үтә. Шунан бер ҙур ялан-

да яңғыҙ йорт, яңғыҙ ҡайын күрә. Барып инһә — унда бер әбей йәшәй икән. Иҫәнлек-һаулыҡ һораша. Әбей егеттең тамағын туйҙыра, ҡунаҡ итә. Иртәгеһен, юлға сығыр алдынан, Биктимер теге эҙ хаҡында һорай.

Әбей:

— Мин белмәйем, әҙерәк барғас, бер яңғыҙ йорт, ике ҡайын булыр. Унда минең апайым йәшәй, шунан һора. Ул әйтһә әйтер,— ти.

Егет китә, байтаҡ ер барғас, яңғыҙ йорт, ике ҡайын күрә, бында йәшәгән әбейҙән теге эҙ хаҡында һорай.

Әбей:

— Мин белмәйем,— ти.— Әҙерәк барғас, яңғыҙ йорт, өс ҡайын булыр, шунда минең апайым йәшәй. Ул белһә белер,— ти.

Биктимер өс ҡайынлы яңғыҙ йортҡа ла барып етә. Бында йәшәгән әбейҙән:

— Һин бик күп йәшәгән кеше инде, шундай-шундай эҙҙең серен беләһеңдер? — тип һорай.

— Эй улым,— ти әбей,— был эҙҙән китеп барып, имен ҡайтҡан кеше юҡ әле. Һин дә һәләк булырһың бит,— ти.— Был эҙ бер ҙур йортҡа алып бара. Өйө алтын, ҡоймаһы көмөш, бағанаһы баҡыр, ҡапҡаһы тимер. Был алты ҡолас ала бейә эҙе. Ул өйҙә алтын ҡыҙ йәшәй. Уны өс арыҫлан, дүрт ҡаплан һаҡлай. Алты ҡолас ала бейә тимер бағанала бәйле тора. Алтын өйгә бер нисек тә үтеп инмәле түгел: бик өҫтөнә бик, һаҡ өҫтөнә һаҡ ҡуйылған.

— Үлһәм үлермен, иллә-мәгәр мин ул алтын йортҡа барырға тейешмен! — ти Биктимер.

— Барһаң, анау ҡайыш ҡамсыны ал, бынау итекте кей,— ти әбей.

Биктимер итекте кейеп, ҡамсыны алырға итә — күтәрә алмай. Әбей уға бер һары һыу эсерә. Биктимер ҡамсыны ҡуҙғата биреп ҡуя. Әбей тағы эсергәйне, егет ҡамсыны алып һелтәп ҡуя: уға алтмыш арыҫландың көсө инә.

— Шул ҡамсыны тотоп, алтын йортҡа бар ҙа, һиңә ташланған арыҫландарға, ҡапландарға һуҡ,— улар бесәй һымаҡ булып йыуашланырҙар. Шунан алтын йортҡа үтерһең. Ҡаршы килеүсе булһа, ҡамсың менән һуҡҡыларһың,— ти әбей.— Алтын ҡош булып осоп йөрөй торған ҡыҙ йоҡлап ятҡан бүлмәгә инерһең. Ҡамсың менән бер һуҡ — ҡуҙғалып ҡуйыр, ике һуҡ — икенсе яғына әйләнеп ятыр, өс һуҡ — уяныр. Бына шунан һуң инде үҙен ысынлап туҡмай башла. Ул ялыныр, ә һин туҡмауыңды бел, ҡаны ҡойолғансы туҡма. Ҡан

йөҙләгәнә етер — туҡма. Тубығына, биленә етер — туҡма. «Мин һинеке, егет», тигәс кенә туҡталырһың,— ти әбей.

Биктимер әбейгә мең рәхмәттәр әйтеп, хушлаша ла юлға сыға. Алтын йортҡа етер алдынан аты телгә килеп: «Өс бөртөк ҡылымды ал да мине ебәр, кәрәк булһам, шул ҡылдарҙы яндырып, мине саҡырырһың»,— ти. Биктимер шулай итә.

Бына ул барып етә. Һауаға олғашып торған матур йорт. Үҙе алтын, ҡоймаһы көмөш, бағаналары баҡыр, ҡапҡаһы тимер. Ҡоймаһына һикереп ҡарай — буйы етмәй, ҡапҡаһына тибеп ҡарай — ҡуҙғалмай ҙа. Ҡойма аҫтын ҡаҙып инә. Быны күреп, арыҫландар, ҡапландар өҫтөнә ташланалар. Биктимер килгән берен ҡамсы менән һуғып ҡаршы ала. Бәйҙәге алты ҡолас ала бейә кешнәп ебәрә. Биктимер үҙ йортондағы кеүек йөрөй. Һаҡсыларҙың йөрәген ала — ҡурҡыуҙан бөтөнләй ҡаушап төшәләр.

Биктимер алтын ҡыҙ йоҡлап ятҡан бүлмәгә инә. Бер һуға — ҡыҙ ҡуҙғалып ҡуя; ике һуға — икенсе яғына әйләнеп ята; өс һуға — уянып, дулай башлай. Биктимер туҡмай ҙа туҡмай тегене. Ҡыҙ ялына, егет уның һайын туҡмай. Ҡан аға, Биктимерҙең йөҙләгәнә, тубығына, биленә етә. Ахырғы сиктә ҡыҙ һикереп тора ла: «Етәр, мин һинеке, егет!» — ти.

Был үтә матур ҡыҙ була. Уны бик күп батшалар ҙа ала алмаған икән — береһенә лә бирешмәгән. Биктимер бына ошо ҡыҙ менән алтын йортта икәүләп донъя көтә башлай. Үҙе һунарға йөрөй, ҡош-ҡорт, йәнлек алып ҡайта, бисәһе яңғыҙы өйҙә ҡала.

Берҙән-бер көндө Биктимер ҡатынына:

— Һиңә өйҙә яңғыҙыңа күңелһеҙҙер, әйҙә, һунарға бергә сығайыҡ,— ти.

Бергә сығып, бик оҙаҡ йөрөйҙәр. Ҡайтып килгәндә, сытыр-сатыр йыйып йөрөгән бер әбейгә осрайҙар. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашалар.

Был әбей:

— Ҡарар кешем юҡ, ҡарт көнөмдә сыбыҡ-сабыҡ йыйып йөрөйөм,— тип илай.

Биктимер менән ҡатыны был ҡарсыҡты йәлләп, үҙҙәренә алып ҡайтмаҡсы булалар. Әбей шатланып риза була. Ә ысынында был бисара ҡарсыҡ түгел, ә мәскәй икән.

Иртәгеһен Биктимер тағы һунарға китә. Ҡатыны менән мәскәй әбей өйҙә ҡала. Мәскәй, бик йомшаҡ телләнеп, асыҡ күңелле булған булып, ҡыҙға оҡшай.

— Балам, кейәүеңде яратаһыңмы? — тип һорай был.

— Бик яратам, ул да мине ярата,— ти алтын ҡыҙ.

— Ай балам, улай тип әйтергә ашыҡма. Һине бик күп батшалар ала алманы, ә ул алды. Ни өсөн тиһәң, ул — батыр, уның йөрәге икәү. Һин унан һора, икенсе йөрәгең ҡайҙа, тиң. Ратһа, әйтер,— ти мәскәй.

Биктимер һунарҙан ҡайтып йоҡларға ятҡас, ҡатыны:

— Йөрәге икәү булған кеше генә һинең кеүек батыр була ала, һинең икенсе йөрәгең ҡайҙа? Мине ратһаң, әйт шуны,— ти.

Биктимер ни әйтергә лә белмәй. Ҡатыны ялына, үпкәләй, мине яратмайһың, тип илай. Шунан Биктимер:

— Ишек алдындағы ҡыҙыл әтәс — шул минең икенсе йөрәгем,— ти.

Биктимер иртә менән тағы ла һунарға китә. Мәскәй, алтын ҡыҙҙан һорашып белеп, ҡыҙыл әтәстең муйынын бора. «Бер йөрәк менән әллә ҡайҙа бара алмаçһың әле!» тип уйлай.

Биктимер һунарҙан ҡайта. Ашайҙар, эсәләр, йоҡларға әҙерләнәләр.

Мәскәй ҡыҙҙы ымлап саҡыра ла:

— Әтәстең үҙ йөрәге генә үҙендә, ирең һине алдаған. Тағы ла һора, ратһа, дөрөçөн әйтер,— ти.

Иоҡларға ятҡас, ҡатыны тағы ла ялынып-ялбарып һорай.

— Минең икенсе йөрәгем һиңә ниңә кәрәк һуң? — ти Биктимер.

— Мине яратаһыңмы, юҡмы, шуны белер өсөн,— ти ҡатыны.

— Уң итегемдең табанында аҡ ҡулъяулыҡҡа ураулы ҡыҙыл һаплы бәке булыр — икенсе йөрәгем шул,— ти Биктимер.

Иртән торғас мәскәй һорашып белә. Итекте күрһәтмәй генә тышҡа алып сыға ла эсенә таш тултырып һыуға илтеп ташлай.

Биктимерҙе уяталар, уянмай. Ҡатыны илай. Мәскәй ҙә ҡыҙғанып илаған була.

Алтын ҡыҙ ҡайғыра. Мәскәй уның күңелен табырға тырышҡан була.

— Әйҙә, урманға сығып йөрөйөк, ял ит, күңел ас, ҡайғыңды тарат,— ти.

Урманға сығып, бик оҙаҡ йөрөйҙәр. Ҡайтырға сыға-

лар. Бер һыу буйына еткәс, мәскәй үҙе күмеп киткән ерҙән бер шешә эсемлек ала.

— Бына шуны эсһәң, йөрәгеңә ял булыр, ҡайғың баҫылыр,— ти мәскәй.

Ҡыҙ шуны эсеү менән йоҡлап китә. Мәскәй уны кәмәгә ултыртып, һыуҙың аръяғына алып китә. Унда әллә ниндәй батша ялсылары ҡуш ҡыңғыраулы тройка менән көтөп торалар икән. Алтын ҡыҙҙы ултырталар ҙа алып китәләр.

Батша быларҙы шатланып ҡаршы ала. Вазифаңды үтәнең тип, мәскәйгә ҙур сәңгелдәк эшләтә, ике ялсы һәр ваҡыт уны тәрбиәләп, бәүетеп кенә торалар.

Айырылышҡан ерҙә аҙналар буйы Биктимерҙе көтөп ултырған ағалары ҡараһалар — ҡурайҙан ҡан аға. Былар әлеге эҙ менән һораша-һораша китәләр. Ҡустыларын барып табалар. Ҡараһалар — үлгән. Эштең ниҙә икәнен аңлап алалар. Шул саҡ яҡында ғына бер тауыш ишетелә. Тауыш килгән яҡҡа барһалар — нимәгәлер сырмаланып бөтөп, ысҡына алмай йөҙәгән сәмреғош була. Ул, телгә килеп:

— Ысҡындырығыҙ мине, йомошоғоҙҙо үтәрмен! — ти.

Сәмреғошто ысҡындыралар. Унан юғалған итекте табышып биреүҙе һорайҙар. Сәмреғош быларҙың икеһен дә арҡаһына ултырта ла итек ташланған һыу буйына алып китә. Һыу өҫтөндә түбән ҡарап бер аҙ осоп йөрөгәс, бер ергә төшә.

— Йылғаның бынау тәңгәлендә һыу кисәгегә ҡарағанда артып тора, итек шунда батырылғандыр, инеп ҡарағыҙ,— ти.

Йылғаның шул тәңгәленә төшөп ҡараһалар — таш тултырып ташланған һыңар итек шунда ята. Итекте алып ҡайтып, икенсе һыңары менән бергә ҡуялар. Биктимер урынынан һикереп тора ла:

— Әллә оҙағыраҡ йоҡлап ташлағанмын инде? — ти.

— Беҙ килмәһәк, мәңге йоҡлар инең әле, атаң башы! — тиҙәр ағалары. Итек мажараһын һөйләп бирәләр.

Бына шунан һуң Биктимер бөтәһен дә төшөнә. Өс ҡылды яндырып, атын килтертә лә шуға атланып алып ҡатынын эҙләп сығып китә. Йылғаны аша сығып, бик күп ер барғас, бер ҙур ҡалаға етә. Ҡала ситендәге яңғыҙ йортҡа фатирға туҡтай. Иртәгеһен тышҡа сыҡһа — һәр йортта ҡыҙыл тыу элеүле, ти.

— Был ни хәл, ниндәй байрам? — тип һорай Биктимер йорт хужаһынан.

— Батша байрамы,— тиҙәр уға.— Әллә ҡайҙағы алтын ҡыҙҙы һуғышып алған, шуны улына бирә, туй яһай,— тиҙәр уға.

Биктимер батша һарайы алдына бара, кеше бик күп. Ҡыҙ сарҙаҡта була. Һарғайған, кипкән, кеше таныpлыҡ түгел. Биктимер халыҡ араһында йөрөй, ни һөйләгәндәрен тыңлай. Ҡыҙ ҡырҡ көн ғәҙәт һаҡларға ҡушҡан икән, шунһыҙ ҡушылмайым, тип әйтә, ти.

Батша төрлө юлдар менән ҡыҙҙы һауыҡтырырға тырыша, ти. Ахыры сиктә батша иғлан иткән: «Кем дә кем ҡыҙҙы һауыҡтыра, шуға ярты байлығымды бирәм»,— тигән.

Биктимер баяғы фатир хужаһы әбейҙе батшаға ебәрә. «Һауыҡтырыусы бар тип әйт»,— ти. Әбей барып әйтә, Биктимерҙе ҡуш ҡыңғырауҙар тағылған тройка менән килеп алалар.

Егет бер бот арыш оно һорай. Бирәләр. Аш бешертә. Арыш ҡамырын яһай ҙа, ҡыҙ биргән алтын балдаҡты ҡамырға баҫа. Балдаҡта ҡыҙҙың исеме яҙылған була. Исем ҡамырға сыға. Биктимер: «Күрһәтегеҙ ҡыҙға, оҡшар микән ҡамыр?» — ти. Ҡыҙға алып барып күрһәтәләр. Ҡыҙ, ҡамырҙа үҙенең исемен күреп: «Килгән икән!» — тип шатлана. Бөтөнләй һауығып китә.

Биктимер батшаның ярты байлығын алып та тормай. Яйын тура килтереп, ҡатынын үҙе менән бергә атҡа атландырып ала ла алтын йортҡа ҡарай сабып та китә. Батша үҙенең улы менән ауыҙын асып тороп ҡала.

Бер аҙ донъя көткәс, Биктимер ҡатынына:

— Китәйек минең ил яғына,— ти.

Китәләр. Ҡыҙ алтын йортто алтын йомғаҡҡа әйләндереп ала.

Ҡайтып етәләр. Ағалары ла ҡайтҡан икән. Иллә мәгәр атаһы бик йонсоған, Биктимер өсөн ҡайғырып, күҙҙәре һуҡырайған, ти.

Биктимер атаһына:

— Атай, бына баҡсала талығып-талығып һайраған теге алтын ҡошто алып ҡайттым. Ул алтын ҡош түгел хәҙер, ә һинең алтын киленең! — ти.

Атаһы:

— Иҫән-һау йөрөп ҡайтыуыңа бик шатмын, улым. Алтын кәләшеңде генә үҙ күҙҙәрем менән күрергә насип булмаған икән шул,— тип әйтте, ти.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Биктимерҙең ҡатыны алтын ҡошҡа әүерелде лә, ҡайныһының күҙ алдына килеп, ҡанаттарын өс тапҡыр елпегәйне, ҡарттың күҙҙәре асылып, элеккенән дә яҡшы күрә башланылар, ти.

Шунан алтын ҡош, йәнә ҡатынға әйләнеп, алтын йомғаҡты тәгәрәтеп ебәрә — бына тигән бер йорт төҙөлә. Эсе тулы бүлмә, бүлмә һайын байлыҡ. Йәнең ни теләй — бары ла бар.

Биктимер менән Алтынҡайҙың ҡырҡ көн туйҙары була. Аяҡҡа баҫҡан, артына ултырған берәү ҙә туйҙан ҡалмай. Һыйлананалар, эсәләр, иллә-мәгәр иҫермәйҙәр. Ни өсөн тиһәң, эсемлектең эскән бере мыйыҡтан ағып, ауыҙға етмәй ҡала икән.

## ТАҘ БАТЫР

Борон- борон заманда йәшәгән, ти, бер ҡарт менән ҡарсыҡ. Бик татыу ғүмер иткәндәр, ти, улар. Тырышып эшләп йорт, кәртә-ҡура ҡорғандар, аҙ-маҙ малтыуар булдырғандар. Ҡарт та, ҡарсыҡ та кешегә яҡшылыҡ итергә генә тырышҡан, үҙҙәре лә бер кемдән дә зарар күрмәй, тыныс ҡына йәшәргә теләгәндәр. Улар үлеү белмәй, гел генә һау-сәләмәт йәшәү хаҡында хыялланғандар. Ауырып киткән саҡтарында бер-береһен ҡарап, үҙ белдектәренсә дауалап, тиҙерәк аяҡҡа баҫтырырға тырышҡандар.

Был әбей менән бабайҙың өс улы булған. Оло улы — Алтынбай, уртансыһы — Көмөшбай, кесеһе — Аҡылбай. Әммә Аҡылбайға атаһы менән әсәһенән башҡа үҙ исеме менән өндәшеүсе булмаған, уны Таҙ тип кенә йөрөткәндәр.

Берҙән-бер көндә әбей бик ҡаты ауырып киткән. Бабай уны ни саҡлы ғына дауалап ҡарамаһын, һауыҡтыра алмаған. Әбей үлеп тә ҡуйған. Ҡарт та, етем ҡалған улдары ла бик ҡайғырышҡан. Әммә күҙ йәше ҡойоу менән үлгән кешене терелтеп буламы һуң. Бабай, ҡарсығын терелтер өсөн берәй әмәлен тапмаҡсы булып, улдарын саҡырып алған. Өлкән улы Алтынбай менән уртансы улы Көмөшбайға ҡарап:

— Улдарым! Һеҙ икегеҙ ҙә аҡыллы, ҡайҙа барһағыҙ ҙа хур булмаҫһығыҙ. Хәҙер үк үлгән кешене терелтә торған тереһыу эҙләргә сығып китегеҙ, донъяның бөтә дүрт яғын да байҡағыҙ, кәрәк икән, ер ситенә барып етегеҙ, әммә эҙләгән нәмәгеҙҙе тапмай ҡайтмағыҙ! — тигән.

Атаһының был бойороғон тыңлап торған Аҡылбай:

— Мин дә барам,— ти башлағас, ағалары уға:

— Һин имгәкте эйәртеп йөрөп булмаҫ инде. Мейес башына мен дә борсаҡ сүплә, таҙыңды тырна ла беҙҙе һағынып йырла. Тик шуны ҡара, ныҡ кипкән борсаҡ ашап, тешеңде ҡырма!— тип көләшкәндәр.

Атаһы ла Таҙға бармаҫҡа ҡушҡан. Ундай ауыр эште булдыра алмаҫһың, тигән.

Алтынбай менән Көмөшбай икеһе лә бына тигән ат атланып, ҡулдарына уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс алып, юлға сығып та киткәндәр.

Таҙ әсәһенең үлеүенә барыһынан да ныҡыраҡ ҡайғырған, ни өсөн тиһәң, бахырҙы ағалары кәмһеткән, мыҫҡыллаған саҡтарҙа, уны әсәһе генә яҡлай, иркәләй торған булған. Шуға Таҙ бик инәлеп һорағас, атаһы:

— Күңелең булһын, бар әйҙә, илләмәгәр бик алыҫ китмә, әйләнеп ҡайта алмай йөрөүең бар, сит ерҙәрҙә эт-ҡош тырнағына эләгеүең дә бар,— тигән.

Таҙға атаһы ябағаһын да ҡоя алмаған бер Күк дүнән биргән, ҡалдыҡ-боҫтоҡ кейем кейҙергән, иҫке-моҫҡо ҡорал тотторған. Ағалары артынса Таҙ шулай юлға сыҡҡан. Әммә ағайҙарының ниндәй юлдан, ҡайһы яҡҡа киткәнен белмәй аптырап ҡалған. Көтмәгәндә Таҙ менгән Күк дүнән, телгә килеп:

— Егет, теҙгенде бушат, ҡайҙа барырға мин үҙем беләм,— тигән.

Таҙ теҙгенде бушатҡан. Күк дүнән иге-сиге күренмәҫ далаға ҡарап елгән.

Таҙ Алтынбай менән Көмөшбайҙан өс тәүлек һуңлап сыҡҡан булһа ла, Күк дүнән уны тиҙ арала ағайҙары янына илтеп еткергән. Алтынбай менән Көмөшбай, арттарынан баҫтырып килгән ҡустыларын күргәс: «Ҡара, ҡара, беҙҙең Таҙ килә, йығылып үлерһең, билләһи»,— тип, быуындары ҡатып көләшкәндәр.

Таҙға ағайҙары кире ҡайтырға ҡушҡан,— Таҙ ҡайтып китмәгән. Шунан һуң Алтынбай менән Көмөшбай, икеһе ике яҡтан төшөп алып, Таҙҙы ҡамсы менән ярырға тотонмаһындармы! Таҙ барыбер ат башын кире бормаған, һаман ағайҙары артынан бара биргән.

Бара торғас, алда өсөһө өс яҡҡа айырылып киткән өс юл күренгән. Юл сатына еткәс, Алтынбай:

— Алдыбыҙҙа өс юл ята. Беҙ хәҙер бына ошо юлдар менән өсөбөҙ өс яҡҡа китәйек,— тигән.

Көмөшбай быны хуп күргән булған, Таҙ иһә ҡаршы төшөп:

— Юҡ, айырылмайыҡ, ағайҙар, берлектә генә терек-

лек. Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар, тигәндәр. Ҡайһы яҡҡа ҡараһаң да, үләне көйгән сикһеҙ ялан. Күпме ваҡыттан бирле аттарыбыҙҙы эсерергә һыу тапмайбыҙ, үҙебеҙҙең дә өйҙән алып сыҡҡан аҙыҡ-түлек бөттө. Йәнлеге лә, ҡошо ла осрамай, исмаһам. Айырылһаҡ, асҡа үлербеҙ, аттарыбыҙ ҙа хәлдән тайыр. Ә бергә булһаҡ, берәй әмәлән табырбыҙ,— тигән.

Ағайҙары быны тыңлап торған да:

— Хәйләкәр! Таҙ! Ғүмерҙә һинең һунарҙа йөрөгәнең, ҡош аулағаның юҡ. Һин шулай беҙҙең елкәлә йәшәмәксе булаһыңмы ни? Үҙ көнөңдө үҙең күр, ана бара юлың! — тигәндәр.

Таҙға һул яҡҡа киткән юлға төшөп алырға ҡушҡандар, Көмөшбай урта юлдан, ә Алтынбай уң юлдан киткән. Таҙ күҙҙән юғалғас та, Алтынбай менән Көмөшбай ҡабат бергә ҡушылған. «Таҙҙың башы олаҡты, ябаға дүнәне әллә ҡайҙа китә алмаҫ, атайым янына ҡайтып китер»,— тип көлөшә-көлөшә алға киткәндәр.

Ағайҙарынан айырылгас, Таҙ үҙенең берҙән-бер тоғро юлдашы булған Күк дүнәне менән алға бара биргән. Аҫамағанға-эсмәгәнгә байтаҡ көн үткән. Атып алырҙай йәнлек тә, ҡош та тап булмаған, һыу ҙа табалмаған. Шулай ыҙаланып барғанда, ҡайҙандыр Таҙ алдына тояғы ялпаҡ бер буҙ тарпан килеп сыҡҡан. Был ҡыр атын күреп, Таҙ тәүҙә бик ҡыуанған. Ашарға ит булды, тип уғын йәйәһенә һала, ә бысағын ҡапшай башлаған. Шул саҡ Таҙҙың башына ҡапыл шундай уй килгән: «Ярай, мин был тарпанды атырмын атыуын, бер-ике тапҡыр туйғансы ашармын да. Ә ҡалған итте ҡайҙа итергә? Тороп ҡалыр, әрәм булыр. Кем белә, ул тарпандың быуаҙ булыуы ла бар. Ул ваҡытта бер юлы ике йән эйәһе харап булыр. Мин ағайҙарымдан айырылған кеүек, был тарпан да, бәлки, үҙ өйөрөнән айырылғандыр, шунлыҡтан минең яныма килгәндер. Был хайуанды харап итмәйем. Шунда миңә тигән берәй ҡош-фәлән осрар әле,— тип, уғын кире урынына һалып ҡуйған.

Аҡрынлап булһа ла, Таҙ һаман алға табан барған. Күк дүнәне лә ҡарышмай атлай биргән, тик уның ҡолаҡтары инде шәмдәй текә баҫып тормаған, башы ла түбән эйелгән. Бахыр аттың морононан эҫе тын бөркөп торған, аҫҡы ирене һалынып төшкән, тештәре саңланып бөткән.

Бына шулай ғазапланып барғанда, баяғы тояғы ялпаҡ буҙ тарпан йәнә Таҙ алдына килеп сыҡан. Таҙ: «Моғайын, был ат мине асҡа үлеүҙән ҡотҡарыу өсөн йөрөйҙөр, юғиһә бер үк хайуан ике тапҡыр күренмәҫ ине»,— тип уйлаған. Был юлы тояғы ялпаҡ буҙ тарпанды атып алмаҡсы булған. Әммә уның башына тағы ла баяғы уй килгән: «Бер-ике тапҡыр туйынам тип, ошондай хайуанды харап итеү егетлек түгел, минән ҡалған итте кем ашар?»

Таҙ тарпанды тағы аяған да ары киткән. Бара торғас, шул саҡлы йонсоған, хатта аттан төшһә, ҡабат менеп ултырырлыҡ та хәле ҡалмаған. Башын аҫҡа эйгән Күк дүнән да аяҡтарын күтәреп атлай алмай башлаған. Бына ошо мәлдә теге тояғы ялпаҡ буҙ тарпан өсөнсө тапҡыр килеп сыҡҡан. Таҙ был юлы ла уғын тарпанға тоҫҡаған, шулай уҡ был юлы ла атыу уйынан дүнгән. Уғын һаҙағына кире һалып, артабан китмәк булған. Әммә аҡтыҡ сиккә етеп хәлдән тайған Күк дүнән урынынан ҡуҙғалып китә алмаған.

Бына шул саҡ ҡаршыла баҫып торған тояғы ялпаҡ буҙ тарпан ҡапыл аҡ һаҡаллы ҡартҡа әүерелгән дә, Таҙға ҡарап:

— Егет, мин һинең оҙаҡ юлдан килеп арығаныңды, аслыҡтан йонсоуыңды ла яҡшы беләм,— тигән.— Һине өс тапҡыр һынап ҡараным: өс тапҡыр тояғы ялпаҡ буҙ тарпан булып юлыңа ҡаршы сыҡтым; яныңа килгән хайуанды атып ҡолатыу ауыр эш түгел ине, иллә-мәгәр һин атманың, сыҙамлыҡ, сабырлыҡ күрһәттең,— тигән.— Һин яҡшылыҡҡа ҡаршы яҡшылыҡ күрергә хаҡлыһың. Әйт, ниндәй мохтажың бар?— тигән.

— Эй бабай, үҙең дә күреп тораһың, үҙемә лә, атыма ла туйғансы ашап-эсергә кәрәк, беренсе мохтажым шул,— тигән Таҙ.

Аҡ һаҡаллы ҡарт, Таҙ янына килеп, атының һыртынан һыйпаған икән, Күк дүнән йәнә теҙгенен тотоп тыя алмаҫлыҡ толпарға әйләнгән. Шул ерҙә ҡарт Таҙға: «Арттан эйәр»,— тигән, үҙе ҡабат буҙ тарпанға әүерелеп, атҡан уҡтай далаға осҡан. Таҙҙың Күк дүнәне лә унан ҡалышмаған. Бара торғас, бейек ҡойма менән уратып алынған бер йорт күренгән. Буҙ тарпан шул йортҡа барып ингән, ә ҡапҡанан үткәс тә, тағы аҡ һаҡаллы ҡартҡа әүерелеп, таҙға:

— Рәхим ит, егет, ҡәҙерле ҡунағым булырһың, ял итерһең,— тигән. Таҙҙы өйгә алып ингән, Күк дүнәнде ат һарайына кертеп ҡуйған. Егетте лә, атын да бик һәйбәтләп һыйлаған. Шунан һуң ҡарт:

— Йә, егет, хәҙер бөтәһен дә һөйләп бир. Юлыңдың башы ҡайҙан ине, ниндәй йомош менән был яҡҡа килеп сыҡтың? Был тирәгә ят кешеләр килеп етә алмай, еткәндәре кире әйләнеп ҡайта алмай. Шуныһын да белеп тор,— тигән.

Таҙ үҙе хаҡында түкмәй-сәсмәй, әнәһенән ебенәсә һөйләп биргән. Әсәһенең үлеүен, уны яңынан терелтеү өсөн тереһыу эҙләп йөрөүен әйткән.

Ҡарт бер аҙ уйланып торғандан һуң:

— Егет, һинең Күк дүнәнең ябай ат түгел, толпар затынан ул, тик ҡанаттары ғына етлекмәгән. Иллә-мәгәр бының өсөн ҡайғырма, минең өйҙән сығыуға уның ҡанаттары ла үҫеп өлгөрөр. Был толпар үҙ теләгеңә ирешергә ярҙам итер. Бөтә эште ул әйткәнсә эшлә,— тигән.

Ошо һүҙҙәренән һуң ҡарт Таҙҙы ат һарайына алып барған. Шунда ул ҡуйынынан алған ҡауырһын менән дүнәндең һыртынан һыйпаған икән, хайуан ҡапыл осорға ынтылып торған толпарға әйләнгән. Толпар яңғыратып кешнәп ебәргән, ярһый, торған урынында үрәпсей башлаған. Шунан һуң ҡарт, толпарҙың башынан һыйпап, уға әллә нәмә шыбырлағас, толпар тынысланған. Иң һуңында ҡарт Таҙға ҡырҡ ҡоласлы тимер сынйыр, бер ус бесән менән бер киҫәк ит тотторған да:

— Егет, былырҙың береһен дә юғалтма. Ни өсөн кәрәклеген, ваҡыты килеп еткәс, толпарың әйтер,— тигән.

Таҙ, аҡ һаҡаллы, алтын аҡыллы ҡартҡа мең рәхмәт әйтеп, ул биргән нәмәләрҙе алып, юлын дауам иткән. Аты, телгә килеп, Таҙға күҙен йоморға ҡушҡан. Таҙ күҙен йомоуға ҡолаҡ төбөндә выжлап ел иҫкәнде генә һиҙгән. Бер аҙҙан, тирә-яҡ һил булғас, күҙен асып ебәрһә, алтын менән саф быяланан һалынған, баҡсаһында төрлө аҫыл ҡоштар һайрап торған бер һарай алдына килеп төшөүен күргән. Әммә был һарайға һис инерлек түгел икән: ул бик бейек таш ҡойма менән уратып алынған, ә ҡапҡаһы бөтөнләй юҡ, ти. Шул ваҡыт толпар, телгә килеп, аптырап торған Таҙҙан:

— Ҡулыңдағы ҡамсың менән уң яҡ ҡабырғама һуҡ, һул ҡабырғамдан ҡан сәсрәп сығырлыҡ булһын,— тигән.

Таҙ ул ҡушҡанса эшләгән. Толпар, ун ике ҡолас бейеклектәге таш ҡойманы күҙ асып йомғансы һикереп үтеп, һарай ишеге алдына барып та төшкән. Әммә ишек алдында һарайҙы һаҡлай торған ғәләмәт ҙур мөгөҙлө бер үгеҙ менән уҫал эттәр тора икән. Был ишектән бер кем дә үтмәле түгел. Инергә теләгән кешене

үгеҙ һөҙөп ултерә, үгеҙҙән ҡотолғандарҙы уҫал эттәр өҙгөләп ташлай икән. Быларҙы күреп Таҙ ни эшләргә белмәй торғанда, толпар йәнә телгә килеп:

— Мине һарай эргәһендәге баҡсаға илт, унда йөҙ йыллаған бер алма ағасы булыр. Шуға мине ҡырҡ ҡоласлы сынйыр менән бәйләп ҡуй. Ҡулыңа баяғы аҡ һаҡаллы бабай биргән ит киҫәге менән бер ус бесән-де ал. Бесәнен үгеҙгә бирерһең, итен эттәргә ташларһың, шунан үҙең һарайға инерһең. Ингәс, ни эшләргә кәрәклеген үҙең күрерһең. Тереһыу ошо һарайҙа һаҡлана,— тигән.

Егет, толпар ҡушҡанса, һарай ишегенә ҡарап йүнәлгән. Һаҡтағы үгеҙ, башын сайҡап, үкерә башлаған. Ул үкергәндә, ер тетрәп торған, баҡсалағы ҡоштар һайрауҙан туҡтаған. Оҙон ботло, ҙур томшоҡло яман эттәр тештәрен ыржайтып Таҙға ташланған. Егет бер ҙә ҡаушамай ғына үгеҙгә бер ус бесәнде ташлаған, эттәргә ит киҫәген ырғытҡан. Үгеҙ — бесән, эттәр ит менән алданған арала, Таҙ һарайға инеп тә киткән.

Һарай иҫәпһеҙ күп бүлмәле икән. Һәр бүлмә үҙенә бер төрлө итеп эшләнгән. Тәүге бүлмәнең иҙәненә йәшел келәм түшәлгән, стеналарына йәшел хәтфә эленгән. Икенсе бүлмә башҡа төҫтәге келәмдәр менән йыһазландырылған. Өсөнсөһө иҙәненән алып түшәменә тиклем көҙгөнән генә торған. Егет, тәүге ике бүлмәне үтеп, көҙгөнән генә торған бүлмәгә ингәс, ҡайҙа барырға белмәй аптырап ҡалған. Ҡайһы яҡҡа ғына ҡарамаһын, унда тик үҙен генә күргән. Аптырап торғанда әмәле табылған. Ҡаршыла аҙ ғына асылып торған ишек ярығынан күрше бүлмәнең яҡтылығы төшөп тора икән. Таҙ ипләп кенә шул бүлмәгә барып ингән.

Инһә, ни күҙе менән күрһен: шундай иркен бүлмә, иҙәне лә, стеналары ла, түшәме лә күҙҙең яуын алып торған аҫыл быяланан эшләнгән. Бүлмәнең тап уртаһында топ-тоноҡ күл бар, ти, ә күлдә алтын балыҡтар уйнап йөрөй, ти. Күл тирәһендә әллә ниндәй ағастар, матур-матур гөлдәр үҫеп ултыра; ҡыҙарып бешеп, өҙөлөп төшөргә торған емештәр араһында былбылдар, башҡа төрлө аҫыл ҡоштар һайрай, ти. Ана шул һайрар ҡоштарҙың ҡайһы берҙәре Таҙҙың иңбашына килеп ҡуналар икән.

Таҙ аяҡ осона баҫып күл янына барған, һыуын татып ҡараған. Һыу бик татлы булған. Ул һыуҙы татып ҡарағанда, бөтә ҡоштар һайрауҙан, алтын балыҡтар уйнауҙан туҡтаған. Күл тирәһендәге ағастар емешле ботаҡтары менән егеттең алдына эйелгән. Шунан Таҙ

күлдең аръяғына йүнәлгән. Унда киң япраҡлы бейек ағастар үҫеп ултыра икән. Ана шул ғәләмәт бейек ағас күләгәһе аҫтында алтын аяҡлы бер ысын карауат тора, ти. Карауатта, аҡ атлас тышлы мамыҡ мендәрҙәргә күмелеп, йәш кенә бер ҡыҙ йоҡлап ята икән, ти. Тел менән һөйләп тә, ҡауырһын менән яҙып та килештерерлек түгел был ҡыҙҙың һылыулығын. Көндөҙ ҡояш көнләшер, төнөн ай оялыр булған, ти, үҙенән. Бына ҡайһылай сибәр ҡыҙ булған ул. Әллә ниндәй матур ҡоштар, ҡыҙҙың баш өҫтөнә килеп, ҡанаттарын елпеп еләҫләндереп торғандар. Ә ҡыҙ һарайға сит кеше ингәнен дә һиҙмәй, ғәмһеҙ йоҡлаған да йоҡлаған. (Уның әле йоҡлай торған сағы булған.) Баяғы аҡ һаҡаллы ҡарт Таҙҙы ҡыҙҙың йоҡлаған сағына самалап ебәргән инде. Юғиһә ҡыҙ уяу ваҡытта һарайға инеү бөтөнләй мөмкин түгел, ти.

Үлгәнде терелтә, ҡартты йәшәртә торған тереһыуҙың хужаһы ошо ҡыҙ икән. Ул үҙе ҡартайыуҙың нимә икәнен дә белмәгән, гел генә йәш көйө торған. Һәр аҙнаның дүрт көнөн ел арбаһына ултырып, донъя гиҙеп йөрөгән. Шул арбаһы менән ул күҙ асып йомғансы бер ерҙән икенсе ергә, бер илдән икенсе илгә осҡан. Шулай ул үҙенә тиң егет эҙләгән,— һис таба алмаған. Дүрт көн ил гиҙгәс, өс көн ял итә торған булған. Беҙҙең Таҙ был һылыу янына барып ингәндә, уға уянырға ете тапҡыр ғына тын алырлыҡ ваҡыт ҡалған икән.

Бына ошондай үтә һылыу ҡыҙҙы күреп, Таҙ ни эшләргә лә белмәй ҡатып ҡалған. Шул арала ҡоштар нығыраҡ һайраша, сырылдаша башлаған, ел иҫмәһә лә, ағас япраҡтары шыбырлашҡан. Тап шул ваҡытта ҡыҙ аҡрын ғына күҙ керпектәрен асҡан, ашыҡмай ғына башын ҡалҡыта башлаған, ти. Ул ҡуҙғалғас, бүлмә тағы ла яҡтыраҡ булып киткән, һарай эсендәге күл өҫтөндә нурҙар уйнаған.

Карауатҡа яҡын ғына баҫып торған егетте күреп, ҡыҙ ҡапыл һиҫкәнеп киткән, өҫтөнән шыуып төшкән ебәкте ике ҡулы менән тотоп, күкрәген ҡаплаған. Бер ни тиклем ваҡыт ҡыҙ ҙа, егет тә бер-береһенә өндәшмәй, аптырашып ҡарап торғандар. Көтмәгәндә үҙ бүлмәһендә ят кешене күреүгә хайран ҡалған ҡыҙ бер аҙҙан һуң ғына егеткә һорау биргән:

— Егет, һин кем, ҡайҙан килдең, минең һарайыма нисек индең? — тигән.

— Мин Аҡылбай, атайым менән әсәйемдән бүтән кеше Таҙ тип йөрөтә. Бик алыҫ илдән килдем.

— Һиңә бында нимә кәрәк?

Бындай һылыу ҡыҙҙы күргәс, Таҙ тәүҙә үҙенең нимә артынан килгәнен дә онотҡан. Ахырҙа:

— Эй, һылыу ҡыҙ! Һинең кеүек иҫ киткес һылыуҙы өнөмдә түгел, төшөмдә лә күргәнем юҡ ине. Кем ҡыҙы булаһың һуң? — тип һораған.

Төрлө илдәрҙә йөрөп тә, иҫәпһеҙ күп кеше күреп тә һылыу ҡыҙға быға тиклем бер егет менән дә икәүҙән-икәү генә ҡалып һөйләшергә тура килмәгән икән. Ул, янында торған егеткә йәнә текләберәк ҡарап: «Был көнгә тиклем мине бик күп егеттәр эҙләп-эҙләп тә таба алмағайны. Һарайыма инергә теләүселәр күп булһа ла, береһенең дә инә алғаны юҡ ине. Был егет мине килеп тапҡан, һарайыма үтә алған. Моғайын, ул бик аҡыллылыр, бик батырҙыр, мин эҙләгән егет ошолор», — тип уйлаған. Таҙҙың күҙҙәренә ҡарап йылмайған. Ҡыҙ йылмайғанда сәселгән күҙ нурҙары егеттең күҙҙәрен сағылдырған, йөрәген елкендергән. Ҡыҙ өндәшмәйенсә генә ҡулдарын егеткә һуҙған. Был ваҡыт бөтә ҡоштар һайрашыуҙан туҡтаған, пырылдашып осоп, күлдең аръяғына күскән, шунда улар ағастар, гөлдәр, сәскәләр араһына йәшеренгәндәр. Бөтә һарай тып-тын булып ҡалған.

Егеттең һарай эсендә күпме ваҡыт булыуын бер кем дә белмәгән. Был хаҡта егет менән ҡыҙ үҙҙәре лә әйтә алмаҫ ине. Әммә алма ағасына сынйыр менән бәйләп ҡалдырған толпар күптән инде егетте ашҡынып көткән.

Таҙ батыр һарайҙа уҙғарған ваҡытын төшөммө был, өнөммө тип уйланып торғанда, ҡапыл ат кешнәгән тауыш ишеткән. Шул ваҡыт был һарайға ни йомош менән килеүе иҫенә төшөп, бошона башлаған. «Инде ни эшләргә? Һарайҙан сығып китһәм, һылыу ҡыҙҙан айырылам, ошондай бәхеттән, ожмахтағы кеүек рәхәт тормоштан мәхрүм булам; һарайҙа ҡалып, тереһыуҙы алып ҡайтмаһам, үлгән әсәйем яңынан терелмәйәсәк», — тип уйланған.

Таҙҙың бойоҡҡанын күреп, ҡыҙы:

— Егет, йөҙөңә ниндәйҙер борсолоу ғәләмәте сыҡты. Ни хәсрәтең бар? — тип һораған.

Таҙ әсәһенең үлеүен, уны яңынан терелтәһе килеүен, шуның өсөн тереһыу эҙләргә сығып китеүен бәйнә-бәйнә һөйләп биргән. Һылыу ҡыҙ, Таҙҙың һөйләгәнен тыңлағас, егетте тағы ла нығыраҡ ярата башлаған, ни өсөн тиһәң, быға тиклем бушҡа күл булып ятҡан был тереһыуҙы килеп табыусы ла, әжәлгә дарыу итеп алып китеүсе лә булмаған. Шунда ҡыҙ:

— Эй, батырым, бәгерем! Мин һинән башҡа тора

алмам, һарайҙан китә ҡалһаң, шиңгән гөл кеүек һарғайырмын. Элек үҙемә тиң егет эҙләп байтаҡ ғүмерем уҙҙы, инде теләгемә ирештем тигәндә генә, мине ташлап китәһең, ҡайғы-хәсрәт утына һалаһың. Китмә минең янымдан, китмә, батырым, минең һарайымдан, бергә-бергә ғүмер итербеҙ; һарайыма, ана шул күлгә һин хужа булырһың,— тип ялынған.

Быны тыңлап, Таҙ:

— Юҡ, йәнем, һылыуым, ҡала алмайым,— атайыма биргән һүҙемдән дүнә алмайым. Үлгән әсәйемде терелтмәй тороп, һинең менән бергә була алмайым. Мин, үҙ илемә ҡайтып, әсәйемде терелтермен дә ҡабат һинең янyңа килермен. Бына шунан һуң ғүмер буйы бергә булырбыҙ,— тигән дә һарайҙан сыға башлаған.

Аҫыл һарайҙың аҫыл ҡыҙы:

— Мин һине көтәрмен. Тик үҙеңде һаҡлай күр. Юлға сыҡҡансы тамағыңды туйҙыр,— ти, Таҙ алдына биҙәкле сүгәтәгә һалып ҡаймаҡ,күпереп бешкән сүрәк килтереп ҡуйған, бер туҫтаҡ шәрбәтле һыу ҙа биргән. Таҙ сүрәкте ҡаймаҡлап ашап, һыуын эсә башлаһа, хайран ҡалған: күпме ашамаһын, эсмәһен, сүрәк тә, һыу ҙа һис кәмемәгән. Ҡаймағы ғына бөткән.

Ашап-эсеп туйғас, Таҙ юлға сығырға булған. Ҡыҙ уға, быныһы үҙеңә, тип бер сүрәк менән бер бәләкәй шешә шәрбәтле һыу биргән, быныһы әсәйеңде терелтер өсөн тип, бер шешә тереһыу тотторған.

Таҙ толпарын сыңйырынан ысҡындырып атланған да, аты әйткәнсә, өс тапҡыр уның һул ҡабырғаһына һуғып, уң яҡ ҡабырғаһынан ҡан сәсрәткән. Шунан егет күҙен йомған. Таҙ батырҙың битенә әсе ел бәрелеп, ҡолаҡ төбөндә выжылдаған. Күҙен асҡанда инде ул үҙен баяғы аҡ һаҡаллы ҡарттың йортонда күргән. Ҡарт унан бөтәһен дә ентекләп һорашҡан. Таҙ бәйнә-бәйнә һөйләп биргән.

Шунан ҡарт:

— Егет, һин бик күп ҡыйыу батырҙар ирешә алмаған бәхеткә ирешкәнһең, былай булғас. Һин, ысынлап та, мин эҙләгән ҡыйыу егет икәнһең. Был батырлығың өсөн мин һиңә йортомдағы ҡырҡ таш келәттең утыҙ туғыҙын асып күрһәтәм. Шул келәттәрҙән йәнең теләгән нәмәне үҙең һайлап алырһың,— тигән.

Ҡарт бер-бер артлы утыҙ туғыҙ келәтте асып күрһәткән. Ул келәттәр алтын, көмөш, гәүһәр, яҡут, тағы әллә ниндәй аҫыл таштар, төрлө-төрлө ҡиммәтле йыһаздар менән тулған икән. Әммә Таҙ батыр бер нәмәне лә алмаған. Уның ҡырҡынсы келәттә нимә барлығын

белгеһе килгән. Ә ҡарт ҡырҡынсы келәтте асырға риза булмаған. Егет бик ялынғас, ҡарт ҡырҡынсыһын да асырға булған, тик ошондай бер шарт ҡуйған:

— Мин ҡырҡынсы келәтте асам, ә һин миңә бер нисә тамсы тереһыуыңды бир, уның миндә лә булыуы хәйерле,— тигән.

Таҙ батыр:

— Бабай, һин кемде терелтергә итәһең һуң?— тип һораған.

— Уныһын белмәһәң дә ярар һиңә,— тигән ҡарт.

Таҙ батыр ҡарышып тормаған, шешәләге тереһыуҙың бер нисә тамсыһын аҡ һаҡаллы ҡартҡа биргән. Шунан һуң ҡырҡынсы келәтте лә асҡандар. Быныһын күреп, Таҙ батыр ни әйтергә лә белмәй аптырап ҡалған: унда аяҡ-ҡулдары бығауланған хәлдә Алтынбай менән Көмөшбай бикләнеп ултырмаһынмы!

Ә был хәл шулай килеп сыҡҡан. Алтынбай менән Көмөшбайға, Таҙ һымаҡ, юлда бик яфа сигергә, асығырға тура килгән. Уларға ла шул уҡ тояғы ялпаҡ буҙ тарпан осраған. Алтынбай менән Көмөшбай был хайуанды күреү менән атып йыҡҡандар. Тик янына бара башлағас, йығылған тарпан ҡапыл юҡ булған. Ике туған, аптырашып ҡалып, артабан юл тотҡан. Бер аҙ барғас, тағы ла яңғыҙ тарпан тап булған. Алтынбай менән Көмөшбай был юлы ла уны атып йыҡҡандар, әммә янына бара башлағас, теге йәнә юғалған. Аптыраған ике юлсы алға ҡарай киткән. Шул уҡ тарпан өсөнсө тапҡыр килеп сыҡҡан. Был юлы хайуанды икәүһе бергә атып ҡолатҡандар. Тик бысаҡлайым тигәндә генә, буҙ тарпан һикереп торған да аҡ һаҡаллы ҡартҡа әүерелгән. Бәһлеүән ҡарт Алтынбай менән Көмөшбайҙы, аяҡ-ҡулдарын бығаулап, үҙенең бына ошо ҡырҡынсы келәтенә килтереп япҡан.

Таҙ батыр ағайҙарын күреп бик ҡыҙғанған, ҡарттан уларҙы ирекә сығарыуын һораған. Әммә ҡарт тәүҙә быға риза булмаған. Ә Таҙ батыр һаман ялынған, һаман инәлгән:

— Миңә бүтән бер нәмә лә кәрәкмәй, тик ағайҙарымды ғына ҡотҡар, беҙ өсәү бергә бер үк тереһыу эҙләп сыҡҡайныҡ, уны мин таптым инде. Хәҙер өсөбөҙ ҙә бергә ҡайтайыҡ, әсәйебеҙҙе терелтәйек, атайыбыҙҙы ҡыуандырайыҡ,— тигән.

Был һүҙҙәрҙе ишетеүгә Алтынбай менән Көмөшбай Таҙҙың аяҡ аҫтына йығылғандар.

— Ҡотҡар инде, ҡустым, беҙҙе, зинһар, ҡотҡар бынан! Күрһәткән яҡшылығыңды ғүмергә онотмабыҙ,

был хәлде бөтә халыҡҡа һөйләрбеҙ. Атайыбыҙ үҙеңә рәхмәт уҡыр. Ҡоткара алһаң, һинең ҡолоң булып йәшәргә лә риза булыр инек,— тип ялынғандар.

Таҙ бик үтенеп һорағас, аҡ һаҡаллы ҡарт, теге икәүҙең аяҡ-ҡулдарынан бығауҙарын алып, иреккә сығарған. Шунан Таҙҙың үҙенә генә:

— Шулай ҙа был ағайҙарыңдан һаҡ бул! — тигән.

Өс туған ана шулай үҙ илдәренә, аталары янына, ҡайтып киткән. Тыуған тупраҡҡа тиҙерәк аяҡ баҫырға ашыҡҡандар. Бигерәк тә Таҙ батыр ашыҡҡан. Үҙенең шәп толпары менән ул йәһәтерәк тә ҡайтып етер ине лә бит, ағайҙарын ташлап киткеһе килмәгән. Алтынбай менән Көмөшбайҙың аты арый башлаһа, ул да туҡтаған. Ябағаһын да ҡоя алмаған Күк дүнәндең шул ҡәҙәр йылдам атҡа әйләнеүен күреп, Алтынбай менән Көмөшбай бик көнләшкән. «Таҙҙың аты арыу белмәй, беҙҙең аттар уға эйәрә лә алмайҙар. Таҙ теҙгенен бушатһа, дүнәне осорға ғына тора. Бара-бара, Таҙ беҙҙе ташлап китер ҙә, йортҡа алданыраҡ ҡайтып, тереһыу менән әсәйебеҙҙе терелтер, ә беҙ күҙле бүкән кеүек тороп ҡалырбыҙ»,— тип уйлашҡандар, ҡайһылай итеп булһа ла Таҙҙың дүнәненә берәй этлек ҡылырға булғандар.

Ҡайтыр юлдың яртыһын үткәс, бер заман, ҡояш байып, ҡараңғы төшә башлағас, егеттәр ҡунырға туҡтаған. Аттарын үлән утларға ебәреп, йоҡларға ятҡандар. Алтынбай менән Көмөшбай, ятҡас та, хырылдап йоҡлап киткән. Таҙ батыр, айға, йондоҙҙарға ҡарап, һарайҙа ҡалған һылыу ҡыҙын уйлап ятҡан да таңға табан ғына татлы йоҡоға сумған. Алтынбай менән Көмөшбай, таң атҡанда тороп, Таҙ дүнәненең дүрт тояғына дүрт сөй ҡаҡҡандар, үҙҙәре йәнә ятып йоҡлағандар.

Таҙ йоҡоһонан торған. Ҡуҙғалырға ваҡыт тип, Алтынбай менән Көмөшбайҙы уятҡан. Ике ағай аттарын эйәрләп китеп тә барған. Ә Таҙҙың Күк дүнәне аяҡтан яҙған. Таҙ батыр, атым сирләгән, инде ни эшләйем, тип аптырап ҡалған. Шунан аяҡтары аҡһаған дүнәнен етәкләп ағайҙары артынан йәйәүләп барған. Көн үҙәге еткәс, ағайҙары туҡтап:

— Таҙ, дүнәнеңдең рәте китте, беҙҙең аттарға эйәрә алмай. Йәйәүлегә һыбайлы юлдаш түгел. Тереһыуҙы беҙгә бир ҙә, беҙ, эш уҙмаҫ борон, тиҙерәк ҡайтып әсәйебеҙҙе терелтәйек; һин, дүнәнең аяҡҡа баҫҡас, ҡайтырһың әле,— тигәндәр.

Таҙ риза булмаған:

— Нисек булһа ла бергә ҡайтайыҡ, әсәйебеҙҙе бер-

гәләп терелтербеҙ, йәйәүләп булһа ла һеҙҙән ҡалышмаҫҡа тырышырмын,— тигән.

Таҙ ана шулай, дүнәнен етәкләп, ағайҙарын күрә-күрә генә арттан барған. Йәнә кис булған, өс туған, аттарын үлән утлатырға ебәреп, йоҡларға ятҡандар. Көн буйы йәйәү килгән Таҙ батыр, ятҡас та, ҡаты йоҡоға киткән. Алтынбай менән Көмөшбай, ул йоҡлаған арала, кәңәш ҡорғандар. Кәңәштәре шул: Таҙҙы үлтермәк булғандар. Терәһыуҙы Таҙ үҙ ҡулында алып ҡайтһа, беҙ буш ҡул менән тороп ҡалырбыҙ. Ул, һыуҙы үҙем генә таптым, тип, аҡ һаҡаллы ҡарттың зинданында ятҡаныбыҙҙы ла кешеләргә һөйләр. Хурлығыңдан ер тишегенә инерҙәй булырһың ул саҡ, тип уйлағандар.

Ағайҙарынан яуызлыҡ көтмәгән Таҙ ғәмһеҙ йоҡлап ята биргән. Шул арала Алтынбай менән Көмөшбай ҡустыларын теҙген менән быуып үлтергәндәр ҙә кеҫәһендәге һыулы шешәне алып ҡайтып киткәндәр.

Бахыр Күк дүнән, үлтереп ташланған хужаһы тирәһендә әйләнгеләп йөрөгән-йөрөгән дә, имгәнгән аяҡтарын көс-хәлгә һөйрәп, аҡ һаҡаллы ҡарт йортона боролоп киткән. Ҡарт, атты күргәс тә, Таҙға ни булғанын төшөнөп алған, шунан ул, үҙенең батырҙарын саҡырып:

— Минең алыҫтан килгән дуҫым Таҙ батырҙы юлда ике ағаһы харап иткән. Шул ике яуызды баҫтыра китегеҙ, үҙҙәрен бында тереләй тотоп килтерегеҙ. Таҙҙың мәйетен һаҡлыҡ менән генә алып ҡайтығыҙ,— тип бойорған.

Атлы батырҙар сабышып тегеләрҙе баҫтыра киткәндәр. Байтаҡ көн үткәс, бөтәһе лә арып-талып кире ҡайтҡандар. Ағаларын да ҡыуып етә алмағандар, Таҙ батырҙы ла таба алмағандар.

Аҡ һаҡаллы ҡарт: «Егетте үлтергәс, күмеп киткәндәрҙер, ер өҫтөндә ятһа, табылыр ине»,— тигән уйға килгән.

Шунан һуң бик һиҙгер бер бүрене саҡырып, килтереп, Таҙ батырҙы үле булһа, үле көйө, тере булһа, тере көйө табып килтерергә ҡушҡан. Бына ошо алыҫтан еҫ тойор бүре өҫтән-мөҫтән генә күмелгән Таҙ батырҙы табып алып, һыртына һалып, ҡартҡа килтереп биргән.

Аҡ һаҡаллы бабай теге ваҡыт Таҙҙан алып ҡалған терәһыуҙы мәйеттең ауыҙына ҡойған. Күп тә үтмәгән, Таҙ батыр, ятҡан еренән тороп:

— Ай-һай, оҙаҡ йоҡлағанмын, ахыры,— тигән.

Шунда ҡарт:

— Йоҡламай ни, йоҡлағанһың, атаң башы! Үҙеңде ағайҙарың үлтереп, ергә күмеп киткәндәр. Ярай әле,

бахыр толпарың минең йортҡа килде. Шунан һуң һине, бүренән таптырып, үҙең биреп ҡалдырған һыуҙы эсереп терелттем,— тигән.

— Ә толпарым ҡайҙа, ул сирләгәйне бит, хәҙер ни хәлдә?

— Юҡ, егет, толпарың сирләмәгән, уның дүрт тояғына дүрт сөй ҡаҡҡандар, уларҙы һурып алдым, дауаланым, атың хәҙер аяҡҡа баҫты инде.

Шунан һуң аҡ һаҡаллы бабай Таҙ батырға бер ҡош ҡауырһыны биргән.

— Был һиңә кәрәк булыр,— тигән ул.— Аптыраған-йөҙәгән сағыңда, теләгеңде әйтеп ошо ҡауырһын менән ергә бер һыйпаһаң, үҙеңә нимә кәрәк булһа, шул алдыңа килер. Бик яҡшы һаҡла һин уны,— тигән.

Алыҫ ерҙән үҙ иленә ҡайтҡанда, Таҙ батыр ашау-эсеүгә аптырамаған. Ашағыһы килһә, баяғы бер ҙә кәмемәй торған сүрәкте ашаған, һыуһаһа — бөтмәй торған шәрбәтле һыуын эскән. (Ярай әле, ағайҙары кесәһендәге тереһыуҙы ғына алғандар, ә ҡуйынында һаҡланған был нәмәләрҙең барлығын белмәгәндәр.) Йоҡларға кәрәк икән, толпарын далаға утларға ебәргән дә, ҡауырһыны менән ерҙе һыйпаған — йомшаҡ түшәк йәйеп, мамыҡ мендәрҙәр һалып ял итергә урын әҙерләгән.

Алтынбай менән Көмөшбай, Таҙ батырҙы үлтергәс, бик ашығып үҙ йорттарына ҡайтҡандар ҙа, аталарына шапырына-шапырына:

— Беҙ, бик күп яфалар күреп, үлгән кешене терелтә торған һыуҙы таптыҡ, хәҙер әсәйебеҙҙе терелтәбеҙ,— тигәндәр.

— Һай, улдарым, һеҙ егет арыҫландары икәнһегеҙ! Ә Аҡылбай ҡайҙа, әллә уға берәй хәл булдымы?— тип һораған аталары. Улдары:

— Ул өйҙән сығып бер аҙ барғас ти, беҙҙән тороп ҡалды, уның ябаға дүнәне беҙҙең аттар артынан эйәрә аламы һуң? Беҙ уны әллә ҡасан кире өйгә ҡайтҡандыр тип уйлағайныҡ,— тигән булғандар.

Атаһы, хәсрәтләнеп:

— Һай, бахыр, бахыр, йөрөмә тинем мин уға, барыбер эш сығара алмаҫһың, ағайҙарыңа имгәк кенә булырһың, тинем. Һүҙемде тыңламаны, үҙ башына үҙе етте, балаҡайым,— тип көрһөнгән.

Улдары алып ҡайтҡан тереһыуҙы аталары ҡарсығының ауыҙына ҡойған. Был һыуҙың бер нисә тамсыһы ла ҡарсыҡты терелтергә етер ине. Әммә ҡарт уны-быны уйлап тормаған, бөткәнсе ҡойған. Тереһыуҙы эсеп

аҙмы-күпме торғас, әбей күҙен асҡан, ә бер аҙҙан һуң тороп та ултырған.

— Ай-һай, бик оҙаҡ йоҡлағанмын икән, ниңә уятмаһығыҙ,— тигән.

Ҡарсыҡҡа эштең ниҙә икәнен һөйләп биргәндәр. Ул, хайран ҡалып, улдарына рәхмәт уҡыған.

— Эшегеҙ уң булһын, улдарым, ғүмер буйы һеҙгә хәйер-фатиха уҡырмын,— тигән. Кесе улының ғәйеп булыуына әсәһе бик ҡайғырған. Мине терелтәм тип, үҙе харап булған, балаҡайым, тип илаған.

Алтынбай менән Көмөшбайҙың, әжәл дарыуы табып ҡайтып, үлгән әсәләрен терелтеү хәбәре шунда уҡ бөтә илгә таралып өлгөргән. Был хәбәр батшаға ла барып еткән. Батша күрше илдәргә ҡаршы һуғыш асырға, ерҙәрен баҫып алырға әҙерләнгән икән. Үткән яуҙарҙа күп ғәскәре ҡырылып, күрше батшаларҙы еңә алмаһа ла, яңынан һуғыш башлау уйынан кире ҡайтмаған икән. Үлгән кешене терелтә торған һыу табылыуын ишеткәс тә, батша: «Әһә, хәҙер көс миндә, минең ғәскәрҙәрем ҡырыла торор, ҡырылған береһен тереһыу менән терелтә торормон»,— тип уйлаған. Батша шунда уҡ Алтынбай менән Көмөшбайҙы үҙенә саҡыртып алған.

— Илемдә һеҙҙең кеүек батыр егеттәр булыуына бик шатмын,— тигән ул.— Терелткес һыуҙы табыуы еңел булмағандыр, әммә һеҙ уны ҡулығыҙға төшөрмәйенсә туҡтап ҡалмағанһығыҙ. Егеттәрҙең аҫылы икәнһегеҙ. Шуның өсөн мин һеҙҙең икегеҙгә лә янарал дәрәжәһе бирәм, һеҙҙең ҡарамағығыҙҙа һалдаттар ҙа булыр. Тик һеҙҙең алға шундай бер шарт ҡуям: үлекте терелтә торған һыуҙың шишмәһе ҡайҙа икәнен бер кемгә лә әйтмәҫкә, әйтһәгеҙ-нитһәгеҙ, башығыҙҙы киҫермен! Хәҙергә өйөгөҙгә ҡайтығыҙ, ҡаҙнамдан аҡса алығыҙ, кәйеф-сафа ҡылығыҙ, ваҡыты еткәс, үҙем саҡыртырмын.

Алтынбай менән Көмөшбай ҡаҙнанан күпме кәрәк шул тиклем аҡса алып, янарал кейемдәрен кейенеп, маһайышып өйгә ҡайтып киткәндәр. Ҡайтыу менән кәләш алырға булғандар. Иң матур ике ҡыҙҙы һайлап алып, туй көнөн тәғәйенләгәндәр. Ат еткән ергә ат саптырып, хат еткән ергә хат ебәреп, тирә-яҡтан ҡунаҡтар саҡырғандар, ҡурайсылар, йырсылар, бейеүселәр, сәсәндәр килтергәндәр.

Билдәләнгән көн килеп еткән. Туй ҡыҙып барған сағында ғына Таҙ батыр ҡайтып төшкән. Шул саҡлы күп халыҡты күреп, бында ниндәй байрам икән, тип

аптырап ҡалған. Аптырап торған арала, йөрөп ятҡан әсәһен күреп:

— Әсәкәйем, терелгәнһең икән,— тип уға шатланған. Шатлығынан ни эшләргә белмәгән. Әсәһе лә:

— Балаҡайым, бәпескәйем! Һине күрер көнөм дә бар икән,— тип илап ебәргән.

Улы:

— Әсәй, бында ниндәй байрам? Ниңә был тиклем күп ҡунаҡтар йыйылды?— тип һораған.

Әсәһе:

— Ағайҙарың, үлене терелтә торған һыу алып ҡайтып, миңә йән бирҙеләр. Ағайҙарыңдың даны бөтә илгә таралды. Батша уларҙы янарал итте. Алтынбай менән Көмөшбай икеһе лә кәләш алды, бына шуларҙың туйына ҡунаҡтар йыйылды. Бик ваҡытлы ҡайттың улым, ағайҙарыңдың шул хәтле дәрәжәгә ирешеүҙәре, бөтә илгә дандары таралыуы беҙҙең бөтәбеҙ өсөн бик ҙур шатлыҡ бит. Ағайҙарың шундай абруйлы кешеләр булғас, инде һине лә таҙ тип мыçҡылламаçтар,— тигән.

Таҙ батыр, ни ҡәҙәр сабыр кеше булһа ла, ағайҙарының шул хәтле яуыз, ялғансы булыуҙарына түҙә алмаған. Бер халыҡҡа, бер йырсыларға ҡарап:

— Туҡтағыҙ! Ниндәй яуыз кешеләрҙе маҡтағанығыҙҙы беләһегеҙме?— тип ҡысҡырған.

Йыйылған халыҡ тәүҙә ни булды икән тип аптырашып, ҡатып ҡалған. Таҙ ары һөйләп алып киткән:

— Үлгән кешене терелтә торған һыуҙы мин таптым уны. Яман эш ҡылғандары өсөн, аяҡ-ҡулдары бығауланып, зинданға ташланған ағайҙарымды мин ҡотҡарҙым. Миңә рәхмәт әйтеү урынына атымдың тояҡтарына сөй ҡағып, мине сикһеҙ далала йәйәү ҡалдырмаҡсы булдылар. Ул ғына ла түгел, йоҡлап ятҡан сағымда мине быуып үлтереп, кеçәмдән тереһыуҙы алып, ҡайтып киткәндәр...

Шунда Алтынбай ҡаушап ҡалыуын һиҙҙермәçкә тырышып, үҙен эре генә тотоп, һүҙ башлаған:

— Хөрмәтле ҡунаҡтар! Беҙҙең ҡустыбыҙ, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, аҡылға самалыраҡ. Ул элек-электән үк ауыҙына ни тура килһә, шуны һөйләй торған бер бәндә, уның әйткән һүҙенә бер ҙә иçегеҙ китмәһен, йырлай, бейей бирегеҙ,— тигән.

Шунан һуң ағаһының һүҙен Көмөшбай ялғап алып киткән:

— Хәйләкәр Таҙ беҙҙең туйҙың йәмен ебәрергә маташа, ул бик көнсөл, бына әле лә шул көнләшеүенән беҙҙең йөҙгә ҡара яҡмаҡсы була. Әйткән һүҙгенәһенә

кем ышанһын һуң! Мине ике ағайым быуып үлтерҙе, ти, ә үҙе бына һеҙҙең арала ултыра,— тигән.

Алтынбай менән Көмөшбай шунда уҡ, бер ялағай сәсәнде яллап, Таҙҙан көлөп таҡмаҡ әйттергәндәр. Үҙҙәре лә таҡмаҡлап бейергә төшөп киткәндәр:

Беҙҙең иҙән тап-таҡыр,
Таҙҙың башы яп-ялтыр.
Таҙҙың бүрке ҡамаһыҙ,
Алйотлоғо самаһыҙ.

Алтынбай менән Көмөшбай бейеүҙән туҡтағас, Таҙ батыр уларға:

— Серекәйҙәр, һәр төрлө хәшәрәттәр кешеләрҙең ҡанын эсәләр ҙә ҡасалар. Һеҙ шундай хәшәрәттәрҙән дә яманыраҡ. Һеҙ кеше үлтереп, халыҡты алдап, туй яһайһығыҙ!— тигән.

Әммә Таҙ кем дә, янаралдар кем! Туй ни ҡыҙа ғына биргән, ә Таҙҙы зинданға тотоп япҡандар.

Тегесәсән иһә, Алтынбай менән Көмөшбай алдында йәнә ярамһаҡланып, Таҙҙан көлөп таҡмаҡлай биргән:

Йылға һыуы татырлы,
Таҙҙың башы ҡутырлы.
Ағайҙарын хурланы ла
Таҙ зинданға ултырҙы.

Ете көн ете төн тигәндә Алтынбай менән Көмөшбай, Таҙ астан үлгәндер инде, тип зинданды барып ҡараһалар, Таҙ батырға бер ни ҙә булмаған, һау-сәләмәт көйө ултыра, ти. Был хәлде күргәс, йәнә зинданды бикләп ҡуйғандар. Тағы ла ете тәүлек үткән. Таҙ астан үлгәндер инде, тип зинданды ҡабат асып ҡараһалар, уға йәнә бер ни ҙә булмаған, ти. Ай ярым буйына ашамай-эсмәй зинданда ултырып та үлмәгәс, Таҙ батырға икенсе төрлө яза уйлап сығарғандар. Ҙур майҙан уртаһына таш төрбә һалдырғандар. Төрбә уртаһында кеше һыйырлыҡ ҡына урын ҡалдырып, Таҙҙы шунда томалағандар.

Йылдар үткән, Таҙ батырҙы онотҡандар. Тик майҙандан үткән кешеләр генә ҡайһы саҡта уны иҫкә алыр булған.

Берҙән-бер ваҡыт Алтынбай менән Көмөшбай ғәскәрҙәрен йыйып, майҙанда ҙур парад үткәрергә булған. Әммә парад яһау өсөн майҙандағы таш төрбә уңайһыҙлаған. Шунлыҡтан, таш ҡәберҙе һүтеп, майҙанды тигеҙләргә әмер биргәндәр. Әмер бик тиҙ еренә еткерелгән. Төрбәнең таштарын аҡтарып һүткән саҡ-

та ғәскәр кешеләре ни күҙҙәре менән күрһендәр: Таҙ йомшаҡ мендәр өҫтөндә иҫән-һау көлөп тик ултыра, ти. Был ни хәл тиһәң, Таҙ батыр ете йыл буйына ҡуйынындағы һис кәмемәҫ сүрәген ашап, бер ҡасан да бөтмәҫ шәрбәтле һыуын эсеп йәшәгән икән. Аҫтына ҡаты булмаһын өсөн, әлеге серле ҡауырһын менән һыйпап, йомшаҡ урын яһаған, ти.

Таҙҙың һаман иҫән-һау булыуын ишеткәс, ағайҙары, ни эшләргә белмәй аптырап, бөтөнләй ҡаушап ҡалғандар. Оҙаҡ кәңәш иткәндән һуң, иң ышаныслы ике һалдатты саҡыртып алғандар ҙа Таҙҙы бик алыҫҡа, тау-таш араһына алып барып, дүрт һанын дүрт ергә күмергә бойороҡ биргәндәр. Әммә һалдаттар Таҙҙы үлтермәгәндәр, бөтмәҫ сүрәге менән бөтмәҫ һыуын алғандар ҙа, үҙен ҡайҙа теләй, шунда ебәргәндәр.

Бер ниһеҙ ҡалған Таҙ батыр, үлемдән ҡотолғас, байтаҡ ваҡыт тау-таш араһын ҡыҙырып йөрөгән, тереһыу хужаһы булған һылыу янына итергә лә уйлаған,— аты ла, ашарына ла булмағас, был уйынан дүнгән. Ахырҙа күрше илгә сығып киткән. Унда бер батшаға йылҡы көтөүсеһе булып яллланған. Көтөүҙәге ҡартайыуҙан хәлһеҙләнгән бөтә аттарҙы йәшәрткән: теге тылсымлы ҡауырһыны менән аттың һырттарынан һыйпанымы, хайуаның шунда уҡ таҙарып, көрәйеп киткән. Аптырашта ҡалған һарай хеҙмәтселәре был хәлде батшаға еткергәндәр. Батша Таҙҙы үҙенә мал ҡараусы итеп алған, уның менән һунарға ла йөрөр булған. Берҙәнбер ваҡыт, һунарҙа йөрөгәндә, батша менән Таҙ бик матур бер күл буйына барып сыҡҡандар. Күлдән ике аҡҡош, һауаға күтәрелеп, бейеккә осоп киткән. Батша, Таҙҙың мәргәнлеген һынап ҡарамаҡсы булып:

— Ошо аҡҡоштарҙың берәйһен атып төшөрә алаһыңмы?— тигән.

Таҙ батшаға:

— Атып төшөрә алам, әммә мин аҡҡошҡа атмаҫ инем, ни өсөн тиһәң, береһен атһаң, икенсеһе етем ҡалыр, ғүмер буйы яңғыҙы зарығып йәшәр,— тигән.— Минең мәргәнлегемде бик һынайһың килә икән, бойор: ҡайһы аҡҡоштоң ҡайһы ҡанатынан ниндәй ҡауырһынын атып төшөрәйем?— тигән.

Был ваҡытта инде аҡҡоштар, бик алыҫайып, бәләкәй генә булып күренгән, шунда батша:

— Алдан барғанының уң ҡанатындағы урта ҡауырһынына ат,— тигән.

Таҙ батыр, атын да туҡтатып тормаҫтан, еҙ башаҡлы уғын тоҫҡап атып та ебәргән. Бер аҙ ваҡыт уҙғас,

батша алдына бер ҡауырһын килеп төшкән. Батша, таҙҙың мәргәнлегенә иҫе китеп, нимә тип әйтергә лә белмәй торған. Ҡауырһынды алып кеҫәһенә һалған.

Һунар йөрөп ҡайтып килгәндә, былар өҫтөнә яман бер юлбарыҫ килеп сыҡҡан. Аттар үрле-ҡырлы һикерешә башлағандар. Ҡурҡыуынан батша атынан ҡолап төшкән. Ул арала булмай, юлбарыҫ батшаға ташланған. Юлбарыҫ батшаның боғаҙына йәбеште тигәндә генә, Таҙ батыр, йәһәт кенә ҡынынан ҡылысын һурып алып, бер сабыуҙа йыртҡыстың башын өҙөп төшөргән. Батша иһә иҫһеҙ булып ята биргән. Шул арала Таҙ батыр, юлбарыҫтың тиреһен тунап алып, батшаның йәрәхәтенә япҡан.

Батша иҫенә килгән:

— Егет, һин мине үлемдән ҡотҡарҙың, мин быны бер ваҡытта ла онотмам, ни теләһәң, шуны эшләрмен,— тигән.

Был бәләнән ҡотолғас, һунарсылар тиҙерәк өйгә ҡайтырға ашыҡҡандар. Әммә быларҙың башына тағы бер бәлә төшкән: батшаның аты бөтөнләй хәлһеҙләнгән, аяҡтарын да һөйрәп атлай алмай башлаған. Шунда Таҙ батыр:

— Батшам, беҙ аттарҙы алмашайыҡ, ҡана, арыған атыңды миңә бир,— тигән.

Аттар алмашылған. Таҙ батыр тылсымлы ҡауырһыны менән батша атының һыртынан һыйпаған икән, арыған хайуан шунда уҡ ауыҙлығын тешләп ҡайтыр яҡҡа сапҡан. Батша быға бик ғәжәпләнгән. «Был ысынлап та бик хикмәтле егет икән дә баһа»,— тип таң ҡалған.

Һунарҙан ҡайтҡандың икенсе көнөндә батша, үҙенең бөтә вәзирҙәрен йыйып, һунарҙа күргәндәрен, Таҙ батырҙың иҫ киткес мәргәнлеген, батырлығын бәйнәбәйнә һөйләп биргән. Аҡҡош ҡанатынан атып төшөрөлгән ҡауырһынды ла, юлбарыҫ тиреһен дә күрһәткән. Аҙаҡтан:

— Янымда ошо егет булмаһа, мине юлбарыҫ өҙгөләп ташлар ҙа, мин бөгөн был тәхеттә ултырмаған булыр инем. Бөгөндән алып был егетте баш вәзирем итеп тәғәйенләйем, үҙенә кесе ҡыҙымды ла бирәм,— тигән.

Таҙ батырҙы вәзир булыу ҙа, батша ҡыҙы алыу ҙа ҡыҙыҡһындырмаған. Ул тереһыу һаҡланған һарайҙағы һылыуҙы һағынған, тик уны ғына уйлап йөрөгән.

Һигеҙ йыл элек, Таҙ батыр тереһыуҙы алып һарайҙан сығып киткәндән һуң, унан гөманлы булып ҡалған һы-

лыу ҡыҙ быны көнө-төнө зарығып көтөр булған. Егет киткәндән һуң, туғыҙ ай үткәс, ул бер бик матур ҡыҙ бала тапҡан. Әсәһе уға Гәүһәр тип исем ҡушҡан. Бала, үҫә төшкәс:

— Әсәй, минең атайым ҡайҙа, ниңә бер ҙә өйгә ҡайтмай? — тип һораша башлаған. Әсәһе уға:

— Ул алыҫ юлға китте, оҙаҡламай ҡайтыр, — тип йыуатҡан. Ҡыҙына ҡарап, әсәһе лә бик бошонған, ул үҙе лә Таҙҙы бик һағынған, уны көтә-көтә көтөк булған. Шунан һуң ул бына ошондай хат яҙырға булған:

«Бынан һигеҙ йыл элек минең һарайыма бер егет килеп, үлгән кешене терелтә торған тереһыу алып киткәйне. Ошо хатты алғас та, шул егет һис кисекмәй минең һарайыма килеп етһен. Килгән егеткә яҡшылыҡтан башҡа бер ни ҙә булмаясаҡ. Ул егет минең һарайыма килеүҙән баш тарта икән, уның ил-йортона донъя үртәй торған ут яуҙырасаҡмын».

Хатты һарайҙағы ҡоштарҙың береһе ауыҙына ҡаптырып ебәргән. Ҡош алыҫҡа осоп киткән. Бына ул Алтынбай менән Көмөшбай йәшәгән һарайҙың тәҙрәһенән үтә инеп, хатты өҫтәл тирәләй ултырған кешеләр алдына ташлаған, ә үҙе тәҙрә төбөндәге гөлгә барып ҡунған. Хатты тәүҙә Алтынбай, уның артынан Көмөшбай уҡыған. Шунан хатты кеҫәгә һалып ҡуйғандар. Мәжлестәге янаралдар:

— Хатта ни яҙылған, ниңә бик ҡаушап киттегеҙ, әллә берәй батша беҙгә ҡаршы һуғыш башлаймы? — тип төпсөнгән.

Алтынбай менән Көмөшбай хатты уҡып күрһәтмәй булдыра алмаған. Бик оҙаҡ баш ватҡандан һуң: «Йә Алтынбайға, йә Көмөшбайға хәҙер үк юлға сығырға», — тигән ҡарарға килгәндәр. Шул ваҡыт Алтынбай:

— Көмөшбай ҡустым, һин йәшерәк кеше, һин бар! — тигән.

— Һин олораҡ та, тәжрибәлерәк тә, һин бар! — тигән.

Бүтән янаралдар ҙа, Алтынбай барһа, яҡшыраҡ булыр, тигәндәр.

Ни эшләһен, Алтынбай, бер ҙә теләмәһә лә, юлға сыҡҡан, әммә үҙе ҡайҙа барырға ла белмәгән. Шул ваҡыт хат килтергән ҡош, килеп сығып, Алтынбайҙың алдынан ғына осоп бара башлаған. Алтынбай, тәүҙә быға иғтибар итмәһә лә, һуңыраҡ уның юл күрһәтеп барыусы ҡош булыуын төшөнгән. Уның артынан ҡал-

май барған да барған. Бик оҙаҡ бара торғас, саҡырылған еренә барып еткән.

Һарайға килеп кергән. Алтынбайҙы тәүҙә бәләкәс Гәүһәр күргән дә, шатланып:

— Әсәй, әсәкәйем! Атайым ҡайтты, атайым! — тип ҡысҡырған.

Ишек төбөндә, шәм һымаҡ, һынын ҡатыра бирел, баҫып торған янаралға күҙ йүгертеп:

— Юҡ, ҡыҙым, был һинең атайың түгел,— тигән. Шунан һуң янаралдан:

— Һин кем булаһың, ниндәй йомош менән бында килдең? — тип һораған.

— Мин ебәргән хатың буйынса килдем,— тп яуап биргән Алтынбай.

— Туғандарың бармы?

— Бар.

— Нисәү?

— Икәү.

— Ә ниңә минән тереһыу алып киткән туғаның килмәне?

— Ул бик ҡаты ауырый, шуның өсөн мине ебәрҙе.

Һарай хужаһы эске бүлмәгә инеп бер бәләкәй генә шешәгә һалған тереһыу алып сыҡҡан да:

— Ауырыу туғаныгыҙға ошо дарыуҙы эсерегеҙ, ул шунда уҡ терелер. Үҙе кисекмәҫтән минең яныма килеп етһен! Әгәр мин ҡушҡанды эшләмәһәгеҙ, был яҡты донъя йөҙөндә йөрөрмөн тип уйламағыҙ! — тигән.

Ҡаушап төшкән Алтынбай:

— Бөтәһе лә һин тигәнсә булыр,— тигән булған. Ә үҙе ни эшләргә белмәй ҡайтып киткән. Ҡайтҡас: «Ниңә миңә баш ватырға әле? Был бәләне Көмөшбай өҫтөнә ауҙарырға кәрәк. Тереһыу һарайына уны ла ебәреп була бит, ул теләһә ҡайһылай яуап бирһен әйҙә»,— тигән уйға килгән. Туғанына:

— Көмөшбай ҡустым, тереһыу һарайының хужаһы һине саҡырҙы, бөгөн үк юлға сыҡ! — тигән.

Көмөшбай, бер ҙә барғыһы килмәһә лә, ҡарышһам, ҡурҡаҡ тип күҙемде астырмаҫтар тип, шул көндө үк юлға сыҡҡан. Серле һарайға барып еткәс, быны ла тәүҙә Гәүһәр күргән. Был юлы ла ул, атайым ҡайтты тип, әсәһен саҡырып сығарған.

Әсәһе:

— Юҡ, ҡыҙым, был да атайың түгел,— тигән. Шунан ул Көмөшбайға ҡарап:

— Тереһыуҙы алып киткән егет ниңә үҙе килмәне, мин уны саҡырғайным бит? — тигән.

— Ул әллә ҡасан үлде инде,— тигән Көмөшбай иҫкәрмәҫтән.

Шунда тереһыу хужаһы бик ҡаты асыуланып:

— Яҡты донъяла йәшәйем тиһәгеҙ, бында үлгән туғанығыҙҙың һөйәктәрен йыйып алып килтерегеҙ,— тигән.

Көмөшбай, башын эйеп, тәрән уйға сумып, ҡайтып киткән.

Ҡайтҡас та, һарай хужаһының фарманы хаҡында Алтынбайға әйткән. Ике туған Таҙҙы, дүрткә тураҡлап, дүрт ҡәбергә күмергә бойорған һалдаттарҙы саҡыртып:

— Хәҙер үк Таҙҙың һөйәктәрен ҡаҙып алып бында килтерегеҙ,— тип әмер биргәндәр. Һалдаттар:

— Ниндәй генә яза бирһәгеҙ ҙә, иркегеҙҙә, әммә беҙ Таҙҙы үлтермәнек, ул иҫән-һау булырға тейеш,— тигәндәр.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Алтынбай менән Көмөшбай бөтөнләй ҡойолоп төшкән. Ни эшләргә лә белмәй йөрөгәндәр. Аҙаҡ килеп: «Таҙҙы тотоп килтергән кешегә үҙе саҡлы алтын бирәбеҙ»,— тип бөтә тирә-яҡҡа хәбәр һалғандар. Эҙләүселәр сығарып ебәргәндәр. Был хәбәр Таҙ баш вәзир булып йөрөгән батшалыҡҡа ла барып еткән. Батша, Таҙҙы ағаларына тотоп биреп, уның үҙе саҡлы алтын алырға бик ҡыҙыҡҡан. Әммә бушҡа сыға, ни өсөн тиһәң, хәбәр килеп еткән көндө генә Таҙ, батша һарайын ташлап, үҙенең һөйгән йәрен эҙләп сығып киткән икән.

Таҙ тереһыу һарайына килеп инеүгә, бәләкәй Гәүһәр уға:

— Һин дә минең атайым түгелме? — тип һораған.

Таҙ ни әйтергә лә белмәй торғанда, баланың әсәһе килеп сыға:

— Быныһы тап һинең атайың була, ҡыҙым,— тип Таҙҙың ҡосағына ташланған. Бала ла: «Атайым!» — тип ҡысҡырып, Таҙ батырҙың муйынына һарылған. Улар шатлыҡтарынан бер талай өндәшмәй торғандар. Таҙ батыр, кәләшен дә, балаһын да ҡыҫып ҡосаҡлап, өнөммө был, төшөммө, тип уйлаған. Тынысланғас ҡатыны Таҙҙы бынан һигеҙ йыл элек ҡауышҡан баҡсалы ҙур бүлмәгә алып ингән. Иренән бөтәһен дә һорашҡан. Таҙ батыр үҙ башынан кисергәндәрҙе түкмәй-сәсмәй бәйнә-бәйнә һөйләп биргән.

Быларҙың ҡауышыуына өс көн тигәндә, һарайға Алтынбай менән Көмөшбай килеп ингән. Улар, тереһыу хужаһы булған һылыу ҡатын алдында баш эйеп:

— Таҙҙы үле көйө лә, тере көйө лә таба алманыҡ. Бөтә ғәйеп беҙҙең икебеҙҙә. Ниндәй яза бирһәң дә, беҙ ризабыҙ. Беҙ бында ғәҙел яза алырға килдек,— тигәндәр.

Һарай хужаһы был һүҙҙәрҙе тыңлаған да:

— Ә мин һеҙҙе язаға хөкөм итмәйем, һеҙгә язаны минең ирем бирер,— тип, ҡаршы бүлмәнән былар янына Таҙҙы сығарған.

Ағайҙар ғүмер буйы үҙҙәре яфалаған ҡустыларын күреп, ҡурҡыуҙан һушһыҙ булып йығылғандар, ти. Уларҙы иҫкә килтереү өсөн күлдән тереһыу ала торған буш шешәне еҫкәтергә кәрәк булған, ти.

Шунан Таҙ:

— Мин һеҙҙе бында хөкөм итмәйем, хөкөм үҙебеҙҙең илдә булыр,— тигән.

Шул саҡ һарай ишеге алдына, теге ғәләмәт ҙур мөгөҙлө үгеҙ эргәһенә, ел арба килеп туҡтаған. Ел арбаның бер көймәһенә ҡатыны, балаһы менән бергә Таҙ үҙе ултырып, икенсе көймәһенә Алтынбай менән Көмөшбайҙы ултыртып, ер өҫтөндә саң туҙҙыра-туҙҙыра елеп тә киткәндәр. Таҙ батыр ҡайтыуға, атаһы инде күптән үлгән булған, әжәл ҡағылмаҫ әсәһе генә йөрөп ятҡан.

Бөтә халыҡты майҙанға йыйғандар. Таҙ батыр, халыҡ алдына сығып:

— Мин Аҡылбай, һеҙҙеңсә әйткәндә, Таҙ булам. Бынау һылыу — минең ҡатыным, тереһыу батшаһының ҡыҙы, бына был бала — беҙҙең ҡыҙыбыҙ Гәүһәр. Ә бынау ике шаҡшы — минең ағайҙарым Алтынбай менән Көмөшбай. Хәҙер һеҙгә һүҙҙе яҡшылар түгел, ана шул шаҡшылар әйтер. Йә, әйтегеҙ, халыҡҡа ниндәй һүҙегеҙ бар,— тигән.

Бына шунан һуң Алтынбай менән Көмөшбай Таҙ батырға ҡылған яуызлыҡтарын, йыртҡыслыҡтарын бәйнә-бәйнә һөйләп биргән. Беҙ быны Таҙҙың аҡыллылығынан, батырлығынан көнләшеп атайыбыҙ, әсәйебеҙ алдында, халыҡ ҡаршыһында яҡшы атлы булып күренергә тырышып эшләнек, тигәндәр. Үҙ ғәйебебеҙҙе үҙебеҙ таныйбыҙ, теләһә ниндәй язаға ла әҙербеҙ, тигәндәр.

Шунан Таҙ:

— Быларға ниндәй яза бирергә?— тигән.

Халыҡ:

— Теҙген менән быуып үлтерергә!

— Тереләй таш төрбә эсенә ултыртырға!

— Дүрт һанын дүрткә өҙөп күмергә!

— Аҡылбай үҙе ниндәй хөкөм сығарһа, шуға риза булырға!— тип ҡысҡырғандар.

Аҡылбай шундай хөкөм сығарған:

— Йәмәғәт,— тигән ул,— Алтынбай менән Көмөшбай, мине бер нисек тә үлтерә алмайынса, үҙҙәренең көсһөҙлөктәрен күрһәттеләр. Ә инде хәҙер мин уларҙы үлтерә торған булһам, ул ваҡытта мин үҙемдең көсһөҙлөгөмдө күрһәтер инем. Был ике яуыз бәндә минең өсөн ҡурҡыныс түгел. Хәҙер инде һеҙҙең өсөн дә уларҙың ҡурҡынысы юҡ. Шулай булғас, беҙ уларҙы үлтермәйек. Әммә бөгөндән башлап икеһен дә үҙебеҙҙең аранан ҡыуайыҡ,— тигән.

Халыҡ был хөкөмгә риза булған.

Алтынбай менән Көмөшбай тәүҙә: «Үлемдән ҡотолдоҡ бит»,— тип бик ҡыуанһалар ҙа, бөтә халыҡтан айырылып икеһе генә тороп ҡалғас, нимә эшләргә белмәй аптырағандар. Ғәскәрһеҙ тороп ҡалған янаралдар далаға китеп юғалғандар.

Шул ваҡыт майҙан уртаһына ел арба килеп туҡтаған. Таҙ батыр үлеү белмәҫ әсәһе менән хушлашып, халыҡ менән иҫәнләшеп, бер яғына һылыу ҡатынын, икенсе яғына һылыу ҡыҙын ултыртып китеп барған. Ҡайҙа киткәне билдәле түгел. Шуныһы ғына мәғлүм: Таҙ аҡылы ҡайҙа бик кәрәк булһа, ул тап шул ергә елгән булырға тейеш.

## АЛТЫН ҠАУЫРҺЫН

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән, ти. Улар инде оло ғына йәштә булғандар, шулай булһа ла икәүләп кенә бик матур итеп донъя көткәндәр, ти. Быларҙың алты ҡолас оҙонлоҡта ала бейәләре булған, ти. Шулай ҙа күңелдәре китек булған. Ни өсөн тиһәң,— ҡатын бер ҙә бала тапмаған. Балалары булмай ҙа ҡуя икән быларҙың.

Бик бала теләгәс, яҙмыш быларға бер ир бала бүләк иткән. Шул уҡ көндө теге алты ҡолас ала бейәләре лә ҡолонлаған. Әбей менән бабай бик шатланған. Был бала шул хәтле таҙа, шул хәтле ҙур булып тыуған, күтәреп алырлыҡ та түгел, ти. Малай ҙа, ҡолон да ай үҫәһен көн үҫә, әбей менән бабайға эш бик ныҡ арта: бабай ҡолон янынан, ә әбей бала янынан китә алмай. Сәпки быларҙың икеһенең дә бер ғәҙәтһеҙ яғы бар икән: малай бер туҡтауһыҙ оло ярау итә, ә ҡолон һарайҙы тиҙәк менән тултыра.

Әбей менән бабайҙы был бик нык аптырата. Күтәреп алғыһыҙ был малайҙың аҫтын таҙарта торғас, әбей бөтөнләй хәлдән тая.

Аптырағас-алйығас, былай уйлай башлайҙар: нимә эшләтергә һуң быларҙы? Карауы бик кыйын: төн йоҡоһо юҡ, йән тынғыһы юҡ, котолайык был шөкәтһеҙ малайҙан, тиҙәр. Әммә нисек? Бабай, уйлап торғас-уйлай торғас, әмәлен таба:

— Әйҙә, әбей, беҙ быны яланға алып барайык та ташлайык. Берәү ҙә күрмәҫ тә, белмәҫ тә,— ти.

Шулай һөйләшәләр ҙә, был баланы һәйбәтләп һыу индерәләр,һәйбәтләп йыуғас-койондорғас, күпме мөмкинселектәре бар, шуның менән нык итеп урайҙар, төрәләр ҙә, алты колас ала бейәне егеп, кыш көнө санаға һалып, бабай алып китә малайҙы. Әбей оҙатып кала инде. Бабай артына әйләнеп караһа, колон да эйәреп килә. Калдырырға итеп карай,— юҡ, һис тороп калмай. «Ярар, үҙем менән әйләнеп кайтыр әле»,— ти ҙә китә был сығып.

Баралар былар, баралар, байтак кына ер баралар. Кыш көнө һалкын булғандыр инде, саналары шығырлап килә. Шулай бик күп ара үткәндән һуң, бабай баланы ошо тирәлә калдырып китергә була. Ни булһа ла булыр, ти ҙә, үҙенең белгәнен укып, баланы кар өҫтөнә һала ла кайтырға борола. Был бала иламаған да, үлеме ул, тереме — бабай асып та карамаған. Шунан ул кайтып китәйем тиһә, теге колон бала эргәһенән китмәй ҙә куя икән. Бабай тегеләй итеп карай; былай итеп карай,— юҡ, эйәрмәй колон. «Эй калһын да. Һарайҙы тиҙәк менән тултырып яфалаған колон да булдымы колон, икенсене колонлар әле»,— тип кулын һелтәй ҙә кайта ла китә бабай.

Ул заманда машина ла булмаған, поезд да йөрөмәгән, самолеттар ҙа осмаған бит инде, бары кола ялан булған. Әйберҙәрҙе дөйәләргә, аттарға тейәп, каруан менән йөрөткәндәр. Каруан башлығы шундай оло хужа булған инде, ул алдағы дөйәлә бара торған булған. Уның артынан башка дөйәләр, башка аттар эйәреп, һатыу итеү өсөн оҙон-оҙон юлға сығып китә торған булғандар. Бер вакыт теге бала ятҡан ерҙән бер каруан үтеп бара икән. Үтеп барһалар, каруанды башлап алып барыусы кеше әйтә:

— Кара әле, ханым-солтаным, анауында йәшел бер урын күренә, шунда ап-ак бер нәмә ятҡан төҫлө. Эргәһендә бер мал да йөрөгән һымаҡ,— ти. Шунан каруан башлығы әйтә:

— Бар, барып ҡарап кил, нәмә икән ул?— ти.

Теге кеше барып ҡараһа, ҡар ирегән, йәм-йәшел булып үлән үҫкән, шул үлән өҫтөндә аҡ юрғанға уралған бер бала ята, бала эргәһендә бер ҡолон үлән ашап йөрөй, ти.

Шуларҙы күрә лә был кеше, килә һалып, хужаһына әйтә:

— Ханым-солтаным, унда бына шундай-шундай хәлдәр: ҡар иреп, йәм-йәшел үлән үҫкән, шул үлән өҫтөндә аҡ юрғанға уралған бер бала ята, бала эргәһендә бер ҡолон үлән ашап йөрөй. Ышанмаһығыҙ, үҙегеҙ барып ҡарағыҙ,— ти.

— Һуң ниңә алып килмәнең уны? Бар, алып кил баланы!— тип, каруан башлығы быны кире ебәрә.

Шунан был кеше барып, баланы күтәреп алып киләйем тиһә, теге ҡолон да ҡалмай, эйәреп килде, ти. Баланы алып килеп дөйәгә һалғас, тереме-үлеме тип, асып ҡараһалар, шундай матур, шундай таҙа ҙур бер ир бала, ти. Баланы яңынан төрөп һалалар ҙа китәләр былар. Ҡараһалар, ҡолон да ҡалмай, һаман эйәреп килә.

Бер ауылға барып етәләр, барып етәләр ҙә остағы ғына бер өйгә барып туҡтайҙар. Туҡтаһалар, был өй башҡа өйҙәрҙән айырылыңҡырап тора, аламараҡ бер өй икән. Рөхсәт һорап барып керһәләр, бер генә әбей ултыра, ти. Сығып әйткәндәр икән, каруан башлығы быларҙы ҡабат индереп ебәргән.

— Барығыҙ, һөйләшеп сығығыҙ. Әгәр риза булһа, баланы шул әбейҙә ҡалдырып китербеҙ. Йыл һайын ошо ерҙәрҙән үткән саҡта, балаға ризыҡ, кейем биреп китербеҙ,— тигән.

Каруандың хеҙмәтселәре кереп һөйләшкәндәр икән, әбей риза буған. Әбей риза булғас, баланы бында ҡалдырып киткәндәр инде. Әйләнеп ҡараһалар, ҡолон да тороп ҡалған. Күпме генә саҡырмаһындар, ҡолон башын да бороп ҡарамаған, теге өйҙөң ишек алдында тик тора, ти.

Шулай итеп, хәҙер был бала бында, яңғыҙ ғына йәшәгән бер әбейҙә, тороп ҡалған. Әбей баланы үҙ тәрбиәһенә алған: үҙенең улы итеп, үҙ фамилияһына яҙҙырып (законлаштырып инде), тәрбиәләй башлаған. Шулай итеп ете йыллап ваҡыт үтеп тә киткән.

Берҙән-бер көндө баланы мәктәпкә алып барырға булған. Матур итеп кейендергән, йыуындырған, сәстәрен тараған, етәкләп алып барып, беренсе класҡа уҡырға биргән.

Бала беренсе класҡа барып уҡырға кереү менән, бик

тәртипле булып, матур итеп уҡый башлаған. Шул хәтлем матур булып, таҙа булып үҫә икән был малай, ай үҫәһен — көн үҫә, ҡайттыниһә, әбейгә шул хәтлем ярҙамлаша, эштәрен эшләй, әнәй тип, күҙенә генә ҡарап тора икән.

Шулай итеп бик матур уҡып, тәрбиәле үҫкән был бала. Ләкин балалар араһында ни булмай тиһең. Уйнаған сағында көнләшепмелер, әллә бүтән сәбәптәнме икән, быны малайҙар үсекләй икән:

— Эй, һинең атайың да, әнәйең дә юҡ бит, һин — килмешәк, һине юлдан табып алғандар бит ул! Эй, табылдыҡ-килмешәк, эй, табылдыҡ-килмешәк! — тип үсекләгәндәр.

Малай шул хәтлем һүҙҙе бик ауыр кисергән. Нисек инде ул минең үҙемдең әнәйем түгел икән? Миңә хәҙер ни эшләргә икән? Нисек был хәлде әнәйемдән әйттерергә икән?.. Һорап ҡараған, әнәһе әйтмәгән. «Һин — минең балам»,— тигән.

Шунан берҙән-бер көндө был малайға шундай уй төшкән: «Туҡта, ҡайтайым да мин әнәйемдән икенсе төрлө юл менән әйттерәйем әле». Ҡайтып ингән дә:

— Әнәй, һин миңә борсаҡ ҡурып бир әле. Шул хәтлем борсаҡ ашағым килә,— тигән.

— Ярар, балам, ярар, борсаҡ ҡурып бирәйем, улайһа.

Хәҙер әсәһе тегеңә борсаҡ ҡурып бирә. Борсаҡ ҡурып алып, бер бер ҡулына һалып, бер икенсе ҡулына һалып, өрә-өрә теге борсаҡты алып килеп ята икән, был малай тегенең ике ҡулын бергә ҡыҫып тотҡан да:

— Әнәй, әйт: мин һинең үҙ балаңмы, түгелме? Дөрөҫөн генә әйт,— тип әсәһенең ҡулын ысҡындырмай тора ла тора, ти. Әсәһе, ҡулы бешеүенә түҙә алмайынса:

— Балам, ебәр! Хәҙер бөтәһен дә — дөрөҫөн һөйләп бирәм,— тигән.

— Һине миңә йыл һайын каруан менән үтә торған кешеләр ҡалдырып киттеләр, улым. Ул ваҡытта һин әле сабый ғына, бәләкәй генә инең. Бәләкәй генә, ала төҫтәге бер ҡолон да эйәргән ине үҙеңә. Ул ҡолон хәҙер ҙурайҙы инде, һин дә ҙурайҙың. Һин минең балам түгел, ләкин мин һине ҡарап, тәрбиәләп үҫтерҙем, ашаттым, эсерҙем, кеше иттем. Һин бына хәҙер ҙурайҙың балаҡайым. Инде үҙ яйыңды үҙең ҡара. Мине инәйем тип танып, миндә йәшәйһең икән, миндә йәшә; уҡырға барам тиһең икән, уҡырға барыуыңа ла ҡаршы түгелмен,— тип әсәһе булған хәлде түкмәй-сәсмәй һөйләп биргән.

Хәҙер дөрөҫ итеп һөйләп биргәс, был малай сит илдәргә сығып, бер аҙ ер-һыу күреп, сәйәхәт итергә уйлаған.

Теге ҡолон был ваҡыт һоҡландырғыс ҙур айғыр булып үҫкән.

— Әнәй, ату мине юлға әҙерлә. Бер аҙ күстәнәс һал шунда. Мин ошо айғырға атланайым да сығып китәйем әле. Иҫән булһам, бер әйләнеп ҡайтырмын; иҫән булмаһам, миңә үпкәләмә. Миңә рәнйемә. Мине ҡарағанһың, үҫтергәнһең, ҙур егет иткәнһең, иҫән бер ҡайтһам, һине бер ваҡытта ла ташламам,— тип, әсәһен йыуатҡан.

Шунан әсәһе әйткән:

— Улым, эле-е-е-к олатайыңдың көмөш йүгәне, эйәре бар ине, тороп ҡалғайны. Өй башында ята буғай. Шуларҙы алып төшөп бирәйем дә, сөхәре ҡатырайым, баллап ҡына ҡорот әҙерләйем, алып китерһең,— тип, улына өй башынан эйәрҙе алып төшөп биргән, сөхәре ҡатырған, баллап ҡына ҡорот әҙерләгән. Шул нәмәләрҙе биргәс, хушлашып:

— Мин үлеп-нитеп китһәм, улым, һине күрә алмаһам, бәхил бул,— тигән.

— Рәхмәт, әнәй, мине ҡарап-тәрбиәләп үҫтергәнең өсөн. Иҫән булһам, мин һине онотмам,— тип, иҫәнлек-һаулыҡ теләп, егет сығып киткән.

Үҙенең ҡайҙа барғанын да белмәгән, алға табан барған да барған, барған да барған был егет. Көн барған, төн барған. Аҙыраҡ ҡына ял итеп, сөхәрейен ашап ала ла бара икән, сөхәрейен ашап ала ла, атын да ял иттереп, ашатып ала ла һаман бара ла бара, бара ла бара икән. Бара торғас, бер ваҡыт төндә йыраҡта-а-а-н ер өҫтөндә бер әйбер ялтырап күренә икән. Барып еткәс ҡараһа, алтын ҡауырһын ялтлап ята икән. Егеттең күҙе ҡыҙҙы. Инде алайым ғына тип, алтын ҡауырһынды тотҡайны, аты телгә килде:

— Эй, егет, был алтын ҡауырһынға күҙең ҡыҙмаһын, алма, бәләһе бик күп булыр,— тине, ти, ат.

Шул урындан бер төлкө үтеп бара икән, ул да туҡталып:

— Эй, егет, теймә ул ҡауырһынға, алма уны. Алһаң, күп яфа сигерһең!— тип әйтте, ти.

Аты ла, төлкө лә ныҡ иҫкәртеүгә ҡарамаҫтан, егет алтын ҡауырһынды алып, ҡуйынына тыҡты ла, юлын дауам итте, ти.

Китеп бара егет, китеп бара, ә үҙе ҡайҙа барғанын да белмәй. Бара торғас, йыраҡта-а-а-ан ҡарайып бер ауыл күренә. Кис булғас, шул ауылға барып етә лә, иң

остағы бәләкәй генә бер өй янында туҡтала. Атынан төшә лә ишек шаҡый. Эстән:

— Кем ул? — тип, бер әбей кеше ҡысҡыра.

— Инәй, ас әле, мин юлаусы, ҡунып китергә рөхсәт ит. Мин ундай-бындай кеше түгел, юлдан ғына үтеп барам,— тигәс, әбей ишеген аса, егетте кертә. Асып керткәс, егет әйтә:

— Инәй, минең атым да бар, уны ҡайҙа ҡуяйым икән?— ти. Инде әбей әйтә:

— Эй, улым, улым, ана шунда бәләкәй генә һарайым бар, һыйһа, атыңды шунда кертеп ҡуй,— ти.

Шунан егет атты һарайға кертеп бәйләй ҙә, алдына бесән һала. Өйгә инһә, әбей самауыр ҡуйып йөрөй. Егет, ҡуйынынан алып теге ҡауырһынды тәҙрә төбөнә һөйәй. Һөйәп ҡуйғайны, өй эсе яҡтырап китә. Ҡауырһындың яҡтыһы шул тиклем яҡты, тәҙрә үтә төшөп, хатта бөтә урамды яҡтыртып тора, ти. Әбейҙең самауыры ҡайнап сыҡҡас, былар сәй эсергә ултыралар. Сәй эсергә ултырһалар, төнгө сәғәт ун икеләрҙә ишек шаҡыйҙар. Шунан әбей ҡысҡыра:

— Кем бар унда тағы? Кем бар?

— Беҙ батша тарафынан ебәрелдек. Ниңә шул тиклем ут яҡтыртып ултыраһығыҙ? Ас ишегеңде!— тиҙәр.

Баҡһаң, был илдең батшаһы ҡараңғы төшкәс, бер кемгә лә шәм тоҡандырырға, ут яғырға ҡушмай икән. Яҡтыны күрерҙәр ҙә сит батшалар килеп баҫып алырҙар, тип ҡурҡа, ти.

Әбей ишеген асҡас, ике кеше (батшаның вәзирҙәрелер инде) килеп инә. Килеп инәләр ҙә былар, аптырап ҡалалар: ут юҡ, шәм юҡ, ә өй эсе яп-яҡты. Ҡарана торғас, тәҙрә төбөндә һөйәлеп торған ҡауырһынға күҙҙәре төшә, оҙаҡ ҡына текләп ҡарап торалар.

— Ярар, әбей, ишегеңде биклӛп ҡал. Беҙ анау тәҙрә төбөндә нәмә яҡтырып тора икән, тип кенә килгәйнек... Ярай, хуш хәҙергә,— тип, сығып та китәләр.

Сығып китәләр ҙә, бара һалып, батшаға әйтәләр:

— Эй, ханым-солтаным, ул әбейҙә бер егет ултыра: шул хәтлегем кәүҙәле, яурындары киң, үҙе ҡарап туймаҫлыҡ матур! Әбей менән сәй эсеп ултыралар, тәҙрә төбөндә бер алтын ҡауырһын һөйәүле тора. Теге яҡтылыҡ шул икән ул!— тиҙәр. Батша тағы бойора:

— Барығыҙ, ул егетте ҡауырһыны менән бында алып килегеҙ,— ти.

Тегеләр ни эшләһен инде, китәләр тағы. Яңынан әбейгә барып инәләр ҙә, алтын ҡауырһынын тотороп,

егетте батшаға алып китәләр. Килтерҙеләр, ултырттылар. Батша һораша башлай:

— Ҡайҙан, ҡайҙан киләһең, улым, нисек, нисек был яҡтарға килеп сығаһы иттең, атаң кем, әсәң кем?..— барыһын да һораша был. Егет һөйләп бирә: ни өсөн өйҙән сығып киткәнен дә, ҡайһылай итеп йөрөгәнен дә, был алтын ҡауырһынды ҡайҙан табып алғанын да — береһен дә ҡалдырмай. Тыңлап бөткәс, батша:

— Ярар, улым, тегендә-бында барып йөрөмә инде, минең эргәмдә генә йәшәрһең,— тип, егетте бында ҡалырға мәжбүр итә.

Таң атҡас, егет әбейҙән атын барып ала ла батша һарайында, уның бер бүлмәһендә йәшәй башлай. Бик матур, һәйбәт итеп йәшәйҙәр, үҙенең улы һымаҡ күрә батша был егетте.

Аҙмылыр, күпмелер ваҡыт үткәс, батшаның вәзирҙәре был егеттән көнләшә башлайҙар. «Әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан бынау килмешәкте, үҙенең улы һымаҡ итеп, үҙенең эргәһендәге бүлмәһендә генә йәшәтә, бер ниндәй эш эшләтмәй, менеп йөрөгән атына хәтлем ҡәҙерләй, ә беҙ ғүмер буйы батшаға хеҙмәт итһәк тә, беҙгә бер ваҡыт яҡшы ашын ашатҡаны юҡ, яҡшы кейемен кейҙергәне юҡ,— тиҙәр.— Бер-бер сараһын табырға кәрәк»,— тиҙәр, үҙ-ара йыйылышып, төрлөһөн уйлай башлайҙар.

Шулай шыбырлаша торғас, бер олораҒы кәңәш бирә:

— Әйҙәгеҙ, батшаны алдайбыҙ.

— Нәмә тип алдайбыҙ?— ти башҡалары.

Был олораҒы әйтә инде:

— Батшаға беҙ уны яманлайыҡ,— ти.

Батшаға барып ингәндәр ҙә былай тигәндәр:

— Эй, бадишам-солтаным, беләһеңме, теге егет һинең хаҡта нимә һөйләй? Ишеткәнең юҡтыр шул, ә беҙ үҙебеҙ ишеттек. Ул һинең хаҡта бына нәмә һөйләй: «Эй, был батша бөтөнләй аңра икән дә, бер нәмә белмәй. Бер алтын ҡауырһынға иҫе китте, ҡошон күрһә, ни эшләр ине икән?» — тип әйтә,— тигәндәр.

Батша, ғәрлегә килеп, егетте саҡыртып алған да:

— Һин, егет, минең хаҡта шулай-шулай һөйләйһең икән. Шул ҡошто алып килмәһәң, мин һинең башыңды киҫтерәм!— тигән.

Егет ҙур ҡайғыға төшөп, башын түбән эйеп килеп сыҡҡан да, аты эргәһенә килеп, башынан һыйпап торған. Шунан айғыр:

— Нимә булды, ниңә бойоҡтоң? — тип һораған.

— Эй, минең тоғро юлдашым, теге саҡта әйткәнең алға килде: батша алтын ҡауырһындың ҡошон тотоп алып килергә ҡуша. Нимә эшләйбеҙ инде хәҙер? — тигән.

Ат:

— Әйттем бит мин һиңә, алма был ҡауырһынды, башыңа бәләһе күп булыр тип. Ә һин тыңламаның. Ярар инде, ни эшләйһең бит, башыңа килгән бәләнән ҡотолоп булмай. Бар, батшаға әйт, бер ай буйы беҙҙе юлға әҙерләһен: йөҙ метр оҙонлоҡта ялтырап торған яҡшы, беренсе сорттағы ебәктән арҡан әҙерләһен; бер айлыҡ ризыҡ әҙерләһен. Бына шул нәмәләрҙе әҙерләп бөткәндән һуң, юлға сығып китербеҙ, — ти аты.

Егет килеп быны батшаға әйтә. Батша быларҙы юлға әҙерләй башлай. Иң яҡшы ебәк таптырып арҡанын да иштерә, тимерҙәр менән ҡоршап, ныҡ итеп, оҙон арба эшләтә, бер айлыҡ ризыҡ әҙерләтә. Бер айҙан һуң егет, үҙенең ҡайҙа барғанын да белмәйенсә, теге айғырын егеп, йөҙ метрлы арҡанды һалып, бөтә ризыҡтарын тейәп, сығып китә.

Бер аҙ барғас, алдарынан бер төлкө үтеп бара икән. Егет ҡысҡыра:

— Эй, төлкө! Ҡайҙа бараһың? Үтмә беҙҙең алдыбыҙҙан. Беҙҙең юлыбыҙға арҡыры сыҡма, мин һине хәҙер атам! — ти.

Ә төлкө егеткә:

— Тороп тор әле, егет, бәлки, минең дә һиңә берәй файҙам тейер, — ти.

Егет:

— Ниндәй файҙа һуң ул? Әйтеп ҡара, булмаһа, — ти төлкөгә. Атын туҡтатты ла төлкө менән һөйләшеп торалар.

— Ҡайҙа бараһығыҙ? — тип һорай төлкө.

— Шулай-шулай, мин бер ваҡыт алтын ҡауырһын табып алғайным, шул алтын ҡауырһындың ҡошон эҙләп китеп барабыҙ, — ти.

— Ә-ә-ә, улаймы ни?! Беләм мин ул ҡошто, — ти төлкө. — Бына нисек итеп барырға кәрәк һеҙгә. Ошо юлдан барығыҙ ҙа барығыҙ. Шунан уңға барығыҙ, уңға барығыҙ ҙа һулға боролоғоҙ, тағы тура барығыҙ. Шулай барғандан һуң, ун биш көнлөк юлды уҙғас, йыраҡта-а-ан ялтырап, бер тирәк күренер. Ул тирәктең бер яҡ япрағы алтын булыр, икенсе яҡ япрағы көмөш булыр, тирәктең эргәһендә урман булыр. Барып еткәс, шул урманға атыңды алып барып, туғарып, бесән һалып бәйләп ҡуй ҙа, арҡаныңды алып, шул тирәктең

төбөнә килеп ят. Ҡара төн уртаһында нурҙар сәсеп, ҡанат елпеүенән ел-дауыл сығарып, ул ҡош тирәккә килеп ҡуныр; ҡунған саҡта тирәктең башы эйелеп, ергә тейер. Шул мәлдә тора һал да, ҡанатын да йыйып өлгөрмәҫ борон, ҡанат төбөнән тот та ал, арҡаныңды сырма. Ул һине бер ергә күтәреп бәрер, бер күккә сорготоп ебәрер,— һин ныҡ йәбеш, ысҡынырға ирек бирмә. Шуға батырлығың етһә, ҡош һинеке булыр,— тигән дә төлкө китеп тә барған.

Егет төлкө өйрәткән боролмалы юлдарҙы үтеп, ун биш көн барғас, алыҫтан уҡ ялтырап, теге алтын-көмөш япраҡлы тирәк күренгән. Тирәк күренгәс тә әле, егет уның янына өс көн, өс төн барған. Ана нисек алыҫтан күренгән ул!

Барып еткәс, егет, төлкө әйткәнсә, атын урманда туғарған; арбаһына бәйләп, алдына бесән һалған да, үҙе ебәк арҡанды күтәреп, тирәк төбөнә килеп ултырған. Алтын ҡоштоң ҡайтҡанын көтә инде.

Кис булған, төн уртаһы еткән. Бына бер саҡ әллә ҡайҙан уҡ ялтырап, бөтә донъяны яҡтыртып, бер ҙу-у-ур ут осоп килә, ти. Яҡынайған һайын көслөрәк елдауыл ҡупҡан, урман шаулаған. Шул хәтлем ҙур көс менән килә, ти, был, күргәндәр түгел, күрмәгәндәрҙең дә ҡото осорлоҡ, ти. Ә егет бөтә көс-ғәйрәтен туплап, керпек тә ҡаҡмай, һаман алтын тирәктең төбөндә ултыра, епте әҙерләй. Ебәк арҡандың осон төйнәп, бер ҡулына ала, икенсе осон ҡоштоң башына ырғытырға элмәкләп ҡуя. Теге уттың, елпенеп килеп, тирәккә ҡуныуы була, тирәк бөгөлөп ергә тейә. Шул арала егет арҡандың элмәкле осон ҡоштоң башына ырғыта, ике ҡулы менән ҡанаттарынан эләктереп тә ала, ебәк арҡан менән сырмап та ташлай. Эй, теге тулай, егетте бер күккә сөйә, бер ергә килтереп бәрә, нисек кенә түҙәһең! Ә егет түҙә, арҡанды ысҡындырмай. Ебәк арҡан тартылған һайын, теге нығыраҡ быулыға; тауыҡ себешен йоҡлатҡандағы һымаҡ, башы ҡанат аҫтына тығыла. Егет бының һикрәндәгән сағында аяҡтарын да уратып ала. Тегенең тамам хәле бөтөп, егеткә һүҙ ҡуша:

— Иә, егет, егет! Бушат мине. Кемгә эләгермен икән тип йөрөй инем, һиңә булған икән. Мин — һинеке хәҙер. Әйҙә, бәйләп арбаңа һал да алып ҡайт,— тигән.

Егет быны күтәреп алып килгән дә, аяҡ-ҡанаттарын яҡшылап сырмап, арбаға һалған, атын егеп ҡайтып киткән. Бер айҙа егет ҡайтып еткән. Батша быларҙы бөтөнләй көтмәгән, юлда берәй ҡазаға осрағандарҙыр, йә үлеп ҡалғандарҙыр, тип уйлаған.

Ҡошто алып ҡайтҡанын күргәс, батша шул хәтлем ҡыуанған, шул хәтлем ҡыуанған, ни эшләргә лә белмәгән: тирә-яҡ ауылдарҙы, ҡалаларҙы ҡунаҡҡа саҡырып, өс көн буйынса бөтә халыҡты ҡунаҡ иткән; ҡошто һуйҙырып, ҡауырһындарын, тиреләрен тунатып алдырып, үҙенең ҙу-у-у-р һарайының башын яптырған. Был ҡош тиреһе, алтын ҡауырһындары тирә-яҡтарҙы әллә нисә саҡрымдарғаса яҡтыртып торған. Батша был егетте тағы ла ныҡыраҡ ярата башлаған, үҙенең улы булмағас, улы һымаҡ күргән. Егет тә бик тәртипле, аҡыллы булған, артыҡ-бортоғон һөйләмәгән, батша нәмә ҡушһа, шуны тыңлаған. Бер ваҡыт та кешегә яуызлыҡ эшләмәгән, һәр ваҡыт күңеле изгелектә булған.

Батшаның вәзирҙәре, башҡа яҡындары егеткә тағы яуызлыҡ уйлай башлағандар. Тағы йыйылышҡандар ҙа кәңәшләшкәндәр, тағы бер ғәйбәт уйлап сығарғандар. Был юлы батшаға шулай итеп һөйләгәндәр:

— Һинең улың һымаҡ күргән килмешәгең бигерәк тә ҡотороп китте бит әле. «Был батша нисәмә йылдар буйына батша булып торһа ла бер ҙә донъя күрмәгән икән. Алтын ҡошто алып ҡайтып биргәйнем, шуға ла иҫе китте бахырҙың. Әгәр һыуҙың һылыу ҡыҙын алып ҡайтып бирһәм, был ни эшләмәҫ икән?» — тип, һинән гел көлөп, мыҫҡыл итеп һөйләп йөрөй икән. Бер сараһын күрергә кәрәк ине ул килмешәккә,— тигәндәр.

Батша егетте саҡыртып алған да, асыуланғандай итеп:

— Йә, егет, һин минән тағы ла көлөп йөрөйһөңмө, һыуҙың һылыу ҡыҙын алып ҡайтып бирһәм, был батша ни эшләр ине икән тип мыҫҡыл итәһеңме?— тип һораған.

Егет меҫкен ни тип әйтергә лә белмәй: «Юҡ» тиһә, батша барыбер ышанмай, башын киҫтерә. «Эйе» тиһә, тағы ла харап. «Эй, ни булһа ла булыр, үлһәм, батырлыҡ юлында үлермен»,— тип уйлай ҙа:

— Эйе шул, бадишам!— тип әйтә лә һала.

— Ярар ату, бар, миңә шул ҡыҙҙы алып ҡайт!— ти батша.

Егет, бик бошоноп, ҡобараһы осоп, аты эргәһенә килә, башын ҡосаҡлап, илап тора. Айғыры йәнә телгә килә:

— Ниңә илайһың?— ти.

— Иламай ни эшләйем, тағы башыма бәлә килде бит. Батша һыуҙың һылыу ҡыҙын алып килергә ҡушты,— ти егет. Аты:

— Эй, егет-егет, әйттем бит мин һиңә, алма шул алтын ҡауырһынды, башыңа бәләһе күп булыр тип. Их, мине тыңламаның шул!.. Йә, ярар, күп һыҡтама, барырбыҙ, алып ҡайтырбыҙ. Әммә быныһы ауырыраҡ та булыр, оҙағыраҡ та үтер,— тигән дә әҙерләнергә ҡушҡан: — Ошо шәһәрҙең эргәһенән диңгеҙгә тиклем канал ҡаҙыһындар, бер карап эшләтеп, шул каналға төшөрһөндәр. Караптың палубаһы алтын менән ялатылған булһын, уның өҫтөнә алтын менән ялатылған өҫтәл әҙерләһендәр, өҫтәлдең эргәһенә дүрт ултырғыс ҡуйһындар, һәр ултырғыстың аҫтында төрлө-төрлө аҫыл таштар менән биҙәлгән һандыҡ булһын. Был һандыҡтар асылып та, ябылып та торһон. Өҫтәл өҫтөндәге бөтә һауыт-һаба алтындан ялатылған булһын. Алтын көҙгө, алтын көҙгө эргәһендә ҡыҙҙар сәсен тарай торған алтын тараҡ булһын. Бына шундай нәмәләрҙе әҙерләгәндән һуң, беҙ юлға сығырбыҙ,— тигән ат.

Егет, инеп, быны батшаға әйткән.

Батша ошо көндән башлап төрлө ерҙәрҙән оҫталар, һөнәр эйәләрен саҡыртып, карабын, башҡа йыһаздарын эшләргә ҡушҡан. Батшалыҡтың бөтә халҡын канал ҡаҙырға сығарған.

Шул каналдан шәһәр эргәһенә һыу килтергәндәр. Быға бер йылмылыр, ике йылмылыр ваҡыт үтеп тә киткән. Карапты ла өлгөрткәндәр. Уны шул тиклем матур итеп, ялтыратып эшләгәндәр, күҙҙең яуын алырлыҡ ҡупшы килеп сыҡҡан: палубаһын тотош алтын менән ялатҡандар; палубаның ҡояш төшә торған нәҡ уртаһына алтын өҫтәл эшләгәндәр; өҫтәлде тирәләтеп, шулай уҡ алтындан ялатылған дүрт ултырғыс яһағандар; һәр бер ултырғыстың аҫтында асылып, ябылып торған һандыҡтары булған, һандыҡтарҙы аҫыл таштар менән биҙәгәндәр; өҫтәл өҫтөндәге бөтә һауыт-һаба алтын менән ялатылған; шунда уҡ алтын көҙгө менән алтын тараҡ ҡуйғандар.

Шуларҙың бөтәһе лә әҙер булғас, атҡа ла карапта урын яһалғас, әллә ике айлыҡ, әллә өс айлыҡ ризыҡ тейәгәс, тирә-яҡтағы бөтә халыҡты йыйып, карапты каналға этәреп төшөргәндәр. Этәреп төшөргәс, карап шул каналдан йөҙөп киткән, диңгеҙгә барып сыҡҡан.

Хәҙер былар ярҙан бик алыҫлашмайынса ғына китәләр. Егет һәр ваҡыт ҡарап бара. (Караптың капитаны икенсе кеше булған). Егет ҡарап бара торғас, яр эргәләп кенә бер бүре китеп бара икән. Егет ҡысҡыра тегеңә:

— Бүре, туҡта, беҙгә эйәреп барма, мин һине хәҙер атам! — ти.

Бүре әйтә:

— Тороп тор әле, егет, ни эшләп һин миңә яуызлыҡ уйлайһың? Тәүҙә ҡайҙа барғаныңды әйт, бәлки, мин һиңә кәңәш бирә алырмын, бәлки, берәй файҙам тейер.— Егет ҡайҙа китеп барыуын һөйләгән.

— Мин һыуҙың һылыу ҡыҙын алырға китеп барам. Ҡайҙа йәшәй икән ул ҡыҙыҡай? Һин белмәйһеңме? — тигән.

Бүре әйткән:

— Ошо диңгеҙгә төшөп, һеҙ дөрөҫ эшләгәнһегеҙ. Бик оҙаҡ барырға тура килер һеҙгә. Бара торғас, һулаҡай ҡул яҡта бер бейе-е-е-ек тау булыр. Ул тауҙың башы тотош урман булыр. Шул һулаҡай ҡул яҡтағы бейе-е-ек тауҙың эргәһенә генә алып барып карабыңды туҡтатырһың да, алтын ултырғысыңдың аҫтына һандыҡ ҡуйылған бит, шул һандыҡтың эсенә инләп кенә кереп ятырһың. Күпме ятһаң да — ҡыбырлама, тауыш та сығарма. Шул тау эргәһендәге яр буйына һыуҙың һылыу ҡыҙҙары һыуҙан сығып уйнай торған шымарыы-ып бөткән таштары бар. Шул урында улар һыу инәләр, йөҙәләр, ҡойоналар. Уларҙың сыр-сыу килгән тауыштарын ишетеп, тороп ҡарай күрмә. Йөрөй торғас, йөрөй торғас, карапҡа күнегә башлағас, улар карапҡа үҙҙәре килеп менерҙәр, алтын өҫтәл янына килеп, ҡарап торорҙар; алтын өҫтәлдә алтын көҙгө менән алтын тараҡты күргәс, бәлки, берәүһе сәсен тарай башлар. Шул ваҡытта һин һандыҡ эсенән йәһәт кенә сыҡ та, ҡыҙҙың сәсенән уратып ал. Ул һине өҫтәлгә лә бәрер, ултырғысҡа ла, иҙәнгә лә бәрер. Һин барыбер ысҡындырма, сәсен урап-урап тот. Шуға батырлығың етһә, һыуҙың һылыу ҡыҙы һинеке булыр, — тип, теге бүре егеткә һәйбәт кәңәш биргән.

Киткәндәр былар тағы ла. Киткәндәр, киткәндәр, гел һыуҙың ҡаршыһына киткәндәр. Бара торғас, һулаҡай яҡтан бейе-е-ек тауға барып еткәндәр. Был тауҙың башы тотош йәшел урман менән ҡапланған. Шул тауҙың эргәһендә капитан карапты туҡтатҡан, үҙе ҡайҙалыр шунда бер ергә йәшенгән, ә егет иплəп кенә палубаға менгән дә теге һандыҡ эсенә кереп ятҡан. Һандыҡты ҡыҫып ҡына ҡарап ята икән. Ята торғас, бына бер саҡ, көн үҙәгендә, уйнап-көлөп, ҡысҡырышып, һыу сәсрәтешеп, һыуҙың һылыу ҡыҙҙары килеп сыҡҡандар. Улар өсәү булғандар икән. Килеп сыҡҡандар ҙа, ғәҙәттәренсә, яр буйындағы теге ташҡа ултырып, сәстәрен

тарағандар. Тағы һыуға һикереп төшкәндәр, тағы килеп сыҡҡандар, уйнағандар, көлгәндәр. Иң кесеһе әйтә икән:

— Ҡарағыҙ әле, апай, ҡарағыҙ, анауында бер нәҫтә тора! Нимә икән ул?

Карапты күргәндәр ҙә аптырашып ҡарап торалар икән былар.

— Әйҙәгеҙ, эргәһенә барып ҡарайыҡ әле,— ти икән теге кесерәге.

Ҡуйсы, нисек бараһың унда, ҡурҡмайынса, йә әллә нәмәкәй булыр,— тигәндәр апайҙары. Ә һыуҙың кесе һылыу ҡыҙы шуғыраҡ булдымы икән инде, һис айвайына ҡуймаған.

— Юҡ инде, апайҙар, әйҙәгеҙ әле барып ҡарайыҡ. Бигерәк матур бит, әйҙәгеҙ инде!— тип, һаман тегеләрҙе тартҡылай икән.— Ҡурҡһағыҙ, эсенә инмәбеҙ, яҡындан ғына ҡарарбыҙ,— ти икән.

Шунан был бик ҡыҫтағас, иларға ла итә башлағас, апайҙары ла күнгән. Өсөһө лә бергәләп таштан шыуып төшкәндәр ҙә иплэп кенә йөҙөп киткәндәр.

Килеп етһәләр, палубаның өҫтө ҡояшҡа шул хәтле ялтырап күренә икән, быларҙың хатта күҙҙәре сағылып, һыуға сумғандар. Килеп сығалар ҙа тағы ҡарап торалар, һыуға сумып алалар ҙа тағы ҡарап торалар. «Әллә нәмәкәй» тигәндәре бер ҙә ҡуҙғалмағас, һис тә тауыш сығармағас, һеңлеләре батырыраҡ та булғандыр инде, караптың баҫҡысын күреп ҡала ла палубаға уҡ менеп китә.

Менһә, палубаның өҫтө тотош алтын менән ялатылған. Алтын өҫтәл, алтын өҫтәл эргәһендә дүрт алтын ултырғыс, ул өҫтәлдең өҫтөндәге затлы һауыт-һаба ҡояшҡа шул хәтлегем ялтырап торалар, шул хәтлегем, шул хәтлегем ялтырап торалар, әйтеп бөтөрөрлөк тә түгел, ти! Етмәһә, тәмле ризыҡтарҙың хуш еҫе борҡоп тора икән. Һыуҙың һылыу ҡыҙы өҫтәлдә ятҡан алтын көҙгө менән алтын тараҡты ла күреп ҡала, апайҙарын саҡыра.

— Апайҙа-а-ар, ҡарағыҙ әле, бынауында алтын көҙгө менән алтын тараҡ бар! Килегеҙ әле, бигерәк матур бит!— ти икән.

Шулай булғас, апайҙары ла яҡынлаша башлайҙар, баҫҡысҡа баҫып палубаға менәләр. Һеңлеләре алтын ултырғысҡа ултыра ла, ике яҡҡа айырып, алтын тараҡ менән сәсен тарай башлай. Тегеләре лә түҙмәй, һеңлеләренән күрмәксе, алтын көҙгө менән алтын тараҡты ҡулдарына алып, сәстәрен тарайҙар.

Һыуҙың һылыу ҡыҙҙарының сәстәре, шул саҡлы оҙон, шул саҡлы ҡуйы, йомшаҡ, ҡара ебәк кеүек ти! Ә алтын тараҡ шундай шыма тешле, ти, сәсте йолҡмайнитмәй, толомдарының осона тиклем барып сыға, ти.

Былар ана шулай, бөтә донъяларын онотоп, сәстәрен тараған саҡта, егет шым ғына һандыҡтың ҡапҡасын күтәрә лә кесе һылыуҙың бер толомон ҡулына урай ҙа ята. Инде шул толомон тарайым тип тартылған ыңғайға һикереп торһа, һандыҡтан егет килә лә сыға. Апайҙары суп итеп һыуға һикерә, һеңлеләре тора ла ҡала! Һыуҙың һылыу ҡыҙы шул хәтлегем көслө, шул хәтлегем көслө икән, егетте бер өҫтәлгә, бер ултырғысҡа, бер иҙәнгә күтәреп бәрә! Беләһегеҙ, беҙҙең егет тә ебегәндәрҙән түгел бит инде, ҡыҙҙың сәсен нығытып ҡулына ураған да һис ебәрмәй. Эй алышалар былар, эй алышалар: ҡыҙ нисек тә һыуға һикерергә итә,— егет ебәрмәй, үҙенә тарта, тартҡан һайын, ҡыҙҙың сәсен ҡулына күберәк урай. Егет ебәрмәгәс, һыуҙың һылыу ҡыҙы әйтә:

— Мин үҙемде кемгә насип икәнмен тип йөрөй инем, һиңә икән, егет. Йә, ярар, бушат инде сәсемде, ебәр, ауырттыраһың бит,— ти.— Ни эшләтһәң дә мин хәҙер һинең хөкөмөңдә,— ти.

Шулай итеп һыуҙың һылыу ҡыҙын алып, егет ҡайтырға, һыуҙың ағышына борола.

Бер аймы икән, ике аймы икән ваҡыт үткәс, былар ҡайтып төшә. Һыуҙың һылыу ҡыҙын күргәс, батша шул хәтлегем ҡыуанған, иҫе-аҡылы киткән. Ҡыҙҙың бер үҙен бер бүлмәгә яптырып ҡуйған. Ҡыҙҙы үҙемә алам, гөрләтеп туй яһайым тип, бөтә халыҡты йыйып, табын башланыр саҡта ғына ҡыҙҙы сығарғандар икән, һыуҙың ҡыҙы батшаға былай тигән:

— Юҡ, һиңә бисә була алмайым. Теге егетегеҙ менән алышҡан саҡта балдағым һыуға төшөп ҡалған. Шул алтын балдағымды табып килтереп, бармағыма кейҙермәйенсә тороп, мин һинең менән никахлаша алмайым,— тигән.

Батша был хәлгә бик аптырап ҡалған инде. Нисек итеп диңгеҙ төбөнә ырғыған был балдаҡты тапмаҡ кәрәк?! Шулай ҙа егетте саҡыртып алған.

— Егет, бына тағы шундай хәл башыбыҙға килде бит әле. Һыуҙың һылыу ҡыҙы миңә тормошҡа сығырға риза түгел, һинең менән алышҡан ваҡытта ҡулындағы алтын балдағы һыу төбөнә ырғып ҡалған икән. Шул алтын балдаҡты табып алып килгәндән һуң ғына, никахлаша алам, ти. Шулай булғас, һыуҙың һылыу ҡы-

ҙын һин алып килдең, балдағын да һин алып кил инде,— тигәс, егет тағы ла үҙенең айғырына кәңәш итергә һарайға сығып китә.

Һарайға барып, эштең нәмәлә икәнен һөйләп биргәс, айғыр:

— Эх, егет, егет, әйттем бит мин һиңә шул алтын ҡауырһынды алма тип, шул ҡауырһындың бәләләре баштарыбыҙға етә бит инде!— ти.— Ярар, ни эшләйһең бит, минең файҙам тейһә тейер, теймәһә юҡ, шулай ҙа барырға тура килер. Шул карап менән китербеҙ,— ти.

Егет сығып батшаға әйтә лә, былар юлға әҙерләнәләр. Бер айлыҡ ризыҡ алалар.

— Бер айҙан, батшам, ҡайтырбыҙ; бер айҙан ҡайтып өлгөрмәһәк, беҙҙе көтмәгеҙ,— тип, тағы ла шул карапҡа ултырып, үҙе менән бергә айғырын да алып, юлға сығып китәләр.

Теге урынға барып туҡтайҙар. Туҡтайҙар ҙа егет ярға сығып ултыра, уйға ҡала: нисек тапмаҡ кәрәк ул балдаҡты диңгеҙ төбөнән? Кемдән ярҙам һорарға? Шулай ултыра торғас, тирә-яғына ҡаранһа, һыуҙың ситендә ҡырылып бөткән бер балыҡ ята икән. Ҡорола ятып хәлдән тайған балыҡты ала ла, әлеге алтын өҫтәл өҫтөндәге алтын тәрилкәгә һыу һалып, шунда ем һалып, бахырҡайҙы тәрбиәләй башлай. Өс-дүрт көн үтеүгә был балыҡ ап-арыу булып йүнәлә. Шул ваҡыт һыуҙан бер балыҡ башын тыға ла:

— Эй, егет, ни эшләп һин минең баламды алдың, ниңә уны тотҡонда йәшәтәһең? Ебәр минең баламды,— ти.

Егет әйтә:

— Һинең балаң һыу ситендә хәлһеҙ ята ине. Мин уны тәрбиәләп терелттем,— ти.

— Ниңә һуң уны һаман ебәрмәйһең?— ти балыҡ.

— Һеҙҙең балыҡ халҡына минең бер һорауым бар. Бына ошо урында һыуҙың һылыу ҡыҙының алтын балдағы төшөп ҡалған. Шул балдаҡты алып сығып бирһәң, мин һинең балаңды ебәрәм,— тигән егет.

Балыҡ уйлап-уйлап торған да:

— Бик ауыр мәсьәлә әйттегеҙ бит әле һеҙ, егет. Һыу төбөнән уны нисек табырмын икән? Ярай, эҙләп ҡарайым, улайһа. Мине өс көн көтөгөҙ ҙә, өс көндән әйләнеп ҡайтмаһам, көтмәҫһегеҙ,— тигән, ти, балыҡ.

Бер көн көткән егет балыҡты, ике көн көткән, өс көн көткән, ә балыҡ юҡ та юҡ, ти, һаман. Ни эшләргә хәҙер?

Тағы ла бер көн көтөп ҡарарға булған. Дүртенсе көн көткәндә кискә табан ғына балыҡ өҫтөндәге тәңкәләре,

ҡанаттары ҡырылып, үлер сиккә етеп, һыу өҫтөнә килеп сыҡҡан. Балыҡтың һыу өҫтөнә килеп сығыуы булған, егет уны иләп кенә тотоп алған да алтын тәрилкәһенә килтереп һалған. Балыҡ ауыҙындағы алтын балдаҡты салтыр итеп тәрилкәгә төшөргән. Алтын балдаҡ бөтә донъяны яҡтыртып, күҙҙең яуын алып ята, ти.

— Йә, егет, һинең бәхетеңме икән, минең бәхетемме икән, әллә һыуҙың һылыу ҡыҙының бәхетеме икән? Был балдаҡты эҙләп табыуҙары шул хәтлем ҡыйын булды. Һыу төбөндә үҫкән үлән араларынан эҙләнем, таш араларынан ҡыҫылып үттем, көмөш тәңкәләрем һыҙырылып ҡалып бөттө, ҡанаттарым да һынып бөттө. Ҡайһыбыҙҙың бәхетенәндер инде, алтын балдаҡты барыбер таптым. Инде өҫкә ҡалҡынайым тиһәм, өҫтөмдән генә бер ҙур балыҡ үтеп бара, илаһы-ы-ым, осо ла юҡ, ҡойроғо ла юҡ! Мин боҫ тиҙ генә төпкә. Әллә ике көн үтте, әллә өс көн; әллә бер балыҡ, әллә ике балыҡ, һис кенә лә күтәрелер әмәлем юҡ. Инде ашарға ла рәтем юҡ: ауыҙымда алтын балдаҡ. «Инде бөттө көнөм, ошонда икән үлем!» — тип, ҡараңғы һыу төптәрендә ята торғас, теге мине күрмәне, үтеп китте. Күреп ҡалһа, ул яуыз мине бер ҡабып ҡына йота ла ҡуя ине. Ярай әле ауыҙына тап килмәнем, табыр инең унан һыуҙың һылыу ҡыҙының балдағын! — тип һүҙен бөтөргән дә, үҙе менән бергә балаһын ебәреүҙе һораған. Егет, рәхмәттәр әйтеп, икеһен дә һыуға төшөрөп ебәргән. Шунан балдаҡ табылыуға шатланып ҡайтыу яғына боролған.

Быларҙың ҡайтыуын батша, халыҡ йыйып, көтөп торған. Алтын балдағын алып ҡайтһа, һыуҙың һылыу ҡыҙын алам, туй үткәрәм, тип шатлана инде, ҡартлас.

Батша тағы һыуҙың һылыу ҡыҙын үҙенең эргәһенә саҡыртып алған.

— Йә, һылыуҡайым, бына һинең балдағыңды ла алып килдек, инде нәмә эшләйбеҙ? Хәҙер туй яһарға ла ярайҙыр, никах уҡытайыҡ,— тип әйткән икән, ти, батша, һыуҙың һылыу ҡыҙы быға тағы ҡаршы төшкән:

— Юҡ шул әле, батшам, минең тағы ла бер һорауым бар,— тигән.

— Ул ниндәй һорау тағы? — тип, ҡысҡырып уҡ ебәргән батша.

— Минең шундай һорауым бар. Ярар, мине тотоп алып килдегеҙ инде, кем бәхетенән килгәнмендер, әле уныһын белмәйем. Балдағымды ла алып килде теге батыр егет, уныһына ла рәхмәт. Инде минең үҙем менеп йөрөй торған һыуҙың һылыу айғырын тотоп алып

килегеҙ! Шул айғырҙы тотоп алып килгәс тә, кем бәхетенә яҙған булһам, шуға кейәүгә сығырмын,— тигән.

Батша ни эшләһен инде, был батыр егетте тағы саҡыртып алған, ти.

— Иә, батыр егет, һыуҙың һылыу ҡыҙының тағы ла бер һорауы ҡалған икән. Ул хәҙер үҙенең һыуҙың һылыу айғырын алып килергә ҡуша. Инде шул айғырҙы ла тотоп алып килһәң, мин һине ҡабат яфаламам, мин үлгәс, батша булырһың,— тип әйткән, ти.

Егеттең башы тағы ҡайғыға төшкән. Үҙенең ала айғыры эргәһенә сыҡҡан да, «инде ни эшләмәк кәрәк?» тигән уй менән атына ҡарап торған. Ә быны айғырын шул хәтлем тәрбиәләп тоталар икән, һоло ашаталар, бесән ашаталар, сылтырап аҡҡан һалҡын шишмәнән генә һыу эсерәләр икән. Һәр ваҡыт айғырҙы йөҙҙөрөп, һыу индереп, таҙартып торалар икән. Теләгәне алдында, теләмәгәне артында икән.

Хужаһының ҡайғыһын һиҙеп, айғыр:

— Ай, егет, егет, әйттем бит мин һиңә, алма был ҡауырһынды, башыңа шул хәтлем бәләһе күп булыр тип. Тыңламаның шул һин мине. Бына инде шул арҡала күпме яфа сигәбеҙ. Инде һыуҙың һылыу айғыры менән алышырға икән. Һай ауыр, бик тә ауыр буласаҡ быныһы... Йә, ярай, башҡаса сара юҡ, барып ҡарарға тура килер,— тигән.— Теге ебәк арҡанды алырға кәрәк булыр, әйт, әҙерләп ҡуйһындар. Бер айҙан артыҡҡа ризыҡ әҙерләһендәр. Миңә кейҙереү өсөн, минең буйыма ҡарап, утыҙ айғыр тиреһен ҡатлап текһендәр. Һәр тояғыма берәр бот ауырлығындағы даға һуҡһындар. Бына ошоларҙы эшләп бөткәс, беҙ юлға сығып ҡарарбыҙ,— тигән. Егет быны батшаға кереп әйткән.

Хәҙер инде батша ошо юл хәстәренә тотонған. Тегенән дә оҫталар саҡыртҡан, бынан да оҫталар саҡыртҡан. Утыҙ айғыр тиреһен ҡатлатып, егеттең ала айғырына тун теккәндәр; тояҡтарын берәр ботло ҡорос дағалар менән дағалағандар; теге оҙо-о-он ебәк арҡанды ла йыуып-таҙартып ҡуйғандар; бер айҙан да күберәккә етерлек итеп, юлға ашамлыҡ-эсемлектәр әҙерләгәндәр. Шуларҙың бөтәһе лә әҙер булғас, быларҙың китер көндәре лә килеп еткән. Бөтә нәмәне баяғы карапҡа сығарып тейәгәндәр, ала айғырҙы ла шунда индереп, үҙ бүлмәһенә бәйләгәндәр. Таныш-белеш, дуҫ-иштәре менән хушлашып, егет элеккеләренән дә хәтәрерәк оҙон юлға сығып киткән.

Былар элекке юлдарынан китеп барған ваҡытта,

уң яҡ ярҙа тағы теге төлкө осраған. Егет быны күреп ҡалған да ҡысҡырып туҡтатҡан:

— Тороп тор әле, төлкө! Ҡайҙа китеп бараһың? Хәҙер атам бит үҙеңде! — тигән.

Төлкө ҡарап торған да әйтә һалған:

— Егет, ни эшләп әле һин мине атмаҡ булдың? Юҡ, атмай тор әле һин мине, бәлки, берәй файҙам тейеп ҡуйыр, — тигән. — Үҙең ҡайҙа бараһың, иҫәнлек-һаулыҡ һорашайыҡ, һәйбәтләп һөйләшәйек, — тип әйткән, ти, төлкө.

— Ярай ату, — тип, егет карабын туҡтатҡан да төлкө менән һөйләшә башлаған, ти.

— Бына, төлкөкәйем, беҙ шулай-шулай хәлдәр менән китеп барабыҙ. Ошо яҡтан һыуҙың һылыу ҡыҙын алып ҡайтҡайныҡ, уны батша үҙенә алмаҡсы булғас, ул ҡыҙыҡай үҙенең нәмәләрен таптыра. Уның диңгеҙгә ташлаған алтын балдағын табып алып ҡайттыҡ. Ә хәҙер үҙе менән йөрөгән һыуҙың һылыу айғырын таптыра, шуны алып килеп бирһәгеҙ генә, мин кейәүгә сығам, ти. Мин ана шул айғырҙы юллап китеп барам, — тип әйтте, ти, егет.

— Шулаймы ни? — тигән төлкө. — Улай булғас, былай эшләгеҙ, — тигән. — Шул һыуҙың һылыу ҡыҙын ҡайһы ерҙән тоттоғоҙ, шул ергә барып етегеҙ ҙә туҡтағыҙ. Туҡтагас, атыңды караптан алып сыҡ. Уң ҡул яғында тотош урман менән ҡапланған бейек тау торор. Һыуға ҡаршы итәгендә түп-түңәрәк бик матур бер аҡлан булыр. Шул аҡланда хуш еҫле сәскәләр, һутлы үләндәр үҫкән булыр. Шул ергә айғырыңды алып сыҡ та көт. Көн уртаһында һыуҙың һылыу айғырҙары килеп сығырҙар ҙа шул аҡланда сабышып-сабышып уйнарҙар. Улар өсәү булыр, һөлөк кеүек иң матуры, иң саяһы кесе ҡыҙҙыҡы булыр. Килеп сыҡҡандарын ҡарап тор ҙа айғырыңды ебәр. Айғырың барһын да тегеләрҙе үсектерһен: тегеләй иткән булһын, былай иткән булһын. Бүтән айғырҙар һинең айғырыңа ҡарап тормаҫтар, шул кесе айғыр килер. Килер ҙә һуғыша башлар. Улар алышҡан ваҡытта һин улар эргәһендә торма, ҡырҙара-а-аҡ бер урында башың күренерлек кенә итеп соҡор ҡаҙы ла тегеләрҙең һуғышҡанын шунан ғына ҡарап тор. Әй алышыр, әй алышырҙар айғырҙар, бер береһе кешнәп ебәрер, еңдем тип; бер икенсеһе кешнәп ебәрер. Үҙеңдең айғырың тегенең өҫтөнә баҫып тороп кешнәп ебәргән ваҡытта, шул баҙыңдан ырғып сығырһың да, килә һалып, арҡаныңды теге айғырҙың башына элерһең. Шул саҡта арҡаныңды ҡулдан ысҡын-

дырмайынса, һыуҙың һылыу айғырын йыға алһаң, ул һинеке булыр. Тик ҡара уны, һинең айғырың иң аҙаҡтан еңмәйенсә тороп, улар янына килә күрмә: ҡазаға ҡалырһың. Ҡара, егет, минең әйткәнемде тыңла, ҡолағыңа эл! — тип әйткән, ти, төлкө.

Ярар, төлкөнө егет атманы бит инде, төлкө егеткә уңышлыҡ теләп, айырылыштылар былар.

Һыуҙың һылыу ҡыҙын ҡайһы ерҙән алып килгәнлеген егет белә бит инде, шул урынға барғандар ҙа караптарын туҡтатҡандар. Барып туҡтағас, егет айғырын ярға алып сыҡҡан. Ат ауыр иттереп атлай, ти, инде хәҙер: өҫтөнә утыҙ айғыр тиреһе йәбештерелгән, етмәһә, аяҡтарында берәр ботло даға бит инде. Атын алып барған да теге аҡланға ебәргән, ә үҙе, ебәк арҡанды алып, башы күренерлек итеп кенә ситтәрәк бер соҡор ҡаҙып, шул соҡорға төшөп торған. Арҡанын әҙерләп, эргәһенә генә һалып ҡуйған.

Бер ваҡыт егеттең айғыры аҡланда йөрөгән була, ти: тегеләй итә, былай итә, ти. Аҡланды сапсыған була, бысрата, тиҙәкләгән була, ти. Шул ваҡытта һыуҙың һылыу ҡыҙҙарының өс айғыры, сабышып уйнаҡлап, һыуҙан килеп сыҡтылар, ти. Килеп сыҡтылар ҙа аҡланға саптылар, ти. Барһалар, егеттең айғыры быларҙың аҡланын бысратып, тиҙәкләп бөткән. Быға һыуҙың һылыу айғырҙарының асыуҙары килде, ти. Олораҡ ике айғыр һыуға кире килеп төштө лә китте, ти, ә кесе айғыр, иң матуры, бында тороп ҡалды ла әйҙә теге егеттең айғыры менән алыша башланы, ти. Инде былар алышалар, тибешәләр, тешләшәләр, кешнәшәләр, ти, хатта бөтә ер тетрәп, тау-таш ҡалтырап тора, ти. Егет соҡорҙа ҡарап тора инде, нәмә эшләргә белмәйенсә-ә-ә. Айғырҙар көрәшкәндә йә тегеһе аҫта ҡала, йә быныһы аҫта ҡала, ти.

Шулай оҙаҡ көрәшә торғас, һыуҙың һылыу айғыры еңде, ти (еңгән һымаҡ булды, ти, инде егеткә). Һыуҙың һылыу айғыры егеттең айғырын этеп алып бара, этеп алып бара икән, егет сыҙамайынса, «Ай!» тип, ҡысҡырҙы ла ебәрҙе, ти. Ҡысҡырып ебәргәйне, егеткә үҙенең айғыры әйләнеп ҡараны, ти. Шул ваҡытта, тамағының аҫтында ғына ныҡлабыраҡ йәбештерелмәгән бер ере ҡалған икән, һыуҙың һылыу ҡыҙының айғыры был айғырҙың шул еренән умырып тешләне лә алды, ти. Тешләп тә алды, ҡан урғылып та китте. Тамаҡ аҫтын тешләп алғас, ат нәмә эшләһен, ятҡан да

үлгән инде. Ә һыуҙың һылыу ҡыҙының айғыры, сабы-ы-ып барып, һыуға төштө лә китте, ти.

Их, егет, егет, нимә эшләй инде хәҙер!.. Айғырының эргәһенә килде лә илай ҙа илай был хәҙер.

— Айғырым үлгәс, миңә хәҙер кем ярҙам итһен, минең серҙәшем кем булһын хәҙер? Кем яҡлаһын, кем мине ел-ямғыр тейҙермәйенсә алып йөрөһөн? Минең бит бер кемем дә юҡ, бер аҫрап үҫтергән әсәйем генә бар ине, ул да әллә ҡайҙа йыраҡта ҡалды, хәҙер ул әллә йәшәй, әллә юҡ. Хәҙер мин ул ерҙәргә нисек ҡайтайым?.. Айғырым үлгәс, үҙем дә үләйем дә ҡуяйым,— тип әйтте лә, ти егет, айғырының эсен ярып та ебәрҙе, шунда кереп тә ятты, ти, үләм тип. Эй ята, эй ята айғырҙың эсендә хәҙер егет, һис үлә алмай ята, ти. Шул саҡ бер ҡарға килгән дә аттың итен ашап тора, ти. Итен ашап, ҡанын эсеп тора икән, егет был ҡарғаны тотҡан да алған. Тотоп алған да һис ебәрмәй, ти, быны. Ҡарға ҡарҡылдай, ти. Шулай ҡарҡылдай торғас, ҡарғаның инәһе килде лә:

— Егет, ни эшләп һин минең баламды тотаһың, ебәр хәҙер баламды! Минең бер генә балам бит ул,— тип әйтте, ти.

— Ни эшләп тотмайым, ти, мин уны минең атымдың итен ашағас. Атымды ашамаһа, мин уны тотмаҫ инем,— тип әйтте, ти, егет.

— Һинең атың үләкһә бит инде хәҙер. Минең балам килеп ашамаһа, ул үләкһәне барыбер башҡа ҡарғалар ашар ине. Ебәр инде баламды!— ти инә ҡарға. Ә егет һаман ебәрмәй.

— Әгәр һин миңә тере һыуы менән үле һыуы алып килһәң, балаңды ебәрәм,— ти.

Ҡарға уйға ҡалған.

— Ярар, эҙләп ҡарайым, улайһа. Өс көндән ҡайтһам, ҡайтҡаным булыр, өс көндән ҡайтмаһам, мине көтмә,— тип әйткән дә ҡарға, ҡанатын елпеп, осоп сығып киткән, ти.

Егеттең эсенә йылы кергән. Торған да ҡарғаның балаһын ашата, эсерә башлаған. Шулай бер көн үткән, ике көн, өс көн дә уҙып киткән. Ә теге ҡарға һаман юҡ та юҡ, ти. Бишенсе көн тигәндә генә ҡарға йонсоп, хәлдән тайып ҡайтып төшкән. Осоп килеп төшкән дә айғырҙың ярылған ерҙәренә үле һыуын ҡойоп сыҡҡан. Икенсе уртындағы тере һыуын аттың танауына, ике ҡолағына тамыҙған. Тамыҙа башлаған икән, бер тамыҙғанда, ат бышҡырып ебәргән, икенсе тамыҙғанда, башын ҡалҡытып ҡараған, өсөнсө тамыҙғанда: «Ай-һай,

бик оҙаҡ йоҡлап киткәнмен түгелме һуң?» — тип, ырғып килеп торған. Һелкенеп алды ла, тирә-яғына ҡарап тора ине, егетте күреп ҡалды. «Ниңә ҡысҡырҙың?» — тип, уны тиргәп ҡуйҙы, ти. «Ярар, инде улай итмә, ҡысҡырма, мин еңмәйенсә, урыныңдан ҡуҙғалма!» — тип, егетте ныҡ киҫәтеп, яңынан әҙерләнергә ҡушты, ти.

Ат бер аҙ ял итеп алырға булған. Ул ял иткән арала егет ҡарғаларҙы ашатып, рәхмәт әйтеп осороп ебәргән. Ҡарғаларҙың икеһен дә оҙатҡас, баяғыса теге аҡланға барғандар ҙа, егет үҙенең соҡорона төшкән. Төшөп ултырған сағында айғыр егеттең ауыҙына ла, ҡолағына ла ҡурғаш ҡойҙорған, ти: тағы ҡысҡырып ебәрмәһен, эште харап итеп ҡуймаһын тип инде!

Ауыҙына, ҡолағына ҡурғаш ҡойҙорған көйөнсә, был егет соҡорҙа баҫып тора икән, бының айғыры, баяғыса, теге аҡланға барған да, һыуҙың һылыу айғырҙарын көтө-көтә, эй тегеләй тапанған була, эй былай тапанған була, ти. Сәскә-үләндәрҙе сапсый, ары ла сабып, бире лә сабып, бөтә аҡланды бысрата, тиҙәкләй ҙә тиҙәкләй, ти.

Көн үҙәге еткәйне, элегесә-баяғыса, һыуҙың һылыу айғырҙары сабышып килеп сыҡтылар ҙа, тегене күреп, ажырайышып ҡарап торалар, ти. Бысраҡты күргәс, ике олорағы, солт итеп, һыуға ҡабат сумды ла ҡуйҙы, ти. Ә һыуҙың һылыу кесе айғыры, инде баяғынан да ныҒыраҡ ажғырып, егеттең айғырына ташланды, ти. Эй алыша башланылар, ти, былар ҡабат, бөтә ер һелкенә, тау-таш һелкенә, ти, хатта! Эй тешләшәләр, эй тибешәләр,тибешкән саҡта, йә береһе ҡолап китә, йә икенсеһе ҡолап китә лә, тегеһе өҫтөнә килеп баҫа, ти. Егет быларҙы теге соҡорҙан күреп тора бит инде. Шулай бик оҙаҡ һуғыша торгас, бына бер заман егеттең айғыры бик яман тибеп ебәргәйне, һыуҙың һылыу айғыры тәкмәсләп китте, өҫтөнә егеттең айғыры килеп тә баҫты, әсе иттереп кешнәп тә ебәрҙе, ти. Шул әсе иттереп кешнәүгә егеттең ауыҙындағы ла, ҡолағындағы ла ҡурғашы шарт итеп атылып сыҡҡан. Шул арала егет ырғып та торған, йүгереп килеп, теге ебәк арҡан менән һыуҙың һылыу айғырын сырмап та ташлаған.

Һыуҙың һылыу айғыры әйткән:

— Ярар инде, бәхетегеҙ. Күрәһең, мин һеҙгә насипмындыр... Йә, етер, тартма шул ҡәҙәр арҡаныңды, быулыҡтыраһың бит! Сис аяҡтарымды. Мин инде тибешмәйем дә, тешләшмәйем дә. Мин һинеке хәҙер, әйҙә, башыма йүгән кейҙер ҙә ал да кит,— тигән.

Һыуҙың һылыу айғыры шулай тигәс, егет бының

аяҡтарын сискән дә башына алтынлы-көмөшлө йүгән һалған. Үҙенең айғыры менән бергә етәкләп алып килеп, карапҡа индергән. Шунан ҡайтып киткәндәр. Былар киткән саҡта, һыуҙың һылыу оло ҡыҙҙары менән айғырҙары, һыуҙан баштарын сығарып, хушлашып ҡалғандар, ти.

Былар ҡайтҡас, батша ҡыуанысынан бөтә халыҡты йыйҙырып, һабан туйы һымаҡ, бәйге һымаҡ, тағы ҙур байрам яһаған. Шул саҡта һыуҙың һылыу ҡыҙын саҡыртып алып, батша һораған икән. Һыуҙың һылыу ҡыҙы йәнә бер хәйлә ҡорған:

— Эй, батша, күп һорауымды үтәнең, һуңғыһын да тыңла инде. Ошо оло байрамығыҙҙа минең алтын балдағымды епкә аҫып ҡуйҙырт та, шуға уҡтан атышығыҙ. Үҙеңме, әллә башҡа берәүме, кем ат менән сабып килгән сағында уғын балдаҡ аша үтә ата, мин шул кешегә булырмын,— тигән.

Батша быныһына ла риза булған. Бәлки, балдаҡ үтә үҙем атырмын, тип уйлағандыр инде. Шунан ни, балдаҡты епкә аҫып ҡуйғандар ҙа уҡ атыш уйыны ҡорғандар.

Бына ыҫпай ғына кейенгән егеттәр, иң яҡшы уҡтарын һайлап алып, ат менеп, байтаҡ ҡына теге яҡҡараҡ киткәндәр. Үҙенең бер атын менеп, уҡ-йәйәһен алып, батша ла шунда киткән. Эй аллы-артлы сабышып килә башлайҙар хәҙер былар, эй киләләр, тегеһе лә атып ҡарай, быныһы ла,— береһенең дә уғы балдаҡҡа теймәй, ситкә осоп тик тора. Хәҙер батша килә. Эй килә был сабып, эй килә, әйтерһең, йәш егет! Өҙәңгеһенә баҫкандай итеп, йәйәһен кирелеп тартып, керешен ебәргәйне,— ҡайҙа ул! Батшаның атҡан уғы, ситкә тайпылып әллә ҡайҙа сыҡты ла китте, ти. Батшаның башы һалынып ҡына төштө лә ҡуйҙы, ти.

Хәҙер сират беҙҙең егеткә. Бына ул үҙенең ала айғырына атланып килеп сыҡты ла, башын уйнаҡлатып, теге урындан алыҫыраҡ барып баҫты, ти. Бер аҙ ҡарап торҙо ла эй килә был хәҙер сабып, эй килә, артында саң бураны ҡупты, ти, хатта! Шулай йән-фарман сабып килә торғас, ярты араны үткәйне, уң ҡулы менән бер уғын алып, йәйәһенә һалды ла, өҙәңгегә аяҡ осо менән генә баҫып, шул саҡлы кирелеп атып ебәрҙе, ти, былдағы балдаҡ зың итеп ҡалды ла юҡ булды ла ҡуйҙы, ти. Бәй, барып ҡараһалар, егеттең уғы ҡаршылағы ташҡа килеп ҡаҙалған да, балдаҡ, һаман зыңлап, уҡта әйләнеп тора, ти.

Һыуҙың һылыу ҡыҙы быны күргәс:

— Бына миңә насип ир ошо егет икән! — тип әйтте, ти. — Был егет, ете урман, ете тау үтеп, алтын ҡошто алып килде, һеҙҙе яҡтылы итте; диңгеҙҙә йәшәгән мине тотоп алып килде; һыуҙа йәшәгән һылыу айғырымды алып килде. Ахыр сиктә,үҙегеҙҙең күҙ алдында уҡ атышып, мәргәнлеген күрһәтте, барығыҙҙан да өҫтөн сыҡты. Һеҙгә бәхәсләшергә урын ҡалманы, мин хәҙер уға булам, — тип, һүҙен нығытты, егеткә килеп ҡулын бирҙе, ти.

Батша әллә нисек булып китте, ти, был саҡ. Һыуҙың һылыу ҡыҙын алам, матур бисәле булам, тип йөрөгәс ни! Һемәйҙе бит инде был хәҙер. Батша тиҙ генә юл бирәме һуң?! Тот ҡапсығыңды, бирер һиңә бар! Вәзирҙәрен ситкә алып киткән дә был батша яңы бер мәкер ҡора башлаған. Нимә тип һөйләшкәндәрҙер, уныһы билдәһеҙ, әйләнеп килгәндәр ҙә, батша үҙе былай тип иғлан иткән:

— Ярай, һылыу, һинең һүҙең дөрөҫ: һин теләгән ярышта был егет беҙҙең барыбыҙҙан да өҫтөн сыҡты. Хәҙер мин теләгән бер ярышты үткәрәйек. Бына ошонда ике ҙур ҡаҙан аҫып ут яғайыҡ. Бер ҡаҙанда һөт ҡайнап ултырһын, икенсе ҡаҙанда һыу ҡайнап ултырһын. Әгәр ҙә һинең егетең ана шул ҡайнап торған һөткә сумып, унан ҡайнап торған һыуға сумып иҫән сыға икән, һин һис һүҙһеҙ уныҡы булаһың. Әгәр инде ул ошо эштән баш тарта йәки һөт менән һыуға сумып ҡаҙандарҙың хыт береһенән иҫән-һау сыға алмай икән, ул ваҡытта һин миңә булаһың! — тигән.

Сараһыҙҙан егет риза булған.

— Ярар, батша, һиңә ҡаршы сығыр әмәл юҡ. Үлер алдынан айғырым менән хушлашып, бәхилләшеп килләйем, рөхсәт ит, — тигән. Батша рөхсәт иткән. «Әйҙә, хушлашһын, бәхилләшһен. Был юлы барыбер үлә бит инде», — тип уйлаған батша.

Егет ситтәрәк торған айғыры янына килгән дә:

— Эй тоғро дуҫым минең, юлдашым! Миңә һинән айырылырға, бәхилләшергә тура килә, ахырыһы. Яуыз батша минең алға элеккеләренән дә яманыраҡ эш ҡуйҙы: ҡайнап ултырған һөт менән ҡайнап ултырған һыуға сумып сығырға ҡуша. Йә, ни эшләйем хәҙер, әйт һүҙеңде, — тип һораған.

Айғыры уйлап-уйлап торған да, ти:

— Эй егеткәйем, әйткәйнем бит мин һиңә, шул хәтлегем инәлеп әйттем, алма шул ҡауырһынды, башыңа бәләһе булыр тип! Шул ҡауырһын арҡаһында нимә-

лэр генэ күрмэнек инде! Йэ, ярар, бынығы һуңғыһы булыр, моғайын. Әйт батшаңа, һин һөткэ сумған ваҡытта, мине эргэңдэ торғоҙһон,— тигэн.

Егет, айғырын етэклэп, батша янына килгэн, ти.

— Йэ, сумаһыңмы инде?— тип һораған батша.

Егет әйткэн:

— Сумам инде, сумам. Тик бер һорауым бар.

— Әйҙэ, тыңлап ҡарайыҡ, ниндэй һорау икэн ул,— тигэн батша.

— Мин һөткэ сумған ваҡытта, айғырым хушлашып тороп ҡалһын,— тип һораған егет.

— Торһон, торһон, эйҙэ, сумғаныңды күреп торһон,— тип рөхсэт иткэн.

Хэҙер тегендэ барған икэн, бер ҙу-у-у-р ҡаҙанда һөт, икенсеһендэ урғылып һыу ҡайнап ултыра, егеттең хатта йөрэктэре жыу итеп китте, ти. Һөтлө ҡаҙан эргэһенэ килгэс, егет атының башын һыйпап, күҙенэ ҡарап торған да, айғыры, хуш тигэн һымаҡ, шул хэтле бышҡырып ебэргэйне, егет ни булғанын хатта һиҙмэй ҙэ ҡалды: шунда уҡ сумып та китте, ырғып килеп тэ сыҡты, ти. Бөтэ халыҡ таң ҡалды, батшаның күҙе аҡайҙы, ти. Егет ҡайнап торған ҡаҙандан һау-сэлэмэт сыҡҡас, батша:

— Тегеһенэ, теге ҡаҙанға сум хэҙер!— тип ҡысҡырып ебэрҙе, ти.

Уныһына килгэйне, айғыры тағы ла шул тиклем эсе итеп бышҡырып ебэрҙе лэ, егет баяғыса сумды лә сыҡты, ти.

Егет иҫэн-һау ғына түгел, тағы ла һылыуыраҡ, тағы ла йэшерэк булып сыҡҡан. Быны күргэс, батша уйға ҡалған. «Бынау хэтле байлыҡ менэн, бынау хэтле ҡөҙрэт менэн, бынау хэтле ҡул аҫтымдағы кешем менэн шул ҡыҙҙы үҙемэ алалмаһам, оят. Мин дэ сумайым да, егет һымаҡ матурланып, йэшэреп сығайым. Ул саҡта һыуҙың һылыу ҡыҙы барыбер миңэ килер»,— тип уйланы, ти, батша.

— Ҡарап торогоҙ, хэҙер бына мин сумам!— тип әйтте лэ ҡаҙан эргэһенэ килде, ти.

Егет айғырын етэклэне лэ, ҡырғараҡ барып, ҡарап тора, ти. Батша, шэп кеше булып, ҡайнап ултырған һөтлө ҡаҙанға сумып киткэйне, шунда уҡ бешеп үлде лэ ҡуйҙы, ти.

Батша үлгэс, байрамдың рэте-сираты ҡалманы, ти. Халыҡ нимэ эшлэргэ, ҡайҙа барырға белмэй, аптырап тора икэн, күпте күргэн аҡһаҡалдар, олораҡ кешелэр

бер урынға йыйылдылар ҙа кәңәш-төңәш итә башланылар, ти.

— Был батыр егет батшаның тоғро хеҙмәтсеһе булды, нимә ҡушһа шуны тыңланы. Ауылыбыҙға яҡтылыҡ алып килде, беҙҙе утлы-күҙле итте. Юғиһә ҡараңғыла күпме яфалана торғайныҡ, ҡайҙа барырға белмәй инек, бер нәмә лә эшләй алмай инек. Ошо егет батша булһын, уны батша итеп һайлайыҡ,— тиешкәндәр.

Сығып әйткәндәр икән, быны халыҡ та бик хуплаған. Ошо байрамда уҡ егетте батша итеп һайлағандар.

Егет батша булғас, һыуҙың һылыу ҡыҙына үҙенең теләген әйткән:

— Бына ошо халыҡ араһында мин һиңә, һылыуҡайым, үҙемдең теләгемде белдерәм. Мин һине барып, беренсе мәртәбә күреп, сәсеңдән тотоп урап алып, һин алтын тараҡ менән сәсеңде тараған ваҡытта уҡ күҙем төшкәйне. Әгәр риза булһаң, мин һиңә өйләнер инем, һылыуҡайым,— тип әйтте, ти.

Ҡыҙ риза булған.

Иртәгеһенә һыуҙың һылыу айғырын егеп, ҡыҙ алтын балдағын кейеп, никах күлдәктәрен кейеп, күршеләге бер һәйбәт муллаға барып, никах уҡытҡандар, теге байрам оло шатлыҡ менән тамамланған, ти. Шулай итеп, егет батша булып, һыуҙың һылыу ҡыҙы уның ҡатыны булып, балалар үҫтереп, шатланып, әле булһа донъя көтөп, йөн тетеп йәшәп яталар, ти.

## ИКМӘКБАЙ

Борон-борон заманда, кәзә апай команда саҡта, булған икән бер әтәс, кейгән икән кәпәс, сыҡҡан икән урамға — түҙмәй ингән буранға. Шул заманда йәшәгән, ти, бер бабай менән әбей, балаһыҙ-ниһеҙ үҙҙәре генә.

Берҙән-бер көн бабай урманға утынға киткән. Әбей, бабай ҡайтыуға тип, икмәк баҫҡан. «Туҡта, бабай ҡайтыуға мәрәкә булһын, икмәктән малай эшләп ҡуяйым әле»,— тигән. Шунан бала һүрәтенә керетеп икмәкте әүәләгән дә, соланға сығарып, көбө эсенә ҡуйған.

Бабай утындан ҡайтып төшкән. Икәүләп сәй эсергә ултырғандар. Әбей бабайға икмәк малай тураһында әйтергә онотоп киткән, ти. Бер аҙ ваҡыт үткәс кенә иҫенә төшөп:

— Бабай, беҙҙең улыбыҙ бар, соланға сығып, көбөнө ҡара әле,— тигән.

Бабай барып ҡараһа, көбө эсенән матур бер малай килеп сыҡмаһынмы! Баҡтыниһәң, икмәк малайға йән ингән, ти. Әбей менән бабай сикһеҙ шатланған. Малайға Икмәкбай тип исем ҡушҡандар. Был бала бик ҙурайҙы, үҫте, тиҙ арала бәһлеүән егеткә әйләнде, ти.

Берҙән-бер көн егет урманға сығып китә. Шул батшалыҡта бик ғәйрәтле, бик йыртҡыс бер айыу йәшәгән, ти. Ошо айыу батшаның малын һис кенә лә ҡуймай икән. Урманда йөрөгәндә егет ошо уҫал һары ала айыуҙы үлтереп алып ҡайтып, тиреһен киптерергә тип, өйөнөң башына йәйеп ҡуйған, ти. Иртәгеһен иртәнсәк батша, тышҡа сығып кирелеп-һуҙылып торһа, тегеләрҙең өй башына ябылған айыу тиреһен күреп ҡалды, ти.

— Һары ала айыуҙы кем үлтерҙе, был кем өйө?— тип һораны, ти, батша.

— Ул Икмәкбайҙың өйө, һары ала айыуҙы шул егет үлтерҙе!— тип әйттеләр, ти, һанаттары.

— Барығыҙ, алып килегеҙ бында ул егетте!

Батша һанаттары тиҙ генә егетте саҡыртып килтергәндәр.

— Һары ала айыуҙы һин үлтерҙеңме?

— Эйе, мин үлтерҙем,— тигән Икмәкбай.

Батша егеттең батырлығына ныҡ шатланған, уны бик ҡәҙерләй башлаған. Ҡайһы бер кешеләр егеткә батшаның хөрмәт күрһәтеүенән бик көнләшкәндәр, ти. Унан нисек кенә булһа ла ҡотолорға тырышҡандар. «Икмәкбай, батшаға Көнһылыу батшаның үгеҙен алып киләм әле, тип әйтә икән»,— тип, юрый һүҙ таратҡандар. Был хәбәр батшаға барып еткән.

— Апкиләм тигәс, апкилһен Икмәкбай миңә шул Көнһылыу үгеҙен. Апкилмәһә, башын сабып өҙәм!— тигән батша.

Был батшалыҡтан бик алыҫта Көнһылыу тигән ҡыҙ батша йәшәгән икән. Уға һис кем яҡын бара алмаған. Барған кеше тере ҡайтмай икән. Икмәкбай, Көнһылыуҙың үгеҙен алып килмәк булып, юлға сыҡҡан. Эй барған, ти, был, эй барған, ти, бара торғас, яңғыҙ ғына йәшәгән бер әбейгә барып еткән, ти.

— Һаумы, инәй!— ти егет.

Әбей һаулыҡ ала ла:

— Төш, балам, атыңдан, ҡатыҡһыҙ-тоҙһоҙ өйрә эс!— ти.

Икмәкбай, атынан һикереп төшөп, ҡатыҡһыҙ-тоҙһоҙ өйрәне эсә лә әбейҙән:

— Инәй, Көнһылыу ҡайҙа икән? Уның торған ерен белмәйһеңме? — тип һораған. Әбей:

— Мин белмәйем, балам. Арыраҡ апайым йәшәй, ул һиңә әйтер, — тип, егеткә юл өйрәтеп ебәргән, ти. Бара торғас, егет бер әбейгә барып еткән.

— Һаумы, инәй!

Әбей һаулыҡ алған да:

— Балам, атыңдан төш, ҡатыҡһыҙ-тоҙһоҙ өйрә эсеп кит! — тигән.

Егетте әбей ашатып-эсереп алған. Тамаҡ туйҙырып алғас, егет:

— Инәй, Көнһылыу батшаның торған ерен белмәйһеңме? — тип һораған. Әбей:

— Юҡ, улым, белмәйем. Арыраҡ минең апайым тора, ул белергә тейеш, һорашырһың, — тип, егеткә юл өйрәтеп ебәргән, ти.

Икмәкбай өсөнсө әбейгә килеп еткән.

— Инәй кешегә сәләмут! — ти егет.

— Йән тәндә әле, улым. Балам, төш, ҡатыҡһыҙ-тоҙһоҙ өйрә эс! — ти әбей.

Егет инәлтеп тормаған, атынан һикереп төшкән дә ашарға ултырған. Икмәкбай, ултыра биргәс, әбейҙән Көнһылыуҙың ҡайҙа йәшәгәнлеген һораған. Әбейгә унда ни өсөн барғанлығын да һөйләгән. Әбей:

— Беләм, улым. Көнһылыу батшалығы бынан алыҫ түгел. Уның һоро ала үгеҙен дә беләм. Көнһылыуҙың һыйыр малы һанап бөтөргөһөҙ, көтөүҙе ебәк нуҡталы һоро ала үгеҙ башлап йөрөй, — тигән. — Әгәр ҙә һин ул үгеҙҙе тотам тиһәң, ҙур йылға буйына төнөн барып, соҡор ҡаҙып ят. Ҡояш ҡалҡҡан мәлдә, үгеҙ көтөү башлап һыу эсергә килер; ҡояш байыуға, мал эсеп бөтөр. Үгеҙ иң аҙаҡтан ғына китер. Һин, үгеҙ килгән саҡта, соҡор эсенән генә уның ебәк нуҡтаһынан эләктереп алырһың, һис кенә лә ебәрмәҫһең. Ул һине өс тапҡыр күтәреп һуғыр, шуға бирешмәһәң, үгеҙҙе алып ҡайтырһың, — тип, егеткә аҡыл өйрәткән, ти.

Икмәкбай һыйыр көтөүе төшә торған ҙур йылғаға барып еткән. Төн буйына соҡор ҡаҙып, таң атыуға шунда төшөп ятҡан. Таң атып, ҡояш ҡалҡыу менән, һыйыр көтөүен башлап, һоро ала үгеҙ килеп еткән. Егет, йәшенеп ятҡан соҡорҙан ҡалҡып, үгеҙҙең һөйрәлеп килгән ебәк нуҡтаһынан эләктереп алған, ти. Үгеҙ Икмәкбайҙы өс тапҡыр ергә күтәреп һуҡҡан, нуҡтанан ысҡынырға тырышҡан, — егет һис бирешмәгән. Шунан

һуң ғына үгеҙ баш һалған, ти. Икмәкбай һоро ала үгеҙҙе батшаға алып ҡайтып биргән. Ҡайтышлай үҙенә юл өйрәткән әбейҙәргә инеп:

— Мин эҙләгәнемде таптым инде, хуш булығыҙ! — тип һаубуллашып сыҡҡан.

— Һау бул, улым, йәнә килерһең әле,— тип ҡалғандар, ти, әбейҙәр.

Бынан һуң батша Икмәкбайҙы элеккегә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡәҙерләй башлаған, ти. Көнсөл кешеләргә был оҡшап етмәгән. Улар нисек тә булһа Икмәкбайҙы харап итмәк булғандар. «Икмәкбай, батшаға Көнһылыуҙың Күк айғырын алып ҡайтам, ти икән», тип һүҙ таратҡандар тегеләр тағы ла. Был хәбәр батшаға барып ишетелгән. Батша егетте саҡыртып алған да:

— Һин миңә Көнһылыуҙың Күк айғырын алып киләм тип һөйләгәнһең икән. Шул Күк айғырҙы апкил, апкилмәһәң, башыңды сабып өҙәм! — тигән. Егет:

— Мин һис кенә лә, Көнһылыуҙың Күк айғырын алып ҡайтам, тип һөйләмәнем,— тип ҡараһа ла, батша үҙ һүҙенән ҡайтмаған.

Икмәкбай ҡайғыра-ҡайғыра тағы киткән. Әлеге әбейҙәр тағы ла Икмәкбайға Күк айғырҙы нисек итеп тотоп алырға аҡыл өйрәтеп ебәргәндәр, ти. Егет, бик күп ҡурҡыныстар үтеп, Көнһылыуҙың Күк айғырын батшаға алып ҡайтҡан. Күк айғырҙы алғас, батша Икмәкбайҙы элеккегә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡәҙер итә башлаған.

Әлеге көнсөлдәр Икмәкбайға ҡаршы тағы ла мәкер уйлайҙар икән. Уйлағандар, уйлағандар ҙа: «Икмәкбай, Көнһылыуҙың үҙен батшаға алып киләм, тип әйтә икән»,— тип, тағы хәбәр таратҡандар. Быны батша ишетеп ҡалып, егетте саҡыртып алған, ти.

— Миңә Көнһылыуҙы апкилергә булғанһың икән. Бар, апкил, апкилмәһәң, башыңды ҡырҡам! — тигән.

— Улай тип әйткәнем булманы,— тип ҡараһа ла, батша егет һүҙенә ҡолаҡ һалмаған.

Икмәкбай ҡайғыра-ҡайғыра тағы ла элекке юл менән киткән, ти. Теге өс әбейгә инеп сығып, Көнһылыуҙы нисек алып ҡайтыу тураһында һорашҡан, ти.

— Ай, балам,— тигән иң өлкән әбей,— уны алып ҡайтыуы бик ҡыйын булыр. Көнһылыу таш һарай эсендәге бер бүлмәлә оҙон сәсен алтын бағанаға урап ултыра. Уға үтеп инеү өсөн ҡырҡ тимер ҡапҡаны үтергә кәрәк. Уның тағы ла кеше үткәрмәй торған ҡырҡ ҡарауылы, ҡырҡ бурҙай эте, ҡырҡ көңө*, йәнә эргәһендә

* Көң — хеҙмәтсе, ҡол ҡатын.

йөрөүсе бер көңө бар. Шуларҙы үтә алһаң, Көнһылыуҙы ҡулға төшөрөрһөң,— тигән. Шунан баягыса тағы аҡыл өйрәткән:

— Улым,— тигән әбей,— Көнһылыуға үтеү өсөн ҡырҡ күнәк дегет, ҡырҡ һуйылған ҡуй, ҡырҡ икмәк һала торған көрәк, бер көҙгө, бер тараҡ алып бар. Ҡырҡ күнәк дегет менән ҡырҡ ҡапҡаны майларһың, ҡырҡ бурҙайға ҡырҡ ҡуй бирерһең, ҡырҡ ҡарауылға ҡырҡ икмәк өләшерһең, ҡырҡ көңгә берәр икмәк көрәге һонорһоң, Көнһылыу алдында йөрөгән көңгә тараҡ менән көҙгөнө тотторорһоң,— тигән.

Икмәкбай, батшаға кире килеп, ҡырҡ күнәк дегет, ҡырҡ ҡуй, ҡырҡ икмәк, ҡырҡ көрәк, бер көҙгө менән бер тараҡ алып юлға сыҡҡан. Бик күп көндәр үткәс, Көнһылыуҙың ҙур таш һарайына килеп еткән. Һарайға инеү өсөн ҡырҡ ҡапҡаны үтергә кәрәк икән. Икмәкбай ҡапҡаларҙың һәр береһен берәр күнәк дегет менән майлап бара, ә ҡапҡалар асыла бара, ти. Ҡапҡаны үтеүе булған, ҡырҡ бурҙай, ашай яҙып, ажарланып килеп сыҡҡан. Икмәкбай ҡырҡ бурҙайға ҡырҡ ҡуй итен ташлаған. Эттәр шунан һуң ғына үткәреп ебәргән, ти, быны. Бурҙайҙарҙы үтеүе булған, Икмәкбайҙың юлын ҡырҡ ҡарауыл кәртәләгән. Егет уларға ҡырҡ икмәк таратып биргән. Ҡарауылдар, икмәккә ҡыуанышып, егетте үткәреп ебәргәндәр. Ҡырҡ ҡарауылды үтеүе булған, егеттең юлын Көнһылыуҙың ҡырҡ көңө бүлгән. Егет уларға ҡырҡ көрәк тотторған. Көңдәр, шатланып, Икмәкбайҙы үткәреп ебәргәндәр. Икмәкбай, шулай итеп, Көнһылыу бүлмәһенә үтеп ингән икән, ҡаршыһына теге яңғыҙ көң килеп сыҡҡан. Икмәкбай уға көҙгө менән сәс тарағын биргән икән, көң үткәреп ебәргән. Хәҙер егет бүлмәгә барып инһә, Көнһылыу оҙон сәстәрен алтын бағанаға урап ултыра, ти. Икмәкбай, бысағын ала һалып, тегенең сәсен ҡырҡып өҙгән.

— Мин һине алып ҡайтырға килдем,— тигән ул ҡыҙға.

Егет Көнһылыуҙы алып сыға башлаған икән, теге үҙе алдында йөрөгән яңғыҙ көңгә:

— Йә, ни эшләп тораһың, миңә ярҙам ит, егетте тот!— тигән.

Көң Көнһылыуға:

— Мин һиңә нисәмә йыл хеҙмәт итһәм дә, бер көҙгө менән тараҡ та биргәнең юҡ ине. Башым бетләп бөтә торғайны. Икмәкбай миңә көҙгө менән тараҡ бирҙе, мин уны тотмайым,— тип, һис кенә лә ярҙам итмәгән, ти.

Көнһылыу ҡырҡ көңгә лә егетте тоторға тип әйтеп ҡараған.

— Беҙ һиңә нисәмә йылдар хеҙмәт иттек, бер яҡшылыҡ итмәнең. Икмәк һалғанда ҡулдарыбыҙ янып бөтә ине, көрәк тә алып бирмәй торғайның. Икмәкбай һәр беребеҙгә икмәк көрәге бирҙе, шуның өсөн уны тотмайбыҙ,— тип, улар ҙа баш тартҡандар, ти.

Көнһылыу ҡырҡ ҡарауылынан ярҙам һорап ҡараған икән, былар ҙа:

— Икмәкбай беҙҙең һәр беребеҙгә берәр икмәк бирҙе. Һин беҙҙең бөтәбеҙгә бер икмәк биреп асыҡтыра торғайның, уны тотмайбыҙ!— тип баш тартҡандар, ти.

Көнһылыу аптырағас, ҡырҡ бурҙайынан ярҙам һораған.

— Беҙ һиңә нисәмә йыл тоғро хеҙмәт итһәк тә, йүнләп ашатманың, ҡырҡыбыҙға бер ҡуй ҙа бирмәй торғайның. Икмәкбай ҡырҡыбыҙға ҡырҡ ҡуй бирҙе, уны тотмайбыҙ,— тип кенә ҡуйғандар, ти, бурҙайҙар.

Көнһылыу, аптырауҙың сигенә сығып, һарайҙың ҡырҡ ҡапҡаһынан егеткә юл асмауҙы, уны ҡыҫып үлтереүҙе үтенеп һораған, ти. Ҡапҡалар ҡыҙға:

— Һин беҙҙең ҡырҡыбыҙға бер генә күнәк дегет бирә торғайның. Ә Икмәкбай беҙҙең һәр беребеҙҙе берәр күнәк дегет менән майлап сыҡты. Беҙ уны ҡыҫмайбыҙ!— тигәндәр.

Шулай итеп, егет Көнһылыуҙы батшаға алып ҡайтып киткән, ти. Юлайҡан ул, үҙенә ярҙам иткән әбейҙәргә инеп, рәхмәт әйтеп, һаубуллашып киткән. Өс әбей ҙә уға: «Хуш, хуш, хуш, улым!» — тип тороп ҡалған, ти.

Әлеге көнсөл кешеләр: «Икмәкбай, ҡайттыниһәм, батшаны үлтерәм, тип әйткән»,— тип, ялған хәбәр таратҡандар, ти.

Батша, бер ҡаҙанға һыу ҡайнатып, Икмәкбайҙың ҡайтҡанын көтөп торған. Ул егетте шул ҡаҙанға һалып үлтермәксе булған. Ҡайтып килешләй Көнһылыу егеткә:

— Икмәкбай, һин мине алып ҡайтаһың да ул ҡайтыуын, батша һине үлтерергә йыйына бит. Ул ҙур ҡаҙанға һыу ҡайнатҡан, һине шунда сумдырып үлтерергә уйлай. Бына һиңә бер балдаҡ бирәм, шуны кейеп сумырһың. Ул һине яндырмаҫ!— тигән.

Икмәкбайҙың батша һарайына килеп инеүе булған, уны тотоп та алғандар, ти.

— Һин мине үлтерергә йыйынғанһың икән, мин һинең үҙеңде юҡ итергә булдым!— тигән батша.

Батшаның ярандары, егетте тотоп алып, борҡ-борҡ

ҡайнап ултырған ҡаҙанға ташлаған икән, Икмәкбай, рәхәтләнеп йыуынып, ҡаҙандан көлә-көлә килеп сыҡты, ти. Икмәкбай Көнһылыуҙың балдағын кейеп алған булғас, бешмәгән инде.

— Һыуығыҙ йылынып етмәгән икән әле! — тигән булды, ти, етмәһә.

Батша ла, уның ярандары ла был хәлгә бик аптырағандар.

— Ысынлап та йылынмағандыр ул! Ҡайҙа әле, үҙем төшөп ҡарайым, — тигән батша.

Уның сисенеп ҡаҙанға һикереүе булған, ике күҙе ағарып килеп тә сыҡҡан, ти. Батша шулай итеп бешеп үлгән.

Икмәкбай үҙе батша булып ҡалған. Көнһылыуҙы кәләш итеп алып, бик һәйбәт батшалыҡ иткән, ти.

## ЯУРЫНТИНСЕ

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың балалары ла, бер ҡара һыйырынан башҡа малдары ла булмаған. Бабайҙың төп кәсебе салғы, тырма һабы, һәнәк эшләү икән. Шуны һатып, көн күргәндәр. Бабай шул хәтле ныҡыш булған, алдына алғанын һис үтәмәй ҡуймаған.

Көндәрҙән бер көндө бабай, ни эшләптер, ҡара һыйырға бик асыуланған. «Әбей, ошо ҡара һыйырҙы һуяйыҡ» — тип, әбейҙе көн дә интектерә икән. Әбей, аптырағас: «Ҡара һыйыр май сысмайсы һуймайым», — тип әйткән, ти. Бабай юғалып ҡалмаған, бер көндө, әбей һыуға киткән арала, бер йомарлаҡ май алған да һыйырҙың ҡойроҡ аҫтына ҡыҫтырған. Ҡарсығы һыуҙан ҡайтыуға: «Әбей, ҡара һыйыр май сысты, әйҙә, хәҙер һуяйыҡ!» — тип, сәпәкәй итеп тора, ти. Әбей ни хәл итһен, әйткән һүҙ — атҡан уҡ тигәндәй, ҡара һыйырҙы һуйырға рөхсәт иткән.

Шулай итеп һыйырҙы һуйып, ағай-эне күрше-тирәләрен саҡырып, бик матур итеп ашап ятҡанда, һүҙҙән-һүҙ сығып, әбей яурынбашы, ҡалаҡ һөйәгенә тешен тейҙермәй генә мөнйөй ҙә, халыҡ алдында сепрәккә матур ғына итеп төйнәп, кәштә башына һалып ҡуя. Бер аҙҙан һуң, ағай-энеләрендә ҡунаҡ булып йөрөп ҡайтҡас, өйгә килеп инһәләр, — бер бала тауышы сыға.

Урындыҡ аҫтын, мейес артын ҡарап бөтөрәләр, эҙләмәгән ер ҡалмай. Әбей менән бабай аптырауға ҡалалар. Бер аҙҙан һуң: «Әсәй, төшәм!», тигәнгә ҡараһалар,— кәштә башында бер бала ултыра. Кәштә башынан баланы күтәреп алалар.

Үҙе бәләкәй генә була был бала. Ә үҙе шул хәтлем тиҙ үҫә: ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, матур егет булып та етә. Әбей менән бабай икәү-ара кәңәшләшеп, яурын һөйәгенән яралғас, «Яурынтинсе» тип исем ҡушалар.

Алты айҙа алты йәшлек балаға әүерелә. Тышҡа сығып уйнай башлай. Уйнаған ваҡытта балаларға сиртһә, тегеләр йығыла, саҡ ҡына һуҡһа, үлтерә һуға ла ҡуя икән. Был малайға ҡаршы батшалыҡта ялыуҙар күтәрелә. Ауылдан көн дә батшаға баралар, «Олаҡтыр шул фәлән ҡарттың шөҡәтһеҙ малайын. Балаларҙы харап итеп бөтә бит инде юғиһә»,— тип ялыналар, ти.

Әбей менән бабай ҡурҡыуға ҡала. Хәҙер Яурынтинсе атаһына:

— Һин миңә уҡ-һаҙаҡ яһатып бир. Уҡ-һаҙаҡ саф ҡоростан булһын,— ти.— Шунан сығып китермен үҙем берәй яҡҡа,— ти.

Бабай ауыл тимерсеһенә бара:

— Һин миңә ҡоростан ян, уҡ яһап бир,— ти.

Уҡ-һаҙаҡты Яурынтинсегә алып килеп биргәс, Яурынтинсе бер-ике әйләндереп ҡарай ҙа, бер тартҡанда, янын һындыра тарта ла ҡуя. Ул ваҡытта Яурынтинсегә ун йәш була.

Ауыл тимерсеһе эшләгән ярамағас, бабай шәһәргә китте, ти. Шәһәрҙең иң атаҡлы тимерсеһенә килде лә:

— Һин минең улыма саф ҡоростан бик елле ян менән уҡ яһап бир. Яны бер боттан, уҡтары унар ҡаҙаҡтан да кәм булмаһын,— тип әйтте, ти.

Эшләтеп алып ҡайтҡас, улына биргәйне, Яурынтинсе бер бот ауырлығы ҡорос янға ун ҡаҙаҡ ауырлығы уғын һалып тартып ҡараһа,— был ян да баяғыса шартлап һынды ла ҡуйҙы, ти.

Бабай тамам аптырауға ҡалды, ти, хәҙер. Ил халҡы менән кәңәшләшеп, юртып барған атты ла дағалауҙы бик данлыҡлы бер тимерсегә китте, ти. Тимерсегә барып, үҙенең хәлен һөйләп бирә:

— Минең яман көслө улым бар,— ти.— Шуға сафтан да саф ҡоростан елленән дә еллерәк итеп уҡ-һаҙаҡ эшләп бир, зинһар,— ти.

Эшләп бирә был данлыҡлы тимерсе. Ян баштарына ҡолас ҡына етмәле түгел. Уҡтары ялтлап тора, үҙҙәре

ҡанатлы, ҡәләм кеүек төҙ, оҙон. Янды түгел, хатта уҡтың беренһен генә лә күтәрә алмай бабай. Бик ҡыуанып, пар атҡа тейәп алып ҡайтып китә. Алып ҡайтып, улына биргәс:

— Бына, улым, эшләтеп алып ҡайттым. Арбанан үҙең ал инде. Быныһы оҡшар, моғайын,— ти.

Яурынтинсе арбанан янды барып алды ла керешен тартҡайны, ян көйәнтә һымаҡ бөгөлдө, кереште ебәргәйне, кинәт йәйелеп, әллә күпме зыңлап торҙо, ти.

— Рәхмәт, атай, быныһы — минең ҡорал!— тип әйтте, ти, шунан.

Бабай ҙа һоҡланып ҡарап торҙо ла берҙән-бер улының сығып китәсәгенә көйөнөп, шулай тип әйтте, ти.

— Ярай, улым, ҡоралың булғас, китһәң китәһең инде. Тик һин бына нимә, анау тауҙың аръяғына сыҡма, харап булырһың,— тип киҫәтте, ти.

Шунан һуң киткән Яурынтинсе сығып, уҡ-һаҙағын яурынына аҫып. Бара торғас: «Туҡта, атайым ниңә унда бармаҫҡа ҡушты һуң әле ул?» — тип уйланып торҙо ла теге тауға ҡарай боролдо, ти. Тау башына менеп еткәйне, ялт-йолт итеп бер нәмә күренде, ти. Үҙе ялт-йолт итә, һаман яҡынайып килә, ти. Яурынтинсе тиҙ генә янын алып, ҡалъянынан бер уғын һурып алып, атып ебәргәйне, теге нәмә тәкмәс-тәкмәс барып ятты, ти. Килеп ҡараһа — ул бер йөнө көмөш, бер йөнө алтын Әнзәләкейек тигән йән икән. Яурынтинсе Әнзәләкейектең тиреһен өс көн, өс төн һыҙыра. Дүртенсе көнө Әнзәләкейектең тиреһен алып ҡайта ла үҙҙәренең өй башына йәйеп һалып ҡуя. Быларҙың өйө тупраҡ башлы, ҡыйыҡһыҙ була.

Был шәһәрҙең батшаһы көн һайын иртәнсәк торғас, үҙенең сарҙағына менеп, шәһәрҙе әйләндереп-әйләндереп ҡарай торған булған. Ошо ваҡытта батшаның күҙе баяғы ҡыйыҡһыҙ өйгә төшкән. «Нимә унда ялтлап ята һуң?» — тип, батша уйға ҡалған. Шул арала вәзирҙәрен саҡыртып килтергән дә бойороҡ биргән:

— Барығыҙ әле, шул өйҙөң хужаһын алып килегеҙ,— тигән.

Вәзирҙәр килеп тә етәләр, бабайҙы алып та китәләр. Батша һорай:

— Өйөң башында нимә ул?

— Әнзәләкейек тигән йән,— ти бабай.

— Ҡайҙан алдың уны?

— Һунарҙан улым алып ҡайтты.

— Улай булғас, тирене лә, улыңды ла миңә һат. Һатмаһаң, башыңды ҡырҡтырам,— ти батша.

Бабай илай-илай ҡайтып китә. Ҡайтҡас улына әйтә.

— Һат, атай, һис тә ҡурҡма, һат. Минең һиңә унан да ярҙамым тейер,— ти улы.

Бабай һатырға риза булғас, батша уға тройка ат ебәрә. Арбаға теге тирене күмәкләп күтәреп килтереп һалғайнылар, арба емерелде лә төштө, ти. Икенсе арба килтергәйнеләр,— хәҙер аттар тарта алмай. Ахырҙа Яурынтинсе тирене үҙе һөйрәп алып китә. Шулай итеп, Яурынтинсе батша малайы булып китә.

Батша Яурынтинсене барлыҡ хеҙмәтселәренән дә артығыраҡ күрә, хатта вәзирҙәренән дә нығыраҡ хөрмәтләй. Шулай иткәс, вәзирҙәр Яурынтинсенән көнләшә башлайҙар. Үҙ-ара кәңәш итешеп, «Давай, беҙ быны бер ваҡытта ла йүгән кейҙерелмәгән арғымаҡты алып ҡайтырға ебәрәйек»,— тиҙәр. Өлкән вәзир, батшаға барып:

— Батшам-солтаным, Әнзәләкейек тиреһе менән өйөң башы күркәмләнде. Донъя йөҙөндә бер ҙә нуҡта киймәгән арғымаҡ бар, тиҙәр. Шуны алдырһаң, урамың да ҡайһылай күркәмләнер ине,— тигән.

— Уны кем алып килә һуң?

— Кем булһын, Яурынтинсе алып килә инде,— ти, вәзир.

Батша яҡшы аттар ектереп, яҡшы кейемдәр кейҙереп, Яурынтинсене юлға оҙатырға әмер бирә. Батша ҡушҡас, ни эшләмәк кәрәк, бараһың инде. Яурынтинсе лә, уҡ-һаҙағын аҫып, оҙон юлға сығып китә.

Бик күп ерҙәр, бик күп йылғалар, бик күп тауҙар аша артылып, бер яңғыҙы ғына өйгә барып етә. Өйгә барып инһә, япа-яңғыҙ бер әбей ултыра.

— Һаумыһығыҙ, инәй кеше, һау тораһығыҙмы?— тип сәләм бирә Яурынтинсе.

— Һаубыҙ әле, ул кеше, ҡайҙа юл тоттоң?

— Донъя йөҙөндә башына йүгән киймәгән бер арғымаҡ бар тип әйтәләр, шуны эҙләп китеп барам.

— Эйе, ундай арғымаҡ бар ул. Ярай, барһаң барырһың, башта өс көн ял ит.

Әбей уны өс көн буйы ҡунаҡ итә. Дүртенсе көн:

— Ярай, егет, ял иттең, әйҙә майҙанға,— ти.— Ошо майҙанда икәү көрәшәбеҙ, әгәр мине алып ташлай алһаң, арғымаҡ һинеке булыр,— ти.

Әбей менән егет көрәшә башлайҙар. Егет әбейҙе күтәреп ала, ләкин ташлай алмай. Ахыр сиктә егет әбейҙән рөхсәт һорай:

— Инәй, мин һине ташлар инем дә ул — инәй кешене атып бәреү — минең өсөн егетлек түгел,— ти.

— Мин ошо йәшемә етеп, минең алдыма сыҡҡан батырҙарҙы күргәнем юҡ әле,— ти әбей.

— Улай булғас, рөхсәт ит, инәй кеше,— тип, егет әбейҙе һауаға сөйөп ебәрә лә, төшөп килгәнендә тотоп алып, ергә баҫтыра. Әбей егетте тағы өс көн ҡунаҡ итә.

Был әбейҙең һөйөп еккән аты булған була. Шул атты егеп, икәүләшеп юлға сығалар. Барыр еренә барып етмәҫ борон әбей егеткә аҡыл өйрәтә башлай:

— Тап төш ваҡытында бер өйөр йылҡы һыу эсергә төшөр. Иң алдан арғымаҡ килер. Һин улар йөрөгән һуҡмаҡ эргәһендә соҡор ҡаҙып, шунда төшөп ят. Арғымаҡ килеп, инде һыу эсәм тип, башын эйгән ваҡытта, муйынына боғал һал. Әгәр ҙә боғал һалып өлгөрһәң, ул һине өс мәртәбә һыуға күтәреп һуғыр. Шул ваҡытта ысҡындырмаһаң: «Егет, мин һинеке!» — тип телгә килер.

Егет, әбей әйткәнсә, соҡор ҡаҙып, һуҡмаҡ буйында көтөп ята. Бына төш етә, аллы-артлы теҙелешеп, ҡырағай аттар күренә. Иң алдан башҡаларынан күпкә ҙурыраҡ, һимеҙлегенән ялтлап, ялбыр ялдарын елберләтеп әлән-йөлән ҡаранып, арғымаҡ килә. Инде килеп етеп, һыуға башын эйгән ваҡытта, Яурынтинсе, ҡарсыға һымаҡ ҡына баҫып, арғымаҡҡа боғал һалып өлгөрә. Арғымаҡ егетте өс мәртәбә һыуға, өс мәртәбә күккә сөйә, егет ысҡындырмағас: «Егет, мин һинеке»,— тип, арғымаҡ телгә килә. Шулай итеп әбей менән егет арғымаҡты алып ҡайтып китәләр. Әбей егетте тағы өс көн ҡунаҡ итә. Егет әбейҙә өс көн ҡунаҡ булғандан һуң, әбей менән хушлаша. Әбей:

— Туҡта әле, балам, һаубуллашмай тор, миңә тағы ла бер киләһең әле,— ти.

Яурынтинсе арғымаҡта елдереп ҡайтып китә. Өс ай килгән юлын өс сәғәттә үтеп, ҡайтып та төшә. Ҡайтып төшә, ә ҡапҡа асыусы юҡ.

— Эй! Ҡапҡаны асығыҙ!— тип ҡысҡырһа ла, асмайҙар.

Инде лә йәне көйөп, Яурынтинсе арғымаҡҡа бер һуғыуы була, арғымаҡ ҡойма аша һикереп, батша өйөнөң башына килеп төшә. Батшаның һаҡсылары ҡурҡышып, вәзирҙәргә хәбәр итәләр. Ғүмерҙә булмаған хәлде күреп, вәзирҙәр ҙә аптырашта ҡалалар.

Егет, атын һикертеп ихатаға төшкәс:

— Батшам-солтаным, мин ҡайттым,— ти.— Мине мәсхәрә итеп ебәргәйнеләр, хәҙер килеп миңә ҡапҡа асыусы ла юҡ,— ти.

Батша сығып Яурынтинсе менән күрешкәйне, вәзирҙәр быны алдында зыҡ ҡуба:

— Ай, абайламай ҡалғанбыҙ шул, бигерәк хәбәрһеҙ ҡайтып төштө бит,— тиҙәр. Ҡайһылары атының башынан килеп тота, ҡайһылары Яурынтинсенең аяғын өҙәңгенән ысҡындыралар. Батша үҙе лә, вәзирҙәре лә: «Ай-һай!» — тип, арғымаҡтың һылыулығына һоҡланып ҡарап торалар.

Ошо көндән башлап батша алдында Яурынтинсенең абруйы бик күтәрелә. Уны шул тиклем ҡәҙерләйҙәр, ятһа, урын йәйеүле, торһа, урын йыйыулы, сығам тиһә, кейендереп торалар. Вәзирҙәрҙең быға эсе күмһей инде, ни эшләргә лә белмәйҙәр. Күмәк-ара кәңәш итешеп йөрөй торғас, бер көндө тағы һүҙ төйнәйҙәр: «Беҙ быны Айһылыуҙың ҡыҙы Көнһылыуға ебәрһәк, әйләнеп ҡайта алмаҫ»,— тиҙәр. Бер яйын табып, күмәкләшеп инәләр ҙә батшаға әйтәләр:

— Эй, бадишаһыбыҙ-солтаныбыҙ! Батша һарайың башында, бөтә донъяға йәм биреп, Әнзәләкейектең алтын-көмөш йөнлө тиреһе ялтлап ята; ат һарайыңда донъяла тиңе юҡ арғымаҡ тора. Ә яныңда үҙеңә тиң бисәң юҡ. Ҡайҙалыр ошо донъяла Айһылыу тигән ҡатын батшаның ҡояш нурҙарынан яратылған ҡыҙы бар икән. Исеме лә Көнһылыу икән уның. Шул ҡыҙҙы алдыртһаң, донъяң бөтөнләй бөтәйер ине үҙеңдең,— тиҙәр.

— Ә кем алып килер һуң миңә ул сибәркәйҙе? Һеҙме ни?— тип төбәлеп ҡарап тора икән батша, тегеләр, бер-береһен уҙышып:

— Ҡайҙан беҙ булайыҡ, алып килһә уны Яурынтинсе генә алып килә ала инде ул,— тиҙәр, ти.

Ошо көндән һуң батшаның йоҡоһо осҡан. Гел генә Көнһылыуҙы уйлап йөрөй икән. Йөрөй торғас тамам сабыры бөтөп, бер көндө Яурынтинсене үҙ янына саҡыртып килтергән дә әйткән:

— Ҡайҙалыр ошо донъя йөҙөндә Айһылыу тигән ҡатын батша бар, уның ҡояш нурҙарынан яралған Көнһылыу исемле ҡыҙы бар икән. Миңә шул ҡыҙҙы алып кил,— тигән.

Яурынтинсе тыңлап торған да, әмерҙең ябай булмауын аңлап, үҙ һүҙен әйткән:

— Арғымаҡты бирһәң, барырмын,— тигән.

— Юҡ!— тигән батша.— Өйөрөмдә күпме ат бар, ҡайһыныһын teләйһең, шуныһын тотоп мен. Теләһәң, берҙе түгел, икене тот, әммә арғымаҡҡа оронма! Ул — мин, батша кеше, менеп йөрөй торған ат!— Бына шулай тип ҡырт киҫкән батша.

Яурынтинсе бер аҙ уйланып торған да:

— Улай булғас миңә арғымаҡ менән хушлашып китергә рөхсәт ит, әллә ҡабат күрә алам, әллә юҡ,— тигән.

Батша рөхсәт иткән. Егет арғымаҡты күреп һөйә лә, береһенә береһе текләшеп ҡарап торғандан һуң, арғымаҡ телгә килә.

— Минең өс бөртөк ҡылымды ал да сығып кит. Шәһәрҙе сыҡҡас, бер ҡылымды өт. Шул ваҡытта таш һарай һелкенә биреп ултырыр. Икенсе ҡылымды өткәндә, емерелер, өсөнсө ҡылымды өткәндә, мин яныңда булырмын,— ти.

Ҡаланан сығып, бер йылға буйына килеп еткәс, төшә лә Яурынтинсе менеп килгән атын, ҡойроғонан тотоп, яр аҫтына атып бәрә. Шунан арғымаҡтың башта бер ҡылын, унан икенсе ҡылын өтә. Һарайҙың емерелеп төшкәне, хатта, бында ишетелә. Өсөнсө ҡылын өткәйне, арғымаҡ — янында уҡ баҫып та тора. Өҫтөндә — алтын эйәр, эйәрендә алмас ҡылыс элеүле. Башындағы көмөш йүгәнен сылтыратып, егеткә өндәшә:

— Йә, егет, атлан миңә. Юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы,— ти.

Яурынтинсе уҡ-һаҙағын рәтләп менеп ултырғайны, осто арғымаҡ: йылғаларҙы, кисеп сыҡмай — аша һикерә, тауға килеп менһә, тауҙан тауға һикерә. Өс сәғәт тигәндә, баяғы әбейгә килеп тә еттеләр.

— Һаумы, инәй кеше!

— Ә, һин икәнһең, улым. Иҫән-һау ғына килдеңме, балам?

— Килдем, инәй, килдем...

— Арығанһыңдыр ҙа инде, ятып ял ит,— ти әбей. Ял итеп торғандан һуң:

— Йә, балам, ҡайҙа сәфәр тоттоң?— тип һорай.

— Донъя йөҙөндә Айһылыу тигән батша бар икән, шуның ҡыҙы Көнһылыуҙы табып алып ҡайтырға ебәрҙеләр,— ти егет.

— Балам, теге арғымаҡ менән килдеңме?

— Эйе, инәй кеше.

— Ярай, балам, башта өс көн ял ит. Мин ары-бире сығып йөрөштөрөп киләйем,— тип әбей сығып киткән.

Әбей йөрөп килгәс, өс көндән һуң юлға сығалар. Айһылыуҙың батшалығына еткәс, әбей һөйләй башлай:

— Барып еткәс тә атыңды туғарырһың, тәртәңде ҡайтыр яҡҡа борорһоң, бөтә булған нәмәңде әҙерләрһең. Айһылыуҙың батшалығына ерҙән барырға һис мөмкинселек юҡ. Ерҙән уның батшалығы таш ҡойма

менән уратып алынған, ҡапҡаһынан үтеп инеп булмай. Ҡапҡа үҙенән-үҙе ҡыҫа, ҡапҡаны ингәс тә, арыҫландар, юлбарыҫтар, йылан-аждаһалар Айһылыу батшаның ишеген һаҡлай. Хәҙер барып төшкәс тә арғымаҡты менәһең, менгәс тә арғымаҡҡа өс мәртәбә һуҡ, ул батшаның һарайына һикерер. Һин шул ваҡытта, сылбыр буйлап, батша һарайының ун икенсе ҡатына тәҙрәнән инерһең, ингәс тә бер тимер һандыҡты ҡырҡ ҡыҙ ҡарауыллап ултырыр. Мин шул ваҡытта, унда инеп, бер йәшел ҡорт булырмын, ҡорт булып, сөйҙән сөйгә йөрөп, етеҙ төрлө таҫма һуҙырмын. Ошо ваҡытта ҡыҙҙарҙың һиндә эше булмаҫ, шул арала һин тимер һандыҡты алып ҡас.

Барып етәләр былар. Атты туғарып, арбаһын бороп ҡуйғас, әбей күҙҙән юғала, Яурынтинсе арғымаҡты менә. Менеп атланғас, ныҡ иттереп өс мәртәбә һуҡҡайны, арғымаҡ бейек ҡойма аша һикереп, батша һарайының башына барып төштө. Яурынтинсе, әбей әйткәнсә, сынйырға тотоноп, ун икенсе ҡатҡа инде. Ингәйне, ҡырҡ ҡыҙ ебәк ҡортон тоторға итеп аҙаплана. Шул арала был Көнһылыу ятҡан һандыҡты ала ла баяғы сынйыр буйынса үрмәләп ҡыйыҡҡа күтәрелә. Арғымағына атлана ла, уны ҡойма аша һикертеп ергә төшә.

Баяғы ҡырҡ ҡыҙ ебәк ҡортон тота алмай тороп ҡала, ҡараһалар, һандыҡ та юҡ, ебәк ҡорто ла юҡ. Яурынтинсе менән әбей тиҙ генә арғымаҡты егеп алалар ҙа ҡасалар.

Айһылыу батша бөтә булған януарҙары менән быларҙы ҡыуа төшә. Ана тотам, бына тотам тигән ерҙә, былар батшалыҡты сығып та китәләр. Әбей йортона барып өс көн ҡунаҡ булғандан һуң, Яурынтинсе ҡайтырға әбейҙән рөхсәт һорай.

— Ярай, егет, ҡайтҡас та батшаға: «Ҡыҙ — минән; һандыҡты аса алһаң — һинеке, аса алмаһаң — минеке»,— тип әйтерһең,— ти.

Әбей Яурынтинсегә бер ҡауырһын бирә.

— Бына ошо ҡауырһын менән һандыҡтың йоҙағын бисмилла итеп борһаң, йоҙаҡ асылыр. Ҡыҙҙың бер бите ай, бер бите ҡояш булыр. Түргә ҡарап көлһә, һөйләшер, ишеккә ҡарап көлһә, һөйләшмәҫ,— ти.— Ярай, һиңә хәйерле юл, имен-аман барып ет,— тип хушлашып тороп ҡала.

Егет батшалыҡҡа ҡайтып төшә:

— Батшам-солтаным, һандыҡ — минән, асҡыс — һинән,— ти.— Һандыҡты аса алһаң — һинеке, аса алмаһаң — минеке,— ти.

— Ҡыҙы менән һандығы булғас, асҡысы табылыр,— тип яуап бирә батша.

Батша бөтә булған тимерсеһен саҡыра ла, асҡыс яһарға ҡуша. Улар эшләй алмағас, бөтә завод кешеһенән асҡыс эшләтеп ҡарай. Улар ҙа эшләй алмағас, ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, асҡыс һорап мөрәжәғәт итә, ебәрелгән асҡыстарҙың береһе лә ярамай.

Был ваҡытта Яурынтинсе лә шарт та шорт асҡыс яһап ултырған була.

Берҙән-бер көн Яурынтинсе бисмилла әйтеп баяғы ҡауырһын менән борһа, һандыҡ асылып китә. Һандыҡ асылыу менән өй эсенә яп-яҡты нур бөркөлә. Ҡыҙ тора, ишеккә ҡарап көлә лә, йүгереп сығып китә. Тышҡа сыҡһа, батшаның өйөнөң башына ябылған Әнзәләкейек тиреһен күрә. Кәртәгә инһә, арғымаҡты күрә. Кире өйгә килеп инә.

— Әнзәләкейек тиреһен кем алып килде? Арғымаҡты кем алып килде?— тип һорай ҡыҙ.

— Барыһын да мин алып килдем,— ти Яурынтинсе.

— Ни өсөн?

— Батша ҡушты.

Ҡыҙ өс мәртәбә батшаның өйөн өйрөлтөп өшкөрә. Шул ваҡытта батшаның өс ҡатыны сусҡа булып, бөтә бала-сағаһын эйәртеп батшалыҡтан сығып китә. Ә батша ҡырҡ төрлө һүрәткә керә.

— Бына, Әнзәләкейек әсәйемдең һөйөп-һөйөп һауған һыйыры ине. Арғымаҡ — атайымдың һөйөп-һөйөп менгән аты. Ә мин әсәйем менән атайымдың күҙ ҡараһы кеүек күргән ҡыҙы инем. Бына аманатҡа хыянат яһамағас, Яурынтинсе, мин, Айһылыуҙың ҡыҙы Көнһылыу,— һинеке.

Шулай итеп, Яурынтинсе ошо батшалыҡта батша булып, Айһылыу үҙ батшалығында батша булып, береһен-береһе саҡырышып, донъя көтөп торалар, ти.

## АЛАТАЕВ

Борон-борон заманда, олатайҙар бала саҡта булған, ти, ике батша. Батшалар үҙҙәренең ҡомһоҙлоҡтары арҡаһында һәр ваҡыт бер-береһе менән һуғышып торғандар, ти. Шулай туҡтауһыҙ һуғыша торғас, уларҙың береһе еңелгән дә үҙ тәхетен ташлап, ике бисәһен, бер малайын алып, атҡа ултырып ҡасҡан,

ти. Ҡасып бара торғас, төн булған, улар бер урында йоҡларға яттылар, ти.

Төндә теге батшаның ғәскәре был батшаны эҙләп килеп тапты ла барыһын да ҡырып китте, ти. Тик бер бәләкәй малай ҙа, бер ала ҡолон ғына иҫән ҡалғандар, ти.

Иртәнсәк торғас, малай яҡ-яғына ҡарай ҙа, үҙенең ата-әсәһенең үлек булыуҙарын күреп, илап ебәрә. Бала тауышын ишетеп, ала ҡолон уның янына килгән дә, кеше теләндә малайға:

— Һин дә, мин дә етем ҡалдыҡ, мин һине ташламам. Ни күрһәк тә, бергә күрәйек,— тип әйткән, ти.

Ҡолон менән малай, ошо көндән башлап, нисек етте шулай көн күреп, ни етте шуны ашап, йыл үҫәһен ай үҫеп, ай үҫәһен көн үҫеп, береһе — егет, икенсеһе — тай ҡорона тулдылар, ти.

Берҙән-бер көндө тай телгә килеп:

— Бынан бик алыҫта бер батшалыҡ бар, шул батшаның бер ҡыҙы бар. Ул үҙенең аҡыллылығы менән тирә-яҡта дан тота. Батша шул ҡыҙына кейәү һайлай. Кейәү булырға теләгән кешеләрҙең бөтәһе лә шунда йыйыла. Беҙ ҙә бәхетебеҙҙе һынап ҡарайыҡ,— тип әйтте, ти.

Егет, бик күп уйлап торғандан һуң, риза булды, ти. Тай менән егет батшалыҡҡа ҡарап юл алдылар, ти. Ете төн, ете көн барғандан һуң, былар әлеге батшалыҡҡа килеп еттеләр, ти. Егет батша янына ингән дә:

— Ҡәҙерле батшам, мин Алатаев тигән кеше булам, миңә лә үҙ бәхетемде һынап ҡарарға рөхсәт ит,— тип әйтте, ти.

Батша кейәү булырға теләүселәргә ошондай шарт ҡуйған, ти: кейәү булырға теләүсе кеше бер төн эсендә бик алыҫтағы һарайҙа йәшәүсе ҡыҙынан алтын яҙыулы хат алып килеп тапшырырға тейеш. Бик күп кенә егеттәр тырышып ҡарағандар — бер төн эсендә урап килеү түгел, ярты юлға ла барып етә алмағандар, ти. Күбеһенең шәп барыуҙан тонсоғоп, юлда аттары үлеп бөткән, ти.

Егет, был хәлдәрҙе белеп, бик борсолған икән, Алатай тынысландырған:

— Ҡайғырма, егетем, миңә атлан да, бар көсөң менән берҙе һуҡ. Күп булһа, өс ҡат тирем һыҙырылыр. Бер төндә әйләнеп килербеҙ,— тигән.

Алатай шулай тигәс, егет атланған да, бөтә көсөн йыйып, берҙе һуғып ебәргән икән, Алатай шундай

ҡаты сабып сығып китҡән, ти, хатта егет саҡ ултырып бара, ти.

Ярты төн дә үтмәгән, былар ҡыҙ янына килеп тә еткәндәр. Ҡыҙ егеттең кем булыуын, ни өсөн килеүен һорағас, егет:

— Мин Алатаев атлы егет булам, алтын яҙыулы хатты алырға килдем,— тип, әйтеп бирҙе, ти. Ҡыҙ:

— Бер төн эсендә әйләнеп ҡайтырға тейеш кеше һөнәрле булырға тейеш, берәй һөнәреңде күрһәтмәҫһеңме?— ти.

Егет, тиҙ генә тышҡа сығып, Алатай менән һөйләшкән дә, һарайға инеп, бер өйөрөлөп китһә, аҡҡош булған да ҡуйған, ти. Ҡыҙ быныҡ бер ҡауырһынын ҡырҡып алғас, Алатаев, икенсе тапҡыр өйөрөлөп, күгәрсен булып, ҡыҙҙың алдына ҡунды, ти. Ҡыҙ егеттең тағы ла ҡауырһынын ҡырҡып алды, ти. Шунан егет яңынан кешегә әүерелгән икән, ҡыҙ уға алтын яҙыулы хатты биреп ебәргән. Ә үҙенең вәғәҙә бүләге итеп, егеткә бер тараҡ менән көҙгө бирҙе, ти.

Егет тиҙ генә үҙенең Алатайына менде лә батша һарайына ҡарап юл алды, ти. Былар барып еткәндә, таң да атмаған икән әле, ти. Шунда аты телгә килеп:

— Мин аҙыраҡ ашап йөрөп киләйем, ә һин йоҡлап китмә, бәләгә осрарһың,— тине, ти.

Егет бик ныҡ арыған булғанға сыҙай алмаған, йоҡлап киткән. Таң атҡас, батшаның вәзире егетте күреп ҡалған да, кеҫәһендәге хатты алып, батшаға биргән. Батша был вәзирен үҙенең кейәүе буласаҡ тип иғлан итте, ти.

Ашап туйғас, Алатай егет янына килһә, егет әле һаман да рәхәтләнеп йоҡлап ята, ти. Алатай уны уятҡан да:

— Мин һиңә йоҡламаҫҡа ҡуштым бит, ни эшләп йоҡланың? Йә, ярар инде... Ҡайғырып эш сыҡмаҫ. Бөгөн батша үҙенең яҡындары, кейәү буласаҡ вәзире менән ҡыҙ торған һарайға туй яһарға китә. Беҙ ҙә уларҙан ҡалышмайыҡ, унда барғас, берәй йүнен күрербеҙ,— тине, ти.

Батша үҙенең кешеләре менән бик күп ер киткәс, ял итергә туҡтай, тик уларҙың бер йоторлоҡ та һыуҙары юҡ икән, ти. Һыу эҙләп-эҙләп тә таба алмағас, батша:

— Минең кейәүҙең бер йотом ғына һыу табырға хәленән килер ул,— тигән, ти.

Кейәү буласаҡ кеше әллә нисә урындан ерҙе ҡаҙып һыу сығарырға тырышып ҡараһа ла булдыра алмай. Шул саҡ Алатаев бер яҡ ситкә барып, көҙгөнө ташлаһа,

таҙа һыулы матур бер ҡоҙоҡ барлыҡҡа килде, ти. Ул батша янына килеп:

— Батшам, мин бында бер ҡоҙоҡ beләм, теләгәнсә эсһәгеҙ ҙә була,— тине, ти.

Юлсылар һыу эсеп, хәл йыйып алалар ҙа ары китәләр, батша егетте лә ҡалдырманы, ти. Эй, бара былар, эй, бара, бара торғас, бер күл янына килеп еттеләр, ти. Ә үҙҙәре күлдән нисек сығырға белмәйҙәр икән, ти.

Шул ваҡыт батша:

— Минең кейәү был күлдән нисек сығыу сараһын ғына табыр ҙа ул,— ти икән. Кейәү буласаҡ кеше ары йүгерә, бире йүгерә, ти, ағас ҡырҡып, күпер һалырға ла уйлай, тик булдыра алмай, ти.

Шул ваҡыт Алатаев ситкәрәк барып күлгә тараҡты ташланы ла батша янына килде, ти.

— Батшам, мин бында бер күпер беләм, әйҙәгеҙ, шунан сығайыҡ,— тине, ти.

Шулай итеп, юлсылар күлде лә сыҡтылар, ҡыҙ һарайына ла барып еттеләр, ти. Икенсе көндө батша, теге вәзиргә ҡыҙын бирергә бик теләмәһә лә, әйткән һүҙендә тороп, бик шәп туй ҡороп ебәрҙе, ти. Халыҡ күп булғанлыҡтан, туй тышта бара, ти. Егет атын ашатырға ебәрҙе лә үҙе бер яҡ ситтәрәк туйҙы күҙәтеп тора, ти. Ҡыҙ бейеп йөрөгәндә был егетте күреп ҡала ла, атаһы янына килеп:

— Атай, теге егеттең дә туйҙа ҡатнашаһы киләлер, ниңә уны ситкә генә ҡуйҙығыҙ?— тип әйтте, ти. Батша егетте күреп ҡалған да:

— Ә ул егет юлда беҙгә бик ҙур ярҙам күрһәтте, килһен, килһен, ул минең ҡәҙерле ҡунағым булыр,— тине, ти.

Егетте түргә ултыртып, һыйлай башланылар, ти. Бер аҙҙан егетте бейергә төшөрҙөләр, ти. Егет бейене лә, бер өйөрөлөп киткәйне, шунда уҡ аҡҡош булды ла ҡуйҙы, ти. Ҡыҙ тиҙ генә йүгереп килеп, теге үҙендәге ҡауырһынды ҡуйып ҡараһа, тап үҙенеке, ти. Егет тағы бер әйләнеп китте лә күгәрсен булды, ти. Икенсе ҡауырһын да бығa тап килеп кенә тора, ти. Ҡыҙ, егетте тағы һынап ҡарарға, теге тараҡ менән көҙгөнө һораны, ти. Егет шунда уҡ тараҡ менән көҙгөнө алып бирҙе лә:

— Һинең был бүләктәрең атайыңа бик яҡшы хеҙмәт иттеләр,— тип әйтте, ти.

Шунан ни, батша үҙе лә төпсөнә башлаған, егет:

— Миңә ҡарағанда, атым яҡшыраҡ белә, мин һөйләй ҙә белмәйем, унан һорағыҙ,— тип кенә ҡуйҙы, ти.

Шунда уҡ Алатай килеп етте лә бөтәһен дә һөйләп

бирҙе, ти. Алдаҡсылығы өсөн шунда уҡ теге вәзирҙең башын өҙҙөләр ҙә Алатаевты батша янына күтәреп алып барып ултырттылар, ти. Батша Алатаевты ҡосаҡлап үпте лә былай тине, ти:

— Мин бөтәһе өс ҡыҙ үҫтерҙем, тәүгеһен кейәүгә бирҙем — дейеү урланы. Икенсеһен бирҙем — уныһын да урланы. Быныһын — иң яратҡан кинйә ҡыҙымды — һиңә бирәм, ныҡ һаҡла,— тине, ти.

Егет менән ҡыҙ, береһен-бере яратышып, матур итеп донъя көтөп ятҡанда, берҙән-бер көндө Алатай егеткә былай тине, ти.

— Бөгөн төндә ҙур ҡаза булырға оҡшай, йоҡлама, һаҡ бул!

Егет ярты төнгә тиклем сыҙаны, тик ярты төн үткәс, үҙе лә һиҙмәҫтән йоҡлап китте, ти. Төн уртаһы ауғас, ел-дауыл ҡупҡан, йәшен йәшенләгән, ер-күк тетрәгән, әллә ниндәй тауыштар яңғыраған. Егет ырғып-һикереп торһа,— ҡыҙ юҡ, ә тәҙрә асыҡ тора, ти. Ул шунда уҡ Алатайын менә лә, ҡатынын эҙләп, юлға сыға. Ай бара, ти, был, йыл бара, ти, бара торғас, бер ҙур диңгеҙ ярына килеп сыҡты, ти. Алатай, телгә килеп:

— Һин йәшеренеп тор, мин үҙ эшемде эшләп киләйем, күп булһа, өс ҡат тирем һыҙырылыр,— ти ҙә әсе итеп бер кешнәп ебәрә. Шул саҡта диңгеҙҙән өс өлкән-өлкән арғымаҡ килеп сыға. Былар дейеү арғымаҡтары икән. Дейеү арғымаҡтары менән Алатай араһында көслө һуғыш башлана. Өс көн, өс төн һуғыштылар, ти былар. Алатай тегеләрҙең өсөһөн дә үлтергән дә егет янына килгән, ти. Ул бер аҙ хәл алған да:

— Хәҙер һинең сират, ҡурҡма, бар көсөң менән алыш,— тине, ти.

Алатай ҡолаҡты ярырлыҡ итеп бер кешнәп ебәргәйне, шунда уҡ диңгеҙ төбөнән бер дейеү килеп сыҡты, ти. Килеп сыҡты ла:

— Алышмы, атышмы?— тип аҡырып ебәрҙе, ти, дейеү.

— Алыш!— тип әйтте, ти, егет.

— Минең,— тип әйтте, ти, дейеү,— ҡырҡ ботлоҡ герем бар, шуның менән өсәр тапҡыр һуғышырбыҙ.

Егет риза булды, ти.

Тәүҙә дейеү берҙе һуҡты, ти, егет йөҙлөгө юғалғансы ергә батты, ти. Икенсегә һуҡҡайны, шайтан ашығына тиклем батты, ти. Өсөнсөгә һуҡҡайны, егет тубығына тиклем батты, ти. Хәҙер сират егеттеке.

Бер һуҡты, ти, егет, дейеү тубығына тиклем батты, ти. Икенсегә һуҡты — биленә тиклем батты, ти. Өсөнсөгә һуҡты — дейеү үңәсенә тиклем батты, ти. Шул ваҡыт егет дейеүҙең башын ҡырҡып ташлай ҙа аты янына килә. Алатай, телгә килеп:

— Хәҙер миңә атлан, күҙеңде йом, мин ас тимәйенсә, асма,— ти.

Егет, аты ҡушҡанды үтәп, күҙен аһа, былар диңгеҙ төбөндәге батша һарайы янында торалар, ти. Һарайҙың бер бүлмәһенә инһәләр, унда — ҡырҡ йәштәр самаһында бер ҡатын, икенсеһенә инһәләр, утыҙ йәштәр самаһындағы бер ҡатын ултыра, ти. Улар икеһе лә: «Егет, ҡайҙан килдең, шунда кит: дейеү килһә, һиңә лә, беҙгә лә изгелек булмаҫ»,— тиҙәр, ти.

Егет, уларҙың кем булыуҙарын һорашып, икеһенең дә батша ҡыҙҙары икәнлектәрен белә. Шунан һуң ул өсөнсө бүлмәгә инә. Унда, ебәк шаршауҙар эсендә, батшаның өсөнсө ҡыҙы — Алатаевтың ҡатыны иҫһеҙ ята, ти. Егет үҙенең ҡатынын үбеп уятҡан да, теге ике ҡатынды ла алып, ҡайтыу юлына сыҡты, ти. Юлда килә торғас, батшаның ике оло кейәүе тап булған. Улар, ҡатындарын эҙләп-эҙләп таба алмай, ҡайтып баралар икән. Төндә, йоҡларға ятҡас, оло кейәүҙәре үҙ-ара кәңәшләшәләр ҙә, йоҡлап ятҡан Алатаевтың аяҡ-ҡулдарын бәйләп, тәрән бер соҡорға алып барып ташлайҙар. Иртән торғас, Алатаевтың ҡатынына:

— Ireң һине ташлап ҡасҡан,— тип алдап, ҡайтырға сығалар.

Алатай иртә менән ашап йөрөгән еренән килһә,— тегеләр юҡ, киткәндәр. Шул ерҙә ул, сабып йөрөп, егетте эҙләргә керешә, әсе итеп кешнәй. Егет тайының кешнәүен ишетеп ҡала ла саҡыра башлай. Алатай шунда уҡ егет янына сабып килеп етә лә, уны нисек ҡотҡарыу тураһында баш вата башлай. Бер аҙ уйланып торғас, әйтә:

— Бынан өс көнлөк юлда бер әбей батша бар, ул ғына һине соҡорҙан ҡотҡара ала, мин шунда киттем,— ти ҙә сабып сығып китә.

Ә әбей батшаның сәсе ҡырҡ ҡолас оҙонлоҡта була. Алатай уның янына бара ла матур ғына бер төҫкә инеп, уйнаҡлап йөрөй башлай. Әбейҙең тайҙы менеп йөрөйһө килеп китә. Әбей менән ултырғас, шуны көтөп кенә торған Алатай уҡ шикелле атылып, «әһ» тигәнсе егет эргәһендә була. Шул ерҙә Алатай телгә килеп, әбейгә:

— Әгәр һин ошо егетте үлемдән ҡотҡарһаң, кире һарайыңа алып барам; әгәр ҡотҡармаһаң, ергә күтәреп һуғам,— ти.

Әбей риза булды, ти.

Егет әбейҙең сәсенә йәбешеп соҡорҙан сыҡҡас, Алатай әбейҙе кире алып барғайны, аңдып торған һаҡсылар тайҙы тотоп алдылар ҙа таш һарайға яптылар ҙа ҡуйҙылар, ти.

Ете көн, ете төн ас тоттолар, ти, бахырҙы. Ете төн уҙгас, һаҡсылар килеп ҡараһалар, тай һуҙылып ерҙә ята. Тайҙы үлгән тип уйлап, тиҙәклеккә сығарып ташлайҙар. Шуны ғына көтөп ятҡан Алатай ырғып тора ла сабып та китә.

Егет, Алатайҙы менеп, ҡайтыр яҡҡа табан юл алды, ти. Егет батшаның теге кейәүҙәрен ҡыуып етте лә, бер нәмә лә белмәгән кеше булып:

— Йоҡлап ятып ҡалғанмын, исмаһам, уятмай ҙа киткәнһегеҙ,— тигән булды, ти.

Шулай итеп, юлсылар батша һарайына килеп инделәр, ти. Батша ҙур туй яһап ебәрҙе, ти. Унан һуң ҡыҙҙарын нисек ҡотҡарыуы тураһында кейәүҙәренән төпсөнә башланы, ти. Кейәүҙәр ыҡ-мыҡ иттеләр ҙә:

— Йәш кейәүең һөйләһен,— тигән булдылар, ти. Ә Алатаев:

— Мин һөйләй белмәйем, ана тайымдан һорағыҙ, ул яҡшыраҡ белә,— тине, ти.

Алатай, береһен дә түкмәй-сәсмәй, яҡшылап һөйләп бирҙе, ти.

Батша үҙенең кесе кейәүенә бөтә батшалығын васыят итте, оло кейәүҙәрен мираҫтан мәхрүм итте лә ҡыуып сығарҙы, ти.

Шулай булмай ни, яҡшылыҡ һәр ваҡыт еңә бит ул!

## АЛТЫНБАШ АЛАТАЕВ

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың бер ҙә улдары булмаған, бер генә ҡыҙҙары булған. Ҡыҙҙары ете диңгеҙ аръяғында торған, ти.

Берҙән-бер көндө әбей:

— Әйҙә бабай, барып, ҡыҙыбыҙҙың хәлен белеп ҡайтайыҡ,— тигән. Бабай:

— Бейәбеҙ ҙә ҡолонларға тора, әле бармай торайыҡ,— тигән.

Әбей көсләшкәс, китергә булалар. Әҙерләнеп, юлға сығалар.

Аяҙ матур көндө, шаулап аҡҡан йылға буйында әбей менән бабай сәй эсергә туҡтайҙар. Шул ваҡытта уларҙың ҡола бейәләре ҡолонлай. Әбей менән бабай, ҡолондо алып, йөрөүе ҡыйын булыр, тип, ҡолондо ташлап китәләр.

Бара торғас, уларҙың улдары тыуа. Әбей менән бабай уны ла ташлап китәләр.

Ҡола аттың ала ҡолоно, ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, бик матур булып етә. Бер көндө ҡолон, юл буйлап китеп барғанда, ағас төбөндә ултырған бер малайға тап була. Был әбей менән бабай ташлап киткән малай икән. Ул да, ҡолон кеүек, йыл үҫәһен ай үҫеп, ай үҫәһен көн үҫкән була. Ҡолон, малай янына килгәс, телгә килә:

— Ни эшләп ултыраһың?

Малай:

— Мине әсәйем менән атайым ташлап китте,— ти.

— Улай булғас, беҙ туғандар булып сыҡтыҡ. Мине лә ташлап киттеләр,— ти ҡолон.

Ҡолон менән малай икәүләп китәләр. Улар бер бик матур күл янына барып сығалар. Күлдең тирәһе баҡса, ә баҡса эсендә бик матур йорт тора, ти. Ҡолон малайға:

— Бар, инеп сыҡ, бәлки, һиңә яраҡлы берәй нәмә булыр,— ти. Малай өйгә барып инә. Барып инһә, йәнеңә нимә кәрәк, барыһы ла бар, ти. Ул сөйҙән бер бүректе алып, аяғына кейеп ҡарай,— ярамай; башына кейә, башына ярай.

— Әһә, быны башҡа кейәләр икән,— тип, бүректе башына кейеп ала. Шулай итеп, малай был өйҙән кейенеп сыға. Атына ҡамыш эйәр, көмөш ҡойошҡа, ебәк йүгән кейҙерә.

Бына ала тай ат ҡорона, ә малай егет ҡорона керә. Ә тайҙың, хатта егеттең үҙенең исеме лә юҡ. Егет атына Алатай тигән исем бирә. Егеттең башы ялтыр булған. Баш кейемен һалһа, башы ҡояшҡа алтын кеүек ялтырап торған. Шуға күрә ул үҙенә Алтынбаш Алатаев тип исем ҡушҡан.

Алтынбаш Алатаев бер көндө: «Бер ҡалала батша, ете диңгеҙ аръяғындағы ҡыҙына барып, бер тәүлек эсендә хат алып килгән кешегә ҡыҙын бирә икән. Әгәр ҙә бер тәүлектә барып килә алмаһа, батша шул кешенең башын киҫә икән» тигән хәбәрҙе ишетә. Алтынбаш Алатаев шунда китергә була.

Эй китте, ти, Алтынбаш Алатаев, эй китте, ти. Бара торғас, бер ҡала күрә был. Ҡалаға етер саҡта, Алатай:

— Һин минең өс бөртөк ҡылымды алып ҡал да мине ебәр. Кәрәк булһам, шул өс ҡылдың береһен яндырырһың,— ти.

Егет атының өс бөртөк ҡылын алып ҡала ла атын ебәрә. Егет батша һарайына килә. Һаҡсыларға ни өсөн килгәнен әйтә. Батша янына инә, уға ла ни өсөн килгәнен әйтә. Батша вәзирҙәре:

— Һин түгел, һинән былайыраҡтар барып килә алманы,— тип көләләр, ти. Егет бик ныҡышҡас, батша:

— Ярай, барһын,— тигән.

Ҡаланы сыҡҡас, Алтынбаш Алатаев теге ҡылын яндыра. Алатай шунда уҡ килеп етә. Егет атҡа менеү менән, уның өҫтөнә шундай матур кейемдәр кейелә лә ҡуя.

Юлда барғанда Алтынбаш Алатаевҡа һыбайлылар, яҡшы аттар еккән кешеләр осрайҙар. Былар бөтәһе лә батша ҡыҙына китеп барған кешеләр икән Алтынбаш уларҙы үтеп китә, ете диңгеҙ аръяғындағы батша ҡыҙының һарайына яҡынлаша. Атын ебәрә лә үҙе һарайға бара. Һаҡсылар уны батша ҡыҙы янына үткәрәләр. Һарайҙың бер бүлмәһендә әхирәттәре, ә икенсеһендә батша ҡыҙы үҙе була. Алтынбаш ҡыҙға атаһы ебәргән ҡағыҙҙы күрһәтә. Ҡыҙ, әхирәттәрен йыйып ала ла, егеткә:

— Йә, егет, һөнәреңде күрһәт! — ти.

Егет, шунда уҡ һандуғасҡа әйләнә. Ҡыҙ һандуғас ҡанатының бер өлөшөн ҡырҡып ала, егет кире кешегә әйләнә. Ҡыҙ тағы ла һөнәрен күрһәтергә ҡуша. Егет бик күп төрлө ҡош һүрәтенә инә, ә инде һуңынан бик матур итеп бейей. Ҡыҙ атаһына, ризалығын белдереп, хат яҙа. Егеткә алтын тараҡ менән көҙгө бирә.

Алтынбаш Алатаев бер аҡланға сығып, ҡылды өтә, Алатай шунда уҡ килеп етә. Юлда уға киткәндә ҡыуып үткән кешеләр ҡаршы тап була. Улар әле ярты юлды ғына үтеп китеп баралар икән. Алатаев иртәнсәк китеп, төшкә ҡайтып етә. Ҡалаға етер саҡта атын ебәрә лә, үҙе йәйәү инә. Батша һаҡсылары:

— Әле батша бушамаған, эше бар,— тип, егетте индермәйҙәр.

Алатаев батша һарайы алдына сығып ултыра. Юлда йонсоп килгәнгә күрә, ул шунда ултырған көйө йоҡлап китә.

Батшаның бер вәзире, егеттең кеҫәһендәге хатты күреп, алып уҡый. Батшаға инеп:

— Мин ҡыҙың янына барып килдем,— ти.

Батша үҙенең вәзире шундай шәп булыуына ҡыуана,

шунда уҡ ҡыҙын вәзиренә бирәсәге, туй буласағы тураһында тирә-яҡҡа хәбәр итә.

Алтынбаш Алатаев, уянып китеп, хаттың юҡлығын белә, ләкин нимә эшләһен, ҡала араһына сығып китә.

Шул арала батша, бер айлыҡ аҙыҡ алып, юлға сығырға була. Кейәү буласаҡ вәзирҙе алдан төшөрөп, юлға сығалар. Алтынбаш та улар артынан йәйәү генә эйәрә. Өс тәүлек барғандан һуң, ял итергә туҡтайҙар. Батша:

— Йә, кейәү була торған кеше, аттарға һыу табып эсер,— ти.

Батша вәзире, бер нисә кешене эйәртеп, ҡоҙоҡ ҡаҙырға китә. Тик ни тиклем ҡаҙыһа ла, һыу сыҡмай. Шул ваҡытта Алатаев ҡыҙ биргән көҙгөнө ташлай. Шул ерҙә күл барлыҡҡа килә. Батша, быны күреп:

— Бында һыу бар бит! — тип ҡысҡыра.

Шунда аттарын эсереп, үҙҙәре ял итеп, тағы ары китәләр. Бара торғас, бик ҡуйы, шырлыҡ урманға барып етәләр. Батша:

— Йә, кейәү була торған кеше, юл һал әле,— ти.

Вәзир бер нисә кеше менән балта алып ағастарҙы ҡырҡа башлай. Тик шундай ҙур урманда балта менән генә юл һалыуы мөмкинме ни инде?! Шул ваҡытта Алатаев, бер ситкәрәк китеп, ҡыҙ биргән алтын тараҡты ташлай. Үҙе киң, үҙе тигеҙ юл барлыҡҡа килә. Батша быны күреп тағы:

— Бында юл бар бит! — ти. Шул юлдан улар урманды үтәләр.

Бер көндө улар ете диңгеҙ аръяғындағы батша ҡыҙы йәшәгән һарайға килеп төшәләр. Батша бөтә кешегә лә майҙанға килергә ҡуша. Бөтәһе лә йыйылалар, ә Алатаев бер үҙе урман ситенә барып ултыра. Батша уны ла яҡын алып килергә ҡуша. Ат менән Алатаев эргәһенә баралар. Ул арбаға ултырғас, арба емерелә. Уға тимер арба менән киләләр, тимер арба эйелә. Уны күтәреп алып китәләр. Алтынбаш Алатаев бер ситкәрәк барып ултыра.

Батша үҙенең вәзиренә, нисек итеп килеп, хат алыуы тураһында һөйләргә ҡуша. Вәзир һөйләй. Батша ҡыҙын килтерергә ҡуша. Иптәштәре менән батша ҡыҙы килә. Ҡыҙ уға:

— Йә, егет, һөнәреңде күрһәт! — ти.

Вәзир, бейеп-бейеп килеп, ҡыҙға баҫа. Ҡыҙ тағы һөнәрен күрһәтергә ҡуша. Вәзир тағы бейеп-бейеп ҡыҙға баҫа. Ҡыҙ риза булмай, шикләнә башлай, тағы һөнәрен күрһәтергә ҡуша. Вәзир тағы бейеп ҡыҙға

баҫа. Шул саҡта ҡыҙ бер яҡ ситтә ултырған Алатаевты алып килергә ҡуша. Уны алып киләләр. Ҡыҙ:

— Һөнәреңде күрһәт,— тиеүгә, егет һандуғасҡа әйләнә. Ҡыҙ ҡырҡып алынған ҡанатты халыҡҡа күрһәтә. Егет төрлө ҡоштар һүрәтенә инә, ә һуңынан, бик матур итеп бейеп, ҡыҙға баҫа. Ҡыҙ халыҡҡа:

— Бына килеп хат алып ҡайтҡан егет,— ти.

Батша алдаҡсы вәзирҙе атырға ҡуша. Шунан бик шәп итеп туй яһайҙар. Ашағаны ашап ҡала, ашамағаны тороп ҡала.

Кис булыуға йәшен йәшнәп, ямғыр яуырға тотона. Йоҡларға ятыр алдынан Алатаев атының тәҙрә төбөндә генә кешнәүен ишетә. Ул тәҙрәгә бара. Аты телгә килеп:

— Һаҡлан, егет! Был батшаның оло ҡыҙы менән икенсе ҡыҙын туй булыр көндө дейеүҙәр урлап алып киткән. Һин йоҡларға ятҡас: «Алтынбаш Алатаевтың Алатайын урланылар!» — тип ҡысҡырырҙар. Һин уға ышанма, ҡыҙҙы ҡулыңдан ысҡындырма,— ти.

Егет менән ҡыҙ йоҡларға ятҡас, дауыл ҡуба. Бер аҙ ваҡыт үткәс, тышта: «Алтынбаш Алатаевтың Алатайын урланылар!» тип ҡысҡырыша башлайҙар. Алатаев, ҡапыл һикереп тороп, тәҙрәнән барып ҡарай. Шул ваҡытта ел-дауыл ҡыҙҙы осороп алып та китә. Таң атҡас, Алатаев батшаға булған хәлде һөйләп бирә. Үҙе шунда уҡ, хушлашып, дейеүҙе эҙләп сығып китә.

Бер нисә көн барғандан һуң ул бер өйгә барып етә. Атынан төшөп, шул өйгә барып инә. Ул өйҙә бер әбей йәшәгән була. Алатаев әбейгә үҙенең ҡайҙа китеп барғанын әйтә, әбей уға барыр юлды өйрәтә, бик күп аҡыл бирә. Алатаев, әбей менән хушлашып, тағы ла китә.

Бара торғас, Алатаев бер аҡланға барып сыға. Унда өс бер тигеҙ өй күренә: беренсеһе — баҡыр, икенсеһе — көмөш, өсөнсөһө алтын өй. Алатаев баҡыр өйгә барып инә. Унда бер әбей ултыра. Ул Алатаевты күреү менән:

— Егет, ҡайҙан килдең шунда кит. Минең ирем — дейеү. Ул килһә, һине тотоп ашар,— ти. Алатаев:

— Мин уны үлтерергә килдем,— ти.

Был әбей Алатаев ҡатынының өлкән апайы икән.

Бер ваҡыт көслө ел сыға, дейеү килеп тәҙрәһенә башын тыға. Алатаев уның башын өҙә саба. Унан һуң Алатаев көмөш өйгә инә. Унда тәүге әбейгә ҡарағанда йәшерәк бер әбей ултыра. Ул Алатаев ҡатынының

уртансы апайы була. Был дейеүҙе лә Алатаев, тәүгеһе кеүек, башын сабып өҙә.

Алатаев өсөнсө, алтын өйгә инә. Унда Алатаевтың үҙ ҡатыны ултыра икән. Ул, күреү менән, иренең ҡосағына ташлана. Ҡатыны:

— Ҡайҙан бында килеп сыҡтың? Хәҙер дейеү килә, ул һине ашар,— ти.

Алатаев дейеүҙе үлтермәйенсә ҡайтмаясағын әйтә. Шул ваҡыт ел-дауыл күтәреп, дейеү ҡайта. Был дейеү иң йәш, иң көслө дейеү икән. Уның менән көрәшеүе бик ауыр була, шулай ҙа Алатаев уны ла еңә. Шунан һуң, улар өс өйҙө, һандыҡ кеүек, бикләп алып, башҡа байлыҡтарын да алып, ҡайтып китәләр. Уларҙы ҙур хөрмәт менән ҡаршы алалар. Бер нисә көн байрам итәләр. Батша үҙенең ярты байлығын Алтынбаш Алатаевҡа бирә.

## ТАҘ БАТЫР, КӨНХАН БАТША МЕНӘН АЙХАН БАТША

Борон-борон заманда бер бабайҙың өс улы булған, иң кесеһе — Таҙ. Әбейе лә бар икән бының. Тағы ла ике йәшәр ала тайы менән бер ҡара һарығы ла бар, ти. Бер көндө былар ҡара һарыҡты һуйғандар ҙа алғы һанын бешереп ашағандар, ә артҡы һанына оронмағандар. Икенсе көндө иртүк сәй эсеп ултырғанда, үҙ-ара һөйләшәләр икән:

— Кем дә кем яҡшы төш күрә, шул ҡара һарыҡтың артҡы һанын ашай.

Йоҡларға ятҡандар. Икенсе көн торғандар ҙа сәйгә ултырғандар. Ҡарт әйтә:

— Йә, ниндәй төш күрҙегеҙ?

Әбей әйтә:

— Мин төшөмдә һарыҡҡа бик байыҡҡанбыҙ ҙа уларҙың йөнөн ҡырҡам, имеш,— тип күрҙем,— ти.

Ҡарт әйтә:

— Мин төшөмдә һиңә һарыҡтарҙың йөнөн ҡырҡырға булышам икән!— ти. Шунан: — Ә һин ниндәй төш күрҙең?— тип һорай оло улынан. Оло улы әйтә:

— Мин төшөмдә,— ти,— әсәйем ҡырҡҡан йөндө тоҡҡа тултырып сыҡтым,— ти. Ҡарт уртансы улынан һорай:

— Улым, һин ниндәй төш күрҙең?

— Мин төшөмдә, һарыҡтарыбыҙ күбәйгән дә, уларға бесән ташып һалып сыҡтым,— ти уртансы улы.

Хәҙер Таҙҙан һорайҙар:

— Һин ниндәй төш күрҙең? Йә, әйтеп ҡара әле,— тиҙәр.

— Мин,— ти Таҙ,— аяғым осонда ай, башым осонда ҡояш ҡалҡҡан, түшемдән шәфәҡ сыҡҡан икән тип төшәнеп сыҡтым,— ти.

— Эй-эй, Таҙ!— ти атаһы,— һин, улай булғас, насар төш күргәнһең!— ти. Шулай тигән дә Таҙҙы туҡмап-туҡмап сығарып ебәргән.

Бер ваҡыт Таҙ китеп барһа, бер өйгә тап була. Өйгә инһә, бер һуҡыр ҡарт ултыра. Ҡарт маңлайын таяҡҡа терәгән, таяҡ маңлайына ике илегә батып киткән, ти.

— Ҡайҙа китеп бараһың? — тип һорай ҡарт.

— Улһыҙға ул булырға, ҡыҙһыҙға ҡыҙ булырға китеп барам,— тип яуаплай Таҙ.

— Минең улым да юҡ, ҡыҙым да юҡ. Улым бул!— ти ҡарт.

Таҙ ҡартҡа ул була.

— Минең туғыҙ өйөр йылҡым бар,— ти ҡарт,— шуларҙы көтөрһөң, башҡа эшең булмаç. Аш-һыуға наҡыçлыҡ күрмәçһең, барыһы ла етеш булыр,— ти.— Алтмыш ҡолас ала айғырың булыр. Ул өйрәтелгән, шуны менеп йөрөрһөң,— ти.— Етмеш ҡолас һары айғыр ҙа булыр, ул өйрәтелмәгән, уныһын менмәçһең,— ти.

Таҙ көн һайын мал ҡарай. Етмеш ҡолас һары айғырҙы өйрәтеп ала ла тирен ҡатырырға таңға табан бәйләп ҡуя. Шунан ҡартҡа килә. Ҡарт һорай:

— Малың теүәлме, улым?

— Э-э, бабай! — ти Таҙ.— Йылҡы туғыҙ өйөргә һыймай башланы, унынсы өйөр тулып килә,— ти.

— Һәй, улым, бәхетең шундалыр, ахыры!— ти ҡарт. Таҙ әйтә:

— Бабай,— ти,— унда береһенән-икенсеһе бейегерәк өс тау бар. Ниндәй тауҙар ул!— тип һорай.

— Уй, улым,— ти ҡарт,— унда бараһы булма, яман тауҙар улар,— ти.

Таҙ Етмеш ҡолас һары айғырҙы менә лә китә. Иң тәпәшәк тауҙың башына сабып барып менә. Шул ваҡыт тау аçтынан бер тауыш килә:

— Минең өйөм башында кем йөрөй унда?

— Бер егет!— ти Таҙ.

Тау аçтынан бер дейеү килеп сыға ла:

— Алыштанмы, әллә атыштанмы?— ти.

— Алыштан!— ти Таҙ.

Шул ерҙә былар алыша башлайҙар. Таҙ дейеүҙе

йығa лa, башын ҡырҡып алып, ары китә. Саптырып барып, икенсе тауҙың башына мендә. Бер тауыш килә:

— Кем ул минең өйөм башында?

— Бер егет! — ти Таҙ.

Тау аҫтынан ике башлы дейеү килеп сыға.

— Алыштанмы, әллә көрәштәнме?

— Көрәштән! — ти Таҙ.

Былар көрәшә башлайҙар. Ике көн, ике төн көрәшәләр былар. Шунан Таҙ, дейеүҙе йығып, ике башын да ҡырҡып ала ла, ҡайтырға сыға. Ҡайтып килә торғас, бының башына уй төшә:

— Тегеһенә лә менеп төшәйем әле. Ни бар икән, ҡарап ҡайтайым! — ти.

Сабып барып менәйем тиһә, тау бик текә икән. Көс-хәл менән йәйәүләп килеп менә был тау башына. Шул ваҡыт тауыш килә:

— Кем ул унда, өйөм башында йөрөй?

Дейеүҙең тауышынан ер тетрәп киткән, ти. Таҙ саҡ-саҡ ҡына:

— Бер егет, — тип әйтә алған.

Тау аҫтынан бер әбей килеп сыҡҡан да:

— Эй, улым! Ҡайҙан килдең, шунда кит: минең ирем — кеше ашаусы пәрей, — тигән. Таҙ әйтә:

— Эй, инәй, улай тип әйтмә, мин шуны эҙләп йөрөгән кеше, — ти. Әбей Таҙға аҡыл бирә:

— Улым, — ти, — көрәшә торғас, хәле бөтә башлағас, ул: «Көс индерә торған дарыу менән көстө ала торған дарыуҙы сығар!» — тип ҡысҡырыр. Мин дарыуҙарҙы алып сығырмын. Һул ҡулымда көс индерә торған дарыу булыр, уң ҡулымда — көстө ала торғаны. Һин һул ҡулдағын эсерһең. Эсеп бөтөрә алмаһаң, ергә һирп, уға ҡалдырып бирмә, — ти. — Тағы ла көрәшә башларһығыҙ. Көсө бөткәс ул: «Көл менән дары алып сыҡ!» — тип ҡысҡырыр. Мин алып сығырмын, уның аяғы аҫтына дары, һинекенә көл һибермен. Өс башлы пәрей булыр ул! — ти.

Таҙ пәрей менән көрәшергә тотона. Өс көн буйына көрәшәләр былар. Пәрей хәлһеҙләнә башлай.

— Көслө дарыу менән көсһөҙ дарыуҙы килтер әле! — тип ҡысҡыра пәрей.

Әбей алып сыға. Таҙ әбейҙең һул ҡулынан, пәрей уң ҡулынан алып эсә. Таҙ эсеп бөтөрә алмай, ҡалғанын ергә һирпә. Пәрей дарыу һирпелгән урынды шунда уҡ ялап ала. Тағы көрәш башлана. Пәрейҙең тағы хәле бөтә.

— Дары менән көл сығар! — тип ҡысҡыра.

Әбей алып сыға, пәрейҙең аяҡ аҫтына дары, Таҙҙыҡына көл һибә. Шул ерҙә Таҙ пәрейҙе һауаға сөйөп ебәрә лә, килеп төшкәс, өҫтөнә аяғы менән баҫа. Баштарын ҡырҡып төшөрәйем тип, ҡылысын үңәсенә килтерһә, пәрей әйтә:

— Эй, егет, аҙ ғына көтөп тор, — ти, — үлер алдынан әйтеп ҡалдырыр һүҙҙәрем бар, — ти.

— Ярар, — ти Таҙ, туҡтап ҡала, пәрейҙе һуймай тора.

— Һин ҡайҙан килдең? — тип һорай пәрей.

— Мин һуҡыр ҡарттың улы булам!

— Ҡайҙарҙа булдың?

— Мәҙрәсәлә булдым, үҫеп еткәс, өйгә ҡайттым.

— Һинән оло ағайҙарың бар инеме?

— Ике оло ағайым бар ине булһа кәрәк, хәҙер тураһын белмәйем.

Шул ваҡыт пәрей әйтә:

— Бына был йөрөгәне һинең әсәйең булыр; бер һарайҙа ике оло ағайың ултырыр — алып сыҡ! — ти. — Икенсе һарайҙа өс ала бейә торор, уларҙы һуғарырға алып бар, — ти. — Бер бейә һыу уртлар ҙа башын күтәреп сайҡар. Һин шул башын сайҡаған бейәнең эсен ярырһың, уның эсенән бер ҡумта бүҫерелеп килеп төшөр. Ҡумтаны асһаң — күк күгәрсен булыр; һин күгәрсенде тотоп ал да эсен тел — ике ап-аҡ ҡына йомортҡа күренер. Шулар атайыңдың күҙҙәре булырҙар, — ти. — Йә, егет, — ти, — башымды киҫ инде! — ти. Егет пәрейҙең өс башын да киҫеп төшөрә. Шунан әбейгә килә лә:

— Йә, әсәй, байлығыңды тейә! — ти.

Егет һарай ҡапҡаһына барһа, ҡапҡаның йөйө беленмәй ҙә, ти. Ҡапҡаға тибеп ебәрһә, һарай он булып ыуалып төшә. Унда ике егет ултыра, аяҡтары ағас сөй менән ҡаҙаҡланып ҡуйылған, маңлайҙарына энә ҡаҙалған. Энәләрҙе алып, аяҡтарындағы сөйҙө һура ла егет:

— Хәҙер үк ҡайтып китегеҙ! — ти.

Барлы-юҡлы әйберҙәрен йыйып алып, ағалары ҡайтып китәләр.

Егет икенсе һарайҙың ҡапҡа төбөнә бара. Берҙе типһә, һарай ҡойолоп төшә лә ҡуя. Тора, ти, унда өс ала ат. Өсөһөн дә һуғарырға алып китә. Алып килеп һуғарып тора ине, бер ала бейә башын күтәрә лә сайҡарға тотона. Егет күп уйлап тормай, тегенең эсен ярып та ебәрә, эсенән бер ҡумта килеп төшә. Егет ҡум-

таны асып, күк күгәрсендең дә эсен яра, ике ап-аҡ ҡына йомортҡа килеп сыға. Йомортҡаларҙы кеҫәһенә һалып ала ла егет ҡайтып китә.

Атаһының өйөнә кире ҡайта был. Өйҙәренә килеп еткәс, тышта тороп ҡына тыңлай: әбей менән бабай зыу килеп илашалар. Һуҡыр ҡарт илай-илай һөйләнә, ти:

— Бер үгәй улым бар ине, ул да әллә ҡайҙа юҡ булды, һеҙ ҡайттығыҙ, ул юҡ! — ти. Таҙ өйгә инә. Әбей ҡартына өндәшә:

— Бына улың ҡайтты, — ти. Ҡарт тора ла:

— Ҡайҙа ул минең балам? — тип ныҡыша.

Таҙ ҡарттың түшенә әкрен генә төртә лә:

— Көтөп тор әҙерәк, олатай! — ти.

Таҙ бер йомортҡаны ҡарттың уң күҙенә бәрә, күҙе баҙлап китә. Ҡарт улының ҡосағына ташланайым тиһә, Таҙ этеп ебәрә лә икенсе йомортҡа менән һул күҙенә һуға. Ҡарттың был күҙе лә баҙлап янып китә. Шунан һуң ғына былар өй мәшәҡәттәренә тотоноп киткәндәр.

Бер ваҡыт ҡарт Таҙға әйтә:

— Улым, — ти, — һиңә байлыҡ кәрәкме, әллә төрлө ғәжәп һөнәргә өйрәнергә уйлайһыңмы? — ти. Таҙ әйтә:

— Ниңә миңә байлыҡ? — ти. — Ғәжәп һөнәргә өйрәнергә теләйем! — ти.

— Ярар, — ти ҙә ҡарт, ҡырҡ ҡолас утынды бер ергә өйә. Утын өҫтөнә Таҙҙы һала ла яндыра. Утын янып бөтә. Ҡарт иләк яһап ала ла көлдө иләргә керешә. Бөтә көлдө иләп сыға — Таҙҙың бер сәтәкәй бармағы ғына тороп ҡалған. Ҡарт сәтәкәйҙе алып ҡайта өйөнә, ныҡ итеп тороп йыуа. Шунан доғаһын уҡый ҙа сәтәкәйҙе ете төрлө сепрәккә урай ҙа:

— Һелкен, егет, елпен! — ти. Таҙ, күк күгәрсенгә әүерелеп, осоп килеп ултыра. Ҡарт тағы ла:

— Һелкен, егет, елпен! — ти. Был юлы Таҙ бөркөткә әүерелә. Ҡарт тағы ла:

— Һелкен, егет, елпен! — ти. Был юлы Таҙ тауисҡа әүерелә. Ҡарт тағы ла:

— Һелкен, егет, елпен! — тиһә, әлеге Таҙ барлыҡҡа килә.

— Бына, улым, — ти ҡарт Таҙға, — һин һөнәргә лә өйрәндең, — ти, — йәнеңде һаҡла, улым! — ти. Өҫтәп ҡарт Таҙға Етмеш ҡолас һары айғырҙы бирә, етерлек итеп аҡса ла тоттора. Батша улы кейек кейенеп, һыланып-һыйпанып, Таҙ ҡайтып китә.

Үҙенең атаһына ҡайта был. Ауылға килеп инә. Атаһы менән өйҙәгеләр күргән төш раҫҡа сыҡҡан була: һарыҡтары бик үрсеп киткән, ти. Атаһы һарыҡтарҙы йыйып, аяҡтарын бәйләп тора, әсәһе йөнөн ҡырҡып тора; оло ағаһы йөндө тоҡҡа тултыра бара; уртансы ағаһы, Ала бейәне егеп, һарыҡтарға бесән ташып тарата. Шулай зыҡ ҡубып йөрөгәндәрендә, оло ағаһы быны күреп ҡала ла:

— Атай, ана батша улы килә ята, беҙҙә туҡталмаҫмы икән?— ти. Атаһы әйтә:

— Улым,— ти,— был ауылда беҙҙән дә байыраҡ кеше юҡ! Беҙҙә туҡталмайса, кемдә туҡталһын!— ти.

Таҙ килеп етеп атаһына сәләм бирә. Атаһы ҡаршы сығып, теҙгендән ала. Батша улы икән тип уйлай был һаман. Таҙҙы аттан күтәреп төшөрә, юлына ап-аҡ кейеҙ түшәй. Шулай итеп бик ололап, атаһы Таҙҙы өйгә алып инә. Таҙ ап-аҡ кейеҙҙе йәлләп төрә лә ситкә һала. Атаһы икенсе кейеҙ йәйеп, Таҙҙы түр башына ултырта. Шулай итеп, атаһы Таҙға ҙур хөрмәт күрһәтә. Таҙ үҙен танытмай. Өс-дүрт көн ҡунаҡ булып ята был. Хәҙер Таҙҙың танытҡыһы килә бит! Быны нисек эшләргә? Үҙен һиҙҙермәк булып, был бер аҫрауға:

— Сыуал яҡһалар, йылынып алыр инем!— ти.

Шулай тигәс, әсәһе, утын һөйәп, сыуалға ут тоҡандыра. Сыуал алдына бүкән ҡуя, Таҙҙың аҫтына тип, бүкәнгә мамыҡ яҫтыҡ һала. Шунан шаршауҙы тарта ла шаршау эсенән батша улының йылынғанын ҡарап ултыра башлай. Таҙ юрамал ғына йылынырға булған икән, уның башында алтын ай бар икән. Башын тырнаған кеше булып, Таҙ түбәтәйен сисә. Шул мәлде әсәһе шаршау артынан сыға ла:

— Был минең балам да баһа!— тип һөйләнә-һөйләнә улына ташлана.

Ҡарт менән өйҙәгеләр өс көн буйы һыйланалар. Таҙ атаһына әйтә:

— Атай, мин бынан китәйем инде! — ти.— Миңә алама ғына толоп бирегеҙ, Ала бейәне лә бирегеҙ,— ти.

— Эй, улым,— ти ҡарт,— үҙеңдең атың, үҙеңдең кейемең менән барһаң, ҡайҙа ла хур булмаҫ инең бит!— ти.

— Ала бейә менән, алама толоп кейһәм дә хур булмам,— ти Таҙ.

Алама толоп кейә лә Таҙ китә. Сей тиренән тегелгән итеге менән Ала бейәнең ҡабырғаһын төйә-төйә юл ала был. Бара, бара, бара торғас, төнгөлөккә туҡ-

тала. Иртәгеһен иртә менән торһа, бер тауыш ишетә. Таҙ тора ла тауыш сыҡҡан яҡҡа ҡарап китә.

— Барайым әле, ҡарайым, ниндәй бәндәләр икән?— ти.

Унда бер ҡала икән, ҡаланың батшаһы Көнхан тигән кеше, ти. Ул һуғышҡа китергә йыйынып ята икән. Таҙ, ҡулдарын болғай-болғай, үксәһе менән Ала бейәне төйә-төйә, батша алдына барып етә лә:

— Батша! Теләһәң, хәҙер үк яуға китер инем!— ти.

— Һай, Таҙ,— ти батша,— ни эшләп һинең үлгең килә?— ти.

— Юҡты мығырлайһың һин, батша,— ти Таҙ.— Һеҙҙән ҡалған һөйәктәрҙе кимереп тамаҡ аҫраһам да барам,— ти.

— Бар әйҙә,— ти батша,— ҡайҙа үлһәң, шунда ятып ҡалырһың.

Киттеләр, ти, былар яуға батша менән икәүләшеп. Бара торғас, өс айлыҡ юлда ятҡан бер ергә барып еттеләр, ти. Иртәгеһен иртә менән батша яуға оран һалған: бөтә ғәскәре алдына килеп баҫҡан. Батша әйтә:

— Өйҙә ҡылысымды онотоп ҡалдырғанмын. Кем дә кем шуны өс көндә килтереп еткерә, шуға ҡыҙымды бирәм!— ти. Өс егет батша алдына килеп баҫалар ҙа:

— Беҙ килтерәбеҙ!— тиҙәр.

Был егеттәр үҙҙәре лә, аттары ла матурҙар, һөлөк кеүектәр, ти. Батша ҡағыҙ яҙып, мөһөрөн баҫып, һәр береһенә тоттора. Ҡағыҙҙа: «Әгәр ҙә мәгәр ошо егет килһә, уға ҡыҙымды бирегеҙ!» — тип яҙылған була. Егеттәр йән-фарман саптырып юлға сығып китәләр. Таҙ ҙа Ала бейәнең ҡабырғаһына үксәһе менән тибә-тибә, батшаға килә лә әйтә:

— Батша,— ти,— мин һинең ҡылысыңды өс көн тигәндә алып килер инем,— ти.

— Эй, Таҙ, һинме һуң минең ҡылысты алып килерҙәй кеше!...— ти батша.

— Юҡты һөйләйһең, батша,— ти Таҙ,— батша булһаң да, ерле юҡты мығырлайһың!— ти.

— Эй, һин, Таҙ!..— ти батша.— Шуға бер ҡағыҙ яҙып бирегеҙ әйҙә, китә бирһен!— ти. Шулай итеп, батша ҡағыҙ яҙып, мөһөр баҫып бирергә ҡуша. Ала бейәһенең ҡабырғаһын үксәһе менән һанай-һанай Таҙ сығып китә. Бара бирә лә Таҙ, Ала бейәне салып, ер

аҫтына тыға ла үҙе, шоңҡарға әүерелеп, осоп китә. Ярты көн эсендә Таҙ батша торған ауылға килеп етә. Шул ерҙә ул, ҡағынып, яңынан Таҙға әүерелә. Батшаның өйөнә инә. Батша ҡатынына ҡағыҙҙы бирә. Ҡатын шунда уҡ Таҙға ҡыҙҙы етәкләтеп сығара. Ҡатыны эргәһендә Таҙ өс көн була. Китергә йыйына был.

— Аҙаҡтан мин һине нисек танырмын икән?— ти батша ҡыҙы. Таҙ әйтә:

— Минең иҫ китмәле һөнәрем бар,— ти.

— Ниндәй һөнәр ул?

— Ҡағын, егет, ҡағын, тип әйтеп ҡара әле,— ти Таҙ.

— Ҡағын, егет, ҡағын!— ти батша ҡыҙы.

Таҙ иңбашын ҡыбырлатып тик ултыра.

— Шулмы һөнәрең?— ти ҡыҙ.

— Был һөнәр түгелме ни?— ти Таҙ. Ҡыҙ әйтә:

— Булһа, булһын, әйҙә,— ти.

— Тағы ла әйтеп ҡара әле,— ти Таҙ.

Ҡыҙ әйтһә, Таҙ иңбаштарын ҡыбырлатып ултырыуын дауам итә.

— Шулмы һөнәрең?

— Шул,— ти Таҙ,— шул булһа, ярамағанмы ни?!

Батша ҡыҙы асыулана ла китә:

— Һин минән көләһең!— ти.

— Тағы ла бер тапҡыр «Ҡағын, егет, ҡағын!» тип әйт әле,— ти Таҙ. Ҡыҙҙың:

— Ҡағын, егет, ҡағын!— тип әйтеүе булған, Таҙ, ҡағынып, күк күгәрсен булып ҡуйған. Батша ҡыҙы күгәрсендең бер ҡауырһынын ҡырҡып алған да тағы ла:

— Ҡағын, егет, ҡағын!— ти.

Таҙ һелкенеп китә лә ҡыйғырға әүерелә. Ҡыҙ уның да бер ҡауырһынын ҡырҡып ала.

— Ҡағын, егет, ҡағын!— ти ҡыҙ тағы ла.

Таҙ ҡағына ла шоңҡарға әйләнә. Ҡыҙ уның да бер ҡауырһынын ҡырҡып ала. Шунан ҡыҙ:

— Ҡағын, егет, ҡағын!— ти.

Таҙ ҡағына ла тауис ҡошона әүерелә. Ҡыҙ уның да бер ҡауырһынын ҡырҡып ала. Шунан:

— Ҡағын, егет, ҡағын! — тиһә, Таҙ бөркөткә әүерелә. Бөркөттөң дә бер ҡауырһынын ҡырҡып ала ҡыҙ. Шунан һуң:

— Ҡағын, егет, ҡағын!— тиһә, Таҙ үҙенең әүәлеге хәленә ҡайта. Ҡыҙ уның толобоноң салғыйынан да бер киҫәк өҙөп ала.

Шунан Таҙ батша ҡылысын ала ла китә. Батша ҡыҙы Таҙға бер тараҡ бирә. «Берәй йылғаны кисеп сыға алмаһаң, ошо тараҡ күпер булыр!» — ти. Шунан йәнә бер ҡылысмау ҙә бирә. Биргән саҡта: «Һыуһыҙ интегергә тура килһә, ул һиңә һыу булыр!» — ти. Тағы ла бер күҙгө бирә. «Ни белергә теләһәң, ошо күҙгөлә күренер!» — ти, быныһын биргәндә.

Юлға сыҡҡас та Таҙ батыр, ҡағынып, шоңҡарға әүерелә. Осоп бара торғас, ул теге өс егетте күреп ҡала. Өҫтәренән шыйылдап осоп барһа, егеттәр быны күреп ҡалалар. Шоңҡарҙың суҡышына ҡарайҙар ҙа:

— Ана, батша ҡылысы осоп бара! — тиҙәр. Шул ерҙә боролалар ҙа кире сабалар.

Ала бейәһе эргәһенә осоп килеп еткәс, Таҙ:

— Серем итеп алайым әле, йоҡо килә, — ти ҙә йоҡларға ята.

Теге өс егет таҙ ергә сабып килеп еткән дә, башын ҡырҡып, ҡылысты алып киткән.

Был саҡта теге әүәлге һуҡыр ҡарт, бөркөткә әүерелеп, һауанан осоп бара икән, Таҙҙы күреп ҡалған. «Бында ниндәй емтек ята?» — тип, Таҙҙың эргәһенә килеп ултырһа, «Эй-эй, был минең аҫрау улым да баһа! — тип аптырап ҡалған. — Кемдер уны үлтереп киткән, боғаҙлаған да ҡасҡан!» — тигән ҡарт. Шулай тигән дә эйелеп кенә Таҙҙың томшоғона бер сөскөргән икән, Таҙ терелеп, һикереп килеп торған. Ҡарт Таҙға әйтә:

— Һин йәнеңде һаҡла! — ти. — Һине үлтергәндәр. Ике йәнемдең береһен һиңә бирҙем, хәҙер үҙемә бер генә йән ҡалды, — ти.

Таҙҙың үҙенең бер ҡылысы булған. Шул ҡылысы менән ярҙы бер һыйпағайны, Ала бейә һикереп килеп сыҡты, ти. Таҙ атланған да батшаға, ғәскәр эргәһенә ҡарап сапҡан.

Батша менән ғәскәре тағы ла ҡуҙғалырға йыйыналар икән. Йыйынғандар ҙа киткәндәр. Бара бирһәләр, батша ғәскәре һыу таба алмай интегә, ти. Батша оран һалып әмер бирә:

— Кем дә кем һыу таба, шуға ярты батшалығымды бирәм!

Әлеге өс егет алға сығалар ҙа:

— Беҙ һыу табабыҙ! — тиҙәр. Өс егет өс яҡҡа сабып сығып китәләр. Таҙ Ала бейәһен үксәһе менән төйәтөйә тағы ла килеп етә лә әйтә:

— Батша, мин һыу табыр инем, — ти.

— Эй, Таҙ,— ти батша,— йә һин уны ҡайҙан табаһың?— ти.

— Эх, батша,— ти Таҙ,— батша булһаң да юҡты һөйләйһең,— ти. Батша быға рөхсәт итә.

— Йә, алайһа бар, тап!— ти.

Таҙ китә. Бер тау башына менә лә бер ташты аҡтарып ала. Урынына ҡылысмауҙы һалһа ҙур йылға ағып китә. Батша ғәскәренең яртыһы эстәре ярылғансы эскән, ти. Таҙ батша ҡашына килергә өлгөрә алмай ята икән, ә теге өс егет, килә һалып:

— Батша, һыуҙы беҙ таптыҡ!— тиҙәр, ти.

Былар тағы ла ҡуҙғалып киткәндә. Теге батшалыҡ ҙур бер диңгеҙ аръяғында икән. Батша диңгеҙ ярына килеп еткәс, өс ай ял итеп алмаҡ булған. Шул ваҡыт Таҙҙың башына бер уй төшкән. Кешеләрҙең ситкәрәк, ҡырға киткән дә, күгәрсенгә әүерелеп, диңгеҙ аша осоп сыҡҡан. Унда Айхан тигән батша йәшәй икән. Тәҙрә төбөндә генә баҡсаһы бар, ти. Таҙ, күгәрсен булып, баҡсаға ҡунған да гөрөлдәргә тотонған. Айхан батшаның ҡыҙы атаһынан һорай:

— Атай, күк күгәрсен ниңә гөрөлдәй ул?

Батша әйтә:

— Гөрөлдәмәйенсә ни эшләһен инде! Теге яҡтан дошман ғәскәре килә бит!— ти.— Беҙҙе ҡайғыға һалырға итәләр, шуның өсөн гөрөлдәйҙер,— ти.

— Тоттормаҫмы икән?— ти ҡыҙ.

— Ниңә тоттормаһын, тотторор,— ти батша.— Был беҙ ашатҡан күгәрсен дә баһа!— ти.

Ҡыҙ, күгәрсенде тотоп алып, өйгә индермәк булып, баҡсаға сыға. Күгәрсенде тотоп индерә. Күгәрсен һаман гөрөлдәй икән. Гөрөлдәй-гөрөлдәй ҙә ағас сөйгә барып ҡуна. Батша ҡыҙы атаһынан һорай:

— Был диңгеҙ аша дошман ғәскәре нисек сығыр икән?— ти.

— Эй, ҡыҙым,— ти батша,— диңгеҙҙең был яҡ ситендә шундай ҡамыш үҫә, ул ҡамыш атты ла күтәрә,— ти батша.

— Ярар, диңгеҙҙе лә урап сыҡһындар, ти, ә беҙҙең ауыл суйын менән кәртәләнгән, уны нисек үтә алырҙар?— ти ҡыҙ. Батша әйтә:

— Ҡыҙым,— ти,— суйын кәртәнең ҡайһы бер урындары ҡурғаш менән беркетелгән,— ти.— Әгәр күп итеп бесән килтереп, ут төртһәләр, ҡурғаш иреп төшәсәк, улар шул ерҙән үтәсәктәр,— ти.

— Ул саҡта, атай, беҙҙең менән ни хәл булыр?— тип һорай ҡыҙ. Батша ҡыҙына әйтә:

— Һин һеперткегә әүерелерһең.
— Оло ағайым менән еңгәм ни булырҙар?
— Оло ағайың төйгөс, еңгәң киле булыр,— ти батша.
— Әсәй, һин ни булырһың?
— Әсәйең аҫкы тирмән ташы, мин өҫкө тирмән ташы булырбыҙ,— ти батша.
— Беҙҙең һәйбәт-һәйбәт әйберҙәребеҙ менән ни булыр?
— Яҡшы әйберҙәребеҙ насарға әйләнер.
— Яҡшы-яҡшы аттарыбыҙға ни булыр?
— Яҡшы-яҡшы аттарыбыҙ аламаға әүерелер.
— Тарантастарыбыҙға ни булыр?
— Насар тарантастарға әйләнерҙәр.
— Алтыныбыҙға ни булыр?

— Алтыныбыҙ күмергә әүерелер, ҡыҙым,— ти батша.

Күгәрсен ҡиәфәтендә осоп килгән таҙ быларҙың барыһын да тыңлап ултыра. Шунан себенгә әйләнә лә, тәҙрә ярығынан осоп сығып китә. Таҙ килеп, ғәскәр араһына инеп ята.

Иртәгеһен ғәскәр бик иртә уяна. Таҙҙы типкеләйҙәр, төрткөләйҙәр:

— Тор!— тиҙәр.

Батша тағы ла оран һала. Ғәскәр йыйылып килә.

— Кем дә кем күпер таба, шуға ҡыҙымды бирәм!— ти.

Баяғы өс егет тағы алға сыға:

— Беҙ табабыҙ!— тиҙәр ҙә төрлө яҡҡа сабып сығып китәләр. Таҙ ҙа батша ҡашына бара.

— Батша, күперҙе мин табыр инем,— ти. Батша әйтә:

— Эй, Таҙ, башымды ҡаңғырттың да баһа!— Ҡайҙан табаһың уны?

— Табам тигәс, табам инде!..

— Бар тап!— ти батша.

— Мин таптым инде!— ти Таҙ.

— Улай булғас, әйҙә киттек,— ти батша.

Таҙ ғәскәрҙе эйәртеп күпергә бара. Ҡамыш эргәһенә киләләр.

— Батша, ҡамыш өҫтөнән китәбеҙ!— ти Таҙ.

— Тәүҙә үҙең барып ҡара!— ти батша.

Таҙ, Ала бейәһен менеп, ҡамышты бер тапҡыр сабып урап сыҡҡан. Шунан батша менән күлдең аръяғына сыҡҡандар, ғәскәр уларҙың артынан эйәргән.

Суйын кәртәгә килеп терәлгәндәр хәҙер былар. Кәртәне бер нисек тә емереп үтә алмайҙар икән.

Батша тағы ла оран һала.

— Кем дә кем ошо суйын кәртәне емерә, шуға батшалығымдың яртыһын бирәм! — ти. Теге өс егет тағы алға сыға:

— Беҙ емерәбеҙ, батша! — тиҙәр. Шунан кәртә тирәләй йөрөп, суйынды балта менән сапҡан кеше булалар. Таҙ батша эргәһенә килә лә:

— Был суйын кәртәне мин емерер инем! — ти. Батша әйтә:

— Емер, алай булғас, — ти батша.

— Ҡалаңда хөкөм йөрөтөргә ирек бир! — ти Таҙ.

Батша Таҙға ирек бирә. Шул ерҙә Таҙ ғәскәргә кипкән үлән, ҡырлы ҡурай ташырға ҡуша. Ғәскәр, барыһын килтереп, кәбән итеп өйөп ташлай. Таҙ ҡурайға ут төртә, суйын кәртә ыуаланып-ыуалып төшә. Шунан ғәскәр ҡалаға инә лә алыш башлана. Өс көн, өс төн алышалар былар, Айхандың ғәскәрен бөтөнләйгә ҡыйратып бөтөрәләр. Хәҙер ғәскәр әйбер тейәргә керешә. Таҙ Айхандың һарайына инә лә насар ғына аттарҙы тотоп ала, уларҙы насар ғына арбаларға егә. Шунан һепертке, күмер, киле, төйгөс, тирмән ташы тейәй, — биш йөктө юҡ-бар менән тултыра. Кешеләр Таҙҙан көләләр икән:

— Һеперткеһе ниңә кәрәк булды әле? — тип көләләр бынан.

— Ярау итер урынды һепererгә ярар әле! — ти Таҙ.

— Тирмән ташын ни эшләтмәк булаһың?

— Бер тоҡ он артынан тирмән сапҡансы, ҡатын өйҙә тартһын! — тип яуап ҡайтара Таҙ.

— Ниңә затлы әйберҙәр һалып алманың?

— Ниңә яҡшы арбаларға яҡшы аттар екмәнең? — тип һорайҙар икән Таҙҙан.

— Миңә шулары ла ярар! — ти Таҙ.

Ғәскәр урынынан ҡуҙғалып китә. Кешеләрҙең яҡшы арбалары ҡыйралып бөтә; яҡшы аттары арып, хәлдән тая. Таҙҙың аттары ла арымай, арбалары ла ватылмай. Бүтәндәрҙән биш тәүлеккә элек ҡайтып инә Таҙ. Бер һаҙлыҡҡа инә лә бөтә байлығын шунда өйөп ҡуя. Аңғармаҫтан батша ла килеп төшә. Батша ғәскәрҙе бер урынға йыйырға бойора ла тәхетенә ҡыҙы менән менеп ултыра. Батша ҡыҙының өс йәшлек ҡыҙы ла бар, ти. Батшаның яуға сығыуына өс йыл ғүмер үтеп тә киткән, ти. Батша ҡыҙы ҡылысмауҙы ҡыҙына

тоттора ла теҙелеп торған кешеләр рәтенә буйлап ебәрә. Ҡыҙ рәтте йүгереп йөрөп урап сыға, ҡылысмауы менән берәүгә лә һуҡмай. Батша ҡыҙы әйтә:

— Шуларҙың ҡайһыһы һинең атайың, шуға һуҡ! — ти.

Ҡыҙ тағы ла берәүгә лә һуҡмай. Шул ерҙә батша:

— Әллә берәйһе өйҙә ятып ҡалдымы? — тип һорай. Бер кеше әйтә:

— Бер Таҙ ғына ятып ҡалды, бүтән кеше юҡ! — ти.

Таҙҙы алып киләләр. Өс йәшлек ҡыҙҙы тағы ла ебәрәләр. Ҡыҙ, килеп, Таҙға һуға. Батша ҡыҙын әрләргә тотона:

— Башыңды һинең эт ашағандыр, ахыры, — ти, — Таҙға сыҡҡанһың, — ти. Ҡыҙы әйтә:

— Атаҡайым, — ти, — ихтимал, уның бәхете һинекенән ҙурыраҡтыр, — ти. — Минең ирем булған кешенең ғәжәп һөнәрҙәре бар! — ти. Батша һөрән һала:

— Кем дә кем ғәжәп һөнәр белә, алға сыҡһын! — ти.

Теге өс егет алға сыға ла батша алдына килеп баҫа. Батша ҡыҙы был өсәүгә әйтә:

— Ҡағын, егет, ҡағын! — ти.

Өс егет баштарын ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла һелкеп ҡарайҙар, үҙгәрешһеҙ тик торалар. Батша быларҙы һаҡсыларына тотороп ебәрә, һуңынан һәр береһен ун ике мылтыҡтан атырға ҡуша.

Батша тағы бойора:

— Кем ғәжәп һөнәр белә, шул алға сыҡһын! — ти.

Бейәһен үксәһе менән төйә-төйә Таҙ алға сыға. Ҡыҙ әйтә:

— Ҡағын, егет,ҡағын! — ти.

Егеттең һелкенеүе була, күгәрсенгә әүерелә. Ҡыҙ ҡырҡып алған ҡауырһынын ҡуя ла, атаһынан һорай:

— Оҡшағанмы?

— Оҡшаған, ҡыҙым, — ти батша. Ҡыҙ тағы ла:

— Ҡағын, егет, ҡағын! — ти.

Таҙ, һелкенеп, ҡыйғырға әүерелә. Ҡыҙ ҡырҡып алған ҡауырһынды тағы ҡуйып ҡарай:

— Оҡшағанмы, атай? — тип һорай.

— Оҡшаған, ҡыҙым, оҡшаған, — ти батша.

— Ҡағын, егет, ҡағын! — ти ҡыҙ.

Таҙ, ҡағынып, шоңҡарға әүерелә. Ҡыҙ ҡырҡып алған ҡауырһынды тағы ялғап ҡарай.

— Оҡшағанмы, атай? — тип һорай.

— Оҡшаған, ҡыҙым,— ти батша. Ҡыҙ тағы ла әйтә:

— Ҡағын, егет, ҡағын!— ти.

Таҙҙың һелкенеүе була — бөркөткә әйләнә. Ҡыҙ ҡауырһынды ялғай.

— Оҡшағанмы, атай?

— Оҡшаған, ҡыҙым,— ти батша.

— Ҡағын, егет, ҡағын!

Егет ҡағынһа, әлеге Таҙға әүерелә. Шунан батшаның ҡыҙы Таҙ менән яңынан ҡушыла. Ҡылысы менән һыйпап, Айхан менән уның ҡатынын терелтә. Айхандың улы менән кәләшен дә һыйпап терелтә. Һепертке-гә әүерелгән ҡыҙын да ҡылысы менән һыйпай, ҡыҙ ҙа терелә. Айхан Таҙға ҡыҙын бирә. Таҙ рәхәтләнеп йәшәй башлай: бер кәләшенә табанын, икенсеһенә башын тырнарға ҡуша. Өс йәшлек ҡыҙы атаһының кәүҙәһе аша ҡолап уйнай, ти. Шулай ята торғас, Таҙ шарҡылдап көлөргә тотона. Ике ҡатыны бер юлы:

— Һин беҙҙән көләһең!— ти ҙә сыға ла китә. Һәр ҡайһыһы үҙенең атаһына барып зарлана. Батшалар таҙҙы саҡырып алалар ҙа:

— Һин ниңә беҙҙең ҡыҙҙарҙан көләһең әле?— тиҙәр. Таҙ яуап бирә:

— Мин уларҙан көлмәнем, хөрмәтле батшалар!— ти.

— Ә ниңә көлдөң һуң улай булғас?..

Таҙ әйтә:

— Өйҙә йәшәгән саҡта бер төш күргәйнем,— ти.— Башым осонда ҡояш ҡалҡҡайны — бына Көнхандың ҡыҙын алдым; аяғым осонда ай ҡалҡҡайны — Айхандың ҡыҙына ла өйләндем,— ти.— Күкрәгем өҫтөндә шәфәҡ балҡығайны — бына өс йәшлек ҡыҙым бар,— ти.

Батшалар ҡыҙҙарын ҡыуып ебәргәндәр ҙә:

— Юҡты юллап йөрөйһөгөҙ, ахыры,— тигәндәр. Шунан ике батша ла батшалыҡтарын таҙға биргәндәр.

Таҙ, батша булып, әле лә һый-хөрмәт эсендә рәхәтләнеп, мәшәҡәт күрмәй йәшәй, ти.

## ӘЛЕҮКӘЙ

Борон бер бабай менән бер әбей йәшәгән. Уларҙың Әлеүкәй исемле бер улдары ғына булған, ти. Атаһы Әлеүкәйҙе көн дә йылҡы өйөрөн ҡарап ҡайтырға ебәрә торған булған.

— Йылҡыларҙы Елғыуар яланына ҡыу,— ти икән атаһы.— Шул ялан тулһа, йылҡылар теүәл булыр, тулмаһа, теүәл булмаҫ.

Әлеүкәй йылҡыларҙы Елғыуар яланына ҡыуып илтһә, ялан тула. Гел шулай теүәл була ла тора, ти, малдар.

Берҙән-бер көндө Әлеүкәй, шул яланда хәл йыйып ята торғас, йоҡлап киткән. Шул ваҡыт бер ен ҡыҙы уның ҡулына балдаҡ кейҙереп киткән, ти. Егет уянһа — һөйләшә алмай: телдән яҙған да ҡуйған, ти.

Өйөнә ҡайта. Һөйләшергә итә — һөйләшә алмай. Атаһы менән әсәһе: «Һиңә нимә булды?» — тип һорағас, был: «Аҡ һаҡаллы ҡартты тотоп килтерегеҙ!» — тип кенә әйтә алды, ти.

Ә ул ҡарттың кем булыуын бер кем дә белмәгән. Әлеүкәй генә бит инде быларҙың балалары, башҡа юҡ, шулай булғас, әй илай, ти былың атаһы менән әсәһе, әй илай, ти, хәҙер ни эшләтергә лә белмәйенсә.

Атаһы уйлап торған-торған да, атына атланып, аҡ һаҡаллы ҡартты эҙләп сығып киткән. Бик оҙаҡ барғас, аҡ һаҡаллы бер бабайға юлығып:

— Миңә тап һин кәрәк инең! Киттек әйҙә! Улым һөйләшә алмай, телдән яҙҙы,— тигән.

— Бар, ҡайт та, мал һуйып, күп итеп ҡунаҡ йый! Аш-һыуың әҙер булғас, мин барырмын,— тигән был ҡарт.

Әлеүкәйҙең атаһы өйөнә ҡайтып, әллә күпме үгеҙ, һарыҡ һуйып, бөтә ауылды ҡунаҡҡа саҡырған. Теге аҡ һаҡаллы ҡарт та килеп еткән. Ашағандар, эскәндәр. Шунан Әлеүкәйҙең атаһы аҡ һаҡаллы ҡартҡа:

— Бына улым телдән яҙҙы, һине саҡырырға ҡушҡайны,— тигән.

Аҡ һаҡаллы ҡарт Әлеүкәйҙең атаһына:

— Бар, йылҡы өйөрөнән алты пар сыбар сапсан ат һайлап ал, шунан улыңдың теле артынан ҡыуа китербеҙ! — тигән.

— Алтыны түгел, алтмыш пар сыбар ат һайлап була ул минең йылҡы өйрөнән! — тигән Әлеүкәйҙең атаһы.

Йылҡы өйөрөнә барһа, бер генә сыбар ат та булмаған. Эҙләп-эҙләп тә тапмағас, буш ҡул менән әйләнеп ҡайтҡан.

— Улым, бер генә сыбар ат та тапманым! — тигән.

Быны ишеткәс, Әлеүкәй, өйөрҙән бер тыу бейәнең Ҡаҙтау яғына киткәнен ишара менән төшөндөрөп биргән. Сыбар аттар шуның артынан киткәндер, тигән. Атаһы Ҡаҙтауға барһа, сыбар аттарҙың бөтөнөһө шунда йыйылған икән, бүтән төҫтәге ат бөтөнләй юҡ, ти. Алты пар сыбар атты алып ҡайтҡан ҡарт.

Әлеүкәй менән атаһы икеһенә өсәр пар сыбар ат алып, аҡ һаҡаллы ҡарт үҙенә бер ерән атты тотоп алып, юлға сығып киткәндәр. Эй сапҡандар, ти, былар, эй сапҡандар — Әлеүкәй менән атаһының аты бер-бер артлы сәсәп йығылып тора, үҙҙәре икенселәренә, өсөнсөләренә алмашлап менеп, һаман сабалар ҙа сабалар, ти. Аҡ һаҡаллы ҡарттың ерәнсәһе генә арыуҙы бар тип тә белмәй, ти. Бара торғас, алты пар сыбар ат арыпталып, хәлһеҙләнеп туҡтап ҡала.

Шунан аҡ һаҡаллы ҡарт ерәнсәһенән төшә лә Әлеүкәйҙе атландыра:

— Сап та сап, иллә мәгәр артыңа әйләнеп ҡарайһы булма! — ти. — Атыңдың уң яҡ ҡабырғаһына һуҡҡанда һул яҡ ҡабырғаһынан ҡан атылып сығырлыҡ булһын — шулай һуҡ ҡамсыңды! — ти. — Фәлән йылғаға барып еткәс, ҡунырға туҡтарһың. Иртәгеһен бер ҡыҙ һыу алырға килер, һин уға үҙеңдәге балдаҡты биреп ебәрерһең, — ти.

Әлеүкәй, ерәнсә менән йән-фарман сабып сығып китеп, бер йылға буйына барып еткәс, ҡунырға туҡтаған. Иртән иртүк тороп ҡараһа, бер ҡыҙ һыуға килгән. Әлеүкәй шул ҡыҙҙы туҡтатып, ҡулындағы теге балдағын күрһәткән. Ҡыҙ:

— Был минең апайымдың балдағы бит, ул һиңә нисек килеп эләкте? Апайым кейәүгә сыға, бөгөн уның туйы була, — тигән.

Әлеүкәй: «Апайыңдың ҡулына һыу ҡойғанда ошо балдаҡты ла усына төшөр», — тигәнде ишара менән аңлатып, балдаҡты биргән.

Һыуға килгән ҡыҙыҡай балдаҡты алып ҡайтып киткән. Әлеүкәй яңғыҙы тороп ҡалған.

Ҡыҙ, ҡайтҡас, апаһының ҡулына һыу ҡойоп йыуындырған сағында баяғы балдаҡты ла төшөргән. Балдаҡ шунда уҡ тегенең бармағына үҙенән-үҙе кейелгән дә ҡуйған. Ҡыҙ, аптырап, һеңлеһенән:

— Минең был балдағым ҡайҙан килеп сыҡты һуң әле? — тип һораған. Һеңлеһе:

— Бер егет биреп ебәрҙе,— тигән.

— Күрһәт миңә шул егетте,— тигән апаһы.

Шунан теге ҡыҙ, апаһын йылға буйына алып барып, Әлеүкәй менән күрештергән. Был икәү шунда уҡ бер-береһенә ғашиҡ булып та ҡуйған, ти. Әлеүкәй тап бына шул ваҡытта, теле асылып китеп, һөйләшә лә башлаған, ти.

Әлеүкәй оҙаҡ уйлап тормаған, Ерәнсәгә атланып, ен ҡыҙын алдына ултыртып алған да, саптырып ҡайтып та киткән, ти.

Ҡыҙҙың атаһы буласаҡ кейәүе Ҡубыҡты-ҡара* менән икәүләп быларҙы баҫтыра киткәндәр, ти. Ҡыҙ, сабып барған еренән:

— Һинең ниндәй һөнәрең бар? Күрһәт әле,— ти икән. Әлеүкәй быға яуап итеп:

Утрауҙа утыҙ тирәк —
Бер атыуҙа ҡолатам!—

тип йырлаған. Шунан уғын алып, атып ебәргән икән, тирәктең утыҙы ла ҡолаған. Уҡ утыҙынсыһына ҡаҙалған көйө тороп ҡалған, ти. Ҡыҙҙы баҫтырып килгән атаһы менән кейәүе:

— Был тирәктәр ни эшләп ҡоланы икән? Ел ҡолатҡан тиһәң, бөтәһе лә берҙәй тигеҙ ҡырҡылған. Балта менән ҡырҡҡандар тиер инең, тапсығы юҡ. Бысҡы менән бысҡандар тиһәң, бысҡы вағы юҡ,— тип аптырап ҡалғандар. Утыҙынсы тирәктәге ҡаҙаулы уҡты күргәс кенә, тирәктең уҡ менән ҡырҡылғанын белгәндәр.

Ерәнсә Әлеүкәй менән ен ҡыҙын елдереп кенә алып китеп ултыра, ти. Ҡыҙ йәнә:

— Ниндәй һөнәрең бар? Күрһәт әле,— тигән. Әлеүкәй быға яуап итеп:

Юл ситендә ҡырҡ ҡарағай —
Бер атыуҙа ҡолатам! —

тип йырлаған. Шунан уғын уғын атып ебәрһә — ҡарағайҙың ҡырҡы ла ҡолап төшкән. Уҡ ҡырҡынсыһында ҡаҙалған көйө ҡалған, ти. Тегеләр килеп еткән дә:

---

* Ҡубыҡты ҡара — был исемде Зеленин (әкиәтте яҙып алыусы) «Һыу тулҡыны өҫтөндәге ҡара һырт» (Черный гребень на водяной волне) тип аңлатҡан. «Әлеүкә улы Ораҡ» тигән ҡаҙаҡ әкиәтендә Ҡубыҡты — ҡалмыҡ батыры.

«Был ҡарағайҙар ни эшләп ҡоланы икән?— тип, тағы аптырап ҡалғандар. Ҡырҡынсы ҡарағайҙа ҡаҙалып торған уҡты күргәс кенә, ҡарағайҙарҙың ниҙән ҡолағанын белгәндәр.

Баҫтыра барып-барып та ҡыуып етә алмағас, ҡыҙҙың атаһы боролоп ҡайтып киткән, тегеләрҙе Ҡубыҡты-ҡара үҙе генә ҡыуып барған, ти. Саба торғас, Ерәнсә тамам арып-талып туҡтап ҡалған. Егет менән ҡыҙ йәйәүләп кенә киткәндәр. Ҡубыҡты-ҡара быларҙы ҡыуып етеп, Әлеүкәйгә:

— Ҡыҙҙы ҡалдырып кит, юғиһә үҙеңде атып үлтерәм!— тип ҡысҡырған.

— Атһаң, ат әйҙә!— тигән Әлеүкәй.

Ҡыҙ ике уртаға инеп баҫҡан да:

— Кем үлтерһә, мин шуға булам,— тигән.

Ҡубыҡты-ҡара уғын ата — теймәй. Әлеүкәй ата — Ҡубыҡты-ҡараның һаҙағына тейеп, ун уғының һигеҙен селпәрәмә сарҡаҡлай. Шунан Ҡубыҡты-ҡара, Әлеүкәйҙең һаҙағына атып, ун ике уғының өсөһөн селпәрәмә килтерә. Әлеүкәй уғын Ҡубыҡты-ҡараның үҙенә тоҫҡап ата, шул ерҙә теге үлеп тә ҡуя.

Әлеүкәй менән ҡыҙ, кире боролоп, ҡыҙҙың атаһына киткәндәр, ти. Улар унда оҙаҡ йәшәгәндәр. Балалары ла булған, ти. Бер заман Әлеүкәй бисәһе менән балаһын алып, бала ҡараусы ла эйәртеп, үҙенең тыуған-үҫкән яҡтарына ҡайтып киткән, ти. Ҡайтып етер саҡта, бер йылға янына туҡтап, Әлеүкәй:

— Һин ошонда тор, ауылға тәүҙә мин үҙем генә ҡайтып киләйем,— тигән.

Киткән. Әлеүкәйҙең бисәһе үҙенә башҡа бик һылыу булған: бер бите ай, бер бите ҡояш, ти. Өйгә ҡайтып ингәс, Әлеүкәй атаһы-әсәһе менән иҫәнләшкән дә былай тигән:

— Мин ҡатын алдым. Ҡатыным — үҙенә башҡа бик һылыу кеше. Аяҡ аҫтына аҡ келәм түшәргә кәрәк. Бер төкөрһә — көмөш, икенсе төкөрһә — алтын була уның! Бына ҡайһылай минең бисә!— тип маҡтанған.

Әлеүкәй йылға буйына боролоп килһә, бында әллә ниҙәр булып бөткән, ти. Бисәһе йылғала яңғыҙы һыу ингән. Уның кейеме алтындан да көмөштән икән. Бына шул кейемде бала ҡараусыһы үҙе кейеп алған да тегеңә бирмәй ҙә бирмәй:

— Үҙ кейемем үҙемдә минең!— тип тик тора икән. Әлеүкәйҙең бисәһе, шәп-шәрә тороуҙан тартынып, үҙенең икенсе кейемен алып кейгән. Шул кейемен

кейеү булған — ҡаҙ булып осоп китеүе булған. Бала ҡараусы ҡыҙ баланы ҡулына алып, Әлеүкәй килеүенә йыр йырлап тик ултыра, ти. Әлеүкәй:

— Апайың ҡайҙа?— тигән.

— Һыуға батты, эҙләнем-эҙләнем дә таба алманым,— тигән бала ҡараусы.

Әлеүкәй, илай-илай, бисәһен үҙе эҙләргә тотонған. Таба алмағас: «Ағып киткәндер, күрәһең»,— тип, балаһын күтәреп, бала ҡараусыһын эйәртеп ҡайтып киткән.

Ҡайтһа, кешенән ояла икән был: минең бисә бик һылыу, тип маҡтанып ташлағайны бит инде. Кешеләр күрергә тип килһәләр, теге ҡыҙҙың бер ҙә иҫ китер ере юҡ, ти.

Әлеүкәйҙең ашағаны аш түгел, йоҡоһо йоҡо түгел, гел ҡатыны хаҡында ғына уйлана икән.

Бер ваҡыт юлаусылар Әлеүкәйҙән фатир һорағандар. Әлеүкәй индергән. Бергәләп ашағандар, эскәндәр. Юлаусыларҙың береһе:

— Үткән төндә һаҙ буйында һунарҙа йөрөгән сағымда бер хәлгә хайран ҡалдым әле,— тип һөйләй башлаған.— Һаҙ эсендә бер яңғыҙ ҡаҙ өҙөлөп-өҙөлөп ҡаңғылдай. Айырылып ҡалғандыр инде, бахырың. Атырға итәм — ҡулым күтәрелмәй: бөтә нәмәне аңлағандай, ялынып-ялынып ҡаңғылдай ҙа ҡаңғылдай.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Әлеүкәй:

— Ул ҡаҙ тигәнең, моғайын, минең бисәләр әле. Ҡайһы ерҙәрәк күрҙең уны?— тигән.

Теге юлсы:

— Фәлән ерҙә күрҙем,— тип, ҡайҙалығын әйткән. Әлеүкәй:

— Нисек тоторға уны?— тип, кәңәш һораған. Юлсы уға:

— Бөтә ауылды йый ҙа йәшенән дә, ҡартынан да һора; улар ни эшләргә икәнен әйтерҙәр,— тигән.

Иртәгеһен Әлеүкәй, үгеҙ, һарыҡ һуйып, бөтә ауыл халҡын саҡырып, табын ҡорған. Йәштәрҙе бер яҡҡа, ҡарттарҙы бер яҡҡа ултыртып һыйлаған. Бер аҙ ашапэсеп алғас, Әлеүкәй:

— Минең бисә осоп китте бит әле, шуны нисек тотайыҡ икән? Үҙен фәлән һаҙҙа күргәндәр,— тигән.

Йәштәр:

— Ҡайһыбыҙ таяҡ тотоп, ҡайһыбыҙ ат менән, шул ергә барайыҡ та, ҡамап тотайыҡ,— тигәндәр.

Шунан Әлеүкәй карттарға ҡарап:

— Һеҙ ниндәй кәңәш бирерһегеҙ? — тип һораған. Ҡарттар:

— Бында берәй хәйлә кәрәк булыр. Ул йөрөгән ергә кеше һыйырлыҡ соҡор ҡаҙырға кәрәк. Шунан соҡорға бик һәйбәтләп урын йәйеп, баланы һалып ҡуй, үҙең шунда күренмәй генә ситтәрәк ултырып алырһың. Бисәң балаһы янына килер ҙә имеҙә башлар. Бына шул саҡта һин уны тотоп алырһың, — тигәндәр.

Әлеүкәй шулай эшләгән дә. Ҡатыны тәүҙә ҡурҡыбыраҡ, соҡор тирәһендә осоп йөрөгән-йөрөгән дә шундағы бер ағасҡа килеп ҡунған. Шунан ергә төшөп, кейемен һалған, ҡатын ҡиәфәтенә ингән. Балаһын урынынан алып, имеҙә башлаған. Бала имгән-имгән дә йоҡлаған; уның артынса әсә үҙе лә иҙрәп киткән. Шул саҡта Әлеүкәй килеп уны әкрен генә тотоп алған. Бисә, уянып китеп, үҙенең ирен таныған.

Әлеүкәй ҡатынын кейендереп, балаһы менән бергә алып ҡайтып киткән, ти.

## ҺАНАЙ БАТЫР

Борон-борон заманда ҡуйы урман менән ҡапланған тау араһында, үҙенең туған-тыумасаһы менән бергәләп, Үлмәҫбей исемле бер ҡарт батыр йәшәгән, ти. Быларҙың уң яғында, — үҙенең йәйләүе менән Тойғонбей батыр, һул яғында үҙ нәҫелдәре менән Тарғынбей батыр һунар итеп, көн күреп яталар икән, ти.

Көндәрҙән бер көн Үлмәҫбей батыр ыңғырашып, хәлдән тайып, ауырып ҡайтты, ти. Теле лә юҡ, өнө лә юҡ, ти, бының. Аҡһаҡалдарҙы, ҡарттарҙы саҡырып кәңәш итеп ҡарайҙар, — бер аҡыл да таба алмайҙар. Шунан йәйләүгә иң аҡыллы табипсы ҡартты саҡырып килтергәндәр. Ул:

— Әйттем мин уға, бер үҙең йөрөмә тип. Ялandағы януарҙарҙы ҡурсыһаң, берҙән-бер улың Көсөн* батырҙы алып сыҡ тинем, — тигән, ти.

Шунан ҡарттар, табипсы ҡарт менән бергәләп ҡот ҡойоп, Үлмәҫбей батырҙың нимәнән ҡурҡып сирләгәнен белергә тотонғандар. Табипсы ҡарт һыулы

---

* Көсөн — ҡулъяҙмала шулай.

тузыйға* балсыҡ һалып ебәрһә, күкле-йәшелле булып сытырлап ҡуйған, ти. Ҡарап тороусы ҡарттар:

— Ҡорғоро! Тойғонбей батырҙы йәшен атҡан тиҙәр ине, шул ваҡытта йәшендән ҡурҡҡан икән,— тип ҡайғырышҡандар, ти. Шул саҡ Көсөн батыр:

— Донъяның аҫтын өҫкә килтерермен, атайымды терелтергә барыбер дауа табырмын,— тип ажарланғас, табипсы ҡарт:

— Туҡта, балам, һиндә көс етерлек, тик ул йәндең Үлмәҫбей батырҙы йомшаҡ мендәргә килтереп бәргәнен онотмайыҡ,— тип, башынан һыпырған, ти. Шунан теге табипсы башҡа ҡарттарға ла ишара яһағас, улар ҙа һәр береһе ҡулдары менән Көсөн батырҙың һынын баштан-аяҡ һыпырып сыҡты, ти. Шулай итһәң, батыр утта ла янмай, һыуҙа ла батмай икән, ти.

Көсөн батыр, атаһына дауа эҙләп, ил гиҙергә сығып киткән, ти. Бара икән, бара икән был, бара торғас, бер бешәлек урынға тап булған. Шул урында, алдында йыландарҙың һыҙғырышып, бүре ояһынан ике бүре балаһын һөйрәтеп алып сығып килгәнен күреп ҡалған, ти. Көсөн батыр, күп уйлап тормай, ҡылысы менән йыландарҙы тураҡлай башлаған. Эй тураҡлай, эй тураҡлай был — йыландарҙың киҫелгән бере, ҡабат йылан булып, йүгереп китеп тик тора, ти. Өс көн, өс төн тигәндә, баяғы йыландар ҡасып бөткәндәр. (Был батырҙың тәненә йыландың ағыуы кермәй бит инде!) Шунан, арып хәлдән тайып ултырғанда ғына, кеше еҫен һиҙеп, таналай инә бүре кешеп етте, ти. Инде ҡабып йотайым тип, ауыҙын асҡан икән, тегенең балалары:

— Беҙҙе үлемдән ҡотҡарҙы, теймә ул ағайға!— тип ҡысҡырҙылар, ти. Бүре:

— Сабыйҙарымды ҡотҡарған өсөн ни кәрәк?— тигәс:

— Атайыма дауа эҙләп, ил гиҙеп йөрөйөм,— тип, Көсөн батыр бөтәһен дә энәһенән ебенә тиклем һөйләп биргән. Бүре шунан:

— Һин ул дауаны Өс ҡайын тигән урындан табырһың, шунда бар,— тигән.— Унда өс ҡыҙ булыр. Улар өсөһө өс ҡайындың ботағын үреп, остарына береһе — бөркөт тырнағы, икенсеһе — ҡарағош тырнағы, өсөнсөһө торна тырнағы тағып, бәхет теләп ултыралар. Шул

---

* Тузый — тырыз.

тырнаҡтың береһенән — ҡымыҙ, икенсеһенән — үрмәксе ауы, өсөнсөһөнән бал ағып торор. Ошо өс дауаны бутап эсерһәң, атайыңдың сире еңеләйеп, баш ҡалҡытыр,— тигән.

Көсөн батыр бүре ҡушҡан урынға барһа, ысынлап та өс ҡыҙ: береһе — Тойғонбей батырҙың, икенсеһе — Тарғынбей батырҙың, өсөнсөһө — табипсы ҡарттың ҡыҙы өс ҡайын төбөндә, турһыҡтарын шишмәгә һыуытырға ҡуйып, һөйләшеп ултыралар, ти. Тойғонбей батырҙың ҡыҙы һулда ултырған ҡайындың һалынып торған тәлгәш ботағын үреп, осона бөркөт тырнағы ҡушып ҡуйғас:

— Әгәр мин шул Көсөн батырҙың кәләше булһам, яҡшы ҡымыҙ бешеп, бөтә тирә-йүнде ҡымыҙ менән һыйлап торор инем,— тигән. Шул ваҡытта бөркөт тырнағынан сөмөрләп ҡымыҙ аҡты, ти. Был ҡыҙҙың йөҙө яҡтырып китте, ти.

Хәҙер Тарғынбейҙең ҡыҙы, тәлгәш ҡайын ботағын үреп бөтөрөп, ҡарағош тырнағын осона ҡуйып:

— Әгәр мин Көсөн батырҙың кәләше булһам, бөтә тирә-йүнгә кейем тегеп өлгөртөп торор инем,— тигәйне, ҡарағош тырнағы осонан бер үрмәксе аҫылынып килеп төштө лә, был ҡыҙҙың да йөҙө көләсләнеп, яҡтырып китте, ти.

Табипсы ҡарттың ҡыҙы, урталағы ҡайындың ботағын үреп, торна тырнағын таҡҡас:

— Мин Көсөн батырҙың кәләше булһам, уға үҙенән дә батырыраҡ бер ул табып бирер инем, исемен Һанай батыр тип ҡушыр инем,— тигән икән, торна тырнағынан бал тамды, ҡыҙҙың йөҙөнән нур балҡыны, ти.

Шул мәлдә Көсөн батыр тыңлап торған еренән килеп сыҡҡан да:

— Һин оло ҡатыным бул, бөтә халыҡты ҡымыҙға туйҙыр,— тигән йәшен атып үлтергән Тойғонбей батырҙың ҡыҙына.— Ә һин уртансы ҡатыным бул, кейем-һалым менән туйҙыр,— тигән Тарғынбей батырҙың ҡыҙына.— Һин, һылыуҡай, минең кесе ҡатыным бул, миңә үҙемдән дә батырыраҡ Һанай батырҙы табып бир,— тигән табипсы ҡарттың ҡыҙына.

Шунан былар бергәләп ҡайтып, теге дарыуҙарҙы эсергәндәр икән, Үлмәҫбей батырға хәл кереп, үлемдән ҡотолоп ҡалған, ти.

Үлмәҫбейҙең улы Көсөн батыр ана шулай өс ҡатын менән донъя көтә хәҙер. Оло ҡатыны ҡымыҙ бешә,

уртансыһы кейем тегә, ә кесе ҡатыны шунда уҡ гөманлы була.

Көсөн батырҙың оло ҡатындары быға бик көнләшә, һис кенә лә сыҙаша алмайҙар, ти. Кесе ҡатын бәпесләргә сирләп киткәс, оло ҡатыны, кендек әбейе кәрәк тип, үҙенең йәйләүенән бер сихырсы әбейҙе саҡырып килтергән. Уртансы ҡатыны, бала ҡарарға тигән булып, бер яман яуыз күрәҙә ҡарсыҡты саҡыртып килтергән. Бала тыуғас, ҡарсыҡтар:

— Әйҙәгеҙ, балаһын көсөк менән алмаштырайыҡ та урманға илтеп ташлайыҡ,— тигәндәр ҙә, һүҙ беркетеп, Һанай батырҙы ҡарурманға алып барып ташлағандар. Шунан Көсөн батырға килә һалып:

— Балаң эт булып тыуҙы, ҡатынның һүҙендә торманы,— тип тәтелдәгәндәр.

Көсөн батыр ни эшләһен, кесе ҡатынын ситлеккә яптырып ҡуйған, ти. (Ғәрлек бит инде кеше араһында.)

Былары бында мәж килә торһон, хәҙер Һанай батырға киләйек.

Һанай батырҙың тауышын ишетеп, әлеге бүре балалары уны үҙҙәренең өңдәренә алып ҡайтҡандар, ти. Һанай батыр бүре имеп нығынып, йыл үсәһен көн үсә лә ҡуя бит! Егет булып еткәс, уҡ-йәйә яһап алып, һунарға йөрөй башлаған, ти.

Шулай бер көн, һунарҙа йөрөгәндә, күҙгә кеүек күл өҫтөндә бер үрҙәк йөҙгәнен күреп ҡалған да, инде атайым тип уҡталған икән, үрҙәк телгә килеп:

— Атма, егет, мин — һинең киләсәк бәхетең!— тип күҙҙән юғалған.

Һанай батыр, бик ҡайғырып ҡайтып, бүрегә:

— Бәхетемде осратҡан инем, ҡасты ла китте,— тигән. Бүре әйткән:

— Тыныс бул, һин тигәнсә булыр,— тигән.— Ете тау аръяғына бар, шунда ҙур күл булыр, һин уны үҙенең ояһында тота алырһың,— тип хәйләһен өйрәткән.

Һанай батыр, әҙерләнеп-ҡоралланып, шул урынға барһа, теге үрҙәк ҡыҙға әйләнеп, бер таш өҫтөндә, сәсен тарап ултыра, ти. Һанай батыр, ҡасып ҡына барып, сәс толомонан эләктергән дә:

— Бәхетемде тоттом, һин минән ҡабат китә алмаҫһың,— тигән икән, ҡыҙ:

— Мин риза,— тип яуап биргән, ти.

Шунан былар шул күл буйында икәүләп йәшәй башлағандар. Һанай батыр бер кеше лә күрмәй, бер

кемгә лә бармай, үҙ ҡаны кешеләрҙе лә белмәй, ти. Һунарҙа йөрөгәндә Һанай батыр шуға ҡайғырып китеп бара икән, әлеге бүре килеп сыҡҡан.

— Һиңә ни булды, ниңә танауыңды төшөрҙөң? тип һорай бүре.

— Үҙ илемде күргем килә, үҙем һымаҡ кешеләр, ялан тулып йөрөгән малдарым араһында булғым килә,— ти Һанай батыр.

— Ярар, һин тигәнсә булыр,— ти ҙә бүре күҙҙән юғала.

Һанай батыр тирмәһенә ҡайтһа, ялан тулы йылҡы, ти. Тирә-яҡтан кешеләр йыйылып, ҡымыҙ эсеп, шау-гөр килеп ултыралар, ти. Һанай батыр ҡыуанып, шул кешеләр менән бергә шат-рәхәт йәшәп алып китте, ти.

Шулай бер көндө былар янына, оҙаҡ юлдан арыпталып, бер дөйә каруаны килеп туҡтаны, ти. Каруансылар ҡыҙыҡ-ҡыҙыҡ хәлдәр һөйләп, ҡымыҙ эсеп, ит ашап ултырҙылар, ти. Һанай батырҙың быға кәйефе ҡырылып, урманға сығып киткәйне, уның алдына тағы әлеге бүре килеп баҫты ла:

— Һиңә ни булды тағы, Һанай батыр?— тип һорай башланы, ти. Һанай батыр:

— Кеше кеүек ил гиҙеп, донъя күреп йөрөгөм килә,— тип әйтте, ти, Һанай батыр.

Шунан һуң теге бүре:

— Ярар, һинеңсә булыр. Бар ҡайт та, һағыҙаҡҡа әйләнеп, шул каруан менән кит,— тип, бер ҡыл бирҙе, ти.

Һанай батыр ҡайтып, ҡылды һыҙғыртҡан икән, һағыҙаҡҡа әйләнгән дә ҡуйған. Шунан каруансылар артынан осоп киткән. Ҡыуып еткәс, дөйә ҡолағына ҡунған да шым ғына бара биргән. Каруан Көсөн батырҙың йәйләүенә хәл алырға туҡтаған. Ситтән килгән ҡунаҡтар хөрмәтенә бында аш-һыу әҙерләп, йыйын ҡорғандар. Шулай ашап-эсеп, кәйеф-сафа ҡылып ултырғанда, Көсөн батыр:

— Йә, ҡунаҡтар, ниндәй һыуҙар кистегеҙ, ниндәй ерҙәр күрҙегеҙ? — тип һораған, ти. Каруан башлығы:

— Күп ерҙәрҙә булдыҡ, икһеҙ-сикһеҙ байлыҡтар күрҙек, әммә бынан ете көнлөк юлда бер батырҙың йәйләүен ҡаплап алған йылҡылар кеүек ҙур көтөү күрмәнек,— тип һүҙ башлаған икән, Көсөндөң ҡатыны, күрәҙәнең күҙ ҡыҫыуын күреп ҡалып, каруан башлығының һүҙен бүлдергән:

— Эй, ул ҙур көтөү бәхетме ни ул? Бына бер илдә йәнеңә ни кәрәк аш булдыра торған ашъяулыҡ бар

икән, бына шул ҙур бәхет, исмаһам! — тигән. Теге сихырсы ҡотортоп ҡуйған инде ҡәһәрҙе!

Шул ваҡытта мөйөштә генә ҡасып ултырған һағыҙаҡ, йәлп итеп килеп сыҡҡан да тегенең күҙен һуҡырайтҡансы сағып сыҡҡан да киткән, ти. Бөтә мәжлес гөж килеп, тәртип боҙолоп, шаулашып тороп ҡалған, ти.

Һанай батыр үҙ иленә ҡайтҡас, урманда бошоноп йөрөй икән, әлеге бүре килеп:

— Һиңә ни булды тағы, башың ниндәй ҡайғыға тарыны? — тип һораған. Һанай батыр:

— Бер илдә төрлө ашамлыҡ булдыра торған ашъяулыҡ бар икән, минең дә шундай ашъяулығым булһасы, — тигән. Бүре:

— Булыр, теләгеңә ирешерһең, — тигән дә, ике ҡыл биреп, күҙҙән юғалған.

Һанай батыр йәйләүенә ҡайтһа, теге ашъяулыҡ йәйелеп ята, ти; йәнеңә ни кәрәк, шул ашамлыҡтар бар, ти.

Арып-талып, әлеге каруан килеп туҡтаған икән, был байлыҡты күреп, иҫтәре киткән, ти. Эй башлаған, ти, байрам!..

Икенсе көндө каруансылар юлға ҡуҙғалған икән, Һанай батыр, ике ҡылын һыҙғыртып, тағы һағыҙаҡҡа әйләнгән дә, дөйә ҡолағына ҡунып, каруансылар менән китеп барған.

Каруансылар Көсөн батыр еренә туҡтап ял итә, кәйеф-сафа ҡыла башлағандар. Шул ваҡыт Көсөн батыр:

— Йә, мосафирҙар, донъяла ниҙәр бар, ниҙәр юҡ? — тип һорай икән. Каруан башлығы:

— Юлда, ял итергә тип, бер йәйләүҙә туҡтаһаҡ, күрмәгәнебеҙҙе күрҙек. Ул йәйләүҙә йәнеңә ни кәрәк аш булдыра торған ашъяулыҡ арҡаһында бөтә халыҡ туҡ йәшәй, — тип һөйләй башлаған икән, Көсөн батырҙың уртансы ҡатыны:

— Ул ғәжәпме ни ул? Бер илдә оса торған сәкмән бар икән, бына уны ғәжәп тиһәң дә ярай? Шул сәкмәнде кейһәң, осоп ҡына йөрөйһөң икән, — тип, теге күрәҙә ҡарсыҡтың ҡотортҡос һүҙен әйткән.

Һағыҙаҡ, баяғыса, ҡасып торған еренән йән-фарман атылып килгән дә, уртансы ҡатындың күҙен сығарғансы сағып, осоп сыҡҡан да ҡасҡан, ти.

Һанай батыр ҡайтҡас, уҡ-һаҙағын алып, тағы ла урманға киткән. Бының ҡайғыһын белеп бүре килгән дә:

— Ни булды, Һанай батырым, ни ҡайғыға тарының?— тип һораған. Һанай батыр:

— Оса торған сәкмәнем булһасы,— тип үтенгән, ти. Бүре:

— Һин теләгәнсә булыр, бар ҡайт,— тип, өс ҡыл, бер көҙгө биреп, хушлашып күҙҙән юғалған, ти.

Һанай батыр йәйләүенә ҡайтып төшһә, бының кешеләре сәкмәнгә ултырып ҡына йөрөйҙәр икән, көҙгөһө менән өс ҡылын йәшереп ҡуйған да, ҙур йыйын ҡороп, байрам яһарға фарман биргән. Шул саҡ әлеге каруансылар тағы килеп, ялға туҡтағандар, ти. Һанай батырҙың тирмәһенә ҡунаҡтарҙы әлеге оса торған сәкмән менән осортоп ҡына алып киләләр, ти. Каруан башлығы был мөғжизәгә бик аптыраған. Йәйләү хужаһының Һанай батыр икәнен белеп, артабан үҙ юлдары менән киткәндәр, ти.

Каруансылар китеп, шау-шыу тынғас, Һанай батыр өс ҡылын һыҙғыртҡан икән, бынамын тигән бер толпар осоп килеп төштө, ти. Һанай батыр шул толпарҙы менеп, ҡоралдарын таҡҡас, көҙгөһөн алып ҡарайым тиһә, көҙгөһөндә, йылт-йылт итеп, төрлө һүрәт, күренә, ти. Ипләберәк ҡараһа, көҙгөлә Көсөн батырҙың да, үҙенең дә ҡасан тыуғаны, әсәһенең айырып, урманға уны кемдәр илтеп ташлағаны — бөтәһе лә апасыҡ күренеп тора, ти. Көҙгөһөн кеҫәһенә һалған икән, толпары ла, үҙе лә күренмәй, ти.

Шунан Һанай батыр, күп уйлап тормайынса, атаһының йәйләүенә килеп төшә лә, атын ысҡындырып ебәреп, шыпырт ҡына ҡунаҡтар ҡырына килеп баҫа. Теге каруан башлығы һөйләй генә башлаған икән, шул ваҡыт Һанай батыр:

— Туҡтағыҙ, ҡабаланмағыҙ!— тип килеп сыҡҡан да, кеҫәһенән көҙгөһөн алып, һөйәгән дә ҡуйған, ти.

Быны күреп, бөтәһе лә аптырап ҡалды, ти. Аптыраһың да шул, көҙгөлә күптән үлгән Үлмәҫбей батыр заманынан бөгөнгө көнгә тиклем бөтә ваҡиға күренеп торғас!

Сабыйҙы көсөккә алмаштырғандары күренгәс, Көсөн батыр ҡамсы алып, сихырсы ҡарсыҡҡа уҡталһа,— яуыз күрәҙә юҡ, сығып тайған, ти, бынан. (Күрәҙә ни, алдан белеп тора ла инде ул, шунда уҡ ҡасҡан.)

Һанай батыр:

— Туҡта, атай, ярһыма, минең әсәйем ҡайҙа?— тигәс, һә тигәнсе, зинданда ятҡан ҡатынды алып килделәр, ти. Алып килгәйнеләр, Көсөн батыр ҡатынының

алдына барып тубыкланды, ти. Шул вакыт был катын:

— Бәпесем, Һанай батырым, түшем бик ауырта, бер генә лә иммәнең бит! — тип имергә кушты, ти.

Һанай батыр имеп туйгас (оло батыр бит инде, ояла-ояла имә, ти был), инәһенең күҙенә мөлдөрәп карап торҙо, ти. Шунан теге катын:

— Көсөн батыр, оло катынының сәүсәлек мүскәгә, уртансы катынының күпкән кәнтәйгә әйләнһен, беҙгә шулай хеҙмәт итһендәр, сихырсы карсык ташка әйләнһен, — тигән икән, әлеге көҙгө көҙрәте менән бөтәһе лә шулай булған да куйған, ти.

Шунан эй туй, шатлык, байрам башланған. Һанай батыр бүрене балалары менән кунакка сакырырға оноткан да куйған, ти. Әлеге сихырсы карсыктың зәхмәте инде: ташка әйләнер алдынан, Һанай батырҙың хәтеренә зыян итеп, онотторорға өлгөргән, ти. Шунан бирле бүре заты кешене яратмай башлаған, ти. Көсөн батыр катыны менән картайып, йөн тетеп, Һанай батыр һунар йөрөп, бик шәп донъя көтөп яталар, ти. Кисә барҙым, буйтым кунак булып кайттым.

## ЮЛДЫБАЙ БАТЫР

Элекке заманда бер әбей менән бер бабай йәшәгән, ти. Уларҙың нур сәсеп торған Алтынсәс исемле кыҙҙары булған. Кыҙ буйға етеп килгәндә, әбей үлеп киткән. Бабай икенсе әбей алған, теге әбейҙең тағы бер кыҙы булған.

Үгәй әсә Алтынсәсте яратмаған. Атаһы кыҙын күрше ауылдағы муллаға укырға ебәргән. Улар бөтәһе ун һигеҙ кыҙ бергә укығандар. Шуларҙың иң матуры Алтынсәс булған. Алтынсәстең атаһы, мулланың байлығына кыҙығып, кыҙын муллаға йәш катынлыкка биргән. Кыҙ быға бер ниндәй ҙә каршылык күрһәтә алмаған. Шулай итеп, ул Хәтип мулланың бисәһе булып калған.

Мулла йәш бисә менән бер аҙырак торған да ике йыллык сәфәргә сыккан. Ул киткәндә, өлкән бисә бет кабығынан бейәләй тегергә, йәш бисә бер бите ай, бер бите көн малай табырға вәғәҙә иткәндәр. Улар вәғәҙәләрен үтәгәндәр. Муллаға хат яҙғандар. Ләкин өлкән катыны: «Йәш бисәң эт балаһы тапты», — тип хатты төҙәткән. Мулла, был хатты алғас, асыуланған да үҙе кайткансы йәш бисәне юк итергә кушкан.

Өлкән бисә, бер сихырсы ҡатынды яллап, Алтынсәсте мулланы ҡаршыларға тип ебәргән. Сихырсы менән Алтынсәс бик алыҫ барғандар. Сихырсы әбей, бер бейек ҡаяның башына менеп, ҡатынды арбанан төшөрөп, ике күҙен соҡоп алған да ҡайтып киткән. Ҡатын һуҡыр көйө малайы менән тороп ҡалған.

Бер заман Алтынсәс ҡыштырлаған тауыш ишеткән дә:

— Әгәр әҙәм заты булһаң, бире кил,— тигән.

— Әҙәм затынанмын,— тип яуап биргән тауыш, ә ул юха йылан булған. Юха йылан:

— Әгәр миңә бисә булһаң, мин һинең ике күҙеңде лә ҡуям,— тигән.

Алтынсәс быға риза булған. Юха йылан ике алма биргән икән, ашау менән, ҡатын күҙле булған.

Алтынсәстең улы ҙурайғанда-ҙурайған, көслө булып үҫкән дә үҫкән. Әсәһе уға Юлдыбай тип исем ҡушҡан. Юха йылан малайҙан ҡурҡа башлаған, уны үлтерергә димләгән. Юха йылан үҙе бер генә лә күренмәгән, нимә теләһә, шуны малайҙың әсәһенән эшләткән.

Бер саҡ юха йылан ҡатынға ауырыуға һалышырға ҡушҡан. Ҡатын ауырыу кеше булып ятҡан да улына дарыу үләне йыйырға ҡушҡан.

— Юлдыбайҙы урманда айыу йәки бүре ашар,— тип уйлағандар улар.

Малай өсөнсө көндө бик күп дарыу үләне алып ҡайтып төшкән. Былар тағы ҡурҡҡандар. Юха икенсе хәйлә уйлаған. Уның ете урман артындағы ете диңгеҙҙә апаһы йәшәгән. Ул Юлдабайҙы шунда ебәрергә димләгән. Алтынсәс ауырып киткән булып, улына былай тигән:

— Улым, мин тағы ауырып киттем. Ошонан алыҫ түгел ете ҡат урман үтһәң, ете диңгеҙ булыр. Шул диңгеҙҙәр артында ете ҡатлы йорт таш ҡойма менән уратылып алынған. Шул йорттоң етенсе ҡатында ете ҡатлы тимер һандыҡ. Уның эсендә тағы ете ҡатлы алтын һандыҡ бар. Шул һандыҡ эсендә алтын йомортҡа бар. Шул йомортҡаны ашаһам, мин һауығыр инем,— тигән.

Юлдыбай әҙерләнеп, сығып киткән. Бара торғас, бер бейек тауға менеп еткән. Ул тау башында бер яҫы таш булған. Юлдабай ошо таш өҫтөнә менеп ятҡан. Ятыу менән йоҡоға киткән. Уға төшөндә бер аҡ һаҡаллы ҡарт үҙе ятҡан таш аҫтында көмөш йүгән барлығын әйткән.

Иртәнсәк тороп, ташты ҡалҡытып ҡараһа, ысынлап та, көмөш йүгән ятҡан. Йүгәнде алып шылтыратыуы булған, күкбуҙ ат килеп сыҡҡан. Малай уға барыһын да һөйләп биргән. Шул саҡ ат, телгә килеп:

— Миңә атлан да ҡамсы менән һул яҡ ҡабырғама һуҡ, ҡаны уң яҡ ҡабырғама сығырлыҡ булһын. Үҙең күҙеңде йомоп тик ултыр,— тигән.

Егет ат ҡушҡанса эшләгән. Ат шундай шәп елгән, хатта ете ҡат таш ҡойманы емереп, етенсе ҡаттағы йортҡа барып еткән.

— Күҙеңде ас! — тигән тауышҡа уянып китһә, егет был эшкә хайран ҡалған. Дейеү, ғәжәпләнеп, быларға ҡаршы сыҡҡан, ул үҙ атының шулай килеп сығыуына аптыраған. Егет уға йомошон әйткән, ҡото осҡан дейеү эскә инеп киткән.

Егет дейеү һарайын урап сығырға уйлаған. Мөйөштө ураһа, уның ҡаршыһында оҙон сәсле һылыу ҡыҙ ултырған. Ҡыҙ уға үҙенең бер батша ҡыҙы булыуын, бында уны дейеү урлап алып килеүен, бөгөн төштән һуң ашаясағын әйткән. Егет уға үҙенең йомошон һөйләгәс, ҡыҙ:

— Әгәр шул алтын йомортҡаны алһаң, нисек кенә булһа ла һыт,— тигән.— Йомортҡа йәне ул,— тигән.

Дейеү ҡалтырай-ҡалтырай хәйлә эҙләгән: йомортҡаны бер ҙә биргеһе килмәй икән — хәйлә таба алмаған. Егет, эскә инеп, ҡылыс менән һандыҡты асып, йомортҡаны алған. Дейеү хәлхеҙләнеп ятып ҡалған.

Юлдыбай батыр бик күп ҡыҙҙарҙы иреккә сығарған. Оҙон сәсле батша ҡыҙын, атҡа атландырып, алып ҡайтып киткән. Улар ҡыҙҙың атаһына килгәндәр. Егет бер аҙ ҡунаҡ булып, ҡыҙ менән вәғәҙәләшеп, алтын балдағын алып, юлға сыҡҡан. Ҡайтып етер саҡта атының ҡушыуы буйынса, Юлдыбай аттың өс бөртөк ҡылын ала ла йүгәне менән ебәрә. Артабан үҙе йәйәү ҡайта.

Егет ҡайтып кереү менән, юха йылан ҡурҡыуынан ҡалтырап китә. Егет йомортҡаны әсәһенә бирә, ә әсәһе йомортҡаны һытҡан кеше булып йәшерергә уйлай. Юлдыбай йомортҡаны үҙе ала, ҡапыл ғына һыта ла әсәһенә эсергә бирә. Әсәһе эсмәй.

Юха аптырай, икенсе төрлө хәйлә уйлай. Ул Юлдыбайға урамдан тимерсыбыҡ алып килергә ҡуша.

— Көс һынашайыҡ,— тигән була.

Юлдыбай урмандан беләк йыуанлыҡ тимерсыбыҡ

алып килә лә, юха менән һынаша башлайҙар. Юха Юлдыбайҙы тимерсыбыҡ менән шул тиклем ҡаты сырмай, шулай ҙа егет бирешмәй. Ул бер һелкенгәндә тимерсыбыҡ таралып китә.

Алтынсәс балтыр йыуанлыҡ тимерсыбыҡ алып килергә ҡуша. Юлдыбай тағы килтерә, юха уны тағы урай. Юлдыбай ике һелкенгәндә, тимерсыбыҡ тағы таралып китә. Юха йылан бөтөнләйгә ҡурҡа төшә. Ҡатын улын тағы тимерсыбыҡ артынан ебәрергә уйлай.

— Һынашҡас, өскә тиклем булһын,— тип юхалана. Улына ул бот йыуанлығы тимерсыбыҡ килтерергә ҡуша.

Юлдыбай әсәһен тыңлай. Ул бот йыуанлығы сыбыҡ килтерә. Ҡатын егетте урай башлай, ә юха күренмәй генә хәрәкәт итә. Тағы бер уратам тигәндә, юха егеттең күҙенә күренеп ҡала. Егет бик ныҡ һелкенә, хатта тимерсыбыҡ тирә-яҡҡа сәсрәп китә. Юлдыбай шунда уҡ үҙенең ҡылысына ташлана, юханы тураҡлап бөтөрә. Ә әсәһен, тимерсыбыҡ менән урап, тимер һандыҡҡа һалып, ағыҙырға уйлай. Әсәһе уға инәлә. Юлдыбай әсәһенең нисек был хәлгә ҡалыуын, атаһының кем икәнен һораша. Әсәһе уға бөтәһен дә һөйләп бирә. Ул үҙенең Хәтип муллала кейәүҙә булыуын, уның Көнбикә исемле өлкән ҡатыны булыуын, шул ҡатын алдап, уларҙы ошо тауға алып килеп, күҙен соҡоп ташлап китеүҙәре тураһында һөйләй. Ауылдары урман артында, Ҡушкүл исемле булыуын, ошо тау башындағы юха йыландың үҙенә нисек буйһондороуын һөйләй.

Юлдыбай әсәһен тыңлап бөтә лә, ғәфү итеп, сығып китә. Өс көн, өс төн барғандан һуң, Юлдыбай теге ауылға килеп еткән. Ауылға килгәс тә, эш эҙләүен, Хәтип муллала эш бар тигәнгә килеүен әйткән.

Юлдыбай килгәндә, мулла үҙе өйҙә булмаған. Юлдыбай өлкән ҡатындан эш һораған, эшкә ялланған. Бер аҙ ваҡыт үткәс, мулла ҡайтып төшкән. Ул үҙенән рөхсәтһеҙ эшкә яллағаны өсөн өлкән ҡатынын бик ныҡ әрләгән.

Юлдыбай шундай көслө булған. Ул эшләгәне өсөн эш хаҡы алмаған, был муллаға бик оҡшаған.

Бер көндө мулла менән Юлдыбай урманға һунарға сыҡҡандар. Күп йөрөгәндәр, ләкин бер нәмә лә ала алмағандар. Шулай йөрөгәндә, уларға ҡаршы бер ҙур януар килеп сыҡҡан. Беренсе булып мулла атҡан — тейҙерә алмаған. Унан Юлдыбай атҡан.

Ул шундай төҙ атҡан, хатта йәнлек тауыш сығарырға ла өлгөрмәгән, йығылып киткән. Мулла табышты үҙенә алырға уйлай, Юлдыбай бирмәй икән. Шунан мулла.

— Һин миңә йәнлекте бир инде, ни һораһаң, шуны үтәрмен,— тигән.

Юлдыбай уға үҙенең тормош юлын һөйләргә ҡушҡан. Мулла уйлаған, уйлаған да һөйләргә риза булған. Ул үҙенең ошо ауылдың бай муллаһы булыуын, мәҙрәсәлә уҡытыуын, шунда бер матур ғына Алтынсәс исемле ҡыҙҙы йәш бисәлеккә алыуын, тик үҙе өйҙә юҡта уның юғалыуын һөйләп биргән. Юлдыбай үҙен шул Алтынсәстең улы булыуын, бер бейек тау башында йәшәүҙәрен, әсәһенең ҙур яфа сигеүен әйткән.

Шунан улар, йәнлекте алып, ҡайтып киткәндәр. Улар ҡайтыуға, өлкән ҡатын ҡуй һуйҙыртып, аш бешереп, көтөп торған, ти. Ашҡа ултырып бер аҙ ашағас та, мулла өлкән ҡатынынан йәш бисәһенең ҡайҙа юғалыуын һорашҡан. Өлкән ҡатын уның бер бите ай, бер бите көн ул табыуын, сихырсы ҡатын менән икәүләп алдап, уны бейек тау башына алып барып, ике күҙен дә соҡоп алыуҙарын һөйләп биргән.

Юлдыбай уға ла шул йәш бисә Алтынсәстең улы булыуын, хәҙер уның тере икәнен әйткән. Өлкән ҡатын быларҙың аяҡтарына йығылып ғәфү үтенгән. Ләкин Юлдыбай муллаға гәфү итергә ҡушмаған.

Шунан мулла, бөтә ауылдың кешеләрен йыйып, Юлдыбайҙың ҡушыуы буйынса, өлкән ҡатынды ҙур күк айғырҙың ҡойроғона бәйләп сығарып ебәргән. Уның: «Ҡотҡарығыҙ!» — тип ҡысҡырған тауышы, диңгеҙ, урмандар аша үтеп, Алтынсәс йәшәгән ергә барып ишетелгән. Мулла, пар аттар егеп, Юлдыбайҙы ултыртып, Алтынсәсте алырға киткән. Улар килеп төшкән саҡта, Алтынсәс, улын һағынып, бойоғоп ултырған. Юлдыбай уға бөтә хәлде һөйләп биргән. Мулла Алтынсәстән ғәфү үтенгән, уны табыуына ҡыуанған.

Мулла Алтынсәс менән Юлдыбайҙы ауылға алып ҡайтып киткән. Уларҙы бөтә ауыл кешеләре ҡаршы алғандар. Шул көндө мулла шаулатып, гөрләтеп туй яһаған. Ошо туйҙа ул Юлдыбайға рәхмәт белдергән.

Һый-хөрмәт бөткәс, Юлдыбай, вәғәҙәһе буйынса, теге дейеүҙән ҡотҡарып алған батша ҡыҙына киткән. Батша ҡыҙы инде уны һағыныуҙан һарғайып кипкән, ти. Ул көндәр-төндәр буйы егет киткән яҡты күҙәт-

кән. Батшаны ла, ҡыҙын һоратып, йөҙәтеп бөтөргәндәр.

Өс көн, өс төн барғандан һуң, егет килеп еткән. Ул килгән саҡта батша ҡыҙы тәҙрә төбөндә илап ултырған. Егет килеп күренеү менән батша ҡыҙы көлөп ебәрҙе, ти, бүлмә эсе нур менән тулды, ти. Батша үҙе бик ҡартайған булған. Батша үҙенең туғандарын, яҡындарын йыйып, Юлдыбайҙың ата-әсәләрен дә саҡырып, аҙна буйына гөрләтеп туй яһаған.

Туй бөткәс, батша, үҙенең батшалығындағы бөтә кешеләрҙе йыйып, халыҡ алдында үҙенең ҡартайыуын, ауырыу булыуын һөйләгән.

— Ошо сәбәпле батшалыҡты Юлдыбай кейәүемә тапшырам,— тигән.

Хәлыҡ быны хуп күреп риза булған. Юлдыбайҙың ата-әсәһе лә ҡыуана-ҡыуана ҡайтып киткәндәр.

Күп тә тормай, батша үлеп киткән. Юлдыбай батыр, илгә ел-ямғыр тейҙермәй, батшалыҡ итә, ти.

Юлдыбайҙың ҡатыны ла бер бите ай, бер бите көн ул тапҡан. Улар улдарының шундай матур, батыр, тоғро булып үҫеүен теләгәндәр, улдарына Урал тип исем ҡушҡандар. Шулай итеп, өсәүләп бергә-бергә донъя көтөп яталар, ти.

## БАТЫР ЕГЕТ

Борон-борон заманда бер бай йәшәгән. Уның ҡатыны бала тапмаған. Балалары булмау байҙы бик борсоған. Бай бала теләгән. Шуға ул икенсе ҡатын алған. Быныһы ярлы ҡыҙы булһа ла төҫкә матур, эшкә уңған ҡыҙ булған. Бай йәш ҡатынды оло ҡатынға ҡарағанда нығыраҡ ярата. Шуныҡ өсөн оло ҡатын көндәшен яратмай.

Берҙән-бер ваҡыт был байҙы икенсе бай саҡыра. Ул унда дурт айға китергә тейеш була. Китер алдынан бай, ҡатындарын саҡырып алып:

— Мин дүрт айға эш менән китәм. Һеҙ минең ҡайтыуға ниндәй бүләктәр әҙерләп ҡуйырһығыҙ?— тип һорай.

Оло ҡатын:

— Мин һиңә бүләк итеп йөйһөҙ тегелгән йөҙ ыштан, йөҙ күлдәк әҙерләрмен,— ти. Йәш ҡатыны:

— Һинең ҡайтыуыңа игеҙ бала, ҡыҙ менән ул табырмын. Шул булыр һиңә минең бүләгем,— ти.

Бай бик шатланып сәфәр сыға.

Айҙар үтә. Байҙың ҡайтыр ваҡыты етеп килә. Оло ҡатын, магазиндарға сығып, йөйһөҙ ыштан менән күлдәк эҙләй — таба алмай. Тегеүселәргә бара, тик йөйһөҙ итеп бер урында ла текмәйҙәр икән.

Йәш ҡатын ауырып китә, ул менән ҡыҙ таба. Балалар бик матур булалар: аҡ йөҙлө, ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, ти.

Оло ҡатын, үҙенең вәғәҙәһе үтәлмәгәс, йәш ҡатындың вәғәҙәһе үтәлеүен күреп, бик ҡайғыра. «Йәш ҡатынды бай ныҡ яратыр, уның һүҙе һәр ваҡыт өҫтән булыр»,— тип уйлай. Оло ҡатын нисек булһа ла кендек әбей менән берлектә теге балаларҙы юҡ итеү яғын ҡарай. Әбей, малға алданып, балаларҙы урап, мискәгә һала ла диңгеҙгә ағыҙа.

Байға оло ҡатын: «Һинең йәш ҡатының һыйыр аяҡлы, эт башлы ике бала тапты. Уларҙы нимә эшләтергә?» — тип, хат яҙа.

Бай, хатты алғас, яуап хаты яҙа: «Мин ҡайтҡансы, балаларҙы яҡшы итеп тәрбиәләгеҙ! Ниндәй генә булһалар ҙа, мин ул балаларҙы яратасаҡмын. Әсәһен дә яҡшы тәрбиәләгеҙ!»

Оло ҡатын, ошондай яуап алғас, аптырап ҡала, сөнки ул: «Бай гәрләнеп, ул балаларҙы ла, ҡатынды ла бер-бер хәл итегеҙ тип яҙыр», тип уйлаған була.

Оло ҡатын, бай булып, үҙе хат яҙа ла хатты байҙың яҡындарына күрһәтә: «Мин ҡайтҡанға тиклем, теге балаларҙы һаҡламағыҙ, мискәгә һалып, диңгеҙгә ырғытығыҙ. Ә әсәһен ете юл сатлығына алып барып, ярты кәүҙәһен биленә тиклем ергә күмеп, ике ҡулын ике яҡҡа һуҙҙырып ҡуйығыҙ. Баш осона таҡта ҡағып, унда: «Ошо ҡатынға көлмәй киткән кешенең ауыҙы ҡыйшая»,— тип яҙып ҡуйығыҙ! Мин игеҙ балаларҙы яратмайым»,— тип яҙылған була хатта.

Хатты оло ҡатын йәш ҡатынға ла уҡыта. Йәш ҡатын быға бик ныҡ ҡайғыра. Байҙың яҡындары хатта яҙылғанса эшләйҙәр.

Биш көндән бай ҡайтып төшә. Ул балаларҙы күрергә бик ашыға. Йәш ҡатыны менән балаларының иҫәнлеге тураһында оло ҡатындан һораша. Оло ҡатын теге ялған хатты уға алып бирә. Бай аптырап ҡала:

— Мин ундай хат яҙманым,— ти, бөтөнләй гәжәпләнә.

Оло ҡатын күҙ йәше менән:

— Эт башлы, һыйыр аяҡлы балалар тыуҙы, һиңә гәрлек булыр ине,— тип, байҙы ышандыра.

Көн артынан көн үтә. Бай оло ҡатыны менән тыныс ҡына йәшәп ята. Тик йыш ҡына:

— Мин балалар төҫө күрә алмайым икән,— тип зарланып ала.

— Яҙмышың шулайҙыр инде,— ти ҡатыны.

Ә теге мискә көндәр, төндәр, йылдар буйы диңгеҙ буйлап аға, ти. Диңгеҙ яры буйында әбейе менән генә бер балыҡсы ҡарт йәшәгән була. Уларҙың да балалары юҡ, ти. Бер көндө иртә менән бабай мурҙа ҡарарға бара. Барһа, ни күҙе менән күрһен, мурҙа янында бер мискә ята. Ул мискәне тәгәрәтеп алып ҡайта. Асып ҡараһалар, мискәлә ике тере бала ята. Әбей менән бабай бик һөйөнәләр. Балаларҙы бик яҡшы итеп тәрбиәләйҙәр.

Был балалар ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп ҙураялар. Әбей менән бабайҙы атай-әсәй тип беләләр. Балалар егет менән ҡыҙ булып үҫеп етте тигәндә, әбей ауырып үлеп китә.

Егет бабайҙан ат һорай башлай, мин берәй төрлө һөнәргә өйрәнәйем, ти. Бабай ат алып бирергә риза була. Баҙарға бәралар. Унан бетле ябаға алып ҡайталар. Егет уны тәрбиәләп үҫтерә. Бабай ябағаның ҙурайыуын күреп ғәжәпләнә. Бабай, алты ботло ауырлығындағы эйәрҙе һалып, малайға атланырға ҡуша. Ҡарап тора ла бабай:

— Әле айғырың менән һунарға йөрөй алмаҫһың, тағы ла тәрбиәләй бир,— ти.

Бер нисә ай ваҡыт үткәс, бабай:

— Ун ике бот ауырлығындағы киҫтәнемде алып, эйәрең артына таҡ, ти.

Егет, киҫтәнде тағып, атына менеп йөрөй. Бабай:

— Һунарға йөрөргә мөмкин инде,— ти.

Егет бабай менән һунарға йөрөй башлай. Берҙәнбер көндө бабай ауырып китә. Ныҡлап ауырый башлағас, бабай былай ти:

— Һеҙ ҡәҙерле кешенең балалары булғанһығыҙ, һеҙҙе яуыз кеше һыуға ағыҙған. Хәҙер үҫеп еттегеҙ, берберегеҙҙе тыңлап йәшәгеҙ ти, йәнә ҡыҙға ҡарап: — Ағайың һунарға йөрөгәндә, һинең янңа ят кешеләр килер, һин уларҙың кем икәнлеген белмәйенсә ишек асма. Тәҙрә аша һөйләш. Мин әжәл түшәгенә ятҡанмын, һеҙ минең әйткәнемде тыңлағыҙ! — тип ҡуя.

Бабай үлә, уны хөрмәтләп, әбей ҡәбере янына күмәләр. Ҡыҙ менән егет икәүҙән-икәү көн итә башлайҙар. Ҡыҙ өй эштәре менән була, егет һунарға йөрөй, төрлө йәнлектәр алып ҡайта, шуның менән тамаҡ аҫрайҙар.

Бер көндө егет һунарҙа йөрөп ҡайтып килһә:

— Ҡотҡарығыҙ! Үлтерәләр!— тигән тауыш ишетә. Тауыш сыҡҡан яҡҡа барһа, бөтә төр йыртҡыстар бик яҡшы кейенгән бер кешене уртаға алғандар ҙа йолҡ-ҡолап ташларға әҙерләнәләр. Егет, быны күреп, киҫтәне менән һуғып, бер нисә йәнлекте үлтерә, ҡалғандары ҡаса. Шулай итеп, теге кешене үлемдән ҡотҡара. Теге кеше был егеткә рәхмәттәр уҡып ҡайтып китә. Ул — егеттең атаһы була.

Бай ҡайтҡас, ҡатынына бер батыр егетте күреүе, уның ун һигеҙ йәштәр самаһында булыуын, үҙенә төҫө яғынан оҡшауын һөйләй. Оло ҡатын аптырап ҡала, бер ни ҙә өндәшмәй ултыра ла кендек әбейгә китә.

— Әгәр улар тере булһа, беҙгә йәшәү булмаясаҡ,— ти кендек әбей. Хәҙер былар балаларҙы юҡ итеү әмәлен эҙләй башлайҙар.

Әбей диңгеҙ буйында балыҡсы ҡарт йәшәгәнен иҫкә төшөрә. Моғайын, шул ҡарт мискәне тотҡандыр, тип, шунда китә.

Әбей ҡыҙ янына килә, ишекте тартып ҡарай. Ҡыҙыҡай асмай. Тәҙрәнән генә һөйләшә.

— Ошо бәләкәй генә өйҙә икәүҙән-икәү йәшәйһегеҙ икән! Ағайың бар икән, ул ҡайтҡас: «Алма ағасы алып килеп ултыртайыҡ!» — тип әйт. Алма ағасы ҡайҙа барлығын мин өйрәтермен. Ул бейек тау башында. Шунан барып алырға кәрәк,— тигән була әбей.

Әбей китә. Егет ҡайтып төшә. Ағаһы ҡайтҡас, һеңлеһе әбейҙең һүҙен һөйләп бирә. Ағаһы алма ағасын барып алырға риза була. Атын менеп, киҫтәнен алып, егет юлға сыға. Бара торғас, ат телгә килә:

— Егет, беҙ һинең менән бик ҡурҡыныс сәфәр сыҡтыҡ. Алма баҡсаһының ҡоймаһы бик бейек. Минең уң яҡҡа һуҡһаң, һул яҡтан ҡан килеп сығыр. Мин баҡсаға төшөү менән, алма ағасын өҙөп ал. Мин икенсе яҡтан һикереп сығырмын, ти.

Егет шулай эшләй. Быларҙы баҡса хужалары баҫтыралар, тота алмайҙар. Егет алмағасты ултыртып баҡса яһай. Баҡсала алмалар өлгөрә.

Егет көндә һунарға йөрөй, ҡыҙ баҡсала эшләй.

Берҙән-бер көн теге әбей тағы килә. Быларҙың иҫән ҡалыуына аптырап ҡала. Хәҙер икенсе эшен эшләмәк була.

— Ҡыҙым, баҡсаң булған, гармун алһаң, һиңә тағы күңеллерәк булыр. Бик йыраҡта, ут эсендә үҙенән-үҙе уйнай торған ғармун бар, шуны ағайыңдан килтерт,— ти әбей.

Ағаһы һунарҙан ҡайтҡас, ҡыҙыҡай әбейҙең һүҙҙә-

рен һөйләп бирә. Ағаһы, атына атланып, гармун алырға китә. Көндәр буйы бара торғас, уға аҡ һаҡаллы бабай осрай. Иҫәнләшәләр. Бабайҙың ҡулында ҡамсы, ти. Бабай:

— Улым, мин ҡартайғанмын инде, ошо ҡамсы миңә бик ныҡ файҙа итте, һин хәтәр юлға сыҡҡанһың, һиңә лә ул һәр ваҡыт ярҙам итер,— тип, ҡамсыны бүләк итеп бирә.— Был ҡамсы менән бер һуҡһаң, кеше, хайуан үлә, өс һуҡһаң терелә,— ти.

Егет ҡамсыны алып, үҙенең киҫтәнен бабайға бирә. Бабай үҙ юлына, егет үҙ юлына китә. Егет был бер ҡарыш ҡамсының кешене үлтереп терелтеүенә аптырай. «Дөрөҫ түгелдер, бабай мине алдағандыр»,— тип, бабай артынан барып етә лә уға бер һуға. Бабай көлгә әйләнә. Икенсе һуҡһа көл йыйылып, кеше барлыҡҡа килә. Өсөнсө һуҡһа, бабай терелә. Бабай терелгәс:

— Улым, бик зирәк икәнһең, ҡамсының көсөн һынап ҡараның. Шулай кәрәк. Мин үҙем бер ваҡытта ла кешене алдаманым, һин дә алдама, алданма ла. Киҫтәнең дә үҙеңә булһын,— тип, киҫтәнен бирә лә алға китә.

Егет тә юлын дауам итә. Тау артылып, тауҙан төшә башлай. Шул ваҡыт ат телгә килә:

— Мин ут эсенә һикереп төшәм, һин гармундың ҡайышына һул ҡулыңды тығып өлгөр, мин һикереп сығып та китермен,— ти.

Егет шулай эшләй. Быларҙы арттан ут баҫтыра. Ут аттың арт һанына тоҡана. Егет быны һиҙеп, алға һикереп төшә. Ут һүнә, ат та янып бөтә. Гармун менән егет ҡотолоп ҡала. Егет ҡамсы менән көлгә һуҡһа, ат барлыҡҡа килә, тағы бер һуҡһа, ат кешнәп ебәрә. Егет атына менеп ҡайтып китә. Гармун баҡсала күңелле итеп уйнай башлай.

Егет тағы һунарға йөрөй башлай. Быларҙың хәлен белергә теге әбей тағы килә. Килһә, аптырап китә. Улар иҫәндәр. Әбей аҙаҡҡы эшен эшләргә тотона.

— Ҡыҙым, алма баҡсаһы ла, гармун да булған. Бик йыраҡта, диңгеҙ аръяғында, дейеү ҡулында бер ике матур ҡыҙ бар. Шуны ағайың үҙенә кәләшлеккә барып алһын. Һиңә, еңгә булғас, йәшәүе тағы ла күңеллерәк булыр,— ти.— Ағайың килгәс, ошо һүҙҙе илап әйт, ул тыңлар,— ти.

Егет ҡайтып төшә. Ҡыҙыҡай әбейҙең һүҙен ағаһына әйтә. Егет риза була.

— Үлһәм үлермен, һинең һүҙеңде тыңлармын, беҙ бер-беребеҙҙе тыңларға тейешбеҙ,— ти ағаһы.

Егет китә. Бара торғас, ер ситенә етә. Шул ваҡыт аты телгә килә:

— Егет, һин бик хәтәр эш башҡарырға килдең. Ул ҡыҙ өсөн күп егеттәр ғүмерҙәрен биргән. Бында һинең хәйләкәрлегең кәрәк. Беҙ бик күп ер килдек. Ҡасып ҡотолоу өсөн минең етеҙлек кәрәк. Мин уны эшләрмен. Хәҙер һин һандуғас һүрәтенә ин, мин дейеүҙең айғыры булам. Мин кешнәп дейеүҙең һарайы янына барып торормон, һин минең ялға ҡун. Дейеү, айғырын тотам тип, һарайҙан сығыр, шул ваҡытта һин һарайға инеп ҡал. Һине дейеү ҡыуырға уйлар, ә ҡыҙ ҡыуҙырмаç,— ти.

Былар нисек һөйләшелгән, шулай эшләйҙәр. Ат кешнәүенә дейеү килеп сыға. Ҡош эскә инеп ҡала. Дейеү, айғырын менеп, һунарға йөрөр булған икән. Дейеү һунарға китә, ҡыҙ һарайҙа тороп ҡала. Шул ваҡыт ҡыҙ:

— Әй, һандуғас, һин ирекле ҡошһоң, ә мин тотҡонда йәшәйем. Кеше һүрәтенә инеп, минең алға ҡунһаңсы?— ти.

Ҡош егет һүрәтенә инә лә үҙенең уны алырға килеүен әйтә. Ҡыҙыҡай риза була.

— Бына тиҙҙән дейеү алты көнлөк һунарға сығып китер, шул ваҡытта беҙ икәү ҡасырбыҙ. Хәҙер дейеү ҡайтып төшөр. Һин егет энәгә әүерел, мин һине бүрәнә ярығына ҡаҙап ҡуйырмын,— ти.

Дейеү ҡайтып төшә лә ҡыҙға:

— Ниндәй әҙәм килде? Бында әҙәм еçе сыға. Мин уны тапһам, хәҙер үк юҡ итәм. Әйт, ул әҙәм кем ул! Әллә донъяла йәшәүҙән туйғанмы?— ти.

Ҡыҙ:

— Юҡ, дейеү, бында бер кем дә килмәне. Һин яңылышаһың. Үҙең һунарҙа кеше ашап йөрөп ҡайтаһың да, шул еç һинең үҙеңдән сыға. Ҡайҙа, ауыҙыңды ас, тешеңде һыҙлыҡлайым. Бына бит, тешеңә әҙәм ҡулы, әҙәм аяғы ҡыçылған. Шул еç үҙеңдән килә,— ти.

— Ә, шулайҙыр,— тип, дейеү тынысланып ҡуя. Дейеү алты көнлөк юлға сығып китә. Егет энә һүрәтенән егет һүрәтенә инә. Улар, дейеү киткәс тә, айғырҙы саҡырып алалар, егет үҙ айғырына, ҡыҙ, үҙе менеп йөрөй торған атҡа атланып, дейеү һаҡсылары йоҡоға талғас, дейеү донъяһын ҡалдырып, китеп тә баралар.

Алтынсы көндө дейеү ҡайтып төшә. Ҡыҙ янына инһә, һарайҙа ҡыҙ юҡ, ҡараусыларҙы саҡырып һорай, улар бер ни белмәйҙәр. Дейеү ҡарауылсыларын төрлө яҡҡа ҡыҙҙы эҙләргә сығарып ебәрә. Үҙе лә, атына атланып, ғәйрәтләнеп, сығып китә. Бара торғас, дейеү

алда ике ҡарасҡы күреп ҡала, шуға ҡарай саба. Егет менән ҡыҙ дейеүҙең килеүен һиҙеп ҡалалар ҙа, аттан һикереп төшөп, аттарҙы ҡыуып ебәреп, егет күл һүрәтенә, ҡыҙ йөҙөп йөрөүсе өйрәк һүрәтенә инә. Дейеү йән-фарман сабып килә лә, күл эргәһендә атынан төшөп, күлдән һыу эсергә тотона, күлдең һыуы кәмей башлай. Дейеү, ҡомһоҙланып эсә торғас, сәсәп китә лә эсеүҙән туҡтай. Уның күңеле болғана башлай, алға барырға хәле ҡалмай, ҡыҙҙы эҙләүҙән туҡтап, кире ҡайтып китә. Ҡайтһа, һарайҙа бер кем дә юҡ, ти. Шул китеүҙән ҡарауылсылар ҙа кире әйләнеп ҡайтмағандар, ти. Улар ҙа әҙәм затынан булып, дейеү тормошонда яфаланған икән.

Шулай итеп, дейеү яңғыҙлыҡта йәшәп, ауырыуҙан яфаланып, хәлдән тайып үлә.

Дейеү киткәс, егет менән ҡыҙ, үҙ һүрәттәренә инеп, атҡа атланып, алға китәләр. Егерме алты көн тигәндә ҡыҙ янына ҡайтып етәләр. Һеңлеһе ағаһының иҫәнһау ҡайтыуына, еңгә алып ҡайтыуына бик шатлана.

Егет алып ҡайтҡан ҡыҙ төҫкә матур, зифа буйлы, баҫалҡы холоҡло була. Йәшкә егеттән аҙ ғына олораҡ, ти. Шулай ҙа бер-береһен бик оҡшаттылар, ти, былар. Еңгә менән ҡыҙ емеш үҫтерәләр, гармун уйнап тора, егет һунарға йөрөй. Яңы йорт һалалар, ҡош-ҡорт үрсетәләр, бик ныҡ байығалар.

Бер саҡ егет һунарҙан ҡайтып килгәндә:

— Ҡотҡарығыҙ! Үлтерәләр,— тигән ҡыҙғаныс тауыш ишетә. Тауыш сыҡҡан яҡҡа барһа, әлеге кешене осрата, был юлы ла уны йәнлектәр уратып алған була. Егет ҡотҡарғас, бай, уға рәхмәттәр уҡып, уны үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра. Егет риза булмай.

— Тәүҙә беҙгә барайыҡ,— ти.

Бай килһә, ни күҙе менән күрһен, бында шундай яҡшы тормош, төрлө үҫемлектәр, йорт хайуандары, ти. Байҙың төрлө ҡоштарҙың һайрауына иҫе китә. Егет уны бер нисә көн ҡунаҡ итә. Шунан һуң бай, быларҙы үҙҙәренә саҡырып, юл өйрәтеп, ҡайтып китә. Килен байға дүртәүләп ҡунаҡҡа барасаҡтарын әйтеп ҡала. Егет тәүҙә: беҙ бит өсәү, кем икән дүртенсебеҙ, тип аптырап ҡала. Шунан үҙе эстән генә, беҙҙең балабыҙ була икән, тип уйлап ҡуя.

Былар ҡунаҡҡа китергә йыйыналар. Ике ат егәләр. Килен егеткә тимер көрәк, ҡатын-ҡыҙҙар кейеме алырға ҡуша. Егет:

— Ни өсөн?— тип һорағас:

— Барғас, күрерһең,— тип яуап бирә.

Килен менән егет бер атҡа, ҡыҙ икенсе атҡа ултырып китәләр. Бара торғас, ете юл сатына килеп сығалар. Унда ҡатын кәүҙәһе күргәс тә егет көлә башлай. Ә ҡатыны уға көлмәҫкә ҡуша. Атты туҡтаттыра ла, егеткә көрәк тоттороп, ҡатынды ҡаҙып алырға ҡуша. Ҡаҙып алғас, иренән ҡамсы менән өс тапҡыр һуҡтырта. Ҡатын терелә. Уны кейендереп, атҡа ултыртып алып китәләр. Был ҡатындың төҫө үҙгәргән, йәмһеҙләнгән, ҡайғылы хәлгә әйләнгән, ти. Ул һөйләшмәҫ булған, ти.

Былар алға китәләр. Шул ваҡытта килен:

— Егет, беҙ барған ерҙә кешеләр бик күп булыр, һинән бик күп нәмә һорарҙар, күп нәмә һөйләтергә теләрҙәр, һинең батырлыҡтарыңды белергә тырышырҙар. Шул ваҡытта һин: «Минең ҡатыным миңә ҡарағанда күберәк белә, башта унан һөйләтәйек», тип әйтерһең, ти.

Егет риза була.

Бай йортона барып төшәләр. Бик күп кешеләр уларҙы ҡаршы ала. Мәжлес башлана. Бөтә халыҡ егеттән үҙенең күргәндәрен һөйләүҙе һорай. Егет ҡатыны өйрәткәнсә әйтә:

— Ана ҡатыным һөйләһен, ул күберәк белә,— ти.

— Һөйләһен, һөйләһен,— тигәс, ҡатын тәүҙә һорай:

— Минең һүҙҙәрем дөрөҫ булмаһа, шул урында мин үҙем таш кеүек ҡатып ҡалырмын; һеҙ минең башымды киҫеп ташларһығыҙ. Әгәр һүҙҙәрем дөрөҫ булһа, ошонда ултырыусы ике ҡатындың күҙҙәре сығыр, улар ғүмер буйы һуҡыр булып ҡалыр. Һеҙ ризамы шуға?— ти.

Бөтәһе лә ризалаша. Килен егет менән ҡыҙҙың, уларҙың әсәһенең яҙмышы тураһында һөйләп бирә. Егет менән ҡыҙҙы иҙән уртаһына баҫтыра ла әсәләрен тәүге хәлгә ҡайтара. Шул ваҡытта әсә телгә килә:

— Был яуызлыҡтарҙың бөтәһе лә дөрөҫ,— ти ҙә балаларының ҡосағына ташлана, уларҙы ҡосаҡлап, шатлығынан илай.

Ә яуыз оло ҡатын менән ҡомһоҙ кендек әбейҙең күҙҙәре атылып килеп сыға. Улар, илап, үҙ яуызлыҡтарын һөйләп бирәләр. Кире элекке хәлдәренә ҡайтарыуҙы үтенәләр. Килен риза булмай.

— Һеҙ үҙ ҡулдарығыҙ менән эшләгән яуызлыҡты үҙ елкәләрегеҙ менән күтәрерһегеҙ, ғүмер буйы яҡты донъяны күрмәҫһегеҙ,— ти.

Бөтә халыҡ был эшкә аптырап ҡала. Бай ҙа, был яуызлыҡтың серенә төшөнөп, иҫе-аҡылы китеп ултыра.

— Был батыр егет минең улыммы? Өнөммө был, төшөммө?— тип, егетте ҡосаҡлап ала.

Шулай итеп, егет, килен, ҡыҙ, атаһы, әсәһе, бөтә байлыҡты кешегә таратып биреп, егет донъяһына ҡайтып китәләр.

Әле лә улар донъя көтөп, матур ғына йәшәп яталар, ти.

## КИЛТӘЙ МӘРГӘН МЕНӘН УНЫҢ ҠАРЫНДАШЫ

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Килтәй Мәргән тигән бер һунарсы. Уның булат ҡылысы менән һәпәләк эте булған. Ата-әсәһе күптән донъя ҡуйғандар. Килтәй Мәргән ҡулында ҡарындашы тәрбиәләнгән.

Килтәй Мәргән бер көн һунарға киткән. Китер алдынан:

— Һылыу, бесәйеңде һуҡма, бер-бер хәл булып ҡуйыуы бар,— тип, ҡарындашына иҫкәртеп киткән.

Ҡарындашы ағаһына ашарға әҙерләп ҡуйыр булған, ти. Ҡарындашы, нимәгәлер асыуланып, бесәйен һуҡҡан, ти. Бесәй асыуланып усаҡ эргәһендә ултырған ҡомғанды ауҙарған. Ҡомған тулы һыу булған. Һыу түгелеп, усаҡтағы утты һүндергән. Ҡыҙ ашарға әҙерләйем тиһә, уты һүнгән. Ул бик ҡаты ҡайғырған. Шунан тирә-яҡта төтөн сыҡҡан ер күренмәйме икән тип, өйҙөң башына менеп ҡараған. Алыҫ бер ерҙә төтөн сыҡҡан төҫлө күренгән. Ҡыҙ, һоҫҡо тотоп, төтөн сыҡҡан яҡҡа ҡарай китте, ти. Китеп барһа, бер бәләкәй генә өйгә тап булды, ти. Өйҙөң мөрйәһенән төтөнө сығып торған. Ҡыҙ өйгә ингән. Урындыҡта сәстәре туҙған әбей ултыра, ти. Ҡыҙ ҡурҡып ҡына һаулыҡ һорашты, ти.

— Эй балам, ҡайҙан килеп сыҡтың? Ниндәй нужалар һине бында килтерҙе?— тип һораны, ти, әбей.

— Инәй, ут эҙләп килгәйнем. Ут бирмәҫһеңме икән?

— Ярар, балам. Мин һиңә ут бирәм. Һин ҡайтҡанда, юлыңа ошо көлдө һибеп, ошо торонбаштарҙы ҡаҙап ҡайтырһың. Мин һиңә иртәгә башымды ҡарата барырмын,— тип ҡыҙға ут, бер күнәк көл менән торонбаштар биреп ҡайтарҙы, ти, әбей. Ҡыҙ юл буйына көл һибеп, торонбаштарҙы ҡаҙап ҡайтты, ти. Ҡайтҡас та ағаһының тамағына әҙерләп ҡуйҙы, ти. Ағаһы һунарҙан ҡайтҡас, ҡарындашы әбей тураһында бер ни ҙә әйтмәне, ти.

Ағаһы иртән тороп тағы ла һунарға киткән. Ул китеп, бер аҙ торғас, теге әбей көйләй-көйләй килә, ти:

Килтәй Мәргән өйҙәме?
Булат ҡылысы ҡындамы?
Һәпәләк эте бәйҙәме?

Ҡыҙ ҡаршы сығып:

Килтәй Мәргән өйҙә юҡ,
Булат ҡылысы ҡында юҡ,
Һәпәләк эте бәйҙә юҡ,—

тип таҡмаҡлаған да:

— Инәйем килгән икән. Әйҙүк, рәхим итеп, түрҙән уҙ. Самауыр ҡуяйым,— тип әбейҙе өйгә алып инде, ти. Шунан әбей:

— Ярар, балам. Самауыр ҡуйып ыҙаланма. Ваҡытым да юҡ. Башымды ғына ҡаратам да ҡайтам,— тип, башын ҡыҙҙың тубығына һалған да башын ҡарата башлаған. Ул, башын ҡаратам тип, һиҙҙермәй генә ҡыҙҙың елек майын һурған. Һурып-һурып, Килтәй Мәргән һунарҙан ҡайтмаҫ борон ҡайтып киткән. Ҡыҙ шулай көн һайын әбейҙең башын ҡараған, әбей уның елек майын һурған. Ҡыҙ көндән-көн кибә, һарғая икән.

Берҙән-бер көн ағаһы:

— Һылыу, ни эшләп былай йөҙөң бойоҡ? Үҙең бик ябығып киттең? — тип һораған. Ҡыҙ:

— Әлләә, үҙем дә белмәйем. Аптырайым инде, бер көндө бесәйемә һуҡҡайным. Бесәй усаҡ алдында ултырған ҡомғанды түгеп, усаҡтың утын һүндерҙе. Шунан мин, берәй ерҙә төтөн сыҡмаймы икән тип, өй башына менеп ҡараным. Бер ерҙә төтөн сыҡҡан төҫлө күренгәнгә барһам, бер әбей ултыра. Ул миңә ут бирҙе лә, көн һайын башын ҡаратып, тамам йонсота. Хәҙер хәлем бөтә. Туйғансы ла ашайым,— тип ағаһына зарланған.

— Улайһа, мин ул әбейҙең кәрәген бирәйем әле. Иртәгә мин һунарға бармам, йәшенеп ятырмын. Һин мин өйҙә юҡ тип таҡмаҡларһың,— тип, ҡарындашына әйтеп ҡуйған Килтәй Мәргән.

Икенсе көндө Килтәй Мәргән мейес артына инеп йәшенде, ти. Ул һунарға китә торған ваҡыты етеп, аҙыраҡ торғас та теге әбей:

Килтәй Мәргән өйҙәме?
Булат ҡылысы ҡындамы?
Һәпәләк эте бәйҙәме? —

тип, таҡмаҡлай-таҡмаҡлай килә ята, ти. Уға ҡыҙ:

Килтәй Мәргән өйҙә юҡ,
Булат ҡылысы ҡында юҡ,
Һәпәләк эте бәйҙә юҡ,—

тип таҡмаҡлап яуап ҡайтарҙы, ти.

Шунан теге әбей өйгә инәм тигәндә генә, Килтәй Мәргән йәшенгән еренән уҡ кеүек атылып килеп сыҡты ла:

— Һинме, убырлы ҡарсыҡ, минең ҡарындашымды ҡоро һөйәккә ҡалдырған? Мә, кәрәгеңде ал! — тип, ҡылысы менән тегенең башын сабып өҙҙө, ти. Өҙөлгән баш ҡапыл өс башлы аждаһаға әүерелде лә ҡуйҙы, ти. Баҡтыниһәң, был мәскәй әбей булған икән. Егет менән аджаһа алыша башлағандар. Эй алышалар, эй алышалар, ти, былар. Килтәй Мәргән аждаһаның ике башын өҙә сапты, ти. Шунан, өсөнсө башын урталайға сабам тип, бик ныҡ сапҡан икән, ҡылыс аждаһаның һөйәгенә ҡаҡлығып китеп, Килтәй Мәргәндең башына килеп тейҙе, ти. Былар икеһе лә бер юлы тәгәрәп киткәндәр.

Ҡарындашы йүгереп килде лә иҫәңгерәп ятҡан аждаһаның ҡалған башын өҙә сапты, ти. Шунан ул аждаһаны бик ҙур усаҡ яғып яндырған. Ә ағаһының үлек кәүҙәһен яҡындағы бер ағас ҡыуышына бикләп ҡуйған. Ҡыҙ Килтәй Мәргәндең кейемен кейгән, булат ҡылысын таҡҡан, уҡ-һаҙағын алған да, күк дүнәненә атланып, Килтәй Мәргәнде терелтергә әмәл эҙләп сығып киткән. Ә һәпәләк этен Килтәй Мәргән менән өйҙө һаҡларға ҡалдырған.

Килтәй Мәргәндең ҡарындашы китеп бара, китеп бара, ти, бара торғас, бер ҡалаға килеп етте, ти. Бында бер батша майҙан ҡорған икән. Уның шарты — балдаҡ аша уҡ менән атыу, ти. Атҡан кешенең уғы балдаҡ үтә сыҡмаһа, батша уның башын ҡырҡтырған; үтә сыҡһа, батша үҙенең ҡыҙы менән көмөш таяғын бирә икән. Батша ҡыҙы бик һылыу, ти. Ә таяғы — тылсымлы, үлгәндәргә йән бирә, ти.

Ҡыҙ менән көмөш таяҡты алыу өсөн күптәр бәхеттәрен һынап ҡарағандар. Тик балдаҡ үтә ата алған кеше юҡ икән. Бик күп кеше башһыҙ ҡалған. Ҡыҙ майҙан эсенә үткән дә: «Мин дә бәхетемде һынап ҡарайым әле, ни булһа ла булыр»,— тип сиратҡа баҫҡан. Сират килеп еткәс, уҡ-һаҙағын алып, төҙәп атып та ебәрҙе, ти. Уҡ, һыҙғырып барып, балдаҡтың ҡап уртаһынан үтеп, уны эләктереп алып китеп ағасҡа барып ҡаҙалған. Халыҡ шатланып ҡул сабырға тотонған.

Батша һүҙендә торған. Ул ҡыҙын, көмөш таяғын, өҫтәп бер аҙ байлыҡ та бирҙе, ти. Бик ҙур туй булған. Өс көн үтеп киткән. Килтәй Мәргәндең ҡарындашы:

— Батша ҡыҙын ҡайтҡанда алып ҡайтырмын, хәҙергә бараһы ерем бар,— тип, ары киткән.

Китеп бара, китеп бара, ти, был. Бара торғас, икенсе бер батшалыҡҡа барып сыҡҡан. Бында ла батшаның хәбәрселәре:

— Батша майҙан ҡора. Кем дә кем балдаҡ үтә уҡ менән ата ала, шуға батша ҡыҙы менән баҡыр таяғын бирә. Кем дә кем үтә ата алмай, башын өҙҙөртә,— тип, һөрән һалып йөрөйҙәр, ти. Был батшаның да ҡыҙы бик матур, ти. Ә баҡыр таяҡ ябай таяҡ түгел, тылсымлы, ти, ауырыу йөрәктәрҙе төҙәлтә, ти.

Килтәй Мәргәндең ҡарындашы бында ла бәхетен һынап ҡарамаҡсы булған. Ул балдаҡҡа тоҫҡап атып ебәргән. Уҡ зыңлап осоп, балдаҡты эләктереп, батша һарайына барып ҡаҙалған. Халыҡ шатланып ҡысҡыра башлаған. Батша һүҙендә торған. Ул еңеүсегә үҙенең ҡыҙын, баҡыр таяғын биргән. Туй яһаған. Туй өс көн, өс төн барҙы, ти. Дүртенсе көндө Килтәй Мәргәндең ҡарындашы:

— Ҡыҙҙы ҡайтышлай алып китермен, хәҙергә бараһы ерем бар,— тип юлға сыҡҡан.

Китеп барһа, тағы бер батшалыҡҡа килеп етте, ти. Бында ла батшаның хәбәрселәре:

— Кем дә кем балдаҡ үтә ата ала, батша шул кешегә ҡыҙы менән еҙ таяғын бирә. Кем дә кем атып та үткәрә алмай, башын ҡырҡтыра,— тип һөрән һалалар икән. Батшаның ҡыҙы бик сибәр икән, ә таяғы ауырыуҙарҙы шәбәйтә, хәлһеҙҙәрҙе көсәйтә икән. Ҡыҙ аптырап тормаған, балдаҡҡа атырға булған. Батшаның вәзирҙәре менән байҙар бынан көлә башлағандар, ә ярлы халыҡ быны ярышта ҡатнашмаҫҡа өндәгән.

— Бик күптәр ҡыҙ менән таяҡ өсөн ғүмерҙәрен әрәм иттеләр,— тигәндәр.

Ҡыҙ балдаҡҡа тоҫҡап атып ебәргән. Уҡ, балдаҡтың ҡап уртаһына тейеп, эләктереп алып китеп, батша һарайының ҡапҡаһына барып ҡаҙалған. Халыҡ шатлығынан ҡысҡырырға, ҡул сабырға тотондо, ти. Батша һүҙендә торған. Ул ҡыҙы менән таяғын биргән дә туй яһап ебәргән. Туй өс көн, өс төн барған. Килтәй Мәргәндең ҡарындашы ҡайтырға булған. Батша, ҡыҙын яҡшы аттарға ултыртып, бик күп байлыҡ биреп оҙатҡан. Килтәй Мәргәндең ҡарындашы, күк дүнәнде менеп, алдан барған. Ул юлда теге ике ҡыҙҙы ла алып киткән. Был ҡыҙҙарҙың аталары ла бик күп байлыҡ тейәтеп ебәрҙе, ти. Ҡайтып етер саҡта Килтәй Мәргәндең ҡарындашы:

— Һеҙ яйлап ҡайта тороғоҙ. Мин алдан ҡайта һалып, ҡарындашыма иҫкәртәйем, әҙерләнә торһон,— тип ҡайтып киткән. Ҡайтып еткәс тә Килтәй Мәргәнде ағас ҡыуышынан алған, өйгә алып инеп, урындыҡҡа йөҙ түбән һалған, кейендергән, булат ҡылысын таҡҡан. Үҙе элекке кейемен ташлап, үҙенең кейемдәрен кейеп, өйөн йыйыштырып, аш-һыу әҙерләргә керешкән.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, теге ҡыҙҙар килеп төштө, ти. Килтәй Мәргәндең ҡарындашы:

— Еңгәләрем килгән икән, иҫән-һау килеп еттегеҙме? Әйҙүк, рәхим итегеҙ! — тип ҡаршы сығып алды, ти.

Иң алдан көмөш таяҡлы ҡыҙ таяғына таянып өйгә ингән. Инһә, Килтәй Мәргән урындыҡта һуҙылып төшөп йөҙ түбән ята, ти. Ҡыҙ быны йоҡлап ята икән тип уйлаған да:

— Өс бисә алдым тип, һуҙылып төшөп тороп ятаһыңмы? — тип, көмөш таяғы менән төртөп алған. Килтәй Мәргән ҡыбырлай биреп ҡуйған, ти. Шунан баҡыр таяҡҡа таянған икенсе ҡыҙ килеп инде, ти. Уныһы ла:

— Һай-һай, өс бисә алдым тигәс тә, ҡайһылайыраҡ ята,— тип, таяғы менән төрткәйне, Килтәй Мәргән көләмһерәп ҡуйҙы, ти. Иң арттан еҙ таяғын таянып, өсөнсө ҡыҙ килеп инде, ти. Был да:

— Һин нимә, өс бисә алдым тип маһайып ятаһыңмы? Ҡара һин уны, исмаһам, ҡаршы ла сыҡмай, көлөп ятҡан була,— тип, еҙ таяғы менән төрткәйне, Килтәй Мәргән:

— Ах, күп йоҡлап киткәнмен,— тип, һикереп килеп торған, ти. Ҡарындашына ул шул тиклем оҡшаш булған. Шуға күрә ҡыҙҙар бер нәмә лә һиҙмәнеләр, ти.

Ҡарындашы Килтәй Мәргәнде ситкәрәк алып китеп, бөтәһен дә аңлатып, һөйләп бирҙе, ти. Килтәй Мәргән ҡыҙҙарҙы оҡшатҡан, өсөһөн дә бисә итеп алған. Былар татыу ғына донъя көтә башланылар, ти.

Берҙән-бер көндө былар билмән бешергәндәр. Бер бисәһе кемгә сығыр икән тип, билмәнгә көмөш балдаҡ һалып ебәргән. Ашап ултырғанда теге балдаҡ Килтәй Мәргәндең ҡарындашына сыҡҡан. Ул быны бүтәндәргә һиҙҙермәгән, үҙе уйға ҡалған: «Әй, был еңгәләрем мине күпһенһәләр икән. Ҡуй, быларҙың тормоштарын боҙмайым, үҙ көнөмдө үҙем күрәйем»,— тип уйлаған да сығып киткән, ти.

Китеп бара, китеп бара, ти, был. Бара торғас, күл буйында кер йыуып ултырған бер әбейҙе күргән. Әбей эргәһенә килгән, һаулыҡ һорашҡан. Әбей:

— Былай бер үҙең генә ҡайҙа юл тоттоң, балам? — тип һораған.

— Инәй, мин бер ҡайҙа ла бармайым. Ҡыҙһыҙға ҡыҙ, улһыҙға ул, киленһеҙгә килен булам,— тип әйтте, ти, ҡыҙ.

— Ярар, балам. Минең киленем юҡ, улыма кәләш булырһың,— тип, ҡыҙҙы алып ҡайтҡан. Әбейҙең улы матур ғына булған. Ҡыҙ ҙа, егет тә бер-береһен күреү менән яраттылар, ти. Былар өсәүләп бергә-бергә донъя көтә башланылар, ти. Оҙаҡламай уларға дүртенсе кеше ҡушылған: Килтәй Мәргәндең ҡарындашы ул тапҡан.

Ҡарындашы оҙаҡ ҡайтмағас, Килтәй Мәргән уйға ҡалды, ти.

— Ҡарындашым миңә өс бисә алып бирҙе лә әллә ҡайҙа юҡ булды, эҙләргә сығайым әле,— тип, сығып китте, ти, был. Эҙләп йөрөй торғас, ул бер өй артына ял итергә ултырҙы, ти. Өй эсендә әбей йәш бала бәүетә, үҙе:

Әүли-бәүли, әүли-бәүли,
Килтәй Мәргән ҡарындашының балаһы, бәүли.
Әүли-бәүли, әүли-бәүли.—

тип көйләй икән.

Килтәй Мәргән тыңлап ултырҙы ла инеп сәләм бирҙе, ти.

— Инәй, баяғы көйөңдө тағы бер көйлә әле? — тип үтенде, ти. Әбей тағы бер көйләгәйне, Килтәй Мәргән:

— Инәй, ул үҙе ҡайҙа һуң? — тип һораны, ти.

— Иренә ашарға алып китте. Ире анау яҡта көтөү көтә,— тип әйткәйне, Килтәй Мәргәнде бик оҙаҡ ҡунаҡ йүгерҙе, ти.

Ҡарындашы Килтәй Мәргәнде бик оҙаҡ ҡунаҡ итеп ҡайтарған. Улар, бер-береһен ҡунаҡҡа саҡырышып бик татыу, оҙаҡ ғүмер иткәндәр, ти.

## ҠАРАҒАНДА БАТША МЕНӘН ҠЫҘ БАТЫР

Ҡарағанда тигән батшаның яңғыҙ ҡыҙы була. Батша бик яуыз, кирәмәттән* ҡаты кеше була. Халыҡты бик рәнйетә. Ҡыҙы кеше йәнле булып үҫә.

Бер ваҡыт ҡыҙ ауырып китә. Батша, ҡыҙы янына килеп, хәлен һораша.

* К и р ә м ә т — ҡот осҡос бер йән эйәһе, йыртҡыс кеше.

— Хәлең нисек, балам?

— Ауыр, атай.

— Балам, ҡалай-ҡалай ауырыйһың һуң?

— Тыным ҡыҫыла, атай, йортҡа иркенселек бирер инең.

Батша, нык асыуланып:

— Әле һин атайыңа өйрәтмәксе булаһыңмы? — ти. Ауырыу ҡыҙының яңағына берҙе саба ла сығып китә.

Ҡыҙҙың иҫе китеп ятып ҡала. Иҫенә килгәс, ҡыҙ ирҙәрсә кейенеп ала ла ата йортон ташлап сығып китә. Ҡалала бер генә өйҙә ут бар, ти. Шул өйгә барып инһә, яңғыҙ ғына әбей ултыра, ти. Ҡыҙ йоҡлап сығырға һорай. Әбей кертә. Сөйҙә ҡалҡан, һуғыш ҡоралдары элеүле тора, ти. Ҡыҙ:

— Инәй, ҡоралдарҙың эйәһе ҡайҙа? — тип һорай.

— Бабай үлеп ҡалды, бер үҙем торам. Анауға ла зарымды һөйләйем, бынауға ла зарымды һөйләйем,— ти әбей.

Йоҡларға яталар. Ҡыҙ әле тегеләй, әле былай әйләнә, йоҡлай алмай. Шул ваҡыт күрше бүлмәнән ике көсөк килеп сыға. Әбей, ятҡан еренән тороп, уларҙы ашата, эсерә; уйнатып, иркәләп-һөйөп, тағы бүлмәгә бикләй. Иртәгеһен йоҡонан уянғас та ҡыҙ:

— Инәй, ниндәй көсөктәр ул, төн буйы һөйөп сыҡтың? — тип һорай. Ҡыҙ ныҡыша торғас, әбей һөйләй башлай:

— Улар көсөк түгел. Бабайым балыҡсы ине, йылға буйлап ағып килгән бер һандыҡ тапты. Шул һандыҡ эсендә ағалы-һеңлеле ике бала ятҡан. Үҫтерҙек, һигеҙтуғыҙ йәшкә еткәс, инәлеп һорап урамға сыҡҡайнылар, аҙашып, батша баҡсаһына барып ингәндәр ҙә шунда йоҡлап киткәндәр. Батша уларҙы ябып ҡуйған. Дүрт йыл үткәс, батшаның ҡыҙ балаға күҙе төшкән. Ҡыҙҙы батша айырым урында тотҡан, аҫыл кейемдәр кейҙергән, тәмле ашамлыҡтар менән генә һыйлаған. Батша һарайында бер әбей булған. Шул әбей ҡыҙҙан:

— Туғаныңды күргең киләме, балам? — тип һораған.

— Бик күрер инем дә бит, юҡ шул.

— Туғаныңды күргең килһә, ер аҫтынан юл һалдырам, тик полоңдо* йәлләмә,— тигән теге әбей.

Әбей әйткәнен эшләгән. Ҡыҙ һәр көндө ағаһы менән һөйләшкән, уға аҙыҡ-түлек килтереп торған. Батша

---

* Пол *(ф.)* — аҡса.

быны һиҙеп ҡалған да ҡыҙҙы ла, ағаһын да эткә әйләндереп, төрмәгә япҡан.

Бер көндө шулай ике күгәрсен өй артындағы ағасҡа ҡундылар ҙа һөйләшә башланылар:

— Апай, апай, был әбейҙең хәлен беләһеңме? Уның улы менән ҡыҙы төрмәлә бит,— тиҙәр.

Таң һыҙылып килер саҡта, күгәрсендәр осоп китте. Ә иртәгеһен тағы ла килеп, хәбәрләшергә тотондолар:

— Ул балаларҙы ҡотҡарып буламы?

— Күҙәтселәренә әфиүн* эсерһәң, ҡотҡарып була.

— Ә нисек уларҙы кире кешегә әйләндерергә икән һуң?

— Уларҙы ҡарауыллап торған яуыз ҡарсыҡтың ҡанын эсерһәң, кешегә әйләнәләр,— тинеләр.

Әбей ана шулай һөйләп бөтә. Әлеге ирҙәрсә кейенеп килгән батша ҡыҙы бик нык ҡолаҡ һалып тыңлай ҙа әбейгә ярҙам итергә була. Атаһының өйөнә ҡайтып, крәҫтиән ҡатындарынса кейенеп ала ла баҙарға сыға. Баҙарҙа атаһының вәзирҙәрен осрата. Тегеләр, халыҡты ыжғыртып, һалым йыйып йөрөйҙәр икән.

— Һин ниндәй ҡыҙ?

— Торор ерем юҡ.

Батшаның бер вәзире, ҡыҙҙың матурлығын күреп:

— Әйҙә, бик булмаһа беҙҙә торорһоң,— тип, ҡыҙҙы алып ҡайтып китә. Ҡайтҡас, вәзир ҡатынына:

— Тамаҡҡа килтер! — тип аҡыра. Ҡатыны ашарға ултырта. Вәзир ашап-эсеп ала ла ҡыҙға яҡынлай башлай. Ҡыҙ һикереп тора ла, вәзирҙе ҡылысы менән сабып, сыға ла китә. Был хәлде ишетеп, батша вәзирҙе үлтереүсене эҙләтә башлай. Икенсе вәзирен саҡырта ла:

— Әгәр шул ваҡыт эсендә енәйәтсене таба алмаһаң, башыңды киҫәм,— ти.

Вәзир йөрөй-йөрөй, үлтереүсенең эҙенә төшә алмай. Ҡайғырып-көйөп, баштан яҙам инде тип ултырғанда, вәзирҙең ҡыҙы:

— Атай, ни булды, ниңә шул ҡәҙәре уфтанаһың? — тип һорай.

— Эй, балам, бөгөн үлә торған көнөм минең,— тип, вәзир бөтә хәлен һөйләп бирә.

— Атай, бәгерем, ҡайғырма. Баҡсыны тап та батшаға алып бар. Баҡсы енәйәтсенең кем икәнен әйтер,— ти. Вәзир, баҡсыны эҙләп табып, батшаға алып бара. Баҡсы, батша янына барғас:

---

* Әфиүн — ҡулъяҙмала афинин.

— Вәзиреңде үҙеңдең ҡыҙың үлтергән, тәҡсир. Ышанмаһаң, үҙенән һора,— ти.

Батша шунда уҡ ҡыҙын саҡырта. Һораһа, ҡыҙ танмай:

— Мин үлтерҙем,— ти.

Шул ерҙә батша:

— Ҡайҙа теләйһең, шунда сығып кит! Бөгөндән алып һин минең ҡыҙым түгелһең! — ти.

Ҡыҙ, яҡшы ат, суҡмар, ҡылыс алып, сығып китә. Ай китә, йыл китә, аҙмы-күпме ер үтә. Алдына ҡараһа,— тауҙай кеше тора, ти.

— Был яҙыуҙы күрмәнеңме? — тип һорай теге кеше. Унда: «Алыштанмы, көрәштәнме?» — тип яҙылған икән.

— Алышыңа — алыш, көрәшеңә — көрәш! — ти ҡыҙ.

Былар алыша башлайҙар. Көн буйына алыша торғас, ҡыҙ батыр суҡмар менән тегенең башын иҙә һуғып китә лә бара. Бара-бара икенсе бер батшалыҡҡа килеп сыға. Йөрөй торғас, батшаның бер вәзире быны аш бешереүсенең ярҙамсыһы итеп ала. Ҡыҙ егеттәрсә кейенеп алған була, аш бешереүсе, быны егет тип белеп:

— Балам, миңә ул бул да ҡуй,— ти.

Ҡыҙ риза була. Бер саҡ батша вәзирҙе саҡырта.

— Ҡарағанда батшаһы менән Ҡытай батшаһы ете йыл түләү түләмәгән өсөн беҙгә һуғыш менән килергә йыйынып яталар икән, ни эшләйбеҙ! — тип һорай.

— Түләп ҡотолорға кәрәк,— тип кәңәш итә вәзир. Батша, вәзир кәңәшен тотоп, түләүҙе түләргә була. Был хәлде ҡыҙ ишетеп ҡала ла бабайҙы батшаға ебәрә:

— Түләмәһендәр. Ғәскәргә баш булып үҙем сығам. Ҡытайҙыҡы иҫәпкә бар, һанға юҡ,— ти.

Бабай батшаға барып һөйләп бирә. Батша аптырай.

— Вәзиремдән дә батыр кеше бар икән әле,— ти. Батшанан рөхсәт алғас, ҡыҙ батыр ғәскәр башында яуға сығып китә. Тәүҙә ул Ҡытай батшаһының батырҙары эргәһенә бара. Ғәскәр башында Ҡытай батшаһының улы сыҡҡан икән. Был икәү һөйләшеп китәләр. Шул ерҙә ҡыҙ батыр:

— Икәүләп Ҡарағанда батшаны ҡыуайыҡ, һин ғәскәреңде ҡайтарып ебәр,— ти.

Ҡытай батшаһының ғәскәре ҡайтып китә, ғәскәр башлығы менән ҡыҙ батыр икәүләп Ҡарағанда батшаға ҡаршы сығалар.

Ҡарағанда батша вәзиренә:

— Баҡсыңды килтер,— ти. Вәзир алып килгәс, батша баҡсынан:

— Кемдәр миңә ҡаршы килә? — тип һорай.

— Үҙеңдең ҡыҙың һиңә ҡаршы сыҡҡан,— ти баҡсы.

Ҡараганда батша, асыуынан ярылырҙай булып:

— Үҙем алам башын! — тип, ғәскәре менән ҡыҙына ҡаршы сыға.

Ҡытай батшаһының улы менән ҡыҙ иң тәүҙә Ҡараганда батшаны үлтерәләр. Ғәскәренең дә күбеһе ҡырылып бөтә.

Еңгәс, ҡыҙ һугыш кейемдәрен һалһа, Ҡытай батшаһы улының иҫе китә. Ҡыҙҙың матурлыгын күреп, уга ғашиҡ була.

— Миңә кәләш бул, өйләнешәйек,— ти. Халыҡ атаһы урынына ҡыҙын батша итеп ҡуя.

Ҡыҙ батыр батша булып алғас та атаһының яуыз ҡарсығын таптырып алып, ҡанын ике көсөккә эсерә. Ике көсөктөң береһе бынамын тигән бәһлеүән егеткә әйләнә, икенсеһе шул тиклем һылыу ҡыҙға әүерелә. Ҡыҙ батыр егеткә ғашиҡ була. Ҡытай батшаһының улына:

— Мин илемде ташлап китә алмайым, күңелем ошо егетте үҙ итте. Дуҫ йәшәйек, оҡшаһа, ошо ҡыҙҙы кәләш итеп ал,— ти. Теге ҡыҙ Ҡытай батшаһының улына ғашиҡ булып ҡарап тора икән. Ҡытай батшаһының улы был ҡыҙҙы алған, ҙур итеп туй яһағандар, туй ҡырҡ көн буйына дауам иткән.

Ҡыҙ батыр батша булып ултырғас, халыҡтың хәле яҡшырып, халыҡ үҙе көрәйеп китте, ти.

## ҺЫЛЫУБИКӘ МЕНӘН ЙӘРКӘЙ

Боронғо ваҡытта Бағдад илендә йәшәгән, ти, бер батша. Булған, ти, уның ҡатыны ла ҡыҙы — Һылыубикә. Батшаның ҡатыны донъялағы һылыуҙарҙың иң һылыуы булған. Шулай йәшәп ятҡанда, ҡатын бик ҡаты ауырып киткән, көндән-көн насарлана икән был. Шул ваҡытта ҡатын батшаға былай тигән:

— Әгәр ҙә мин үлһәм, минең кеүек һылыу ҡатын ал! Әгәр таба алмаһаң, ғүмер буйы яңғыҙ йәшәрһең,— тигән дә үлеп тә киткән, ти.

Батша, ҡатыны үлгәс, кәҙерләп ҡуя ла, ҡырҡ көн үткәс, ҡатын эҙләп сығып китә. Бөтә ерҙе әйләнеп

сыға, тик үҙенең ҡатыны кеүек һылыу ҡатын таба алмай. Таба алмай ҡайтҡас, көнө-төнө ҡайғырған, ти. Көндәрҙең бер көнөндә батша үҙенең ҡыҙы Һылыубикәне саҡырып алған да былай тигән, ти:

— Әсәйең үлгәндә: «Минең кеүек һылыу ҡатын таба алмаһаң, ғүмерлеккә ҡатынһыҙ йәшәрһең»,— тип әйткәйне. Мин бөгөнгө көнгә саҡлы әсәйең кеүек ҡатын таба алманым. Шунан мин ошондай ҡарарға килдем: мин хәҙер, ҡыҙым, һиңә өйләнәм,— тигән, ти. Быны ишеткәс, ҡыҙы иҫтән яҙып ҡолаған. Ә батша барыбер уйынан кире ҡайтмаған, һаман ныҡышҡан, ти. Һис тә булмағас, Һылыубикә риҙалыҡ биргән дә:

— Мин мунса яҡтым, мунсаға бар,— тип, атаһын мунсаға ебәргән дә, үҙе ҡасып сыҡҡан да киткән, ти. Батша мунсала ҡыҙын бик оҙаҡ көткән-көткән дә, Һылыубикә килмәгәс, мунсанан ҡайтһа, Һылыубикә өйҙә юҡ, ти.

Һылыубикә шул китеүенән китә лә китә, китә торғас, Яландол тигән батшалыҡҡа барып сығып, бер бәләкәй генә өйгә инеп ултыра. Был батшаның еткән улы бар икән. Ул һәр ваҡыт һунарҙа йөрөй, ти. Уның бик яҡшы бер эте лә бар, ти. Һәр көндө ул үҙенең этен эйәртә лә урман эсендәге ошо бәләкәй генә өй эргәһенән үтеп китә икән.

Бер көн шулай һунарҙан ҡайтып килһә, эте ошо өйҙөң тәҙрәһенә ҡарап өрә лә өрә, өрә лә өрә, ти. Һунарсы:

— Бында бер нәмә лә булмай торғайны, ниндәй йән эйәһе бар икән? — тип уйлай. Тора ла, уҡ-йәйәһен алып, өй эргәһенә килеп ҡысҡыра:

— Кем бар унда? Сыҡ, сыҡмаһаң, атып үлтерәм! — ти.

Ҡыҙ килеп сыҡҡан икән, һунарсы уның матурлығын күреп иҫтән яҙған да ҡуйған. Ҡыҙ, был хәлгә ҡурҡып, ҡасырға уйлаһа, тегенең эте быны һис ебәрмәй тотоп тик тора, ти. Шунан ни, егет, айныға, ҡыҙҙы батшалыҡҡа алып ҡайтҡан да йәшереп ҡуйған. Кис булғас, атаһына һунарҙа булған хәлдәрҙе һөйләп бирә:

— Мин бер ҡыҙ табып алып ҡайттым,— ти. Атаһы ҡыҙҙы күрһәттергә ҡуша. Егет ҡыҙҙы индерә лә:

— Мин ошо ҡыҙға өйләнәм,— ти. Яландол батша һылыуҙы оҡшата, барыһын да һорашып белә, таныша ла, риҙалығын бирә. Шунан туй яһап, ат саптырып, бүләк биреп, килеп алған, ти, батша.

Көндәр үтеп торған. Был хәл Бағдад батшалығына ишетелгән.

— Һинең Һылыубикәң Яландол батшалығында батша улына кейәүгә сыҡҡан! — тиҙәр икән.

Бағдад батшаһы Һылыубикәнән үс алыу өсөн Яландол батшалығына китә. Батшалыҡты эҙләп таба. Ярлы ғына бер кешенең ҡорсаңғы атын ала ла, оҙон арбаға егеп, урамдан үтеп барған була. «Мосафир мин»,— тип туҡталып, кешеләрҙән тегеһен-быныһын һорай. Быға саҡлы уҡ Һылыубикәнең улы тыуған була. Һунарсы, Һылыубикә, улы — өсөһө сарҙаҡтан ҡарап торалар икән. Шул ваҡытта Һылыубикә атаһын күреп ҡалып таный. Уны бындай хәлдә күреп бик йәлләй. Һылыубикә һунарсыға:

— Был — минең атайым, ниндәй хәлгә төшкән, бахыр! — ти. Һунарсы ҡайныһына ҡаршы сығып таныша ла үҙ батшалығына алып инә. Ҡоҙа ҡоҙа менән танышып, яңынан туй яһап, уйнап-көлөп көн үтә, төн үтә.

Шулай бер көндө, туй-ҡунаҡ бөткәс, ял итергә булалар. Бағдад батшаһына икенсе урынға урын һалалар, ә ул: «Юҡ, минең ҡыҙым менән һөйләшә торған һүҙем бар»,— тип, ҡыҙының бүлмәһендә ҡалырға тырыша. Уға урынды мейес башына һалалар. Бөтәһе лә йоҡоға сумып, төн уртаһы еткәйне, теге тора ла ҡыҙының улы Йәркәйҙе бысаҡ менән сала ла ташлай. Ә бысаҡты баланың баш аҫтына һала. Шунан үҙе кире мейес башына менә лә ята. Иртәнсәк торһалар, бала һаман тормай ҙа тормай. Әсәһе быға аптырай:

— Ниңә был бала бик оҙаҡ йоҡлай икән? — тип ҡараһа, бала үлгән! Һылыу илап килеп иренә әйтә. Һарайҙа ғауға ҡуба, халыҡ йыйыла. Шул саҡ Бағдад батшаһы әйтә:

— Был минең ҡыҙымдың үҙенең эше, үҙе салғандыр әле. Тентергә кәрәк үҙен, бысаҡ ҡайҙа икән? — ти.— Үҙенең әсәһен дә шулай төндә салып ҡасты ул,— ти.— Уға һис ышанырға ярамай,— ти. Тентеһәләр, баланың баш аҫтынан ҡанлы бысаҡты алалар. Шул ерҙә һунарсы ҡылысы менән Һылыубикәне сабайым тиһә, Бағдад батшаһы тотоп ала:

— Туҡта, кейәү, улай итмә. Беҙ уны, үлгән балаһын ҡулына тоттороп, аҙыҡ-кейемһеҙ сығарайыҡ та ебәрәйек, ҡайҙа китһә лә китһен! — ти.

Һылыубикә илай-илай башы һуҡҡан яҡҡа сығып китә. Бик оҙаҡ йөрөй, асыға башлай, бар ғына кейеме лә туҙа. Нисек етте шулай, үлән тамырҙары ашай-ашай, бара ла бара, балаһын ташламай, ҡулында алып йөрөй. Ташлап китергә бала ҡыҙғаныс. Шулай йөрөй торғас, бер күл буйына барып сыға был. Ял итеп

алмаҡ булып, шул күл ситенә килеп ултыра. Шул ваҡыт күлдән бер ҙур йылан икенсе бер үлгән йыланды тешләп ярға килеп сыға ла, уны ташлап, кире күлгә төшөп китә. Һылыубикә, бик асыҡҡан булғас, шул йыланды утта өтөп ашарға уйлай. Йыланды утҡа һалыуы була, йылан терелеп, кире һыуға төшә лә китә. Шунан ни, бик ҡыҙғаныс булһа ла, ни эшләһен инде, бик асыҡҡас, Һылыубикә үҙенең үлек улын ашамаҡ була. Утҡа һалғайны, балаһы йылан кеүек терелә лә ҡуя. Бына шатлыҡ: ни тиһәң дә, терәк бит инде был яңғыҙ әсәгә!

Йәркәй (малайҙың исеме шулай ине бит әле), көнтөн үҫеп, ун һигеҙ йәшкә етә, егет була. Һылыубикә, күл янындағы төрлө үлән тамыры ашатып, Йәркәйҙе үҫтерә, яҡшылап тәрбиәләй.

Үҫеп егет булғас, үҙенә уҡ, йәйә яһап, урманда кейектәр аулап, яҙлы-көҙлө үткән ҡоштарҙы аулап, Йәркәй әсәһе менән бергәләп көн күрә. Ошолай итеп, ул ир ҡорона ла инә, бер баһадир булып үҫә. Быным хәҙер ауламаған януары юҡ, хатта төрлө йыртҡыстарҙы ла алып ҡайта башлай. Һәйбәт кенә өй ҙә һалып ебәрә,— ҡыҫҡаһы, бик шәп тора башлайҙар былар.

Шулай бер көндө, ауҙа йөрөгәндә, Йәркәй бер ябалаҡ күрә лә атырға итә. Шул ваҡытта ябалаҡ телгә килә. «Эй, Йәркәй, һин минең йәнемде алма, мин һиңә аҡыл өйрәтәм,— ти.— Тиҙ көндә Төркиәнән бер каруан килер, төрлө йәнлек тиреләре йыйыр. Каруансыларҙа булыр бер ҡорсаңғы ат, алама йөнлө бер ялбыр эт. Һин, үҙеңдәге тиреләрҙе биреп, ана шуларҙы һатып ал. Яҡшы аттар ҙа, яҡшы эттәр ҙә булыр — һин уларҙы алма. Ат — һинең йәнең булыр. Алдағы көндәреңдә эт һине яман хәлдәрҙән ҡотҡарыр»,— ти. Аҡ ябалаҡ шулай тигәс, Йәркәй уны атмаған, ҡайтып киткән. Күп тә үтмәй, Төркиәнән каруан килә. Йәркәй, теге ябалаҡ өйрәткәнсә, үҙендә йыйылған бик күп йәнлек тиреһенә быларҙың ҡорсаңғы тайы менән ялбыр йөнлө эттәрен алмаштырып ала. Каруан хужаһы оттом был егетте тип шатлана. «Был малды үткәреп булмаç тигәйнем, яҡшы булды әле»,— ти. Каруан киткәс, Йәркәй тайҙы менергә, әтте һунарға өйрәтә. Ат та, эт тә бик зирәк булып сыға.

Йәркәй бер көндө төш күрә. Имеш, ҡайҙалыр, Төркиәлә, бер батшаның улы баһадир икән, өс һалдат баһадиры ла бар икән. Батша бер нисә мең ғәскәр ҙә тота икән. Йәркәй ошо батшаны һуғышып еңгән икән.

Йәркәй төшөн әсәһенә һөйләмәй, шул батшаны

эҙләп сығып китә. Аҙналар буйы эҙләй торғас, был батшалыҡты барып таба. Батша ҡапҡаһына инергә уйлай — ҡапҡа ҡарауылсыһы быны индермәй. Йәркәй ҡарауылсының тас маңлайына бер сирткәйне, теге үлә лә ҡуя. Ҡала ҡапҡаһын асып инә лә Йәркәй хәҙер һарайға табан юл тота. Бара бирһә, батшаның батырҙарына осрай. Өс көн, өс төн алыша Йәркәй былар менән. Батырҙарҙы еңеп, батшаны баш эйҙереп, зинданға ултыртып ҡуя был. Шунан бөтә ергә оран һалып, был батшалыҡта үҙен батша итеп иғлан итә. Был батша бик бай булған икән. Ул өйөр-өйөр ҡуй тиһеңме, өйөр-өйөр йылҡы тиһеңме, эре мал тиһеңме — бөтә яланды ҡаплап, эркелеп йөрөйҙәр, ти.

Ярай, шул байлыҡҡа батша булып алды Йәркәй. Хәҙер әсәһен килтермәк була. Батшалыҡҡа бер ҡараусы ҡуя ла әсәһе эргәһенә ҡайтып китә.

Әсәһен алып килгәс тә, Йәркәй үҙе һаман һунарҙа йөрөр булған. Киткән ваҡытта бүлмәләрҙең асҡыстарын әсәһенә биреп китә икән. Ә зинданда ултырған батшаны әсәһенән йәшергән, уның хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәгән. Бер көндө әсәһе:

— Бында нимә бар икән? — тип, зинданды асып ҡараһа, зиндандан бер яман тауыш килә:

— Һыу! Эсергә һыу бир!

Һылыубикә батшаны сығарып һыйлай. Йәшеренеп-боҫоп осраша башлайҙар былар. Батша әйтә:

— Һин улыңды үлтер! — ти.

— Ҡайҙа ул уны үлтереү?!. Ул бик көслө батыр бит!

— Улай булғас, уны бер яҡҡа алдап ебәрергә кәрәк! Һин улың ҡайтҡанда ауырып ятҡан бул да: «Улым, мин ауырыйым. Бүре һөтө килешә тип әйтәләр, шуны барып алып килеп бирсе»,— тип әйт. Ни эшләтһен, әсәй бит, барыр. Әгәр алып килһә, һин уны эсмә, ә ситкә түк! — ти батша.

Һылыубикә батша өйрәткәнсә эште башлай. Йәркәй килеүгә ашарға ла, эсергә лә әҙерләп тормай, сәсрәп ауырып ятҡан кеше була, өйәнәге тотҡанмы ни!

— Балам, бүре һөтө килешә тиҙәр, алып ҡайтыр инең! — ти.

Йәркәй китә. Бүренең һөтөн дә ала, балаһын да күтәреп алып ҡайта. Әсәһе Йәркәйҙең тамағына тағы ла әҙерләп тормаған.

— Улым,— тигән була әсәһе,— бүре һөтөнән файҙа булманы, инә айыуға бар,— ти. Шулай итеп, был әсә төрлө хәйлә менән улын төрлө йәнлектәргә ебәреп, айыу һөтө лә, арыҫлан һөтө лә алдыра. Батыр барыһын

да үтәй. Әсәһенең үлтереү өсөн төрлө хәйлә ҡорғанын улы һиҙенә, ти, шулай ҙа уйлай: «Ниндәй сиккә барып етер икән был?» — ти.

Бер көндө әсәһе улына:

— Ҡайҙалыр ете ҡыр сигендә ун ике башлы аждаһа ҡулында үҙе ауыҙға тамып торған алма бар,— ти.— Шуны ашаһаң, йүнәләһең тинеләр,— ти.

Ни эшләтһен, әсәй бит, тағы киткән, ти, был.

Егет юлға сыҡҡан һайын, аты, телгә килеп, һәр ваҡыт һорар булған:

— Йәркәй, ҡайҙа барабыҙ?

Был юлы ла аты һораған. Йәркәй бар хәлде һөйләп биргәс, аты уға:

— Һинең әсәйең ауырымай, һине юрый үлтерер өсөн шундай эштәр ҡуша. Ул батша менән кәйеф-сафа ҡора,— ти.— Ярай, алмаға ла барырбыҙ. Әммә уны алыу бик ауыр булыр,— ти.— Бара биргәс, алда бер өй, өйҙә әбей торор, шунан һора,— ти.

Атына атланды ла китте Йәркәй сығып. Бара, бара — алда бер өй тора, нәҙек кенә төтөнө сыға.

Барып етеп, әбейҙән һораһа, әбей әйтә:

— Эй улым, мин белмәйем. Минән алдараҡ бер апайым бар, белһә ул белер,— ти.

Йәркәй шуныһына китә. Барып етһә — тағы өй, уныһында ла бер әбей ултыра. Был әбей Йәркәйгә юл өйрәтә лә:

— Атыңды ҡалдыр, ә үҙең минең атты меней кит,— ти.

Йәркәй әбейҙең атын менеп китә. Бара бирһә, тағы ла бер өй тап була. Йәнә бер әбей йәшәй икән. Йәркәй һорашҡайны, быныһы әйтә:

— Ой, улым, алма ун ике башлы дейеү ҡулында бит ул,— ти.— Алмағасты дейеү үҙе уратып ята,— ти.— Уның ҡапҡаһын бер һылыу ҡыҙ ҡарай. Ул — ҡайҙандыр урлап килтерелгән бер батша ҡыҙы,— ти.— Улым,— ти әбей,— дейеү бик көслө. Уға һинең көсөң етерме икән һуң? Ана, ишек төбөндә сөйҙә элеүле торған ҡамсыны күтәреп ҡара әле,— ти әбей.

Йәркәй ишек төбөндә элеүле торған ҡамсыны күтәреп ҡарай, көсө етмәй. Шул саҡ әбей өс туҫтаҡ һыу бирә. Йәркәй бер туҫтаҡ һыуҙы эскәйне, ҡамсыны сөйҙән ысҡындырҙы; икенсеһен эскәйне, күтәрә биреп ҡуйҙы; өсөнсөһөн эскәйне, ҡамсыны күтәреп үк алды, һелтәп тә ҡараны.

— Бына хәҙер көсөң дейеү көсө менән тиңәлде,—

ти әбей. Ҡабат ҡамсыны күтәртеп ҡарай, Йәркәй бик еңел күтәрә.

Ҡайтҡанда миңә ярты алмаңды биреп китерһең,— ти әбей.— Ана минең атты менеп кит. Дейеү менән һуғыша башлаһаң, тәүҙә уң башын сап,— ти.— Һул башын сапһаң, кире үҫер ҙә торор,— ти.

Йәркәй хушлаша ла, әбейҙең атын менеп, үҙ юлына сығып китә. Китеп барғанда, ат һорай:

— Беҙ ҡайҙа барабыҙ?— ти. Йәркәй әйтә:

— Фәлән-фәлән ерҙә алма бар, шуны алырға барабыҙ,— ти.

— Һин минең һул яҡ ҡабырғамды ныҡ ҡыҫып ултыр, ә дейеүҙе уң яҡтан урарбыҙ. Шул ваҡытта алманы уң ҡулың менән ынтылып алырһың, ә һул ҡулың менән ҡыҙҙы алырһың,— ти.— Тик ҡара уны, ныҡ ултыр,— ти.— Шул ваҡытта бик көслө ел ҡубыр, осоп китмә,— ти.

Барып етәләр. Ҡапҡаға килһәләр, унда бер һылыу ҡыҙ тора.

— Эй, ағай, ни эшләп килдең? Туҡһан туғыҙ кеше килде, береһе лә кире ҡайтманы, үләһең бит!— ти ҡыҙ.

— Юҡ, мин үлмәм, алманы ла, һине лә ҡотҡарырға килдем мин,— тип яуап ҡайтарған Йәркәй.

Йәркәй, тап ат өйрәткәнсә эшләп, ҡыҙҙы ла, алманы ла урлап ҡаса. Шул ваҡыт дейеү уянып китә лә Йәркәйҙе ҡыуырға төшә. Йәркәй әбейгә килеп етә лә, ярты алманы биреп, ҡалдырып киткән атына менә лә тағы саба. Ә был әбей дейеүҙең бер ҡарауылсыһы икән. Дейеү килеп етеп, әбейҙән егетте һораһа, әбей:

— Белмәйем! Күрмәнем!— тип тик тора.

— Ниңә күрмәнең? Ниңә тотманың? Алма менән ҡыҙҙы урлап ҡасты бит!— тип, дейеү әбейҙе әрләй башлаған икән, әбей:

— Ә-ә-ә, ул егеттеме? Күрәһең бит, ат манма тиргә батҡан! Ҡыуҙым да етә алманым,— тип ҡотолоп ҡалған.

Йәркәй икенсе әбейгә килеп еткәс үҙ атына атланып ҡасҡан. Ике кеше бер атҡа меңгәшеп сабыуы бик ауыр булһа булған, шулай ҙа былар ҡыҙҙың ҡайта торған юлына килеп еткәндәр. Шул урында Йәркәйгә ҡыҙ былай ти:

— Әгәр бер-беребеҙҙе яратһаҡ, һуҡыр, ҡулһыҙ, аяҡһыҙ, һаңрау булһаҡ та, бергә булырбыҙ.

Ошолай итеп һүҙ ҡуйышып, ҡыҙ — егеткә, егет ҡыҙға бүләк бирешәләр ҙә айырылышып китәләр.

Йәркәй, дейеүгә ҡаршы барып, һуғыша башлай.

Бик оҙаҡ һуғышҡас, башын киҫеп төшөрә лә ҡайтып китә. Ҡайтып еткәс, алманы бирһә, әсәһе алманы ашамай, ситкә ырғыта. Йәркәй бик арыған, ә әсәһе рәтле аш та әҙерләмәй. Ә теге батша һаман да нәфрәтләнә. Нисек тә егетте үлтерергә, нисек тә унан ҡотолорға уйлай.

Иртәгеһен иртүк тороп, Йәркәй һунарға китә. Әсәһе менән батша тағы хәйлә ҡоралар.

— Бер батшаның тирмәне бар икән,— ти батша.— Асып инһәң, кире сығып булмай икән. Шунда ебәреп, тирмәндән он алырға ҡуш,— ти.

Йәркәй һунарҙан ҡайтҡас, әсәһе:

— Улым,— ти,— күп нәмәләрҙе алып килдең — береһе лә дарыу булманы. Бер батшаның тирмәне бар икән, инде шул тирмәндән он алып килеп биреп ҡара әле. Булһа, шуның ғына шифаһы булыр,— ти.

Йәркәйҙең януарҙары бар икән. Айыу, бүре, арыҫлан — барыһы ла Йәркәйҙе һағынғандар, асығышып бөткәндәр, ти. Йәркәй януарҙарын туйындыра ла, эйәртеп, юлға сыға. Әлеге батшаға барып, тирмәнде асып инһә, сыға алмай. Шул ваҡытта егеттең аты менән бергә айыу, бүре, арыҫлан, эт килеп, Йәркәйгә ярҙамлашырға булалар. Аты барып тирмәндең ишеген ярғанса тибә, айыу ер ҡаҙа башлай... Ошолай итеп, Йәркәйҙе ҡотҡаралар ҙа, он алып, ҡайтып китәләр.

Ҡайтҡас, әсәһе әйтә:

— Улым, беҙ һине үлтереү өсөн төрлө хәйлә ҡорҙоҡ, төрлө эштәр ҡушып ҡараныҡ. Һин барыһын да үтәнең. Тик мин һаман бер нәмәне белмәйем: һин шул тиклем көслөмө әллә күҙ буяусы бер күрәҙәме?— ти.— Әгәр ҙә күрәҙә булһаң, күрәҙәлегеңде күрһәт; әгәр көслө булһаң, көсөңдө күрһәт,— ти.— Йылҡы ҡайышынан ишкән арҡан менән ҡулыңды бәйләһәм, өҙөрһөңмө?— ти.

— Бәйләп ҡара һуң,— ти Йәркәй.

Әсәһе улының ҡулын бәйләй. Йәркәй ҡулдарын тартҡайны, арҡан шартлап өҙөлә.

— Ә кеше ҡайышынан ишелгән арҡан менән бәйләһәм, өҙөрһөңмө?— ти әсәһе тағы.

— Бәйлә!— ти Йәркәй. Әсәһе бәйләй, Йәркәй өҙә алмай. Шул ваҡыт әсәһе йүгереп сыға ла тегеңә әйтә:

— Бар, ҡулы бәйле, үлтер!— ти.

Йәркәй батшаға әйтә:

— Мин һеҙҙең был хәйләгеҙҙе белдем, белә тороп, ҡулымды бәйләтергә риза булдым. Мине һеҙ ебәрегеҙ,—

ти. Батша Йәркәйҙе ебәрергә була, шул ваҡыт әсәһе улының ике күҙен дә соҡоп ала ла:

— Әйҙә, хәҙер кит,— тип ҡыуып сығара.

Йәркәй, атына атланып, сығып китә, ҡайҙа барғанын да белмәй.

Ярай, былар тороп торһон, инде ҡыҙға киләйек.

Ҡыҙ, Йәркәйҙән айырылғас, ҡайтып киткән, ти. Ҡайтып килһә, быға бер һалдат тап була. Һалдат был ҡыҙҙы эҙләп йөрөй икән.

— Һин кем ҡыҙы? — тип һорағас, ҡыҙ:

— Мин шул батшаның ҡыҙы,— ти.

— Эһә, мин һине эҙләй инем. «Кем тапты?» — тип һораһалар: «Мине ошо һалдат тапты»,— тип әйтерһең. Әгәр әйтмәһәң, хәҙер үк үлтерәм дә башыңды атайыңа алып барып бирәм,— ти һалдат. Ҡыҙ, күп уйлап тормай:

— Ярай, әйтермен!— ти.

Былар ҡайтып китәләр. Ҡайтып еткәс:

— Бына, ҡыҙығыҙҙы таптым!— тип һалдат батшанан һөйөнсө һорай.

— Тапҡас, рәхмәт, үҙеңә бирермен,— тип батша туй яһарға була. Ә ҡыҙ атаһына:

— Атай, һин мине бер айға ялға ебәр, шунан туй яһарбыҙ,— ти. Атаһы быға риза була.

Ҡыҙ, үҙе менән ҡырҡ ҡыҙ алып, Йәркәйҙән айырылған урынға килә. Егерме көн көтөп ятҡандар, ти, былар. Егерме һигеҙенсе көндө Йәркәйҙең аты менән януарҙары юл сатына килеп ятҡан булалар. Ике күҙе лә күрмәгәс, Йәркәй бер нәмә табып та, атып та ала алмай, асығып, хәлдән тайып, һыу буйында ята икән. Ҡыҙҙар һыу буйына төшһәләр, Йәркәй, һыу алғанды ишетеп, һыу һораған, ә ҡыҙҙар ҡасып ҡайтып киткәндәр. Икенсе көндө ҡыҙҙар тағы һыуға төшәләр, Йәркәй тағы һыу һорай, ҡыҙҙар тағы ҡасып ҡайтып китә. Өсөнсө көндө ҡыҙҙар тағы ла һыуға килә, Йәркәй тағы һыу һорай. Ҡыҙҙарҙың береһе был юлы, туҡтап, Йәркәйгә һыу эсерә. Һыу эскәс, Йәркәй балдағын һыулы биҙрәгә төшөрә. Ҡыҙҙар һыуҙан ҡайтҡансы, батша ҡыҙы йоҡлаған була. Уянып китһә, биҙрәләге балдаҡтың шәүләһе сатырының түбәһенә төшкәнен күреп ҡала. Шунан һыуға барған ҡыҙҙарҙы саҡырып килтерә лә һыуға барғанда ниҙәр күргәндәрен һөйләргә ҡуша.

— Бына шулай-шулай, бер күҙһеҙ егет һыу һорап ята,— тиҙәр ҡыҙҙар. Бер ҡыҙ егеткә һыу эсергәнен әйтә. Шулай итеп, ҡыҙ, биҙрәләге балдаҡты алып ҡарап, Йәркәйҙең килгәнен белә. Улар вәғәҙә бирешкәй-

нәләр бит инде. Батша ҡыҙы Иәркәйҙе барып таба, аша-та, эсерә. Шунан ул Йәркәйҙе үҙе менән алып ҡайта ла атаһына әйтә:

— Быны, атай, ошо кешегә мин тормошҡа сығам,— ти. Атаһы ҡыҙына бик ныҡ асыулана, туй ҙа үткәрмәй.

— Әйҙә, һуҡыр ирең менән ҡайҙа барырһың икән!— тип, бер ҡорсаңғы быҙау бирәп, ишек алдындағы бер бәләкәй генә өйгә сығара. Батшаның ҡыҙҙары күп икән. Башҡа ҡыҙҙарын ул туйлап, матурлап, һәйбәт өй биреп сығарған.

Иәркәй менән ҡыҙ шулай ғүмер итеп торғандар. Иәркәй һуҡыр булғас, унан бөтәһе лә көлгәндәр. Йәркәй бажалары менән һөйләшмәгән дә, йөрөшмәгән дә.

Бер ваҡыт Йәркәй төш күрә. Имеш, бер ҡарт төшөндә әйтә:

— Әй, Йәркәй батыр, элек һинең күҙең булған, ә хәҙер күҙең дә, батыр исемең дә юҡ. Ярай, ҡайғырма, күҙең булыр,— ти.— Өс уҡ яһат та өсөһөн өс яҡҡа ат,— ти.— Береһе ҡоҙоҡҡа төшөр, шул ҡоҙоҡтан һыу ал да битеңде йыу,— ти.

Иәркәй, иртән иртүк тороп, ҡатынынан уҡ яһатып алып, тышҡа сығып, өсөһөн дә һауаға атҡан. Төшөндәге ҡарт әйткәнсә, уҡтың береһе тап ҡоҙоҡҡа килеп төшкән, ти. Йәркәй шул ҡоҙоҡтан һыу алып, битен йыуған икән, уның элекке кеүек матур күҙҙәре барлыҡҡа килгән, ти. Тик ул күҙенән бәйен алмаған, һаман бәйләп йөрөгән. Шуға уларға элеккесә бер кем дә килмәй, ти.

Шулай тороп ятҡанда, бер ваҡыт ҡайҙандыр бер батша был батшаға: «Өлкән ҡыҙыңды улыма бирмәгән өсөн һуғыш асам»,— тип ҡағыҙ ебәргән. Ни эшләмәк кәрәк? Батша өлкән кейәүен башлыҡ итеп, бик күп һалдат биреп, һуғышҡа ебәрә. Йәркәй меңкен булып, өйҙә ҡала. Оло бажаһы китеп, өс-дүрт көн үткәс, Йәркәй тышҡа сыға ла атының ҡылын өтә. Шунда уҡ януарҙарын эйәртеп, аты килеп етә. Батыр, һалдаттарҙың артынан ҡыуып етеп, батшаның өлкән кейәүе эргәһенән үтеп барһа, тегe:

— Эй, батыр, әйҙә беҙҙең менән һуғышҡа! Еңһәң, өйҙә беҙҙең балдыҙ бар, шуны бирербеҙ үҙеңә!— ти икән.

— Ярай, улай булһа, барайым, тик бер шартым бар. Әгәр дошманыңды һин үҙең түгел, мин еңһәм, миңә ҡолағыңды ҡырҡып бирәһең!— ти Йәркәй. Оло кейәү риза, ти. Былар алға бергә-бергә киткәндәр, ти. Йәркәй, һуғышта еңеп, өлкән бажаһының ҡолағын ҡырҡып

алған да ҡайтҡан да киткән. Ә тегеләр араҡы эсеп иҫерешеп ятып ҡалғандар. Бер аҙна тигәндә генә ҡайтып килгәндәр.

Күп ваҡыт үткәнме, аҙ ваҡыт үткәнме — уныһын кем белһен, тик тағы бер сит батша: «Уртансы ҡыҙыңды улыма бирмәнең, шуның өсөн һуғыш асам үҙеңә!» — тип батшаға ҡағыҙ ебәргән. Был юлы батша, уртансы кейәүен башлыҡ итеп ҡуйып, һалдат йыйған. Йәркәй:

— Минең күҙем күрмәгәс, мине һуғышҡа алып бармайҙар,— ти икән ҡатынына. Оло кейәү, һуғышты туҡтатып килеп, байрам иткән, бүләк алған, ә Йәркәйҙән көлә генә икән. Шулай итеп, оло бажа, байрам итеп, өйҙә ятып ҡалған, уртансы бажа башлыҡ булып, юлға сығып киткән. Ун көн үткәс, Йәркәй тағы ла атының ҡылын өтә, аты януарҙарын эйәртеп килеп тә етә. Атына атланып, батыр кейемдәрен кейеп, Йәркәй тағы ла бажаһын ҡыуып барып етә лә эргәһенән үтеп барған була, ти. Уртансы кейәү батырға инәлә башлай:

— Батыр, ярҙам ит, дошманды еңһәң, ни теләһәң, шуны алырһың,— ти. Йәркәй әйтә:

— Бармағыңды ҡырҡып алайым, шунан һуң ғына ярҙам итермен,— ти. Үҙе, йәнәһе, китергә ашыға,— тиҙерәк бул,— ти. Уртансы бажа йәһәт кенә бармағын ҡырҡып бирә, Йәркәй бармаҡты урап кеҫәһенә һалып ала ла алға китә. Барып һуғышып, дошманды ҡырып бөтөрә, шунан ҡайтып та китә. Батша һалдаттары быны ҡайҙан икәнен белмәй ҙә ҡалалар.

Ғүмер уҙа торған, Йәркәйҙе һаман кәмһеткәндәр, ти. Өсөнсө бер батша ла был батшаға ҡаршы һуғыш асҡан, ти. Был юлы батша, бер батыр улын алып, яуға үҙе китә. Батша китеп ун көн үткәс, Йәркәй, тағы ла яланға барып, атының ҡылын өтә. Аты януарҙарын эйәртеп килеп етә. Йәркәй батша ғәскәрен ҡыуып барып етә лә эргәнән үтеп барған була. Батша ялбара башлай:

— Эй, батыр егет, өйҙә бер һуҡыр кейәүем бар. Уны ҡыуам да ҡыҙымды һиңә бирермен. Зинһар, беҙгә ярҙам ит,— ти.

— Ярай, бер нәмә лә кәрәкмәй. Еңелә башлаһағыҙ, былай ғына ярҙам итермен,— ти Йәркәй.

Тәүҙә Йәркәй ике яҡтан ике ғәскәрҙең йөҙгә-йөҙ килеп һуғышҡанын ҡарап торған, ти. Ҡайныһының ғәскәре еңелә башлағас, Йәркәй һуғышҡа инеп киткән. Дошманды инде ҡырып һалдым тигәндә генә, дошман батыры Йәркәйҙең ҡулын сапҡан. Йәркәй, ҡыҙып китеп, тегенең башын өҙә сапҡан. Шуның менән һуғыш та тамамлана. Шунан батша килә һала ла үҙенең ебәк

таҫтамалы менән Йәркәйҙең яраһын бәйләп ҡуя. Шулай итеп, батша һуғышта еңеүсе булып ҡайтҡан. Ҡайтып, бер ай буйына ҡунаҡ булғандар, ти, былар. Йәркәйҙе саҡырмағандар ҙа, ҡыҙ ҙа һыйланырға бармаған.

Бер көндө Йәркәйгә уй төшә. «Ниңә әле миңә ошо батырлығым менән быларҙан кәм булып йәшәргә!» — тип уйлай ул. Шунан төндә сығып, атының ҡылын өтә. Аты януарҙарын эйәртеп килеп етә. Йәркәй януарҙарын өйгә индерә, атын ишек алдына бәйләй. Шул ваҡыт батша ҡатыны ҡыҙҙарының нисек торғанын берәм-берәм ҡарап йөрөй икән. Өлкән кейәүе ҡолағы ауыртыуҙан, уртансы кейәүе бармағы һыҙлауҙан әрләшеп яталар, ти. Ҡатындары менән ыҙғышып-талашып та алалар, ти. Оло кейәүе ҡатынына:

— Һинең өсөн ҡолағымды бирҙем,— ти икән. Ә уртансыһы:

— Һинең өсөн бармағымды бирҙем,— тип ыҙғыша, ти.

— Былары былай, һуҡыр кейәү ни хәлдә икән? — тип тәҙрәнән ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, өй эсендә айыу, бүре, арыҫлан, эт йөрөп ята.

Йәркәй яралы ҡулын өҫкә һалып йоҡлап ята. Был ҡатын һуғышҡа киткәндә батшаға биреп ебәргән ебәк таҫтамалын танып ҡала. Аптырап, иҫе китеп, ах та ух булып, һарайға ҡайтып йығыла был. Иҫенә килгәс, булған хәлде батшаға һөйләп бирә. Батша аптырауға ҡала, ҡурҡҡандай итә. Шунан төнө менән, ҡыңғырау һуғып, барабан ҡағып, халыҡ йыйырға ҡуша ла өлкән ҡыҙын саҡырта.

— Бар, кесе һеңлеңде алып кил әле! — ти батша.

Өлкән ҡыҙы саҡырырға килһә, кесеһе:

— Йәркәйҙе уятмағыҙ, ул ял итә, яңы ғына һунарҙан ҡайтты,— тип уятырға рөхсәт бирмәй. Былай булмағас, батша үҙе килә, Йәркәйҙең аяғына йығыла, ялбара башлай:

— Ат, хат еткән ерҙән халыҡ йыйып, туй яһап, батыр исеме бирҙертергә риза булам, вәғәҙә бирәм. Бер яҡҡа ла йөрөмә, беҙҙе ғәфү ит,— тип ялбара икән батша. Йәркәй быға ғына риза булмай. Халыҡ алдына сыға ла батшаның ҡыҙын нисек ҡотҡарыуын, үҙе нисек һуҡыр ҡалғанын, дошман яуын еңгәнен һөйләй. Батша уға:

— Был дөрөҫ түгел! — тип ҡысҡыра. Тегеләр ышанмағас, Йәркәй кеҫәһенән бер бажаһының ҡолағын, икенсеһенең бармағын сығарып күрһәтә. Батша аптырап ҡала.

— Минең шундай ҙа баһадир кейәүем бар икән! — тип халыҡ алдында гәфү үтенә.

Былар шулай тыныс ҡына йәшәп китә. Көндәрҙең береһендә батшанан Йәркәй бер айға юлға сығырға рөхсәт һорай, ә батша ебәрергә риза булмай. Шулай ҙа Йәркәй үҙенең атына атлана ла, януарҙарын эйәртеп, сығып китә. Әсәһе Һылыубикәне эҙләп таба ла:

— Улығыҙ ҡайҙа? — тип һораша. Һылыубикә:

— Беҙҙең улыбыҙ булғаны ла юҡ! — ти.

Йәркәй барлыҡ кешене йыя ла:

— Бына был ҡатын — минең әсәйем,— ти. Ул миңә шундай ҡәһәрле эштәр ҡушты, иң аҙаҡта күҙҙәремде соҡоп алды,— ти.— Уның бөтә этлектәре ҡала батшаһының ҡотҡоһо арҡаһында булды,— тип Йәркәй батша менән әсәһен һарай стенаһына ҡаҙаҡлап ҡуя. Шунан һарайға ут төртөп яндыра. Йәркәй, батшаның булған байлығын атҡа, дөйәгә тейәп, каруан менән ҡайны йортона алып китә. Ҡайныһы, алыҫтан каруан килеүен күреп, ҡурҡыуға төшә.

— Яу ҡалҡты! Яу! — тип ғәскәрен әҙерләй башлай.

Бөтә халыҡ ҡурҡышып-ҡалтыранышып торғанда, Йәркәй ҡайтып төшә. Кейәүенең алтын-көмөш алып ҡайтҡанын күреп, ҡайны бик риза була. Ҡайтып, ун көн үтте тигәндә, Йәркәй тағы ла бер айға юлға сығырға рөхсәт һорай. Был юлы батша риза була.

Йәркәй хәҙер атаһын эҙләп сығып китә. Бик оҙон юлдар үтеп, атаһы йәшәгән Яландол батшалығына барып сыға. Шул саҡ батша ҡатыны, Йәркәйҙе күреп ҡалып, атының башынан ала.

— Эй йәрем,— ти был ҡатын,— саҡ ҡына һүҙгә лә үсектең! — ти.— Үсегешмәйек, татыулашайыҡ инде! — тип ялынып-ялбара. Йәркәй аптырап ҡала.

— Был ниндәй хәл? — ти. Баҡтыниһәң, был ҡатын Йәркәйҙең үгәй әсәһе икән, Йәркәйҙе иренә оҡшатып, үҙенең ире тип уйлай икән был. Иренең дә шундай януарҙары бар икән, аты ла, кейгән кейеме лә шул төҫтә икән. Ҡатын Йәркәйҙе, хужам тип, өйгә алып инә. Әллә ниндәй ашамлыҡтар әҙерләп торғанда, ире һунарҙан ҡайтып төшә. Ҡатын тағы ла аптырай. Ҡайһыһы үҙенең хужаһы икәнен айыра алмай. Һиҙҙермәҫтән һораша башлай:

— Батша, һин кем булаһың? Ҡайҙа бараһың? — ти. Батша:

— Бына һиңә кәрәк булһа, әллә ҡоторҙоңмо? — тигәс кенә, ҡатын ирен танып ҡала. Үгәй әсә, таңға ҡалып, һушын юя. Шул ерҙә Йәркәй атаһына үҙе ме-

нән булған хәлдәрҙе баштан-аяҡ һөйләп бирә. Әсәһен үлтереп киткәнен дә, атаһын нисек эҙләп тапҡанын да һөйләй. Атаһы сикһеҙ шатлана, улына батшалығын бирә. Йәркәй, өс батшалыҡты бергә ҡушып, донъяла беренсе бай булып киткән, ти. Халыҡты үҙенә йыйып, яҡшы юл өйрәтеп, көн итә, ти.

## АҠХАН УЛЫ МЕНӘН ҠАРАХАН ҠЫҘЫ

Борон-борон заманда Аҡхан менән Ҡарахан йәшәгән. Улар бик дуҫ булғандар. Ике хандың да бисәләре гоманлы булған. Балалары тыуғас, улар ҡоза булышырға һүҙ ҡуйышҡандар. Аҡхандың улы тыуған, Ҡарахандың бисәһе ҡыҙ бала килтергән. Улы тыуғас, күп тә үтмәгән, Аҡхан үлеп ҡалған. Аҡхан үлгәс, Ҡарахан дуҫының ханлығына килеп тә әйләнмәгән. Аҡхандың улы бура һуғырлыҡ булып ҙурайып киткән.

Бер көндө малай һыу ҡойоноп йөрөһә, еңгәһе һыуға килә. Малай еңгәһе менән шаярып алып китә. Ә еңгәһе ҡәйнешенә:

— Минең менән булғансы, кәләшеңә барыр инең,— ти.

— Минең кәләшем бармы ни? — ти малай.

— Ҡайт та әсәйеңә ҡурмас ҡыҙҙырырға ҡуш. Тәгәс менән бирһә, алма. Усың менән бир, тип әйт. Усы менән биргәс, ҡулын баҫырһың да ҡуйырһың. Ул әйтер,— тип өйрәткән еңгәһе.

Малай ҡайта ла әсәһенән ҡурмас һорай. Әсәһе, ҡурмас ҡыҙҙырып, тәгәс менән бирһә, малай алмай.

— Усың менән бир,— ти.

Әсәһе ҡурмасты усы менән бирә. Малай әсәһенең ҡулын баҫа ла:

— Әсәй, кем минең кәләшем? — ти. Әсәһе әйтмәҫкә итә, усы янғас, сыҙай алмай:

— Ҡарахандың ҡыҙы,— ти.— Атайың үлгәс, ул беҙгә килмәй башланы,— ти.

Малай ҡыҙ янына китергә була. Әсәһе юл аҙығы әҙерләп бирә лә, малай өйҙән сығып китә. «Малай» тигәс тә, малай ҙа түгел инде ул хәҙер — еткән егет.

Ҡарахандың бисәһе донъяла тиңе булмаған матур булған, ти. Ҡыҙы әсәһенән дә һылыуыраҡ булып үҫеп килә икән. Берҙән-бер көндө Ҡарахандың ҡатыны ҡапыл ауырып үлеп киткән. Үлер алдынан васыят әйтеп ҡалдырған.

— Һин өйләнһәң, ҡатыныңдан матурыраҡ та, уңғаныраҡ та булһын. Һүҙемде тотмаһаң, минең йәнем бер ваҡытта ла риза булмаҫ,— тигән, ти. Ҡарахан ҡатынының васыятын үтәргә ант иткән.

Ҡатынды ерләгәндәр. Хәҙер Ҡарахан үҙенә ҡатын эҙләй башлаған. Төрлө ерҙәргә сапҡындар ебәргән, үлгән ҡатынынан сибәрерәкте, уңғаныраҡты таба алмаған. Шул ваҡыт уның күҙенә ҡыҙы салына. Ҡыҙы әсәһенә ҡарағанда сибәрерәк тә, уңғаныраҡ та, ти. Ҡарахан ҡыҙын саҡыртып алған да:

— Ҡыҙым, мин әсәйеңдең васыятын үтәйем тип, бөтә ерҙән унан сибәрерәкте, унан уңғаныраҡты эҙләттем — берәүҙе лә таба алманым. Инде һиңә өйләнергә булдым,— тигән, ти. Ҡыҙы илап та ҡараған. Ҡарахан үҙ һүҙенән кире ҡайтмаған. Шул ваҡыт ҡыҙ:

— Ярай, атай, мин риза, тик һин дә минең үтенесте үтә,— тигән, ти.— Миңә туй көнөнә бөрсә тиреһенән тун тектер, бет тиреһенән шәл эшләт.

Ҡарахан риза булған. Айҙар-йылдар буйына ил гиҙеп, бөрсә тиреһенән тун тектереп, бет тиреһенән шәл эшләтеп алып ҡайтҡан.

Хәҙер ҡыҙ Ҡарахандан ҡотолоу сараһын эҙләй башлаған. Уйлаған-уйлаған да мунса эләүкәһенең аҫтына тәрән итеп соҡор ҡаҙҙырған, уны балаҫ менән ҡаплап ҡуйған. Шунан ҡыҙыу итеп мунса яҡҡан да атаһына:

— Атай, мунса әҙер, мунсаға бар, шунан мин дә барырмын,— тигән. Ҡарахан мунсаға киткән. Уның балаҫҡа ултырыуы булған, баҙға осоп та төшкән. Ҡыҙ үҙенең аҫыл кейемдәрен кейеп алған да башы һуҡҡан яҡҡа сығып киткән. Бер ауылға барып, шунда бер әбей менән бабайҙа йәшәй башлаған. Көндәр үткән, ҡыҙҙың кейемдәре лә туҙып бөткән, ҡайғынан йөҙө лә һарғая башлаған. Шулай, көндән-көн һарғайып көн итә башлаған, ти, был бахыр.

Аҡхандың улы бара ла бара икән, бара ла бара икән. Ай бара, йыл бара. Ҡарахандың ханлығына барып етһә, унда бер кем дә юҡ, ти. Кәртә-ҡаралты ғына һерәйеп ултыра, ти. Егет мунсаны асып ҡараһа, мунсалағы баҙҙан ыңғырашҡан тауыш килә. Барып ҡараһа, тәрән соҡор төбөндә һаҡал-мыйыҡ баҫҡан бер йән эйәһе ултыра.

— Һин кем? — тип һорай егет.

— Мин атаҡлы Ҡарахан инем. Үҙең кем улы булаһың?

Егет үҙенең кем улы икәнлеген әйтә лә Ҡараханды

баҙҙан арҡан менән тартып сығара. Ашата, эсерә, һөйләшәләр.

— Мин тыумаҫ борон уҡ йәрәшкән кәләшемде күрергә тип килгәйнем,— ти егет.

— Һин уны эҙләп йөрөмә. Ул әсәһен үлтерҙе, баҙ ҡаҙып, мине шунда төшөрөп, үҙе бер дейеү пәрейенә эйәреп китте,— ти Ҡарахан.

Егет аптырай. Ҡарахан менән хушлаша ла ҡайтырға сыға. Эй ҡайта, эй ҡайта, ҡайта торғас, бер ауылда йоҡлап сыҡмаҡсы була. Бер өйгә инә. Инһә, өйҙә ҡартайып, бәлтерәп бөткән әбей менән бабай ултыра, ти. Алама ғына кейенгән бер ҡыҙ ширлек буйында бер устай ғына талҡанды төйөп тора. Үҙе һап-һары, ти. Егет аптырап ҡала. Сәләм бирә лә:

— Мин төнәп сығайым әле,— ти.

— Төнәүен төнәр инең дә, һиңә ашатырға ашыбыҙ, һуйырға малыбыҙ, аҫтыңа түшәргә кейеҙебеҙ, өҫтөңә ябырға юрғаныбыҙ, баш аҫтыңа һалырға мендәребеҙ юҡ. Башҡа ерҙә баш төртөр урының булмаһа, әйҙә, ҡунып сыҡ. Бынау талҡанды дүрткә бүлеп ашарбыҙ ҙа ятып йоҡларбыҙ,— тине, ти, бабай.

Егет, үҙенең аҙығын сығарып, бабай менән әбейҙе бик ныҡ итеп туйҙырғансы һыйланы, ти. Күпме генә саҡырһа ла, ҡыҙ ашарға ултырманы, ауыҙын асып бер генә һүҙ ҙә әйтмәне, ти. Егет, үҙенең кем булыуын, ҡайҙарға барыуын һөйләгәс:

— Әллә ҡыҙығыҙ ауырып торамы? — тип һораны.

— Ҡыҙыбыҙ аҫрау булһа ла, үҙ ҡыҙыбыҙҙан артыҡ. Ул булмаһа, күптән астан аяҡ һуҙған булыр инек. Эшкә бик уңған, үҙе таһыл, үҙе әҙәпле. Ят кеше барҙа ғына һөйләшмәй. Зәхмәт ҡағылған, ахыры, көндән-көн һарғая,— тине, ти, бабай.

Йоҡларға яттылар, ти. Йоҡлап торғас, егет иртүк сығып китте лә бер һарыҡ, бер ҡаҙ һатып алып ҡайтты, ти. Һарыҡты һуйҙы ла йөнөн йолҡорға тотондо, ти. Ҡыҙ ҡарап-ҡарап торҙо ла шарҡылдап көлөп ебәрҙе, ти.

— Ҡарағыҙ әле бынауҙы, һарыҡтың йөнөн йолҡоп маташа,— ти икән ҡыҙ. Шунан егет һарыҡтың тиреһен тунап алды ла, ҡаҙанды түңкәреп, ит һалды ла һыу ҡойҙо, ти. Һыу ҡойған ыңғайы ит шыуа ла төшә, шыуа ла төшә, ти. Ҡыҙ тағы ла шарҡылдап көлөргә тотондо, ти. Көлгән һайын ҡыҙҙың төҫө асыла бара, ти.

Һарыҡ итен ҡаҙанға бешерергә һалғас, егет ҡаҙҙы һуйҙы ла тиреһен һыҙырырға тотондо, ти. Ҡыҙ инде сыҙай алмайынса, быуылып-быуылып көлә, ти.

Көлә торғас, төҫөндәге һарыһы бөтөнләйгә бөттө, элекке матур төҫө ҡайтты, ти. Егет ҡыҙҙың матурлығына ҡарап хайран ҡалды, ти, иҫтән яҙып ғашиҡ булды, ти. Ҡыҙ ҙа егетте бик яратты, ти. Ит ашап, һурпа эсеп алғас, әбей менән бабайға ла йән керҙе, ти.

Бер нисә көн торғас, егет, ҡыҙҙың вәғәҙәһен алып, әсәһенән рөхсәт һорарға тип, ҡайтып китте, ти. Ҡайтҡас, әсәһенә үҙе күргән-белгәнде түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе лә:

— Әсәй, Ҡарахандың ҡыҙынан да матурыраҡ ҡыҙ таптым,— тине, ти.

— Тапҡас, ниңә алып ҡайтманың һуң?— тине, ти, әсәһе.

— Алып ҡайтыр инем дә, уның өҫтөндә юҡ.

— Теләгән нәмәңде алып барып кейендер ҙә алып кил,— тине, ти, әсәһе.

Егет, тиҙ генә барып, ҡыҙҙы кейендереп алып килде, ти. Ҡыҙҙың һылыулығын күреп, бөтә халыҡ хайран ҡалды, ти. Өс көн уҙғас, шаулатып туй үткәрҙеләр, ти. Ҡыҙ менән егет бик татыу ғүмер итә башланылар, ти. Уларҙың бер ир балалары тыуҙы, ти. Малай көнләп түгел, сәғәтләп үҫә, ти. Бик матур булып үҫеп килә, ти.

Бер көндө әсәһе ҡамыр баҫып торғанда, малай тәҙрәгә ҡарап эй көлә, эй көлә, ти. Әсәһе:

— Ниңә көләһең, улым?— тип һорағас:

— Әсәй, әсәй, ҡара әле, анау бабайҙың маңҡаһы ҡатаһының башына тиклем һуҙылып туңған,— тип һамаҡлай, ти. Әсәһе килеп ҡараһа, үҙенең атаһын таный. Ҡарахանды индереп, маңҡаһын балта менән тумырып төшөрөп, тамағын саҡ туйҙырҙылар, ти, быныҡ. Шунан һуң Ҡарахан ҡыҙы менән кейәүендә йәшәй башланы, ти.

— Әйҙә, беҙҙә тор, тик кейәүеңә ҡайны булыуыңды белгертә күрмә,— тип әйтте, ти, ҡыҙы.

Малай әсәһе менән атаһы уртаһында йоҡлай торған булған. Төн уртаһында тороп, гел уйнап алыр булған. Ҡарахан мейес башында йоҡлап йөрөгән. Бер көндө ул төн менән мейес башынан иплэп кенә төшкән дә малайҙы бәкеһе менән салған да ҡуйған. Бәкене ҡыҙының уң ҡабырғаһы аҫтына һалып ҡуйған. Иртәнсәк: «Был бала лыс һыу булып йоҡлап ята»,— тип ҡараһалар, малай һуйылған. Тиҙ генә атаһын алып кергәндәр. Шул ваҡыт Ҡарахан:

— Кейәү, был минең ҡыҙым ине. Ул әсәһен үлтерҙе, мине үлтерә яҙҙы, хәҙер улын үлтергән. Йоҡлаған

ваҡытта уның ҡабырғаһы аҫтында һәр ваҡыт бәке ятыр,— тигән, ти. Баяғы түшәк аҫтын ҡараһалар, ысынлап та бәке ята. Егеттең әсәһе:

— Был убырҙы ҡайҙан алдың, шунда алып барып ҡуй,— тине, ти.

Ҡыҙ дөрөҫөн һөйләп ҡараһа ла, уға иренән башҡа берәү ҙә ышанманы, ти. Шунан егет, ҡатынын алып, уға улының үлек кәүҙәһен ҡосаҡлатып, әлеге әбей менән бабайға алып барып ташланы, ти. Айырылыша алмай, өс көн, өс төн илаштылар, ти. Ни эшләһендәр, әсә бойороғо бит, үтәргә кәрәк. Шулай итеп, былар ҡан-йәш илашып айырылыштылар, ти.

Бер төндө ай бик яҡты, ти. Ҡатын йылға буйына сығып ултырһа, бер йыландың үлгән йыланды йөкмәк килә ятҡанын күреп ҡала. Былар ни эшләр икән тип, ҡатын күҙәтә башлай. Баяғы йылан бер түңгәкте өс урағайны, икәү булып китте лә барҙылар, ти. Ҡатын:

— Туҡта, мин дә улым менән ошо түңгәкте урайым әле,— тип, йүгереп инеп, улын алып сыҡты, ти. Теге түңгәкте улы менән өс урағайны, улы:

— Ах, ҡалай оҙаҡ йоҡлағанмын,— тип килеп торҙо, ти. Әсәһе улына ни булғанын һөйләп бирҙе, ти. Былар бик һәйбәт кенә йәшәй башлағандар. Малай көндән-көн ҙурая, үҫә, егет булып етә. Һунарға йөрөй башлай. Быларға юлаусылар ҙа төшөп йөрөйҙәр икән.

Бер ваҡыт бер юлаусы ҡолонло бейә егеп китеп бара икән. Ҡолоно бик ныҡ арыған, ти. Шунан юлаусы:

— Мә, ошо ҡолондо ат итеп үҫтер ҙә менеп йөрөрһөң!— тип егеткә ташлап китте, ти. Егет, был ҡолондо ҡәҙерләп тәрбиәләп, ат итеп алды, ти. Һунарға ла һыбай сыға башланы, ти.

Бер ваҡыт бер юлаусы баяр үҙенең хеҙмәтселәре менән быларға килеп төшкән. Баяр егеттән:

— Нимә менән шөғөлләнәһең?— тип һораған.

— Һунарға йөрөйөм.

— Ҡош-ҡортто нисек тотаһың?

— Ҡошон уҡ менән атып алам, кейеген баҫтырып тотам,— тине, ти, егет. Шунан баяр быға мылтыҡ бүләк итеп китте, ти. Икенсе бер юлаусы егеткә көсөк ҡалдырып китте, ти. Хәҙер егеттең аты ла, эте лә, мылтығы ла булды. Ул, көн-төн тау-таш, ҡара урман араһында йөрөп, йәнлектәр аулай башланы, ти.

Берҙән-бер көндө егет ҡайҙалыр бер ерҙә дейеү батша бар икән, ул тирә-яҡты үҙ ҡулында тотоп, ха-

лыҡҡа яфа күрһәтә икән тип ишетә. Шунан ул, әсәһе менән хушлашып, этен эйәртеп, мылтығын аҫып, атына атланып, дейеү батшаһын эҙләп киткән. Ул дейеүҙең ҡайҙа йәшәгәнен белмәгән. Ул китеп ултыра, китеп ултыра, ти, китеп ултыра торғас, барып сыҡты, ти, бер өйгә. Өйҙән килеп сыҡты, ти, өс бөртөк сәсле бер мәскәй әбей. Егет:

— Сәләм һиңә, инәй кеше,— тине, ти.

— Шул сәләмең булмаһа, уртаға өҙөп йотор инем, бала кеше,— тине, ти, әбей.

— Йотһаң, йотор инең инде, инәй кеше,— тип әйтте, ти, егет.

Был әбейҙең еҙ мунсаһы бар икән. Мәскәй әбей, бер кешене лә үткәреп ебәрмәй, гел мунсала яндырып ашай икән. Ул шул мунсаһын йәһәт кенә бик ҡыҙыу итеп яғып ебәрҙе, ти. Мунса әҙер булғас:

— Бар, улым, эҫеһе һүрелмәҫ борон, мунса инеп сыҡ,— тип әйтте, ти. Егет:

— Беҙҙә мунсаны башта хужа инеп сыға,— тип, әбейҙе елтерәтеп алып барып, мунсаға индерә һалып, елкәһенә бер төшөрөп, арт һанына бер тибеп сығарҙы, ти. Шунан әбей:

— Ни теләһәң, шуны бирәм, тик үҙемә теймә,— тине, ти. Егет әбейҙән дейеүгә бара торған юлды һораған. Әбей:

— Мин ул юлды белмәйем, балаҡай. Уны белһә, минең уртансы апайым белә инде,— тине, ти. Шунан ул юл өйрәтеп ебәрҙе, ти.

Егет эй бара, ти, эй бара, ти, һис барып етә алмай, ти. Шунан көс-хәл менән генә көмөш мунсалы өйгә барып етте, ти. Өйҙән ике тешле, ике бөртөк сәсле бер әбей килеп сыҡты, ти. Егет баяғы кеүек был әбей менән дә һаулашты, ти. Был әбей ҙә баяғы кеүек яуапланы, ти. Мәскәй әбей көмөш мунсаһын яғып ебәрҙе, ти. Мунса әҙер булғас:

— Бар, улым, инеп сыҡ, саңланып, арып-талып килгәнһеңдер,— тине, ти. Егет был әбейҙе лә тәүгеһе кеүек итте, ти.

— Беҙҙә мунсаны башта хужа кеше үҙе инә,— тип мәскәй әбейҙе, бер төртөп, бер һелкеп, баҙлап ултырған мунсаһына алып барып бикләне, ти. Әбей:

— Улым, ни теләһәң, шуны бирәм, үҙемә тейә күрмә,— тип ялбарырға тотонғас, егет дейеүҙең торған ерен һораны, ти.

— Уны белһә, өлкән апайым белер инде, ул дейеү менән ҡатышып йөрөй,— тине, ти, әбей.

Егет, әбей менән хушлашып, ары китте, ти. Эй бара, эй бара, һаман барып етә алмай икән егет. Бара торғас, бер алтын мунсалы өй күрҙе, ти. Унан бер тешле, бер бөртөк сәсле әбей килеп сыҡты, ти. Быныһы ла егеттең сәләменә тегеләре кеүек үк яуап бирҙе, ти. Шул арала әбей, йүгереп йөрөп, алтын мунсаһын яға һалып ебәрҙе, ти.

— Өҫ-башыңды саң баҫҡан, аяҡтарың талып киткәндер, тандыр ғына итеп мунса яҡтым, әйҙә, улым, башына инеп сыҡ,— тигән булды, ти, әбей. Теге алтын мунса шундай ҡыҙыу яғылған, ялҡыны тышҡа бәреп тора, ти. Егет был әбейҙе лә тегеләре кеүек итте, ти. Шунан, әбей ялбарырға тотонғас, егет дейеү тураһында һорашты, ти.

— Эйе, дейеү килеүен миңә килеп йөрөй, тик һин уның эргәһенә еңел генә инә алмаҫһың,— тип әйтте, ти, әбей.— Унда инеү өсөн һин бер батман май ал. Уны барғас та, дейеүҙең ҡапҡаһына һөрт. Ниңә тиһәң, ҡапҡалар ингән бер кешене ҡыҫып үлтереп тора. Бына һиңә булат ҡылыс, көсөң етеп, күтәрә алһаң, уның менән ажғырып ҡаршы килгән йыландарҙы, арыҫландарҙы турарһың. Шунан тағы шуны әйтәм: һинең Ҡанйерәнеңдең янбашын арыҫлан тартыр. Һин бурһыҡ ҡанына ҡулъяулығыңды манып ал да атыңдың яраһына яп. Яра тиҙ генә йүнәлер,— тине, ти.

Егет булат ҡылысты бер күтәреп ҡарай, күҙенән йәш сыға, икенсе тапҡыр күтәреп ҡарай, тыны ҡыҫыла, өсөнсө тапҡыр ҡылысты йән асыуынан күтәреп алды, ҡылыс еп-еңел булып тойолдо, ти. Батман майҙы алып, егет дейеүҙе эҙләп китте, ти. Китеп ултыра, ти, китеп ултыра, ти. Бара торғас, дейеүҙең ҙур, матур аҡ йорто күренде, ти. Килеп етте, ти, был дейеү торған урынға. Атынан төшә һалып ҡапҡаны майлағайны, ҡапҡалар шар асылып китте, ти. Шул ыңғайы арыҫландар, ажғырып торған йыландар ташланды, ти, бит егетеңә. Егет, булат ҡылысын бер уңға, бер һулға һелтәп, тегеләрҙе турарға кереште, ти. Ҡандан йылға аҡты, ти. Һуғыша торғас, Ҡанйерәндең янбашын бер арыҫлан умырып алды, ти. Егет әбей өйрәткәнсә эшләгәс, Ҡанйерәндең яраһы шунда уҡ йүнәлде лә ҡуйҙы, ти. Йыртҡыстарҙы ҡырып бөтөп, барып инде, ти, егет дейеү йәшәгән урынға. Барып инһә, ята, ти, дейеү йоҡлап. Шунан егет тегенең һаҡалынан һөйрәп торғоҙҙо, ти. Дейеү үкереп-үкереп ебәрҙе лә:

— Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме?— тине, ти.

— Атыш атаң башына, алыш кәрәк,— тине, ти, егет.

Былар өс көн, өс төн алыштылар, ти. Өсөнсө көн егет дейеүҙе муйынына тиклем батыра һуҡты, ти. Дейеү:

— Үлтерә күрмә инде, егет,— тип ялына, ти. Егет дейеүҙе бер келәткә индереп сынйырланы ла, икенсеһен асып ҡараһа, келәт эсе тулы матур-матур ҡыҙҙар, ти. Арала иң һылыуы — бер батшаның ҡыҙы, ти. Егет ҡыҙҙарҙы өйҙәренә ҡайтарып ебәрҙе, ти. Теге батша ҡыҙы ла, көтөргә вәғәҙә билдәһе итеп йөҙөк биреп, ҡайтып китте, ти.

Егет әсәһен алып килде, ти. Дейеү йортонда шатланышып донъя көтә башланылар, ти. Егет әсәһенә бөтә асҡыстарҙы бирҙе, ти, тик келәтте асмаҫҡа ҡушты, ти.

Бер көндө егет, Ҡанйерәнен менеп, этен эйәртеп, һунарға сығып китте, ти. Егеттең күҙҙән юғалыуы булды, ҡапҡанан әлеге Ҡарахан килеп тә инде, ти. Атаһын күреп, ҡатын иҫе китеп йығылды, ти. Ҡарахан, асҡыстарҙы ала һалып, келәттәрҙе ҡарарға тотондо, ти. Әлеге келәтте асып ҡараһа, сынйырлы дейеү ултыра.

— Зинһар, тип әйтәм, оло кеше, мине ҡотҡара күр, ни теләһәң, шуны үтәрмен, теләһәң, бөтөнләйгә ҡасып китермен,— тине, ти, дейеү.

— Мин һине ҡотҡарырмын, тик һин миңә егетте үлтереү юлын өйрәт,— тине, ти, Ҡарахан.

— Алыҫта, диңгеҙ буйында бер айыу булыр, һин шуның һөтөн килтерергә ҡуш. Ул айыуға бер эләккән кеше кире әйләнеп ҡайта алмай,— тине, ти, дейеү.

Егет кисләтеп кенә һунарҙан ҡайтты, ти. Әсәһе иҫһеҙ ята, эргәһендә Ҡарахан илап ултырған була, ти. Үҙе меҫкенләнеп кенә:

— Улым, мин һинең олатайың булам. Ғүмерем буйы донъя ҡыҙырып һеҙҙе эҙләнем, бына бөгөн килеп таптым тигәндә генә һинең әсәйең — минем ҡыҙым шатлығынан ауырып китте. Үлеп ҡуя күрмәһен, ете ҡат ер аҫтына төшөп булһа ла, берәй дарыу табып килтерергә кәрәк,— тигән була, ти. Егет аптырап ҡалған. Унда һуғылған, бында һуғылған, бер нәмә лә уйлап таба алмаған. Ахырҙа:

— Олатай, һин берәй әмәлен белмәйһеңме?— тип һораған.

— Белеүен беләм дә ул, улым, тик һинең хәлеңдән килмәҫ шул. Алыҫта, диңгеҙ буйында бер айыу бар икән. Шуның һөтөн эсерһәң, үлгән кеше лә терелә, тиҙәр,— тигән булды, ти, Ҡарахан.

Егет, Ҡанйерәненә атланып, этен эйәртеп, айыуҙы эҙләп сығып китте, ти.

Барып етте, ти, айыу ятҡан ергә. Ҡараһа, айыу ыңғырашып ауырып ята икән. Ниңә тиһәң, табанына ҙур бер таш ҡаҙалған булған. Егет, айыу табанындағы ташҡа элмәк һалып, иплэп кенә тартып алды, ти. Шул ваҡыт айыу:

— Кем һин, мәрхәмәтле егет? Сыҡ бында! — тине, ти. Егет ағас артынан килеп сыҡҡан. Айыу:

— Рәхмәт һиңә, батыр егет, мин был таш менән утыҙ йыл яфа сиктем. Һиңә минән нимә кәрәк, әйт! — тигән.

Егет айыуҙан ауырыу әсәһенә үҙенең һөтөн биреүҙе үтенгән. Айыу егеткә үҙенең һөтөн һауып биргән, өҫтәүенә, үҙенең бер балаһын да тотторол ҡайтарып ебәргән.

Ҡарахан егеттең ҡайтып килеүен күргәс тә, йүгереп барып, дейеүҙе сынйырҙан ысҡындырған да егетте аңғармаҫтан ғына үлтерергә ҡушҡан.

Егет, шатланып, йырлай-йырлай ҡайтып ингән. Әсәһенә айыу һөтөн эсермәк булып эйелһә, дейеү уның ҡулындағы һөттө әллә ҡайҙарға осора һуғып ебәргән дә үҙенә килеп тә йәбешкән. Эй киткән, эй киткән, ти, алыш. Бер егет, бер дейеү еңгән һымаҡ була, ти. Алыша торғас, егет дейеүҙе шундай итеп ергә һуҡты, ти, хатта ер ярылып китеп, дейеү ер аҫтына инеп юғалды, ти. Ер һелкенгән ыңғайы егеттең әсәһе лә:

— Ай-һай, ҡалай оҙаҡ йоҡлағанмын,— тип килеп торҙо, ти. Ҡарахан үле лә түгел, тере лә түгел, таш кеүек ҡатып ҡарап тора, ти. Егет әсәһенә бар хәлде һөйләп бирҙе, ти. Әсәһе лә үҙенең башынан үткәнде түкмәйсәсмәй һөйләп бирҙе лә:

— Улым, олатайыңа ниндәй яза бирһәң дә үҙ иркеңдә,— тине, ти. Шунан егет:

— Ҡараташ булып ҡат,— тип бер-ике тамсы айыу һөтө тамыҙғайны, Ҡарахан таш булып ҡатты ла ҡуйҙы, ти. Шунан егет:

— Тирмән ташы булып ҡат, дейеүҙе мәңге баҫып ят,— тип дейеү донъяһына айыу һөтөн һипкәйне, дейеү инеп киткән тапҡырға ғына ҙур тирмән ташы тәгәрәп килеп ятты, ти.

Егет, атына әсәһен ултыртып, этен, айыуын алып, ил ҡыҙырып сығып китте, ти. Ул үҙе ҡотҡарған ҡыҙҙың атаһы батшалығына ҡарай юл тотто, ти. Ай барҙылар, йыл барҙылар, ҡыҙҙың йәшәгән ҡалаһына килеп еттеләр, ти. Егет, ҡала кешеләренән һорашып, батша ҡыҙына йыуыныrға һыу ала торған ҡоҙоҡ янына барып ултырҙы, ти. Бер ваҡыт бер бик матур ҡыҙ ҡоҙоҡҡа һыу алырға килә, ти. Ҡыҙ килеп һыу алғас, егет:

— Матур ҡыҙ, һыу эсерсе? — тип һораны, ти. Ҡыҙ егеткә һыу бирҙе, ти. Егет унан был һыуҙы кемгә алып барыуын һорашҡан. Ҡыҙ егеткә был һыуҙы батша ҡыҙына алып барыуы тураһында әйтте, ти. Егет иплэп кенә ҡыҙ бүләк иткән йөҙөктө күнәк төбөнә төшөрҙө, ти.

Батша ҡыҙы, күнәкте алып йыуына башлағас, йөҙөктө күреп, үҙенең йөҙөгө икәнлеген таныны, ти. Шунан ул баяғы ҡыҙҙан кемде күреүен, был йөҙөктө кем биреүен һораша башланы, ти. Ҡыҙ уға бер мосафирға һыу эсереүен, башҡа берәүҙе лә күрмәүен әйтте, ти. Ҡыҙ тиҙ генә шул мосафирҙы табырға ҡушты, ти. Егетте баяғы ҡоҙоҡ эргәһендә табып, батша ҡыҙы янына алып ҡайттылар, ти. Ҡыҙ менән егет, өйләнешергә һүҙ ҡуйыштылар, ти. Ҡыҙҙың атаһы ла быға риза булды, ти. Шаулатып туй яһанылар, ти. Туйға егеттең атаһын да саҡырҙылар, ти. Илашы ла, шатлығы ла бергә булды, ти. Туй бөткәс, егеттең әсәһе ире менән ҡайтып китте, ти. Ҡыҙҙың атаһы батыр кейәүен үҙенең урынына батша итеп ултыртты, ти. Егет үҙе бик батыр, үҙе бик ғәҙел батша булып китте, ти.

## АЛМАБАТЫР МЕНӘН АЛМАБИКӘ

Борон-борон заманда булған, ти, ике һунарсы. Улар бер-береһе менән дуҫ булып, бергә һунар иткәндәр, ти. Тик быларҙың икеһенең дә бала-сағалары булмаған, шуға донъялары китек булып торған. Бала булмауҙан һәр ваҡыт зарлана торған булғандар, ти. Был ике һунарсы: «Әгәр ҙә беҙҙең беребеҙҙең малай, беребеҙҙең ҡыҙ балаларыбыҙ булһа, ҡоҙа булышыр инек», — тип һүҙ беркеткәндәр, ти.

Бер көндө шулай һунарҙан икәүләп ҡайтып килһәләр, әбей осраған быларға. Әбей һунарсыларҙың атып алған ҡош-ҡорттарына ҡарап алған да:

— Уңышығыҙ бик яҡшы икән, тик уландар, ниңәлер һеҙҙең кәйефегеҙ юҡ, — тигән.

Шул ваҡыт һунарсыларҙың береһе:

— Эй әбей, беҙҙең ҡайғыларыбыҙ ҙур: икебеҙҙең дә бала-сағабыҙ юҡ бит, бик-бик теләһәк тә булмай, — тип, әбейгә зарлана башлаған, ти.

— Ниңә һуң, улдарым, уны миңә элегерәк әйтмәнегеҙ, мин уны булдыра алам, — тигән, ти, әбей.

Шулай тип, был ҡарсыҡ һунарсыларҙы өмөтләндереп ебәргән. Икенсе көн ошо урындан һунарҙан ҡайтып барғанда, тағы ла теге әбейҙе осратҡандар.

Әбей уларға бер алманы уртаға ярып бирә лә, йәмәгәттәренә ашатырға ҡуша. «Ошо алманы ашаһалар, бала табырҙар»,— ти әбей.

Һунарсылар, әбейгә рәхмәт әйтеп, ҡыуанышып ҡайтып китәләр, ҡоҙа булышырға һүҙ ҡуйышалар. Ҡайтҡас та алманы йәмәгәттәренә тотторалар, «Аша, ошо алманы», тип. Ашағас, ике бисә лә гоманлы була. Ваҡыты еткәс, береһе — ул, икенсеһе ҡыҙ таба. Малайға Алмабатыр тип, ҡыҙға Алмабикә тип исем ҡушалар.

Ике һунарсы тағы ла нығыраҡ дуҫлашып йәшәп ятҡандар, балалары, буйға-һынға матур булып, 10—12 йәшкә еткәндәр, ти. Шул ваҡыт Алмабатырҙың атаһы үлеп киткән. Алмабатыр инәһе менән көн итеп, ярлыланып ҡалғандар, ти.

Ҡыҙҙың атаһы: «Ошондай ярлы егеткә алма кеүек ҡыҙымды бирә алмайым»,— тигән дә донъяһы менән икенсе яҡҡа күсеп киткән, ти.

Алмабатыр бик мөһәбәт, матур, көслө бер егет булып үҫеп етә. Уға ғашиҡ булмаған ҡыҙ ҡалмай. Тик егеттең күңелен ауылдағы бер ҡыҙ ҙа табалмай, ти. Берҙән-бер көн ул тирмәндә он тарттырып ҡайтып килһә, ике һунарсыға тап булған теге әбей Алмабатырға ҡаршы сыға.

— Нихәл, улым, әйбәт кенә йөрөйһөңмө?

— Әйбәт кенә ле, инәй,— ти егет.

— Һинең атайың менән дуҫ булып йөрөгән һунарсының бик матур бер ҡыҙы бар. Һинең атайың менән улар ҡоҙа булышҡайнылар. Һиңә йәштән әйттерелгән шул кәләшеңде барып алырға кәрәк,— ти әбей.

Өйгә ҡайтҡас, Алмабатыр бойоғоп ҡына ашамай-эсмәй ултыра икән, ти. Инәһе, быны күреп ҡалып:

— Ни өсөн ҡайғыраһың, улым? — тип һораған. Алмабатыр:

— Үҙемә әйттерелгән Алмабикә тигән ҡыҙҙы һағынам,— тигән.

— Атаҡ-атаҡ, һиңә ҡыҙ әйттергәнебеҙ юҡ бит әле беҙҙең. Алмабикә исемле ҡыҙҙы минең ишеткәнем дә юҡсы,— тип алдаған әсәһе.

Егет икенсе тапҡыр теге әбейҙе күреп һораша. Әбей егеткә әйтә:

— Һин ҡайт та әсәйеңдән көлсә һора. Бешереп биргәс, эҫе көлсәне тот та түшенә баҫ. Ысынын әйткәнсе ебәрмә,— ти.

Алмабатыр ҡайта ла әсәһенән көлсә һорай. Бешереп биргәс, эҫе көлсәне тота ла түшенә баҫа:

— Ҡайҙа ул Алмабикә исемле ҡыҙ? Уны барып алырға рөхсәт ит миңә,— ти.

Әсәһе түше яныуға сыҙай алмай, илап ебәрә, барыһын да һөйләп бирә:

— Беҙ хәҙер ярлы булғас, ҡыҙын һиңә бирмәҫ шул ул,— ти.

Егет, ҡайғырып, көндән-көн һарғая башлағас ҡына, әсәһе риза була. Алмабатыр ҡайһы атты менеп барырға кәңәш һорай. Әсәһе әйтә:

— Йылҡы өйөрөнә бар ҙа, йүгәнеңде сылтырат, ҡороғоңдо ҡалтырат,— ти.— Ниндәй ат әйләнеп ҡараһа, шуны тотоп менерһең,— ти.

Алмабатыр йылҡы көтөүенә барып, йүгәнен сылтыратып, ҡороғон ҡылтыратҡан икән, ябыҡ ҡына бер йөнтәҫ ат ҡараны, ти. Егет ғәрләнеп кире ҡайтҡан. Икенсе тапҡыр барып йүгәнен сылтыратып, ҡороғон ҡалтыратһа, баяғы аттан да яманыраҡ бер ат ҡараған, ти. Егет тағы ла ғәрләнеп кире ҡайтып киткән. Өсөнсө тапҡыр сығып йүгәнен сылтыратып, ҡороғон ҡалтыратҡан икән, иң насар ат үҙе килеп, йүгәненә башын кейҙергән. Егет алып ҡайтып, арҡаһына әйәр һалған икән, ат толпарға әйләнгән, ти. Алмабатыр атланған да юлға сығып киткән.

Ул, әйҙә, бара торһон, беҙ Алмабикәгә киләйек. Алмабикә, үҙен бик күп бай егеттәр һоратыуға ҡарамаҫтан, уларҙың береһенә лә риза булмайынса, Алмабатырҙы көтә, һағына икән, ти. Уның күңелендә гел шул егет кенә булған, ти.

Ә Алмабатыр бара, шыр урмандар, бейек тауҙар аша үтә, бүреләр көтөүенә осрай, нисек етте шулай, бүреләрҙән ҡасып ҡотола. Бара торғас, бер ауылға килеп етеп, ауыл ситендәге өйгә инеп, Алмабикәне һораша. Бында яңғыҙ бер әбей тора икән, ул Алмабатырға юл өйрәтә. Атын ошо әбейҙә ҡалдыра ла, үҙе алама кейем кейенеп, Алмабатыр Алмабикә йәшәгән һарайға килә. Һарай ҡараусылары уның менән һөйләшмәйҙәр ҙә, һарайға яҡын да ебәрмәйҙәр.

Әбей егеткә бер хәйлә өйрәтә:

— Һин анауында йөрөгән ҡуй көтөүе эргәһенә бар. Алмабикәнең унда һөйгән ҡуйы бар, ул шул ҡуйҙы күрер өсөн һәр ваҡыт килеп йөрөй. Һин шул ҡуйҙың ботон һындыра һуҡ та, Алмабикәгә алып бар,— ти.

Егет ҡуй көтөүенә барһа, Алмабикәнең иң яратҡан ҡуйы көтөүҙән артҡа ҡалып бара икән. Ул ҡуйҙың аяғын һындыра һуға ла, ҡуйҙы күтәреп алып китә. Ҡуйҙы көтөүсегә килтереп:

— Бынау ҡуйың бото һынып ятып ҡалған бит,— ти.

Көтөүсе Алмабикәгә хәбәр итергә ашыға.

Ҡыҙ шундуҡ килеп тә етә. Алмабатыр ҡыҙҙы күреү менән ғашиҡ була. Алмабикә лә ғашиҡ. Егеттән һорай:

— Һин ҡайҙа йәшәйһең? — ти. Егет:

— Анауҙағы күрше ауылда, иң ситтәге өйҙә,— ти.

Кис булыу менән Алмабикә әбейҙең өйөнә килә. Егет үҙен белгертә, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултыралар, ҡауышырға һүҙ беркетәләр. Ҡыҙ егеткә көн һайын кис һарайға килергә ҡуша. Улар осраша башлайҙар. Нисек кенә һиҙҙермәҫкә тырышһалар ҙа, ҡыҙҙың атаһы быны белеп ҡала.

— Һин кем менән осрашаһың? — тип һорай бер көндө.

Алмабикә Алмабатыр менән осрашыуын һөйләй, егетте атаһы менән таныштыра. Атаһы үҙенең дуҫының улы икәнлеген таныһа ла, ҡыҙын бирмәҫкә ныҡ тора. Алмабикә, егеткә бармаҡ булып, атаһынан үтенгәс, атаһы егетте берәй хәйлә ҡороп үлтермәк була. Ул бик ҙур йыйын йыя. Бөтә тирә-яҡтан халыҡтар киләләр. Ҡарт егетте йыйында иҫертеп үлтермәк була. Алмабикә быны һиҙеп ҡала ла егеткә балды эсмәйенсә яғаһынан ҡойоп ултырырға ҡуша. Үҙе әбейҙең өйөнән Алмабатырҙың атын килтереп ҡуя, башҡаларҙың өҙәңгеләрен өҙөп сыға.

Ҡунаҡтар бал эсә, иҫерешеп бөтәләр. Алмабатыр ҙа иҫергән һымаҡ булып ултыра. Алмабикәнең атаһы алдан әҙерләп ҡуйған кешеләренә ымлай, «Йә, үлтерегеҙ!» — ти инде. Быны күреп ҡала ла, ҡыҙ тиҙ генә килә һалып, Алмабатырҙың ҡолағына шыбырлай: «Ҡас тиҙерәк! — ти.— Атыңды алып килеп ҡуйҙым»,— ти.

Алмабатыр, тышҡа сығып инәйем әле, тигән булып, мәжлестән сыға ла, атына менеп ҡаса. Тегеләр ҡыуабыҙ тип, аттарын менергә аҙапланалар,— өҙәнгеләре өҙөк булғас, йығылып төшөп тик торалар.

Алмабатыр урманға барып йоҡлай.

Таң атҡас күрә, бер турғай уның тирәһендә урала. Егет, хат яҙып, турғайға бирә, «Бар Алмабикәгә илтеп бир»,— ти. Турғай Алмабикәгә хат алып бара.

Ҡыҙ менән егет шулай хат яҙыша башлайҙар. Турғайҙың хат килтереүен бер хеҙмәтсе ғәрәп һиҙеп ҡала. Ул ҡыҙҙың атаһына әйтә. Атаһы бик үк ышанып етмәй быға. Турғайҙы тоторға ҡуша.

Бер көндө, Алмабикә өйҙә юҡта, турғай тәҙрә аша бүлмәгә инеүе була, ғәрәп уны тотоп та ала. Турғайҙан

егеттең ҡайҙа икәнлеген һорайҙар. Ни тиклем яҙалаһалар ҙа турғай әйтмәй. Уның йөнөн йолҡоп бөтәләр, тик башында ғына бер суҡ йөн ҡалған була. Уныһын да йолҡоп алғас, ул «суҡ», ти ҙә үлеп китә. «Суҡ» тигәнде ишетеп ҡалалар ҙа: «Алмабатыр Суҡ буйында икән»,— тип эҙләп китәләр.

Суҡ йылғаһы буйында егетте табып, башын ҡылыс менән сабып өҙәләр. Башын тоҡҡа һалып алып ҡайтып, ҡыҙҙың атаһына күрһәтәләр. Алмабикәгә Алмабатырҙың үлтерелеүе хаҡында бер ни ҙә әйтмәйҙәр. Бер аҙҙан һуң ғәрәп быны Алмабикәгә әйтә. Ул ҡыҙға үҙе өйләнергә самалап йөрөгән була. Алмабикә атаһынан таҡмаҡлап егеттең башын һорай:

— Батырымдың башын бирсе, атай, бирсе, атай! — ти.

Атаһы бирмәй, бик ҡаты тора. Әсәһе ҡыҙын йәлләп әйтә башлағас ҡына риза була.

Алмабикә егетенең башын ҡосаҡлап ала ла, тройка ат ектереп, Суҡ буйына китә. Алмабатырҙың кәүҙәһен эҙләп таба ла, шул ерҙә үҙен-үҙе сәнсеп үлтерә. Ике-өс көн үткәс кенә табалар. Алып ҡайтып, икеһен йәнәш күмәләр. Ҡыҙҙың үлеүендә теге ғәрәпте ғәйепләп, уны ла үлтерәләр. Ғәрәпте бер үҙен бер ситкә күмәләр.

Алмабикә менән Алмабатыр ҡәберенән бик матур ике сәскә үҫеп сығып, бер-береһенә баштарын эйеп үҫәләр, ә ғәрәптең ҡәберенән дегәнәк үҫеп сыҡҡан, ти.

## ӘХМӘТ БАТЫР МЕНӘН ҠАСИМ БАТЫР

Борон заманда бер шәһәрҙә Ғариф тигән бер батша йәшәгән. Уның өс ҡыҙы, бер улы булған. Иң кесеһе — ул кеше. Шәһәрҙән ун ике саҡрым йыраҡлыҡта батшаның баҡсаһы бар икән. Баҡсаның әйләнәһе лә ун ике саҡрым, ти. Донъяла ниндәй емештәр булһа, шулар барыһы ла баҡсала бар икән. Юҡ әйбер генә юҡ, ти, бында. Баҡсала сәйханалар ҙа, ҡунаҡ йорттары ла бар, ти. Кешеләр икенсе ҡаланан, сит илдәрҙән дә килеп ял итәләр икән.

Батшаның ҡыҙҙары еткән. Батша ҡыҙҙарына баҡсаға бармаҫҡа ҡуша. Май айының матур саҡтары, июнь-июль айҙары етә, күңелле саҡ бит инде! Ҡыҙҙарҙың береһе ҡустыһына:

— Әхмәт, бар ат ек, баҡсаға барабыҙ,— ти.

Ат ектеләр, ултырып киттеләр, ти, былар. Баҡсаға килһәләр, шул тиклем күп халыҡ, ти. Бер заман,

ел-дауыл ҡубып китеп, халыҡ ағас тамырына йәбешеп ятып бөттө, ти. Дауыл үтеп киткәс, Әхмәт апаларын бер ергә йыя, ә оло апаһы юҡ. Кешенән һорап ҡаранылар — юҡ, бер кем белмәй, ҡыҙ ғәйеп. Аталарына ҡайтып әйттеләр, ти. Батша бик асыулана. Ҡабат бармаҫҡа ҡуша. Икенсе йылын ҡыҙҙар тағы түҙә алманылар, баҡсаға киттеләр. Әхмәттең уртансы апаһын да дауыл алып китә, өсөнсө йылды — кесе апаһын. Шулай итеп, Әхмәттең өс апаһы ла ғәйеп була.

Бер ваҡыт Әхмәт төш күрә. Төшөндә бер һылыу ҡыҙ:

— Эй-й, Әхмәт, мине эҙләп тә тапмайһың! — ти.

Әхмәт был ҡыҙға төшөндә ғашиҡ була ла эҙләп китергә йыйына. Атаһына:

— Атай, мин апайҙарымды эҙләп ҡайтайым,— ти.

— Уларҙы ҡайҙан тапмаҡ кәрәк, дейеү урлаған бит,— ти атаһы.

Әхмәт, ныҡыша торғас, атаһының ризалығын ала ла һыбай сығып китә. Эй бара, эй бара, бара торғас, арыны, ял итергә ятты. Йоҡоһонан торһа, атын бүре ашап киткән. Йәйәү китте хәҙер. Бара торғас, бер аҡланға барып сыҡты. Аҡлан уртаһында — ҡыҙыл түбәле йорт. Әхмәт барып керһә, шунда апаһы тора икән. Ҡосаҡлашып, илашып күрештеләр, ти, былар.

— Оҙаҡламай дейеү еҙнәң ҡайтыр, йәшерен!

Әхмәт йәшерenә. Эй бер заман, дауыл ҡуптарып, дейеү ҡайтып төшә.

— Фу-фу, әҙәм еҫе! — ти дейеү.

— Эйе бына, көнө-төнө әҙәм ашап йөрөйһөң дә.

— Юҡ, кем килде?

— Әйтмәйем, ашайһың. Ҡәйнешең килһә, ни эшләр инең?

— Эй, кеше ҡәйнеште ашаймы ни!

Әхмәт сыға. Дейеү ҡотһоҙ була икән ул. Үҙе гел йөн генә, тырнаҡтары бер сирек! Әхмәтте ҡунаҡ итәләр. Әхмәттең башында тик шул һылыу ҡыҙ икән. Төшөн ул дейеү еҙнәһенә лә һөйләй.

— Ҡәйнеш, ул бик йыраҡта, Лена Прекрасная исемле ҡыҙ, һин түгел, беҙ уны ала алмайбыҙ. Мин һиңә икенсе бер батша ҡыҙын димләрмен.

— Юҡ, еҙнә, мин шул Ленаға барам.

Әхмәтте юлға оҙатып ҡалдылар. Дейеү бер ҡулъяулыҡ та бүләк итте.

— Бик мохтаж сағыңда ошоно йәйеп кенә һалырһың, бары ла булыр,— тине.

Әхмәт китте. Китте, китте был, бара торғас, зәңгәр

түбәле йорт күрҙе. Бында уртансы апаһы йәшәй икән. Был еҙнәһе лә һунарҙа икән. Быныһы менән дә теге еҙнәһе менән осрашҡан кеүек осраша инде. Әхмәт был дейеү еҙнәһенә лә юлға ниңә сығыуын һөйләп бирә.

— Еҙнә, мин төштә кәләшемде күрҙем, уны табырға тейешмен,— ти.

— Һин, ҡәйнеш, ул уйыңдан ҡайт: һин түгел, беҙ, дейеүҙәр, ала алманыҡ. Ул бит Лена Прекрасная, ә үҙе батша! — ти еҙнәһе.

Әхмәт тыңламай. Уртансы дейеү еҙнәһе тағы бер ҡулъяулыҡ бирҙе, егет ары китте. Китеп бара торғас, кесе апаһына килеп етте. Тағы шул уҡ хәл булды: теге еҙнәләре менән осрашҡан кеүек осрашты, үҙенең ҡайғыһын һөйләп бирҙе. Был еҙнәһе лә Әхмәткә йөрөмәҫкә ҡуша, Әхмәт уны ла тыңламай. Хушлашҡанда Әхмәт быяла трубка һөйәп ҡуйҙы ла:

— Эсе һөт менән тулһа, минең өсөн ҡайғырмағыҙ; ҡан менән тулһа, эҙләй сығығыҙ! — тине.

Кесе дейеү ҙә быға бер ҡулъяулыҡ бирҙе. Оло еҙнәһе — урмандағы ҡоштарға, уртансыһы — ерҙәге бар кейеккә, ә кесеһе һыуҙағы йәнлектәргә хужа икән.

Китте был тағы сығып. Бик күп йылдар барғас, бер шәһәргә етте. Был Лена Прекрасная батшалығы була. Һарайҙың ишек төбөнә килһә, бер һаҡсы тора:

— Ни кәрәк?

— Лена Прекраснаяны алырға килдем.

Теге һаҡсы көлөмһөрәй ҙә Ленаға инеп әйтә.

— Керһен,— ти Лена Прекрасная.

Әхмәтте алып инәләр. Әхмәт үҙенең төшөн һөйләп бирә. Ленаға тағы ла ныҒыраҡ күҙе төшә. Лена егетте тыңлап бөткәс, ҡулын һелтәгәйне, Әхмәтте илттеләр ҙә яптылар. Бәй, ҡараһа — зиндан тулы халыҡ!

— Ни эшләп килдең?

— Лена Прекраснаяны алырға.

Эй бынан көләләр. Зинданда ниндәй генә бәһлеүән юҡ! Килгән берен төрмәгә бикләп тик тора икән был ҡыҙ.

— Һин Лenaның үҙен күрҙеңме? — тип һорайҙар бынан.

— Күрҙем,— ти Әхмәт.

— Һай, беҙ күрмәйенсә ятабыҙ әле. Һиңә төрмәлә ятһаң да ярай.

Әхмәт асыҡты. Шунан ҡулъяулығын йәйеп һалғайны, эй төрлө-төрлө ашамлыҡ-эсемлек тулып китә,

ул музыка уйнай! Күмәкләп бейейҙәр, йырлайҙар былар хәҙер. Әхмәтте иптәштәре бик ярата инде.

Был хәбәр Лена Прекраснаяға ишетелә. Жандармдар:

— Был Әхмәттең эше булырға тейеш,— тип әйттәләр. Лена Әхмәтте саҡырта:

— Кисә ниндәй тауыш булды?

— Мин һине күреү шатлығынан байрам ойошторҙом.

— Йә, күрһәт әле, нисек ойошторaһың икән?

Әхмәт яулыҡты йәйеп ебәрҙе, ул музыка, ул йыр менән донъя тулды.

— Әхмәт, һин был яулығыңды миңә һат!

— Юҡ һатмайым! Аҡсаға һатмайым, минең бер шартымды үтәһәң, бирәм.

— Шартың нимә?

— Шартым шул: бер-беребеҙгә ҡара-ҡаршы ултырабыҙ, ирендәр сирек кенә теймәй; һинең дүрт бәһлеүәнең башымдан, яурындарымдан, билемдән тотоп торалар, мин һиңә тартылам; әгәр ирендәр тейһә, һин — минеке; теймәһә, ҡулъяулыҡ — һинеке. Бер сәғәт тоторға.

Ярыш башланды. Әхмәтте дүрт бәһлеүән тотоп тора, ун минут үтте, ярты сәғәт үтте, бер сәғәт үтте. Тегеләр ҡағыҙ ҡалынлығы ла яҡын ебәрмәнеләр. Мин үҙем шунда сәғәт тотоп торҙом. Бер сәғәт үткәс тә, бәһлеүәндәр Әхмәтте ырғытып ебәрҙеләр ҙә төрмәгә яптылар. Яулыҡты Лена алды инде, шартын үтәне бит.

Әхмәт иптәштәренә барыһын да энәһенән ебенә тиклем һөйләп бирҙе. Иптәштәре:

— Яулыҡ булмағас, асығабыҙ бит инде! — тиҙәр, уфтаналар.

— Ҡайғырмағыҙ!

Әхмәт икенсе яулығын йәйеп ебәрһә, беренсеһенә ҡарағанда ла мулыраҡ һый тулып китә. Төнө буйы уйнап сыҡтылар. Төрмә башлығы тағы Ленаға барып әйтте. Әхмәтте саҡырттылар, Лена:

— Һинең ҡулъяулығың тағы бармы?

— Бар.

— Һатаһыңмы?

— Юҡ, һатмайым, был юлы элекке кеүек ике сәғәт торорға.

Тағы комиссия һайланылар, мин дә шунда торам. Башланды. Юҡ, бит әй, әҙ генә лә яҡын ебәрмәйҙәр тегеләр. Ике сәғәт үтеп тә китте, бәһлеүәндәр Әхмәтте ырғытып та ебәрҙеләр. Ҡабат төрмәгә илтеп яптылар.

— Ни булды?
— Был юлы ике сәғәт тоттолар.
— Яулыҡ ҡайҙа?
— Алып ҡалдылар.
Төрмәлә ятыусылар ҡайғыра башланылар.
— Ҡайғырмағыҙ, миндә тағы бар.
Әхмәт өсөнсө яулығын йәйеп ебәргәйне, ашамлыҡ-эсемлек менән донъя тулды. Икенсе көн тағы саҡырттылар. Әхмәт был юлы өс сәғәт тоторға тигән шарт ҡуйҙы.
Ярай, тағы башланды. Бәһлеүәндәр тотоп тора, мин ҡарап торам, комиссия ныҡ эшләй. Бер сәғәт үтте, ике сәғәт үтте. Ике сәғәт ярым үткәйне, ҡыҙҙың ирене тейеп ҡалды. Бәһлеүәндәрҙең ҡулдары талып киттеме икән?! Лена шул саҡ.
— Ебәрегеҙ! — тип ҡысҡыра.
Бәһлеүәндәр Әхмәтте ташлап сығып та ҡастылар, комиссия ла тайҙы. Мин генә бер аҙ ҡарап торҙом.
Ярай, Лена хәҙер Әхмәткә барҙы, никах уҡыттылар. Законда ҡаралғанса, ҡыҙ батша иргә сыҡһа, батша булып тора алмай икән. Лена ярандарын йыйҙы ла:
— Әфәнделәр, мин тормошҡа сыҡтым, батша һайлағыҙ,— тине.
Әхмәт бында ай буйына булды бит, уны белеп бөткәндәр инде. Шунда ултырған бер вәзир:
— Әхмәт булһын! — тине.
Был һүҙгә башҡалары ла ҡушылды, Әхмәт батша булып һайланды.
Хәҙер Әхмәт Ленанан батшалыҡты ҡабул итеп алып йөрөй. Лена уға бер ҡорал складын күрһәтә, асҡыстарын бирә. Ун икенсе складты ҡарамаҫҡа ҡуша.
Лена Прекрасная:
— Әхмәт, бынан ун ике саҡрым ғына апайым йәшәй, барып күреп ҡайтайым әле,— ти.
— Бар,— ти Әхмәт.
Лена киткәс, Әхмәттең теге складты ҡарайһы килә. Барып асып ебәрһә, тимер бағанаға бер баһадирҙы тимер сынйырҙар менән бығаулап ҡуйғандар, бөтөнләй сырмап бөткәндәр, ти, бының йәне лә бик аҙ ҡалған, инде башы ла һалынып төшкән, ти.
— Әхмәт, миңә бер биҙрә һыу килтереп эсер. Эсерһәң, мин һиңә йөҙ илле ғүмер бирәм,— тине, баһадир.
Әхмәт килтереп эсерҙе. Бер биҙрә һыуҙы эскәйне, был башын күтәрҙе.
— Әхмәт, ике биҙрә һыу булһын инде, тағы йөҙ илле ғүмер вәғәҙә итәм.

Әхмәт тағы килтереп эсергәйне, сынйырҙары сылтырап ҡуйҙы.

— Әхмәт өс биҙрә һыу булһын инде, тағы йөҙ илле ғүмер вәғәҙә итәм! — ти теге.

Әхмәт килтереп эсерҙе. Баһадирҙың өсөнсө биҙрәне эсеп бөтөүе була, ҡуҙғалып тороп баҫа, шул ыңғайы сынйырҙар ҙа таралып бөтә. Баһадир таш һарайҙың стенаһына тибә, таш һарай ҡойолоп төшә. Унан бер ҡара айғыр килеп сыға. Баһадир айғырға атланып ала ла:

— Әхмәт, һин Лена Прекраснаяны эҙләп мәшәҡәтләнмә, ул минеке! — ти ҙә сабып сығып та китә.

Шул саҡ Лена апайынан ҡайтып килгән була. Теге баһадир уны эләктереп ала ла китә. Бының аты алты ҡанатлы икән, бер һикерһә, бер саҡрым һикерә лә ҡуя. Барып төшкән ерендә өй соҡоро ҙурлығы соҡорҙар ҡала. Шулай итеп былар күҙҙән дә юғалдылар. Әхмәт туҙан болотон ғына күреп ҡалды. Шул ваҡыт күсер бер үҙе ҡайтып төштө.

— Ҡайҙа Лена?

— Берәү алып китте...

Әхмәт тиҙ генә ярандарҙы йыйҙы ла хәлде һөйләп бирҙе.

— Мин Ленаны эҙләп китәм,— тине.

— Юҡ, һин барма: ул — Ҡасим батыр, донъяла уға тиң юҡ! — тиҙәр ярандары.

Әхмәт бик үтенеп һорағас, риза булдылар. Әхмәт бик яҡшы итеп йыйынды ла китте. Ҡасимдың аты ҡара тупраҡ аҡтарып барған, шул юл менән китте. Бинокле бар, ҡайҙа ҡара тупраҡ, шуны ҡарап бара. Бара торғас, бер аҡланға килеп сыҡты. Аҡлан уртаһында — ҡыҙыл түбәле, алты мөйөшлө өй. Лена шунда икән. Әхмәтте ҡосаҡлап алды, ти, был.

— Әйҙә ҡасайыҡ. Ҡасим һунарҙа.

Ҡастылар былар. Ҡасим һунарҙа йөрөгән саҡта, айғыры сырсый.

— Ниңә сырсыйһың?

— Кәләшеңде Әхмәт урлап алып китте бит! — ти аты.

Ҡасим тегенең артынан ҡыуа төштө. Килеп етеп:

— Әхмәт, мин һиңә йөҙ илле ғүмер биргәйнем, кире алам,— тип, Ленаны күтәреп алып осто ла китте.

Әхмәт бик ҡайғыра. Кире барып, ҡатынын тағы урланы. Ҡасим ҡыуып етеп, тағы йөҙ илле йыл ғүмерен кире алды. Әхмәт өсөнсө ҡабат урланы. Өсөнсөһөндә ҡыуып етте лә:

— Әхмәт, һин әйткәнде тыңламаның, үҙеңә үпкәлә,— тип, башын ҡыйҙы ла төшөрҙө бының. Лenaны алып китте.

Ярай, быныһы шулай булып торһон, хәҙер Әхмәттең дейеү еҙнәләренә киләйек. Әхмәт Ленаға өйләнгәс, ҡалдырып киткән теге быяла трубка һөт менән тулды.

— Беҙҙең ҡәйнештең юлы уң икән,— тип уйлап ҡуйҙылар.

Ә хәҙер теге һауыт ҡан менән тулды. Хәҙер өс бажа, өс дейеү, быны күреп, тиҙ генә йыйынып, юлға сыҡтылар. Килһәләр, бәй, Әхмәт үлеп ята!

— Ни эшләргә?

— Ни эшләргә тип ни, бөтәбеҙ ҙә батша, берәй әмәл ҡылайыҡ!

Оло дейеү һыҙғырып ебәргән икән, донъялағы бар ҡоштар йыйылған.

— Үлгән кешене терелтә алаһығыҙмы?

— Юҡ,— тиҙәр ҡоштар.

Ҡоштар араһында табипсы буламы ни? Барыһын да таратып ебәрҙе. Шунан уртансы дейеү һыҙғырып ебәрҙе. Ҡоро ерҙәге бөтә кейектәр йыйылды.

— Арағыҙҙа табипсы бармы?

Былар араһында ла табипсы табылмаған. Өсөнсөһө һыҙғырған, һыу йәнлектәре, балыҡтар йыйылған, баҡалар ҙа килеп еткәндәр.

— Арағыҙҙа табипсы табылырмы?

Бер баҡа:

— Минең апайым табипсы, ул беләлер,— ти.

— Ҡайҙа апайың?

— Ул, гәрип, артта ҡалды.

Уһ-аһ, уһ-аһ итеп, бер сатан баҡа килеп етте, ти. Килеп етте лә:

— Быны терелтеп була,— тип әйтте, ти, был.

— Нисек?

— Әнглиә* ерендә ике күл бар, береһе тере һыуы, икенсеһе үле һыуы. Шул күлдәрҙән ике шешә һыу килтерергә кәрәк,— ти сатан баҡа.

Донъяла алабоға тигән ҡош** бар икән, шул бик шәп оса икән. Оло дейеү һыҙғырып ебәргәйне, көллө ҡоштар йыйылды. Теге ҡошто таба һалып, аяғына ике шешә бәйләнеләр. Шунан алабоға осоп китте, башҡа ҡоштарҙы тараттылар.

---

* Әнглиә — Англия.

** Алабоға тигән ҡош — өйрәк төрө, башында суғы була.

Алабоға теге күлдәр янына килһә, һәр күлдең ҡарауылсыһы бар икән. Бер күлдең ҡарауылсыһы һуҡыр, икенсеһе аяҡһыҙ, ти. Ҡош, аяҡһыҙ ҡарауыллаған тере күл өҫтөндә леп-леп итеп кенә осоп тороп, һыу тултырып алды. Аяҡһыҙ кеше ни эшләһен инде. Шунан икенсе күл өҫтөндә тороп, икенсе шешәһен дә тултырып алды ла осоп ҡайтты ла китте.

Бында көтөп кенә торалар икән. Әхмәттең башын тигеҙ генә беркетеп, үле һыу менән йыуғандар икән, йөйө лә беленмәй, ти.

Шунан баҡа тере һыу менән ыуа башлай. Әхмәт күҙен аса, шунан аяҡ-ҡулдарын ҡыймылдата. Башын ҡалҡыта, тороп ултыра, уянып бөтә алмай әле, эштең айышына төшә алмай тора.

— Еҙнәләр, һеҙ түгелме?

— Беҙ.

— Мин йоҡлап киткәнмен бит.

— Эйе бына, йоҡлағанһың! Һинең башың ҡырҡыулы ине бит! Һинең башыңды Ҡасим Бессмертный ҡыйып төшөргән!

— Еҙнәләр, барыбер мин Лена Прекраснаяны алырға тейешмен,— ти Әхмәт.

— Һин ул Ленены алып ҡасма, Ҡасимдың йәне ҡайҙа икәнен бел! Алты ҡанатлы атты ҡайҙан алды икән, шуны ла бел.

Еҙнәләре, теге дейеүҙәр, шулай тиҙәр ҙә осоп ҡайталар ҙа китәләр.

Әхмәт тағы Лена ҡырына барҙы.

— Ҡасабыҙмы?

— Юҡ, хәҙер ҡасмайбыҙ.

Ике-өс йыл үтеп китте бит инде! Әкиәт бит инде, ҡыҫҡа һөйләһәң дә, күп ваҡыт үткән була. Быларҙың ике-өс йәшлек ҡыҙ балалары бар, иҙәндә шыуышып йөрөй. Әхмәт Ленаға әйтә:

— Ҡасим Бессмертный һунарҙан ҡайтҡас, мин баҙҙан балаға беҙ менән сәнсермен. Бала ҡысҡырып илағас, Ҡасим ниңә илай тип һораһа, атайым атты ҡайҙан алған, тип һорай ул тиерһең,— ти. Шулай һөйләштеләр былар, килештеләр.

Ҡасим ҡайтҡас, сәй эсеп ултыралар ине, бала ҡысҡырып илап ебәрҙе.

— Ниңә илай ул?

— Атайым ҡара айғырҙы ҡайҙан алған? — тип һорай.

— Мин уны көнсығыш яҡта бер әбейҙән өс көн көтөү көтөп алдым,— тине Ҡасим.

Ярай, быныһы булды, ишетте быны Әхмәт. Бала тағы ҡысҡырып илап ебәрҙе.

— Ниңә ҡысҡыра?

— Атайымдың йәне ҡайҙа? — тип һорай.

— Минең йәнем һарыҡ тәкәһендә.

Ярай, быныһын да белделәр.

Лена Прекрасная бик аҡыллы ҡатын була. Ул Әхмәтте ярата. Ҡасим менән торорға тәне лә, йәне лә тартмай. Әхмәт һаман баҙҙа ята әле.

Икенсе көн Ҡасим һунарҙан ҡайтыуға, Лена теге тәкәнең мөгөҙөнә таҫма тағып ҡуя.

— Бәй, ниңә таҫма таҡтың?

— Һинең йәнең шунда булғас, ҡәҙерләйем.

— Ҡатындарҙың сәсе оҙон, аҡылы ҡыҫҡа тиҙәр, дөрөҫ икән. Тәкәлә йән булғас, уны һуйғас, мин үлгән булам даһа!

Быны Әхмәт ишетеп ултыра. Баҙҙан теге балаға тағы беҙ менән төртә, ҡыҙыҡай тағы ҡысҡырып илап ебәрә.

— Ниңә ҡысҡыра? — тип һорай Ҡасим.

— Атайымдың йәне ҡайҙа? — тип илай ул, ти Лена.

— Минең йәнем анау һеперткелә.

Икенсе көн Ҡасим һунарҙан ҡайтыуға, ҡатын теге һеперткене суҡлап-матурлап түргә мендереп ҡуйҙы.

— Бәй, ниңә улай итәһең?

— Һинең йәнең шунда булғас, ҡәҙерләйем.

— Һей-й, иҫәр икәнһең! Минең йән шунда булғас, һепертке таралһа, үлергә тейеш булам бит.

Шул ваҡыт Әхмәт баланы аҫтан тағы сәнсте.

— Ниңә ҡысҡыра?

— Һинең йәнеңде һорай.

— Минең йәнем ете диңгеҙ артындағы утрауҙа. Шул утрауҙа бер тирәк бар, тирәк аҫтында бер ҡош өс йомортҡа баҫып ултыра, бына шул минең йәнем.

Булды, хәҙер дөрөҫөн белделәр. Әхмәт бик яҡшылап юлға әҙерләнде лә көнсығыш яҡтағы әбейҙе эҙләп китте. Эй бара, эй бара, бара торғас, аҙығы бөттө быяың, кейеме лә туҙҙы. Килә торғас, бер бүрегә тап булды. Был бүрене атырға уйланы: ас бит инде Әхмәт.

— Әхмәт, атма! Минең балаларым бар. Кәрәк сағында саҡырырһың,— ти бүре.

Тыңлап Әхмәт, атманы, ары китте. Бара, бара, исмаһам, бер генә йәнлек тура килмәй. «Юҡҡа шул бүрене атып ашап китмәнем»,— тип һөйләнеп бара был. Быға бер ҡарсыға тура килә. Атайым тип, мылтығын төҙәгәйне, ҡарсыға ҡысҡыра:

— Әхмәт, атма, атма, һиңә бер ярҙамым тейер! — ти.

Быны ла атманы, тағы китте был. Китеп бара, китеп бара, бер ҡырмыҫҡа ояһына барып етә. Был таяҡ алды ла ояны болғата башланы. Ҙур ғына аҡ ҡырмыҫҡа килеп сыҡты ла:

— Әхмәт, теймә инде минең әрмейәмә, һиңә бер ярҙамға ярарбыҙ,— тине.

Шулай тигәс, быны ла тыңланы, ары китте Әхмәт. Бара торғас, һыу буйына барып сыҡты. Суртан тап булды. «Быларҙы тыңлап асҡа үлергәме?» — тип, инде аттым тигәндә, суртан телгә килде:

— Әхмәт, атма! Бер йомошоңа ярармын.

Тағы китте был. Би-и-к оҙаҡ киткәс, бер бесәй тура килде. Бесәй ҡаршы йүгереп килә:

— Атма, атма! Һиңә хәбәр һөйләйем! — ти.

Әхмәт тоҫҡаған мылтығын төшөрөп тыңлай башланы.

— Әхмәт, һин теге әбейгә килеп еттең. Ана алда аҡлан бар, шул аҡландағы өйҙә ул әбей. Уның ун ике эте бар, һаҡ бул. Хәҙер мине ҡуйыныңа йәшереп кенә ал да шунда кит. Эттәр ташланғас, мине ырғыт та үҙең тиҙ генә өйгә инеп йәшерен.

Әхмәт бесәйҙе ҡуйынына алып тыҡты. Инде ихата ҡапҡаһын асып ҡына ингәйне, ун ике уҫал эт ажарланып быға ташланды. Әхмәт бесәйҙе ырғытты ла йүгереп өйгә инеп китте. Эттәрҙең берәүһе үксәһенән саҡ ҡына эләктермәне. Барып керҙе. Ҡараһа, мейес башында бер әбей ята. Аяғын анауҙан-анауҙан уратып килтереп, мейес алдына һалып, ҡыҙынып ята икән был.

— Һаумы, әбей?

— Иҫән генә.

— Инәй, мин асыҡтым, тамаҡты туйҙыр әле.

Әбей ашарға бирҙе. Әхмәт ашаны-эсте лә, был көндө ятып йоҡланылар. Икенсе көн иртәнсәк әбей менән һөйләшеп алып киттеләр. Әбей:

— Ни эшләп йөрөйһөң? — тип һорай.

— Инәй, мин эш эҙләп сығып киттем, һиндә эш юҡмы?

— Бар, күнһәң. Миндә ун ике бейә бар. Шуларҙы өс көн көтөргә. Береһен дә юғалтмаһаң, бер ҡолон бирермен; юғалтһаң, үҙеңде ашармын.

Был убырлы ҡарсыҡ икән. Бейәләрҙе көтөргә һүҙ ҡуйыштылар. Әбей Әхмәтте эй ашата, үҙенсә һимертә инде, барыбер ашайым тип уйлай. Баҡһаң, килгән

бер кешене шулай итеп ашап тора икән был. Ҡасимды гына ашай алмаған. Шулай итеп, өс көн ашатҡас:

— Иә, улым, ун ике бейәне алып сыҡ инде,— ти әбей Әхмәткә.

Эй оло-оло, йыуан бейәләр, ти. Яланға ғына еткәйнеләр былар, ун икеһе лә төлкө булып, шыҡайып сыҡтылы китте бит, эй!

Ни эшләргә хәҙер? Әхмәт илап ултыра торғас, теге бүрене хәтеренә төшөрҙө. Ул да булмай, бүре килеп етте.

— Ниңә илайһың?

Әхмәт хәлен һөйләп бирҙе.

— Ҡайғырма, хәҙер үк ят та йоҡла! Кискә табан үҙем уятырмын.

Бер заман Әхмәт тауышҡа уянып китһә, бүре теге төлкөләрҙе өйөрөп алып килә бит, малай! Эй ҡыуа, эй ҡыуа, сыҙап ҡына тор! Ҡапҡаға етер алдынан бүре күҙҙән юғалды. Әхмәт әбейгә ҡысҡыра:

— Әбей, ҡапҡаңды ас!

Әбей ҡапҡаны асып, бейәләрҙе индерҙе. Ашарға ултырҙылар. Бәй, ашта — әҙәм һөйәктәре! Әхмәт эштең асылын белмәгән икән әле. Аштағы һөйәктәрҙе күргәс, аңланы был әбейҙең кем икәнен.

Икенсе көн теге бейәләрҙе тағы алып сығып китте. Күҙ күреме ер киткәйнеләр, былар күгәрсен булып таралдылар ҙа бөттөләр. Вәт әй! Әхмәт тағы илап ултыра. Шул ваҡыт ҡарсыға иҫенә төштө. Ҡарсыға килеп тә етте.

— Ниңә илайһың?

— Иламай ни, убыр әбей башыма етә бит!

— Ҡайғырма, ят та йоҡла, көтөү ҡайтыр ваҡыт еткәс, үҙем шыҡыйтып килтереп еткерермен.

Көтөү ҡайтыр ваҡытта ҡарсыға тегеләрҙе килтерә бит, әй, шыҡыйтып! Ҡалған яғына Әхмәт, ҡысҡыра-ҡысҡыра, үҙе ҡыуып алып ҡайта. Әбей сығып һананы, бейәләр теүәл.

— Улым, рәхмәт, дөрөҫ,— тигән була.

Өсөнсө көндө Әхмәт тағы алып сығып китте. Бер һыу буйлап китеп баралар ине, теге бейәләр, балыҡҡа әйләнеп, һыуға сумдылар. Бына һиңә тағы — бар, эҙләп ҡара һин уларҙы һыуҙан! Әхмәт ҡайғырып ултыра ине, суртан хәтеренә төштө. Унан суртан килеп тә етте.

— Илама, Әхмәт, мин барыһын да беләм, хәҙер ят та йоҡла, көтөү ҡайтыр ваҡытта ни эшләргә белермен.

Әхмәт ятып йоҡланы. Бер заман һыу шаптырлағанға уянып китһә, суртан һыуҙан балыҡтарҙы баҫты-

рып ҡыуып алып килә, малай, һис ҡасып ҡотолор әмәлдәре юҡ! Һикереп ярға сығыуҙары була, ҡабат бейәгә әйләнеп, саң туҙҙырып, өйгә ҡайтып та китәләр, эй! «Һайт та һайт!» — тип һөрәнләп торҙо ла, ун икеһе лә ҡайтҡас, Әхмәт әбей ҡырына керҙе.

— Рәхмәт, улым,— тине тамаҡҡа ашап ултырған саҡта әбей,— яҡшы көтәһең.

Ярар, быныһы булды, Әхмәттең өҫтөнә алған эш үтәлде. Ултыралар ине, теге әбей һүҙ башланы.

— Улым, тағы ла бер эш бар,— тине.

— Беҙ бит өс көн көтөү көтөргә генә һөйләшкәйнек.

— Юҡ, быныһы былай ғына. Бына ун ҡаҙаҡ мәк орлоғо, шуны мин ергә сәсеп тырматам. Һин бер бөртөгөн дә ҡалдырмайынса кире йыйып бир.

Әбей мәкте таратып, ергә бутап, тырматып ташланы, ти. Бар һин хәҙер, шул тиклем мәкте йыйып ҡара! Әхмәт башын тырнап ҡайғырып ултыра ине, теге ҡырмыҫҡаларҙы хәтеренә төшөрҙө. Шул арала аҡ ҡырмыҫҡа ғәскәре менән килеп тә етте.

— Ҡайғырма, Әхмәт! — тип ҡырмыҫҡалар эшкә лә тотондо.

Эй эшләйҙәр ҡырмыҫҡалар, эй сүпләйҙәр мәк орлоғон,— еңел эш түгел бит инде был! Инде бөттөк тигәндә, аҡ ҡырмыҫҡа:

— Бер бөртөк тулмай,— тине. Бәй, сысҡан ашаған икән. Ни эшләргә? Бесәй килеп етте. Бер сысҡан йүгереп китеп бара ине, бесәй тотто ла алды. Әхмәт, бәкеһен алып, эсен ярып ебәрһә, эсендә теге мәк орлоғо, ти. Аҡ ҡырмыҫҡа:

— Әхмәт, бар, әбейеңә тапшыр, етмәй тиһә, ныҡ тор,— ти.

Әхмәт мәкте алып керҙе. Әбей ҡулы менән һәлмәкләп ҡараны ла:

— Ике бөртөк тулмай бит? — тине.

— Һин, әбей юҡты һөйләмә, йөҙ проценты менән шунда! — ти Әхмәт.

Ярар. Әбей бер заман тышҡа сыҡты ла бейәләренә:

— Һеҙ ун икегеҙ ҙә ҡолонлағыҙ, ун берегеҙҙеке йоп-йомро шәп ҡолондар булһын, ә ун икенсегеҙҙеке ун ике ҡанатлы ҡара ҡолон булһын,— тине.

Әхмәт быны мөйөштән генә тыңлап тора. Әбей кергәс:

— Әхмәт, һин миңә яҡшы хеҙмәт иттең, үҙ ғүмеремдә икенсе генә кешегә ҡолон бирәм,— тине, ти.

Һарайға сығалар. Эй ҡолондар сабышып уйнап йөрөйҙәр, эй! Ун бере ялтлап тора, ә ситтә бер өтөк

кенәһе, муйынын көйәнтә шикелле һәлендереп, ҡара ҡолон тора, ти. Әхмәт ҡара ҡолондо барып тотто.

— Эй улым, ниңә һимеҙен тотмайһың?

— Миңә шуныһы ла ярар, һимеҙен мин нисек тотайым!

Әхмәт ҡолондо алды ла китте. Әбей ашарға ла бирҙе. Байтаҡ юл киткәс, ялға туҡтанылар. Ҡолон:

— Әхмәт, һин бер йөк утынды өйөп ут яҡ,— ти.

Әхмәт бер йөк утынды өйҙө лә, ут төртөп, йоҡларға ятты.

Бәй, уянып китһә, ҡолон ут уртаһында көйөп ята. Әхмәт тиҙ генә тартып алды. Баҡһаң, ҡолон, инәһен имеп килеп, утта шулай сыныға икән. Тағы ла ары киттеләр. Бик оҙаҡ барғас, тағы ялға туҡтанылар.

— Әхмәт, был юлы ике йөк утын яҡ.

Әхмәт ике йөк утынды өйөп ут төрттө лә тағы ятып йоҡланы. Таң алдынан торһа, ҡолон тағы ут уртаһында тора. Ҡолон бөтөнләйгә бүтән булған, сыныҡҡан. Тағы ары юл тоттолар. Ялға туҡтар алдынан ҡолон:

— Әхмәт, хәҙер өс йөк утын яҡ,— ти.

Өс йөк утынды киҫеп килтереп, бер ергә өйҙө лә, ут төртөп, ятып йоҡланы. Таң алдынан уянһа, ҡолон ут уртаһында тора. Был хәҙер бынамын тигән айғыр булған! Эйәре, ҡылысы бар, эйәренә дүрт сатлы ҡамсы эленгән.

— Әйҙә, Әхмәт, киттек!

Киттеләр. Китеп ултырһалар, бер күл буйында ике малай һуғыша.

— Ниңә һуғышаһығыҙ?

— Ағай, атайымдан бер бысҡы ҡалғайны, шуны бүлә алмайбыҙ. Тылсымлы бысҡы ул.

Былар пәрей малайҙары икән. Әхмәт ҡылысы менән малайҙарҙың башын өҙә сапты ла, бысҡыны алып китте лә барҙы.

Айғыр телгә килде.

— Әхмәт, һин хәҙер ҡайҙа юл тотмаҡсыһың?

— Әнглиә ерендә бер тирәк бар, шуның төбөндә һандыҡ бар, шул һандыҡта өйрәк ултыра, өйрәк аҫтында өс йомортҡа бар. Шул йомортҡаларҙы алырға кәрәк.

— Һин, Әхмәт, бер һуҡ — тиремә үтһен, икенсе һуҡҡанда — тәнемә үтһен, өсөнсө һуҡҡанда — елегемә үтһен.

Әхмәт бер-бер артлы өс һуҡҡан икән, ун ике ҡанатлы айғыр осоп та киткән, теге тирәккә барып та

еткән. Айғыр тирәк тирәләй осоп тик йөрөй. Әхмәт әлеге бысҡыға:

— Бар, бынау тирәкте бысып ташла! — ти.

Бысҡы магнит шикелле тирәккә йәбешеп бысып ебәрҙе, тирәк аунап китте. Эй диңгеҙ өҫтө ҡып-ҡыҙыл нәҫтә менән ҡапланды, ул арала булмай һандыҡ килеп тә сыҡты! Әхмәт, барып, һандыҡты ҡылыс менән һелтәп ебәргәйне, һандыҡ ярылып китте, һандыҡ эсенән өйрәк осоп килеп сыҡты, Әхмәт уны атып та төшөрҙө. Өйрәктең ултырған еренән өс йомортҡаны алып кеҫәһенә һалды ла Әхмәт Лена Прекрасная ҡырына осоп ҡайтып та китте.

Килеп керҙе, килеп керһә, Ҡасим ял итеп ята икән. Әхмәт бер йомортҡаны тегенең ҡаҡ маңлайына тасылдата бәрҙе. Ҡасимдың хәле бөттө. Икенсе йомортҡа менән тондорғайны, күҙе аҡайҙы; өсөнсөһөн атҡайны, ялпашты ла ятты теге.

— Әйҙә, Лена, ҡайтабыҙ!

Ҡайттылар, Әхмәтте батша итеп ныҡлап ултырттылар. Бер аҙ йәшәгәс, Әхмәт:

— Ағай-эне, мин атайымды, инәйемде күреп киләйем,— ти.

Үҙе ун ике ҡанатлы айғырҙы меңеп, Лена Прекраснаяны алты ҡанатлы айғырға атландырып алып ҡайтып китә. Юлда ҡайтҡанда өс еҙнәһендә лә ҡунаҡ булалар. Атаһы-инәһе ҡырына ла ҡайтып етәләр. Аталары шул тиклем шатланған, хатта инде бер көләләр, бер илайҙар, ти. Бер ай шунда ҡунаҡ булып, аталарын ҡунаҡҡа саҡырып, кире ҡайтып киткәндәр, ти, былар.

Әле булһа ла Әхмәт тәхетендә бына тигән батшалыҡ итеп ултыра, ти.

## ДАНДАН БАТЫР

Борон-борон заманда тирә-яҡта дан тотҡан Абдулла исемле бер батша булған. Был батшаның Дандан исемле улы була. Был малай, ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, бик көслө, һәләтле, матур егет булып етә.

Был батшалыҡта бер сауҙагәр ҙә була. Ул йыл һайын ун-ун берәр ай буйы сит илдәрҙә һатыу итеп йөрөй икән. Ҡайтҡан ваҡытта батшаға һәр ваҡыт бүләк алып ҡайтыр булған.

Бер ваҡыт шулай, сит илдәрҙә йөрөп ҡайтҡас, сау-

ҙагәр Абдулла батша эргәһенә барған. Һәр ваҡыттағыса уның батшаға бүләге лә булған. Батша менән Данданға сит илдәрҙәге яңылыҡтарҙы һөйләп бөткән дә былай тигән:

— Улыңды сығарып тор, мин һиңә бер нәмә күрһәтергә теләйем.

Дандан сығып киткәс, сауҙагәр батшаға бүләген бирә. Был бәләкәй генә һандыҡ икән. Һандыҡты асып ебәреү менән, батша бик һылыу бер ҡыҙ һүрәтен күрә, үҙе, ҡарт булыуына ҡарамаҫтан, саҡ аҡылдан яҙмай.

Сауҙагәр ҡайтып китә. Батша, был һандыҡты башҡа асып ҡарамаҫҡа ант итеп, төрлө бүләктәр менән тулған келәтенә индереп бикләп ҡуя. Дандан атаһының бүләкте күрһәтмәүенә бик ныҡ ғәжәпләнә, уйға ҡала, уйлай-уйлай ҙа атаһына өндәшмәй генә бүләктәр келәтенә инә. Унда әлеге ҡумтаны эҙләп таба, уны асып ҡарай, һүрәттәге һылыу ҡыҙҙы күреп, уға ғашиҡ була. Шул көндән алып, егет ашау-эсеүҙән яҙа, көндән-көн ябыға башлай. Батша быға бик аптырай.

— Улым, һине ниндәй ҡайғы баҫты, ниңә борсолаһың,— тип һорап ҡарай, Дандан бер ни ҙә әйтмәй. Дандан ҡумтаны үҙ бүлмәһенә индереп ҡуя, шул һүрәткә ҡарап ҡына күңелен йыуата.

Батшаның бик аҡыллы бер хакимы — кәңәшсеһе булған. Берҙән-бер көндө Дандан ошо хакимға бара ла, бер кешегә лә әйтмәҫкә ҡушып, үҙ хәле тураһында һөйләп бирә. Хакимдан ярҙам һорай. Хаким Данданға был ҡумтаны килтереүсе сауҙагәрҙе табырға ҡуша. Дандан сауҙагәрҙе эҙләп сығып китә. Эҙләп табып, өйөнә барып керһә: «Ул сауҙагәр күптән түгел генә, тамағына балыҡ ҡылсығы ҡаҙалып, үлеп китте шул»,— тиҙәр.

Дандан, башын түбән эйеп, ҡайғырып, хаким янына ҡайта. Хаким Данданды йыуата, кисекмәҫтән юлға сығырға кәрәклекте әйтә. Нил* аръяғына сығыу өсөн ҙур кәмә эшләтергә, юлға алтын, төрлө хәрездәр** алырға, был турала бер кемгә лә белдермәҫкә ҡуша.

Дандан атаһына әйтмәй генә бер бик яҡшы елкәнле кәмә эшләтә, ҡорал ала, шунан хаким менән икеһе юлға сығалар. Диңгеҙҙә бер һәфтә*** ваҡыт барғандан һуң, яр ситенә туҡтап ял итәләр, һыу алалар ҙа

---

* Нил — Африкалағы ҙур йылға.

** Хәрез *(ғәр.,* дөрөҫө — хәреж) — сығым, расход. Экиәтсе был һүҙҙе ашамлыҡ тип аңлатҡан.

*** Һәфтә *(ғәр.)* — аҙна.

юлдарын артабан дауам иттерәләр. Былар, бара торғас, диңгеҙҙә бер утрау күрәләр. Дандан хакимға ошо утрауға тейеп китергә тәҡдим итә. Улар шулай эшләйҙәр ҙә. Ярға баҫҡас, былар алдарында ғына бик матур баҡсалы бер ҙур йорт күрәләр. Дандан күп уйлап тормай, ҡумтаһын алып, ошо йортҡа йүнәлә. Дандан йортҡа ингәс, йорт хужаһынан иҫәнлек-аманлыҡ һорашҡандан һуң, үҙенең ҡайҙа, ни өсөн барыуын әйтеп бирә. Шул ерҙә йорт хужаһы, стенаға ҡоролған баршауҙы асып, унда төшөрөлгән ҡыҙ һүрәтен күрһәтеп, былай ти:

— Мин бына утыҙ йыл ошо һүрәткә ҡарап күңелемде йыуатам, һин йәш ғүмереңде заяға үткәрмә, ҡыҙҙы эҙләп тап,— ти.

Дандан һаубуллашып сығып китә, хакимға барыһын да һөйләп бирә. Китәләр былар тағы. Китәләр, китәләр, тағы бер һәфтә юл үтәләр. Бер ярға барып һуғылһалар, балыҡсы ултыра. Ҡайҙан, кем булыуын һорашалар. Ҡарт, ошондағы ҡалала йәшәп, ғүмере буйы балыҡ тотоуын әйтә. «Ниңә улай?» — тигәс, һөйләп бирә:

— Мин бер балыҡ тотһам, бер аҙна тик йәшәйем,— ти.— Беҙҙең батшаның бик һылыу бер ҡыҙы бар. Был ҡыҙҙы ҡоҙалап, ун туғыҙ батшалыҡтан һәр береһе үҙ ғәскәре менән ун туғыҙ егет ҡалала ята. Бына шуларға балыҡты һатып көн күрәм. Был ҡыҙ егеттәргә аҙнаһына бер генә сығып күренә,— ти.

Шул саҡ егет бабайға үҙендә булған ҡыҙ һүрәтен күрһәтә. Бабай, был һүрәтте ҡарағас та, былай ти:

— Был ҡыҙ әле биҙгәк ауырыуы менән ауырыған сағында төшөрөлгән, хәҙер уны күрһәң, һушың китәр.

Ҡыҙҙың был ҡалала йәшәүен белгәс, егет, балыҡсыға бик күп аҡса бирергә вәғәҙә итеп, яҡшы фатир әҙерләргә ҡуша. Балыҡсы уның һорағандарын үтәй.

Дандан шулай бер-ике көн нисек ҡыҙҙы күрергә икән тигән уй менән ҡала буйлап йөрөй. Өсөнсө көндө ҡала буйлап йөрөгәндә:

— Кем дә кем Нәркәс исемле ҡыҙҙы күрергә теләй, батша һарайындағы матур баҡсаға барығыҙ, тик, ғашиҡ булып, ғүмерегеҙҙе заяға үткәрмәгеҙ,— тигән тауышты ишетә.

Дандан хакимға ҡайтып әйтә лә, Нәркәсте күрергә тип, баҡсаға китә.

Дандан баҡсаға барып ингәндә, теге батша уландары күптән инде үҙ урындарын алғандар, ти, бөтәһе лә түҙемһеҙләнеп, ҡыҙҙың күреңеүен көтәләр, ти. Бына

бер ваҡыт, ҡара болот аҫтынан сыҡҡан ҡояш кеүек, баҡсаға Нәркәс сығып баҫа. Ҡыҙҙы күреү менән егеттәрҙең барыһы ла, иҫтәре китеп, тәгәрәшеп бөтә.

Егеттәрҙе күргән Нәркәс, улар янына килеп, барыһына ла иҫ кертә торған дарыу еҫкәтә. Бер ыңғайҙан ул егеттәрҙе лә ҡарап йөрөй. Уға Дандан оҡшай:

— Ошо егеткә кейәүгә сығыр инем,— ти.

Егеттәр күңелһеҙ генә ҡайтып китәләр. Дандан да ҡайтып китә, бар хәл-әхүәлде хакимға һөйләп бирә. Хаким уға баҙарға барырға, унан тырнаҡлы бәтинкә*, бирсәткә һатып алырға ҡуша. Дандан быларҙың барыһын да үтәй. Кис булып, ҡараңғы төшкәс, Дандан батша һарайына китә. Ҡоймаға барып еткәс, Дандан күп уйлап тормай, тырмашып ҡоймаға менеп ултыра. Менгәйне, барыһы ла күренеп тора: кәртә уртаһында** ҙур ҡаҙанда бығыр-бығыр бутҡа ҡайнай, ҡаҙан тирәһендә ҡырҡ ҡыҙ йүгерешеп йөрөй, ә Нәркәс үҙе балконда ултыра.

Дандан ҡыҙҙарҙың ситкәрәк китеүен аңдып тороп ҡойманан һикереп төшә лә, бара һалып, ҡаҙанға йоҡо дарыуы тамыҙа. Шунан ағас башына менә лә ултыра. Бер аҙҙан ҡыҙҙар бутҡа ашарға ултыралар. Нәркәс үҙ күҙенә үҙе ышанмай: ҡыҙҙар барыһы ла бутҡаны ашап та бөтөрмәй йоҡоға талғандар. Ул шунда уҡ бер хәйлә барлығын һиҙенә. Тиҙ генә инеп, ҡулына ҡылыс ала ла үҙ урынына ята.

Бер аҙҙан уның янына Дандан инә. Нәркәс, Данданды күреү менән, шатлығын йәшерә алмайынса тороп ултыра.

Улар таңға тиклем ултыралар. Таң һыҙылғас, Дандан ҡайтып китә. Иртәгеһен Нәркәс йоҡонан һуң ғына уяна ла баҡсалағы күлгә килеп йыуына башлай. Шул саҡ ҡайҙандыр ҡара болот килеп сыға ла, Нәркәс тапҡырына еткәс кенә, ҡулдарын сығарып, уны һауаға үҙе менән күтәреп осоп китә. Ҡоттары осҡан ҡыҙҙар батшаға йүгерәләр. Батша быға бер ҙә көйөнмәй, ни өсөн тигәндә, ул Нәркәсте кемгә бирергә белмәйенсә аптырап бөткән була.

— Алла бирҙе, алла алды,— тип кенә ҡуя.

Батша, ҡыҙының ҡайҙа икәнлеген белергә тип, ҡала ситендәге күрәҙәсене үҙенең һарайына саҡырта. Батша бөтә хәлде аңлатҡандан һуң, күрәҙәсе уға ҡыҙының Ҡафтау артындағы Ҡәһҡәһә тигән дейеү батша ҡу-

---

* Бәтинкә — ботинка.

** Кәртә уртаһында — ихатала.

лында икәнлеген әйтә. Күрәҙәсе батшаға күгәрсен бирә лә:

— Ошо күгәрсен ҡайһы егеткә ҡунһа, шул кеше ҡыҙыңды барып эҙләп тапһын,— ти.

Батша шунда уҡ был хәбәрҙе иғлан итә. Күгәрсенде осороп ебәреү менән, ул Дандандың иңбашына килеп ҡуна ла геүләй башлай. Башҡа егеттәр быны менән риза булмайҙар. Улар Данданды ғәскәрһеҙ булыуында кәмһетеп, күгәрсенде яңынан осороуҙы талап итәләр. Батша икенсе, өсөнсө тапҡыр осорғас та, күгәрсен яңынан Дандан иңбашына ҡуна. Быны күреп, батша малайҙары, тамам өмөттәрен өҙөп, ҡайтып китәләр. Дандан хаким менән кәңәшләшкәс, хаким уға:

— Ятып ҡалғансы, атып ҡал,— ти.

Улар, кәрәк-яраҡтарын алып, юлға сығалар. Эй баралар, эй баралар, бара торғас, былар арыйҙар, бер яр ситенә туҡтап ял итмәк булалар. Яр ситендә ҙур бер тирәк үҫкән була. Ҡараһалар, унда: «Кем дә кем ошо ағастың япрағын алып яралы ерен ыуа, яраһы уңала. Ботағынан яһалған уҡ атылһа, бөтә сихыр юғала»,— тип яҙылған. Дандан бер тоҡ япраҡ өҙөп ала, уҡ өсөн күп итеп ботаҡ һындырып ала.

Дандан менән хаким юлдарын артабан дауам иттерәләр. Баралар, баралар, бара торғас, ашарға аҙыҡтары бөтә. Тағы бер яр буйында туҡтайҙар. Дандан һунарға сығып китә. Урманда йөрөп ятһа, ҙур бер ҡара нәмә күреп ҡала. Яҡыныраҡ килһә, бер ҙур ҡош икән. Ҡапыл ҡош Дандандаға башын бора ла, телгә килеп:

— Ҡотҡар инде мине зинһар өсөн, мин һиңә ғүмерлеккә ҡол булыр инем,— ти. Был ҡош аждаһа утына янған икән. Дандан, тиҙ генә баяғы япраҡтарҙы килтереп, янған урынды ыуа башлай. Ни күҙе менән күрһен, ыуған ергә ҡауырһындар үҫә башлай. Шулай итеп, Дандан ҡошто үлемдән ҡотҡарып алып ҡала. Ҡош алдағы юлдың бик оҙон булыуын әйтә.

— Былай ғына барһағыҙ, ғүмер буйына осона сыға алмаҫлыҡ юл. Әйҙәгеҙ, үҙем ултыртып алып барам,— ти. Ҡош осор алдынан Дандаға ҡырҡлап ҡыр кәзәһе әҙерләргә ҡуша, шулай булмағанда, оло диңгеҙ аша сығып булмаясағын аңлата. Улар ун көн буйы диңгеҙ өҫтөнән осалар. Ярға еткәс, ял итеп алғас, ҡош егеткә былай ти:

— Минең фәлән тау башында балаларым ҡалды, шуларҙы ғына күреп китәйексе.

Егет быға риза була. Баралар, ҡош балалары іөсөн

һау була. Ҡош балаларына аҙыҡ килтерергә тип сығып китә лә, оҙаҡ та йөрөмәй, шыйлап килеп, кире ояһына төшә. Был ҡоштоң балаларын бер бөгөлһә, тау булған, бер һуҙылһа, ҡойроғо күренмәгән йылан килеп ашап китә торған булған. Әле лә шул йылан, уттар сәсеп, килә ята икән. Дандан, тиҙ генә булат ҡылысын ҡулына алып, ағас башына менеп ултыра. Йылан уның янынан уҙып барған саҡта ғына, ул ҡылысы менән уны урталай өҙә саба ла ҡуя. Йыландың ҡаны даръя булып ағып китә. Ҡош Данданға ҙур рәхмәттәр әйтә, күтәреп ала ла был урындан осоп китә. Хаким ҡоштоң балалары эргәһендә тороп ҡала.

Эй осалар былар, эй осалар. Оса торғас, ҡош:

— Алда сихырлы ут, сихырлы бейек тауҙар осрар, теге уҡтарыңды әҙерләп ҡуй,— ти.

Бара торғас, Дандан алда урғылып сығып ятҡан ут таҫмаһын күрә. Был ут кеше яҡынлаша башлаһа, һауаға тоташа икән. Шул ерҙә ҡош, телгә килеп:

— Әгәр ҙә ошо ут өҫтөндә осоп йөрөгән турғайҙы атып төшөрһәң, ут юҡ булыр,— ти.

Дандан атып ебәргәйне, турғай өлтөрәп килеп төшә, шул арала ут та юҡ була.

Артабан китәләр. Бара торғас, ҡаялары күккә олғашып торған бейек бер тау күренә, тау башында, ҡош әйткәнсә, бер кеше тора. Дандан, әлеге тирәк уғын алып, был кешегә ата. Кешегә уҡтың барып тейеүе була, кеше лә, тау ҙа юҡ була, осо-ҡырыйы күренмәгән тигеҙлек барлыҡҡа килә.

Дандан артабан китә. Бара торғас, йәнә бер тау күрә. Бында өс ағай-эне йәшәгән була, уларҙың береһе Нәркәсте урлап киткән Ҡәһҡәһә икән. Ошо ерҙә ҡош Данданға:

— Нәркәс бына ошо тауҙа,— ти.

Был тауҙа өс ишек була. Дандан килеп бер ишекте асып ебәрһә, бер ҙур дейеүҙең Нәркәс алдында йоҡлап ятҡанын күрә. Нәркәстең Дандандың күреүе була:

— Йоҡоһонан уянмаҫ борон дейеүҙе үлтер,— ти.

— Йоҡлап ятҡан дошманды үлтереү егетлек түгел,— ти ҙә Дандан, ҡылысын табанына сәнсеп, дейеүҙе уята. Дейеү уянғас ҡына, Дандан уның башын сабып өҙә.

Дандан Нәркәсте тышҡа алып сыға. Нәркәс уға икенсе дейеүҙәрҙә лә тотҡонда йәшәүсе ҡыҙҙар барлығын әйтә. Дандан, Нәркәсте тышта ҡалдырып, икенсе ишектән эскә инә. Инһә, бер дейеү Мәликәбаныу исемле ҡыҙҙың тубығына башын һалып, йоҡоға

талған. Мәликәбаныуҙың үтенеп һорауына ҡарамаҫтан, Дандан дейеүҙе йоҡоһонда үлтерергә риза булмай. Ул дейеүҙе ҡылысы менән тәртәп уята ла сабып үлтерә. Мәликәбаныу менән Дандан был дейеүҙең дә үлтерелеүенә ҡыуанып тышҡа сыҡһалар, Нәркәс урынында юҡ. Дейеүҙәрҙең иң кеселәре Нәркәсте үҙенең өйөнә алып ингән дә ишек урынын ҙур бер таш менән ҡаплап ҡуйған икән. Дандандың быға бик асыуы килә. Ташты шыуҙырып, ишекте асһа, дейеү килеп сыға ла Данданды һыуға ташларға уйлай. Ошо ваҡыт Мәликәбаныу дейеүҙе ҡылысы менән үлтерә саба. Шул арала ҡайҙандыр дейеүҙең әсәһе бер әбей ҡиәфәтендә килеп сыға. Ҡош, быны күреп, Данданға:

— Хәҙер үк әбейҙе ат! — тип ҡысҡырып ебәрә.

Дандандың атыуы була, әбей шундай әсе тауыш менән ҡысҡырып ебәрә. Уның тауышына бөтә ер дейеү-пәрейҙәр менән тула. Был дейеү-пәрейҙәрҙең ҡойроҡтары һауа менән тулы ҡыуыҡтарҙан тора икән, шуға улар бик шәп осалар. Дандан уғы менән берәм-берәм теге пәрейҙәрҙең ҡыуығын тишә атып тора, Мәликәбаныу төшкән бер дейеүҙең башын өҙә сабып тора. Улар һуңғы пәрейҙе юҡ иткәс, улар янына ҡош килеп етә. Бөтәһе лә сәмреғошҡа ултырып, юлға сығалар. Бер аҙ ваҡыт үткәс, хаким янына ла килеп етәләр. Хаким бик шатлана, ҙур шатлыҡтан улар өс көн, өс төн бында ҡунаҡ булалар. Дүртенсе көн Мәликәбаныу Данданға былай ти:

— Һин мине ҙур бәләнән ҡотҡарҙың, инде бер һорауымды үтәһәң, һинең менән мәңге бергә булыр инем. Минең ун ике йыл буйына күрмәгән атайым янына барайыҡсы,— ти. Шулай ти ҙә Мәликәбаныу дүрт бөртөк сәсен алып яндырып ебәрә. Былар янына дүрт күгәрсен дүрт осонан тешләп балаҫ килтереп йәйәләр.

Дандан, хаким, Мәликәбаныу менән Нәркәс, сәмреғошҡа ҙур-ҙур рәхмәттәр әйтеп, хәҙер теге балаҫҡа ултырып осалар. Күҙҙәрен асыуға, балаҫ уларҙы ҙур бер ҡала ситенә килтереп төшөргән була. Хәҙер былар нисек батшаға барып күренергә тип баш вата башлайҙар. Күп кенә уйлағандан һуң, Дандан батшаға күрәҙәсе итеп ебәреп, ҡыҙының бөгөн киләсәген әйттерәләр. Батша тәүҙә ышанмай, шулай ҙа күрәҙәсенең был һүҙҙәре ысын булып ҡуйһа тип, ҡыҙын ҡаршы алырға әҙерләнә башлай.

Күп тә үтмәй, ҡыҙ иптәштәре менән балаҫ өҫтөндә батша картәһенә килеп төшә. Батша тәүҙә үҙ күҙенә үҙе ышанмай тора. Аҙаҡтан ҙур мәжлес ойоштора,

Данданға үҙенең ҡыҙын бирә. Дандан бында оҙаҡ тормай: Нәркәс тә бит үҙ йортона ашыға. «Нәркәсте бөтөнләйгә юғалттыҡ»,— тип ҡайғырып ултырған ваҡытта, ата-әсәһе янына Нәркәс, Дандан, уның иптәштәре килеп инәләр. Нәркәсте Данданға икенсе ҡатынлыҡҡа биреп, бында ла аҙнаға яҡын байрам итәләр.

Аҙаҡ килеп, Дандан үҙ атаһы янына ҡайтырға була. Улының иҫән-һау булыуын, өҫтәүенә ике килен дә алып ҡайтыуын күргәс, атаһы бик ныҡ шатлана.

Хаким Данданға:

— Дандан, һинең егетлегеңде күрҙем, инде минең ҡыҙымды ла өсөнсө кәләш итеп ал,— ти. Дандан хакимдың ҡыҙын да ала. Бик ҙур туй яһап, өс батшалыҡҡа хужа булып, Дандан әлеге көнгә тиклем йәшәй, ти.

## ИРЕКБАЙ

Борон-борон заманда
Бик алыҫта, бер илдә,
Байбурия ерендә
Йәшәгән, ти, бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ.
Үҙҙәре ҡартайып килгәндә,
Быларҙың булды, ти, бер ир балаһы.
Исемен ҡуштылар, ти, «Ирекбай»,
Бирҙеләр, ти, уға бер тай.
Был малай бик шәп үҫә,
Ай үҫәһен, көн үҫә,
Йыл үҫәһен, ай үҫә;
Һәр кем уға һоҡлана,
Һәр кем күреп шатлана.
Уйын уйнаған сағында
Бик яратҡан сабырға.
Урмандарға барған ул,
Айыу, бүре атланып,
Йортҡа ҡайтып ингән ул.
Йылдар илап уҙғанда,
Айҙар аяҙ булғанда,
Көндәр көнләп йөрөгәндә,
Ирекбайға ун биш тулғанда,
Хандан әмер килгән, ти:
«Һәр бер иргә, йәшкә-ҡартҡа,
Атланырға ҡара атҡа,
Йүнәлергә тура утҡа!»

Был әмергә ил халҡы
Ҡурҡыу менән ҡараған,
Ирекбайҙы үҙҙәренә
Башлыҡ итеп һайлаған.

Ирекбай башлыҡ булғас:
— Был хандың әмеренә
Баш эймәгеҙ берегеҙ,
Ут ебәрһә илебеҙгә,
Йөҙ һытмағыҙ берегеҙ!
Илен утҡа тоторбоҙ,
Үҙен туҙан итербеҙ.
Китәм мин Ҡыҫҡыс ханға,
Ул тыныслыҡ боҙмаһын,
Һис хәйләһен ҡормаһын! —
Тип ырғып менде тайға,
Сапты, ти, ҡарап айға.

Эй саба, ти, эй саба,
Саба ла саба торғас,
Осраған, ти, бер кеше.
Ҡырын ятҡан үләнгә,
Башын һалған бүкәнгә,
Төҫкә, башҡа йәш кеше,
Сабыу икән бар эше,
Исеме шуға — Саптаретдин.

— Мин Ирекбай буламын,
Ҡыҫҡыс ханға барамын:
Илгә әмер ташланы,
Күп ирҙәрҙе аҙаны,
Етер инде ул ханға,
Туйындырҙы ерҙе ҡанға.
Хәҙер барамын уға,
Күс һынашып ҡарарға!
— Мине лә ал иптәшкә,
Бергә-бергә булырбыҙ,
Йомошоңдо тыңлармын,
Ҡоштар менән ярышһаң да
Мин уларҙы уҙырмын,—
Тине, ти, Саптаретдин.

Шулай итеп икәүләшеп
Саптылар улар алға,
Туп-тура ҡарап айға.
Эй сабалар, сабалар —

Энә буйы ер сабалар.
Саба ла саба торғас,
Осраттылар тағы кеше,
Атыу икән, ти, бар эше.
Елкәһендә йәйәһе,
Арҡаһында уҡтары,
Алтын икән остары.

Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас,
Ирекбай:
— Һеҙ кем булаһығыҙ?
Теге кеше:
— Мин Уғатар булам, ағай,
Үҙегеҙ кем булаһығыҙ?
Ирекбай:
— Был Саптаретдин, минең юлдашым,
Ҡыҫҡыс ханға юл башым:
Илгә әмер ташланы,
Күп ирҙәрҙе аҙаны.
Етер инде ул ханға,
Туйындырҙы ерҙе ҡанға.
Хәҙер мин барам уға,
Көс һынашып ҡарарға!
Уғатар:
— Мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ,
Һеҙгә кәрәк булырмын,
Күбәләктәй ҡошто ла
Күктән атып алырмын.

Саптаретдин шул арала
Ат килтерҙе Уғатарға.
Шунан былар өсәүләшеп
Эй сабалар, сабалар,
Эй сабалар, сабалар.
Саба торғас, быларға
Тап булған йәнә кеше,
Күл йотоу икән эше:
Күлдең һыуын йотҡан да
Төбөнә төшөп ятҡан.

Иҫәнлек-һаулыҡ һорағас:
— Һеҙ кем булаһығыҙ? — тине Ирекбай.
Теге кеше:
— Мин Күлйотар булырмын,
Һеҙҙе кем тип танырмын?
Ирекбай:

— Былар минең юлдаштыр,
Һөнәрҙәре бик фаштыр.
Ҡыҫҡыс хандыр юлыбыҙ,
Байбурия еребеҙ.
Илгә әмер ташланы,
Күп ирҙәрҙе аҙаны.
Етер инде ул ханға,
Туйындырҙы ерҙе ҡанға.
Хәҙер барам мин уға,
Көс һынашып ҡарарға.
Шунан Күлйотар:
— Мине лә алһағыҙсы,
Һеҙгә кәрәк булырмын,
Ҙур-ҙур күлдәр йотормон,
Күп балыҡтар тотормон,
Һеҙҙе ашҡа туйҙырырмын.

Саптаретдин күҙ асып йомғансы юҡ булды ла алмасыбар төҫтә тағы бер тарпанды ҡыуып килтерҙе, ти.

Инде былар дүртәүләшеп
Киттеләр, ти, сабышып,
Берен-бере уҙышып.
Саптылар, ти, гел алға,
Туп-тура ҡарап айға.
Эй саптылар, саптылар,
Эй саптылар, саптылар.
Саба торғас, былар барып,
Еттеләр бер сахрә ергә.

Бында ҡоштар һайрайҙар,
Төрлө кейектәр олойҙар.
Бер ҡараһаң — матурлыҡ,
Бер ҡараһаң — ҡурҡырлыҡ:
Арыҫландар аҡыра,
Зубрҙары баҡыра.

Көн кис булып киткәнгә,
Шунда ҡунмаҡ булдылар,
Бергәләшеп өсөһө
Утын ташып яҡтылар.
Уғатар китте һунарға,
Саптаретдин сапты үгеҙ һуйырға,
Күлйотар ҡалды ҡаҙан аҫырға,
Ирекбай ҡалды ҡыуыш яһарға.
Саптаретдин алып килде бер үгеҙ,

Иҫ киткес инде һимеҙ.
Уғатар ҙа саҡ күтәреп,
Алып килде өйрәктәр,
Матур-матур дүдәктәр.
Ирекбай ҡыуыш яһаны,
Күлйотар аш өлгөрттө.
Ашты тәмләп ашағас,
Батырҙар ҡаты йоҡлап
Киттеләр, бик ныҡ арығас.

Иртән тороп таң менән,
Саптылар фарман менән.
Эй саптылар, саптылар,
Эй саптылар, саптылар.
Саба ла саба торғас,
Еттеләр таш ҡалаға —
Буялған гел ҡараға.

Ҡыҫҡыс хан шунда йәшәй икән,
Таш кәртәһе ныҡ икән.
Инә алмайҙар батырҙар,
Кәңәш ҡороп ҡарайҙар.
Шул арала Ҡыҫҡыс хан
Йыйҙырҙы, ти, ҙур майҙан.
Йыйҙырғастын ҙур майҙан,
Уҡтарын да туптарын
Осорорға ҡушты, ти,
Һәр батырҙың башына
Бер ҡыҙ бирмәк булды, ти.

Шунда һуғыш башланған,
Йәҙрәләр ташланған.
Ә батырҙар тегеләрҙең
Өҫтәренә ташланған.

Хан йыйған барлыҡ көсөн:
Бер ҡапҡаһынан көтөү-көтөү филдәр сығара,
Бер ҡапҡанан көтөү-көтөү арыҫландар сығара,
Береһенән — караптар менән туптар,
Береһенән — меңләп-меңләп һалдаттар,
Бары ла ҡылыс таҡҡан, тимер кейемле!
Ҡулдарында — һөңгө,
Әйтерһең дә, урман ҡороған был ерҙә!

Шунан ҡаланың дүрт яғынан дүрт батыр
Тотондолар ҡырырға шатыр-шотор:

Ирекбай ҡылыс менән турай һалдаттарын,
Саптаретдин түшәп һалды һөңгө менән филдәрен.
Күлйотар, өс уртлауҙа күлде йотоп,
Ултыртты ҡомға кәмәләрен.

Хан ғәскәрен еңгәс батырҙар
Дүрт ҡапҡанан инделәр баҫып,
Ҡыҫҡыс хандың һарайын ватып,
Үҙен дә ебәрҙеләр атып.

Батырҙарҙың был эшенә
Халыҡтар бик шатланды.
Күрер өсөн бөтәһе лә,
Таш ҡалаға ташланды.
Ирекбайҙар ҙур майҙанда,
Башлыҡ булып танылды,
Бына шунан һуң ғына
Иркен тормош ҡоролдо.

# ТЕКСТЫҢ СЫҒАНАҠТАРЫ

Шартлы ҡыҫҡартыуҙар:

ББС — Башкирские богатырские сказки/Составление, вступительная статья, подготовка текстов и комментариев Л. Г. Барага и Н. Т. Зарипова. Уфа: Башкнигоиздат, 1981, 1986.

БДУ БӘК фонды — Башҡорт дәүләт университеты башҡорт әҙәбиәте кафедраһының фольклор фонды.

Бессонов — Башкирские народные сказки/Запись и перевод А. Г. Бессонова; редакция, введение и примечания действительного члена Географического общества профессора Н. К. Дмитриева, под общей редакцией члена совета Географического общества академика И. Ю. Крачковского. Уфа: Башгосиздат, 1941.

БНТ — Башкирское народное творчество, том 3: Богатырские сказки/Составитель Н. Т. Зарипов, вступ. статья и комментарии Л. Г. Барага и Н. Г. Зарипова, ответственный редактор тома Л. Г. Бараг. Уфа: Башкнигоиздат, 1988; том 4: Волшебные сказки/Составитель Н. Т. Зарипов, вступ. ст. и коммент. Л. Г. Барага и Н. Т. Зарипова, ответ. редактор тома Л. Г. Бараг. Уфа: Башкнигоиздат, 1989.

БХИ, 1959 — Башҡорт халыҡ ижады, 2-се том/Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм иҫкәрмәләр авторы Ә. И. Харисов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1959.

БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап — Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр, 2-се китап/Төҙөүселәр Марат Минһажетдинов, Әхнәф Харисов, инеш мәҡәлә Марат Минһажетдиновтыҡы, аңлатмалар Лев Бараг менән Марат Минһажетдиновтыҡы, томдың яуаплы редакторы Н. Т. Зарипов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976.

БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап — Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр, 3-сө китап/Төҙөүселәр Нур Зарипов, Марат Минһажетдинов, инеш мәҡәлә Нур Зариповтыҡы, аңлатмалар Лев Бараг менән Нур Зариповтыҡы, томдың яуаплы редакторҙары Ә. И. Харисов менән Ғ. Б. Хөсәйенов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978.

БХӘ, 1939 — Башҡорт халыҡ әкиәттәре/Төҙөүсеһе Ғ. Сәләм. Өфө: Башгосиздат, 1939.

БХӘ, 1956 — Башҡорт халыҡ әкиәттәре/Төҙөүсеһе Ғ. Ишбулатов, инеш һүҙ һәм редакция Ә. И. Харисовтыҡы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1956.

**Урал батыр** — шул уҡ исемдәге героик эпостың әкиәтләшкән варианты. 1956 йыл Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында Исмәғил Рәхмәтуллиндан Ә. И. Харисов яҙып алған.— БХӘ, 1956, № 1; БХИ, 1959; ББС, № 1; БНТ, т. 3, № 1.

**Алп батыр** — башҡорт, ҡаҙаҡ, үзбәк, алтай, ҡарағалпаҡ, нуғай, татар халыҡтарында «Алпамыша» («Алпамыш», «Алып-Манаш») исемендә киң таралған героик эпостың әкиәт-легенда варианты. 1938 йыл Башҡортостандың Бөрйән р-ны Монасип ауылында* Ишмурзин Хәйрулла сәсәндән Кирәй Мәргән (Ә. Н. Кирә-

* Артабан Башҡортостанда яҙып алынған текстарға район менән ауыл исемдәре генә күрһәтелә.

йев) яҙып алған.— БХИ, 1969, № 9; БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 1; ББС, № 2; БНТ, т. 3, № 2.

**Алпамыша батыр** — шул уҡ «Алпамыша» эпосының әкиәт варианты. 1972 йыл Ауырғазы р-ны Мораҙым ауылында Ф. Г. Вахитованан (1935 йылғы) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 3; ББС, № 3, БНТ, т. 3, № 4.

**Ҡаһарман батыр.** — Бессонов, № 4; ББС, № 38; БНТ, т. 3, № 5. Башҡортсаға М. Х. Минһажетдинов тәржемәһе — БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 36.

**Һунаҡ менән Имрәк.** 1960 йыл Учалы р-ны Ҡобағош ауылында М. Х. Минһажетдинов үҙенең әсәһе Мәүзифә Мәғәфүр ҡыҙынан (1901 йылғы) яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 3; ББС, № 4. 1976 йыл шул уҡ райондың Науруз ауылында «Һунаҡ менән Әнрәк» исемендә А. Г. Садриевтан Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған варианты — БНТ, т. 3, № 6.

**Оморҙаҡ батыр.** — Бессонов, № 5; ББС, № 6: БНТ, т. 3, № 7 Башҡортсаға М. Х. Минһажетдинов тәржемәһе — БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 5.

**Ташбаш батыр, Солтанғол менән Солтанбай батыр.**— Бессонов, № 7. Башҡортсаға М. Минһажетдинов тәржемәһе — БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 6.

**Яңғыҙаҡ батыр.**— Бессонов, № 17; ББС, № 5; БНТ, т. 3, № 9. Башҡортсаға М. Х. Минһажетдинов тәржемәһе — БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 4.

**Арпа батыр.**— Бессонов, № 16; БНТ, т. 3, № 10. Башҡортсаға М. Х. Минһажетдинов тәржемәһе, тәү тапҡыр баҫыла.

**Таң батыр.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр р-ны Ҡотос ауылында Н. Х. Ишбулатовтан (1926 йылғы) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 7; ББС, № 7; БНТ, т. 3, № 11.

**Аҡъял батыр.** 1930 йылдар башында Ш. Шәһәр тарафынан яҙып алынған. Бер аҙ үҙгәртелеп — әҙәби эшкәртелеп баҫылған — БХӘ, 1939, № 1; БХӘ, 1956, № 2; БХИ, 1959, № 2. Архив тексының руссаға тәржемәһе — ББС, № 8; БНТ, т. 3, № 12.

Бында архив тексы баҫыла.

**Исмай.** 1963 йылда Ишембай р-ны Ҡолғона ауылында Р. Ямаловтан (1934 йылғы) А. Хәсәнова менән Ф. Галина яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 8; ББС, № 9; БНТ, т. 3. № 13.

**Батыр һалдат.** 1964 йыл Әлшәй р-ны Яңы Аҡҡолай ауылында Б. Булатовтан (1888 йылғы) Н. Шоңҡаров яҙып алған. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Алтын сабаҡ.** 1968 йыл Учалы р-ны Ҡолош ауылында Г. Н. Нуриевтан М. Х. Минһажетдинов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 9; ББС, № 10; БНТ, т. 3, № 14.

**Ҡамыр батыр.** Юғары Уральск өйәҙе (хәҙерге Әбйәлил районы) Дәүләт ауылында уҡытыусы Г. Мағазов яҙып алып, М. Лось тарафынан руссаға тәржемә итеп баҫылған.— Вестник Оренбургского учебного округа, 1912, № 5, с. 173—176. Г. Х. Ишбулатов тарафынан башҡортсаға байтаҡ үҙгәртелеп кире ҡайтарылышы — БХӘ, 1956, 47—56 бб.; БХИ, 1959, 19—26 бб.; Нур Зарипов тарафынан төҙәтелгән тәржемә — БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 10. Русса тексының яңы баҫмаһы — ББС, № 11; БНТ, т. 3, № 15.

**Ғәйнизар менән Етемйәр.** 1962 йыл Әбйәлил р-ны Ташбулат ауылында Ғ. Вәлиеванан (1909 йылғы) Р. Ситдыҡова яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 11; ББС, № 12; БНТ, т. 3, № 16.

**Боғар хан улдары.** 1900 йылда Ҡарағай-Ҡыпсаҡ волосы (Башҡортостандың хәҙерге Әбйәлил районы) Хәлил ауылында Бүребай

Ирназаровтан М. Ҡулаев яҙып алған. Башҡортса тәү тапҡыр баҫыла. Руссаға тәржемәһе — БНТ, т. 3, № 17.

**Осҡос ишәк.**— Бессонов, № 23; БНТ, т. 3, № 18. Башҡортсаға Нур Зарипов ҡайтарҙы, тәү тапҡыр баҫыла.

**Егет менән аждаһа.**— Бессонов, № 22; БНТ, т. 3, № 19. Башҡортсаға Нур Зарипов ҡайтарҙы, тәү тапҡыр баҫыла.

**Бер туған ике батыр.** 1967 йылда Әлшәй р-ны Сарыш ауылында Кинйәбикә Миңлеғоловананан (1910 йылғы) БДУ студенттары яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 13; ББС, № 14; БНТ, т. 3, № 21.

**Булат батыр.** 1964 йылда Баймаҡ р-ны Үрге Иҙрис ауылында Абдулла Моратовтан (1904 йылғы) С. Мөхәмәтшин яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 14.

**Тимербулат.** Верхнеуральск өйәҙе Учалы рус училищеһы уҡытыусыһы З. Туймаҡаев яҙып алған, руссаға тәржемәлә М. Лось тарафынан «Вестник Оренбургского учебного округа» журналының 1912 йыл 7—8 һанында баҫтырылған. Аҙаҡ — БНТ, т. 3, № 29. Ә. Харисов тарафынан яңынан башҡортсаға тәржемәһе — БХИ, 1959, 139—141-се бб.; БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап, № 23.

**Әхмәт батыр менән Хоҙайбирҙе батыр.** 1959 йылда Ҡыйғы р-ны Иҫке Мөхәммәт ауылында Хәйҙәр Нурғәлиндан (1934 йылғы) БДУ студенты Мөхтәбәров яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 20; ББС, № 13; БНТ, т. 3, № 20.

**Миң башлы аждаһаны еңгән егет.** 1930 йылдар башында Дүртөйлө район үҙәгендә Ғата Исхаҡов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 15; ББС, № 15; БНТ, т. 3, № 22.

**Ҡамыр батыр менән убырлы ҡарсыҡ.** 1960 йылда Дәүләкән р-нында БДУ студенткаһы Кәримова яҙып алған (паспорты тулы түгел).— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 16; ББС, № 16; БНТ, т. 3, № 23.

**Бүре улы Сынтимер бәһлеүән.** 1930 йылдар башында Дүртөйлө район үҙәгендә Ғата Исхаҡов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 22; ББС, № 22; БНТ, т. 3, № 24.

**Айыуғолаҡ.** 1939 йылда Бөрйән р-ны Монасип ауылында Ишмурзин Хәйрулла сәсәндән (1873 йылғы) Ғәйнан Әмири яҙып алған.— Әкиәттәр, 1940 («Айыу ҡолаҡ малай»); БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 23; ББС, № 23, БНТ, т. 3, № 25.

**Аҡъеләк.** Верхнеуральск өйәҙе (хәҙерге Әбйәлил р-ны) Дәүләт ауылы уҡытыусыһы Ғ. Мағазов яҙып алған. Руссаға тәржемәлә М. Лось тарафынан «Вестник Оренбургского учебного округа» журналының 1912 йыл 5 һанында баҫтырылған. Аҙаҡ — ББС, № 44; БНТ, т. 3, № 26; ҡайтанан башҡортсаға М. Минһажетдинов тәржемә итте, тәү тапҡыр баҫыла.

**Йөргәк батыр.**— Бессонов, № 13. Ҡайтанан башҡортсаға М. Минһажетдинов тәржемә итте, тәү тапҡыр баҫыла.

**Хәтәр шәп батыр.** 1950 йылда Әлшәй р-ны Ҡыпсаҡ ауылында Сәйфулла Сафиндан (1876 йылғы) яҙып алынған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 44; БНТ, т. 3, № 27.

**Буҙансы батыр.** Верхнеуральск өйәҙе (хәҙерге Әбйәлил р-ны) Дәүләт ауылы уҡытыусыһы Ғ. Мағазов яҙып алған. Руссаға тәржемәлә М. Лось тарафынан «Вестник Оренбургского учебного округа» журналының 1912 йыл 7—8-се һанында баҫтырылған. Башҡортсаға Ғ. Ишбулатов тарафынан тәржемәһе — БХӘ, 1956, 80—92-се бб.; БХИ, 1959, 42—46-сы бб.; Нур Зарипов тарафынан төҙәтелгән тәржемә — БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 19; ББС, № 19; БНТ, т. 3, № 31.

**Тимерхан.** 1964 йылда Дәүләкән р-ны Буранғол ауылында

Гөльямал Ҡотлогилдинанан (1886 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған.— БНТ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 25; ББС, № 25, БНТ, т. 3, № 28.

**Ғәҙел батша.** 1965 йылда Ырымбур өлкәһе Александровский р-ны Ҡотос ауылында Шәрәфей Юлуевтан улы Р. Ш. Юлуев яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 24; ББС, № 24; БНТ, т. 3, № 30.

**Кинйәбатыр.** 1964 йылда Баймаҡ р-ны Алғазы ауылында Ғ. Биктимеровтан яҙып алынған.— БДУ БӘК фонды, 92 һаҡ. бер., 20—25 бб. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Өс батыр.**— 1960 йылда Дәүләкән р-ны Иҫке Аҡкүлай ауылында Рәхимьян Бикбулатовтан (1895 йылғы) Р. Н. Байымов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 17; ББС, № 17; БНТ, т. 3, № 44.

**Ҡырҡатар батыр.**— Бессонов, № 1; ББС, № 18; БНТ, т. 3, № 45; ҡайтанан башҡортсаға М. Х. Минһажетдинов тәржемәһе — БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 18.

**Ҡараса батыр.** 1929 йылда Арғаяш кантоны (хәҙер Силәбе өлкәһенең шул исемдәге р-ны) Күлмәк ауылында Кәримовтан (1894 йылғы) яҙып алынған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 20; ББС, № 20; БНТ, т. 3, № 32.

**Етегән батыр.** 1968 йылда Ишембай р-ны Байғужа ауылында Фәзулла Мирасовтан (1887 йылғы) Ә. Х. Вахитов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 21; ББС, № 21; БНТ, т. 3, № 33.

**Таңһиҙәр бәһлеүән.** 1960 йылда Әлшәй р-ны Ҡыпсаҡ ауылында Сәйфулла Сафиндан (1876 йылғы) яҙып алынған. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Алтынҡуға.** 1929 йылда Арғаяш кантонында (хәҙер Силәбе өлкәһенең шул исемдәге р-ны) яҙып алынған.— БХӘ, 1939, 154—170-се бб.; БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 29; ББС, № 29; БНТ, т. 3, № 34.

**Юлбат.** 1968 йылда Ишембай р-ны Көҙән ауылында Ситдыҡ Мөхәмәтьяновтан (1888 йылғы) Нур Зарипов яҙып алған. Ғилми архивта ошо уҡ әкиәттең 1939 йылда Рәшит Шәкиров тарафынан яҙып алынған тексы ла һаҡлана. Бер үк кеше тарафынан төрлө ваҡытта һөйләнгән текстарҙы үҙ-ара сағыштырыу (тексты ҡарағыҙ) фән өсөн бик әһәмиәтле.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 30; ББС, № 30, БНТ, т. 3, № 35.

**Бәләкәй Яҡуп.** 1959 йылда Ғафури р-ны Имәнлек ауылында Дәүләтовтан (1915 йылғы) яҙып алынған.— БДУ БӘК фонды, 101 һаҡ. берәмеге, 52—59-сы бб. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Бейеш батыр.**— Бессонов, № 6; ББС, № 31; БНТ, т. 3, № 36. Ҡайтанан башҡортсаға М. Х. Минһажетдинов тәржемәһе, тәү тапҡыр баҫыла.

**Уғланы Ҡороҡса батыр.** 1968 йылда Ишембай р-ны Әтҡол ауылында Сабирьян Ғарифуллиндан (1892 йылғы) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 31; ББС, № 32; т. 3, № 37.

**Ҡыран батыр.** 1968 йылда Учалы р-ны Ҡолош ауылында Ғ. Н. Нурыевтан (1907 йылғы) М. Х. Минһажетдинов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 39; ББС, № 41; БНТ, т. 3, № 38.

**Ҡарабәкәл.** 1967 йылда Йылайыр р-ны Юлдыбай ауылында Сәлихә Сәйетҡолованан (1891 йылғы) С. Ә. Галин яҙып алған. БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 40.

**Көләшә батыр.** 1985 йылда Баймаҡ р-ны Сыңғыҙ ауылында Әбдрәхим Рәжәповтан (1897 йылғы) Б. С. Байымов яҙып алған. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Аҡ бүре.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Перволоцкий р-ны

Ғәбдрәфиҡ ауылында Раилә Баҡаеванан (1939 йылғы) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 37; ББС, № 39; БНТ, т. 3, № 39.

**Аҡтым менән Һәмәндир.** 1959 йылда Зианчура р-ны Әлибай ауылында Рәйхәнә Ғәйнуллинанан (1899 йылғы) яҙып алынған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 38; ББС, № 40; БНТ, т. 3, № 51.

**Хәсән менән Хөсәйен.** 1959 йылда Курган өлкәһе Сафакүл р-ны Баязит ауылында Асия Ғүмәрованан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 33; ББС, № 34; БНТ, т. 3, № 42.

**Алсуҙар менән Кирсуҙар.** 1961 йылда Саратов өлкәһе Пугачев р-ны Мәҡсүт ауылында Ғ. Ғ. Сәлимованан С. Ғ. Сафуанов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 34; ББС, № 35; БНТ, т. 3, № 43.

**Дарыу эҙләүселәр.** 1930 йылда Әбйәлил р-ны Буранғол ауылында яҙып алынған (башҡа мәғлүмәт юҡ).— БХӘ, 1956, № 12 (әҙәби эшкәртелеп, «Аҡмырҙа» тип аталған); БХИ, 1959, № 20 («Аҡмырҙа»). Архивтағы текст менән төҙәтелеп — БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 42; ББС, № 43; БНТ, т. 3, № 40.

**Алтын ҡош.** 1940 йылда Ғафури р-ны Ҡолҡан ауылында Мәғзүмә Ҡунаҡбаеванан Шакир Насиров яҙып алған.— БХИ, 1959, 82—86-сы бб.; БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап, № 7; БНТ, т. 3, № 41.

**Таҙ батыр.** 1950 йылдарҙа Ә. Н. Усманов яҙып алған һәм 1963 йылда шул исемдәге китапта баҫтырған. Артабан — БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап, № 8.

**Алтын ҡауырһын.** 1974 йылда Күмертау р-ны Яҡут ауылында башланғыс мәктәп уҡытыусыһы С. Н. Сарбаеванан (1929 йылғы) Р. В. Нафиҡова яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 27; ББС, № 27; БНТ, т. 3, № 46.

**Икмәкбай.** 1965 йылда Әбйәлил р-ны Асҡар ауылында Ә. Ш. Кусимованан (1898 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 28; ББС,. № 28; БНТ, т. 3, № 47.

**Яурынтинсе.** 1983 йылда Баймаҡ р-ны Үрге Иҙрис ауылында М. Үтәбаеванан Р. А. Солтангәрәева яҙып алған. Тәү тапҡыр баҫыла.

**Алатаев.** 1959 йылда Әбйәлил р-ны Таштимер ауылында Ғәлимә Юлдашеванан (1921 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 35; ББС, № 36; БНТ, т. 3, № 48.

**Алтынбай Алатаев (вариант).** 1959 йылда Әбйәлил р-ны Айыуһаҙы ауылында Ш. Усманованан яҙып алынған.— БДУ БӘК фонды, һаҡлау берәмеге 59, 1—6 бб. Тәү тапҡыр баҫыла. Вариант (үрҙә «Алатаев» исемендә бирелгәне менән сағыштырығыҙ) бер үк әкиәттең хатта бер төбәктә лә бер төрлө генә һөйләнмәүен асыҡ күрһәтә.

**Таҙ батыр, Көнхан батша менән Айхан батша.**— Бессонов, № 33: «Плешивый богатырь»; БНТ, т. 3, № 49. Яңынан башҡортсаға М. Х. Минһажетдинов тәржемәһе, тәү тапҡыр баҫыла.

**Әлеүкәй.**— Зеленин. 1914, с. 479—481; БНТ, т. 3, № 50. Яңынан башҡортсаға Ә. И. Харисов тәржемәһе — БХИ, 1959, 128—130-сы бб.; БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 43.

**Һанай батыр.** 1948 йылда Әлшәй р-ны Ташлы ауылында С. Б. Батталовтан (1878 йылғы) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 32; ББС, № 33; БНТ, т. 4, № 71.

**Юлдыбай батыр.** 1962 йылда Баймаҡ р-ны Күсей ауылында Зәйнулла Ишкилдиндан (1906 йылғы) Ф. Мусина яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап, № 44; БНТ, т. 4, № 68.

**Килтәй Мәргән менән уның ҡарындашы.** 1965 йылда Күгәрсен р-ны Мраҡ ауылында Ш. С. Рәфиҡовтан яҙып алынған.— БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап, № 39; БНТ, т. 3, № 52.

Баҫма варианттары:
Киртәй Мәргән.— Бессонов, № 2;
Килтәй Мәргән.— БХИ, 1959, № 37.

**Ҡарағанда батша менән ҡыҙ батыр.** 1968 йылда Учалы р-ны Кесе Муйнаҡ ауылында Мәрйәм Бузыҡаеванан (1900 йылғы) Ф. Нурмөхәмәтова яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, № 26; ББС, № 26; БНТ, т. 3, № 53.

**Һылыубикә менән Йәркәй.** 1968 йылда Йылайыр р-ны Байгужа ауылында Зәйнулла Солтановтан яҙып алынған.— БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап, № 40; БНТ, т. 4, № 66.

**Аҡхан улы менән Ҡарахан ҡыҙы.** Учалы районында М. Х. Минһажетдинов яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап, № 41; БНТ, т. 3, № 54.

**Алмабатыр менән Алмабикә.** 1961 йылда Куйбышев өлкәһе Алексеевский р-ны Мурташ ауылында К. Н. Фазлиәхмәтованан (1926 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған.— БНТ, т. 3, № 55. Башҡортса тәү тапҡыр баҫыла.

**Әхмәт батыр менән Ҡасим батыр.** 1968 йылда Ишембай р-ны Уразбай ауылында А. Б. Фәхретдиновтан (1897—1970) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 3-сө китап, 41; ББС, № 42; БНТ, т. 3, № 56.

**Дандан батыр.** 1967 йылда Белорет р-ны Абзаҡ ауылында Тимерхан Камаловтан (1907 йылғы) З. Камалова яҙып алған.— БХИ: Әкиәттәр, 2-се китап, № 16; БНТ, т. 3, № 57.

**Ирекбай.** Утыҙынсы йылдар аҙағында Нәжип Асанбаев тарафынан яҙып алынған.— БХӘ, 1939; Борис Карамзин. Сказки. По мотивам башкирских народных сказок. Ростовское обл. книгоизд-во, 1946, 1947; Уфа: Башкнигоиздат, 1974; БХИ, совет осоро, 2-се китап: Әкиәттәр. Риүәйәттәр һәм хәтирәләр. Сәсәндәр ижады, Өфө, 1981.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Әкиәт батырҙары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Урал батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 17
Алп батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 28
Алпамыша батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 30
Ҡаһарман батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 37
Һунаҡ менән Имрәк . . . . . . . . . . . . . . . . . 40
Оморҙаҡ батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
Ташбаш батыр, Солтанғол һәм Солтанбай батыр . . . . . 46
Яңғыҙаҡ батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
Арпа батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 54
Таң батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 57
Аҡъял батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 61
Исмай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
Батыр һалдат . . . . . . . . . . . . . . . . . . 91
Алтын сабаҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
Ҡамыр батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 107
Ғәйнизар менән Етемйәр . . . . . . . . . . . . . . 113
Боғар хан улдары . . . . . . . . . . . . . . . . . 118
Осҡос ишәк . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 124
Егет менән аждаһа . . . . . . . . . . . . . . . . 129
Бер туған ике батыр . . . . . . . . . . . . . . . 134
Булат батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 136
Тимербулат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 141
Әхмәт батыр менән Хоҙайбирҙе батыр . . . . . . . . 143
Меӊ башлы аждаһаны еңгән егет . . . . . . . . . . 149
Ҡамыр батыр менән убырлы ҡарсыҡ . . . . . . . . . 157
Бүре улы Сынтимер бәһлеүән . . . . . . . . . . . . 162
Айыуғолаҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 173
Аҡъеләк . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 182
Йөргәк батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 184
Хәтәр шәп батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . 192
Буҙансы батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 194
Тимерхан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 198
Ғәҙел батша . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 202
Кинйәбатыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 211
Өс батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 217

Ҡырҡатар батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 2[illegible]
Ҡараса батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 23[illegible]
Етегән батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 240
Таңһиҙәр бәһлеүән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 246
Алтындуға батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 249
Юлбат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . [illegible]
Бәләкәй Яҡуп . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 279
Бейеш батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 286
Уғланы Ҡороҡса батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 291
Ҡыран батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 297
Көләшә батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 312
Ҡарабәкәл . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 317
Аҡ бүре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 324
Аҡтым менән Һәмәндир . . . . . . . . . . . . . . . . . 329
Хәсән менән Хөсәйен . . . . . . . . . . . . . . . . . . 331
Алсуҙар менән Кирсуҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . 335
Дарыу эҙләүселәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 349
Алтын ҡош . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 357
Таҙ батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 365
Алтын ҡауырһын . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 387
Икмәкбай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 411
Яурынтинсе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 417
Алатаев . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 425
Таҙ батыр, Көнхан батша менән Айхан батша . . . . . . 436
Әлеүкәй . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 449
Һанай батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 454
Юлдыбай батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 462
Батыр егет . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 467
Килтәй Мәргән менән уның ҡарындашы . . . . . . . . . 475
Ҡараганда батша менән ҡыҙ батыр . . . . . . . . . . . . 480
Һылыубикә менән Иәркәй . . . . . . . . . . . . . . . . 484
Аҡхан улы менән Ҡарахан ҡыҙы . . . . . . . . . . . . . 497
Алмабатыр менән Алмабикә . . . . . . . . . . . . . . . 506
Әхмәт батыр менән Ҡасим батыр . . . . . . . . . . . . . 510
Дандан батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 523
Ирекбай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 530
Текстарҙың сығанаҡтары . . . . . . . . . . . . . . . . . 536

Литературно-художественное издание

ЖИЛИ, ГОВОРЯТ, БОГАТЫРИ...

*(на башкирском языке)*

Редакторы *Р. Х. Дәүләтҡолов*
Художество редакторы *И. С. Файрушин*
Рәссамы *А. А. Костин*
Техник редакторы *Н. Я. Зарипова*
Корректорҙары *Г. Й. Яҡшыдәүләтова, Ә. Н. Әсәҙуллина*

ИБ № 4265

Наборға бирелде 25.04.90. Баҫырға ҡул ҡуйылды 20.11.90. Ҡағыҙ форматы $84 \times 108^1/_{32}$. Тип. ҡағыҙы № 2. Мәктәп гарнитураһы. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 28,56. Шартлы буяу отт. 29,4. Учет.-изд. таб. 30,35. Тиражы 25 000 экз. Заказ № 65. Хаҡы 2 һум 80 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. 450000, Өфө-үҙәк, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство. 450000, Уфа-центр, ул. Советская, 18.
Башҡорт ССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.